

# ӨФӨ ТАРИХЫ

СССР ФӘНДӘР АКАДЕМИЯҺЫ
БАШҠОРТОСТАН ФИЛИАЛЫ
«ПОЧЕТ БИЛДӘҺЕ» ОРДЕНЛЫ
ТАРИХ, ТЕЛ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТ
ИНСТИТУТЫ

# Өфө тарихы

---

## Ҡыҫҡаса очерк

Башҡортостан
китап нәшриәте
Өфө — 1983




## СССР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫ ПРЕЗИДИУМЫ

## УКАЗЫ

## ӨФӨ ҠАЛАҺЫН ОКТЯБРЬ РЕВОЛЮЦИЯҺЫ ОРДЕНЫ МЕНӘН НАГРАДЛАУ ТУРАҺЫНДА

Ҡала хеҙмәтсәндәренең хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндә өлгәшкән ҙур уңыштары өсөн, революцион хәрәкәттәге хеҙмәттәрен билдәләп һәм нигеҙе һалыныуға 400 йыл тулыу айҡанлы Өфө ҡалаһын ОКТЯБРЬ РЕВОЛЮЦИЯҺЫ ордены менән наградларға.

**СССР Верховный Советы Президиумы Председателе**
**Н. ПОДГОРНЫЙ**

**СССР Верховный Советы Президиумы Секретары**
**М. ГЕОРГАДЗЕ**

**Мәскәү, Кремль, 1974 йыл, 27 ноябрь.**

# ИНЕШ ҺҮҘ

Күп милләтле Советтар иленең ҙур һәм бәләкәй ҡалалары араһында орденлы Өфө ҡалаһы лайыҡлы урын алып тора, ул 1974 йылда нигеҙ һалыныуының 400 йыллығын билдәләп уҙҙы.

Совет илендәге ҡалаларҙың, шул иҫәптән Өфө ҡалаһының да, тарих биттәре һәр кем өсөн фәһемле. Уларҙа халыҡтың бай һәм данлы тәжрибәһе һүрәтләнә, быуаттар һәм быуыңдарҙың бәйләнеше, үткән замандарҙың һәм социалистик яңы тормоштоң героикаһы кәүҙәләнә. Хеҙмәтсәндәрҙе совет халҡының һәм уның алдынғы отряды — эшселәр синыфының революцион, боевой һәм хеҙмәт традицияларында тәрбиәләүгә ғәҙәттән тыш әһәмиәт биреп, бөйөк пролетар яҙыусыһы Максим Горький утыҙынсы йылдарҙың башында уҡ әле совет тарихсылары, әҙәбиәтселәре, журналистары һәм тыуған яҡты өйрәнеүселәре алдына ҡалалар һәм ауылдар, фабрикалар һәм заводтар, совхоздар һәм колхоздар тарихын бөтә яҡлап ғилми тикшереү һәм шуның нигеҙендә уларҙың тарихы буйынса фәнни-популяр китаптар яҙыу бурысын ҡуйҙы.

М. Горькийҙың инициативаһын Коммунистар партияһы Үҙәк Комитеты, ғилми һәм ижтимағи ойошмалар, хеҙмәтсәндәр үҙҙәре күтәреп алды. Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғандан һуң, был мәсьәләгә айырыуса ҙур иғтибар бүленә башланы. Мәскәү һәм Ленинградтың күп томлыҡ тарихын яҙыу һәм баҫтырып сығарыу буйынса эш киң йәйелдерелде. 1974 йылда уҡыусылар йылы ҡабул иткән бер томлыҡ «Мәскәү тарихы. Ҡыҫҡаса очерк» матбуғатта баҫылып сыҡты. 50-се йылдарҙан алып 80-се йылдарҙың башына тиклем Минск, Ҡазан, Киев, Кишинев, Вильнюс, Рига, Горький, Свердловск, Севастополь, Сәмәрҡәнд, Сыктывкар һ. б. ҡалаларҙың тарихы буйынса китаптар донъя күрҙе. Украинала ҡалалар һәм ауылдарҙың тарихын яҙыу эше айырыуса киң ҡолас алды. Унда 60-сы йылдарҙа — 70-се йылдарҙың беренсе яртыһында киң йәмәғәтселек — эшселәр, колхозсылар, уҡытыусылар, ғилми работниктар, әҙәбиәтселәр һәм журналистар көсө менән 26 томлыҡ «Украина ҡалалары һәм ауылдарының тарихы» әҙерләнде һәм баҫылып сыҡты.

Өфөләр үҙ ҡалаларының тарихы менән сағыштырмаса иртә ҡыҙыҡһына башлай. Мәҫәлән, XIX быуаттың ҡырҡынсы йылдарында уҡ әле Өфөнөң тыуған яҡты өйрәнеүсеһе В. С. Юматов «Оренбургские губернские ведомости» газетаһында мәҡәләләр баҫтыра, уларҙа Өфө тарихы буйынса ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерә; тәүгеләрҙең береһе булып ул ҡалаға 1574 йылда нигеҙ һалыныуы тураһында һығымта яһай. Революцияға тиклемге Өфө тарихын яҙыуҙа Р. Г. Игнатьевтың хеҙмәте айырыуса ҙур. Тарихи документтарҙы яҡшы белгән был кеше ҡала тарихы буйынса байтаҡ ҡыҙыҡлы әҫәрҙәр яҙған. Өфөнөң XVI—XVIII быуаттарҙағы тарихы буйынса мәғлүмәттәр шулай уҡ Н. Гурвич, А. Пекер, М. Сомов, В. Шевич һәм башҡаларҙың мәҡәләләрендә лә килтерелә. 1872 йылда Өфөлә тыуып үҫкән академик П. П. Пекарский «Өфө һәм Һамар ҡалалары ҡасан һәм ни өсөн нигеҙләнгән?» тигән мәҡәләһендә Өфөгә 1586 йылда нигеҙ һалыныуы тураһында фекер әйткән. Башҡортостанда тәүге ҡаланың төҙөлөүенә килтергән тарихи шарттарҙы күҙ уңынан төшөрөп ҡалдырып, Пекарский ялғыш Өфөгә ҡала статуты бирелгән датаны уға нигеҙ һалыу датаһы тип атай.

Өфө ҡалаһы һәм уның тирә-яғының тарихын ысын-ысындан ғилми өйрәнеү тик Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң ғына башлана. Башҡортостан[1] һәм Башҡортостан партия ойошмаһының[2] тарихы буйынса дөйөмләштереүсе әҫәрҙәрҙә Өфөләге революцион хәрәкәт, социалистик һәм коммунистик төҙөлөш, КПСС-тың Өфө ойошмаһының эшмәкәрлеге менән бәйле мәсьәләләр айырыуса киң яҡтыртыла. Урындағы тыуған яҡты өйрәнеүселәрҙең, журналистар һәм әҙәбиәтселәрҙең байтаҡ мәҡәләләрендә, брошюраларында һәм китаптарында ҡала үҫешенең айырым мәсьәләләре, ундағы ҡайһы бер предприятиелар һәм уҡыу йорттарының тарихы буйынса ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерелә[3]. Шулай ҙа һуңғы осорға тиклем дөйөмләштереүсе тикшеренеүҙәр булғаны юҡ ине. Шул уҡ ваҡытта дүрт орденлы Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының баш ҡалаһы Өфөнөң тарихы, уның бөгөнгөһө һәм үҫеш перспективалары менән ҡыҙыҡһыныу даими көсәйә бара. Был китап ошо өлгәреп еткән ихтыяжға яуап булып тора, бында Өфөнөң уға нигеҙ һалынғандан алып бөгөнгө көнгә тиклемге ҡыҫҡаса тарихы һөйләп бирелә.

---

[1] Очерки по истории Башкирской АССР, I том, беренсе киҫәк. Өфө, 1956; Очерки по истории Башкирской АССР, I том, икенсе киҫәк, Өфө, 1959; Очерки по истории Башкирской АССР, II том (Совет осоро). Өфө, 1966.

[2] Очерки истории Башкирской организации КПСС. Өфө, 1973.

[3] Уфа — столица Башкирской Автономной Советской Социалистической Республики за 40 лет Советской власти. Өфө. 1957; Тахаев Х. Я., Пархоменко И. И. Уфа — столица Башкирской АССР. Өфө, 1961; Винкельман А. П., Сорина Р. М. Ветеран башкирской нефтепереработки (Из истории Уфимского ордена Ленина нефтеперерабатывающего завода). Өфө, 1968; Наймушин П. Наш ордена Ленина Ново-Уфимский. Өфө, 1968; Уфимскому нефтяному институту 20 лет. Өфө, 1968; Сошников Д. Я., Кизин Ю. П. Полувековой путь (Из истории Уфимского витаминного завода). Өфө, 1969; Бахтизин Н., Богданова Р. Кузница сельскохозяйственных кадров. Өфө. 1972; Воловик М., Сотников И. Завод мой — гордость моя. Өфө, 1975 һәм башҡалар.

Марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәре, Советтар Союзы Коммунистар партияһы съездарының һәм конференцияларының ҡарарҙары, уның Үҙәк Комитеты пленумдарының ҡарарҙары һәм башҡа партия документтары был китапты яҙыуҙың теоретик нигеҙен тәшкил итте. Авторҙар коллективы КПСС Үҙәк Комитеты эргәһендәге Марксизм-ленинизм институтының Үҙәк партия архивы (ЦПА ИМЛ), Октябрь революцияһы, дәүләт власының юғарғы органдары һәм СССР дәүләт идараһы органдары архивы (ЦГАОР СССР), Совет Армияһы Үҙәк дәүләт архивы (ЦГАСА), СССР Халыҡ хужалығы Үҙәк дәүләт архивы (ЦГАНХ СССР), РСФСР Үҙәк дәүләт архивы (ЦГА РСФСР), СССР Оборона министерствоһы архивы, ВЛКСМ-дың Үҙәк архивы, Боронғо акттар Үҙәк дәүләт архивы (ЦГАДА), СССР Үҙәк дәүләт хәрби-тарихи архивы (ЦГВИА), Ленинградтағы СССР-ҙың Үҙәк дәүләт тарих архивы (ЦГИА СССР), СССР Әҙәбиәт һәм сәнғәт Үҙәк дәүләт архивы (ЦГАЛИ СССР), Дәүләт тарих музейы (ГИМ), Башҡорт АССР-ы Үҙәк дәүләт архивы (ЦГА БАССР), КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетының партия архивы (ПА БОК КПСС), Минск, Ҡазан, Куйбышев, Пермь, Ырымбур һәм Силәбе партия һәм дәүләт архивтары фондтарында һаҡланған документтар һәм материалдар киң файҙаланды. КПСС-тың Өфө ҡала комитеты һәм халыҡ депутаттарының Өфө ҡала Советының, ҡалалағы предприятиелар, учреждениелар һәм уҡыу йорттарының ағымдағы архивтарынан байтаҡ ҡиммәтле материалдар алынды. Бынан тыш документтар йыйынтыҡтары, статистик йыйынтыҡтар, замандаштарыбыҙҙың иҫтәлектәре, периодик баҫмалар, революцияға тиклемге һәм совет тарихсыларының тикшеренеүҙәре, башҡа бик күп материалдар өйрәнелде.

Китапта СССР Үҙәк революция музейының, М. И. Калинин исемендәге Дәүләт музейының, КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты партия архивының, БАССР Үҙәк дәүләт архивының, СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалы фәнни-практик фотография һәм кино лабораторияһының, БАССР Республика тыуған яҡты өйрәнеү музейының, Өфөләге ҡайһы бер предприятиелар музейҙарының фотоматериалдары файҙаланылды.

Авторҙар коллективы, бай документаль материалға нигеҙләнеп, тәүге тапҡыр Өфөнөң 1,2 гектар ҙурлыҡтағы территорияны биләп торған бәләкәй генә ауылдан илебеҙҙәге миллиондан ашыу кеше йәшәгән һәм 480 квадрат километр самаһы майҙанда йәйрәп ятҡан ҙур экономик һәм культура үҙәгенә тиклем үҫеш тарихын системалаштырып яҙырға тырышты. Ҡаланың дүрт быуаттан ашыуға һуҙылған тарихы сағыу ваҡиғаларға бай.

Авторҙар коллективы Башҡортостан тарихының байтаҡ ҡатмарлы мәсьәләләрен тикшерҙе. Археологтарҙың эҙләнеүҙәре быуаттар төпкөлөнә күҙ һалырға, Өфө ҡалаһының боронғо территорияһын аяҡҡа баҫтырырға мөмкинлек бирҙе. Ҡалаға нигеҙ һалыу датаһы тураһындағы мәсьәлә ентекләп өйрәнелде. Был датаны аныҡ билдәләүҙең ҡыйынлашыуы документаль сығанаҡтарҙың аҙ булыуы менән аңлатыла. Ҡазан һарайы тип йөрөтөлгән, Мәскәүҙә урынлашҡан һәм XVI—XVII быуаттарҙа Башҡортостанға идара итеүҙе ғәмәлгә ашырған приказдың архивы һаҡланмаған. Өфөнөң үҙендәге архив һаҡлағыстары ла XVII—XVIII быуаттарҙағы күп һанлы янғындар ваҡытында юҡҡа сыҡҡан.

Шулай ҙа былар ҡаланың тәүге йылдарҙағы тарихын аяҡҡа баҫтырыу, атап әйткәндә, ҡалаға нигеҙ һалыуҙың аныҡ датаһын билдәләү мөмкинлеген юҡ итә алмаған. Был мәсьәләне хәл иткәндә һаҡланып ҡалған документаль сығанаҡтарҙы, бөтәһенән элек, сығанаҡтарҙың башҡорт ырыуҙарының шәжәрәләре кеүек элек тарихсылар файҙаланмаған йәки бик аҙ файҙаланған төрөн иғтибарлы өйрәнеү мөһим әһәмиәткә эйә булды. Авторҙар XVIII—XIX быуаттарҙағы тарихсылар, географтар һәм тыуған яҡты өйрәнеүселәрҙең мәғлүмәттәрен дә яңыса баһаланы. Үҙҙәренең тикшеренеүҙәрендә улар боронғо замандың ысын документтарын файҙаланған, тик ул документтар беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланмаған. XVIII быуаттың билдәле тарихсыһы, Россия Фәндәр академияһының член-корреспонденты П. И. Рычков, тарихсылар Е. Ф. Зябловский, А. Е. Щекатов, Өфөнән тыуған яҡты өйрәнеүсе Р. Г. Игнатьев һәм башҡаларҙың әҫәрҙәре айырым иғтибарға лайыҡ булды. Аҙаҡ килеп, Өфәнең «йәшен» билдәләгәндә Башҡортостанда тәүге ҡаланың төҙөлөүенә килтергән шарттар ҙа (бөтәһенән элек, башҡорт халҡының Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуы) иҫәпкә алынды. Был мәсьәләне шулай киң һәм комплекслы тикшереү, элек матбуғатта баҫылған һәм архивтан алынған яңы сығанаҡтарҙы файҙаланыу авторҙарға Өфө ҡалаһына 1574 йылда нигеҙ һалынған тигән һығымта яһарға мөмкинлек бирҙе.

«Өфө тарихы» ҡаланың тәүге төҙөүселәре, унда йәшәгән тәүге кешеләр, Өфө посадының барлыҡҡа килеүе кеүек бәхәсле мәсьәләләргә лә яуап бирә. Бында тәүге тапҡыр бынан меңләгән йыл элек тәүге торлаҡтар барлыҡҡа килгәндән алып бөгөнгө көнгә тиклем ҡала тарихының фәнни хронологияһы бирелә.

Был крайҙың экономик, политик һәм культура тормошонда, рус халҡының башҡорттар һәм башҡа халыҡтар менән бөйөк дуҫлығының барлыҡҡа килеүендә һәм нығыуында Өфәнең урынын асыҡлау ҙа бик мөһим булды. Китапта крепость-ҡалала тәүге сауҙагәрҙәрҙең һәм һөнәрселәрҙең күренеүе, әкренләп лавкалар, баҙарҙар һәм йыл һайын үткәрелә торған йәрминкәнең барлыҡҡа килеүе, уларҙа сауҙа әйләнешенең тайпылышһыҙ үҫә барыуы тураһында һөйләнелә. XIX быуат аҙағына ҡалала өлгөрөп еткән эшселәр синыфы менән капиталистик фабрикалар һәм заводтар була. Һамар — Златоуст (хәҙерге Куйбышев) тимер юлының төҙөлөүе буржуаз Өфөнөң үҫешендә ҙур роль уйнай.

В. И. Лениндың 1900 йылда Өфөгә ике тапҡыр килеүе Башҡортостан тарихында ғәҙәттән тыш урын алып тора. Владимир Ильич урындағы социал-демократтар менән осрашҡан һәм Өфөлә «Искра» газетаһының терәк пунктын ойоштороған. В. И. Лениндың Өфөләге революцион эшмәкәрлеге Өфө социал-демократтары төркөмөн Уралдағы төп социал-демократик ойошмаларҙың береһенә әүерелдереүҙә ғәйәт ҙур әһәмиәт ҡаҙана.

Теге йәки был тарихи этапта ҡала территорияһының һәм унда йәшәүсе халыҡ һанының үҫеүе, ҡала кешеләренең социаль йөҙөнөң үҙгәреүе ҡаланың үҫеше менән тығыҙ бәйләнештә күҙәтелә.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының еңеүе Өфө алдында яңы, быға са күрелмәгән офоҡтар асты. «Өфө тарихында» эшселәр синыфының өлкә һәм ҡала партия ойошмалары етәкселегендә яңы, социалистик Өфөнө — автономиялы Башҡорт республикаһының баш ҡалаһын формалаштырыу буйынса

актив ижади эшмәкәрлеге ҙур фактик материал нигеҙендә асыла. Авторҙар килтергән материалдар ҡала промышленносының, айырыуса һуғыштан һуңғы йылдарҙа, көслө үҫешен күҙәтергә мөмкинлек бирә. Хәҙерге көндә Өфө СССР-ҙағы нефть химияһы һәм машиналар эшләүҙең иң ҙур үҙәгенә әүерелде. Бер үк ваҡытта ҡалала торлаҡ төҙөлөшө, мәктәптәр, больницалар, Культура һарайҙары, кинотеатрҙар һәм башҡаларҙы төҙөү йылдам темпта алып барыла.

Китапта социалистик һәм коммунистик төҙөлөш осоронда ҡала культураһы тарихына байтаҡ урын бүленгән. Байтаҡ өлөшө тәүге тапҡыр фәнни әйләнешкә индерелгән бик бай фактик материалда тотош грамоталылыҡ, дөйөм һәм махсус урта белем, шулай уҡ юғары белем биреүҙе үҫтереү өсөн көрәш мәсьәләләре яҡтыртыла, Өфөлә совет театры, музыкаһы, живопись, әҙәбиәтенең барлыҡҡа килеүе һәм нығыуы күрһәтелә. Авторҙар килтергән факттар хәҙерге өфөлөнө — эшсән кешене, киң культура ихтыяждары булған кешене тәҫмөрләргә мөмкинлек бирә. Ҡалала Совет власы йылдарында барлыҡҡа килгән күп һандағы культура учреждениеларының эшмәкәрлеге уның үҫә барған ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә йүнәлтелгән дә.

* *
*

«Өфө тарихы. Ҡыҫҡаса очерк» китабын СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының «Почет билдәһе» орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Башҡорт дәүләт университеты, Башҡорт дәүләт педагогия институты һәм Мәскәү технология институты Өфө филиалының ҡайһы бер преподавателдәре ҡатнашлығында әҙерләне.

Китаптың айырым главаларын һәм бүлектәрен яҙыуҙа түбәндәге авторҙар ҡатнашты: Әсфәндиәров Ә. З. — I главаның 2-се параграфы Р. Ғ. Ғәниев менән авторҙашлыҡта, III глава; Әхмәҙиев Т. Х.—XI глава; Болтушкин В. В. — XIV глава; Ваһапова Л. А.— VIII глава, X главаның 1, 3-сө параграфтары; Васильев С. М.— IV глава; Ғәниев Р. Ғ.— I главаның 2-се параграфы Әсфәндиәров Ә. З. менән авторҙашлыҡта, V главаның 1, 2, 4-се параграфтары Кизин Ю. П. менән авторҙашлыҡта, V главаның 3-сө параграфы, VII главаның 3, 4-се параграфтары, инеш һүҙ һәм йомғаҡлау; Дәүләтбаев Б. С.— VI глава; 2-се параграфта «Милли матбуғат» бүлеге һәм 3-сө параграфта «Милли театр» бүлеге Ҡудашев А. Ғ. менән авторҙашлыҡта; Деева Л. Ф.— IX главаның 3-сө параграфы; Демидова Н. Ф.— II глава; Кизин Ю. П.— V главаның 1, 2, 4-се параграфтары Ғәниев Р. Ғ. менән авторҙашлыҡта, XII глава; Ҡудашев А. Ғ.— VI главаның 2, 3-сө параграфтарында «Милли матбуғат» һәм «Милли театр» бүлектәре Дәүләтбаев Б. С. менән авторҙашлыҡта; Пшеничнюк А. Х.— I главаның 1-се параграфы; Сәитов С. С.— X главаның 2-се параграфында «Сәнғәт» бүлеге; Сафуанов С. Г.— X главаның 2-се параграфында «Әҙәбиәт» бүлеге; Саяхов Ф. Л.— IX главаның 1, 2-се параграфтары; Хөсәйенова Г. Т.— XIII глава; Чемерис В. П.— VII главаның 1, 2-се параграфтары.

Авторҙар коллективы етәксеһе — Р. Ғ. Ғәниев.

XIV главаны яҙғанда Т. А. Сафаровтың материалдары, айырым күҙәтеүҙәре һәм дөйөмләштереүҙәре файҙаланылды; V главала Р. М. Рәимов, Ә. Н. Ус-

манов һәм Х. Ф. Усмановтарҙың материалдары файҙаланылды. Китапҡа материалдар һәм һүрәттәр һайлап алыуҙа авторҙарға Н. Н. Барсов, Т. Г. Городинская, З. Ш. Латипов, Т. К. Новикова, В. А. Скачилов, Г. М. Сутягина һәм В. П. Яковлевтар ҙур ярҙам күрһәтте. А. Ратиславский планының күсермәһен, Өфөнөң үҫеше һәм кремлде реконструкциялау схемаларын В. Д. Таич эшләне.

Редколлегия һәм авторҙар коллективы китаптың беренсе һәм икенсе баҫмаларын әҙерләгәндә үҙҙәренең кәңәштәре һәм тәкдимдәре менән ҙур ярҙам күрһәткән ғилми учреждениеларға, айырым иптәштәргә һәм рецензенттарға рәхмәт белдерә.

# Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыу

## § 1. Өфө ҡалаһы территорияһы борон заманда

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының баш ҡалаһы Өфө Ағиҙел йылғаһының урта ағымында, уға Ҡариҙел, Дим һәм Сутолока йылғалары ҡушылған урында, уның уң яҡ һәм өлөшләтә һул яҡ ярында киң территорияны биләй. Тәбиғи-географик күҙлектән ҡарағанда, был район кешеләргә йәшәү өсөн ҙур уңайлыҡтар тыуҙырған. Тулы һыулы йылғалар, ҡуйы урмандар, уңдырышлы йылға террасалары, күпереп үләндәр үҫкән күҙ күреме етмәҫ һыуба-ҫар туғайҙар һунар һәм балыҡсылыҡ менән дә, игенселек һәм малсылыҡ менән дә уңышлы шөғөлләнеү өсөн тәбиғи нигеҙ булып торған. Ағиҙелдең уң яҡ ярындағы текә тау битләүҙәре һуғышсан күршеләрҙең һөжүменән ышаныслы һаҡланырға ярҙам иткән. Уңайлы тәбиғи шарттар бынан күп мең йылдар элек, боронғо таш быуат (палеолит) осоронда уҡ, бында кешеләргә тәүге торлаҡтарын ҡорорға мөмкинлек биргән. Ул саҡта кешеләр әсәлек ырыуы менән йәшәгән. Ҙур йәнлектәрҙе коллектив менән аулау уларҙың төп шөғөлө булған. Эш ҡоралдарын таштан, шулай уҡ һөйәктән һәм ағастан яһағандар. Тауҙарҙа — мәмерйәләр, ялан ерҙә землянкалар кешеләргә торлаҡ булып хеҙмәт иткән.

Өфө территорияһында һәм уның тирә-яғында урта таш быуат (мезолит) бер ни тиклем тулыраҡ сағыла. Ул осор беҙҙең көндәрҙән сама менән 17—7 мең йыл элек булған. Мезолит осоро кешеләре йәшәгән урындар Ҡариҙел йылғаһының уң ярында Дудкино ауылы тәңгәлендә, Затондан алыҫ түгел Миловка ауылы эргәһендә һәм Ағиҙел йылғаһының элекке үҙәненең ярында Романовка ауылы эргәһендә табылды. Унда йәшәгән боронғо кешеләр ваҡ кремний пластиналарҙан бысаҡтар, уҡ башаҡтары, киҫкестәр, ҡырғыстар һ. б. яһағандар. Уҡ һәм йәйәне уйлап табыу мезолит осоро кешеһенең бик ҙур ҡаҙанышы булған. Улар ваҡ йәнлектәргә һунарҙы уңышлы алып барырға мөмкинлек биргән.

Яңы таш быуат (неолит) яңы эраға тиклемге V—III мең йыллыктарҙы үҙ эсенә ала. Өфө территорияһында ул осорҙо сағылдырған бер нисә ҡом көршәк ярсығы ғына бар. Улар ҡаланың төпьяҡ ситендә элекке Яңы Турбаслы ауылы (хәҙер Орджоникидзе районы составына инә) эргәһендә табылған.

Бронза осоронда (яңы эраға тиклемге II мең йыллыҡ — I мең йыллыҡтың башы) тәүтормош ҡәбиләләренең тормошонда ҙур үҙгәрештәр булып үтә. Кешеләр тәүге тапҡыр металды (баҡырҙы һәм уның ҡатнашмаһы — бронзаны) файҙаланырға өйрәнә. Таш ҡоралдар әкренләп ныҡлыраҡ һәм уңайлыраҡ бронза ҡоралдар менән алмаштырыла. Һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ икенсе планға күсә; малсылыҡ һәм игенселек хужалыҡ эшмәкәрлегендә төп урынды ала. Үткән быуат аҙағында Миловка ауылынан алыҫ түгел Лазоревый күле буйында табылған хазина быны асыҡ күрһәтә. Унда бер метрҙан саҡ ҡына ашыуыраҡ тәрәнлектә бер урынға өйөлгән алты бронза ураҡ, балта һәм ҡасау табылған. Ураҡтар 30 сантиметр самаһы оҙонлоҡтағы бер аҙ бөгөлгән яҫы пластинкаларҙан ғибарәт. Уларҙың төбөндә тотҡаға беркетеү өсөн ырғаҡ эшләнгән. Эш ҡоралдарының, айырыуса ураҡтарҙың, формаһы был табыштың яңы эраға тиклемге II мең йыллыҡ аҙағында яһалыуын билдәләргә мөмкинлек бирә [1].

1934 йылда Дим йылғаһы тамағында, Ағиҙел аша тимер юл күпере районында, табылған Дим торлағы бронза осороноң икенсе бер ҡыҙыҡлы ҡомартҡыһы булып тора. Бында ҡаҙыныу эштәре алып барғанда йорт хайуандарының (ат, һыйыр, сусҡа) һөйәктәре, бронзанан һәм һөйәктән эшләнгән бер нисә әйбер, шулай уҡ бик күп керамика табылған. Керамик изделиеларҙың ярсыҡтары һәр төрлө һырҙар, соҡорҙар, зигзагтар, горизонталь шыршылар, флажоктар рәүешендәге биҙәктәр менән бик матур итеп биҙәлгән. Дим торлағында йәшәүселәр малсылыҡ һәм бик ябай игенселек менән шөғөлләнгән. Малсылыҡ һәм металлургия ирҙәрҙе алғы планға ҡуя; әсәлек ырыуынан аталыҡ ырыуына күсеү осоро башлана.

Өфө территорияһында асылған археологик ҡомартҡыларҙың иң күбеһе яңы эраға тиклемге VIII—VII быуаттарҙан башланған тимер осорона ҡарай. Тимерҙән эш ҡоралдары етештереү һәм уларҙы хужалыҡта ҡулланыу хеҙмәт етештереүсәнлеген һиҙелерлек күтәрә, был айырым ырыуҙарға һәм ғаиләләргә үҙ ҡулдарында байтаҡ байлыҡтар тупларға мөмкинлек бирә. Күршеләрҙең байлығын тартып алыу өсөн ҡоралллы һөжүмдәр ғәҙәти күренешкә әйләнә. Даими һөжүм ҡурҡынысы кешеләрҙе үҙҙәренең торлаҡтарын йылғаларҙың текә ярҙары буйындағы бейек ҡалҡыулыҡтарҙа төҙөргә, уларҙы валдар һәм соҡорҙар менән нығытырға мәжбүр итә.

---

[1] Тихонов Б. Г. Металлические изделия эпохи бронзы на Среднем Урале и в Приуралье.— Материалы и исследования по археологии СССР. № 90. М., 1960, 60, 68-се биттәр.

Бронза осоро. Кремнийҙан эшләнгән һөңгө һәм уҡ башаҡтары. Улар 1957—1958 йылдарҙа Затопда ҡаҙыныу эштәре алып барғанда табылған.



Хәҙерге көндә «Шайтан ҡаласығы» («Чертово городище») исеме аҫтында билдәле булған шундай ныҡытылған ауылдарҙың береһе Ҡариҙел йылғаһының уң яҡ текә ярында, хәҙерге «Зеленая роща» санаторийы территорияһында урынлашҡан булған. Ҡаласыҡ майҙаны өс яҡтан текә тау битләүҙәре менән уратып алынған, ә дүртенсе яғы өҫтөнә осло бүрәнәләр ултыртылған тупраҡ вал һәм 97 метр оҙонлоҡтағы соҡор менән һаҡланған булған. Валдың бейеклеге айырым урындарҙа соҡор төбөнән 5 метрға еткән. Был ҡаласыҡ яңы эраға тиклемге IV—III быуаттарҙа төҙөлгән. Бында ҡаҙыныу эштәре алып барғанда һөйәктән эшләнгән уҡ башаҡтары, тимер бысаҡ, ҡом көршәк ярсыҡтары табылған. Ҡаласыҡ валының тыш яғында ҡәберлек табылған һәм уның бер өлөшө ҡаҙылған, унда ҡатын-ҡыҙҙарҙың бик күп биҙәнеү әйберҙәре (бронзанан һәм быяланан эшләнгән муйынсаҡтар, беләҙектәр, балдаҡтар, йөҙөктәр, алҡалар һ. б.) һәм һуғыш ҡоралдары (уҡ-һаҙаҡтар, һөңгөләр, бысаҡтар) табылған. Бронзанан эшләнгән билбау баштары ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра: ундағы төрлө йәнлек һүрәттәре ҙур оҫталыҡ һәм художестволы зауыҡ менән яһалған.

«Шайтан ҡаласығы» — Өфө территорияһындағы һәм уның тирә-яғындағы берҙән-бер ҡомартҡы түгел. Ҡариҙел йылғаһының уң яҡ ярындағы тар ғына оҙон ҡалҡыулыҡта Ҡариҙел тамағы (Усть-Уфимское) ҡаласығы булған. 1967 йылда Ағиҙелдең уң яҡ ярында, әле Салауат Юлаев һәйкәле ҡалҡып торған урында, боронғо нығытылған ҡаласыҡтың ҡалдыҡтары асылды. Культуралы ҡатламдың ҡалынлығы һәм археологик табыштарҙың күп һанда булыуы бында боронғо ҡәбиләләрҙең кәмендә 3—4 быуат буйы йәшәгәнлектәрен күрһәтә. Өфө территорияһында шулай уҡ тимер осорона ҡараған тиҫтәләгән ҡәберлек һәм йылға үҙәндәрендә урынлашҡан бер нисә нығытылмаған ҡаласыҡ булыуы ла билдәле.

Шуға оҡшаш ҡаласыҡтар һәм ҡәберлектәрҙең ҡалдыҡтары Ағиҙелдең уң яҡ яры буйлап тар ғына һыҙат булып Стәрлетамаҡтан Бөрөгә тиклем һуҙылған. Благовещенск ҡалаһынан алыҫ булмаған Ҡара-абыз күле эргәһендәге сағыштырмаса тулыраҡ өйрәнелгән ҡаласыҡтың исеме буйынса ул ҡомартҡылар Ҡара-абыз культураһы тип йөрөтөлә. Ғалимдар, ҡара-абыз кешеләре боронғо фин-угор ҡәбиләләренә ҡараған, тип берҙәм иҫәпләй. Улар ултыраҡ тормошта йәшәгән. Малсылыҡ һәм игенселек уларҙың хужалығының нигеҙен тәшкил иткән. Улар күпселектә йылҡы һәм кәзә-һарыҡ аҫраған. Малдарын һутлы үләнле һыубаҫар туғайҙарҙа һәм урман аҡландарында көткәндәр. Ҡышҡы айҙарҙа малға ашатыр өсөн бесән әҙерләгәндәр. Иглин районының Охлебинино ауылы эргәһендәге ҡаласыҡтарҙың береһендә табылған салғыға оҡшаш тимер эш ҡоралы быны асыҡ күрһәтә. Сәсеүлектәрҙә тупраҡты осона һөйәктән, бронзанан йәки тимерҙән эшләнгән киҫкестәр ҡуйылған таяҡтар менән эшкәрткәндәр, күрәһең. Ҡаты бойҙай һәм арпа төп иген культуралары булып торған. Һунарсылыҡ һәм балыҡсылыҡ халыҡтың ярҙамсыл шөғөлө булған. Урмандарҙа мышылар, боландар, айыуҙар, ҡама, төлкө, шәшке һ. б. йәнлектәр бик күп булған.

Ҡара-абыз ҡәбиләләре ныҡ үҫкән ырыу ҡоролошо дәүерендә йәшәгән. Быҡаса асылған ҡаласыҡтар айырым ырыуҙарҙың нығытылған төйәге булып хеҙмәт иткән, күрәһең. Ырыуҙарҙағы кешеләрҙең байҙарға һәм ярлыларға бүленеүе инде башланған булған, ләкин был процесс бик әкрен барған. Нисек кенә булмаһын, ҡаласыҡтарҙа һәм ҡәберлектәрҙә табылған ҡомартҡыларҙы өйрәнеү ырыуҙаштарҙың сағыштырмаса тиң хоҡуҡлы булыуҙарын күрһәтә.

Яңы эраның III быуатынан гунн ҡәбиләләренең көнбайышҡа хәрәкәте һөҙөмтәһендә «халыҡтарҙың бөйөк күсенеү» осоро башлана. Был процесс Көньяҡ Урал территорияһын да урап үтмәй. IV быуат аҙағында — V быуат башында этник яҡтан бер төрлө булмаған күсмә ҡәбиләләрҙең ҙур төркөмө был яҡтарға ла килеп сыға. Улар ҡара-абыз культураһын алмаштырған бахмут (мазунин) культураһына ҡараған урындағы ултыраҡ тормошло ҡәбиләләр менән тығыҙ бәйләнешкә ингән.

Күсмә ҡәбиләләр ҡалдырған күп кенә ҡомартҡылар һаҡланған. Шуларҙан Яңы Турбаслы ҡурғандарындағы ҡәберлек бөтәһенән дә тулыраҡ өйрәнелгән. 100-гә яҡын ҡурған өйөмө иҫәпләнгән был ҡәберлектә ҡаҙыныу эштәре XIX быуат аҙағында уҡ башланған. 1957—1958 йылдарҙа тикшеренеүҙәр дауам иттерелде. Асылған ҡурғандарҙа 1-ҙән алып 5—7-гә тиклем мәйет ерләнгән булып сыҡты. Мәйеттәрҙе ҡурған төбөндәге тар ғына соҡорҙарға ерләгәндәр, ҡайһы бер мәйеттәрҙең баш осонда ҙур булмаған ләхет алынған, унда аҙыҡ-түлек (ниндәйҙер, күрәһең, шыйыҡ аш һалынған һауыт һәм йылҡы ите) ҡуйылған. Ләхет алынмаған ҡәберҙәрҙә аҙыҡ-түлекте мәйеттең башы эргәһенә йәки

Яңы эраның V быуатына, сасанидтар осорона ҡараған көмөш табаҡ. 1941 йылда Өфөлә (Пушкин һәм Совет урамдары сатында) ер эштәре алып барғанда табылған.



аяҡ осона ҡуйғандар. Мәйеттәрҙе табутһыҙ салҡан яткырып аяҡ-ҡулдарын һуҙып һалғандар һәм баштарын төньяҡҡа ҡаратып ерләгәндәр. Бөтә ҡәберҙәр ҙә борон заманда уҡ таланған булып сыҡты. Ләкин уларҙа таланғандан һуң ҡалған ҡайһы бер әйберҙәр ҙә ҡәберҙәрҙең арыу уҡ бай булыуы тураһында һығымта яһарға мөмкинлек бирә. Унда алтын ялатылған алҡалар, бронзанан эшләнгән бил ҡайышы һәм аяҡ кейемдәре пряжкалары, алтын фольга менән көпләнгән ҡайыш остары, беләҙектәр, бронзанан эшләнгән ҡайыш биҙәктәре һ. б. табылған. Был ҡурғандар яңы эраның V—VII быуаттарына ҡарай.

Ағиҙел йылғаһының уң яҡ яры буйында, автомобиль юлы менән тимер юл күперҙәре араһында төрлө ваҡытта ундан ашыу боронғо кешеләр ерләнгән урындар (элекке Семинария тауы районында, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры эргәһендә һ. б. урындарҙа) табылған. Уларҙа IV—VII быуаттарға ҡараған һәм бик бай йыһазландырылған бер йәки бер нисә ҡәбер булған. Ҡаҙыныу эштәре алып барғанда уларҙан бронзанан, көмөштән, алтын ялатып һәм алтындан эшләнгән бик күп биҙәнеү әйберҙәре (пряжкалар, алҡалар, беләҙектәр, йөҙөктәр, муйынсаҡтар, медальондар һ. б.), шулай уҡ һуғыш ҡоралдары — ҡылыстар, бысаҡтар, һөңгөләр, йәйә биҙәктәре килеп сыҡҡан.

1936 йылда Башҡортостан медицина институтының (Ленин урамы, 3-сө йорт) ишек алдында ер эштәре башҡарғанда өс ҡәбер: бер ир кеше, бер ҡатын-ҡыҙ һәм бер бала ҡәбере асыла. Ҡатын-ҡыҙ һөлдәһенең ҡул-аяҡтары һуҙып һалынған, ул салҡан яткырылған һәм ба-

шы менән төньяҡ-көнсығышҡа ҡаратып ерләнгән. Ҡәберҙә табылған биҙәнеү әйберҙәре һәм уларҙың урыны был ҡатындың өҫ кейемдәрен яҡынса төҫмөрләргә мөмкинлек бирә. Уның кейеме оҙон ебәк күлдәктән һәм өҫкө еләндән торған, биле алтын осло ҡайыш менән быуылған. Ул кейгән оҙон балаҡлы ыштан һәм күн аяҡ кейеме баҡыр һәм бронза пряжкалар менән ҡаптырылған. Сәс толомона алтын сулпы ҡушып үрелгән, баш кейеменә сикә тәңгәленә ике яҡлап ҙур оҫталыҡ менән яһалған парлы медальон тағылған. Күлдәге яғаһынан түбәндәрәк, ихтимал, еләне лә алтын брошкалар менән ҡаптырылған. Бил ҡайышына уң яҡтан бронза көҙгө тағылған. Һул яҡ осаһы эргәһенә һөйәк менән биҙәлгән оҙон һаплы ҡалаҡ һәм тимер бысаҡ һалынған.

Ир кеше менән баланың ҡәберҙәре тулыһынса тип әйтерлек емерелгән булып сыға. Ир кеше ҡәберендә һөйәк менән биҙәлгән йәйә ҡалдыҡтары, уҡ башаҡтары, тимер кольчуга киҫәктәре; бала ҡәберендә бронза сымдан үрелгән муйынсаҡ, ҡом көршәк ватыҡтары һәм баҡыр пластина табылған. Ҡәберлектәрҙе тикшереүсенең фекеренсә, унда боронғо замандың бер күренекле кешеһенең, ихтимал, ҙур байлыҡҡа эйә булған ырыу-ҡәбилә башлығының ғаиләһе ерләнгән булыуы мөмкин [1].

Археологик мәғлүмәттәр Өфө территорияһында йәшәгән халыҡтың ижтимағи ҡоролошонда һәм хужалыҡ тормошонда, бынан элегерәк булған осор менән сағыштырғанда, бик ҙур үҙгәрештәр булмауын күрһәтә. Күсмә ҡәбиләләр килгәс, малсылыҡтың, айырыуса йылҡысылыҡтың роле арта. Ҡәберҙәр эргәһендә аттың баш, тояҡ һөйәктәре һәм ял-ҡойроғонoң табылыуы шул хаҡта һөйләй. Күрәһең, ул саҡта мәйеттәр менән бергә һуғышсы, көтөүсе, күсмә тормош кешеһенең тоғро юлдашы һәм ярҙамсыһы булып торған атын да ерләгәндәрҙер.

Кешеләрҙең байҙарға һәм ярлыларға бүленеүе көсәйә. Төрлө ҡәберҙәрҙәге кешеләрҙең төрлөсә ерләнгән булыуы быны асыҡ күрһәтә. «Ярлы» һәм «урта хәлле» мәйеттәр менән бер рәттән, һоҡланғыс ювелир оҫталығы менән эшләнгән бик күп алтын һәм көмөш әйберҙәр менән мул биҙәлгән ҡәберҙәр ҙә осрай. Мәйеттәрҙең төрлөсә биҙәп ерләнгән булыуы, һис һүҙһеҙ, уларҙың тиң хоҡуҡлы булмауын күрһәтә.

VIII — X быуаттарҙа Евразия далаларында күпселеге төрки телендә һөйләшеүсе күсмә халыҡтар активлаша башлай. Көньяҡ Урал территорияһына монголоидтарға оҡшаш күсмә халыҡтарҙың байтаҡ төркөмдәре үтеп ингән. Башҡортостандың көньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш райондарында был ҡәбиләләрҙең ҡурған өйөлгән ҡәберлектәре киң таралған. Ҡайһы бер тарихсылар был ҡомартҡыларҙы боронғо башҡорттарға ҡайтарып ҡалдыра. Нисек кенә булмаһын,

[1] Ахмеров Р. Б. Уфимские погребения IV—VII вв. н. э. и их место в древней истории Башкирии.— Древности Башкирии. Сборник статей. М., 1970, 163, 164, 180-се биттәр.

яңы эраның II мең йыллығы башына Көньяҡ Уралдың дала һәм урман-дала райондарында боронғо башҡорт ҡәбиләләре йәшәгән тип тулы ышаныс менән әйтергә мөмкин.

Күсмә халыҡтарҙың бик ҙур массаһының килеүе Башҡортостандың үҙәк райондарында йәшәгән халыҡтың тормошона тәрән үҙгәрештәр индергән. Урындағы ҡәбиләләрҙең бер өлөшө көнбайышҡа йәки төньяҡ-көнбайышҡа күсенеп китергә мәжбүр булған, бер өлөшө килмешәктәр менән аралашҡан. Урындағы халыҡтың ассимиляция процесы, күрәһең, ҙур ҡатмарланыуһыҙ һәм бәрелештәрһеҙ барғандыр, сөнки улар ҙа ярым күсмә тормошта йәшәгән, атап әйткәндә, нигеҙҙә малсылыҡ менән шөғөлләнгән. Күсенеп килгән боронғо башҡорт халҡының күсмә тормошта йәшәүе арҡаһында Өфө ҡалаһының элек халыҡ күп йәшәгән территорияһы «бушап ҡала». Был Өфө ярымутрауында бер кеше лә ҡалмаған икән тигән һүҙ түгел, әлбиттә. Ҡариҙел һәм Дим йылғалары тамағындағы киң һыубаҫар туғайҙар күсмә тормошта йәшәүсе малсылар өсөн бик һәйбәт йәйләү булып хеҙмәт иткән. Башта Бәләбәй ҡалҡыулығына килеп урынлашҡан боронғо башҡорт ҡәбиләләренең Көньяҡ Уралда йәшәүҙәренең тәүге осоронда уҡ Өфө тирәһенә, бәлки унан да төньяҡҡараҡ барып етеүҙәренә икеләнергә тура килмәй[1]. Ҡаланың төньяҡ өлөшөндәге Александровка поселогы эргәһендәге ҡурғандар, ихтимал, шул боронғо осорға ҡарайҙыр. 1914—1916 йылдарҙа шул тирәлә урман төпләгәндә шундай ҡурғандарҙың береһендә ваҡ аҡсалар, өҙәңгеләр һәм ат сбруйы биҙәктәре табылған. Ундай әйберҙәр Башҡортостандың көньяҡ һәм төньяҡ-көнсығышындағы төрки ҡәбиләләренең VIII — X быуаттарға ҡараған ҡурғанлы ҡәберлектәрендә йыш табыла[2].

IV—VII быуатҡа ҡараған ҡатын-ҡыҙ ҡәберенән алтын биҙәнеү әйберҙәре. Башҡортостан медицина институты территорияһынан табылған.



XI—XIII быуаттарҙа, айырыуса монгол яуы осоронда, Ағиҙел йылғаһының һул яҡ яр буйы бик күп төрки ҡәбиләләренең даими күсенеп йөрөү урынына әүерелә. XIV быуатта Дим йылғаһы буйын-

[1] Кузеев Р. Г. Развитие хозяйства башкир в X—XIX вв. (К истории перехода башкир от кочевого скотоводства к земледелию).— Археология и этнография Башкирии, III том, 1968, 265, 266-сы биттәр.

[2] Мажитов Н. А. Происхождение башкир (Историко-археологический анализ).— Археология и этнография Башкирии, IV том. Өфө, 1971, 13—15-се биттәр.

да һәм Ҡариҙел йылғаһының түбәнге ағымында иң күп һанлы башҡорт ырыуы — мендәр килеп урынлаша[1]. Өфөнән 60 километр көньяҡ-көнбайыштараҡ, Шишмә тимер юл станцияһы эргәһендә, урынлашҡан боронғо архитектураның һоҡланғыс ҡомартҡылары — XIV—XV быуаттарға ҡараған Хөсәйенбәк һәм Түрәхан мавзолейҙары — ул осорҙа был тирәлә халыҡтың күп йәшәүен асыҡ күрһәтә.

XV быуатта Алтын урҙа тарҡалғандан һуң, Башҡортостандың төп өлөшө, шул иҫәптән мең ырыуы йәшәгән территория ла, Нуғай урҙаһы власы аҫтында тороп ҡала. Нуғайҙарҙың Өфө тирәһендә булыуҙарын күрһәткән бик күп дәлилдәр — шәжәрәләр, риүәйәттәр, легендалар һ. б. һаҡланған. Мәҫәлән, шундай риүәйәттәрҙең береһен XIX быуаттың икенсе яртыһында тыуған яҡты өйрәнеүсе Р. Г. Игнатьев яҙып алған. Унда Ҡариҙел йылғаһының уң яҡ текә ярында, «Шайтан ҡаласығы» урынында, нуғай хандарының ставкаһы булған, тип әйтелә; «хандар ҡаласыҡта йәшәгән, ә уларҙың ҡул аҫтындағылар хәҙерге Өфөлә, ҡаланың хәҙер иҫке Өфө тип йөрөтөлгән таулы өлөшөндә йәшәгәндәр». Йәнәһе, йәйләү Өфө урынында 10 саҡрымға йәйелеп ятҡан[2].

Күп кенә тарихсылар был риүәйәтте ысынға ала. Әммә нуғай хандары ставкаһының «Шайтан ҡаласығында» булыуын раҫлаусы башҡа дәлилдәрҙең әлегә табылғаны юҡ. Ҡеүәтле хандарҙың резиденцияһы ҡаласыҡтың ҙур булмаған майҙанында урынлаша алдымы, ә хәҙерге Өфө ҡалаһының территорияһы уларҙың йәйләү урыны булдымы икән? Бөтәһенән элек, был риүәйәт, бер яҡтан, нуғай хандары хакимлығының реаллеген, икенсе яҡтан, был ҡаласыҡта боронғо ныҡытма булыуын сағылдыралыр, күрәһең.

## § 2. Башҡортостанда тәүге ҡаланың барлыҡҡа килеүе

XVI быуатта башҡорт ырыуҙары Урал тауының ике яҡ битендәге, Волга, Кама, Тобол һәм Йайыҡ (Урал) йылғалары араһындағы киң территорияны биләгән. Башҡортостандың ҙур өлөшө Нуғай урҙаһына буйһонған. Башҡортостандың Ыҡ, Минзәлә һәм Беүә йылғалары буйындағы көнбайыш райондары — Ҡазан ханлығына, Урал аръяғы Себер ханлығына ҡараған. Күсмә малсылыҡ башҡорттар хужалығының нигеҙен тәшкил иткән. Улар шулай уҡ һунар һәм ҡырағай бал йыйыу менән шөғөлләнгән. Башҡорттарҙың ере ҡәбилә йәки ырыу милке булып иҫәпләнгән. Ләкин иң яҡшы көтөүлектәрҙе,

---

[1] Кузеев Р. Г. Этнический состав, история расселения и происхождения башкирского народа. Автореферат диссертации на соискание ученой степени доктора исторических наук. М., 1971, 42, 43-сө биттәр.

[2] Игнатьев Р. Г. Памятник доисторических древностей Уфимской губернии.— Памятная книжка Уфимской губернии. II киҫәк. Өфө, 1873, 172-се бит.

һунар итеү һәм ҡырағай умарталыҡ төбәктәрен урындағы феодалдар баҫып алған.

Татар хандары, нуғай мырҙалары һәм урындағы байҙар хеҙмәтсән массаларҙы аяуһыҙ иҙгән, уларҙан нигеҙҙә мал һәм кейек йәнлек тиреләре менән бик ҙур яһаҡ түләткән. Яһаҡтан тыш, халыҡ үҙенең хакимдарына һуғышсылар һәм аттар бирергә тейеш булған. Башҡорт феодалдарының үҙ-ара һуғыштары ябай халыҡты айырыуса бөлдөргән. Былар бөтәһе лә хеҙмәтсән башҡорттар елкәһенә ауыр йөк булып төшкән. XVIII быуаттағы күренекле рус ғалимы П. И. Рычков Башҡортостан тарихының ул осоро тураһында түбәндәгесә яҙған: башҡорттар «үҙҙәренең хакимдарынан бөтөнләй таланған һәм бөлгән, йәнлек аулау һәм балыҡ тотоуҙан ҙур мохтажлыҡ менән тамаҡ туйҙыралар» [1]. Рычковтың мәғлүмәттәре башҡорт шәжәрәләре менән раҫлана. Уларҙың береһендә «күп кешеле һәм бай улустар бөтөнләй бушап ҡалды, малдар һәм кешеләр аяуһыҙ һыуыҡтан ҡырылды» тиелә.

Башҡорттар илбаҫарҙарҙың иҙеүенә ҡаршы, үҙҙәренең азатлығы өсөн көрәшкә күп тапҡырҙар күтәрелгән. Ләкин башҡорт иле ваҡ феодалдар биләмәләренә бүлгеләнгән шарттарҙа халыҡтың стихиялы сығыштары ышаныслы уңышҡа килтерә алмаған. 1552 йылда Ҡазан ханлығының ҡыйратылыуы һәм Урта Волга буйының Рус дәүләтенә ҡушылыуы башҡорттарҙы Нуғай урҙаһы һәм Себер хандары хакимлығынан азат итеү өсөн шарттар тыуҙырған. Беренселәр булып элек Ҡазан хандарына буйһонған көнбайыштағы башҡорт ырыуҙары, ә 1555—1556 йылдарҙа нуғай мырҙаларына буйһонған башҡорттар рус подданныйлығы ҡабул иткән. Һуңынаныраҡ Урал аръяғындағы башҡорттар ҙа Рус дәүләте составына ингән. Иван Грозный батша үҙенең яңы подданныйҙарына махсус грамоталар биргән, уларҙа башҡорттарҙың үҙ ерҙәренә вотчина хоҡуғы танылған, уларҙың именлеге һәм экономик льготалары гарантияланған. Ер «алған» өсөн башҡорттар яһаҡ (башта кейек йәнлек тиреләре һәм бал менән, һуңынан — аҡсалата) түләргә тейеш булған.

Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуы ғәйәт ҙур прогрессив әһәмиәткә эйә булған. «Россия,— тип яҙған Ф. Энгельс К. Марксҡа хатында,— Көнсығышҡа ҡарата ысындан да прогрессив роль уйнай... Россияның хакимлығы Ҡара һәм Каспий диңгеҙҙәре һәм Урта Азия өсөн, башҡорттар һәм татарҙар өсөн... цивилизаторлыҡ роле уйнай»[2]. Был тарихи акт татар хандарының һәм нуғай мырҙаларының башбаштаҡлығына сик ҡуйған, ваҡ феодаллыҡтарға бүленеүҙе һәм өҙлөкһөҙ дауам иткән һуғыштарҙы бөтөргән, башҡорт ерҙәренең берләшеүенә килтергән. Рус дәүләте составына инеү башҡорт халҡын

---

[1] Рычков П. И. Топография Оренбургской губернии. Ырымбур, 1887, 58-се бит.

[2] Маркс К. һәм Энгельс Ф. Әҫәрҙәр, 2-се баҫма. 27-се том, 241-се бит.

бөйөк рус халҡы менән яҡынайыуға алып бара, был яҡтың экономикаһын һәм культураһын үҫтереүҙе тиҙләтә.

Шуның менән бергә Башҡортостандың Россияға ҡушылыуы царизм үткәргән милли иҙеү политикаһы менән дә бәйләнгән. Был бик бай төбәк Рус феодаль-крепостниклыҡ дәүләтенең хакимлыҡ итеүсе юғары ҡатламының йыртҡыстарса иҙеү объектына әүерелә.

Башҡортостанға идара итеү Ҡазан ханлығы Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң ойошторолған Ҡазан һарайы Приказында туплана. Административ яҡтан Башҡортостан территорияһы дүрт юлға (өлкәгә): Ҡазан, Себер, Нуғай һәм Уса юлдарына бүленгән Өфө өйәҙен тәшкил итә. Юлдар башҡорт иленең элекке политик бүленеше тураһында һөйләй һәм Ҡазан, Себер ханлыҡтарының, шулай уҡ Нуғай урҙаһының элекке биләмәләренә яҡынса тап килә. Уса юлына килгәндә, ул Ҡазан һәм Себер юлдары араһындағы тар ғына араны алып тора. Юлдар — волостарға, улары үҙ сиратында ырыуҙарға (аймаҡтарға йәки түбәләргә) бүленгән. Өйәҙ халҡы Ҡазан наместниктары һәм воеводалар властына туранан-тура буйһона.

Ләкин өйәҙҙең Ҡазандан алыҫта булыуы байтаҡ ҡыйынлыҡтар һәм уңайһыҙлыҡтар тыуҙыра. Нигеҙҙә, ҙур өлкәгә идара итеү һәм уны күршеләге күсмә халыҡтарҙың һөжүменән һаҡлау ҡыйынлаша. Даими хәрби гарнизондар торған ҡалаларҙың булмауы Себер ханы Күсемгә һәм нуғай мырҙаларына Башҡортостанға йыш ҡына һөжүм итеү өсөн киң мөмкинлектәр аса. Улар һаман башҡорттарға хаким булыуға дәғүә итәләр, уларҙан яһаҡ таптыралар, малдарын ҡыуып, кешеләрен әсир итеп алып китәләр. Һуңынаныраҡ башҡорт ерҙәре ҡалмыҡ тайшаларының ҡоротҡос барымталары объектына әүерелә.

Урындағы феодалдарҙың бер өлөшөнөң Ҡырым, Нуғай һәм Себер хандарының йоғонтоһо аҫтында булыуы һәм рустарға ҡаршы интригаларҙа ҡатнашыуы батша хөкүмәтенең борсолоуын тыуҙыра. XVI быуаттың һуңғы сирегендә Рус дәүләтенең Себер ханлығына ҡаршы көрәше активлаша, ул 1598 йылда Күсемдең ҡыйратылыуы һәм Себерҙең Россияға ҡушылыуы менән тамамлана. Быны менән бәйләнештә территорияһы аша Ҡазан — Себер юлы — дәүләт өсөн бик мөһим юлдарҙың береһе — үткән Башҡортостан батша Иван IV һәм уның хөкүмәтенең тышҡы политик пландарында һаман ҙурыраҡ әһәмиәт ҡаҙана.

Яңы ҡушылған Себерҙә үҙ властын нығытыу, уға идара итеүҙе ойоштороу, уны ҡаҙаҡ далаларына һәм Себергә артабан үтеп инеү өсөн плацдарм итеп әүерелдереү өсөн батша хөкүмәтенә терәк пункты кәрәк була. Үҙ сираттарында башҡорттар дала халыҡтарының йыш ҡабатланып торған һөжүмдәренән йонсой һәм Мәскәү хөкүмәтенең даими ҡоралды ярҙамына мохтаж була. Бындай ярҙамды уларға тик крепость-ҡала гарнизоны ғына күрһәтә ала. Башҡорттарға ҡала яһаҡ түләү урыны булараҡ та кәрәк була, сөнки улар яһаҡты һаман алыҫтағы Ҡазанға ташырға мәжбүр була.

Ғына ни өсөн башҡорттар 1573 йылда үҙ ерҙәрендә ҡала төҙөү тураһындағы үтенес менән Иван Грозныйға мөрәжәғәт итәләр. Беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланмаған документтарға таянып, П. И. Рычков был ваҡиға тураһында түбәндәгеләрҙе яҙған: «Ышаныслы документтарҙан күренеүенсә, башҡорттар был ҡаланы төҙөү тураһындағы үтенестәрен 7081 йылда (йәғни Христос тыуғандан һуң 1573 йылда) тик бер үҙҙәре түләргә тейешле яһаҡты бында, үҙ торлаҡтарындағы кеүек түләү уңайлы булғанға ғына түгел, ә дошмандарынан бында ҡасыу һәм һаҡланыу өсөн дә биргәндәр» [1].

П. И. Рычков килтергән документ башҡорттарҙың берҙән-бер генә үтенесе булмаған, сөнки тарихсылар ҡарамағындағы материалдар башҡорттарҙың элегерәк тә шундай уҡ үтенестәр менән мөрәжәғәт иткәнлектәрен күрһәтә. Мәҫәлән, Өфө дворяндары Артемьевтарҙың нәҫел яҙмаһында уларҙың нәҫел башлығы Иван Васильевичты Иван Грозный 1569 йылдан һуң Ҡазандан «башҡорттарҙың үтенесе буйынса Өфө ҡалаһының урынын билдәләү һәм уны төҙөү өсөн» [2] ебәргән, тип әйтелә. Был мәғлүмәттәр башҡорт шәжәрәләрендәге һүҙҙәр менән дә раҫлана. Мәҫәлән, Юрматы ырыуының шәжәрәһендә түбәндәгесә яҙылған: «Яһаҡты Ҡазан ҡалаһына ташыу ҡыйын була, сөнки ул алыҫта: (башҡорттар) бөйөк батшанан үҙ ерҙәрендә Өфө ҡалаһын төҙөүҙе һорайҙар». Көньяҡ-көнсығыш ырыуҙарының шәжәрәһендә, башҡорттарҙың үҙ иректәре менән рус подданныйлығын ҡабул итеүе Себер татарҙарын һәм башҡа күсмә халыҡтарҙы уларға ҡаршы ҡуйҙы, һәм шуға күрә «башҡорттар батшанан һөжүмдәрҙе кире ҡағыу өсөн... һәм яһаҡ индереү уңайлы булһын өсөн, үҙ ерҙәрендә ҡала төҙөргә рөхсәт бирелеүен һорай башлайҙар» [3].

Ғүмеренең күп йылдарын Башҡортостан тарихын өйрәнеүгә биргән профессор М. В. Лоссиевский 1883 йылда «Старинные ханства» тигән хроника баҫылып сығыу айҡанлы былай тип яҙған: «Был хрониканың, ҡайһы бер фекерҙәргә ҡапма-ҡаршы булараҡ, башҡорттарҙың подданныйлығы ирекле булыуын һәм тап Өфө ҡалаһының уларҙың уҡ һорауы буйынса нуғайҙарҙың һөжүменән һаҡланыу өсөн төҙөлөүен, ...һәм быларҙың бөтәһенең дә тотош халыҡтың йыйылышында, дөйөм йыйында хәл ителеүен туранан-тура күрһәтеүе бик һәйбәт» [4].

1574 йылда рус уҡсылары отряды Ағиҙелдең бейек уң яҡ ярында, Ҡариҙел тамағынан алыҫ булмаған урында, бәләкәй генә нығытыл-

---

[1] Рычков П. И. Топография Оренбургской губернии, 371, 372-се биттәр.
[2] ЦГИА СССР, ф. 1343, оп. 16, д. 2789, л. 198.
[3] Усманов А. Н. Присоединение Башкирии к Русскому государству. Өфө, 1960, 155-се бит.
[4] Лоссиевский М. В. Былое Башкирии и башкир по преданиям, сказаниям и хроникам. (Историко-этнографический очерк.) — Справочная книжка Уфимской губернии. Өфө, 1883, 384-се бит.

ған пункт төҙөй [1]. Уны төҙөү өсөн урын бик уңышлы һайлап алына. Төньяҡтан көньяҡҡа аҡҡан Сутолока йылғаһы ҡаласыҡты көнсығыштан һаҡлай, көньяҡ-көнбайыштан текә тау битләүе була, ә Ағиҙел йылғаһы далалағы күсмә халыҡтар өсөн үтә алмаçлыҡ тип әйтерлек кәртә була; төньяҡ-көнсығыштан ҡаласыҡ махсус тупраҡ вал менән ҡамап алына, уның ҡалдыҡтары XIX быуат аҙағына тиклем һаҡлана. Ҡаласыҡтың һаҡланыу өсөн ғәҙәттән тыш уңайлы урынлашҡан булыуы һуңынан күршеләге күсмә ҡәбиләләрҙең бөтә һөжүмдәрен уңышлы кире ҡағырға булышлыҡ итә.

Уҡсылар тау башында төҙөгән ҡаласыҡ, Р. Г. Игнатьевтың фекеренсә, башта шул тау исеме менән Тора-тау ҡаласығы тип, ә ул имән бүрәнәләрҙән стена менән уратып алынғас, урындағы халыҡ һәм ҡаҙаҡтар уны Имәнҡала [2] тип йөрөтә башлай. Бер үк ваҡытта ҡаласыҡ Өфө тип тә йөрөтөлә. Шул уҡ быуатта бында барлыҡҡа килгән ҡалаға Өфө исеме бирелә. «Өфө» һүҙенең нисек барлыҡҡа килеүе ошо көнгә тиклем асыҡланмаған көйө ҡала килә. Төрки телдәренең күренекле белгесе Н. К. Дмитриевтың фекеренсә, Өфө — «Уфа» һүҙе боронғо төрки телендәге «уба» һүҙенән алынған һәм «ҡалҡыулыҡ», «ҡурған», «таулы урын» тигәнде аңлата [3]. В. И. Филоненконың ҡала исеменең боронғо төрки һүҙе «өфәк»тән («бәләкәй», «ҙур булмаған») килеп сығыуы тураһындағы гипотезаһы ла иғтибарға лайыҡ [4]. Һуңғы йылдарҙа шулай уҡ ҡала исеме башҡорт ырыуы «өпәйҙән» алынған тигән фекер ҙә әйтелде [5].

Өфөгә нигеҙ һалыныуы менән бәйләнештә ҡалалағы сиркәүҙәрҙең тарихына ҡағылған сығанаҡтар ҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Р. Г. Игнатьев Өфө, Ырымбур һәм Вятка архивтарында 1574—1586 йылдарҙа Өфө территорияһында православный сиркәү булыуы тураһында материалдар тапҡан [6]. Аҙаҡ килеп, Өфөләге Троицк сиркәүенең XIX быуаттың 70-се йылдарында дьякон П. Сухарев төҙөгән йылъяҙмаһында элекке, беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланмаған, документтар нигеҙендә 1579 йылда «Смоленск алла әсәһе хөрмәтенә таш сиркәү төҙөлгән[7], тип билдәләнә.

XVI быуаттың 70-се йылдарында бында сиркәү, етмәһә, таш сиркәү булыуы ул саҡта сиркәү приходын тәшкил итерлек ҙур ғына ҡаласыҡ булыуы тураһында һөйләй. Хәҙерге Өфө урынында

---

[1] ЦГВИА СССР, ф. ВУА, д. 18 895, л. 12, 50; д. 18 896, л. 2; д. 22 723.

[2] Игнатьев Р. Г. О древних памятниках в Уфимском уезде. — Сборник статистических, исторических и археологических сведений по бывшей Оренбургской и нынешней Уфимской губерниям, собранных и разобранных в течение 1866 и 67 гг. Өфө, 1868, 29-сы бит.

[3] Гарипов. Т. М. Изучение башкирского языка в дореволюционный период. — Вопросы башкирской филологии. М., 1959, 35-се бит.

[4] Никонов В. А. Краткий топонимический словарь. М., 1966, 441-се бит.

[5] «Совет Башҡортостаны», 1967, 29 ғинуар.

[6] «Уфимские губернские ведомости», 1876, № 16.

[7] Государственный архив Оренбургской области (артабан ҡыҫҡ. — ГАОО), ф. 94, оп. 1, д. 71, л. 28.

уңдай ҡаласыҡтың булыуы һәм унда хәрби хеҙмәттәге рус кешеләренең йәшәүе урта быуаттарҙағы Рус дәүләтендә төҙөлгән, яңы ерҙәрҙе биләүҙе һәм үҙләштереүҙе тәьмин иткән ҡағиҙә менән дә раҫлана. Ул ҡағиҙә бына ниндәй булған: «Яһаҡ түләүселәрҙең ҡышлағы булған урында — тәре йәки һуңынан часовня, крепость төҙөлгән урында — пушка, ҡаласыҡ булған урында — воевода идаралығы, утлы ҡорал һәм монастырь» [1] булырға тейеш.

1574 йылда Өфө ярымутрауында нигеҙ һалынған һәм нығытылған ҡаласыҡ йылдам үҫә; ул батша хөкүмәтенең Башҡортостандағы терәк пункты функцияһын торған һайын уңышлыраҡ үтәй, урындағы халыҡ өсөн нуғайҙарҙың һәм Себерҙәге күсмә ҡәбиләләрҙең бөтә нәмәне юҡҡа сығарыусы һөжүмдәренән ышаныслы һаҡ булып тора. Илдең иң уртаһында, дүрт юл тоташҡан ерҙә уңайлы географик урынлашыуы ла уның күтәрелеүенә булышлыҡ итә. Бына шуға күрә быға тиклем билдәле булмаған Өфө 1586 йылда ҡала статуты ала һәм шул ваҡыттан батша хөкүмәтенең рәсми документтарында, бөтәһенән элек, күпселегендә ҡала воеводалары һәр йыл һайын теркәлеп барған разряд кенәгәләрендә телгә алына башлай. XVI быуат аҙағына разряд кенәгәләрендә айырым райондарҙағы ҡалаларҙың исемлеге билдәләнә. Унда башҡа ҡалалар иҫәбендә 7095 йылдың, йәғни 1586 йылдың, декабрендә «яңы ҡала Өфө» тәүге тапҡыр телгә алына. (Артабан Өфө 1590, 1592, 1593, 1595—1597 йылдарҙа һ. б. яҙылған) [2].

Өфө Башҡортостандың административ үҙәгенә әүерелә. Илгә идара итеү Ҡазан наместнигына буйһонған Өфө воеводаһына тапшырыла. Бер үк ваҡытта Өфө башҡорт халҡынан ғына түгел, ә күрше йәшәгән Бөйөк Пермь һәм Көнбайыш Себер халыҡтарынан да яһаҡ йыйыу үҙәге булып тора.

Өфөлә яңы нығытмалар төҙөлөүе, хәрби хеҙмәттәге кешеләр һанының артыуы, гарнизонды өр-яңы ҡоралдар, айырыуса дала кешеләренең ҡотон алған пушкалар һәм саҡма мылтыҡтар менән ҡоралландырыу күсмә халыҡтарҙы башҡорт ерҙәренә һөжүмдәрен туҡтатырға мәжбүр итә. Шуға күрә Рус дәүләтенең асыҡ дошманы, Ҙур Нуғай урҙаһы кенәзе Урус (1578—1590) һәм уның мырҙаларының көслө протестары Өфөнөң ҡала итеп үҙгәртелеүенең ҡотолғоһоҙ һөҙөмтәһе була. Улар Волгала Һамар ҡалаһын төҙөүгә лә ҡаршы төшә. Әстрхан воеводаһы К. Ф. Лобанов-Ростовский 1586 йылдың сентябрендә батша Федор Ивановичҡа был хаҡта: «государь, Урус кенәз... Өфөлә һәм Һамарҙа һинең батшалыҡ ҡалалары киләсәктә булмаясаҡ, тип яҙа» [3],— тип хәбәр иткән.

---

[1] Доброклонский А. Руководство по истории русской церкви, III сығарылыш. М., 1889, 5-се бит.

2. Разрядная книга 1475—1598 гг. М., 1966, 390, 436, 486, 494, 504, 513-сө биттәр.

[3] Карамзин Н. М. История государства Российского, X том, СПб., 1982, иҫкәрмәләр, 9-сы бит.

Нуғай феодалдары менән конфликтты яйға һалыу өсөн, йәнәһе, был ҡалалар нуғайҙарҙың үҙ мәнфәғәттәрендә, уларҙың улустарын ҡаҙаҡтарҙың һөжүменән һаҡлау өсөн төҙөлгән, тигән версия уйлап табыла. Мәскәүҙән Урус кенәзгә һәм уның мырҙаларына батша грамотаһы менән илселәр ебәрелә. Шулай ҙа нуғайҙар үҙ талаптарын ҡуйыуҙы дауам итәләр. 1586 йылдың 2 ноябрендә Урус кенәз үҙенең протесын ҡабатлай, Өфө ҡалаһын талау менән янай [1].

Нуғайҙар менән артабан һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн, күптән түгел булып үткән һарай перевороты һөҙөмтәһендә Ҡырымдан ҡыуылған батша улы Морат-Гирәй кандидатураһы һайлап алына. Ул Мәскәүгә килә, уны батша ҡабул итә, ә һуңынан ул Әстрханға оҙатыла. Уның алдына Ҙур Нуғай урҙаһы феодалдарын рус батшаһына буйһондороу бурысы ҡуйыла [2]. 1586 йылдың 5 ноябрендә Урус кенәздең илселәре Морат-Гирәйгә төшкө ашҡа саҡырыла. Мәжлес барышында Морат-Гирәй рус батшаһының уға, йәнәһе, Волга, Яйыҡ, Дон һәм Терек йылғалары өҫтөнән власть биреүе тураһында һөйләй; шунан һуң, ҡалалар тураһындағы мәсьәләгә күсеп, улар «минең батшаға яҙған үтенесем буйынса төҙөлдө», тип белдерә. Морат-Гирәй илселәрҙе ҡалалар нуғайҙар мәнфәғәтендә төҙөлгән, тип ышандырырға тырыша. Йомғаҡлауҙа ул: «батша киләсәктә лә ҡалаларҙы... ҡайҙа кәрәк тапһа, шунда төҙөйәсәк» [3], тип билдәләй.

Урус кенәздең илселәре Морат-Гирәй килтергән дәлилдәр менән ризалашалар, батша ебәргән бүләктәрҙе алалар һәм Урҙаға ҡайтып китәләр. Юлға сығыр алдынан уларға «батшалыҡ сиктәренә үҙ һуғышсыларын ебәрмәҫкә һәм батша илселәрен хурламаҫҡа»[4] тип иң киҫкен формала күрһәтелә. Шул уҡ йылда Морат-Гирәй үҙ алдына ҡуйылған маҡсатҡа өлгәшә: Урус кенәз Мәскәү власына буйһонорға, уға тоғролоҡта ант итергә һәм заложниктар бирергә мәжбүр була. Шуның менән нуғайҙарҙың, атап әйткәндә, Өфө ҡалаһын төҙөү арҡаһында башланған протестары бөтөнләй тынып ҡала.

Ҡаланың тәүге воеводаһы тураһындағы мәсьәлә һуңғы ваҡытҡа тиклем бәхәсле булып килде. П. И. Рычковтан башлап бөтә тикшеренеүселәр ҙә, Өфөгә нигеҙ һалыусы һәм уның тәүге воеводаһы Иван Нагой булған, тип иҫәпләне. Был ҡараш боронғо ваҡиғаларҙы беҙҙең көндәргә тиклем килтереп еткергән, ләкин күп кенә деталдәрҙе һаҡлай алмаған халыҡ легендаһына нигеҙләнгәйне. Шул уҡ ваҡытта разряд кенәгәләрендә Өфөнөң тәүге воеводаһы Михаил Александрович Нагой булыуы күрһәтелә. Уның Өфөлә 1590, 1592, 1593,

---

[1] Отдел рукописей Государственной публичной библиотеки им. М. Е. Салтыкова-Щедрина, ф. 568 (П. П. Пекарский), д. 96, л. 13.

[2] Новосельский А. А. Борьба Московского государства с татарами в первой половине XVII века. М.—Л., 1948, 35-се бит.

[3] Перетяткович Г. Поволжье в XV и XVI веках. (Очерки из истории края и его колонизации). М., 1877, 315, 316-сы биттәр.

[4] Шунда уҡ, 316-сы бит.

1595—1597, 1599—1602, 1604, 1605 йылдарҙа воевода булып тороуы теркәлгән [1], ә 1614 йылдан ул баяр чинында Великий Устюг ҡалаһының воеводаһы булған һәм 1618 йылда шунда уҡ үлгән. Иван Григорьевич Нагойға килгәндә, ул тарихи сығанаҡтарҙа 1577 йылдан билдәле; 1586 йылда ул Кузьмодемьянский острогында, 1587 йылда «Санчюр күлендәге яңы Батша ҡалаһында» [2] «торған», 1589 йылдан И. Г. Нагой Себерҙә почетлы һөргөндә булған [3].

Ҡаланың тәүге төҙөүселәре тураһындағы мәсьәлә лә ҙур бәхәстәр тыуҙырып килгән. Әҙәбиәттә улар Мәскәүҙән килгән хәрби хеҙмәт кешеләре булғандар тигән фекер киң тарала. Ләкин был фекер менән тулыһынса килешеп булмай, сөнки ҡаланың тәүге төҙөүселәре араһында, Мәскәү кешеләренән тыш, бик күп яңы суҡындырылғандар (мәҫәлән, Вавиловтар, Сокуровтар һ. б.), сит илдәрҙән килгән кешеләр (Каловскийҙар, Киржацкийҙар), Полоцк шляхтаһы вәкилдәре лә (Бурцевтар, Курчеевтар) булған. Нисек кенә булмаһын, XVI быуат аҙағында Өфө дворяндары араһында Мәскәүҙән килгән ике генә кеше иҫәпләнгән, ҡалғандары башҡа рус ҡалаларынан килгән кешеләр булған [4]. Улар, күрәһең, шул осорҙа Көнсығышта рус дәүләтенең терәге булып торған һәм Башҡортостанға яҡын урынлашҡан Ҡазандан килгәндәрҙер.

Ҡаланы тоҙөүҙә, хәрби хеҙмәт кешеләренән тыш, урындағы төп халыҡ вәкилдәре лә актив ҡатнашҡан. Мәҫәлән, Себер юлының Оло-Ҡатай һәм Салзауыт волосы башҡорттары Әлиғула Күҙев, Акимнаметка Кирданов, Анчуков һәм уларҙың иптәштәренең үтенесендә «...уларҙың олатайҙары һәм атайҙарының хеҙмәттәре тураһында, уларҙың олатаһы Шөгөр Дәүләттең Өфө ҡалаһын төҙөүе... шуның өсөн уға, Шөгөргә, кенәз исеме биреләүе» [5] тураһында әйтелә. Башҡорттар ҡаланы төҙөүҙә туранан-тура ҡатнашыу ғына түгел, ҙур материаль ярҙам да күрһәткәндәр. Шәжәрәләрҙең бирелеүендә Өфө «башҡорттарҙың үҙҙәренең аҡсаһына... төҙөлгән» [6] тип билдәләнә. Аҙаҡ килеп, ҡала төҙөлөшөндә мишәрҙәр ҙә ҡатнашҡан» [7].

Өфөләге даими хеҙмәт халҡының XVI быуат аҙағына барлыҡҡа килгән ҡатлам ҡоролошо Россия сигендәге башҡа крепость-ҡалалар-

---

[1] Разрядная книга 1475—1598 гг. 436, 486, 494, 504, 513-сө биттәр; Разрядные книги 1598—1638 гг. М., 1974, 86, 98, 116, 132, 151, 175-се биттәр; Разрядная книга 1559—1605 гг. М., 1974, 341-се бит.

[2] Разрядная книга 1475—1598 гг., 378, 390-сы биттәр.

[3] Шунда уҡ, 487, 505, 514-се биттәр; Русский биографический словарь. СПб., 1914, 15-се бит.

[4] ЦГИА СССР, ф. 1343, оп. 23, д. 5460, л. 7; оп. 17, д. 6854, л. 2.

[5] Пермская летопись, бишенсе осор, икенсе киҫәк, 1695—1701 йылдар. Пермь, 1887, 45-се бит.

[6] Соколов Д. Н. Опыт разбора одной башкирской летописи. — Труды Оренбургской ученой архивной комиссии, IV сығарылыш. Ырымбур, 1898. 48-се бит.

[7] Государственный архив Пермской области (артабан ҡыҫҡ. ГАПО), ф. 316, оп. 1, д. 78, л. 26.

ҙағы кеүек булған. Шул уҡ ваҡытта уның хәрби хеҙмәт кешеләрен комплектлау сығанаҡтары менән билдәләнгән ҡайһы бер үҙенсәлектәре лә бар. Ҡала халҡының күп өлөшө башҡа ҡалаларҙан күсерелгән рустарҙан торған; улар араһында Ҡазан өйәҙенән күсерелгән хәрби хеҙмәттәге татарҙар ҙа, төрлө милләт вәкилдәренән торған яңы суҡындырылған кешеләр ҙә булған.

Ҡала кешеләренең юғары ҡатламы баяр балаларынан торған. Улар 6 кеше булған. Артабан хәрби хеҙмәттәге яңы суҡындырылған кешеләр — 5 һәм татарҙар — 5 кеше, ҡапҡасылар — ҡала ҡапҡаларын һаҡлаусы хәрби хеҙмәт кешеләре — 2, проводниктар — 2 кеше, тупсылар — 3 кеше, толмач (тәржемәсе), ҡарауылсы, тимерсе. Халыҡтың иң ҙур төркөмө — уҡсылар — 150-нән ашыу кеше булған. Шулай итеп, XVI быуат аҙағында Өфө ҡалаһы халҡының һаны артыҡ ҙур булмаған.

90-сы йылдарҙың башына тиклем Өфө гарнизоны аҙыҡ-түлек менән ҡаҙнанан тәьмин ителгән, йәғни уларға икмәк жалованиеһы бирелгән. Ләкин дәүләттең үҙәк райондарынан иген килтереү ҙур ғына ҡыйынлыҡтар тыуҙырғанға, Өфө администрацияһы тәүге осорҙа уҡ үҙенең иген запасын булдырыу тураһында хәстәрлек күрә башлаған. Бының өсөн ҡаланың тирә-яғында «батша», йәки дисәтинә, сәсеүлектәре эшкәртелгән, уларҙан алынған уңыш хәрби хеҙмәттәге кешеләрҙе тәьмин итеүгә тотонолған. Ҡала тарихы буйынса иң боронғо сығанаҡ — «Отводная книга по Уфе» [1] ҡаҙна сәсеүлегенең айырым участкаларының ҡайҙа урынлашыуын күрһәтә. Мәҫәлән, Сутолока йылғаһы аръяғында «яҡындағы батша сәсеүлегенең артҡы ырҙыны» булған.

Тәүге осорҙа «батша» сәсеүлеген хәрби хеҙмәттәге кешеләр үҙҙәре эшкәрткән, был ил сигендә улар атҡарған вазифаларҙың береһе булып торған. Һуңынан Өфө эргәһендәге дисәтинә сәсеүлеген һарай крәҫтиәндәре эшкәртә башлаған, улар өсөн хатта был эштең күләме, дөрөҫөрәге, уның крәҫтиәндәр үҙҙәре өсөн һөргән ергә нисбәте лә билдәләнгән.

Дисәтинә сәсеүлеге игенгә урындағы ихтыяжды тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алмаған, күрәһең, был 1592—1594 йылдарҙа Өфөлә хәрби хеҙмәттә булған кешеләрҙең бөтә разрядтарына ла поместье наделдары — ер участкалары бүлеп биреүгә килтергән. Һәр бер яңы «сәсеүлек асыу» осрағындағы кеүек, бында ла ер менән бергә ҡаҙнанан орлоҡ ссудаһы бирелгән. Мәҫәлән, баяр балалары 5-әр сирек * (четь, четверть) арыш һәм 5-әр сирек һоло, яңы суҡындырылған хәрби хеҙмәт кешеләре, тәржемәсе, ҡарауылсы һәм тимерсе — 2-шәр

---

[1] «Текст отводной книги по Уфе» (1591/92—1629 гг.).— Из истории феодализма и капитализма в Башкирии. Өфө, 1971, 259—351-се биттәр.

* Четь, четверть — боронғо рустарҙа иген һәм майҙан үлсәү берәмеге. Иген үлсәгәндә бер сирек — 4 ботҡа, майҙан үлсәгәндә ярты дисәтинәгә тигеҙ булған.

сирек аршын, һоло һәм арпа, уҡсылар —3-әр әсмүхә * (осьмина) арыш һәм 1-әр сирек һоло алған.

Ер дачалары хосуси йәки община менән файҙаланыу өсөн бүленгән. Хәрби хеҙмәттәге кешеләрҙең юғары ҡатламына ғына ер хосуси милек итеп бирелгән. Хеҙмәт кешеләренең төп массаһы, шул иҫәптән уҡсылар ҙа, ерҙе община менән файҙаланыуға алған, шул уҡ ваҡытта уларҙың һәр береһенә бирелгән ер участкаһы бик бәләкәй булған [1].

Тәүге поместьелар ҡала тирәһен киң булмаған түңәрәк менән уратып алһа («ҡала эргәһенән ситтә Турово яланында», «Ҡариҙел йылғаһы буйындағы Ҙур яланда», «Татар биҫтәһе артындағы ҡаласыҡта»), XVII быуат башында инде хәрби хеҙмәттәге кешеләрҙең билагән ерҙәре әкренләп киңәйә бара (Юрмаш, Шаҡша, Бөрө һ. б. йылғалар буйында поместьелар барлыҡҡа килә). Был поместьеларға күсерелгән рус крәҫтиәндәре, быуаттар буйы кеше ҡулы теймәгән уңдырышлы сиҙәм ерҙәрҙе һөрөп, игенселек менән шөғөлләнгән. Уларҙың йоғонтоһонда XVI быуат аҙағында Өфө тирәһендә йәшәгән башҡорттар ҙа игенселек менән шөғөлләнә башлай. Мәҫәлән, «Өфө буйынса ер бүлеү кенәгәһендә» «Мең волосы башҡорто Меңғатай иптәштәре менән һөрөп килгән» [2] баҫыуҙар тураһында яҙылған.

Өфөләге хәрби хеҙмәт кешеләре һәм илдең үҙәк райондарынан күсеп килгән крәҫтиәндәр игенселектән тыш малсылыҡ менән дә шөғөлләнгән. Һунар һәм балыҡ тотоу хужалыҡтың был төп тармаҡтарына өҫтәмә шөғөл булған. Ләкин хәрби хеҙмәт Өфөләге хеҙмәт кешеләренең төп вазифаһы булып торған.

Өфөгә нигеҙ һалыу Башҡортостан тарихында күренекле роль уйнаған. Өфөнөң төҙөлөүе башҡа ҡаласыҡтар — Бөрө, Минзәлә, Табын ҡаласыҡтарының барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ иткән; рустарҙың яңы ҡушылған төбәктәге иркен ерҙәрҙе планлы үҙләштереүе башлана. Рус халҡы башҡорттарҙың әкренләп ултыраҡ тормошҡа һәм игенселек хужалығына күсеүенә ҙур йоғонто яһаған. Шуның менән ул Башҡортостандың етештереүсе көстәренең үҫешенә, уның ғәйәт ҙур тәбиғи байлыҡтарын тулыраҡ һәм маҡсатҡа ярашлыраҡ файҙаланыуға булышлыҡ иткән.

Өфө Ҡазан менән Себерҙе бәйләп тороусы мөһим пункт булып әүерелә. Өфө кешеләре Себер татарҙарына ҡаршы походтарҙа, Себерҙә тәүге рус ҡалаларын төҙөүҙә ҡатнашҡан. Мәҫәлән, 1594 йылда Күсем ханға ҡаршы көрәшеү һәм Тара ҡалаһын төҙөү өсөн Мәскәүҙән 145 уҡсы, 300 башҡорт, 100 Ҡазан һәм Свияга татарынан торған отряд ебәрелә [3]. 1600 йылда ошо уҡ маҡсат менән Себергә Өфө

---

* Осьмина — иген һәм майҙан үлсәү берәмеге, ярты сиреккә торош итә.

[1] Демидова Н. Ф. Древнейший источник по истории города Уфы.— Из истории феодализма и капитализма в Башкирии, 255—257-се биттәр.

[2] Текст «Отводной книги по Уфе», 271-се бит.

[3] Миллер Г. Ф. История Сибири, I том. М.—Л., 1937, 288-се бит.

кешеһе, баяр улы Г. Артемьев «иптәштәре менән»[1] ебәрелә. Өфө әкренләп сауҙа өлкәһендә лә Европа һәм Себер ҡалалары араһында ярҙамсы булып әүерелә башлай. Себер сауҙагәрҙәре үҙҙәренең тауарҙары менән Өфө, Ҡазан һәм башҡа ҡалаларға йөрөгәндәр. XVI быуаттың 90-сы йылдарында уҡ Төмәндең хәрби хеҙмәткәрҙәре һәм сауҙа итеүсе татарҙары «һәр төрлө тауарҙар» менән Өфөгә йыш килгән, башҡорттар ҙа «тауарҙар һәм аттар менән» унда барған. Төмәндән Өфөгә Бохара сауҙагәрҙәре лә килгән[2].

Шулай итеп, Өфөнөң барлыҡҡа килеүе Башҡортостанда Рус дәүләтенең позицияларын нығыта, Көнсығышҡа уның йоғонтоһон көсәйтеүгә булышлыҡ итә, нуғай кенәздәре һәм мырҙаларының башҡорт ерҙәренә дәғүә итеүҙәренә сик ҡуя. Яңы ҡала Рус дәүләтенең көньяҡ һәм көнсығыш сиктәрен обороналауҙы еңеләйтә.

---

[1] Дмитриев А. Пермская старина. Сборник исторических статей и материалов преимущественно о Пермском крае, VII сығарылыш. Пермь, 1897, 28, 29-сы биттәр.

[2] Миллер Г. Ф. История Сибири, II том. М.—Л., 1941, 159—160-сы биттәр.

# *Феодаль Өфө*

## § 1. Территорияһы һәм халҡы. Өфөнөң экономик тормошо

XVII быуатта һәм XVIII быуаттың тәүге ун йыллыҡтарында Өфө Россия нығытмаларының дөйөм һыҙатынан көньяҡ-көнсығышҡа алыҫҡа сығарылған сик буйы крепосы булып ҡала һәм дәүләт сиктәрен күршеләге күсмә халыҡтарҙың һөжүменән һаҡлауҙы ойоштороуҙа терәк пункты булып хеҙмәт итә. Өфөнөң сик буйындағы крепость хәле уның тәүге осорҙағы йөҙөн, шулай уҡ халҡының составын һәм шөғөлөн күп яҡлап билдәләгән.

XVII быуатта Өфө үҙәгендә крепосы һәм уның эргәһендә төҙөлгән посад һәм биҫтәләре менән бергә типик урта быуат ҡалаһы булған. Уның төп өлөшөн XVI быуатта уҡ нигеҙ һалынған «ҡала» йәки «кремль» тәшкил иткән. Ул Сутолока (йәки Сукалака) йылғаһы Ағиҙелгә ҡойған урында ике яҡтан тәрән соҡор менән сикләнгән бейек ҡалҡыулыҡтың иң көньяҡ осон биләгән. Ихтимал, крепосты төҙөгән саҡта ҡалҡыулыҡ битләүҙәрен субайҙар менән нығытып тупраҡ та һалғандарҙыр, сөнки бындай типтағы крепостар төҙөгәндә был йыш ҡына шулай эшләнгән.

Һуңынаныраҡ эшләнгән картографик һәм иконографик мәғлүмәттәрҙе сағыштырып ҡарап, кремлдең тәүге рәүешен аяҡҡа баҫтырырға мөмкин. Планда ул дөрөҫ булмаған дүртмөйөш рәүешендә. Ҡаласыҡтың дөйөм майҙаны ҙур булмаған — 1,2 гектарҙан артмаған, ә стеналарының дөйөм оҙонлоғо 440 метр булған. Ҡаласыҡ стеналары вертикаль ултыртылған ғәйәт йыуан имән бүрәнәләрҙән ҡоролған. Бынан тыш, нығытмалар иҫәбенә имәндән буралған өс башня ла ингән, уларҙың икеһендә ат-арба менән үтерлек ҡала ҡапҡалары булған. Ҡапҡалы башнялар ҡала стеналары дүртмөйөшөнөң тар яҡтарында бер-береһенә ҡапма-ҡаршы урынлашҡан һәм ике яруслы оҡшаш конструкцияла булған, — һигеҙ мөйөшлө икенсе ярус ҙурыраҡ һигеҙ мөйөшлө беренсе ярус өҫтөнә ҡоролған һәм беренсе ярус өҫ-

төндә барлыҡҡа килгән майҙансыҡ крепость артиллерияһын ҡуйыу өсөн файҙаланылған. Ике башня ла бейек сатыр кеүек түбәләр менән осланған; төньяҡтағыһы — Михайловский, көньяҡтағыһы Никольский башняһы тип аталған. Был исемдәрҙе улар ҡапҡалары өҫтөнә ҡуйылған икона һүрәттәренән алған.

Михайловский башняһы аша тура юл булған. Никольский башняһындағы ҡапҡа аша, дөрөҫөн әйткәндә, атлы арба менән үтеп булмаған, уның аша тик йәйәү һәм һыбай ғына кремлдән посадҡа сығып йөрөгәндәр; ҡапҡанан сыҡҡас та текә тауҙан төшөргә кәрәк булған. Никольский башняһы эсендә юл бөгөлмәле итеп һалынған, ул дошмандарға ҡала эсенә үтеп инеүҙе ҡыйынлаштырған; башня эсенә бәреп ингән дошмандар икенсе яруста урынлашҡан һаҡсыларҙың уҡтары аҫтына эләккән. Башняның тышҡы ҡапҡаһы Сутолока йылғаһына ҡараған, шуға уны Сутолока ҡапҡаһы тип тә йөрөткәндәр.

Өсөнсө башня крепостың төньяҡ-көнсығыш мөйөшөндә урынлашҡан һәм Мөйөштәге башня тип йөрөтөлгән. Ул тәүге ике башнянан тәпәшәгерәк булған һәм квадрат формаһында һалынған. Унда ла һаҡсылар урынлашҡан һәм башня уларға кремлдән төньяҡ-көнсығышҡа ҡарай һуҙылған, үҙенең йүнәлеше буйынса Себер юлы тип йөрөтөлгән юлды даими күҙәтеп торорға мөмкинлек биргән.

Кремлдең үҙәгендә собор сиркәүе урынлашҡан. Соборҙан көньяҡтараҡ — иген келәттәре, дары мөгәрәптәре, төньяҡта воевода йорто, приказ өйө, төрмә, шулай уҡ башҡа ҡаҙна һәм сиркәү ҡаралтылары булған. XVII быуаттың беренсе яртыһында ошонда уҡ бер нисә байҙың торлаҡ йорто ла булған; тыныс осорҙа улар үҙҙәренең ауылдарында йәшәгән, ситтән ҡурҡыныс янағанда, крепосҡа инеп йәшәренгән.

Кремль эргәһендә, Сутолока йылғаһының уң яҡ яры буйында, ҙур булмаған Өфө посадының өйҙәре теҙелеп киткән (хәҙерге Посад урамы). Ҡала эргәһенән үк хәрби хеҙмәттәге кешеләрҙең баҫыуҙары башланып киткән. Ҡала тәңгәлендә, Сутолока йылғаһының һул яҡ ярында, ҡаҙна һәм монастырь ерҙәре урынлашҡан.

XVII быуаттың уртаһында уҡ инде Өфө халҡының күпселеге кремлдән һәм посадтан ситтә йәшәргә мәжбүр булған. Улар ҡала эргәһендәге биҫтәләрҙә йорттар һалып ингән. XVI быуатта уҡ Сутолока йылғаһының үрге ағымында барлыҡҡа килгән Татар биҫтәһенән тыш, Ҡазан юлының ике яғы буйлап кремлдән төньяҡ-көнсығышта — Оло Репная һәм төньяҡ-көнбайышта Кесе Репная (Шалҡанлы) исеме алған уҡсы биҫтәләре төҙөлгән. Был биҫтәләр үҙ исемдәрен XVIII быуаттың икенсе яртыһына тиклем һаҡлаған.

Өфөнөң 1647 йылғы перепись кенәгәһе биҫтәләре менән бергә ҡаланың дәүмәлен күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә, — унда 66 йорт теркәлгән. Ләкин был исемлеккә Өфөләге йорттарҙың бөтәһе лә инмәгән. Перепись кенәгәһендә уҡсыларҙың йорттары иҫәпкә

алынмаған. Был мәғлүмәтте уҡсылар отрядының ҙурлығына ҡарап төҫмөрләргә мөмкин (XVII быуаттың 30-сы йылдарында уҡсылар отрядында 219 кеше иҫәпләнгән)[1]. Һәр йортта ғаиләһе менән 2—3 уҡсы йәшәгән, тип иҫәпләгәндә лә, ҡалала 70-тән алып 110-ға тиклем уҡсылар йорто булып сыға. Шулай итеп, ҡалалағы йорттар һаны 200-гә барып баҫа.

Ҡала үҫкән һайын, элекке кремль нығытмалары һәм биҫтәләрҙе ҡамап алған ябай ғына оборона ҡоролмалары етешмәй башлай. Өҫтәүенә, кремлдең имән ҡоролмалары быуат уртаһына тиклем иҫкерә һәм үҙенең элекке һуғышҡа яраҡлылығын юғалта. 1670 йылда воевода П. Кондратьев ҡаланың ауыр хәле тураһында хәбәр итә: кремлдең ылауҙар үтә торған башняһы (Михайловский башняһы, күрәһең) емерелгән, унда торған пушкалар алынған һәм келәткә һалып ҡуйылған. Был ваҡытта Өфө тирәһендә яңы оборона линияһы үҫеп сыҡҡанға, элекке кремль башняларын шулай ҡоралһыҙландырыу мөмкин булғандыр, моғайын. Мәскәү властары яңы оборона линияһын төҙөү тураһында ҡарарҙы 1664 йылда сығарған[2].

Яңы крепость сағыштырмаса ҙур булғанға, уны төҙөү оҙаҡҡа һуҙыла. Уның стеналары ҡала тирәһендәге биҫтәләрҙе лә үҙ эсенә алырға тейеш була. Яңы крепость «яңы» йәки «ҙур» баструк (острог) исемен ала, кремлде «иҫке» йәки «үрге» ҡала тип, ә ҡайһы берҙә «бәләкәй баструк» тип йөрөтәләр. Крепосты Өфөләге хәрби хеҙмәт кешеләре һәм ҡала тирәһендә йәшәүсе башҡорттар төҙөгән[3]. Уның стеналары имән бағаналарҙан төҙөлгән һәм 2 сажин * бейеклеккә еткән. Бүрәнәләрҙе ҡаланан сама менән 50 саҡрым алыҫлыҡтағы урманда әҙерләгәндәр һәм Ҡариҙел йылғаһы буйлап һал итеп ағыҙғандар. Һуңынан крепосты ремонтлау өсөн дә ағасты шунан алғандар.

Ҡапҡалар алтау булған, һәм улар ҡала урамдарының башында урынлашҡан. XVIII быуаттан беҙҙең көндәргә тиклем ҡапҡаларҙың түбәндәге исемдәре килеп еткән (көнсығыштан көнбайышҡа табан): Успенский ҡапҡаһы (яҡында ғына урынлашҡан монастырь исеменән алынған), Спасский, Себер ҡапҡаһы (ул үҙенең исемен шунан Себергә үткән юлдан алған), Ҡазан (Ҡазанға юлдан), Ильинский һәм Фроловский ҡапҡалары (яҡындағы сиркәү исемдәренән алынған). Ҡазан ҡапҡаһы иҫке ҡаланың Михайловский ҡапҡаһы тәңгәлендә булған. Был ҡапҡа эргәһендә ҡарауыл йорттары булған, унда хәрби хеҙмәт кешеләре йәшәгән.

Ҙур ҡала стеналарының дөйөм оҙонлоғо сама менән 2,4 километр булған һәм 73 гектар майҙанды үҙ эсенә алған. Көнсығышта Серги-

---

[1] Книги разрядные, II том. СПб., 1855, 192-се бит.
[2] Новиков В. А. Сборник материалов для истории Уфимского дворянства. Өфө, 1903, 14, 18, 210-сы биттәр.
[3] ЦГВИА, ф. 349, оп. 1, д. 68, л. 1; ЦГАДА, ф. Сенат, кн. 456, л. 303.
* Сажин — 2 метр 34 сантиметр.

Өфө Кремле XVII—XVIII быуаттарҙа. *(Реконструкция.)*

1. Михайловский башняһы, 2. Никольский башняһы, 3. Мөйөштәге башня. 4 Кремль стенаһы, 5. Воевода йорто, 6. Воевода йортоноң ишек алды. 7. Приказ өйө (канцелярия). 8. Ҡарауыл өйө (гауптвахта). 9. Собор (1679 һәм 1685 йылдарҙағы төкәтмәләренән тыш). 10. Колокольня һәм сәғәт. 11. Дары мөгәрәбе. 12. Пушка келәттәре (артиллерия магазины). 13. Ҡоҙаҡтар урынлашҡан урын (яҡынса). 14. «Ҙур ҡала» стенаһы. 15. Өфө бисҭәләренең бер өлөшө һәм ҡапҡалы Спасский башняһы.



евский тауынан көнбайышта Шөгөр тауына тиклем һуҙылған был территорияла 8 соҡор булған. Сутолока йылғаһы һәм Нуғай инеше (Нуғай соҡоро) буйынса һуҙылған соҡорҙар иң ҙурҙарынан иҫәпләнгән. Сутолока йылғаһының түбәнге ағымында ҡаланың көнсығыш өлөшөн үҙәге менән тоташтырыусы күпер һалынған. Ҡала стеналары Ағиҙелгә барып етмәгән, яр буйында асыҡ урын ҡалдырылған [1].

Кремль элеккесә ҙур Өфөнөң административ һәм дини үҙәге булып ҡалған. Ул торлаҡ йорттарынан тулыһынса бушатылған, унда тик воевода йорто ғына тороп ҡалған. Кремль, посад һәм уҡсылар биҫтәләре бер бөтөн булып берләшкән.

Яңы нығытмалар төҙөгәндә ҡала майҙаны күпкә ҙурайһа ла, халыҡҡа йорт төҙөү өсөн урын етешмәүе һиҙелгән. Торлаҡ төҙөү өсөн яраҡлы ерҙең етешмәүе уны бүлеүҙә ҡаты тәртип индерергә мәжбүр иткән. Был эште урындағы администрация ғәмәлгә ашырған. XVII быуаттың икенсе яртыһында, яңы территорияла төҙөлөш киң ҡолас йәйгән осорҙа, Өфөнөң приказ өйөндә төрлө ихтыяждарға һәм ҡала халҡының төрлө социаль төркөмдәренә ер бүлеү нормалары эшләнә. 60—70-се йылдарҙа йәйәүле уҡсыларға йорт төҙөү өсөн 8×6 сажин, йорт төҙөү һәм йәшелсә баҡсаһы өсөн 16 × 6 сажин ҙурлыҡтағы участкалар бүленгән [2]. Һыбайлы уҡсылар өсөн норма бер аҙ ҙурыраҡ булған. Хәрби хеҙмәттәге кешеләрҙең башҡа төркөмдәре өсөн йорт һәм йәшелсә баҡсаһына бүленгән участкаларҙың ҙурлығы 60-тан 170 квадрат сажинға тиклем тәшкил иткән [3]. Айырым ғаилә йорттарынан тыш коллектив биләмәләр ҙә булған. Мәҫәлән, Кесе Шалҡанлы биҫтәһендә Өфөлә хеҙмәт итеүсе атлы казактарҙың дөйөм йорто булған, уны халыҡ телендә «казактар өйө» тип йөрөткәндәр. Унда кешеләр йәшәгән ике йорт һәм башҡа ҡаралтыларҙан тыш, казактарҙың аттарын аҫрау өсөн аҙбар һәм асыҡ кәртә лә булған.

60—70-се йылдарҙа йорт төҙөү өсөн ер участкалары нигеҙҙә Сутолока йылғаһының һул яҡ яры буйынан бүленгән. Ҡала урамдары сатай-ботай төҙөлгән, быға урындағы рельефтың ҡатмарлы булыуы ла ҙур йоғонто яһаған. Ҡаланың тәүге урамдары кремлгә алып барған юлдар буйлап төҙөлгән. XVII быуатта һәм XVIII быуаттың беренсе яртыһында урамдарҙың исеме булмаған, уларҙы «Сутолока йылғаһына төшкән урам», «Ильинский ҡапҡаһына барған үрге урам» кеүек һәм башҡа шундай аңлатмалар менән атап йөрөткәндәр.

XVII быуат аҙағына торлаҡ йорттары ҡала стенаһы тышында ла төҙөлә башлай, яҡындағы ауылдар территорияһына барып тоташа. 1698 йылда ҡаланың төньяҡ-көнсығыш ситендә, Себер ҡапҡаһының тыш яғында, Өфөгә һөргөнгә ебәрелгән Мәскәү уҡсыларының Мәскәү биҫтәһе барлыҡҡа килә. Ҡаланан көнсығыштараҡ, Усолье

---

[1] ЦГАДА, ф. Коллекция крепостных книг, оп. 1, д. 12 381, л. 10.
[2] ЦГАДА, ф. Уфимская приказная изба, оп. 1, д. 503, л. 3; д. 507, л. 2.
[3] Шунда уҡ, д. 507, л. 2.

2 Заказ 206

тауҙары тирәһендә, XVIII быуатта Золотухин бисҭәһе тип йөрөтөлгән бисҭә булған, ундағы халыҡ нигеҙҙә ауыл хужалығы менән шөғөлләнгән.

Ике быуат сигендә ҡала көнбайышҡа ҡарай ҙа үҫә башлай. XVIII быуат башында Ильинский һәм Фроловский ҡапҡалары тышында торлаҡ йорттарынан тотош кварталдар барлыҡҡа килә, Шөгөр тауында ла йорттар күп төҙөлә. Уны ҡала үҙәге менән тоташтырыу өсөн, Нуғай соҡоро аша шул уҡ исемдә алған күпер төҙөлә. Был осорға Өфөлә инде 650-нән ашыу йорт иҫәпләнә [1].

Ҡала территорияһы сиктәренең киңәйеүе уның характерындағы үҙгәрештәр менән тап килә. Дәүләт сиктәренең көньяҡ-көнсығышҡа алыҫҡа күсеүе һөҙөмтәһендә, XVIII быуат уртаһына Өфө, Башҡортостандың хәрби үҙәге ролен уйнауын дауам итһә лә, үҙенең элекке стратегик әһәмиәтен юғалта.

Был осорға Өфө нығытмалары ташландыҡ хәлгә килә. 1728 йылда Өфө крепосын тикшергән инженер-поручик А. Ратиславский Хәрби коллегияға түбәндәгеләрҙе яҙған: «...хәҙер кремль буйынса һәм ҙур ҡала буйынса бер ниндәй нығытмалар ҙа юҡ» [2]. Оборона ҡоролмаларының тулыһынса иҫкереүенә ҡарамаҫтан, Өфө оҙаҡ ваҡыт буйы рус крепостары исемлегендә иҫәпләнеүен дауам иткән. Ҡала нығытмаларының бөтә системаһын ныҡ үҙгәртеү талап ителгән. Тәүге тапҡыр был мәсьәлә 1724 йылда ҡарала. Петр I, дәүләт крепостары тураһындағы положениены үҙгәрткәндә, шундай күрһәтмә бирә: «ағас ҡалалар һәм ағас стеналар булған һәм әле лә торған, ләкин улар бик туҙған һәм ишелгән урындарҙа (Өфө һәм уға оҡшаштар кеүек), уларҙы емерергә һәм улар урынына тупраҡтан валдар яһарға һәм тышҡы яғынан ағас стеналар ҡорорға, улар араһында канал соҡорға; башнялар булып, шулай уҡ емерелгән урында улар урынына больварктар йәки бастиондар төҙөргә» [3].

Инженерлыҡ идараһы контораһы офицерҙары ҡаланы ентекләп тикшергәндән һуң, 1728 йылда проект әҙерләнә. Уның нигеҙенә ҡаланың элекке урынының яраҡһыҙ булыуы («...кремль эргәһен ҡайтанан фортификациялауға килгәндә, ул урын бәләкәй булғанға, уны бейегерәк тауҙарҙан фортификациялау мөмкин түгел») һәм нығытмаларҙы Өфөнән көнбайышта урынлашҡан тауға күсереү кәрәклеге тураһындағы фекер һалынған була [4]. Яңы урында биш бастион менән тупраҡтан нығытмалар төҙөргә тәҡдим ителә. Яңы проект тормошҡа ашырылмай ҡала. Өфө менән оҙаҡ ҡына хатлашҡандан һуң, Хәрби коллегия оборона ҡоролмаларын ремонтлау һәм бер ни тиклем яңыртыу менән сикләнергә ҡарар итә.

---

[1] ЦГАДА, ф. Сенат, кн. 1/132, л. 119—145; ГИМ, ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 7.

[2] ЦГАДА, ф. Сенат, кн. 456, л. 303.

[3] ЦГВИА, ф. 349, оп. 1, д. 68, л. 3.

[4] Шунда уҡ.

1728 йыл А. Ратиславский төҙөгән Өфө планы. Һулда түбәндәге мөйөштә яңы нығытмалар проекты бирелгән. Ул ғәмәлгә ашырылмай ҡалған.



1736 йылда Өфө крепосының яңы планы төҙөлә. Был план буйынса ҡала тирәләй тупраҡтан 12 бастион төҙөү, тауҙар араһындағы соҡорҙарҙы икешәр ҡат бүрәнә стеналар менән кәртәләү, ул стеналарҙа яҙғы ташҡын һыуҙарын ағыҙыу өсөн ике яҡҡа асылмалы ҡапҡалар эшләү күҙҙә тотола [1]. Ләкин был план да тормошҡа ашырылмай ҡала. Шул арала ҡала нығытмалары әкренләп бөтөнләй эштән сыға, сөнки Хәрби коллегия уларҙы ремонтлауға бүлгән аҡса урындағы власть ҡарамағына килеп етмәй башлай һәм ремонт эштәренең бөтә ауырлығы ҙур булмаған гарнизон өҫтөнә күсерелә.

Оборона ҡоролмаларының ике ҡулсаһы ла XVIII быуат урталарына тиклем һаҡланып килә. Кремль стеналары тик 50-се йылдарҙа ғына юҡҡа сыға. 1759 йылғы янғын кремль өсөн дә, бөтә ҡала өсөн дә һәләкәтле була. Ул Өфөнөң планировкаһын үҙгәртеүҙә ҙур роль уйнай. Янғын 23 майҙа кремлдең Михайловский башняһын йәшен атыуҙан башлана, унан ут бер-береһенә яҡын торған ағас ҡаралтыларҙың бөтәһен дә ялмап ала. Өфө провинцияһы канцелярияһының ҡағыҙҙары араһында был стихиялы афәт ентекләп һүрәтләнгән яҙыу һаҡланған: «Унан (янғындан.— *Авт.*) кремлдә торған Михайловский башняһы, ә унан гоубтвахта бинаһы, ҡарауыл өйө соланы менән һәм воевода йорто, шулай уҡ канцелярия ҡайһы бер указдар, протоколдар, журналдар һәм башҡа делолар менән һәм бер ни тиклем герблы һәм ябай ҡағыҙ, тағы ла собор сиркәүендә бер нисә сиркәү биҙәге һәм колокольняла һуҡмалы сәғәт, бастругы менән төрмә, ике сиркәүе менән ҡыҙҙар монастыры һ. б. янып бөттө» [2]. Афәт кремль менән генә сикләнмәй. Янғын Кесе Шалҡанлы биҫтәһенең яҡындағы урамдарын һәм хатта ҙур ҡала стенаһының бер өлөшөн дә юҡ итә. Барлығы 210 йорт юҡҡа сыға [3].

Янғындан һуң кремль нығытмалары аяҡҡа баҫтырылмай, сөнки уларҙың кәрәге ҡалмай. Элекке кремль территорияһы ҡаланың административ үҙәгенә әүерелә; «ҡурҡыныс хәлдәрҙән», йәғни яңы янғындарҙан, һаҡланыу маҡсатында, уның менән торлаҡ кварталдары араһында йорт-ҡаралтылар төҙөлмәгән асыҡ зона ҡалдырыла.

Дәүләт учреждениелары биналарын төҙөү губерна властары раҫлаған проекттар буйынса ойошҡанлыҡ менән алып барыла. 1760 йылда өс бинанан: провинция канцелярияһы, архив һәм рентерея, йәғни ҡаҙна аҡсаларын һаҡлағыс, шулай уҡ воевода йорто һәм ҡаралтыларынан торған комплексты төҙөү тамамлана. Граждандар төҙөлөшөнән Өфөләге тәүге таш йорт — архив һәм рентерея бинаһы ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Ҙур булмаған был бина ағастан төҙөлгән торлаҡ йорттар өлгөһөндә планлаштырылған; ул солан менән тоташтырылған ике бүлмәнән торған. Уның дөйөм майҙаны 150 квадрат метр,

---

[1] ЦГВИА, ф. 349, оп. 1, д. 68, л. 5.
[2] ЦГАДА, ф. Камер-коллегия, оп. 7, д. 31 334, л. 1.
[3] Игнатьев Р. Г. Хроника достопамятных событий Уфимской губернии. — Памятная книжка Уфимской губернии, II киҫәк, 9-сы бит.

1759 йылдың 23 майындағы Өфө янғыны. *(Реконструкция.)*



стеналарының ҡалынлығы 90 сантиметр булған, 1742 йылғы Сенат указында күрһәтелгәненсә, уны «таш көмбәҙҙәр һәм биктәр, тимер рәшәткәле ишектәр һәм тәҙрәләр» [1] менән һалғандар. Провинция канцелярияһы бинаһы өс үҙ аллы ишеге булған өс солан менән берләштерелгән 5 бүлмәнән торған.

Кремлдең төньяҡ-көнсығыш өлөшөндә баструк, гауптвахта һәм дары мөгәрәбе төҙөлгән.

Ҙур ҡаланың янғындан зыян күргән нығытмалары әкренләп аяҡка баҫтырыла; улар 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышына тиклем һаҡлана. Ҡаланың торлаҡ кварталдары ла яңыртып төҙәлә. Уның урамдары һәм тыҡрыҡтары тулыһынса формалаша. Тап бына XVIII быуаттың осонсо сирегендә уларға, башта тотороҡло булмаһа ла, исемдәр бирелә. Мәҫәлән, ул саҡтағы документтарҙа ниндәй ҙә булһа урам телгә алынғанда, уның исеме лә, ҡайһы тирәлә урынлашыуы ла яҙыла, әйтәйек, «Успенье сиркәүе приходында, Будановский тип йөротөлгән тыҡрыҡта» [2] һ. б. Ҡайһы бер урамдарҙың икешәр исеме була. Шалҡанлы урамдарының (биҫтәләр исеме буйынса) иҫке исемдәре әкренләп улар менән бер ҡатарҙан ҡулланылған

---

[1] ЦГАДА, ф. Камер-коллегия, оп. 7, д. 31 334, л. 17.
[2] ЦГАДА, ф. Крепостные книги местных учреждений, оп. 1, д. 12 359, л. 6.

ял исемдәре менән алмашына: Кесе Шалҡанлы — Оло Ҡазан (хәҙерге Октябрь революцияһы урамы), Оло Шалҡанлы — Себер (хәҙерге Минһажев) урамы тип йөрөтөлә башлай. 50—60-сы йылдарҙа уларҙан тыш: көнбайышта Ильинский (хәҙерге Фрунзе) һәм Фроловский (хәҙерге Туҡай) урамдары; Покров (һуңынан Посад) урамы — Сутолоканың уң яҡ яры буйында; Сутолоканан көнсығышта — Успенский (хәҙерге Сочи), Будановский (хәҙерге Е. Сазонов), Кафтанов (Ағиҙел буйында) урамдары булған. 70-се йылдарҙа Өфөлә бөтәһе 9 урам иҫәпләнгән [1].

XVIII быуаттың икенсе яртыһында Өфөлә яңы биҫтә барлыҡҡа килә. Уға граф Шереметевтарҙың Нижегородский (Нижний Новгород) губернаһы Горбатовский өйәҙендәге вотчиналарынан күсеп килеүселәр нигеҙ һала. 50 крепостной крәҫтиән үҙ хужаларының рөхсәте менән Өфөгә күсеп килә һәм башта Сутолока йылғаһының һул яҡ ярында Усольский (хәҙерге Һаҡмар) һәм Будановский урамдары районында урынлаша. Бында улар күн иләү һәм итекселек һөнәрҙәре менән шөғөлләнә. Һуңынаныраҡ улар үҙҙәренең мастерскойҙарын кремль ҡалҡыулығынан көнбайышҡараҡ, Ағиҙел буйындағы буш ергә, күсергән. Бында барлыҡҡа килгән биҫтә ундағы халыҡтың тәүҙә йәшәгән урыны буйынса Нижегородка исемен алған.

XVIII быуат аҙағына ҡалала 1058 йорт иҫәпләнгән [2].

Өфө XVII—XVIII быуаттарҙа ағас ҡала булған. Кремль дә, ҙур ҡаланың стеналары ла, шулай уҡ ҡаҙна биналарының күпселеге һәм ҡалала йәшәүселәрҙең йорттары ла ағастан төҙөлгән булған. XVIII быуат башындағы айырым торлаҡ йорттары һүрәтләнгән яҙмалар һаҡланған, улар ҡала урамдарының тышҡы күренешен асыҡ күҙ алдына килтерергә мөмкинлек бирә. Дворянин К. И. Жилиндың Өфөләге усадьбаһы типик дворяндар ояһы булған: «Ҙур йорт ике ҡатлы, ҡарағайҙан, улар аҫтында — түрге бүлмә аҫтында баҙ, алғы бүлмә аҫтында умарта баҙы ...түрге бүлмәнең ике яғынан солан менән бесән һәм утын һарайы, йүкә мунса» [3]. Был йорт ҡаралтылары менән бергә буйы 10,5 һәм иңе 9 сажин булған майҙанды биләп торған. Йәйәүле уҡсы М. Гудовщиковтың биләмәләре байтаҡҡа ҡайтышыраҡ: «йүкә өйө иҫкергән, ишек алды уратып алынған һәм ҡапҡалы» [4]. Йорттарҙың бер өлөшө «ҡара ысул менән» (мөрйәһеҙ) яғылған. Ҡағиҙә булараҡ, бөтә йорттар ҙа кәртәләп алынған. Күп кенә кешеләрҙең алма баҡсалары булған.

Алма һәм йәшелсә баҡсалары менән уратып алынған тәпәшәк кенә өйҙәр фонында бейек итеп төҙөлгән монастырь һәм сиркәү биналары һерәйеп торған. Успенский ирҙәр монастыры Өфөләге иң бо-

---

[1] ЦГВИА, ф. 20, оп. 1, 1233, л. 278—301.
[2] ЦГАДА, ф. Экономические примечания к генеральному межеванию. Өфө өйәҙе, оп. 1, д. 1884, л. 77.
[3] ЦГАДА, ф. Крепостные книги местных учреждений, оп. 1, д. 12 165, л. 3.
[4] Шунда уҡ, л. 12.

Өфө XVIII быуаттың беренсе яртыһында (көньяҡ-көнсығыштан ҡарағанда). П. И. Рычковтың «Известия о начале и состоянии Оренбургской комиссии» тигән ҡулъяҙмаһындағы ҡәләм менән төшөрөлгән һүрәт.



ронго монастырь булған, уға XVI быуат аҙағында — XVII быуат башында уҡ нигеҙ һалынған. Ул ҡаланан ситтә, Ағиҙелдең бейек ярында, Сутолока тамағынан көнсығыштараҡ, урынлашҡан. Монастырҙың бөтә ҡаралтылары ағас кәртә менән ҡамап алынған һәм үҙ аллы крепость булып торған.

Успенский монастыры үҙе төҙөлгәндән алып 1764 йылда Екатерина II хөкүмәте үткәргән сиркәү ерҙәрен конфискациялауға тиклем ҙур ер биләп торған. Тиҙҙән ул монастырь үҙе лә бөтөрөлгән.

XVII быуаттың 40-сы йылдарында төҙөлгән һәм XVIII быуаттың уртаһына тиклем кремль территорияһында урынлашҡан Рождественский ҡатын-ҡыҙҙар монастыры унан байтаҡҡа бәләкәйерәк булған. Уның биналары воевода йорто һәм приказ палатаһы араһында урынлашҡан. «Уның (монастырҙың.— *Авт.)* тирәһендә бик тығыҙ һәм тар арала ҡаҙна бинаһы торған» [1], — тип яҙған 1760 йылда уны тикшергән офицер. 1759 йылғы янғын монастырь ҡаралтыларын тулыһынса юҡ иткәндән һуң, уны яңы урынға, «киң арала монастырь иркенләп урынлаша алырлыҡ ергә» [2], күсерергә ҡарар иткәндәр. 1763 йылда монастырь Оло Ҡазан урамының башында төҙөлгән яңы

[1] ЦГАДА, ф. Коллегия экономии, оп. 3, д. 491, л. 18.
[2] Шунда уҡ, л. 17.

биналарҙа урынлаша. Бында ул 1777 йылға тиклем тора, һуңынан Слободской ҡалаһына күсерелә.

XVIII быуаттың 20-се йылдарында Өфөлә, монастырҙарҙан тыш, 7 сиркәү эшләгән. Улар бөтәһе лә тип әйтерлек ағастан төҙөлгән булған. Кремль уртаһындағы собор сиркәүе генә таштан һалынған. Башта уны — Ҡазан, ә XVII быуаттың икенсе яртыһынан Смоленск алла әсәһе сиркәүе тип йөрөткәндәр. Соборҙың таш бинаһы ҡайһы бер сығанаҡтар буйынса XVI—XVII быуаттар сигендә, икенселәре буйынса XVII быуат уртаһында бер үк исемдәге ағас бина урынына төҙөлгән. Башта ул XVI быуат архитектураһы традицияларында төҙөлгән биш көмбәҙле храм булған. Ләкин тиҙҙән уның тышҡы күренеше ҡатмарлылана: уға өҫтәп йылы сиркәү һәм придел төҙөлә. Собор эргәһендә колокольня төҙөлә, XVIII быуатта унда һуҡмалы сәғәт була. Янғын ваҡытында собор бик ныҡ зыян күрә һәм тик 1767 йылда ғына аяҡҡа баҫтырыла.

Бөтә XVII быуат буйына Өфөлә йәшәүселәрҙең күпселеге хәрби хеҙмәттәге кешеләрҙең төрлө төркөмдәре вәкилдәренән торған. Һан яғынан ҙур булмаған баяр балалары төркөмө иң юғары ҡатлам булған. Гарнизондың төп өлөшө «приборҙар буйынса» (уҡсылар, тупсылар, ҡапҡасылар, казактар һ. б.) хәрби хеҙмәттәге кешеләрҙән торған. 1629 йылда Өфөлә 36 баяр балаһы, 219 уҡсы, 4 тупсы, 18 тәржемәсе, приказ кешеләре һ. б. булған [1].

Гарнизондың бындай составы ил сигендәге крепостарҙың бөтәһе өсөн дә ғәҙәти. Хәрби хеҙмәттәге кешеләр араһында яңы суҡындырылғандар төркөмө лә булыуы Өфө гарнизонының үҙенсәлеге булып торған. Был — хәрби хеҙмәттәге кешеләр сословиеһына башҡа милләт (нигеҙҙә татарҙар) вәкилдәрен дә индереүҙең һөҙөмтәһе. Был төркөм вәкилдәре рустар менән никахҡа ингән һәм әкренләп руслашҡан. 1647 йылда ҡалала хеҙмәт итеүсе яңы суҡындырылғандар һаны 69, 1675 йылда —52 кеше булған [2]. XVIII быуат башына инде ундайҙарҙың айырым төркөмө тураһында мәғлүмәттәр юҡ.

XVII быуат эсендә хәрби хеҙмәттәге кешеләр һаны башҡа өйәҙҙәрҙән кешеләр ебәреү һәм урындағы халыҡ вәкилдәре менән тулыландырыу иҫәбенә әкренләп арта бара. 1681 йылда инде Өфөлә 107 баяр балаһы, 754 уҡсы (188 һыбай һәм 566 йәйәүле) иҫәпләнгән [3]. Сама менән шул уҡ осорҙа Өфө ҡала казактары формалаша. 1675 йылда ҡалала 100 казак, 1681 йылда 165 казак булған, ә 1702 йылда уларҙың һаны 400-гә еткән [4].

---

[1] ЦГАДА, Книги разрядные, II том, 192-се бит.

[2] ЦГАДА, ф. Поместный приказ, кн. 6468, л. 147; ф. Кабардинские дела, 1675 йыл, д. 1, л. 246.

[3] Зерцалов А. Н. Окладная расходная роспись денежного хлебного жалования за 1681 г. М., 1893, 53-сө бит.

[4] Шунда уҡ; ЦГАДА, Кабардинские дела, 1675 йыл, д. 1, л. 246, 247; ф. Сенат, кн. 31/713, л. 366.

XVIII быуаттың тәүге ун йыллыҡтарында Россияла хәрби хеҙмәттәгеләр сословиеһының структураһын ябайлаштырыу, дворяндар синыфын аныҡлау, хәрби хеҙмәттәге байтаҡ төркөмдәрҙе унан айырып сығарыу процесы бара. Ул Өфөгә лә ҡағыла. 1711 йылда казактар һәм уҡсыларҙың байтаҡ өлөшө Ҡазанға ебәрелә, унда тикшереү үткәрелгәндән һуң, казактарҙың күпселеге драгун итеп күсерелә, ә бөтә уҡсылар ҙа һалдатҡа әүерелдерелә [1]. 1711 йылғы тикшереү Өфөләге уҡсылар ғәскәрен юҡҡа сығара. Казактар иһә ҡала хеҙмәтен дауам итә, уларҙың һаны ҡайтанан бик тиҙ 300-гә етә [2]. 30—40-сы йылдарҙа Ырымбур төҙөлөү һәм Ырымбур казактары ғәскәре ойошторолоу һөҙөмтәһендә Өфөнән 185 казакты яңы ҡалаға күсерәләр [3]. Ырымбур крепостар линияһын төҙөү — хеҙмәт кешеләренең байтаҡ башҡа төркөмдәренең дә Өфөнән китеүенә булышлыҡ итә. Мәҫәлән, 1742 йылда һалдат балаларынан ойошторолған 2 атлы һәм йәйәүле полк та шунда уҡ оҙатыла [4].

Быуат аҙағына хәрби хеҙмәт менән бәйле бөтә төркөмдәрҙә 578 кеше иҫәпләнә, улар араһында дворяндар бик аҙ — 32 кеше генә була [5].

Ҡала халҡы составында хәрби хеҙмәттәге кешеләр һаны кәмеүенең сәбәбен ҡаланың характеры үҙгәреүендә түгел, ә дәүләттә хәрби хеҙмәтте ойоштороуҙың үҙгәреүендә эҙләргә кәрәк, — регуляр армия барлыҡҡа килтерелгәс, асылда хәрби хеҙмәттәге ҡалалар юҡҡа сыға. Был тәңгәлдә лә Өфө Россияның үҙәгендәге ҡалаларҙан бер ни тиклем айырылып тора, сөнки бында регуляр булмаған ҡала ғәскәренең бер өлөшө оҙағыраҡ һаҡлана.

Өфө посадының ике быуатлыҡ тарихы ҡала халҡы составының нисек үҙгәреүен асыҡ күрһәтә. XVI быуат аҙағында Өфө посады булмаған тип әйтерлек. XVII быуаттың тәүге яртыһында ҡалала посад кешеләре сословиеһы барлыҡҡа килә. Быуат уртаһында инде төп шөғөлдәре сауҙа һәм һөнәрселек булған юридик яҡтан формалашҡан айырым төркөм барлыҡҡа килеүе тураһында һөйләргә мөмкин. 1647 йылғы переписта посад кешеләренең 17 йорто булыуы, уларҙа 74 кеше йәшәүе теркәлгән. Бынан тыш, посад кешеләренән дүртеһенең үҙ йорто булмаған, һәм улар «шул уҡ посадта, йорттан йортҡа күсеп, кешеләр менән өйҙәш» [6] йәшәгәндәр.

XVIII быуатта, хөкүмәт илдең сауҙа-промышленность кешеләрен яҡлау политикаһын үткәргәнгә, посад халҡы һиҙелерлек арта. Өфө өсөн был политика башҡа ҡалаларҙан посад кешеләрен бында мас-

---

[1] ЦГАДА, ф. Сенат, кн. 31/713, л. 366.
[2] Шунда уҡ, л. 366, 380.
[3] Сборник исторического общества, 8-се том. СПб., 1871, 158-се бит.
[4] ГИМ ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 10.
[5] ЦГАДА, ф. Экономические примечания к генеральному межеванию. Өфө өйәҙе, оп. 1, д. 1884, л. 77.
[6] ЦГАДА, ф. Поместный приказ, кн. 6488, л. 141.

совый күсереүҙә сағыла, ә урындағы халыҡтың башҡа сословиелары вәкилдәре посадҡа бик аҙ яҙыла. 1718 йылда ҡалала посад кешеләре һаны 93 булһа, 1724 йылда — 140-ҡа, 1728 йылда 148 кешегә етә [1]. 50-се йылдарҙа уларҙың һаны 180-гә барып баҫа. Әкренләп посад кешеләре араһынан юғары ҡатлам бүленеп сыға. Уны Өфөлә йәшәүсе баш ҡала сауҙагәрҙәре (ҡунаҡтар тип йөрөтөлгән һәм ҡунаҡтар сотняһының сауҙа кешеләре) тәшкил итә. Быуат башында ҡалала шундай 1 генә ҡунаҡ йәшәһә, яртыбыуаттан инде 4 кеше булған [2].

XVIII быуаттың икенсе яртыһында Көньяҡ Уралда металлургия промышленносы үҫеш ала һәм Өфөлә Уралдағы ҙур заводтар хужаларының йорттары барлыҡҡа килә. Ҡағиҙә булараҡ, улар Өфөлә даими йәшәмәй, үҙҙәренә кәрәк саҡта ғына килә. Мәҫәлән, заводсылар И. Б. Твердышев һәм И. С. Мясников 1766 йылда Ағиҙел ярындағы Оло Шалҡанлы биҫтәһендә казак ҡатыны Ф. Филиппованан һәм отставкалағы драгун И. Тарасовтан ике йорт һатып алалар [3]. Бер аҙҙан улар тағы бер йорт һатып ала. Демидовтар һәм И. П. Осокиндың йорттары ла ошо тирәлә була. Күрәһең, Сутолока Ағиҙелгә ҡойған урында йорттарҙы XVIII быуат аҙағында байҙар, нигеҙҙә заводсылар һәм сауҙагәрҙәр, һалғандыр.

Хәрби хеҙмәттәге һәм посад кешеләренән тыш, ҡалала халыҡтың башҡа категориялары — буш йөрөүселәр *, өйҙәштәр **, ялсылар ҙа йәшәгән. Илдең башҡа ҡалаларында булмаған һәм ҡоллоҡҡа яҡын торған туҫнаҡсылыҡ, йәғни кемделер бурыстары өсөн эшләргә мәжбүр итеү, кешеләрҙе иҙеүҙең үҙенсәлекле формаһы булып торған. Өфөлә туҫнаҡсылыҡ рус булмаған халыҡтарҙы, шул иҫәптән башҡорттарҙы ла, эксплуатациялауҙың бер формаһы булған. Туҫнаҡсылыҡ закон менән тыйылыуға ҡарамаҫтан, 1743 йылда махсус комиссия ҡалала «төрлө чиндағы рус кешеләрендә» йәшәүсе 91 туҫнаҡ булыуын асыҡлаған. Улар араһында Башҡортостандағы бөтә дүрт юлдан сыҡҡан кешеләр ҙә булған [4]. Өфө провинцияһы канцелярияһының тәржемәсеһе Килмөхәмбәт Ураҡовтың императрица Елизавета Петровнаға яҙған аңлатмаһында туҫнаҡсылыҡтың асылы һәм кешеләрҙе ҡоллоҡҡа төшөрөү ысулдары асып бирелә: «Берәй башҡорт йәки башҡа милләт кешеһе килә лә аслыҡтан бурысҡа бик аҙ ғына аҡса алып тора һәм бер аҙ йәшәй. Аҡса биреп тороусы рустар йәки башҡа милләт кешеләре уларҙы, йәнәһе, яҙылыу өсөн, канцелярияға саҡырта, канцелярия хеҙмәткәрҙәре менән берләшеп, уның өҫтө-

---

[1] ЦГАДА, ф. Ландратские книги и ревизские сказки, кн. 4643, л. 15; ф. Сенат кн. 86/1163, л. 898; ф. Камер-коллегия, оп. 1, д. 98 297, л. 260.

[2] Шунда уҡ, ф. Сенат, кн. 86/1163, л. 898; ГИМ, ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 8.

[3] ЦГАДА, ф. Крепостные книги местных учреждений, оп. 1, д. 12 308, л. 5.

* Крәҫтиәндәрҙең шәхси азат категорияһы.

** Ҡала халҡының үҙ йорт-ере булмаған бойондороҡло өлөшө.

[4] Материалы по истории Башкирской АССР, III том. М.—Л., 1949, 542-се бит.

нән бик ҙур аҡсаға бурыс ҡағыҙы йәки, йәнәһе, ул аҡса биреп тороусыла ғүмер буйы йәшәргә теләй тигән хужа булыу указы яҙалар, ә башҡалары бик ҡаты туҡмау менән ҡурҡытып үҙ исемдәренә күсерәләр һәм уларға хужа булып алалар» [1].

XVIII быуатта халыҡтың күрһәтелгән төркөмдәренән башҡа яңы разрядтары ла барлыҡҡа килә. Ундайҙар иҫәбенә беренсе сиратта разночинецтарҙы индерергә мөмкин. 1724 йылда улар — 207 ир кеше, быуат аҙағында 689 кеше иҫәпләнгән [2].

Өфө халҡының төрлө этаптарҙағы теүәл һанын билдәләү мөмкин түгел, сөнки уларҙың бөтә категориялары тураһында ла тулы һәм сағыштырып ҡарарлыҡ мәғлүмәттәр юҡ. Архивтарҙан табылған мәғлүмәттәр халыҡтың яҡынса һаны тураһында ла, XVII—XVIII быуаттарҙа уның төрлө төркөмдәренең нисбәтендәге үҙгәрештәр тураһында ла фекер йөрөтөргә мөмкинлек бирә (1-се таблицаны ҡарағыҙ).

1-се таблица*

**XVII—XVIII быуаттарҙа Өфө халҡы составының үҙгәреүе**

| Халыҡ категориялары | XVII быуат уртаһы | | XVIII быуаттың 20-се йылдары | | XVIII быуат аҙағы | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | ирҙәр һаны | проц. | ирҙәр һаны | проц. | ирҙәр һаны | проц. |
| Хәрби хеҙмәт кешеләре (дворяндар, баяр балалары, прибор буйынса хеҙмәт кешеләре, яңы суҡындырылғандар, отставкалағылар һ. б.) . . | 368 | 77,8 | 489 | 57,9 | 578 | 28,9 |
| Посад кешеләре (сауҙагәрҙәр, һөнәрселәр һәм башҡалар) . . . . | 74 | 15,6 | 140 | 16,6 | 606 | 30,3 |
| Разночинецтар . . . . . . . . . . . | — | — | 207 | 24,6 | 689 | 34,5 |
| Буш йөрөүселәр . . . . . . . . | 27 | 5,7 | — | | — | |
| Бойондороҡло халыҡ (өйҙәштәр, ялсылар) . . . . . . . . . . . | 4 | 0,9 | 8 | 0,9 | 83 | 4,1 |
| Руханиҙар . . . . . . . . . . . . | — | | — | | 44 | 2,2 |
| Бөтәһе: | 473 | 100 | 844 | 100 | 2000 | 100 |

* Таблица түбәндәге мәғлүмәттәр нигеҙендә төҙөлдө: Книга разрядные, II том, 192-се бит; ЦГАДА, ф. Поместный приказ, кн. 6488. л. 138—150; ф. Камер-коллегия, ф. 1, оп. 1, д. 98 297, л. 260—262; ф. Сенат, кн. 31/713, л. 392; ф. Экономические примечания к генеральному межеванию. Өфө өйәҙе, оп. 1, д. 1884, л. 77.

[1] Материалы по истории Башкирской АССР, III том. М.—Л., 1949, 554-се бит.

[2] ЦГАДА, ф. Камер-коллегия, оп. 1, д. 98 297, л. 261; ф. Экономические примечания к генеральному межеванию. Өфө өйәҙе, оп. 1, д. 1884, л. 77.

Быуаттар ағышы менән ҡала халҡының шөғөлө лә үҙгәрә. XVII быуатта Өфөлә сик буйындағы рус ҡалалары өсөн типик булған тормош уклады барлыҡҡа килә: ҡала халҡы хәрби хеҙмәтте ауыл хужалығы эштәре менән бергә алып бара. Баҫыуҙар ҡала стеналары әргәһенән үк башлана, ҡала эсендә лә байтаҡ майҙанды йәшелсә баҡсаһы алып тора. Хәрби хеҙмәт кешеләренең күпселеге (уҡсылар, казактар, тупсылар) ерҙе үҙ ғаиләләренең көсө менән эшкәртә, тик дворяндар һәм баяр балалары ғына крәҫтиәндәр хеҙмәтен файҙалана. Тормоштоң хәрби-игенселек уклады XVIII быуатта ла бер ни тиклем кимәлдә һаҡлана, ләкин ул ҡала кешеләренең бер өлөшөнә генә ҡағыла.

Өфөлә хужалыҡ тормошоноң натураль характерҙа булыуы һөнәрселектең әкрен үҫеүенә килтерә. Посад кешеләре, нигеҙҙә, сауҙа менән шөғөлләнә һәм һөнәрселек производствоһында ҡатнашмай тип әйтерлек. Унда элек-электән төп ролде уҡсылар һәм казактар уйнай.

XVII быуатта ҡалала эшкәртеү промышленносының ваҡ предприятиелары ғына булған. Улар араһында тимерселек беренсе урынды алып торған. Тимерлектәр Сутолока яры буйында Оло Шалҡанлы биҫтәһендә бер тирәгә тупланған. 1679 йылда бында ҡаҙнаның йәшелсә баҡсаһы әргәһендә казактар Г. Шарапов, С. Зубов һәм С. Дуровтың тимерлектәре булған. 1688 йылда йәйәүле уҡсы И. Кузнец воеводанан шул уҡ рәттә тимерлек төҙөргә рөхсәт һорағанда уның урынын түбәндәгесә билдәләй: «Себер ҡапҡаһына барғанда күпер әргәһендә ... тәүге инеш аръяғында» [1]. XVIII быуатта сауҙагәрҙәрҙең ҙур предприятиелары казактар һәм уҡсыларҙың ваҡ тимерлектәрен юҡҡа сығара. 1738 йылда махсус перепись ике ҙур тимерлек булыуын теркәй; 15—20 йылдан инде уларҙың һаны 20-гә яҡын була [2].

XVIII быуатта күн иләү кәсебе тиҙ үҫә. Уның үҫешенә ситтән, бөтәһенән элек Нижегородский губернаһынан, килгән крәҫтиәндәр ҙур йоғонто яһай. Башҡортостан кеүек ҙур малсылыҡ районында күн етештереүҙең файҙалы булыуы был эшкә ҙур помещик-предпринимателдәрҙең иғтибарын йәлеп итә. Мәҫәлән, граф В. С. Шереметев, үҙ крәҫтиәндәренең өлгөһөнә эйәреп, бер приказчигына Өфөлә «бишләп йорт» һатып алырға ҡуша, быны үҙенең «Өфө ҡалаһында күн заводы асырға ниәтләүе» менән аңлата [3]. 1780 йылда Сутолоканың һул ярында ул Ағиҙелгә ҡойған урындағы йорттар һатып алына.

Тимерселек һәм күн етештереүҙән тыш, ҡала кешеләре башҡа, аҙыраҡ әһәмиәтле һөнәрҙәр менән дә кәсеп иткән: бында тегенсе-

---

[1] ЦГАДА, ф. Уфимская приказная изба, оп. 1, д. 760, л. 2, 3; д. 756, л. 1.
[2] ЦГАДА, ф. Камер-коллегия, оп. 1, д. 129, л. 36.
[3] Шунда уҡ, ф. Крепостные книги местных учреждений, оп. 1, д. 12 393, л. 7.

ләр, итекселәр, балта оҫталары, столярҙар, көмөшсөләр, баҡырсылар, ҡурғашсылар һ. б. булған.

Сауҙа һөнәрселеккә ҡарағанда бер ни тиклем ҙурыраҡ үҫеш алған. Уның менән ҡала халҡының бөтә ҡатламдары ла аҙмы-күпме шөғөлләнгән. Кремль ҡалҡыулығы итәгендә Ағиҙел яры буйында урынлашҡан һәм йәкшәмбе көндәрендә эшләгән баҙар XVII быуатта Өфөнөң сауҙа үҙәге булып торған. Уның хаҡындағы тәүге яҙма сығанаҡтар 1619 йылда яҙылған, унда Өфөлә йәшәүсе К. Степанов ҡала администрацияһынан үҙенә лавка төҙөү өсөн сауҙа рәтендә урын бүлеүҙәрен һорай. Уға урын бүленә, ә уның күршеләре хәрби хеҙмәт кешеләре булып сыға [1]. XVII быуат аҙағында баҙарҙа 50-ләп лавка һәм 11 асыҡ прилавка була. Асыҡ прилавкаларҙа, нигеҙҙә, казактарҙың һәм уҡсыларҙың ҡатындары һәм тол ҡатындар сауҙа иткән [2].

Ағиҙелдең һул яҡ ярында ҡала тәңгәлендә йыш ҡына үткәрелеп торған йылҡы йәрминкәләре гарнизондың кавалерия частары (дворяндарҙың атлы ғәскәре, һыбайлы уҡсылар һәм казактар) өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булған. Йылҡы йәрминкәләре тураһында тәүге мәғлүмәттәр 1608 йылға ҡарай, шул йылда хөкүмәт уларҙы үткәрергә рөхсәт иткән [3]. Яҡындағы волостарҙың башҡорттары, шулай уҡ ҡалмыҡтар һатыу өсөн ҡала эргәһенә 10-дан 25 мең башҡа тиклем йылҡы иҫәпләнгән өйөрҙәр ҡыуып килтерә торған булған. Ҡалмыҡ юртаҡтары айырыуса юғары баһаланған. 40-сы йылдарҙа ғына, ҡалмыҡтарҙың башҡорт йәйләүҙәренә һөжүм итеүе һөҙөмтәһендә, был сауҙа бер ни тиклем сикләнеп торған.

1696 йылда Өфө баҙары янғындан ҡаза күрә, ә һуңынанырак Ағиҙелдең яҙғы ташҡыны уның урынын йыуып алып киткән. Баҙарҙы тау өҫтөнә кремль аръяғына күсерәләр һәм, иҫкеһенән — Түбәнгеһенән айырмалы буларак, Үрге баҙар тип йөрөтәләр [4]. Яңы сауҙа рәттәре төньяҡтан кремль стеналарына килеп етә. 1726 йылда Үрге баҙар майҙанында 64 лавка була. Уларҙың хужалары элеккесә төрлө ҡатлам кешеләренән торһа ла, улар араһында ныҡлы сауҙагәрҙәр күренә башлай. Бында 15 сауҙагәр, 20 дворян, казак һәм һалдат, 17 сиркәү хеҙмәтсеһе, 5 канцелярист, 2 ялсы крәҫтиән, монастырҙар икеһе лә һәм сиркәүҙәрҙең ҡайһы берҙәре лавка тотҡан [5]. Өфөнөң дөйөм йыллыҡ сауҙа әйләнеше ҙур булмаған. XVIII быуаттың 20-се йылдарында тик ҡунаҡтар сотняһының сауҙагәре Д. Осипов ҡына йылына 500 һумлыҡ сауҙа иткән; башҡа сауҙагәрҙәрҙең әйләнеше, ҡағиҙә буларак, 20—25 һумдан артмаған [6].

---

[1] Текст «Отводной книги по Уфе», 319-сы бит.
[2] ЦГАДА, ф. Камер-коллегия, оп. 1, д. 129, л. 35, 36.
[3] Очерки истории Калмыцкой АССР. М., 1967, 83-сө бит.
[4] ЦГАДА, ф. Камер-коллегия, оп. 1, д. 129, л. 37.
[5] Шунда уҡ, л. 29—34.
[6] Шунда уҡ, кн. 32/674, л. 72, 73.

Әкренләп баҙарҙа сауҙагәрҙәр Башҡортостандың төрлө мөйөштәренән йыйып алып килгән тауарҙар — йәнлек тиреләре, күн, бал, балауыҙ — ҙур урын ала. Урындағы халыҡтың һунарсылыҡ һәм малсылыҡ хужалығы продукттары Өфөнән атаҡлы Мәкәрйә йәрминкәһенә (Нижний Новгород эргәһендә) һәм илдең башҡа йәрминкәләренә ебәрелә. Оҙатыу күләмен Өфө таможняһы һатып алыусыларға биргән исемлектәр асыҡ күрһәтә. Мәҫәлән, 1702 йылдың яҙында сит ҡаланан килгән сауҙа кешеһе И. Гостевтың приказчигы «Өфөлә баҙарҙа» 300 ҡыҙыл төлкө тиреһе һатып алған [1]. Һуңынанyраҡ Ҡазандағы посад кешеһе И. И. Мурасиндың приказчигы 96 бүре, 180 төлкө, 66 корсак, 18 һуҫар, 80 аҫ, 1500 тейен, 5000 ҡуян тиреһе һатып алған һ. б. [2].

XVIII быуатта ҡала илдең үҙәк райондары менән дә, уның көньяҡ-көнсығыш төбәктәре (ҡаҙаҡ һәм ҡалмыҡ далалары) менән дә ныҡлы экономик бәйләнештәр тотҡан ҙур өлкә баҙарына әүерелә. Өфө был яҡтың эске ресурстарын да, башҡа ҡалаларҙың капиталын да үҙенә тартып тора һәм Башҡортостандың төрлө төбәктәренән килтерелгән күн, тире һәм балды оҙатыу, шулай уҡ Башҡортостандың көньяғынан килтерелгән тоҙҙо Өфө эргәһендә ҙур йылға караптарына тейәп оҙатыу пункты булып тора. Был яҡтың экономик үҙәге булараҡ, Өфө дөйөм тауар әйләнешенә инә барған күп милләтле халыҡтың бөтә хужалығының тауарлылығы үҫешенә көслө йоғонто яһай.

Өфө йәшәгән тәүге быуаттарҙа уның халҡының культура тормошо үҙенсәлеге менән айырылып тормаған һәм Рәсәйҙең үҙәгендәге ҡалалар культураһының туранан-тура йоғонтоһо аҫтында формалашҡан. Ҡалала оҙаҡ ҡына ваҡыт буйы уҡыу йорттары булмаһа ла, хәрби хеҙмәттәге һәм посад кешеләре араһында уҡый-яҙа белеүселәрҙең сағыштырмаса күп булыуын билдәләп үтергә мөмкин. Өфөлә йәшәүселәр ҡулы менән яҙылған күп һандағы документтар был хаҡта асыҡ һөйләй. Уҡырға-яҙырға өйрәтеү хосуси характерҙа булған, уны ғәҙәттә приказ өйөндә эшләүсе подьячийҙар һәм сиркәү әһелдәре алып барған. Һаҡланған мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, ҡалала тәүге уҡыу йорто XVIII быуаттың 20-се йылдарында Өфө гарнизоны эргәһендә асылған һәм гарнизон мәктәбе [3] тип йөрөтөлгән. Һалдаттар, дьячоктар һәм башҡа хәрби хеҙмәттәге кешеләрҙең балалары унда уҡырға-яҙырға ғына түгел, ә математика («цифр һәм геометрия»), фортификация, артиллерия нигеҙҙәрен дә өйрәнгән. 1778 йылда был мәктәп Ырымбурға күсерелгән [4].

Петр I заманынан һуң Башҡортостанға килеп торған төрлө экспедициялар ҡала кешеләренең рухи тормошона билдәле бер йоғонто

---

[1] ЦГАДА, ф. Камер-коллегия, оп. 1, д. 3, л. 93.
[2] Шунда уҡ, л. 95.
[3] ЦГАДА, ф. Крепостные книги местных учреждений, оп. 1, д. 12 227, л. 60.
[4] ГИМ, ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 22.

яһаған. Сенаттың обер-секретары И. К. Кирилов етәкселегендәге Ырымбур экспедидияһы уларҙың иң тәүгеһе булған. Экспедицияла ҡатнашыусылар тышҡы политик мәсьәләләрҙе хәл итеү менән бер рәттән был яҡтың тәбиғи байлыҡтарын өйрәнергә һәм яҙып алырға тейеш булған. Уның составына Россия Фәндәр академияһының йәш ғалимдары — ботаниктар, географтар, геодезистар һ. б. ингән. Һуңынан танылған ғалим һәм Башҡортостан тәбиғәтенең һәм тарихының тәүге белгесе булып киткән П. И. Рычков был экспедицияның бухгалтеры итеп алынған.

Экспедиция үҙенең ҡорамалдары һәм китапханаһы менән Өфөгә 1734 йылдың көҙөндә килә һәм бында 1736 йылдың майына тиклем була [1]. Башҡа эштәр менән бергә Кирилов экспедицияһында ҡатнашыусылар ҡаланың тирә-яғын тәүге тапҡыр картаға төшөрә һәм ентекләп тикшерә. Шулай уҡ Өфөнөң ул саҡтағы күренештәренең һүрәттәре лә һаҡланған. Уларҙы экспедицияның рәссамы Д. Кассель эшләгән, күрәһең.

Фәндәр академияһы XVIII быуаттың 60—70-се йылдарында илдең айырым райондарын тикшереү өсөн ойошторған экспедиция кеүек ҙур сара ла Өфөнө урап үтмәгән. 1769—1770 йылғы ҡышта Башҡортостанға академик экспедицияла ҡатнашыусыларҙың береһе этнограф П. С. Паллас Өфөлә йәшәгән. Ғалим был яҡтың тәбиғәте, хужалығы, башҡорттарҙың ғөрөф-ғәҙәттәре һәм көнкүреше буйынса ҡиммәтле яҙмалар ҡалдырған.

Ҡала халҡының көнкүреше тураһында бик аҙ мәғлүмәттәр һаҡланған. XVIII быуат башына тиклем ҡалала халыҡтың күңел асыу күренештәре һәм байрамдарҙың ысын-ысындан дини төҫтә үтеүе шик тыуҙырмай. Тәре күтәреп йөрөү кеүек сиркәү байрамдары тураһында яҙмалар беҙҙең көнгәсә һаҡланған. Уларҙың иң боронғолары — һәр йыл һайын 6 ғинуарҙа һәм 1 августа үткәрелгән. Был байрамдарҙа тантаналы шарттарҙа ҡала соборынан бөтә халыҡ ихтирам иткән Смоленск алла әсәһенең һүрәтен алып сыҡҡандар. Шулай уҡ 7 июлдә Ҡазан алла әсәһенең һүрәте менән Өфөнән Богородский ауылына барыу ҙа — боронғо байрам, һәм ул урындағы тарих менән тығыҙ бәйләнгән. Халыҡ телендә уның барлыҡҡа килеүе 1677 йылғы башҡорт восстаниеһы ваҡиғалары менән тоташа, йәнәһе, ул саҡта алла әсәһенең һүрәте Богородский ауылын баш күтәреүселәрҙән һаҡлауҙа мөғжизәле роль уйнаған. Ғөмүмән, мөғжизәләргә һәм «күктән ингән билдәләргә» ышаныу — феодаль Өфө өсөн хас күренеш.

XVIII быуатта ҡала кешеләренең көнкүрешенә, Өфөнөң көндәлек тормошона дәүерҙең яңы һулышын сағылдырыусы донъяуи элементтарҙың үтеп инеүе көсәйә. Мөһим политик ваҡиғаларҙы — рус армияһының еңеүҙәрен, батшаларҙың тәхеткә ултырыуын һәм башҡа

[1] Новлянская М. Г. Иван Кириллович Кирилов, географ XVIII века. М.—Л., 1964, 108, 113-сө биттәр.

шундайҙарҙы билдәләгәндә, бөтә халыҡ байрамдары, тантаналар ойошторола башлай. И. К. Кирилов шундай байрамдарҙың береһе хаҡында яҙып ҡалдырған. 1735 йылдың февралендә Министрҙар кабинетына императрица Анна Ивановнаның тәхеткә ултырыуының йыллығын Өфөлә нисек билдәләргә йыйыныуҙары тураһында хәбәр итеп, ул үҙенең «сиркәүҙә табынғандан һуң, полкта пушкаларҙан өс тапҡыр боевой ут асырға... ә кис еткәс бәләкәй фейерверк яндырырға» [1] күрһәтмә биреүе тураһында яҙған.

XVII—XVIII быуаттарҙа Өфө тәүге осорҙа урындағы тормоштоң бөтә укладына ят булған крепость-ҡалаһан әкренләп Башҡортостандың политик һәм экономик үҙәгенә әүерелә бара.

## § 2. Өфө — крайҙың административ үҙәге

XVII—XVIII быуаттарҙа Өфө күп милләтле халыҡ йәшәгән Башҡортостанға идара итеү үҙәге булып тора. Ләкин ҡала администрацияһы алдына ҡуйылған бурыстар ҙа, һөҙөмтәлә урындағы учреждениеларҙың структураһы ла был быуаттар эсендә ҡайһы бер үҙгәрештәр кисерә. Урындағы власты XVI быуатта уҡ ойошторолған Өфө приказ өйө ғәмәлгә ашыра, уға Мәскәүҙән ебәрелгән һәм периодик (өс йылға бер) алмашынып торған воевода етәкселек итә. Башта Өфө воеводаһы дәүләттең бөтә көньяҡ-көнсығышының үҙәге булған Ҡазанға буйһона. Әкренләп Өфө администрацияһы һаман ҙурыраҡ үҙ аллылыҡ ала, Ҡазан воеводаһына һаман аҙыраҡ буйһона бара. Йыш ҡына Өфө приказ өйө, аралағы инстанция булған Ҡазанды урап үтеп, үҙәк власта — Мәскәүҙә урынлашҡан Ҡазан һарайы Приказы менән туранан-тура бәйләнешкә инә.

XVIII быуат башында Өфө воеводаһының буйһоноуында һәм власы күләмендә ҡайһы бер үҙгәрештәр була. Ҡазан губернаһы ойошторолғанда Өфө приказ өйөн алмаштырған Өфө воевода канцелярияһы Ҡазан губернаторы ҡарамағына күсерелә. Ләкин бынан һуң да ул билдәле үҙ аллылығын һаҡлай. Өфө өйәҙенең үҙ аллылығы һәм хөкүмәт былдағы учреждениелар алдына ҡуйған айырым бурыстар 1715 йылда Өфө провинцияһының ойошторолоуына килтерә. Уның башына воевода урынына Ҡазан властарына һүҙҙә генә буйһонған обер-комендант ҡуйыла. Халыҡ телендә «провинция» һүҙенең бөтөнләй тип әйтерлек ҡулланылмауы ҡыҙыҡлы. Хатта ул осорҙағы рәсми документтарҙа ла «Өфө провинцияһы» урынына «Өфө өйәҙе» тип яҙыуҙарын дауам итәләр. 1719 йылғы өлкә реформаһы «Обер-комендант провинцияһын» тағы ла аныҡыраҡ формалаштыра, Өфө воеводаһы тағы ла ҙурыраҡ үҙ аллылыҡ ала, ул туранан-тура Сенатҡа һәм коллегияларға буйһона башлай.

---

[1] ЦГАДА, ф. Сенат, кн. 54/1131, л. 111.

Воевода провинция территорияһында дөйөм етәкселекте ғәмәлгә ашырған, «бөтә нәмәлә лә батша ғали йәнәптәре мәпфәғәтен һәм дәүләт файҙаһын ентекләп һаҡларға» бурыслы булған. Уның ҡарамағында һәр береһе идара итеүҙең билдәле бер тармағын алып барған күп һанлы чиновниктар эшләгән. Улар араһында камерир — воеводаның финанстар буйынса ярҙамсыһы мөһим урын тотҡан, ул тура һәм өҫтәмә налогтарҙы йыйыу өсөн яуаплы булған. Провинция казначействоһы башында рентмейстер — аҡса һаҡсыһы торған. Башҡа провинция үҙәктәрендәге кеүек, Өфөлә шулай уҡ рекрут эштәре канцелярияһы, провиантмейстер (хәрби чиновниктар) конторaһы һәм башҡа бик күп учреждениелар булған.

Өфө провинцияһының бындай айырым хәле 1734 йылға тиклем һаҡлана, шунан дөйөм положение буйынса ул Ҡазан губернаһы составына кире ҡайтарыла. Шул уҡ йылда Россияның сиген көньяҡ-көнсығышҡа артабан күсереү маҡсатында Ырымбур экспедицияһы ойошторола. Башҡортостан менән Ҡаҙағстан араһындағы сик буйында ҡала төҙөү һәм Урта Азия ханлыҡтары менән даими сауҙаны яйға һалыу был экспедицияның иң тәүге бурысы була. Шуның менән бергә уның эшмәкәрлеге Башҡортостанға идара итеүгә лә ҡағыла. Экспедиция бер ни тиклем ваҡытҡа (1734—1736 йылдар) Өфөлә урынлаша. Бында килгән экспедиция башлығы, Сенаттың обер-секретары И. К. Кириловтың сикләнмәгән полномочиелары була. Ул идара итеү аппаратының (суд, налогтар йыйыу һ. б.) эшмәкәрлеген яҡшыртыу һәм вазифалы кешеләрҙең власты уҫал ниәт менән файҙаланыуҙарына ҡаршы көрәш буйынса байтаҡ саралар үткәрә.

Өфө провинцияһының билдәле үҙ аллылығы бында 1740 йылда воевода урынына махсус вице-губернатор вазифаһын булдырыуҙа ла сағыла. П. Воейков тәүге вице-губернатор була, тиҙҙән уны П. Д. Аксаков алмаштыра. Рус чиновниктарының һәм башҡорт старшиналарының баш-баштаҡлыҡтарын тикшереү буйынса Аксаковтың актив эшмәкәрлеге урындағы дворяндарҙың һәм хөкүмәттең ризаһыҙлығын тыуҙыра. 1744 йылда уны следствие үткәреү өсөн Петербургҡа саҡыртып алалар, ә вице-губернатор вазифаһын бөтөрәләр.

Аҙаҡ килеп, 1744 йылда Ырымбур губернаһы ойошторолғанда Өфө провинцияһы уның составына индерелә, ә Өфө воеводаһы Ырымбур губернаторына буйһондорола. Башҡортостандың административ үҙәге булған Өфөнөң әһәмиәте кәмей төшә, сөнки байтаҡ ҡына мөһим функциялар Ырымбурға күсә.

1753 йылда Өфөлә ҡаҙнаның Көньяҡ Уралдағы заводтарына идара итеү өсөн Ырымбур тау начальствоһы ойошторола. Бында таможня өйө лә 1754 йылға тиклем эшләй.

XVIII быуат башында Өфөлә ҡаланың үҙидара органы — ратуша ойошторола, 1722 йылда ул магистратҡа әүерелдерелә. Башта ҡала тормошондағы суд, полиция, хужалыҡ һәм финанс мәсьәләләренең

киң даирәһе был учреждениелар ҡарамағында булған. 1743 йылдан башлап магистраттың компетенцияһы нигеҙҙә суд, шулай уҡ дәүләт һалымдарын һәм йыйымдарын бүлеү менән сикләнә. Магистрат ағзаларының составы сословие һәм мөлкәт рамкалары менән ныҡ сикләнгән була. Баш магистраттың күрһәтмәһе буйынса уларҙы сауҙагәрҙәр һәм һөнәрселәр «беренсе статьялы» посад кешеләренән һайлай. Магистрат эштәренә ике кеше — бурмистр менән ратман идара итә, бер ни тиклем һуңғараҡ ратмандар һаны икегә еткерелә. 1722 йылғы Өфө магистратының тәүге ағзаларының исемдәре һаҡланған: ул саҡта ҡала кешеләре бурмистр итеп С. Перфильевты, ә ратман итеп П. Даниловты һайлағандар [1].

Илситендәге башҡа ҡалаларҙан айырмалы булараҡ, Өфөлә рус булмаған халыҡтарға идара итеү буйынса махсус учреждениелар ойошторолмаған, ләкин уларҙың төрлө төркөмдәре менән төрлөсә мөғәмәлә иткәндәр. Башҡорттарға һәм Волга буйынан килеп уларҙың ерендә йәшәгән «килмешәктәргә» ҡарата Өфө администрацияһы царизмдың эске политикаһының колонизациялауға йүнәлтелгән дөйөм линияһын үткәргән. Өфө XVII быуатта һәм XVIII быуат башында үҙидараның байтаҡ өлөшөн һаҡлап килгән бөтә 4 юл башҡорттары өсөн дә идара итеү үҙәге булған.

Общиналарға идара итеү, ил сиген һаҡлау хеҙмәтен ойоштороу, шулай уҡ өлөшләтә яһаҡ йыйыу мәсьәләләре башҡорт түрәләре ҡулында булған. Администрация воевода «иғландары» аша улар менән туранан-тура бәйләнеш тотҡан. Башҡорт ырыуҙарының вәкилдәре сапҡынсыларҙың алдан хәбәр итеүе буйынса Ағиҙелдең һул яҡ яр буйына ҡала тәңгәленә (хәҙерге Киров районы пляжы) йыйылғандар. Шунда, «ҡом өҫтөндә», төрлө указдар уҡылған, яһаҡ йыйыу, хәрби походҡа әҙерләнеү һ. б. тураһында бойороҡтар бирелгән. 1648 йылда ҡалмыҡтарҙың Яйыҡ һәм Үр йылғалары буйына күсеүен иғлан итеү, 1675 йылда — Ҡырымға поход тураһында указды, 1704 йылда яңы һалымдар индерелеүе тураһында указды уҡыу өсөн башҡорт старшиналарын тап бына шунда йыйғандар.

Башҡорт халҡын баш эйҙереп тотоу Өфө администрацияһының иң мөһим бурысы булған. Аманаттар (заложниктар) тотоу быға өлгәшеүҙең бер сараһы булып торған. Был тәртип XVIII быуаттың 30-сы йылдарына тиклем һаҡланған. Башта башҡорттарҙың заложниктарын Ҡазанда тотҡандар. Башҡорт халҡы уларҙы Өфөгә күсереүҙе даими талап иткән. 1663 йылда Өфө воеводаһы кенәз Ф. Ф. Волконский башҡорттарға мөрәжәғәтендә былай тип яҙған: «...һеҙ биргән аманаттарҙы, ул кешеләрҙе, Ҡазанға оҙаттым, сөнки уны һеҙ үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ, Өфө ҡалаһы бәләкәй һәм тар, бында аманаттар йорто юҡ...» [2]. Ләкин киләһе йылына уҡ инде ҡалала мах-

---

[1] ЦГАДА, ф. Главный магистрат, оп. 1, д. 29, л. 5.

[2] Материалы по истории Башкирской АССР, 1-се киҫәк. М.—Л., 1936, 178-се бит.

сус аманат йорто төҙөлә, унда бер юлы 12 кеше тотола. Әммә ул тиҙҙән ябыла һәм аманаттарҙы ҡайтанан Волга буйындағы ҡалаларға оҙата башлайҙар. XVIII быуат башында ғына Өфөлә яңы аманат йорто төҙөлә, башҡа ҡалаларҙағы бөтә заложниктар ҙа унда килтерелә.

Аманаттар тотоу башҡорттарҙы батша ҡаҙнаһына ясаҡ түләргә мәжбүр итеү сараһы булараҡ та мөһим роль уйнаған. Ясаҡҡа йыйылған йәнлек тиреләрен махсус йыйыусылар йәки башҡорт старшиналары һәр яҙ һайын Өфөгә килтергән, бынан улар Мәскәүгә оҙатылған.

Суд хөкөмө функциялары ла Өфө воеводалары ҡулында булған. Башҡорттар, нигеҙҙә, ер тураһында бәхәс йәки ҙур енәйәт эштәре буйынса ғына Өфөлә судлашҡан, ә ваҡ мәсьәләләр буйынса хөкөм эштәре старшиналар һәм мосолман руханиҙары ҡарамағында ҡалып килгән. В. Н. Татищев 1724 йылда воевода судының ойошторолоуы хаҡында түбәндәгесә яҙған: «Улар (йәғни башҡорттар. — *Авт.*) инде бер ерҙә лә судлашмай, тик — Өфөлә генә, шуның өсөн улар һәр йыл һайын төрлө алыҫ ерҙәрҙән Өфөгә бик күп булып йыйылалар...» [1]

Өфө учреждениеларының был яҡтағы рус халҡына идара итеүе илдең башҡа, айырыуса сик буйындағы, райондарындағы идаранан һиҙелерлек айырылып тормаған. XVII быуатта ҡала сик буйында булғанға, Өфө воеводаларының хәрби функциялары бөтә башҡа функцияларынан өҫтөнлөк иткән. Воевода бөтәһенән элек Өфө гарнизоны һәм ҡала ғәскәренең башлығы булған.

Ул осорҙа ҡаланың бөтә тормошо даими хәрби һөжүм ҡурҡынысы аҫтында барған. Себерҙәге татар феодалдары отрядтарының йыш ҡына уларҙы яҡлаусы ҡалмыҡ тайшалары менән берлектәге һөжүмдәре ҡала һәм өйәҙ өсөн етди ҡурҡыныс тыуҙырып торған. Дала халыҡтарының яуы ихтимал булыуы тураһындағы хәбәрҙәр ҡала халҡына XVII быуаттың 50-се йылдарының аҙағына, ҡалмыҡтар Рус подданныйлығын ҡабул иткәнгә, саҡлы тынғы бирмәгән. Шуға күрә ҡаланы обороналау Өфөләге хәрби хеҙмәт кешеләренең көнүҙәк бурыстарының береһе булған. Ҡазан һарайы Приказынан воеводаларға бирелгән наказдарҙа: «бик һаҡ булырға, Өфөлә, ҡалала һәм баструкта, көнөн-төнөн өҙлөкһөҙ ҡарауыл тоторға» [2] кәрәклеге тураһындағы күрһәтмәләр даими ҡабатланып торған. Крепость-ҡаланың тәғәйенләнеше үк ҡаланы обороналау менән генә сикләнергә мөмкинлек бирмәгән, ә бөтә тирә-яҡты һаҡлауҙың ойошторолоуын күҙҙә тотҡан. «Күсмә (һыбайлы) ҡарауылдар» һәм «һаҡсыларҙы» — сик буйы дозорҙарын даими ебәреп тороу Өфө воеводаһының вазифаһына ингән. Ҡазан һарайы Приказы Өфө воеводаларынан «хәбәр

---

[1] Материалы по истории Башкирской АССР, III том. М.—Л., 1949, 481-се бит.

[2] ЦГАДА, ф. Сенат, кн. 1/132, л. 122.

итеү өсөн... Өфөнән юл өҫтөндәге станицаларға баяр балаларын, йөҙ башлыҡтарын һәм уҡсылар ебәреп тороуҙы»[1] талап иткән.

Өфөләге хәрби хеҙмәт кешеләре алыҫтарға үткәрелгән походтарҙа ла ҡатнашҡан. Воеводалар дәүләттең көньяҡ-көнсығыш сиктәрен һаҡлауҙа, ҡалалағы хәрби хеҙмәт кешеләренән тыш, башҡорт атлыларының ҙур отрядтарын да файҙаланған. 1635 йылда рус һәм башҡорт яугирҙәренең берләшкән отряды Себер ханзадалары Аблай менән Тәүкәлдең Өфө янына яҡын килгән ғәскәрен ҡыйратҡан, ханзадаларҙың икеһен дә әсир иткән.

Батша хөкүмәтенең тапшырыуы буйынса Өфө воеводаһы күрше халыҡтар менән дипломатик һөйләшеүҙәр алып барған. XVII быуатта Өфө рус-ҡалмыҡ бәйләнештәренең мөһим үҙәге булған; ҡалмыҡ тайшаларының вәкилдәре бында солох, Рус дәүләтенә ҡушылыу, сауҙа һәм әсирҙәр алмашыу мәсьәләләре буйынса һөйләшеүҙәр алып барған. 1620 йылда ҡалмыҡ илселәре Далай, Чокур, Урлюк һ. б. тайшалар исеменән рус хөкүмәтенә ант иткәндәр, унда үҙҙәрен рус батшаһының подданныйҙары итеп танығандар[2]. 1623 йылда ҡалмыҡ вәкилдәре Өфө воеводаһы алдында «улар, тайшалар, ҡалмыҡ кешеләре менән Өфө өйәҙенә яуға килмәйәсәк»[3] тип ант иткән. Ҡалмыҡ улустарына ебәрелгән рус илселектәренә йыш ҡына Өфөләге хәрби хеҙмәт кешеләре етәкселек иткән.

XVIII быуат башында Өфө Россияның ҡаҙаҡ жүздәре * менән бәйләнештәрендә күренекле урын ала. 1730 йылда Кесе жүз ханы Абулхәйер, үҙен рус подданныйы итеп алыуҙарын үтенеп, Өфөгә илселек ебәрә **. Башҡорт феодаль даирәләренең вәкилдәре йоғонтоло булышсылар һәм илселек ағзалары булып килгән.

Өфө ҡалаһы һәм унда йәшәүселәр был тирәлә яңы ҡалалар төҙөүҙә әшлекле ҡатнаша. 1664 йылда Өфө воеводаһы стольник Ф. И. Сомовҡа ебәрелгән наказда Бөрө йылғаһы буйындағы Архангельский ауылын ағас стена менән уратып алырға һәм тоҙ ҡайнатыу ҡаласығын нығытырға ҡушылған[4]. Был наказ буйынса Башҡортостандағы ике — Бөрө һәм Табын ҡаласыҡтарына нигеҙ һалына. Улар элекке ауылдар урынында үҫеп сыға. Тоҙ ҡайнатыу ҡаласығы XVI быуат аҙағында барлыҡҡа килә һәм Өфө халҡын тоҙ менән тәьмин итә. Бының ҡала халҡы өсөн ғәҙәттән тыш мөһим булыуы уның тирәһендә нығытмалар төҙөүгә һәм Өфөгә буйһонған Табын ҡаласығына әүерелдереүгә килтерә. XVIII быуаттың беренсе ярты-

---

[1] ЦГАДА, ф. Сенат, кн. 1/132, л. 122.
[2] ЦГАДА, ф. Калмыцкие дела, 1620 йыл, д. 1, л. 18—20.
[3] Материалы по истории Башкирской АССР, 1-се киҫәк, 158-се бит.
* Жүз — йөҙ — өлөш, төбәк.
** Абулхәйер һәм Кесе жүз старшиналары 1731 йылдың 10 октябрендә рус хөкүмәтенә ант итә.
[4] ЦГАДА, ф. Сенат, кн. 1/132, л. 121—145.

һындағы башҡорт восстаниелары ваҡытында ул бер нисә тапҡыр ҡыйратылған, ләкин Өфө властарының ҡушыуы буйынса ҡайтанан аяҡҡа баҫтырылған.

XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Өфө Ырымбурҙы төҙөү өсөн база булып тора; махсус экспедиция Өфө аша Үр йылғаһының үрге ағымына күтәрелә, төрлө йөктәр һәм аҙыҡ-түлек тә уның аша ташыла. XVIII быуаттың икенсе яртыһы Башҡортостан территорияһында байтаҡ ҡалаларға нигеҙ һалыу осоро булып тора. Был осорҙа элекке Стәрлетамаҡ пристане урынында Стәрлетамаҡ ҡалаһы, Бәләбәй һәм башҡа ҡалалар барлыҡҡа килә.

Илдең үҙәк райондарынан алыҫта урынлашҡанға күрә, Өфө һөргөнгә ебәреү урындарының береһенә әүерелә. 1602 йылда Борис батша бөтә Романовтар менән бергә һөргөнгә ебәргән баяр И. Н. Романов — буласаҡ батша Михаил Романовтың ағаһы Пелым төрмәһенән бында күсерелә. 1606 йылда дума дьягы А. Власьев бында воевода итеп почетлы һөргөнгә ебәрелә. Ул Өфөлә үлә һәм Смоленск соборында ерләнә. 1698 йылда уҡсылар восстаниеһы баҫтырылғандан һуң ҡулға алынған Мәскәү уҡсылары ғаиләләре менән бында һөргөнгә ебәрелә, улар араһында батша ҡыҙы Софьяның атаҡлы фавориты Ф. Л. Шакловитыйҙың ҡустыһы Л. Л. Шакловитый ҙа була. 1772 йылда, Польша тәүге тапҡыр бүленгәндән һуң, батша хөкүмәте 100-гә яҡын конфедератты бында һөргөнгә ебәрә. Ҡаҙаҡ старшиналары власынан мәхрүм иткәс, Рәсәйгә ҡасҡан Кесе жүз ханы Нуралы XVIII быуат аҙағында Өфөлә йәшәй һәм ошонда үлә.

Өфө администрацияһының билдәле үҙ аллылығы, дәүләттең баш ҡалаһынан алыҫта булыуы, башҡорт халҡының хоҡуҡһыҙлығы йыш ҡына айырым чиновниктарҙың сикһеҙ баш-баштаҡлыҡтар эшләүенә килтергән. 1735 йылда И. К. Кирилов Министрҙар кабинетына төрмәгә ябылған башҡорттарҙың хәле тураһында тәрән асыу менән яҙған: «бында... элек-электән воевода ундай кешеләр менән һатыу итә, тоҡҡондар воеводаның һәм приказ кешеләренең теләһә ниндәй эштәрен башҡара» [1].

Яһаҡ йыйыусылар, табышсылар һ. б. һәр төрлө чиновниктарҙан да халыҡ бик күп йәберләүҙәр кисергән. Мәҫәлән, 1704 йылда табышсылар А. Жихарев һәм М. Дохов Өфөгә киләләр һәм үҙ эшмәкәрлектәрен киң йәйелдерәләр. Уларҙың тәҡдиме буйынса башҡорт халҡына 72 төрлө яңы оброк һалына. Шул иҫәптә күҙ төҫөнә оброк та була. Өҫтәмә йыйымдар менән бер рәттән «табыш статьяларында» мосолмандарҙың дини тойғоларын кәмһетеүсе талаптар ҙа булған: мәсеттәрҙе христиан сиркәүҙәре өлгөһөндә төҙөү, никахҡа ингәндә мулланы ғына түгел, мотлаҡ рус руханийын да саҡырыу һ. б. Был яңы статьялар башҡорттарҙың асыуын ҡабартҡан. Улар үҙҙәренең

[1] ЦГАДА, ф. Сенат, кн. 54/1131, л. 64.

дини инаныуҙарына ҡағылған был указды батшаның сығарыуына ышанмағандар, «император ғали йәнәптәренән уларҙың атай-олатайҙарына былдай кәмһетеүҙең булғаны юҡ» тип белдереп, «бәхәсләшкәндәр». Был указ Ағиҙел яры буйында иғлан ителгән. Кәмһетелгән башҡорттар табышсылар өҫтөнә ташланған, уларҙы туҡмаған, ә указды һыуға атып бәргән [1].

1705 йылда карателдәр отряды башында Өфөгә килгән Ҡазан комиссары А. Сергеевтың эштәре урындағы халыҡта айырыуса ҙур ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙырған. Сергеев бөтә дүрт юл башҡорттары һайлаған вәкилдәрҙе үҙенә саҡыртҡан да уларҙан аттар һәм армияға кешеләр ебәрергә ризалыҡ биреүҙәрен талап иткән. Үҙенең талаптарын ул туҡмау һәм йәберләүҙәр менән нығытҡан. Был хаҡтағы сағыу яҙмалар шул саҡтағы документтарҙа һаҡланған. Вәкилдәрҙе һәм шул саҡта ҡалала булған бөтә башҡорттарҙы Сергеев «ныҡ бинаға» бикләткән дә әсегән бал һәм шарап менән һыйларға тотонған. Баш тартыусыларҙы «көсләп эсергән». «...Уларҙың мәзин-муллаларын да, ахундарын да эсергән; ә әгәр ҙә берәйһе эсмәй башлаһа, уларҙы таяҡ менән туҡмаған һәм көсләп эсергән, иҫергәндәре иҫһеҙ ауған, ул иҫһеҙ ятҡан кешеләрҙе дары менән өткән, һаламға ут төрткән, ҡулдарына май шәм йәбештергән, башҡаларының устарына дары һалып ут төрткән... иҫһеҙ ауғандарҙы ҡайтанан аяғына баҫтырған һәм ҡыҫтап эсергән, үлтереп бөтөрөргә теләгән». Әммә батша ялсыһының кешеләрҙе мәсхәрәләүе быны менән генә бөтмәгән әле: «улар иҫерешеп тәгәрәгәс, Сергеев үҙе улар ятҡан бинаға ингән, ҡулындағы көҙгөһөн ҡояшҡа ҡаршы тотоп, иҫһеҙ ятҡан теләһә ҡайһы кешенең битен һәм башын бешергән, берәйһе иҫенә килһә, уны үлтерер өсөн тағы эсергән». Быдай «һыйлауҙан» һуң бер нисә кеше үлгән [2].

Урындағы властарҙың ришүәт алыуы һәм талауы, ғәҙелһеҙлеге һәм аяуһыҙлығы башҡорттарҙың батша исеменә ялыуҙар һәм коллектив үтенестәр яҙыуына килтергән, шулай уҡ халыҡта өнһөҙ ҡәнәғәтһеҙлектең тупланыуына булышлыҡ иткән.

## § 3. Өфө 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы осоронда

XVII—XVIII быуаттарҙа Башҡортостанда милли һәм крепостниклыҡ иҙеүенең көсәйә барыуы, быны Өфө администрацияһының ғәмәлгә ашырыуы халыҡ сығыштарын баҫтырыуҙа Өфөнөң урынын билдәләгән. Восстаниелар осоронда уларға ҡаршы көрәш үҙәге булып торған ҡаланы баш күтәреүселәр царизмдың терәге итеп һанаған.

---

[1] Лебедев В. И. Башкирское восстание 1705—1711 гг. — Исторические записки, № 1. М., 1937, 85-се бит.

[2] Материалы по истории Башкирской АССР, 1-се киҫәк, 113-сө бит.

Шуға улар күп тапҡырҙар Өфөнө приступ менән алырға, ундағы вазифалы кешеләрҙе яуапҡа тарттырырға маташҡан.

1677 йылда уҡ әле баш күтәргән башҡорттар Өфөгә ҡаршы поход ойоштора. XVIII быуаттың беренсе яртыһындағы башҡорт восстаниеларының иң мөһим ваҡиғалары Өфө менән бәйләнгән. 1704 йылда яңы оброк статьяларын индереү, комиссар А. Сергеевтың баш-баштаҡлыҡтары халыҡ асыуының көсәйеүенә килтерә һәм башҡорттарҙың баш күтәреүенә сәбәп була. Волга буйындағы хөкүмәт ғәскәрҙәре Өфөгә ярҙамға ебәрелә, улар ҡалаға триумфаль арка аша тантаналы килеп инә; Минзәлә эргәһендә әсир ителгән баш күтәреүселәр ҙә ошо уҡ арка аша ҡалаға килтерелә. Восстание көсәйә бара. 1706 йылда Өфөнән 200 саҡрым алыҫлыҡта баш күтәреүселәр ҡалаға килеүсе яңы билдәләнгән воевода С. Аристовты ҡулға алалар. 1707—1708 йылдарҙа ҡаланың тирә-яғында хәрби хәрәкәттәр яңынан көсәйеп китә, баш күтәреүселәр асылда ҡаланы ҡамап ала, уның башҡа ҡалалар менән бәйләнеше өҙөлә. Тик 1708 йылдың яҙында ғына батша ғәскәрҙәре ныҡышмалы көрәштән һуң ҡамау ҡулсаһын өҙөүгә өлгәшә. 1711 йылда Нуғай һәм Ҡазан юлы башҡорттарының Өфөгә яңы поход ойоштороуҙары хаҡында мәғлүмәттәр бар [1].

1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғалары ҡала тарихында иң мөһимдәре була. Баш күтәреүселәрҙең күп милләтле армияһы ғәскәрҙәре ҡала стеналары эргәһенә үк килеп етә. Өфөнө ҡамау халыҡ эше өсөн ҡыйыу көрәшсе, Дон казагы Е. И. Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышының бөтә барышына үҙ тамғаһын һала.

1773 йылдың көҙөндә Ырымбур губернаһының көньяғында башланған был хәрәкәт күрше райондарға бик тиҙ тарала. Пугачев манифестары һәм уның ғәскәрҙәренең уңыштары тураһындағы хәбәрҙәр йоғонтоһонда Башҡортостан халҡы ла ҡол итеүселәргә ҡаршы көрәшкә күтәрелә. Баш күтәреүселәрҙең бер өлөшө Ырымбур эргәһенә, Пугачевтың Бердалағы лагерына йүнәлә, башҡалары Өфө тирәһенә туплана. Ноябрь аҙағында баш күтәргән башҡорттар отряды ҡала эргәһендәге Чесноковка ауылын яулап ала. Унда йәшәүсе дәүләт крәҫтиәндәре ҙур теләк менән баш күтәреүселәргә ҡушыла. Тиҙҙән ҡала тирәһендәге башҡа рус ауылдарында йәшәүселәр ҙә улар яғына баҫа. Шулай итеп, Крәҫтиәндәр һуғышының тәүге этабында уның икенсе, төньяҡтағы, үҙәге булып әүерелгән атаҡлы Чесноковка лагеры барлыҡҡа килә башлай. Баш күтәреүселәрҙең бер өлөшө Богородский ауылында лагерь булып урынлаша. Улар Чесноковкалағы төп лагерға тулыһынса буйһона.

Баш күтәреүселәрҙең лагеры барлыҡҡа килеүҙән борсолған Өфө провинция канцелярияһы 27 ноябрҙә былай тип донос яҙа: «Өфө өйә-

---

[1] Акманов И. Г. Башкирское восстание 1704—1711 гг.— Ученые записки Башкирского государственного университета. Серия исторических наук, 35-се сығарылыш, № 7. Өфө, 1968, 79-сы бит.

ҙе башҡорттары ҙур төркөмдәр булып ҡала эргәһендә һыбай йөрөйҙәр һәм бер ҡайҙа ла үтергә бирмәйҙәр, ә ҡаланан сығыусылар булһа, уларҙы тоталар, талайҙар һәм туҡмайҙар»[1]. Ноябрь аҙағында ҡала баш күтәреүселәрҙең тығыҙ ҡулсаһы менән уратып алына. Ҡамауҙағылар алып барған «Өфө коменданты канцелярияһы журналында» 28 ноябрҙә түбәндәгеләр яҙылған: «...инде Өфө ҡалаһы бөтә яҡтан да яуыз башҡорттар һәм улар эргәһендә йәшәгән яһаҡ түләүсе татарҙар, помещиктар, һарай һәм экономик крәҫтиәндәр менән уратып алынды һәм ысын ҡамауҙа ҡалды»[2].

Царизм иҙеүенән борҙәй яфаланған төрлө халыҡтарҙың вәкилдәре Чесноковка лагерына ағыла. Ындағы айырым башҡорт һәм мишәр отрядтарына Ҡасҡын Һамаров, Канбулат Юлдашев, Ибраһим Мерәсев, Түрәй Ишәлин һ. б. етәкселек итә. 1773 йылдың көҙөндә баш күтәреүселәргә ҡушылған һәм Пугачевтан подполковник званиеһы алған Өфө казактары капралы Иван Губанов рус отрядының етәксеһе була.

Ноябрь — декабрь айҙарында Чесноковка лагеры етәкселәре ҡамауҙағылар менән бәйләнешкә инергә тырыша. 29 ноябрҙә башҡорттарҙың бер отряды ҡала стеналарына яҡын уҡ килә һәм ҡалалағыларға һөйләшеүҙәр башларға тәҡдим итә. Иртәгеһенә башҡа отрядтар күренә, улар ҡайтанан «ҡысҡырып... ҡаланы тапшырыуҙарын, ҡала кешеләренең полковник һәм комендант Мясоедовты, воевода Борисовты үҙҙәренә тотоп биреүҙәрен талап итәләр, һәм әгәр ҙә улар тотоп бирелһә, Өфө ҡалаһында йәшәүселәр менән һуғышмаҫҡа, уларҙың береһен дә таламаҫҡа...»[3] вәғәҙә итәләр. 10—14 декабрҙә баш күтәреүселәр күп тапҡырҙар ҡаланы ирекле тапшырыу тураһында һөйләшеүҙәрҙе башларға тырышалар, Өфөгә үҙҙәренең агитаторҙарын, Пугачевтың рус һәм татар телдәрендә яҙылған хаттарын, өндәмәләрен һәм манифестарын ебәрәләр.

Е. И. Пугачев Өфөнө ҡамауҙың ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булыуын дөрөҫ баһалай. Ҡамауға етәкселек итеү өсөн ул бында үҙенең иң талантлы көрәштәштәренең береһен — ҡыйыу һәм тәүәккәл Яйыҡ казагы И. Н. Зарубин-Чиканы ебәрә, уға граф И. Чернышев исеме һәм киң полномочиелар бирә. 12 декабрҙә Зарубин Чесноковка лагерына килә; уның килеүе менән баш күтәреүселәр хәрәкәттәренең ойошҡанлығы күтәрелә. Ул баш күтәреүселәр араһында тыуып торған низағтарҙы, айырым отрядтарҙың хәрәкәтендәге килешмәүсәнлекте бөтөрөү генә түгел, Берда лагерындағы тәртиптәрҙе бында

---

[1] Крестьянская война в России в 1773—1775 гг., II том. Л., 1966, 219-сы бит.

[2] 1773 йылдың 24 ноябренән 1774 йылдың 24 мартына тиклем Өфө эргәһендә И. Н. Зарубин-Чиканың баш күтәреүселәр отрядтарына ҡаршы хәрби хәрәкәттәр барышы тураһында Өфө коменданты канцелярияһы журналы (Р. В. Овчинников әҙерләгән). — Южно-Уральский археографический сборник. 1-се сығарылыш. Өфө, 1973, 309-сы бит.

[3] Журнал Уфимской комендантской канцелярии, 309-сы бит.

күсереп, уларҙы берҙәм армияға туплауға өлгәшә. Шунан һуң Чесноковкалағы отряд «Икенсе армия» исемен ала.

Тәүге осорҙа Зарубин-Чика ла Өфөнө һаҡлаусыларҙы ҡаланы ирекле тапшырыуға күндерергә тырышып ҡарай. Ошо маҡсат менән ул 19 декабрҙә элегерәк әсир ителгән 48 өфөлөнө иреккә сығара. Ләкин тиҙҙән, тыныс һөйләшеүҙәрҙең һөҙөмтә бирмәүен күреп, Чесноковка штабы ҡаланы генераль штурмлауға әҙерлек эштәрен башлай. Өфө эргәһендә көс туплау һөҙөмтәһендә бында баш күтәреүселәр һаны ваҡыты менән 12—15 меңгә етә.

Ҡамауҙағылар ҙа һуғышҡа әҙерләнә. 15-тән 70 йәшкә тиклемгә ҡорал тота алған һәр кем сафҡа баҫтырыла. Инвалидтар командаһынан һәм казактарҙан торған гарнизон ҡаланы һаҡлаусыларҙың үҙәк өлөшөн тәшкил итә. Дворяндар, сауҙагәрҙәр һәм чиновниктар уның тирәһенә туплана. Ҡаланы һаҡлаусыларҙың дөйөм һаны 1120 генә кеше тәшкил итә, ләкин улар мылтыҡтар һәм байтаҡ пушкалар менән ҡоралланған була. Ҡамауҙағыларҙың башҡа өҫтөнлөктәре лә ҙур роль уйнай. Уларҙың береһе — ҡаланың оборона өсөн уңайлы урынлашҡан булыуы. Ҙур баструктың һаҡланып ҡалған нығытмалары, етди ҡаршылыҡ була алмаһа ла, билдәле бер роль уйнай. Һәр урам башындағы баструк ҡапҡаһында йәки уның алдында 40—60 кешенән торған пикеттар һәм 1—2 туп ҡуйыла. Барлығы 13 пикет була. Әммә ҡаланы һаҡлаусылар араһында ла берҙәмлек булмай, сөнки халыҡтың байтаҡ өлөшө — ялсылар, посад ярлылары, һалдаттар, әсир поляктар эстән генә баш күтәреүселәргә теләктәш була.

22 декабрҙә баш күтәреүселәр разведка өсөн атака яһай, унда сағыштырмаса ҙур булмаған көстәр ҡатнаша. Иртәгеһенә иртәнсәк Зарубин үҙенең бөтә көстәрен ҡаланы штурмлауға ташлай. Ғәскәрҙең хәрәкәтен күреп, ҡамауҙағылар ут аса. Ағиҙел аръяғынан баш күтәреүселәрҙең туптары ла ата башлай. Уларҙың икеһен ҙур ҡыйынлыҡ менән йылға аша алып сығалар һәм насарыраҡ һаҡланған Усольский урамына ҡаршы ҡуялар. Артиллерия утына ышыҡланып, баш күтәреүселәр һөжүмгә ташлана. Һигеҙ сәғәтлек ҡаты һуғыштан һуң улар, 80 кешеләрен һәм туптарының икеһен дә юғалтып, сигенергә мәжбүр була.

Тәүге штурмдың уңышһыҙ тамамланыуы баш күтәреүселәрҙе планлы ҡамауға күсергә мәжбүр итә. Ҡалала халыҡ өсөн аҙыҡ-түлек, малға — бесән, утын етешмәй. Тулы ҡамауҙың мөһимлеген аңлап, баш күтәреүселәр күрше ауылдар иҫәбенә Өфөнө тәьмин итеүҙе яйға һалырға маташҡан ҡала кешеләренең ҡамауҙан сығыу өсөн яһаған һөжүмдәрен кире ҡағырға тырыша. Был көндәрҙә хәрәкәткә теләктәш кешеләрҙең һәм төркөмдәрҙең ҡаланан ҡасыу һәм баш күтәреүселәргә ҡушылыу осраҡтары йышая.

1774 йылдың 25 ғинуарында пугачевсылар ҡалаға икенсе һәм һуңғы тапҡыр штурм яһай. Ул яҡшыраҡ әҙерләнә һәм ҙурыраҡ ны-

ҡышмалылыҡ менән алып барыла. Атака дүрт яҡтан бер үк ваҡытта тип әйтерлек башлана: Чесноковка яғынан Ағиҙел боҙо өҫтөнә ҡуйылған туптарҙың уты ышығында йылға аша, Ҡазан һәм Себер юлдары яғынан һәм, аҙаҡ килеп, көньяҡ-көнбайыштан — йәнәшә тип әйтерлек урынлашҡан Ильинский һәм Фроловский ҡапҡаларына һөжүм итәләр. Штурмда атлылар һәм саңғысылар ҙа ҡатнаша. Шаһиттарҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, улар «ҡалаға бөтә яҡтарҙан да туптарҙан атып, бик ҙур дәрт һәм шау-шыу менән һөжүмгә ташлана» [1]. Төньяҡ-көнсығыштан И. Губановтың отряды һөжүм итә. Ике мең кешелек отрядтың Ағиҙел аша һөжүмен И. Зарубин үҙе етәкләй. Һуғыш барышында ул менгән ат һәләк була. Был юлы баш күтәреүселәр арыу уҡ уңышҡа өлгәшә: зарубинсылар баш батареяны һәм Усольский ҡалҡыулығын, Губанов отряды Себер урамының бер өлөшөн баҫып ала. Ләкин насар ҡоралланған һәм һуғыш алымдарына өйрәтелмәгән халыҡ ғәскәре яулап алынған позицияларҙы үҙ ҡулында тота алмай, Зарубиндың һәм башҡа етәкселәренең бөтә тырышлыҡтарына һәм шәхси батырлыҡтарына ҡарамаҫтан, үлеләр һәм әсирҙәр иҫәбенә ҙур юғалтыуҙар кисереп, кире сигенә.

Ғинуар штурмы уңышһыҙ тамамланғандан һуң, баш күтәреүселәр ҡаланы ҡамауҙа тотоу, уға килгән юлдарҙы ҡырҡылған ағастар менән кәртәләү, шулай уҡ ҡала ситтәрен ара-тирә утҡа тотоу менән генә сикләнә. Улар ҡалала башланған аслыҡ һәм ауырыуҙар ваҡыт үтеү менән гарнизонды һуғышһыҙ бирелергә мәжбүр итер тип ышана.

1774 йылдың яҙында Ҡазандан ҡамауҙағы Өфөгә ярҙамға генерал-майор А. Л. Ларионов командаһындағы регуляр ғәскәрҙәр юлға сыға. Тиҙҙән ул генерал подполковник И. И. Михельсон менән алмаштырыла. 18 мартта Михельсон Чесноковкаға ҡаты һөжүм башлай. Тәүәккәл ҡаршылыҡ күрһәтеүҙәренә ҡарамаҫтан, 24 мартта баш күтәреүселәр еңелә. И. Зарубин һәм И. Губанов казактарҙың ҙур булмаған төркөмө менән Табынск ҡаласығына ҡаса, унда уларҙы тоталар һәм карателдәргә тапшыралар. 4 апрелдә Михельсон ғәскәрҙәре Өфөгә тантаналы инә. Әсир төшкән баш күтәреүселәрҙең бер өлөшөн, шул иҫәптән Зарубинды ла, бында күсерәләр. Ҡалаға килеп ингәс, карателдәр халыҡ алдында массовый язалауҙар үткәрә. Тере ҡалған әсирҙәр төрмәлә генә түгел, башҡа таш биналарҙа ла бикле тотола.

Апрелдең икенсе яртыһында Михельсон ғәскәрҙәре Өфөнән Башҡортостандың төпкөлөнә юлға сыға.

Сиктән тыш аяуһыҙлыҡ менән баҫтырылған восстание бик тиҙҙән Өфө районында яңы көс менән тоҡанып китә. Апрель аҙағында уҡ инде Өфө провинция канцелярияһы ҙур борсолоу менән ҡала

---

[1] Журнал Уфимской комендантской канцелярии, 320-се бит.

Пугачев ғәскәрҙәренең Өфөнө ҡамауы. *Рәссам А. Лежнев картинаһынан.*



ҡалған ғәскәрҙәр оборона өсөн «бөтөнләй етерлек түгел»[1], — тип яҙа. Өфө властарының ҡурҡыуы нигеҙле була һәм тиҙҙән раҫлана.

Июндә баш күтәреүселәр Өфөнө ҡамарға тотона. Көнсығыштан — Салауат Юлаев отряды, көньяҡтан мишәр полковнигы Ҡәнзәфәр Усаев отряды уға яҡынлаша. Көнбайыштан килгән Ҡазан юлы башҡорттарының отряды ҡамауҙы тамамлай. Өфө ҡайтанан тулыһынса ҡамауҙа ҡалыр кеүек була. Ләкин улай барып сыҡмай. Хөкүмәт ғәскәрҙәре баш күтәреүселәрҙең Өфөгә йәйге һөжүмен өҙә. Июль уртаһында генерал П. М. Голицындың Ырымбурҙан ебәрелгән корпусы ҡалаға килеп инә. Баш күтәреүселәр ғәскәре, Өфөгә килеп етмәҫ борон уҡ еңелеп, сигенә һәм үҙенең хәрәкәттәрен башҡа райондарға күсерә.

1774 йылдың аҙағында — 1775 йылдың башында Өфө баш күтәреүселәрҙең эштәрен тикшереү һәм уларҙы язалау үҙәктәренең береһенә әүерелә. 1774 йылдың көҙө аҙағында карателдәр Салауат Юлаевты һәм уның атаһы Юлай Аҙналинды ҡалаға килтерә һәм

[1] Крестьянская война в России в 1773—1775 гг., III том. Л., 1970, 48-се бит.

Смоленск соборының подвалына яба. Тиҙҙән уларҙы Ҡазанға оҙаталар; бер аҙ әлегерәк Зарубин-Чиканы ла шунда уҡ алып китәләр. Крәҫтиәндәр хәрәкәтенең йөҙәрләгән ябай ҡатнашсылары Өфө төрмәләрендә яфаланыуын дауам итә. Өфө воеводаһы А. Н. Борисов Ҡазандағы йәшерен комиссияға яҙған рапортында әсир төшкән баш күтәреүселәр тотолған шарттарҙы түбәндәгесә һүрәтләй: «Ә улар бындағы берҙән-бер баструкта тотола, унда ҙур булмаған ике казарма ғына бар, ә хәҙер инде көҙ етә, артабан ҡаты һыуыҡтар ҙа булыуы мөмкин, ә улар бөтәһе лә кейемһеҙ, әгәр ҙә уларҙы ҡарауыл аҫтында тотоуҙы дауам итһәң, ундай осраҡта был яфаларҙан улар үләсәк... Ул ҡалыптағылар бөтәһе лә кешеләр ни килтерһә, шуны ғына ашап йән аҫрай, бик күптәре үлдө инде һәм әле лә үләләр» [1].

1774 йылдың көҙөндә Өфөнө ҡамауға етәкселек итеүселәрҙең береһен — И. Губановты язалап үлтерәләр. Урындағы йылъяҙмала күрһәтелеүенсә, 1774 йылдың 19 октябрендә ҡаланың үҙәк майҙанында уның башын киҫкәндәр. «Уның башын,— тип яҙа йылъяҙма авторы,— палачтан алып юғары күтәрҙеләр һәм халыҡҡа күрһәттеләр, ә һуңынан кәүҙәһен башы менән бергә күтәреп ошонда яһалған эшафотҡа һалдылар» [2]. Халыҡ телендә уны Ағиҙел аръяғында Ырымбур юлы буйында ерләгәндәр тип һөйләнелә. Бер үк ваҡытта Себер урамы осонда ҡаланы ҡамауҙа ҡатнашҡан ике кешене аҫҡандар, йөҙләп кешене сыбыртҡы һәм ҡамсы менән һуҡтырғандар.

1775 йылдың 24 ғинуарында дворяндар реакцияһы Чесноковка лагерының етәксеһе И. Н. Зарубин-Чиканан үс ала. Мәскәүҙә Е. И. Пугачевты язалауҙа булғандан һуң, уны кире Өфөгә алып ҡайталар. Пугачев «атаманын һәм поход полковнигын» Ағиҙел аръяғында, ул штурмдарға етәкселек иткән урында, язалайҙар. Карателдәр йылға яры буйында ҡала тәңгәлендә махсус эшафот төҙөй, уның эсенә һалам һәм ыҫмала тултыра. Приговор уҡылғандан һуң, Зарубиндың башын сабып өҙәләр. Уның ҡанға батҡан башын бейек бағана башына ҡуялар, эшафотты уның кәүҙәһе менән бергә яндыралар һәм көлөн елгә осоралар.

Баш күтәргән башҡорттарҙың етәксеһе Салауат Юлаевтың һәм уның атаһы Юлай Аҙналиндың эштәрен ахырғаса тикшереү урыны итеп тә хөкүмәт Өфөнө һайлай. 1775 йылдың 20 июлендә уларға приговор уҡыла. Ҡыҙған тимер менән keләймә һалынғандан һәм үҙ эшмәкәрлектәренең иң мөһим урындарында сыбыртҡы менән туҡмалғандан һуң, Салауат һәм Юлай Рогервикка ғүмерлек каторга эштәренә оҙатылырға тейеш булалар. Өфөнән улар яндырылған һәм таланған Башҡортостан буйлап үҙҙәренең ике айға һуҙылған ауыр юлына сыға. Күп тапҡырҙар туҡмау һәм мәсхәрәләүҙәрҙән яфа сигеп, Өфөгә урап ҡайтҡас, уларҙы яңы ғазаптарға дусар итәләр: вое-

---

[1] ЦГАДА, Дәүләт архивы, разряд VI, д. 443, л. 1, 2. (Был документты Р. В. Овчинников күрһәтә.)

[2] ГИМ, ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 22/II.

воданың талабы буйынса Салауаттың бөтәшергә өлгөргән танау япраҡтары ҡайтанан «таҙартыла», ә Юлайҙың уңалып килгән келәймәһе яңынан баҫыла.

Царизм халыҡ юлбашсыларынан шулай үс ала.

Крәҫтиәндәр һуғышы ваҡиғалары Өфөнөң тормошонда билдәле бер сик булып тора, улар менән ҡала тарихының тотош бер дәүере тамамлана. Восстание аяуһыҙ баҫтырылғандан һуң, ҙур баструктың иҫке нығытмалары асылда юҡҡа сыға. Уларҙың ҡалдыҡтары баш күтәреүселәр армияһы ғәскәрҙәре ҡаланы штурмлағанда һепереп түгелә. Хәҙер инде уларҙы аяҡҡа баҫтырыуҙың кәрәге лә ҡалмай. Бәләкәй ҡала административ үҙәк сифатында үҙенең һуңғы көндәрен кисерә, ул күптән инде бюрократик учреждениеларҙың киң селтәрен һыйҙыра алмай. Баш күтәреүселәрҙең ҡамауы һәм ике штурмы ҡала хужалығына ғәйәт ҙур зыян килтерә; ҡаланың ситтәре һәм биҫтәләре айырыуса ҙур ҡаза күрә, күп кенә йорттар һәм йәмәғәт ҡаралтылары утта янып юҡҡа сыға. Аслыҡ һәм малдар ҡырылыуҙың эҙемтәләре оҙаҡ ҡына ваҡыт үҙен һиҙҙерә.

Өфө тормоштоң бөтә укладында мөһим үҙгәрештәр алдына килеп баҫа.

# *Өфө крепостной короллоштоң таркалыуы һәм кризисы осоронда*

## § 1. Территория. Ҡала хужалығы. Промышленность һәм сауҙа

Е. И. Пугачев етәкселегендәге 1773—1775 йылдарҙағы крәҫтиәндәр һуғышы дворяндар империяһын нигеҙенән ҡаҡшатты, урындағы идараның йомшаҡлығын күрһәтте һәм элегерәк билдәләнгән административ реформаларҙы үткәреүҙе тиҙләтте. 1775 йылда иғлан ителгән губерна реформаһы үҙәктә һәм урындарҙа чиновниктар-дворяндар аппаратын һәм унда дворяндар сословиеһының хакимлығын нығытырға тейеш булған.

Реформа аҡрынлап үткәрелгән. Ырымбур губернаһына сират 1781 йылда килеп еткән, уның урынына ике өлкә — Өфө һәм Ырымбур өлкәләре составында Өфө наместничествоһы төҙөлгән.

Һәр өлкә өйәҙҙәргә бүленгән: Өфө өлкәһе —8, Ырымбур өлкәһе 4 өйәҙгә бүленгән. Ҡалалар айырым административ берәмектәр итеп билдәләнгән. Наместничество администрацияһы башында ҙур власть бирелгән генерал-губернатор (наместник) торған. Өлкәләргә наместникка буйһонған губернатор идара иткән. Наместниктың резиденцияһы Өфө булған да инде.

Батша администрацияһы наместничество төҙөлөүен бай һәм ҡупшы итеп ойошторорға тырышҡан. Өфөгә уны тантаналы асыу церемонияһына (ул 1782 йылдың 29 апрелендә булған) яңы наместничествоның тәүге генерал-губернаторы генерал-поручик И. В. Якоби килгән.

Ошо уңай менән Өфө урамдарында ҡала чиновниктарының тантаналы йөрөшө, балдар, сиркәүҙә тантаналы ғибәҙәт ҡылыуҙар ойошторолған. Айырыуса ҙур биналар иллюминация менән биҙәлгән. Кисен ҡала халҡы һауала гөлтөлдәгән фейерверк уттарын күҙәткән, дворяндар йорттарынан ишетелгән дәртле музыка тауыштарын тыңлаған. Наместничество асылыу хөрмәтенә «туптан һәм мылтыҡтан атыуҙар» [1] ойошторолған.

[1] ГИМ, ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 23, 24.

Бөтә был шау-шыулы тантаналар, уларҙы ойоштороусыларҙың фекеренсә, ябай ҡала халҡында тәьҫир ҡалдырырға, батша власының һәм уның урындарҙағы администрацияһының ныҡлығына һәм ҡаҡшамаҫлығына ышаныс тыуҙырырға тейеш була.

30 апрелдә наместничество чиновниктары үҙҙәренең көндәлек эштәренә тотонған.

Башында генерал-губернатор торған наместничество идараһы крайҙа иң юғары башҡарма орган булып торған; ул хөкүмәт бойороҡтарын иғлан иткән һәм уларҙың үтәлешен күҙәтеүҙе ғәмәлгә ашырған. Ҡаҙна палатаһы промышленноска, налогтар йыйыуға, килем һәм сығымдарға идара иткән. Йәмәғәт хәстәрлеге приказы яңы учреждение булған, ул аҙ һанлы мәктәптәргә, больницаларға, приюттарға һ. б. ш. идара иткән. Суд төҙөлөшө тулыһынса сословие принцибына буйһондоролған: дворяндар өсөн айырым судтар (өйәҙҙәрҙә — түбәнге земство судтары, губерналарҙа — юғары земство судтары) индерелгән, ҡала халҡын городовойҙар һәм губерна магистраттары хөкөм иткән; дәүләт крәҫтиәндәре өйәҙҙәрҙә — түбәнге расправалар, губерналарҙа юғары расправалар хөкөмөндә булған.

Өфөнөң төпкөл провинциаль ҡаланан ҙур крайға хәрби һәм гражданский идара итеү * үҙәгенә әүерелеүе ҡала төҙөлөшөнөң һәм ҡала хужалығының үҫеүенә булышлыҡ иткән.

XVIII быуат аҙағында Өфө Сутолока йылғаһы ярҙарында уның Ағиҙел йылғаһына ҡойған урынында урынлашҡан булған һәм 32 урамдан, тыҡрыҡтан һәм биҫтәнән торған. Ул буйы 1200 һәм киңлеге 500 сажин булған территорияны биләгән. Өфөнөң хәрби топограф тарафынан эшләнгән шул замандағы тасуирланышы һаҡланып ҡалған: «Был ҡала һигеҙ ҙур һәм тәрән йырын араһында ята, шуларҙың береһенән, ҡала арҡыры үткәненән, Сутолока йылғаһы аға. Һәм ул (ҡала.— *Ред.*) бейек тауҙар менән уратып алынған» [1]. Ҡалала төҙөлөш стихиялы рәүештә, берҙәм планһыҙ барған. Илдең башҡа ҡалаларында ла төҙөлөш бынан яҡшыраҡ алып барылмау сәбәпле, хөкүмәт XIX быуат башынан алып ҡалала төҙөлөштө регламентациялай башлай.

1803 йылда раҫланған план буйынса Өфөнө сағыштырмаса тигеҙ һәм ҡоро урынға күсереү күҙҙә тотолған. Ләкин күпселек ҡала халҡының көсө етмәү сәбәпле, был план тормошҡа ашырылмай ҡала. Шуға күрә генерал-губернатор Г. С. Волконский пландың яңы проектын тапшырған, һәм ул, аныҡлыҡ индерелгәндән һуң, 1819 йыл-

---

* 1796 йылда Өфө наместничествоһын үҙәге Ырымбурҙа булған Ырымбур губернаһына үҙгәртеү уңайы менән Өфө яңынан өйәҙ ҡалаһы булған. 1802 йылда ғына ул яңынан губерна ҡалаһы — гражданский губернатор һәм губерна учреждениелары резиденцияһы статутын ала. Ырымбур иһә Ырымбур крайына хәрби идара итеүҙе ғәмәлгә ашырыусы генерал-губернатор (хәрби губернатор) резиденцияһы булып ҡала.

[1] ЦГВИА, ф. ВУА, оп. 1, д. 18 895, л. 50.

Духовный семинария.



дың 3 мартында батша хөкүмәте тарафынан раҫлапа. 1819 йылғы генераль план буйынса ҡаланы Телеграф урамынан (хәҙерге Цюрупа урамы) Никольский урамына (хәҙерге М. Ғафури урамы) тиклем һәм Ағиҙел йылғаһынан алып Богородский урамына (хәҙерге Революцион урамы) тиклем киңәйтеү ҡаралған.

Ҡаланы төҙөү башлыса халыҡ средстволары иҫәбенә үткәрелгән, сөнки был маҡсатҡа хөкүмәт ни бары 200 мең һум аҡса бүлгән. Был сумманың яртыһы ҡала кешеләренә йорт һалыу өсөн ссуда биреүгә тәғәйенләнгән була. Икенсе өлөшө ер эштәренә, соҡорҙар һәм йырындар аша күперҙәр һалыуға билдәләнгән була [1].

Ҡала XIX быуаттың 20-се йылдарынан алып айырыуса тиҙ үҫә башлай. 1860 йылға яңы ҡалала 139 квартал иҫәпләнә, ә иҫкеһендә 41 була [2]. Әгәр иҫке Өфөгә кәкре тар урамдар һәм тыҡрыҡтар характерлы булһа, яңы ҡалала иһә беҙ тура һәм сағыштырмаса киң урамдар, ҙур майҙандар күрәбеҙ. Ҡала бер-береһенән ярайһы ғына киң усадьбалар менән бүленгән йорттар төркөмөнән торған. Ҙур биналар аҙ булған. Улар араһында айырыуса иғтибар итерлек биналар булып 20-се йылдарҙа һалынған губернатор йорто (хәҙер 1-се һаплы ҡала клиник больницаһының поликлиника бүлеге — Туҡай ура-

---

[1] ГАОО, ф. 6, оп. 3, д. 5469, ч. 3, л. 2; ЦГА БАССР, ф. 352, оп. 1, д. 286, л. 549.

[2] «Оренбургские губернские ведомости», 1861, № 4; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 409, л. 107.

мы, 23), духовный семинария бинаһы (хәҙер С. М. Киров исемендәге завод бинаһы — К. Маркс урамы, 3) торған; 30-сы йылдарҙа ҡаланы гостиный двор (һуңынан кизе-мамыҡ комбинаты — Үрге сауҙа майҙаны, 35-се корпус) һәм губерна учреждениелары (хәҙер И. И. Мечников исемендәге вакцина һәм сывороткалар ғилми-тикшеренеү институтының донорҙар пункты — Фрунзе урамы. 45) биналары биҙәгән. 1852 йылда төҙөлгән губерна Дворяндар собраниеһы бинаһы (хәҙер Өфө сәнғәт институты — Ленин урамы, 14) XIX быуаттың беренсе яртыһындағы архитектура ҡомартҡыһы булып тора.

Ҡаланың торлаҡ фонды үҫкән. 1783 йылда 979 шәхси йорт булһа, 1800 йылда —1129, 1861 йылда инде 1991 [1] йорт була. Уларҙың бөтәһе лә тиерлек ағас йорттар булған. 1824 йылда Өфөлә ни бары 5 шәхси таш йорт иҫәпләнгән, ә 1857 йылда 59 йорт [2] була. Йорттарҙың сословиелар буйынса бүленешен 2-се таблица бик асыҡ күрһәтеп тора.

2-се таблица*

| Сословиелар \ Йорттар һаны | 1797 йыл | | 1810 йыл | | 1837 йыл | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | бөтәһе | процент-тарҙа | бөтәһе | процент-тарҙа | бөтәһе | процент-тарҙа |
| Дворяндар | 163 | 15,5 | 174 | 15,8 | 690 | 45 |
| Руханиҙар | 18 | 1,7 | 13 | 1,2 | 31 | 2 |
| Купецтар | 168 | 16,0 | 48 | 4,4 | 124 | 8,1 |
| Мещандар | — | — | 123 | 11,2 | 250 | 16,3 |
| Разночинецтар | 359 | 34,2 | 136 | 12,4 | — | — |
| Һалдаттар | 78 | 7,4 | 353 | 32,1 | 226 | 14,7 |
| Казактар | 265 | 25,2 | 229 | 20,9 | 200 | 13,1 |
| Крәҫтиәндәр (Нижегородка) | — | — | 22 | 2,0 | 12 | 0,8 |
| Бөтәһе | 1051 | 100 | 1098 | 100 | 1533 | 100 |

* Таблица түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса төҙөлгән: ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 79, л. 1019; ГАОО, ф. 6, оп. 3, д. 3305, л. 20; НА БФАН СССР, ф. 3, оп. 12, д. 107, л. 189.

Дворяндар, дин башлыҡтары һәм купецтар биләүендә булған йорттар һанының артыуы, күрәһең, шуның менән аңлатыла, торлак төҙөлөшө осөн ссуда менән нигеҙҙә ҡаланың бай кешеләре файҙалан-

[1] ГИМ, ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 31; Шевич В. С. Уфа.— Памятная книжка Оренбургской губернии на 1865 год. Өфө, б/г, 35-се бит; ЦГВИА, ф. ВУА, оп. 1, д. 18 895, л. 50.

[2] ЦГВИА, ф. ВУА, оп. 1, д. 18 896, л. 3; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 2, д. 68, л. 118.

ған. Шул уҡ ваҡытта ҡаланың йорт биләүселәре араһында казактар һәм һалдаттар өлөшө пыҡ кәмегән, уларҙың бер өлөшө Орск һәм Троицк крепостары араһындағы яңы сик буйы линияһына күсерелгән.

Ҡала ярлылары бәләкәй, иҫке йорттарҙа, йыш ҡына ҡыйығы һәм торбалары булмаған йорттарҙа йәшәгән. XVIII быуат аҙағында 200-гә яҡын землянка иҫәпләнеп, улар һалдаттарҙыҡы һәм һалдат ҡатындарыныҡы булған. Байҙар иһә бик күп бүлмәләре һәм ишек алдында һәр төрлө хужалыҡ ҡаралтылары булған ҙур йорттарҙы биләгәндәр. Мәҫәлән, П. Воскобойников тигән помещиктың ике ҡатлы таш йорто, уның эргәһендә таш флигель, йорт хеҙмәтселәре өсөн өй, баҙ, иген һаҡлау өсөн ике амбар, утын һарайы, ат аҙбары, мунса, мал һарайы, ҡоҙоҡ, йәшелсә һәм емеш баҡсалары булған.

40-сы йылдарға тиклем Өфө урамдары төҙөкләндерелмәгән. Ҡала халҡы туп-тура урамға ташлаған сүп-сар һәм тиреҫтән барлыҡҡа килгән үткеһеҙ бысраҡ арҡаһында яҙын һәм көҙөн ҡала буйлап йөрөргә момкин булмаған. «Кем Өфөлә булмаған, ул бысраҡ күрмәгән» — тигән өфөләр үҙ ҡалалары тураһында. Урамдарҙың транспорт йөрөй торған өлөшөн яҡшыртыу өсөн, шәхси йорттарҙың баһаланған һумынан 1 процент күләмендә аҡсалата махсус һалым индерелгән. 1848—1854 йылдарҙа мостовой йыйым көмөш менән 22 880 һум тәшкил иткән. Шунан башлап мостовойҙар төҙөү башланған. Соборный (хәҙерге Ярослав Гашек урамы), Оло Ҡазан, Александровский (хәҙерге К. Маркс урамы башы) урамдарына, Соборный (хәҙерге М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры территорияһы) һәм Үрге сауҙа (хәҙерге Өфө авиация институты территорияһы) майҙандарына таш түшәлгән. 1861 йылға Өфөлә таш түшәлгән урамдарҙың оҙонлоғо 14 саҡрымға еткән [1]. Ҡалған урамдарға таш йәйелмәгән.

Ҡаланың яңы өлөшөндә урамдар һәм кварталдар барлыҡҡа килеү менән, ағас ултыртыу башланған. Ләкин ағастарҙың күбеһе һәләк булған, уларҙы урам буйлап бер ниндәй ҡарауһыҙ йөрөгән кәзәләр ашаған. Өфөнөң йәшеллеген нисек тә һаҡлау өсөн, ҡала властары урамда йөрөгән мал өсөн мал хужаларынан 50 тиндән алып 1 һумға тиклем ассигнациялар менән штраф һала башлағандар [2]. 1833 йылда Фроловский, Садовый (хәҙерге Матросов урамы), Ильинский һәм Телеграф урамдары киҫешкән урында ҡала халҡына ял итеү өсөн тәүге йәмәғәт баҡсаһы төҙөлгән. Ҡараусыһы булмаған баҡса тиҙҙән ташландыҡ хәлгә килгән, ҡомағай кәзәләрҙең табышына әйләнгән. 1860—1861 йылдарҙа ғына ошо уҡ урында яңынан баҡса эшләйҙәр. Үрге сауҙа майҙанын әйләндереп алған йүкә аллеяһы, бульварҙар ял итеү өсөн өфөләрҙең яратҡан урыны булған.

---

[1] Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—62 г., икенсе киҫәк. СПб., 1863, 6-сы бит.

[2] ГАОО, ф. 6, оп. 3, д. 5417, л. 240.

Өфө урамдары һәм тыҡрыҡтары оҙаҡ ваҡыттар буйына яҡтыртылмаған. Төнгө ҡала буйлап йөрөү ҡурҡыныс булған. 1837 йылда ғына тәүге 50 фонарь ҡуйыла, ә 1852 йылға уларҙың һаны 437-гә етә [1]. Фонарҙар байҙар йәшәгән үҙәк райондарҙы ғына яҡтыртҡан. Ярлылар йәшәгән ҡала ситтәре иһә, бигерәк тә Иҫке Өфө, ҡараңғылыҡҡа сумған.

Өс яҡтан тулы һыулы йылғалар менән уратып алынған губерна ҡалаһы өсөн периферия менән даими бәйләнеш тотоуҙың ҙур әһәмиәте булған. 1795 йылда Ағиҙел йылғаһы аша күпер һалырға ынтылыш яһалған. Ләкин быны уңышһыҙ бөтөүе ҡала башлыҡтарының дәртен оҙаҡҡа һүндергән. Шуға күрә яҙын һәм йәйен ҡала кешеләренең тышҡы донъя менән берҙән-бер бәйләнеш сараһы йылға аша сығыуҙың ҡәҙимге средстволары — паромдар һәм кәмәләр була. Өфөләр көньяҡ райондарға Ырымбур переправаһы аша, көнбайышҡа — Вавилов, көньяҡ-көнбайышҡа — Стрешневский, көнсығышҡа Дудкино һәм Каменный переправалары аша йөрөгән; төньяҡҡа юл Сафронов переправаһы аша үткән.

1808 йылдың йәйендә Ырымбур переправаһында Өфөлә тәүге плашкоут (кәмәләрҙә) күпер һалалар, был күперҙән «үтеү иркен булып сыға, шуға граждандар бик ҡәнәғәт була» [2]. Шунда уҡ күпер аша сыҡҡан өсөн хаҡ ҡуялар: атҡа 1 тин, йәйәүлегә $^1/_2$ тин. Күперҙән файҙаланыу, ә ҡышын уны һаҡлау һәм ремонтлау губерна төҙөлөш комиссияһына йөкләтелгән.

Ҡала йылғаларға бай булһа ла, уның халҡы эсә торған һыуға ҡытлыҡ кисергән. Был тәү ҡарашҡа ғәжәп булып күренә. Ағиҙелдең текә, бейек ярҙары һәм уның үҙәктән алыҫ булыуы ҡала халҡының йылғанан файҙаланыуын ҡыйынлаштырған. Ағиҙелдән һыуҙы бер генә урында — төшөү урыны уңайлы итеп эшләнгән Ырымбур переправаһы янынан алғандар. Бынан Ағиҙел һыуы һыу ташыусылар тарафынан йорттар буйынса таратылған. 30—40-сы йылдарҙа Өфөлә тәүге ҡоҙоҡтар барлыҡҡа килгән. Мәҫәлән, Үрге сауҙа майҙанында ҡаҙна средствоһына 4 ҡоҙоҡ ҡаҙығандар, уларҙың береһе бассейн менән булған һәм бынан һыуҙы ҡала ярлылары, гостиный двор клиенттары алған. 1852 йылда 435 ҡоҙоҡ иҫәпләнгән, шуларҙың 9-ы ҡаҙнаныҡы һәм 426-һы айырым кешеләрҙеке (усадьба эргәһендәге) булған [3]. Ләкин ҡаты һәм эсеү өсөн аҙ яраҡлы булған ҡоҙоҡ һыуы хужалыҡ кәрәк-ярағына ғына тотонолған. Ҡалала йәшәүселәрҙе һыу менән тәьмин итеү һаман хәл ителмәгән проблема булып ҡалған.

XIX быуаттың беренсе яртыһында булған Өфө мупсалары ҡала хужалығының артталығын һәм элек урынлашҡан феодаль традиция-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 79, л. 1027; д. 409, л. 115.

[2] Дневник М. С. Ребелинского, II киҫәк, 165, 166-сы биттәр. Ҡулъяҙма БАССР Китап палатаһында һаҡлана.

[3] ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 409, л. 107.

XIX быуат уртаһында Өфөнөң бер күренеше (Ильинский һәм Соборный урамдары мөйөшө).



ларҙың тотороҡлологон асыҡ күрһәтеп торған. 13—15 мең халҡы булған Өфөнөң 40—50-се йылдарҙа, хаҡ түләп, бөтә кеше файҙалана алған бер генә мунсаһы булған. Ҡала халҡы, ҡағиҙә булараҡ, үҙ йортондағы мунсаларҙан файҙаланған, улар һәр дворҙа тиерлек мотлаҡ булған.

Ҡалаға килеүсе кешеләрҙе 1856 йылда 2 ҙур булмаған ҡунаҡхана хеҙмәтләндергән. 1860 йылда уларҙың һаны 5-кә еткән. Крәҫтиәндәрҙе, һөнәрселәрҙе, мещандарҙы һәм түбән сословиеларҙың башҡа вәкилдәрен 12 постоялый двор һыйындырған.

Һәр йыл һайын тиерлек сығып торған янғындар өфөләр өсөн ҙур бәхетһеҙлек булған. 1803 йылда ҡалала 77 йорт, 1804 йылда — 83, 1815 йылда — 53, 1816 йылда — 400, 1821 йылда 331 йорт янған [1]. Йорттарҙың тығыҙ ултырыуы һәм бигерәк тә Иҫке Өфөлә уларҙың тәртипһеҙ урынлашыуы, промышленность предприятиеларын, тимерлектәрҙе һәм мунсаларҙы торлаҡ ҡаралтыларына яҡын итеп һалыу, урамдарҙың иҫке-моҫҡо менән сүпләнгәнлеге, шулай уҡ ағастан төҙөлгән ҡалала янғынға ҡаршы средстволарҙың булмауы арҡаһында янғындар йыш сыҡҡан.

1827 йылда ғына ҡала халҡы средстволарына Өфөлә 12 кешенән торған, тейешле инструменттары булған тәүге янғын командаһы

[1] ГИМ ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 37—40, 46; ГАОО, ф. 6, оп. 2, д. 1093, л. 1, 2; оп. 3, д. 4785, л. 1; оп. 4, д. 7688, л. 1, 2.

төҙөлә. XIX быуат урталарында инде ул брандмейстерҙан, ике унтер-брандмейстерҙан һәм 46 рядовойҙан торған; янғын һүндереү өсөн 38 ат тотолған. 1855—1856 йылдарҙа янғын депоһын тотоуға киткән сығымдар йылына көмөш менән 3037 һумға еткән [1].

Бер үк ваҡытта промышленность биналары һәм тимерлектәр ҡала ситенә сығарылған, яңы төҙөлөш планлы рәүештә, янғынға ҡаршы сараларҙы еренә еткереп үтәп башҡарылған. Янғынға ҡаршы көрәш маҡсатында полиция киҫкен саралар ҡулланған: урамда тәмәке тартҡан өсөн, ишек алдында самауыр ҡайнатҡан өсөн көмөшләтә 50 тиндән алып 1 һумға тиклем штраф һалыу билдәләнгән [2].

XIX быуаттың икенсе сирегендә Өфөлә инде ҙур янғындар булмаған.

XIX быуаттың беренсе яртыһында ҡала халҡына врач ярҙамы күрһәтеү бер аҙ киңәйгән. Йәмәғәт хәстәрлеге приказы ҡарамағында 80 урынлыҡ больница, 80 урынлыҡ ҡарттар йорто һәм аҡылдан яҙғандар өсөн йорт булған. Өфө өсөн был һис тә етерлек булмаған. Медицина работниктары аҙ булған. XVIII быуат аҙағында —3 врач, XIX быуат башында —4, 30—40-сы йылдарҙа 9 (шул иҫәптән өйәҙ врачы, ике хосуси врач, гарнизон врачы һәм инспектор, оператор, акушер, ике ветеринария врачы составында губерна врачтар управаһы персоналы) иҫәпләнгән [3].

Халыҡты медикаменттар менән тәьмин итеү эше лә насар ҡуйылған була. Тәүге хосуси аптека 1787 йылда, ҡаҙнаныҡы 1807 йылда асылған [4]; быуат уртаһында икенсе хосуси аптека барлыҡҡа килгән. Ләкин уларҙың хеҙмәтләндереүенән дарыуҙарҙың ҡиммәтлеге арҡаһында бары тик хәлле кешеләр генә файҙалана алған. Больницаларҙа дауалаған өсөн дә түбән ҡатламдарҙың көсө етмәҫлек юғары хаҡ алынған.

Ҡаланың санитария ҡағиҙәләренә яуап бирмәүе һәм үтә бәләкәй медицина ярҙамы — революцияға тиклемге Өфөлә санитария-дауалау эшенең кимәле ана шундай булған.

XIX быуатҡа Өфө чиновниктар һәм һалдаттар ҡалаһы, экономик тормошо һүлпән барған, илдең төп промышленность һәм сауҙа үҙәктәренән айырылған ҡала булып аяҡ баҫа. Шуға ҡарамаҫтан капитализмдың үҫеше һәм дөйөм Россия характерындағы башҡа күренештәр бында капиталистик мөнәсәбәттәрҙең урынлаша башлауында сағылыш тапҡан. Промышленность предприятиелары барлыҡҡа килеп, уларҙың һаны аҡрынлап булһа ла үҫә барған (3-сө таблицаны ҡарағыҙ).

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 385, оп. 1, д. 27, л. 872—874; ф. 6, оп. 2, д. 67, л. 60, 61.
[2] «Оренбургские губернские ведомости», 1865, № 13.
[3] Записки Винского.— «Русский архив», I китап. 1877, 190-сы бит; ЦГА БАССР, ф. 3, оп. 1, д. 6, л. 182.
[4] ГАОО, ф. 6, оп. 3, д. 4067, л. 1.

3-сө таблица*

| Промышленность тармаҡтары | Йылдар | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1800 | 1830 | 1839 | 1841 | 1850 | 1857 | 1861 |
| Силикат | — | — | — | 27 | 33 | 19 | 22 |
| Май һәм балауыҙ | 2 | 3 | 6 | 8 | 5 | 12 | 8 |
| Аҙыҡ-түлек | — | — | — | — | — | 1 | 3 |
| Химия | — | — | — | — | — | — | 1 |
| Күн | 5 | 26 | 27 | 11 | 3 | 4 | 4 |
| Бөтәһе | 7 | 29 | 33 | 46 | 41 | 36 | 38 |

* Таблица түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса төҙөлгән. Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—62 г. икенсе киҫәк, 5-се бит; ЦГВИА, ф. ВУА, оп. 1, д. 18 895, л. 50; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 39, л. 25, 74, 75; д. 79, л. 102б; д. 80, л. 65; д. 174, л. 316—338; д. 347, л. 165—167, 168; оп. 2, д. 68, л. 129, 130; ГАОО, ф. 6, оп. 6, д. 12 741, л. 116.

Силикат промышленносы — кирбес һәм кафель заводтарын, май һәм балауыҙ промышленносы һабын ҡайнатыу, туң май иретеү һәм шәм эшләү заводтарын берләштергән. Аҙыҡ-түлек производствоһын — май яҙыу һәм араҡы эшләү предприятиелары, химия производствоһын поташ заводы кәүҙәләндергән. 30-сы йылдар аҙағына тиклем ҡаланың экономикаһында күн етештереү ҙур ғына урын алып тора, әммә ул һуңынан малсылыҡтың түбән төшөүе һәм башҡорттарҙың мал һатыуы аҙайыу арҡаһында киҫкен кәмей. Ҡала төҙөлөшөнөң киңәйеүе кирбес етештереүҙең тиҙ үҫеүенә килтерә; май һәм балауыҙ промышленносы аҡрыныраҡ үҫә. Аҙыҡ-түлек һәм химия производствоһына килгәндә инде, улар 50-се йылдар аҙағында ғына барлыҡҡа килә. Тотош алғанда промышленность предприятиелары һаны 1800 йылдан алып 1861 йылға тиклем 5,4 тапҡырға арта.

Промышленность продукцияһының күләме аҙ була, ләкин ул йылдан йылға арта бара. 1847 йылда ҡала предприятиелары —70 368 һумлыҡ, ә 1861 йылда 113 130 һумлыҡ тауар биргән [1]. Быуат уртаһында Өфөлә йыл һайын 2600 дана күн, 800 меңдән күберәк кирбес, 2500 бот самаһы туң май һәм 3000 бот һабын етештерелгән [2].

Промышленность предприятиеларында иректе рәүештә ялланған эшселәр эшләгән, ләкин уларҙың һаны ҙур булмаған. 1861 йылда 38 предприятиела 169 эшсе [3] иҫәпләнгән, йәғни уртаса бер заведение-

[1] Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—62 гг., икенсе киҫәк, 5-се бит; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 2, д. 62, л. 100.
[2] ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 347, л. 165—167, 168.
[3] Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—62 гг., икенсе киҫәк, 5-се бит.

ға 4 эшсе тура килгән. Улар ҡул хеҙмәтен ҡулланыуға нигеҙләнгән ваҡ капиталистик предприятиелар булған. Эшселәр араһында рус булмаған халыҡ вәкилдәре күренә башлай. Мәҫәлән, күн һәм һабын ҡайнатыу предприятиеларында фәҡәт башҡорт һәм татарҙар тиерлек эшләгән.

Эш көнө тәүлегенә 15—16 сәғәткә тиклем еткән. Эшсенең һәр аҙымы эш ваҡытында ла, шулай уҡ унан һуң да хужаның йәки мастерҙың ҡаты күҙәтеүе аҫтында булған. Үтә ауыр хеҙмәткә бик бәләкәй эш хаҡы түләнгән. 1860 йылғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Өфө эшсеһенең уртаса айлыҡ эш хаҡы хужа аҙығын ашап эшләгәндә —3 һум, үҙ аҙығы менән 6 һум тәшкил иткән.

40—50-се йылдарҙа предприятиеларҙың хужалары төрлө сословие вәкилдәре булған. Күн заводтарын, нигеҙҙә,— крәҫтиәндәр, кирбес заводтарын — мещандар һәм дворяндар, туң май иретеү предприятиеларын — мещандар, крәҫтиәндәр һәм купецтар, шәм һәм һабын ҡайнатыу предприятиеларын купецтар биләгән. Күпселек предприятиеларҙы Нижегородка биҫтәһенән граф Шереметев крәҫтиәндәре һәм мещандар биләп торған. Бары тик 6 купец һәм 4 дворян ғына предпринимателлек эше менән шөғөлләнгән.

Һөнәрселек производствоһы ҡаланың хужалыҡ тормошонда билдәле роль уйнаған. Бер үк һөнәр оҫталары, әгәр улар 5-тән кәм булмаһа, цех ойоштороған, старшина һәм уның ике урынбаҫарын һайлап ҡуйған. Тегенселәр, итекселәр, тимерселәр, баҡырсылар, ювелирҙар, сәғәт төҙәтеүселәр һәм балта оҫталары цехтары айырыуса күп булған.

Цехтар составына инмәгән помещик крәҫтиәндәре лә төрлө һөнәр менән шөғөлләнгән. Цех мастерҙары менән һөнәрсе крәҫтиәндәр араһында йыш ҡына заказсылар һәм һатып алыусылар өсөн киҫкен конкурентлыҡ көрәше барған. Мәҫәлән, цех тегенселәре тегеү эше менән шөғөлләнгән помещик йорто хеҙмәтселәренең уларға ҡамасаулауы хаҡында йыш ҡына ҡала властарына ялыу иткәндәр.

Промышленность продукцияһы һәм һөнәрселек әйберҙәре урында һатылған. Сауҙа баҙарҙа, йәрминкәлә һәм кибеттәрҙә алып барылған.

1827 йылға тиклем ҡалала баҙар аҙнаға бер тапҡыр, һуңынан ике тапҡыр — шишәмбе һәм йәкшәмбе көндәрҙә йыйылған. Бынан тыш, йылына бер тапҡыр яҙын «Түбәнге баҙар» тип йөрөтөлгән баҙар асылған. Был саҡта Урал тау заводтары продукцияһы тейәлгән тиҫтәләгән суднолар һәм баржалар Ырымбур переправаһы янында туҡтап торған булған. Бында биҙрә, даға, ҡаҙаҡ, суйын әйберҙәр һәм башҡа нәмәләр һатып алыу өсөн ҡала халҡы килгән, тирә-яҡ ауылдарҙа йәшәүселәр йыйылған. Баҙарҙарҙың сауҙа әйләнешен аныҡ иҫәпләп сығарыуы ҡыйын.

Урындағы купецтарҙың юллауы буйынса 1812 йылда Өфөлә йәрминкә ойошторола. Ул йыл һайын 20 ғинуарҙан 1 февралгә тиклем

үткәрелгән. Йәрминкәгә төрлө ҡалаларҙан бик күп купецтар килгән. Мәскәүҙән улар хрусталь, сын-сынаяҡ, ситса, киндер туҡыма; Ҡазандан, Нижегород һәм Эрбет йәрминкәләренән — туҡыма, буҫтау, йәнлек тиреһе, бакалея, сәй һәм шәкәр; Туланан һәм Уралдың тау заводтарынан — металл әйберҙәр; Ырымбурҙан, Семберҙән һәм Саратовтан — емеш-еләк; Илецк яғынан — тоҙ; Уральскиҙан — балыҡ, ыуылдырыҡ; Силәбе өйәҙенән аҡ май һәм ҡыр ҡоштары ите килтергәндәр. Сит илдәргә, шулай уҡ илдең башҡа райондарына сығарыу өсөн йәрминкәлә иген, бал, туң май, аҡ май, ҡомалаҡ, тире, поташ, шәм һ. б. ш. һатып алынған.

Урамдарҙа, сауҙа майҙандарында һәм баҙарҙарҙа кибеттәр һаны йылдан-йыл арта барған. 1798 йылда ҡалала 30 кибет, 1837 йылда — 120, 1857 йылда — 148, 1861 йылда 346 кибет булған [1]. Быларҙан башҡа ашханалар, трактирҙар, эсеү йорттары, постоялый дворҙар булған, уларҙа ла байтаҡ сауҙа барған. Йәрминкәләр ваҡытында күп күсмә кибеттәр, палаткалар, балагандар ҡоролған. Даими эшләгән кибеттәрҙең бөтәһе тиерлек купецтар һәм мещандар ҡулында булған, һәм улар тәүҙә Троицк (хәҙерге Первомайский) майҙанына тоташҡан Иҫке сауҙа майҙанында урынлашҡан. Ләкин 1816 йылдағы бөлдөргөс янғындан һуң ҡала властары 1819 йылғы генераль планға ярашлы рәүештә сауҙагәрҙәргә үҙ заведениеларын Үрге сауҙа майҙанына гостиный двор районына күсерергә тәҡдим иткәндәр, ә гостиный дворҙы төҙөү 1836 йылда тамамланған.

Кибет сауҙаһы билдәле бер дәрәжәлә махсуслашҡан булған, бакалея, кондитер, йәшелсә, икмәк, галантерея, һөт, москатель тауарҙар, туҡымалар һатыу һәм башҡа кибеттәр булған.

Өфөләрҙең бер өлөшө ауыл хужалығы менән бәйләнгән булған. «Купец, мещандарҙан башҡа унда отставкаға сыҡҡан һалдаттар һәм казактар йәшәй, улар ошо ҡаланыҡы булған ерҙәрҙе һөрәләр»,— тип яҙған 1782 йылда Өфөгә килгән академик Н. Я. Озерецковский [2]. Ҡайһы берәүҙәре күрше ауыл ерҙәрендә игенселек хужалығы алып барған.

Картуф һәм йәшелсә сәсеүлектәре айырыуса киң таралған була. 1853 йылда өфөләр 915 баҫыуға һәм баҡсаға картуф ултыртҡандар, 6013 сирек йыйып алғандар [3]. Йәшелсә баҡсаларҙа үҫтерелгән, улар сагыштырмаса күп булған. 1837 йылда 1533 ҡала йортона — 1312 баҡса, 1838 йылда 1627 йортҡа — 1383, 1852 йылда 1664 йортҡа 825 баҡса тура килгән [4]. Баҡсалар һанының кәмеүе, күрәһең, Өфө казакта-

---

[1] ЦГВИА, ф. ВУА, оп. 1, д. 18 895, л. 50; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 79, л. 1026; оп. 2, д. 68, л. 118; Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—62 г., икенсе киҫәк, 4-се бит.

[2] «Русский архив», № 9—12, 3-сө китап. М., 1876, 49-сы бит.

[3] ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 278, л. 125, 145.

[4] Шунда уҡ, д. 79, л. 138, 1018, 1380; д. 409, л. 107.

рын һәм һалдаттарҙың бер өлөшөн Ырымбур сик буйы линияһына күсереп ултыртыуҙан булғандыр.

Ҡала халҡының бөтәһе тиерлек малсылыҡ менән шөғөлләнгән. 40—50-се йылдарҙа һәр йортҡа уртаса ике баш самаһы йорт малы тура килгән. Ҡала халҡы мал аҙығын ҡаланың көтөүлек ерҙәрендә бесән сабыу өсөн махсус рәүештә бүленгән участкаларҙа әҙерләгән. Бесәнлектәр Ҡариҙел, Ағиҙел, Дим йылғалары буйында урынлашҡан булған. Өфө, Усолка, Сафронов тауҙарында күп һанлы көтөүҙәр йөрөтөлгән.

Ҡала халҡының бер өлөшө һунарсылыҡ һәм балыҡ тотоу менән шөғөлләнгән. Өфөнөң тирә-яғында мышы, болан, айыу, һуҫар, ҡуян, тейен, урман һәм һыу ҡоштары күп булған. Ике быуат араһында, «һуҫар төрлө урында, әммә бөтәһенән күберәк Өфө тирәһендә йәшәй [1], тип яҙғандар шул заман кешеләре. Бай дворяндар һәм чиновниктар үҙҙәренең бөтә хеҙмәтселәре һәм һунар эттәре менән йыш ҡына «ҡораллы һунарға» сыға торған булғандар. Ағиҙел, Ҡариҙел һәм Дим йылғалары, шулай уҡ тирә-йүндәге күлдәр балыҡ менән дан тотҡан.

## § 2. Өфөнөң халҡы. Ҡалаға идара итеү

Капиталистик промышленностың һәм сауҙаның үҫеүе, производствола иреклеялланған хеҙмәтте ҡулланыуҙың арта барыуы крайҙағы тәрән социаль-экономик үҙгәрештәрҙең: феодаль-крепостнойлыҡ хужалыҡ системаһының тарҡалыуы, тауар-аҡса мөнәсәбәттәренең үҫеүе, крәҫтиәндәрҙең ҡатламдарға бүленеүенең әҙемтәһе булып торған. Ошо нигеҙҙә Өфө халҡының сағыштырмаса тиҙ үҫеүе бара (4-се таблицаны ҡарағыҙ).

XIX быуаттың тәүге ун йыллыҡтарында халыҡтың социаль составы тураһындағы мәғлүмәттәр Өфөлә элеккесә хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең күп булыуын күрһәтә. Ырымбур менән бергә Өфө шундай плацдарм булып хеҙмәт иткән, бынан батша хөкүмәте ҡаҙаҡ далаларына һәм Урта Азияға ғәскәр һәм һәр төрлө миссиялар (дипломатик, дини, сауҙа миссиялары) ебәргән, шулай уҡ Ырымбур крайының үҙендә язалау функцияларын башҡарған. Хәрбиҙәр (хеҙмәт иткәндәре лә, отставкаға сыҡҡандары ла) 1782 йылда ҡала халҡының дөйөм һанының 38,9 процентын, 1837 йылда —33,4, 1856 йылда —19,9, 1861 йылда 22,1 процентын тәшкил иткән [2]. Хәрбиҙәр өлөшөнөң кәмеүе Ҡаҙағстанды аҡрынлап империяға ҡушыу һәм башҡорт халҡын тамам «тынысландырыу» һөҙөмтәһендә мөмкин булған.

[1] Зябловский Е. Землеописание Российской империи для всех состояний, IV киҫәк. СПб., 1810, 316-сы бит.

[2] Пекер А. Очерки Уфы.— «Вестник Императорского Русского географического общества», 191-се бит; Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—62 гг., икенсе киҫәк, 3-сө бит; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 79, л. 1020, 1021; ГИМ, ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 31.

4-се таблица*

**XIX быуаттың беренсе яртыһында Өфөнөң халҡы**

| Йылдар | Ике енес кешеләре | Йылдар | Ике енес кешеләре |
|---|---|---|---|
| 1782 | 2389 | 1847 | 12 851 |
| 1800 | 4107 | 1850 | 13 483 |
| 1816 | 6097 | 1856 | 15 051 |
| 1825 | 7589 | | |
| 1837 | 14 300 | | |

* Таблица түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса төҙөлгән: Пекер А. Очерки Уфы. — „Вестник Императорского Русского географического общества“, 1860, 29-сы кисәк, 11-се бүлек, 191-се бит; Статистическое изображение городов и посадов Российской империи по 1825 год. СПб., 1825, 40-сы бит; „Оренбургские губернские ведомости“, 1852, № 30. Шунда уҡ, 1862, № 32; ГИМ ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 31; ЦГВИА, ф. ВУА, оп. 1, д. 22 723; ГАОО, ф. 6, оп. 5, д. 11082, л. 233, 234; оп. 6, д. 12 955. л. 2, 3; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 79, л. 1020, 1021.

Өфө Уралда дворяндар иң күп йәшәгән ҡала булған. Һәселдән килгән һәм шәхси дворяндар өлөшөнә 1837 йылда бөтә халыҡтың 8,8 проценты, 1856 йылда — 16, 1861 йылда 14,5 проценты тура килгән. Ҡағиҙә булараҡ, улар йәйен поместьеларына китә торған булғандар. Ҙур булмаған өлөшө гарнизонда, губерна һәм өйәҙ гражданский учреждениеларҙа хеҙмәт иткән. Дворяндар ҡаланың ижтимағи-политик тормошонда бик мөһим роль уйнаған. Өфөлә хеҙмәт итеүсе чиновниктар ҙа байтаҡ булған. 1856 йылда, мәҫәлән, 1195 чиновник иҫәпләнгән, был бөтә халыҡтың 7,8 процентын тәшкил иткән [1].

5-се таблица айырым сословиеларҙың һаны һәм улар араһындағы процент сағыштырмаһы тураһында бер ни тиклем төшөнсә бирә.

Бында килтерелгән мәғлүмәттәр халыҡ составында ҡала сословиелары (купецтар, мещандар, разночинецтар) өлөшөнөң кәмеүен күрһәтә: әгәр 1837 йылда улар өлөшөнә 53,7 процент тура килһә, 1861 йылда инде 42,1 процент тура килә. Бер үк ваҡытта хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең һаны байтаҡ кәмегән, ә отставкалағы һалдаттар һаны тағы ла нығыраҡ артҡан. Уның ҡарауы, крәҫтиән халҡының өлөшө һиҙелерлек үҫкән: 1837 йылдағы 3,3 проценттан 1861 йылда 19,6 процентҡа тиклем артҡан. Крәҫтиәндәрҙең ҡалаға ағылыуы XIX быуаттың тәүге яртыһында Өфө халҡы артыуының мөһим сығанағын тәшкил иткән. Тауар-аҡса мөнәсәбәттәренең үҫеүе менән, һаман күберәк крәҫтиәндәр ҡалаға киткән, улар башлыса промышленность предприятиеларының ирекле ялланған эшселәренә әүерелгән. Килтерелгән таблица шулай уҡ үҙешмәкәр халыҡтың — купецтар, мещандар, крәҫтиәндәр өлөшөнөң артыуын һәм, шуға ярашлы рәүештә, эшләмәгән халыҡтың кәмеүен күрһәтә.

---

[1] **Пекер А. Очерки Уфы. — «Вестник Императорского Русского географического общества», 191-се бит; Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—62 г., икенсе кисәк, 3-сө бит; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 79, л. 1020, 1021.**

5-се таблица*

**Өфө халҡының социаль составындағы үҙгәрештәр**

| Сословиелар | 1837 йыл | | 1861 йыл | |
|---|---|---|---|---|
| | дөйөм һаны | процент-тарҙа | дөйөм һаны | процент-тарҙа |
| Дворяндар . . . . . . . . . . . . . | 1252 | 8,8 | 2190 | 14,5 |
| Руханиҙар . . . . . . . . . . . . . | 86 | 0,6 | 190 | 1,3 |
| Купецтар . . . . . . . . . . . . . | 360 | 2,5 | 250 | 1,7 |
| Мещандар . . . . . . . . . . . . . | 2793 | 19,5 | 6110 | 40,5 |
| Почетлы граждандар . . . . . . . . | — | — | 34 | 0,2 |
| Разночинецтар . . . . . . . . . . . | 4525 | 31,7 | — | — |
| Крәҫтиәндәр (йорт хеҙмәтселәре, помещик, удель крәҫтиәндәре). . . . | 478 | 3,3 | 2965 | 19,6 |
| Отставкалағы һалдаттар . . . . . . | 344 | 2,4 | 2028 | 13,4 |
| Хәрби хеҙмәткәрҙәр . . . . . . . . | 4462 | 31,2 | 1337 | 8,8 |
| Бөтәһе: | 14 300 | 100 | 15 104 | 100 |

*Таблица түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса төҙөлгән: Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—62 г., икенсе киҫәк, 3-сө бит; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. I, д. 79, л. 1020, 1021.

Халыҡтың тәбиғи артымы ҙур булмаған. 1835 йылдан алып 1844 йылға тиклем уртаса йыл һайын 818 кеше тыуған, 639 кеше үлгән [1].

Өфөләрҙең милли составы тураһындағы мәғлүмәттәр 1861 йылға тиклем юҡ. Был кәмселек ҡала халҡының ниндәй дин тотоуы тураһындағы мәғлүмәттәр менән билдәле күләмдә ҡаплатыла. 1859 йылда Өфөлә 97,7 процент христиандар һәм 2,3 процент мосолмандар йәшәгән [2]. Христиан динен, нигеҙҙә — рустарҙың, ә ислам динен башҡорт һәм татарҙарҙың тотоуын иҫәпкә алғанда, ҡаланың милли йөҙөн күҙ алдына килтереү ҡыйын түгел: XIX быуат уртаһында ла Өфө рустар ҡалаһы булып ҡалған.

Ҡалала юғары власть булып губернатор торған, ул батша хөкүмәтенең политикаһын тормошҡа ашырған. Ул полиция ярҙамында идара иткән. Полиция башында 1816 йылдан алып полицмейстер торған. Халыҡтың ышаныслылығын күҙәтеп тороуҙы көсәйтеү өсөн, ҡала — һәр береһендә «йыйылыу йорто» булған полиция часына, ә

---

[1] Военно-статистическое обозрение Российской империи, XIV том, 2-се киҫәк. Оренбургская губерния. СПб., 1848, 4-се таблица.
[2] «Оренбургские губернские ведомости», 1860, № 32.

часть кварталдарға бүленгән. Һәр часҡа полиция приставтары һәм квартал надзирателдәре билдәләнгән. 1816 йылғы штат буйынса полиция 3 часть приставынан, 3 квартал надзирателенән һәм унтер-офицер, 33 рядовой, 11 казак һәм 45 бутишник составындағы полиция командаһынан торған[1]. Ҡарауыл хеҙмәтен үтәү өсөн 90 казак йәлеп ителгән. Өфөлә шулай уҡ 3 унтер-офицерҙан һәм обер-офицер етәкселегендәге 24 рядовойҙан торған жандармдар командаһы булған[2].

Губернаторға буйһонған һайланма орган булып ҡала думаһы торған. Ул ҡала хужалығы һәм ҡаланы төҙөкләндереү менән шөғөлләнгән. Ул ҡала финансына идара иткән, үҙ ҡаҙнаһына йыйымдар күләмен билдәләгән, ҡала йәмғиәтенә ағзалар ҡабул иткән һәм унан сығарған. Думаға гласныйҙар һайлау 3 йылға бер тапҡыр сословиелар буйынса үткәрелгән. Дума составына ҡала башлығы һәм 4 гласный — купецтарҙан, мещандарҙан, казактарҙан һәм отставкалағы һалдаттарҙан берәр гласный ингән. Унда купецтар вәкилдәре етәксе роль уйнаған.

Ҡала бюджетын дума төҙөгән һәм губернатор раҫлаған. XIX быуат уртаһында Өфө бюджетының характеры һәм ҡала хужалығын алып барыу тураһындағы төшөнсәне 6-сы таблица бирә.

Шулай итеп, 1856 йылда Өфө килемдәренең 58 процентын ғәҙәттән тыш (обывателдәр кенәгәһенә яҙғанда граждандарҙан алынған, ҡала мөлкәтен һатыуҙан, вариҫһыҙ ҡалған имениеларҙан, недоимкалар түләтеүҙән, айырым кешеләрҙең ярҙам итеп биреүенән) килгән йыйымдар тәшкил иткән, 18,3 процентын — ер һалымы һәм 5,6 процентын ғына промышленность, сауҙа предприятиеларынан алынған йыйымдар тәшкил иткән. Беҙҙең алда промышленносы һәм сауҙаһы бик йомшаҡ үҫкән феодаль ҡала бюджеты.

Килемдәрҙең ҙур өлөшө ҡала учреждениеларын һәм полицияны тотоуға киткән — улар бөтә тотоноуҙар суммаһының 72,9 процентын тәшкил иткән. Ҡаланы төҙөкләндереүгә, ярҙам күрһәтеүгә һәм халыҡ мәғарифына ни бары 8 процент бүленгән. Ҡала бюджеты бөтәһенән элек хөкүмәт ихтыяждарына, көс ҡулланыу һәм хеҙмәтсәндәрҙе иҙеү аппаратын нығытыуға буйһондоролған.

Идара итеү органдарына шулай уҡ магистрат — ҡала халҡы өсөн суд учреждениеһы ла ингән. Магистрат ағзалары — бурмистр һәм ратмандар урындағы купецтар һәм мещандар иҫәбенән һайланған. Магистрат фәҡәт купецтар һәм мещандар араһындағы гражданский һәм енәйәт эштәрен тикшергән. Магистрат янында етемдәр суды төҙөлгән, уның вазифаһына кесе йәштәге мөлкәт хужаларына опекундар тәғәйенләү, шулай уҡ мираҫ бүлеү менән бәйләнгән бәхәсле

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 385, оп. 1, д. 27, л. 868—870; ГАОО, ф. 6, оп. 1, д. 12 955, л. 1.

[2] ГАОО, ф. 6, оп. 3, д. 5699, л. 4—7; оп. 5, д. 11 082, л. 107, 108; ЦГА БАССР. ф. 3, оп. 1, д. 6, л. 122.

6сы таблица*

**1856 йылда Өфө ҡалаһының бюджеты**

| Килем (һумдарҙа) | Сығым (һумдарҙа) | |
|---|---|---|
| Ер һалымы—6180 | Ҡала, полиция идаралыҡтарын һәм судты тотоуға—10 911 | |
| Йорт хужаларынан йыйымдар—2511 | | |
| Промышленниктарҙан һәм сауҙагәрҙәрҙән йыйымдар—1873 | Хәрбиҙәргә квартира хаҡы—476 | |
| Ҡыялата налогтар—863 | Ҡаланы төҙөкләндереүгә—1575 | |
| Ярҙамсы килемдәр—2661 | Уҡыу йорттарын тотоуға һәм ярҙам күрһәтеүгә—448 | |
| Ваҡ һәм осраҡлы килемдәр—71 | Бурыстарҙы түләүгә—265 | |
| Ғәҙәттән тыш йыйымдар—19 582 | Вак-төйәк сығымдар—11 746** | |
| Бөтәһе: 33 741 | Барлығы: | 25 422 |
| | Ҡалдыҡ: | 8 319 |
| | Бөтәһе: | 33 741 |

*Таблица түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса төҙөлгән: ЦГА БАССР, ф. 385, оп. 1, д. 27, л. 865—946.

мәсьәләләрҙе хәл итеү ингән. Ҡаланың полиция частарында ҙур булмаған сауҙа бәхәстәрен хәл итеүсе телдән булған судтар эш иткән; намыҫ суды сабый балалар, аҡылдан яҙғандар һәм айыҡ булмаған кешеләр эшләгән енәйәттәрҙе, шулай уҡ сихырсылыҡ һәм хөрәфәткә ышаныу тураһындағы эштәрҙе ҡараған.

1835—1865 йылдарҙа Өфө башҡорт-мишәр ғәскәрҙәренең округ үҙәге булған; бында округ попечителе резиденцияһы урынлашҡан, уға «юғары начальниктар» бойороҡтарының үтәлешен күҙәтеү йөкләтелгән. Өфөлә стряпчийҙар ҙа йәшәгән; улар вазифаһына башҡорт халҡының хөкөм эштәрен, бәхәсле эштәрҙе, атап әйткәндә, «уларҙың йәмәғәт һәм хосуси милкен тартып алыуҙарға» [1] ҡағылған эштәрҙе алып барыу ингән. Попечителдәр һәм стряпчийҙар итеп ғәҙәттә рустар — армия офицерҙары һәм гражданский чиновниктар араһынан тәғәйенләнгән.

** Быға 3-сө полиция часы өсөн бина төҙөүгә тотолған 5634 һум һәм 1852, 1854, 1855 йылдарҙа полиция һәм янғын командаларын тотоуға киткән 1997 һум инә.

[1] Очерки по истории Башкирской АССР, 1-се том, икенсе киҫәк. Өфө, 1959, 38-се бит.

XIX быуаттың беренсе яртыһында ҡаланың хеҙмәтсән халҡының бер генә ҙур сығышы ла булмаған. Шулай ҙа йәмғиәттең төпкөләндә йәшерен көрәш барған, ҡайһы берҙә ул бөтә халыҡҡа билдәле булған. Мәҫәлән, 1825 йылдың көҙөнә, гражданский губернатор һүҙҙәренә ҡарағанда, «төрлө заводчиктарҙыҡы һәм помещиктарҙыҡы булған ҡасаҡтар Өфө ҡалаһында ике мең кешегә тиклем тупланған»[1].

Помещик йортондағы хеҙмәтсе крәҫтиәндәр администрацияға ҙур тынғыһыҙлыҡ килтергән. Мәңге алама кейем кейеп, ярым ас йәшәгән хеҙмәтселәр үҙ хужаларының теләктәрен ҡәнәғәтләндереп хеҙмәт иткәндәр. Ҡайһы бер Өфө помещиктарының 60-лап хеҙмәтсеһе булған, улар дворецкий, буфетсы, кассир, капельмейстер, тегенсе, күсер һ. б. ш. булып эшләгәндәр. Күңел асыу өсөн ҡалмыҡ һәм ҡарағалпаҡ малайҙары һатып алынған, улар хеҙмәтселәр менән бер дәрәжәлә үҙ хужаһының «йорт хайуанын тәшкил иткәндәр».

Өмөтһөҙлөк хәленә еткерелгән хеҙмәтселәрҙең, үҙ хужаларына ҡаршы күтәрелеп, уларҙың иң яуыздарын язалап үлтереү осраҡтары йыш булған. Өфө помещиктары араһында А. Е. Жадовский айырыуса дыуамаллығы һәм яуызлығы менән айырылып торған; ул крәҫтиәндәрен үҙ ҡулдары менән туҡмаған, уларҙы аяуһыҙ ҡаты язалаған һәм ғазаплаған. 1854 йылда 12 хеҙмәтсе, үҙҙәрен интектереүсенән үс алырға һүҙ ҡуйышып, уны ярым үлек хәленә еткәнсе туҡмағандар. Был аҙымға уларҙы Жадовскийҙың имение конторщигы ярҙамсыһын, йәнәһе, аҡса етмәгән өсөн аяуһыҙ язалауы этәргән. Ҡот осҡос язалауҙы ауыр кисереп ҡарап тороусыларҙан кемдер бөрәү: «Әйҙәгеҙ, туғандар, тирандың үҙенең арт һабағын уҡытайыҡ»,— тигән. Язалаусыны йоҡо бүлмәһендә табып алып, хеҙмәтселәр уға ташланалар һәм туҡмай башлайҙар.

Ҡурҡҡан, үҙенең ғүмере өсөн ҡалтыранған, ҡыҙғаныс Жадовский хеҙмәтселәрен бер ҡасан да йәберләмәҫкә ысын дворян һүҙе биргән. Ләкин бында килеп еткән полицейскийҙар һәм һалдаттар помещиктың күрһәтмәһе буйынса уның бөтә хеҙмәтселәрен ҡулға алғандар; икеһе, ҡотортоусылар булараҡ, һалдатҡа алынған[2].

Алыҫ Өфөләгө фажиғәле ваҡиғалар хаҡында, ҡәбәхәт крепостниктың енәйәттәре тураһында А. И. Герцен тарафынан Лондонда сығарылған ирекле «Колокол» газетаһы үҙенең уҡыусыларына һөйләп биргән.

Хеҙмәтсәндәрҙе баҫып тотоу өсөн, Өфөлә XIX быуаттың беренсе яртыһында губерна төрмә замогы, «эшләтеү» һәм «баҫынҡыландырыу» йорттары булған. 1826 йылда ҡаланың Ырымбур переправаһынан һул яҡ осонда төҙөлгән губерна замогы, йәки острогы, төп төрмә булған. Төрмәнең дүрт мөйөшлө, һәр мөйөшөндә дүрт бейек түңәрәк башняһы булған ике ҡатлы бик ҙур таш бинаһы бейек таш

---

[1] Рабочее движение в России в XIX в., 1-се том, 1-се киҫәк. М., 1955, 800-сө бит.

[2] ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 432, л. 1, 2, 4, 5, 8, 11, 22, 38.

стена менән уратып алынған булған. Губерна замогы аша йылына 10 меңгә тиклем кеше үткән. Ҡулға алыныусыларҙың байтаҡ өлөшө крепостниклыҡҡа һәм йәшәп килгән тәртиптәргә ҡаршы сығыш яһаған өсөн төрмәгә эләккән.

Төрмәлә бөтә сословие кешеләре тиерлек яза үткән, ләкин бөтәһенән күберәк һалым түләүселәр булған; 1852 йылда 598 ҡулға алыныусынан хәрбиҙәр өлөшөнә —224, дәүләт крәҫтиәндәре өлөшөнә — 195, помещик крәҫтиәндәренә — 52, удель крәҫтиәндәренә — 90 һәм мещандар өлөшөнә 27 кеше тура килгән. Острогта, ҡағиҙә булараҡ, Ырымбур һәм башҡа губернала йәшәүселәр тотолған; 598 ҡулға алыныусының 10-һы ғына Өфөнөкө булған [1]. Ҡаланың хөкөм ителгән халҡы полицияла, магистратта, намыҫ судында тотолған. Ҡайһы берҙә ҡулға алынған өфөләр һаны ҙур һанға барып еткән. Мәҫәлән, 1834 йылда 533 кеше һаҡ аҫтына алынған, был иһә бөтә ҡала халҡының 4 процент самаһын тәшкил иткән [2].

Төрмә янында сиркәү булған, ләкин төрмәләгеләр унда бик һирәк йөрөгән. Шуға күрә сиркәүҙең протоиерейы губернаторға, «...ҡулға алынғандарҙың күп өлөшө алла, дин, христианлыҡ һәм гражданлыҡ бурыстары тураһында иң тәүге төшөнсәне лә алмаған, ә ҡайһы берҙәре... тыуғандан алып сиркәүҙә булмаған» [3], тип зарланған.

«Баҫынҡыландырыу» һәм «эшләтеү» йорттарында помещиктарға буйһонмаған өсөн хөкөм ителгән крәҫтиәндәр һәм хәйерселәр булған. Был йорттарҙа «тәрбиәләнеүселәр» бик ҡаты эксплуатацияға дусар ителгән. 1849 йылда арестанттар ротаһы төҙөлөп, бында ҡасаҡтар, берәҙәктәр, насар ҡылыҡлы кешеләр, Себергә һөргөнгә хөкөм ителгән һ. б. ш. кешеләр тотолған. Ул хеҙмәт менән төҙәтеү заведениеһы булған; ҡулға алынғандарҙы ҡаланы төҙөкләндереү эштәрендә файҙаланғандар.

Алыҫ төпкөлдәге ҡала булараҡ, Өфө XIX быуатта ла политик һөргөн урыны булып хеҙмәт итә. 20—30-сы йылдарҙа йәшерен ойошмаларҙа ҡатнашҡан өсөн поручик Песляк, подпоручик А. А. Фок, студент И. Чечет, А. П. Салтанов һәм башҡалар Өфө һөргөнөндә булған. 1830—1831 йылдарҙағы Польша восстаниеһында ҡатнашыусыларҙың ҡайһы берҙәре лә бында һөргөн срогын үткәргән.

1849—1855 йылдарҙа ҡалала 14 политик һөргөнсө булған [4].

XVIII быуат аҙағы мосолман руханиҙарына ҡарата батша хөкүмәтенең политикаһы үҙгәреү менән билдәләнгән. Ул сикләү һәм хатта эҙәрлекләү политикаһынан уларҙың эшмәкәрлеген аңлы рәүештә дәртләндереүгә күсә, иң күренекле дин әһелдәрен үҙ яғына ылыҡтыра. 1788 йылда Ырымбур мосолман Духовный собраниеһын ойошто-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 409, л. 115.
[2] ГАОО, ф. 6, оп. 5, д. 11 082, л. 105, 106.
[3] ЦГА БАССР, ф. 4, оп. 1, д. 35, л. 84.
[4] ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 333, л. 19—25; д. 437, л. 12—18.

Благовещенск ҡатын-ҡыҙҙар монастыры. Ағиҙел йылғаһы аръяғынан күренеше. *Гозенфельден гравюраһынан. 1856 йыл.*



роу царизм политикаһының үҙгәреүе һөҙөмтәһе булған. Ул Өфөлә урынлаштырылып, уның башында мөфтөй торған. Духовный собрание ойоштороп, хөкүмәт шулай уҡ Урта Азияла һәм Ҡаҙагстанда үҙенең йоғонтоһон көсәйтергә тырышҡан.

Мөфтөйҙәр үҙ вазифаһына эске эштәр министры һәм батша тарафынан купецтар һәм феодалдар араһынан сыҡҡан иң йоғонтоло дин әһелдәре иҫәбенән раҫланған. Тәүге мөфтөй Мөхәмәтйән Хөсәйенов тигән купец булған, һуңынан эре помещикка әйләнгән, крепостной крәҫтиәндәре менән бик ҙур имение биләгән. Икенсе мөфтөй тархан Әбделсәләм Абдрахманов булған. Батшаға тырыш һәм тоғро хеҙмәте өсөн уларҙың һәр ҡайһыһы хөкүмәт тарафынан алтын миҙал менән наградланған.

1788 йылғы указ менән Собраниеға дини исем алырға теләгән кешеләрҙе һынау бурысы йөкмәтелгән. Бер аҙ һуңыраҡ никахлашыу, айырылышыу һәм «мәсет хеҙмәте» эштәре уның ҡарамағына күскән. Ул урта суд органдарына тиңләштерелгән һәм Өфө наместниклыҡ идараһына һәм губерна прокурорына туранан-тура буйһондоролған булған.

Ырымбур губернаһында 1847 йылда Духовный собрание идаралығында 1931 мәсет, шул иҫәптән бер мәсет Өфөлә, булған [1]. Шулай ҙа Собрание ҡарамағындағы мәсеттәр һаны байтаҡ күберәк булған, сөнки ул үҙенең дини власын Себер һәм Россияның Европа өлөшөндәге мосолмандарға ла йәйелдергән. 1855 йылда илдең 17 губернаһында бындай мәсеттәр һаны 4825-кә еткән [2].

Мофтөй, Духовный собрание ағзалары, бөтә мосолман дин башлыҡтары царизм политикаһын Башҡортостанда ғына түгел, бәлки башҡа райондарҙа ла, шул иҫәптән Ҡаҙағстанда һәм Урта Азияла, тоғро үткәргәндәр, уларға царизмға ныҡ бирелгән указный муллалар тәғәйенләнгән. Ислам дине һәм уға хеҙмәт итеүселәр башҡорт, татар һәм күп кенә башҡа халыҡтар тормошонда реакцион роль уйнаған, уларҙың ижтимағи-политик һәм культура үҫешен оҙаҡ ваҡыттарға тотҡарлаған.

Башҡортостан территорияһындағы христиан храмдары һәм дин башлыҡтары тәүҙә Ҡазан епархияһы ҡарамағында булған. 1799 йылда Өфөлә Өфө-Ырымбур епархияһы төҙөлә. Тәүге епископ Амвросий Келембет Өфөгә 1800 йылдың ғинуарында килгән. Яңы епархияға Өфө, Ырымбур, Бөрө, Бөгөлмә, Быҙаулыҡ, Верхнеуральск, Минзәлә, Уральск, Троицк, Силәбе, Сергиевск ҡалалары һәм шул уҡ исемдәге өйәҙҙәр ҡараған. Шулай уҡ консистория һәм духовный семинария асылған. Ул ваҡытта епархияла 205 сиркәү, шул иҫәптән Өфөлә 7 сиркәү, иҫәпләнгән [3]. Губернала православный халыҡтың артыуы менән, сиркәүҙәр һаны ла күбәйгән. 1834 йылда — 286, 1843 йылда — 518, 1847 йылда 523 сиркәү булған [4]. Өфөлә иһә бөтә сиркәүҙәр 1837 йылда 12, шул иҫәптән 7 таш сиркәү, булған [5].

Епархия асылыу менән, 1799 йылда Успенский ирҙәр монастыры үҙенең эшмәкәрлеген яңынан башлап ебәрә. Уға 200 дисәтинә ер һәм бай балыҡ тотоу урындары, шул иҫәптән Оҙонкүл, бирелә. Ә 1832 йылда сиркәү властарының тырышлығы менән ҡатын-ҡыҙҙар монастырын аяҡҡа баҫтыралар, бер аҙ һуңыраҡ ул Благовещенск монастыры исемен ала. Ирҙәр монастыры территорияһында хәҙер СССР Эске эштәр министерстvoһының Өфө махсус мәктәбе урынлашҡан. Ҡатын-ҡыҙҙар монастыры бинаһары иһә 2-се һанлы ҡала больницаһына (Сочинская урамы, 10) бирелгән.

Территорияның ҙурлығы, христиан миссионерҙарының мосолмандар һәм мәжүсиҙәр араһында эш алып барыуындағы ҡыйынлыҡтар 1859 йылда епархияны икегә: үҙәге Өфөлә булған Өфө епархияһы-

---

1 ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 2, д. 62, л. 90, 91.

2 ГАОО, ф. 6, оп. 6, д. 13415, л. 52.

3 Щекатов А. Ф. Географический словарь Российского государства. 6—7-се кисәк, СПб., 1808, 655-се бит.

4 ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 79, л. 80; оп. 2, д. 59, л. 78; д. 62, л. 91; ГАОО, ф. 6, оп. 5, д. 11082, л. 21.

5 ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 79, л. 1019.

на һәм үҙәге Ырымбурҙа булған Ырымбур епархияһына бүлеүгә килтергән. Ике үҙ аллы сиркәү идаралығы төҙөү, Синод чиновниктарының фекеренсә, крайҙың мосолман халҡына православный дин башлыҡтарының йоғонтоһон көсәйтергә, урындағы халыҡты христианлаштырыуҙы тиҙләтергә тейеш була. Христиан сиркәүе һәм уның күп һанлы хеҙмәтселәре самодержавие терәктәрен бик тырышып яҡлағандар, хөкүмәткә крайҙың төрлө ҡәбиләле халҡын буйһондороп тоторға ярҙам иткәндәр.

1812 йылғы Ватан һуғышы Өфө халҡының киң ҡатламдарының тыныс тормошон ҡуҙғытып ебәргән ваҡиға була. Халыҡ ополчениеһы төҙөүгә, һуғыш алып барыу өсөн материаль средстволар йыйыуға саҡырыу ҡала халҡы араһында ҡайнар отклик таба. Күп кенә өфөләр ополчение сафтарына баҫҡан. 1797 йылда уҡ төҙөлгән Өфө йәйәүлеләр полкы һуғыштың тәүге көндәрендә фронтҡа ебәрелгән [1].
Ополчениены тотоуға ҡала кешеләре байтаҡ сумма биргәндәр: купецтар менән мещандар ғына ополчение фондына 2000 һум самаһы аҡса индергәндәр һәм 2-се Кострома полкының ылауын ат һәм сбруй менән тәьмин иткәндәр. 1813 йылда крайҙың мосолман халҡы азат ителгән районДарҙың хужалығын аяҡҡа баҫтырыу өсөн 5553 һум аҡса йыйған [2].

Өфө полкы күп кенә боевой операцияларҙа, шул иҫәптән Смоленск өсөн һуғышта, ҡатнашҡан. Уның һуғышсылары Бородино һуғышында айырыуса батырлыҡ күрһәткән. Рус армияһының баш командующийы М. И. Кутузовтың батша Александр I-гә ебәргән донесениеһында майор Демидов командалығындағы Өфө полкының 3-сө батальонының һуғыш хәрәкәттәре айырыуса билдәләнә. Егерь полктары менән бергә батальон французДарҙы улар баҫып алған Раевский батареяһынан штык удары менән бәреп сығарған һәм, бик ҙур юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, уны кискә тиклем дошмандың өҙлөкһөҙ атакаһынан обороналаған. Һуңынан полк рус армияһы һөжүмендә ҡатнашҡан һәм башҡа частар менән бергә Парижға барып ингән.

## § 3. Мәғариф һәм культура

XIX быуаттың беренсе яртыһында Россияның үҙәк районДарында ла, шулай уҡ уның төпкөлөндә лә мәғариф, фән һәм культура алға ҙур ғына аҙым яһай. Өфө ошо процестан ситтә ҡалмай. Уның губерна үҙәгенә әүерелеүе, халыҡтың артыуы, промышленность һәм сауҙаның үҫеүе, администрация һәм сиркәүҙең кадрҙарға ихтыяжы тәүге уҡыу йорттарының, китапханаларҙың һәм типографияның

---

[1] ГИМ, ОПИ, ф. 450, оп. 1, д. 708, л. 36.
[2] ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 134, л. 10; ГАОО, ф. 6, оп. 5, д. 11 182, л. 33; оп. 3, д. 3872, л. 9, 13, 16.

барлыҡҡа килеүенә килтерә; газета сығарыла башлай. Аҡрынлап Өфө крайҙың культура тормошоноң эре үҙәгенә әйләнә. Ләкин мәғариф һәм культураның үҫешен иҫке феодаль-крепостнойлыҡ мөнәсәбәттәре, царизмдың реакцион политикаһы ныҡ тотҡарлай.

XVIII быуаттың 80-се йылдарында хөкүмәт Россияла халыҡ мәғарифының дөйөм планын эшләгән. Планға ярашлы рәүештә, ике баҫҡыслы мәктәптәр: ике класс составында кесе халыҡ училищелары һәм дүрт класс составында, өс түбәнге класта бер йыллыҡ курс һәм дүртенсеһендә ике йыллыҡ курс менән төп училищелар (губерна ҡалаларында) асылған. Кесе училищеларҙа балаларҙы яҙырға, уҡырға, арифметикаға һәм «дин законына» өйрәткәндәр. Төп училищеларҙың ике түбәнге класында ла шул уҡ фәндәр өйрәнелгән; өлкән кластарҙа уларға геометрия, архитектура, механика, физика, тәбиғәт белеме, география, дөйөм һәм рус тарихы, немец теле өҫтәлгән һәм теләгәндәргә латин теле өйрәтелгән. Малайҙар менән ҡыҙҙар бергә уҡытылған.

Өфөлә төп халыҡ училищеһы 1789 йылдың сентябрендә асылған. Ләкин 8 йылдан һуң уны Ырымбурға күсергәндәр, ә унан, үҙ сиратында, Өфөгә кесе училище күсерелгән. 1802 йылда училищеның 50 уҡыусыһынан 9 — хеҙмәтсе, 8 — һалдат, 9 казак балаһы булған, ҡала сословиеһынан — 12 (6 купец һәм 6 мещан), 10 обер-офицер балаһы һәм бары тик 2 дворян балаһы булған [1]. Шулай итеп, уҡыусылар араһында һалым түләүсе сословие вәкилдәре ҙур күпселекте тәшкил иткән. Ваҡыт үтеү менән, был сағыштырма үҙгәргән: дворян, купец балалары һаны артҡан, крәҫтиәндәрҙән уҡыусылар һаны кәмегән.

Халыҡ училищелары төҙөп, хөкүмәт уларҙан батша самодержавиеһына бирелгән хеҙмәтселәр тәрбиәләргә ынтылған. Ошо маҡсат менән мәктәптәрҙә Екатерина II тарафынан раҫланған «Кешенең һәм гражданиндың вазифалары тураһындағы» китапты мотлаҡ өйрәнеү индерелгән. Был китапта йәмғиәттең сословиеларға бүленешен аҡлау, кеше, ниндәй генә хәлдә булыуына ҡарамаҫтан, үҙенең хәленән һәр ваҡыт ҡәнәғәт булырға, хөкүмәткә бер һүҙһеҙ буйһонорға һәм начальниктар ихтыярына таянырға тейешлеген күрһәтеү бурысы ҡуйылған.

1818 йылдың 6 декабрендә кесе училище Өфө өйәҙ училищеһы итеп үҙгәртеп ҡорола, һуңынан ул губернаның өйәҙ училищелары араһында иң эреләрҙең береһенә әйләнгән. 1824 йылда унда 52, 1830 йылда —274, 1845 йылда 264 уҡыусы уҡыған [2]. 1839 йылда әҙерлек класын үҙ аллы приход училищеһы итеп үҙгәртеп ойошторғас, Өфө өйәҙ училищеһында уҡыусылар һаны бер аҙ кәмегән:

---

[1] ЦГА ТАССР, ф. 92, оп. 1, д. 6, лл. 45, 46.

[2] ЦГВИА, ф. ВУА. оп. 1, д. 18 899 (2), л. 127; ЦГА БАССР, ф. 6, оп, 2, д. 80, л. 64; ф. 110, оп. 1, д. 422, л. 139—154.

Ирҙәр гимназияһы.



1852 йылда бында ни бары 102 кеше уҡыған. Улар рус теле, матур яҙыу, география, тарих, арифметиканы, геометрияпан, физиканан, тәбиғәт белеменән тәүге мәғлүмәттәрҙе, шулай уҡ «дин законын» өйрәнгән [1].

Разночинецтар, мещандар һәм крәҫтиәндәр араһында грамоталылыҡты таратыуҙа ҡаҙна, шәхси (1859 йылда асылған) һәм сиркәү (1860 йылда асылған) приход училищелары — башланғыс белем биреү мәктәптәре ҙур ғына роль уйнаған. Ҡаҙна һәм шәхси училищеларҙа башҡорт балалары ла уҡыған.

Дворян йәштәре XVIII быуат аҙағында — XIX быуаттың беренсе яртыһында күбеһенсә йортта уҡыған. Мәҫәлән, Өфө дворяны М. С. Ребелинский үҙенең малайҙарына сит телдәрҙе, арифметика, география, тарих уҡытыу өсөн бер нисә йыл рәттән уҡытыусылар, шул иҫәптән француздарҙы ла, саҡыртҡан. Йорттағы уҡытыуға, ҡағиҙә булараҡ, рус теле лә — уҡыу һәм яҙыу, арифметика, «дин законы» ла ингән.

XIX быуаттың беренсе яртыһында шәхси пансиондар асыла башлаған, улар йорттағы уҡытыуға ҡарағанда бер аҙым алға китеү булған. Француз һәм немец телдәрен, тарих, география һәм арифметика уҡытыу өсөн пансион хужалары предметтар буйынса квалификациялы уҡытыусылар саҡырған. 40—50-се йылдарҙа И. П. Сосфенов, В. Б. Гутоптың, француздар Бертрам һәм Томпсондың ирҙәр пансиондары, Н. Пеутлинг, П. Герн, Е. Урих, М. Я. Гутоптың ҡа-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 110, оп. 1, д. 8, л. 5, 6.

Мариинский ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһы.



тын-ҡыҙҙар пансиондары киң билдәле булған. Һәр пансиондың алты йыллыҡ уҡытыу курсы менән 3 класы булған. Түләүле булғанлыҡтан, улар бары тик дворян һәм хәлле чиновниктар балаларын ғына хеҙмәтләндергән.

XIX быуат башында уҡ әле Өфөлә донъяуи урта уҡыу йорто асыу кәрәклеге тураһында мәсьәлә күтәрелгән. Күп йылдар юллағандан һуң, 1828 йылдың 11 ноябрендә губерна гимназияһы ойошторола. Уның өсөн ике ҡатлы бина 1847 йылда айырым кешеләр ярҙам итеп биргән аҡсаға һәм ҡаҙна средстволарына төҙөлә (хәҙер ВЛКСМ-дың XV йыллығы исемендәге Башҡортостан медицина институтының административ корпусы, Фрунзе урамы, 47). Гимназияла дворян һәм чиновник балалары уҡыған. Гимназия асылыуҙың беренсе йылында 18 уҡыусы ҡабул ителгән [1]. Һуңынан уҡыусылар һаны аҡрынлап арта барған: 1836 йылда инде 112 кеше, 1847 йылда — 198, 1861 йылда 185 кеше уҡыған [2].

Уҡыусыларҙы уҡытыу курсы дүрт йыллыҡ, ә 1835 йылдан ете йыллыҡ булған. Гимназияла рус теле, тарих, география, математика, физика, закон белеме, статистика, латин, немец, француз, грек телдәре, ә 1853 йылдан татар теле уҡытылған. Татар телен индереү шуның менән аңлатыла: гимназияны тамамлап сығыусылар башлыса Ырымбур крайында эшләү өсөн билдәләнгән, ә бында күпселек халыҡ төрки телдәрендә һөйләшкән.

---

[1] «Оренбургские губернские ведомости», 1860, № 51.
[2] ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 1, д. 145, л. 10; ф. 110, оп. 1, д. 141, л. 75.

1860 йылдың 17 декабрендә Өфөлә алты йыллыҡ уҡытыу курсы менән ҡазна ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһы асылған. 1860/61 уҡыу йылында занятиеларға 25 ҡыҙ бала йөрөй, ә икенсе йылында инде 70 ҡыҙ уҡый [1]. Формаль яҡтан училище бөтә сословие балалары өсөн асыҡ булып иҫәпләнгән. Ләкин уҡыған өсөн юғары хаҡ ҡаланың түбән ҡатлам балаларына уның ишектәрен нығ япҡан. 1865 йылдың июнендә училище Өфө Мариинский ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһы итеп үҙгәртеп ҡорола.

Дин хеҙмәтселәре әҙерләү өсөн 1800 йылда тәүге дини урта уҡыу йорто — Өфө духовный семинарияһы төҙөлә. 1827 йылда ул махсус уның өсөн төҙөлгән бинаға күсерелә. 1830 йылда семинарияла 100 кеше, 1837 йылда — 201, 1853 йылда 176 кеше уҡыған [2].

Семинаристарҙан мәжүсиҙәр һәм мосолмандар араһында эшләү өсөн миссионерҙар ҙа әҙерләгәндәр. Шуға күрә уларға башҡа дисциплиналар менән бер рәттән татар һәм сыуаш телдәре уҡытҡандар. Ләкин уны тамамлаусыларҙың бөтәһе лә үк дини карьера һайламаған. Уларҙың ҡайһы берҙәре уҡытыусы, чиновниктар булып киткән, юғары уҡыу йорттарына ингән һ. б. ш. Ҡалалағы башланғыс мәктәптәрҙең күп уҡытыусылары семинария тамамлаусылар булған.

Мәктәптәр асылыуға ҡарамаҫтан, Өфөлә белем алыу ҡаланың юғары ҡатлам балаларына ғына мөмкин булған. 1845 йыл мәғлүмәттәренә ҡарағанда, бөтә өфөләрҙең егермense өлөшө генә уҡыу йорттарында шөғөлләнә [3].

Халыҡты китаптар менән тәьмин итеү эше лә насар ҡуйылған. Бер генә китап кибете йәки магазины ла булмаған. Ҡалала тәүге публичный китапхана 1836 йылдың 25 мартында асылған [4]. Шул заманда йәшәүселәр китапхананың ярлы булыуын, кәрәкле китаптарҙың, йүнле мебелдең һәм уны һатып алыу өсөн аҡса булмауын билдәләп үтәләр. Шәхси китапханалар яҡшыраҡ хәлдә булған; китап уҡыусылар, абонемент өсөн 6—10 һум түләп, китаптарҙы өйгә ала торған булғандар. Уҡыу йорттары янындағы китапханаларҙан уҡытыусылар һәм уҡыусылар ғына файҙаланған. Уларҙы комплектлау ярлы мәктәп средстволары иҫәбенә эшләнгән, уларҙа китап аҙ булған. Мәҫәлән, гимназия янындағы китапханала 1836 йылда 418, 1859 йылда 1160 китап иҫәпләнгән. Өйәҙ училищеһы китапханаһының 1833 йылда 113, 1859 йылда 395 китабы булған. Гимназия янында шулай уҡ уҡыусыларҙың шәхси китапханаһы, «йөрөй торған» тип аталған китапхана ла булған, унан уҡыусыларға китап түләү менән бирелгән.

---

[1] ГАОО, ф. 6, оп. 6, д. 13 885, л. 1, 6; д. 13 680, л. 67—84.

[2] «Оренбургские губернские ведомости», 1860, № 51; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 2, д. 66, л. 61; оп. 1, д. 145, л. 5; ЦГВИА, ф. ВУА, он. 1, д. 18 892 (2), л. 127.

[3] ЦГВИА, ф. ВУА, оп. 1, д. 18 899 (2), л. 130.

[4] ГАОО, ф. 6, оп. 5, д. 11 141, л. 1, 2—4; ЦГА БАССР, ф. 110, оп. 1, д. 79, л. 2.

Өфөлә нәшриәт эше 1801 йылда, урындағы администрацияның рәсми материалдарын баҫып сығарыусы губерна типографияһы ойошторолғас, барлыҡҡа килгән. 1838 йылдың 1 ғинуарында ҡала һәм губернала тәүге «Оренбургские губернские ведомости» газетаһының беренсе һаны баҫыла. Аҙнаға бер тапҡыр сыға торған газета рәсми өлөштән, ә 1843 йылдан алып рәсми булмаған өлөштән торған. Уның тәүге өлөшөндә хөкүмәт материалдары һәм урындағы власть бойороҡтары, торгка саҡырыуҙар, юғалған нәмәләр тураһында иғландар баҫылған. Икенсе өлөшөндә урындағы яңылыҡтар, шулай уҡ крайҙың географияһы, археологияһы, этнографияһы, экономикаһы мәсьәләләре буйынса мәҡәләләр һәм шәхси иғландар урынлаштырылған. Газетаның рәсми өлөшө вице-губернатор ҡултамғаһы менән, ә рәсми булмаған өлөшө редактор ҡултамғаһы менән сыҡҡан, ә редактор ғәҙәттә гимназияның рус теле уҡытыусылары араһынан өҫтәмә эш башҡарыу сифатында билдәләнгән.

«Оренбургские губернские ведомости» газетаһының беренсе һаны.


ОРЕНБУРГСКІЯ

ГУБЕРНСКІЯ ВѢДОМОСТИ

№ 1

«Ведомости» газетаһының даими хеҙмәткәрҙәре һәм үҙенең ихтыяри хәбәрселәренең хеҙмәтенә түләү өсөн средстволары булмаған. Шуға күрә газета тормошонда актив ҡатнашҡан өсөн уларға рәхмәт белдерелгән. Газетаның тышҡы күренеше оҙаҡ ваҡыттар буйына бик күрекһеҙ булып ҡала килгән: ул әйбер төрә торған ҡаты ҡағыҙҙа ҡул станогы менән 12—16 биттә сығарылған, текст ҡағыҙҙың бер генә яғында баҫылған һәм хаталар тулып ятҡан. Бер авторҙың, «халыҡ уҡымышлы түгел, грамотаһыҙ һәм аң дәрәжәһе түбән; уның өсөн газеталар уҡыу заманы етмәгән әле» [1], тип зарланыуына ҡарамаҫтан, газетаға яҙылыусылар һаны Өфөлә лә, шулай уҡ губернала ла артҡан: 1847 йылда —395, 1855 йылда 477 кеше газетаға яҙылған. Бынан тыш, «Ведомости» газетаһы бөтә эш урындарына, сиркәүҙәргә һәм полиция становойҙарына буш ебәрелгән [2].

Газета сығарыу крайҙы өйрәнеүҙе үҫтереүҙә мөһим роль уйнаған. Уның биттәрендә крайҙы атаҡлы тикшереүсе Өфө судьяһы

---

[1] «Оренбургские губернские ведомости», 1865, № 10.
[2] Шунда уҡ, 1847, № 48; ЦГА БАССР, ф. 6, оп. 2, д. 67, л. 57.

В. С. Юматовтың Башҡортостан тарихына арналған күп кенә хеҙмәттәре баҫылған. «Мысли об истории Оренбургской губернии» һәм «Краткий исторический взгляд на первобытных жителей Оренбургского края» тигән мәҡәләләрҙә ул Башҡортостан тарихы буйынса ғына түгел, бәлки тыуған ҡалаһы тарихы буйынса ла ҡиммәтле мәғлүмәттәр килтерә. В. С. Юматов үҙе өйрәнә алған материалдар нигеҙендә Өфө ҡалаһына 1574 йылда нигеҙ һалынған тигән һығымтаға өфөләрҙән беренсе булып килә; ул быуат уртаһында уҡ Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуының ирекле характерҙа булыуы тураһында яҙа. Духовный семинария уҡытыусыһы крайҙы өйрәнеүсе В. С. Зефиров «Соколиная охота в Башкирии», «Рассказы башкирца Джантюри», «Взгляд на семейный быт башкирца» тигән мәҡәләләрендә крайҙың төп халҡының тормошон, көнкүрешен, ғөрөф-ғәҙәттәрен һәм кәсептәрен тасуирлай. Ҡаланың урынлашыуы, уның кварталдары һәм айырыуса иҫтә ҡалырлыҡ биналары хаҡында һөйләп бирелгән «Взгляд на Уфу» тигән мәҡәлә лә уның тарафынан яҙылған. «Ведомости» газетаһында урындағы тарихсы И. Казанцев «Описание башкирцев» тигән хеҙмәтен тәүбашлап баҫтырған, унда башҡорттарҙың көнкүреше, хужалығы һәм хәрби хеҙмәте тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар.

Өфөлә тыуған мәшһүр рус яҙыусыһы Сергей Тимофеевич Аксаков (1791—1859) үҙенең әҫәрҙәрендә тыуған ҡалаһын тасуирлауға күп биттәр арнаған. Бына тигән нәфис һүҙ оҫтаһы С. Т. Аксаков XVIII быуат аҙағында — XIX быуат башында Өфө халҡының йәшәү рәүешен һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен дөрөҫ һәм асыҡ итеп тасуирлай, Өфө крепостник-помещиктары көнкүрешенең реалистик картиналарын тыуҙыра.

Крайҙы өйрәнеүсе ғалим Я. В. Ханыков «Географическое обозрение Оренбургского края» тигән хеҙмәтте төҙөгән, бында Өфө һәм губерна халҡының һаны, социаль составы, шәхси һәм йәмәғәт биналарының, промышленность предприятиеларының торошо хаҡында мәғлүмәттәр килтерелә. «Обозрение рудного производства частных оренбургских заводов в 1838 году» тигән китап та уның тарафынан яҙылған. И. Дебу губерна учреждениеларының отчет материалдары нигеҙендә «Топографическое и статистическое описание Оренбургской губернии в нынешнем ее состоянии» тигән китап яҙып, уны 1837 йылда Мәскәүҙә баҫтырып сығара.

1859 йылда Өфө типографияһында духовный семинария уҡытыусыһы В. М. Черемшанскийҙың «Описание Оренбургской губернии в хозяйственно-статистическом, этнографическом и промышленном отношениях» тигән ҙур хеҙмәте баҫылған. Был китапта крайҙың географияһы, тарихы, этнографияһы, экономикаһы, мәғариф һәм һаулыҡ һаҡлау эше буйынса бай фактик материал бар. Өфөнөкө булған А. А. Пекерҙың «Очерки Уфы» хеҙмәтендә ҡаланың тарихы буйынса ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр бар. Был хеҙмәт 1860 йылда «Вест-

ник Императорского Русского Географического общества»ла баҫылып сыҡҡан.

1834 йылда Өфөлә төҙөлгән губерна статистика комитеты крайҙың тарихын, экономикаһын һәм культураһын системалы өйрәнеүгә булышлыҡ иткән. Комитет губернаның халҡы, промышленносы, ауыл хужалығы һәм сауҙаһы тураһында материалдар сығара башлаған, ә 1851 йылдан алып Өфөнөң тарихы һәм экономикаһы буйынса ла ҡиммәтле мәғлүмәттәр булған «Адрес-календарь Оренбургской губернии»ҙы даими рәүештә сығара башлай.

XVIII быуат аҙағынан алып ҡалала һауа торошон күҙәтеү башлана. Ләкин XIX быуаттың 30-сы йылдарынан ғына һәүәҫкәр метеорологтар атмосфераның бөтә күренештәрен тәүлек әйләнәһенә күҙәтә башлағандар. 1835—1850 йылдарҙа был эш менән аптекарь А. А. Боссе шөғөлләнгән. Уның мәғлүмәттәре буйынса, 16 йыл эсендә Өфөлә уртаса температура $+2,31° R$, иң түбән температура декабрҙә $-11, 32° R$, ә иң юғарыһы июлдә $+15, 38° R$ була[1]. «Ведомости» гимназия уҡытыусылары И. Сунгуров һәм И. Уржумцев тарафынан алып барылған метеорология күҙәтеүҙәре мәғлүмәттәрен даими рәүештә баҫып сығарған.

Өфөлә тәүге театрҙың барлыҡҡа килеүе XVIII быуаттың 70-се йылдарына тура килә. 1772 йылда Голубиный урамында (хәҙерге Пушкин урамы) Минзәлә воеводаһы йортонда һөргөндәге поляктар тарафынан сәхнә төҙөлә һәм поляк телендә ике тапҡыр «Пан Бронислав» опереттаһы ҡуйыла. Әммә тиҙҙән уларға спектаклдәр ҡуйырға тыйыла. Ләкин Өфө театрһыҙ ҡалмай. 80—90-сы йылдарҙа, нигеҙҙә, комедиялар ҡуйған немец труппалары бер нисә тапҡыр гастролгә килә.

1841—1843 йылдарҙа Өфөлә махсус рәүештә бүленгән бинала билдәле провинциаль антрепренер Н. А. Соколов етәкселегендәге тәүге профессиональ труппа сығыш яһай. Труппа Ҡазандан килгән һәм 14 кешенән торған була. Труппаның ҙур булмаған оркестры булып, уға йәш капельмейстер Немвродов дирижерлыҡ иткән.

Труппаның репертуарын Д. Ленский, Ф. Кони, А. Шаховский водевилдәре, 3—4 опера, шул иҫәптән А. И. Верстовскийҙың «Аскольд ҡәбере» операһы, тәшкил иткән. Опералаарҙа музыка номерҙары — көйләп һөйләүҙәр менән, ә хор һәм оркестрҙар драма сәхнәләре менән сиратлаштырылған. Пьесаларҙан Н. В. Гоголдең «Ревизоры» тамашасыларҙа ҙур уңыш менән файҙаланған. «Был пьесаның тәүге тамашаһы өсөн, — тип яҙған рецензент, — публика Соколов әфәндегә үҙенең ҡәнәғәт булыуын белдерҙе, — ...ҡул сабыуҙар

[1] Черемшанский В. М. Описание Оренбургской губернии в хозяйственно-статистическом, этнографическом и промышленном отношениях. Өфө, 1859, 66, 67, 73—103, 166-сы биттәр.

ҡолаҡ тондорғос көслө булды»[1]. Тәүге мәлдә ҡала халҡы театрға бик теләп йөрөгән, әммә тиҙҙән репертуарҙың бер төрлөлөгө сәбәпле йыйым кәмей башлай, һәм 1843 йылда труппа «үҙенең финансын рәтләү өсөн»[2] Екатеринбургка китергә мәжбүр була.

1849—1850 йылдарҙа Өфөлә Ивановтың профессиональ труппаһы гастролдә була. Уның репертуарында 8 водевиль («Любовное зелье», «В людях — ангел, не жена, дома с мужем сатана» һәм башҡалар) була. «Оренбургские губернские ведомости» өс бер туған Соколоваларҙың, шулай уҡ Максимова, Литавкин һәм Петровтың «бик яҡшы уйнауҙарын» билдәләп үткән. Рецензент һүҙҙәренә ҡарағанда, публика бер туған ҡыҙҙарҙың өлкәненең һәм «саф, яңғырауыҡлы тауышлы» уртансыһының уйнауына «һоҡланған»[3]. Труппаның гастролдәре өфөләргә «ҙур шатлыҡ», ә оркестры «айырыуса кинәнес» килтергән[4].

1856 йылдың йәйендә Н. А. Соколов труппаһы яңынан Өфөгә килеп сыға. Уның репертуарын «бик уңышлы һайлап алынған» өс водевиль тәшкил итә. Газета рецензенты фекеренсә, ролдәрҙең күбеһе «бик һөйкөмлө» башҡарылған. «Ролдәрҙе тәрән уйлап өйрәнеү, уларҙы бик һәйбәт тапшырыу һәм» артист Головинскийҙың «ғәҙәттән тыш һөйкөмлө, тәбиғи уйнауы» тамашасылар тарафынан юғары баһаланды[5].

Сәхнә сәнғәтен яратыусылар XIX быуат уртаһында труппа төҙөй һәм Дворянский собрание залында тамашалар ҡуя. Һәүәҫкәр артистар спектаклдәре урындағы интеллигенция араһында уңыш ҡаҙана. 1859/60 йыл сезонында улар йәмәғәтселек хөкөмөнә 17 пьеса ҡуя. А. Н. Островскийҙың «Төшөмлө урын» пьесаһын ҡуйыу публикаға бигерәк тә көслө тәьҫир итә. Һәүәҫкәр В. А. Ястребов Белогубов ролен «шул тиклем йәнле, ысын һәм ышандырырлыҡ итеп уйнай», газета һүҙҙәренә ҡарағанда, шунан алып «беҙҙә (Өфөлә.— *Авт.)* ришүәтселек яртылашҡа кәмене»[6].

XVIII быуат аҙағы — XIX быуат башы ҡала халҡының көнкүрешенә лә яңылыҡтар килтерә. Байрам көндәрендә дворяндар музыка кисәләре үткәрә. 1819 йылда Өфө дворяндары өсөн Благородный собрание ойошторола. Собрание ағзалары ваҡыттарын «үҙ-ара күңел асып үткәргән»: бейегәндәр, кәрт уйнағандар, аҡһөйәктәр араһындағы юҡ-бар хәбәрҙәрҙе һөйләгәндәр.

Күпселек дворяндар тирап һәм дыуамал булып ҡалған. Уҡымышлы кешеләрҙе улар ихтирам итмәү генә түгел, бәлки уларҙан асыҡтан-асыҡ ситләшкәндәр, фән һәм уҡыуҙы кәрәкһеҙ, аңлайышһыҙ

---

[1] Бельский Сутолак. О временном уфимском театре.— «Репертуар и Пантеон», 4-се том, 11. 12-се китап. СПб., 1843, 127-се бит.
[2] Шунда уҡ, 128-се бит.
[3] «Оренбургские губернские ведомости», 1849, № 50.
[4] Шунда уҡ, 1850, № 10.
[5] Шунда уҡ, 1856, № 45.
[6] Шунда уҡ, 1859, № 23.

һәм хатта зарарлы эш тип иҫәпләгәндәр. Шул заман кешеһенең һүҙҙәренә ҡарағанда, улар «наҙанлыҡты үҙҙәренең хоҡуғы итеп ихтирам иткән». Өфө дворяндарының шәхси тормошонда аҙғынлыҡ һәм әхлаҡһыҙлыҡ хөкөм һөргән.

Ябай халыҡ өсөн һирәк-һаяҡ, башлыса сиркәү байрамдарына тура килтерелгән, халыҡ гуляниелары ойошторолған. Ошо уңай менән махсус төҙөлгән ҙур балагандарҙа акробаттар, бәһлеүәндәр, алпамыша һәм кәрләләр сығыш яһаған; майҙансыҡтарҙа бәүелсәктәр, каруселдәр эшләнгән, тынлы оркестр уйнаған. Башҡорттарҙың йыл һайын үткәрелә торған йыйындарында юртаҡтар сабышы ла күп тамашасыларҙы ылыҡтырған. Усолка һәм Сафронов тауҙары, «Шайтан ҡаласығы» һәм «Висячий камень» (хәҙер «Воронки» тимер юл разъезы) районындағы ерҙәр йәй көндәрендә ҡала халҡының яратҡан ял итеү урындары булған.

Ләкин күңел асыу һәм ял итеү хеҙмәтсән халыҡтың күпселек массаһына теймәгән; оҙайлы һәм йонсотҡос хеҙмәт уларҙың бөтә ваҡытын алған. Өҫтәүенә, ҡала властары күп һандағы ҡала кешеләре ҡатнашҡан массовый байрамдарҙы хупламаған.

# Өфө промышленность капитализмы шарттарында

## § 1. Капиталистик Өфөлә промышленность һәм транспорт. сауҙа һәм кредит

1861 йылда батша хөкүмәте экономик зарурлыҡ һәм үҫә барған крәҫтиән сыуалыштары ҡурҡыныcы баҫымы аҫтында крепостной правоны бөтөрөргә мәжбүр булды.

Өфөлә крәҫтиәндәрҙе азат итеү тураһындағы манифест 15 мартта иғлан ителгән. Унда реформаны ғәмәлдә тормошҡа ашырыуҙа, губернала «тәртип һәм тыныслыҡты» тәьмин итеүҙә губерна начальствоһына булышлыҡ күрһәтеү өсөн батша Александр II-нең махсус доверенный кешеһе сифатында ебәрелгән флигель-адъютант Г. А. Кригер ҡатнашҡан. Шул уҡ көндө манифест урындарҙа крәҫтиәндәргә белдереү өсөн өйәҙҙәр буйынса таратылған.

Крепостной право бөтөрөлгәндән һуң, тәүге йылдарҙа Өфө Ырымбур губернаһының гражданский губернаторы резиденцияһы булып ҡалған, ә 1865 йылдан Ырымбур губернаһынан 6 өйәҙ (Өфө, Бәләбәй, Бөрө, Стәрлетамаҡ, Минзәлә һәм Златоуст) составында бүленеп сыҡҡан Өфө губернаһының төп ҡалаһы булып китә.

Россияла крепостной право бөтөрөлгәндән һуң, капитализм, бөтәһенән бигерәк промышленноста, сағыштырмаса тиҙерәк үҫә башлай. Яңынан-яңы фабрикалар һәм заводтар барлыҡҡа килә, тимер юлдар һалына. Ижтимағи тормош майҙанына буржуазия һәм хәҙерге заман промышленность пролетариаты сығып, йылдам рәүештә көс йыя башлай.

Илдә капиталистик етештереү ысулының урынлашыуы XIX быуаттың икенсе яртыһында Өфө хужалығының, социаль мөнәсәбәттәренең һәм культура тормошоноң үҫешен тиҙләткән.

60—70-се йылдарҙа ҡала промышленносында ҡул хеҙмәтенә нигеҙләнгән ваҡ производство бер үҙе хакимлыҡ итеүен дауам итә, уның нигеҙендә киләсәктә мануфактуралар һәм фабрикалар үҫеп сыға. Мануфактура тибындағы тәүге предприятиелар ағас эшкәртеү һәм силикат промышленносы тармаҡтарында барлыҡҡа килгән;

уларҙа етештереү процесының күп хеҙмәт һалыуҙы талап итеүе һәм сезонлы булыуы сәбәпле, эшсе көстө байтаҡ туплау талап ителгән.

80-се йылдарҙа промышленность производствоһын механизациялау, мануфактуранан фабрикаға күсеү башлана. Купец М. К. Палатиндың ярма ярыу предприятиеһында, купецтар Ф. С. Стуколкиндың һәм П. С. Чиковтың таҡта ярыу заводтарында тәүге пар двигателдәре барлыҡҡа килә. «Производствоға пар двигателдәрен ҡулланыу эре машина индустрияһының иң характерлы билдәләренең береһе булып тора», — тип яҙҙы В. И. Ленин [1].

Ҡалала 1879 йылда — 4, ә 1890 йылда 9 эре (эшселәр һаны 16-нан да кәм булмаған) предприятие иҫәпләнгән, улар фабрика-завод заведениелары дөйөм һанының шул йылдарға ярашлы рәүештә 11,4 һәм 32,1 процентын тәшкил иткән. Улар өлөшөнә шул уҡ йылдарҙа эшселәрҙең 48,1 һәм 70,9 проценты, йыллыҡ етештереү күләменең 18,3 һәм 78,5 проценты тура килгән [2].

Капиталистик Өфө промышленносындағы үҙгәрештәрҙе 7-се таблицанан күреп була.

7-се таблица*

| Производстволар | Предприятиелар һаны | | | Эшселәр һаны | | | Етештереү күләме (мең һумдарҙа) | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1861й. | 1879й. | 1890й. | 1861й. | 1879 й. | 1890й. | 1861й. | 1879й. | 1890й. |
| Туҡыу . . . . . | — | 1 | — | — | 6 | — | — | 2,8 | — |
| Ағас эшкәртеү . . | — | 1 | 3 | — | 65 | 56 | — | 52,5 | 23,0 |
| Химия . . . . . . | 1 | — | — | 11 | — | — | 6,0 | — | — |
| Май һәм балауыҙ | 8 | 5 | 4 | 37 | 40 | 79 | 37,6 | 155,5 | 65,0 |
| Күн . . . . | 4 | 10 | 7 | 20 | 48 | 29 | 10,5 | 84,3 | 30,0 |
| Силикат . . . | 22 | 4 | 7 | 92 | 107 | 77 | 32,0 | 27,0 | 21,0 |
| Аҙыҡ-түлек . . . | 3 | 14 | 7 | 9 | 75 | 136 | 27,3 | 90,5 | 266,16 |
| Бөтәһе: | 38 | 35 | 28 | 169 | 341 | 377 | 113,4 | 412,6 | 405,16 |

*Таблица түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса төҙөлгән: Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—62 г., икенсе киҫәк, 4, 5-се биттәр; Орлов П. А. Указатель фабрик и заводов Европейской России, 122, 149, 213, 223, 275, 329, 332, 458, 525, 526, 542-се биттәр; Орлов П. А., Будагов С. Г. Указатель фабрик и заводов Европейской России, 144, 208, 227, 268, 269, 331, 344, 523, 561, 634, 676-сы биттәр.

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 3-сө том, 506-сы бит.

[2] Түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса иҫәпләп сығарылған. Орлов П. А. Указатель фабрик и заводов Европейской России с царством Польским и великим княжеством Финляндским, 1-се баҫма. СПб., 1881, 122, 149, 213, 223, 275, 329, 332, 458, 525, 526, 542-се биттәр; Орлов П. А., Будагов С. Г. Указатель фабрик и заводов Европейской России, 3-сө баҫма. СПб., 1894, 144, 208, 227, 268, 269, 331, 344, 523, 561, 634, 676-сы биттәр.

Килтерелгән мәғлүмәттәр ҡаланың фабрика-завод промышленносы етештергән йыллыҡ продукция ҡиммәтенең 1861 йылдан 1890 йылға тиклемге осорҙа 3,5 тапҡырҙан күберәккә (113 130 һумдан 405 164 һумға ҡәҙәр), эшселәр һанының 2,2 тапҡырға (169 кешенән 377 кешегә тиклем) артыуын күрһәтә.

Өфө промышленносындағы айырым тармаҡтарҙың үсеше тигеҙһеҙ бара. 1890 йылға предприятиелар, эшселәр һанындағы һәм йыллыҡ етештереү күләмендәге нисбәт тармаҡтар буйынса һиҙелерлек үҙгәрә. Бөтәһенән элек туҡыу һәм химия промышленносы предприятиелары эшләүҙән туҡтай, силикат, ағас эшкәртеү һәм май-балауыҙ предприятиелары төшөнкөлөк кисерә. Икенсе яҡтан, аҙыҡ-түлек промышленносы йылдам темптар менән үҫә, унда 1890 йылға етештереү күләме 1861 йыл менән сағыштырғанда 10 тапҡырға тиерлек арта.

Ныҡ үҫкән промышленность тармаҡтарында юғарыраҡ хеҙмәт етештереүсәнлегенә лә өлгәшелә. Мәҫәлән, 1890 йылда бер эшсегә йыллыҡ етештереү күләме аҙыҡ-түлек промышленносында — 1957, күн промышленносында 1034 һум тәшкил иткән, ә ағас эшкәртеүҙә — 411 һәм силикат промышленносында 273 һум булған.

90-сы йылдарҙағы промышленность күтәрелеше Өфөлә фабрика-завод производствоһының көслө үҫешен тыуҙыра. Иҫке предприятиелар эреләтелә, уларҙың техника менән йыһазландырылыуы арта,

8-се таблица*

| Производстволар | Абсолют һандарҙа | | | Проценттарҙа | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | предприятиелар һаны | эшселәр һаны | етештереү күләме (һумдарҙа) | предприятиелар һаны | эшселәр һаны | етештереү күләме |
| Туҡыу . . . . . . . . . | 1 | 40 | 33 100 | 3,0 | 3,5 | 2,2 |
| Ҡағыҙ . . . . . . . . . | 5 | 200 | 81 800 | 15,2 | 17.7 | 5,5 |
| Ағас эшкәртеү . . . . . . | 9 | 291 | 387 100 | 27,3 | 26,0 | 26,0 |
| Химия . . . . . . . . . . | 1 | 28 | 4300 | 3,0 | 2,5 | 0,3 |
| Май һәм балауыҙ . . . . | 1 | 16 | 119 300 | 3,0 | 1,4 | 8,0 |
| Күн . . . . . . . . . . . | 1 | 13 | 31 100 | 3,0 | 1,2 | 2,1 |
| Силикат . . . . . . . . . | 6 | 115 | 30 500 | 18,2 | 10,2 | 2,0 |
| Металл эшкәртеү . . . . . | 3 | 78 | 45 400 | 9,1 | 7,0 | 3,1 |
| Аҙыҡ-түлек . . . . . . . | 6 | 343 | 755 000 | 18,2 | 30,5 | 50,8 |
| Бөтәһе: | 33 | 1124 | 1 487 600 | 100 | 100 | 100 |

* Список фабрик и заводов Европейской России. СПБ., 1903, 109, 171 172, 233, 234, 328, 401, 457, 684, 686, 751-се биттәр.

яңы производстволар — металл эшкәртеү һәм ҡағыҙ эшләү производстволары барлыҡҡа килә. 1900 йылда ҡала промышленносының иң мөһим күрһәткестәре 8-се таблицала килтерелгән.

1890 йылдан 1900 йылға тиклем фабрика-завод промышленносында эшселәр һаны 3 тапҡырға, етештереүҙең йыллыҡ күләме 3,7 тапҡырға артҡан. Алты предприятиенан торған аҙыҡ-түлек производствоһы элеккесә етештереү күләме (50,8 процент) буйынса ла, шулай уҡ эшселәр һаны (30,5 процент) буйынса ла беренсе урында торған. 1890 йыл менән сағыштырғанда аҙыҡ-түлек промышленносы продукцияһының ҡиммәте 2,8 тапҡырға артҡан. Икенсе урында ағас эшкәртеү производствоһы торған, уның өлөшөнә эшселәрҙең 26 проценты һәм етештереү күләменең 26 проценты тура килгән. Пар двигателдәрен ҡулланыу һөҙөмтәһендә таҡта ярыу заводтарында хеҙмәт етештереүсәнлеге киҫкен күтәрелгән, бер эшсе йылына уртаса 1330 һумлыҡ продукция эшләп сығарған.

90-сы йылдарҙа 16-нан да кәм булмаған эшсеһе булған промышленность предприятиелары һаны 82 процентҡа тиклем артҡан. Улар мануфактура һәм фабрика тибындағы капиталистик предприятиелар булған. Башланған техник переворот нигеҙҙә ағас эшкәртеү, металл эшкәртеү һәм аҙыҡ-түлек производстволарын солғап алған. Етештереү процестарын механизациялау хеҙмәт етештереүсәнлеген киҫкен күтәргән, эре предприятиеларҙың ваҡ предприятиеларҙы ҡыҫырыҡлап сығарыуына булышлыҡ иткән, даими промышленность эшселәре кадрҙарының формалашыуын тиҙләткән.

Фабрика-завод промышленносы, шаҡтай үҫеүенә ҡарамаҫтан, халыҡтың тауарҙарға үҫә барған ихтыяждарын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алмаған. Өфөнөң экономик тормошонда ҡала халҡының һәр төрлө заказдарын үтәүгә нигеҙләнгән һөнәрселек производствоһы күренекле урын тотҡан. 1886 йылғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Өфөлә 80-гә яҡын һөнәрселек заведениеһы (мастерскойы) булып, уларҙа 310 мастер, 308 мастер ярҙамсыһы һәм 271 өйрәнсек иҫәпләнгән [1]. Һөнәрселек производствоһы рынок мөнәсәбәттәре орбитаһына торған һайын күберәк ылыҡтырыла барған, цех кәртәләрен емереп, ирекле капиталистик үҫеш юлына баҫҡан.

XIX быуат уртаһында Өфөгә төп килеп инеү юлдары ҡоро юл тракттарынан һәм һыу юлдарынан торған, улар буйынса хәрәкәт иҫке ысул — ылау һәм һал ағыҙыу менән барған.

1857—1858 йылдарҙа урындағы промышленниктарҙың юллауы буйынса Ағиҙелде тикшереү үткәрелгән. Комиссия Ағиҙелде уның тамағынан алып Стәрлетамаҡҡа тиклем судолар йөрөү өсөн уңайлы тип тапҡан һәм Ағиҙелдә пароходство асыу тураһында Нижний Новгородтың пароход йәмғиәттәре менән һөйләшеүҙәр алып барған.

---

[1] Уфимский юбилейный сборник в память празднования трехсотлетнего юбилея города Уфы. Өфө, 1887, 95-се бит.

Сафронов приставе.



1858 йылдың 11 августында иртәнсәк Өфөгә ике пароход — «Грозный» һәм «Быстрый», ә 7 сентябрҙә «Русалка» тигән еңел пароход килеп туҡтаған. Һуңғыһы Ағиҙел буйлап Нөгөш йылғаһы тамағынан алыҫ булмаған Бесәнсе тигән башҡорт ауылынан 12 саҡрым юғары күтәрелгән.

1860 йылдың ғинуарында «Дружина» тигән Нижегород йәмғиәте идараһы Өфөлә «үҙҙәренең йөктәрен ебәрергә йәки йәмғиәттең пароходтарында пассажир булырға теләүселәр менән бәйләнеш тотоу өсөн» контора ойоштора [1]. Ләкин йылға фарватерының өйрәнелмәгәнлеге, уңайлы пристандәрҙең булмауы пароход аша бәйләнеште ныҡ ҡыйынлаштырған, шуға күрә йәмғиәт тиҙҙән үҙенең конторарaһын япҡан. 1863 йылдан алып Ағиҙелдә Өфө купецы Сафроновтың «Надежда» исемле буксир пароходы ғына, ә 1867 йылдан помещик Базилевскийҙың «Манатура» тигән пароходы йөрөгән [2].

1870 йылда «Ағиҙел пароходствоһы» йәмғиәте ойошторолғас ҡына, Ағиҙелдә пароходтарҙың регуляр йөрөшө башлана. 1871 йылда инде 5 пассажир судноһы рейстар яһай, уларҙың 3-һө Өфө менән Ҡазан араһында һәм 2-һе Өфө менән Нижний Новгород араһында йөрөй.

Буксир пароходтары күренә башлай. Быуат аҙағына Ағиҙелдә 57 тауар-пассажир пароходы йөрөгән [3]. Шул ваҡытта Өфө Ағиҙел йылға юлы үҙәгенә һәм ҙур пристангә әүерелә.

---

[1] «Оренбургские губернские ведомости», 1860, № 4.
[2] «Уфимские губернские ведомости», 1867, № 33.
[3] Обзор Уфимской губернии за 1900 год. Өфө, 1902, 44, 45-се биттәр.

Һамар — Златоуст (хәҙерге Куйбышев) тимер юлын төҙөү Өфөнөң экономик һәм культура тормошон күтәреүҙә ғәйәт ҙур роль уйнаған. Ҡалаһың йәмәғәтселегe, ҡала идараһы Себер тимер юлын Өфө аша үткәреүҙе 10 йыл буйы юллаған. 1885 йылдың 9 ғинуарында ғына хөкүмәт Һамар—Өфө—Златоуст—Силәбе—Екатеринбург тимер юлы проектын раҫлай. Шул уҡ йылдың 23 октябрендә Һамар—Өфө участкаһында төҙөлөш эштәре башлана. Тимер юл вокзалына һәм башҡа ҡоролмаларға тантаналы рәүештә нигеҙ һалыу 1886 йылдың 26 апрелендә булған. Һамар—Өфө участкаһында хәрәкәт 1888 йылдың 8 сентябрендә асылған (был көндө төҙөүселәр Ағиҙел аша һалынған күперҙе тимер юлсыларға тапшырған), ә нәҡ ике йылдан һуң, 1890 йылдың 8 сентябрендә, юлдың Өфө—Златоуст участкаһы һәм Ҡариҙел аша күпер файҙаланыуға ҡабул ителгән. 1888 йылдың августа Өфөлә Һамар—Златоуст тимер юлының төп мастерскойҙары (хәҙер тепловоздар ремонтлау заводы) һәм депо сафҡа ингән. Мастерскойҙар хәрәкәт итеүсе составҡа урта һәм капиталь ремонт, ә депо бәләкәй, йәки ағымдағы ремонт үткәргән.

Мастерскойҙар өс айырым бинанан торған һәм уларҙа биш цех, дүрт бүлексә урынлашҡан. 1889 йылда бында 167 эшсе эшләгән, артабан уларҙың һаны ҡырҡа артҡан. Тәүге мәлдә паровоздар, вагондар һәм ҡаҙандар ремонтлау һәм уларҙы йыйыу буйынса бөтә эштәр ҡул көсө менән башҡарылған. 1890 йылда мастерскойҙар шул заман өсөн алдынғы булған техника менән йыһазландырылған. Мәҫәлән, механика цехының тәгәрмәсле 5 станогы, 21 токарь станогы, 1 болт киҫкес, 5 йышыу, 1 тишеү, 6 быраулау станогы, 40 һәм 25 ат көсөндәге 2 пар машинаһы һ. б. ш. булған.

Пароход, ә иң мөһиме, тимер юл хәрәкәттәрен асып ебәреү Өфөнө Көньяҡ Уралда эре транспорт узелына әүерелдергән, Өфө промышленносының йылдам үҫеүенә, шулай уҡ Өфө менән Урал, Себер, Волга буйы, Урта Азия, Үҙәк Россия райондары һәм баш ҡалалары араһында тауар әйләнешенең үҫә барыуына булышлыҡ иткән. «Тимер юлдың Өфө ҡалаһына — Көньяҡ Уралдағы ике ҙур йылғаның — бик күп һанда ағас изделиелары, шулай уҡ Урал заводтарында эшләп сығарылған металдар ағыҙыла торған Ағиҙел менән Ҡариҙелдең бергә ҡушылған ерендә урынлашҡан ҡалаға йүнәлтелеүе Өфө ҡалаһына тимер юлды файҙаланыу менән туранан-тура йәки ҡыялата ҡыҙыҡһынған хеҙмәт, тернәкселлек һәм капитал кешеләренең көслө ағымын тыуҙырҙы. Был кешеләрҙең эшмәкәрлеге ҡаланың экономик тормошона халыҡтың ғәйәт ҙур артымын индерҙе, ул иһә ҡала бюджетының үҫешендә ғәҙәттән тыш уңайлы сағылды» [1], тип яҙған ҡала идаралығы.

80-се йылдарға тиклем Өфөлә сауҙа иң кәрәкле тауарҙарға аҙмы-күпме ҙур һорауҙың булмауы арҡаһында аҡрын үҫкән. Ҡалала йә-

---

[1] Краткий очерк 25-летия введения в городе Уфе городового положения, 26 января 1871 г. — 26 января 1896 г. Өфө, 1896, 35-се бит.

Тимер юл вокзалы.



шәгән дворяндар үҙ имениеларында етештерелгән продукттар менән тәьмин ителгән; мещандарҙың, ҡағиҙә булараҡ, баҡсаһы һәм малы, ҡайһы берҙәренең сәсеүлектәре лә булған. Тимер юл үткәрелгәндән һуң, халыҡ һанының киҫкен артыуы һәм киң ҡулланыу тауарҙарына, төҙөлөш материалдарына рынок ихтыяжының үҫеүе, шулай уҡ крәҫтиәндәрҙе сауҙа мөнәсәбәттәренә һаман күберәк ылыҡтырыу арҡаһында сауҙала ҙур үҙгәрештәр була.

Үрге сауҙа майҙаны элеккесә Өфөнөң сауҙа үҙәге булып ҡалған. Уның көнбайыш өлөшөндә йәрминкә биналары корпустары, кибеттәр, павильондар, складтар, сауҙа рәттәре төҙөлгән. Бында ғинуар аҙағында — февраль башында йыл һайын ике аҙналыҡ йәрминкә йыйылған. Ләкин сауҙа әйләнешендә уның әһәмиәте үткән осор менән сағыштырғанда аҡрынлап төшә башлаған. Тимер юлды файҙалана башлау менән, был түбән төшөү бигерәк тә һиҙелә, сөнки тимер юл буйынса йылдың теләһә ниндәй ваҡытында илдең күп районадарынан промышленность тауарҙары килтерелгән. 60—80-се йылдарҙа йәрминкәгә килтерелгән тауарҙарҙың хаҡы ҡайһы берҙә 822 мең һумға, ә һатылғандарының 467 мең һумға еткән; 90-сы йылдарҙа иһә шуға ярашлы рәүештә 400 мең һәм 90 мең һумға еткән [1]. Йәрминкә сауҙаһы сауҙаның башҡа төрҙәренә: баҙар һәм кибет сауҙаһына һаман күберәк урын биргән. Баҙарҙар Үрге сауҙа майҙанында ла үткәрелгән; ошонда уҡ толчок баҙары

[1] «Уфимские губернские ведомости», 1870, № 11; Обзор Уфимской губернии за 1892 год. Өфө, 1893, 41-се бит.

Гостиный рәт эргәһендә баҙар көндө.



урынлашҡан. 1892 йылда Өфө губернаторы Эске эштәр министерствоһына: «Үрге сауҙа майҙанында көн һайын ит, балыҡ, йәшелсә, емеш-еләк, һөт, ҡош-ҡорт, бакалея, тимер-томор, күн, итек-ситек, бүрек һәм галантерея тауарҙары, көлдәк һәм һауыт-һаба һаталар»[1],— тип яҙған. Баҙар көндәрендә тирә-яҡ ауылдарҙағы крәҫтиәндәр ҡалаға ауыл хужалығы продукттары, ағас әйберҙәре, утын килтергән һәм промышленность тауарҙары алып киткән.

Үрге сауҙа майҙанының көнсығыш өлөшөндә гостиный двор урынлашҡан, уның кибеттәр өсөн 56 тышҡы һәм 56 эске урыны булған. Ырымбур генерал-губернаторының 1858 йылдың 13 мартындағы бойороғо буйынса был урындар (бер урындан башҡаһы: уныһы шунда төҙөлгән кибете менән ҡала идаралығыныҡы булған) ҡала идаралығы тарафынан сауҙагәрҙәргә бер тапҡыр түләнә торған ҙур булмаған хаҡҡа мәңгегә быуындан быуынға файҙаланыу өсөн бирелгән. 1866 йылғы мәғлүмәттәргә ҡарағанда, тышҡы урындарҙы 25 купец һәм 2 мещан биләгән, ә беренсе гильдия купецы К. И. Блохиндың 9 урыны, икенсе гильдия купецтары М. А. Полетаевтың һәм С. Т. Колмацкийҙың 5-әр урыны булған; эске урындар ваҡ-төйәк һатыу өсөн 14 купецҡа һәм 10 мещанға һатылған. Һатып алынған урындарға бер төрлө һыҙма менән таш кибеттәр һалынған. Сауҙа линияларында йәки рәттәрендә участкалар торгтан һатырға теләүселәргә бирелгән.

[1] ЦГИАЛ, ф. 1287, оп. 25, д. 1686, л. 10.

Бынан тыш, Түбәнге сауҙа (Иҫке сауҙа) майҙанында ҡала идаралығының 1875 йылда ҙур булмаған 20 кибете булған. Ҡалған кибеттәр һәм сауҙа биналары купецтарҙыҡы һәм мещандарҙыҡы булған.

Сауҙаның үҫеүе яңы магазиндар һәм кибеттәр төҙөүгә килтергән. 1861 йылдан 1890 йылға тиклем уларҙың һаны 247-нән 726-ға тиклем, йәки 2,9 тапҡырға, артҡан, шуның менән бергә иң ҙур үҫеш гостиный дворҙы үҙгәртеп ҡороу уңайы менән 60-сы йылдарҙа күҙәтелгән [1]. Купецтар сословиеһының составы ла үҙгәргән. Ҙур капиталдары булған гильдия купецтары сауҙала хәл иткес роль уйнай башлаған. Әгәр 1861 йылда 69 гильдия купецы (1 — икенсе гильдия, 68 — өсөнсө гильдия купецы) иҫәпләнһә, 1880 йылда улар инде 154 (6 — беренсе гильдия, 148 — икенсе гильдия купецы) була [2]. Ҡаланың купецтар халҡы 1864 йылдан 1897 йылға тиклем 300 кешенән 672-гә тиклем, йәғни 2,24 тапҡырға, артҡан [3].

Промышленность, транспорт һәм сауҙаның үҫеүе ҙур аҡса средстволарын туплауҙы, кредит биреүҙең капиталистик системаһын булдырыуҙы талап иткән. Урындағы промышленниктарҙың ныҡышмалы юллауынан һуң Өфөлә Дәүләт банкыһы (1865 йыл), Петербург акционерҙар Волга-Кама коммерция банкыһы (1873 йыл), Крәҫтиәндәр ер банкыһы (1883 йыл) үҙҙәренең бүлексәләрен асҡан; эре акционер провинциаль банкыларҙың агентстволары төҙөлгән. Улар вкладтарҙы һаҡлауға һәм ағымдағы счетҡа ҡабул иткән, промышленность һәм сауҙа предприятиеларына векселдәрҙе иҫәпкә алыу формаһында кредиттар биргән һ. б. ш. 1877 йылдан 1890 йылға тиклем Дәүләт банкыһының тик Өфө бүлексәһендә генә дөйөм аҡса әйләнеше 13,1 миллион һумдан 27,6 миллион һумға тиклем артҡан. Крәҫтиәндәр ер банкыһы бүлексәһенә килгәндә инде, уның башҡорт ерҙәрен рәхимһеҙ талау, күсеп килгән кулактарҙың эре хужалыҡтарын губернала урынлаштырыу менән даны сыҡҡан.

1876 йылдың 15 декабрендә Өфө йәмәғәт банкыһы үҙенең эштәрен башлап ебәрә; уның идараһы ҡала думаһы тарафынан урындағы ҡалын кеҫәле кешеләр араһынан һайланған. Ҡала буржуазияһының, башҡорт ерҙәрен талау иҫәбенә байыҡҡан колонизаторҙар һәм губерна земстволының ярҙамы арҡаһында банк операциялары тиҙ үҫә башлай. Әгәр 1877 йылда банкының йыллыҡ аҡса әйләнеше 1,6 мил-

---

[1] Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—1862 гг., икенсе киҫәк, 4-се бит; Обзор Уфимской губернии за 1890 год. Өфө, 1891, 80-се бит.

[2] Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—1862 гг., икенсе киҫәк, 4-се бит; Географическо-статистический словарь Российской империи, V том. СПб., 1885, 395-се бит.

[3] «Оренбургские губернские ведомости», 1865, № 10. Первая всеобщая перепись населения Российской империи, 1897 г. Эске эштәр министерствоһының Үҙәк статистика комитеты баҫмаһы. Н. А. Тройницкий редакцияһында. XLV. Өфө губернаһы. II дәфтәр. СПб., 1901, 2, 3-сө биттәр.

Өфө баҙары. Ҡымыҙ һатыусы.



лион һум тәшкил итһә, 1890 йылда инде 8,5 миллион һум булған [1]. Банк урындағы промышленносҡа һәм сауҙаға кредит асҡан, ҡала идаралығына коммуналь предприятиелар төҙөү һәм ҡаланы төҙөкләндереү өсөн заемдар биргән. 1879 йылдың 25 майында ҡаланың икенсе коммерция банкыһы — үҙ-ара кредит биреүҙең Өфө йәмғиәте барлыҡҡа килгән. 1881 йылда йәмғиәттә 126 ағза торған, уның әйләнештәге капиталы 27 260 һум булған [2]. Башҡа банк учреждениеларынан айырмалы рәүештә, үҙ-ара кредит биреү йәмғиәттәре фәҡәт үҙ ағзаларына — йәмғиәттең капитал хужаларына ғына ссудалар биргән.

Аҡса средстволары туплау, бигерәк тә ваҡ буржуазияның шуға ҡәҙәр өйҙә «аҡса кәршәгендә» һаҡланған средстволарын йыйыу менән һаҡлыҡ кассалары ла шөғөлләнгән. 90-сы йылдар уртаһында Өфө губернаһында 40 һаҡлыҡ кассаһы эшләгән, уларҙың вкладтар ҡалдығы 1,4 миллион һум тәшкил иткән [3].

Шулай итеп, Өфөлә реформанан һуңғы осорҙа эре промышленность һәм сауҙа буржуазияһының, урындағы помещиктарҙың, көсәп килгән бай кулактарҙың мәнфәғәтен хеҙмәтләндереү өсөн капиталистик кредит системаһы барлыҡҡа килгән.

[1] Географическо-статистический словарь Российской империи, V том, 395-се бит; Обзор Уфимской губернии за 1890 год, 41-се бит.

[2] Обзор деятельности городского управления и положения городского хозяйства г. Уфы, с 1870 по 1881 год. Өфө, 1881, 47, 48-се биттәр.

[3] Очерки по истории Башкирской АССР, 1-се том, икенсе китап, 215-се бит.

## § 2. Территорияһы һәм халҡы. Ҡала үҙидараһы һәм ҡала хужалығы

Өфөлә капиталистик промышленностың һәм сауҙаның үҫеүе, уның Көньяҡ Уралда эре транспорт узелына әүерелеүе территорияның киңәйеүенә һәм халыҡтың артыуына булышлыҡ иткән. Ҡала ике йүнәлештә: көнсығыштан көнбайышҡа табан һәм көньяҡтан төньяҡҡа табан төҙөлгән. 1879 йылда ҡаланың төҙөлөү сиктәре көньяҡта инде Ағиҙелдең уң яҡ яры буйлап үткән, уның ипкенендә Золотуха, Труниловка һәм Архиерейка биҫтәләре айырылып торған; көнбайышта — Нижегородка биҫтәһенән буш пространство менән айырылып торған Никольский урамы буйлап, төньяҡта — Богородский урамы буйлап, көнсығышта Оло Себер урамы (хәҙерге Мипһажев урамы) буйлап үткән. Сутолоканан көнсығышҡа табан сик Копейкин урамынан (хәҙерге Сун Ят-Сен урамы) төньяҡтараҡ зыяратҡа ҡәҙәр һәм унан көньяҡҡа Золотуха биҫтәһенә тиклем үткән.

Ҡала торлаҡ фондының артабан үҫеүе тимер юл төҙөү менән бәйләнгән. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Никольский урамы менән мосолман зыяратынан алып тауар станцияһына тиклемге тимер юл линияһы араһындағы буш урын төҙөлгән. Богородский урамынан төньяҡҡа табан Лазаретный һәм Сафроново биҫтәләре, Кесе Бекетов урамы (хәҙерге Беляков урамы), көнсығыш окраинала Кесе Себер урамы (хәҙерге Ветошников урамы), Иҫке Өфөлә Блохин урамы (хәҙерге Кавказ урамы) һәм башҡа урамдар барлыҡҡа килгән. 40 йыл эсендә, 1864 йылдан алып 1904 йылға тиклем, ҡаланың халыҡ урынлашҡан майҙаны 4,3 квадрат саҡрымдан 7,4 квадрат саҡрымға тиклем, йәғни 1,7 тапҡырға, артҡан.

Халыҡ һаны тағы ла тиҙерәк темптар менән үҫкән. 1864 йылда ҡалала — 20 149 кеше, 1886 йылда — 26 976, ә 1897 йылда инде 49 275 кеше йәшәгән, йәғни 33 йыл эсендә ҡалала йәшәүселәр һаны 2,5 тапҡырға артҡан. Шул уҡ ваҡытта халыҡ һаны Һамар — Златоуст тимер юлын төҙөгән ваҡытта һәм уны төҙөгәс бигерәк тә интенсив үҫкән. 1886 йылдан 1897 йылға тиклем ҡала кешеләре һаны 22 299 кешегә, йәғни йылына уртаса 2027-шәр кешегә, артҡан.

Халыҡтың тәбиғи артымы XIX быуаттың икенсе яртыһында ла Өфөлә йәшәүсе халыҡ һанына һәм составына хәл иткес йоғонто яһамаған. Мәҫәлән, крепостной право бөтөрөлгәндән һуң тәүге 10 йылда тәбиғи артым йылына уртаса 41 кеше тәшкил иткән [1], ә ҡала халҡы һаны яҡынса 310 кешегә артҡан. Капиталистик Өфөнөң халҡы нигеҙҙә башҡа урындарҙан күсеп килеүселәр иҫәбенә артҡан. 80—

---

[1] Памятная книжка Уфимской губернии со статистическою картою губернии. Өфө губерна статистика комитеты ҡушыуы буйынса, Н. А. Гурвич редакцияһында төҙөлгән һәм баҫып сығарылған, 1-се киҫәк. Өфө, 1873, 94, 95-се биттәр.




**XVI—XIX быуаттарҙа Өфө территорияһының үҫеш схемаһы.**

I. XVI быуат Кремле. II. Ҙур ҡала (Яңы острог). XVII быуат, III, XIX быуат башына төҙөлгән майҙандың артыуы. IV, Шул уҡ, XIX быуат уртаһына, V, Шул уҡ, XIX быуат аҙағына.

Биҫтәләр: 1 — Архиерей, 2 — Оло Репный, 3 — Голубина, 4 — Золотухино, 5 — Ҡазан, 6 — Кесе Репный, 7 — Мокра, 8 — Мәскәү, 9 — Нежегородка (яңы һәм иҫке), 10 — Посад, 11 — Төньяҡ, 12 — Себер, 13 — Соборный, 14 — Һалдат, 15 — Сафроново, 16 — Труниловка, 17 — Усольский, 18 — Успенский, 19 — Черкалихина, 20 — Цыганский поляна.

**90-сы йылдарҙа Өфөлә килгән халыҡ ҙур күпселекте тәшкил иткән. 1897 йылғы перепись мәғлүмәттәре буйынса, Өфөнөң 18 528 төп кешеһенә (ҡалала тыуып үҫкәндәргә) башҡа урындарҙан килгән 30 747 кеше тура килгән.**

| Сословиелар | Абсолют һандарҙа | | | Проценттарҙа | | |
|---|---|---|---|---|---|---|
| | 1864 й. | 1886 й. | 1897 й. | 1864 й. | 1886 й. | 1897 й. |
| Дворяндар һәм чиновниктар . . . . . . . | 3882 | 3766 | 4479 | 19,3 | 14,0 | 9,1 |
| Руханиҙар . . . . | 705 | 933 | 953 | 3,5 | 3,4 | 1,9 |
| Ҡала сословиелары | 8451 | 12 757 | 19 319 | 41,9 | 47,2 | 39,1 |
| шул иҫәптән: | | | | | | |
| а) купецтар һәм почетлы граждандар | 315 | — | 672 | 1,6 | — | 1,3 |
| б) мещандар . . . . | 8136 | — | 18 647 | 40,3 | — | 37,8 |
| Крәҫтиәндәр . . . . | 2244 | 5481 | 22 869 | 10,3 | 20,3 | 46,4 |
| Хәрбиҙәр (хеҙмәт итеүселәр һәм отставкалағылар) | 4005 | 3473 | — | 19,9 | 13,0 | — |
| Башҡалар . . . . . | 862 | 566 | 1665 | 4,3 | 2,1 | 3,5 |
| Бөтәһе: | 20 149 | 26 976 | 49 275 | 100,0 | 100,0 | 100,0 |

* Таблица түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса төҙөлгән: ,,Оренбургские губернские ведомости'', 1865, № 10; Город Уфа к трехсотлетнему его юбилею, 9-сы бит. Первая всеобщая перепись населения Российской империи, 1897 г. XV. Өфө губернаһы, 1-се дәфтәр. СПб., 1901, 182, 183-сө биттәр.

Реформанан һуңғы Өфө күп милләтле ҡалаға әйләнә. 1886 йылда ҡалала — 19, ә 1897 йылда 33 тел төркөмө вәкилдәре йәшәгән. Өфөләрҙең төп массаһы элеккесә рустарҙан торған, шул уҡ ваҡытта башҡорт һәм татарҙар һанының үҫеше күҙәтелгән. 1897 йылда рустар, украиндар һәм белорустар Өфө халҡының 85,36 процентын, башҡорттар — 6,39, татарҙар һәм мишәрҙәр — 5,38, типтәрҙәр — 0,15, ҡалған бөтә халыҡтар 2,82 процент самаһы тәшкил иткән.

Өфө халҡының үҫеше ирҙәр менән ҡатын-ҡыҙҙар һан сағыштырмаһының тигеҙләшеү процесы менән бергә барған. Әгәр ирҙәр 1861 йылда — 56, 1864 йылда 51,2 процент тәшкил итһә, 1886 йылғы һәм унан һуңғы йылдарҙағы мәғлүмәттәр буйынса 50 процент тәшкил иткән [1]. Ҡатын-ҡыҙҙар һанының үҫеүен капиталистик ҡалала

[1] Экономическое состояние городских поселений Европейской России в 1861—62 г., икенсе киҫәк, 3-сө бит; «Оренбургские губернские ведомости», 1865, № 10; Город Уфа к трехсотлетнему его юбилею. По произведенной Уфимским губернским статистическим комитетом однодневной переписи 19 апреля 1886 года. Разработана членом-секретарем статистического комитета Н. А. Гурвичем. Өфө, 1887, 8-се бит.

ҡатын-ҡыҙ хеҙмәте ҡулланыуҙың сағыштырмаса киң мөмкинлеге тыуҙырған; бер үк ваҡытта ул килгән кешеләрҙең ҡалала шығыраҡ төпләнеп ҡалыуы һәм даими ҡала халҡының формалашыуы билдәһе булған.

Үҫә барған буржуаз мөнәсәбәттәр йоғонтоһо аҫтында ҡала халҡының сословие составы ла үҙгәргән (9-сы таблицаны ҡарағыҙ).

Шул рәүешле, бөтә сословие төркөмдәре һан яғынан артҡан, әммә төрлө темптар менән артҡан. Шуға күрә улар араһындағы нисбәт ныҡ үҙгәргән. 1864 йылдан 1897 йылға тиклем дворяндар һәм чиновниктар өлөшө 19,3 проценттан 9,1-гә тиклем, руханиҙар өлөшө 3,5-тән 1,9 процентҡа тиклем кәмегән. Уның ҡарауы ҡала халҡы составында крәҫтиәндәрҙең тотҡан урыны 10,3 проценттан 46,4 процентҡа тиклем, йәғни 4 тапҡырҙан күберәккә, артҡан.

Реформанан һуңғы Өфө халҡының синфи составын унда йәшәүселәрҙең кәсебе тураһындағы мәғлүмәттәр күрһәтә, улар перепись материалдарында бар, ә перепись материалдары халыҡтың «үҙешмәкәр» тип аталған өлөшөн айырып күрһәтә. Уға, йәшәү өсөн үҙ аллы средстволарҙың ниндәй сығанаҡтан һәм ниндәй ысул менән алыныуына ҡарамаҫтан, йәшәү өсөн үҙ аллы средстволары булған кешеләр ингән. Халыҡтың ҡалған өлөшө йәшәү средстволарын «үҙешмәкәрҙәрҙән» уларҙың иждивенецтары булараҡ алған һәм ғәҙәттә уларҙың ғаилә ағзалары булып торған.

Өфөлә «үҙешмәкәр» халыҡтың тотҡан урыны өлгөргән эшсе йәшендәге кешеләрҙең күпме килеүенә ҡарап үҙгәреп торған һәм түбәндәге һандарға барып еткән (процентарҙа) *:

| | 1864 й. | 1879 й. | 1886 й. | 1897 й. |
|---|---|---|---|---|
| Ирҙәр араһында . . . . . . . | 71,0 | 25,0 | 32,6 | 61,5 |
| Ҡатын-ҡыҙҙар араһында . . . . . | 39,8 | 10,0 | 9,5 | 26,0 |
| Бөтә халыҡҡа ҡарата процентарҙа . | 55,8 | 17,9 | 21,1 | 43,7 |

* Таблица түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса төҙөлгән: ,,Оренбургские губернские ведомссти''. 1865, № 10; Справочная книжка Уфимской губернии. Өфө, 1883, IV бүлек, 31-се бит; Город Уфа к трехсотлетнему его юбилею, 13-сө бит; Распределение населения по видам главных занятий и возрастным группам по отдельным территориальным районам. XX таблица, II том. СПб., 1905, 134, 135-се биттәр.

Халыҡтың «үҙешмәкәр» өлөшөнөң тотҡан урыны 1864 һәм 1897 йылдарҙа айырыуса юғары була, шул йылдар алдынан күбеһенсә эшсе йәшендәге яңғыҙаҡтарҙан торған кешеләрҙең көслө ағымы килә.

Экономик көс йыйып алған буржуазия беренсе сиратта купецтарҙы һәм юғары ҡатлам мещандарҙы үҙ эсенә алған. Уға төп синыф — капиталистик йәмғиәттең етештереүсеһе булған пролетариат ҡаршы торған. Пролетариат мещандар, һөнәрселәр һәм башлыса бөлгән крәҫтиәндәр араһынан йыйылған.

Ҡала үҙидараһы реформаһы нығып барыусы буржуазия мәнфәғәттәре, илдең капиталистик үҫеш ихтыяждары файҙаһына эшләнгән аҙым булды. Реформа 1870 йылдың 16 июнендә Александр II тарафынан раҫланған яңы городовой положение нигеҙендә үткәрелгән.

Ҡала үҙидараһының реформаға тиклемге органдарынан айырмалы рәүештә, яңы учреждениелар сословиеһыҙ булған. Дүрт йылға бер тапҡыр үткәрелгән һайлаусылар йыйылыштарында ҡала думаһының гласныйҙары һайланған. Ҡала башлығынан һәм бер нисә ағзанан торған ҡала управаһы думаның башҡарыусы органы булған.

Думаға һайлауҙар буржуаз принципҡа — берҙәм мөлкәт цензы принцибына нигеҙләнгән. Һайлау хоҡуғынан 25 йәшкә еткән, күсмәй торған мөлкәте йәки сауҙа-промышленность заведениелары булған, шул ҡалала кәмендә ике йыл йәшәгән һәм билдәләнгән ҡала налогтарын түләгән кешеләр файҙаланған. Квартира яллаусылар, эшселәр, һөнәрселәр, йорт хеҙмәтселәре, ваҡ хеҙмәткәрҙәр, билдәләнгән мөлкәт цензы булмаған башҡа кешеләр һайлау хоҡуғынан мәхрүм ителгән.

Ҡала гласныйҙары араһында эре капитал вәкилдәренә күпселекте тәьмин итеү өсөн, һайлаусылар өс айырым курияға (йыйылыштарға) бүленгән. Беренсе курия ҡала налогтары дөйөм суммаһының өстән бер өлөшөн түләүсе иң эре милекселәрҙән торған; икенсе курияға уртаса күләмдәге мөлкәт хужалары, шулай уҡ бөтәһе бергә һайлаусыларҙан ингән налогтарҙың өстән бер өлөшөн түләгән кешеләр ингән; өсөнсө, иң күп һанлы, курияға һайлау хоҡуғы булған бөтә ҡалған халыҡ ингән. Һәр йыйылыш шул ҡала өсөн билдәләнгән гласныйҙарҙың өстән бер өлөшөн һайлаған.

Яңы городовой положение буйынса һайлауҙар Өфөлә 1870 йылдың 25 ноябренән 16 декабренә тиклем үткәрелгән. Бөтәһе 1275 һайлаусы теркәлгән, уларҙан беренсе курия буйынса — 31, икенсе курия буйынса — 118 һәм өсөнсө курия буйынса 1126 кеше теркәлгән. Улар ҡала думаһының 69 гласныйын, һәр курианан 23-әр гласный һайлаған. Беренсе саҡырылыш думала 40 купец һәм почетлы граждан, 17 дворян һәм чиновник, 1 руханиҙар вәкиле, 11 мещан һәм крәҫтиән булған. Дума ҡала башлығы, өс ағза (ике купец һәм бер дворян) һәм секретарь составында ҡала управаһын билдәләгән [1].

---

[1] «Уфимские губернские ведомости», 1870, № 52.

Губерна администрацияһы 1870 йылдағы һайлау йомғаҡтары менән ҡәнәғәт булмаған, сөнки ҡала думаһында бер социаль төркөм — купецтар һәм почетлы граждандар күпселегә барлыҡҡа килгән. Шуға күрә ул шунан һуңғы һайлауҙарҙа опеканы һәм контролде байтаҡ көсәйтеп, гласныйҙар составын дворяндар һәм руханиҙар файҙаһына үҙгәртеүгә өлгәшкән.

Ҡала думаһының һәм управаһының эшмәкәрлеге губернаторҙың һәм махсус административ учреждениеның — ҡала эштәре буйынса губерна присутствиеһының даими һәм ҡаты контроле аҫтында барған. Яңы городовой положение ҡабул ителгәндән һуң, 1892 йылғы ҡала «контрреформаһы» ҡала үҙидараһының батша администрацияһына тағы ла ныҡыраҡ бойондороҡлолоғон урынлаштырған. Шунан башлап губернаторҙың йәки эске эштәр министрының санкцияһынан башҡа думаның бер генә ҡарары ла ғәмәлгә ашырыла алмаған. Финанс хужалығы өлкәһендә дума губернаторҙан тыш ҡаҙна палатаһы председателенә буйһонған. Ваҡ сауҙагәрҙәр һәм промышленниктар, интеллигент профессияһы кешеләре, ҙур булмаған йорт хужалары һ. б. ш. һайлау хоҡуғынан мәхрүм ителгән. Ҡала үҙидараһында дворяндар һәм эре буржуазия хакимлығы ныҡлап урынлашҡан, улар думаның эшмәкәрлеген үҙ мәнфәғәттәрендә йүнәлдергәндәр ҙә.

Дума һәм уның управаһы ҡала хужалығына идара иткән; ҡаланы төҙөкләндереү, сауҙа һәм промышленность, больницалар, мәктәптәр, культура-ағартыу һәм ярҙам күрһәтеү учреждениелары уның ҡарамағында булған. Думаның аҡса средстволарының (ҡала бюджетының) төп сығанаҡтары ҡала халҡының күсмәй торған мөлкәтенән, сауҙанан һәм промыслаларҙан алына торған махсус йыйымдар, ҡала ерҙәренән, предприятиеларҙан һәм ҡоролмаларҙан ингән килемдәр, шулай уҡ ҡала банкыһының йыллыҡ табышынан бүленгән средстволар һ. б. ш. булған.

Ил экономикаһының капитализм үҫеше менән бәйләнгән дөйөм күтәрелеше ҡала килемдәренең йылдам үҫешенә килтергән. 22 йылда, 1870 йылдан 1892 йылға тиклем, ҡала бюджеты 24,6 мең һумдан 166,8 мең һумға тиклем, йәғни 7 тапҡырға тиерлек, артҡан[1]. Ҡала бюджетының шаҡтай артыуына ҡарамаҫтан, килемдәр сығымдар үҫеше артынан өлгөрә алмаған. 1872 йылда ҡала дефициты — 6956 һум, 1873 йылда — 10 160, 1874 йылда 6174 һум тәшкил иткән[2]. Бындай хәл ҡала хужалығына туранан-тура мөнәсәбәте булмаған күп кенә сығымдарҙың: полиция, жандармерия, төрмәләр, ғәскәри казармалар һ. б. тотоу сығымдарының ҡала иҫәбенә түләнеүе арҡаһында килеп сыҡҡан.

---

[1] Обзор деятельности городского управления и положения городского хозяйства г. Уфы с 1870 по 1881 год, 3-сө бит; ЦГИАЛ, ф. 1287, оп. 33, д. 857, л. 36.

[2] Обзор деятельности городского управления и положения городского хозяйства г. Уфы с 1870 по 1881 год, 193, 194-се биттәр.

XIX быуаттың икенсе яртыһында ҡала хужалығында ҙур үҙгәрештәр булған. Реформанан һуңғы осорҙа Өфө халҡының йылдам үҫеүе арҡаһында торлаҡ фонды ла артҡан. Шуның менән бергә торлаҡ төҙөлөшө темптары һәр ун йыллыҡта арта барған. Әгәр 60—80-се йылдарҙа йыл һайын 18-гә тиклем йорт һалынһа, 90-сы йылдарҙа инде йылына уртаса 259 йорт һалына. XIX быуаттың һуңғы ун йыллығында уларҙың һаны 3091-ҙән 5682-гә тиклем, йәки 83,8 процентҡа, артҡан.

Өфөләге йорттар усадьба көнкүреше һыҙаттарын һаҡлаған. «Бөтә ҡала,— тип яҙған шул заман кешеһе,— бер-береһенән ҙур ғына өй алды участкаһы менән бүленгән йорттар төркөмөнән торған, бында тотош биналар юҡ...» [1] 1886 йылғы перепись мәғлүмәттәре буйынса, ҡалалағы йорттарҙың 73 процентының өй алды ҡаралтылары һәм службалары, 31 процентының — баҡсалары, 48 процентының — мунсалары, 42 процентының ҡоҙоҡтары булған [2].

Ҡала ҙур булмаған бер ҡатлы ағас йорттарҙан торған, шулай ҙа үҙәктә ике ҡатлы, һирәгерәк өс ҡатлы биналар осраған. 80-се йылдар уртаһында ағас торлаҡ йорттар 93 процент, таш һәм ҡатнаш йорттар 7 процент тәшкил иткән. Архитектура йәһәтенән шул замандағы Өфө өсөн ағастан һалынған айырым йорттар (особняк) характерлы булған, күпселек осраҡта уның урамға ҡараған өс тәҙрәһе, урта өлөшөндә ихатала оҙопайтылған фасады һәм мотлаҡ мезонины булған. Мезонин сатлыҡтарында фронтонлы ябыҡ террасалар эшләнгән. Парадный ишектәр ныҡ ағас түшәмле лоджийҙар рәүешендә яһалған. Кәрниз фасады, тәҙрә һәм ҡапҡалар бай семәр менән биҙәлгән.

80—90-сы йылдарҙа Өфөлә ҙур шәхси биналар, үҙҙәренең хужаларына ҙур табыштар килтерә торған «төшөмлө йорттар» тип йөрөтөлгән йорттар, төҙөлә башлай. 1886 йылдан алып 1898 йылға тиклем ҡалала квартиралар һаны 4526-нан 8011-гә тиклем (77 процентҡа), шул иҫәптән арендаға бирелә торғандары 1954-тән 3622-гә тиклем (85,4 процентҡа) артҡан. Эре йорт биләүселәрҙең бер нисә йорто булған. 1886 йылда йорт биләүселәрҙең 24 процентының икешәр, 7 процентының өсәр һәм унан да күберәк йорто булған [3].

Губерна һәм өйәҙ учреждениелары, дини ведомство, ҡала идаралығы һ. б. ш. өсөн төҙөлгән ҡаҙна һәм йәмәғәт биналары ҡала төҙөлөштәренең дөйөм фонында үҙҙәренең ҙурлығы һәм архитектура биҙәлеше менән айырылып торған.

---

[1] Географическо-статистический словарь Российской империи, V том, 394-се бит.

[2] Город Уфа к трехсотлетнему его юбилею, 3-сө бит.

[3] Сборник статистических сведений по Уфимской губернии, I том, 1-се сығарылыш. Ҡалалар. Ҡазан, 1887, 21, 30-сы биттәр; Сборник статистических сведений по Уфимской губернии, IX том. Өфө, 1901, 57, 59-сы биттәр.

Трупиловка биҫтәһе.



Реформанан һуңғы осорҙа шул заман өсөн ҙур ғына булған ҡоролмалар: Мосолмандарҙың дини идаралығы бинаһы (1863), хәҙер СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының физика һәм математика бүлеге бинаһы (Туҡай урамы, 50), ҡала полиция идаралығы һәм ҡала янғындан һаҡланыу бинаһы (1869), хәҙерге ваҡытта бында БАССР Эске эштәр министерствоһының янғындан һаҡланыу идаралығы урынлашҡан (Октябрь революцияһы урамы, 14), губерна земство управаһы бинаһы, хәҙер «Уфимкабель» заводының производство биналарының береһе; тимер юл вокзалы; почтамт (хәҙер телеграф — Чернышевский урамы, 61) һәм башҡалар төҙөлгән.

1886 йылғы перепись буйынса Өфөлә 59 урам һәм тыҡрыҡ, 167 квартал, 12 майҙан, парк, бульвар һәм 2 баҡса булған. Шул заман кешеләренең хәтерләүе буйынса, Иҫке Өфөлә урамдар кәкре һәм тар, ә ҡаланың яңы өлөшөндә тура һәм шаҡтай киң булған, улар көнсығыштан көнбайышҡа табан һәм көньяҡтан төньяҡҡа табан параллель рәүештә урынлашҡан. Ҡаланың иҫке өлөшөн яңы өлөшөнөң үҙәге менән тоташтырған Оло Ҡазан урамы Үҙәк урам булып иҫәпләнгән. 90-сы йылдарҙа ҡаланы тимер юл станцияһы һәм Сафронов пристане менән тоташтырған Лазаретный урамы (һуңынан Үҙәк урам тип аталған, хәҙерге Ленин урамы), Александровский, шулай уҡ Каретный урамдары (хәҙерге Аксаков урамы) ҙур әһәмиәткә эйә була башлаған. Егеүле транспорттың йәнле хәрәкәте Оло Вавилов урамы (хәҙерге Пушкин урамы) буйынса үткән.

Иҫке Өфө.



Ҡаланың яңы өлөшө үҙәгендә 15 дисәтинәнән ашыу ер биләп торған Үрге сауҙа майҙаны урынлашҡан. «Майҙанға бөтә урамдар тиерлек килеп тоташа, — тип яҙған 80-се йылдарҙың беренсе яртыһында Өфөлә һәм Благовещен заводында һөргөндә булған народник С. Я. Елпатьевский, — ә майҙан тирәләй Өфөнөң бөтә цивилизацияһы урынлашҡан — оҙон рәттәр һуҙылып киткән, йорттар, хатта өс ҡатлы йорттар, тора, унда почта ла, аптека ла, палаталар ҙа, Дворяндар собраниеһы ла һәм номерҙары менән «Гранд-отель» дә бар. «Дамская портная» тигән яҙыу матур булып күренеп тора, ә бесән менән уратылған ҡоршау яҙыуһыҙ ҙа зирәк кешеләргә бында постоялый двор икәнен белдереп тора» [1].

Өфө урамдары һәм майҙандары, бигерәк тә яҙын һәм көҙөн, элек-кесә, үтеп сыҡҡыһыҙ бысраҡ булған. 1892 йылда Өфө губернаторы үҙенең донесениеларының береһендә, Үрге сауҙа майҙанында «аҙна һайын меңләгән йөк туплана, улар йыш ҡына көпсәккә тиклем бысраҡта тора; майҙандың ере, ваҡыт үтеү менән, тиреҫ һәм ҡара тупраҡ буткаһына әйләнә...» [2], тип яҙған.

Транспорт һәм йәйәүлеләр хәрәкәтен яҡшыртыу өсөн, ҡаланың иң мөһим юлдары аҡрынлап төҙөкләндерелә барған. Средстволар етешмәү арҡаһында юл эштәре арлы-бирле генә, техник талаптарҙы еренә еткермәйенсә үткәрелгән. Шуға күрә таш түшәлгән урамдар һәм майҙандар, ваҡыт үтеү менән, һәр төрлө шоссе төҫөн юғалтҡан. Иҫкә алып үтелгән документта губернатор шуны айырып күрһәткән: «Был йомшаҡ ерҙә таштар төпкә батып бөттө, ул таштарҙан ҡала идаралығы төрлө ваҡытта үҙ средстволары менән мостовой кеүек нә-

[1] Башкирия в русской литературе, 4-се том. Өфө, 1966, 185-се бит.
[2] ЦГИАЛ, ф. 1287, оп. 25, д. 1686, л. 4.

мә эшләргә маташҡайны; шунан ямғыр ваҡытта өҫтө бысраҡ менән ҡапланған соҡорҙар барлыҡҡа килә, был иһә ат менән йөрөгәндә бик тә уңайһыҙ, хатта ҡурҡыныс. Ҡала урынлашҡан тауҙан Ағиҙел йылғаһына табан иңкеүлектәге ҡайһы бер урамдар һыуҙың дөрөҫ аҡмауынан һәм тейешенсә тигеҙләүҙең булмауынан ашалып бөтә»[1].

Урамдарҙы төҙөкләндереү ҡала средстволары иҫәбенә подряд һәм өлөшләтә хужалыҡ ысулы менән үткәрелгән. Ҡалала камиллашҡан (бурса һәм асфальт түшәлгән) урамдар булмаған. Таш йәйелгән урамдарҙа, ян-яҡҡа таш йәки ағас түшәп, һыу ағыҙғыс канауҙар һәм йәйәүлеләр өсөн тротуарҙар төҙөлгән.

Һамар — Златоуст тимер юлы төҙөлөү менән, ҡала юлдарын яҡшыртыу ихтыяжы байтаҡ артҡан. Тимер юл станцияһына, Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғаларындағы пристандәргә барыу өсөн, яңы юлдар һалырға һәм иҫкеләрен ремонтларға, шулай уҡ урамдарға, сауҙа майҙандарына һәм башҡа майҙандарға таш түшәү эштәрен киңәйтергә кәрәк булған. 1888 йылдан алып 1892 йылға тиклемге биш йыл эсендә урамдарҙы төҙөкләндереү сығымдары үткән биш йыллыҡ менән сағыштырғанда 9,1 мең һумдан 36,2 мең һумға тиклем, йәғни 4 тапҡырға тиерлек, артҡан[2]. Ләкин киң күләмдә юл эштәре үткәреү өсөн был средстволар етерлек булмаған. Шуға күрә Өфө революцияға тиклемге бөтә осор буйына бысраҡ, төҙөкләндерелмәгән ҡала булып ҡалған.

Бәйләнеш тотоу юлдарынан күперҙәр, дамбалар һәм переправалар Өфөлә мөһим урын алып торған. 1864 йылда 8 күпер, шуларҙан 2 таш һәм 6 ағас күпер, соҡорҙар аша һалынған, ерҙән эшләнгән 4 дамба иҫәпләнгән. Сутолоканың Ағиҙелгә ҡойған урынында һалынған таш күпер иң ҙур күпер һаналған. Дамбалар ҡала үҙәгендә булған. Һыу ағыҙғыс канауҙар булмау арҡаһында улар йыш ҡына емерелгән һәм капиталь ремонт талап иткән. Ырымбур переправаһында йыл һайын плашкоут күпер һалынған, ул 16 пар плашкоуттан, 28 бүрәнә һалдан торған, уларҙың йөк күтәреүсәнлеге ҙур булмаған, хатта еңел экипаждарға ла саҡ-саҡ ҡына сыҙаған. Вавилов переправаһында 10 йыл буйына паром переправаһы эшләгән; 1870 йылдың яҙында ғына плашкоут күпер һалынған.

Ваҡыт үтеү менән, Ағиҙел аша сығыу шаҡтай яҡшырған. Күперҙәр һалһыҙ, фәҡәт плашкоуттарҙан ғына төҙөлгән, өҫтәүенә, уларҙың күләме һәм һаны байтаҡ ҙурыраҡ булған, улар инде сүс арҡандар менән түгел, ә тимер сынйырҙар менән беркетелгән. 1879 йылда ике переправалағы күпер ҙә ҙур күләмле 22 плашкоут судноһында төҙөлгән, ә паромдарҙы 10-ар ат көсөндәге пар двигателе менән ике катер йөрөткән[3].

---

[1] ЦГИАЛ, ф. 1287, оп. 25, д. 1686, л. 4.
[2] Шунда уҡ, оп. 33, д. 857, л. 36.
[3] Обзор деятельности городского управления и положения городского хозяйства г. Уфы, с 1870 по 1881 год, 25, 27-се биттәр.

Ағиҙел йылғаһы аша плашкоут күпер.



XIX быуаттың икенсе яртыһында ла халыҡты һыу менән тәьмин итеү Өфө өсөн бик киҫкен проблема булып ҡалған. «Оренбургские губернские ведомости» хәбәрсеһе 1865 йылда былай тип яҙған: «Йылға менән уратып алынған, һәр ихатала тиерлек ҡоҙоғо булған ҡала һыуға мохтажлыҡ кисерә, тип әйтеү сәйер күренер ине. Был бит урманда ағас тапмау тигән һүҙ» [1].

Ҡала думаһы ҡала халҡын һыу менән тәьмин итеүҙе яҡшыртыу мәсьәләһе менән күп тапҡырҙар шөғөлләнгән. 1875 йылдың авгусында ул предпринимателдәргә үҙ средстволарына һыуҙы Ағиҙелдән күтәртеп, водопровод төҙөргә, бының өсөн водопроводты файҙаланыуҙан 50 йыл буйына табыш алырға тигән тәҡдим менән мөрәжәғәт иткән. Ләкин теләүселәр табылмай. Шунан дума ҡала водопроводы төҙөү өсөн айырым фонд ойоштора, был фондҡа йорт участкаларын һатыуҙан, һыу өсөн түләүҙән, айырым кешеләрҙең ярҙам итеүҙәренән һ. б. ш. ингән килемдәр күсерелә. 1879 йылға 11,1 мең һум йыя алғандар; әммә резервуар төҙөп һәм Үрге сауҙа майҙанына саҡлы торбалар һалып, йылғанан һыу күтәртеү өсөн генә лә кәмендә 30 мең һум аҡса талап ителгән [2].

---

[1] «Оренбургские губернские ведомости», 1865, № 9.

[2] Обзор деятельности городского управления и положения городского хозяйства г. Уфы с 1870 по 1881 год. 35, 37, 339—342-се биттәр.

Күп йылдар буйына барған тотҡарлыҡтарҙан, бюрократик волокитанан һуң Өфө думаһы 1898 йыл башында хөкүмәткә 37 йыллыҡ срок менән йылына 5 процент күләмендә отош түләү, тотонолған капиталдың йыл һайын 1-әр процентын ҡайтарып биреү иҫәбенән номиналь ҡиммәте 300 мең һумлыҡ облигация заемы сығарыуҙы рөхсәт итеүҙе һорап мөрәжәғәт итә. Шул уҡ йылдың июлендә рөхсәт алына. Заем таратыуҙан ингән аҡса средстволары тулыһынса водопровод төҙөүгә билдәләнгән була. Ахыр сиктә, 1901 йылда водопроводтың тәүге сираты файҙаланыуға тапшырыла, әммә ул ҡаланың буржуазия һәм дворяндар йәшәгән үҙәк өлөшөн генә хеҙмәтләндергән. Ҡала ситендәге халыҡ элеккесә эсергә яраҡлы һыуһыҙ тороп ҡалған.

XIX быуат аҙағында Өфөлә электр менән яҡтыртыу барлыҡҡа килә. 1896 йылдың ноябрендә ҡала думаһы Петербургтың «Дюфлон һәм Константинович», Париждың «Сотт, Гарлей һәм уның кампанияһы» фирмалары вәкиле тау инженеры Н. В. Коншин менән электр станцияһы һалыу тураһында договор төҙөй. Тиҙҙән Коншин үҙен вәкил итеп түгел, ә берҙән-бер концессионер итеп иҫәпләргә тигән үтенес менән думаға мөрәжәғәт итә; дума тернәксел инженерҙың үтенесен ҡәнәғәтләндерә һәм уның менән яңы договор төҙөй [1].

Договор шарттары буйынса Коншин үҙ средстволарына 560 киловатт ҡеүәтле (һәр береһе 16 шәм көсөргәнешле 12 мең лампочка һәм һәр береһе 1,2 мең шәм көсөргәнешле 300 дуға һымаҡ фонарҙар) электр станцияһы төҙөргә, урамдарҙа 12 дуға һымаҡ фонарҙы түләүһеҙ яндырырға — 24 йылдан һуң станцияны бөтә ҡорамалдары һәм кәрәк-яраҡтары менән ҡалаға түләүһеҙ тапшырырға йөкләмә алған. Әгәр концессионер ғәйебе менән ҡала 10 тәүлектән күберәк ваҡыт электр энергияһыҙ тороп ҡалһа йәки электр станцияһын ҡала үҙенә һатып алырға теләһә, договор юҡҡа сығарылырға тейеш булған. Концессионер электр энергияһын ҡулланыусыларҙан энергияны файҙаланған өсөн, яңы ҡулланыусыларҙы электр селтәренә тоташтырғанда станцияның проект бюроһында техник документация эшләгән өсөн хаҡ алған.

1898 йылдың 1 февралендә ҡалала тәүге электр станцияһы ток бирә башлаған (хәҙер уның бинаһы «Уфасельмаш» ауыл хужалығы машиналары эшләү заводына ҡарай); шул уҡ көндө кисен урамдарҙа тәү тапҡыр электр фонарҙары тоҡанған.

Станция иҫкергән машиналар һәм ҡорамалдар менән йыһазландырылған, ҡаҙандар утын яғып эшләгән. Электр селтәрҙәре төрлө киҫелештәге сымдарҙан һәм иң төрлө-төрлө материалдарҙан торған. Шуға күрә улар йыш ҡына сафтан сыҡҡан, ә электр энергияһы өсөн хаҡ һәр ваҡыт алынған.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 9, оп. 1, д. 587, л. 55, 56.

Александровский урамы. Унда Коншин электр станцияһы бинаһы.



Электр энергияһын төп ҡулланыусылар бай ғаиләләр, ҡаҙна һәм йәмәғәт учреждениелары, промышленность һәм сауҙа заведениелары булған. Ҡаланың үҙәк урамдарын 50 дуға һымаҡ фонарҙар яҡтыртҡан.

Ҡаланы төҙөкләндереү буйынса дума тарафынан үткәрелгән бөтә саралар фәҡәт Өфөнөң үҙәгенә генә тиерлек ҡағылған. Ярлылар йәшәгән ҡала ситтәре төҙөкләндерелмәйенсә ҡалған: улар бысраҡҡа батҡан һәм ҡараңғылыҡҡа күмелгән.

Төҙөкләндереүҙең түбән кимәле, водопровод һәм канализацияның булмауы, урамдарҙа һәм йорт ихаталарында йыйылған сүп-сар һәм бысраҡ, баҙарҙарҙың һәм мал һуйыу урындарының санитария талаптарына яуап бирмәүе, шуның менән бергә ҡала халҡының байтаҡ өлөшөнөң иҫ киткес ярлылығы хроник ауырыуҙарҙың һәм меңләгән кешеләрҙең ғүмерен алып киткән һәләкәтле эпидемияларҙың таралыуына булышлыҡ иткән. Урындағы врачтар дизентерия, малярия, скарлатина, дифтерия менән күпләп ауырыу осраҡтарын билдәләп үткәндәр; холера, сәсәк һәм тиф эпидемиялары әленән-әле ҡабатланып торған. Ҡала үҙидараһының халыҡты медицина менән хеҙмәтләндереүгә тотҡан сығымдары үтә аҙ булған.

XIX быуаттың икенсе яртыһында ла йәмәғәт хәстәрлеге приказы больницаһы ҡаланың иң ҙур медицина учреждениеһы булып ҡалған. 1875 йылда Өфө губернаһында земство ойошторолоу менән, ул губерна земство управаһына тапшырылған һәм бөтә губерналағы бик ҡаты сирлеләрҙе хеҙмәтләндереүгә билдәләнгән. Больница аҡрынлап булһа

ла киңәйә барған һәм койкалар һаны 1868 йылдағы 51-ҙән 1890 йылда 156-ға тиклем артҡан.

Икенсе ҙур дауалау учреждениеһы аҡылдан яҙғандар йорто булған, 1876 йылда ул аҡылдан яҙғандар больницаһы тип аталған һәм яңы бинаға күсерелгән. Ләкин исемен алмаштырыу бер нәмә лә бирмәгән: ауырыуҙарҙы дауалау өсөн белгестәр һәм кәрәкле йыһаздар булмаған. 1890 йылдан алып ҡына, тәжрибәле врач-психиатр С. Сухов больницаның мөдире булып алғас, ауырыуҙарҙы дауалау байтаҡ яҡшырған. 1895 йылда больницаның яңы бинаһын төҙөү башланған. 1898 йылға ауырыуҙар өсөн 5 павильон, водопроводы һәм һыу ағыҙғыс селтәре булған бер нисә хеҙмәтләндереү һәм торлаҡ бинаһы файҙаланыуға тапшырылған, махсус медицина ҡорамалдары һатып алынған.

Ҡалған дауалау заведениелары, йәмәғәт һәм ведомство ҡарамағындағылары, күләме һәм хеҙмәтләндергән ауырыуҙары һаны буйынса ҙур булмаған. 1899 йылда ҡалала 575 койкалыҡ 12 больница (земский һәм психиатрик больницаларҙың 370 койкаһы) булған.

Врачтар һәм урта медицина персоналының һаны үтә аҙ булған. 1880 йылда Өфө халҡын 7 врач, 6 фельдшер һәм акушерка, 1899 йылда 30 врач, 43 фельдшер һәм акушерка хеҙмәтләндергән.

XIX быуаттың һуңғы ун йыллыҡтарында больницалар һәм врачтар һанының бер аҙ артыуына ҡарамаҫтан, медицина хеҙмәтләндереүенән ҡаланың хәлле халҡы ғына файҙалана алған; халыҡтың бик ҙур күпселеге күп һанлы ауырыуҙарҙан һаҡлана алмаған.

## § 3. Өфө эшселәренең хәле. Тәүге марксистик түңәрәктәр

Эшселәр синыфының барлыҡҡа килеүе һәм үҫеүе Өфөнөң реформанан һуңғы үҫешенең бик мөһим күренеше булған. 1897 йылда фабрика-завод һәм һөнәрселек промышленносында, төҙөлөштә һәм транспортта (извозчиктарҙан башҡа) 5,8 мең кеше эшләгән. Ялланма эшселәрҙән тыш был һанға шулай уҡ промышленность предприятиелары, һөнәрселек мастерскойҙары хужалары һәм хеҙмәткәрҙәре ингән.

Өфө эшселәренең составы бөлгөнлөккә төшкән крәҫтиән массалары иҫәбенә даими рәүештә тулыланып торған. Шуға күрә ҡалала һәр ваҡыт эшһеҙлек булған. Бынан файҙаланып, хужалар эш хаҡын арттырыуҙан, эш көнөн ҡыҫҡартыуҙан баш тартҡандар.

Өфө эшселәренең хәле, тотош илдәге кеүек үк, ғәҙәттән тыш ауыр булған. Эш көнөнөң дауамлылығы тотош тиерлек фабриканттар һәм завод хужалары теләге менән билдәләнгән, 10 сәғәттән алып 17 сәғәткә тиклем тирбәлгән. Мәҫәлән, купец ҡатыны В. Т. Попованың һыра ҡайнатыу заводында һыра ҡайнатыу осоронда эшселәр 17-шәр

сәғәт, ә ремонт эштәре ваҡытында 12-шәр сәғәт эшләгәндәр [1]. Шулай итеп, айырым предприятиеларҙа эшселәрҙең шәхси ихтыяждары, йоҡо, ял, эшкә барыу һәм ҡайтыу өсөн тәүлегенә ни бары 8—9 сәғәт ваҡыты ҡалған.

Кесе йәштәге эшселәрҙең яҙмышы уғата ауыр булған. Улар, өлкәндәр кеүек, тәүлегенә 14—15 сәғәт эшләгәндәр. Купец Д. П. Берштейндың кондитер заведениеһында йәш үҫмер ҡыҙҙар, 80-се йылдарҙа кесе йәштәге балалар хеҙмәтен ҡулланыуҙы тыйыусы һәм йәш үҫмерҙәрҙең эш көнөн 8 сәғәт менән сикләүсе закондар ҡабул ителгәндән һуң да, тәүлегенә 11-әр сәғәт, ә һөнәрселәр өйрәнсектәре 12—14-әр сәғәт эшләгәндәр [2].

Фабрикаларҙа, заводтарҙа һәм мастерскойҙарҙа хеҙмәт шарттары ҡот осҡос булған, уларҙың күптәрендә элементар хәүефһеҙлек техникаһы ла булмаған, төп санитария талаптарын тупаҫ боҙоуҙар булып торған. Мәҫәлән, тимер юл мастерскойҙарында эшселәр ҡыҫыҡ, бысраҡ һәм тынсыу биналарҙа, нефть янтыуҙан һәр ваҡыт сығып торған әсе төтөн эсендә, кәрәсин лампаларының, шәмдәрҙең һәм һуҡыр лампаларҙың тоноҡ яҡтылығында эшләгәндәр. Ҡарт эшселәр һөйләүенсә, ҡаҙандар ремонтлағанда «кеше һуҡыр лампа менән яҡтыртылған ҡаҙан эсендә ултыра, уның ҡулында махсус тимер болванка, ул уны бөтә көсө менән заклепкаға баҫа. Ә тыштан икенсе синәүсе балға менән заклепкаға бик ҡаты һуға. Һәм һәр көн шулай. Тынсыу һәм туҙан. Бик көслө гөрһөлдәүҙән һәм тауыштан эшсе һаңғыраулана. Шундай профессия кешеләре «һаңғырауҙар» тип аталған да» [3].

Эшселәр үҙҙәренең йонсотҡос хеҙмәте өсөн бик аҙ эш хаҡы алған. Эшселәрҙең төп массаһы айына 10—15 һум алған. Купец П. С. Чиковтың ағас бысыу заводы, купец К. М. Газенбуштың араҡы ҡайнатыу заводының хужала тамаҡ туйҙырып эшләгән эшселәре айына 5—6-шар һум эш хаҡы алғандар. Тейәү-бушатыу һәм юл эштәрендә эшләүсе көнлөксөләрҙең эш хаҡы айырыуса түбән булған. Мәҫәлән, 1865 йылда юл эшендәге ҡара эшселәр көнөнә 25-шәр тин алған. Ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар хеҙмәтенә тағы ла аҙыраҡ түләнгән. Квалификациялы эшселәрҙең һәм мастерҙарҙың эш хаҡы сағыштырмаса юғары булған, айына 30 һумға еткән.

Әммә эшсе ғаиләһенә йәшәү өсөн кәрәкле минимумды ла тәьмин итмәгән ошо үтә бәләкәй эш хаҡын да капиталистар, бер маҡсатты, пролетарий иҫәбенә үҙенең табышын арттырыу маҡсатын, күҙәтеп, бөтә ысулдар менән кәметергә тырышҡандар. Улар штрафтарҙы киң ҡулланғандар, эш хаҡының бер өлөшөн натуралата түләгәндәр, һәр төрлө сәбәптәр менән тотоп алып ҡалғандар һ. б. ш. Эшселәрҙе би-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 9, оп. 1, д. 459, л. 131—134, 204, 208—210.

[2] ЦГИАЛ, ф. 1290, оп. 5, д. 132 (биттәр һаны ҡуйылмаған).

[3] «Гудок завода». (Өфө паровоздар ремонтлау заводының партком, профсоюз завкомы һәм завод идаралығы органы), 1963, 12 март.

гераҡ тә штрафтар менән йөҙәткәндәр. «Фабрикаларҙа һәм заводтарҙа эшселәрҙән алына торған штрафтар тураһындағы законға аңлатма» тигән брошюрала В. И. Ленин, 1886 йылға тиклемге (штрафтар тураһындағы закон тәү тапҡыр индерелгән йыл) Россия промышленносындағы хәлгә характеристика биреп, былай тип яҙған: «Фабриканттар штрафтарҙы теләһә нәмә өсөн һәм теләһә күпме һанда ала алдылар... Штрафтар ҡайһы саҡта «хужа ҡарамағы» буйынса, штрафтың алыныу сәбәбен күрһәтмәйенсә билдәләнгән — Штрафтар ҡайһы берҙә *эш хаҡының яртыһына тиклем* еткән, шулай итеп, эшсе эшләп алған бер һумының илле тинен штраф рәүешендә хужаһына биргән» [1].

Өфө эшселәренең торлаҡ шарттары ғәҙәттән тыш ауыр булған. Эшселәрҙең һәм уларҙың ғаиләләренең бер өлөшө бер бүлмәле үҙ өйҙәрендә, бәләкәй генә аласыҡтарҙа, землянкаларҙа йәшәгән, күпселеге иһә фабрика казармаларында, шәхси йорт биләүселәрҙең подвалдарында, сарҙаҡтарында йәшәгән йәки квартира арендалаусылар мөйөштәрендә һыйынып торған.

80-се йылдар аҙағында казармалар Попованың һыра ҡайнатыу, Пупышевтың араҡы эшләү, Боктың, Чиковтың һ. б. ш. таҡта ярыу заводтарында булған. Фабрика казармалары иҫке биналарҙа, ҡайһы берҙә йәшәү өсөн яраҡһыҙ булған, тишек һәм ярыҡтарынан иркен рәүештә ел һәм ямғыр үтеп торған биналарҙа урынлашҡан. Бүлмәләрҙә бер иле бысраҡ булған, һикеләр аҫтында иҫке бысраҡ кейемһалым, итектәр, сылғауҙар, сабата, быймалар һ. б. ш. ятҡан. Һикеләр йышылмаған, көпләнмәгән иҫке бысраҡ таҡталарҙан, һис ниндәй бүлеүһеҙ эшләнгән. Аҫҡа һалыу өсөн йыш ҡына икегә бөкләнгән септә хеҙмәт иткән. Һикеләр өҫтөнә бау үткәрелеп, уға киптереү осон күлдәк-ыштан, сылғауҙар, сабаталар эленгән, бынан һауа һулау өсөн яраҡһыҙ тиерлек хәлгә килгән. Бәҙрәфтәр бысраҡ булған.

Эшселәрҙе медицина менән хеҙмәтләндереү һәм социаль страховкалау булмаған.

Эшселәрҙең ауыр материаль хәле политик хоҡуҡһыҙлыҡ, самодержавиеның полиция баш-баштаҡлығы менән тәрәнәйтелгән. Эшселәргә йыйылыштар үткәрергә, союздарға һәм ойошмаларға берләшергә, стачкалар иғлан итергә тыйылған. «Рус эшселәр синыфы икеләтә иҙелә: уны капиталистар һәм помещиктар бөлгөнлөккә төшөрә һәм талай, ә инде ул капиталистарға һәм помещиктарға ҡаршы көрәшә алмаһын өсөн, полиция уның аяҡ-ҡулдарын бәйләй, уның ауыҙын ҡаплай, халыҡтың хоҡуғын яҡлауға булған һәр бер ынтылышын әҙәрләй. Капиталисҡа ҡаршы һәр стачка айҡанлы эшселәр өҫтөнә ғәскәр һәм полиция ябырыла» [2].

---

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 2-се том, 21-се бит.
[2] Шунда уҡ, 4-се том, 185-се бит.

Былар бөтәһе эшселәрҙең һәм ҡала ярлыларының киҫкен ризаһыҙлығын тыуҙырған, уларҙы үҙҙәренең экономик һәм политик хәлен яҡшыртыу өсөн көрәшкә күтәргән.

70—80-се йылдарҙа Өфөлә революцион эште народниктар алып барған. 1875 йыл башында народниктар түңәрәге төҙөлөп, уға фельдшер О. Курчатов, уның ҡатыны А. В. Курчатова (ҡыҙ фамилияһы Серебрякова), С. В. Сәлихов һәм башҡалар ингән. Түңәрәк ағзалары сходкаларга йыйылған, прокламациялар тараткан. Ләкин полиция эҙәрлекләүҙәре арҡаһында уның эшмәкәрлеге тиҙҙән туҡтаған.

1885 йылда Петербургтан революцион хәрәкәттә ҡатнашҡаны өсөн Өфөгә полиция күҙәтеүенә П. И. Кларк ебәрелгән. Ул уҡыусы йәштәр араһында агитация алып барған, народоволецтар түңәрәге ойоштороған. Түңәрәк ағзалары йәшерен типография булдырған, сходкалар үткәргән. Түңәрәк «Народная воля» ойошмаһы менән бәйләнеш тотҡан. 1887 йылдың 1 мартындағы эш буйынса (батша Александр III-гә һөжүм ойоштороорға ынтылыу) ҡулға алынған Александр Ильич Ульяновтың (В. И. Лениндың ағаһының) яҙыу кенәгәһендә П. И. Кларктың һәм уның ярҙамсыһы И. Мерзляковтың адрестары һәм квартираларының урынлашҡан планы күрһәтелгән. Батшаға һөжүм иткәндән һуң, унда ҡатнашыусылар Өфөлә йәшеренергә уйлағандар, тип фараз итәләр. 1887 йылда жандармдар түңәрәкте тар-мар иткән.

Өфөлә тыуып үҫкән күп кенә кешеләр революцион хәрәкәттең үҙәктәрендә тәүге сыныҡыу алған. Мәҫәлән, 1887 йылдың декабрендә Ҡазандағы студенттар сыуалыштарында Өфө гимназияһын тамамлап сығыусылар В. П. Аргентовский, Н. А. Вышенский, В. В. Гудков, М. С. Дударь, В. Д. Ладыгин, Е. Н. Фосс һәм башҡалар ҡатнашҡан. Уларҙың 7-һе В. И. Ленин менән бергә университеттан сығарылған, төрмәгә ултыртылған, һуңынан ата-әсәләренең йәшәгән урындарына һөрөлгән. Петербург урман институты студенты Өфө кешеһе В. А. Кугушев Д. Н. Благоевтың социал-демократик группаһын ойоштороуҙа һәм уның эшмәкәрлегендә актив ҡатнашҡан.

80-се йылдарҙа Өфөлә марксистик әҙәбиәтте таратыу башлана. Благовещен уҡытыусылар семинарияһының ҡайһы бер уҡыусылары К. Маркстың Өфөгә С. Я. Елпатьевский тарафынан килтерелгән «Капиталын» уҡығандар. 1885 йылда Өфө телеграф станцияһында полиция народниктар әҙәбиәте араһында К. Маркстың «Францияла граждандар һуғышы» китабын һ. б. ш. тапҡан.

Өфөлә социал-демократияның барлыҡҡа килеүе һәм нығыныуы ваҡыт яғынан Россияла азатлыҡ хәрәкәтенең пролетар осоро башланыуға тура килә, ул тимер юл эшселәренең синфи көрәше активлашыу, һөргөндәге ҙур төркөм марксистарҙың һәм урындағы революционерҙарҙың киң эшмәкәрлеге менән әҙерләнгән.

1891 йылда инде Өфөлә тимер юл мастерскойҙарында тәүге стачка тоҡанып киткән. Тотоп алып ҡалынған эш хаҡын кисекмәҫтән биреү

турАһында администрацияға талап ҡуйған эшселәр вәкилдәре «ҡотортоусылар» итеп ғәйепләнеп, эштән сығарылған. Быға яуап итеп, 14 февралдә 200 эшсе, эш ташлап, Һамар—Златоуст тимер юлы идаралығы бинаһы янында йыйылған. Был урынға килеп еткән полицмейстерға эшселәр: беҙ эш хаҡын биреүҙе «шуның өсөн йыйылып талап итәбеҙ, сөнки Тимер юл идаралығы һайлаған кешеләр аша һоратҡан өсөн был кешеләрҙе ҡотортоусылар тип иҫәпләп, уларҙы урындарынан мәхрүм итә, былдай хәл элек тә булғайны...»[1] тип белдергәндәр. Администрацияға мастеровойҙарҙың талабын ҡәнәғәтләндерергә тура килгән. 1897 йылда И. С. Якутовтың һәм башҡа

М. М. Шоур.



алдынғы эшселәрҙең тәҡдиме менән мастерскойҙарҙа Златоуст ҡаҙна заводында баш күтәргән эшселәргә материаль ярҙам күрһәтеү өсөн аҡса йыйыу үткәрелгән.

Өфөлә тәүге марксистик группа 1895 йылда ойошторолған. Уға башҡа ҡалаларҙа революцион түңәрәктәрҙә ҡатнашҡан бер нисә элекке студент, шулай уҡ үткәндә актив народник булған күп кенә эшмәкәрҙәр ингән. Түңәрәктең етәксеһе М. М. Шоур булған, ул 1893—1894 йылдарҙа Цюрих университетында (Швейцария) уҡыған. Бында ул күренекле революционер В. К. Курнатовский менән яҡынлашҡан, уның менән һуңынан да бәйләнеш тотҡан. Өфөгә ҡайтҡас, Шоур народниктар менән бәхәстәрҙә, марксизмды пропагандалауҙа йәнле ҡатнаша. Түңәрәк ағзаһы Ф. А. Беляев 90-сы йылдар башында Парижда йәшәгән, Көнбайыштағы эшселәр хәрәкәтен өйрәнгән. Женевала ул Г. В. Плеханов һәм В. И. Засулич менән осрашҡан.

Группа йәшерен китапхана ойошторған, унда К. Маркстың «Капитал», «Францияла граждандар һуғышы», Ф. Энгельстың «Ғаиләнең, хосуси милектең һәм дәүләттең килеп сығыуы», «Фәнни социализмдың үҫеүе» тигән хеҙмәттәре, К. Каутский, А. Бебель, Н. Г. Чернышевский, Т. Г. Шевченко, Н. В. Шелгунов, Д. И. Писарев, М. Е. Салтыков-Щедрин әҫәрҙәре булған. Группа ағзалары марксистик әҙәбиәтте өйрәнгәндәр, фәнни социализмдың айырым проблемалары буйынса бәхәстәр үткәргәндәр. Күп тапҡырҙар тикшергәндән һуң, түңәрәк ағзаларының күпселеге, народниктарға ҡаршы рәүештә, Россияла капитализмдың үҫеү фактын таныуҙы яҡлап фекер әйткән. Эшселәр араһында фәнни социализм идеяларын пропагандалау

[1] Очерки по истории Башкирской АССР, 1-се том, икенсе киҫәк, 235-се бит.

И. С. Якутов.



өсөн йәкшәмбе мәктәбе асыуға әҙерлек алып барылған. Ләкин был ниәт тормошҡа ашырыла алмаған. 1896 йылдың мартында группа полиция тарафынан тар-мар ителгән [1].

Бөтә ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, Маркстың тәғлимәте яңынан-яңы яҡлаусыларын яулап ала барған. 1898 йылда ҡалала яңы социал-демократик группа барлыҡҡа килеп, эшселәр араһында марксизмды пропагандалай башлай. Уға шунан алда ғына килгән профессиональ революционер А. Д. Цюрупа, үткәндә күренекле народник булып, һуңынан марксизм позицияларына күскән О. В. Аптекман, Петербург университетының элекке студенты С. Н. Салтыков, Киев университеты студенты В. Н. Крохмаль, тимер юл мастерскойҙары эшсеһе И. С. Якутов, Ҡазанда студенттарҙың социаль-демократик түңәрәгендә ҡатнашҡан К. К. Газенбуш ингән. Һуңыраҡ группаға революцион эшмәкәрлеге өсөн Петербургтан һөргөнгә ебәрелгән А. И. Свидерский, О. И. Чачина һәм башҡалар инә.

И. С. Якутов группала күренекле роль уйнаған. Бөрө өйәҙенән ярлы крәҫтиән улы И. С. Якутов мохтажлыҡты иртә татыған, 13 йәштән эшләй башлаған. Армияла хеҙмәт иткәндән һуң, 1893 йылда Өфө тимер юл мастерскойҙарына слесарь булып ингән. Россия ысынбарлығы уны эшселәрҙең хәле тураһында уйланырға мәжбүр иткән. Аҡрынлап Якутов һөргөндәге революционерҙар менән яҡынлашҡан, марксистик әҙәбиәт менән танышҡан. Уның аша группа эшселәр менән бәйләнеш урынлаштырған. Был иһә тимер юл мастерскойҙарында социал-демократик түңәрәк ойоштороу өсөн шарттар тыуҙырған. И. С. Якутов, В. В. Александров, А. Ф. Киряев, Н. В. Леопольдов һәм башҡалар түңәрәктең актив ҡатнашсылары булып киткән. Түңәрәк ағзалары марксистик әҙәбиәтте өйрәнгән, уны эшселәр араһында таратҡан, улар менән көнүҙәк экономик һәм политик мәсьәләләр буйынса әңгәмәләр үткәргән.

90-сы йылдар аҙағында Өфө социал-демократтар группаһы, бөтә илдә булған кеүек үк, тарҡаулыҡ һәм икеләнеү осоро кисерә. Группала ике лагерь — революцион һәм оппортунистик лагерҙар була. Был хаҡта Н. К. Крупская һуңыраҡ былай тип хәтергә ала: «Мин Өфөгә килер алдынан унда һөргөн тарихы булған, һәм социал-демократик публика ике лагерға бүленгән. Бер лагерҙа — Крохмаль,

[1] Очерки истории Башкирской организации КПСС. Өфө, 1973, 28, 29-сы биттәр.

Цюрупа, Свидерский ,икенсеһендә бер туған Плаксиндар, Салтыков, Квятковский ине. Чачина һәм Аптекман группаларҙың береһенә лә инмәйенсә, икеһе менән дә бәйләнеш тотто. Миңә беренсе группа яҡыныраҡ ине, тиҙҙән мин уның менән яҡынлаштым» [1].

## § 4. Культура

Крайҙа капиталистик мөнәсәбәттәрҙең үҫеүе, революцион-демократик көстәрҙең көрәше реформанан һуңғы Өфөнөң культура тормошонда билдәле бер күтәрелеш тыуҙырған.

Ҡайһы бер ташламаларға барырға мәжбүр булған батша властары шул уҡ ваҡытта культураның үҫешен тотҡарлаған, хеҙмәтсәндәрҙең белемгә ынтылышына ҡамасаулаған. В. И. Ленин, Европаның бер генә илендә лә халыҡ массалары мәғариф, уҡыу һәм аң-белем алыу йәһәтенән Россиялағы кеүек таланмаған, тип яҙҙы. «Йәш быуындың биштән дүрт өлөшө Россияның крепостнойлыҡ дәүләт ҡоролошо тарафынан грамотаһыҙлыҡҡа дусар ителде» [2].

XIX быуаттың икенсе яртыһында Өфө мәктәптәренең селтәре бер аҙ киңәйә. 1896 йылда ҡала приход училищеларының һаны 10-ға тиклем еткән; уларҙа 1157 бала, шул иҫәптән 500 ҡыҙ бала, уҡыған [3]. Халыҡ һаны менән сағыштырғанда мәктәптәр һаны үтә аҙ булған. 1898 йылдың 28 авгусында «Уфимские губернские ведомости»: «Өфөлә ҡала башланғыс мәктәптәре ун, уларҙың бөтәһе лә кәрәгенән артыҡ тулы —20—30 буш урынға йөҙләгән кандидат; конкурс экзамены менән генә түгел, бәлки йәрәбә һалып ҡабул итергә тура килә»,— тип яҙған.

Башланғыс мәктәптәрҙә уҡыған өсөн шаҡтай юғары хаҡ алынған. Запятиелар рус телендә барған. Дини яҙыу һәм сиркәү йыры төп предмет булып һаналған, уҡыу, яҙыу һәм арифметикаға аҙыраҡ дәрестәр бирелгән.

Урта уҡыу йорттары һаны ла үтә әкрен артҡан. 1871 йылда Өфөлә ике гимназия — Мариинский ҡатын-ҡыҙҙар һәм ирҙәр гимназияһы булған. Улар классик гимназиялар иҫәпләнгән; ирҙәр гимназияһы — һигеҙ класлы, уның әҙерлек класы ла булған; ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһы — ете класлы, уның һигеҙенсе — педагогик класы ла булған: был класты тамамлап сығыусыларҙың йорт уҡытыусыһы исеменә хоҡуғы булған. Ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһында программа күләме һәм талаптары буйынса кимәл ирҙәр гимназияһындағынан түбәнерәк булған. Гимназияларҙың уҡыу пландарында төп иғтибар латин һәм грек телдәренә бирелгән, уларға уҡыу сәғәттәренең яртыһы бүленгән; тәбиғәт фәндәрен уҡытыу бөтөрөлгән.

---

[1] Крупская Н. К. Ленин тураһында иҫтәлектәр. М., 1957, 38-се бит.
[2] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 23-сө том, 127-се бит.
[3] Краткий очерк 25-летия введения в городе Уфе городового положения. 26 января 1871 г. — 26 января 1896 г. 22—24-се биттәр; ЦГА БАССР, ф. 11, оп. 54, д. 1298, л. 20.

Уҡыу өсөн юғары хаҡ урта белем алыуҙы байҙар балалары өсөн генә мөмкин иткән. 1864 йылдан 1894 йылға тиклем ирҙәр гимназияһында уҡыусылар һаны —199-ҙан 361-гә тиклем, ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһында 74-тән 290-ға тиклем артҡан.

Тәүге урта махсус уҡыу йорттары барлыҡҡа килгән. 1872 йылда асылған татар-башҡорт уҡытыусылар мәктәбенең айырыуса әһәмиәте булған. Уҡытыу курсы 4 йылға иҫәпләнгән һәм унда рус теле, геометрия һәм черчение элементтары менән арифметика, матур яҙыу һәм рәсем төшөрөү, тарих, география, педагогика һәм дидактика нигеҙҙәре, мосолман дине уҡытылған. Бынан тыш, уҡыусылар китап төпләү, токарь һәм башҡа һөнәрҙәргә өйрәтелгән.

Мәктәпте тамамлап сығыусылар үҙ милләте кешеләрен рус грамотаһына өйрәтергә генә түгел, ә башҡорт һәм татарҙарҙы руслаштырыу политикаһын да тормошҡа ашырырға тейеш булған. Ләкин хөкүмәттең руслаштырыу теләктәре аҡланмаған. Мәғариф министры Д. А. Толстой, 1876 йылда мәктәпте ҡарап сыҡҡас, тәрбиәләүҙең идея йүнәлеше менән дә, шулай уҡ рус телен уҡытыу кимәле менән дә ҡәнәғәт булмаған. Оҙаҡ та үтмәй, уның бойороғо буйынса мәктәп, уны уҡыу-уҡытыу округы попечителе күҙәтеүе аҫтында тотоу өсөн, Ырымбурға күсерелгән. Әммә был сара ла көтөлгән һөҙөмтәләр бирмәгән. 1889 йылда уҡытыусылар мәктәбе ябылған. Мәктәпте ойоштороусылар тарафынан ҡуйылған реакцион маҡсаттарға ҡарамаҫтан, мәктәп башҡорт һәм татар халыҡтарының культура үҫешендә һиҙелерлек роль уйнаған.

1876 йылда ер төҙөүсе белгестәр әҙерләү өсөн землемерҙар училищеһы асылып, унда 40—50 кеше уҡыған. Өфө духовный семинарияһы алты йыллыҡ программа буйынса сиркәү хеҙмәтселәре кадрҙарын әҙерләгән. Муллалар һәм мөғәллимдәр әҙерләү өсөн, милли буржуазия инициативаһы буйынса 1887 йылда мосолмандар өсөн урта дини уҡыу йорто «Ғосмания» мәҙрәсәһе ойошторолған.

Быуат аҙағына Өфөлә мәғариф эше һиҙелерлек уңыштарға өлгәшкән, ләкин шуға ҡарамаҫтан халыҡтың грамоталылығы яғынан Өфө илдең күпселек ҡалаларынан ныҡ артта ҡалған. 1897 йылғы перепись буйынса Россия ҡала халҡының грамоталылығы 45 процент тәшкил итһә, Өфө халҡының 39 процент ҡына булған, өҫтәүенә, был күрһәткес рустарҙа — 40, татарҙарҙа — 25 һәм башҡорттарҙа 24 процент тәшкил иткән. Өфөләрҙең 7 проценты, шул иҫәптән рустарҙың —7,5 проценты, татарҙарҙың —3, башҡорттарҙың 2 проценттан кәмерәге, тулы булмаған урта белемгә эйә булған.

Халыҡ мәғарифының үҫеше халыҡ араһында китап, журнал һәм газеталарҙың таралыуы менән бергә барған. Был эштә китап магазиндары һәм китапханалар ҙур роль уйнаған. XIX быуат аҙағында Өфөлә, халыҡтың айыҡлығы тураһында Өфө хәстәрлек көрәү губерна комитеты янындағы үҙәк китап складынан тыш, 5 шәхси китап магазины булған. 1864 йылда губерна статистика комитетының түләүле асыҡ китапханаһы ойошторолған, уның китап фонды

438 томдан 1890 йылға 3785 томға тиклем арткан. Ҡаланың хәлле кешеләрен түләүле шәхси китапханалар хеҙмәтләндергән.

1891 йылда ҡала думаһы күп йыллыҡ бәхәстәрҙән һуң 3500 томлыҡ китап фонды [1] булған түләүле йәмәғәт китапханаһы асҡан. Бынан тыш, китапханалар уҡыу йорттары эргәһендә лә булған. 1890 йылда ирҙәр гимназияһы китапханаһында 10 021 том, ҡатын ҡыҙҙар гимназияһында 2025 том, землемерҙар училищеһында 1645 том иҫәпләнгән һ. б. ш. [2].

Р. Г. Игнатьев.



Өфөнөң культура тормошонда ваҡытлы матбуғат мөһим роль уйнаған. 1865 йылда, Ырымбур губернаһын Өфө һәм Ырымбур губерналарына бүлеү айҡанлы, Өфөлә сыға торған «Оренбургские губернские ведомости» газетаһы «Уфимские губернские ведомости» тип үҙгәртелгән. Аҙна һайын сыҡҡан газета 1894 йылдың июленән алып көндәлек газетаға әйләнгән. 1879—1883 йылдарҙа айлыҡ «Вестник Уфимского земства» журналы сыҡҡан, 1879 йылда (айға 2 тапҡыр) «Уфимские епархиальные ведомости» журналы сыға башлаған. Ул рәсми һәм рәсми булмаған өлөштәрҙән торған. 1871 йылда купец Н. К. Блохин тарафынан ҡалала тәүге шәхси газета «Уфимский листок объявлений и извещений» ойошторолған. Күп кенә айырым кешеләр газета һәм журнал сығарыу өсөн рөхсәт һорап властарға мөрәжәғәт иткәндәр, ләкин уларҙың һорауҙары төрлө һылтауҙар менән һәр саҡ кире ҡағылған.

Губерна статистика комитеты, губерна земство управаһының статистика бүлеге һәм ҡала думаһы белешмә характерындағы «Уфимский календарь», «Адрес-календарь Уфимской губернии», «Памятная книжка Уфимской губернии», «Справочная книжка Уфимской губернии» тигән йыйынтыҡтар, земство йыйылыштарының, дәүләт думаһының һ. б. ш. материалдарын һәм ҡарарҙарын баҫып сығарғандар. Һәр төрлө статистика мәғлүмәттәре менән бер рәттән уларҙа метеорология, топография, геология, этнография һәм край тарихы буйынса мәҡәләләр, шулай уҡ библиография буйынса мәғлүмәттәр булған.

Газета, журнал һәм китаптар фәҡәт рус телендә баҫылған, башҡорт һәм татар матбуғаты булмаған.

1864 йылда статистика комитеты Өфөлә губерна крайҙы өйрәнеү музейы ойошторған. Ләкин биналар булмағанлыҡтан, музей кол-

---

[1] Краткий очерк 25-летия введения в городе Уфе городового положения. 26 января 1871 г. — 26 января 1896 г., 25-се бит.

[2] Очерки по истории Башкирской АССР, 1-се том, икенсе киҫәк, 268-се бит.

Н. В. Ремезов.



лекциялар өсөн склад ҡына булып хеҙмәт иткән. 1886 йылда Үрге сауҙа майҙаны бипаларының береһендә музей тамашасылар өсөн асылған.

Реформанан һуңғы осорҙа Башҡортостан халыҡтарының экономикаһы, тарихы, этнографияһы, материаль һәм рухи культураһы менән ҡыҙыҡһыныу көсәйә. Губерна статистика комитеты ағзаһы-секретары, Рус География йәмғиәте ағзаһы Н. А. Гурвич, губерна земство управаһының статистика бүлеге мөдире М. П. Красильников, крайҙы өйрәнеүселәр В. А. Абрютин, А. Е. Алекторов, М. В. Лоссиевский, В. А. Новиков, А. А. Калачев, В. Михайлов, С. Г. Рыбаков һәм башҡалар крайҙы өйрәнеүгә ҙур ғына өлөш индерәләр.

Рус География йәмғиәте, Ҡазан университеты эргәһендәге археология, тарих һәм этнография йәмғиәте һәм башҡа ғилми ассоциациялар ағзаһы, крайҙы өйрәнеүсе ғалим Руф Гаврилович Игнатьев (1819—1886) киң билдәле була. Уның тарафынан «Ногайские валы в Уфимской губернии», «Миасские золотые промыслы в Оренбургской губернии», «Карасакал, лжехан Башкирии (эпизод из истории Оренбургского края XVIII в.)», «Взгляд на историю Оренбургского края», «Башкир Салават Юлаев, пугачевский бригадир, певец и импровизатор», «Осада города Уфы (эпизод из истории Пугачевского бунта)», «Губернский город Уфа» тигән һәм башҡа хеҙмәттәр яҙылған. Үҙенең хеҙмәттәрендә Р. Г. Игнатьев башҡорттарҙың килеп сығышы, крайҙы колонизациялау һәм урындағы халыҡтың 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыуы тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерә. Уның «Башкир Салават Юлаев, пугачевский бригадир, певец и импровизатор» тигән мәҡәләһе башҡорт халҡының милли батырының тормошон һәм эшмәкәрлеген революцияға тиклемге иң яҡшы тикшеренеү булып тора.

Һоҡланғыс публицист һәм ғалим, алдынғы рус демократик интеллигенция вәкиле Николай Владимирович Ремезовтың (1855—1915) «Очерки из жизни дикой Башкирии. Быль в сказочной стране» (М., 1887), «Очерки из жизни дикой Башкирии. Переселенческая эпопея» (М., 1889) һәм «Очерки из жизни дикой Башкирии. Судебная ошибка или созданное преступление?» (Владивосток, 1900) тигән хеҙмәттәре крайҙың тарихын һәм экономикаһын өйрәнеү өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Уларҙа крайҙы колонизациялауҙың һәм башҡорт ерҙәрен талауҙың асыҡ картинаһы бирелә, батша чиновниктарының, дворяндарҙың,

купец һәм кулактарҙың тупаҫ баш-баштаҡлығы һәм көс ҡулланыуы фаш итеүе. Ремезов китаптары хаҡында В. И. Ленин былай тип яҙҙы: «Очерки из жизни дикой Башкирии» — «колонизаторҙарҙың» нисек итеп караптар төҙөүгә яраҡлы урмандарҙы ҡырҡып бөтөрөүҙәрен һәм «ҡырағай» башҡорттарҙан «таҙартылған» баҫыуҙарҙы «бойҙай фабрикаларына» әүерелдереүҙәрен йәнле һүрәтләү ул. Был иһә колониаль политиканың шундай өлөшө, ул ҡайҙалыр Африкала немецтарҙың теләһә ниндәй подвигтарына тиңләшә ала»[1].

М. И. Өмөтбаев.



Реформанан һуңғы Өфөнөң культура тормошонда башҡорт ғалимы, шағир-мәғрифәтсе Мөхәмәтсәлим Ишмөхәмәт улы Өмөтбаевтың (1841—1907) ижады күренекле урын алып тора. Үҙ халҡына аң-белем биреүҙе дәртле яҡлаусы Өмөтбаев башҡорт һәм татар балаларын үҙ туған телендә уҡытыуҙы яҡлап сыҡты, милли ваҡытлы матбуғат һәм китап сығарыу эшен булдырыу өсөн көрәште. «Европала,— тип һөйләгән ул 1882 йылда Өфө земство сессияһында,— һәр халыҡ белемде үҙенең туған телендә фәндәрҙе уҡыу һәм өйрәнеү юлы менән алған, шуға күрә, мосолмандарҙы (башҡорт һәм татарҙарҙы.— *Авт.)* фәндәр һәм хәҙерге хәл менән таныштырыу өсөн, мин земство собраниеһынан хөкүмәт алдында түбәндәге мәсьәләләрҙе ҡуйыуҙы үтенеп һорайым: беренсенән, уҡыу китаптарын татар теленә тәржемә итеп, баҫтырып сығарырға; икенсенән, татар телендә газета сығарырға һәм татар шрифы менән яҙырға, география һәм тарих буйынса китаптар баҫып сығарырға»[2]. 1897 йылда Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың «Йәдкәр» («Памятки») тигән иң мөһим хеҙмәте баҫылып сыҡҡан. Уға башҡорттар тарихы һәм этнографияһы буйынса материалдар, ауыҙ-тел халыҡ ижады ҡомартҡылары, башҡорт шәжәрәләре, авторҙың шиғырҙары һәм юлъяҙмалары ингән.

Өмөтбаевтың поэзияһы башҡорт халҡының тормошон һәм көнкүрешен, уның аң-белем һәм культура таратыу менән бәйләнгән яҡты идеалдарын сағылдыра. Крайҙың төп халҡы araһында алдынғы рус культураһын һәм әҙәбиәтен популярлаштырыусы булараҡ та шағирҙың роле баһалап бөтөргөһөҙ. Ул А. С. Пушкиндың «Баҡсаһарай фонтаны» тигән поэмаһын татар теленә тәржемә итә, һәм ул 1901 йылда Ҡазанда айырым китап булып сыға.

---

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәренең тулы йыйынтығы, 3-сө том, 253-сө бит.
[2] Очерки по истории Башкирской АССР, 1-се том, икенсе киҫәк, 276-сы бит.

XX быуат башына ғалимдың, шағир һәм мәғрифәтсенең исеме киң билдәлелек ала. «Башҡорттарҙың,— тип яҙа 1903 йылдың 11 июнендә «Уфимские губернские ведомости» гәзетаһы,— үҙҙәренең шағиры, 60 йәшлек Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевы, бар. Ул тулҡынландырғыс һәм көслө стилгә эйә, Пушкиндың «Баҡсаһарайын» бик һәйбәт тәржемә итте, Ҡазанда, Ырымбурҙа, Уралда, Өфөлә киң билдәле».

Реформанан һуңғы Өфөнөң театр һәм музыка тормошо XIX быуаттың беренсе яртыһындағыға ҡарағанда йәнлерәк һәм йөкмәткелерәк булған. 1861 йылда төрлө кешеләрҙең ярҙам итеп биргән аҡсаһына ҡышҡы театрҙың бельэтажы, ложалары һәм галереяһы булған өс ярусллы ағас бинаһы төҙөлгән. Бина ҡатын-ҡыҙҙар гимназияһы ҡарамағында булған, ул үҙендә тәрбиәләнеүселәр көсө менән түләүле һәүәҫкәрҙәр спектаклдәре ҡуйған, бинаны килгән профессиональ труппаларға арендаға биреп торған. 1868 йылда ул янған. Уның урынында губерна архитекторы Р. О. Карвовский проекты буйынса театрҙың 800 урынлыҡ яңы ике ҡатлы бинаһы һалынған. Ул 1876 йылда тантаналы рәүештә асылған. Ҡышҡы театрҙан тыш Өфөлә йәйге театр ҙа булған, ул купец Блохин баҡсаһында (хәҙер А. В. Луначарский исемендәге баҡса) урынлашҡан. «Сцена» журналы хәбәрсеһенең һүҙҙәренә ҡарағанда, был тәпәш, ҡыҫынҡы һәм шаҡтай бысраҡ һарай булған, унда тамашалар майҙан алып август — сентябргә тиклем барған [1].

Өфөлә даими профессиональ театр коллективы булмаған. Театр биналары гастролгә килгән труппаларға бирелгән, улар иһә гәҙәттә пароходтарҙа йәйге сезонға, ә инде тимер юл бәйләнеше булыу менән, ҡышын да килә торған булған. 70—80-се йылдарҙа Хотев-Самойлов, Шумилов, Славянский, Вехтер, Андреев, Крамес, Васильев-Гладков труппалары сығыш яһаған. А. Н. Островскийҙың «Төшөмлө урын», «Бүреләр һәм һарыҡтар», «Белугиндың өйләнеүе», Ф. Шиллерҙың «Юлбаҫарҙар» тигән пьесалары ҡуйылған. Әммә театрҙың төп репертуары художество кимәле түбән булған мелодрамаларҙан һәм водевилдәрҙән торған.

1890 йылдың сентябренән 1891 йылдың майына ҡәҙәр ҡышҡы театр бинаһында провинциаль антрепренер Семенов-Самарскийҙың опера труппаһы сығыштар яһаған, уның составында ул саҡта әле бер кемгә лә билдәле булмаған 17 йәшлек хор йырсыһы Федор Шаляпин (1873—1938) булған. Бында ул үҙенең тәүге партияларын — С. Монюшконың «Галька» операһында — Стольник, Д. Вердиҙың «Трубадур» операһында — Фернандо, А. И. Верстовскийҙың «Аскольд ҡәберендә» Билдәһеҙ партияларын башҡарған.

1892 йылда — ҡышҡы театр бинаһы, ә уның икенсе йылына йәйге театр бинаһы янған. 1894 йылда ғына Блохиндың вариҫы за-

[1] «Сцена», 1885, № 16, 380-се бит

вод хужаһы Видинеев йәйге театрҙың яңы бинаһын һалдырған, ул хәҙер ҙә бар. Уның менән бер рәттән ресторан бинаһы һалғандар, ресторанда Видинеевтың араҡы һәм һыра ҡайнатыу предприятиеларының продукцияһы мул һатылған. Театр бинаһында сезондан сезонға Максимовтың оперетта труппаһы, Алмазованың опера труппаһы һәм башҡаларҙың спектаклдәре барған. 1895 йылда бында «Император Мәскәү Кесе театры артистары товариществоһы» составында буласаҡ СССР-ҙың халыҡ артисткаһы А. А. Яблочкина (1869—1964) һәм танылған актер Ф. П. Горев сығыш яһаған. А. А. Яблочкинаның бик шәп уйнауы күп һанлы тамашасыларҙы һоҡландырған, уларҙа сағыу, тулҡынландырғыс тәьҫир ҡалдырған.

1896 йылда трактирщик Кляузников хосуси ҡышҡы театр һалдырған, ундағы ресторан тамаша залына ҡарағанда күберәк урын биләгән. 1897 йылдың февралендә бында драма труппаһы составында бөйөк рус актрисаһы Г. Н. Федотова (1846—1925) гастролдә булған. 14 февралдә Федотова А. Н. Островскийҙың «Василиса Мелентьева» тигән тарихи драмаһында төп ролде иҫ киткес шәп башҡарыуы менән тамашасыларҙы хайран ҡалдырған. Ул был ролде авторҙың үҙенең күрһәтмәләре буйынса әҙерләгән булған. Актрисаның ғәҙәттән тыш уңышын билдәләп, рецензент «Ведомости» газетаһында былай яҙған: «Хаҡтарҙың сиктән тыш юғары булыуына ҡарамаҫтан, театр туп-тулы ине. Уңыш, көтөлгәнсә, тағы ла тулыраҡ булды... ғөмүмән, кешеләргә килтергән кинәнесе буйынса һирәк осрай торған спектакль булды» [1].

Ҡаланың культура тормошонда һәүәҫкәрҙәр түңәрәктәре ғәйәт ҙур роль уйнаған. 1885 йылда «Йыр, музыка һәм драма сәнғәтен һөйөүселәр йәмғиәте» барлыҡҡа килеп, ул Дворяндар собраниеһы бинаһында урынлашҡан. Йәмғиәт дворяндарҙан, чиновниктарҙан һәм дворян-буржуаз интеллигенция вәкилдәренән торған. Бер аҙ һуңыраҡ һөнәрселәрҙең «Ремесленка» клубы, «Хосуси служба хеҙмәтенә үҙ-ара ярҙамлашыуҙың Өфө йәмғиәте» клубы, тимер юл мастерскойҙары эшселәре клубы янында демократик һәүәҫкәрҙәр түңәрәктәре барлыҡҡа килгән. Уларҙың репертуарында А. Н. Островский һәм Н. В. Гоголь пьесалары өҫтөнлөк иткән.

Музыка культураһында бер ни тиклем алға китеш булған. 60-сы йылдарҙа Өфөлә бер нисә музыка уҡытыусыһы, пианист һәм скрипкасы йәшәгән, улар һәүәҫкәр концерттарҙа Моцарт, Шопен, Кальбреннер әҫәрҙәрен башҡарғандар. Өфө педагогтары Игнатович һәм Новицкий күренекле рус пианисткаһы В. В. Тимանованың (1855—1942) тәүге йорт уҡытыусылары булған. 1865 йылдың 21 ғинуарында ул Өфөлә үҙенең беренсе концертын бирә, бында ул Моцарт һәм Россини әҫәрҙәрен башҡара. Атаҡлы пианистар һәм композиторҙар А. Г. Рубинштейн һәм Ференц Листың шәкерте Тиманова тыуған

---

[1] Волков-Кривуша С. Русский театр в Уфе. Тарихи очерк. Өфө, 1959, 11-се бит.

ҡалаһына концерттар менән күп тапҡырҙар (һуңғы тапҡыр 1896 йылда) килгән. Күренекле опера йырсыһы Е. Я. Цветкова, ҡыҙ фамилияһы Барсова (1872—1929) Өфөлә музыкаға өйрәнә башлаған.

Бер нисә хор, шул иҫәптән ирҙәр гимназияһы эргәһендә һәүәҫкәрҙәр хоры, барлыҡҡа килә. Собор хоры губернала иң яҡшы хор тип иҫәпләнгән, уның башында В. А. Скворцов торған. Хор солистары, сиркәүҙә йырлауҙан тыш, Дворяндар собраниеһы концерттарында ҡатнашҡан. «Йыр, музыка һәм драма сәнғәтен һөйөүселәр йәмғиәтенең» эшмәкәрлеге ҡала халҡының музыка культураһы менән ҡыҙыҡһыныуын уятыуға булышлыҡ иткән. 1886 йылда Йәмғиәт тәүге концертын биргән, унда ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар хорҙары һәм солистары Даргомыжскийҙың «Һыу инәһе» операһының 3-сө актын башҡарғандар. Шунан һуңғы йылдарҙа Йәмғиәттең концерттары шаҡтай йыш булған. Репертуарҙа Глинка, Чайковский, Рубинштейн, Серов, Шуберт, Верди әҫәрҙәре күренекле урын тотҡан.

# *Өфө империализм һәм буржуаз-демократик революциялар осоронда*

## § 1. Промышленность һәм сауҙа. Халыҡ һәм ҡала хужалығы

Империализм дәүерендәге Өфө — батша Россияһының типик провинциаль ҡалаһы. Капитализм уның бөтә йөҙөнә йәмһеҙ төҫ бирҙе. Тирә-яғындағы күп кенә губерна ҡалаларынан (Вятка, Сембер һәм башҡаларҙан) сағыштырмаса йылдамыраҡ үҫеүе менән айырылып, Өфө Көньяҡ Уралдың мөһим административ, экономик һәм культура үҙәге булып үҫте.

XX быуаттың тәүге йылдары фабрика-завод производствоһының артабан күтәрелеүе менән характерлана. Промышленность продукцияһының ҡиммәте 1900 йылдағы 1487,6 мең һумдан 1913 йылда 3136,1 мең һумға тиклем, йәғни 2 тапҡырҙан күберәккә, үҫкән[1]. 98 эшсеһе булған Гутман заводы (хәҙер Өфө тау ҡорамалдары заводы) металл эшкәртеү предприятиеларынан иң ҙур завод иҫәпләнгән. Унда суйын-баҡыр ҡойолмаһы, янғын насостары, ашлыҡ һуҡҡыстар һәм аҙ ҡеүәтле двигателдәр эшләп сығарылған. Етештереү күләмдәре тураһында шуға ҡарап фекер йөрөтөргә мөмкин: завод 1913 йылда, мәҫәлән, 5 нефть двигателе һәм 37 ашлыҡ һуҡҡыс эшләп сығарған. Ҙур булмаған Фролов заводы (унда 20 кеше эшләгән) һәм бер нисә слесарь-тимерлек һәм механика мастерскойы ауыл хужалығы машиналарын һәм ҡоралдарын ремонтлауға махсуслашҡан.

Сырьеның күп булыуы, бик ҙур тимер юл төҙөлөшө Өфө ҡалаһының ағас эшкәртеү промышленносын (таҡта ярыу заводтарын, столярлыҡ һәм ағас эшкәртеү мастерскойҙарын) йылдам үҫтереүгә ярҙам итте. Был промышленность XX быуат башында тулайым продукция буйынса ла, шулай уҡ эшселәр һаны яғынан да беренсе урынға сыҡты. 1913 йылда ошо тармаҡтың 28 предприятиеһында 944 эшсе 1064,5 мең һумлыҡ[2] продукция, йәғни ҡала промышлен-

[1] Обзор Уфимской губернии за 1913 год. Өфө, 1915, 25-се ҡушымта.
[2] Шунда уҡ.

Гутман заводы.



носының тулайым продукцияһының өстән бер өлөшө самаһын, етештерҙе. Улар араһында «Өфө урман промышленносы товариществоһының» таҡта ярыу һәм юнысҡы-йышыу заводы (245 эшсе) һәм «Комаров тимер рудаһы ятҡылыҡтары һәм Көньяҡ Урал заводтары йәмғиәтенең» таҡта ярыу заводы (118 эшсе) мөһим роль уйнанылар.

XIX быуат аҙағында йылдам үҫеүсе аҙыҡ производствоһы һәм ауыл хужалығы сырьеһын эшкәртеү хәҙер инде һиҙелерлек артта ҡала башлай һәм икенсе планға сигенә. Шуға ҡарамаҫтан, ҡалала он тартыу һәм тире иләү ҙур күләмдәрҙә алып барыла. Был продукция, нигеҙҙә, тышҡы рынокка сығарылған, ә кондитер һәм колбаса изделиелары ҡала кешеләренең ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә киткән. 1913 йылда аҙыҡ һәм эшкәртеү промышленносының 55 предприятиеһы (уларҙа 494 эшсе эшләгән) 710 мең һумлыҡ продукция етештергән [1].

Ҙур торлаҡ төҙөлөшө алып барылыу айҡанлы төҙөлөш материалдары промышленносы предприятиелары байтаҡ үҫте. Шул уҡ 1913 йылда ҡалала 424 эшсеһе булған 20 кирбес заводы иҫәпләнде; улар 139,2 мең һумлыҡ продукция бирҙе [2].

Ҡалалағы фабрика-завод предприятиеларының техник яҡтан арттаlығы күҙгә ташланып торған; уларҙың ни бары 10,5 проценты ғына пар двигателдәренән файҙаланған [3]. Байтаҡ производстволарҙа һаман да эле ҡул хеҙмәте, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар хеҙмәте, киң ҡулланылған.

---

[1] Обзор Уфимской губернии за 1913 год. Өфө, 1915, 25-се ҡушымта.
[2] Шунда уҡ.
[3] Шунда уҡ.

Эшселәрҙе рәхимһеҙ эксплуатациялау Өфө фабриканттарына һәм завод хужаларына, производствоны камиллаштырыуға әллә ни сығымдар тотмайынса, бик ҙур табыштар алырға мөмкинлек биргән. Мәҫәлән, XX быуат башына он тартыу предприятиелары хужаларының саф доходы һалынған капиталға ҡарата 31 процент, бойма баҫыу предприятиеларында — 26 процент һәм таҡта ярыу заводтарында 23,5 процент тәшкил иткән [1].

Өфөнөң экономик тормошонда сауҙа төп урынды алып торған. 1901 йылдан 1913 йылға саҡлы уның дөйөм әйләнеше 16,8 миллион һумдан 25,6 миллион һумға тиклем үҫкән [2]. Тауарҙарҙы күмәртәләп һатыу буйынса ҙур килешеүҙәр биржала төҙөлә торған булған. Ваҡлап һәм аҙлап һатыу менән 1500 самаһы заведение шөғөлләнгән. Нигеҙҙә, былар ваҡ сауҙагәрҙәр лавкалары була, улар эшселәр окраиналарындағы еүеш, ҡараңғы һәм бысраҡ биналарҙа урынлашҡан булған. Юғары сифатлы тауарҙар һәм зиннәтле әйберҙәр менән сауҙа итеүсе ҙур һәм төҙөк магазиндар, элеккесә, ҡаланың үҙәгендә урынлашҡан. Бындай магазиндар рәтенә, мәҫәлән, XX быуат башында Өфөнөң иң билдәле сауҙа үҙәге булған гостиный дворҙың күп һанлы магазиндары ингән.

Сауҙа сфераһына эре акционерҙар йәмғиәттәре барған һайын ныҡлыраҡ үтеп инә, «И. Г. Стахеевтың сауҙа йорто» икмәк, кәрәсин менән сауҙа итеүҙә төп ролде уйнай башлай. Сәй менән күмәртәләп сауҙа итеү тотошлайы менән тип әйтерлек сәй менән сауҙа итеүсе Мәскәү товариществоһы — «Каруан» ҡулында туплана. «Бер туған Кәримовтарҙың сауҙа йорто» мануфактура тауары менән сауҙа итеүҙе монополиялаштыра.

Өфөнөң ҡала эсендәге сауҙаһында баҙарҙар ҙур урын алып торҙо.

XX быуаттың башы ҡала территорияһының һәм халҡының артабан йылдам үҫеүе менән характерлана. 1898 йылдан 1916 йылға тиклем урамдар һаны — 89-ҙан 216-ға, йорттар һаны 6078-ҙән 10 131-гә етә [3]. Яңы торлаҡ кварталдары, нигеҙҙә, ҡаланың төньяҡ өлөшөндә (Богородский урамынан тимер юл вокзалы һәм пароход пристане яғына табан) барлыҡҡа килә.

Яңы территорияларҙың үҙләштерелеүе менән бер үк ваҡытта иҫке территорияларҙа төҙөлөш тығыҙлана, бигерәк тә ҡаланың үҙәгендә бер нисә ҡатлы биналар һалына башлай. 1916 йылда ҡалала 400-гә яҡын ике ҡатлы һәм ҡырҡлап өс ҡатлы йорт иҫәпләнгән [4]. Ағас төп

---

[1] Сборник статистических сведений по Уфимской губернии. 10-сы том. Фабрики, заводы и промышленные заведения Уфимской губернии, 2-се киҫәк. Өфө, 1910, 31, 77, 109-сы биттәр.

[2] Хозяйственно-статистический обзор Уфимской губернии за 1902 год. Өфө, 1903, 660, 661-се биттәр; Обзор Уфимской губернии за 1913 год, 608, 609-сы биттәр.

[3] Обзор Уфимской губернии за 1900 год. Өфө, 1902, 55-се бит; ЦГА БАССР, ф. 148, оп. 1, д. 21, л. 6.

[4] «Советская Башкирия», 1967, 18 апрель.

Үрге сауҙа майҙанында биржа һәм Себер сауҙа банкыһы йорто.




төҙөлөш материалы булып ҡала килгән. Шуның менән бергә торған һайын күберәк күләмдә кирбес ҡулланыла башлай. 1900 йылда 247 кирбес бина булһа, 1915 йылда инде уларҙың һаны 1562-гә еткән[1]. Шулай итеп, сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт эсендә кирбестән һалынған биналарҙың удель ауырлығы 6,1 проценттан 20,9 процентҡа үҫте.

Яңы һалынған биналар араһында С. Т. Аксаковтың Халыҡ йорто (хәҙер Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры), Ҙур Себер ҡунаҡханаһы (хәҙер Совет Армияһының Офицерҙар йорто), коммерция училищеһы һәм сауҙа мәктәбе (хәҙер П. Тольятти исемендәге Өфө авиация техникумы) биналары һәм Чижева йорто (хәҙер Башҡортостандың Республика крайҙы өйрәнеү музейы бинаһы) айырылып торған.

Аксаков йортон төҙөү иғтибарға лайыҡлы. 1909 йылда, бөтә ил танылған рус яҙыусыһы, Өфө ҡалаһында тыуған С. Т. Аксаковтың вафат булыуына 50 йыл тулыу көнөн билдәләгәндә, ҡала думаһы уның иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн культура һәм сәнғәт усағы төҙөргә ҡарар сығара. Шунда уҡ ярҙам йыйыу башлана, ә Петербургтың архитекторҙар йәмғиәте иң яҡшы бина проектына Бөтә Россия конкурсы иғлан итә. Ләкин жюри тәҡдим ителгән 24 проекттың бе-

[1] Обзор Уфимской губернии за 1900 год, 55-се бит; ЦГА БАССР, ф. 148, оп. 1, д. 21, л. 6.

реһеп дә ҡабул итмәй. Ахыр сиктә, Халыҡ йортон Өфө архитекторы П. П. Рудавский проекты буйынса һалырға ҡарар итәләр. 1910 йылдың феврале башына Йорт төҙөлөшө кассаһына Россияның бөтә яҡтарынан 154,5 мең һум аҡса инә. 1914 йылда төҙөүселәр кирбес һалыуҙы тамамлап, биҙәү эштәренә, бинаны архитектура яғынан оформить итеүгә тотона. Бина егерменсе йылдар башына тамам төҙөлөп бөтә.

Массовый күләмдә граждандар һәм промышленность төҙөлөшө ҡаланың йөҙөн үҙгәртә. Гостиный двор менән Үрге сауҙа майҙанын сауҙа предприятиеларының, ҡунаҡханаларҙың, йәмғәт ойошмаларының һәм доходлы йорттарҙың кирбес бинаһары уратып ала. Шул уҡ ваҡытта ҡаланың тап үҙәгендә, ҡала думаһы бинаһы алдында (хәҙерге В. И. Ленин исемендәге сквер территорияһында), тирә-яғы һәр ваҡыт үтеп булмаҫлыҡ батҡаҡ булған һыу алыу будкаһы тороп ҡала (ул бары тик 1906 йылда ғына алып ташлана). Тотошлай тип әйтерлек 2—3 ҡатлы кирбес йорттарҙан торған ҡала үҙәге уның ситтәрендәге ағас йорттарҙан бик ныҡ айырылып торған.

Яңы быуаттың тәүге 15 йылында Өфө халҡы ике тапҡырға тип әйтерлек арта. 1901 йылда ҡалала 60,6 мең кеше иҫәпләнһә, 1916 йылда инде 112,7 мең кеше йәшәгән [1]. Элекке кеүек үк, халыҡ башлыса ауыл иҫәбенә, бөлгөнлөккә төшкән крәҫтиәндәр иҫәбенә, арта. Ул йыл һайын уртаса 4,6 мең кешегә артҡан, һәм иң ҙур тәбиғи үҫеш (1911 йылда) 1411 кеше тәшкил иткән [2]. Башҡорттар һанының, нигеҙҙә, эш эҙләп, тыуған ауылдарын ташлап китеүсе ярлы башҡорттарҙың, йылдам артыуы яңы күренеш була. Улар утын ҡырҡыу, ихаталарҙы йыйыштырыу, мал ҡарау һәм башҡа шуның кеүек иң квалификацияһыҙ эш менән шөғөлләнгән.

Өфө халҡының төп массаһы ялланып эшләүсе кешеләрҙән торған. Ләкин улар араһында эшселәр сағыштырмаса аҙ була. Дәүләт һәм шәхси учреждениеларҙың, сауҙа йорттарының хеҙмәткәрҙәре, һөнәрселәр, ялсылар күпселекте тәшкил иткән. 1901 йылда ҡаланың промышленность предприятиеларында — 1242, ә 1913 йылда 3667 эшсе эшләгән [3]. Күп эшселәр тимер юлда, һыу транспортында, төҙөлөштә, элемтә предприятиеларында эшләгән. Мәҫәлән, Өфө тимер юл мастерскойҙарында 1905 йылда — 2000-гә яҡын, депола 600 самаһы эшсе иҫәпләнгән.

Россияның империализм осорона аяҡ баҫыуы эшселәр синыфын эксплуатациялауҙың көсәйеүе, уның экономик хәленең насарайыуы,

---

[1] Хозяйственно-статистический обзор Уфимской губернии за 1900—1901 гг. Өфө, 1902, 360, 361-се биттәр. Уфа за годы Советской власти (Статистический справочник). Өфө, 1969, 16-сы бит.

[2] Хозяйственно-статистический обзор Уфимской губернии за 1911 год. Өфө, 1912, 733-сө бит.

[3] Хозяйственно-статистический обзор Уфимской губернии за 1900—1901 год, 413, 417-се биттәр; Обзор Уфимской губернии за 1913 год, 25-се ҡушымта.

Оло Успенский һәм Үҙәк урамдар мөйөшөндәге һыу алыу будкаһы.



политик хоҡуҡһыҙлығы менән характерлана. Тимер юл мастерской-ҙарында эш көнө, мәҫәлән, 1903 йылдан башлап формаль рәүештә 10 сәғәт менән сикләнгән булһа ла, ғәмәлдә ул 12 сәғәт һәм унан да күберәк дауам иткән. Бында «вечеровкалар» тип аталған нәмә, йәғни эш сәғәтенән һуң эшләү, даими күренешкә әйләнә.

Ҡаланың башҡа предприятиеларының эшселәре тағы ла ауырыраҡ шарттарҙа йәшәгән. 1906 йылдың 22 ноябрендә «Уфимский рабочий» газетаһы икмәк бешереүселәрҙең хәле тураһында, «төнгө смена көндөҙгө сәғәт 12-нән иртәнге сәғәт 3—5-кә саҡлы дауам итә, көндөҙгө смена ла шулай уҡ... Ашау күпселек осраҡта хужа ҡулынан, ерәнгес аҙыҡ ашаталар. Эшселәр хужаларҙың квартираларында йәшәгән. Буйы 7—8, киңлеге 4—5 аҙым булған тығыҙ, бысраҡ һәм бөркөү бүлмәләрҙе квартиралар тип атау ҙа ҡыйын; унда ғәҙәттә 8—10 кеше йәшәй торған булған... Эш хаҡы бик түбән: пекарға айына 25 һум, уның ярҙамсыһына 15 һум түләнә». «Каруан» фирмаһы сәй төрөүселәре хеҙмәтен рәхимһеҙ интенсификациялау тураһында «Заря Поволжья» журналы хәбәрсеһе былай тип яҙа: «Заводтарҙағы һәм фабрикаларҙағы һымаҡ, ҙур-ҙур торбалары булмаһа ла һәм уларҙан төтөн бөркөлөп тормаһа ла, унда, был бина эсендә, эшселәр хеҙмәте, бигерәк тә балалар хеҙмәте, рәхимһеҙ рәүештә эксплуатациялана. Унда, бина эсендә, 200-гә яҡын эшсе көн һайын аҙ-аҙлап үҙенең ҡанын, көсөн, һаулығын һәм йәшлеген ҡалдыра. Иртәнге сәғәт 8-ҙән алып... йөҙҙәрсә ҡулдар йәшен тиҙлегендәге йылдам хәрәкәттәр менән үҙҙәренең вазифаларын башҡаралар: үлсәйҙәр, төрәләр, йәбештерәләр, бәйләйҙәр, төргәкләйҙәр һәм башҡалар. Артта-

рынан күҙәтеп торған «өлкәндең» ашыктырыуына буйһоноп, бер һүҙһеҙ, тирә-яҡҡа күҙ ташламай, ял итмәйенсә эшләйҙәр. Машина-автомат менән оҡшашлыҡты аҙағына саҡлы еткереү өсөн, «норма» ҡуйылған... минутына 5—8 төргәк. Был автоматик, тамуҡ эше түгелме ни? Ошондай интенсив, иҫ киткес көсөргәнешле хеҙмәттән һуң эшсе был ғазаплау һәм зәғифләндереү бинаһынан физик һәм әхлаҡи яҡтан бөтөнләй ҡыйралып сыға. Был рәхимһеҙ ҙур бина һәр көн киске сәғәт 7-лә көс-хәл менән хәрәкәт итеүсе ит киҫәктәрен урамға сығарып ташлай» [1].

Өфө эшселәренең даими йәберләнеүе һәм уларҙың экономик хәленең насарайыуы хаҡында «Правда» газетаһы бер нисә тапҡыр яҙып сыҡты. Хеҙмәтте һаҡлау юҡ ине. Ауырыған һәм эшкә һәләтлелекте юғалтҡан осраҡта пособие биреү һәм материаль ярҙам күрһәтеү предпринимателдәр ихтыярына бәйле булған һәм, ҡағиҙә булараҡ, бирелмәгән. Ул заманда эшкә һәләтлелекте юғалтыу эшселәр һәм уларҙың ғаиләләре өсөн ҡот осҡос бәхетһеҙлек булған.

Ҡала халҡының төп массаларының хәйерселеге һәм хоҡуҡһыҙлығы фонында хакимлыҡ итеүсе синыфтар үҙҙәренең байлығы менән нык айырылып торған. Дворяндар, предпринимателдәр, сауҙагәрҙәр, финанс эшҡыуарҙары, тормоштоң бөтә рәхәтлектәренән файҙаланып, зиннәт-байлыҡ эсендә, муллыҡта йәшәпеләр. Улар ҡалала һоҡланғыс матур йорттар һалдылар, бер-берећенән уҙҙырырға тырышып, мал туҙҙырҙылар, взятка алдылар.

Дворяндар, аҙ һанлы булыуҙарына ҡарамаҫтан, элеккесә ҡалала һәм губернала самодержавиеның таянысы булып ҡалдылар. Улар губерна администрацияһына етәкселек иттеләр, бөтә учреждениеларҙа, шул иҫәптән урындағы үҙидарала һәм йәмәғәт ойошмаларында, юғары хаҡ түләнә торған төп вазифаларҙы биләнеләр. XIX быуат аҙағында һәм XX быуат башында дворяндар, ҡаланың кредит һәм банк учреждениелары советтарына етәкселек итеп йәки унда ағза булараҡ, капитал донъяһы вәкилдәре менән тығыҙ союзға инәләр.

Губернаторҙар Өфө менән идара итеү эшен полиция аша тормошҡа ашырҙылар, уның башында ҡала полиция идаралығы торҙо. Приставтар, уларҙың ярҙамсылары һәм околоток надзирателдәре, элекке кеүек үк, ҡала хаҡында «хәстәрлек күрәләр»; уңайлы булһын өсөн, ҡала биш полиция участкаһына бүленгән булған. Ҡала полиция идаралығына янғын һүндереү командаһы буйһонған.

Ҡала думаһы ғәмәлдә батша администрацияһының ярҙамсы органына әйләнде, уның эшмәкәрлеге синфи характерҙа булды.

Өфө ҙурая һәм үҫә барған һайын, ҡала хужалығын хеҙмәтләндереү бурыстары ла ҡатмарлаша. Өфөнөң бюджеты 1900 йылдан алып 1913 йылға саҡлы 4 тапҡырға тип әйтерлек арта һәм 1 125 899 һум-

---

[1] «Заря Поволжья», 1914, № 20, 11—12-се биттәр.

Оло Успенский һәм Телеграф урамдары мөйөшө.



ға етә [1]. Ләкин Дума халыҡтың кисектергеһеҙ ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн средстволарға даими мохтажлыҡ кисерә һәм ауыр финанс кризисынан сыҡмай. Бюджет дефицитын ҡаплау өсөн «ҡала хужалары» банкыларҙан һәм шәхси кешеләрҙән әленән-әле бурысҡа алып торғандар. Ындай бурыстар 1916 йылда байтаҡ ҙур суммаға, бер миллион һумға, барып етә [2]. Дефицитты хужаһына иҫ киткес ҙур табыш килтереүсе электр станцияһын ҡалаға биреү менән бөтөрөп булыр ине. Дума байтаҡ йылдар буйына уны һатып алырға тырышып ҡарай, ләкин уның хужаһы, үтәп булмаҫлыҡ талаптар ҡуйып, һәр саҡ һатыуҙан баш тартҡан. Аҙаҡ килеп, 1916 йылда ул үҙ милкен 300 мең һумға ҡалаға һата.

Ҡала бюджетына башҡа төрлө керем сығанаҡтарын да эҙләп ҡарайҙар. 1909 йылда, мәҫәлән, Думаның финанс комиссияһының Үргә сауҙа майҙанында урын арендалау хаҡын арттырыу тураһындағы тәҡдиме тикшерелә. Думалағы сауҙагәрҙәр комиссия проектына ҡырҡа ҡаршы сығалар. Башҡа гласныйҙар ҙа уларҙың мәнфәғәтен яҡлай. «Уфимский край» газетаһының хәбәрсеһе ошо хаҡта былай тип үкенес белдерә: «Ләкин кем үҙенә дошман булһын инде? Мәсьәлә хәл ителмәне» [3].

Дума 1913 йылда Ағиҙел яр буйы участкаларын пристань төҙөү өсөн ҡаланың арендаға тапшырыуының яңы шарттарын да ҡабул итмәй. Пароходчиктар иҫке договорҙар буйынса түләүҙе туҡтата-

---

[1] Обзор Уфимской губернии за 1913 год, 32-се ҡушымта.
[2] «Уфимская жизнь», 1916, 23 март.
[3] «Уфимский край», 1909, 17 сентябрь.

лар, ә яңыларын төҙөмәйҙәр. Управаның судҡа мөрәжәғәт итеүе лә арҙам итмәй. Ҡаланың мәнфәғәттәрен яҡларға тейеш булған гласный Быховский (ҡала ерҙәрен файҙаланыу буйынса комиссия председателе) мәсьәләне тикшергән саҡта, үҙенең бөтә пароход хужаларының юрисконсульты булыуын һәм ҡала 15 йыл буйына судлашһа ла, процесты отмаясаҡ [1], тип белдергән бер ваҡытта башҡаса нимә күтәргә мөмкин ине. Дума сигенергә мәжбүр булды.

Дворяндарҙың һәм буржуазияның синфи мәнфәғәттәрен думаның яҡлауы ҡаланы төҙөкләндереү мәсьәләләрендә лә асыҡ сағылды. Төҙөкләндереү эштәре ҡала үҙәгендә генә алып барылды. 1910 йылға 122 километрға һуҙылған Өфө урамдарының ни бары 15 километрының ғына өҫтөнә таш түшәлгәйне. Буржуазия йәшәгән ошо уҡ кварталдарҙа асфальт түшәлгән тәүге тротуарҙар барлыҡҡа килә. Урамдарға таш нисек етте шулай түшәлгәнлектән, йәй көпө унда һикәлтәләр һәм түмһәләктәр барлыҡҡа килгән; ел иҫкәндә, ат юлы өҫтөндә саң болото күтәрелә торған булған. Ҡышын юлдарҙы ҡар баҫып, үтеп булмаҫлыҡ хәлгә килтергән. Ямғырлы мәлдәрҙә юлдарҙағы бысраҡ тәрән батҡаҡҡа әйләнгән. Экипаждар бысраҡты иҙеп, тротуарға аҡтарған һәм кешеләргә баштан-аяҡ бысраҡ сәсрәткән.

Парктар ҙа: Ушаков (һуңынан А. Матросов исемендәге культура һәм ял паркы *), Видинеев (хәҙер А. В. Луначарский исемендәге баҡса) парктары, айыҡ кешеләр паркы (хәҙер И. С. Якутов исемендәге балалар паркы) һәм Случевский тауындағы парк (хәҙер Н. К. Крупская исемендәге баҡса) ҡаланың үҙәгендә урынлашҡан булған. Иң төҙөкләндерелгән тәүге ике парк халыҡтың бай ҡатламдары өсөн күңел асыу урыны булып хеҙмәт иткән. 1913 йылда парктарҙың һәм скверҙарҙың дөйөм майҙаны 0,35 квадрат километрҙан артмаған, фонтандар һәм бассейндар булмаған. Сәскә түтәлдәре аҙ булып, ултыртылғандары ла үтә ябай була.

Думала оҙаҡ йылдар буйына ҡала канализацияһын төҙөү хаҡында һүҙ алып барыла, ләкин бының өсөн бер нисек тә аҡса таба алмайҙар. Ассенизация обозы ҡаланы сүп-сарҙан һәм бысраҡлыҡтан таҙартып өлгөрә алмай. Управаның санитария бүлегенең мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 1915 йылда ассенизация средстволарына булған ихтыяж, промышленность предприятиеларының ташландыҡ һыуҙарын да иҫәпләгәндә, 8 процентҡа ғына ҡәнәғәтләндерелгән [2]. Бысраҡтың күп өлөшө ергә һеңеп, Ағиҙелгә ағып төшкән. Был иһә тирәяҡҡа яман еҫ таратып ҡына ҡалмай, бәлки күп кенә эсәк һәм үпкә ауырыуҙарының сығанағы булып торған.

Дума трамвай хаҡындағы мәсьәләне лә хәл итә алмаған. Ат транспорты төп хәрәкәт итеү средствоһы булып ҡала. Ул ике төрҙән: бай хужаларҙың экипаждарынан һәм извозчиктар экипажда-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 311, оп. 1, д. 10, л. 162.
* Хәҙер ул В. И. Ленин исемендәге парк тип атала.— *Ред.*
[2] ЦГА БАССР, ф. 311, оп. 1, д. 3, л. 69.

рынан торған. 1913 йылда 395 извозчик иҫәпләнгән. Улар йылына бер миллион самаһы пассажир йөрөтә торған булғандар. Вокзалға багаж менән барыу өсөн 40—60 тин, йәғни квалификацияһыҙ эшсенең бер көнлөк эш хаҡы күләмендә тип әйтерлек, түләргә кәрәк булған [1].

XX быуат башында Өфөлә тәүге автомобилдәр һәм мотоциклдар күренә башлай. 1914 йылда иң бай дворяндарҙың һәм буржуаларҙың 15 еңел автомобиле һәм 8 мотоциклы булған [2]. Йөк автомашиналары булмаған.

Элемтә учреждениелары селтәре сиктән тыш аҙ үҫкәйне. 1904 йылда ҡала үҙәгендә тәүге 19 почта йәшниге ҡуйыла. Ҡала телефон станцияһының ни бары 230 номеры була. 1914 йылдың 10 декабрендә дөйөм файҙаланыу өсөн 5 телефон линияһы асыла. Улар губерна үҙәген Надеждино, Ново-Троицк, Охлебинино, Семеновка һәм Топорнино ауылдары менән бәйләгән [3].

Ҡаланың бөтә хужалығында, бигерәк тә халыҡтың төп массаһы йәшәгән уның ситтәрендә, артталыҡ, ташландыҡлыҡ һәм йыртҡыслыҡ билдәләре күҙгә бәрелеп торған. Антисанитария, канализацияның, водопроводтың һәм яҡтыртыуҙың юҡлығы — революцияға тиклемге Өфөнөң эшселәр окраиналарында йәшәүселәрҙең яҙмышы бына шундай булған.

## § 2. Өфө социал-демократик ойошмаһының барлыҡҡа килеүе һәм эшмәкәрлеге

XX быуат башында илдә пролетариат хәрәкәте йылдам күтәрелә, һәм ул Өфөгә лә килеп етә. Марксизм — эшселәр синыфының революцион идеологияһы киң тарала. Социал-демократик хәрәкәттең пионерҙары Өфө предприятиелары эшселәре менән бәйләнеште һаман тәрәнәйтәләр, марксистарҙы берҙәм ойошмаға туплау буйынса ҙур эш алып баралар.

Өфөлә социал-демократик ойошманың барлыҡҡа килеүе Владимир Ильич Лениндың революцион эшмәкәрлеге менән тығыҙ бәйләнгән, уның туранан-тура йоғонтоһо аҫтында үтте. Ул тәү тапҡыр Өфөгә 1900 йылдың 6 февралендә Н. К. Крупская менән бергә Себерҙән ҡайтышлай килде. Бында Надежда Константиновна һөргөндөң ҡалған срогын үткәрергә тейеш була.

Ул саҡта В. И. Ленин Өфөлә бер нисә көн генә була, шулай ҙа был көндәр ҡаланың күп быуатлыҡ тарихында юйылмаҫ эҙ ҡалдырҙы. Тәүге кистә үк ул В. Н. Крохмаль квартираһында Өфө со-

---

[1] «Ленинец», 1967, 11 февраль.

[2] ЦГА БАССР, ф. 9, оп. 1, д. 1017, л. 1, 2.

[3] Адрес-календарь Уфимской губернии и справочная книжка на 1904 год. Өфө, 1904, 60—64-се биттәр; «Уфимский вестник», 1914, 15 декабрь.

циал-демократтары менән осраша. А. И. Петренко ошо осрашыуҙы хәтергә төшөрөп, былай тип яҙа: «Киске сәғәт һигеҙенселәрҙә, ныҡ ҡына пеләш булыуына ҡарамаҫтан, 30 йәштәр самаһындағы бер йәш кеше килеп инде. Ул беҙҙең күпселегебеҙ кеүек, бик ябай кейенгәйне. Өҫтөндә иҫке генә пальто, муйынына йөн шарф ураған. Алғы бүлмәлә пальтоһын сисеп, төпкө бүлмәгә уҙҙы. Уның өҫтөндә күкһел төҫтәге ҡыҫҡа пинжәк, жилет һәм шундай уҡ салбар ине. Ҡайтарма яғалы чесуча күлдәгенә ҡара ебәк галстук бәйләгән. Уның менән йәш кенә бер ҡатын килде. Былар Владимир Ильич Ульянов һәм уның ҡатыны Надежда Константиновна Крупская ине» [1]. Икенсе тапҡыр ул урындағы марксистар менән О. В. Аптекман квартираһында осраша.

Н. К. Крупская. 1900 йыл.



Был осрашыуҙа Н. К. Крупская, А. Д. Цюрупа, А. И. Свидерский, В. Н. Крохмаль, К. К. Газенбуш, О. В. Аптекман, О. И. Чачина, О. А. Варенцова, А. И. Петренко һәм башҡалар ҡатнаша. Владимир Ильич уларға Россиялағы эшселәр хәрәкәтенең торошо тураһында һөйләй, үҙенең марксистик революцион партияны төҙөү һәм дөйөм рус политик газетаһын ойоштороу планы менән таныштыра.

В. И. Ленин менән осрашыуҙар өфөләрҙе рухландыра, улар алдында революцион көрәштең киң перспективаларын аса, уның асыҡ маҡсаттарын күрһәтә. «Владимир Ильичтың Өфөлә булыуы, — тип билдәләй А. И. Петренко, — бик ҡыҫҡа ваҡытлы булыуына ҡарамаҫтан, үтә ыңғай тәьҫир ҡалдырҙы: бөркөү бүлмәлә тәҙрәне шар асып ебәргәндәй һәм унан ҡояш нурҙары менән саф һауа бөркөлөп ингәндәй булды» [2].

Сит илгә китер алдынан (унда газета сығарыу планлаштырыла) В. И. Ленин Н. К. Крупская менән күрешеү һәм урындағы социал-демократтар менән осрашыу өсөн Өфөгә икенсе тапҡыр килә. Ул бында әсәһе Мария Александровна һәм апаһы Анна Ильинична менән 15 июндә пароходта килә. Был юлы Владимир Ильич Өфөлә өс аҙнаға яҡын йәшәй һәм бик ҙур ойоштороу эше алып бара. Күп кенә йыйылыштар үткәрелә, унда теоретик, шулай уҡ практик мәсьәләләр тикшерелә.

---

[1] В. И. Ленин и Башкирия. Документтар, материалдар, иҫтәлектәр. Өфө, 1974, 264, 265-се биттәр.
[2] Шунда уҡ, 266-сы бит.

В. И. Ленин. 1900 йыл.



Йыйылыштарҙа урындағы марксистар ғына түгел, бәлки илдең бүтән ҡалалары вәкилдәре лә ҡатнаша. В. И. Ленин Әстрхандан Л. М. Книпович, Һамарҙан П. П. Румянцев, Нижний Новгородтан А. И. Пискунов, Е. И. Пискунова һәм башҡалар менән һөйләшә. Өфө пролетарийҙары вәкилдәре, атап әйткәндә И. С. Якутов һәм башҡалар, менән осрашыу В. И. Ленинда ҙур тәьҫир ҡалдыра. Ул тимер юл мастерскойҙарындағы социал-демократик түңәрәктең эшенә (унда Н. К. Крупская пропагандист булған) юғары баһа бирә.

Өфөлә В. И. Ленин Кадомцевтар ғаиләһендә була. Унда Надежда Константиновна ла йыш бара торған булған. Ҡыйыу пролетариат етәкселәре Инна, Эразм, Иван һәм Михаилды биргән был ғаилә урындағы революционерҙар араһында ҙур популярлыҡ менән файҙалана. Ғаилә башлығы Самуил Евменьевич суҡынған татарҙар ғаиләһенән сыҡҡан булған һәм губерна казначействоһында чиновник булып эшләгән. Уның ҡатыны Анна Федоровна быуындан быуынға килгән Златоуст эшсеһе ҡыҙы булған. Улар күп бала үҫтергәндәр. Балаларын тәрбиәләү өсөн, уларҙың атаһына өҫтәмә рәүештә итексе булып эшләргә һәм столяр һөнәре менән дә шөғөлләнергә тура килгән. Ул тарихты яҡшы белгән, әҙәбиәтте яратҡан һәм ошоно уҡ балаларында ла тәрбиәләгән.

Өфө урамындағы ошо йортта (хәҙер Чернышевский урамы, 83) 1900 йылдың февралендә, В. И. Ленин В. Н. Крохмаль квартираһында урындағы социал-демократтар менән осрашҡан.



Владимир Ильич менән осрашыуҙар, уның яҡындан тороп ҡыҙыҡһыныуы ошо һоҡланғыс ғаилә ағзаларының тормош юлын билдәләй. Владимир Ильич яңы ғына кадет корпусын тамамлаған йәш Эразмға хәрби белемен дауам итергәме-юҡмы тигән икеләнеүен бөтөрөргә ярҙам итә. Эразм үҙенең ғүмерен революцияға арнарға ҡарар итә, ләкин быны батша армияһы офицеры дәрәжәһе менән нисек бергә ҡушып алып барырға белмәй. Таныш революционерҙар ҙа уны хәрби училищеға инмәҫкә өгөтләйҙәр. Үҙенең кисерештәре тураһында ул В. И. Ленинға һөйләй. «Владимир Ильич, — тип хәтерләй Эразм Кадомцев, — революцияға, Париж коммунаһындағы кеүек үк, хәрби эш белгестәре, революцион офицерҙар һәм генералдар кәрәклеген һәм шуға күрә миңә хәрби училищеға уҡырға инергә кәрәклеген аңлатты. Миңә Маркс һәм Энгельстың хәрби эш буйынса мәҡәләләре менән танышырға, Клюзеренан алып Клаузевицҡа тиклем

Э. С. Кадомцев.



бөтә нәмәне өйрәнергә, ә хәрби училищелағы занятиеларҙа алған белемдең массовый коралды восстание өсөн нисек файҙаланыла алыуы хаҡында һәр ваҡыт уйларға һәм шул уҡ ваҡытта, синфи көстәр нисбәтен һәм шарттарҙы иҫәпкә алмағанда, ҡоро хәрби фәндең бер нәмә лә бирә алмауын бер ҡасан да онотмаҫҡа кәңәш бирҙе. Ә бының өсөн марксист булырға кәрәк» [1].

Йәйге көндәрҙең береһендә В. И. Ленин Раевка тимер юл станцияһынан ете саҡрым алыҫлыҡта ятҡан башҡорт Яхъя Туҡаев утарына бара һәм унда «Төньяҡ эшселәр союзына» (Ярославль ҡалаһы) нигеҙ һалыусыларҙың береһе, бында ҡымыҙ менән дауаланып ятыусы социал-демократ В. А. Носков менән осраша. Һуңғараҡ, 1902 йылдың авгусында, ошо осрашыу хаҡында хәтерләп, Носков Ленинға былай тип яҙа: «Владимир Ильич, шуны Һеҙҙең хәтерегеҙгә төшөрәм. Беҙ «ҡымыҙҙа» осрашҡанда, Һеҙ Төньяҡ союз эшмәкәрлегенә етәкселек итергә әҙер тороуығыҙҙы әйткәйнегеҙ... Һеҙҙең ризалыҡты мин үҙемдең иптәштәремә еткерҙем, һәм беҙ барыбыҙ ҙа Һеҙҙең яуапты шатланып ҡабул иттек һәм шул ваҡыттан алып Һеҙҙе яҡын иптәшебеҙ, Төньяҡ союз ағзаһы тип иҫәпләйбеҙ. Төньяҡ союздың бүтән ойошмалар менән ҙур бәйләнеш урынлаштырыуына һәм бигерәк тә «Искра» менән яҡынайыуына күп ярҙам иткәнегеҙ өсөн бында ҡайтыу менән мин Һеҙгә төньяҡ кешеләренән рәхмәт тапшырҙым...» [2]

В. И. Ленин Өфөлә дөйөм рус газетаһының терәк пунктын булдырыу буйынса ҙур эш алып барҙы, агенттар һәм хәбәрселәр һайлап алды, йәшерен хат яҙышыу өсөн улар менән шифрҙар һәм адрестар хаҡында һөйләшеп килеште һәм башҡалар. Уның актив ҡатнашлығында Өфө социал-демократик ойошмаһы тамам төҙөлөп бөтә; был ойошма ул саҡта Уралда иң көслө һәм йоғонтоло ойошмаға әүерелә. Уға Надежда Константиновна Крупская менән Александр Дмитриевич Цюрупа етәкселек итә.

1900 йылдың көҙөнә Өфө социал-демократик ойошмаһы нығынды һәм Көньяҡ Урал заводтарына йоғонто яһай башланы. Өфө социал-демократтары Н. К. Крупская аша В. И. Ленин менән даими бәйләнеш тоталар.

1901 йылдың февралендә Өфө социал-демократтары «Искраның» беренсе һанын алалар. Уның артынан башҡалары килә. Өфө социал-

[1] Кадомцев Э. С. Встреча с Ильичем.—«Вечерняя Уфа», 1971, 10 март.
[2] Переписка В. И. Ленина и редакции газеты «Искра» с социал-демократическими организациями в России. 1900—1903 гг., 2-се том. М., 1969, 132-се бит.

демократтары газетаны Башҡортостандың ҡалаларына, эшселәр поселоктарына тараталар, мәҡәләләр ебәреүгә күп иғтибар бирәләр. «Искраның» тәүге илле һанында туранан-тура Өфө губернаһына ҡағылышлы 33 мәҡәлә һәм заметка баҫылып сыға [1].

Өфөләге терәк пункты ленинсы «Искраға» аҡсалата ярҙам да күрһәтте. РСДРП-ның II съезына «Искра» ойошмаһының докладында, «Көнсығышта бер төркөм кешеләр (Өфө күҙ уңында тотола. — *Авт.*) «Искраға» аҡсалата ярҙам итә башланылар һәм беренсе йылда 600 һумға яҡын аҡса ебәрҙеләр. Һәр тиндә иҫәпләргә тура килгән ул заманда был ярайһы уҡ ҙур ярҙам булды» [2], тип күрһәтелде. Газетаның килемдәр һәм сығымдар тураһындағы яҙмаһы ла ошо хаҡта һөйләй; унда В. И. Лениндың ҡулы менән, 1901 йылдың мартынан майына саҡлы Өфөнән 427 марка 88 пфенниг аҡса инде, тип билдәләнгән [3].

1901 йылдың мартында һөргөн срогы тамамланғандан һуң, Н. К. Крупская сит илгә киткәс, «Искра» редакцияһы менән өфөләр араһындағы регуляр бәйләнеш өҙөлә. Урындағы социал-демократтар араһында ла етди үҙгәрештәр була. Теоретик яҡтан иң әҙерлекле, тәжрибәле партия работниктары — А. Д. Цюрупа, К. К. Газенбуш һәм башҡалар ҡаланан китә. Социал-демократтар араһында политик яҡтан өлгөрөп етмәгән, ныҡлы марксистик ҡарашта тормаған кешеләр тон бирә башлай. Был шуға килтерҙе, 1901 йылдың йәйендә ойошторолған социал-демократик «Өфө эшселәр комитеты» шул уҡ йылдың аҙағында оппортунистик «Урал социал-демократтар һәм социалист-революционерҙар союзына» инде һәм шуның менән ҙур политик хата яһаны.

Ленинсы «Искра» «Урал союзын» ҡырҡа тәнҡитләне, урындағы ойошмаларҙағы әҙмә-әҙлекле революцион элементтарға оппортунизмға ҡаршы көрәште көсәйтергә ярҙам итте. 1902 йылдың башында Өфө социал-демократтары төркөмө (Н. Н. Покровский, А. И. Малышев, Г. М. Мишенев, Л. И. Бойкова, В. М. Лихачев, И. С. Якутов һәм башҡалар) «Урал союзы» менән араны өҙөп, үҙ аллы ойошма төҙөнө. Был ойошма «Өфө эшселәр комитетын» «Искра» яғына сығарыу өсөн киҫкен көрәш алып бара. Искрасылар йоғонтоһо аҫтында комитет аҡрынлап дөрөҫ йүнәлеш ала башлай. 1902 йылдың 1 майында комитет ҡала тарихында беренсе тапҡыр маевка ойошторҙо, унда 50-гә яҡын эшсе ҡатнашты. Унда йыйылған кешеләр алдында һөргөндәге студент А. И. Малышев Беренсе май байрамының әһәмиәте хаҡында сығыш яһай. 23 майҙа маевка кәмәлә йөрөү исеме менән яңынан ҡабатлана. Малышев Ағиҙел яры буйында маевкала ҡатнашыусыларға Украинала крәҫтиәндәрҙең сығыштары тураһында «Искрала» баҫылып сыҡҡан мәҡәләне уҡый.

---

[1] Очерки истории Башкирской организации КПСС, 40-сы бит.

[2] В. И. Ленин и Башкирия, 11-се бит.

[3] Павлюченков Г. Ф. Н. К. Крупская в Уфимской ссылке (февраль 1900 — март 1901 гг.) Документаль очерк. Өфө, 1973, 169, 170-се биттәр.

И. С. Кадомцев.



1903 йылдың ғинуарында «Өфө эшселәр комитеты» «Урал социал-демократтар һәм социалист-революционерҙар союзынан» сыға һәм искрасылар группаһы менән берләшә. Ошондай берләшеү һөҙөмтәһендә РСДРП-ның берҙәм Урал комитеты төҙөлә, йәшерен Урал типографияһы уның ҡулына күсә. 1903 йылдың февралендә РСДРП-ның Өфө комитеты «Искраға» уны үҙенең етәксе органы тип таныуы хаҡында белдереү ебәрә. «Өфө комитеты»,— тип әйтелә документта,— хәҙерге ваҡытта Россия социал-демократик эшселәр партияһына ҡушыла, «Заряның» һәм «Искраның» теоретик ҡараштары һәм ойоштороу идеялары менән үҙенең теләктәшлеген белдерә һәм был органдарҙы рус социал-демократияһы өсөн етәксе органдар тип тапый» [1].

РСДРП-ның Өфө комитеты эшселәр араһында ҙур ойоштороу һәм агитация-масса эшен киң йәйелдерҙе: яңы түңәрәктәр төҙөлә, предприятиеларҙа социал-демократик әҙәбиәт таратыла, политик әңгәмәләр үткәрелә һәм башҡалар. Йәшерен типографияла эшселәр араһында эшләү һәм түңәрәктәрҙә занятиелар үткәреү программаларының проекттары баҫылып сыға. 1903 йылдың ғинуарынан алып комитет «Уфимский листок» газетаһын сығара башлай. Бөтәһе 4 номер сыға. Ул баҫма хәрефтәр менән ҡулдан яҙылып, гектографта күбәйтелгән. Һәр номерҙа дүрттән унға тиклем бит булған. Был Уралда беренсе социал-демократик газета булды. Иң мөһим политик ваҡиғаларға шунда уҡ үҙенең ҡарашын белдереп, РСДРП-ның Өфө комитеты Һамар комитеты менән бергә йыл башында 600 данаға яҡын «19 февраль» тигән листовкалар сығарҙы, уларҙы ҡалаға һәм губернаға таратты. Россияла крепостной правоның бөтөрөлөү көнөн иҫкә алып, листовка массаларҙы помещиктарға һәм батша хөкүмәтенә ҡаршы көрәшкә саҡырҙы.

1903 йылдың 13 мартында Өфө губернаторы Богдановичтың приказы буйынса Златоуст эшселәренең тыныс сходкаһын аттырыу уңайы менән бигерәк күп листовкалар сығарыла. РСДРП-ның Өфө комитетының «Россия граждандары», «Златоуст ҡалаһында ҡан ҡойош», «Златоуст фажиғәһе (шаһит кеше хаты)» прокламациялары

---

[1] Переписка В. И. Ленина и редакции газеты «Искра» с социал-демократическими организациями в России. 1900—1903 гг., 3-сө том. М., 1970, 89-сы бит.

бөтә илгә таралды. Уларҙа социал-демократтар ғәйепһеҙ кешеләргә ҡул күтәргән батша палачтарын хурлыҡлап фаш иттеләр. «Был факттар үҙҙәре, — тип әйтелде «Златоуст ҡалаһында ҡан ҡойош» тигән листовкала, — самодержавиены тулыһынса ғәйепләүгә һәм ойошҡан пролетариаттың уға ҡаршы аңлы көрәшендә ҡатнашырға иң яҡшы саҡырыу булып хеҙмәт итә. Аңлы, ойошҡан политик көрәш кенә самодержавие ҡоролошон, уның ҡот осҡос күренештәре һәм хоҡуҡһыҙлығы менән бергә тамам бөтөрөүгә килтерәсәк» [1].

Өфө комитетының эшмәкәрлеге бик тиҙ арала ҡала рамкаларынан сыҡты, Көньяҡ Урал заводтарында уның йоғонтоһо көсәйҙе; Пермь, Екатеринбург, Һамар һәм башҡа ҡалаларҙың социал-демократик комитеттары һәм группалары менән бәйләнеш урыплаштырылды. Өфө «Искраны» һәм уның баҫмаларын бөтә Уралда таратыу пунктына әйләнде.

РСДРП-ның II съезын саҡырыу буйынса Ойоштороу комитеты 1903 йылдың апрелендә Өфө комитетын партия съезына вәкилдәр ебәреү хоҡуғына эйә булған комитет итеп теркәне. Өфө социал-демократтары партия Программаһын һәм Уставын алдылар һәм уларҙы тикшереүҙе ойошторҙолар. Съезға делегаттар итеп Г. М. Мишенев һәм В. Н. Крохмаль һайланды.

Г. М. Мишенев съезда ныҡлы искрасы, революцион партия өсөн әҙмә-әҙлекле көрәшсе булып сығыш яһаны. Ул бунд федерализмына ҡаршы, «Искраны» партияның үҙәк органы итеп таныу өсөн көрәште, Уставтың беренсе параграфын ленинса формулировкалауҙы яҡланы. Өфө комитетынан икенсе делегат Крохмаль меньшевиктар яғына сыҡты.

Мишенев, Өфөгә ҡайтҡас, съездың эше һәм РСДРП-ның большевиктарға һәм меньшевиктарға айырылыуы тураһында тулы доклад һөйләй. Үҙ вәкиленең отчетын тикшергәндән һуң, Өфө комитеты, һис бер икеләнеп тормайынса, ленинсы позицияны алды.

1903 йылдың аҙағында Өфөлә «Искраның» 52-се һәм 53-сө номерҙары алынды. Уларҙа меньшевиктар һәм уларға ҡушылған Плеханов партияның ленинсы ойоштороу принциптарын ғәйепләп сыҡтылар. Газета биттәрендә оппортунизмды яҡлау өфөләрҙә ҙур асыу тыуҙырҙы. Уралдағы башҡа революцион социал-демократтар менән бергә улар яңы «Искраға» ҡаршы сыҡтылар. 1904 йылдың башында РСДРП-ның Өфө, Урта Урал һәм Пермь комитеттары «Искра» редакцияһына ҙур хат ебәрҙеләр, унда яңы искрасыларҙың оппортунизмын ҡырҡа ғәйепләнеләр. «Лениндың китеүе менән, — тип әйтелде хатта, — «Искра»... бөтөнләй кирегә боролдо. Лениндың партияға уның эске дошмандарының — ревизионистарҙың, оппортунистарҙың һәм экономистарҙың ниндәй ҙур зарар килтереүе хаҡында яҙған ҡараһы кибеп тә өлгөрмәне, «Искрала» был эске дошмандарға ҡарата әҙәплелек, йомшаҡлыҡ, түҙемлелек күрһәтеү хаҡында яҙа ла

[1] Очерки истории Башкирской организации КПСС, 49-сы бит.

М. С. Кадомцев.



башланылар»[1]. В. И. Ленин Урал социал-демократтарының хатын юғары баһаланы, был хат, уның һүҙҙәре менән әйткәндә, «яңы» «Искраны» обывателдәр йомшаҡлығынан башҡа»[2] хурлыҡлы фашланы.

1904 йылдың июлендә Нижний Тагилда РСДРП-ның I Урал өлкә конференцияһы булды. Уның эшендә Өфө, Екатеринбург, Вятка һәм Нижний Тагил вәкилдәре ҡатнашты. Конференция РСДРП-ның Урал өлкә комитетын һайланы. Өфө социал-демократик ойошмаһы, ҡабул ителгән Уставҡа ярашлы рәүештә, Урал комитетының Өфө группаһына үҙгәртеп төҙөлдө. Конференцияның ҡарарҙары Өфөлә революцион эште көсәйтергә булышлыҡ итте.

1904 йылдың ғинуарында рус-япон һуғышы башланды. Ул халыҡ массаларына яңы бәлә-ҡазалар килтерҙе. Урындағы большевиктар, ленинсы тактик линия буйынса эш итеп, һуғыштың ғәҙел булмаған, талау характерын фашланылар. Промышленность предприятиеларында «Япон һуғышы кемгә кәрәк?», «Тимер юл эшселәренең ауыр хәле тураһында» тигән һәм башҡа прокламациялар таратылды[3]. РСДРП-ның Өфө группаһының «Бөтә граждандарға» тигән листовкаһы ҡалала ҙур резонанс тыуҙырҙы, унда батша ҡулынан конституция алырға өмөт итеүсе либералдарҙың килешеүселек политикаһы фаш ителде; листовка халыҡ массаларын «халыҡ восстаниеһы ярҙамында власты хаким батша ҡулынан тартып алыу» өсөн «самодержавие тәртибенә ҡаршы асыҡтан-асыҡ политик көрәш юлына» баҫырға саҡырҙы[4].

## § 3. Беренсе рус революцияһы йылдарында

1905 йылдың 9 ғинуарында Петербургта булған фажиғәле ваҡиғалар Россияла беренсе буржуаз-демократик революцияның башы булды. Был көндә үҙҙәренең кисектергеһеҙ ихтыяждары һәм талаптары тураһында петиция менән Ҡышҡы һарайға килгән эшселәрҙең

---

[1] Третий съезд РСДРП. Сборник документов и материалов. М., 1955, 138-се бит.

[2] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 46-сы том, 355-се бит.

[3] ЦГА БАССР, ф. 187, оп. 1, д. 187, л. 310, 311.

[4] Очерки истории Башкирской организации КПСС, 62, 63-сө биттәр.

тыныс демонстрацияһына ғәскәрҙәр һәм полиция батшаның бойороғо буйынса ут асты. Царизмдың ҡанлы яуыз эше бөтә урында көслө нәфрәт һәм асыу тыуҙырҙы. Бөтә илдә протест стачкалары башлана. Ғинуар айында ғына, тулы булмаған рәсми мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 444 мең эшсе забастовкала ҡатнаша. Был — бөтә уҙған ун йылға ҡарағанда ла күберәк һан.

Хеҙмәтсән Өфө лә ҡуҙғалды. Ҡала предприятиеларында алдынғы эшселәрҙең йыйылыштары үтте, унда Питер пролетариатының көрәше менән теләктәшлек белдереүсе һәм батша хөкүмәтен ҡолатырға саҡырыусы резолюциялар ҡабул ителде. 19 ғинуарҙа тимер юл мастерскойҙарында ике мең кеше ҡатнашлығында үткән митинг ҙур иҗтимағи яңғыраш тыуҙырҙы. Большевик И. А. Воронин эшселәргә царизмдың йыртҡыслыҡтары хаҡында һөйләне һәм уларҙы бөтә ил пролетарийҙарының көрәшенә ҡушылырға саҡырҙы. «Әгәр ҙә һеҙ намыҫлы эшселәр икәнһегеҙ, — тине ул, — Петербург эшселәрен яҡларға тейешһегеҙ. Бөтә Россия эшселәренең көрәшенә ҡушылығыҙ, бөтә аңлы эшселәрҙең союзына, Россия социал-демократик эшселәр партияһына ҡушылығыҙ, — тик ул ғына һеҙгә еңеүгә дөрөҫ юл күрһәтер!» [1] Бер нисә көндән һуң гектографта баҫылған уның телмәре ҡалаға таралды һәм хеҙмәтсәндәрҙә ҡайнар отклик тыуҙырҙы.

Үҫеп килеүсе хәрәкәтте етәкселектән мәхрүм итеү өсөн, властар большевиктарҙы эҙәрләй башлайҙар. РСДРП-ның Өфө группаһының 20-гә яҡын ағзаһы ҡулға алына. Ҙур юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, большевиктар революцион эште көсәйттеләр. Улар үҙҙәренең баҫмаларынан тыш РСДРП-ның Петербург, Урал, Һамар, Ҡазан һәм башҡа комитеттарының листовкаларын һәм прокламацияларын тараттылар. Группа татар телендә листовкалар сығарыуҙы ла ойошторҙо. Татар теленә тәржемә ителгән «Революция алдынан» тигән прокламация, шулай уҡ «Мосолмандарға!» тигән мөрәжәғәт таратылды. «Һеҙ ишеткәнһегеҙҙер, моғайын, — тип әйтелә унда, — 9 ғинуарҙа Петербургтың 140 мең эшсеһе забастовка иғлан итте һәм хөкүмәттән үҙҙәренең генә түгел, бәлки бөтә халыҡтың хәлен яҡшыртыуҙы талап итте... Уларҙың өлгөһөнә эйәреп, башҡа ҡалаларҙың: Мәскәү, Харьков, Ҡазан, Одесса, Киев, Рига, Саратов ҡалаларының да эшселәре, — бер һүҙ менән әйткәндә, Россияның бөтә ҡалаларының эшселәре забастовкаға күтәрелделәр һәм шундай уҡ талаптар ҡуйҙылар. Һеҙҙә, мосолман эшселәр, эш ташлағыҙ, рус эшселәренә ҡушылығыҙ, үҙегеҙ эшләгән урында шундай уҡ талаптар ҡуйығыҙ» [2].

Большевистик агитация йоғонтоһонда эшселәр стачка көрәшенә активыраҡ ҡушыла барҙылар. Тәүҙә забастовкалар экономик характерҙа булды. Ғинуар — февраль айҙарында тимер юл мастерскойҙа-

---

[1] Сборник документов и материалов о революционном движении 1905—1907 гг. в Башкирии. Өфө, 1956, 9-сы бит.

[2] Раимов Р. М. 1905 год в Башкирии (Революционное движение в 1905—1907 гг.). М.—Л., 1941, 86, 87-се биттәр.

А. Д. Цюрупа.



ры һәм депо эшселәре, эш хаҡын күтәреү, эш көнөн ҡыҫҡартыу, медицина хеҙмәтләндереүен яҡшыртыуҙы талап итеп, бер нисә тапҡыр сығыш яһанылар. 13 февралдә Костерин тирмәне эшселәре хужанан эш көнөн ҡыҫҡартыуҙы талап иттеләр, ә икенсе көндә эшкә сыҡманылар. Стачка тиҙҙән политик характер ала. Эш ташлаусылар араһында «Рус халҡына ниндәй политик азатлыҡ кәрәк» һәм «Революция алдынан» тигән листовкалар таратылды. Улар алдында Өфө большевиктары вәкиле Л. Х. Пеккер (Виктор Поляков) сығыш яһай. Ул, эшселәр йәшәп килгән дәүләт ҡоролошон ҡолатҡан хәлдә генә үҙҙәренең хәлен яҡшыртыуға өлгәшә алалар, ти. Уның «Бөтһөн самодержавие!» тигән һүҙҙәрен баш күтәреүселәр берҙәм ҡабатлайҙар. Властар стачканы ҡоралы көс менән баҫтырҙылар, ә эшселәрҙең етәкселәрен төрмәгә яптылар [1].

Эшселәрҙең стачкалары халыҡтың башҡа ҡатламдарына революцион йоғонто яһаны, уларҙы самодержавиеға ҡаршы көрәшкә ылыҡтырҙы. 12 ғинуарҙа Себер гостиницаһы залында Өфө интеллигенцияһы һәм уҡыусыларының митингыһы була. Ул Петербургтағы 9 ғинуар ваҡиғалары айҡанлы ойошторола. Митингыла 200-ҙән ашыу кеше ҡатнаша. Март айында Өфө тимер юл станцияһы хеҙмәткәрҙәре, апрелдә сауҙа предприятиелары приказчиктары үҙҙәренең талаптары менән сығыш яһайҙар. Уҡыу йорттарында сыуалыштар башлана.

Социал-демократтар-ленинсылар алдына башланып киткән революцияла партияның аныҡ һәм асыҡ марксистик тактикаһын эшләү бурысы килеп баҫты. Был бурысты РСДРП-ның 1905 йылдың апрелендә Лондонда үткән III съезы үтәне. Съезға В. И. Ленин етәкселек итте. Съезд эшендә Өфө большевиктары вәкиле В. Ю. Фридолин (Дашин) актив ҡатнашты. Хеҙмәтсән массалар араһында пропаганда һәм агитация тураһындағы мәсьәләне тикшергәндә ул делегаттарға Башҡортостандағы хәл хаҡында һөйләне: «Татар һәм башҡорт пролетариаты наҙан һәм ҡағылып-һуғылып йәшәй, шулай ҙа революцион йоғонтоға бирелә... Ҡазанда ҡулланыла торған һәм хәҙер инде Өфөлә лә башланған гектограф ярҙамында баҫып сығарыу һис тә етерлек түгел. Уралда татар һәм башҡорт һалдаттарының ни тиклем күп булыуын иғтибарға алырға кәрәк. Бынан тыш, башҡорттарҙың аграр хәрәкәте башлана; башҡорттар хәҙер элекке

[1] Очерки истории Башкирской организации КПСС, 65-се бит.

кеүек түтелдәр инде. Был инде хәҙер күсмә һәм ярым күсмә халыҡтарҙың ябай бер тупланған массаһы ғына түгел, был — азатлыҡ көрәшенә тәү тапҡыр күтәрелергә ынтылғанда уҡ үҙенең аграр буржуазияһы ҡаршылығына осраған аграр (ләкин өләшләтә промышленность) пролетариат. Шуға күрә татар телендә баҫып сығарыу эшен үҫтерергә кәрәк (башҡорттар татарса аңлай)» [1].

А. И. Свидерский.



Өфө большевиктары, май — июнь айҙарында булып үткән йыйылыштарҙа партияның III съезы ҡарарын тулыһынса хупланылар. 1905 йылдың 18 майында ҡала партия работниктары активы йыйылышында Фридолин докладына буйынса ҡабул ителгән резолюцияла былай тип билдәләнде: «Өфөнөң яуаплы работниктары группаһы, съезды партияның өсөнсө съезы тип таныш, унда эшләнгән резолюцияларға ҡушыла, партияның яңы Уставына буйһона...» [2]. Сентябрҙә Өфө комитеты *, «III съезд тарафынан һайланған партия Үҙәк Комитетына ҡушылыуын һәм уның политик етәкселегенә тулыһынса буйһоноуын» [3] раҫланы.

Өфө большевиктары, съезд директиваларын үтәй барып, губерна эшселәре һәм крәҫтиәндәре араһында ҙур агитация-пропаганда һәм ойоштороу эшен йәйелдереп ебәрҙеләр. Күп кенә урындарҙа яңы партия ойошмалары, группалары, түңәрәктәр төҙөлә. Большевиктар бөтә урында ла хеҙмәтсәндәрҙе батша хөкүмәтенә ҡаршы ҡоралды көрәшкә әҙерләнеләр. РСДРП-ның Өфө комитеты «Йәмғиәткә» тигән листовкала былай тип яҙҙы: «Яуызлыҡтың башы нимәлә икәнлеген миллиондарса кешеләр аңланылар, һәм миллиондарса ҡулдар үлемесле көрәшкә күтәрелеү өсөн ҡоралға тотондолар... Бөтә халыҡ восстаниеһы көнө яҡын!.. Ҡоралға, граждандар, ҡоралға!..» [4]

1905 йылдың яҙы һәм йәйе илдә революцияның артабан көсәйеүе менән билдәләнде. Өфөлә лә революцион көрәш уты көсәйҙе. 1 майҙа 300-ҙән ашыу эшсе, хеҙмәткәр һәм уҡыусы РСДРП комитетының

---

[1] Третий съезд РСДРП. Протоколы. М., 1959, 397-се бит.

[2] Третий съезд РСДРП. Сборник документов и материалов, 464-се бит.

* Өфөлә РСДРП комитеты 1905 йылдың мартында яңынан төҙөлдө. Ул Өфө губернаһының, шулай уҡ Ырымбур губернаһы Верхне-Уральск өйәҙенең социал-демократик ойошмаларын һәм группаларын берләштерҙе.

[3] Третий съезд РСДРП. Сборник документов и материалов, 475-се бит.

[4] Сборник документов и материалов о революционном движении 1905—1907 гг. в Башкирии, 13-сө бит.

Л. И. Бойкова.



саҡырыуы буйынса «Шайтан ҡаласығы» районында митинг үткәрҙеләр. Унда телмәрҙәр һөйләнде, прокламациялар таратылды. Митингынан һуң унда ҡатнашыусылар, ҡыҙыл флагтар күтәреп, революцион йырҙар йырлап, ҡалаға табан йүнәлделәр. Полиция һәм һалдаттар демонстранттарҙың юлын ҡартәләнеләр. Булып үткән бәрелеш ваҡытында демонстрацияла ҡатнашыусы 51 кеше ҡулға алынды.

Май—июнь айҙарында РСДРП-ның Өфө комитеты ҡала янында аҙна һайын массовкалар ойошторҙо, уларҙа 30-ҙан алып 200-гә тиклем кеше ҡатнашты. Массовкаларҙа илдең политик тормошондағы ваҡиғалар тикшерелде, алдағы стачка өсөн эшселәрҙең талаптары әҙерләнде. Июнь айында комитет «Йәшәһен дөйөм забастовка!» тигән листовка сығарҙы, унда Өфө эшселәрен дөйөм забастовкаға саҡырҙы. Полицияның активистарҙы күпләп ҡулға алыуына ҡарамаҫтан, партия ойошмаһы көстәрен һаҡлап ҡала алды һәм билдәләнгән пландарын тормошҡа ашырыу сараларын күрҙе.

5 июлдә иртәнге сәғәт 8-ҙә тимер юл мастерскойҙарының һәм депоның 2200-гә яҡын эшсеһе, 8 сәғәтлек эш көнөн урынлаштырыуҙы, эш сәғәттәренән тыш эшләтеүҙе бөтөрөүҙе, медицина хеҙмәтләндереүен яҡшыртыуҙы, ҡулға алынған иптәштәрен һис кисекмәҫтән азат итеүҙе, йыйылыштар үткәреү иркен, забастовкала ҡатнашыусыларҙың тейелмәҫлеген талап итеп, эш ташланы. Киләһе ике көндә уларға Фролов, Гутман заводтарының, күп кенә таҡта ярыу заводтары һәм башҡа предприятиеларҙың эшселәре ҡушылды. Забастовка дөйөм ҡала забастовкаһына әйләнде. Тимер юлсылар, үҙ талаптарын өлөшләтә ҡәнәғәтләндереүгә өлгәшкәндән һуң, эшкә сыҡтылар.

1905 йылдың көҙөнә революцион хәрәкәт бөтә илде солғап алды. Мәскәү транспорт узелы тимер юлсыларының 7 октябрҙә башланған стачкаһы тиҙҙән баш ҡаланың башҡа предприятиеларына күсте. Стачка тиҙ генә бөтә промышленность үҙәктәрен солғап алды һәм Бөтә Россия стачкаһына әйләнде. Ул 2 миллиондан күберәк кешене актив көрәшкә күтәрҙе. Улар «Бөтһөн батша самодержавиеһы!», «Йәшәһен демократик республика!» тигән лозунгылар менән сығыш яһанылар.

Мәскәүҙәр менән теләктәшлек йөҙөнән 7 октябрҙә Өфө тимер юл мастерскойҙарының эшселәре эш ташланы. Тиҙҙән уларға депо һәм ҡаланың башҡа күп кенә предприятиелары эшселәре, телеграфистар, һөнәрселәр, магазин приказчиктары, банк, губерна земствоһы һәм ҡала управаһы хеҙмәткәрҙәре, уҡытыусылар һәм уҡыусылар ҡушылды. Тимер юлдарҙа тауар һәм пас-

сажир поездарының хәрәкәте тукталды, сауҙа-промышленность тормошо туктап калды, почта, телеграф, магазиндар, укыу йорттары ябылды.

О. В. Аптекман.



Бөтә Россия политик стачкаһы самодержавиеға бик көслө удар яһаны, уны йәшәп килгән королошто һаклап калыу өсөн ташламалар яһарға мәжбүр итте. Кото алынған батша Николай II 17 октябрҙә манифест иғлан итте, унда, ике йөҙлөләнеп, халыкка «шәхестең ысын-ысындан тейелмәҫлеге, выждан, һүҙ ирке, законлар сығарыу думаһын сакырыу башланғыстарында граждандар азатлығының какшамаҫ нигеҙҙәрен» вәғәҙә итте. В. И. Ленин самодержавиеның ташламаларында революцияның «бөтә азатлык әше яҙмыштарын һис тә әле хәл итмәүсе» [1] тәүге еңеүен генә күрҙе. Большевиктар, батша манифесы царизмдың көстәрҙе кайтанан туплау һәм революцияға һөжүм яһау өсөн хәйлә короуы, вакытлыса сигенеүе булды, тип иҫкәрттеләр.

Өфөләр манифестың йөкмәткеһе хакында 18 октябрҙә ирән белделәр. РСДРП-ның Өфө комитеты ашығыс рәүештә «Артабан ни эшләргә?» тигән листовка әҙерләп сығарҙы. «Хөкүмәт көс алдында сигенде, — тип әйтелде унда, — хәҙер унда яулап алынғандарҙы кире тартып алыу теләге тыумаҫлык көс тупларға кәрәк!

Хәҙер инде еңел акыллылык, тиҙ ышаныу һәм бер катлылык — енәйәт.

Нимә эшләргә һуң? Коралланырға» [2].

Иртән иртүк кала халкы, шатланып, урамдарға сыкты һәм кала үҙәгенә ағылды. Пролетар окраиналарҙан эшселәрҙең ҙур-ҙур төркөмдәре кыҙыл байрактар күтәреп һәм революцион йырҙар йырлап килделәр. Губернатор йорто алдында митинг була, унда Өфө большевиктары етәкселәренән береһе А. И. Свидерский көслө телмәр менән сығыш яһай. Демонстранттар губернаторҙы политик тоткондарҙы төрмәнән сығарыу хакында бойорок бирергә мәжбүр итәләр.

19 октябрҙә 3 меңгә якын эшсе, укыусы йәштәр һәм хеҙмәтсән интеллигенция вәкилдәре Ушаков паркында митингыға йыйыла. Митингыла сығыш яһаусы большевиктар массаларҙы самодержавиеға каршы көрәште көсәйтергә, эшселәр милицияһын төҙөр-

---

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 12-се том, 27-се бит.

[2] Сборник документов и материалов о революционном движении 1905—1907 гг. в Башкирии, 66-сы бит.

гә, тәртипте һаҡлау эшен үҙ ҡулдарына алырға саҡырҙылар. Шунда уҡ «восстание өсөн» ҡорал һатып алырға аҡса йыйыу буйынса уполномоченный һайлана. Демонстранттар губернаторҙы саҡыртып килтерәләр һәм унан революционерҙарҙың хәүефһеҙлегенә гарантия һәм хеҙмәтсәндәргә демонстрациялар яһарға рөхсәт биреүен талап итәләр. Ҡото алынған губернатор «бөтәһен дә вәғәҙә итә» һәм халыҡ алдында баш эйә.

18—20 октябрҙә ҡаланың бөтә яҡтарында асыҡ һауала һәм йәмәғәт биналарында көн кеше ҡатнашҡан митингылар була. Хеҙмәтсән массалар үҙҙәрен хужа итеп тоялар. Был көндәрҙә урындағы властар губернаторҙан алып рядовой полицейскийға тиклем ҡаушап ҡала. Полиция урамға сығырға баҙнат итмәй.

Революцион массаларҙы ысын ойоштороусылар большевиктар булды. Большевиктар партияһы Үҙәк Комитеты тарафынан Петербургта сығарыла торған легаль «Новая жизнь» газетаһы былай тип яҙҙы: «Өфөлә «Октябрь көндәренең» характерлы һыҙаттарынан береһе шул: партияның урындағы комитетының йоғонтоһо үҫте. Социал-демократтар бөтә урында: митингыларҙа, Думала һәм башҡа урындарҙа сығыш яһанылар. Уларҙың фекере менән иҫәпләшеп кенә ҡалманылар, бәлки ҡала идаралығы вәкилдәре, шулай уҡ губернатор ҙа ярҙам һорап даими рәүештә уларға мөрәжәғәт иттеләр» [1].

Буржуазия батша ташламаһын, Конституция эраһының башланыуы тип иҫәпләп, шатланып ҡабул итте. Өфө ҡалаһының сауҙа-промышленность донъяһы хужалары октябрь көндәрендә үҙҙәренең йорттарын, банкыларын һәм конторaларын өс төҫтәге батша флагтары менән биҙәнеләр. Урындағы либералдар үҙҙәренең йыйылыштарында резолюциялар ҡабул иттеләр, унда «бөйөк азатлыҡ манифесы бүләк иткән» өсөн «хөрмәтле монархҡа» рәхмәт белдерҙеләр.

17 октябрь манифесы баҫылып сығыу менән үк, хөкүмәт полиция тарафынан төҙөлгән ҡарагоруһсы-монархия ойошмалары ярҙамында революционерҙарҙы, алдынғы эшселәрҙе массовый рәүештә ҡыра башлай, еврейҙарға погромдар ойоштора, көс ҡулланыу һәм талау ярҙамында хеҙмәтсәндәрҙе мораль яҡтан тарҡатырға, ҡурҡытырға тырыша. 23 октябрҙә полиция һәм руханиҙар тәреләр, хоругвиҙар, Николай II һүрәттәрен күтәреп һәм «Боже, царя храниҙы» йырлап, «патриотик» манифестация үткәрҙеләр. Манифестация ваҡытында ҡарагоруһсыларҙың береһе хоругви һабы менән иҫкәрмәҫтән батшаның һүрәтен тишә. Сығырынан сыҡҡан фанатик кешеләр төркөмө ғәйеплене шунда уҡ өҙгөләп ташлай. Ҡарагоруһсылар өйөрө шашып ҡоторона, һөҙөмтәлә өс кеше һәләк була. Был көндө лавочниктар, дворниктар, босяктар, ваҡ полиция агенттары, енәйәтселәр бандаһы прогрессив ҡараштары менән билдәле булған врач Волод-

[1] Сборник документов и материалов о революционном движении 1905—1907 гг. в Башкирии, 69, 70-се биттәр.

кевичтың йортон, башҡа еврейҙарҙың квартираларын ҡыйраттылар; күп кенә магазиндар һәм лавкалар таланды.

К. К. Газенбуш.



Өфөнөң революцион пролетариаты большевиктар етәкселегендә погромсыларға ҡаршы көслә көрәш алып барҙы. Митингыларҙы, демонстрацияларҙы, партия работниктарын, забастовкалар етәкселәрен, агитаторҙарҙы һаҡлау өсөн, РСДРП-ның Өфө комитеты эшселәр милицияһын ойошторҙо; уның начальнигы итеп тимер юл мастерскойҙары эшсеһе И. Л. Мавринский билдәләнде. Комитет погромдарҙа ҡатнашыусыларға «Наҙан кешеләргә!» тигән листовка менән мөрәжәғәт итте, унда уларҙы аҡылға килергә саҡырҙы. «Тыңлағыҙсы, наҙан кешеләр! — тип әйтелде унда.— Туҡмарға һәм таларға барыр алдынан туҡтағыҙ һәм яҡшылап уйлап ҡарағыҙ. Барыһынан элек, ҡарағыҙ, һеҙҙе енәйәт эшенә кем ебәрә, кем ҡоторта? Һеҙ полицейский һәм жандарм формаһын, священник рясаһын күрерһегеҙ, ҙур ҡорһаҡлы подрядсыны күрерһегеҙ... Уйлап ҡарағыҙ, һеҙ нимә эшләйһегеҙ? Яуыз эштәрегеҙгә алла исемен ҡушып, уны мәсхәрәләйһегеҙ, һеҙ рус халҡын байҙарға һәм чиновниктарға һатаһығыҙ, һеҙ Россияның иң яҡшы улдарын һәләк итәһегеҙ» [1].

Ҡалала ноябрь айында хәл тағы ла киҫкенләшә төшә; забастовка хәрәкәте көсәйҙе, уның башында тимер юл мастерскойҙары эшселәре барҙы.

Октябрь айында Красноярскиҙа ҡарагоруһсылар тарафынан үлтерелгән Өфө революционеркаһы Емельянованы ерләү хеҙмәтсән массаларҙы мобилизациялауҙа ҙур әһәмиәткә эйә булды. Уның мәйете һалынған табутты Өфөгә алып ҡайталар. Партияның Өфө комитеты үлтерелгән иптәшен ерләүҙе киң политик демонстрацияға әйләндерергә ҡарар итте. 8 ноябрҙә үткәрелгән траур процессияһында күп меңдәрсә ҡала кешеләре ҡатнаша. Эшселәр ҡыҙыл байраҡтар һәм венoктар күтәреп баралар, оркестр тауыштары революцион йырҙар менән алмашынып тора. «Халыҡ төркөмө ҡапыл, борсолоп, туҡтап ҡалды,— тип яҙа үҙенең иҫтәлектәрендә А. Н. Соколов-Новоселов,— мылтыҡтарын алға әйеп тотҡан һалдаттар сафы урамды кәртәләне. Халыҡ төркөмө өҫтөндә: «Дружинниктар, алға!» — тигән көслө команда яңғыраны. Халыҡ төркөмө буйлап тулҡын үткәндәй булды, һәм һалдаттар алдына боевиктар килеп баҫты. Якутов һалдат-

[1] Сборник документов и материалов о революционном движении 1905—1907 гг. в Башкирии, 71—72-се биттәр.

тарға телмәр менән мөрәжәғәт итте. Һалдаттар, ике яҡҡа айырылып, юл бирҙеләр,— демонстрация, «Интернационал» йырлап, артабан хәрәкәт итте... Ул көндө демонстранттарҙан бер кем дә ҡулға алынманы» [1].

9 ноябрҙә тимер юл мастерскойҙары бинаһында 700-гә яҡын эшсе асыҡтан-асыҡ йыйылыш үткәрҙе. Улар элек эштән ҡыуылған иптәштәренең, шул иҫәптән И. С. Якутовтың, И. Л. Мавринскийҙың һәм башҡаларҙың, яңынан эшкә алыныуына өлгәштеләр. Мастерской эшселәре 16 ноябрҙә бынан бер нисә көн элек төҙөлгән стачка комитетының тәҡдиме буйынса үҙҙәре 8 сәғәтлек эш көнө урынлаштыралар. Уларҙың өлгөһөнә депо ла ҡушыла. 26 ноябрҙә стачка комитеты мастерскойҙар һәм депо эшселәренең берлектәге йыйылышын үткәрә. Унда Һамар—Златоуст тимер юлы начальнигына 8 сәғәтлек эш көнөн законлаштырыу, эш хаҡын арттырыу, стачка комитетының хоҡуҡтарын таныу, уның ағзаларына «мастеровойҙарҙың һәм эшселәрҙең көпкүрешен яҡшыртыуға ҡағылышлы ултырыштарҙа үткәргән сәғәттәр өсөн» эш хаҡы түләү талаптары эшләнде. Йыйылыш, был талаптар ҡәнәғәтләндерелгәнгә саҡлы, эшкә бойкот яһарға ҡарар итте [2].

Илдәге революцион хәрәкәттең бөтә барышы ҡораллы бәрелештең яҡынайыуы хаҡында һөйләне. Өфө комитеты октябрь аҙағынан алып восстаниены ғәмәлдә әҙерләй башланы. Эшселәр милицияһы боевой дружинаға үҙгәртеп ҡоролдо, ул баш күтәреүселәрҙең ядроһына әйләнергә тейеш ине. Дружина составына партияның 16-нан 35-кә тиклем йәштәге һыналған, революция эшенә йәне-тәне менән бирелгән, үҙҙәрен тулыһынса хәрби эшкә арнаған йәш ағзалары (шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙҙар) ингән. Дружинаға инеүсе командирҙарҙың приказдарын һәм бойороҡтарын бер һүҙһеҙ үтәргә ант биргән. Хыянат итеү, боевой операциялар ваҡытында приказды үтәмәү, партия серен фашлау иптәштәр суды менән атып үлтереүгә саҡлы хөкөм ителгән [3].

Дружина ун кешенән торған отрядтарға бүленә, улар специальность буйынса уҡсыларға, бомба ташлаусыларға, саперҙарға, разведчиктарға, ҡыҙыл тәре отрядына формалаша. Һәр отряд башында десятский торған. Отряд үҙ сиратында бишәр кешегә бүленеп, уға пяточник етәкселек иткән. Ун кешенән торған отрядтағы кеүек үк, бында ла отрядтың исеменә ҡарағанда байтаҡ тапҡырҙарға күбе-

---

[1] Соколов-Новоселов Александр. Ҡоралды подполье. Өфө, 1958, 27-се бит.

[2] 25 лет первой революции. (ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитетының 1905 йылғы революцияның 25 йыллыҡ юбилейына арналған Истпарт йыйынтығы.) Өфө, 1930. 40, 41-се биттәр.

[3] Военные организации российского пролетариата и опыт его вооруженной борьбы. 1903—1917. М., 1974, 74, 75-се биттәр; Кривов Т. С. В ленинском строю. М., 1973, 32-се бит.

рәк кеше инә алған. Дружинала бөтәһе 400-гә яҡын кеше иҫәпләнгән.

Г. М. Мишенев.



Партия комитеты дружинаға совет аша етәкселек иткән. Советҡа тысяцкий — командующий, айырым отрядтарҙың командирҙары һәм боевой ойошма эшмәкәрлегенә партия контролен тура-нан-тура ғәмәлгә ашырыусы партком вәкиле ингән. Дружинаның башында инструктор — штаб начальнигы торған штабы була. Тысяцкий итеп большевик Иван Кадомцев һайлана, уның бер туған ағаһы, офицер, рус-япон һуғышында ҡатнашҡан Эразм инструктор була, советта комитет вәкиле итеп Николай Накоряков[1] билдәләнә. Бер туған Кадомцевтарҙың иң кесеһе — ун туғыҙ йәшлек Михаил да боевой ойошмала күренекле роль уйнаған.

Дружинниктарҙы ҡорал менән тәьмин итеү бик ауыр эш була. Атыу ҡоралдары, башлыса револьверҙар, эшселәрҙең һәм революцион ҡараштағы интеллигенцияның ярҙам аҡсаһына сит илдәрҙән һатып алына, полиция һәм армия чиндарын ҡоралһыҙландырыу, складтарға, арсеналдарға ҡоралды һөжүм итеү юлы менән баҫып алына. Предприятиеларҙа һалҡын ҡорал әҙерләү эше бик ҡыҙыу алып барыла, эшселәр ҡорос хәнйәрҙәр, ҡылыстар, һөңгөләр яһайҙар. Ҡорал етмәүен нисек тә ҡаплау өсөн, партия комитеты бомбалар әҙерләү буйынса (бомбалар дружинниктар көрәшенең иң дәһшәтле техник средстволарынан береһе була) мастерской һәм мәктәп ойоштора. Ул Приют урамы (хәҙерге Киров урамы) менән Һалдат тыҡрығы (хәҙерге Каховский урамы) мөйөшөндә Е. Ф. Савченко йортоноң икенсе ҡатында конспиратив квартирала урынлашҡан була. Мөйөштәге ҙур бүлмәнән, кухня һәм соландан торған квартираның тәҙрәләре ташландыҡ йорт алдына ҡараған. Йәй көндәрендә унда бейек булып алабута һәм кесерткән үҫкән. Мастерскойға И. М. Мызгин («Петрусь») етәкселек иткән. Бомбалар әҙерләү менән Владимир Густомесов («Володя Белый»), Владимир Алексеев («Черный»), Тимофей Шаширин, Петр Подоксенов, Иван Павлов («Ваня Беленький») һәм башҡалар шөғөлләнгән. Мастерской Минйәр, Сим, Златоуст, Силәбе, Курган, Пермь, Ырымбур, Һамар һәм башҡа ҡалаларҙың дружиналарын бомбалар менән тәьмин итеп торған.

---

[1] Мызгин Иван. Ни бог, ни царь и не герой. Воспоминания уральского подпольщика. М., 1958, 25-се бит.

В. Ю. Фридолин.



Партия ойошмаһы дружинниктарҙы хәрби эшкә өйрәтеүгә күп иғтибар бүлә. Уларҙы атыу эшенә, баррикада һәм урам һуғыштары тактикаһына өйрәтәләр. Улар менән системалы рәүештә хәрби һәм политик уҡыуҙар үткәрелә. 1905 йылғы революцияла актив ҡатнашыусы, Өфө боевой дружинаһы ағзаһы Т. С. Кривов, байтаҡ йылдар үткәс, былай тип яҙҙы: «Барыһынан да күберәк беҙ атыу буйынса күнегеүҙәр үткәрҙек, партизандар һуғышын алып барыу тактикаһын өйрәндек. Ул саҡта беҙҙең төп дошманыбыҙ батшаның регуляр армияһы ине бит. Беҙ көслө дошманды асыҡ һуғышта еңә алыуға иҫәп тота алмай инек, әлбиттә. Һуғыштың партизандар методтарын ғына ҡулланып була ине. Беҙ урам һуғыштары тактикаһын яҡшы белергә, урманда компас буйынса ориентирлаша алырға, атлы полицияның һөжүмдәрен кире ҡаға белергә тейеш инек...

Боевой әҙерлек программаһына шулай уҡ Өфө һәм уның тирәяғы планын өйрәнеү ҙә инде. Беҙҙән һәр бер тыҡрыҡты, һәр бер үтеп йөрөмәле йорт алдын, полиция участкалары, хәрби казармалар, төрмәләр, телеграф һәм башҡа ҡаҙна учреждениеларының ҡайҙа урынлашыуын яҡшы белеү, офицерҙарҙы, полиция начальнигын, жандармдарҙы, шымсыларҙы танып белеү талап ителде» [1].

Декабрь башында РСДРП комитетының И. С. Якутов квартираһында үткән киңәйтелгән ултырышында ҡораллы восстаниеға әҙерлек мәсьәләһе тикшерелде. Ултырыш Өфөлә эшселәр депутаттары Советын ойошторорға ҡарар итте. Ҡала предприятиеларына яуаплы ойоштороусылар һәм агитаторҙар ебәрелде [2].

Батшаға ҡаршы ҡораллы көрәшкә беренсе булып Мәскәү пролетариаты күтәрелде. 7 декабрҙә Мәскәүҙә дөйөм политик забастовка башланды, һуңынан ул ҡораллы восстаниеға әйләнде. Мәскәү эшселәренең сығышын башҡа ҡалаларҙың хеҙмәтсәндәре яҡлап сыҡты. Өфө пролетарийҙары ла ҡушылды. 7 декабрҙә көндөҙгө сәғәт өстә тимер юл мастерскойҙары һәм депо эшселәре гудок сигналы буйынса эште туҡтаттылар һәм митингыға йүнәлделәр. Уларға Гутман заводы эшселәре, ир балалар гимназияһы уҡыусылары, хеҙмәткәрҙәр ҡушылды.

---

[1] Кривов Т. С. В ленинском строю. 34, 35-се биттәр.
[2] Очерки истории Башкирской организации КПСС, 80-се бит.

Забастовка барышында стачка комитеты базаһында эшселәр депутаттары Советы ойошторолдо. Уның составына 35 кеше инде. Өфө ҡала Советының беренсе председателе итеп эшселәр тимер юл мастерскойҙары слесары большевик Иван Степанович Якутовты һайланылар.

Алдап эшләнгән планға ярашлы рәүештә, Совет тимер юл узелын үҙ контроленә алырға ҡарар итте. Дружинниктар Өфө станцияһында телеграфҡа, кассаға, станция һәм депо начальнигы контораһына пост ар ҡуйҙылар. Эшселәр депутаттарының Һамар Советы менән бәйләнеш урынлаштырылды.

Совет 9 декабрҙә тимер юл мастерскойҙарының йыйыу цехында ҡоралды восстание тураһындағы мәсьәләне тикшереү өсөн дөйөм ҡала митингыһын йыйҙы. Митингыны И. С. Якутов асты. Ләкин митинг оҙаҡ дауам итмәне. Полицияның, казактар һәм һалдаттарҙың мастерской янына килтерелгән ҙур нарядтары унда йыйылған халыҡты таратырға маташтылар. Якутов митингыла ҡатнашыусыларға: «Ҡораллы отпор бирергә тигән фекер менән килешәһегеҙме?» — тигән һорау менән мөрәжәғәт иткәндә, карателдәрҙең аяҡ тауыштары ишетелә ине. Якутовтың һорауына митингыла ҡатнашыусылар бер тауыштан: «Ризабыҙ, ризабыҙ!» — тип яуап бирҙеләр. Дружинниктар менән бергә эшселәр мастерской ҡапҡаһы алдында позицияға баҫтылар. Совет председателе һалдаттарға һәм казактарға офицерҙарҙы тыңламаҫҡа һәм ҡан ҡойоуға юл ҡуймаҫ өсөн сигенергә саҡырып мөрәжәғәт итте. Ләкин улар командирҙарының ҡыуыуына буйһоноп, тауҙан мастерской будкаһына табан төшөүҙәрен дауам иттеләр. Икенсе тапҡыр иҫкәртеү яһағандан һуң, дружинниктар ҡулдан эшләнгән бер нисә бомба ташланылар һәм револьверҙарҙан ут астылар. Алыш башланды. Ләкин бик тиҙҙән көстәрҙең тигеҙ булмауы асыҡланды. Эшселәр насар ҡоралланғайнылар, һуғыш припастары етмәне. Өҫтәүенә, уларҙың властарға ҡаршы ҡораллы көрәш тәжрибәһе юҡ ине.

Килеп тыуған хәлде тикшереп, Совет ҡаршылыҡ күрһәтеүҙе туҡтатырға һәм ойошҡан рәүештә сигенергә ҡарар итте. Митингыла ҡатнашыусыларҙың бер өлөшө, шул иҫәптән ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар, төрлө юлдар менән ҡалаға киттеләр. Күп кеше Ағиҙел аръяғына сыҡты.

Өфө эшселәренең ҡораллы сығышы еңелде. Массовый ҡулға алыуҙар башланды. Тимер юл мастерскойҙары ябылды, бөтә эшселәр эштән сығарылды. «Өфө республикаһы президенты» И. С. Якутов, революцион массаларҙың күп кенә башҡа етәкселәре ҡаланан китергә мәжбүр булды.

Декабрь ваҡиғалары Өфөлә һәм Көньяҡ Уралда революцияның иң юғары нөктәһе булды. Мәскәүҙә һәм башҡа ҡалаларҙа ла пролетариаттың батыр ҡораллы һөжүме уңышлы булманы. Революция тәүге асыҡ алышта уңышһыҙлыҡҡа осраны. Ләкин революция көстәре ҡыйратылманы. Улар үҙҙәрен тәртипкә килтереү һәм яңы ҡыйыу

Һамар тимер юлсыларының стачка комитеты делегацияһы менән 1905 йылдың 13 октябрендә Өфөгә килгән «пролетар поезд».



алышҡа әҙерләнеү өсөн сигенделәр генә. Большевиктар етәкселегендә Өфө пролетариаты ла самодержавиеға ҡаршы яңы көрәшкә әҙерләнде.

РСДРП-ның Өфө комитеты һығылмалыраҡ һәм тәьҫирлерәк ойоштороу һәм агитация-пропаганда эше үткәрә башланы. Комитеттың нәшриәт эше айырыуса киң ҡолас алды. Уның тарафынан 1905 йылдың октябрендә ойошторолған йәшерен типография Уралдың байтаҡ ҡалаларын, завод поселоктарын һәм ауылдарын хеҙмәтләндерҙе. Прокламациялар һәм листовкалар меңдәрсә данала сығарылды. Уларҙа большевиктар эшселәрҙе, крәҫтиәндәрҙе һәм һалдаттарҙы ҡоралды восстаниеға әҙерләнергә саҡырҙылар. Иҙелеп йәшәүсе милләттәр араһында революцион пропаганда көсәйҙе. РСДРП комитеты составына ингән күренекле татар большевигы Хөсәйен Ямашев Өфөгә килгәндән һуң, комитет эргәһендәге татар-башҡорт группаһының эшмәкәрлеге активлашты. Группа татар телендә листовкалар һәм прокламациялар сығарҙы.

1906 йылдың октябренән башлап йәшерен большевистик «Уфимский рабочий» газетаһының — РСДРП-ның Өфө комитетының боевой органы сығарылыуы крайҙың революцион хәрәкәтендә күренекле ваҡиға булды. Газета ике йылдан күберәк ваҡыт регуляр сығарылды. Уның тиражы 5 мең данаға етте. Ул Өфө, Ырымбур һәм Пермь губерналары эшселәре һәм крәҫтиәндәре араһында таратылды.

Өфө комитеты типографияһында шулай уҡ РСДРП-ның Урал өлкә комитеты баҫмалары — «Солдатская газета» менән «Крестьянская газета» ла баҫылды. Типография сотрудниктары бер ниндәй уңышһыҙлыҡҡа осрамайынса эшләп, ике йыл эсендә (1905 йылдың 15 октябренән алып 1907 йылдың 15 октябренә саҡлы) бөтәһе 543 700 дана газета, брошюра, листовка һәм прокламация баҫып сығарҙылар [1].

Революцион пропаганда менән бер рәттән Өфө большевиктарының хәрби-боевой эше киңәйтелде. Мәҫәлән, дружинниктар хөкүмәт типографияларына һәм шәхси типографияларға һөжүм яһап, йәшерен типография ҙур мохтажлыҡ кисергән күп һанда хәрефтәр алып сыҡтылар. Өфө боевиктарының ҙур суммала ҡаҙна аҡсаһын экспроприациялауы айырыуса күренекле ваҡиға булды. И. Кадомцев етәкселегендәге боевиктар группаһы 1906 йылдың авгусында Воронки разъезы янында поезға һөжүм итеп, почта вагонынан 15 мең һум аҡсаны ҡулға төшөрҙө [2]. И. Кадомцев боевиктары тарафынан ентекләп әҙерләнгән һәм 21 сентябрҙә Дим станцияһы янында үткәрелгән экспроприация ҡыйыулығы һәм тәүәккәллеге менән һоҡланғыс операция булды. Ул көндө дружинниктар көслө һаҡ аҫтында Өфөгә аҡса алып килеүсе Һамар — Златоуст тимер юлы кассирҙарынан 163 мең һум аҡса конфискациялайҙар [3]. Революция ихтыяждары өсөн ошондай ҙур сумманың тартып алыныуы батша охранкаһын бик ныҡ борсой. Боевиктарҙы тотоуға политик сыск һәм полицияның иң яҡшы көстәре йүнәлтелә, ләкин улар бер кемде лә ҡулға ала алмайҙар. Баҫып алынған аҡса ҡорал һатып алыуға, РСДРП-ның хәрби-боевой ойошмаларының Таммерфорс конференцияһын, партияның V (Лондон) съезын саҡырыуға, «Уфимский рабочий», «Уральский рабочий», «Урал» (татар телендә), «Солдатская газета» газеталарын сығарыуға, инструкторҙар мәктәптәрен, шул иҫәптән Киевта һәм Львовта бомба ташлаусылар мәктәптәрен ойоштороуға һәм башҡа маҡсаттарға китте.

Революцияның төшөнкөлөгө шарттарында большевиктар йәшерен партия ойошмаларын һаҡлау һәм нығытыу өсөн көрәштеләр. Шул уҡ ваҡытта эшселәр синыфы һәм хеҙмәтсән массалар менән бәйләнеште киңәйтеү, уларҙы яңы революцияға әҙерләү өсөн улар бөтә легаль мөмкинлектәрҙе: профсоюздарҙы, кооперативтарҙы, клубтарҙы һәм башҡа легаль ойошмаларҙы киңерәк файҙаланырға тырыштылар. Большевиктар Думаның трибунаһын революцион агитация алып барыу, самодержавиеның халыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән политикаһын һәм буржуазияның хыянат итеүен фашлау өсөн файҙаланыу маҡсатында II Дәүләт думаһында ҡатнашырға ҡарар иттеләр. РСДРП-ның Өфө комитеты һайлау кампанияһы ваҡытында,

[1] Раимов Р. М. 1905 год в Башкирии, 188-се бит.

[2] Соколов-Новосёлов Александр. Вооруженное подполье, 42-се бит.

[3] Шунда уҡ, 61-се бит.

И. Л. Мавринский.



1906 йыл аҙағында — 1907 йыл башында, массаларҙы ойоштороу һәм уларға политик белем биреү буйынса ҙур эш башлап ебәрҙе. Рус һәм татар телдәрендә агитацион әҙәбиәт баҫып сығарыу ойошторолдо. Халыҡ һәм һалдаттар араһында Өфө большевиктарының «9 ғинуар», «Эшсе һайлаусыларға», «Һалдаттар!» тигән һәм башҡа листовкалары таратылды.

Һайлау кампанияһына практик етәкселек итеү өсөн, Өфө социал-демократтары һайлау комиссияһы төҙөнөләр. Улар һайлау алды йыйылыштарын ойоштороуҙа һәм үткәреүҙә лә бик ныҡ ҡатнаштылар. Уларҙың тырышлығы бушҡа китмәне. Эшселәр курияһынан II Дәүләт думаһына депутат итеп Иөрүҙән заводы эшсеһе, большевик Иван Давыдович Серебряков һайланды.

1907 йылдың 15 февралендә пролетар Өфө үҙенең депутатын Петербургка оҙатты. Вокзал перронында 700-гә яҡын кеше йыйылды. Оҙатыу ваҡытында сығып һөйләүселәрҙең береһе унда булған кешеләрҙең настроениеһын, уларҙың Думаға мөнәсәбәтен бик яҡшы әйтеп бирҙе. «Һине, Серебряков иптәш, һый мәжлесенә, байрамға түгел, ә көрәшкә оҙатабыҙ. Быны хәтереңдә тот! Беҙ хоҡуҡһыҙбыҙ, беҙҙе полицияның тупаҫ, ҡанлы тырнағы баҫа. Ул хатта һине оҙатырға, һинең менән хушлашырға ирек бирмәй. Шуны хәтереңдә тот, һин Думала хөкүмәттең баш-баштаҡлығы менән бөтә ихтыяр көсөңдө һалып көрәшергә тейешһең. Беҙгә ҡара: беҙ асбыҙ, бысраҡбыҙ, яланғасбыҙ. Беҙҙе, полицияның тупаҫ тырнағынан тыш, буржуазияның наҙлы ҡулы быуа, беҙҙең барлыҡ көсөбөҙҙө һығып ала. Шуны хәтереңдә тот, Думала һин азатлыҡ өсөн хөкүмәткә ҡаршы ғына түгел, бәлки 8 сәғәтлек эш көнө һәм эшселәрҙең башҡа талаптары өсөн буржуазияға ҡаршы ла көрәшергә тейешһең. Һин ас крәҫтиәндәргә бөтә ер өсөн, бөтә халыҡтың тулы властлы Учредительный йыйылышы өсөн көрәшергә тейешһең. Һәм һин беҙҙең наказды үтәһәң, беҙҙең пролетар социал-демократик партиябыҙ байрағы аҫтында һәм уның сафтарында барһаң, ниндәй генә хәлдәргә эләкһәң дә, беҙ һине яҡларбыҙ, һәм шуның өсөн, һин кире әйләнеп ҡайтҡас, беҙ һиңә пролетар рәхмәтебеҙҙе әйтербеҙ» [1].

II Дәүләт думаһы оҙаҡ йәшәмәне. 3 июндә Думаны таратыу һәм һайлауҙар тураһындағы положениены үҙгәртеү хаҡында батша ма-

[1] Сборник документов и материалов о революционном движении 1905—1907 гг. в Башкирии, 193-сө бит.

нифесы баҫылып сыҡты. Хөкүмәт тарафынан иғлан ителгән яңы һайлау законы эшселәрҙең һәм крәҫтиәндәрҙең хоҡуҡтарын тағы ла нығыраҡ ҡыҫты. 3 июнь перевороты революцияның еңелеүен һәм илдә ҡараңғы политик реакция осороноң башланыуын аңлатты.

## § 4. Өфө реакция һәм яңы революцион күтәрелеш осоронда. Февраль революцияһының еңеүе

Хәлгә хужа булып алғас, батша хөкүмәте революцион хәрәкәттә ҡатнашыусыларҙан, беренсе сиратта эшселәр синыфынан һәм уның партияһынан, ҡанлы үс ала башланы. 1907 йылдың июненән алып 1908 йылдың аҙағына саҡлы тәүге осор эсендә генә лә Өфөлә РСДРП-ның ҡала ойошмаһын тар-мар итеү маҡсатында 5 тапҡыр массовый тентеү һәм ҡулға алыуҙар үткәрелде. 34 кеше һаҡ аҫтына алынды. Ҡулға алыныусылар араһында партияның Өфө комитеты ағзалары А. М. Брагин, А. Ф. Васильев, К. В. Готовцев, М. И. Ефремов, З. Ш. Садиҡов бар ине [1]. Йөҙҙәрсә аңлы эшселәр, большевиктар төрмәләрҙә, һөргөндә, каторгала яфа сикте. Үлемгә хөкөм итеү һәм үлем язаһы көндәлек күренешкә, яҙыусы В. Г. Короленконың бик тапҡыр һүҙҙәре менән әйткәндә,— «көндәлек тормош күренешенә» әйләнде.

1907 йылдың 8 ноябренә ҡаршы төндә күренекле революционер эшсе И. С. Якутов язалап үлтерелде. Ғүмеренең һуңғы минутына саҡлы ул пролетариат эше өсөн ҡаҡшамаҫ көрәшсе булып ҡалды, революцияның ҡотолғоһоҙ рәүештә еңәсәгенә ышанды. Күп йылдар үткәс, Н. К. Крупская былай тип яҙҙы: «Ул төрмә йортонда үлде,ә бөтә төрмә йырланы — барлыҡ камераларҙа йырланылар — һәм уның үлемен бер ҡасан да онотмаҫҡа, ул үлемде ғәфү итмәҫкә ант бирҙеләр» [2].

Революция йылдарында яһалған ташламаларҙы кире тартып алырға тырышыусы капиталистар ҙа эшселәр синыфына һөжүм итеүгә күстеләр. Ҡала предприятиеларында яңынан 10—12 сәғәтлек эш көнө урынлаштырыла, эш хаҡы кәметелә, бөтә урында ла штрафтар ҡулланыла. Фабриканттар һәм заводчиктар, экономик кризистан файҙаланып, эшселәрҙе күпләп эштән сығарҙылар. Активистарҙы «ҡара исемлектәргә» индерҙеләр, һәм уларҙы бер генә предприятиеға ла эшкә алманылар. РСДРП-ның Өфө комитеты 1908 йылдың авгусында сығарған бер листовкала былай тип яҙылды: «Эшһеҙлек — хәҙер Россияла бик ныҡ таралған күренеш. Беҙҙең Өфө Россиянан ҡалышмай. Бында, тимер юл мастерскойҙарында, һуңғы ваҡытта әленән-әле расчет тураһында ишетәһең. Йәй эсендә мастерскойҙарҙа 200-ҙән күберәк кеше эштән сығарылды һәм тағы ла

---

[1] Очерки истории Башкирской организации КПСС, 99-сы бит.
[2] Крупская Н. К. Воспоминания о Ленине, 39-сы бит.

Х. М. Ямашев.



200 кеше эштән сығарыласаҡ. Һөнәрселәр араһында ла эш шәптән түгел» [1].

Революцияның еңелеүенә һәм реакцияның тантана итеүенә ҡарамаҫтан, Өфө эшселәре стачка көрәшен туҡтатманылар. Ул осорҙағы стачкалар нигеҙҙә экономик, оборона характерында булды. Пролетарийҙар үҙҙәренең тормош кимәленә һәм эш шарттарына, буржуазияның һаман көсәйә барыусы һөжүменә ҡаршылыҡ күрһәттеләр.

Ҡалала эшселәр хәрәкәтенә рәхимһеҙ террор һәм эҙәрләүҙәр осоронда ла элеккесә большевиктар ойошмаһы етәкселек итте. Царизмдың туҡтауһыҙ һөжүме һөҙөмтәһендә ул ҙур юғалтыуҙар кисерҙе, шулай ҙа революцион подпольеның үтә ауыр шарттарына ҡулайлашып, яңынан һәм яңынан аяҡҡа баҫты. Партия ағзалары һаны 1907 йылдың февралендә 450-нән 1909 йылдың июленә 155—160-ҡа ҡалды. Артабан да партия ағзаларының һаны тағы ла нығыраҡ кәмене. 1911 йылдың көҙөндә Өфөлә ни бары 40—50 социал-демократ иҫәпләнде.

Большевиктар йәшерен эште хатта бәләкәй генә легаль мөмкинлектәрҙе — үтә реакцион Думанан алып төрлө культура-ағартыу йәмғиәттәренә тиклем — файҙаланыу менән бергә ҡушып алып барҙылар. Массаларға политик белем биреү өсөн, улар Дәүләт думаһына һайлауҙар буйынса һайлау кампанияһын файҙаландылар. РСДРП-ның Өфө комитеты ҡала кешеләре һәм губерна халҡы араһында большевистик кандидаттарға тауыш бирергә саҡырыусы бер нисә һайлау алды листовкаһы таратты. Реакцияның шашынып ҡаршылыҡ күрһәтеүенә ҡарамаҫтан, Өфө губернаһы эшселәренән III Думаға депутат итеп большевик В. Е. Косоротов һайланды. Уның Дума депутаты посында актив эшләүе хеҙмәтсәндәр дошмандарында уға ҡарата нәфрәт тыуҙырҙы. 1908 йылдың июнендә батша суды ялған ғәйепләү буйынса уны крепосҡа ябырға хөкөм ҡарары сығарҙы. В. Е. Косоротовтың ғәйепләнеүе айҡанлы большевистик газета «Пролетарий» былай тип яҙҙы: «Батша төрмәһендә тотҡонда ятыусы Косоротов иптәшкә беҙ ҡайнар пролетар сәләм ебәрәбеҙ. Беҙ Россияның бөтә аңлы эшселәрен идара итеүсе өйөрҙөң Думалағы эшсе вәкиллегенән үс алыу актына ҡарата үҙҙәренең мөнәсәбәтен протестар, ҡотлауҙар, хаттар формаһында һәм мөмкин булған бөтә башҡа ысулдар менән белдерергә саҡырабыҙ» [2].

---

[1] ЦГАОР, ф. ДП, ОО, 1908, д. 5, ч. 65, л. 16.
[2] «Пролетарий», 1909, 13(26) май.


УФИМСКІЙ РАБОЧІЙ

«Уфимский рабочий» газетаһының беренсе һаны.

Большевиктарҙың профсоюздар, кооперативтар, культура-ағартыу йәмғиәттәре кеүек пролетариаттың легаль ойошмаларындағы эше реакция шарттарында ҙур әһәмиәткә эйә булды. Большевиктар етәкселегендәге сауҙа хеҙмәткәрҙәре профессиональ йәмғиәте ҡалаға ныҡ билдәле булды. Ул гектографта йәшерен «Приказчик» газетаһын сығарҙы, йәмғиәт янында үҙ алдыңа белем алыу түңәрәктәре эшләне. Йәмғиәт Дәүләт думаһына һайлауҙар буйынса һайлау кампанияһында ҡатнашты, приказчиктар өсөн йәкшәмбене ял көнө итеү һәм 8 сәғәтлек эш көнө индереү өсөн көрәште.

1908 йылда властар сауҙа хеҙмәткәрҙәренең йәмғиәтен тар-мар иттеләр. Шунан һуң партия ойошмаһы легаль эште «Шәхси ярҙамсы хеҙмәткә үҙ-ара ярҙам буйынса Өфө йәмғиәтендә» тупланы. Идара составына ингән большевиктар «Үҙ-ара ярҙам йәмғиәтен» эшселәргә һәм хеҙмәткәрҙәргә политик белем биреү һәм уларҙы ойоштороу өсөн файҙаландылар. «Йәмғиәт» бинаһында (хәҙер Мәғариф, юғары мәктәп һәм фәнни учреждениелар работниктары йорто, Социалистик урамы, 38) дискуссиялар, йәшерен йыйылыштар үткәрелде. 1911 йылдың аҙағында губернаторҙың бойороғо буйынса «Йәмғиәт» уставты боҙа тигән һылтау менән ябылды.

Большевиктар властар тарафынан рөхсәт ителгән башҡа йәмғиәттәрҙә лә легаль эш алып барҙылар. 1907 йылдың 12 мартында Өфөлә өлкәндәр өсөн түләүһеҙ мәктәп асылды; унда тәүге йылда уҡ 169 кеше уҡыны [1]. 1907 йылдың 18 апрелендә властар «Өфө халыҡ университеттары йәмғиәтен» — юғары фәнни-белем биреү курстарын теркәнеләр. Уның программаһы белемдең төрлө тармаҡтары буйынса бик күп мәсьәләләрҙе эсенә алды [2]. Университетта, шулай уҡ мәктәптә гимназия уҡытыусылары, врачтар, башҡа белгестәр уҡытҡан. Улар араһында социал-демократтар һәм уларға теләктәш кешеләр булған.

1910 йылдың аҙағында илдә эшселәр хәрәкәте йәнләнеүенең тәүге билдәләре күренә башлай. «Революцион күтәрелеш» тигән мәҡәләһендә В. И. Ленин, өс йыл, 1908—1910 йылдар, ҡарагоруһсы

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 348, оп. 1, д. 6, л. 5.
[2] ЦГАОР, ф. ДП, IV д-во, 1908, д. 81, л. 2, 4.

В. Е. Косоротов.



контрреволюциянығ ҡотороноуы, либераль-буржуаз ренегатлыҡ һәм пролетариаттың төшөнкөлөккә бирелеүе һәм таркалыуы осоро булды, тип яҙҙы. «Ләкин 1910 йыл аҙағынан алып,— тип билдәләне ул,— һиҙелерлек көрәш башлана. Либерал Муромцевтың һәм Лев Толстойҙың үлеүе уңайы менән демонстрациялар, шулай уҡ студенттар хәрәкәте хәлдең үҙгәрә башлауын, демократик массаларҙың настроениеһында билдәле көрәш башланыуын асыҡ күрһәтә»[1]. Был көрәш Өфөлә лә үҙенең сағылышын тапты.

1910 йылда Гутман заводы һәм «Вестник Уфы» газетаһы типографияһы эшселәре забастовка үткәрҙеләр. 1911 йылда «Печать» типографияһы эшселәре ике аҙна буйына эшкә сыҡманылар[2]. Уҡыусы йәштәр араһында сыуалыштар башланды. Өфө урта уҡыу йорттарының уҡыусылары, казарма режимына яуап итеп, 1911 йылдың яҙында стачка ойошторҙолар[3].

Себерҙә Лена алтын прискыларында ҡоралһыҙ эшселәргә атыу Өфөлә, Россияның күпселек ҡалаларындағы кеүек үк, батша хөкүмәтенең ҡанлы яуызлыҡтарына ҡаршы көслө протест тулҡыны тыуҙырҙы һәм пролетарийҙарҙың яңы сығыштары өсөн этәргес көс булып хеҙмәт итте. Лена ваҡиғаларының туранан-тура йоғонтоһо аҫтында Гутман һәм Шамов заводтары эшселәре, төҙөүселәр, грузчиктар, тегеүселәр һәм башҡалар эш ташланы. 1 майҙа «Восточная печать», «Товарищество печать», «Товарищество Соловьева и К°» һәм Шаровкин типографияларының эшселәре эшкә сыҡманы[4]. 1913 йылда Гутман заводы эшселәрнең забастовкаһы ныҡышмалы характерҙа булды. Өфөлә стачка хәрәкәте 1914 йыл башында айырыуса киң ҡолас алды. Забастовка тимер юл мастерскойҙарын, депоны, күп кенә заводтарҙы, фабрикаларҙы, тирмәндәрҙе һ. б. солғап алды.

Эшселәрҙең массовый сығыштарына большевиктар етәкселек итте. Уларҙы революция рухында тәрбиәләүҙә В. И. Ленин тарафынан ойошторолған массовый аҙналыҡ марксистик эшселәр газетаһы «Правда» бик ҙур роль уйнаны. Уның беренсе һаны 1912 йылдың 22 апрелендә (5 майында) Петербургта сыҡты. «Правда» Өфө эшсе-

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 21-се том, 340-сы бит.
[2] Гуран В. 70 лет. От стачки к организованному профдвижению в бывшей Уфимской губернии и БАССР (1857—1927). Өфө, 1927, 56-сы бит.
[3] ЦГАОР, ф. ДП. IV д-во, 1911. д. 81, ч. 5, л. 4.
[4] Шунда уҡ, ч. 2, л. 1—3.

ләрендә бик тиҙ үтә ҙур абруй яулап алды, уға материаль ярҙам күрһәттеләр, ҙур теләк менән яҙылдылар.

В. П. Арцыбушев.



Партия ойошмаһы тарафынан махсус рәүештә бүленгән вәкилдәр газетаны таратыу менән генә сикләнмәнеләр, бәлки уның фондына аҡса средстволары ла йыйҙылар. Вәкилдәрҙең береһендә — типография эшсеһе М. Е. Нестеровта ғына ла тентеү үткәргәндә жандармдар «Правда» редакцияһына 1914 йылдың апрелендә 125 һум 54 тингә ике перевод ебәреү тураһында документ табалар[1]. Был ҡала эшселәренең — газета уҡыусыларҙың большевистик матбуғат көнөндә «Правда» фондына биргән бер көнлөк эш хаҡы ине. Өфөлә бер үк ваҡытта меньшевистик «Северная рабочая газета»ға ла аҡса йыялар, ләкин һөҙөмтә бик бәләкәй — ни бары 43 һум 66 тин була[2]. Йыйылған аҡса суммаһы Өфө эшселәренең үҙ газетаһын фиҙакәр яҡлауын күрһәтте.

Өфө большевиктары массаларҙа йоғонтоно көсәйтеү өсөн страховой кампанияны, йәғни эшселәрҙең баҫымы аҫтында эшселәрҙең дәүләт страхованиеһы тураһында Дума тарафынан ҡабул ителгән закон нигеҙендә ойошторолған больница кассаларына һайлауҙарҙы файҙаландылар. Көсөргәнешле көрәштән һуң 1914 йылдың февралендә дөйөм ҡала больница кассаһы идараһының председателе итеп большевик М. Е. Нестеров һайланды, оҙаҡ та үтмәй большевик К. В. Готовцев идараның секретары булды.

Большевиктар төрлө культура-ағартыу йәмғиәттәрендә эшләүҙәрен дауам иттеләр. 1912 йылдың июлендә улар «Шәхси ярҙамсы хеҙмәткә үҙ-ара ярҙам йәмғиәтенең» аяҡҡа баҫтырылыуына өлгәштеләр. Идара һәм ревизия комиссияһы составына В. П. Арцыбушев, Н. П. Брюханов, А. Ф. Васильев, А. П. Кучкин һәм башҡалар инде. «Йәмғиәт» бинаһында эшселәрҙең йыйылыштары, түңәрәктәрҙең занятиелары һ. б. үткәрелде. Һуңынан А. П. Кучкин «Ярҙамлашыу йәмғиәте» «эшселәрҙең үҙенә күрә бер ойошмаһы, клубы булды» тип хәтергә алды. «Бында элементар грамота менән генә танышып ҡалманылар, бәлки аҡрын ғына, бик һаҡ рәүештә, хәҙерге тел менән әйткәндә, политграмота менән дә таныштылар. Бында подпольелағы работниктар менән эшселәр араһында яңы бәйләнештәр эҙләнде һәм урынлаштырылды»[3].

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 185, оп. 1, д. 485, л. 32.
[2] ЦГАОР, ф. ДП, ОО, 1914, д. 5 ч. 86, лит. Б, 38.
[3] Кучкин А. Подполье в Уфе в 1911—1915 годах.—«Пролетарская революция», 1929, № 1, 234-се бит.

Революцион хәрәкәттең һаман күтәрелә барыуы пролетариаттың көрәшен бер ниндәй әҙәрләүҙәр ҙә туҡтата алмаясағын күрһәтте. Быны 1914 йылдың 19 июлендә башланған беренсе донъя һуғышы ла эшләй алманы.

Өфө буржуазияһы һуғыш тураһындағы хәбәрҙе шатланып ҡаршы алды. Улар 1914 йылдың йәйендә бөтә илгә киң таралған «еңгәнгә тиклем һуғышырға» тигән шовинистик кампанияла бик актив ҡатнаштылар. «Массаларҙы шовинизм менән ағыулау, имеш, батша хөкүмәте «ғәҙел» һуғыш алып бара, «славян туғандарҙы» эскерһеҙ яҡлай һ. б. тигән фекер тыуҙырыр өсөн, алдашыу һәм хәйләкәрлектең ҡот осҡос ҙур аппараты ходҡа ебәрелде» [1], — тип яҙҙы В. И. Ленин. Буржуаз-монархик пропаганданың бөтә саралары: сиркәү ҙә, матбуғат та, кинематограф та һәм һәр төрлө күңел асыу йорттары ла файҙаланылды. Ошо уҡ маҡсат менән властар батшаға тоғролоҡ тойғоларын белдереү өсөн ялған патриотик манифестациялар ойоштторҙолар.

Ләкин ҡала эшселәренең күпселеге һуғышҡа ҡаршы булды. Уларҙың ындай позицияһы революцион көрәш традициялары һәм шунда уҡ империалистик һуғышты ғәйепләп сыҡҡан большевиктарҙың дөрөҫ тактикаһы менән билдәләнде.

Партия Үҙәк Комитетының В. И. Ленин тарафынан яҙылған «Һуғыш һәм Россия социал-демократияһы» тигән манифесы Уралда 1914 йылдың аҙағында алына. Уға тиклем Өфө большевиктары РСДРП-ның һәм II Интернационал конгрестарының элекке ҡарарҙарына нигеҙләнеп эш итәләр. Һуғыштың беренсе көндәрендә үк партия ойошмаһының ҡушыуы буйынса В. П. Арцыбушев һәм Н. П. Брюханов «Һуғыш хаҡында хәҡиҡәт» тигән прокламация яҙҙылар. Ул Урал предприятиеларында киң таратылды. Прокламация хеҙмәтсәндәргә хөкүмәт тарафынан тоҡандырылған һуғыштың бер төркөм империалистар мәнфәғәтендә алып барылыуын аңлатты, самодержавиены ҡолатырға һәм демократик республика урынлаштырырға саҡырҙы. «Бөтә илдәрҙең аңлы эшселәре,— тип әйтелде унда,— һуғышҡа ҡаршы асыҡтан-асыҡ протест белдерәләр, туған туғанды үлтереү һуғышын туҡтатыуҙы талап итәләр, хөкүмәттәр — капиталистар һәм помещиктарҙың тоғро приказчиктары, халыҡ ихтыярынан тыш, уның мәнфәғәттәренә ҡаршы килеп һуғыш иғлан итеүсе, йөҙ меңдәрсә эшселәрҙе һәм крәҫтиәндәрҙе үлемгә дусар итеүсе, уларҙың ҡатындарын һәм балаларын аслыҡҡа һәм хәйерселеккә дусар итеүсе йәмғиәт ҡоролошон ҡолатыуҙы талап итәләр» [2]. Етешһеҙлектәренә, һуғыш, тыныслыҡ һәм революция мәсьәләләре буйынса партия тактикаһының аныҡ һәм асыҡ формулировкалары бул-

---

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 26-сы том, 329-сы бит.

[2] Большевики в годы империалистической войны. 1914—февраль 1917. Сборник документов местных большевистских организаций. М., 1939, 12-се бит.

мауға ҡарамаҫтан, Өфө большевиктарының прокламацияһы эшселәр синыфының интернационалистик позицияһын сағылдырҙы.

Өфө тәрән тылда булыуға ҡарамаҫтан, һуғыш уның тормошона бик ҙур йоғонто яһаны. Тәүге йылда уҡ төҙөлөш эштәре туҡтатылды, кирбес заводтарының күпселеге һәм бөтә һыра заводтары ябылды. Һуңыраҡ та производствоны ҡыҫҡартыу дауам итте. 1916 йылда 7 предприятие: Шамовтың механика заводы, Берштейндың кондитер фабрикаһы һәм башҡалар продукция эшләп сығарыуҙы туҡтатты.

Н. П. Брюханов.



Фабрика-завод промышленносының капиталистар өсөн файҙалы хәрби заказдар үтәүсе предприятиеларында ғына етештереүҙең байтаҡ көсәйеүе күҙәтелде.

Тимер юл һәм һыу транспорты емерек хәлгә килде. 1916 йылдың 1 ғинуарына Өфө тауар станцияһында 550 мең ботҡа яҡын оҙатылмаған төрлө йөк тороп ҡалды, был йөк тейәүҙең бер айлыҡ нормаһына тиң ине [1].

Һуғыш Өфөнөң ҡала хужалығына төҙәтеп булмаҫлыҡ зарар килтерҙе. Ул өфөләрҙең туған ҡаланы төҙөкләндереү тураһындағы хыялдарын селпәрәмә килтерҙе. Водопроводтың һәм электр станцияһының туҙған ҡорамалдары ремонтланманы һәм йыш ҡына сафтан сығып торҙо. Урамдарҙың һәм тротуарҙарҙың япмаһы яраҡһыҙ хәлгә килде. Халыҡ ҡала управаһына «хәрәкәт итеүҙең ҡыйынлашыуына» жалобалар яуҙырҙы, ләкин дума ремонт өсөн тейешле средствоны бүлмәне.

Һуғыш йылдарында эшселәр составында ҙур ғына үҙгәрештәр булды. Күп кенә кадровый эшселәр армияла ине. Улар урынына предприятиеларға мобилизациянан йәшеренеп йөрөүсе лавочниктар, трактирщиктар, кустарҙар, кулактар улдары килде. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм балаларҙың арзан хеҙмәте киң файҙаланылды. 1913 йылдан 1915 йылға саҡлы ҡала предприятиеларында эшселәрҙең дөйөм һаны 14,4 процентҡа үҫкән булһа, ҡатын-ҡыҙҙар һаны 36,7 процентҡа артты.

Һуғыш Өфө хеҙмәтсәндәренә яңы ғазаптар килтерҙе. Заводтарҙа һәм фабрикаларҙа эш көнөнөң дауамлылығы артты. Эшселәр бер предприятиенан икенсеһенә ирекле рәүештә күсеү хоҡуғынан мәхрүм

---

[1] Сводные статистические ведомости по перевозке пассажиров, багажа и грузов большой и малой скорости за 1915 год. Һамар, 1916, 28-се бит.

Эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының Өфө Советы башҡарма комитетының өндәмәһе.



ВОЗЗВАНІЕ.

ТОВАРИЩИ И ГРАЖДАНЕ!

ителде. Армияла хеҙмәт итергә тейешле кешеләр забастовкаларҙа ҡатнашҡан өсөн фронтҡа ебәрелде. Эш хаҡының бер ни тиклем арттырылыуы көндәлек ҡулланыу әйберҙәренә хаҡтарҙың йылдам үҫеүенән күпкә ҡалышты. Аҙыҡ продукттарының хаҡтары, мәҫәлән, һуғыштың беренсе айынан уҡ күтәрелә башланы. 1914 йылдың ғинуарына сағыштырғанда, улар 1916 йылдың 1 июленә, 3 тапҡырҙан күберәккә артты [1]. 1916 йылда эшсе өҫтәлендә ит, май, һөт, шәкәр юҡ ине инде. 1916 йылдың ноябрендә онға, шәкәргә, тоҙға һәм башҡа продукттарға карточка системаһы индерелде.

Өфөлә аҙыҡ-түлек хәле 1916 йылдың көҙөнә ҡиҫкен насарайҙы. Иген булмау сәбәпле, сентябрь айында Костериндың һәм Черниковтың тирмәндәре — ҡалалағы иң ҙур тирмәндәр туҡтаны. Декабрҙә Себерҙән яҡшы бойҙай оно ташыу туҡтатылды, арыш оно запастары ла бөттө. Аҙыҡ-түлек кризисына яғыулыҡ кризисы өҫтәлде. Предприятиеларҙа, учреждениеларҙа һәм торлаҡ йорттарҙа түҙеп торғоһоҙ һыуыҡ булды.

Хеҙмәт интенсивлығының көсәйтелеүе һәм туҡланыуҙың насарайыуы эшселәрҙең, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм балаларҙың, физик хәлһеҙләнеүенә сәбәп булды. Фабрикаларҙа һәм заводтарҙа бәхетһеҙлеккә осрау факттары артты, эшсе халыҡ араһында ауырыу һәм үлеү йышайҙы.

Халыҡта һуғыштан һәм батша хөкүмәтенең сәйәсәтенән ризаһыҙлыҡ көсәйҙе. Һуғыш осороноң рәхимһеҙ закондарына ҡарамаҫтан, Өфө эшселәре эш шарттарын яҡшыртыу, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү һәм башҡалар тураһында һаман йышыраҡ талаптар ҡуя башланылар. Экономик нигеҙҙә килеп тыуған забастовкалар йыш ҡына политик характер алды.

Армияла һуғышҡа ҡаршы настроениелар көсәйҙе. Башҡорт һәм татар һалдаттары Өфөлә сыға торған «Шура» журналы редакцияһына 1917 йылдың февралендә былай тип яҙҙылар: «Был яфа сиктереүсе ҡараңғы тон үтһен. Нурҙар һибеп, яҡты ҡояш сыҡһын. Етер инде, бик күп ҡан ҡойолдо, бер нисә миллион кеше һәләк бул-

[1] ЦГА БАССР, ф. 95, оп. 1, д. 72, л. 58.

ды. Ни өсөн кешеләр бер-береһен үлтерә, был йырткыслык ҡасан бөтөр?»[1]. Өфө гарнизоны һалдаттары эшселәрҙең һәм крәҫтиәндәрҙең үҙ хоҡуҡтары өсөн көрәшенә ыңғай ҡарашта булдылар, улар араһында начальниктарҙың приказдарына буйһонмау һәм дезертирлыҡ осраҡтары йышайҙы. 1917 йылдың февралендә генә лә хәрби-ялан суды гарнизондың 15 һалдатын хәрби дисциплинаны боҙған өсөн төрлө срокка каторга эштәренә хөкөм итте.

1917 йыл башына илдәге хәл сиктән тыш киҫкенләште. Петроградтағы хәл бигерәк тә көсоргәнешле булды. Ҡаҡшаған империяның баш ҡалаһын синфи көрәштәр дер һелкетте. Заводтарҙың береһендә 17 февралдә башланған забастовка оҙаҡ та үтмәй дөйөм забастовкаға әйләнде. 26 февраль иртәһенән башлап большевиктарҙың саҡырыуы буйынса эшселәр политик стачканан восстаниеға күсә башланылар. Баш күтәреүсе халыҡҡа гарнизон һалдаттары ҡушылды. 27 февралдә Россияла буржуаз-демократик революция еңде.

Батша самодержавиеһының ҡолатылыуы тураһындағы хәбәрҙе Башҡортостандың эшселәре һәм крәҫтиәндәре шатланып ҡаршы алды. Ләкин революция еңеүенең емештәре менән, Петроградтағы һәм илдең башҡа районларындағы кеүек үк, власты үҙ ҡулына алған буржуазия файҙаланды. 1917 йылдың 2 мартында Өфө ҡала думаһының ашығыс рәүештә саҡырылған ултырышында йәмәғәт ойошмаларының губерна комитеты төҙөлә. 8 мартта Ваҡытлы хөкүмәттең губерна комиссары үҙенең хеҙмәт вазифаларын үтәй башланы. Уға элекке губернаторҙарҙың полномочиелары бирелде. Буржуазияның һәм помещиктарҙың хакимлыҡ итеү органдары менән бер үк ваҡытта халыҡ власы органдары — депутаттар Советтары төҙөлдө. 5 мартта эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының Өфө Советының беренсе ултырышы үткәрелде. Уның составына эшселәрҙән —72, һалдаттарҙан — 82 һәм РСДРП-ның Өфө ойошмаһынан һәм эсерҙар ойошмаһынан 4-әр депутат инде. Совет 34 кешенән башҡарма комитет һайланы; ул иһә ағымдағы эш өсөн президиум һәм финанс, хәрби, нәшриәт, митинг комиссиялары һәм башҡа комиссиялар төҙөнө. Башҡарма комитетта ла, президиумда ла күпселек урынды эсерҙар һәм меньшевиктар алды. Большевиктар алдында Советты хеҙмәтсәндәрҙең мәнфәғәттәрен ысын-ысындан яҡлаусы органға әйләндереү өсөн килешеүселәргә ҡаршы ныҡышмалы көрәшеү бурысы торҙо.

Шулай итеп, илдә ике власлылыҡ, ике диктатураның — Ваҡытлы хөкүмәт йөҙөндә буржуазия диктатураһы менән депутаттар Советтары йөҙөндә пролетариат һәм крәҫтиәндәрҙең революцион-демократик диктатураһының үҙенсәлекле бергә йәшәүе барлыҡҡа килде. Большевиктар партияһы алдына массаларҙы революцияны артабан үҫтереү өсөн, социализмдың еңеүе өсөн көрәшкә әҙерләү бурысы килеп баҫты.

---

[1] «Царская армия в период мировой войны и Февральской революции». Ҡазан, 1932, 202-се бит.

# *XX быуат баштарында Өфөлә культура тормошо*

## § 1. Мәғариф. Тыуған яҡты өйрәнеү

Империализм дәүерендә илдең экономик һәм политик үҫеше йоғонтоһонда Башҡортостандың культура тормошонда күп кенә ыңғай үҙгәрештәр булып үтә: уҡымышлы кешеләрҙең һаны яйлап арта, һәр төрлө мәктәптәр, курстар, китапханалар селтәре йылдамыраҡ үҫә, беренсе ғилми учреждениелар һәм йәмғиәттәр барлыҡҡа килә, нәшриәт эше киңерәк ҡолас ала һ. б. Башҡорт һәм татар халыҡтарының милли культураһы үҫешендә лә йәнләнеү һиҙелә. Илдең башҡа милли төбәктәрендәге кеүек, Башҡортостанда ла рус, башҡорт, татар культура эшмәкәрҙәренең үҙ-ара ижади аралашыуы һәм хеҙмәттәшлеге процесында яңы ижтимағи-идея йүнәлештәре, культура башланғыстары һәм ойошмалары барлыҡҡа килә.

Милли культураларҙың үҫешенә беренсе рус революцияһы ифрат ҙур йоғонто яһай. Дөйөм дошманға — батша самодержавиеһына ҡаршы көрәштә Россия халыҡтарының милли культураларында прогрессив демократик һәм социалистик элементтарҙың революцион-идея берҙәмлеге нығына.

Бөтә ошо үҙгәрештәр бигерәк тә Өфөнөң культура тормошонда айырым-асыҡ күренә.

XX быуат баштарында Өфө губернаһы грамоталылыҡ яғынан Россияның Европа өлөшөндәге 50 губернаһы араһында ҡырҡынсы урынды алып тора. Быға һис тә ғәжәпләнерлек түгел, сөнки губернала башланғыс мәктәптәрҙе тотоуға кеше башына ни бары 39 тин, Россия буйынса тотош алғандағынан байтаҡ кәмерәк, аҡса тотола [1]. Өфөнөң башланғыс мәктәптәре ихтыяждарына бүленгән аҡса иконалар һәм батша портреттары һатып алыуға ебәрелгәндән дә аҙыраҡ була. Уҡытыусылар материаль яҡтан үтә насар тәьмин ителә. «Ха-

---

[1] Однодневная перепись начальных школ в империи, произведенная 18 января 1911 г., VII сығарылыш, 1-се киҫәк. Пгр., 1916, 10-сы бит.

лыҡ уҡытыусыһының эш хаҡы тураһында һүҙ барғанда, Россия ярлы,— ти В. И. Ленин.— Уларға баҡыр тиндәр түләйҙәр... Халыҡ мәғарифының намыҫлы эшсәндәренә түләргә — Россия ярлы, ә эрәмтамаҡ дворяндарға, һуғыш авантюраларына, шәкәр заводтары хужаларына, нефть королдәренә һәм башҡа шуның кеүеккә миллион һәм ундарса миллион һум таратырға тиһәң — Россия бик бай» [1]. Ауыр көнкүреш шарттарында, материаль мохтажлыҡта йәшәү халыҡ уҡытыусыһының ғүмерен бик иртә өҙә, губерна земство идараһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, уларҙың 1,3 проценты ғына 50 йәшкә тиклем йәшәгән» [2].

Быуат башында ҡалала тиҫтәгә яҡын төрлө типтағы башланғыс мәктәп эшләй. Мәктәптәрҙең ҡайһы ведомствоға буйһоноуҙарын да аңларлыҡ булмай, ә инде уларҙың структуралары һәм программаларына килгәндә, бөтөнләй буталсыҡлыҡ хөкөм һөрә. «Түбәнге дөйөм белем биреүсе уҡыу йорттары системаһы шул тиклем буталсыҡ, халыҡ мәғарифы эшен махсус өйрәнеүсе кеше өсөн дә уны төшөнөүе үтә ситен» [3],— тип күрһәтелә белешмә баҫмаларҙың береһендә.

Башланғыс мәктәптәрҙән иң киң таралғаны ҡала приход училищелары була. Уларҙың күпселегендә уҡытыу 3—4 йыл, бары тик ике класлы тип йөрөтөлгәндәрендә генә 5—6 йыл дауам итә. 1901 йылдан 1907 йылға тиклем приход училищеларының һаны бик аҙ арта. Шулай ҙа уларҙың күпселегендә өҫтәмә кластар асылыу иҫәбенә уҡыусылар һаны һиҙелерлек үҫә. 1911 йылда Өфөлә 3116 бала уҡыған 15 училище, шул иҫәптән 2 класлы приход училищеһы, иҫәпләнә [4].

Башланғыс мәктәп системаһында сиркәү-приход училищелары ҙур ғына урын алып тора — уларҙы хөкүмәт менән сиркәү бик тырышып үҫтерә һәм яҡлай. 1911 йылда ҡалала ошондай 8 мәктәптә 758 кеше уҡый [5]. Приход училищеларынан тыш, башланғыс мәктәп системаһында бер класлы ике земство мәктәбе (137 уҡыусы), рус булмаған халыҡтар өсөн 3 мәктәп (194), биш шәхси (80), приходтарға ҡарамаған ике бер класлы мәктәп (76) һәм тимер юл станцияһы эргәһендә ике класлы училище (300 уҡыусы) була. Ҡалала 1911 йылда барлығы төрлө типтағы 36 башланғыс мәктәп эшләй. 1915 йылда инде улар 41-гә етә, һәм унда 6529 бала (4021 ир бала һәм 2508 ҡыҙ бала) уҡый [6].

Империалистик һуғыш ҡаланың башланғыс мәктәптәре селтәрен үҫтереүҙе тотҡарлай: иң яҡшы биналарға лазарет урынлаштыра-

---

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 23-сө том, 129, 130-сы биттәр.

[2] ЦГА БАССР, ф. 113, оп. 1, д. 545, л. 122.

[3] Энциклопедический словарь Брокгауза-Ефрона, 54-се том, 392-се бит.

[4] Однодневная перепись начальных школ в империи, произведенная 18 января 1911 г., VII сығарылыш, 1-се киҫәк, 18-се бит.

[5] Шунда уҡ, 19-сы бит.

[6] Обзор Уфимской губернии за 1915 год. Өфө, 1917, 33-сө ҡушымта.

лар, занятиелар бер нисә сменала үткәреләә, транспорт булмағанлыҡтан, мәктәптәрҙә яғыулыҡ менән тәьмин итеүҙә өҙөклөк тыуа, уҡытыусыларға һәм хеҙмәтләндереүсе персоналға эш хаҡы ваҡытында түләнмәй.

Башланғыс мәктәптәрҙән тыш Өфөлә юғарыраҡ типтағы 3 мәктәп була, улар башта «ҡала училищелары», ә 1912 йылдан «юғары башланғыс училищелар» тип йөрөтөлә. Был мәктәптәрҙә байыраҡ кешеләрҙең балалары ғына уҡый. Уны тамамлаусылар йыш ҡына уҡытыусылар семинарияһында уҡыуын дауам итә йәки, әҙерләнеп, башланғыс мәктәп уҡытыусыһы хоҡуғына экстерн тәртибендә имтихан тота.

Мәктәптәр һаны һиҙелерлек артыуға ҡарамаҫтан, балаларҙың бик аҙының ғына башланғыс белем алырға мөмкинлеге була, күпселеге — хеҙмәтсән халыҡ балалары — уҡыуҙан ситтә ҡала. Тормош шарттары ауыр булғанлыҡтан, ярлы балалары йә мәктәпкә бөтөнләй алынмай, йә, алынған хәлдә лә, уҡыуын ташларға мәжбүр була.

Башланғыс мәктәп программалары уҡыусыларға тейешле белем бирмәй; улар, гимназиялар һәм реаль училищелар программаларына яраштырып төҙөлмәгәнлектән, эшселәрҙең балаларына урта уҡыу йорттарына инеү юлын яба. Балалар, өс йыл уҡығандан һуң, рус теле һәм арифметика буйынса ғына бер ни тиклем белем алып сыға, тәбиғәт белеме, география, тарих бөтөнләй уҡытылмай. Батша хөкүмәте мәктәптәрҙә хөрриәт хаҡында фекерҙәр үтеп инеүенән һаҡлай, киреһенсә, уларҙа үҙенә хуп күренгән һәр нәмә алдында баш эйеү, ярамһаҡланыу рухы тәрбиәләргә тырыша.

XX быуат баштарында урта белем биреү өлкәһендә лә һиҙелерлек үҙгәрештәр күҙәтелә. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына тиклем илдә берҙәм урта мәктәп системаһы булмай. Был системала тамамланған урта белем һәм университетҡа инергә хоҡуҡ биреүсе гимназиялар өҫтөнлөклө урын алып тора. Ике быуат сигендә Өфөлә ике гимназия — ир балалар гимназияһы һәм ҡыҙ балалар өсөн Мариинский гимназияһы була. Ләкин улар ҡаланың һәм крайҙың белемле кешеләргә ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә алмай һәм халыҡтың белемгә ғәйәт ҙур ынтылышына яуап бирмәй. Губерналағы алдынғы йәмәғәтселектең баҫымы аҫтында ҡала думаһы 1899 йылдың 5 сентябрендә ҡыҙ балалар өсөн дүрт йыллыҡ гимназия аса, ул ҡыҙ балалар гимназияһының башланғыс кластарына торошло уҡыу йорто була. Уны тамамлаусылар башланғыс мәктәп уҡытыусыһы булып эшләү хоҡуғы ала.

Халыҡтың урта белемгә үҫә барған ихтыяжы һәм ошо системалағы етешһеҙлектәр хөкүмәттең рөхсәте менән буржуазия средстволарына шәхси урта уҡыу йорттары асыуға килтерә. Былдай мәктәптәр Өфөлә лә барлыҡҡа килә. Башта ир балалар һәм ҡыҙ балалар өсөн прогимназиялар асыла. Тиҙҙән ҡаҙнаға ҡараған һәм шәхси прогимназиялар гимназиялар итеп үҙгәртелә, ҡаҙнаныҡы ҡыҙ балалар өсөн хөкүмәт гимназияһы тип йөрөтөлә башлай, ул Олө Успенский

(хәҙер Коммунистик урамындағы 19-сы йорт, Башҡорт дәүләт университетының уҡыу корпустарының береһе) урамында була. Н. В. Верниковская менән А. Ф. Ництың ир балалар өсөн шәхси гимназиялары Үҙәк урамда (хәҙер Ленин урамындағы 22-се һанлы йорт, Башҡорт дәүләт педагогия институтының 2-се корпусы), С. П. Хитровскаяның ҡыҙҙар өсөн шәхси гимназияһы Гоголевский урамында (хәҙер Гоголь урамындағы 34-се һанлы йорт — Уҡытыусыларҙың белемен камиллаштырыу институты бинаһы) урынлаша. Шулай итеп, яңы быуаттың тәүге йылдарында Өфө гимназиялары һаны 2-нән 5-кә тиклем үҫә, ә уларҙа уҡыусылар һаны 1900 йылдағы 894 баланан 1915 йылда 2508 балаға арта [1].

Гимназияларҙың уҡыу программаларында төп иғтибар, әүәлгесә, латин һәм шул замандағы сит ил телдәрен, әҙәбиәт һәм тарих өйрәнеүгә бирелә. Ә уҡыусыларҙа донъяға материалистик ҡараш тәрбиәләүгә булышлыҡ итеүсе тәбиғәт фәндәре икенсе планда тора. Ҡыҙҙар гимназияларында боронғо телдәр инмәгән, тәбиғәт фәндәре һәм математика уҡытыу тағы ла түбәнерәк кимәлдә булған, сөнки был уҡыу йорттары ҡыҙҙарҙы киләсәктә ғаиләлә үҙ вазифаларын «башҡарыуға» әҙерләүҙе төп маҡсат итеп ҡуйған.

Капиталистик мөнәсәбәттәр үҫкән һайын, буржуазия теүәл фәндәр буйынса төплө белем алырға һәм юғары техник уҡыу йорттарына инергә мөмкинлек биреүсе уҡыу йорттары булдырыу менән ныҒыраҡ ҡыҙыҡһына. «Реаль» белемде,— ул саҡта теүәл фәндәр буйынса белем биреүҙе шулай атайҙар,— гимназия, йәки «классик» белем биреүсе уҡыу йорттарынан айырмалы рәүештә, икенсе типтағы урта уҡыу йорттарында — реаль училищеларҙа алырға мөмкин була. Өфөлә реаль училище 1901 йылда асыла, һәм ул 1905 йылда Аксаков менән Оло Успенский урамдары мөйөшөндә төҙөлгән яңы бинаға күсә. 1907 йылда унда — 228, 1915 йылда 291 кеше уҡый [2].

Урта мәктәптәр һаны үҫеүгә ҡарамаҫтан, улар уҡырға теләге булғандарҙың бөтәһен дә һыйҙырып бөтә алмай. 1906 йылда, мәҫәлән, урта уҡыу йорттарына ғариза биреүселәрҙең 26 проценты алынмай [3]. Мәктәптәрҙең күпселегендә, айырыуса гимназияларҙа, уҡытыу процесын ойоштороуҙа феодаль-юғары ҡатлам йоғонтоһо һаҡланыу сәбәпле, уларҙың ишеге эшсе һәм крәҫтиән балалары өсөн ябыҡ була. 1906 йылда Өфө гимназияларында уҡыусыларҙың 78 процентын дворян һәм сауҙагәр балалары тәшкил итә. Шул яғы ла бик харак-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 119, оп. 1, д. 213, л. 6; Белавин К. К истории просвещения в Оренбургском крае (женские гимназии и прогимназии в 1875—1899 гг.). Ырымбур, 1903, 76-сы бит; Обзор Уфимской губернии за 1915 год, 33-сө ҡушымта.

[2] Доклады губернской земской управы XXXIII очередному Уфимскому губернскому земскому собранию 1907 года. По отделу народного образования. Өфө, 1908, 602-се бит. Обзор Уфимской губернии за 1915 год, 33-сө ҡушымта.

[3] Шунда уҡ, 599-сы бит.

Е. В. Червяков.



терлы: урта уҡыу йорттары ҡаланың үҙәк өлөшөндә урынлаша, эшселәр йәшәгән ҡала ситтәрендә улар булмай.

Уҡыған өсөн түләү арта барыу ҙа урта белем биреү системаһын үҫтереүгә етди ҡамасаулыҡ итә. Ул айырыуса ҡыҙ балалар гимназияларында юғары була. Мариинский ҡатын-ҡыҙ гимназияһында башта йылына 20 һум түләһәләр, XIX быуат аҙағына ул — 60, ә 8 класта 80 һумға барып етә. Хатта әҙерлек класында уҡытыу ғына ла 30 һумға төшә.

Әлбиттә, Өфөнөң бөтә урта мәктәптәре лә Халыҡ мәғарифы министерствоһы рамкалары сигендә генә эш итмәй. Улар араһында уҡыусыларға яҡшы әҙерлек биргән мәктәптәр ҙә була. Ҡаланың иң өлкән уҡыу йорттарынан береһе — ир балалар гимназияһында уҡытыу эше сағыштырмаса юғары кимәлгә ҡуйыла. Мәктәптең 20 мең томлыҡ китап фонды менән китапханаһы, мең төрҙән ашыу күргәҙмә әсбабы, минералдар коллекцияһы, ихата эсендә яҡшы тәрбиәләнгән баҡсаһы була. Шулай уҡ гимназияла асылған метеорология станцияһында ла ҡыҙыҡлы ғына материалдар туплана, унда уҡыусылар, һауа торошон даими күҙәтә барып, күҙәтеү һөҙөмтәләрен, урындағы газеталарҙа баҫып сығарыу өсөн, губерна типографияһына хәбәр итеп тора. XIX быуат аҙағынан алып бында төп фәндәр менән бер рәттән музыка уҡытыла, хор һәм оркестр ойошторола. Элеккегә ҡарағанда, гимнастика дәрестәренә, төрлө хәрәкәтсән уйындарға, спорт ярыштарына күберәк иғтибар бирелә башлай; Өфөнөң тирәяғындағы күркәм тәбиғәт ҡосағына, промышленность предприятиеларына һәм тарихи урындарға экскурсиялар ойоштороla, уҡыусылар тупорған картиналар күргәҙмәһе йыш ҡына булып тора, был күргәҙмәләрҙе ҡарарға ҡала халҡы бик ихлас йөрөй.

Гимназияны тамамлаған кешеләрҙең ҡайһы берҙәре аҙаҡ атаҡлы фән һәм культура эшмәкәрҙәре булып китә. Улар араһында күренекле совет офтальмологы 1-се Мәскәү медицина институты профессоры В. П. Одинцов (1876—1938), СССР Дәүләт премияһы лауреаты В. И. Суриков исемендәге Мәскәү дәүләт художество институты профессоры П. В. Мальков (1900—1953), кинола беренсе булып А. С. Пушкин образын тыуҙырыусыларҙың береһе, актер, драматург һәм кинорежиссер Е. В. Червяков (1899—1942), яҙыусы, уҡыусылар яратып уҡыған күп кенә романдар һәм повестар авторы Б. Д. Четвериков (1896—1981), атаҡлы геолог, Ленин премияһы лауреаты академик А. Н. Заварицкий (1884—1952) күренекле урынды алып тора. СССР Фәндәр академияһы Урал ғилми үҙәгенең геология һәм

геохимия институты хәҙер А. Н. Заварицкийҙың исемен йөрөтә. Был гимназияны тамамлаусыларҙан тағы берәү, ҙур ғалим-медик, РСФСР һәм ТАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре профессор Ә. Ғ. Тереғоловтың (1885—1966) исеме Ҡазандың 1-се клиника больницаһына бирелде.

П. В. Мальков.



Ҡаланың урта мәктәптәрендә уҡыусылар ҡаты режимға буйһоноп һәм кластан тыш та ныҡлы күҙәтеү аҫтында йәшәй. Һәр төрлө хөр фекер ҡаты эҙәрләнә.Шулай ҙа йәштәрҙе ижтимағи хәрәкәттән айырыу инде мөмкин булмай. Уҡыусылар 1905—1907 йылдарҙағы революцион ваҡиғаларҙа актив ҡатнаша. Батшаның 1905 йылдың 9 ғинуарында Питер эшселәренең тыныс демонстрацияһын ҡанға батырыуына нәфрәт белдереп, Өфөлә беренсе тапҡыр уҡыусылар забастовкаһы тоҡана, уны ир балалар гимназияһының өлкән кластарында уҡыусылар башлап ебәрә. 1905/06 уҡыу йылында был гимназияла балалар 2200 дәрес ҡалдыра, шуның өстән бер өлөшө һәр төрлө демонстрацияларҙа һәм йыйылыштарҙа ҡатнашыу сәбәпле ҡалдырыла [1].

Уҡыусыларҙың иң революцион ҡарашлылары большевиктар сафына баҫа, улар ҡала эшселәре араһында агитация һәм ойоштороу эше алып бара. Шундайҙарҙың береһе А. П. Серебровский (1884—1943) хөр фекерлелеге өсөн гимназиянан ҡыуыла. Төрлө ҡаршылыҡтарҙы йырып үтеп, ул 1900 йылда тимер юл мастерскойҙарында эшләү менән бергә гимназияның тулы курсы өсөн экстерн тәртибендә имтихан тапшыра. 1903 йылдан партия ағзаһы Серебровский Рәсәйҙәге революцион хәрәкәттә актив ҡатнаша. Эмиграцияла сағында В. И. Ленин менән таныша һәм, уның кәңәшен тотоп, Брюсселдә Юғары техник училищены тамамлай. Октябрь революцияһынан һуң ул совет индустрияһының иң талантлы етәкселәренең береһе, күп кенә фәнни хеҙмәттәрҙең авторы була. Хәҙерге ваҡытта Азербайжан нефть промышленносының иң ҙур предприятиеһы А. П. Серебровскийҙың исемен йөрөтә. Дауыллы 1905 йылда тағы бер гимназист — Б. Н. Нимвицкий ҙа (1885—1969) үҙенең яҙмышын большевиктар партияһы менән бәйләй һәм аҙаҡ күренекле партия эшмәкәре булып китә. Ир балалар гимназияһында уҡыусылар забастовкаһын ойоштороуҙан башлап, ул 1905—1907 йылдарҙағы революцияла ҡатнаша, ҡаланың боевой дружинаһы ағзаһы була. Гимназистар

[1] ЦГА БАССР, ф. 119, оп. 1, д. 166, л. 17.

А. П. Серебровский.



И. С. Кадомцев, В. И. Алексеев, В. Ф. Горелов, реалист В. П. Густомесов һәм башҡа бик күптәр революцион көрәштәрҙә ҡатнаша.

XX быуат башында Өфөлә бер генә махсус урта мәктәп — ер төҙөүселәр училищеһы була. 1912 йылда яңы уҡыу йорто — коммерция училищеһы асыла, ул Өфөнөң үҙ-ара кредит биреп тороу йәмғиәте средстволарына эшләй. 1909 йылда асылған сауҙа мәктәбе менән бер рәттән ул яңы дәүер шарттарында оҫта эш алып барырға һәләтле белемле буржуалар, шулай уҡ капиталистар өсөн кәрәкле кадрҙар әҙерләп сығарырға тейеш була.

Профессиональ белем биреүсе мәктәптәр араһында земство инициативаһы менән 1908 йылда Өфө губерна земство больницаһы эргәһендә асылған акушер-фельдшерҙар мәктәбе күренекле урын алып тора, ул губерналағы земство медицина учреждениеларын урта квалификациялы белгестәр менән тәьмин итә. 1915/16 уҡыу йылында унда 119 ҡыҙ уҡый [1].

Халыҡ мәғарифы системаһын үҫтереү квалификациялы педагогтар әҙерләү мәсьәләһен ныҡышмалы рәүештә алға ҡуя. Өфө йәмәғәтселеге ҡалала махсус педагогик уҡыу йорттары асыу мәсьәләһен властар алдында бер нисә тапҡыр ҡуйып ҡарай, ләкин һәр саҡ уларҙың ныҡлы ҡаршылығына осрай. Ниһайәт, батша хөкүмәте Өфөлә уҡытыусылар институты һәм уның эргәһендә башланғыс мәктәп уҡытыусылары әҙерләү өсөн ҡала училищеһы асырға мәжбүр була. Институт 1909 йылдың 4 октябрендә тантаналы рәүештә асыла; ләкин донъя һуғышы башланып китеп, уның эшләүе өсөн ҙур ҡыйынлыҡтар тыуа. Эшләүенең тәүге 10 йылында институтты 180 кеше тамамлай, улар араһында бер нисә генә башҡорт, татар була. Халыҡ мәктәптәренең квалификациялы кадрҙарға ҙур мохтажлыҡ кисереүе бындай шарттарҙа һис тә ғәжәп түгел. 1916/17 уҡыу йылында, мәҫәлән, губерналағы башланғыс мәктәп уҡытыусыларының 18,1 проценты ғына махсус педагогик белемле, 35,7 проценты дөйөм урта белемле була, ә 46,2 процентының урта белеме лә булмай.

Губерна земствоһы халыҡ мәктәптәре өсөн кадрҙар әҙерләүҙе һәр төрлө курстар системаһы аша тормошҡа ашырырға тырышып ҡарай,

---

[1] Отчет по акушерско-фельдшерской школе Уфимского губернского земства. Өфө, 1916. Ҡушымта: «Список учениц акушерско-фельдшерской школы на 1915—1916 учебный год».

ләкин земствоның был башланғысы, Халыҡ мәғарифы министерствоһы ҡорған кәртәләрҙе үтеп, артабан йәйелдерелә алмай. Тик 1915/16 уҡыу йылында ғына рус-башҡорт һәм рус-татар башланғыс мәктәптәре уҡытыусылары әҙерләү буйынса өс йыллыҡ татар-башҡорт педагогик курстарын асыуға өлгәшелә. Уларға 20 егет һәм 9 ҡыҙ ҡабул ителә. Педагогик курстар шулай уҡ ҡайһы бер юғары башланғыс һәм ҡыҙҙар училищелары эргәһендә лә ойошторола. Губерна земствоһының Өфөлә татар-башҡорт уҡытыусылар семинарияһын асыу хаҡында Халыҡ мәғарифы министерствоһы алдында юллауы (1898 йылдан 1912 йылға тиклем земство ошо мәсьәлә буйынса министерствоға 13 тапҡыр мөрәжәғәт итә!) яҡлау тапмай.

А. Н. Заварицкий.



Дини уҡыу йорттары үтә сикләнгән һәм консерватив характерҙа була. Улар — ир балалар дини училищеһы (хәҙер Башҡорт дәүләт университетының биология факультеты бинаһы, Фрунзе урамы, 32), ҡыҙҙар епархиаль училищеһы (хәҙер 1-се һанлы ҡала клиника больницаһы бинаһы, Туҡай урамы, 48) һәм дини семинария — сиркәү хеҙмәткәрҙәре һәм башланғыс мәктәптәр өсөн уҡытыусылар әҙерләй.

Рус булмаған халыҡтарға белем биреү бик ауыр шарттарҙа алып барыла. Башҡорт һәм татар балалары өсөн асылған мәктәптәр руслаштырыу маҡсатын тота. Туған тел уҡытылмай, милли үҙенсәлектәр һәм ихтыяждар һанға һуғылмай. Шул сәбәпле был мәктәптәр халыҡ араһында танылыу тапмай, уларҙың һаны сағыштырмаса аҙ була. 1913 йылда Өфөлә ҡыҙҙар өсөн ике класлы 2 рус-башҡорт училищеһы һәм ир балалар өсөн 2 рус-башҡорт училищеһы (береһе — ике класлы, икенсеһе — бер класлы) эшләй. 1915 йылда ошо уҡыу йорттарында ни бары 356 кеше уҡый. Бынан тыш, рус-мари мәктәбе (ул 1911 йылда Бөрөгә күсерелә) һәм мөсөлман приюты эргәһендә ҡарттар һәм малайҙар өсөн рус-татар мәктәбе эшләй. Бер класлы мәктәптәрҙә уҡытыу 4 йыл, ике класлыларында 6 йыл дауам итә. Төп иғтибар рус теле һәм дин уҡытыуға бирелә. Арифметика, география, тәбиғәт фәндәрен уҡытыу бик дөйөм характерҙа була. Рус-башҡорт мәктәптәре эшендәге етешһеҙлектәргә ҡарамаҫтан, улар башҡорт, татарҙарҙы уҡытыуҙа ыңғай роль уйнай һәм уларға алдынғы рус культураһына юл аса.

Шулай ҙа башҡорттар менән татарҙар араһында иң киң таралғаны милли мәктәптәр (башланғыс) һәм мәҙрәсәләр (урта) була, улар халыҡ аҡсаһына мосолман мәхәлләләрендә ойошторола һәм дини-схоластик характерҙа була. Ындай мәктәптәрҙә берҙәм про-

грамма, күргәҙмә әсбаптар, яҡшы дәреслектәр булмай, уҡытыу төрки телендә алып барыла. Уҡытыу, ҡағиҙә рәүешендә, махсус педагогик әҙерлеге булмаған муллалар ҡулында була. Шәкерттәр, мәҙрәсәләрҙә күп йылдар үткәреүенә ҡарамаҫтан, грамотаны һәм ислам дине нигеҙҙәрен бик яй үҙләштерә.

Капитализмдың үҫеүе менән, милли мәктәптәр ҙә ҙур үҙгәреш кисерә. Татар, башҡорт буржуазияһы хакимлыҡ итеүсе рус буржуазияһы менән тиң булмаған ҡаты конкуренция көрәше алып бара һәм техник грамоталы хеҙмәткәрҙәргә мохтажлыҡ кисерә. Ул үтә ҡырағай феодализм ҡалдыҡтарын бөтөрөү менән ҡыҙыҡһынған хәлдә мосолман мәктәптәрен европалаштырырға тотона. Яңыса үҙгәртеп ҡоролған, йәки йәдид (йәдид — ғәрәпсә «яңы»), мәктәптәрҙә тауыш методы буйынса ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә грамотаға өйрәтелә, уҡытыу татар телендә була. Бында дини фәндәр генә түгел, бәлки тәбиғәт һәм гуманитар фәндәр өйрәнелә. Улар күргәҙмә әсбаптар ҡулланып, класс системаһы менән алып барыла.

XIX быуат аҙағында яңы метод менән уҡытыу Башҡортостан мәктәптәренә лә тарала. Яңыса үҙгәртеп ҡоролған тәүге мәктәпте бай сауҙагәр Ғәни Хөсәинов һалдыра. Ул шулай уҡ уҡытыусылар курсы астыра, был курстарҙа 1899—1901 йылдарҙа яңы мәктәптәр өсөн 210 уҡытыусы (мөғәллим) әҙерләнә. 1913 йылда Өфө губернаһындағы мәктәптәрҙең күбеһе яңыса уҡытыуға күсерелә (849 һәм 1579) [1]. Ләкин уларҙың бөтәһе лә тейешле кимәлгә күтәрелә тип әйтеп булмай, күбеһе күсеү осоро кисерә. Ныҡлап эшләнгән программалар, яҡшы әҙерлекле мөғәллимдәр, дәреслектәр, бина булмау эшкә ныҡ ҡамасаулай. Батша хөкүмәте иһә был мәктәптәргә бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтмәй.

Ҡалалағы мәктәптәрҙә һәм мәҙрәсәләрҙә уҡытыу кимәле ауыл ерҙәрендәгеләргә ҡарағанда юғарыраҡ була. Был шуның менән аңлатыла, үҙ араһынан уҡытыусылар әҙерләгән милли интеллигенция һәм үҙ аҡсаларына байтаҡ мәктәп һәм мәҙрәсә һалдырған бай буржуа-меценаттар башлыса ҡалала йәшәй. Беренсе донъя һуғышы башланыр алдынан Өфөлә ир балалар өсөн 4 һәм ҡыҙҙар өсөн 9 мәктәп эшләй, ә ҡыҙҙар өсөн ике мәктәп юғарыраҡ типта була, уны тамамлаусылар Өфө губернаһының яңы методлы мәктәптәрендә эшләй һәм иң яҡшы педагогтар булып иҫәпләнә. Ҡаланың дүрт мәҙрәсәһендә: «Ғосмания», «Ғалиә», «Хакимиә» һәм «Хөсәиниәлә» 580 шәкерт була (улар иҫәбенә «Хакимиә» мәҙрәсәһенең ҡыҙҙар төркөмө уҡыусылары ла инә).

Өфөләге иң өлкән мәҙрәсәләрҙән «Ғосмания» халыҡ араһында киң танылла, ул 1906 йылда үҙ бинаһына күсә (хәҙер Туҡай урамындағы 39-сы һанлы был йортта Башҡорт дәүләт педагогия инсти-

---

[1] Обухов М. И. Мектебы Уфимской губернии. Статистический очерк татарских и башкирских низких школ (мектебов) Уфимской губернии по данным исследования Уфимской губернской земской управы 1912—1913 годов. Өфө, 1915, 40-сы бит.

«Ғалиә» мәҙрәсәһе бинаһы.



тутының квалификация күтәреү факультеты урынлашҡан). Был мәҙрәсә муллалар һәм мөғәллимдәр әҙерләп сығара. 1905 йылға тиклем унда тик бай балалары ғына инеп уҡый алған, ярлы балалары өсөн ишеге ябыҡ булған. 1896 йылда Өфөгә килгән буласаҡ халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриға ла был мәҙрәсәлә урын табылмай. Беренсе рус революцияһынан һуң мәҙрәсә тормошонда һиҙелерлек үҙгәрештәр булып үтә: ул тамам яңы метод менән уҡытыуға күсә һәм дин әһелдәрен генә түгел, уҡытыусылар, китапханасылар, журналистар һәм башҡа шундай профессия кешеләре әҙерләй башлай.

Шулай ҙа был системала иң күренеклеһе «Ғалиә» мәҙрәсәһе була, ул 1906 йылда, юғары мосолман уҡыу йортона тип, халыҡтан йыйылған аҡсаға һалына (ғали — ғәрәпсә, ҙур, бөйөк, юғары). Ул Россияның татар, башҡорт һәм башҡа мосолман халыҡтарын ағартыуҙа ыңғай роль уйнай. 1908 йылда мәҙрәсә Өфө (хәҙер Чернышевский урамы) һәм Вавилов (хәҙер Нагорный) урамдары сатында уның өсөн махсус төҙөлгән бинаға күсә.

«Ғалиә» асылыу менән, бында Россияның бөтә мосолман райондарынан белемгә һыуһаған йәштәр, шулай уҡ башҡа мәҙрәсәләрҙең шәкерттәре ағыла башлай. «Ғалиәлә» бер йыллыҡ 3 әҙерлек класы һәм өс йыллыҡ 3 төп класс була. Башҡа мәҙрәсәләрҙәге кеүек, бында ислам ҡанундары өйрәнелә, шулай ҙа дөйөм белем биреүсе фәндәрҙе (алгебра, геометрия, физика, химия, тарих, география, тәбиғәт

белеме, рус теле, татар теле һәм әҙәбиәте, педагогика, гигиена) уҡытыу сағыштырмаса яҡшыраҡ ҡуйыла. Уның яҡшы йыһазландырылған физика, химия кабинеттары, бай китапханаһы була. Һәр уҡыусыға фәнни һәм донъяуи әҙәбиәт, татар, рус, ғәрәп һәм төрки телдәрендә сыҡҡан газета, журналдар уҡыу мөмкинлеге бирелә. «Ғалиә» уҡытыу процесының ҡуйылышы менән генә түгел, ә шәкерттәр араһында хөкөм һөргән хөр фекер рухы менән дә башҡа мәҙрәсәләрҙән айырылып тора. Бында йыш ҡына диспуттар, лекциялар, әҙәби кисәләр ойоштороло, татар, ҡаҙаҡ, үзбәк телдәрендә ҡулдан яҙып журналдар сығарыла. Уҡыусылар күңелендә революцион ваҡиғалар йәпле отклик таба. 1912 йылда шәкерттәрҙең ҙур ғына забастовкаһы була, унда протест йөҙөнән 65 уҡыусы мәҙрәсәне ташлап китә.

Мәҙрәсәләрҙә төрлө юғары уҡыу йорттарын тамамлаған белгестәр уҡыта. 1915 йылда уҡыусыларҙың талабы буйынса уҡытыусылыҡ эшенә ул саҡта уҡ инде яҡшы танылып өлгөргән яҙыусы, демократик йәштәрҙең яратҡан кешеһе Ғалимйән Ибраһимов (1887—1938) саҡырыла. Мәҙрәсә тормошо, ул килеү менән, тағы ла йәнләнеберәк китә, татар теле һәм әҙәбиәтен уҡытыу яҡшыра. Ғ. Ғ. Ибраһимовтан тыш, бында Ф. К. Сәйфи-Ҡазанлы, Й. Я. Абдюшев, З. Богданов, ҡатын-ҡыҙҙарҙан тәүге уҡытыусы Ф. А. Дәүләткилдиева һәм башҡа күренекле педагогтар һәм культура эшмәкәрҙәре эшләй.

Властар «Ғалиәне» өҙлөкһөҙ күҙәтеү аҫтына ала, фанатик муллалар иһә уға асыҡтан-асыҡ дошманлыҡ менән ҡарай. «Ғалиәлә» тыңлаусан муллалар һәм сауҙа, промышленность өлкәһендә эшләрҙәй уҡымышлы хеҙмәткәрҙәр тәрбиәләргә иҫәп тотҡан милли буржуазия ла ундағы демократик йүнәлеш менән ризаһыҙлыҡ белдерә. 1914 йылда либераль буржуалар мәҙрәсә кассаһына аҡса биреүҙән баш тарта һәм шуның менән уның ябылыуына иҫәп тота. Ләкин прогрессив интеллигенцияның ярҙамы менән «Ғалиә» ябылыуҙан ҡотолоп ҡала һәм эшмәкәрлеген дауам иттерә.

1906—1916 йылдарҙа мәҙрәсәлә 950 кеше белем ала, уларҙың күпселеге уҡытыусылар, милли культура һәм фән эшмәкәрҙәре булып китә. Ғ. Ғ. Ибраһимов, М. Ғафури, С. Ҡудаш, К. Ғ. Хәкимов, Б. Ишемғол, С. С. Атнағолов, Ш. М. Бабич, З. Ш. Насиров, Ғ. Х. Алпаров, С. Х. Ғәбәши, Ғ. Ғ. Ҡоҙаяров, М. А. Бикбулатов, Ә. Ф. Зөбәиров, Х. Ф. Туфан, С. Ф. Бәҙриев кеүек һәм башҡа бик күп башҡорт, татар культураһы эшмәкәрҙәре, йәмәғәт һәм дәүләт эшмәкәрҙәре «Ғалиә» мәҙрәсәһенән сыға. Башҡа милләт халыҡтарының байтаҡ яҙыусылары һәм шағирҙарының, культура эшмәкәрҙәренең исемдәре (ҡаҙаҡ Б. Майлин, Ж. Теләнбиргәнов, Н. Манаев, А. Мостафин, адыгей Т. Керашев, А. Хатков, үзбәк М. Ширмөхәммәтов, Б. Сәлиев, ҡырғыҙ И. Аралбаев) «Ғалиә» мәҙрәсәһе менән бәйләнгән.

Фәҡәт халыҡтан йыйған аҡса иҫәбенә йәшәп, тулыһынса мосолман руханиҙары һәм буржуазия йоғонтоһонда булған мәктәптәр һәм

мәҙрәсәләр хеҙмәтсән башҡорттарға һәм татарҙарға алдынғы культураға, фәнгә юл аса алмай. Шуға күрә милли мәктәптәрҙә уҡытыу процесының ҡуйылышы менән риза булмаған прогрессив ҡарашлы йәштәр, Февраль буржуаз-демократик революцияһы еңгәндән һуң уҡ, татар-башҡорт ир балалар гимназияһын асыу өсөн аҡса йыя башлай. Хөкүмәт гимназиялары программаһы буйынса эшләргә тейеш булған был гимназия 1917 йылдың көҙөндә асыла.

Ф. А. Дәүләткилдиева.



Халыҡ массаларын ағартыуҙа китапханалар мөһим роль уйнай, уларҙың һаны XX быуатта аҡрынлап үҫә башлай. 1909 йылдың апрелендә Аксаков китапханаһы тип йөрөтөлә башлаған Өфө ҡала китапханаһының татар телендәге әҙәбиәтте лә эсенә алған ҙур китап фонды була. Башта ул ҡала думаһы бинаһында (хәҙер бында — Ленин һәм Коммунистик урамдары мөйөшөндәге йортта «Белем» йәмғиәтенең Башҡортостан республика бүлексәһе) урынлаша, аҙаҡ С. Т. Аксаковтың Халыҡ йортона күсә. Өфө губерна статистика комитеты китапханаһы һәм губерна музейы эргәһендәге «Йәмәғәт» китапханаһы, сауҙагәр Н. К. Блохиндың китапханаһы бик бай була, Блохин ҙур китап магазины ла тота (хәҙер Башкниготоргтың 1-се китап магазины, Ленин урамы, 24). Хөкүмәт ҡарамағындағы ир һәм ҡыҙ балалар гимназияларының, коммерция, ер төҙөүселәр һәм реаль училищеларҙың, «Ғосмания», «Хакимиә» мәҙрәсәләренең һәм башҡа уҡыу йорттарының да китапханалары була.

XX быуат башында крайҙы өйрәнеү менән ҡыҙыҡһыныу үҫә. Илдә капитализмдың һәм промышленностың үҫеше өсөн сырье һәм яғыулыҡтың яңы сығанаҡтарын асыуҙы талап итә. Башҡортостандың тәбиғи байлыҡтарын өйрәнеүҙә А. Н. Заварицкий, А. Н. Замятин, Ф. И. Кандыкин һәм башҡа геологтарҙың тикшеренеүҙәре ҙур роль уйнай. Ғалимдар: М. М. Ильин, И. М. Крашенинников, С. С. Неуструевтың хеҙмәттәрендә край территорияһының айырым өлөштәренә физик-географик, геоботаник һәм тупраҡ йәһәтенән характеристика бирелә. Рус тупраҡты өйрәнеү фәненә нигеҙ һалыусы В. В. Докучаев та Башҡортостан тупрағын өйрәнеү менән шөғөлләнә.

Өфө губерна земствоһы XIX быуат аҙағында Башҡортостандың экономик хәле тураһында бай фактик материал йыя. Тикшереү һөҙөмтәләре 1898—1910 йылдарҙа «Өфө губернаһы буйынса статистик мәғлүмәттәр йыйынтығы» тигән дөйөм исем аҫтында ун томда баҫылып сыға. Унда һәр өйәҙҙең геологик ер өҫтө төҙөлөшөнә, тупраҡ-

үҫемлек ҡатламына, климат шарттарына характеристика бирелә, уның физик-географик һәм хужалыҡ шарттары ентекле тасуирлана. Өфө губернаһында 1912—1913 йылдарҙа үткәрелгән крәҫтиән хужалыҡтарын йорт беренсә иҫәпкә алыу материалдары экономик тарихты өйрәнеүҙә бик ҡиммәтле мәғлүмәт бирә. Күренекле статистиктар-экономистар большевиктар А. М. Брагин менән М. П. Красильников крайҙың халыҡ хужалығын өйрәнеү буйынса ҙур эш алып бара.

1905 йылда Өфөлә тәүге ғилми-тикшеренеү учреждениеһы — Пастер станцияһы барлыҡҡа килә. Тиҙҙән ул бактериология лабораторияһы итеп үҙгәртелә, ә 1908 йылдан губерна земствоһы бактериология институты булып китә (хәҙер И. И. Мечников исемендәге Өфө вакцина һәм сывороткалар ғилми-тикшеренеү институты). 1917 йылда унда 25 кеше, шул иҫәптән 6 врач, эшләй. Был ваҡытта инде институт 7 төр бактериологик препарат эшләп сығара. Институттың эшмәкәрлеге ныҡ сикләнгән булһа ла, йыш ҡына тотош райондарҙа эпидемиялар ҡотороноған, артта ҡалған край шарттарында ул, һис шикһеҙ, ыңғай роль уйнай.

1908 йылда ҡаланың алдынғы ҡарашлы интеллигенцияһы «Урындағы крайҙы өйрәнеү йәмғиәтен» ойоштора, уға уҡытыусылар, врачтар, земство работниктары һәм башҡалар инә. «Йәмғиәткә» 2-се ҡыҙҙар гимназияһы уҡытыусыһы В. И. Филоненко етәкселек итә. Ул край тарихы буйынса иң ҙур хеҙмәттәрҙең береһе — «Башҡорттар» китабын яҙа, был хеҙмәт 1916 йылда Өфөлә айырым китап булып баҫылып сыға. Унда башҡорт халҡының борондан алып XIX быуатҡа тиклемге тарихы күрһәтелә. Автор, тарихи процесты фәнни, марксистик-ленинсы ҡараштан сығып яҡтыртыуҙан алыҫ торһа ла, царизмдың Башҡортостандағы колониаль политикаһын хуплаусы рәсми тарихсыларға эйәреүҙән баш тартып, башҡорт халҡының тарихи үҫешендәге төп этаптарҙы, уның батша хөкүмәте менән мөнәсәбәттәрен яңыса аңлатырға ынтылыш яһай.

«Урындағы крайҙы өйрәнеү йәмғиәте» үҙ тирәһенә иң белемле кешеләрҙе туплауға өлгәшә. Үҙ баҫма органы булмаһа ла, ул эшендә урында баҫылған әҙәбиәтте киң файҙалана. 1912 йылда Өфөлә ай һайын сығыусы «Вестник Оренбургского учебного округа» журналында урындағы крайҙы өйрәнеүселәрҙең ғилми хеҙмәттәре йыш баҫыла. Улар араһында ир балалар гимназияһы уҡытыусыһы В. А. Ефремовтың Өфө тарихы һәм крайҙы колониялаштырыу, башҡорттарҙың экономикаһы һәм көнкүреше буйынса мәҡәләләре айырыуса әһәмиәтле. Крайҙы өйрәнеү-тарих буйынса ҡиммәтле материалдар «Рус географик йәмғиәтенең Ырымбур бүлеге хәбәрҙәре» һәм «Ырымбур фәнни архив комиссияһы хеҙмәттәре» биттәрендә лә күренгеләй.

Фәндең төрлө тармаҡтары буйынса хеҙмәттәр Өфөлә татар телендә сыҡҡан «Мәғлүмәт мәхкәмәи шәрғиә» журналында ла баҫыла. Журналды сығарыуҙа күренекле тарихсы, «Мофассал тарих ҡәүм төрки» («Төрки ҡәбиләләренең ентекле тарихы») китабының авторы

Х. Мөхәмәтов-Ғәбәшиҙең ҡатнашыуы уның биттәрендә тарих буйынса тикшеренеүҙәрҙең баҫылыуына булышлыҡ итә. Журналда П. И. Рычковтың татар теленә тәржемә ителгән «Ырымбур тарихы», «Өфө губернаһында 1556 йылдан алып хәҙерге ваҡытҡа тиклем булған иң мөһим тарихи ваҡиғалар хроникаһы», венгер ғалимы Вамбериҙың «Бохара тарихы» китабынан бер бүлек һәм башҡа шуның кеүек мәҡәләләр күп күрә.

XIX быуат аҙағында — XX быуат башында Өфөлә милли интеллигенцияның күп кенә күренекле вәкилдәре йәшәй. Улар араһында киң мәғлүмәтле булыуы менән Р. Ф. Фәхретдинов (1859—1936) айырым урын алып тора. Үтә ҡаршылыҡлы ҡарашта тороуына ҡарамаҫтан, ул Урал — Волга буйы төрки телдәре өлкәһендә күп эшләгән күренекле ғалим, көнсығыш телдәре белгесе, яҙыусы, журналист, күп томлы «Әҫәр» хеҙмәтенең авторы була. «Әҫәрҙә», атап әйткәндә, башҡорт, татар культураһының байтаҡ эшмәкәрҙәренең тормошо һүрәтләнә [1]. Польшаның «Слово» газетаһының быуат башында Башҡортостанға килеп киткән махсус хәбәрсеһе И. А. Урсын ғалим, яҙыусы Р. Ф. Фәхретдиновтың эшмәкәрлегенә бик юғары баһа бирә. «...Башҡорт проза яҙыусыларынан иң яҡшыһы булып Ризаэтдин Фәхретдинов иҫәпләнә, — тип яҙа ул. — Уның әҫәрҙәре — башҡорт, татар хөрәфәттәренә бына тигән сатира. Ул Европа мәғрифәтселегеге яҡлы кеше» [2].

Беренсе рус революцияһы алдынан ил тормошоноң бөтә сфераларын солғап алған киң демократик күтәренкелек, культураның йәнләнеүе халыҡ массаларының хәл-әхүәле һәм ижады менән ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Башҡорт халҡының да ауыҙ-тел ижады менән ҡыҙыҡһыныу көсәйә. Башҡорт әкиәттәрен русса баҫтырып популярлаштырыуҙа айырыуса М. Лось һәм Д. Зелениндың хеҙмәттәре ҙур. 1912 йылда М. Лось «Вестник Оренбургского учебного округа» журналында башҡорт әкиәттәренең 8 өлгөһөн баҫтыра. Д. Зеленин «Пермь губернаһының великорусс әкиәттәре» тигән йыйынтыҡҡа (Петроград, 1914) ҡушымта итеп 12 башҡорт әкиәтен урынлаштыра. 1901 йылдың йәйендә Өфөгә күренекле венгер ғалимы, башҡорт халыҡ йырҙарын йыйнаусы Вильгельм Прёле килә, ул аҙаҡ башҡорт халҡының йыр ижады өлгөләрен немец телендә баҫтырып сығара [3].

XX быуат башында халыҡ мәғарифы һәм фән, батша хөкүмәтенең асыҡтан-асыҡ аяҡ салыуына ҡарамаҫтан, билдәле үҫешкә өлгәшә. Уның емештәре Өфөлә лә күренә: яңы уҡыу йорттары асыла, ҡалалағы башҡорт һәм татарҙарҙы ағартыуҙа тәүге аҙымдар яһала, Башҡортостандың тәбиғи ресурстарын һәм экономикаһын өйрәнеү төплөрәк характер ала. Шуның менән бергә фәндең практиканан

[1] Харисов Ә. И. Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы (XVIII—XIX быуаттар). Өфө, 1973, 190, 191-се биттәр.
[2] Шунда уҡ, 277-се бит.
[3] Шунда уҡ, 111-се бит.

айырылғанлығы, самодержавие шарттары быуып торған мәғариф системаһының артта ҡалғанлығы тағы ла нығыраҡ күҙгә ташлана. Фәҡәт Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы ғына фән һәм мәктәпте, феодаль-бюрократизм бығауҙарынан азат итеп, халыҡҡа хеҙмәт итеүгә, социализм төҙөлөшөнә хеҙмәт итеүгә ҡуйҙы.

## § 2. Матбуғат

Империализм дәүерендә эшселәр хәрәкәтенең ҡеүәтле күтәрелеше һәм эшселәр синыфының политик аңы үҫеүе, крәҫтиәндәрҙең һәм ҡала ярлыларының политик тормошҡа уяныуы газета-журналдарға һәм китапҡа ихтыяжды арттыра, йәмғиәттең башҡа ҡатламдарының да баҫма әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныуы үҫә. Ваҡытлы матбуғаттың һәм китап нәшриәте эшенең йылдам үҫешенә 1905—1907 йылдарҙағы буржуаз-демократик революция көслө этәргес бирә. Тап бына революция көндәрендә Өфөлә рус телендә баҫылған газета-журналдар һаны арта, татар-башҡорттарҙың милли матбуғаты барлыҡҡа килә.

XIX быуат аҙағында — XX быуат башында Өфөлә ни бары бер газета — «Уфимские губернские ведомости» ғына сыға. Унда, нигеҙҙә, рәсми материалдар ғына баҫыла. Күп мәҡәләләрҙе ул үҙәк газеталарҙан, айырыуса консервативлығы менән даны сыҡҡан «Московские ведомости» газетаһынан ала. Газета Россиялағы крепостной ҡоролоштоң быуаттар буйы нығынған терәктәрен яҡлай, революцион хәрәкәткә генә түгел, хатта буржуаз либерализмдың һәр төрлө күренештәренә лә дошманлыҡ менән ҡарай. 1905—1907 йылдарҙағы революцияны ул «ҡәбәхәт эске бер фетнә» тип атай һәм уны Россия «хыянатсылары менән енәйәтселәренең эше» тип иҫәпләй. Газетаға бигерәк тә рус булмаған халыҡтарҙың революцияла ҡатнашыуы оҡшамай, был, газетаның фекеренсә, илгә тарҡалыу һәм һәләкәт ҡурҡынысы менән янай. Газета Көнсығыш халыҡтарына ҡарата «Россияның тарихи миссияһы» — «монгол-мәжүсилек донъяһына уның христианлыҡ цивилизацияһы алдында түбән булыуын раҫлаусы дәлилдәр биреү...» [1] миссияһы тураһындағы фекерҙе ныҡлап үткәрергә тырыша. «Уфимские губернские ведомости» газетаһының рәсми булмаған өлөшөнән 1909 йылда үҙ аллы газета булып сыға башлаған «Уфимский край» шундай уҡ һөрһөгән ҡарагоруһсылар, монархия рухында була.

«Уфимские епархиальные ведомости» журналы крайҙың православие руханиҙары органы булып ҡала. Унда хөкүмәт, сиркәү ҡарарҙары һәм бойороҡтары, дин идаралығы ҡарамағындағы уҡыу йорттары тураһында хәбәрҙәр, күп һанлы дини вәғәздәр һәм руханиҙарҙың халыҡҡа мөрәжәғәттәре баҫыла. Журнал христиандарҙа «батшаға һәм Ватанға сикһеҙ һөйөү» тәрбиәләүҙе төп бурыс итеп

[1] «Уфимские губернские ведомости», 1904, 15 июль.

ҡуя; Башҡортостан халыҡтары араһында исламды таратыуға ҡаршы көрәш мәсьәләһенә ҙур иғтибар бирә. Руханиҙар халыҡ массаларына йоғонто яһау сараһы итеп баҫма һүҙҙең мөмкинлектәрен тулыһынса файҙаланырға тырыша. Ошо маҡсатта 1913 йылда «Сеятель» тигән дини журнал сығарыла башлай, уның биттәрендә дин-әхлаҡ темаларына мәҡәләләр, хикәйәләр һәм һүрәттәр урынлаштырыла. 1916 йылда сиркәү тағы бер реакцион рухлы «Заволжский летописец» журналын сығара башлай.

Шулай ҙа реакцион-монархик һәм сиркәү-дин матбуғаты киң тарала алмай һәм ҙур йоғонто менән файҙаланмай. Уларҙы Өфө дворяндары, чиновниктар, руханиҙар, ҡарагоруһсы обывателдәр уҡый.

17 октябрҙә батша манифесы баҫылғандан һуң, Өфөлә ҡала либераль буржуазияһының һәм буржуазлашҡан помещиктарҙың мәнфәғәттәрен сағылдырған шәхси «Уфимский вестник» газетаһы сыға башлай. Ул йыш ҡына хеҙмәтсән массаларҙың материаль һәм хоҡуҡи яҡтан ауыр хәлен яҡтырта, ҡайһы бер реформалар кәрәклеген нигеҙләй. Күренеп торған консерватив йүнәлештә булыуына ҡарамаҫтан, властар уны ла ҡыҫымға ала: штрафтар, иҫкәртеү яһай, ҡулдан һатыуҙы тыя. 1906 йылда ғына ла «Уфимский вестник» 4 тапҡыр баҫыуҙан туҡтатыла, ә уның редакторҙары адвокат П. М. Сокуровты һәм Н. Н. Быховскийҙы «Һуйырға теләйҙәр», «Бәләкәй закон сығарыусылар», «Суд һәм язалау экспедицияһы», «Һайлау алды мутлыҡтары» мәҡәләләрен баҫҡандары өсөн суд яуаплылығына тарттыралар. «Һуйырға теләйҙәр» тигән мәҡәләһендә газета Өфө губерна төрмәһендә политик тотҡондарҙың ҡот осҡос шарттарҙа тотолоуы хаҡында яҙа, уларҙы енәйәтсе элементтар ҡулы менән үлтерергә йыйыныуҙары тураһында иҫкәртә. Судта «Политик тотҡондарҙың Өфө округ суды прокурорына асыҡ хаты», шулай уҡ «Бөтә намыҫлы кешеләргә» хат һәм политик тотҡондарҙы мәсхәрәләү, көс ҡулланыу кеүек факттарҙы раҫлаусы кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр килтерелһә лә, П. М. Сокуров менән Н. Н. Быховскийҙы ғәйепле тип табалар һәм төрмәгә ябалар.

1907 йыл башында властар «Уфимский вестник» газетаһын яба, уның урынына «Вестник Уфы» сыға башлай. Уның редакторы булып тимер юл мастерскойҙары хисапсыһы Н. А. Трубников иҫәпләнһә лә, ғәмәлдә иһә уны сығарыуға П. М. Сокуров етәкселек итә. Һуғыш йылдарында газета тағы ла бер тапҡыр исемен үҙгәртә, үҙенең элекке — «Уфимский вестник» исемен йөрөтә башлай. 1915 йылда ҡалала конституцион-демократик партияның күренекле эшмәкәре граф П. П. Толстой нигеҙ һалған яңы «Уфимская жизнь» газетаһы сыға.

Өфө буржуаз-помещиктар газеталары революцион хәрәкәткә, большевиктар партияһына ҡаршы сыға, йәшәп килгән ҡоролошто яҡлай. Донъя һуғышы осоронда ул оборона лозунгыларын алға һөрә, үҙ биттәрендә ялған патриотизм тураһында һөрән һала һәм халыҡтың ҡайһы бер ҡатламдарын солғап алған шовинизм утын дөрләтеп ебәрергә ынтыла.

Өфөләгө легаль прессанан иң һул баҫмаларҙан береһе «Южный Урал» газетаһы була. Уны Н. В. Верниковская ойоштора, редакторы адвокат Д. В. Резанцев була. Ләкин газета оҙаҡ йәшәмәй: 1906 йылдың 19 декабрендә уның тәүге һаны донъя күрә, ә 1907 йылдың 5 ғинуарында дүртенсе, һуңғы, һаны баҫыла. Ул илдең эске тормошон ентекле яҡтырта, Өфө губернаһындағы крәҫтиәндәрҙең асығыуы, икмәк менән һатыу итеү тәртибен боҙоу, полицияны тотоуға сығымдарҙың артыуы һәм башҡа шундай факттар хаҡында яҙа. «Южный Урал» ҡарагоруһсыларҙы, бигерәк тә хөкүмәттең яҡлауы менән файҙаланған «Союз русского народа» ойошмаһын, ҡырҡа тәнҡит аҫтына ала, уны «яллапған үлтереүселәр шайкаһы» тип атай. Ваҡ буржуаз массаларҙың томаналығын һәм наҙанлығын газета реакцияның союздаштары тип иҫәпләй. «Ләкин тормош үҙенекен итә,— тип яҙа ул.— Капитализм миллиондарса ауыл халҡын Россияның бер яғынан икенсе яғына күсереп йөрөтөүсе тимер юлдары, земство мәктәптәре һәм башҡа шундайҙар менән иҫке хөрәфәттәрҙе йыллап түгел, көнләп үҙгәртә.

Был процесҡа үҙенең язалау экспедициялары, пулеметтары, казактары, хәрби-ялан судтары менән самодержавие режимы тырышып булышлыҡ итә.

Һәм, шик юҡ, яңы Россия яғына, йәмғиәт ташландыҡтары һәм уларҙың эшәке ялсыларынан башҡа, бөтә Россия баҫасаҡ сәғәт яҡынлай [1]. Реакция ҡоторонған шарттарҙа газета оҙаҡ йәшәй алмай. «Ҡара партия» тигән мәҡәләһе өсөн ул суд яуаплылығына тартыла һәм ябыла, ә редакторы ҡулға алына.

Революциянан һуңғы осорҙа Өфөлә махсус матбуғат органдары барлыҡҡа килә. 1908 йылда сыға башлаған «Сельскохозяйственный листок Уфимского губернского земства» журналының тематикаһы күп төрлө була; 1912 йылда ул «Уфимский сельскохозяйственный листок» тип исемләнә башлай. Ауыл хужалығы темаларына яҙылған мәҡәләләр менән бер рәттән уның биттәрендә иң мөһим халыҡ-ара һәм илдәге ваҡиғалар, губерна земствоһы үткәргән саралар тураһында хәбәрҙәр әленән-әле баҫылып тора. Журнал, башлыса, эре ер биләүселәр һәм кулактар мәнфәғәтенә хеҙмәт итеп, ауыл ярлыларының яҙмышы менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмай.

Губерна земствоһының санитар бюроһы тарафынан 1909 йылда сығарылған «Врачебно-санитарная хроника Уфимской губернии» журналында губерналағы медицина учреждениеларының эшмәкәрлеге тураһында бай материал табырға мөмкин. Шундай уҡ журналды ҡала идараһы ла сығара («Врачебно-санитарная хроника. Сведения о медико-санитарной и санитарно-ветеринарной организациях г. Уфы»).

Губерна земствоһының «Бюллетень народного образования» (1915—1916), «Вестник Оренбургского учебного округа» (1912—

---

[1] «Южный Урал», 1907, 4 ғинуар.

1915) журналдарында мәктәптә һәм мәктәптән тыш белем биреү, культура-ағартыу учреждениеларының торошо, башҡорттар һәм татарҙар араһында мәғариф мәсьәләләренә арналған мәҡәләләр баҫыла. 1910—1911 йылдарҙа Өфө ғаилә-педагогика йәмғиәте тарафынан ата-әсәләр, тәрбиәселәр һәм уҡытыусылар өсөн «Вестник семьи и школы» тигән журнал сығарыла.

1906 йылдың 3 майында татар телендә «Әл-ғәләм әл-ислами» («Мосолмандар донъяһы») милли газетаһының беренсе һаны донъя күрә. Газета либераль татар-башҡорт буржуазияһы органы була һәм Россиялағы мосолман халыҡтарҙың берҙәмлегенә саҡыра. Ул синыф, синфи көрәш төшөнсәләрен бөтөнләй инҡар итә, шулай ҙа милли иҙеүгә ҡаршы баҙнатһыҙ ғына булһа ла протест белдерә. Газета I Дәүләт думаһының асылыуын «Шатлыҡ ҡояшы сыҡты!» тигән һүҙҙәр менән ҡыуанып ҡаршы ала. Ул Думаның иғтибарын башҡорт крәҫтиәндәренең ерһеҙлегенә, Өфө губернаһындағы башҡорт, татарҙарҙың хоҡуҡһыҙлығына һәм уларҙы дәүләт идаралығы органдарында ҡатнашыуға йәлеп итеү кәрәклегенә йүнәлтергә ынтыла. Башҡорт шағиры С. С. Яҡшығолов газетала татар һәм башҡорттарҙы ағартыу хаҡындағы, ләкин милли мәктәптәрҙә туған тел уҡытыуҙы юҡҡа сығарыусы 1906 йылдың 31 мартында баҫылған русификаторлыҡ «Ҡағиҙәләрен» ғәйепләп сығыш яһай [1]. Батша властары редакцияның хөр фекерлелеккә аҙ ғына ынтылышын да иғтибарһыҙ ҡалдырмай. Полиция донесениеларында «Әл-ғәләм әл-ислами», ундай булмаһа ла, «һул йүнәлешле газета» [2] тип характерлана, ә уның редакторы Б. З. Мәҡсүтовты, «уҫал ниәтле» материалдар баҫтырып сығарғаны өсөн, ике айға төрмәгә ябалар һәм штраф түләтәләр. 1907 йылдың башында газета,ни бары 9 ай йәшәгәндән һуң, эҙәрлекләүҙәргә сыҙай алмай ябыла.

Беренсе рус революцияһы еңелгәндән һуң, Өфө милли газетаһыҙ тороп ҡала. 1913 йылдың 18 октябрендә генә эре татар, башҡорт буржуазияһы органы — «Тормош» [3] газетаһы сыға башлай. Уны шул исемдәге типография хужаһы, Өфө сауҙагәре Ғ. Усманов нигеҙләй. «Тормош» үҙенең һәр һанында синыфһыҙ мосолман йәмғиәте, бөтә мосолмандарҙың мәнфәғәттәре уртаҡ булыуы хаҡындағы идеяны алға һөрә. Урындағы, башҡорт баҙарын үҙенән көслөрәк рус буржуазияһы йоғонтоһонан тартып алырға ынтылған башҡорт, татар буржуазияһының мәнфәғәттәрен сағылдырып, «Тормош» милләтселек байрағын юғары күтәрә, уҡыусыларын шовинизм, милли сикләнгәнлек ағыуы менән ағыулай. Уның башҡа милләт крәҫтиәндәренең Башҡортостанға күсенеп ултырыуына дошманлыҡ менән ҡарауы ла осраҡлы булмай, сөнки, ти ул, «күпселек ер майҙандары ят

[1] «Әл-ғәләм әл-ислами», 1906, 14 декабрь.

[2] Национальные движения в период первой революции в России. Чебоксары, 1935, 268-се бит.

[3] «Тормош» Томскиҙан күсеп килә, унда газета «Себериә» тигән исем менән сыҡҡан була; 1918 йылдың 29 апрелендә йәшәүҙән туҡтай.

Мәжит Ғафури.



халыҡтар ҡулына күсәсәк, ул саҡта мосолмандар бик аҙсылыҡты тәшкил итәсәк»[1].

Башҡортостандың танылған яҙыусылары һәм шағирҙары М. Ғафури, Ғ. Ғ. Ибраһимов, Ш. М. Бабич, С. Л. Рәмиев, цензура ҡорған кәртәләрҙе урап үтеп һәм газета хужаһының шөһрәт һөйөүенән файҙаланып, унда үҙҙәренең демократик рухлы әҫәрҙәрен баҫтыра. Сәйфи Ҡудаш та бында үҙенең тәүге шиғри юлдары менән сығыш яһай.

Өфөлә татар телендә сыҡҡан журналдар араһында Ырымбур ислам дини собраниеһы органы «Мәғлүмәт мәхкәмәи шәргиә» иң күренеклеһе булып иҫәпләнә. Уның беренсе һаны 1908 йылдың 21 ғинуарында сыға. Журналда ислам дине мәсьәләләре буйынса хөкүмәт директивалары, Дини собраниеның мәхәлләләрҙең эше, яңы мәсеттәр һәм мәҙрәсәләр төҙөү һәм асыу, муллаларҙы тәғәйенләү, вәҡыф эштәре хаҡында ҡарарҙары һәм күрһәтмәләре баҫыла. «Рәсми булмаған» өлөшөндә дин, әхлаҡ мәсьәләләре буйынса мәҡәләләр, яңы сыҡҡан китаптарға рецензиялар, ил тормошо һәм сит илдәге ваҡиғалар тураһындағы хәбәрҙәр бирелә.

«Мәғлүмәт мәхкәмәи шәргиә» татар, башҡорт хеҙмәтсәндәре араһында мосолман руханиҙарының йоғонтоһон көсәйтеү өсөн баҫма һүҙҙе файҙаланырға ынтыла, прогрессив һәр нәмәгә, һәр яңылыҡҡа ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып бара, дини фанатизмды яҡлай. Ә урындағы халыҡтың ауыр тормошо тураһында яҙырға баҙнат иткән авторҙарҙың мәҡәләләрен батша властары һәм реакцион руханиҙар ҡаты ғәйепләй. Мәҫәлән, 1908 йылдың яҙында журнал хөкүмәттең һәр төрлө «Ҡағиҙәләр» сығарып, межалау һәм ревизиялар үткәреү хәйләһе менән башҡорт ерҙәрен баҫып алыуы тураһында депутат Ш. Сәйфетдиновтың II думаның ер буйынса комиссияһына прошениеһын баҫып сығара. Уны губернатор күреп ҡалып, Дини собрание органында халыҡты «болғандырырҙай» материалдар баҫылыу һис тә мәғҡүл эш булмауы хаҡында мөфтиҙе иҫкәртә; 1910 йылдың ноябрендә мөфтиҙең күрһәтмәһе буйынса журнал ябыла һәм яңынан 1916 йылда, мөфти үлгәндән һуң ғына, сыға башлай.

XX быуатҡа Өфө бик аҙ үҫешкән полиграфия базаһы һәм насар ойошторолған китап нәшриәте менән аяҡ баҫа. Нигеҙҙә, газета баҫыу менән шөғөлләнеүсе 6 типографиянан башҡа, ҡалала дәреслектәр, художестволы һәм махсус әҙәбиәт баҫыу өсөн йыһазландырылған бер

---

[1] «Тормош», 1917, 3 ноябрь.

генә типография ла булмай. Шулай ҙа 1917 йылда барлығы 81 мең дана тираж менән 102 исемле китап баҫылып сыға [1]. Китап продукцияһын нәшер итеү менән, башлыса, губерна земствоһы һәм статистика комитеты шөғөлләнә. Адрес-календарҙар, ауыл хужалығы календарҙары, перепись материалдары, белешмәләр, крайҙа ауыл хужалығының торошо, халыҡ мәғарифы тураһында статистик мәғлүмәттәр, земство йыйылыштары менән ҡала думаһының материалдары, ҡарарҙары һәм башҡа шундай продукция әленән-әле сыға килә. Улар араһында А. А. Гуляевтың 1914 йылда сыҡҡан «Иллюстрациялы Өфө» китабы художестволы биҙәлеше менән айырылып тора.



Ғ. Ғ. Ибраһимов.

Халыҡ массаларының аңын ағыуларға ынтылып, нәшриәт хужалары дини-монархик йөкмәткеле китаптарҙы, Башҡортостандың рус булмаған халыҡтарын көсләп христиан диненә күсереүҙе маҡсат итеп ҡуйған миссионерҙар өсөн ҡулланмаларҙы бик ихлас сығара. Тарих, география, медицина, математика буйынса китаптар ҡаланың полиграфия предприятиелары етештергән продукцияның бик аҙ өлөшөн генә тәшкил итә.

1905—1907 йылдарҙағы революция Өфөлә татар телендә китап баҫыу эшенең барлыҡҡа килеүе өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра. Беренсе милли «Шәреҡ» типографияһы 1908 йылда нигеҙләнә. Башта ул Ырымбурҙағы «Кәримов, Хөсәинов һәм К⁰» китап нәшриәтенә ҡарай, ә 1914 йылдан ағалы-ҡустылы Кәримовтарға күсә. Типография художестволы әҙәбиәт, фольклор һәм яңы метод менән эшләүсе мәктәптәр өсөн дәреслектәр баҫыуға махсуслаша. Бында М. Ғафури, Ғ. Х. Алпаров, С. Л. Рәмиев, Ф. К. Туйкин, С. С. Яҡшығолов кеүек шағирҙарҙың һәм яҙыусыларҙың әҫәрҙәре бер нисә баҫма булып сыға, ә 1910 йылда башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадының М. Ғафури яҙып алған «Заятүләк менән Һыуһылыу» [2] эпик поэмаһы донъя күрә. Был типографияла шулай уҡ ҡаҙаҡ яҙыусыларының әҫәрҙәре, ҡаҙаҡ мәктәптәре өсөн дәреслектәр, тарихи тикшеренеүҙәр (Ғ. Абыҙгилдин. «Мохтасар тарих ҡырғызия», Ғ. Ситдиҡов. «Тарих ҡырғыз Шадмания») баҫыла.

Татар телендә китап нәшриәте эше милли культураны туҡтауһыҙ эҙәрлекләү шарттарында алып барыла. Ҡайһы саҡта властар, артыҡ «тырышлыҡ» күрһәтеп, көлкөлө хәлгә лә ҡалып ҡуя. Мәҫәлән,

[1] Башкирия за 50 лет. Статистический сборник. Өфө, 1969, 128-се бит.

[2] Рус телендә ул беренсе тапҡыр танылған рус ғалимы һәм яҙыусыһы В. И. Даль тарафынан 1843 йылда «Москвитянин» журналының 1-се һанында «Башкирская русалка» тигән исем менән баҫып сығарыла.

1914 йылда батша администрацияһы Шушуҡ-оғлы тигән кешенең «Шәреҡ» типографияһында баҫылған «Ҡөрьәндән ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр» тигән китабын тыя. Китап авторына ҡаршы, уны «мосолманлыҡты пропагандалауҙа» ғәйепләп, суд эше ҡуҙғатыла. Ләкин судта был китаптың Өфө миссионерҙар йәмғиәте тарафынан миссионерҙар өсөн ҡулланма итеп сығарылыуы асыҡлана. Ә «Шушуҡ-оғлы» тигән псевдоним христиан-сиркәү әҙәбиәтен уҡымаған мосолмандарҙың иғтибарын йәлеп итеү өсөн кәрәк булған икән. Тәбиғи, бындай шарттарҙа милли телдә китап баҫыу эше киң ҡолас ала алмай. 1908—1917 йылдарҙа ҡала типографиялары 620 мең дана тираж менән барлығы 200 исемле китап сығарған [1]. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, китап баҫыу эшенең барлыҡҡа килеүе, беренсе газета һәм журналдарҙың сығыуы башҡорт, татар һәм ҡаҙаҡ милли культуралары үҫешендә мөһим роль уйнай.

## § 3. Әҙәбиәт һәм сәнғәт

XX быуат башында йылдан-йыл үҫә барған революцион күтәрелеш Россия халыҡтары әҙәбиәте һәм сәнғәтенә ғәйәт ҙур йоғонто яһай. Реалистик көстәр артта ҡалған, иҫкергән, ғүмере бөткән һәр нәмәгә ҡаршы көрәштә көс йыйып, нығый бара.

М. Ғафури, Ғ. Ғ. Ибраһимов, В. В. Брусянин, С. Ғиззәтуллина-Волжская, М. Н. Елгаштина, Н. А. Крашенинников, А. Ф. Зөбәиров, А. М. Таһиров, А. Э. Тюлькин кеүек күренекле культура эшмәкәрҙәренең ижады Башҡортостан әҙәбиәте һәм сәнғәтендә реализмдың бына тигән өлгөләре булып тора. Уларҙың сафы тормошта һәм сәнғәттә хаҡлыҡ эҙләүсе ижади йәш көстәр менән тулыланып тора.

Яңы быуат башында Өфөнөң әҙәби йөҙөн, иң элек, М. Ғафури, Ғ. Ғ. Ибраһимов һәм Ш. М. Бабичтың исемдәре билдәләй.

Башҡорт әҙәбиәтендә тәнҡитле реализмға нигеҙ һалыусы, башҡорт халҡының милли культураһында демократик һәм социалистик элементтарҙы барлыҡҡа килтереүсе шағир Мәжит Ғафури (Ғәбделмәжит Нурғәни улы Ғафуров) була. Ул 1906 йылдың көҙөнән алып ғүмеренең ахырына тиклем (1880—1934) Өфөлә йәшәй һәм эшләй. Оло ҡала һәм уның ижтимағи-политик ҡоролошо менән, фән һәм культура эшмәкәрҙәре менән танышыу йәш шағирға ифрат ҙур йоғонто яһай. Ләкин шунда уҡ капиталистик ҡала тормошоноң контраст яҡтары: берәүҙәрҙең фәҡирлеге, икенселәрҙең иҫ киткес байлығы күҙгә ташлана. Ҡалалағы башлыса башҡорт, татар хеҙмәтсәндәренең тормошон сағылдырған «Фәҡирлектә үткән тереклек» повесында М. Ғафури иҙелгән, йәберләнгән кешеләрҙең ҡараңғы тормошон иҫ киткес ҙур художестволы көс менән һүрәтләй.

[1] Каримуллин А. Г. Из истории татаро-башкирского книгопечатания в Башкирии. Доклад на Южноуральской конференции по археографии, источниковедению и архивоведению (1—4 февраля 1972 г.). (Стенограмма.)

Мәжит Ғафуриҙың барлыҡ ижады азатлыҡҡа ынтылыш рухы, халыҡтың бәхетле тормошо хаҡында уй-хыялдар менән һуғарылған. Бөтә милли интеллигенция кеүек, 1905—1907 йылдарҙағы революцияны ул бөйөк үҙгәрештәрҙең башы итеп бик шатланып ҡаршы ала. Шағир Дәүләт думаһына ла ҙур өмөт бағлай, ләкин тиҙҙән уның халыҡтың уй-хыялдарын тормошҡа ашырмаясағын аңлай. «1906 йылға 1907 йылдың яуабы» шиғырында М. Ғафури революция эшен дауам иттерергә саҡыра. Һуңыраҡ «1906 йылдан 1907 йылға васыят» тигән шиғыры өсөн ул полиция күҙәтеүе аҫтына алына. Унан шағирҙы тик революция ғына азат итә. Цензура М. Ғафуриҙың әҫәрҙәрен «йәшәп килгән йәмғиәт ҡоролошон бәреп төшөрөргә саҡырыу» тип билдәләй [1].

М. Ғафуриҙың ижтимағи һәм әҙәби позицияһы, уның мәғрифәтселек эшмәкәрлеге бөйөк пролетар яҙыусы Максим Горькийҙың һәм күренекле татар шағиры Ғабдулла Туҡайҙың көслө йоғонтоһонда тыуа.

1912 йылдың яҙында М. Ғафури үтеп барышлай Өфөлә туҡтаған ҡаты сирле Ғабдулла Туҡай менән тәүге һәм һуңғы тапҡыр осраша *. Күп йылдар үткәс, М. Ғафури ысын күңелдән яратҡан һәм ижадына сикһеҙ һоҡланыуын белдергән бөйөк шағир менән үҙенең осрашыуын былай тип хәтерләй: «Әйе, бөгөнгө кеүек хәтеремдә, Зөһрә ҡайҙандыр ашығып ҡайтты ла, шатлығынан быуылып:

«Ғафури, һөйөнсө, Туҡай килгән бит! Бар, үҙебеҙгә алып кил. Ниңә үҙебеҙгә генә тура төшмәне икән?» — тип һөйләнергә тотондо». «Әй, Зөһрәкәй, Туҡай саҡлы Туҡай булһын да, ваҡланып һинең тауыҡ кетәге кеүек квартираңа килеп төшһөн, имеш. Ул бит әҫәрҙәре иң күп тарала торған, был дәүер татар яҙыусылары араһында иң атаҡлы булған бер ҙур шағир! Бәс, шулай булғас, гостиницаларҙың да иң яҡшыһына туҡталғандыр әле ул,— тинем, тәрән тулҡынланып».

Ашыҡ-бошоҡ ҡына кейендем дә Туҡайҙы күрергә сығып киттем. Эҙләп йөрөй торғас, «Сабах» китап магазинының складынан барып таптым мин уны.

Керһәм, ни күҙем менән күрәйем, яҡшы гостиницаларҙан эҙләп йөрөгән ҙур Туҡайым, магазин артында, йәшниктәрҙән ойошторолоп яһаған «карауат» өҫтөндә, бәп-бәләкәй генә булып, ятып тора. Ғәжәпләнеүҙән нимә әйтергә лә белмәнем.

Туҡай, мин барып кереү менән, һикереп торҙо. Әллә ҡасан беренбере күреп белгән һәм һағынышҡан дуҫтар һымаҡ ҡосаҡлашып күрештек» [2].

---

[1] Очерки по истории Башкирской АССР, 1-се том, икенсе киҫәк, 458-се бит.

* Ғ. Туҡай Александр һәм М. Ҡазан урамдары мөйөшөндәге йортта (хәҙер Свердлов урамы, 98) «Сабах» китап магазинының хеҙмәткәрҙәр өсөн тәғәйенләнгән бүлмәһендә йәшәй. Ғ. Туҡайҙың Өфөлә булыуын һәм уның М. Ғафури менән осрашыуын башҡорт халыҡ шағиры С. Ҡудаш үҙенең «Яҙҙы ҡаршылағанда» тигән повесында һүрәтләгән. М., 1954.

[2] Ҡудаш С. Хәтерҙә ҡалған минуттар. М., 1964, 220, 221-се биттәр.

Ғ. Туҡай һәм М. Ғафури. *Рәссам Ғ. Мостафин һүрәтенән.*



Онһо осрашыуҙан һуң бер йыл үткәс, Ғабдулла Туҡай вафат була.

Беренсе донъя һуғышы йылдарында М. Ғафури халыҡтың моңдарын, өмөт-ынтылыштарын сағылдырыусы ысын йырсыға әүерелә. Үҙ әҫәрҙәрендә ул туған-туғанды үлтереү һуғышына ҡаршы протест менән сығыш яһай. Батша цензураһы уның 1915 йылда капиталистар мәнфәғәтендә башланған һуғышты ҡырҡа ғәйепләп яҙған «Һалдат ҡатыны Хәмиҙә» хикәйәһен баҫыуҙан тыя. Шул уҡ йылда шағир үҙенең танылған «Юҡтырһың да, алла...» тигән шиғырын яҙа. Дин, ҡараңғылыҡ хөкөм һөргән шарттарҙа шиғырҙың көрәнеүе аяҙ көндә йәшен атҡан кеүек тәьҫир итә. Ул, тип хәтерләй С. Ҡудаш, «шунда уҡ йәштәрҙең аҡылын биләп алды, яңы хистәр уятты»[1]. Шағир былай тип яҙа:

Юҡтырһың да, алла, әгәр булһаң,
Сабыр итмәҫ инең был эшкә.
Бөтә ҡөҙрәтеңде бағлап ҡуймаҫ
инең ерҙә алтын, көмөшкә...
Күрер инең көсһөҙ бәндәләрҙе,
Ярҙам итер инең уларға.
Ирек бирмәҫ инең көслөләргә
Көсһөҙҙәрҙе былай таларға.

[1] Ҡ у д а ш С. Хәтерҙә ҡалған минуттар, 61-се бит.

Мәжит Ғафури 1917 йылғы Февраль революцияһын шатланып ҡаршы ала. Тап шул көндәрҙә ул үҙенең иң яҡшы әҫәрҙәренең береһен — «Ҡыҙыл байраҡ» шиғырын яҙа. Ул «Марсельеза» һәм «Варшавянка» менән бер рәттән башҡорт, татар хеҙмәтсәндәренең революцион гимны булып әүерелә.

Өфөлә бер нисә йыл буйына күренекле татар яҙыусыһы һәм йәмәғәт эшмәкәре Ғәлимйән Ғирфан улы Ибраһимов (1887—1938) йәшәй һәм эшләй. 1906 йылдың көҙөндә ул М. Ғафури менән бергә яңы ғына асылған «Ғалиә» мәҙрәсәһенә инә. Мәктәптең татар байҙарының теләгенә буйһонop йәшәүенә егет түҙеп тора алмай һәм, ике йыл уҡығандан һуң, уны ташлап китә. Оҙаҡ булмаһа ла, «Ғалиәлә» уҡыу йылдары буласаҡ яҙыусының ижтимағи-политик ҡарашын формалаштырыуҙа ҙур әһәмиәткә эйә була. Шунда уның әҙәби эшмәкәрлеге башлана: ул «Зәки шәкерттең мәҙрәсәнән ҡыуылыуы» хикәйәһен һәм «Ҡөрьән аллананмы, түгелме?» китабын яҙа. Яҙыусының был әҫәрҙәре тиҙ үк татар, башҡорт йәштәренең аҡылын биләп ала. Университетҡа инеү теләге менән Ғ. Ибраһимов 1909 йылда Ҡазанға килә. Аҙаҡ, 1914 йылда, әҙип татар әҙәбиәтендә беренсе тарихи-революцион әҫәр — «Беҙҙең көндәр» романын яҙа. Уның нигеҙендә Столыпин реакцияһының ауыр йылдарында Өфө һәм уның революцион йәштәренең тормошонан алынған факттар һалынған.

1915 йылдың февралендә Ғ. Ибраһимов Өфөгә ҡайта һәм Февраль революцияһына тиклем «Ғалиә» мәҙрәсәһендә татар теле һәм әҙәбиәтен уҡыта. Революцияның тәүге көндәренән үк ул мәҙрәсәнән китә һәм тулыһынса ижтимағи-политик эшмәкәрлеккә бирелә. Яҙыусы Ф. К. Сәйфи-Ҡазанлы менән бергәләп ул татар телендә «Ирек» * революцион газетаһын сығара башлай. Уның беренсе һаны 1917 йылдың 30 мартында сыға. Газетала М. Ғафури (уның «Ҡыҙыл байраҡ» шиғыры тәү тапҡыр шунда баҫыла), С. Л. Рәмиев, С. Х. Сүнчәләй һәм башҡа яҙыусылар актив эшләй.

Өфөлә башҡорт халҡының үҙенсәлекле шағирҙарының береһе Шәйхзада Мөхәмәтзакир улы Бабичтың (1895—1919) сағыу таланты сәскә ата. Тыуған ауылында — Бөрө өйәҙенең Әсән ауылында (хәҙерге Дүртөйлө районы) башланғыс белем алғас, ул 1911 йылдың көҙөндә Өфөгә килә һәм «Ғалиә» мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Уны 1916 йылда тамамлай. Бабичтың поэтик таланты бик иртә асыла, ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә ул һоҡланғыс шиғри әҫәрҙәр ижад итә. Ғ. Ибраһимов күрһәтеүенсә, Бабич уның уҡыусыһы була һәм уның идея йоғонтоһонда үҫә. «Бабич вәзендәрҙе һәм баҫымдарҙы үҙ урынында һаҡлау менән бергә һүҙҙәрҙә, тәғбирҙәрҙә шундай еңеллек, байлыҡ күрһәтә ки, әйтерһең, ул үҙ алдына теҙелгән матур таштар менән үҙе теләгәнсә уйнай, уларҙы үҙе теләгәнсә йыя, туҙҙыра, сәсә,

---

* Газета редакцияһы «Һарай» ҡунаҡханаһының бәләкәй генә бер бүлмәһендә урынлаша (хәҙер Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының лаборатория корпусы, Пушкин урамы, 90).

тағы йыя» [1]. Ул бигерәк тә сатира һәм юмор жанрында күп эшләй («Китабеннас» эпиграммалар йыйынтығы, «Ғазазил» поэмаһы, «Ҡандала» балладаһы һәм башҡа әҫәрҙәре). Пародиялар оҫтаһы, үткер телле Бабич үҙе «минең яраткан ҡалам» тип атаған Өфөлә әҙәби кисәләр, концерттар һәм башҡа шундай культуралы саралар ҙы ойоштороусы һәм уларҙа актив ҡатнашыусы була.

Шәйхзада Бабич донъяны тетрәткән бөйөк социаль һәм политик үҙгәрештәр дәүерендә, иҫке эксплуататорлыҡ ҡоролошо емерелгән һәм һәләк булған, яңы хеҙмәт һәм азатлыҡ донъяһы тыуып, аяҡҡа баҫҡан дәүерҙә йәшәй һәм ижад итә. Ул бер ни тиклем ваҡыт башҡорт буржуаз милләтселеге идеяһы йоғонтоһона бирелеп, идея яғынан етди аҙашыу осоро кисерә. Ләкин, шуға ҡарамаҫтан, Бабичтың ижады, нигеҙҙә, халыҡсан, тормошсан рух менән һуғарылған.

XX быуаттың тәүге ун йылында Өфөлә башҡорт һәм татар халыҡтарының культураһына һиҙелерлек йоғонто яһаған күп кенә яҙыусылар: С. Л. Рәмиев, Ф. К. Туйкин, В. Х. Солтанов, З. И. Өммәти, А. С. Иҫәнбирҙин, Ғ. С. Иҫәнбирҙин йәшәй, уҡый һәм эшләй. Башҡортостандың буласаҡ халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаштың ижад юлының башы ла ошо йылдарға тура килә.

Башҡортостандың гүзәл тәбиғәте һәм бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлығы, милли-колониаль иҙеү бығауҙарында интеккән урындағы халыҡтың түҙеп торғоһоҙ ауыр тормошта йәшәүе күп кенә рус демократик яҙыусыларының иғтибарын һәр ваҡыт үҙенә тарта. Башҡортостан, уның баш ҡалаһы Өфө Максим Горький ижадында ла ҙур ғына урын алып тора. Яҙыусыны Өфөнөң танылған революционерҙарынан Кадомцевтарҙың яҙмышы ҡыҙыҡһындыра. Атаҡлы «Әсә» романында Ниловна образын тыуҙырғанда, М. Горький прототип итеп Петр Заломовтың әсәһенең генә түгел, башҡа күп кенә революционерҙар әсәләренең дә, шул иҫәптән Кадомцевтарҙың әсәһе Анна Федоровнаның да, характерлы һыҙаттарын дөйөмләштереп алған. Был турала аҙаҡтан ул былай тип яҙа: «Ниловна — 900-сө йылдарҙа Сормоволағы 1 Май демонстрацияһы өсөн хөкөм ителгән Петр Заломовтың әсәһенең портреты. Ул ойошмала эшләй, мосафир ҡарсыҡ булып кейенеп, Иваново-Вознесенск районында әҙәбиәт тарата һ. б. Ул бер үҙе генә түгел. Кадомцевтарҙың әсәһен хәтерләгеҙ әле — ул улына, ҡасҡан ваҡытта стенаны шартлатыр өсөн, төрмәгә бомба алып инә һәм шуның өсөн Өфөлә хөкөм ителә» [2].

Башҡортостан темаһына М. Горький «Клим Самгиндың тормошо» тигән монументаль роман-эпопеяһында ла ҡағыла. Яҙыусы рус булмаған халыҡтарға түбәнһетеп ҡараусы һәм батша хөкүмәтенең милли окраиналарҙа үткәргән колонизаторлыҡ политикаһын яҡлаусы буржуаз интеллигенцияның позицияһынан әсе көлә. Романда

---

[1] Бабич Шәйхзада. Һайланма әҫәрҙәр. Өфө, 1972, 62-се бит.
[2] Рахимкулов Мурат. Страницы дружбы. Русско-башкирские литературно-фольклорные связи. Өфө, 1972, 62-се бит.

Видинеев (хәҙерге Луначарский) баҡсаһындағы йәйге театр.



Самгин һәм уның юлдашы Өфөгә китеп барған поезға һөжүм итеү ваҡиғаһы һүрәтләнә. Уның нигеҙенә, күрәһең, Өфө боевиктарының Дим станцияһында бик ҙур сумма ҡаҙна аҡсаһын ҡоткарыу операцияһы алынғандыр.

Пролетариаттың социаль азатлыҡ өсөн көрәш темаһы тапылған Өфө яҙыусыһы В. В. Брусяниндың (1867—1919) ижадында ла художестволы сағылышын таба. Яҙыусы «Урманлы Башҡортостанда» тигән хикәйәһендә урман ҡырҡыу промыслаларындағы төрлө милләт эшселәренең ауыр тормошон, уларҙың синфи үҙаңы уяныуын һәм эш шарттарын яҡшыртыу өсөн көрәшен күрһәтә. Уралдың күп милләтле пролетариатының капитализм иҙеүенә ҡаршы аңлы көрәшкә күтәрелеүен Брусянин 1918 йылда донъя күргән һуңғы әҫәре «Хеҙмәт өсөн көрәштә» повесында ла һүрәтләй. «Бисаралар» хикәйәһендә ул Өфө ҡала ярлылары тормошоноң сағыу картинаһын бирә. Яҙыусының әҙәби һәм йәмәғәт эшмәкәрлеген А. В. Луначарский юғары баһалай. Ул В. В. Брусяninды үҙ тормошон эшселәр синыфына, революцияға хеҙмәт итеү эшенә арнаған социал-демократ тип атай.

Ҡаланың культура тормошонда театр һиҙелерлек роль уйнай. Ләкин XX быуат башында ла әле Өфөлә даими профессиональ театр ҙа, ҡышҡы махсус театр бинаһы ла булмай. Йәйҙәрен ситтән килгән һәм һәүәҫкәр труппаларҙың спектаклдәре сауҙагәр Видинеев театрында, ҡыштарын иһә Ҙур Себер ҡунаҡханаһы һәм Дворяндар йыйылышы залдарында, шулай уҡ «Шәхси ярҙамсы хеҙмәткә үҙ-ара

ярҙам йәмғиәте», «Ремеслянка», сауҙагәрҙәрҙең «Берләштерелгән йыйылышы» һәм йылға пароходстваһының Кержактар затонындағы клубтары сәхнәләрендә ҡуйыла.

Бөтә йәйге миҙгелдәрҙә лә тип әйтерлек Өфө театры сәхнәләрендә танылған антрепренерҙар П. П. Струйский һәм П. М. Медведевтың труппалары сығыш яһай. 1907 йылдың йәйендә Струйский труппаһы составында Петербургтың Александр театрының күренекле артисы К. А. Варламов (1848—1915) Өфөлә гастролдә була. Ул ҡатнашҡан спектаклдәр һәр ваҡыт бик ҙур уңыш менән үтә. Айырыуса А. Н. Островский пьесаларында Варламов тыуҙырған образдар тамашасыларға тәрән тәьҫир яһай. Өфөлә төрлө йылдарҙа һоҡланғыс актерҙар: П. Н. Орленев, Н. М. Гондатти, трагиктар бер туған Роберт һәм Рафаил Адельгеймдар, И. А. Слонов һәм башҡалар гастролдә йөрөй.

Драма труппаларының репертуарын бөтәһенән элек кассаға инәсәк төшөм билдәләй — күберәк төшөм биргән бөтә нәмә сәхнәгә ҡуйыла. Репертуарҙа күбеһенсә буржуаз драматургияның төшөнкөлөгөн сағылдырыусы рус һәм сит ил «хәҙерге заман» авторҙары өҫтөнлөк итә. М. Горькийҙың «Тормош төпкөлөндә», «Мещандар», «Дачниктар» пьесаларын ҡуйырға мөмкинлек биргән беренсе рус революцияһы Өфөнөң театр тормошона ифрат ҙур йоғонто яһай.

Өфө йәмғәтселегенең музыка сәнғәтенә ҡарата ла ҡыҙыҡһыныуы үҫә. Йыл һайын Өфөгә опера труппалары ла, айырым башҡарыусылар ҙа килеп тора. Петербург консерваторияһы профессоры мәшһүр скрипач Л. С. Ауэр, виолончелист А. В. Вержбилович, талантлы пианист И. К. Гофман, Мариинский операһының танылған теноры А. М. Лабинский, йырсылар М. И. Долина, М. А. Михайлова, Е. К. Мравина ҡатнашҡан концерттар музыка һөйөүселәр өсөн ысын байрамға әйләнә.

Әүәлгесә, ҡаланың музыка һәм театр тормошонда һәүәҫкәр труппалар һәм түңәрәктәр бик ҙур роль уйнай. «Йыр, музыка һәм драма сәнғәтен һөйөүселәр йәмғиәтенең» спектаклдәре һәм концерттары ҡала халҡы араһында киң таныла. Ләкин «Йәмғиәт» аристократик, сикләнгән характерҙа була, унда теләгән бер кеше инә алмай. 1905—1907 йылдарҙағы революция төрлө клубтар эргәһендә ойошторолған демократик түңәрәктәрҙең эшен йәнләндерә. «Шәхси ярҙамсы хеҙмәткә үҙ-ара ярҙам йәмғиәте» клубы киң таныла, унда эшселәр, хеҙмәткәрҙәр, уҡытыусылар һ. б. йыйыла. Клубта бай ғына китапхана була, лекциялар уҡыла, түләүһеҙ юридик консультациялар үткәрелә, спектаклдәр, концерттар ҡуйыла. 1916 йылда губерна земство идараһы эргәһендә «Халыҡ театры һәм нәфис сәнғәтте таратыу секцияһы» ойошторола, уның драма труппаһы спектаклдәр менән Өфөлә генә түгел, яҡын ауылдарға барып та сығыш яһай [1].

---

[1] Научный архив БФАН СССР, ф. 3, оп. 11, д. 28, л. 143.

Беренсе рус революцияһы йоғонтоһонда милли театр труппалары барлыҡҡа килеү крайҙың культура тормошонда күренекле ваҡиға була. Дөрөҫ, театр тамашалары ойоштороорға ынтылыш элек тә булған. Мәҫәлән, 1901 йылдың ғинуарында «Ғосмания» мәҙрәсәһе шәкерттәре властарҙың рохсәтенән башҡа «Рисәләт» комедияһын ҡуя, ул әҫәр мосолман дини-схоластик мәктәптәрҙә уҡыусыларҙың көнкүрешенән әсе көлә. Ләкин фанатик руханиҙар башҡорттар һәм татарҙар өсөн театр, музыка тамашалары ҡуйыу мөмкинлеге тураһындағы уйға урын ҡалдырмай. Фәҡәт 1906 йылдың 16 апрелендә генә Башҡортостан тарихында тәүге тапҡыр үҙешмәкәр театр труппаһы мулла-мөнтәғәйҙәр һәм байҙар тормошонда хөкөм һөргән ҡырағай ғөрөф-ғәҙәттәрҙе фашлаған «Өс ҡатын менән тормош» [1] пьесаһын сәхнәгә ҡуя. Унда 3 ҡыҙ ҙа ҡатнаша.

Беренсе тапҡыр театрҙың халыҡ өсөн ҡуйылыуы, шәриғәт закондары буйынса мосолман ҡатын-ҡыҙҙарына сәхнәгә сығып уйнау түгел, театрға йөрөү ҙә тыйылған шарттарҙа спектаклдә ҡатын-ҡыҙҙың ҡатнашыуы ваҡытлы матбуғатта ҡыҙыу бәхәстәр тыуҙыра. Реакцион газеталар һәм журналдар милли театрҙың барлыҡҡа килеүен «хурлыҡҡа» һанай. Ҡазандың ҡарагоруһсы «Бәян-әл-хак» газетаһы был хаҡта бик борсолоп яҙа: «Беҙҙе был хәбәр шөбһәгә һалды. Өфөлә беҙҙең дини йыйылыш, унда беҙҙең мөфтөй, унда ҡазый, ахундар. Шуның өсөн беҙ Өфөнө ислам диненең үҙәге тип иҫәпләйбеҙ. Әммә бына Өфөнән шундай ҡайғылы хәбәр алынды. Унда ошо хәлгә писек түҙеп торалар икән?.. Бының ахыры насар бөтәсәк...» [2]

Реакция йылдарында ла спектаклдәр ҡуйыу өҙөлмәй. 1908 йылдың октябрендә Зайков йортонда (хәҙер К. Маркс урамындағы 25-се һанлы йорт) сәхнә сәнғәте һәүәҫкәрҙәре Ғ. Камалдың «Бәхетһеҙ егет» драмаһын ҡуя. Спектакль ҙур уңыш ҡаҙана. Шығырым тулы залда башҡорт, татарҙар ғына түгел, рустар ҙа була. Ә киләһе йылына приказчик Н. Н. Әбдрәшитов приказчиктарҙан, хәреф йыйыусыларҙан һәм уҡыусы йәштәрҙән һәүәҫкәр драма түңәрәге ойоштора. Үҙешмәкәр труппаның эшендә РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың буласаҡ халыҡ артисы Ә. Зөбәиров, Ю. Бельская, Ғ. Исхаҡов, С. Шәрипов һәм башҡа артистар актив ҡатнаша. Түңәрәк ағзалары татар драматургтарының, бигерәк тә Ғ. Камал, пьесаларын ҡуя.

1912 йылдың майында беренсе татар артисткаһы Сәхипъямал Ғиззәтуллина-Волжская Өфөлә профессиональ «Нур» труппаһын ойоштора. Уға танылған артистар Ф. Сәмитова, З. Богданова, Ғ. Казанский, Н. Ханжаров, Ш. Шамильский, Н. Сакаев, Ф. Йосопов һәм башҡалар инә (уларҙың ҡайһы берҙәре «Сәйяр» труппаһынан күсә). Һуңыраҡ труппала Ә. Ф. Зөбәиров һәм Е. А. Сыртланова (Елизавета Александровна Шляхтина, аҙаҡ ул БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы булып китә) сығыш яһай. Труппа йыш ҡына илдең мосолман-

[1] Татар театры. 1906—1926. Ҡазан, 1926. 81-се бит (татар телендә).
[2] «Яңы юл» (Өфө), 1923. № 2—3, 35, 36-сы биттәр.

С. Ғиззәтуллина-Волжская.



дар йәшәгән ҡалаларына гастролдәргә бара. 1916 йылда ул бөтөнләй Өфөлә тамыр йәйә.

«Нур» үҙенең эшләү дәүерендә (1912—1918) татар драматургтарының оригиналь пьесаларынан, рус һәм Көнбайыш Европа авторҙарының тәржемә ителгән драма әҫәрҙәренән яҡшы ғына репертуар төҙөй. Шулай уҡ беренсе башҡорт драматургтары Ф. К. Туйкин менән М. Я. Нуримановтың да пьесалары ҡуйыла. Труппаның эш шарттары сиктән тыш ауыр була. Ул батша властары һәм мосолман руханиҙарының өҙлөкһөҙ эҙәрлекләүе, реакцион матбуғаттың сәнскеле реакцияһы, полицияның даими күҙәтеүе аҫтында эш алып бара. «Ҡайғы һыуын беҙ етерлек эстек, — тип хәтерләй ул ваҡыттарҙы Е. А. Сыртланова. — Беҙҙе, актерҙарҙы, урамда йөрөгән эттәр кеүек күрәләр ине, беҙ шундай уҡ хоҡуҡһыҙ булдыҡ. Аслыҡ, яланғаслыҡ арттан ҡалмай эйәреп йөрөнө. Алыҫ төбәктәрҙәге ҡалаларҙа, далалағы ауылдарҙа йөрөгәндә, беҙ, был берәҙәк тормош ҡасан бөтөр икән, тип хыяллана инек. Бер ҡалала бер рәттән ике тапҡыр сығыш яһар көн булырмы икән?.. Ҡайҙа ғына гастролдә булмайыҡ, мулла-монтағайҙар һәм полиция беҙҙе һәр ерҙән дә ҡыуа ине» [1].

Ҙур ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, «Нур» труппаһы милли театр сәнғәтенең барлыҡҡа килеүендә, халыҡ массалары араһында алдынғы идеяларҙы һәм культураны таратыуҙа һиҙелерлек роль уйнай. Ул хәҙерге заман башҡорт совет театрына лайыҡлы нигеҙ һала.

Милли йыр һәм музыка концерттары ла халыҡта киң танылыу таба. Өфөлә йырсылар С. Әхмәҙиев, Ф. Латипов, Ҡ. Мотиғый, гармунсы Ф. Туишев, буласаҡ композитор, пианист С. Ғәбәши гастролдә була. Йыш ҡына, бигерәк тә Февраль революцияһынан һуң, концерттар һәм әҙәби кисәләр ҡаланың башҡорт, татар халҡы тормошонда сағыу бер ваҡиға булып ҡала. Мәҫәлән, 1917 йылдың 25 июлендә Ҙур Себер ҡунаҡханаһы залдарының береһендә күренекле башҡорт йырсыһы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың концерты ҙур уңыш менән үтә. Ул башҡорт халыҡ йырҙарын оҫта башҡарыуы менән тыңлаусыларҙың күңелен арбай. Йырсының талантын урындағы матбуғат бик юғары баһалай.

1904 йылда ҡалала кинематограф барлыҡҡа килә. Баштараҡ фильмдар «Физик күнегеүҙәрҙе һөйөүселәр йәмғиәте театры» бина-

---

[1] Очерки по истории Башкирской АССР, I том, икенсе киҫәк, 464-се бит.

һында ҡуйыла; саҡ ҡына һуңыраҡ махсус йыһазландырылған «Фурор», «Йондоҙ», «Эффект» «электр театрҙары» тороло. Тәүҙәрәк сеанстар бер нисә минут ҡына бара, ғәжәпләнгән тамашасылар урамға һыу һиптереүсене йәки экипаждың урамдан үтеп барыуын һүрәтләгән ҡыҫҡа-ҡыҫҡа ғына фильмдарҙы таң ҡалып ҡарай. Һәр «фильм» бер минут самаһы бара. Бара-тора сеанстар бер ярым-ике сәғәткә тиклем оҙайтыла. Бер сеанста 6—8 фильм, шулар иҫәбендә 3—4 «драма», 2—3 «комик» фильмдар, бер нисә таҫма күренеш һәм хроника, күрһәтелә. Ҡағиҙә рәүешендә, фильмдар рояль, скрипка, йыш ҡына трио аккомпанементы менән бара.

М. В. Нестеров.



Кинотеатрҙарҙың репертуарында «йөрәк өшөткөс» боевиктар «Герцог Гизды үлтереү», «Үлгәндәр бойора», «Ҡатындар ашаусы») һәм әҙәпһеҙ комедиялар («Горничная менән үбешмә», «Ҡатынмы, грелкамы») ҙур урын алып тора. Һуғыш йылдарында ҡала экрандарына кешеләрҙең «патриотик рухын» күтәреүгә иҫәп тотоп, һуғышсан-шовинистик һәм детектив фильмдар күпләп сығарыла («Ҡанға мансылған Ҡопсығыш», «Төрөк шпионажы»).

Өфө йәмәғәтселегенең рухи тормошона урындағы рәссамдарҙың эшмәкәрлеге ҙур йоғонто индерә. Уларҙың инициативаһы буйынса 1913 йылда «Живопись һөйөүселәрҙең Өфө йәмғиәте» ойошторола. Петербург художество академияһын тамамлаған Ю. Ю. Блюменталь (1870—1944) уның етәкселәренең береһе була. Йәмғиәт эшендә РСФСР-ҙың буласаҡ атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Башҡорт АССР-ының халыҡ художнигы А. Э. Тюлькин (1888—1980), Башҡорт АССР-ының халыҡ художнигы М. Н. Елгаштина (1873—1966), Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре А. П. Лежнев (1888—1956), В. В. Сыромятников (1885—1979) һәм башҡа рәссамдар актив ҡатнаша.

Йәмғиәт рус һынлы сәнғәтен пропагандалауҙы бурыс итеп ҡуя. Ошо маҡсатта Өфөлә художество күргәҙмәләре ойошторола. Күргәҙмәләргә күренекле рус художниктарының картиналары менән бер рәттән, йәмғиәт ағзаларының да әҫәрҙәре ҡуйыла. Мәҫәлән, 1916 йылғы күргәҙмәлә айырым кешеләр йыйған коллекциянан И. К. Айвазовский, В. М. Васнецов, В. В. Верещагин, И. И. Шишкин һәм М. В. Нестеровтың картиналары, этюдтары һәм һүрәттәре күрһәтелә. Урындағы рәссамдарҙың әҫәрҙәре тыуған ҡалаларын, башҡорт ауылдарын, тирә-йүндәге тәбиғәт күренештәрен тасуирлауға арнала.



К. А. Дәүләткилдиев.

Башҡорттарҙан беренсе профессиональ рәссам К. А. Дәүләткилдиев (1887—1947) була, ул 1914 йылда Петербург художество-промышленность училищеһын тамамлай. 1917 йылдан ғүмеренең аҙағына тиклем Өфөлә йәшәй һәм эшләй. Тәүге әҫәрҙәре менән үк ул живопись белгестәренә сәнғәт донъяһына үҙенсәлекле талант, тыуған яҡ йырсыһы килеүен күрһәтә.

«Нур» труппаһы спектаклдәрен художество йәһәтенән беренсе профессиональ театр рәссамы Сабит Яҡшыбаев биҙәй. Ул Өфө байҙарына күп кенә ҡыйыу карикатуралар яһай, был карикатуралар аҙаҡ Ҡазандың «Ялт-йолт» сатирик журналында баҫылып сыға.

Һынлы сәнғәткә ҡыҙыҡһыныуҙың үҫеүе алдынғы йәмәғәтселектең Өфөлә картина галереяһын булдырыу тураһындағы талабында ла сағылыш таба. Уны ойоштороу инициативаһы менән танылған рәссам, буласаҡ живопись академигы, Өфөлә тыуып үҫкән М. В. Нестеров (1862—1942) сығыш яһай. Ләкин Дума, галереяны урынлаштырыу өсөн, байтаҡ йылдар буйына бина таба алмай.

XX быуат башында Өфөлә мәғариф, фән, әҙәбиәт һәм сәнғәт артабан да үҫеш ала. Ләкин батша Россияһы шарттарында фән һәм культура ҡаҙаныштарына эксплуататор синыфтар эйә була. Октябрь революцияһының еңеүе халыҡ массаларына донъя культураһы хазиналарына юл аса, ғәйәт ҙур фәнни асыштарҙы бөтә халыҡ байлығы итә, кешенең ижади көстәренең бығаса булмағанса йылдам сәскә атыуы өсөн шарттар тыуҙыра.

# *Өфө Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы һәм граждандар һуғышы осоронда (1917 йылдың марты—1920 йылдар)*

## § 1. «Бөтә власть Советтарға!»

Самодержавиеның ҡолатылыуы һәм ике власлылыҡтың барлыҡҡа килеүе илдең тормошона бөтөнләй яңы һыҙаттар индерҙе. «Россия хәҙер ҡайнай,— тип яҙҙы В. И. Ленин 1917 йылдың апрелендә,— миллиондар һәм ундарса миллиондар *уяндылар һәм* политикаға *тартылдылар»* [1]. Өфө лә был процестан ситтә тороп ҡалманы. Бөтә ерҙә лә стихиялы рәүештә йыйылыштар, митингылар булып торҙо. Манифестацияла ҡатнашыусыларҙың ҡулдарына елберләп тороусы байраҡтар, пальто һәм шинель яғаларындағы ҡыҙыл банттар, дөйөм күңел күтәренкелеге, революцион йырҙар моңо, азатлыҡҡа һәм туғанлыҡҡа дәртле саҡырыу һүҙҙәре —1917 йылдың тәүге яҙғы көндәрендә ҡала бына ошондай төҫтә ине.

Революция политик тәжрибәһе булмаған бик киң халыҡ массаларын хәрәкәткә килтерҙе. Ябай кешеләрҙең байтағы политик партияларҙың программаларын аңлап еткермәй ине әле. Эсерҙар һәм меньшевиктар бына ошонан файҙаланып ҡалдылар. Вәғәҙә һәм һүҙ биреүҙәр менән улар, гәрсә ғәмәлдә Ваҡытлы хөкүмәттең халыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән политикаһын актив яҡлаһалар ҙа, буржуазия менән асыҡтан-асыҡ килешеүсе партиялар булып әүерелһәләр ҙә, башта киң халыҡ массаларын үҙ арттарынан эйәртә алдылар.

Өфө эсерҙары һәм меньшевиктары үҙ сафтарын һөнәрселәр, ваҡ сауҙагәрҙәр, хеҙмәткәрҙәр, шулай уҡ политик әҙерлеге булмаған һалдаттар һәм эшселәр иҫәбенә тулыландырҙы. 1—2 мартта ҡалала социалист-революционерҙар ойошмаһы [2] барлыҡҡа килә, 5 мартта Бунд ойошмаһы үҙенең йәшәүе хаҡында белдерә [3]. 30 мартта эсерҙарҙың «Земля и воля» һәм «Ирек» газеталары сыға башлай.

---

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 31-се том, 156-сы бит.
[2] «Социалист-революционер» (Өфө), 1918 йыл, 8 март.
[3] ЦГА БАССР, ф. 2, оп. 1, д. 22, л. 4.

Промышленность предприятиелары хужалары, сауҙагәрҙәр, губерна учреждениеларының чиновниктары, буржуаз интеллигенция үҙҙәренең синфи маҡсаттарын конституцион-демократик партия менән бәйләйҙәр. 6 мартта Өфөлә кадеттарҙың тәүге ойоштороу йыйылышы була. Тиҙҙән эре помещик граф П. П. Толстой етәкселегендә кадеттар партияһының Өфө бүлеге губерна комитеты төҙөлә. Буржуазияның мәнфәғәттәрен яҡлау өсөн кадеттар «Өфө крайының сауҙа һәм промышленность союзын» төҙөй. «Союздың бурысы,— тип әйтелгән уның уставында,— шунан тора: хосуси милекте һаҡлауҙа Ваҡытлы хөкүмәткә бөтә саралар менән булышлыҡ күрһәтеү...[1] «Уфимская жизнь» һәм «Уфимский вестник» газеталары кадеттарҙың урындағы ойошмаһы фекерен таратыусылар булып әүерелә.

Милли буржуазия ла ойоша. «Тормош» газетаһы мосолмандарҙы «бөтә милләт менән бер йән, бер тән булып» берләшеүгә саҡыра. Өфөлә март башында татар һәм башҡорт буржуазияһы тарафынан ойошторолған «Мосолмандар араһында гражданлыҡ идеяларын таратыу буйынса комитет» синыфтарҙың үҙ-ара килешеп йәшәүенә, Ваҡытлы хөкүмәткә булышлыҡ күрһәтеүгә өгөтләп сығыш яһай.

Күп һанлы православие һәм мосолман руханиҙары Башҡортостанда Ваҡытлы хөкүмәттең тоғро терәге булып эш итә. 3 апрелдә Өфөлә эске Россия һәм Себер мосолмандары Диния назаратының ултырышы була. Унда йыйылыусылар Диния назараты «яңы хөкүмәттең мосолмандар араһындағы йоғонтоһон нығытыу йәһәтенән эре үҙәк булып әүерелергә тейеш» тип ҡарар итәләр[2].

Подпольенан сыҡҡан Өфө большевиктары алдында массаларҙы политик тәрбиәләү, уларҙы үҙ яғына яулау буйынса ҙур һәм ауыр бурыс тора ине. 1917 йылдың 2 мартында «Метрополь» ҡунаҡханаһы (хәҙерге Ленин урамы, 10-сы йорт) бинаһында Өфө социал-демократ большевиктарының һәм меньшевиктарының тәүге легаль йыйылышы була. Йыйылыш 13 кеше, шул иҫәптән 9 большевик һәм 4 меньшевик, составында РСДРП-ның Өфө берләшкән ойошмаһы комитетын һайлай. Комитеттың председателе итеп меньшевик И. А. Әхтәмов, казначейы итеп большевик А. Д. Цюрупа һайлана. 19 мартта комитеттың матбуғат органы «Вперед!» газетаһының беренсе номеры баҫылып сыға.

Большевиктарҙың меньшевиктар менән бер ойошмаға инеүе бөтәһенән элек революциянан һуңғы тәүге айҙарҙа Өфөнөң ижтимағи-политик тормошонда ваҡ буржуазия йоғонтоһоноң хакимлыҡ итеүе һөҙөмтәһе була. Ҡала большевиктарының подполье йылдарында меньшевиктар менән бәйләнеш тотҡан етәкселәре (Н. П. Брюханов, А. И. Свидерский, Б. М. Эльцин һәм башҡалар) яңы шарттарҙа

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 334, оп. 1, д. 857, л. 2.

[2] Мухарямов М. К. Октябрь и национально-государственное строительство в Татарии (октябрь 1917—1920 гг.). М., 1969, 17-се бит.

шунда уҡ дөрөҫ партиялы позицияға баҫа алмайҙар. Өфө берләшкән комитетының бик мөһим мәсьәләләр буйынса аныҡ ҡына политик линияһы булмай. Хеҙмәтсәндәрҙе буржуазияға ҡаршы көрәшкә саҡырып, комитет шул уҡ ваҡытта буржуаз Ваҡытлы хөкүмәтте лә тыштан яҡлау фекерен белдерә. «Вперед!» газетаһы һуғышты дауам итеү өсөн хөкүмәт тарафынан сығарылған «Азатлыҡ заемын» пропагандалай. Ошо заемға ҡаршы «Правда» газетаһының сығышынан һәм большевиктарҙың 1-се Урал өлкә конференцияһының был заем өсөн агитацияға юл ҡуйырға ярамау тураһындағы ҡарарынан һуң ғына, «Вперед!» үҙ биттәрендә «Азатлыҡ заемы» тураһында белдереүҙәр баҫыуҙы туҡтатты.

Өфө большевиктарының аҡрынлап ленинсы позицияға баҫыуында В. И. Лениндың Апрель тезистары һәм РСДРП-ның VII (Апрель) Бөтә Россия конференцияһы ҡарарҙары хәл иткес әһәмиәткә эйә була. В. И. Ленин партияға буржуаз-демократик революциянан социалистик революцияға күсеү өсөн көрәш программаһын эшләп бирә. Ул «Бөтә власть Советтарға!» тигән лозунг күтәрә һәм ике власлылыҡ шарттарында тыныс юл менән пролетар революцияны ғәмәлгә ашырыу мөмкинлеге хаҡында һығымта эшләй.

Төрмәләрҙән, һөргөндән һәм эмиграциянан актив партия работниктарының, шул иҫәптән тимер юл мастерскойҙары эшселәре П. И. Зенцовтың, Т. С. Кривовтың, В. М. Алексакиндың, П. А. Вавиловтың, И. П. Мыльниковтың, А. С. Ермолаевтың ҡайтыуы партия эшен йәнләндереүгә, массалар араһында большевиктар йоғонтоһон көсәйтеүгә булышлыҡ итә. Гарнизон частарында большевик һалдаттар С. Ф. Докман, И. В. Полянкин, И. М. Скрябинский, прапорщик А. П. Бром, поручик А. К. Евлампиев һәм башҡалар революцион пропаганда алып бара. «Офицерҙарҙан большевиктар партияһына беренсе булып Алексей Константинович Евлампиев ҡушылды,— тип яҙған үҙенең иҫтәлектәрендә И. В. Полянкин.— Ул яҡшы командир һәм саф күңелле кеше сифатында һалдаттар араһында киң танылғайны. Һалдаттар уны «Атай» тип йөрөтәләр ине» [1].

Рус булмаған милләт хеҙмәтсәндәре араһында эшләү өсөн РСДРП-ның Өфө комитеты эргәһендә милли группалар барлыҡҡа килә. Апрель айында Б. И. Нуриманов инициативаһы менән татар-башҡорт группаһы төҙөлә, ул башҡорт һәм татар эшселәре, шулай уҡ гарнизон һалдаттары араһында агитация эшен йәйелдерә. Бер нн тиклем һуңыраҡ А. П. Бром етәкселегендә латыштар группаһы барлыҡҡа килә.

Большевиктар йоғонтоһо аҫтында Өфө эшселәре буржуазияға ҡаршы торған һайын ҡыйыуыраҡ сығыш яһай. Улар эш көнөн ҡыҫҡартыуҙы, хеҙмәт хаҡын арттырыуҙы, хеҙмәт һәм көнкүреш шарттарын яҡшыртыуҙы талап итә. Предпринимателдәрҙең баш-баштаҡ-

---

[1] На Южном Урале. Воспоминания участников гражданской войны. М., 1958, 62-се бит.

1917 йылдың 2 мартында Өфө социал-демократтарының беренсе легаль йыйылышы булып үткән «Метрополь» ҡунаҡханаһы бинаһы. *1971 йылғы фотография.*



лығына яуап итеп, әле бер, әле икенсе предприятиела забастовкалар башлана. Стачка хәрәкәтендә Гутман заводы, Костерин тирмәне, Некрасовтың таҡта ярыу заводы, электр станцияһы, һыу үткәргес эшселәре, Зугман һәм Петроваларҙың кер йыуыусылары һәм буяусылары актив ҡатнаша. Печатниктар коллектив договор төҙөшөүгә өлгәшә. Уның проекты ҡалалағы бөтә типография эшселәренең йыйылыштарында раҫлана. Хужаларҙы ташламаға барырға һәм 29 майҙа договор төҙөшөргә мәжбүр итеү өсөн, бер ай буйына көсөргәнешле көрәш алып баралар[1]. Был батшаны ҡолатҡандан һуң Өфө хеҙмәтсәндәре тарафынан яулап алынған тәүге коллектив договор була.

8 сәғәтлек эш көнө индереү өсөн көрәш пролетариаттың буржуазияға ҡаршы асыҡтан-асыҡ алышына әүерелә. Апрель башына тимер юлында, Гутман заводында, «Караван» товариществоһының сәй төрөү фабрикаһында, Земгор мастерскойҙарында, бер туған «Нобелдәр», «Океан», «Мазут» һәм башҡа ҡайһы бер акционерҙар йәмғиәттәренең нефть складтарында эш көнөнөң яңы тәртибе индерелә. Ҙур булмаған мастерскойҙарҙың һәм таҡта ярыу заводтарының хужалары, эшселәрҙең тарҡаулығынан файҙаланып, ҡаты ҡаршылыҡ

---

[1] «Вперед!», 1917, 30 апрель, 30 май.

күрһәтә, предприятиеларҙы ябыу менән янай. Эшселәр һәм һалдаттар депутаттары Советының эсер-меньшевистик етәкселеге Өфө пролетарийҙарының көрәшенә ҙур зыян килтерә, улар Өфө предприятиеларында 8 сәғәтлек эш көнө индереү тураһындағы мәжбүри ҡарарҙы ҡабул итеүҙән баш тарта. 1917 йылдың көҙөнә тиклем күп кенә ваҡ промышленность предприятиеларында эш көнө 10—12-шәр сәғәт дауам итә.

Февраль революцияһының тәүге көндәренән үк ҡала эшселәре большевиктар етәкселегендә профессиональ союздар һәм башҡа массовый ойошмалар төҙөй башлай. РСДРП-ның Өфө комитетында А. Д. Цюрупа етәкселегендәге ойоштороу комиссияһының эшмәкәрлеге был процесҡа бик ҙур йоғонто яһай. Беренселәрҙән булып «Өфө ҡалаһы һәм уның тирә-яғындағы күп иләүсе эшселәр профсоюзы» барлыҡҡа килә [1]. Апрель аҙағына инде 8 профсоюз иҫәпләнә. Һамар — Златоуст тимер юлы эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре союзының Өфө район тимер юл комитеты уларҙың иң ҙурыһы була, уны төҙөү 1917 йылдың 29 мартына тамамлана. Комитет Өфө тимер юл мастерскойҙары, депо, станция, юл служебаһы һәм башҡа профсоюз ойошмаларын берләштерә; уның эш итеү районы Туҡран станцияһынан алып Оло Теләк станцияһына тиклемге участканы үҙ эсенә ала [2]. Профсоюздарҙың берҙәм эш итеүен тәьмин итеү өсөн, большевиктар инициативаһы менән май аҙағында профессиональ союздарҙың ҡала бюроһы төҙөлә; июль айынан алып ул профсоюздарҙың Үҙәк советы тип аталып йөрөтөлә башлай. Эшселәр уның председателе итеп тире иләүсе большевик М. А. Плотниковты, председателдең урынбаҫары итеп большевик-слесарь Н. Я. Терехинды һайлай.

Революция еңгәс тә барлыҡҡа килгән һәм профсоюздар менән бер рәттән эш иткән завод һәм фабрика комитеттары (фабзавкомдар) эшселәр синыфының политик һәм экономик көрәшендә ҙур роль уйнай. Профсоюздарҙан айырмалы рәүештә фабзавкомдар предприятиелағы бөтә эшселәрҙе, уларҙың ниндәй профессиянан булыуына ҡарамаҫтан, берләштергән була. Улар шул предприятиелағы эшселәрҙең мәнфәғәттәрен күҙәтеү өсөн, предпринимателдәрҙең контрреволюцион хәрәкәттәренә ҡаршы көрәшеү өсөн, шулай уҡ етештереү, бүлеү өҫтөнән эшселәр контролен ғәмәлгә ашырыу өсөн төҙөләләр. 1917 йылдың майында Өфөләге 38 предприятиеның (тимер юл узелынан башҡа) фабзавкомдары асылда фабзавкомдарҙың үҙәк Советы булып торған ҡала район комитеты тарафынан берләштерелә. Район комитетының председателе итеп ҡала электр станцияһының чертежнигы большевик Ф. Ф. Морин һайлана [3].

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 334, оп. 1, д. 897, л. 2—3.
[2] ГАКО, ф. 927, оп. 1, л. 3; д. 26, л. 310.
[3] Васильев С. М., Чемерис В. П. На путях к Октябрю. Өфө, 1960, 57—59-сы биттәр.

П. И. Зенцов.



Ваҡытлы хөкүмәттең халыҡҡа ҡаршы политикаһы илдә үҫә барыусы ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Июнь айында Өфөлә эшселәрҙең һәм һалдаттарҙың артабан революционлашыуын һәм большевиктарҙың массаларға йоғонтоһо үҫә барыуын раҫлаусы күп һанлы йыйылыштар һәм митингылар булып уҙа. Фронтта һөжүмгә күсеүгә әҙерлек айҡанлы запастағы полктарҙа һәм мобилизацияға эләккән кешеләр араһында сыуалыштар башлана. 103-сө запастағы полктың ғәскәри хеҙмәткә өйрәтеү командаһы начальнигы был көндәрҙә былай тип хәбәр иткән: Гоголь урамында билдәһеҙ бер һалдат, патрулдә йөрөүсе һалдаттарҙы митингыға барырға саҡырып, уларҙы хәрби министр «Керенский буржуй ул. Башҡа бер кем дә түгел. Бына беҙ бөтөн митингыла Керенскийҙы урынынан төшөрөүҙе талап итәсәкбеҙ» тип ышандырырға тырышты [1].

19 июндә булып үткән массовый митингыла һалдаттар, империалистик һуғыштың дауам итеүенә ҡаршы протест менән сығыш яһап, былай тип белдергәндәр: «Беҙ... үҙебеҙгә ят булған капиталистар мәнфәғәте өсөн артабан үлемгә барырға теләмәйбеҙ... Бөтә власть эшселәр, һалдаттар һәм крәҫтиәндәр депутаттары Советтарына!.. Бары тик шул саҡта ғына һуғышҡа сик ҡуйылыуы мөмкин» [2].

Халыҡтың теләгенә ҡаршы килеп, хөкүмәт 1917 йылдың 18 июнендә фронтта һөжүм башлай. Был авантюраның хурлыҡ менән бөтөүе хеҙмәтсәндәрҙең көслө нәфрәтен тыуҙыра. 4 июлдә Петроградтың йөҙҙәрсә мең эшселәре һәм һалдаттары һуғышты һис кисекмәҫтән туҡтатыуҙы һәм власты Советтарға биреүҙе талап итеп урамдарға сыға. Советтарҙағы эсер-меньшевиктар лидерҙарының яҡлауынан файҙаланған Ваҡытлы хөкүмәт эшселәрҙең һәм һалдаттарҙың сығышын «большевистик заговор» тип иғлан итә һәм уларға ҡаршы үҙенә тоғро ғәскәрҙәрен йүнәлтә. Демонстрация утҡа тотола.

Петроградтағы июль көндәренең дауыллы ваҡиғалары контрреволюцияның ҡотороноуын тыуҙыра. «Правда» һәм «Солдатская правда» газеталары ябыла, В. И. Ленинды ҡулға алыу тураһында приказ бирелә, фронтта үлем язаһы индерелә, большевиктарҙы эҙәрләү башлана.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 2, оп. 1, д. 7, л. 101.
[2] «Вперед!», 1917, 23 июнь.

Контрреволюция Өфөлә лә башын ҡалҡыта. Большевиктарға, В. И. Ленинға ятһыҙ яла ягыу буржуаз газеталар — «Уфимский вестник», «Тормош» газеталарының, ҡасҡын монархистар төркөмө тарафынан сығарылған бульвар «Пчела» журналының төп темаһы булып әүерелә. Буржуазияға ярҙамға эсерҙар һәм меньшевиктар ашыға. Өфө Советының килешеү яҡлы булған күпселеге Петроград эшселәренең һәм һалдаттарының июль көндәрендәге сығышын ғәйепләй һәм «әлеге составындағы» Ваҡытлы хөкүмәткә «уның бөтә эштәрендә» булышлыҡ күрһәтергә саҡыра [1].

3—4 июлдәге ваҡиғалар ике властылыҡтың бөтөүен аңлата. Илдә килешеүсе партияларға һәм контрреволюцион ғәскәри частарға таяныусы буржуазияның бер үҙе хакимлыҡ итеүе урынлаша. Властың тыныс рәүештә Советтарға күсеүе — большевиктар бына шуның өсөн көрәшкән берҙән-бер юл — хәҙер инде мөмкин түгел ине. «Советтарҙың, социалист-революционерҙар һәм меньшевиктар партияларының... юлбашсылары, — тип яҙған ул көндәрҙә В. И. Ленин, — революция эшенә тамам хыянат иттеләр... үҙҙәрен, үҙ партияларын һәм Советтарҙы контрреволюцияның фига япрағына әүерелдерҙеләр» [2].

РСДРП-ның 1917 йылдың 26 июлендә — 3 августында булып үткән VI съезы партияны буржуазияның хакимлығына ҡаршы, пролетариат диктатураһын урынлаштырыу өсөн ҡораллы восстаниены әҙерләүгә йүнәлтә. «Партияны берләштереү тураһындағы» резолюция Өфө большевиктары өсөн принципиаль әһәмиәткә эйә була, был резолюцияла съезд «социал-демократияның бөтә революцион элементтарын ойошоу йәһәтенән оборонасылар менән бәйләнеште өҙөргә» саҡырғайны [3].

6 һәм 7 августа съездың материалдары «Вперед!» газетаһында баҫылып сыға, ә 17 августа РСДРП-ның дөйөм ҡала ойошмаһы йыйылышы съезд делегаты А. И. Свидерскийҙың ентекле докладын тыңлай.

Партияның VI съезынан һуң Өфө ойошмаһында меньшевиктарға ҡаршы көрәш көсәйә. Тимер юл районының партия ойошмаһы, шулай уҡ күп кенә предприятиеларҙың эшсе-большевиктары улар менән араны өҙөүҙе яҡлап сығыш яһай. 1917 йылдың августында партияның Өфө ҡала комитетының һалдат А. П. Кучкин етәкселегендә төҙөлгән культура-ағартыу комиссияһы меньшевиктарҙы фашлау буйынса ҙур эш алып бара. 6 августа РСДРП(б)-ның губерна бюроһы, съезд күрһәтмәһен үтәй барып, Учредительный собраниеға һайлау кампанияһы үткәргәндә меньшевиктар-оборонасылар менән ниндәй ҙә булһа блоктарҙың һәм килешеүҙәрҙең юл ҡуйылғыһыҙлығы

---

[1] Подготовка и проведение Великой Октябрьской социалистической революции в Башкирии (февраль 1917 г. — июнь 1918 г.), 121-се бит.

[2] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 34-се том, 2-се бит.

[3] КПСС в резолюциях и решениях съездов, конференций и пленумов ЦК, 8-се баҫма, 1-се том. М., 1970, 501-се бит.

Т. С. Кривов.



хаҡында ҡарар ҡабул итә [1]. «Вперед!» газетаһы үҙенең биттәрендә меньшевиктарҙың материалдарын баҫыуҙы туҡтата. Ғәмәлдә Өфө ойошмаһынан ҡыуып сығарылған меньшевиктар 6 сентябрҙә 90—100 кешенән артмаған үҙ аллы группаһын төҙөй. Уға И. А. Әхтәмов етәкселек итә [2]. РСДРП(б) ойошмаһында 500 кеше тороп ҡала. Шулай итеп, 1917 йылдың сентябрь башында Өфөләге берләшкән ойошманың большевистик ойошмаға әүерелеү процесы тамамлана. Меньшевиктар менән араны өҙөү, килешеүсәнлек элементтарының алдап фараз итеүҙәренә ҡарамаҫтан, партия ойошмаһын йомшартмай, ә ныҡыта ғына. Бер айҙан да аҙыраҡ ваҡыт эсендә уның сафтарына 200-ләп яңы ағза инә. Ҡала большевиктары йоғонтоһоноң йылдам үҫеүе 1917 йылдың көҙ айҙарында айырыуса асыҡ күренә.

Ваҡытлы хөкүмәттең һәм эсер-меньшевистик килешеүселәрҙең халыҡҡа ҡаршы политикаһы 1917 йылдың август аҙағында генерал Корниловтың контрреволюцион фетнәһенә юл аса. Большевиктар партияһы көтөлмәгән хәлгә аптырап ҡалмай: ул эшселәрҙе, һалдаттарҙы һәм матростарҙы корниловщинаны тар-мар итеүгә күтәрә. Өфө партия ойошмаһы был көндәрҙә революцияға ҡурҡыныс янауын массаларға аңлатыу буйынса ҙур эш алып бара. РСДРП(б)-ның Өфө губерна бюроһы саҡырыуы буйынса гарнизондың революцион ҡараштағы частары боевой әҙерлек хәленә килтерелә. Улар ҡалалағы иң мөһим объекттарҙы — тимер юл станцияһын, йылға вокзалын, телеграф, почтаны контролгә ала. Крәҫтиәндәр ер банкыһының Өфө бүлексәһендә Корниловтың саҡырыу тексы яҙылған һәм таратыуға әҙерләнгән листовкалар ҡулға төшөрөлә һәм юҡ ителә.

3 сентябрҙә эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының Өфө һәм крәҫтиәндәр депутаттарының Өфө губерна Советы башҡарма комитеттарының берлектәге ултырышы эшселәр милицияһын (Ҡыҙыл гвардия) булдырыу тураһында ҡарар ҡабул итә һәм П. И. Зенцовты, Т. С. Кривовты һәм поручик Л. И. Гребневты уның комиссарҙары итеп раҫлай. Тимер юл мастерскойҙарында һәм депола тәүге добровольцтарҙы яҙыу башлана.

Корниловсыларҙың сығышын тар-мар итеү илдәге хәлде үҙгәртә. Эшселәр, крәҫтиәндәр, һалдаттар большевистик идеяларҙың дөрөҫлөгөнә үҙ тәжрибәләрендә ышана. Хеҙмәтсәндәр эсер-меньшевистик

---

[1] Очерки истории Башкирской организации КПСС, 158-се бит.
[2] «Вперед!», 1917, 10 сентябрь.

депутаттарҙы Советтарҙан сығара һәм уларҙы большевиктар менән алмаштыра башлай. Партияһыҙ депутаттар большевиктарҙы яҡлау юлына баҫа. 31 августа Петроград Советы, ә 5 сентябрҙә Мәскәү Советы властың Советтарға күсеүе тураһында большевистик резолюциялар ҡабул итә. Провинция Советтары тарафынан да ошондай уҡ резолюциялар ҡабул ителә башлай. 29 августа уҡ әле Өфө большевиктары эшселәр һәм һалдаттар депутаттары Советы Президиумы составын үҙгәртеүгә өлгәшә. Әгәр элек президиумға 2 большевик, 4 меньшевик һәм эсер ингән булһа, яңы составҡа инде 7 большевик (И. М. Беляков, Э. С. Кадомцев, П. З. Кузнецов, И. В. Поляпкин, А. И. Свидерский, Н. В. Соколов, А. А. Юрьев), 4 һул эсер, 1 уң эсер, 2 меньшевик-интернационалист һәм 1 меньшевик-оборонасы һайлана [1]. Президиумдың яңы составы большевиктарға Советҡа етәкселек итеүҙә хәл иткес ролде тәьмин итә. 8 сентябрҙә Советтың дөйөм йыйылышы ҙур күпселек тауыш менән бөтә власты Советтарға биреүҙе һәм Советтарҙың Бөтә Россия съезын саҡырыуҙы талап итә.

Илдә Советтарҙың киң ҡолас алған большевиклашыу процесы шарттарында партия яңынан көн тәртибенә «Бөтә власть Советтарға!» тигән лозунгыны ҡуя. Хәҙер ул буржуаз хөкүмәткә ҡаршы, пролетариат диктатураһын урынлаштырыу өсөн ҡораллы восстаниеға саҡырыуҙы аңлата ине.

1917 йылдың көҙөндә ил дөйөм милли кризис кисерә. Дауам иткән империалистик һуғыш һәр көн һайын материаль һәм кеше ресурстарының кәмеүенә, хеҙмәтсәндәрҙең былай ҙа ауыр булған тормош хәленең насарайыуына алып бара. Эшселәр синыфының забастовка хәрәкәте үҫә. Ауыл крәҫтиәндәрҙең помещиктарға ҡаршы сығыштары менән солғап алына.

Экономик емереклектең йоғонтоһон Өфө хеҙмәтсәндәре лә үҙ елкәләрендә кисерә. Хәрби ведомство заказдарын үтәүсе предприятиеларҙа сырье һәм материалдар етешмәгәнлектән, етештереү күләме кәмей. Эшһеҙлек тире иләүселәр, тегенселәр, металлистар өсөн реаль күренеш булып әүерелә. Тимер юл транспорты күҙгә күренеп эштән сыға.

Заводчиктарға һәм фабриканттарға ҡаршы көрәштә эшселәрҙең хеҙмәт хаҡын арттырыуға өлгәшеүе хаҡтарҙың күтәрелеүе арҡаһында бик тиҙ юҡҡа сыға. Октябрь айында Өфөлә ит хаҡы 1914 йыл менән сағыштырғанда 8 тапҡырға, ҡара икмәк — 10, аҡ май 9 тапҡырға арта һәм башҡалар. Промышленность тауарҙарының хаҡы ныҡ күтәрелә. Мәҫәлән, 1914 йылда 7—9 һум торған ирҙәр ботинкаһы 1917 йылдың көҙөндә 55—65 һумға һатыла [2]. Шул уҡ ваҡытта хатта тимер юл мастерскойҙарындағы квалификациялы эшсенең хеҙмәт хаҡы айына 80—90 һумдан артмай. Таҡта ярыу заводтарының һәм бәләкәй мастерскойҙарҙың эшселәре бынан да аҙыраҡ эш хаҡы ала-

[1] ЦГА БАССР, ф. 1, оп. 1, д. 32, л. 27, 56, 57.
[2] «Земля и воля» (Өфө), 1917, 27 октябрь.

А. К. Евлампиев.



Хәл шуның арҡаһында ҡатмарлаша: күп кенә промышленность тауарҙары һәм туҡланыу продукттары ғөмүмән һатыуға сығарылмай. Сауҙагәрҙәр дефицит тауарҙарҙы йәшерә, спекуляция киң ҡолас ала. Йыш ҡына магазиндар эргәһендә шәкәр, шырпы, аяҡ кейеме, ситса һәм башҡа әйберҙәр һатып алыу өсөн бик ҙур сират теҙелә. Синфи йөҙөн юғалтҡан һәм анархист элементтар халыҡтың ризаһыҙлығынан файҙаланып эш итә, айырым магазиндарҙы, вино лавкаларын ҡыйратыу-талауҙар көсәйә.

12 сентябрҙә булған талау ҡаланың экономикаһына айырыуса ҙур зыян килтерә. Был көндө иртән иртүк Александровская урамында Гостиный двор менән йәнәшәлә А. Г. Сәғәҙиев магазины эргәһенә бик күп кеше йыйыла: бында калуш һатҡандар. Тиҙҙән бындағы халыҡ тауарҙың бер өлөшөн сауҙагәрҙең йәшергәнлеген белеп ҡала. Синфи йөҙөн юғалтҡан кешеләр тарафынан ҡотортолған асыулы халыҡ, Сәғәҙиевтең магазинын тар-мар итеп, башҡа магазиндарҙы вата-емерә һәм талай башлай. Ҡала үҙәгендәге бөтә магазиндар бер нисә сәғәт буйына ҡоторонған обывателдәр, люмпен-пролетарҙар һәм иҫерек һалдаттар ҡарамағында була. Ваҡытлы хөкүмәттең губерна комиссариаты чиновниктары араһында һәм гарнизон штабында аптырау хөкөм һөрә· Ҡарауыл ротаһы һалдаттары бер ниндәй сара күрмәй. Шикле кешеләр, күренеп торған провокаторҙар халыҡты Советтарға ҡаршы, уларҙы ҡыйратырға ҡоторта башлай. Ошондай ҡатмарлы шарттарҙа большевиктар ғына үҙҙәренең сабырлығын юғалтмай.

12 сентябрҙә көндөҙгө ҡыйралышты туҡтатыу ғөмүмән мөмкин булмаған һымаҡ бер ваҡытта, эшселәр милицияһы комиссары П. И. Зенцов бер төркөм большевиктар менән тимер юл мастерскойҙарына бара һәм тревога менән эшселәр милицияһының боецтарын йыйып ала. Ҡала милицияһында ҡорал алып, эшселәр, ҡарауыл ротаһы һалдаттары менән бергәләп, Өфө Советы резиденцияһы — элекке губернатор йорто (хәҙер 1-се һанлы ҡала клиник больницаһының поликлиника бүлеге, Туҡай урамы, 23-сө йорт) эргәһенә йыйылалар. Улар ошонан большевиктар етәкселегендә үҙәккә табан йүнәләләр. Ҡала урамдары бик тиҙ арала таҙартыла [1]. 12 сентябрь Өфөлә революцияның ҡораллы көстәре тыуыу көнө булып әүерелә.

---

[1] Тарасов И. Д., Зенцова С. П. Петр Иванович Зенцов (биографический очерк). Өфө, 1966, 47-се бит.

Эшселәр һәм һалдат массалары ҡыйралышты ҡырҡа ғәйепләй. Улар бөтә власты Советтарға биреү өсөн ойошҡан сығыштарҙың, көрәштең генә емереклекте, экономик тарҡалыуҙы һәм һәләкәтте юҡ итеүҙең берҙән-бер юлы икәнлеген һаман асығыраҡ аңлай бара.

Б. Я. Нуриманов.



1917 йылдың сентябрь — октябрендә забастовка хәрәкәте ҡаланың күпселек предприятиеларын солғап ала. Гутман заводы, тимер юл мастерскойҙары, депо, юл службаһы эшселәре, печатниктар забастовка иғлан итә. Таҡта ярыу заводтары, фанер фабрикаһы һәм столяр мастерскойҙары эшселәренең 10 октябрҙә башланған дөйөм стачкаһы айырыуса ҙур була. Унда 1 меңгә яҡын эшсе, шул иҫәптән бик күп башҡорт һәм татар эшселәре, ҡатнаша. Забастовкала ҡатнашыусылар ағас эшкәртеүселәр профсоюзы етәкселегендә коллектив договор төҙөшөүҙе һәм хеҙмәт хаҡын арттырыуҙы талап итә; власты Советтарға биреү уларҙың политик талабы була. Бөтә Өфө пролетариаты тарафынан яҡланған ағас эшкәртеүселәрҙең сығышы эшселәрҙең еңеүе менән тамамлана.

Корниловщинаны тар-мар иткәндән һуң большевиктарҙың гарнизон һалдаттарын революцион тәрбиәләү буйынса эше көсәйә. РСДРП(б)-ның Өфө комитеты эргәһендәге хәрби ойошма һәм культура-ағартыу комиссияһы айырыуса ҙур роль уйнай. Сентябрь аҙағында Советтың А. К. Евлампиев етәкселек иткән хәрби секцияһы гарнизон частарында «азатлыҡ легиондарын» ойоштороу буйынса комиссия төҙөй, уға революцион ҡараштағы һалдаттар инә. 1917 йылдың 25 октябренә легиондарҙа Совет власы өсөн ҡулына ҡорал тотоп көрәшергә әҙер торған 2 меңгә яҡын һалдат иҫәпләнә. Ғәмәлдә ҡаланың бөтә 30 меңле гарнизоны большевиктар яғына баҫа. Ваҡытлы хөкүмәт хәҙер уға иҫәп тота алмаған бик ҙур көс ине был.

Партияның Өфө комитетының татар-башҡорт группаһының да эше активлаша. РСДРП(б)-ның Урал өлкә һәм Өфө комитеттары инициативаһы менән башҡорт һәм татар большевиктарының Өфөлә 15—18 октябрҙә булып үткән I съезы ҡарарҙары башҡорт һәм татар хеҙмәтсәндәре араһында революцион агитацияның тәьҫирле булыуына, уларҙы буржуаз милләтселәр йоғонтоһонан ҡотҡарыуға, пролетариат диктатураһы өсөн көрәшкә туплауға булышлыҡ итә [1].

Хеҙмәтсән йәштәр араһында ҙур эш алып барыла. Ҡалала октябрь урталарында «III Интернационал» йәштәр союзы төҙөлә. Уның алдына йәш эшселәрҙең һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың синфи үҙаң-

[1] Очерки истории Башкирской организации КПСС, 163, 164-се биттәр.

лылығын үҫтереү һәм уларҙы пролетариаттың революцион авангарды менән бергә алып барыу бурысы ҡуйыла. Партияның йәш ағзалары А. Боков, А. Тараканова, Б. Задовский, Н. Хәмитова союзды ойоштороуҙа актив ҡатнаша[1].

Илдәге дөйөм кризистың үҫеүе аумаҡай партияларға ла йоғонто яһай. Уларҙың сафтарында буталыш башлана. Өфө меньшевиктар ойошмаһы хеҙмәтсәндәр араһында һәр төрлө йоғонтоһон юғалта. Эшселәр синыфы мәнфәғәттәренә хыянат итеү политикаһы уларҙан элекке күп кенә яҡлаусыларын да ситләштерә. Ҡаланың предприятиеларында меньшевиктар инде бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡала. Бигерәк тә интеллигенция, хеҙмәткәрҙәр, һалдаттар һәм башлыса тимер юлда эшләүсе эшселәрҙең бер өлөшө араһында сентябрь айында (татар-башҡорт группаһынан башҡа) 700 кешене[2] берләштергән эсерҙар ойошмаһы үҙенең йогонтоһон билдәле күләмдә һаҡлаған була. Ләкин ул берҙәм түгел ине. Уның сафтарында июль айында уҡ әле һул ағым барлыҡҡа килгәйне, һәм ул һәр көн һайын нығына бара ине. Һул эсерҙар аҡрынлап ойошмала төп билдәләүсе көс булып әүерелә. Крәҫтиән депутаттарының губерна Советы, Мосолмандарҙың хәрби шураһы (советы *) һәм башҡа ҡайһы бер ойошмалар улар етәкселеге аҫтында була. Крәҫтиән-һалдат массалары ҡараштарын сағылдырып, һул эсерҙар күп кенә мәсьәләләрҙә большевиктарҙы яҡлайҙар, власты Советтарға биреүҙе яҡлап сығыш яһайҙар.

1917 йылдың көҙөнә илдә буржуазия һәм помещиктар власын ҡолатыу өсөн шарттар барлыҡҡа килә. В. И. Лениндың күрһәтмәләренә таянып эш итеп, большевиктар партияһы ҡоралды восстаниеға әҙерлекте йәйелдерә. Өфө большевиктарына революцион көстәрҙе әҙерләүҙә РСДРП(б) Үҙәк Комитеты вәкиле А. В. Шотман ҙур ярҙам күрһәтә. Ул Өфө губернаһына 1917 йылдың сентябрендә килеп китә. А. В. Шотман Өфө большевиктарын илдәге хәл менән, Үҙәк Комитеттың күрһәтмәләре менән таныштыра. «Владимир Ильичтың власты алыу тураһындағы, власты алғандың иртәгеһе көнөндә нимә эшләргә кәрәклеге хаҡындағы мәсьәләне нисек ҡуйғанлығы» хаҡында һөйләп бирә[3]. 1917 йылдың 4—5 октябрендә булып үткән РСДРП(б)-ның I губерна конференцияһы ҡарарҙары массаларҙы Совет власы өсөн көрәшкә туплауға хеҙмәт итә. Уның делегаттары 4200-гә яҡын коммунистың вәкиле булып килә. Конференция боль-

---

[1] Саяпов Т. Ш. Ленинский комсомол Башкирии (краткие очерки). Өфө, 1966, 27-се бит.

[2] «Земля и воля», 1917, 25 сентябрь.

* Мосолмандарҙың хәрби шураһы 1917 йылдың 30 майында Өфө советы депутаттары булған башҡорт һәм татарҙар инициативаһы менән мосолман һалдаттары араһында политик һәм культура-ағартыу эше алып барыу өсөн ойоштороло. Октябрь көндәре алдынан шура эшендә большевик һалдат Ф. А. Әхмәдуллин һәм һул эсер-интернационалистар Ш. Ә. Хоҙайбирҙин, Г. Әлмөхәмәтов, И. Рәмиев торған һайын ҙурыраҡ роль уйнай башлай.

[3] Пройденный путь. К истории борьбы за диктатуру пролетариата в Приуралье, 1-се сығарылыш. Өфө, 1927, 48-се бит.

шевиктар партияһының эшселәр, һалдаттар һәм крәҫтиәндәр араһында бик ҙур абруй менән файҙаланғанлығын күрһәтә. Конференция урындағы партия ойошмаларын «бер яктан пролетариат һәм уны яклаусы крәҫтиәндәр катламдары менән, икенсе яктан буржуазия араһында... үҙәк власть өсөн барған көрәштең нисек тамамланыуын көтөп тормаҫтан, революция алға куйған ер мәсьәләһен һәм башка мәсьәләләрҙе революцион юл менән хәл итә башларға, һәм шуның менән үҙәктәрҙәге көрәштең уңышлы бөтөүенә булышлык итергә» саҡыра [1].

А. А. Юрьев.



Конференция карарҙары эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының Өфө Советында большевиктарҙың позицияһын артабан нығытыуға булышлык итә. 2 октябрҙә президиумдың эшселәр секцияһын һайлау була, секцияның етәксеһе итеп Н. П. Брюханов һайлана. Ә 9 октябрҙә ғәмәлдә бынан алда уҡ етәкселектән ситләштерелгән уң эсер В. П. Гиневский урынына «Вперед!» газетаһы редакторы А. И Свидерский кала Советы башкарма комитеты председателе итеп тәғәйенләнә. Советта большевиктар фракцияһы тайпылышһыҙ үҫә: сентябрҙә — октябрҙә гарнизондың айырым роталарынан Советка большевик һалдаттар А. П. Кучкин, А. М. Чеверев, А. А. Жариков, унтер-офицер Т. Ф. Долженков, прапорщик Х. Б. Момужьянц һәм башкалар һайлана, башкарма комитет ағзалары меньшевик С. Д. Микадзе һәм бундсы М. И. Плакса үҙҙәренең партиялары менән араларын өҙә һәм большевиктар позицияһына күсә.

1917 йылдың октябрь аҙағында Өфө, бөтә ил шикелле, Петроградтан хәбәр көтөп йәшәй. 10 һәм 16 октябрҙә большевиктар партияһы Үҙәк Комитетының тарихи ултырыштары була. Улар В. И. Лениндың тәкдиме буйынса коралды восстание тураһында карар кабул итә.

17 октябрҙә «Вперед!» газетаһы В. И. Лениндың «Кризис өлгөрҙө» тигән хеҙмәтен баҫып сығара. Унда киҫкен революцион хәрәкәттәрҙең кәрәклеге нигеҙләнгәйне. Газетаның шул уҡ номерында партияның Өфө комитеты эшселәргә: «Буржуазия эшселәр синыфына каршы һөжүмгә әҙерләнә. Эшсе иптәштәр, шундай сәғәт якынлаша, ул һуңғы һәм хәл иткес алыш буласак!» — тигән саҡырыу менән мөрәжәғәт итә.

---

[1] Резолюции областных конференций Башкирской партийной организации и пленумов обкома КПСС (1917—1940 гг.). Өфө, 1959, 20-се бит.

## § 2. Ҡалала Совет власының урынлашыуы һәм нығыныуы

1917 йылдың 25 октябрендә Петроградта Коммунистар партияһы етәкселек иткән революцион эшселәрҙең һәм һалдаттарҙың ҡораллы восстаниеһы һөҙөмтәһендә буржуаз Ваҡытлы хөкүмәт ҡолай. Донъяла тәүге еңеүле социалистик революция башлана. «Бөгөндән алып Россия тарихында яңы осор башлана,— тип иғлан иткән В. И. Ленин Петроград Советы ултырышында, — һәм был, өсөнсө рус революцияһы үҙенең һуңғы һөҙөмтәһендә социализмдың еңеүенә килтерергә тейеш» [1].

25 октябрҙә кис Петроградтан телеграф аша Петроград хәрби-революцион комитетының «Хәрәкәт итеүсе армияның бөтә армия комитеттарына. Һалдат депутаттарының бөтә Советтарына» тигән приказы тапшырыла башлай. Приказда Керенский хөкүмәтенең ҡолатылыуы һәм властың Советтар хөкүмәтен төҙөгәнгә тиклем Хәрби-революцион комитет ҡулына күсеүе тураһында хәбәр ителә [2]. 26 октябрҙә иртән был хәбәр Өфө станцияһының тимер юл телеграфында ла ҡабул ителә. Ул, моғайын, Һамарҙан йәки Ҡазандан тапшырылғандыр. Дежурҙағы телеграфист большевик С. Т. Галкин телеграмма тексын һис кисекмәҫтән РСДРП(б)-ның ҡала комитетына илтеп тапшыра [3]. Совет башҡарма комитеты президиумының күрһәтмәһе буйынса ҡаланың иң мөһим пункттарында һалдаттар һәм ҡыҙылгвардеецтар отрядтары туплана башлай.

Көндөҙгө 3 сәғәт 30 минутта большевиктар инициативаһы менән элекке губернатор йортоноң бер бүлмәһендә эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының Өфө Советы һәм крәҫтиәндәр депутаттарының губерна Советы башҡарма комитеттарының берлектәге ултырышы асыла. Өфө Советы башҡарма комитеты председателе А. И. Свидерский Петроград хәрби-революцион комитетының телеграммаһын уҡып ишеттерә һәм президиум ҡабул иткән саралар тураһында хәбәр итә. Ултырышта сығыш яһаған меньшевиктар һәм уң эсерҙар баш ҡаладағы ҡоралды восстаниены ғәйепләйҙәр. Өфө меньшевиктары лидеры И. А. Әхтәмов, «переворотты революция өсөн бәхетһеҙлек тип иҫәпләп, үҙҙәренең яңы революцион властың эшендә ҡатнашмаясаҡтарын» белдерә [4]. Пролетар революция менән килешеүселәр араһында буталыусы һул эсерҙар башҡаса позиция алалар. Үҙ лидерҙарының береһе И. З. Штейнберг аша улар, «әгәр яңы власть төҙөлә икән... уға актив ҡаршылыҡ күрһәтмәйәсәктәрен... сонки был ко-

---

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы. 35-се том, 2-се бит.

[2] Декреты Советской власти, 1-се том, 1917 йыл, 25 октябрь — 1918 йыл, 16 март. М., 1957, 7-се бит.

[3] За власть Советов. Сборник воспоминаний участников Октябрьской революции и гражданской войны в Башкирии. Өфө, 1961. 42-се бит.

[4] Октябрь в Башкирии (октябрь 1917 г.— май 1918 г.). Сборник документов и материалов. Өфө, 1979, 22-се бит.

рәшкә бер большевиктарҙы ғына түгел, бәлки гөмүмән социалистарҙы ҡолатырға теләгән асыҡтан-асыҡ һәм йәшерен контрреволюцион көстәрҙең килеп тығылыуы мөмкин», тип белдерәләр. Һул эсерҙар билдәле бер шарттарҙа яңы власҡа «эшлекле булышлыҡ күрһәтеү» мөмкинлеген әйтәләр [1].

А. М. Чеверев.



Кѳслө бәхәстәрҙән һуң большевиктар фракцияһы тәҡдим иткән резолюция күпселек тауыш менән ҡабул ителә. Унда властың Советтарға күсеүе хуплана һәм «власты үҙ ҡулыңа алып һәм Петроград гарнизоны һәм пролетариаты тарафынан олгәшелгән еңеүҙе артабан тәрәнәйтеүгә һәм үҫтереүгә булышлыҡ итеп, урындарҙа һис кисекмәҫтән революцион-демократик башланғыстарҙа власты ойоштора башлауға керешеү» бурысы ҡуйыла [2]. Шулай уҡ яңы, революцион властың органы сифатында губерна революцион комитетын (губревком) ойоштороурға ҡарар ителә. Ултырышта комитеттың бурыстары тураһындағы мәсьәлә буйынса киҫкен көрәш башланып китә. Большевиктар, губревком власты алыу органы, пролетариат диктатураһы органы булырға тейеш, тип иҫәпләй. Эсерҙар иһә уның функцияларын йәмәғәт именлеге комитеттарының гәҙәти бурыстары менән сикләргә тәҡдим итәләр. «Үкенескә ҡаршы,— тип яҙған И. З. Штейнберг эсерҙар партияһы үҙәк комитеты органы булған «Знамя труда» газетаһы редакцияһына ебәргән хатында,— беҙҙең проект Өфөлә Совет башҡарма комитеты тарафынан кире ҡағылды һәм күпселек власты алыу өсөн орган төҙөргә тип ҡарар итте» [3].

Тиҙҙән иғлан ителгән тәнәфес ваҡытында РСДРП(б)-ның Өфө комитетының ултырышы була, унда Н. П. Брюхановтың «Петроградта ҡоралды восстаниеның еңеүе һәм барлыҡҡа килгән яңы политик хәл тураһындағы» белдереүе тыңлана. Комитет губревкомға үҙенең вәкилдәрен тәғәйенләй. Н. П. Брюханов (председатель), А. И. Свидерский, А. Д. Цюрупа, А. А. Юрьев, А. И. Кирьянов һәм Б. М. Эльцин [4] составында комитеттың президиумын һайлай һәм халыҡҡа саҡырыу менән мөрәжәғәт итә. Унда ул контрреволюцияның теләһә ниндәй соҡсоноуҙарына ҡырҡа отпор бирергә саҡыра. «Халыҡты

[1] Очерки по истории Башкирской АССР, 2-се том (Советский период), 53-сө бит.

[2] Октябрь в Башкирии (октябрь 1917 г.— май 1918 г.), 22-се бит.

[3] «Знамя труда», 1917, 9 ноябрь.

[4] Подготовка и проведение Великой Октябрьской социалистической революции в Башкирии (февраль 1917 г. — июнь 1918 г.), 226-сы бит.

A. П. Кучкин.



ҡотҡарып алып ҡалыу, революцияны ҡотҡарып алып ҡалыу,— тип әйтелә сағырыуҙа,— пролетар һәм һалдат массаларының революцион энергияһына бәйләнгән. Бары тик үҙ көстәребеҙгә генә, үҙебеҙҙең дисциплинабыҙға ғына, үҙебеҙҙең ойошҡанлығыбыҙға ғына, үҙебеҙҙең тотанаҡлығыбыҙға ғына ышана алабыҙ. Беҙ пролетар һәм һалдат-крәҫтиән массаларының талаптарын тормошҡа ашырыуҙы һис һүҙһеҙ, батырҙарса, бөтә тулылығы менән үҙ өҫтөнә алған яңы власҡа бөтә революцияны, уның ҡаҙаныштарын һәм ошо властың киләсәген һаҡлап ҡалыу өсөн көрәшкә етәкселекте ышанып тапшырабыҙ»[1].

Большевистик комитеттың ултырышы менән бер үк ваҡытта тип әйтерлек Өфө Советындағы эсерҙар фракцияһының йыйылышы була. Һул эсерҙар биргән тауыш менән фракция, губревкомға ике вәкилен ебәреп, аҙсылыҡта уның составына инергә ҡарар итә[2].

Кисен һуң ғына Советтар башҡарма комитеттарының ултырышы яңынан башлана, ләкин хәҙер унда Мосолман хәрби шураһы һәм район тимер юл комитеты вәкилдәре лә ҡатнаша. Төнгө сәғәт 12-лә губернаға идара итеү өсөн ревком ойошторола. Унда большевиктар — Н. П. Брюханов, А. К. Евлампиев, А. И. Свидерский, А. Д. Цюрупа, А. А. Юрьев һәм һул эсерҙар А. И. Бриллиантов һәм З. И. Штейнберг инә. А. И. Свидерский губревкомдың председателе була. Берлектәге ултырыш халыҡҡа ҡабул ителгән мөрәжәғәттә Өфөлә һәм губернала властың Советтар ҡулына күсеүе, губревком ойошторолоуы тураһында хәбәр итә һәм хеҙмәтсәндәрҙе ағымдағы эштәрҙе тыныс ҡына үтәргә һәм революцион демократия органдары тирәһенә тупланырға саҡыра[3].

Ревком ойошторғанда большевиктар хеҙмәтсән крәҫтиәндәрҙең байтаҡ массаларын ғына түгел, бәлки эшселәрҙең дә бер өлөшөн үҙ артынан эйәртеүсе, крәҫтиәндәр депутаттарының губерна Советына, Мосолман хәрби шураһына һәм район тимер юл комитетына етәкселек итеүсе һул эсерҙар менән блок төҙөргә мөмкин тип иҫәпләй. Өфөнөң һул эсерҙары ул көндәрҙә Совет власын яҡлауҙары тураһында белдерә. Большевиктарҙың һул эсерҙар менән хеҙмәттәшлеге әле ваҡ буржуазия, эсерҙар иллюзияһын еңеп, унан ҡотола алмаған

---

[1] Октябрь в Башкирии (октябрь 1917 г. — май 1918 г.), 25-се бит.
[2] «Земля и воля», 1917, 28 октябрь.
[3] «Вперед!», 1917, 28 октябрь.

хеҙмәтсәндәрҙең бер өлөшөн яңы тормош төҙөү буйынса практик эшкә ылыҡтырырға, эшселәр синыфы етәкселегендә эшселәр синыфының крәҫтиәндәр менән союзын нығытырға булышлыҡ итә.

27 октябргә ҡаршы төндә губревком Өфөлә һәм губернала революцион власты нығытыу буйынса күп кенә саралар күрә. Ваҡытлы хөкүмәттең губерна комиссариатын бөтөрөргә тип ҡарар ителә. Башҡортостандың бөтә эре үҙәктәренә Петроградта ҡораллы восстаниеның еңеүе, губревком ойошторолоуы һәм уның бурыстары тураһында телеграммалар ебәрелә, цензура индерелә һәм матбуғат мәсьәләләре буйынса комиссар тәғәйенләнә. А. А. Юрьев етәкселегендәге бер торкөм һалдат почта-телеграф бинаһына үтеп инә һәм уның начальнигын ҡулға ала.

1917 йылдың 26 октябре — Өфө тормошонда иҫтәлекле ваҡиға. Был көндө ҡаланың күп быуатлыҡ тарихында яңы бит асыла — совет, социалистик Өфөнө төҙөү башлана.

Советтар башҡарма комитеттарының власты алыу һәм губревком ойоштороу тураһындағы ҡарары хеҙмәтсәндәрҙең һәм массовый ойошмаларҙың яҡлауын таба. 27 октябрҙә Өфө Советының хәрби секцияһы полк, рота һәм команда комитеттарының вәкилдәре менән берлектә, Петроградта ҡораллы восстание һәм Советтарҙың II Бөтә Россия съезы эше тураһындағы хәбәрҙе тыңлағандан һуң, октябрь переворотын бер күңелдән ҡотлай. Советтарҙың власты үҙ ҡулдарына алыуын Өфө Советының эшселәр секцияһы, ҡаланың таҡта ярыу һәм башҡа предприятиелары эшселәре ҡыйыу рәүештә яҡлай. Эшселәрҙең һәм һалдаттарҙың настроениеһын сағылдырып, РСДРП(б)-ның Өфө комитеты ағзаһы А. Р. Кучкин шул көндәрҙә былай тип яҙған: «Миллионлаған йөрәктәр берҙәй тибә башланы һәм беренсе тапҡыр иркен итеп һулыш алды... Һәм революцион халыҡ дошмандары, революция дошмандары хәҙер нисек кенә тырышып ҡарамаһындар, улар үҙҙәренең контрреволюцион пландарын ғәмәлгә ашыра алмаясаҡ. Бөгөндән башлап власть башына революцион халыҡ үҙе — эшселәр, һалдаттар һәм иң ярлы крәҫтиәндәр баҫа һәм власть башында торған ошо халыҡтың ҡулынан власты һәм революцияны тартып алырлыҡ көс юҡ» [1].

Халыҡ массаларының революцион переворотты яҡлауы контрреволюцион көстәрҙе тиҙ тар-мар итеү өсөн шарттар тыуҙыра. Ләкин Өфө партия ойошмаһының, губревкомдың һәм эшселәр һәм һалдаттар депутаттары Советының ҡайһы бер етәкселәре (А. И. Свидерский, Н. П. Брюханов, Б. М. Эльцин һәм башҡалар) дошманға ҡаршы ҡыйыу һөжүм итеү урынына был көндәрҙә икеләнеүгә, иҫке буржуаз дәүләт аппаратын емереүҙә, властың ҡалала һәм губернала Советтар ҡулына күсеүен ныҡлы ғәмәлгә ашырыуҙа «ҡыйыуһыҙлыҡ күрһәтеүгә» юл ҡуйҙылар. Уларҙың йоғонтоһо аҫтында 28 октябрҙә губревком Ваҡытлы хөкүмәттең губерна комиссариатын бө-

---

[1] «Вперед!», 1917 йыл, 28 октябрь.

төрөү тураһындағы үҙенең ҡарарын һис кисекмәҫтән ғәмәлгә ашырыуҙан тыйылып торорға, комиссариаттың эшмәкәрлеген контроль аҫтына алыу менән сикләнергә ҡарар итә. Бындай аҙым, йәнәһе, комиссариаттың техник аппаратын ағымдағы эштәр өсөн файҙаланыу менән аҡлана тип иҫәпләйҙәр. Ысынында иһә комиссариат хеҙмәткәрҙәре Өфөлә лә, өйәҙҙәрҙә лә, революцияға асыҡтан-асыҡ ҡорал менән ҡаршылыҡ күрһәтеүҙәре мөмкин булмаған хәлдә, крайға идара итеүҙә тарҡаулыҡ индереү маҡсатында, Советтар үткәргән сараларҙы уҫал уй менән өҙә башлайҙар. Ә 30 октябрҙә эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының Өфө Советы һәм крәҫтиәндәр депутаттарының губерна Советы башҡарма комитеттарының берлектәге ултырышы ла хата резолюция ҡабул итә, унда ул Бөтә Россия тимер юл профессиональ союзы (Викжель) башҡарма комитетының эсер-меньшевистик етәкселегенең бөтә «совет партиялары» вәкилдәренән ниндәйҙер «бер төрлө социалистик хөкүмәт» төҙөү тураһындағы тәкдимен хуплай. Был әле генә булған пролетар революцияның еңеүҙәрен юҡ итергә ынтылған буржуазияға хеҙмәт итеүсе «социалистарға» ташлама ине.

Өфө большевиктар ойошмаһы етәкселегенең ҡыйыуһыҙлығы, «ташламаға барыуы» контрреволюцион көстәрҙең активлашыуына булышлыҡ итә. «Известия Уфимского губернского комиссариата» газетаһы, халыҡты алдап, Керенский, имеш, Петроградты алған, большевиктарҙың восстаниеһы баҫтырылған, тип яҙа. Йорт стеналарында һәм ҡоймаларҙа Ваҡытлы хөкүмәт власын аяҡҡа баҫтырыу өсөн көрәшкә саҡырыусы, Советҡа ҡаршы листовкалар күренә башлай.

Өфө буржуазияһы был көндәрҙә ҡала думаһын Советтарға ҡаршы кос үҙәге итеп әүерелдерергә иҫәп тота. 30 октябрҙә кадет-эсер-меньшевистик күпселектең талап итеүе буйынса думаның ғәҙәттән тыш йыйылышы саҡырыла, унда сауҙагәр чиновниктар даирәһенән күп кенә обывателдәр килә. Урындағы кадеттар лидеры граф П. П. Толстой йыйылыштың эшенә йүнәлеш бирергә маташып ҡарай. Ул «власты үҙләштереүҙәге» ғәйепләүҙәр менән большевиктарға ябырыла. Йыйылышҡа тәҡдим ителгән резолюция проектында кадеттар «эшселәр, һалдаттар һәм крәҫтиәндәр депутаттарының Өфө Советтарының, Мосолман хәрби советының һәм район тимер юл комитетының восстаниеға ҡушылған эшмәкәрҙәренә ҡаршы, Өфөлә барлыҡҡа килгән губерна революцион комитеты ағзаларына ҡаршы һәм Өфөлә, шулай уҡ Өфө губернаһында восстаниеға булышлыҡ күрһәткән бөтә кешеләргә ҡаршы һис кисекмәҫтән суд ярҙамында эҙәрләү башлауҙы» талап итә [1].

А. И. Свидерский менән Ф. Я. Першин контрреволюцион ҡалдыҡ-боҫтоҡҡа лайыҡлы отпор бирә. Большевиктар фракцияһы исеменән сығыш яһап, А. И. Свидерский былай тип белдерә: «Бөгөн бөтә кис

[1] Октябрь в Башкирии (октябрь 1917 г. — май 1918 г.), 34-се бит.

буйына... большевиктарҙы хөкөм итәләр... Тик шуныһы ғәжәп, бөтә кис буйына большевиктар хаҡында һөйләп тә бер кем, бер һүҙ менән дә улар артынан кемдәр барғанлығы хаҡында әйтмәне. Большевиктар эшселәр һәм иң ярлы крәҫтиәндәр менән бергә булдылар... Большевиктарҙың ғәйебе нимәлә һуң? Ә бары тик шунда ғына: иҙелгән, һәр төрлө түҙемлеген юғалтҡан, бөтәһе тарафынан да яҙмыш ҡарамағына тапшырылған халыҡ менән бергә булдылар, был — революцион эшселәр, һалдаттар һәм крәҫтиәндәр менән бергәләп еңеүгә юл ярыусы берҙән-бер партия. Тарих большевиктарҙы аҡлаясаҡ, пролетариатты йәшәүенең түҙеп торғоһоҙ ауыр минуттарында ташламаған өсөн беҙҙе аҡлаясаҡ» [1].

Үҙенең составы буйынса Советтарға ҡаршы булған Өфө думаһы, буржуаз эшмәкәрҙәр бағлаған өмөттәргә ҡарамаҫтан, контрреволюция өсөн уңайлы булған ҡарарҙы ҡабул иттереүгә өлгәшә алмай; ул «булып ятҡан ваҡиғаларға ҡарата билдәле бер фекер юҡ» [2] тигән фактты билдәләп үтеү менән генә сикләнергә мәжбүр була.

Бары тик ноябрь башында ғына, илдә пролетар революцияның уңыштары хаҡындағы информацияны тотҡарлап тороусы почта-телеграф хеҙмәткәрҙәренең саботажы уңышһыҙлыҡҡа осрағас ҡына, Советтарҙың II Бөтә Россия съезы делегаттары Д. Е. Сулимов менән А. А. Жариков ҡайтҡас һәм уларҙың ялҡынлы сығыштарынан һуң ғына, губревком контрреволюцияға ҡаршы ҡыйыуыраҡ көрәшә башлай.

Ноябрҙең тәүге көндәрендә, һул эсерҙарҙың ҡаршылыҡ күрһәтеүенә ҡарамаҫтан, ревком Өфөлә сыға торған бөтә баҫмаларға алдан цензура күҙәтеүен индерә. Шуның менән контрреволюция рупорҙарына — «Уфимская жизнь» һәм «Уфимский вестник» газеталарына ҡаты удар яһала. 22 ноябрҙә губревком башында меньшевиктар һәм кадеттар торған губерна йәмәғәт ойошмалары комитетын тарата. 30 ноябрҙә Ваҡытлы хөкүмәттең губерна комиссариаты бөтөрөлә, э ревкомға эштәрен тапшырыуҙан баш тартҡаны өсөн комиссар В. Ф. Герасимов үҙе өйөндә һаҡ аҫтына алына.

Совет хөкүмәтенә һәм В. И. Лениндың үҙенә Өфөләге ваҡиғалар хаҡында, ҡалала һәм губернала пролетариат власының урынлашыуы тураһында һөйләп биреү өсөн РСДРП(б)-ның Өфө комитеты Петроградҡа үҙенең вәкилен ебәрергә ҡарар итә. Унда тимер юл мастерскойҙары эшсеһе, Өфө Советы башҡарма комитеты ағзаһы, Владимир Ильич менән эмиграцияла осрашҡан Т. С. Кривовты ебәрергә тип хәл ителә.

1917 йылдың 16 ноябрендә Т. С. Кривов Өфөнән поезд менән юлға сыға. Уның менән бергә А. Д. Цюрупа һәм Өфө Советы башҡарма комитеты ағзаһы большевик М. И. Родионов Мәскәүгә аҙыҡ-түлек съезына бара. Составҡа аҙыҡ-түлек тейәлгән вагондар — ти-

---

[1] Октябрь в Башкирии (октябрь 1917 г. — май 1918 г.), 38-се бит.
[2] «Вперед!», 1917 йыл, 1 ноябрь.

мер юлсыларҙың Тула ҡорал эшләүселәренә бүләге тейәлгән вагондар тағылғайны. Игенде тимер юл мастерскойҙары эшсеһе Д. Н. Краснов етәкселегендәге ҡоралды һаҡ оҙатып барған.

Петроградта Т. С. Кривовты В. И. Ленин председателлегендә үткән Совнарком ултырышына саҡыралар. Өфө пролетариаты вәкиле Владимир Ильичҡа губревком председателе А. И. Свидерскийҙың хатын тапшыра һәм хөкүмәт ағзаларына социалистик революцияның Башҡортостан ҡалаларындағы һәм ауылдарындағы еңеүле аҙымдары тураһында, революцион ойошмаларҙың ихтыяждары хаҡында һөйләп биргән.

Юлбашсы менән осрашыуын хәтергә алып, Т. С. Кривов аҙаҡ былай тип яҙған: «Буталсыҡ итеп һөйләйем, бер мәсьәләнән икенсеһенә күсәм. Әммә Ильич шунда уҡ иң мөһимен эләктереп ала:

— Ҡорал кәрәкме? Ҡорал алырға Тулаға барығыҙ. Һеҙгә ҡағыҙ яҙып бирербеҙ.

...— Владимир Ильич, — тимен мин, — беҙ Тулаға продукттар тейәлгән вагондар оҙаттыҡ.

— Бына был яҡшы! Бына был ысын пролетар теләктәшлек өлгөһө! Игенде бушатығыҙ ҙа ҡорал тейәгеҙ» [1]. В. И. Ленин Өфө большевиктарына килеп тыуған хәлгә ҡарап аҡыл менән, үҙ аллы эш итергә, анархияға ҡаршы ҡырҡа көрәшергә, хужалыҡ итергә өйрәнергә кәңәш биргән.

В. И. Лениндың тәрән аҡыллы кәңәштәре Өфө һәм губерна партия һәм Совет органдарының эшмәкәрлегенә нигеҙ итеп алына, хеҙмәтсәндәргә буржуазияның ҡаршылыҡ күрһәтеүен һындырырға, Ваҡытлы хөкүмәттең учреждениеларын бөтөрөргә, идара итеүҙең яңы совет аппаратын булдырырға, ҡала хужалығын үҙгәртеп ҡорорға ярҙам итә.

Өфөлә ноябрь аҙағында — декабрь башында булып үткән эшселәр һәм һалдаттар депутаттары Советтарының IV губерна съезы һәм крәҫтиән депутаттарының V губерна съезы Башҡортостанда Совет власын нығытыуҙа мөһим роль уйнай. Большевиктарҙың тәҡдиме менән съездарҙың күп кенә ултырыштары бергә үтә. Съездарҙың делегаттары күпселек тауыш менән Халыҡ Комиссарҙары Советын тулыһынса яҡлау тураһында резолюция ҡабул иттеләр һәм «Эшселәр һәм Крәҫтиәндәр хөкүмәтенең Үҙәк Башҡарма Комитет хуплауы менән сығарыла торған ҡарарҙарын эҙмә-эҙ ғәмәлгә ашырыуҙы талап иттеләр» [2]. Уң эсерҙарҙың Учредительный собраниеға тиклем Халыҡ Комиссарҙары Советын танымаҫҡа тип саҡырыуҙары депутаттарҙың ҙур күпселегенең ҡырҡа отпорына осрай.

4 декабрҙә съездарҙың берләшкән ултырышы край тарихында беренсе тапҡыр эшселәр, һалдаттар һәм крәҫтиәндәр депутаттары Со-

---

[1] В. И. Ленин и Башкирия, 284-се бит.

[2] Подготовка и проведение Великой Октябрьской социалистической революции в Башкирии (февраль 1917 г. — июнь 1918 г.), 250-се бит.

веттарының губерна башҡарма комитетын һәм Мосолман хәрби шураһын һайлай. Башҡарма комитетҡа 55 кеше инә, уларҙың 22-һе эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының Өфө Советы ағзалары була [1]. Башҡарма комитет тарафынан раҫланған губревкомға 5 большевик һәм 5 һул эсер инә. Губревком председателе итеп яңынан А. И. Свидерский һайлана.

Губерна башҡарма комитеты булдырыу һәм губревкомдың яңы составын һайлау эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының Өфө Советының функцияларын асыҡларға мөмкинлек бирә. Әгәр ҙә элек ул билдәле күләмдә эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының губерна үҙәге ролен үтәп килһә, хәҙер инде уның иғтибарын бары тик ҡала тормошона ғына тип әйтерлек туплау мөмкинлеге барлыҡҡа килә. Өфө Советының эшен йәнләндереүгә, уны дәүләт власының тулы хоҡуҡлы органы итеп әүерелдереүгә 1917 йылдың декабрендәге яңынан һайлауҙар булышлыҡ итә.

1917 йылдың аҙағынан башлап Советта эшселәр секцияһы һаман үҫә барған әһәмиәт ҡаҙана. Иҫке армияны стихиялы рәүештә демобилизациялау уңайы менән хәрби секция аҡрынлап тарҡала башлай. Һалдаттар төркөм-төркөм булып та, берәмләп тә үҙҙәренең частарын ташлап китә һәм туған яҡтарына ынтыла. Офицерҙарҙың контрреволюция яҡлы өлөшө Көньяҡ Уралдың, Дондың һәм башҡа ерҙәрҙең казактар йәшәгән райондарына китеү яғын ҡарай. 1918 йылдың яҙына ҡаланың гарнизоны тулыһынса таралып бөтә, ә хәрби секция йәшәүҙән туҡтай. Шуға күрә 1918 йылдың 1 апрелендә эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының Өфө Советы эшселәр депутаттары Советы итеп үҙгәртеп ҡорола, шуға бәйле рәүештә эшселәр секцияһы бөтөрөлә [2].

Яңы власть органдарын төҙөү буйынса ҙур һәм ҡатмарлы эш буржуазияның һәм революцияның бөтә дошмандарының ныҡлы ҡаршылыҡ күрһәтеүҙәренә осрай. Кадеттарҙың, меньшевиктарҙың һәм уң эсерҙарҙың саҡырыуы буйынса дәүләт учреждениелары работниктарының саботажы башлана. Беренсе булып банк чиновниктары сығып яһай. Банкыларҙы национализациялау тураһында ВЦИК-тың декретын ғәмәлгә ашырыу хаҡында губревком ҡарарына яуап итеп, улар 1917 йылдың 15 декабрендә забастовка иғлан итә һәм Совет власына буйһоноуҙан баш тарта. Тиҙҙән уларға губерна земствоһы, статистика комитеты, ҡала управаһы һәм башҡа учреждениелар хеҙмәткәрҙәре, шулай уҡ уҡытыусыларҙың һәм врачтарҙың бөтә өлөшө ҡушыла. Бәләкәй вазифалы хеҙмәткәрҙәр, интеллигенцияның революцион-демократик ҡараштағы өлөшө, башланғыс мәктәптәрҙең уҡытыусылары стачкала ҡатнашмай.

---

[1] «Вперед!» газетаһының 1917 йыл 6 декабрҙәге материалдары буйынса иҫәпләп сығарылды.
[2] «Вперед!», 1918, 3, 10 апрель.

Саботажсылар Өфө гарнизонының запастағы 144-се пехота полкы нигеҙендә төҙөлгән һәм 2,5 мең һалдаттан торған мосолман полкын Совет власына ҡаршы файҙаланырға маташалар [1]. Контрреволюцион Милли идара полкка айырым өмөттәр бағлай. Ул 1917 йылдың ноябрендә эске Россия һәм Себер мосолмандарының Өфөлә булып үткән буржуаз-милләтсе Милли мәжлесе тарафынан ойошторолған була. Ләкин саботажсыларҙың Совет власына ҡаршы милли буржуазия менән бергәләп сығыш яһарға, башҡорт һәм татар һалдаттарын үҙ маҡсаттарында файҙаланырға тырышыуҙары уңышһыҙлыҡҡа осрай.

Өфө хеҙмәтсәндәре был контрреволюцион хәрәкәттәрҙе ҡырҡа ғәйепләй. Эшселәр һәм һалдаттар депутаттары Советының, профессиональ союздарҙың, фабрика-завод һәм рота комитеттарының 27 декабрҙә булып үткән берлектәге кәңәшмәһендә ҡатнашыусылар Советтар хеҙмәт иткән эшкә бер кемдең дә ҡамасаулыҡ итеүенә юл ҡуймаясаҡтарын белдерәләр. Күп һанлы митингыларҙа һәм йыйылыштарҙа хеҙмәтсәндәр саботажсыларҙы яуапҡа тарттырыуҙы талап итәләр.

Массаларҙың яҡлауына таянып, губревком саботажды бөтөрөү буйынса ҡырҡа саралар күрә. Забастовканы ойоштороусылар эштән сығарыла, ҡайһы берҙәре судҡа бирелә. Уң эсерҙар һәм меньшевиктар Совет составынан сығарыла. Хеҙмәткәрҙәр һәм уҡытыусылар араһында массовый-аңлатыу эше үткәрелә. Большевистик агитация йоғонтоһо аҫтында 2-се мосолман полкы һалдаттары өйҙәренә тарала башлай. 1918 йылдың ғинуар уртаһына асыҡтан-асыҡ саботаж еңеп сығыла.

1918 йылдың ғинуарында Совет хөкүмәте тарафынан таратылған Учредительный собраниены яҡлап контрреволюцияның массовый сығыштар ойошторорға маташыуы ла уңышһыҙлыҡҡа осрай. Эшселәр һәм һалдаттар Учредительный собраниены бөтөрөүҙе хуплай, кадеттар тарафынан төҙөлгән «Учредительный собраниены яҡлау Союзы» Өфө бүлексәһенең протест демонстрацияһы һәм забастовкаһы ойошторорға маташыуҙарын ғәйепләй.

Чиновниктарҙың саботажы иҫке буржуаз дәүләт аппаратын ватыуҙы һәм яңы дәүләт аппараты төҙөүҙе тиҙләтә. Губерна идаралығы, губерна присутствиеһы, ҡаҙна палатаһы, губерна земствоһы, статистика комитеты, округ суды, Ырымбур уҡыу-уҡытыу округы һәм башҡа органдар бөтөрөлә, ә уларҙың эштәре Советтарҙың губерна башҡарма комитетының тейешле коллегияларына (бүлектәренә) тапшырыла.

Тарҡалған иҫке армияға алмашҡа Совет дәүләте яңы ҡоралды көстәрҙе төҙөүгә керешә. 1918 йылдың ғинуар башына Өфө Советының Ҡыҙыл гвардияһы төҙөлә. Уның составына 4 строевой, пулеметсылар һәм саперҙар командалары, нигеҙҙә урындағы гарнизон-

[1] «Вперед!», 13 ғинуар; ЦГАОР СССР, ф. 393, оп. 2, д. 101, л. 11.

дағы элекке һалдаттар иҫәбенән бөтәһе 275 ҡыҙылгвардеец инә[1]. Улар араһында рустар, башҡорттар, татарҙар, латыштар, мариҙар була. Ҡыҙылгвардеецтар даими рәүештә ҡаҙармала йәшәйҙәр һәм ҡала Советы, шулай уҡ губревком аҡсаһы иҫәбенә тәьмин ителәләр.

Советтар һәм урындағы большевистик ойошмалар эргәһендә ойошторолған эшсе-крәҫтиәндәр дружиналары контрреволюционерҙарға ҡаршы дәһшәтле көс булып әүерелә. Был дружиналар губерна күләмендә халыҡтың ҡоралланған боевой ойошмаһына (БОНВ) берләшә. Өфөлә боевой дружиналар бары тик большевик эшселәрҙән генә тора тиерлек. Уларҙың составы даими булмай: кәрәк сағында ваҡытлы рәүештә предприятиеларын ҡалдырып торған эшселәр ҡулдарына ҡорал ала. Ҡала БОНВ-ына ғәжәп көслө ихтыярлы һәм нервылары тимерҙәй ныҡ булған кеше — П. И. Зенцов етәкселек итә. Ҡала большевиктары уға контрреволюция һәм саботаж менән көрәшеү буйынса Өфөнөң ғәҙәттән тыш комиссияһы (ЧК) председателе һәм ҡала милицияһы етәксеһе кеүек үтә яуаплы постарҙы ла ышанып тапшыра. Өфө БОНВ-ы һәм 1918 йылдың апрелендә уның менән бергә ҡушылған ҡала Ҡыҙыл гвардияһы крайҙа Совет власын нығытыуҙа күренекле роль уйнай.

Өфөләр Көньяҡ Уралдың бик киң районын баҫып алған казак атаманы Дутовтың Советтарға ҡаршы фетнәһен тар-мар итеүҙә актив ҡатнаша. 1917 йылдың 18 ноябрендә үк Өфө, Һамар һәм Сызрань пролетарийҙарынан торған 400 кешелек беренсе революцион отряд Дутов фронтына китә. Уның командирҙары араһында аҙаҡ дан алған совет хәрби начальнигы слесарь коммунист В. К. Блюхер ҙа була. Отряд дутовсыларҙы Силәбе янында тар-мар итеүҙә айырыуса ҙур батырлыҡ күрһәтә. 1917 йылдың ноябрь—декабрендә Өфө губревкомы Дутов бандаларына ҡаршы көрәшкә бөтәһе өс йыйылма отряд ебәрә.

1918 йылдың апрелендә М. С. Кадомцев етәкселегендәге Өфө тимер юлсылар һәм ҡыҙылгвардеецтар отрядтары Верхнеуральск эргәһендә казак контрреволюцияһына ҡаршы ҡаты һуғыштарҙа ҡаһарманлыҡ һәм батырлыҡ өлгөләре күрһәтә. 21 апрелдә һәм 24 майҙа Якутов исемендәге баҡсала Өфө пролетарийҙары Дутовҡа ҡаршы һуғыштарҙа һәләк булған тәүге иптәштәрен ерләйҙәр. Бына уларҙың исемдәре: тимерсе Дмитрий Салманов, токарь Иосиф Станишевский — Өфө Советы ағзалары, баҡырсы Павел Кызин, металл ҡойоусы Николай Петров, депо осмотрщигы Михаил Трегубов, эшсeләр Николай Щелев, Михаил Киселев, санитар Гавриил Ефимов.

1918 йылдың 31 ғинуарында * ҡала думаһын таратыу Өфө хеҙмәтсәндәре өсөн бик ҙур әһәмиәткә эйә була. Халыҡҡа мөрәжәғәтендә Өфө Советы башҡарма комитеты, бынан һуң ҡала хужалығына идара итеү «бары тик иң ярлыларҙың ғына ихтыяждарын ҡәнәғәт-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 107, оп. 1, д. 4, л. 3—8, 76, 93, 94.
* 1918 йылдың 1 февраленән башлап даталар яңы стилдә бирелә.

И. Якутов исемендәге паркта Башҡортостанда Совет власының еңеүе өсөн көрәшеүселәрҙең ҡәберө өҫтөндәге мемориаль комплекс.



ләндереү өсөн, промышленносты эшселәр синыфы мәнфәғәттәрендә ойоштороу өсөн йүнәлтеләсәк», тип белдерә [1]. Ҡала хужалығын алып барыу өсөн Совет ҡала Коммунаһын төҙөй. 10 комиссар составындағы комиссариат уның башҡарма органы була, комиссарҙарҙың 7-һе Советтың дөйөм йыйылышында, 3-һө Мосолман хәрби шураһы тарафынан һайлап ҡуйыла. Комиссарҙар эргәһендә эшселәр һәм белгестәр вәкилдәренән коллегиялар һәм комиссиялар төҙөлә. Коммунаның юғары органы — Өфө Советының дөйөм йыйылышы — уның председателе итеп большевик Ф. Я. Першинды һайлай [2].

Коммуна Өфө хеҙмәтсәндәре араһында ҙур йогонто көсө менән файҙалана. Улар уның йөҙөндә халыҡ власы органын күрә, кәңәш һәм ярҙам һорап мөрәжәғәт итә. Медицина-санитария коллегияһы эшселәрҙе, ярлыларҙы түләүһеҙ дауалау тураһында саралар күрә. Буш торған йорттар иҫәпкә алына, айырым биналар реквизициялана. Квартиралар буйынса комиссия яңы совет учреждениеларын урынлаштырыу менән шөғөлләнә, хеҙмәтсәндәрҙе байҙар йорттарына күсерә башлай. Сиркәүҙе дәүләттән айырыу айҡанлы Коммуна эргәһендәге мещандар управаһы урынына метрика-теркәү бүлеге (ЗАГС) ойоштторола [3]. Коммунаның тәҡдиме буйынса 1918 йылдың

[1] «Вперед!», 1918 йыл, 14 февраль.
[2] ЦГА БАССР, ф. 107, оп. 1, д. 3, л. 9.
[3] ЦГА БАССР, ф. 2, оп 1, д. 47, л. 24.

1 майында эшсе депутаттарының Өфө Советы беренсе тапҡыр урамдарҙың, баҡсаларҙың һәм биналарҙың исемдәрен үҙгәртә. Ушаков баҡсаһы Свобода баҡсаһы тип (хәҙерге В. И. Ленин исемендәге парк), айыҡ кешеләр йәмғиәте баҡсаһы — Иван Якутов исемендәге баҡса, губернатор урамы — Совет урамы, губернатор йорто — Советтар йорто тип йөрөтөлә башлай һәм башҡалар [1].

Хеҙмәтсәндәр Өфө Советының 1918 йылдың 25 мартында ҡалалағы бөтә ер участкаларының Коммуна ҡарамағына күсеүе тураһында ҡабул ителгән ҡарарын хуплап ҡаршы ала. Ошо көндән алып башлыса ҡала ситендә йәшәгән һәм ҡала думаһынан йорт һалыу, баҡса һәм йәшелсә баҡсаһы өсөн өсләтә артығын түләп ер участкаһын арендаға алып көн иткән ярлылар һәм эшселәр 1 квадрат сажин өсөн 30—70 тин күләмендә аренда түләүе индерергә тейеш булалар. Шул уҡ ваҡытта ҡала үҙәгендә йәшәүсе буржуа, дворяндар, чиновниктар һәм ер һатып алып йәшәүселәр өсөн 1 квадрат сажин ергә 4 һумға тиклем аренда түләүе билдәләнә [2].

Тәрән социаль-экономик үҙгәртеп ҡороуҙарҙы ғәмәлгә ашырыу, буржуазияның милкен национализациялау Совет власын нығытыуҙа бик мөһим роль уйнай. Эшселәр контроле капиталистик промышленносты, банкыларҙы һәм транспорт средстволарын йәмәғәт милкенә әүерелдереүҙә тәүге аҙым була. 1917 йылдың 14 ноябрендә ВЦИК һәм Совнарком эшселәр контроленә халыҡ хужалығын планлы рәүештә яйға һалып алып барыу бурысын йөкләтеүсе положение ҡабул итәләр, эшселәр контроле органдары дәүләт учреждениелары булып әүерелә. Уларҙың ҡарарҙары предприятие хужалары тарафынан мотлаҡ үтәлергә тейеш тип иғлан ителә.

Өфө эшселәре ленинсы декретты энтузиазм менән ҡаршы ала һәм уны шунда уҡ ғәмәлгә ашыра башлай. 13 декабрҙә ҡала фабрика-завод комитеттарының дөйөм йыйылышы «производствоға эшселәр контроле тураһындағы законды һис кисекмәҫтән тормошҡа ашыра башларға» тип ҡарар итә [3]. Предприятиеларҙа эшселәр контроле органдарының эшен координациялау өсөн 21 декабрҙә эшселәр һәм һалдаттар депутаттарының Өфө Советы эргәһендә эшселәр контроле Советы ойоштороla, Башҡортостанда профсоюз хәрәкәтенең күренекле эшмәкәре М. А. Плотников уның председателе итеп ҡуйыла. Суднолар йөрөтөүселәр, металлистар, ағас эшкәртеүселәр профсоюздары һәм башҡа профсоюздар эргәһендә предприятиеларҙа контроль органдарына етәкселек итеүсе, хеҙмәт тураһында совет закондарының ғәмәлгә ашырылыуын, финанс иҫәп-хисап эштәренең, сырье һәм ҡорамалдарҙы файҙаланыуҙың дөрөҫ алып барылыуын тикшереп тороусы контроль-бүлеү комиссиялары төҙөлә. Контроль органдары

---

[1] «Вперед!», 1918, 5 май.
[2] ЦГА БАССР, ф. 2, оп. 4, д. 46, л. 44.
[3] Подготовка и проведение Великой Октябрьской социалистической революции в Башкирии (февраль 1917 г. — июнь 1918 г.), 346-сы бит.

1918 йылда Өфөлә 1 Майҙы байрам итеү.



аҡрынлап предприятиеларға финанс йәһәтенән һәм башҡа төр ярҙам күрһәтә башлай.

Капиталистар эшселәр контроле индереүгә ҡотороноп ҡаршылыҡ күрһәтә. Улар контроль органдарын таныуҙан баш тарта, производствоға аҡса бүлеүҙе туҡтата. Айырым предпринимателдәр, банкынан алдан уҡ аҡсаларын алып, предприятиеларын ташлап китә. Лесопромышленник Долгушев, эшселәр менән иҫәпләшеп тә тормайынса, Өфөнән ҡасып уҡ китә. Федоровтың сүпрә заводы, Дудоров менән Рыгаловтың шырпы фабрикаларының, күп кенә күн заводтарының продукцияһын уларҙың хужалары юғары спекуляция хаҡы менән йәшереп һаталар [1]. «Бер туған Каменскийҙар һәм Н. Мешков» пароходствоһы хужалары эшселәр контроле урынлаштырырға тырышыуға эшселәрҙе күпләп эштән сығарыу менән яуап бирәләр һәм Старица затонында [2] (хәҙерге Октябрь революцияһы исемендәге судноләр ремонтлау заводы) ремонт эштәрен туҡтаталар.

Предпринимателдәрҙең саботажына Совет хөкүмәте ҡырҡа саралар менән яуап бирә. 1917 йылдың ноябрь аҙағында Совет власы

[1] Вагапова Л. А. Осуществление рабочего контроля над производством в Башкирии. — Октябрьская революция и рождение Советской Башкирии. Сборник статей. Өфө, 1959, 86-сы бит.

[2] Подготовка и проведение Великой Октябрьской социалистической революции в Башкирии (февраль 1917 г. — июнь 1918 г.), 346-сы бит.

промышленносты национализациялауға керешә. Күп кенә осраҡтарҙа национализациялау эшселәр коллективтарының ҡарары буйынса үткәрелә. Мәҫәлән, Старица затонының эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре, хужаларҙың суднолар ремонтлауҙы туҡтатырға ҡарар иткәнлектәрен белеп ҡалғас, 1917 йылдың 28 декабрендә предприятиены үҙ ҡулдарына алыу һәм ВЦИК-тан «бөтә һыу юлы транспортын национализациялау тураһында һис кисекмәҫтән декрет баҫып сығарыуҙы» талап итеү тураһында ҡарар сығаралар [1]. 1918 йылдың 18 ғинуарында Совет хөкүмәте сауҙа флотын национализациялау тураһында декрет сығара. Затон эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре был ҡарарҙы ҡайнар хуплап ҡаршы ала. Һыу юлы транспорты работниктары союзының Ағиҙел йылға бассейны район комитеты һәм 1918 йылдың 26 ғинуарында ойошторолған Өфө губерна совнархозы, 1,1 миллион һум аҡса әҙләп табып, ике ай эсендә бөтә суднолларҙы ремонтлауҙы тәьмин итәләр һәм уларҙы 1918 йылдың навигацияһына әҙерләп ҡуялар [2].

Өфөлә Совет власының нығыныуы һәм 1917 йылдың аҙағынан алып 1918 йылдың башына тиклемге тәүге социаль-экономик үҙгәртеп ҡороуҙар большевиктарҙың ҡала ойошмаһы эше менән айырылғыһыҙ бәйләнгән була. 1918 йылдың яҙына уның составы ҙур үҙгәрештәр кисерә. Гарнизон частары таратылғас, күп кенә һалдат-большевиктар тыуған яҡтарына ҡайтып китә. Латыштар группаһы председателе А. П. Бром Өфө өйәҙенең Свято-Троицк волосына ебәрелә, ул унда ауыл ярлыларының кулактарға ҡаршы көрәшенә етәкселек итә. Башҡорт һәм татар большевиктары етәксеһе Б. Й. Нариманов Ырымбурға китә, сөнки 1917 йылдың аҙағында башҡорт халҡының милли хәрәкәте үҙәге унда күсә. Партия Үҙәк Комитетының ҡарары менән А. Д. Цюрупа РСФСР аҙыҡ-түлек халыҡ комиссары, Н. П. Брюханов менән А. И. Свидерский аҙыҡ-түлек халыҡ комиссариаты коллегияһы ағзалары итеп билдәләнә. Шуға ҡарамаҫтан, Өфө большевиктарының һаны арта: китеүселәр урынына алдынғы эшселәр, революцион рухтағы интеллигенция һәм ҡала йәштәре вәкилдәре килә. 1917 йылдың октябренән алып 1918 йылдың апреленә тиклем РКП(б)-ның ҡала ойошмаһы 700 ағзанан 1100 ағзаға арта. Бынан тыш, 55 большевик латыштар группаһына инә.

Илдең ауыр халыҡ-ара хәле киң ҡолас алған революцион үҙгәртеп ҡороуҙарға ҡамасаулыҡ итә. Совет хөкүмәте үҙе йәшәй башлауҙың тәүге көнөндә үк һуғышыусы бөтә илдәргә ғәҙел демократик ярашыу төҙөшөүгә саҡырыу менән мөрәжәғәт итә. Россияның элекке союздаштары Англия һәм Франция был тәҡдимде кире ҡағыу менән яуап бирә. Шул саҡ Германия һәм уның союздаштары менән һөйләшеүҙәр башлана.

---

[1] Подготовка и проведение Великой Октябрьской социалистической революции в Башкирии (6 февраль 1917 г.— июнь 1918 г.), 347-се бит.
[2] Шунда уҡ, 362—364-се биттәр.

Территориаль һәм экономик ташламаларға барыу иҫәбенә Совет иленә ваҡытлыса ғына тыныслыҡ тәьмин иткән договор — Бреста Германия менән договор төҙөшөү эсерҙарҙың һәм меньшевиктарҙың ярһыулы һөжүмен тыуҙыра. Коммунистар партияһының үҙ эсендә троцкистар һәм «һул коммунистар», революцион фразаға төрөнөп, ярашыу договорына ҡаршы сығалар, һуғышты дауам иттереүҙе талап итәләр.

Өфө большевиктары һуғыштан сығыуға йүнәлтелгән ленинсы политиканы әҙмә-әҙлекле яҡлайҙар. 6 мартта ҡала партия ойошмаһының дөйөм йыйылышы Б. М. Эльциндың империалистик Германияға ҡаршы «изге һуғыш» иғлан итеү тураһында индергән резолюция проектын ҡырҡа кире ҡаға һәм Үҙәк Комитеттағы ленинсы күпселекте яҡлау тураһында резолюция ҡабул итә [1].

Брест ярашыуын төҙөшөү Совет власын нығыта. Илде социалистик башланғыстарҙа үҙгәртеп ҡора башлауға керешергә мөмкинлек биргән ваҡытлы тыныслыҡ яулап алына. Бөтә партия менән бергә ҡала коммунистары тырышлыҡтарҙы халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуға, 1918 йылдың яҙында В. И. Лениндың атаҡлы «Совет власының нәүбәттәге бурыстары» тигән хеҙмәтендә фәнни нигеҙләнгән социалистик экономика нигеҙҙәрен төҙөү планын ғәмәлгә ашырыуға туплайҙар.

## § 3. Өфө хеҙмәтсәндәрен Октябрь ҡаҙаныштарын яҡлауға туплау

1918 йылдың яҙында һәм йәйендә ҡалала тормош ҡатмарлы шарттарҙа бара. Россияла элекке Австрия-Венгрия армияһы хәрби пленныйҙарынан төҙөлгән чехословак корпусының май аҙағында Англия-Франция-Америка империалистарының туранан-тура күрһәтмәләре буйынса Советтарға ҡаршы фетнәһе башлана. Урындағы аҡгвардеецтарҙың, эсерҙарҙың һәм меньшевиктарҙың актив ҡатнашлығында фетнәселәр Силәбене, Новониколаевскиҙы, Омскиҙы, Сызранде, Пензаны, Һамарҙы баҫып алалар.

Чехословактарҙың сығышы Россия контрреволюцияһын ҡанатландыра. Империалистарҙың бөтә яҡлап ярҙам күрһәтеүҙәренә таянып, ҡолатылған эксплуататор синыфтар граждандар һуғышын башлап ебәрә. Йәш Совет республикаһы фронттарҙың утлы ҡулсаһында тороп ҡала. Хәрби мәсьәлә пролетар революцияның һәм социализмдың яҙмышын хәл итеүсе төп мәсьәлә булып әүерелә.

Аҡ чехтарҙың фетнәһе Башҡортостанда ла граждандар һуғышына һәм сит ил хәрби интервенцияһына башланғыс һала. Июнь башында Өфө, Бөрө, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ һәм Златоуст өйәҙҙәрендә кулак-тар-милләтселәрҙең фетнәләре башлана. Күп кенә урындарҙа кулак-

[1] Очерки истории Башкирской организации КПСС, 191-се бит.

тарҙың отрядтары Һамар һәм Силәбе яғынан Өфөгә һөжүм итеп килеүсе чехословак ғәскәрҙәре менән бәйләнеш урынлаштыра һәм улар менән Совет ғәскәрҙәренә ҡаршы берлектәге операцияларҙа ҡатнаша.

Өфөлә эсерҙарҙың һәм меньшевиктарҙың контрреволюцион агитацияһы көсәйә. Экономик ҡыйынлыҡтарҙан, аҙыҡ-түлектең етешмәүенән файҙаланып, бының өсөн коммунистарҙы ғәйепләп, улар хеҙмәтсәндәрҙе Совет власына ҡаршы ҡуйырға тырыша. Улар ялған вәғәҙәләр, алдау юлы менән эшселәрҙең бер өлөшөн, бигерәк тә тимер юлсыларҙы, үҙ арттарынан эйәртеүгә өлгәшә.

Ошо ауыр көндәрҙә коммунистар партияһы халыҡты тышҡы һәм эске дошмандарға ҡаршы көрәшкә күтәрә. 1918 йылдың 29 июнендә ВЦИК-тың, Мәскәү Советының, Мәскәү профессиональ союздарының һәм фабрика-завод комитеттарының берләшкән ултырышы В. И. Ленindың тәҡдиме менән социалистик Ватанды ҡурҡыныс хәлдә тип иғлан итә. Ултырыш иғлан иткән «Үлем йәки еңеү!» тигән лозунг бөтә партия һәм Советтарҙың боевой лозунгыһы булып әүерелә. 1918 йылдың 2 сентябрендә ВЦИК Совет республикаһын хәрби лагерь тип иғлан итә. Эске һәм тышҡы контрреволюцияның берләшкән көстәренә ҡаршы ҡаты һуғыш шарттарында илдә хәрби коммунизм политикаһына күсеү тамамлана. Армияның ихтыяждарын яҡшыраҡ ҡәнәғәтләндереү өсөн Совет дәүләте, ваҡ промышленносты ла индереп, аҡрынлап бөтә промышленносты национализациялай; промышленносҡа идара итеү ныҡ үҙәкләштерелә. Аслыҡҡа ҡаршы көрәш маҡсатында икмәк менән хосуси сауҙа тыйыла һәм аҙыҡ-түлек разверсткаһы индерелә. Хеҙмәт повинносы ғәмәлгә ашырыла.

Халыҡ хужалығын үҙгәртеп ҡороу менән бер үк ваҡытта Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте 1918 йылдың йәйендә һәм көҙөндә Совет Ҡораллы Көстәрен төҙөү һәм нығытыу буйынса бик ҙур эш башҡара. Бында төп иғтибар республиканың мөһим, хәл иткес фронты булған Көнсығыш фронтҡа йүнәлтелә. «Хәҙер,— тип яҙған В. И. Ленин,— революцияның бөтә яҙмышы бер картала тора: Ҡазан — Урал — Һамар фронтында чехословактарҙы тиҙ еңеү. Бөтәһе лә шуға бәйле» [1].

1918 йылдың йәйендә Өфө контрреволюция көстәренә отпор биреүҙе ойоштороуҙың ҙур бер үҙәге булып әүерелә. Советтарҙың июнь башында булып үткән VI губерна съезы Өфө губернаһын һуғыш хәлендә тип иғлан итә, ә 6 июндә губерна башҡарма комитеты ҡаланы обороналау штабын ойошторорға ҡарар итә.

Хеҙмәтсәндәр массаларын аҡ чехтарға һәм аҡгвардеецтарға ҡаршы көрәшкә туплау эшенә ҡала партия ойошмаһы етәкселек итә. 7 июндә РКП(б)-ның Өфө губерна комитеты һәм ҡала комитеты бөтә коммунистарҙы мобилизацияланған тип иҫәпләргә тигән ҡарар ҡабул итә. Партия ағзалары казарма тормошо хәленә күсерелә һәм

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 50-се том, 133-сө бит.

хәрби эшкә өйрәнә башлай. 10 июндә РКП(б)-ның Өфө губерна һәм ҡала комитеттарының берләшкән ултырышы губерна һәм ҡала Советтары башҡарма комитеттарының коммунистик фракциялары менән берлектә бөтә эшселәрҙе һәм иң ярлы крәҫтиәндәрҙе революция дошмандарына ҡаршы ҡоралллы көрәшкә саҡыра.

Был көндәрҙә тиҫтәләрсә коммунист халыҡ араһында киң массовый-аңлатыу эше алып барыу өсөн предприятиеларға һәм пролетар кварталдарға ебәрелә. 1918 йылдың 26 майында ҡалалағы чехословак коммунистарының йыйылышында һайланған Өфө чехословак коммунистары комитеты корпус фетнәһенең контрреволюцион асылын фашлауҙа, шулай уҡ революцион чехтарҙан һәм словактарҙан Ҡыҙыл Армия отрядтарын төҙөүҙә күренекле роль уйнай [1]. Комитеттың Совет республикаһына ҡаршы көрәште туҡтатыуға саҡырыу тураһындағы мөрәжәғәте фетнәсе корпус һалдаттары араһында айырыуса ҙур отклик таба. «Чехтар-һалдаттар,— тип әйтелгәйне был документта,— күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ! Һеҙ донъялағы тәүге социалистик республиканы быуып үлтерергә булышаһығыҙ! Ҡоралдарығыҙҙы ташлағыҙ! Үҙ көстәрегеҙҙе ысын дошман булған буржуазияға ҡаршы көрәшкә һаҡлағыҙ! Туғандарҙың бер-береһен үлтереүен туҡтатығыҙ! Йәшәһен халыҡтарҙың туғандашлығы! Йәшәһен Россия Социалистик Республикаһы» [2].

Фабрикаларҙа һәм заводтарҙа, мастерскойҙарҙа, эшселәр клубтарында, ҡыҙылармеецтар ҡаҙармаларында күп кеше ҡатнашлығындағы митингылар һәм йыйылыштар булып үтә. «Социалистик Ватан ҡурҡыныс аҫтында» — был фекер губерна һәм ҡала партия ойошмаларының етәксе работниктары ҡала хеҙмәтсәндәре алдында сығып һөйләгән докладтарҙа һәм телмәрҙәрҙә еп булып үтә.

Коммунистарҙың саҡырыуына пролетар Өфө үҙенең бөтә көстәрен Совет республикаһын яҡлауға йүнәлтергә әҙер тороуы менән яуап бирә. Ҡалала аңлы эшселәрҙән һәм иң ярлы крәҫтиәндәрҙән Ҡыҙыл Армия частары, отрядтары һәм соединениелары төҙөлә. 1918 йылдың 29 майында Өфөгә Коммунистар партияһының күренекле эшмәкәре Н. И. Подвойский етәкселегендә Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһы юғары хәрби инспекцияһы ағзаларының килеүе был процесты тиҙләтә. Инспекция сотрудниктарының көсөргәнешле эше һөҙөмтәһендә 7 июндә БОНВ штабы отрядтары нигеҙендә 1-се Өфө уҡсылар дивизияһының ике полкын һәм артиллерия дивизионын төҙөү башлана. Ҡыҙыл Армияның башҡа отрядтары һәм частары ла төҙөлә: бер нисә көн эсендә татар-башҡорт дружинаһы, латыштар батальоны, мариҙар отряды, төрөк хәрби пленныйҙары отряды һәм башҡалар ойошторола.

---

[1] «Вперед!», 1918 йыл, 31 май.

[2] Подготовка и проведение Великой Октябрьской социалистической революции в Башкирии (февраль 1917 г. — июнь 1918 г.), 439-сы бит.

Коммунистар был отрядтарҙың ядроһы була. Ул саҡта 10 мең кешенән торған губерна партия ойошмаһы үҙенең 7 меңгә яҡын ағзаһын армияға ебәрә. Уларҙың өлгөһөнә эйәреп «III Интернационал» ҡала йәштәре союзы ағзалары ла ҡыҙыл һуғышсылар сафтарына баҫалар.

Регуляр ғәскәри частарҙы төҙөү ауыр шарттарҙа бара. Чехословактар фетнәһенең тәүге көндәренән үк бөтә яҡлап ҡамап алынған Өфө фронтҡа яңынан-яңы өҫтәмә көстәр ебәреп торорға мәжбүр була. БОНВ-тың Өфө губерна штабы 1 июндә үк әле телеграф аша В. И. Ленинға фронтҡа ике ҙур отрядтың ебәрелеүе хаҡында хәбәр итә, уларҙың береһе — 3 мең һуғышсынан торғаны Пенза менән Сызранде яҡлау өсөн Һамарға, ә 2,2 мең кешенән торған икенсеһе Златоустты обороналау өсөн ебәрелә. 7 июндә Өфөнән Һамарға 600 кешенән торған татар-башҡорт отряды килә [1].

1918 йылдың июнендә Өфө районында хәрәкәт иткән совет отрядтары II армияға берләшә. Етерлек тиклем әҙерлек үтмәүҙәренә, насар ҡоралланған булыуҙарына ҡарамаҫтан, әммә революцион энтузиазм менән тулы булған был кешеләр аҡ чехтарға һәм аҡгвардеецтарға ҡаршы көрәш йылъяҙмаларына күп кенә яңы биттәр яҙып ҡалдырҙы. Ләкин көстәр тигеҙ түгел ине. Фронттан һөжүм итеүсе чехословак һәм аҡгвардия көстәренең һәм тылда кулак восстаниеларының — берләшкән контрреволюцион көстәрҙең ҡыҫымына түҙә алмайынса, Ҡыҙыл Армияның тарҡау һәм аҙ һанлы отрядтары сигенергә мәжбүр була. Ҡайһы бер хәрби етәкселәрҙең килешеп эш итмәүе, ҡаланы яҡлаусылар араһында паника, аптырашта ҡалыу тойғолары таратыусы һул эсерҙарҙың емертеү эшмәкәрлеге һәм Өфө районындағы совет ғәскәрҙәре командующийы, элекке батша армияһы полковнигы Махиндың хыянаты (ул мөһим документтарҙы алып чехословактар яғына ҡасып сыға) быға булышлыҡ итә. 1918 йылдың 4 июнендә совет ғәскәрҙәре Өфөнө ҡалдырып, пароходтарҙа Ағиҙел йылғаһы буйлап сигенә. Улар менән бергә ҡаланың партия һәм совет учреждениелары ла эвакуациялана. Өфөнө яҡлаусыларҙың икенсе, ҙур булмаған өлөшө тауҙарға китә.

Өфө обывателе чехословактарҙы һәм акгвардеецтарҙы шашып барған шатлыҡ тойғоһо, сәскәләр менән ҡаршы ала. Даны сыҡҡан уң эсер А. Л. Шеломенцев етәкселегендә Совет власы яҡлыларҙы ҡулға алыу һәм «йәмәғәт тәртибен» һаҡлау өсөн ҡоралды отрядтар ойошторола. Үҙ теләктәре менән палач вазифаһын алған кешеләр төркөмө — сауҙагәрҙәр, йорт биләүселәр коммунистарҙы, совет учреждениелары сотрудниктарын, ҡыҙыларм еецтарҙы, эшсе-активистарҙы рәхимһеҙ язалай. Йырткыслыҡ бер нисә көн дауам итә, был көндәрҙә урамдарҙа язалап үлтерелгән кешеләрҙең имгәтелгән кәүҙәләре аунап ята. Хатта Өфө меньшевиктарының «Голос рабочего»

---

[1] Попов Ф. Г. За власть Советов. Разгром Самарской Учредиловки. Куйбышев, 1959, 60-сы бит.

газетаһы 17 июлдә ҡалала «погром хәрәкәте үҫә башланы» тип танырға мәжбүр була.

Башта ҡалала һәм губернала власты элек таратылған ҡала думаһының гласныйҙары — эсерҙар һәм меньшевиктар тарафынан 1918 йылдың 4 июлендә төҙөлгән Өфө ҡала думаһының Ваҡытлы комитеты тип йөрөтөлгән комитет үҙ ҡулына ала. Крайҙағы уң эсерҙар лидерҙарының береһе, ҡаланың элекке башлығы В. П. Гиневский Комитеттың председателе була. Комитет Учредительный собрание ағзалары комитеты (Комуч) тип йөрөтөлгән эсер-меньшевистик Һамар хөкүмәтенең власын таный. 1918 йылда июлдең икенсе яртыһында Комуч Ваҡытлы комитетты тарата һәм Гиневскийҙы Өфө губернаһы буйынса үҙенең вәкиле итеп тәғәйенләй. Уға губерналағы административ власть бөтә тулылығы менән бирелә, ул Комучтың власын нығытыу өсөн көрәшергә, учредителдәрҙең «Халыҡ армияһын» төҙөүгә бөтә саралар менән булышлыҡ итергә, йәмәғәт тәртибен һаҡларға, «большевистик агитацияға» юл ҡуймаҫҡа тейеш була һәм башҡалар [1].

Ваҡытлы комитеттың көнөнә ике тапҡыр булып торған ултырыштарында һәр төрлө характерҙағы һәм әһәмиәттәге күп төрлө мәсьәләләр тикшерелә. Уның «мотлаҡ үтәлергә тейешле ҡарарҙары» һәм приказдары асыу, Совет власына, уның революцион декреттарына, эшселәргә һәм крәҫтиәндәргә әйтеп бөтөргөһөҙ күрә алмаусылыҡ менән һуғарылғайны. Иң беренселәрҙән булып «Өфө ҡала думаһы Ваҡытлы комитетының национализацияланған һәм тартып алынған сауҙа-промышленность предприятиеларын аяҡҡа баҫтырыу тәртибе тураһындағы мәжбүри ҡарары» ҡабул ителә, уны «халыҡ социалисы» Петроград ҡалаһы башлығының элекке урынбаҫары В. Н. Новиков әҙерләй. «...Совет власының сауҙа-промышленность предприятиеларын национализациялау һәм улар өҫтөнән эшселәр контроле хаҡындағы декреттары, — тип әйтелгәйне ҡарарҙа, — уларға, шулай уҡ үҙәк һәм урындағы властың ҡарарҙарына, инструкцияларына һәм циркулярҙарына нигеҙләнгән бөтә нәмә үҙенең көсөн юғалтты. Предприятиеларҙың элекке хужаларының хоҡуҡтары Ваҡытлы хөкүмәттең бөтә закондарына һәм бойороҡтарына тулыһынса ярашлы рәүештә аяҡҡа баҫтырыла» [2]. 8 сәғәтлек эш көнө юҡҡа сығарыла һәм хеҙмәт хаҡы кәметелә. Эшһеҙлек көндән-көн арта бара. Кулактарҙын һәм помещиктарҙың талаптарын ҡәнәғәтләндерә барып, Комитет икмәк монополияһы тураһындағы законды һәм Совет власы тарафынан икмәккә билдәләнгән тотороҡло хаҡтарҙы юҡҡа сығара [3]. Бынан файҙаланып, спекулянттар шунда уҡ продукттарҙың хаҡтарын күтәрә. Магазиндарҙа мануфактура, сәй, шәкәр бөтә, ә икмәк, ит, май хаҡ-

---

[1] «Уфимская жизнь», 1918, 22 июль.
[2] ЦГА БАССР, ф. 1177, оп. 2, д. 2, л. 33.
[3] Шунда уҡ, л. 53.

тары бер нисә тапҡырға күтәрелә. Себерҙә ҡаҙағы 2—3 һум торған аҡ май Өфөлә 7—9-ар һум менән һатыла [1].

Илдең һамар хөкүмәте власы аҫтында тороп ҡалған башҡа райондарындағы шикелле, Өфөлә дөйөм ҡурҡыу атмосфераһы урынлаша. Чехословак коменданты Ребенданың приказы менән ҡалала комендант сәғәте индерелә: киске сәғәт 11-ҙән алып иртәнге 5-кә тиклем урамдар буйлап бөтә хәрәкәт, митингылар һәм йыйылыштар үткәреү тыйыла [2]. Совет власына теләктәшлек менән ҡарауҙа шикле булған кешеләрҙе күпләп ҡулға алыуҙар башлана. Был хәлдәрҙе үҙ күҙҙәре менән күргән кешеләр үҙҙәренең хәтирәләрендә аҡгвардеецтарҙың ҡот осҡос терроры факттарын килтерә. Эсер-меньшевистик контрреволюция хакимлыҡ иткән осорҙа Өфөләге хәл тураһында һөйләп, ҡарт большевик И. И. Шеломенцев былай тип яҙған: «...Ҡалала контрреволюция бөтөнләй ҡоторондо. Кешеләрҙе, ул эшсеме йәки хеҙмәткәрме, урамдарҙа, өйҙәрендә, эштәрендә ҡулға алалар ине. Улар контрреволюцияның язалау урындарына эләктеләр. Уларҙы төрмәләргә ултырттылар, концентрацион лагерға яптылар.

...Центральный урамындағы (хәҙер Ленин урамындағы «Труд» стадионы территорияһында) концентрацион лагерь айырыуса ҡот осҡос күренеште күҙ алдына килтереп баҫтыра ине. Элекке 103-сө запастағы пехота полкының сәнскеле тимер сыбыҡ менән уратып алынған барактарында 2000 тотҡон үҙенең тәҡдирен көтөп йәшәне. Әйтерһең дә, иң ҡараңғы, иң ҡот осҡос төн башланды» [3]. Күренекле партия һәм совет работниктары: Н. И. Подвойскийҙың, Н. П. Брюхановтың, А. Д. Цюрупаның, А. А. Юрьевтың һәм башҡаларҙың эвакуацияланып өлгөрә алмаған ғаилә ағзалары ҡулға алына һәм заложниктар тип иғлан ителә. 17 августа бары тик бер Өфө төрмәһендә генә 959 политик тотҡон иҫәпләнә. Улар араһында большевиктар — Өфө башҡарма комитеты ағзаһы А. К. Евлампиев, губерна аҙыҡ-түлек комитеты ағзаһы П. Т. Зубарев, БОНВ губерна Советы ағзаһы Н. С. Кадомцев һәм башҡалар була [4]. Провокация һәм доностар киң ҡолас ала. Революция дошмандары азатлыҡ һәм социаль прогресс юлына баҫҡан хеҙмәтсәндәрҙән бына шулай бөтә көс менән үс алырға тырыша.

Эсерҙар һәм меньшевиктар үҙҙәренең бөтә эшмәкәрлеге менән асыҡтан-асыҡ хәрби буржуаз-помещиктар диктатураһына юл яра. 1918 йылдың 8—23 сентябрендә Өфөлә үткәрелгән Дәүләт кәңәшмәһе был юлдағы мөһим бер аҙым була. Антанта империалистарының фекеренсә, ул берҙәм бөтә Россия власын урынлаштырыу, аҡ

---

[1] Гармиза В. В. Крушение эсеровских правительств. М., 1970, 153-сө бит.

[2] Аминев З. А. Октябрьская социалистическая революция и гражданская война в Башкирии, 301-се бит.

[3] За власть Советов. Сборник воспоминаний участников Октябрьской революции и гражданской войны в Башкирии, 287-се бит.

[4] Аминев З. А. Октябрьская социалистическая революция и гражданская война в Башкирии, 303-сө бит.

гвардия ғәскәрҙәрен берләштереү һәм Совет республикаһына ҡаршы көрәште көсәйтеү мәсьәләһен хәл итергә тейеш була.

Өфө кәңәшмәһе Ҙур Себер ҡунаҡханаһының саманан тыш йыһазландырылған залында асыла. Был ҡунаҡхана бинаһы тотошлайы менән ошо кәңәшмә ҡарамағына бирелгән була. Кәңәшмәлә 170 кеше ҡатнаша. Уның составы социаль, партиялылыҡ һәм милләт яғынан үтә сыбар була. Кәңәшмәгә Һамар, Себер һәм Урал хөкүмәттәренең, ҡаҙаҡ ғәскәрҙәренең (Урал, Ырымбур, Себер, Иркутск, Енисей, Семиречье, Әстрхан), башҡорт һәм ҡаҙаҡ буржуаз-милләтсе хөкүмәттәренең, эсерҙарҙың, меньшевиктарҙың, халыҡ социалистарының, кадеттарҙың, асыҡтан-асыҡ монархистарҙың, «Земство һәм ҡалалар союзының» һәм башҡаларҙың делегациялары килә. Унда ҡатнашыусылар араһында Өфөнөң ҡарагоруһлы ҡарашы менән киң танылған епископы Андрей, Россияның Европа өлөшө һәм Себер мосолмандары Диния назараты башлығы мөфтөй Тәржемәнов һәм башҡалар була.

Кәңәшмә эшендә Антанта илдәре һәм АҠШ вәкилдәре ҡатнаша һәм уға көслө йоғонто яһай.

Оҙаҡ һатыулашҡандан, чехословактар ҡаты баҫым яһағандан һуң, Өфө кәңәшмәһе биш кешенән торған, һайлап ҡуйылған ниндәй ҙә булһа закон сығарыусы орган алдында яуап бирмәгән каолицион власть — Ваҡытлы Бөтә Россия хөкүмәтен (Директория) төҙөй. Уның составындағы күпселек кадеттарҙан торған була. Директория буржуазия һәм помещиктар хөкүмәте ине һәм ошо синыфтарҙың мәнфәғәттәрен яҡлай [1].

Ләкин Директорияның ныҡлы терәге булмай. Себер хөкүмәте уның менән иҫәпләшмәй. Ҡыҙыл Армияның Көнсығыш фронтта дауам иткән һөжүме уның тотороҡһоҙлоғон тағы ла ныҒыраҡ көсәйтә. Октябрь башында Директория Өфөнән Омскиға ҡаса һәм, бер ниндәй реаль көскә эйә булмағанлыҡтан, бик тиҙҙән аҡгвардеец офицерҙар ҡулындағы бер уйынсыҡҡа әүерелә. Ошондай шарттарҙа Омскиҙа хәрби заговор өлгөрөп етә. Англия-Франция-Америка яғынан яҡлау тапҡан адмирал Колчак 1918 йылдың 18 ноябренә ҡаршы төндә дәүләт перевороты яһай. Директория ҡулға алына. Колчак «Россияның верховный правителе» тип иғлан ителә. Шулай итеп, эсерҙар һәм меньшевиктар ярҙамында Себерҙә Колчактың хәрби-монархистик диктатураһы урынлаштырыла һәм бөтә эске контрреволюция көстәрен Совет республикаһына ҡаршы һөжүмгә берләштереү башлана.

Өфө эшселәре Комуч хакимлыҡ итә башлаған тәүге айҙа уҡ эсерҙарҙың һәм меньшевиктарҙың халыҡҡа дошман булған политикаһына берҙәм рәүештә ҡаршы сығалар. Уларҙың Һамар учредилкаһына ҡарата булған дошманлыҡ мөнәсәбәте һәр төрлө формаларҙа сағылыш таба. Мәҫәлән, тимер юлсылар Комучтың Совет власына ҡаршы

[1] Гармиза В. В. Крушение эсеровских правительств, 201-се бит.

көрәшеү өсөн «Халыҡ армияһына» инеүгә саҡырыуына яуап итеп аҡтар армияһына бер генә һалдат та бирмәҫкә тип ҡарар итәләр [1]. Эсер-меньшевистик «демократтарҙың» репрессияларын һәм тупаҫ баш-баштаҡлыҡтарын ғәйепләп, улар, шәхестең тейелмәҫлеген ғәмәлдә тормошҡа ашырырға кәрәк тип белдереп, ҡулға алыуҙарға ҡаршы протест белдерәләр [2].

Эсерҙар һәм меньшевиктар ҡаланың пролетар массаларының яҡлауына таянырға маташалар. Ошо маҡсатта улар 1918 йылдың 24 июлендә эшселәр конференцияһын саҡыралар. Конференция, уны үткәреүселәрҙең фекеренсә, массаларҙың большевизмдан эсер-меньшевистик «демократияға» табан боролошон күрһәтеп бирергә тейеш була. Конференция эшендә 213 делегат ҡатнаша. Тәүге көндә үк унда ҡатнашҡан ҙур күпселектең конференцияны ойоштороусыларға ҡаршы фекерҙә торғанлығы асыҡ күренә. Делегат Кукушкин, үҙенә ниндәй ҡурҡыныс янағанлығын белһә лә, Коммунистар партияһы һәм Совет власын ҡыйыу яҡлап сыға. Ул былай тип белдерә: «Ваҡытлы хөкүмәт ваҡытында ла, хәҙер ҙә буржуазия һәм социал-килешеүселәр яғынан большевиктарға ҡаршы бөтә ябырылыуҙарға ҡарамаҫтан, **Совет власы ғына — эшселәр мәнфәғәттәрен сағылдырыусы ысын пролетар власть»**[3]. Конференция тураһында отчет баҫып сығарған «Голос рабочего» газетаһында әлеге һуңғы юлдар ҡалын хәреф менән йыйылғайны, был хәреф йыйыусылар араһында, бәлки редакциялалыр, Совет власы яҡлы кешеләр булғандыр тип фараз итергә нигеҙлек бирә.

Ағымдағы момент буйынса меньшевик И. А. Әхтәмов тәҡдим иткән резолюцияны тауышҡа ҡуйыу һөҙөмтәләре меньшевиктарҙың һәм эсерҙарҙың йоғонтоһо кәмеүен күрһәтә. Резолюцияны яҡлап — 92, ҡаршы 45 делегат тауыш бирә, күптәр тауыш биреүҙән ситләшә йәки тыйылып ҡала [4].

Эсер-меньшевистик учредилкаға ҡаршы көрәштә эшселәр көслөрәк сараларҙы — стачкалар үткәреүҙе лә ҡуллана. Төрлө ваҡытта металлистар, печатниктар, тимер юлсылар, таҡта ярыу заводтары, коммуналь предприятиелар эшселәре баш күтәрә.

Хеҙмәтсәндәрҙең сығыштарына подпольелағы большевистик ойошмалар етәкселек итә. Өфөнән китеү алдынан дошман тылында эшләү өсөн махсус рәүештә ҡалдырылған коммунистар подпольщиктарҙы үҙ тирәһенә туплаусы төп көс була. Подпольелағы группалар Совет Россияһы менән бәйләнеш тота, унан кәрәкле күрһәтмәләр һәм материаль ярҙам алып торалар. 1918 йылдың сентябрендә үк инде подпольела эшләү тәжрибәһе булған, ҡорал һәм аҡса менән тәьмин ителгән бер төркөм коммунист өфөләргә ярҙамға килә.

---

[1] «Голос рабочего», 1918, 18 июль.

[2] ЦГАСА, ф. 169, оп. 1, д. 115, л. 83.

[3] Гармиза В. В. Крушение эсеровских правительств, 228, 229-сы биттәр.

[4] Гужвенко Г. И. Башкирия в борьбе за Октябрь. Краткий исторический очерк. Өфө, 1941, 72-се бит.

Өфөнөң большевистик подпольеһы губернаның ғына түгел, бәлки бөтә Уралдың һәм Себерҙең подпольелағы ойошмалары менән дә бәйләнеш тота. Себерҙең легаль булмаған партия ойошмаһы вәкиле А. Я. Бакаев Өфө подпольщиктарына ҙур ярҙам күрһәтә. Ул Өфө подпольщиктарына Себерҙәге хәлдәр тураһында һөйләп бирә, подпольелағы ойошманың төп бурыстарын — халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барыу, легаль булмаған группалар ойоштороу һәм уларҙы ҡоралллы восстаниеға әҙерләү бурыстарын билдәләй.

Ҡала партия ойошмаһының латыш милли секцияһы Өфөлә легаль булмаған эште йәйелдереп ебәреүсе тәүге ойошма була. Уның составына беренсе бөтә донъя һуғышы йылдарында Өфөгә эвакуацияланған латыштар араһынан булған коммунистар инә. Секцияға 1918 йылдың февралендә партия Үҙәк Комитеты тарафынан Өфөгә ебәрелгән, 1911 йылдан партия ағзаһы Ф. И. Карклин етәкселек итә. Чехословактар фетнәһе ваҡытында ул ҡалала ҡалдырыла һәм бик тиҙҙән большевистик подполье етәкселәренең береһе булып әүерелә. Группа ағзалары Большая Успенская урамында Анна Ермолаева квартираһында йыйылған була. Анна Ермолаева һәм уның әхирәте Мария Сазонова төрмәгә передачалар илткәндәр, ҡулға алынған кешеләр менән осрашыуға барғандар, ҡоралдарҙы йәшереп һаҡлағандар, милициянан ышаныслы кешеләр аша паспорттарҙы ҡулға төшөргәндәр. Подпольщиктар тотҡондарҙы Себергә оҙатыр алдынан ғына төрмәнән большевик Г. В. Андреевты һәм уның иптәштәре И. Пухляков менән В. Грачевты ҡотҡарып ҡалғандар.

Латыштар группаһы менән бер рәттән легаль булмаған башҡа ойошмалар ҙа йәшәп килгән. Ф. И. Локацков группаһының подпольщик-тимер юлсылары ҙур эш башҡарған. Тимер юл мастерскойҙарының вагон цехында V армия политбүлеге вәкиле М. А. Чистяковтың ҡушыуы буйынса И. А. Белоусов етәкселегендәге группа ойошторола. Бынан тыш ҡалала В. С. Зуйков, С. Малых, Я. Х. Әхмәтов группалары эшләп килгән.

Подпольелағы группалар аҡрынлап үҙ-ара бәйләнеш урынлаштырғандар. Өфөләге һәм губерналағы бөтә легаль булмаған эшкә етәкселек итеү өсөн Партия үҙәге булдырыла, унда Ф. И. Карклин, М. А. Чистяков, Ф. И. Локацков етәксе ролде уйнай. Подпольщиктар ҡаланың эшселәр, тимер юлсылар, һыу транспорты работниктары араһында, «Халыҡ армияһы» һалдаттары, хәрби пленныйҙар һәм концентрацион лагерҙарҙың тотҡондары араһында киң агитация һәм ойоштороу эшен йәйелдерә. Мәҫәлән, дәүләт именлеген һаҡлау буйынса Өфө штабы начальнигының Комучтың эске эштәр министрына рапорты был хаҡта асыҡ һөйләй: «Электр станцияһы менән бәйләнеш булдырылғанлығын хәбәр итеү хөрмәтенә эйәмен. Эшселәр хөкүмәткә ҡаршы фекерҙә. Бындай ҡараш, моғайын, ике эшсе-агитатор тарафынан тыуҙырыла торғандыр, уларҙың фамилиялары штабҡа билдәле.

Алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 2-се участка милиционерҙары большевистик настроениела. Күҙәтеү ҡуйылды» [1].

Большевистик подпольеның эшмәкәрлеге чехословактарҙы һәм аҡгвардеецтарҙы ныҡ борсой. Чехословакия гәскәрҙәре командованиеһы 1918 йылдың 26 июлендә үк әле белдереү иглан итә, унда былай тип әйтелгәйне: «Һуңғы ваҡытта беҙгә Өфө ҡалаһында һәм өйәҙҙә эшселәр араһында ғына түгел, бәлки халыҡтың башҡа синыфтары араһында ла чехословак ғәскәрҙәренә һәм Халыҡ Армияһына ҡаршы агитация алып барыусы бик күп агитатор-большевиктың барлығы хаҡында хәбәрҙәр килде...

...Йәмәғәт тәртибен һәр төрлө боҙоуҙы һәм беҙгә ҡаршы һәр бер ҡотортоуҙы һәм сығышты, бер нәмә алдында ла туҡталып ҡалмайынса, хәрби көс ҡулланып баҫтырасаҡбыҙ» [2].

Подпольщиктар «Печать» типографияһы эшселәре менән бәйләнеш урынлаштыра алған, ә улар, үтә тәүәккәл эш итеп, Өфө предприятиеларында, аҡ армия частарында һәм башҡа урындарҙа таратыу өсөн прокламациялар һәм листовкалар сығарыуҙы яйға һалған. Листовкаларҙың бер өлөшө губерна буйынса таратыла. Партияға бирелгән, хөкүмәт учреждениеларында һәм аҡтар армияһы штабтарында эшләгән кешеләр подпольщиктар өсөн кәрәкле документтарҙы ҡулға төшөрә. Ә улар ойошманы аҡ гвардия армияһының һәм тылының хәле тураһындағы мәғлүмәттәр менән тәьмин иткән. Тимер юлсылар һәм йылға транспорты работниктары дошман ғәскәрҙәренең хәрәкәте, уларҙың һаны, һалдаттарҙың кәйефтәре һәм ниндәй операциялар әҙерләүҙәре тураһында ҡиммәтле мәғлүмәттәр биреп торған. Һәр төрлө юлдар менән алынған мәғлүмәттәр Партия үҙәгендә эшкәртелгән, уларҙың иң мөһимдәре йәшерен хәрефтәр менән яҙылып, фронт һыҙығы аша совет ғәскәрҙәре командованиеһына ебәрелгән.

1918 йылдың көҙөндә Ҡыҙыл Армияның Көнсығыш фронттағы уңышлы һөжүме һәм Өфөнөң бик тиҙҙән аҡгвардеецтарҙан азат ителеүе перспективаһы айҡанлы подпольелағы ойошма аҡтарҙың предприятиелар ҡорамалдарын, төрмәгә ябылған эшселәрҙе, крәҫтиәндәрҙе һәм тотҡондағы ҡыҙылармеецтарҙы Себергә алып китеүенә ҡамасаулыҡ итеү, шулай уҡ Ҡыҙыл Армияның алға барыуын тиҙләтеү өсөн үҙенең бөтә тырышлыҡтарын ҡораллы восстание әҙерләүгә туплай.

Ф. И. Локацковтың группаһы аҡтарҙың хәрби эшелонын Шаҡша станцияһы эргәһендәге тимер юл күперендә юҡҡа сығарырға иҫәп тотҡан. Эшелонды юҡ итеү ҡалалағы восстание менән бер үк ваҡытта эшләнер һәм был аҡгвардеецтарға сигенергә һәм үҙе менән ҡорамалдар, аҙыҡ-түлек алып китергә ҡамасаулар тип уйланыла. Өфө эшселәренә листовка-саҡырыу һәм «Халыҡ армияһы» һалдаттарына

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 1832, оп. 2, д. 169, л. 105.
[2] Шунда уҡ, л. 139.

мөрәжәғәт баҫтырып әҙерләнеп ҡуйыла. Текст аҫтына «Россия Коммунистар партияһы» тип яҙылғайны.

Партия үҙәге ҡораллы восстаниены әҙерләү менән шөғөлләнеүсе махсус группа булә. Эшселәрҙән, шул иҫәптән тимер юл мастерскойҙарында ла, боевой дружиналар төҙөлә. Гарнизон һалдаттары араһында эшләүсе коммунистар үҙҙәренең эшмәкәрлеген көсәйтә. Подпольщиктар ҡорал йыйыуҙы яйға һала —1918 йылдың декабрь башында уларҙың йөҙҙән ашыу винтовкаһы, ике пулеметы, револьверҙары, бер йәшник ҡул гранатаһы һәм 25 пироксилин шашкаһы була. Ҡоралдарҙың бер өлөшө Совет власы ваҡытында уҡ алдан әҙерләп ҡуйылғайны, икенсе бер өлөшөн пропаганда эше алып барыу арҡаһында Совет власын яҡлау юлына баҫҡан һалдаттар биргәйне, ә бер өлөшө аҡгвардия патрулдәрен ҡоралһыҙландырыу юлы менән тупланғайны [1].

Восстаниеға әҙерлектең иң ҡыҙыу мәлендә, 1918 йылдың 11 декабренә ҡаршы төнөндә, Өфө ойошмаһы тар-мар ителә, күп кенә подпольщиктар, шул иҫәптән Партия үҙәгенең күпселек ағзалары, ҡулға алына һәм төрмәгә ябыла [2]. Бер үк ваҡытта Златоуст һәм Сим заводтарының күп кенә подпольщигы ҡулға алына. Большевистик подпольены аҡгвардеецтарға һатҡан провокатор 1917—1918 йылдарҙа ҡоралланған халыҡтың Сим боевой ойошмаһы штабының элекке начальнигы А. А. Деулин булып сыҡҡан [3].

Большевистик подпольеға етди удар яһала. Дошман Өфө эшселәренең ҡораллы сығышын өҙөүгә һәм бик күп коммунистың контрразведка ҡулына эләгеүенә өлгәшә, шулай ҙа подпольеның эше туҡталмай. Яҡшы уйланылған конспирация системаһы — һәр кемдең тик үҙ группаһындағы сикләнгән һандағы кешеләрҙе генә белеүе системаһы арҡаһында подпольщиктарҙың төп массаһы иҫән ҡала һәм Партия үҙәгенең иректәге ағзалары етәкселегендә эште яйға һала башлай.

Большевистик подпольеның эшмәкәрлеге һәм партизандар хәрәкәтенең киңәйеүе Көнсығыш фронтта Ҡыҙыл Армияның уңыштарға өлгәшеүенә булышлыҡ итә. 1918 йылдың 10 сентябрендә ул Ҡазанды, 12 сентябрҙә — Семберҙе, 7 октябрҙә Һамарҙы азат итә. Ҡыҙыл яугирҙарҙың ударҙары аҫтында чехословак корпусы һәм ҡыҙылгвардеецтарҙың «Халыҡ армияһы» частары ашығыс рәүештә көнсығышҡа табан ҡаса башлай. Һамар хөкүмәте министры, уң эсерҙар партияһы Үҙәк Комитеты ағзаһы В. В. Веденяпин 5 ноябрҙә Омскиға Директория ағзаһы В. М. Зензиновҡа Һамар алынғандан һуң армия тулыһынса тарҡалды, ул юҡ тип әйтерлек, таралып бөттө» [4] тип хәбәр итә. Өфөгә инеү юлдарын Һамар яғынан да, Сембер яғынан да, башлыса

[1] «Наш путь». 1919 йыл, 12 ғинуар.

[2] «Вперед!», 1919 йыл, 1 ғинуар.

[3] ПА БОК КПСС, ф. 1, оп. 1, д. 16, л. 297; Революционное прошлое. Өфө, 1923, л. 72.

[4] ПА БОК, ф. 1832, оп. 2, д. 169, л. 164, 165.

чех полктары һаҡлай. Ләкин улар ҙа йыш ҡына боевой приказдарҙы үтәүҙән баш тарта һәм Совет власына ҡаршы һуғышырға теләмәй. Һуғышҡа инергә приказ алған 4-се чех полкы үҙенең командиры полковник Швецты тыңлауҙан баш тарта. Полк тылға сығарыла һәм ҡоралһыҙландырыла. «...Башҡа полктарҙың кәйефе лә шәптән түгел,— тип хәбәр иткән 20 ноябрҙә Веденяпин Зензиновҡа.—...Халыҡ армияһы ла тарҡалыу хәлендә, полктар таралыша, һалдаттар ҡасалар һәм тик ҙур булмаған төркөмдәр генә тороп ҡала» [1].

1918 йылдың 30 декабрендә киске сәғәт 8-ҙә, сигенеүсе колчаксыларҙы эҙәрләп килеп, подпольщиктар ярҙамында Ҡыҙыл Армия разведчиктары Өфөгә бәреп инә. Улар шунда уҡ төрмәгә йүнәлә. Аҡтар атып үлтерергә йәки Себергә алып китергә өлгөрә алмаған бөтә кеше азат ителә. Һәләк булыуға дусар ителгән меңдән ашыу кеше ҡотҡарып алып ҡалына. Улар араһында Өфө подпольщиктарының ҙур бер төркөмө (Ф. И. Карклин, В. И. Коссовский, И. А. Белоусов, В. В. Трофимов, В. Кузнецов, бер туған Пономаревтар һәм башҡалар), шулай уҡ бер нисә Һамар большевигы була. 31 декабрҙә иртән ҡаланың эшселәре һәм ярлы кешеләре тарафынан ҡотлап ҡаршы алынған V армияның 26-сы һәм 27-се дивизиялары тантаналы рәүештә Өфөгә килеп инә.

1919 йылдың башына Башҡортостандың Урал тауҙарына тиклемге байтаҡ өлөшө аҡгвардеецтарҙан азат ителә. Хеҙмәтсәндәр бөтә ерҙә лә үҙҙәренең азат итеүселәрен шатлыҡ менән ҡаршы ала, уларға бөтә яҡлап булышлыҡ күрһәтә, үҙҙәре лә ирекле рәүештә Ҡыҙыл Армияға ҡушыла. Чехословактарҙан һәм аҡгвардеецтарҙан ҡаты һабаҡ алған эшселәр һәм крәҫтиәндәр бары тик Совет власының ғына ысын халыҡ власы икәнлегенә, бары тик уның ғына хеҙмәтсәндәр мәнфәғәттәрен яҡлағанлығына үҙ тәжрибәләрендә күреп ышана.

1918 йылдың 31 декабрендә Видинеевтың элекке йортоноң бер бинаһында тәүге партия йыйылышы була, унда Өфө большевиктары менән бергә төрмәнән ҡотҡарылған Һамар большевиктары ла ҡатнаша. Йыйылыш РКП(б)-ның 13 кешенән торған ваҡытлы ҡала комитетын һайлай. Улар араһында Ф. И. Локацков, П. П. Кузьмин, В. И. Ермощенко (икеһе лә Һамарҙан), В. Кириллов, И. Каргопольцев, М. И. Локацков һәм башҡалар була. Комитет президиумы председателе итеп Ф. И. Локацковты ҡуялар. Йыйылыш «Вперед!» газетаһын яңынан сығара башлау тураһында ҡарар ҡабул итә һәм П. П. Кузьминды уның редакторы итеп раҫлай. Икенсе көндө үк, 1919 йылдың 1 ғинуарында, газетаның сираттағы номеры сыға [2].

1919 йылдың 2 ғинуарында V армия Реввоенсоветы билдәләгән Өфө ҡалаһының ваҡытлы революцион комитеты һәм губерна революцион комитеты эшләй башлай. Ревком сығарған 1-се номерлы

---

[1] ПА БОК, ф. 1, оп. 2, д. 169, л. 164, 165.

[2] За власть Советов. Сборник воспоминаний участников Октябрьской революции и гражданской войны в Башкирии. Өфө, 296—297-се биттәр.

приказда, «ҡалала Совет власының нормаль тормошон ойошторғанға — эшселәр, ҡыҙылармеецтар һәм крәҫтиәндәр депутаттарының Өфө Советын һайлағанға тиклем Өфөлә һәм Өфө губернаһында бөтә власть тулыһынса Өфө ҡалаһының һәм Өфө губернаһының ваҡытлы революцион комитеты ҡулына бирелә» [1], тип ныҡлап күрһәтеп үтелә.

Ғинуарҙа комсомол ойошмалары төҙөлә башлай. РКСМ-дың тәүге ячейкаһы тимер юл районында барлыҡҡа килә. Комсомол ойошмалары V армия политбүлегенең һәм партияның ҡала комитетының иғтибары һәм булышлығы менән файҙалана. 1919 йылдың 22 ғинуарында булып үткән комсомол йыйылышында РКСМ-дың 5 кеше составында ваҡытлы ҡала комитеты һайлана, ул ҡала райондарында комсомол ойошмалары төҙөү, башҡорт һәм татар йәштәре араһында тәрбиә эшен яйға һалыу буйынса бик ҙур эш башҡара [2].

V армияның политбүлек начальнигы, Питер эшсеһе И. Д. Чугурин, армия политбүлеге органы «Наш путь» газетаһы редакторы В. В. Сорокин, Үҙәк мосолман хәрби коллегияһы ағзаһы К. Л. Якубов урындағы ойошмаларға ҙур ярҙам күрһәтә. «Наш путь» газетаһы типографияһы мөдире, чех коммунисы, чехословакияның буласаҡ атаҡлы сатиригы Ярослав Гашек ҡала кешеләре һәм ҡыҙылармеецтар араһында политик эштә актив ҡатнаша. Өфөлә Я. Гашек сит ил коммунистары ойошмаһы комитетының секретары итеп һайлана. Дәртле большевистик һүҙе һәм үткер публицист ҡәләме менән ул хеҙмәтсән халыҡтың еңеүе өсөн көрәшә.

Элекке Өфө работниктарынан тиҫтәләрсә кешенең аҡрынлап армиянан һәм үҙәк совет учреждениеларынан ҡайтыуы урындағы партия, совет органдарының эшен яҡшыртыуға булышлыҡ итә. Өфөгә урындағы совет органдарына ярҙамлашыу өсөн РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советының һәм күп кенә халыҡ комиссариаттарының вәкилдәре килә.

1919 йылдың ғинуарында Өфө Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһын төҙөү тураһында һөйләшеүҙәр алып барыу урыны булып әүерелә. Март айында был мәсьәлә партия Үҙәк Комитеты, РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советы һәм Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитеты ултырыштарында тикшерелә. 1919 йылдың 23 мартында Башҡорт АССР-ын төҙөү тураһында В. И. Ленин, М. Ф. Владимирский һәм И. В. Сталин ҡул ҡуйған документ «Известия ВЦИК» газетаһында баҫылып сыға.

Урындағы партия һәм совет органдары етәкселегендә азат ителгән райондарҙың хеҙмәтсәндәре 1919 йылдың яҙына тиклем ҙур ижади эш башҡара. Волга, Кама һәм Ағиҙел флотилияһының күп һанлы судноларын тупланған Өфө затонында ғинуарҙың тәүге көндәрендә үк

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 1, оп. 1, д. 4, л. 22.

[2] Саяпов Т. Ш. Ленинский комсомол Башкирии (краткие очерки), 41—42-се биттәр.

ремонт эштәре башлана, промышленносты аяҡҡа баҫтырыу өсөн ҡаһармандарса саралар күрелә. Ләкин дауам иткән граждандар һуғышы шарттарында, бөтә халыҡ хужалығы емереклек хәлендә йәшәгәндә, аҙыҡ-түлек көндөң иң мөһим мәсьәләһе була. Шул уҡ ваҡытта Өфө губернаһындағы иген запасы 60 миллион ботҡа еткән. Шуға күрә армияға һәм илдең асығыусы районларына иген әҙерләү партия һәм совет органдарының төп бурысына әүерелә. 1919 йылдың март башына тиклем үк инде губернаның аҙыҡ-түлек органдары 5,6 миллион боттан ашыу иген, күп кенә ит, йәшелсә, бесән әҙерләгән. Аҡгвардеецтарҙың иҙеүен үҙҙәре әле күптән түгел генә кисергән крәҫтиәндәр артыҡ игендәрен үҙ теләктәре менән ашлыҡ һалыу пункттарына алып барған.

Ләкин тимер юл транспортының емерек хәлдә булыуы аҙыҡ-түлекте илдең асығыусы районларына ташыуҙы ҡыйынлаштырған. Март башына әҙерләнгән бөтә игендең Мәскәүгә 306 вагоны, ә Петроградта — 64-е [1], йәғни бөтәһе 400 мең бот самаһы ғына, оҙатылған.

Тимер юл транспортын аяҡҡа баҫтырыу өсөн көрәштә ҡала хеҙмәтсәндәре ҙур роль уйнай. Тимер юл мастерскойҙары, депо, юл эшселәре, шарттар бик ауыр булыуға ҡарамаҫтан, паровоздарҙы һәм вагондарҙы мөмкин тиклем тиҙерәк ремонтлау һәм уларҙы файҙаланыуға тапшырыу өсөн көнө-төнө эшләгәндәр. Тимер юл транспорты өсөн утын әҙерләнгән. Тимер юлға нагрузканы кәметеү өсөн, әҙерләнгән игенде йылға пристандәренә ташыу башланған.

Партия ойошмалары етәкселегендә уңышлы рәүештә яйға һалына башлаған совет, хужалыҡ һәм аҙыҡ-түлек әҙерләү эше 1919 йылдың мартында Колчак армияларының һөжүме арҡаһында ҡапыл өҙөлә.

РКП(б)-ның Өфө губерна комитеты, колчаксыларҙың һөжүме тураһында тәүге хәбәрҙәрҙе алыу менән үк, бөтә коммунистарҙы ла мобилизациялау тураһында ҡарар ҡабул итә. 10 мартта Өфөнөң район партия йыйылыштарында партия ағзаларынан һәм уға теләктәштәрҙән мобилизацияланырға тейешле кешеләрҙең исемлеген төҙөргә ҡарар ителә. Бер үк ваҡытта тимер юл мастерскойҙарында һәм затонда эшселәрҙең Ҡыҙыл Армияға үҙ теләктәре менән яҙылыуҙары өсөн киң агитация башлана. Ҡаланы эвакуациялау кәрәк була ҡалһа тип, партияның губерна комитеты подпольела эшләү өсөн — кешеләр, ә губревком аҡса средстволары бүлә.

Шул уҡ ваҡытта ваҡиғалар һәләкәтле тиҙлек менән үҫә. 10 мартта Бөрө дошман ҡулында тороп ҡала. Шул уҡ көндө киске сәғәт 7-лә губревком V армия Реввоенсоветынан Өфөнө һис кисекмәҫтән эвакуацияларга тигән бойороҡ ала. [2]. 11 мартта төнгө сәғәт 2-лә РКП(б) губерна комитетының ҙур өлөшө, губревком һәм башҡа

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 1, оп. 3, д. 40, л. 14.
[2] Шунда уҡ, л. 21.

партия, совет органдары ҡаланы ҡалдырып китте [1]. Әммә был көндә аҡгвардеецтар Өфөнө ала алмай. 26 һәм 27-се дивизиялар һуғышсыларының, командирҙарының һәм политработниктарының батырлығы һәм ҡаһарманлығы арҡаһында колчаксыларҙың һөжүмен ваҡытлыса туҡтатып тороуға өлгәшелә. Был губерна комитетының Өфөлә ҡалған ағзаларына (А. П. Кучкинға, Ф. И. Карклинға, М. И. Локацковҡа һәм Чесалинға) V армияның Реввоенсоветы вәкилдәре менән бергәләп ваҡытлы губерна комитетын төҙөргә һәм ҡаланы планлы рәүештә эвакуациялай башларға мөмкинлек бирә [2].

Ваҡытлы губерна комитеты Өфө эшселәренә Совет власын яҡлауға баҫырға саҡырыу менән мөрәжәғәт итә һәм ҡаланың районларына агитаторҙар ебәрә. Эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр араһында Ҡыҙыл Армия сафтарына мобилизация башлана. Ҡала өсөн был борсоулы көндәрҙә заводтар, фабрикалар, тимер юл мастерскойҙары, депо һәм Ағиҙел флотилияһы армияға туған ҡаланы һаҡлап ҡалыу һәм колчаксыларҙы тар-мар итеү ихтыяры менән тулы булған 4 мең һуғышсы бирә. Өфө эшселәренән ике полк ойошторола: уның береһе 27-се, икенсеһе 26-сы дивизияға бирелә [3].

Бер үк ваҡытта губревком Өфөлә ҡалған мөлкәтте тимер юл һәм ылау менән эвакуациялауҙы ойошторған, бының өсөн депо эшселәре ашығыс рәүештә бер нисә паровозды һәм вагондар составын ремонтлаған. 3 көн эсендә материаль байлыҡтарҙың ҙур өлөшөн, эшселәр һәм партия-совет работниктары ғаиләләренең бер өлөшөн алып сыҡҡандар. Ҡыҙыл Армияға ирекле рәүештә яҙылыусыларҙы алып бөтөргәндәр. 1919 йылдың 13 мартында иртәнге сәғәт 6-ла Ҡыҙыл Армияның һуңғы частары Өфөнө ҡалдырып киткән. Өфө яңынан аҡгвардеецтар ҡулында тороп ҡалған.

Өфө тарихында иң ҡараңғы осорҙарҙың береһе башлана. Профессиональ ойошмалар тар-мар ителә, уларҙың клубтарында, китапханаларында һәм уҡыу залдарында һалдат ҡаҙармалары урынлаша, 400 профсоюз работнигы төрмәгә ябыла. Обывателдәрҙе дәртләндереп, аҡгвардеецтар газеталары уларҙы совет работниктарын, коммунистарҙы һәм уларға теләктәш булған кешеләрҙе властарға тотоп бирергә саҡыра. Өфө контрразведкаһы яманаты менән билдәле булған 3-сө номерлы приказын сығара, унда ғөмүмән Совет власы яҡлы бөтә кешеләр хаҡында хәбәр итергә ҡушылғайны. Контрразведка ҡала халҡын доностар биреү менән ашығырға саҡырған, хатта уны нисек яҙырға һәм кемгә ебәрергә, башлыса нимә хаҡында хәбәр итергә кәрәклеген дә күрһәтеп биргән. Хәбәр иткән кешенең исемен йәшереп, сер итеп һаҡлау хаҡында һәр төрлө вәғәҙәләр бирелгән.

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 1, оп. 1, д. 79, л. 45.

[2] Шунда уҡ, д. 79, л. 5—6.

[3] Кучкин А. П. В боях и походах от Волги и до Енисея. Записки военного комиссара. М., 1969, 22-се бит.

Доностар вакханалияһы башланған[1]. Төрмә пленный ҡыҙылармеецтар, эшселәр, крәҫтиәндәр һәм политик тотҡондар менән тулған. Совет власы яҡлыларҙы күн һайын атыу ғәҙәти күренешкә әүерелгән. Яҡынса иҫәпләүҙәр буйынса Өфөлә булған осорҙа колчаксылар 200-гә яҡын кешене атып үлтергән.

Өфөнөң буржуаз пропаганда ҡотҡоһона бирелгән кешеләренә мөрәжәғәт итеп, большевистик подполье ойошмаһы ҡалала таратылған листовкаларының береһендә былай тип яҙған: «Колчакты көткәйнегеҙ, бына ул ордендары, погондары һәм ҡамсыһы менән килеп етте. Хәҙер тәндәр сымырлап китә! Мал һуя торған урында кисә нисә кеше атып үлтерелде? Бөгөн иртәнге сәғәт 5-тә офицерҙар нисә кешене тураҡланы? Барығыҙ, баҙар артында ятҡан ҡаплы өйөмдәргә күҙ һалығыҙ! Был өйөмдәрҙә кемдәр ятҡанлығына иғтибар итегеҙ: бер большевиктар ғынамы ни? Унда күпме ябай грамотаһыҙ эшселәр һәм бер ниндәй ғәйепһеҙ граждандар ята?»[2]

Колчак контрреволюцияһы нисек кенә ҡоторонмаһын, уның көндәре һанаулы ине инде. Совет республикаһы Коммунистар партияһы етәкселегендә колчаксыларҙы тамам тар-мар итеү һәм Уралды, шулай уҡ Себерҙе азат итеү өсөн көстәр туплай.

## § 4. Өфөнө колчаксыларҙан азат итеү. Хужалыҡ емереклегенә ҡаршы көрәш. Фронтҡа ярҙам

1919 йылдың яҙына Совет республикаһының хәле иҫ киткес ауыр ине. Ул бөтә яҡтан дошмандар менән ҡамап алынған була. Көнсығыш фронт яңынан хәл иткес фронтҡа әүерелә, унда был саҡ Россия контрреволюцияһының төп көстәре тупланғайны. Колчаксылар Волгаға үтеп сығырға һәм унда, Деникин менән бергә ҡушылып, Мәскәүгә берлектә удар яһарға иҫәп тоталар.

В. И. Ленин тарафынан яҙылған «Көнсығыш фронттағы хәл айҡанлы РКП(б) Үҙәк Комитеты тезистары» илдең бөтә көстәрен Колчакты тар-мар итеүгә туплауҙың боевой программаһы булып тора. «Колчактың Көнсығыш фронттағы еңеүҙәре,— тип әйтелгәйне тезистарҙа, — Советтар Республикаһы өсөн ғәҙәттән тыш дәһшәтле ҡурҡыныс тыуҙыра. Колчакты тар-мар итеү өсөн, көстәрҙе бик ныҡ тупларға кәрәк»[3]. Ҡыҙыл Армияға ярҙам итеүҙең конкрет саралары 13 апрелдә партия Үҙәк Комитеты пленумында тикшерелә.

Коммунистар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең хеҙмәтсән массаларҙы Көнсығыш фронтҡа туплау буйынса бик ҙур эше Колчак армияларын еңеү өсөн шарттар әҙерләй. Үҙәк Комитеттың күрһәт-

---

[1] «Красный бюллетень», 1919, 25 июнь.
[2] «Известия ВЦИК», 1919, 15 май; Спирин Л. М. Разгром армии Колчака. М., 1957, 103-сө бит.
[3] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 38-се том, 271-се бит.

М. В. Фрунзе.



мәләрен үтәй барып, командование Көнсығыш фронт ғәскәрҙәрен ике оператив группаға: М. В. Фрунзе етәкселегендәге Көньяҡ группаға һәм В. И. Шорин етәкселегендәге Төньяҡ группаға бүлә.

1919 йылдың 28 апрелендә Көньяҡ группа ғәскәрҙәре ҡаршы һөжүмгә күсә. Ҡаты һуғыштар барышында дошмандың иң яҡшы дивизиялары ҡыйратыла. 17 майҙа Ҡыҙыл Армия частары Бәләбәйгә инә. Аҡгвардеецтар өйөрҙәрен Башҡортостан ерҙәренән бөтөнләйгә ҡыуыу башлана.

Совет ғәскәрҙәренең ҡаршы һөжүмен иғтибар менән күҙәткән В. И. Ленин Уралды мотлаҡ рәүештә ҡышҡа тиклем азат итеүҙе талап иткән, сөнки быға өлгәшмәгәндә Колчактың, Урал һәм Себер ресурстарына таянып, үҙ армияларының һуғышсан һәләтлеген аяҡҡа баҫтырыуы һәм Совет власының йәшәүенә яңынан янауы мөмкин ине. 29 майҙа көнсығыш Реввоенсоветына телеграммаһында ул былай тип яҙған: «Әгәр ҙә беҙ ҡышҡа тиклем Уралды яулап алмаһаҡ, ул ваҡытта мин революцияның һәләкәте котолғоһоҙ тип иҫәпләйем» [1]. Юлбашсының приказын үтәп, Көньяҡ группа ғәскәрҙәре Өфөнө — колчаксыларҙың Көньяҡ Урал алдындағы һуңғы ҙур терәк пунктын азат итеү буйынса операцияны бик ауыр шарттарҙа башҡарып сығалар.

Колчак һәм уның тирәһендәгеләр Өфө районына бик ҙур әһәмиәт биргәндәр. Көнбайыш армия командующийы генерал Ханжин Ағиҙел йылғаһын һәм бигерәк тә Өфөнө һуңғы һалдат ҡалғанға тиклем обороналарға тигән ҡәтғи приказ алған. Йылға менән ышыҡланып һәм бейек яр өҫтөндә урынлашып алып, колчаксылар үҙ ғәскәрҙәрен яңынан төркөмдәргә бүлгәндәр, резервтар булдырғандар, ҡыҙыл полктарҙың айырыуса ихтимал булған хәрәкәт итеү йүнәлештәрендә ныҒытмалар ҡорғандар.

Ләкин ҡыҙылармеецтарҙың һөжүм итеү дәртен бер нәмә лә тотоп тора алмай. 3 июндә ҡыҫҡа табан ҡаланы азат итеү йөкләтелгән Төркөстан армияһының алдынғы частары Ағиҙел йылғаһына килеп еткән. Һуғышсыларҙың күҙ алдында ҡеүәтле киң йылға йәйрәп ағып ята, колчаксылар шартлатҡан тимер юл күперенең терәктәре һерәйеп тора, ҡала ситтәрендәге йорттар ағарып күренә ине.

Командованиеның планына ярашлы рәүештә Дим йылғаһы тамағынан алып Ҡыҙыл Яр ауылына тиклемге участканы В. И. Чапаев етәкселегендәге 25-се уҡсылар дивизияһы биләй. Уның комис-

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәренең тулы йыйынтығы, 50-се том, 328-се бит.

сары Д. А. Фурманов була. Ҡыҙыл Яр — Лавочное районында дивизияның 73-сө бригадаһы, Лавочное — Масловола — 74-се бригада урынлаша, 75-се бригада тимер юлдың ике яғын биләп тора. 7-се июндә Ҡыҙыл Ярға М. В. Фрунзе килә һәм 8 июнгә ҡаршы төндә ошонда дивизияның төп көстәре менән Йылғаны аша сығырға һәм Өфө ҡалаһын алырға тигән приказ бирә. Операцияның мөһимлеген һәм ҡатмарлылығын иҫәпкә алып, Михаил Васильевич дивизияның команда һәм политик работниктар составы кәңәшмәһен үткәрә, унда дошмандың был районда ҙур көстәр туплағанын һәм Өфө өсөн һуғыштың бик ҡаты буласағын күрһәтеп үтә. Хәлдең ҡатмарлылығы хаҡында ул бөтә командирҙарға һәм һуғышсыларға еткереүҙе үтенә[1].

Йылғаны аша сығыу 8 июнгә ҡаршы төндә башлана. Бының өсөн ашығыс рәүештә бәйләнгән һалдар, кәмәләр һәм бынан бер ни тиклем элек аҡтарҙан тартып алынған ҙур булмаған ике пароход файҙаланыла. Йылға аша беренсе булып 220-се Иваново-Вознесенский һәм 217-се Пугачев полктары сыға. Аҡгвардеецтарҙың заслонын юлдан алып ташлап, улар Яңы Турбаслы, Александровка һәм Степановка ауылдарын (хәҙер был ауылдар Өфө ҡалаһына инде) алалар.

Улар артынан дивизияның башҡа частары ла Йылғаны аша сыға башлай. Уң яҡ ярҙа улар дошмандың ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтеүенә осрай. Аҡгвардеецтар командованиеһы, Өфөнән төньяҡта ниндәй ҡурҡыныс хәл барлыҡҡа килеүен күреп, үҙенең резервтарын һуғышҡа ташлай. Авиация көстәренең ярҙамы арҡаһында колчаксылар был яҡ ярға сыҡҡан беҙҙең полктарҙы Йылғаға табан ҡыҫрыҡлауға өлгәшә алғандар.

Ошо ауыр мәлдә М. В. Фрунзе Иваново-Вознесенский полкының ҡаршы атакаһына үҙе етәкселек итә. Ҡулына винтовка тотҡан килеш ул сафтың алдына йүгереп сығып, ҡаушап ҡалған сафтарҙы үҙ артынан эйәртә. Командующийҙың ҡаһарманлығы менән рухланған һуғышсылар алға ынтыла. Берҙәм удар менән улар ябырылып килгән дошманды ҡыуып алып китәләр һәм хәлде үҙгәртәләр.

Ҡаты алыштар көн буйы дауам итә. Дивизия 8 июндә колчаксыларҙың бөтә атакаларын кире ҡаға һәм ҙур плацдармды яулап ала.

Шул уҡ көндө кис 25-се дивизияға Өфөнөң бер эшсеһе үтеп сыға, ул командованиеға дошмандың ҡыҙыл полктарҙы тар-мар итеү һәм уларҙы Ағиҙелгә батырыу өсөн иртән хәл иткес һөжүмгә күсергә әҙерләнеүе хаҡында хәбәр итә. Билдәһеҙ герой килтергән мәғлүмәттәр чапаевсыларға дошманды бөтә әҙерлек менән ҡаршы алырға мөмкинлек бирә.

9 июндең таңында колчаксылар колоннаһы һөжүмгә күсә. Алда барабан тауыштары аҫтында офицерҙар батальоны һәм Каппель корпусы частары килә. «Чапаев» фильмында ҙур оҫталыҡ менән һүрәт-

---

[1] Хлебников Н. М., Евлампиев П. С., Володихин Я. А. Легендарная Чапаевская. М., 1970, 161-се бит.

Чапаевсыларҙың Шишмә станцияһы янындағы һуғышы. *Рәссам П. Соколов-Скаль һүрәтенән.*



ләп бирелгән атаҡлы «психик атака» башлана. Дошмандың ташҡын һымаҡ килеүе ҡыҙыл ҡаһармандарҙы аптырашта ҡалдырмай. Пулеметчиктар аҡтарҙы бик яҡын ҡалғансы ебәрәләр ҙә уларға терәп ата башлайҙар, дошманды «картечь» менән артиллеристар ҙа утҡа тота. Ошо алыштан һуң күп йылдар үткәс, 73-сө бригаданың дан алған командиры И. С. Кутяков үҙенең иҫтәлектәрендә былай тип яҙған: «Әле генә күрәм һымаҡ: бик иртә, йәйрәп ятҡан бейек арыш баҫыуы аша оборонала ғы чапаевсы полктарҙың сафтарына ҡаршы офицер батальондары колонналары килә. Был иртәнге сәғәт 5-тәр самаһында ине. Ә өс сәғәттән һуң инде бейек булып үҫкән ошо арыш баҫыуы беҙҙең пулеметтар уты менән ҡамылына тиклем урып ташланғайны. Ер өҫтө ҡара буҫтаулы френч кейгән һәм күкрәктәренә Георгий тәреләре таҡҡан юнкерҙарҙың һәм офицерҙарҙың кәүҙәләре менән ҡапланғайны. Был һуғышта аҡтарҙың 3000-гә яҡын кешеһе үлтерелде» [1].

9 июндә Өфө өсөн алышта һынылыш яһала. Көндөң икенсе яртыһында 25-се дивизия полктары, дошмандың ҡаршылыҡ күрһәтеүен һындырып, дөйөм һөжүмгә күсә. Аҡтар ҡаушап ҡала һәм сигенә башлай.

Степановка ауылынан һөжүм итеп килеүсе 73-сө бригада 19 сәғәт тирәһендә Черниковка ауылы районында тимер юлға барып етә. Шулай итеп, Өфөнән сығыу юлы киҫелә. Ләкин колчаксылар бығa тиклем үк үҙҙәренең тылына ҡурҡыныс янауын тойоп, тәртипһеҙ рәүештә ҡаса башлай.

Аҡтарҙың паникаға бирелеп сигеүен 75-се бригада оҫта файҙаланып ҡала. Уның подразделениелары үҙҙәренең артиллерияһы уты аҫтында, бер ниндәй ҡаршылыҡҡа осрамайынса тип әйтерлек, йылғаны аша сығалар һәм тиҙҙән ҡалаға инәләр. 219-сы Домашкинск полкының полк комиссары Ф. П. Антонов етәкселегендәге бер төркөм ҡыҙылармеецтары төрмәне ала. Бында бер төркөм һуғышсы менән Дмитрий Фурманов та килеп етә. Улар аҡгвардеецтар атырға өлгөрә алмай ҡалған политик тотҡондарҙы азат итәләр.

9 июндә кискә табан ҡалаға 73-сө һәм 74-се бригадалар ҙа инә. Өфө аҡгвардеецтарҙан тамам азат ителә. Халыҡ үҙен азат итеүселәрҙе шатланып ҡаршылай. Шул заманда «Рабочий край» газетаһында

---

[1] Кутяков И. С. Василий Иванович Чапаев. М., 1958, 48-се бит.

баҫылып сыҡҡан мәҡәләһендә Фурманов былай тип яҙған: «Ҡыҙыл ғәскәрҙәрҙе ҡаршылап эшселәр урамдарға сыҡты һәм үҙҙәрен азат итеүселәрҙе тәбрикләне...

Беҙҙең полктарҙың береһе ҡала буйлап тигеҙ сафтар менән үткән саҡта урамдың ике яғына теҙелгән граждандар үҙҙәренең шатлыҡтарына һыйыша алмайынса, һоҡланыу ауаздары белдереп, беҙҙе иң йылы һүҙҙәр менән тәбрикләне. Ә бер ҡыҙ: «Беҙ һеҙҙең менән, ҡыҙыл яугирҙар, беҙ һәр ваҡытта ла һеҙҙең менән!» — тип ҡысҡырып илап ебәрҙе» [1].

Көнсығыш фронт командующийы С. С. Каменев 10 июндә В. И. Ленинға телеграф аша былай тип хәбәр иткән: «9 июндә 20 сәғәттә ҡаты алыштан һуң Өфө беҙҙең ғәскәрҙәр тарафынан алынды. Өфөнө 25-се дивизия частары алды...» [2].

Республика Реввоенсоветы 25-се дивизия һуғышсыларының, командирҙарының һәм политработниктарының батырлығын юғары баһалай. Уның бөтә туғыҙ полкы һәм кавалерия дивизионы Боғоруслан, Бәләбәй, Шишмә һәм Өфө өсөн һуғыштарҙа күрһәткән батырлығы өсөн почетлы революцион Ҡыҙыл байраҡтар менән наградлана. Реввоенсоветтың приказында: «Полктар Ағиҙел йылғаһын аша сыҡҡанда һәм Өфө ҡалаһын алғанда айырыуса батырлыҡ күрһәттеләр» тип әйтелгән [3]. Ғәскәрҙәргә оҫта етәкселек иткәне, Өфө өсөн һуғыштарҙа шәхси ҡаһарманлығы һәм батырлығы өсөн М. В. Фрунзе Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана; В. И. Чапаев та һәм данлы дивизияның күп кенә һуғышсылары һәм командирҙары ошо юғары наградаға лайыҡ була. Өфөнө һәм Башҡортостанды азат итеүҙә ҡатнашҡан, II, V һәм Төркөстан армияларының бөтә ҡыҙылармеецтарына, командирҙарына һәм политработниктарына 1919 йылдың 25 июнендә эшсе һәм крәҫтиәндәр оборона Советы «айырыуса фиҙакәр батырлыҡ өсөн... һәм революция алдындағы уларҙың айырыуса күренекле хеҙмәттәре» өсөн рәхмәт белдерә һәм строевой сафтағыларға бер айлыҡ, строевой сафта булмағандарына ярты айлыҡ оклад күләмендә аҡсалата бүләк биргән [4].

Өфөнө азат итеү Ҡыҙыл Армияның артабанғы һөжүме өсөн бик ҙур әһәмиәткә эйә була. Бында Совет ғәскәрҙәре Колчак армияларына үлемесле ударҙар яһай, бынан һуң колчаксылар йүнәлә алмай. 1919 йылдың июль аҙағына бөтә Урал Советтар ҡулына күсә. В. И. Лениндың директиваһы үтәлә.

Колчаксыларҙы тамам ҡыуып сығарғандан һуң ҡалала граждандар һуғышы эҙемтәләрен бөтөрөү тураһындағы, быға саҡлы күрелмәгән

---

[1] Фурманов Д. А. Повести, рассказы, очерки. М., 1957, 134, 135-се биттәр.

[2] Хлебников Н. М., Евлампиев П. С., Володихин Я. А. Легендарная Чапаевская, 168-се бит.

[3] Боевые подвиги частей Красной Армии (1918—1922 гг.). Сборник документов. М., 1957, 10, 11-се биттәр.

[4] ЦГА ИМЛ, ф. 19, оп. 3, д. 50, л. 3—4.

1919 йылдың 9 июнендә тимер юл күпере районында чапаевсыларҙың Ағиҙелдө аша сығыуы. *Билдәһеҙ рәссам һүрәтенән.*



хужалыҡ емереклектәрен еңеп сығыу тураһындағы мәсьәлә төп мәсьәлә булып әүерелә. Бөтәһенән элек металлургия, еңел, аҙыҡ, тире иләү һәм промышленностың башҡа тармаҡтары бик ҙур зыян күргәйне.

Һыу һәм тимер юл транспорты ҡаты емереклек хәлендә ине. Өфө затонында ҡышлатыуға ҡуйылған 90 пароходтың 2-һе генә тороп ҡалғайны; ҡалғандарын аҡгвардеецтар йә алып киткәйне, йә яндырғайны [1]. Улар бөтә тимер юл күперҙәрен, шул иҫәптән Ағиҙел һәм Ҡариҙел аша һалынған күперҙәрҙе, шартлатҡайны, бөтә пассажир һәм тауар вагондарын, паровоздарҙы, телеграф һәм телефон аппараттарын, сигнализация һәм яҡтыртыу средстволарын юҡ иткәйне, йә булмаһа Себергә алып киткәйне. Аҡтар ҡасып киткәндән һуң, станциялар янындағы юлдарҙа сафтан сыҡҡан 22 паровоз һәм 338 вагон тороп ҡалғайны, уларҙың күбеһе ремонтлап булырлыҡ та түгел ине [2]. «Тимер юл мастерскойҙарынан һәм депонан бөтә төп машиналар йәки уларҙың частары, бөтә канцелярияның документтары һәм башҡалар алып кителгән. Тулыһынса талау ойошторолған». Эшселәрҙең батырлығы һәм ҡаһарманлығы арҡаһында ғына ҡорамалдың бер өлөшөн һаҡлап алып ҡалыуға өлгәшелә [3].

[1] «Известия Уфимского губревкома», 1919, 9 июнь.
[2] ЦГА БАССР, ф. 1, оп. 3, д. 76, л. 108, 109.
[3] Шунда уҡ, д. 41, л. 35—36.

25-се уксылар дивизияһының командирҙар һәм политработниктар составы; уртала В. И. Чапаев менән Д. А. Фурманов ултыра. Өфө, 1919 йылдың июне.



Колчаксылар ҡала больницаларының, аптекаларының, мәктәптәренең, клубтарының күпселеген, шулай уҡ уның коммуналь хужалығын емертә. Күп кенә инженерҙар, врачтар, уҡытыусылар, техниктар, хеҙмәткәрҙәр, юғары квалификациялы эшселәр көсләп Себергә оҙатыла. Аҡгвардеецтарҙың хакимлығы һәм өҙлөкһөҙ дауам иткән һуғыш хәрәкәттәре арҡаһында меңдәрсә кеше йәшәр урынһыҙ тороп ҡала, бик күп балалар ата-әсәләрен юғалта һәм ҡараусыһыҙ тороп ҡала; ҡалала йоғошло ауырыуҙар киң тарала.

Тәүге көндәрҙә граждандар властын ойоштороуҙың, халыҡты аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүҙең, агитация-аңлатыу эше үткәреүҙең бөтә ауырлығы 25-се дивизия политбүлеге өҫтөнә төшә. 9 июндә үк инде бөтә халыҡҡа ҡалала булып ятҡан ваҡиғаларҙың асылын аңлатыусы листовкалар, газеталар таратыла. Әле бер урында, әле икенсе урында стихиялы рәүештә чапаевсыларҙың ҡала халҡы менән митингылары-осрашыуҙары булып тора. 10 июндән алып дивизияның көндәлек «Красный бюллетень» газетаһы сыға башлай, ул тәүге осорҙа, урындағы газета әле сыға башламаған саҡта, Өфө халҡын да хеҙмәтләндерә. Уның ҡайһы бер һандары, атап әйткәндә, беренсе һаны, татар телендә сыға.

13 июндә Көньяҡ группа, Төркөстан армияһы һәм V армия Реввоенсоветтары тарафынан билдәләнгән губерна ревкомы Өфөгә килә һәм эшләй башлай. Уның составына армия политработниктары ла, шулай уҡ Өфөнөң күренекле большевиктары ла (Т. С. Кривов, Ф. Я. Першин. А. З. Байков һәм башҡалар) инә. 14 июндә губерна ревкомы эшселәр һәм крәҫтиәндәр оборона Советы, ә 16 июндә Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитеты Президиумы тарафынан раҫлана.

Уның алдына бөтә губерна территорияһында Совет власын урынлаштырыу бурысы ҡуйыла. Губерна ревкомы, бер ни тиклем ваҡыттан һуң РКП(б)-ның губерна комитеты һәм башҡа ҡайһы бер ойошмалар элекке Крәҫтиәндәр ер банкыһының Өфө бүлеге бинаһында (хәҙер унда Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы һәм ВЛКСМ өлкә комитеты урынлашҡан) эшләй башлай.

Ревкомға аппаратты ойоштороуҙа һәм уның эшен яйға һалыуҙа 25-се дивизия ҙур ярҙам күрһәтә. Ул был маҡсатта 610 мең һум аҡса бүлә һәм дивизия политбүлеге начальниғы Постников етәкселегендәге үҙенең бер төркөм политработниктарын уға ярҙамға ебәрә [1]. V армияның Реввоенсоветы һәм штабы Өфөгә күсеп килгәс, ревкомға ошо армияның политработниктары эшлекле ярҙам күрһәтә башлай.

14 июндә 25-се дивизия политбүлегенең инициативаһы менән ҡала коммунистарының ойоштороу йыйылышы була, ул РКП(б)-ның ваҡытлы губерна комитетын һайлай. Бер үк ваҡытта партияның дөйөм ҡала комитеты һәм 4 ҡала район комитеты — ҡала, тимер юл, Нижегород, һыу транспорты район комитеттары төҙөлә. 1919 йылдың сентябрендә, Өфө коммунистарын яңынан теркәү тамамланғас, партия ойошмаһында 487 агза һәм 567 теләктәш иҫәпләнә. Ҡала партия ойошмаһы тиҙ үҫә: 1 ноябрҙә уның сафтарында 62 ячейкаға берләшкән 1032 ағза һәм 920 теләктәш иҫәпләнгән [2].

Өфөлә 1919 йылдың 25 октябренән алып 2 ноябренә тиклем үткәрелгән партия аҙнаһы массаларҙа коммунистик эште көсәйтеүгә, РКП(б)-ға хеҙмәтсәндәрҙең айырыуса аңлы өлөшөн ылыҡтырыуға булышлыҡ итә. Партияның губерна һәм ҡала комитеттары был мөһим политик сараға ентекләп әҙерләнә. Яңы ағзалар ылыҡтырыу өсөн Өфө партия ойошмаһының һәм Көнсығыш фронт политик идаралығының иң яҡшы вәкилдәре ебәрелә. Аҙнаның тәүге көнөндә «Известия Уфимского губревкома» газетаһы В. И. Лениндың «Эшселәр дәүләте һәм партия аҙнаһы» тигән мәҡәләһен баҫып сығара. Ҡаланың бөтә райондарында булып үткән эшселәр, эшсе ҡатын-ҡыҙҙар, ҡыҙылармеецтар йыйылыштарында илдәге хәрби һәм аҙыҡ-түлек хәле тураһында, РКП(б)-ның Программаһы һәм Уставы тураһында докладтар менән Республика Реввоенсоветының, Көнсығыш фронттың, партияның губерна һәм ҡала комитеттарының вәкилдәре И. П. Дзевалтовский, О. Ю. Калнин, Т. С. Кривов, П. В. Гузаков, Э. С. Кадомцев, М. В. Котомкин, И. С. Герасимов, Х. Ш. Сәйфелмөлөкөв, Ғ. Ғ. Ҡоҙаяров һәм башҡалар докладтар менән сығыш яһай. Ошонда уҡ партияға яҙыуҙар ҙа үткәрелә. Эшселәр һәм ҡыҙылармеецтар массаларын бик ҙур революцион күтәренкелек солғап ала. Бер аҙна эсендә Өфөлә 1929 кеше РКП(б) сафына инә [3]. «Өфө ҡалаһында тамамланған аҙнаның һөҙөмтәләре,— тип яҙған «Известия Уфим-

---

[1] ЦГАСА, ф. 238, оп. 2, д. 23, л. 36.
[2] ПА БОК КПСС, ф. 1, оп. 1, д. 4, л. 23.
[3] Шунда уҡ.

ского губревкома» 11 ноябрҙә, — һәр төрлө көтөлгәнде уҙып китте: пролетар булмаған... Өфө партияға ике меңдән ашыу яңы ағза *, эшсе-крәҫтиән революцияһы өсөн, коммунизм эше өсөн ысын фиҙакәр көрәшселәр бирҙе». 1919 йылдың аҙағына ҡала партия ойошмаһында инде 5 меңгә яҡын коммунист иҫәпләнгән [1].

Рус булмаған милләт хеҙмәтсәндәре араһында эшләү өсөн губком эргәһендә тейешле секциялар ойошторола башлай. Иң беренселәрҙән булып татар-башҡорт секцияһы барлыҡҡа килә, ул 20 июндә V армия потитбүлеге вәкилдәре ҡатнашлығында ҡаланың башҡорт һәм татар коммунистары йыйылышында төҙөлә [2]. Уны ойоштороусы һәм тәүге председателе Ш. Ә. Хоҙайбирҙин була. Шул уҡ көндәрҙә губерна ревкомы эргәһендә лә милли секциялар барлыҡҡа килә.

Секциялар урындарҙа партия һәм комсомол ячейкалары ойоштороуҙа, Совет власын аяҡҡа баҫтырыуҙа, хеҙмәтсәндәрҙе Ҡыҙыл Армияға мобилизациялауҙы үткәреүҙә актив ҡатнашалар. Улар агитация-масса һәм культура-ағартыу эшен йәйелдерәләр: митингылар, лекциялар үткәрәләр, клубтар, китапханалар асалар, газеталар, популяр брошюралар, листовкалар, саҡырыуҙар баҫып сығаралар һәм башҡалар. Татар-башҡорт секцияһының эшмәкәрлеге айырыуса ҙур була. Мәҫәлән, 1919 йылдың 4 ноябрендә Ҡыҙылармеецтар клубы бинаһында (элекке Ҙур Себер ҡунаҡханаһы) [3] Көнсығыш халыҡтарының азатлыҡ хәрәкәтенә арналған күп кеше ҡатнашлығындағы митинг башҡорт һәм татар хеҙмәтсәндәренең синфи үҙаңлылығын күтәреүҙә һәм уларҙа интернациональ бурыс тойғоһон тәрбиәләүҙә ҙур әһәмиәткә эйә була.

Митинг Һиндостан халыҡтары милли-азатлыҡ хәрәкәтенең күренекле эшмәкәре, Һиндостан милли конгресы партияһы ағзаһы, профессор Эш-Шейху Бәрәкәтулланың РКП(б)-ның милли программаһын практик ғәмәлгә ашырыу менән танышыу өсөн Башҡортостанға килеүе айҡанлы үткәрелгәйне. 1919 йылдың башында Бәрәкәтулла бер төркөм революцион ҡараштағы һиндтар менән Совет Россияһына килгәйне. 7 майҙа ул һәм уның иптәштәре һинд патриоттарының үҙ Тыуған иленең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәше менән бик ныҡ ҡыҙыҡһынған В. И. Ленин тарафынан Кремлдә ҡабул ителә [4].

Митингыла ҡатнашыусылар Һиндостан, Иран, Афғанстан халыҡтарының милли-азатлыҡ хәрәкәте күтәрелеше хаҡында, һинд пат-

---

* Күренеүенсә, газетаның был мәғлүмәттәре бик үк дөрөҫ түгел, сөнки һуңғы йомғаҡтар бер ни тиклем ваҡыт үткәс яһалды.

[1] ПА БОК КПСС, ф. 1, оп. 1, д. 4, л. 23, 24.

[2] Шунда уҡ, д. 74, л. 25.

[3] «Известия Уфимского губревкома», 1919, 9 ноябрь; ПА БОК КПСС, ф. 1, оп. 1, д. 74, л. 4.

[4] Андронов И. Из истории пробуждения Востока.— «Новое время», 1967, 9, 11-се бит; Проблема коммунистического движения в Индии. М., 1971, 12-се бит.

Өфөнө азат итеү айҡанлы 25-се уҡсылар дивизияһы частарының параҙы. 1919 йылдың 10 июне.



риоттарының Британия колониаль хакимлығына ҡаршы фиҙакәр көрәше тураһында һөйләгән һинд революционерын йылы ҡаршылай. Бәрәкәтулла үҙенең ысын йөрәктән яһаған сығышын ошондай һүҙҙәр менән тамамлай: «Хәҙер кешелек донъяһы бөхете өсөн көрәш бара. Әгәр Россияның революцион пролетариатын дошмандар еңә ҡалһа, кешелек донъяһы яңынан бик оҙаҡ ваҡытҡа сынйыр менән быуланыр ине. Әгәр ҙә һеҙ, мосолмандар, ирекле йәшәргә теләйһегеҙ икән, Һиндостандағы, Персиялағы, Афғанстандағы, Төркиәләге туғандарығыҙға азатлыҡ теләйһегеҙ икән, Совет власына бөтә көсөгөҙ менән булышлыҡ күрһәтегеҙ, сөнки бөтә донъя мосолмандарының Совет власынан да тоғро, намыҫлы һәм яҡын дуҫы юҡ.

Мосолман йәштәре — Ҡыҙыл Армия сафына, фабрикаларға! Ошо иҫтәлекле осорҙа донъя пролетариатының яҙмышы хәл ителә. Бөтә мосолмандар совет короло[illegible]о өсөн көрәшкә»[1].

Йәш совет иле өсөн ошо ауыр көндәрҙә Башҡортостан хеҙмәтсәндәре, шул иҫәптән өфөләр, Петроградты Юденич бандаларынан һаҡлап алып ҡалыуҙа ҡулдарына ҡорал тотоп ҡатнашалар. Башҡорт ғәскәрҙәре группаһына һуғышта күрһәткән батырлыҡтары һәм ҡаһармаплыҡтары өсөн Петроград Советының Ҡыҙыл байрағы тапшы-

[1] ПА БОК КПСС, ф. 1, д. 74, л. 10.

рыла. Ул Петроград эшселәре менән Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең мәңге туғанлығы символы булып әүерелә.

1919 йылдың 16 сентябрендә РКП(б)-ның губерна комитеты пленумы, Өфө ҡала Советына һайлауҙар тураһындағы мәсьәләне тикшереп, губревкомға Үҙәк һайлау комиссияһы төҙөргә, уның ҡарамағына агитаторҙар һәм инструкторҙар бүлергә тәҡдим итә. Комиссия һайлауҙарҙың срогын һәм тәртибен билдәләргә тейеш ине. Совет платформаһында торған бөтә партиялар ҙа һайлауҙарҙа ҡатнашыу хоҡуғына эйә ине [1].

Һайлауҙар производство принцибы буйынса, йәғни заводтар, фабрикалар, мастерскойҙар, ғәскәри частар, шулай уҡ профессиональ союздар буйынса үткәрелә һәм 1919 йылдың 9 октябренә тамамлана. Уларҙа 22 мең кеше (эшселәр, хеҙмәткәрҙәр, ҡыҙылармеецтар һәм уларҙың ғаилә ағзалары, ваҡ кустарҙар һәм ҡалала йәшәүсе хеҙмәтсәндәрҙең башҡа категория кешеләре) ҡатнаша. Улар 222 депутат, шул иҫәптән коммунистарҙан 200, партияһыҙҙарҙан 20, эсерҙарҙан 2 кеше, һайлай. Һайлау йомғаҡтары эсерҙар менән меньшевиктарҙың үҙ йоғонтоларын тамам юғалтҡанлыҡтарын һәм Коммунистар партияһының хеҙмәтсәндәр массаларының берҙән-бер дөйөм танылған юлбашсыһы булып торғанлығын тағы ла бер тапҡыр күрһәтә [2].

10 октябрҙә элекке ҡала думаһы бинаһында (хәҙер бында — Ленин һәм Коммунистическая урамдары мөйөшөндә «Белем» йәмғиәтенең Башҡортостан республика ойошмаһы идараһы урынлашҡан) эшселәр һәм ҡыҙылармеецтар депутаттарының Өфө Советын тантаналы асыу була. Халыҡ тарафынан һайланып ҡуйылыусылар тәүге ултырышта ҡала Советының беренсе нәүбәттәге бурыстары: фронтҡа бөтә саралар менән ярҙам итеү; Үҙәк Россияның аслыҡтан интегеүсе райондарын аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү буйынса партия һәм хөкүмәттең бөтә заданиеларын теүәл һәм тайпылышһыҙ үтәү; ҡаланың аҡгвардеецтар тарафынан емертелгән хужалығын аяҡҡа баҫтырыу; буржуаз-помещик элементтарға ҡарата тимерҙәй ҡаты диктатураны ғәмәлгә ашырыу бурыстары билдәләнә [3].

Ағымдағы эштәр өсөн Совет башҡарма комитет һайлай, Ф. Я. Першин уның председателе, Соловьев председатель урынбаҫары, А. Иванов секретары итеп тәғәйенләнә, улар башҡарма комитеттың президиумын тәшкил итә. Советҡа йөкләтелгән бурыстарҙы үтәү башҡарма комитет эргәһендә төҙөлгән бүлектәргә: ҡала хужалығы, социаль тәьминәт, финанс, халыҡ мәғарифы, аҙыҡ-түлек, ағыулыҡ идаралыҡтарына, Хеҙмәт һарайына [4] (элекке С. Т. Аксаков йорто) идара итеү вәкиленә тапшырыла.

Өфө һәм губернаның партия һәм совет органдары хеҙмәтсәндәрҙе ҡаланың хужалыҡ тормошон аяҡҡа баҫтырыуға туплау буйынса ҙур

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 1, оп. 1, д. 8, л. 20, 21.
[2] «Известия Уфимского губревкома», 1919, 11 октябрь.
[3] Шунда уҡ, 12 октябрь.
[4] ЦГА СССР, ф. 393, оп. 22, д. 383, л. 104.

Чапаевсыларҙы Өфөнән Уральскиҙы азат итеүгә оҙатыу.



эш башҡара. Бөтәһенән элек еңел һәм аҙыҡ промышленносы предприятиеларын аяҡҡа баҫтырыу киң ҡолас ала, сөнки халыҡ һәм армия уларҙың продукцияһына ҡарата айырыуса мохтажлыҡ кисерә, ә был предприятиеларҙы эшкә ҡушыу ҙур тотоноуҙар талап итмәй. Эшселәр ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә тире иләү, ағас эшкәртеү, еңел һәм аҙыҡ промышленносы предприятиеларын емереклектәрҙән күтәреп сығаралар һәм уларҙа продукция етештереүҙе яйға һалалар. Күн етештереүҙе аяҡҡа баҫтырыуға айырыуса иғтибар бүленә, сөнки сырье етешмәгәнлектән 1919 йылда илдә армия өсөн аяҡ кейеме етештереү кәмегәйне. 1920 йылдың көҙөнә үк инде Өфөнөң һәм губернаның 47 эре күн заводы халыҡ хужалығы өсөн үтә кәрәкле булған ошо продукцияны етештергән була [1]. Бер үк ваҡытта итек тегеү, бйма баҫыу, күндән сбруйҙар етештереү, бейәләйҙәр тегеү, кейеҙ әйберҙәр эшләү, кейем тегеү, иҫке-моҫҡо әйберҙәрҙән кейем-һалым тегеү, бүрек-фуражка тегеү, еп иләү-туҡыу мастерскойҙары һәм башҡа мастерскойҙар асыла. Уларҙың бөтәһенең дә тип әйтерлек продукцияһы фронт ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә китә. Был мастерскойҙар армия өсөн арбалар, артиллерия саналары, эйәр, сбруй, бактар, биҙрәләр, котелоктар, сәйнүктәр, һыу ҡайнатҡыстар, күсмә мейестәр эшләйҙәр. Шинелдәр, гимнастеркалар, салбарҙар,

[1] ЦГА БАССР, ф. 173, оп. 1, д. 131, л. 23.

фуражкалар, итектәр тегәләр, быйма баҫалар, бейәләй бәйләйҙәр һәм башҡалар.

Ш. А. Хоҙайбирҙин.



Азат ителеүҙең тәүге көндәренән үк Өфө тимер юл узелын аяҡҡа баҫтырыу эштәре башлана. Был эштәрҙең төп ауырлығы тимер юлсылар өҫтөнә төшә. Уларҙың ҡулы менән Өфөнөң күп кенә предприятиелары һәм ҡаланың коммуналь хужалығы ла (һыу үткәргес, электр станцияһы, мунсалар һәм башҡалар) аяҡҡа баҫтырыла. 1919 йылдың аҙағына тимер юл мастерскойҙары тулы ҡеүәттәрендә тип әйтерлек эшләй башлай. Бер үк ваҡытта вагондар, йөк йөрөтөү составын ремонтлау башлана. 1919 йылдың июненән алып 1920 йылдың март уртаһына тиклем мастерскойҙар эшселәре 39 паровоз һәм 544 вагонды ремонтлайҙар [1]. Ҡаланың меңдәрсә эшсәне һәм тирә-яҡ ауылдарҙың крәҫтиәндәре юл хужалығын, депоны һәм вокзалды аяҡҡа баҫтыра. Буржуаз элементтар ярҙамсы эштәргә (тимер юлды сүп-сарҙан таҙартыуға, ягыулыҡ ташыуға һәм башҡа эштәргә) ылыҡтырыла.

Волга менән Урал араһында тоткарлыҡһыҙ тимер юл хәрәкәтен яңынан тәьмин итеү өсөн Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғалары аша һалынған күперҙәрҙе аяҡҡа баҫтырырға кәрәк ине. Был эшкә совет ғәскәрҙәре Өфөгә инеп бер аҙна үткәс тә тотоналар. 1919 йылдың август аҙағында күперҙәр төҙөүҙә 5 меңгә яҡын эшсе эшләй, уларҙың төп өлөшөн тимер юлсылар тәшкил итә. Эштәр көнө-төнө бара. Күпер төҙөүселәргә Совет хөкүмәте ҙур ярҙам күрһәтә. Уның күрһәтмәһе буйынса Ағиҙел һәм Ҡариҙел күперҙәрен аяҡҡа баҫтырыу өсөн 60 миллион һум аҡса бүленә һәм тәжрибәле инженерҙар С. И. Ольшевский менән Н. И. Мазуренко етәкселегендә бер төркөм юғары квалификациялы белгестәр ебәрелә.

Сентябрь уртаһында төҙөүселәр Ҡариҙел йылғаһы аша ваҡытлы күперҙе файҙаланыуға тапшыралар, ә 6 октябрҙә Ағиҙелгә һалынған ваҡытлы күпер аша хәрәкәт башлана. Илдең үҙәк райондары менән тимер юл хәрәкәтен аяҡҡа баҫтырыу Өфө кешеләренең, бөтә Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең бик ҙур еңеүе була. Ағиҙел күперен төҙөгән эшселәр һәм белгестәр тарафынан РКП(б) Үҙәк Комитетына ебәрелгән телеграммала былай тип әйтелгәйне: «Беҙҙең өсөн, ер шарындағы бөтә байлыҡты тыуҙырыусы эшселәр өсөн, ҡара реакцияның емертеүҙәре ҡурҡыныс түгел. Беҙ үҙебеҙҙең ижади һәм изге

[1] «Известия Уфимского губисполкома», 1920, 19 май.

пролетар эшебеҙгә ышанған хәлдә, тығыҙ тупланған сафтар менән билдәләнгән маҡсатҡа, коммунизмға барырға ант итәбеҙ... Хәҙер Ҡыҙыл Себерҙән ас пролетар үҙәккә иген илтеү өсөн кәртә юҡ» [1]. Үҙәк Комитет һәм Совет хөкүмәте төҙөүселәрҙең хеҙмәт батырлығын юғары баһалай. Өфө эшселәренә ебәргән телеграммаһында В. И. Ленин былай тип яҙған: «Ағиҙел күперен ваҡытлыса аяҡҡа баҫтырыу буйынса эштәрҙең хатта тыныс ваҡыт өсөн дә ғәҙәттән тыш ҡыйын шарттарҙа билдәләнгән сроктан дүрт тәүлеккә элек бик уңышлы тамамланыуын республика Оборона Советы тулыһынса һеҙҙең ойошҡанлығығыҙға һәм Совет Россияһын һуғыш яланында ҡулға ҡорал тотоп ҡына түгел, бәлки тыныс ҡаҙаныштар юлында ла яҡлауға көслө ынтылыш менән рухланған ҡеүәтле тупланғанлығығыҙға ҡайтарып ҡалдыра. Оборона Советы исеменән һеҙгә иптәштәрсә сәләм һәм иң тәрән рәхмәт һүҙҙәре ебәрәм» [2]. Даими күперҙәрҙе аяҡҡа баҫтырыу эше бөтә ҡыш буйына дауам итә. Ҡариҙел күпере 1920 йылдың 12 мартында, ә Ағиҙел күпере 4 октябрҙә файҙаланыуға тапшырыла.

Ағиҙел йылға флотын аяҡҡа баҫтырыу буйынса ла эштәр йәйелдерелә. Өфөнө азат иткәндән һуң бер аҙна эсендә һыу юлы эшселәре 4 пароходты аяҡҡа баҫтыралар һәм хәрби частарҙы һәм йөктәрҙе һис кисекмәҫтән ташый башлайҙар. 1919 йыл навигацияһы аҙағына флоттың 30-ға яҡын пароходы һәм 100-гә яҡын баржаһы һәм баркасы була, улар менән 6,5 миллион боттан ашыу йөк һәм 43 мең самаһы пассажир [3] ташылған, ә инде 1920 йыл навигацияһында был һандар 16,5 миллион бот йөккә һәм 100 меңдән ашыу пассажирға саҡлы күтәрелгән [4].

Мәскәү тимер юлы эшселәренең башланғысы буйынса 1919 йылдың яҙында барлыҡҡа килгән коммунистик субботниктар хужалыҡ емереклектәренә ҡаршы көрәштә күренекле роль уйнай. Өфөлә тәүге субботниктарҙың береһе 1919 йылдың июлендә Ағиҙел күперен аяҡҡа баҫтырғанда уҙғарылған [5].

Ҡаланың политик, хужалыҡ һәм культура тормошон аяҡҡа баҫтырыу аяуһыҙ граждандар һуғышы тыуҙырған ғәҙәттән тыш ауыр шарттарҙа барған. 1919 йылдың көҙөнән пролетар республиканың муйынына боғал булып тағылған тиф эпидемияһы контрреволюцияның дәһшәтле союздашы булған. Илдең көнсығышында колчаксылар өйөрө араһында башланған был ауырыу хәрби пленныйҙар һәм үҙҙәре теләп Ҡыҙыл Армия яғына сығыусылар менән бергә килгән. Сабыртмалы тиф, тимер юлы менән килеп, беренсе ситатта Златоустта, Өфөлә, Бәләбәйҙә, ә унан һуң бөтә Башҡортостанда таралған, ул көнсығыштағы фронтҡа яҡын башҡа губерналарҙа ла кешеләрҙе ҡырған. Хәрби пленныйҙар, Ҡыҙыл Армия яғына сығыусылар һәм

---

1 «Правда», 1919, 11 октябрь.
2 Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 51-се том, 332-се бит.
3 ЦГА БАССР, ф. 107, оп. 3, д. 24, л. 128, 129.
4 «Известия Уфимского губисполкома», 1920, 11 декабрь.
5 «Правда», 1919, 27 август.

ҡасаҡтар эшелондары менән бергә сабыртмалы тиф Волгаға тиклем барып еткән һәм Үҙәк Россия райондарына ла таралған.

Эпидемияның тиҙ таралыуына аслыҡ, яланғаслыҡ, халыҡтың бик тығыҙ йәшәүе *, ҡот осҡос антисанитария шарттары, дауалау учреждениеларының һәм медицина персоналының етешмәүе лә булышлыҡ иткән. Әгәр ҡалала август айында сабыртмалы тиф менән ауырыусылар — 96,9, сентябрҙә 1231 кеше булһа, октябрь айында 2254 һәм ноябрҙә 5598 кеше иҫәпләнгән. Губерна һаулыҡ һаҡлау бүлеге мөдире А. Маневичтың һүҙҙәре менән әйткәндә, Өфө халҡы «тулыһынса сабыртмалы тиф менән зарарланғайны һәм сабыртмалы тиф менән ауырымаған бер генә йорт та, учреждение ла юҡ тип әйтерлек ине» [1]. Ноябрҙә эпидемия үҙенең иң юғары нөктәһенә барып еткән. Санитария летучкалары көн һайын 300-гә тиклемге ауырыуҙы йыйып алып госпиталдәргә килтергән [2]. Тиф ҡала халҡын ҡырып бөтөрөү менән янай ине. «...Сабыртмалы тиф башланған урындарҙағы ҡот осҡос хәлде күҙ алдына килтереү мөмкин түгел, — тигән В И. Ленин Советтарҙың VII Бөтә Россия съезында, — әгәр халыҡ хәлһеҙләнгән, косһеҙләнгән, йонсоған, материаль средстволар юҡ икән, — һәр төрлө тормош, һәр төрлө йәмғиәт юҡҡа сыға. Бында беҙ: «Иптәштәр, бөтә иғтибарҙы ошо мәсьәләгә йүнәлтергә! *Йә беттәр социализмды еңер, йә социализм беттәрҙе еңер!»* [3] тибеҙ».

Эпидемияға ҡаршы көрәшкә Өфө һәм губернаның партия һәм совет органдары үҙҙәренең бөтә көсөн, бөтә тәжрибәләрен туплайҙар. Улар йылдам, ҡыйыу, хәрби ваҡыттағыса эш итәләр. 25 октябрҙә губревкомдың, РКП(б)-ның губерна комитетының һәм Көнсығыш фронт Реввоенсоветының берлектәге ултырышы, сабыртмалы тиф эпидемияһына ҡаршы көрәшеү өсөн санитария диктатураһы булдырырға кәрәк, тип таный [4], ә 27 октябрҙә губревком президиумы һәм Көнсығыш фронт Реввоенсоветы «тиф эпидемияһына ҡаршы мөмкин тиклем ашығыс һәм мөмкин тиклем уңышлы көрәшеү өсөн кәрәкле бөтә техник һәм ғилми көстәрҙе һәм средстволарҙы файҙаланыу һәм хәрби-административ, санитария-йәмәғәт сараларын ҡулланыу мәғәнәһендә иң киң хоҡуҡтар биреп» губернаның санитария диктаторын тәғәйенләйҙәр [5].

Санитария диктатураһы алдында госпиталдәрҙең киң селтәрен булдырыу, эпидемияның таралыуына юл ҡуймау һәм уның сығанаҡтарын планлы рәүештә бөтөрөү өсөн ашығыс саралар күреү бурысы

---

* Торлаҡ фондының байтаҡ өлөшөн юғалтыуға һәм коммуналь хужалыҡтың күп кенә предприятиелары емерелеүгә ҡарамаҫтан, Өфө халҡы бик күп һанлы ҡасаҡтар, пленныйҙар, үҙҙәре теләп Ҡыҙыл Армия яғына сығыусылар һәм запас частарҙың ҡыҙылармеецтары иҫәбенә 1919 йылдың аҙағына, 1913 йыл менән сағыштырғанда, 1,5—2 тапҡырға арта.

[1] «Известия Уфимского губисполкома», 1920, 15 май.

[2] ЦГА ТАССР, ф. 107, оп. 2, д. 31-а, л. 215.

[3] Ленин В. И. Әҫәрҙәренең тулы йыйынтығы, 39-сы том, 410-сы бит.

[4] ЦГА БАССР, ф. 107, оп. 2, д. 31-а, л. 215.

[5] Шунда уҡ, оп. 3, д. 41, л. 183.

тора. Сабыртмалы тифкә ҡаршы көрәштең башында уҡ был эшкә хеҙмәтсәндәр ылыҡтырыла. Бөтә предприятиеларҙа һәм учреждениеларҙа, һәр квартал комитеты эргәһендә өс кешенән торған комиссия төҙөлә, улар үҙҙәренең участкаларындағы санитария торошо өсөн яуап бирә: таҙалыҡты һаҡлауҙы күҙәтә, ауырыуҙарҙы эҙләп табалар һәм уларҙы госпиталгә һалыу өсөн саралар күрәләр, санитария диктаторының поручениеларын үтәйҙәр.

Ҡаланың бөтә медицина персоналы (врачтар, лекарь ярҙамсылары, III, IV һәм V курстарҙың медик-студенттары, фельдшерҙар, формацевтар, санитарҙар, медицина сестралары) хеҙмәт повинносы буйынса тиф эпидемияһына ҡаршы көрәшкә мобилизациялана. Бер үк ваҡытта санитарҙар, медицина сестралары һәм дезинфекторҙар әҙерләү буйынса ҡыҫҡа сроклы курстар асыла.

Тиф ауырыуы йоғоу ҡурҡынысын кәметеү маҡсатында ҡала Советы театрҙарҙы, клубтарҙы, уҡыу йорттарын яба, ә уларҙың биналарын госпиталдәр һәм барактар йыһазландырыу өсөн санитария диктаторына бирә. Һабын эшләү һәм халыҡҡа бушлай таратыу өсөн, шулай уҡ уның менән госпиталдәрҙе тәьмин итеү өсөн ғәҙәттән тыш саралар күрелә. Эске кейем менән хәл ауыр ине, меңдәрсә ауырыуҙар бер нимә менән дә ябынмайынса һалам өҫтөндә ятырға мәжбүр ине. Шул саҡ йөҙҙәрсә эшселәр складтарҙы тикшерергә китә һәм унда табылған мануфактуранан простыня, халат һәм эске кейемдәр тегеү ойошторола. Буржуазиянан тартып алынған ҡорамалдарҙың (электр лампалары, кәрәсин лампалары, ванналар, карауаттар һәм башҡалар), эске һәм өҫкө кейемдәрҙең ҙур өлөшөн ҡала Советы госпиталдәргә бирә. Урындағы предприятиелар бик күп карауаттар, һыу ҡайнатҡыстар һәм башҡа ҡорамалдар әҙерләй. Күрелгән саралар арҡаһында, 1919 йылдың аҙағына Өфөнөң тиф ауырыуынан дауалау госпиталдәрендә койкалар һаны 9 меңгә етә [1].

Губревкомдың ҡарары буйынса Өфөлә эпидемияға ҡаршы көрәшкә буржуаз һәм хатта паразит элементтар мобилизациялана. Госпиталдәрҙе, мунсаларҙы, зыяраттарҙы хеҙмәтләндереү, утын әҙерләүҙә һәм уны ташыуҙа эшләү өсөн төҙөлгән санитар отрядтарҙа һәм эшселәр командаларында көн һайын 400-гә тиклем кеше эшләй. Бынан тыш 400-гә яҡын монашка госпиталдәрҙә санитаркалар булып эшләй, тегеү мастерскойҙарында эске кейем тегә [2].

Тифҡа ҡаршы көрәш буйынса Бөтә Россия комиссияһы Председателе, Бөтә Россия Ғәҙәттән тыш Комиссияһы Председателе урынбаҫары Михаил Сергеевич Кедров өфөләргә дәһшәтле ҡурҡынысҡа ҡаршы көрәштә ҙур ярҙам күрһәтә. Ул Өфөгә 1919 йылдың декабрь баштарында килә. Уның приказы буйынса транспорттағы ғәҙәттән тыш Комиссияның һәм милицияның санитария кордондары ауырыуҙарҙың, ҡасаҡтарҙың, санитар поездарҙың Өфөгә һәр төрлө инеү

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 107, оп. 3, д. 24, л. 112.
[2] Шунда уҡ, ф. 1, оп. 3, д. 41, л. 228, 229.

юлып яба; больницаларҙа койкалар һаны арттырыла, бик ҙур тимер юл пакгауздары госпиталдәр итеп яраҡлаштырыла; госпиталдәрҙе, больницаларҙы, мунсаларҙы, дезинфекция камераларып һәм башҡаларҙы яғыулыҡ менән тәьмин итеү өсөн мөһим саралар күрелә [1].

Санитария диктаторының ашығыс рәүештә күргән һәм ҡырҡыу саралары, М. С. Кедров комиссияһының ярҙамы, бөтә хеҙмәтсәндәрҙең фиҙакәр эше 1919 йылдың декабрендә үк үҙенең һөҙөмтәләрен бирә: сабыртмалы тиф эпидемияһы кәмей башлай. 1920 йылдың 9 февралендә губерна башҡарма комитеты санитария диктатураһы институтын тарата. 1920 йылдың йәйенә эпидемия бөтә.

М. С. Кедров.



Колчаксыларҙан азат ителгәндән һуң да Өфөләге һәм губерналағы хәл көсөргәнешле була. Асыҡ һуғышта уңышҡа өлгәшеүгә өмөтөн өҙгән контрреволюция Ҡыҙыл Армияның тылында заговорҙар һәм провокациялар менән Совет власын экономик һәм политик яҡтан көсһеҙләндерергә тырыша. Һәр төрлө буржуаз һәм ваҡ буржуаз партияларҙың ҡалдыҡтары активлаша. «Беҙгә, чекистарға, — тине Ф. Э. Дзержинский, — азат ителгән районларҙа колчаксыларҙың үҙ агентураһын ҡалдырып китеүҙәре лә билдәле. Уның бурыстары күп яҡлы — икмәк менән спекуляция яһауҙан, саботаждан алып диверсия эштәренә тиклемге сараларҙы файҙаланыу» [2]. 1919 йылдың 21 августа РКП(б)-ның Өфө губерна комитеты Үҙәк Комитетҡа, һуңғы ваҡытта һәр төрлө эсерҙар группаларының эше йәнләнеүе күҙәтелә, уларҙың хатта губерна комитетының һәм ҡала комитетының ваҡытлы бюроһы йәшәп килә, тип хәбәр итә [3]. Өфөлә 21 сентябрҙә анархистарҙың, һул эсерҙарҙың, эсер-максималистарҙың бандитлыҡ менән шөғөлләнеүсе әтрәгәләмдәрен берләштергән подпольелағы «Тынлелек һәм ирек» анархистар ойошмаһы тарафынан листовкалар таратыла, уларҙа коммунистарға ҡаршы аҡ-ҡара террор иғлан ителә [4].

Революция дошмандарына ҡаршы көрәштең алғы һыҙығында торған кешеләргә аҡгвардеецтарҙың мөйөш артына йәшеренеп атыу тауыштары ҡала урамдарында төнөн дә һәм хатта көндөҙөн дә ишө-

---

[1] Чекисты Башкирии. Очерки, статьи, воспоминания. Өфө, 1967, 33—34-се биттәр.
[2] Зубов Н. Ф. Э. Дзержинский. Биография. М., 1965, 208-се бит.
[3] ПА БОК КПСС, ф. 1, оп. 1, д. 82, л. 16.
[4] ПА БОК КПСС, ф. 1, оп. 1, д. 79, л. 19.

телеп тора. Воскресенская урамында (хәҙерге Туҡай урамы) Ғәҙәттән тыш Комиссия комиссары Василий Соколов үлемесле яралана. Өфө губернаһының Ғәҙәттән тыш Комиссияһы председателе П. И. Зенцовҡа бер нисә тапҡыр һөжүм итеүгә маташыуҙар уңышһыҙ барып сыға. Уның ҡатыны А. И. Зенцова, ошо заманды хәтергә алып, былай тип яҙған: «Ул саҡта, беҙгә һирәк-мирәк уның менән ҡайҙа булһа ла барырға тура килгәндә, мин йыш ҡына уның һаҡсыһы була торғайным, ул кеҫәһендә револьверын ҡулында тотоп алдан төшә, ә мин шулай уҡ ҡулымдағы ҙур булмаған «велодок» менән уның артынан бара инем» [1].

1920 йылдың башында, «Ҡарағош» (һәнәкселәр) тигән исем алған кулактар восстаниеһы башланғас, синфи көрәш айырыуса ҡырҡыу төҫ ала. Фетнә солғап алған урындарҙа кулактар коммунистарҙы, комсомолецтарҙы, аҙыҡ-түлек әҙерләү органдары работниктарын, совет хеҙмәткәрҙәрен, уҡытыусыларҙы һәм хатта һәр төрлө культура-ағартыу түңәрәктәре ағзаларын иҫ киткес мәрхәмәтһеҙлек менән үлтерәләр.

Кулактарҙың сығышы хеҙмәтсәндәр араһында көслө нәфрәт тыуҙыра. Ҡала предприятиеларында стихиялы рәүештә митингылар йыйыла, улар «Йәшәһен коммунистар!» тигән лозунг аҫтында үтә. Ә партияның губерна комитеты һәм губерна профсоюздар Советы, партия һәм профсоюз мобилизацияһы иғлан иткәс, Өфөнөң йөҙҙәрсә кешеһе кулактар контрреволюцияһын тар-мар итеү өсөн фронтҡа китә.

Кулактар восстаниеһын баҫтырыу өсөн, Өфөнән А. М. Чеверев етәкселегендә губерна Ғәҙәттән тыш Комиссияһының батальоны, Республиканың әске һаҡ ғәскәрҙәренең 67-се бригадаһы, махсус тәғәйенләнгән частар (ЧОН) подразделениелары, шулай уҡ эшселәрҙең ҡоралланған отрядтары ебәрелә. Баш күтәреүселәр райондары совет ғәскәрҙәре менән ҡамап алына һәм фетнәселәрҙән бер-бер артлы таҙартыла.

15 мартҡа восстание нигеҙҙә баҫтырыла.

Кулактар контрреволюцияһын тар-мар иткәндән һуң күп тә үтмәй урындарҙа партия һәм совет эшен яҡшыртыу буйынса саралар күрелә: унда алдынғы эшсе-коммунистар, тәжрибәле совет работниктары ебәрелә, совет аппаратын карьерист, дошман элементтарҙан таҙартыу, урындарҙағы работниктарҙы социалистик законлылыҡты еренә еткереп, тайпылышһыҙ үтәү рухында тәрбиәләү һәм башҡа эштәр үткәрелә. Быларҙың бөтәһе лә губернала политик хәлдө яҡшыртыуға килтерә, крәҫтиәндәрҙең күҙ алдында Коммунистар партияһының һәм Совет власының авторитетын нығыта.

Өфө хеҙмәтсәндәренең аңлылығы һәм политик активлығының үҫеүе Совет республикаһына пандар Польшаһы һөжүм башлау айҡаллы айырыуса асыҡ күренә. Халыҡ-ара империализмдың һәм

---

[1] Тарасов И. Д., Зенцова С. П. Петр Иванович Зенцов, 75-се бит.

упың поляк марионеткаларының яңы еңәйәте тураһындағы хәбәр бөтә хеҙмәт кешеһен аяҡҡа баҫтыра. Ҡаланың төрлө районарында күп кеше ҡатнашлығында протест митингылары һәм демонстрациялары ойошторола. Бары тик 1920 йылдың 6 майында ғына Свобода баҡсаһында, тимер юл мастерскойҙарында, Иваново майҙанында (хәҙер был территорияла Куйбышев тимер юлының Башҡортостан бүлеге идаралығы һәм торлаҡ йорттар урынлашҡан) һәм башҡа урындарҙа ошондай митингылар була; уларҙа Я. Я. Грунт, Э. С. Кадомцев, П. Н. Мостовенко, Ф. Я. Першин, Стуков, Ә. В. Хәбиби, А. М. Чеверев, И. С. Чернядьев, Ғ. К. Шәмиғолов ялҡынлы, тәьҫирле телмәрҙәр менән сығыш яһай. Свобода баҡсаһындағы митингыла ҡатнашҡан 20 мең кеше Стуковтың белдереүен тыңлап, бер тауыштан резолюция ҡабул итә. Унда былай тип әйтелгән: «Совет власы — беҙҙең ҡаныбыҙ менән һәм яфа сигеүҙәр аша яулап алған үҙебеҙҙең власыбыҙ ул. Совет Россияһы — беҙҙең туған һәм ҡаныбыҙ менән һуғарылған беҙҙең азат, социалистик ватаныбыҙ ул. Был власты, был Россияны беҙ бер кемгә бер ҡасан да бирмәйәсәкбеҙ. Империалистарҙың яңы хәшәрәт политикаһына беҙ емергес удар менән яуап бирәсәкбеҙ. Аҡгвардеецтар Польшаһын Колчак менән Деникин яҙмышы көтә — беҙ бөгөн был хаҡта ант итәбеҙ. Бөтәгеҙ ҙә ҡоралды контрреволюцияға ҡаршы һуңғы ҡораллы алышҡа. Үҙебеҙҙең бөтә көсөбөҙ менән тыныс коммунистик хеҙмәткә тотоноу өсөн һуңғы янауҙы юҡ итәйек»[1].

Йөҙҙәрсә эшсе һәм крәҫтиән, партияның саҡырыуына яуап итеп, үҙ теләктәре менән Ҡыҙыл Армия сафтарына баҫа һәм Польша фронтына китә. Улар араһында коммунистар беренсе сафта була. Май башында уҡ Өфө, Стәрлетамаҡ, Бөрө фронтҡа үҙҙәренең доброволец отрядтарын оҙата.

Фронтҡа ярҙам аҙналары ҙур күтәренкелек менән үткәрелә, улар ваҡытында бик күп йылы кейем, эске кейем, иген, май, тәмәке һәм башҡалар йыйыла. Ләкин Өфө губернаһы шарттарында социалистик дәүләттең аҙыҡ-түлек заданиеларын уңышлы үтәү армияға һәм илгә ярҙам итеүҙең төп формаһы булып ҡала. Шуға күрә ҡала партия ойошмаһының бөтә иғтибары, бөтә көсө ошо мәсьәләгә йүнәлтелә. Ауылға агитаторҙар, аҙыҡ-түлек әҙерләүселәр итеп ебәрелгән йөҙҙәрсә коммунистар һәм комсомолецтар иген өсөн көсөргәнешле көрәш алып бара. Губерна Республика алдындағы үҙенең бурысын үтәгән — әҙерләүҙәр кампанияһын 1921 йылдың февраль башына тамамлаған икән, бында Өфө коммунистарының, бөтә хеҙмәтсәндәренең хеҙмәте ҙур.

1920 йылдың ноябрь уртаһында Өфө бөтә ил менән бергә Ҡыҙыл Армияның Ҡырымда Врангелдең аҡгвардеец өйөрҙәре өҫтөнән еңеүен һәм граждандар һуғышының тамамланыуын тантаналы рәүештә билдәләй. Совет халҡы Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының

[1] «Известия Уфимского губисполкома», 1920, 9 май.

Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитетының «Октябрьская революция» агитатор-инструкторҙар поезы.



еңеүҙәрен яҡлап алып ҡала, тыныс шартарҙа социалистик үҙгәртеп ҡороуҙарҙы ғәмәлгә ашырыу мөмкинлеген ала. Емертелгән халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу уның алдында беренсе сираттағы бурысҡа әүерелә. 16 ноябрҙә иртән Өфөгә килгән Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитетының «Октябрьская революция» агитатор-инструкторҙар поезы коллективының тырышлығы ошо яңы бурысты хәл итеүгә йүнәлтелгән була. Поезға Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитеты Председателе М. И. Калинин етәкселек итә.

Агитпоезд Өфө станцияһында 14 сәғәт 9 минут тора, әммә сағыштырмаса ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә лә уның коллективы ҙур эш башҡара. Агитпоездың 16 ноябрь көнөндәге отчетында былай тип хәбәр ителә: «Көндөҙгө сәғәт берҙә Калинин иптәш ҡала майҙанында Ҡыҙыл Армияның еңеүе хөрмәтенә урындағы гарнизондың парадын ҡабул итте, сәғәт 4-тә тимер юл мастерскойҙарында митингыла ҡатнашты, киске сәғәт 6-ла Хеҙмәт һарайында митинг булды... Көндөҙгө сәғәт 3-тән балалар өсөн, кис — өлкәндәр өсөн кино күрһәтелде. Иртән учреждениеларға инструкция бирелде. Поезда киске сәғәт 10-да поезд политбүлегенең Өфө ҡалаһы яуаплы работниктары менән берләшкән ултырышы булды» [1].

Был көн М. И. Калинин өсөн дә көсөргәнешле була. Ул губерна һәм ҡала партия, совет органдарының эшмәкәрлеген барлауҙа һәм тикшереүҙә ҡатнаша, урындағы работниктар, эшселәр, ҡыҙыларме-

[1] М. И. Калинин в Башкирской АССР. Өфө, 1966, 46-сы бит.

еңтар менән әңгәмәләшә. Эше күп булыуға ҡарамаҫтан, Михаил Иванович Өфө ҡалаһы хеҙмәтсәндәренең бөтә митингыларында ла сығыш яһау мөмкинлеген таба. Уның телмәрҙәре ябай кешеләрҙең күңелдәрендә Совет власының көсөнә һәм еңелмәҫлегенә бөйөк ышаныс тыуҙыра. «Граждандар һуғышы тәжрибәһе шуны күрһәтте, — тине ул Хеҙмәт һарайындағы митингыла, — ҡеүәтле Германияны еңгән һәм хәҙер асылда бөтә донъяға хужа булып торған, бөтә илдәрҙе үҙе нисек теләй шулай таларға һәм иҙергә ҡулынан килгән Антанта ярлы, яланғас һәм ас Совет Россияһына ҡаршы көрәштә ғәмәлдә көсһөҙ булып сыҡты» [1].

[1] М. И. Калинин в Башкирской АССР. Өфө, 1966, 41-се бит.

# *Өфө халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу йылдарында (1921—1928 йылдар)*

## § 1. Тыныс төҙөлөшкә күсеү. Өфө — Башҡорт АССР-ының баш ҡалаһы

1921 йылдың башы. Өфөнөң бөтә тышҡы күренешендә һуғыш эҙҙәре: емерек йорттар, аҡтарып ташланған урамдар, өнһөҙ предприятиелар ап-асыҡ күренеп тора.

Ҡала ауыр ваҡыт кисерә. Сырье етешмәү сәбәпле, утыҙҙан ашыу предприятие эштән туҡтай. Яғыулыҡ етешмәүе Өфө тимер юл узелының, электр һәм водопровод станцияларының эшенә ҡурҡыныс тыуҙыра. 1921 йылдың февралендә больницалар, госпиталдәр, мәктәптәр, торлаҡ йорттар һәм учреждениелар йылытыуҙан туҡтатыла. Аҙыҡ-түлек, мануфактура, аяҡ кейемдәре, һабын, шырпы һ. б. етешмәй.

Өфөлә политик хәл дә ҡатмарлы була. Экономик ҡыйынлыҡтарҙан файҙаланып, меньшевиктар менән эсерҙар революцияға ҡаршы агитация йәйелдереп ебәрә. 1921 йылдың мартында улар тимер юлсылар менән һыу юлы эшселәренең артта ҡалған өлөшө араһында забастовка ойоштора [1]. Анархистар йәштәр араһында тарҡатыу эше алып бара. Улар йәшерен кәңәшмәләр үткәрә, Советтарға ҡаршы яҙылған әҙәбиәт тарата [2]. Өйәҙҙәрҙә тыныс түгел ине. Крәҫтиәндәр аҙыҡ развёрсткаһына ризаһыҙлыҡ белдерә. 1920—1921 йылдарҙа губернала бер-бер артлы кулак восстаниелары күтәрелеп тора.

Политик бандитлыҡ, революцияға ҡаршы пропаганда улар менән көрәшеү өсөн көс һәм средстволарҙы ситкә йүнәлдерә, Өфө менән крайҙың хужалығын аяҡҡа баҫтырырға тотҡарлыҡ яһай ине. Бөтә ил буйынса шундай уҡ хәл була.

Килеп тыуған ҡыйынлыҡтарҙан оппортунистик элементтар файҙаланып ҡалырға тырыша. Троцкий һәм уның яҡлылар партияға профсоюздар тураһында дискуссия көсләп таға. Коммунистар бөтә

[1] ЦГАОР СССР, ф. 5451, оп. 4, д. 267, л. 30.
[2] «Советская Башкирия», 1967, 24 декабрь.

оппозиционерзарға ҡырҡа ҡаршы сыға. Профсоюздар мәсьәләһе буйынса ленинсы платформа РКП(б)-ның VIII Өфө губерна конференцияһында ла (1921 йылдың 17—21 ғинуары), ҡала райондарының партия йыйылыштарында ла еңеп сыға.

1921 йылдың мартында РКП(б)-ның X съезы булып үтә, унда профсоюз дискуссияһына йомғаҡ яһала. Ул хәрби коммунизм политикаһынан яңы экономик политикаға күсеү тураһында эшселәр синыфы менән крәҫтиәндәрҙең союзын нығытыуға, капиталистик элементтарҙы бөтөрөүгә, СССР-ҙа социализм төҙөүгә иҫәпләнгән ҡарар ҡабул итә. Был ҡарар съездың милли мәсьәлә буйынса ҡарарына тығыҙ бәйләнгәйне. Унда элек иҙелеп йәшәгән халыҡтарҙың хужалыҡ һәм культура яғынан артта ҡалыуы рәүешендәге фактик тигеҙһеҙлеген бөтөрөүҙең киң программаһы билдәләнгәйне.

Ҡаланың партия һәм совет ойошмалары нэп-тың асылын һәм бурыстарын массаларға аңлатыу эшен киң йәйелдерә. Улар йыйылыштар, митингылар уҙғара, ауылдарға барып аңлата. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Өфөлә һәм Өфө өйәҙендә генә аҙыҡ развёрсткаһын аҙыҡ налогы менән алыштырыу мәсьәләләре буйынса 300-гә яҡын доклад һәм лекция һөйләнгән. Партияның X съезы ҡарарҙарын Өфө һәм губерна хеҙмәтсәндәре берҙәм хуплап сыға. Мәҫәлән, фабрика-завод комитеттарының ҡала конференцияһы: «Өфөнөң ойошҡан пролетариаты Совет власының аҙыҡ-түлек политикаһын бик дөрөҫ тип, ә развёрстканы аҙыҡ налогы менән алыштырыуҙы дөрөҫ тип кенә түгел, бәлки маҡсатҡа ярашлы ла тип һанай» [1], — тип билдәләй.

Яңы экономик политиканы тормошҡа ашырыу партиянан идея һәм ойоштороу яғынан ҙур тупланғанлыҡ талап итә. X съезд директиваһына ярашлы рәүештә, 1921 йылда Өфөлә, бөтә илдәге кеүек үк, партия сафтарын таҙартыу үткәрелә. Һөҙөмтәлә ойошмаларҙың сифат яғынан составы яҡшыра, партия тәртибе нығый, коммунистарҙың йоғонтоһо үҫә. Ҡалала, элекке кеүек үк, ике район партия ойошмаһы ҡала. РКП(б)-ның I ҡала райкомы, нигеҙҙә, — административ учреждениелар һәм уҡыу йорттары: губерна башҡарма комитеты, губпрофсовет, губерна аҙыҡ комитеты, губерна хәрби комиссариаты, губерна ер эштәре идаралығы, партия мәктәбе, эшселәр факультеты һәм башҡаларҙың ячейкаларын, ә II ҡала райкомы тимер юл мастерскойҙары, депо, төрлө тимер юл хеҙмәте, һыу транспорты һәм ҡайһы бер ваҡ предприятиелар ячейкаларын берләштергән *.

Партия ойошмаһы бөтә көсөн ҡала экономикаһын нэп рельсына күсереүгә туплай. Был ҡатмарлы һәм күп яҡлы процесс ине. Ул развёрстканы аҙыҡ налогы менән алмаштырыуҙы ғына түгел, бәлки аҡрынлап социалистик предприятиеларҙа хозрасчет индереүҙе, урындағы әйләнешкә ирек биреүҙе, аҡса әйләнешенең ролен күтәреүҙе,

---

[1] ЦГАОР СССР, ф. 5451, оп. 8, д. 237, л. 9.

* РКП(б)-ның I ҡала райкомы — 1919 йылда, II-һе 1920 йылда төҙөлгән.

дәүләт һәм хужалыҡ менән идара итеүгә хеҙмәтсәндәрҙе киңерәк ылыҡтырыуҙы үҙ эсенә алған.

Яңы экономик политикаға күсеү хәрби коммунизм шарттарында урынлашҡан хужалыҡ итеү практикаһын үҙгәртеп ҡороуҙы килтереп сығара. Главкалар системаһы уның артыҡ регламентациялары менән бергә бөтөрөлә. Уның урынына яҡшыраҡ ҡорамалландырылған, сырье һәм яғыулыҡ менән тәьмин ителгәнерәк иң мөһим предприятиеларҙы берләштергән трестар төҙөлә. 1922 йылдың башында Уфпром тресы — Өфө предприятиелары берләшмәһе ойошторолдо. Уның ҡарамағына 19 предприятие, уларҙың 11-е ҡала предприятиелары: фанера фабрикаһы, берләштерелгән 2-се һәм 13-сө һанлы агас заводтары, 3-сө, 4-се, 5-се һанлы типографиялар, канат-арҡан заводы, 1-се һанлы тегеү мастерскойы, 2-се һанлы кирбес заводы, 1-се һанлы дәүләт заводы (элекке Гутман заводы), аяҡ кейемдәре-ҡайыш әйберҙәр һәм экипаж мастерскойҙары ингән [1].

Предприятиеларҙы хужалыҡ иҫәбенә күсереү промышленносты аяҡҡа баҫтырыу эшендә урындағы органдарҙың инициативаһына ирек бирә һәм айырым кешеләрҙең һәм коллективтарҙың материаль ҡыҙыҡһыныуҙары принцибын индерә. Етештереүҙе һайлау һәм туплау дәүләт органдары ҡарамағындағы иң эре һәм ныҡ предприятиелар ҡулында була. Ваҡ предприятиелар иһә айырым кешеләргә һәм кооперация учреждениеларына арендаға бирелгән. Халыҡ хужалығының Өфө губерна советы арендаға биреләсәк предприятиеларҙың исемлеген баҫтырып сығарған һәм аренда шарттарын эшләгән [2]. Был сара предприятиеларҙы аяҡҡа баҫтырыуҙы һәм тәртипкә килтереүҙе. промышленность әйберҙәре етештереүҙе арттырыуҙы маҡсат итеп ҡуя. Шуға күрә һәр бер аренда договоры, етештереүҙең иң аҙ күләмен билдәләп, арендаторҙы теге йәки был ремонтты уҙғарырға мәжбүр иткән. Аренда срогы 3 йылдан алып 6 йылға тиклем билдәләнгән. Арендатор эшкә алыу һәм эштән сығарыу, хеҙмәтте һаҡлау тураһындағы ҡарарҙарҙы һәм дөйөм закондарҙы һаҡларға тейеш булған. 1922 йылдың февраленә Өфөлә 20-гә яҡын предприятие арендаға бирелгән. Уларҙың күбеһен 10-ға тиклем эшселәре булған ваҡ предприятиелар: күн, кирбес, һабын ҡайнатыу заводтары, икмәк пекарнялары тәшкил иткән. Предприятиеларҙың байтаҡ өлөшөн кооперация учреждениелары арендаға алған. Нэп-ты индереү тәүге осорҙарҙа шәхси инициативаның үҫеүен күҙ уңында тотҡан. ВЦИК-тың «Кустарь һәм ваҡ промышленностар тураһында» 1921 йыл 7 июль декреты айырым кешеләргә үҙ предприятиеларын (промышленность, һатыу итеү һ. б.) асырға рөхсәт иткән. Декрет баҫылып сыҡҡас, Өфө ҡала Советына мастерскойҙар, кибеттәр, ресторандар,

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 394, оп. 4, д. 103, л. 120, 121; оп. 2, д. 8, л. 42—44; ф. 173, оп. 1, д. 99, л. 10; ф. 933, оп. 1, д. 109, л. 17.

[2] «Известия Уфимского губкома РКП(б) и губисполкома Советов рабочих, крестьянских и красноармейских депутатов», 1921, 14 ноябрь.

Халыҡ мәғарифы институты территорияһын төҙөкләндереүгә арналған өмә. 1922 йыл.



ҡунаҡханалар һ. б. йорттар асырға теләүсе граждандарҙан ғариза-лар килә башлай. Халыҡ хужалығының губерна советы 1921 йылда Өфөләге ваҡ һәм кустарь промышленностарҙың иҫәбен ала, уларға ярҙам итеү өсөн махсус фонд булдыра. Субсидиялар артелдәргә бер-ләшкән һәм дәүләт заказдарын үтәгән кустарҙарға беренсе сиратта бирелгән. Дәртләндереү саралары ҡаланың ваҡ промышленносын йәнләндереп ебәрә.

Нэп-тың беренсе айҙарында уҡ Өфө хеҙмәтсәндәренең политик һәм хеҙмәт активлығы һиҙелерлек үҫә. Промышленность предприя-тиелары, торлаҡ йорттар, больницалар, мәктәптәр тергеҙелә. Өфөләр көстәрен дә, ваҡыттарын да йәлләмәй эшләй. Был осорҙа ҡалала өмә-ләр, воскресниктар киң йәйелдерелә. 1921 йылдың март—май айҙа-рында Өфөлә РКП(б)-ның I ҡала райкомы ойошторған өмәләрҙә 60 меңдән ашыу кеше ҡатнаша [1].

Беренсе Май өмәһе хеҙмәт байрамына әүерелә. Иртән иртүк хеҙмәтсәндәр колонналары, революцион йырҙар йырлап, билдәлән-гән эш урындарына ҡуҙғалалар. Шул ваҡыттағы газеталарҙың бе-реһе коллектив хеҙмәт һөҙөмтәләрен быша нисек тасуирлай: «Бөтәһе өс сәғәт эшләнде, әммә шаҡтай ҙур һөҙөмтәләргә ирешелде: 8122 бот

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 1, д. 35, л. 11, 15.

ашлыҡ йөктәре, 34 вагон утын, 3 вагон кирбес, 63 бот күмер һәм 5621 бот төрлө материал бушатылды; 2 вагон ер, 2 вагон сүп-сар, 55 вагон шпал, 600 бот шлак, 1600 бот тимер-томор һәм юныҫҡы, 10 вагон балласт... тейәлде. Бүрәнәләр күсерелде, урамдар таҙартылды, тиреҫ сүплеккә түгелде һәм башҡа ваҡ-төйәк эштәр башҡарылды.

Тик бер Өфө станцияһында үтәлгән эштәр суммаһы 158 545 һум менән иҫәпләнә» [1].

Ағыулыҡ кризисын хәл итеүҙә өмәләр ҙур роль уйнай. Өфө хеҙмәтсәндәре ағыулыҡ әҙерләүҙә һәм ташыуҙа актив ҡатнаша. Ул саҡта торлаҡ йорттар, учреждениелар һәм башҡа күп промышленность предприятиелары башлыса өмәләрҙә һәм воскресниктарҙа әҙерләнгән утын менән йылытылған була.

Ләкин промышленность һәм ҡаланың емерек хужалығын торғоҙоу эштәре тиҙҙән ҡырҡа кәмей. 1921 йылдың йәйендә ил стихия ҡазаһына — ҡоролоҡҡа дусар була. Ул 35 губернаға, шул иҫәптән Өфө губернаһына ла, тарала. Крайҙа 62 процент сәсеүлек бер нимәй ҙә уңыш бирмәй, халыҡтың өстән ике өлөшө икмәктән мәхрүм ҡала. Өфөлә 93 мең халыҡтан 68 меңе асыға [2].

Бер-бер артлы промышленность предприятиелары — канат-арҡан, кондитер фабрикалары, һыра ҡайнатыу, сүпрә, күн һәм ҡайһы бер башҡа заводтар эштән туҡтай. Эшләгән предприятиеларҙа эшселәр һаны ҡырҡа кәмей. Хеҙмәт етештереүсәнлеге һәм тәртибе түбәнәйә. Прогулдар һаны эшләгән көндәрҙең дөйөм һанына ҡарата 60—65 процентҡа барып етә [3].

Хәл тағы ла шуның менән ҡатмарлаша: ауыл райондарының күп кешеләре Өфөгә икмәк һәм медицина ярҙамы эҙләп ағылған. 1921 йылдың уртаһында уҡ шәһәрҙә ҡалала тик регистрацияланған ҡасаҡтар һаны 60 меңдән ашыу иҫәпләнә. Бигерәк тә балалар күп килгән [4]. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә бөтә балалар йорттары шығырым тулған һәм асылда йоҡлап сығыу йорттарына әйләнгән. Ҡарауһыҙ балалар һаны һәләкәтле рәүештә арта барған.

Шулай итеп, Өфөлә, губернала, бөтә илдәге кеүек үк, экономик һәм политик хәл бик ҡатмарлы була. В. И. Ленин партияның XI съезында, 1921 йылда килеп тыуған хәлде һүрәтләп, былай тигән: «Быйыл беҙҙең өҫкә төшкән бәлә-ҡазалар үткән йылдарға ҡарағанда ла ауырыраҡ булғандыр.

Империалистик һуғыштың һәм беҙҙе капиталистар дусар иткән һуғыштың бөтә һөҙөмтәләре бөтәһе бергә йыйылдылар ҙа беҙгә аслыҡ һәм иң аяуһыҙ бөлгөнлөк булып ябырылдылар төҫлө» [5].

---

[1] «Известия Уфимского губкома РКП(б) и губисполкома Советов рабочих крестьянских и красноармейских депутатов», 1921, 14 май.

[2] ПА БОК КПСС, ф. 1, оп. 1, д. 509, л. 3.

[3] ЦГАНХ СССР, ф. 1562, оп, 73, д. 81.

[4] ЦГА БАССР, ф. 472, оп. 2, д. 271, л. 18.

[5] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 45-се том, 67-се бит.

Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте Өфө губерна хеҙмәтсәндәре тураһында айырыуса хәстәрлек күрә. Өфө губернаһы бөтә тор аҙыҡ-түлек налогынан азат ителә, ярҙамға ныҡ мохтаж районлар иҫәбенә индерелә. Хөкүмәт губернаға 6 млн. һум аҡса бүлә, бында врач ярҙамы-туҡландырыу отрядтары һәм поездары ебәрә, балаларҙы илдең имен районларына эвакуациялауҙы ойоштора. Екатеринбург, Төмән, Курск, Смоленск губерналары хеҙмәтсәндәре бик күп аҙыҡ-түлек менән ярҙам итә.

1921—1922 йылдарҙа Өфө крайҙағы аслыҡҡа ҡаршы көрәш штабына әүерелә. Партия һәм совет органдарынан иҫ киткес көс һалыу, һәләтлек һәм мобиллек талап ителә. Уларға хәл итергә тура килгән иң мөһим һәм ауыр бурыстарҙың береһе аслыҡ ябырылған өйәҙҙәрҙән килгән ҡасаҡтарҙы һәм балаларҙы урынлаштырыуҙы, ашатыуҙы һәм медицина ярҙамы күрһәтеүҙе ойоштороу була. Төп йөк бушатыу пункты булған Өфө станцияһына килгән аҙыҡ-түлек, промышленность һәм орлоҡ тейәлгән йөктәрҙең өҙлөкһөҙ хәрәкәтен тәьмин итеү ҙә ҡатмарлы мәсьәлә ине. Йөктәр бынан Өфө губернаһына һәм Кесе Башҡортостанға таратыла. Йөктәрҙе ҡабул итеү һәм билдәләнгән урынға тиклем ташыу, шулай уҡ һаҡлау буйынса бөтә сикһеҙ ҙур эш Өфө эшселәре-тимер юлсылары, һыу юлы эшселәре, металлистары, ағас эшкәртеүселәре һәм башҡалар тарафынан башҡарыла.

Ҡаланың ҡатын-ҡыҙҙары аслыҡ менән көрәшеүҙә актив ҡатнаша. Улар балалар йорттары тураһындағы хәстәрлекте үҙ ҡулдарына ала. Балаларға кейем-һалым тегеү, ямау, йыуыу, уларҙы ашатыу ҡатын-ҡыҙҙар өҫтөнә төшә.

Аслыҡҡа ҡаршы көрәш киҫкен синфи бәрелештәр шарттарында бара. Контрреволюция хәлгә яраҡлашып, көрәш тактикаһын да үҙгәртеп тора. Ул осорҙа Совет власына ҡаршы һөжүмдәр йыш ҡына дин һәм сиркәүҙе һаҡлау һылтауы аҫтында ойоштороле. Халыҡтың байтаҡ өлөшөнөң хөрәфәттәргә ышаныуын файҙаланырға тырышып, контрреволюционерҙар аслыҡтың сәбәбе, Совет власының дин һәм сиркәүҙе «йәберләүҙәре» тураһында ялған хәбәрҙәр тарата, һәр төрлө провокациялар ойоштора. Шулай, 1921 йылдың яҙында Өфөлә губчека следователе М. Мастриков үлтерелә. Тиҙҙән тағы бер атыу тауышы яңғырай. Епископ Симон уның ҡорбаны була. Енәйәтте тикшереү бында юлбаҫарҙар шайкаһының ғәйепле булыуын күрһәтһә лә, сиркәү башлыҡтары: «Комиссар үлтерелгәнгә үс итеп, хакимыбыҙҙы чекистар үлтергән», — тигән ҡотҡо тараталар. Дин тотоусылар араһында сыуалыштар башлана. Бер нисә көн буйы ЧК йорто алдында (хәҙер был бинала Башҡортостан хәрби комиссариаты урынлашҡан) бик күп халыҡ йыйыла. Советтарға ҡаршы ҡыҫҡырыуҙар һәм янауҙар яңғырай [1].

---

[1] Тарасов И. Д., Деденко В. П. Дмитрий Михайлович Чудинов. (Биографик очерк). Өфө, 1969, 38-се бит.

Асығыусыларға ярҙамды көсәйтеү өсөн, сиркәүҙең ҡиммәтле нәмәләрен конфисковать итеү тураһында ВЦИК-тың 1922 йыл 23 февраль декретына ҡаршы руханиҙар ҡоторонҡо көрәш йәйелдереп ебәрә. Патриарх Тихон «Православие сиркәуенең бөтә тоғро улдарына һәм ҡыҙҙарына» хат менән мөрәжәғәт итә. Ул унда ҡиммәтле нәмәләрҙе конфискациялауҙа ҡатнашҡан кешеләрҙе сиркәүҙән ҡыуыу, ә руханиҙарҙы дәрәжәләрен төшөрөү менән янаны.

Патриархтың мөрәжәғәте Өфөлә лә таратыла. Сиркәү башлыҡтары уны бөтә ерҙә уҡыйҙар һәм дин тотоусыларҙы Совет власына ҡаршы көрәшергә саҡыралар. Хеҙмәтсән массалар реакцион руханиҙарҙы яҡламайҙар. Декретты тикшереүгә бағышланған бөтә йыйылыштарҙа фекер бер була: «ВЦИК-тың ваҡытлы сығарылған ҡарарын хуплайбыҙ, уға бөтә яҡлап ярҙам вәғәҙә итәбеҙ». Өфөнөң йөҙҙәрсә хеҙмәтсәндәре крайҙың сиркәүҙәрендә, мәсеттәрендә һәм костелдарында һаҡланған ҡиммәтле нәмәләрҙе конфискациялауҙа ҡатнаша. Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Өфө губернаһында 120 ботҡа яҡын алтын һәм көмөш конфискациялана [1].

Мосолман руханиҙары Совет власына ҡаршы актив көрәшә. 1921 йылдың аҙағында Эске Россия һәм Себер мосолмандарының Үҙәк дини назариаты (идаралығы) — уның резиденцияһы Өфөлә урынлашҡан була — Мәскәүҙә мосолман руханиҙарының асығыусыларға ярҙам итеү буйынса комиссияһын төҙөүгә өлгәшә. Ләкин комиссия мосолман ярлыларына ярҙам ойоштороу урынына илдең эсендә лә, тышында ла революцияға ҡаршы көстәрҙе туплау, спекуляция менән шөғөлләнә [2].

Өфө руханиҙарының революцияға ҡаршы эшмәкәрлеге «Америка ярҙам итеү администрацияһы» («АРА») тарафынан яҡлана. Рәсми рәүештә ул донъя һуғышы ваҡытында зыян күргән Европа илдәренә ярҙам күрһәтеү өсөн төҙөлгән булған, ләкин, бөтәһенән элек, Европала революцион хәрәкәткә ҡаршы көрәшеү һәм Америка империализмы позицияларын нығытыу маҡсатын күҙәткән була. 1921 йылғы аслыҡ ваҡытында Совет хөкүмәте «АРА-ның» РСФСР-ҙа эшләүенә рөхсәт итә. Был ойошманың вәкилдәре 1921 йылдың аҙағында Өфөгә киләләр. Улар асығыусыларға бер ни тиклем ярҙам күрһәтәләр, ҡалала һәм губернала ашханалар асалар. Әммә уларҙың төп тырышлыҡтары шпион-емергес эшмәкәрлекте йәйелдереүгә, элекке аҡгвардеецтар араһынан агенттар вербовкалауға йүнәлдерелгән була.

«АРА-ның» Өфө контораһы етәксеһе булып Американың кадровый разведчигы Блэнди тора. Чекистарҙың асыҡлауы буйынса, контораның хеҙмәткәрҙәре завод районларының күп һанлы һүрәттәрен төшөргәндәр, Көньяҡ Уралдың тулы политик-экономик картаһын төҙөгәндәр. Бөтә был разведка характерындағы материалдар

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 5, д. 136, л. 14.
[2] Шунда уҡ, ф. 1, оп. 1, д. 536, л. 198.

«АРА» вәкилдәре тыуған илдәренә ҡайтҡан саҡта конфискациялаған. Улар шпионаж менән бергә ҡиммәтле һәм антиквар әйберҙәр һатып алыу, спекуляция менән шөғөлләнгәндәр. Крайға килгән аҙыҡ-түлек партиялары (ә уларҙың күләме Америка пропагандаһы тарафынан шаштырып күрһәтелгән була), асығыусы халыҡҡа ҡарағанда, күберәк революцияға ҡаршы элементтарға ярҙамға китә, спекулянттар ҡулына эләгә.

1922 йылдың көҙөндә асլыҡ еңелә. Был йәш Совет республикаһының экономик еңеүе генә түгел, ә политик еңеүе лә ине. Йөҙҙәрсә мең кешеләр — үлемдән, халыҡ хужалығы тулыһынса емерелеүҙән ҡотҡарып ҡалына. Аслыҡҡа ҡаршы ҡаты көрәштә хеҙмәтсән массалар Ленин партияһы тирәһенә нығыраҡ туплана, Совет властының абруйы үҫә, күп милләтле Тыуған илебеҙ халыҡтарының дуҫлығы нығый.

1922 йылда Өфө тарихында әһәмиәтле ваҡиға була. Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитетының 1922 йыл 14 июнь Декреты менән Өфө губернаһы бөтөрөлөп, уның территорияһы Башҡортостан республикаһына бирелә, ә административ үҙәге Башҡорт АССР-ының баш ҡалаһына әүерелдерелә. Ошо ваҡыттан алып Өфө Башҡортостандың баш ҡалаһы булып үҫә башлай. Ул республиканың милли-дәүләт төҙөлөшөндә ҙур роль уйнай. Башҡорт АССР-ының һәм Өфө губернаһының партия һәм дәүләт учреждениеларын ҡушыу юлы менән республиканың Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты, Халыҡ Комиссарҙары Советы формалаша. Аҙыҡ-түлек, ер эшкәртеү, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, социаль тәьминәт, промышленность, финанс, хеҙмәт, юстиция, эшсе-крәҫтиәндәр инспекцияһы халыҡ комиссариаттары төҙөлә. Дәүләт һәм партия учреждениелары биналары ике телдә — башҡорт һәм рус телдәрендә яҙылған вывескалар менән биҙәлә.

Өфө республиканың баш ҡалаһына әйләнеү менән, Башҡортостандың экономик, политик һәм культура тормошо үҙәге булараҡ, уның әһәмиәте үҫә. Бында партия, комсомол, профсоюз конференциялары менән бер рәттән партияһыҙ крәҫтиәндәрҙең, ҡатын-ҡыҙҙарҙың республика съездары, экономик, милли төҙөлөш мәсьәләләре буйынса кәңәшмәләр һ. б. уҙғарыла. Өфө ҡунаҡтарҙы йылы ҡаршылай. Ситтән килеүселәргә ҡунаҡханалар, дөйөм торлаҡтар асыла, 1924 йылда «Крәҫтиән йорто» эшләй башлай. Алыҫ башҡорт, татар, рус, сыуаш ауылдарынан килгән вәкилдәр ҡаланың иҫтәлекле урындары, промышленность предприятиелары, өфөләр менән таныша.

Өфө Башҡортостан хеҙмәтсәндәре араһында ҙур идея-тәрбиә эштәренең, милләтселек ҡалдыҡтары менән көрәштең үҙәгенә әүерелә. Элек иҙелгән милләттәр хеҙмәтсәндәренән партия, совет, хужалыҡ кадрҙары әҙерләү буйынса, партия һәм совет аппаратын нығытыу буйынса күп эштәр башҡарыла.

Республика сиктәрен киңәйтеү һәм Өфөнө уның баш ҡалаһына әүерелдереү РСФСР-ҙы һәм башҡа Совет республикаларын ССР

Союзына берләштереү ваҡытына тура килгән. 1922 йылдың 30 декабрендә Советтарҙың I Бөтә Союз съезы Совет Социалистик Республикалар Союзын төҙөү тураһында тарихи ҡарар ҡабул итә. Яңы дәүләт берләшмәһе В. И. Лениндың азат милләттәрҙең ирекле союзы тураһындағы идеяларының практик кәүҙәләнеше була. Бөтә Совет кешеләре менән бергә Өфө хеҙмәтсәндәре лә СССР-ҙың төҙөлөүен ҡайнар яҡлайҙар. Уларҙың уй-хыялдарын ҡала Советының 1923 йыл 14 ғинуар Пленумы шулай сағылдырған: «Пленум социалистик республикаларҙың берҙәм союзға берләшеүен ихлас күңелдән ҡотлай. Был союз капитализмға ҡаршы көрәштә терәк буласаҡ һәм азатлыҡ алған халыҡтарға ошо Союзға инергә мөмкинлек бирәсәк»[1].

СССР-ҙың төҙөлөүе Союздың башҡа республикалары, өлкәләре һәм ҡалалары менән Башҡортостандың һәр яҡлы бәйләнешен нығыта һәм киңәйтә, ә был крайҙың һәм уның баш ҡалаһының политика, экономика һәм культура яғынан йылдам үсешенә нигеҙ булып хеҙмәт итә.

## § 2. Промышленность һәм ҡала коммуналь хужалығын аяҡҡа баҫтырыу

Ауыл хужалығында хәлдең яҡшырыуы промышленносты аяҡҡа баҫтырыуҙы йәйелдереп ебәреүгә тәүшарт булдыра.

Өфөләр эшкә берҙәм тотона. Промышленность производствоһын ауыр шарттарҙа күтәрергә тура килә. Ҡала фабрикалары һәм заводтарының ҡоралдары туҙғайны һәм иҫкергәйне, күп кенә производство биналары эштән сыҡҡайны. Промышленность ҡорамалдарының физик иҫкереүе уртаса 38 процентҡа еткәйне, ә айырым предприятиелар буйынса 60 проценттан ашып киткәйне[2]. Ағыулыҡ, транспорт средстволары, квалификациялы кадрҙар етешмәй. Мохтажлыҡтарҙы еңә барып, эшселәр үҙҙәрен аямай эшләй, күп уйлап табыусанлыҡ, инициатива күрһәтә, етешмәгән инструменттарҙы, машиналарҙың айырым деталдәрен үҙҙәре яһай. Был тырышлыҡтар тиҙҙән тәүге уңыштар килтерә. 1922 йылда ҡала электр һәм водопровод станцияларында, күн заводтарында, 1-се һаплы дәүләт заводында, тимер юл һәм башҡа предприятиеларҙа ремонт эштәре яңынан башлана. 1922—1923 йылдарҙа һыра ҡайнатыу һәм таҡта ярыу заводтары, фанера фабрикаһы, 4-се һәм 19-сы һанлы тирмәндәр сафҡа баҫа.

Һәр бер предприятиеның эшләй башлауы өфөләр өсөн байрамға әүерелә. 1922 йылдың 8 ноябрендә яңы асылған «Октябрьский натиск» типографияһы бинаһы алдында бик ҙур митинг була. Ул Зенцов урамы, 22-се йортта (хәҙер Ленин урамы, 24-се йорт) урынлашҡайны. Был көндө бөтә хеҙмәтсән Өфө печатниктарҙы уларҙың тор-

---

[1] «Власть труда», 1923, 17 ғинуар.
[2] ЦГА БАССР, ф. 202, оп. 1, д. 148, л. 16.

мошондағы шатлыҡлы ваҡиға менән ҡотлай. Фанера фабрикаһының яғынан аяҡҡа баҫыуын эшселәр тантаналы белдәләйҙәр [1].

1925 йылдың башына ҡаланың иң эре промышленность предприятиелары, нигеҙҙә, аяҡҡа баҫтырыла. 1-се һанлы дәүләт заводы двигателдәр, ауыл хужалығы машиналары эшләп сығара башлай. Ағас эшкәртеү тармағында дүрт таҡта ярыу заводы һәм фанера фабрикаһы эшләй. Был предприятиелар урындағы баҙарға һәм ситкә сығарыуға төҙөлөш материалдары етештерә. Силикат промышленносында ике кирбес заводының береһе эшләй. Аҙыҡ-түлек промышленносын он тартыу, араҡы ҡыуыу һәм һыра ҡайнатыу предприятиелары тәшкил итә.

Ҡала промышленносын аяҡҡа баҫтырыуҙа ирешелгән уңышлыҡтар продукция эшләп сығарыуҙы байтаҡҡа арттырыуға булышлыҡ итә. Уның үҫеше 1924/25 хужалыҡ йылының беренсе кварталында, 1923/24 йылдың беренсе кварталы менән сағыштырғанда, 64 процент тәшкил иткән [2]. 1925 йыл Өфө промышленносы өсөн һынылыш йылы була. Күп кенә предприятиелар тәү башлап файҙа ала.

Промышленностың күтәрелеүе менән бергә эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр һаны ла арта бара. Уларҙың сафтары тулыланыу Ҡыҙыл Армиянан демобилизацияланған кадровый эшселәрҙең ҡайтыуы, производствоға йәштәрҙе, ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм эшһеҙҙәрҙе йәлеп итеү иҫәбенә барған. 1925 йылда Өфөнөң эре дәүләт промышленносы предприятиеларында, тимер юл һәм һыу транспортында 6 меңдән ашыу кеше эшләгән була [3].

1925 йылда, совет кешеләренең героик хеҙмәте арҡаһында, халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу тамамлана яҙа. Шуға бәйле рәүештә партия алдына артабанғы үҫеш перспективалары тураһындағы мәсьәлә килеп баҫа. ВКП(б)-ның 1925 йылдың декабрендә булған XIV съезы илде социалистик индустриялаштырыуға курс ала.

Съезд йомғаҡтары Өфө ҡала партия активында һәм хеҙмәтсәндәрҙең күп кешеле йыйылыштарында киң тикшерелә һәм хуплана. ВКП(б)-ның XI Башҡортостан өлкә конференцияһы (1926 йыл, декабрь) республика промышленносын аяҡҡа баҫтырыуҙы тамамлауҙың һәм реконструкциялауға күсеүҙең конкрет юлдарын билдәләй. Өфөлә ҡайтанан ҡорамалландырыу һәм реконструкциялау беренсе сиратта тимер юл мастерскойҙарында, «Октябрьский натиск» типографияһында, күн заводтарында һәм 1-се һанлы дәүләт заводында йәйелдерелә.

Аяҡҡа баҫтырыу һәм реконструкциялау эштәренең көсәйеүе тулайым продукция күләменең артабан тиҙ үҫеүен тәьмин итә. Быны түбәндәге мәғлүмәттәр раҫлай: 1923/24 йылдан алып 1927/28 хужа-

---

[1] «Власть труда», 1922, 20 ноябрь.
[2] «Бюллетень БЦСУ», 1925, № 18, 1-се бит; № 23—24, 24, 25-се биттәр.
[3] ПА БОК КПСС, ф. 377, оп. 1, д. 184, л. 379; «Бюллетень БЦСУ», 1926, № 27—28, 112-се бит.

лыҡ йылдары эсендә етештереү 1-се һанлы дәүләт заводында 3,5 тапҡырға, күн заводтарында 4 тапҡырға, таҡта ярыу заводтарында 4,5 тапҡырға [1] арта һ. б.

Бер үк ваҡытта металл, ағас, малсылыҡ продукттары һ. б. эшкәртеү менән бәйләнгән кустарь промыслалар ҙа барлыҡҡа килә. Ҡаланың күн иләү предприятиелары урындағы баҙарҙы ғына тәьмин итмәйҙәр, бәлки иләнгән күндәрҙе ҙур булмаған партиялар менән Украинаға, Урта Азияға ебәреп торалар. 1925 йылда Өфөлә —25 кооператив һәм 746 шәхси промышленность предприятиелары, шул иҫәптән өҫ кейемдәре етештереү буйынса —339, металл эшкәртеүсе —116, аҙыҡ етештереүсе —111, күн иләүсе —54, ағас эшкәртеүсе 45 [2] һ. б. предприятиелар була. Бөтә был предприятиелар ваҡ була. Уларҙың һәр ҡайһыһында уртаса 1—2 кеше эшләй, ә был ваҡытта дәүләт предприятиеларында 60—70 кеше хеҙмәт итә. 1925 йылда Өфөнөң шәхси заведениеларында, тулы булмаған мәғлүмәттәр буйынса, 1036 эшсе эшләй [3]. Шәхси ваҡ промышленностың үҫеүе билдәле дәрәжәлә капиталистик элементтарҙы көсәйтә, ләкин унда ул киң ҡулланыу тауарҙарын етештереүҙе арттырыу өсөн өҫтәлмә мөмкинлек аса.

Экономиканың уңышлы аяҡҡа баҫтырылыуы һәм промышленность продукцияһын эшләп сығарыуҙы даими арттыра барыу Өфө хеҙмәтсәндәренең фиҙакәр хеҙмәте арҡаһында мөмкин була. Промышленносты һәм ҡала хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙа эшселәрҙең күрһәткән хеҙмәте юғары баһалана. Уларҙың күбеһе премия ала, Ҡыҙыл таҡтаға индерелә, ә иң яҡшыларына Хеҙмәт Геройы тигән почетлы исем бирелә. 1922 йылдың апрелендә был исемгә «Верный», «Зенит», «Стәрлетамаҡ» пароходтары командаларының 18 ағзаһы лайыҡ була. Профессиональ союздарҙың Өфө губерна советы ҡарарында: «а) пароходтарҙың эште срогынан алда үтәгән, хеҙмәт тәртибен һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреп, башҡаларға өлгө булған командаларының интенсивлығын иҫәпкә алып, бөтәһен дә Ҡыҙыл таҡтаға индерергә; б) уларға бүләк рәүешендә премия: һәр командаға 2,5-әр млн. һум аҡсалата һәм һәр береһенә 1,5-әр бот он, берәр пар эске кейем, берәр пар... ботинка бирергә» [4], — тиелгәйне. Тимер юл мастерскойҙарында слесарҙар Н. А. Шатунов, Ф. П. Трясоногов, токарҙар Ф. Ф. Инякин, Ф. В. Медведев, А. Я. Козлов Хеҙмәт Геройы тип атала башлайҙар [5].

---

[1] Башҡортостанда ун биш йылда социалистик төҙөлөш. Экономик-статистик белешмә. М., 1934, 12, 13-сө биттәр.

[2] «Бюллетень БЦСУ», 1925, № 21—22; 40, 41-се биттәр; 1926, № 27—28, 112-се бит.

[3] ПА БОК КПСС, ф. 377, оп. 1, д. 184, л. 379; «Бюллетень БЦСУ», 1926, № 27—28, 112-се бит.

[4] ЦГАОР СССР, ф. 5451, оп. 41, д. 172, л. 58.

[5] «Красная Башкирия», 1926, 7 ноябрь, 21 декабрь.

Хеҙмәт Геройҙарын тантаналы рәүештә котлау тормошта яңы күренешкә әүерелә. Ул хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәт тәрбиәләүгә булышлыҡ итә.

М. И. Калинин.



РКП(б) Үҙәк Комитеты Политбюроһы ағзаһы, СССР Үҙәк Башҡарма Комитеты Председателе М. И. Калининдың 1923 йылдың декабрендә республикабыҙға килеүе эшселәрҙең хеҙмәт активлығын күтәреүҙә, Өфөнөң политик тормошонда ҙур роль уйнай. Ул ҡаланың коммунистары йыйылышында сығыш яһай, Башҡорт АССР-ы Советтарының IV съезында ҡатнаша, хеҙмәтсәндәр менән осраша. Республиканың «Власть труда» газетаһы Бөтә Союз старостаһының тимер юлсыларҙа булыуы тураһында бына нәмәләр яҙа: «Сәғәт 3-тә бөтә мастерскойҙарҙа ла эштән туҡтанылар. Йыйыу цехы ғәҙәттәгесә йыйылыш өсөн урын булып хеҙмәт итә. Бөгөн бында бөтә хеҙмәт иткән урындарынан төркөм-төркөм булып эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр ағыла. Бер нисә минуттан йыйыу цехы халыҡ менән тулды, ҡайҙа етте шунда — тендерҙа, паровозда, кранда урынлаштылар. Трибунаны эшселәр уратып алған, һәр кемдең яҡыныраҡ баҫып, Калининды күргеһе килә. Калинин килә! Бышылдап әйтелгән был һүҙҙәр бик тиҙ ауыҙҙан ауыҙға йыйыу цехы буйлап таралды, һәм 3000 кеше бөтә иғтибарҙарын трибунаға йүнәлтте»[1]. М. И. Калинин ике сәғәттән ашыу һөйләй. Тимер юлсыларҙы халыҡ-ара һәм эске хәл менән ентекләп таныштырғандан һуң, ул үҙенең сығышын хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрергә саҡырып тамамлай: «Бында беҙҙең көрәштең тәүге баррикада осоронда булған кеүек ябай массовый баҫым ғына аҙ, ул саҡта дошманға массовый баҫым менән мәсьәлә хәл ителә ине. Хәҙерге мәлдә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн тағы ла ҙурыраҡ ижади камиллыҡ кәрәк. Бында һүҙ һөйләү һәм теләк кенә аҙ, ә эшкә тәрән ойошҡанлыҡ менән яҡын килә белеү кәрәк»[2].

Промышленность предприятиеларының ритмлы эшләүен юлға һалыуҙа, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә, эшләп сығарылған продукцияның үҙкиммәтен кәметеүҙә һәм сифатын яҡшыртыуҙа, яңы хеҙмәт күнекмәләре тәрбиәләүҙә производство кәңәшмәләренең әһәмиәте бик ҙур. Өфөлә тәүге производство кәңәшмәләре 1924 йылда тимер юл мастерскойҙары менән «Октябрьский натиск» типография-

---

[1] «Власть труда», 1923, 7 декабрь.
[2] М. И. Калинин в Башкирской АССР, 117-се бит.

һында барлыҡҡа килә. 1925 йылға улар инде ҡаланың бөтә эре предприятиеларында тиерлек үткәрелә башлай [1].

1926 йылда тимер юл мастерскойҙарының производство кәңәшмәһе «Станок — эшсенең ҡәҙерле балаһы» тигән лозунг күтәреп сыға. Бында аҙнаның һәр шәмбеһендә ҡорамалдарҙы яҡшылап таҙарталар, һәр эшсе үҙенең станогын таҙа тоторға йөкләмә ала. Һөҙөмтәлә инструменттар әҙерәк ватыла һәм сырье тотоноу кәмей. Эшселәрҙә яңы тойғо — үҙенең туған производствоһы өсөн яуаплылыҡ тойғоһо барлыҡҡа килә. Эштә һаҡсыллыҡ һәм йыйнаҡлыҡ ҙур средстволарҙы экономияларға мөмкинлек бирә. Әгәр паровозды капиталь ремонтлауға 1926 йылдың I кварталында 14 мең һум тотонолһа, III кварталында иһә 9 мең һум тотонола, тауар вагонын ремонтлау хаҡы шуға ярашлы рәүештә 340 һумдан 225 һумға төшә. Мастерскойҙар айына 150 вагон ремонтлап сығара [2]. Бракты 10 проценттан 4,5 процентҡа тиклем кәметеү 1-се һанлы дәүләт заводы производство кәңәшмәһенең төп ҡаҙанышы була [3].

Яңы шарттарҙағы хеҙмәт эшселәрҙә бығаса күрелмәгән инициатива, уйлап табыусанлыҡ тыуҙыра. Фанера фабрикаһының производство кәңәшмәһендә ҡабул ителгән тәҡдимдәрҙе үтәү ағас материалдар эшләп сығарыуҙы байтаҡҡа арттыра, предприятиены материалдар менән тәьмин итеүҙе яҡшыртырға ярҙам итә. Тимер юл мастерскойҙары эшселәренең тәҡдиме буйынса цехтар араһына тар колеялы юлдар һалына, вагон тележкалары электр менән йөрөүгә күсерелә. 1925 йыл өсөн хеҙмәт етештереүсәнлеге бында 15—20 процентҡа күтәрелә. 2-се һанлы ағас заводы эшселәренең 16 тәҡдимен тормошҡа ашырыу 10 мең һум экономия бирә [4] һ. б.

Рационализаторҙар түңәрәктәре төҙөлә башлай. Шундай беренсе түңәрәк 1927 йылдың сентябрендә тимер юл мастерскойҙарында барлыҡҡа килә. Халыҡ хужалығының Башҡортостан советы ҡаршыһында эшсе рационализаторҙарга ярҙам итеү бюроһы ойошторола. 1927 йылда ҡаланың эре предприятиеларында рационализаторҙарҙы бүләкләү өсөн премия фондтары бүленә. «Правда» газетаһы 1927 йылда иғлан иткән конкурста Өфө рационализаторҙары актив ҡатнаша.

20-се йылдарҙың икенсе яртыһында Өфөлә производство кәңәшмәләре ҡатнашлығында йыш ҡына иң яҡшы завод, фабрика исеме өсөн конкурстар үткәрелә. Шундай конкурстарҙың береһен 1927 йылдың 15 сентябрендә «Красная Башкирия» («Ҡыҙыл Башҡортостан») газетаһы иғлан итә. Ул үҙкиммәттең хәрәкәт динамикаһын, уның кәмеүен тотҡарлаусы факторҙарҙы, рационализаторлыҡ эштәренең

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 173, оп. 1, д. 68, л. 5.

[2] Формирование и развитие советского рабочего класса Башкирской АССР. Часть первая. Рабочий класс Башкирии в борьбе за социализм. 1917—1950 гг. Өфө, 1971, 79-сы бит; «Красная Башкирия», 1926, 9 декабрь.

[3] ЦГА БАССР, ф. 172, оп. 1, д. 245, л. 8.

[4] Шунда уҡ, ф. 394, оп. 1, д. 172, л. 6; «Красная Башкирия», 1925, 8, 21 декабрь.

Өфө ҡала Советының почетлы председателе М. И. Калининдың билеты.




барышын, производствоны яҡшыртыу эшендә эшселәрҙең үҙ аллылығы эффектлылығын, хеҙмәт дисциплинаһы торошон, алдынғы коллективтарҙың ҡаҙаныштарын таратыуҙы өйрәнеүҙе үҙ алдына маҡсат итеп ҡуя. Һәр көн тиерлек газетала предприятие директорҙарының отчеттары, эшсе корреспонденттарҙың үҙ завод һәм фабрикалары тормошо тураһында мәҡәләләре баҫылып тора. Конкурс комиссиялары ағзалары предприятиеларҙың торошон тикшерәләр. 1928 йылдың 5 мартында жюри һөҙөмтәләрҙе иғлан итә. Тимер юл мастерскойҙары еңеүсе тип табыла.

Бер үк ваҡытта предприятиеларҙың үҙҙәрендә конкурстар йәйелдерелә. 1928 йылдың ғинуарында фанера фабрикаһының производство комиссияһы иң яҡшы эшсе исеменә конкурс иғлан итә. Февралдә комсомол ячейкаһы инициативаһы буйынса тимер юл мастерскойҙарында иң яҡшы производственник-йәмәғәтсе (производствола эшләүсе-йәмәғәт эшендә ҡатнашыусы) исеменә конкурс башлана. Конкурс

шарттары түбәндәгесә ине: эшкә намыҫлы мөнәсәбәт, материал һәм инструменттарҙы һаҡсыл файҙаланыу, эшкә сыҡмау һәм буш тороуҙарға юл ҡуймау, производство кәңәшмәләрендә актив ҡатнашыу. Махсус комиссия конкурс шарттарының үтәлеүен күҙәтеп тора. 50-нән ашыу йәш эшсе почетлы исемгә дәғүә итә, иң яҡшы 14 кеше ул исемгә лайыҡ була [1].

Бындай конкурстар хеҙмәткә яңы мөнәсәбәт тәрбиәләүгә, производство эшен йәйелдереүгә ярҙам итә.

Яңы экономик политика ҡалала сауҙаны йәйелдереп ебәрә. Элекке хосуси магазиндар, кибеттәр һәм ларектар эшләй башлай, яңылары асыла. 1923 йылда Өфөлә 1256 сауҙа йорто иҫәпләнә, уларҙың 25-е дәүләттеке, 12-һе кооперативтыҡы һәм 1219-ы айырым кешеләрҙеке була [2]. Һуңғылары ит, балыҡ, һөт продукттары, йәшелсә, емеш-еләк, булкалар һәм кондитер әйберҙәре, сәй, йәнлек тиреләре, баш кейемдәре, өй кәрәк-яраҡтары менән сауҙа итеүҙе тулыһынса үҙ ҡулдарында тота. 20-се йылдарҙың беренсе яртыһында бер туған Ғәлекәевтәрҙең, Миңлебаевтарҙың туҡыма магазиндары, Папин һәм Вахмундарҙың Октябрь революцияһы урамындағы кондитер магазиндары, Нагель һәм К°-ларҙың Егор Сазонов (хәҙерге Коммунистик урамы) урамындагы колбаса магазиндары киң таныла.

Ҡағиҙә булараҡ, хосуси заведениелар ваҡ булалар, әммә улар ваҡлап һатыу сауҙаһында көслө позицияларҙы алып торалар. 1922 йылдың аҙағында Өфөлә хосуси сауҙагәрҙәр ҡалалағы бөтә ваҡлап һатыу тауар әйләнешенең 77,4 процентын үҙ ҡулдарында тота, дәүләт сауҙаһына — 19,1, кооперация сауҙаһына 3,5 процент тура килә [3]. Хосуси сектор күмәртәләп һатыу сауҙаһында ла үҙ йоғонтоһон киңәйтә. 29 күмәртәләп һатыу предприятиеларынан туҡыма, галантерея, бакалея, ҡыл әйберҙәр һәм яртыһынан да күберәк икмәк менән һатыу итеүҙе монополиялаштырған 10 предприятие улар өлөшөнә тура килә [4]. 1923 йылда Өфө сауҙа буржуазияһы үҙенең берләшмәләрен төҙөй. «Ҡыл әйберҙәр товариществоһына»,— ҡыл әйберҙәр, «Работник» берләшмәһенә москатель тауарҙар һатыуға махсуслашҡан предпринимателдәр инә, «Сауҙа эше» бакалейщиктарҙы берләштерә. 1924 йылда был берләшмәләр үҙҙәренең тауар әйләнештәре буйынса дәүләт һәм кооператив күмәртәләп һатыу сауҙаһын ҡыуып етә яҙалар [5].

Хосуси сауҙа капиталына билдәле шарттарҙа булһа ла юл ҡуйыу (дәүләт промышленносы менән турапан-тура бәйләнеште бөтөрөү, налог һалымы, аренда хаҡтарын, тарифтарҙы дифференциялаштырыу һ. б.) үҙендә ҡайһы бер ҡурҡыныс һаҡлай ине. Хосуси сауҙагәр социалистик промышленность менән ваҡ тауар производствоһы ара-

---

[1] «Красная Башкирия», 1928, 3 ғинуар, 19 ғинуар, 7 август.
[2] «Бюллетень БЦСУ», 1923, № 1—2, 56, 60, 61-се биттәр.
[3] Шунда уҡ, 1923, № 4, 23-сө бит.
[4] Торговля Башкирии в цифрах. Өфө, 1924, 9-сы бит.
[5] Шунда уҡ, 10-сы бит.

һында ярaштырыусы булып китә. Шуға күрә ҡала менән ауыл араһында тауар әйләнешенә зыян килтермәйенсә, хеҙмәтсән массаларҙың һатып алыу мәнфәғәттәрен сикләмәйенсә, хосуси капиталды ҡыҫырыҡлап сығарыу Совет власының бурысы булып тора. Хосуси сауҙаны дәүләт сауҙаһы менән алыштырырға кәрәк ине. РКП(б)-ның XIII конференцияһы (1924 йыл, ғинуар): «...сауҙаны ойоштороу ғәҙәттән тыш әһәмиәткә эйә, сөнки сауҙа аппараты аша национализацияланған промышленность менән крәҫтиән баҙарының тура-нан-тура элемтәһе урынлашырға тейеш. Кооперацияны һәм дәүләт сауҙаһын һәр төрлө көсәйтеү... социалистик хужалыҡ сфераһын киңәйтеүҙе сағылдыра» [1], — тип билдәләй.

Баҙарға эйә булыу мәсьәләләре Башҡортостан өлкә партия ойошмаһының да иғтибар үҙәгендә була. Өфөлә хосуси сауҙагәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарыу һәм совет сауҙаһын ойоштороу ҡаты синфи көрәш эсендә бара. Хосуси сауҙагәрҙәрҙең коммерция эштәрендә ҙур ғына тәжрибәләре була, улар промышленность тауарҙары етешмәүҙән, дәүләт һәм кооператив ойошмаларының хаталарынан файҙалана. Шундай шарттарҙа партия һәм совет органдары дәүләт һәм кооператив сауҙаһын көсәйтеү буйынса тотош экономик саралар системаһын күрә: промышленность тауарҙарына һәм ауыл хужалығы продукттарына баҙар хаҡтарын регулирлай, промышленность тауарҙарына ваҡлап һатыу хаҡтарын кәметә, «Башкнига», «Башторг», «Хлебопродукт» кеүек дәүләт сауҙа берекмәләрен, «Горпотреб», «Железнодорожный кооператив» һымаҡ кооператив берекмәләрҙе төҙөй. Берекмәләр фабрика-завод промышленносы өсөн һатыуҙы, сауҙа-әҙерләү һәм кредит операцияларын еңеләйтә.

Яңы дәүләт һәм кооператив магазиндары асыла. 1925 йылда бер Өфө ҡала үҙәк кооперативы ҡарамағында ғына 24 магазин була. Улар ҡала уртаһында ла (Үрге Сауҙа майҙанында, Карл Маркс, Егор Сазонов урамдарында), ситендә лә (Көнсығыш биҫтәһендә, Нижегородкала, Затонда) урынлашҡан була. Дәүләт һәм кооператив магазиндары араһында махсуслашҡандары: ит, он, колбаса, һауыт-һаба-хужалыҡ тауарҙары магазиндары ла эшләй. Кооперативтар тауарҙы халыҡҡа кредитҡа һата башлай. Был саралар хосуси сауҙагәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарыуға көсергә мөмкинлек бирә. 1922—1928 йылдар эсендә ҡала тауар әйләнешендә дәүләт-кооперация секторының тотҡан урыны 22,6 проценттан 66 процентҡа тиклем үҫә, ә хосуси секторҙыҡы 77,4 проценттан 34 процентҡа тиклем кәмей [2].

Промышленносты, ҡала хужалығын аяҡҡа баҫтырыу, сауҙаның үҫеүе менән, Өфө халҡы арта бара (был процестың үҙ үҙенсәлектәре булһа ла), 1920 йылда ҡалала 93 056 кеше йәшәй [3]. Ләкин 1923 йыл-

---

[1] КПСС съездар, конференциялар һәм Үҙәк Комитет пленумдары резолюцияларында һәм ҡарарҙарында, 8-се баҫма, 2-се том. М., 1970, 523-сө бит.

[2] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 21, л. 30; «Бюллетень БЦСУ», 1923, № 3, 23-сө бит.

[3] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 1, д. 84, л. 113.

ға, аслыҡ эҙемтәләренә бәйле рәүештә, халыҡ һаны 8 меңгә тиерлек кәмей һәм бөтәһе 85 360 кешегә етә [1]. Тик 1923 йылдан ғына Өфө халҡы арта башлай. 1926 йылға тиклем ул йылына 4 меңдән ашыу кешегә, йәғни 3,8 процентҡа, артып тора. Был ошо уҡ осорҙа Ҡазандағы (1,9 процент), Чебоксарҙағы (1,0 процент) халыҡтың йыл һайын артыуынан юғары, ләкин Свердловскиҙың (10 процент), Силәбенең (6,8 процент) күрһәткестәренән күпкә түбән ине [2]. 1926 йылда Өфөлә 98 537 кеше иҫәпләнә [3].

Ҡала халҡының социаль һәм милли составында ҡайһы бер үҙгәрештәр булып үтә. Әгәр 1923 йылда эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең тотҡан урыны 41,1 процент тәшкил итһә, 1926 йылда иһә ул 49,4 процентҡа саҡлы үҫә. Өфөнө Башҡортостан республикаһының баш ҡалаһына әйләндереү ҡала халҡы араһында башҡорт һәм татарҙарҙың күбәйеүенә булышлыҡ итә. 1920 йылда Өфөлә 1200 башҡорт (1,3 процент), 10 300 татар (11,1), 72 900 рус, украин һәм белорус (77,5 процент), 130 сыуаш, мари һәм мордва (0,1 процент) һәм башҡа халыҡтар йәшәй. 1926 йылда башҡорттар — 4600 (4,7 процент), татарҙар — 14 600 (14,8 процент), рус, украин һәм белорустар — 76 500 (77,6), сыуаш, мари һәм мордвалар 800 кеше 0,8 процент) булып китә [4].

Өфө халҡының артыуы торлаҡ проблемаһын киҫкенләштерә. 1924 йыл башына ҡалала торлаҡ майҙаны (коммуналь йорттарҙа ла, шәхси йорттарҙа ла), 1913 йыл менән сағыштырғанда, хатта 20 процентҡа ҡыҫҡара [5].

Ҡала Советының торлаҡ фонды ҙур булмай. Ул бөтә торлаҡ фондының 8 процентын тәшкил итә. Етмәһә, бөтә коммуналь йорттар ҙа ремонт талап итә. Торлаҡ кризисынан беренсе сиратта шәхси йорт биләүселәрҙән бүлмәләр, мөйөштәр алып торорға мәжбүр булған эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр интегә. Торлаҡ майҙаны ҡотороноҡ спекуляция предметы булып әүерелә.

Ҡала Советы хеҙмәтсәндәрҙең хәлен еңеләйтеү өсөн һәр төрлө саралар күрә. Эшселәрҙе элекке буржуазия йорттарына бер ни тиклем күсереп урынлаштыралар, ҡала эсендә учреждениелар тығыҙлатыла һәм шәхси йорттарҙың 10 процент торлаҡ майҙаны бүлеп алына. Былар бөтәһе лә эшсе ғаиләләренең бер өлөшөнөң тормош шарттарын бер аҙ яҡшырта, ләкин торлаҡ кризисын тулыһынса хәл итә алмай. Өфөләге былай хәл урындағы күренеш кенә булмай. Торлаҡ проблемаһы бөтә ил буйынса үтә ныҡ киҫкенләшә. Партия һәм хөкүмәт уны хәл итеү өсөн эске ресурстарҙы мобилизациялау кәрәклегенә күрһәтә.

---

[1] «Бюллетень БЦСУ», 1923, № 1—2, 2—3-сө биттәр.

[2] Социалистическое строительство СССР. Статистический сборник. М., 1934, 356—367-се биттәр.

[3] Социалистическое строительство Башкирии за пятнадцать лет, 57-се бит.

[4] Уфа за годы Советской власти (Статистический справочник). 18-се бит.

[5] «Бюллетень БЦСУ», 1923, № 1—2, 4-се бит; «Власть труда», 1924, 10 июль.

Өфөлә Башҡорт АССР-ы Халыҡ Комиссарҙары Советы ҡаршыһында «Эшселәр өсөн торлаҡ тоҙөүгә булышлыҡ итеү комитеты» төҙөлә, «Тимер юлсы», «Водник», «Типограф», «Новый быт» һәм башҡа торлаҡ-төҙөлөш товариществолары ойошторола. Улар ҡаланың торлаҡ фондын аяҡҡа баҫтырыу буйынса эш йәйелдерең ебәрә. 1925—1927 йылдарҙа торлаҡ-тоҙөлөш товариществолары дөйөм майҙаны 73 мең квадрат метр булған 363 торлаҡ йортон ремонтлай һәм йөҙҙәрсә эшсе ғаиләләрен торлаҡ менән тәьмин итә [1].

Аҡрынлап яңы төҙөлөш тә йәйелдерелә. 1923—1930 йылдар эсендә Өфөлә 283 йорт һалына, шуларҙың 35-ен ҡала Советы һәм учреждениелар, 6-һын төҙөлөш кооперативтары һәм 242-һен айырым кешеләр төҙөй. Иҫке Өфө менән Көнсығыш биҫтәһе яңы төҙөлөш райондары булып әүерелә. 1927 йылға ҡаланың торлаҡ фонды 9816 йорттан тора, уларҙың байтаҡ өлөшөн шәхси кешеләрҙең бер ҡатлы ағас өйҙәре тәшкил итә. Бөтә Өфөгә 484 кирбес бина, шуларҙың ни бары 41-е өс ҡатлы ине.

Бер үк ваҡытта йәмәғәт биналарын аяҡҡа баҫтырыу эштәре алып барыла. Ҡала коммуналь хужалығы мәғлүмәттәре буйынса 1923 йылдың октябренән алып 1924 йылдың августына тиклем 58 объект (больницалар, мәктәптәр, Луначарский исемендәге баҡсала йәйге театр һ. б.) ремонтлана [2]. 1923—1925 йылдарҙа Ағиҙел йылғаһында Вавилов һәм Ырымбур переправаларында ике яңы йөҙмә күпер, Сафронов пристаненда иген һалыу һәм тауарҙар һаҡлау өсөн бик ҙур бетон склад төҙөлә.

Өфө халҡын һыу менән тәьмин итеүгә ҙур иғтибар бирелә. 1921 йылда ҡала водопровод станцияһының ҡеүәте тәүлегенә 200 куб. метр самаһы була. Ағиҙел йылғаһында, тимер юл күпере районында, урынлашҡан пар насос станцияһы һыуҙы будкаға ҡыуа, унан уны ҡала халҡына тараталар. Водопровод бөтәһе 25 километр оҙонлоҡта була. 1923 йылда уға квартира һәм учреждениеларҙың ни бары 2,4 проценты ғына тоташтырыла. Шуныҡтан халыҡтың күбеһе айырым һыу ташыусыларҙың хеҙмәтенән йәки ҡоҙоҡтарҙан файҙалана. 1924—1928 йылдарҙа водопровод селтәренә яңы предприятиелар һәм учреждениелар тоташтырылған. Эшселәр йәшәгән ҡала ситендә — Көнсығыш һәм Төньяҡ биҫтәләре, Оло Себер һәм Тракт (хәҙер Урицкий урамы) урамдары халҡын һыу менән тәьмин итеүҙе яҡшыртыу тураһында айырыуса хәстәрлек күрелә. Был райондарҙа иҫке ҡоҙоҡтар таҙартыла, яңылары ҡаҙыла, водопровод будкалары төҙөлә. 1928 йылға водопровод станцияһы халыҡҡа бирелә торған һыу миҡдарын, 1921 йыл менән сағыштырғанда, ике тапҡырға тиерлек арттыра.

---

[1] «Красная Башкирия», 1925, 5 май, 5 август; 1927, 17 сентябрь мәғлүмәттәре буйынса иҫәпләнде.

[2] «Власть труда», 1923, 13 сентябрь; 1924, 21 сентябрь; «Красная Башкирия», 1925, 4 июль.

Ҡаланы электр менән тәьмин итеүҙе яҡшыртыу буйынса саралар күрелә. 1923 йылдың декабрендә тимер юл вокзалына сиктәш торған торлаҡ йорттарҙа һәм Өфөнөң башҡа ҡайһы бер райондарында тәү тапҡыр электр лампалары тоҡана. 1926 йылға электрлаштырылған биналар һаны, 1913 йыл менән сағыштырғанда, дүрт тапҡырҙан да ашыуға үҫә. Электр энергияһын производство маҡсаттарында ҡулланыу ошо уҡ осорҙа ос тапҡырға үҫә. Шулай ҙа ҡаланың электр энергияһына мохтажлығы һаман арта бара. Иҫке электр станцияһы уны тәьмин итә алмай ине инде. 1926 йылда 294,4 киловатт ҡеүәтле ярҙамсы электр станцияһы төҙөлә [1].

Республика халыҡ хужалығының һәм ҡаланың үҙенең үҫә барыусы ихтыяждары элемтәне тиҙ аяҡҡа баҫтырыуҙы һәм артабан үҫтереүҙе талап итә. 1928 йылдың аҙағына Өфө менән Бөрө, Стәрлетамаҡ, Йылайыр һәм Тамъян-Ҡатай кантондары араһында ҡала-ара телефон элемтәһе юлға һалына. Өфө телефон селтәре ҡайтанан йыһазландырыла. Аяҡҡа баҫтырыу осороноң аҙағына ҡаланы радиолаштырыуҙа ла ҡайһы бер уңыштарға өлгәшелә.

Егор Сазонов, Пушкин, Зенцов, Бекетов (хәҙерге Социалистик урамы), Оло Илья, Өфө, Александровка, Достоевский һәм Аксаков урамдары һәм тротуарҙары ремонтлана. Ҡаланың үҙәк урамдарынан береһе Оло Ҡазан урамына Урал һуйыр таштары түшәлә. 1928 йылда урамдарҙың дөйөм оҙонлоғо 153,6 километр тәшкил итә, шуның 31 километрына таш түшәлгән була [2].

Элекке скверҙар һәм баҡсалар яңыртыла. Луначарский исемендәге, Азатлыҡ, Якутов исемендәге парктар тәртипкә килтерелә һәм ҡоймалап алына. Ҡала Советы бинаһы алдында арҡыс-торҡос таҡта эскәмйәләр генә торған бысраҡ майҙан урынына өфөләр яңы сквер яһайҙар (хәҙер В. И. Ленин исемендәге сквер). Урамдарға, парктарға ағастар, сәскәләр ултыртыла. Ултыртылған йәшел ағастарҙың дөйөм майҙаны 1926 йылда 30 гектар тәшкил итә.

Ҡаланың санитария торошона ҙур иғтибар бирелә. Махсус санитар милицияһы йорттар идаралығының тапшырылған участкаларҙа таҙалыҡ урынлаштырыу эшен күҙәтә. Урамдар таҙарып китә. Йәйгеһен уларҙы һеперә, ә ҡышын ҡарҙан таҙарта башлайҙар. Ҡаланы төндә яҡтыртыу аҡрынлап яйға һалына һәм ул яҡтыра төшә. 1925 йылдың аҙағына Өфө 67 фонарь менән яҡтыртыла (1923 йылда улар 20 була).

20-се йылдарҙың уртаһына ҡаланың тышҡы күренеше күҙгә күренеп яҡшыра. «Өфө танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе: таҙарҙы, ҡупшыланды — оҙаҡ йоҡонан уянған кеүек булды. Өс йылда күп нәмәләр эшләнде: панелдәр төҙәтелде, баҡсалар таҙартылды, ҡоймалап алынды, бик күп йорттар ремонтлана...»,— тип яҙған 1924 йылдың 7 ноябрендә «Власть труда» газетаһы.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 804, оп. 2, д. 6, л. 183; «Власть труда», 1924, 15 октябрь.
[2] ЦГА БАССР, ф. 804, оп. 2, д. 428, л. 32.

Ҡаланы төҙекләндереүгә киткән сығымдар йылдан-йыл арта бара. Әгәр 1925/26 хужалыҡ йылында улар 86 мең һум тәшкил итһә, 1927/28 йылда иһә 142 мең һумдан ашып китә.

1924 йылдың июнендә Өфөлә тәү башлап үҙәк — тимер юл вокзалы — Сафронов пристане маршруты менән автобус йөрөй башлай. Линияла бер генә автобус йөрөй, ул да бик йыш ватылып тора. 1926 йылдан был маршрут буйынса автобустар регуляр йөрөй башлай. Шул уҡ ваҡытта Өфө менән Стәрлетамаҡ араһында автобус йөрөй башлай. Тәүге пассажир машиналары йөк автомобилдәренән ҡулайлаштырылған була. Йөктәр ҙә ташыла. Ләкин 5 машина * бөтә ҡаланың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә алмай. Шуға күрә 20-се йылдарҙа Өфөлә еңелгә йөрөүсе һәм йөк ташыусы извозчиктар ҡала транспортының төп төрө булған.

Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙағы уңышлыҡтар хеҙмәтсән массаларҙың тормош кимәлен күтәреүгә материаль шарттар тыуҙыра. Бөтәһенән элек, ул эш хаҡы күләменең артыуы аша, хеҙмәткә ҡарап бүлеүҙең социалистик принцибына ярашлы рәүештә, уның системаһын камиллаштырыу аша бара.

Граждандар һуғышы йылдарында аҡсаның осһоҙланыуы, продукттарҙың ныҡ етешмәүе арҡаһында натуралата (йыш ҡына тигеҙләүсе нормалар буйынса) түләүҙәр киң ҡулланыла. Яңы экономик политика индерелеү менән, предприятиеларҙы хужалыҡ иҫәбенә күсереү менән, промышленноста хеҙмәт шарттарын һәм хеҙмәткә түләүҙе регулирлауҙың граждандар һуғышына тиклем ҡулланылған коллектив-договор формаһы киң тарала. Коллектив договорҙарҙа эшкә алыу һәм эштән сығарыу шарттары билдәләнә. Профсоюз ағзалары был саҡта өҫтөнлөк алдылар: улар эшкә беренсе сиратта алыналар, ә эштән һуңғы сиратта сығарылалар. Хеҙмәт тураһындағы совет закондары нигеҙендә эш ваҡыты оҙонлоғо, эш хаҡы кимәле һәм формаһы билдәләнә.

СССР эре промышленносы эшселәренең уртаса айлыҡ номиналь эш хаҡы 1923/24 хужалыҡ йылынан алып 1926/27 йылдарға саҡлы 1,7 тапҡырға арта [1]. Өфөнөң цензлы промышленносында эшләүсе эшселәрҙең эш хаҡы ла яҡынса шундай уҡ темптарҙа күтәрелә. Айырым предприятиелар буйынса был күрһәткес юғарыраҡ була. Сөнки аяҡҡа баҫтырыу осоро шарттарында хеҙмәткә түләү производство тармаҡтары һәм предприятиелар буйынса киҫкен үҙгәреп торған.

Йыш ҡына эш хаҡының артыуы хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙән уҙып киткән. 1924 йылда Өфөнөң бөтә промышленносы буйынса был бәйләнешһеҙлек 15—20 процент тәшкил иткән. Былдай хәлдең сәбәптәре ҡайһы бер фабрика һәм заводтарҙың ҡорамалдары

* Өфө автопаркында 30 самаһы машина иҫәпләнеп, бишеһе генә эшкә яраҡлы булған.

[1] Труд в СССР. Статистический справочник. М., 1936, 96-сы бит.

торошо, сырье, квалификациялы эшсе көсө менән тәьмин ителеүҙең төрлөсә булыуында ине. Был уларҙың етештереү үҫешенең тигеҙ булмауына килтерә. Продукцияны реализациялау шарттары ҙур әһәмиәткә эйә була. Продукцияны баҙарҙа һатыу өсөн эшләп сығарыусы һәм унан юғары доход алыусы предприятиелар иң отошло хәлдә булып сыға.

Эш хаҡының артыуы эшсе ғаиләләренең аҡсалата средстволарында уның роле күтәрелеүгә килтерә. Бюджет тикшереүҙәре күрһәтеүенсә, 1923 йылда Өфөлә ғаилә башлығы булған эшсенең эш хаҡы бюджеттың керем өлөшөндә —59,2 процент, ә 1926 йылда инде 71,2 процент тәшкил иткән. Шул ваҡыт эсендә шәхси хужалыҡтан кергән аҡсаның өлөшө 14-тән 8,1 процентҡа тиклем кәмегән [1]. Расходтарҙың характеры ла үҙгәргән. Әгәр 1923 йылда ғаилә бюджетының уртаса 60 проценты аҙыҡ продукттарына, 23,2 проценты кейемһалымға тотонолһа, 1926 йылда иһә шуға ярашлы рәүештә 45,8 һәм 19,4 процент тотонолған. Шул уҡ ваҡытта торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға һәм культура ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә тотонолған сығымдар артҡан. Ашауҙың сифаты күтәрелгән: ит, май, йомортҡа ҡулланыу үҫкән [2].

Коммуналь хеҙмәтләндереү хаҡтарының төшөүе хеҙмәтсәндәрҙең аҡсаһын экономиялауҙа мөһим сығанаҡ булған. 1923 йылда Өфөлә йылытыуға һәм яҡтыртыуға ғаилә бюджетының уртаса 20,2 проценты тотолған, ә 1927 йылда инде ул 11,6 процент ҡына тәшкил иткән. Белем алыуға, ял итеүгә, дауаланыуға сығымдарҙы социалистик дәүләт үҙ өҫтөнә алғанлыҡтан, эшсе ғаиләһе бюджетында ул әҙме-күпме һиҙелерлек дәүмәлде тәшкил итмәгән.

Өфөләрҙә медицина хеҙмәтләндереүе яҡшырған. Иҫке амбулаториялар һәм больницалар ремонтланған, төҙөкләндерелгән, яңылары төҙөлгән. 1924 йылдың апрелендә Башҡорт АССР-ы Һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссариатында эшселәр медицинаһы (Рабмед) бүлексәһе ойошторола. Уның етәкселегендә ҡаланың байтаҡ предприятиеларында һәм эшселәр йәшәгән райондарҙа медпункттар һәм амбулаториялар асыла. 5 махсуслашҡан кабинеты булған беренсе шундай амбулатория 1924 йылда Өфөнөң иң күп халыҡ йәшәгән районында — Нижегородкала эшләй башлай [3]. Шул уҡ йылда үҙәк амбулатория ҡаршыһында тәү тапҡыр балалар теш дауалау кабинеты, аптека ойошторола, унда медицина ярҙамы күрһәтелә һәм дарыуҙар иң ҙур скидка менән һатыла.

Әсә менән бала һаулығы тураһында ҙур хәстәрлек күрелә. 1924 йылдың авгусында ҡалала беренсе бала табыу йорто асыла. Имсәк балаларын һәм уларҙың әсәләрен хеҙмәтләндереү өсөн махсус консультациялар, имсәк балалар йорто, һөт кухнялары ойошторола.

---

[1] «Бюллетень БЦСУ», 1924, № 6—7, 14-се бит; 1927, № 29, 74, 75-се биттәр.
[2] Шунда уҡ.
[3] «Власть труда», 1924, 21 ноябрь.

1923 йылда Өфөлә өс балалар баҡсаһы (унда 170 бала йөрөй) һәм бер ясле була [1]. Һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссариаты ҡаршыһында балалар һәм үҫмерҙәр һаулығын һаҡлау бүлеге төҙөлә. Балалар профилактикаһы амбулаторияһы асыла, ул йыл һайын ҡаланың бөтә районларында үҫмерҙәрҙе тикшереп тора.

1924 йылдың аҙағына Өфө халҡын 10 амбулатория һәм 10 больница (1-се һанлы Совет больницаһы — 180 койка, күҙ больницаһы — 50 койка, нервы-психиатрия больницаһы — 280 койка, туберкулез диспансеры һ. б.) хеҙмәтләндерә, уларҙа 98 врач эшләй [2].

1923 йылдан алып республиканың Һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссариаты Өфө халҡының хеҙмәтен һәм көнкүрешен сәләмәтләндереү буйынса саралар күрә башлай. Дауалау учреждениелары киң профилактика ойоштора: производствоның, көнкүрештең санитария торошон тикшерәләр, эшселәрҙең физик хәлен күҙәтәләр. Социаль ауырыуҙарға (туберкулез һ. б.) ҡаршы планлы рәүештә һөжүм башлапа. Ҡала туберкулез диспансеры ҡаршыһында — Социаль ярҙам советы, ә предприятиеларҙа тубячейкалар ойошторола. Социаль ярҙам советы туберкулез менән ауырыған эшселәрҙең тормош шарттарын тикшерә. Үтә мохтажлыҡ кисергәндәргә диспансер фондынан аҙыҡ, кейем, һауыт-һаба, дауаланыуға ссудалар бирелә. Туберкулезға ҡаршы көрәш өс көнлөктәре даими үткәрелеп тора, унда лекциялар уҡыла, медицина әҙәбиәте таратыла. 1924 йылдың ноябрендә Өфөлә туберкулез менән ауырыусыларҙы хеҙмәтләндереү өсөн — диетик ашханалар, ә 1925 йылдың башында өлкәндәр өсөн төнгө санаторий һәм балалар өсөн тубдиспансер асыла.

Предприятиеларҙа хеҙмәт шарттары яҡшыра, производствола имгәнеүҙәрҙең һәм ауырыуҙарҙың сәбәптәре бөтөрөлә бара. Хеҙмәтте һаҡлау органдарына тиҫтәләрсә коммунистар һәм комсомолецтар эшкә күсерелә, предприятиеларҙа хеҙмәтте һаҡлау буйынса комиссиялар төҙөлә. Улар хәүефһеҙлек техникаһы ҡағиҙәләрен боҙоуҙа ғәйепле кешеләргә, Хеҙмәт тураһында закондар кодексын һаҡламауы хосуси предпринимателдәргә ҡаты талаптар ҡуйған. 1924/25 хужалыҡ йылында ғына ла Өфөлә хеҙмәт закондарын боҙоуҙар тураһында 366 эш тыңланыла [3].

Ҡатын-ҡыҙ һәм үҫмерҙәр хеҙмәтен һаҡлауға айырыуса иғтибар бирелә. Ауыр һәм һаулыҡ өсөн зарарлы производстволарҙа ҡатын-ҡыҙҙар хеҙмәте тыйыла. Силикат заводтарында ҡатын-ҡыҙҙар зарарлы цехтарҙан башҡа эш урындарына күсерелә, ағас эшкәртеүселәрҙә улар өсөн утын һалыу нормаһы кәметелә һ. б. Ҡаланың бөтә дәүләт предприятиеларында ла тиерлек йөклө ҡатындарға — түләүле отпускылар, имеҙеүсе әсәләргә, балаларын имеҙеү өсөн, өҫтәлмә тәнәфес-

---

[1] «Бюллетень БЦСУ», 1924, № 4, 1—3-сө биттәр; 1927, № 29, 3-сө бит; ЦГА БАССР, ф. 444, оп. 1, д. 182, л. 86; «Власть труда», 1924, 20 август.

[2] ЦГА БАССР, ф. 202, оп. 1, д. 177, л. 168; «Власть труда», 1924, 10 июль, 21 декабрь.

[3] ЦГА БАССР, ф. 802, оп. 1, д. 151, л. 33; ф. 172, оп. 1, д. 218, л. 22.

тәр бирелә башлай. 1922 йылдан башлап тимер юл мастерскойҙарында, типографияларҙа, такта ярыу заводтарында балиғ булмағандар өсөн ҡыҫҡартылған эш көнө (4—6 сәғәт) урынлаштырыла. Үҫмерҙәр өҫтәлмә отпускылар менән файҙалана башлай. Күп кенә предприятиеларҙа йәш эшселәр төнгө сменаларҙан, зарарлы һәм хәүефле эштәрҙән бушатыла.

Промышленность аяҡҡа баҫтырылған һайын, хеҙмәт шарттарын яҡшыртыуға һаман күберәк аҡса бүленә. Был өлкәләге тырышлыҡтар системалы характер ала.

Социаль страховкалау индереү хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәлен күтәреүҙә мөһим ҡаҙаныш була. РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советының 1921 йыл 15 ноябрь декреты менән бөтә дәүләт, кооператив, хосуси предприятиеларҙа ла страховкалау урынлаштырыла. Социаль страховкалау буйынса хеҙмәтсәндәргә хеҙмәткә һәләтлелеген ваҡытлыса һәм бөтөнләйгә юғалтҡанда һәм эшһеҙлек ваҡытында түләнә. Дөрөҫ, илдең ауыр экономик хәленә бәйле рәүештә, тәүҙә пособиелар ҙур булмай. Ләкин аҡрынлап улар арта бара.

Эшһеҙҙәргә ҙур ярҙам күрһәтелә. 1928 йылдың 1 октябренә Өфө хеҙмәт биржаһы 3924 кешегә эшһеҙлек буйынса пособие түләй. 1926—1928 йылдарҙа был маҡсатта 850 мең һум аҡса тотонолған [1]. Бынан тыш, эшһеҙҙәргә коммуналь хеҙмәтләндереүҙәргә льготалар бирелә, бушлай медицина ярҙамы күрһәтелә һәм ашханаларҙа ашау ойошторола.

Соцстрах иҫәбенә санаторийҙарҙа һәм ял йорттарында дауаланырға, ял итергә мөмкинлек алыусы эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр һаны йылдан-йыл арта бара. 1924 йылда улар — 1031, 1926 йылда 2 мең кеше була [2].

Шулай итеп, халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу шарттарында уҡ инде хеҙмәтсәндәр, үҙҙәренең тормош хәлен күтәреү өсөн, социалистик революция еңеүенең һөҙөмтәләренән файҙалана башлай.

Социалистик төҙөлөштөң уңыштары һәм совет кешеләренең тормош кимәле күтәрелеү уларҙың политик активлыҡтарының үҫеүенә булышлыҡ итә.

## § 3. Өфө хеҙмәтсәндәренең политик үҫеше

Аяҡҡа баҫтырыу осоро Өфө өсөн хеҙмәтсәндәр активлығының һәм политик аңлылығының артабан көслө үҫеш ваҡыты була. Күп һанлы митингылар, партияһыҙ эшселәр конференциялары, ҡатынҡыҙҙарҙың делегат йыйылыштары быны асыҡ күҙәләнеше була. Уларҙа предприятиелар тормошона, профессиональ эшмәкәрлеккә һәм конкурешкә, ҡаланы төҙөкләндереүгә һ. б. бәйләнешле мәсьәләләр тикшерелә.

---

[1] Совет Башҡортостанына ун йыл. 1919—1929 йылдар. (Советтарҙың юбилей съезына материалдар.) Өфө, 1929, 255-се бит.

[2] «Власть труда», 1924, 24 сентябрь; «Красная Башкирия», 1927, 16 ғинуар.

Мәҫәлән, 1922 йылдың йәйендә Мәскәүҙә эсерҙар партияһы етәкселәре өҫтөнән асыҡ суд барған көндәрҙә Өфө хеҙмәтсәндәре юғары аңлылыҡ, марксизм-ленинизм идеяларына инанғанлыҡ күрһәтә. Меңдәрсә эшсе һәм хеҙмәткәр процесс материалдарын тикшереүҙә ҡатнаша. Күп кешеләр булған йыйылыштарҙа һәм митингыларҙа ораторҙар эсерҙар партияһын хурлыҡ тамғаһы менән билдәләй. «Социалист-революционерҙарҙың революцияға ҡаршы енәйәтсел тактикаһы социалист-революционерҙар программаһының төп положениеларынан сыға,— тип әйтелә Өфөнөң берләштерелгән типографиялары эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәренең дәйөм йыйылышы резолюцияһында.— Социалист-революционерҙар партияһының Февраль революцияһынан башлап бөтә енәйәтсел тарихы социалистик революцияға ҡаршы ҡәбәхәт һәм әшәке көрәш тарихы булып тора. Юғарыла күрһәтелгән факттарға нигеҙләнеп, революцион трибуналдан капиталистар лакейҙары һәм эшселәр синыфы менән крәҫтиәндәр палачтары — социалист-революционерҙарға аяуһыҙ булыуҙы һорайбыҙ» [1].

Ошондай уҡ резолюцияларҙы туҡыусылар, һыу юлы эшселәре ҡабул итә. Был процесс Өфөнөң ижтимағи-политик тормошонда ҙур ғына роль уйнай. Ул хеҙмәтсәндәрҙең Коммунистар партияһы тирәһенә нығыраҡ тупланыуына, әле һаман эсерҙар ҡарашы йоғонтоһонда булғандарға үҙҙәренең яңылышыуҙарынан тамам арынырға булышлыҡ итә. Мәҫәлән, Өфө предприятиеларының бер эшсеһе С. С. Филипповтың 1924 йылдың 1 июлендә «Власть труда» газетаһында асыҡ хаты баҫылып сыға. Ул унда: «Мин, ҡарт эшсе, 1917 йылда, революция тулҡыны йоғонтоһона бирелеп, социалист-революционерҙар партияһына индем. Был партияға ингәндә, революцион үткәне булған социалист-революционерҙар партияһы киләсәктә лә хеҙмәтсәндәр — эшселәр һәм крәҫтиәндәр мәнфәғәтен ныҡ яҡлар тип ышанғайным. Ләкин партия етәкселәренең оҙаҡ та үтмәй күргән саралары социалист-революционерҙар партияһының хеҙмәтсәндәр мәнфәғәтен бер ниндәй дәрәжәлә лә сағылдырырға һәләтле түгеллеген асыҡ күрһәтте. Шуға күрә, революцияға ҡаршы партия булараҡ, социалист-революционерҙар партияһы менән һәр төрлө бәйләнештәрҙе өҙҙөм тип белдереүҙе әхлаҡи бурысым тип иҫәпләйем һәм мине ул партиянан сыҡҡан тип һанауығыҙҙы үтенәм... Хеҙмәтсәндәр мәнфәғәте һағында тороусы берҙән-бер партия — большевиктарҙың Россия Коммунистар партияһы тип белдерәм»,— тип яҙған була.

1924 йылдың 21 ғинуарында илебеҙ һәм бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең ҙур ҡайғы кисерә: юлбашсыбыҙ һәм Коммунистар партияһы менән Совет дәүләтенә нигеҙ һалыусы В. И. Ленин үлде. Бөтә партия, бөтә совет халҡы менән бергә хеҙмәтсән Өфө лә ҡаты ҡайғыра.

23—27 ғинуарҙа ҡалала эшселәрҙең, хеҙмәткәрҙәрҙең, уҡыусыларҙың һәм ҡыҙылармеецтарҙың В. И. Ленин иҫтәлегенә арналған йыйылыштары, митингылары булып уҙа. Унда ҡатнашыусылар

[1] ЦГА БАССР, ф. 172, оп. 1, д. 248, л. 61.

эшселәр һәм крәҫтиәндәр союзын нығытырға, Ленин билдәләгән юлдан Коммунистар партияһы етәкселегендә барырға ант итә. Ҡала коммуналь хужалығы эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре ҡабул иткән резолюцияла: «Оло бәхетһеҙлек тураһында телеграф хәбәрен тыңлағандан һуң, үҙебеҙҙең ҡаты ҡайғыбыҙҙы белдерәбеҙ. Уның идеялары, тәғлимәте һәм васыяттары беҙҙә нык йәшәр, пролетар революцияны нығытыу һәм үҫтереү өсөн беҙҙең артабанғы көрәшебеҙҙә илһам бирер һәм етәкләр» [1], — тип әйтелгәйне.

Һөйөклө юлбашсы менән хушлашыу көндәрендә меңдәрсә эшсе һәм хеҙмәткәр Коммунистар партияһы сафына инергә үҙҙәренең теләктәрен белдерә. 1924 йылдың 31 ғинуарында РКП(б) Үҙәк Комитеты эшселәрҙе партияға станоктарҙан ҡабул итергә ленинсы саҡырыу иғлан итә. Ул саҡта Өфөлә тимер юлсылар —100-гә яҡын, Затон һыу юлы эшселәре —74, ағас эшкәртеүселәр —65, тегенселәр 30 ғариза бирәләр [2] һ. б.

Партияға инергә теләүселәрҙең кандидатуралары предприятиелар коллективтарының дөйөм йыйылыштарында ныҡлап тикшерелә. Эшселәр үҙҙәре иң лайыҡлыларҙы һайлап ала. «Беҙ партияны сүпләргә юл ҡуймабыҙ, был партия беҙҙеке, һәм беҙ уны тулыландырып ҡына ҡалмабыҙ, ә бөтә саралар менән һаҡларбыҙ ҙа»,— тиҙәр улар.

Ленинсы саҡырыуҙың ике айы эсендә генә лә Өфө партия ойошмаһына 500 самаһы кеше алына [3]. Яңы алынғандар уның социаль составын байтаҡҡа яҡшырта. II ҡала райкомының партячейкаларында эшселәрҙең тотҡан урыны 1924 йыл өсөн 69 проценттан 86,7 процентҡа тиклем үҫә [4]. Ленинсы саҡырыу хеҙмәтсәндәрҙең Коммунистар партияһына ҡайнар һөйөүен, уның массалар менән тығыҙ бәйләнешен күрһәтә.

Өфө эшселәренең һәм хеҙмәткәрҙәренең партияға күпләп инеүе бынан һуңғы йылдарҙа ла дауам итә. Мәҫәлән, 1925 йылдың ғинуарынан алып 1929 йылдың ғинуарына тиклем коммунистар һаны тимер юл мастерскойҙарында 185 кешенән 308-гә, ағас заводтарында 32-нән 105 кешегә арта [5] һ. б.

Комсомол ойошмаһы тиҙ үҫә. Профсоюздар хәрәкәте ҙур үҫеш ала. Хеҙмәтсәндәрҙе профсоюздарға иң күп йәлеп итеү печатниктарҙа, һыу юлы эшселәрендә, тимер юлсыларҙа, ағас эшкәртеүселәрҙә, тегенселәрҙә була.

Траур көндәрендә Өфө хеҙмәтсәндәре үҙ йыйылыштарында В. И. Ленинға һәйкәл һалыу тураһында ҡарар ҡабул итә. Башҡортостан Үҙәк Башҡарма Комитеты, Халыҡ Комиссарҙары Советы, Башпрофсовет һәм Өфө ҡала Советының берләшкән ултырышы

---

[1] «Власть труда», 1924, 24 ғинуар.

[2] Шунда уҡ, 1924, 19 февраль, 6 март, 15 апрель.

[3] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 4, д. 93, л. 7; «Власть труда», 1924, 24 август; «Красная Башкирия», 1925, 6 ғинуар.

[4] «Власть труда», 1924, 15 апрель.

[5] Шунда уҡ, 1924, 10 ноябрь; «Красная Башкирия», 1928, 4 декабрь.

монументты иң ҡыҫҡа срокта һалып бөтөрөү тураһында ҡарар сығара. Һәйкәл проектын төҙөүгә конкурс иғлан ителә. Төҙөүсе техник Д. М. Ларионовтың проекты иң яҡшы тип табыла һәм уға уны һалырға йөкләтелә. В. И. Ленин скульптураһын Мәскәү рәссамы П. А. Менделевичҡа эшләргә тапшырыла.

1924 йылдың 1 майында монумент ҡала Советы бинаһы алдына ҡуйыла. Фундамент нигеҙенә: «В. И. Ленинға. Өфө ҡалаһы хеҙмәтсәндәре. 1924 йылдың 1 Майы» — тип яҙылған металл табличка һалына. Ҡара көҙгә тиклем өфөләр һәйкәл һәм уны тирәләп сквер һалыу өҫтөндә эшләй. Илебеҙҙең башҡа ҡалалары хеҙмәтсәндәре ҙур ярҙам күрһәтә. Ленинградтың «Красный выборжец» заводы эшселәре бронза статуя ҡоя, Урал эшселәре мәрмәр деталдәр эшләй.

1924 йылдың 7 ноябрендә һәйкәлде тантаналы асыу була. Ул гранит цоколле, герб һәм орнамент менән биҙәлгән бейек мәрмәр колоннанан тора. Колоннаның осона аҡ мәрмәрҙән эшләнгән шар — глобус ҡуйылған. Гранит постаментта В. И. Ленин скульптураһы торған. Һуңынан Менделевичтың эше Владимир Ильичтың ҡулына китап тотоп ултырған скульптураһы менән алмаштырыла. Уны күренекле совет скульпторы С. Д. Меркуров эшләгән.

Башҡортостанда һәм унан алыҫ ситтә һәйкәл асыу тураһында белгәндәр. Был көндө Өфө Советы адресына күп телеграммалар килгән. Телеграммаларҙың береһендә: «Йылайыр һәм Тамъян-Ҡатай кантондарының төпкөлдәге ауылдарынан башҡорт хеҙмәтсән крәҫтиәндәре, Советтарҙың волость съездарына йыйылып, эшсе һәм крәҫтиәндәрҙең бөйөк юлбашсыһына һәйкәл асылған тантаналы көндә Өфө хеҙмәтсәндәренә ҡайнар сәләм ебәрә. Ленин идеялары милләттәр буржуазияһы тарафынан иҙелгән хеҙмәтсәндәргә азатлыҡ бирҙе. Был тантаналы мәлдә беҙ шуны белдерәбеҙ: «Ленинды һәм уның васыяттарын онотмаясаҡбыҙ»,— тип әйтелгәйне. «...Революцияның бөйөк даһийы, бөйөк юлбашсы хаҡындағы иҫтәлектәр яңы тормош өсөн көрәштә хеҙмәтсәндәрҙең көсөн унлата тапҡыр арттырһын»,— тип пыҡлап әйтелгәйне СССР Халыҡ Комиссарҙары Советы, Хеҙмәт һәм Оборона Советы Председателе урынбаҫары А. Д. Цюрупаның телеграммаһында [1].

1924—1928 йылдарҙа партия һәм профсоюз ойошмалары хеҙмәтсәндәрҙе политик ағартыу буйынса ҙур эш йәйелдерә. Политграмота мәктәптәре, совет закондарын өйрәнеү, ҡыҙыл агитаторҙар, ҡатын-ҡыҙ делегаткалары, комсомол һ. б. түңәрәктәре киң тарала. Партияның II ҡала райкомы ВКП(б) Өлкә Комитетына биргән отчетында 1925 йыл эсендә район ойошмаһы коммунистарының 60 процентына политграмота уҡытылыуын, шул иҫәптән ленинсы саҡырыуҙың 83 проценты политик уҡыуға йәлеп ителеүен, хәбәр итә. 1926/27 уҡыу йылында Өфөлә 160 политграмота мәктәптәрендә, профсоюз түңәрәк-

---

[1] Узиков Ю. В. И. Ленин в Уфе. Өфө, 1974, 165, 166-сы биттәр.

1924 йылдың 7 ноябрендә В. И. Ленинға һәйкәл асыу.



тәрендә 5 мең самаһы коммунист, комсомолец һәм партияһыҙҙар уҡый [1].

Хеҙмәтсәндәрҙе политик ағартыуға клубтарҙың һәм ҡыҙыл мөйөштәрҙең эше лә булышлыҡ итә. 1924 йыл аҙағында Өфөлә 9 клуб: коммуналь хужалыҡ, мәғариф, совет учреждениелары работниктарының, төҙөүселәрҙең, аҙыҡ-түлек промышленносы эшселәренең, металлистарҙың, тимер юлсыларҙың, тегенселәрҙең һәм Үҙәк партия мәғарифы клубы иҫәпләнә. Бында политик темаларға докладтар, лекциялар, әңгәмәләр, кисәләр үткәрелә. Һораүҙар һәм яуаптар кисәләре, йәнле газеталар өфөләрҙә ҙур популярлыҡ ҡаҙана.

Ҡала халҡының политик һәм культура кимәле күтәрелә барыу менән, уларҙың аңлылығы һәм ойошҡанлығы, хужалыҡ һәм йәмәғәт тормошондағы роле үҫә. Өфөнөң йөҙҙәрсә хеҙмәтсәне производство комиссиялары һәм кәңәшмәләренең ағзалары булып тора. Фабрика һәм завод активистары предприятиелар, учреждениелар эшен тикшерә, бюрократизм менән волокитаны фашлай һәм уны бөтөрөү өсөн көрәшә. Коммунистар, комсомолецтар һәм партияһыҙҙар ҡала Советының һәр төрлө (шефлыҡ, культура һ. б.) комиссиялары эшендә, КК—РКИ ярҙам итеү группаларында, суд органдарында актив ҡатнаша.

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 4, д. 69, л. 371; ф. 377, оп. 1, д. 304, л. 73; «Красная Башкирия», 1927, 19 июнь.

В. И. Ленинга һәйкәл. *Скульптор С. Меркуров.*



Өфөләрҙең ҡала Советы комиссияларында, жалобалар бюроһындағы һәм РКИ ярҙам итеү ячейкаларындағы эшмәкәрлеге предприятиеларҙың эшенә, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә, хеҙмәт тәртибен нығытыуға туранан-тура йоғонто яһай.

Ҡаланың партия, совет, профсоюз һәм комсомол ойошмалары ҡатын-ҡыҙҙарҙы йәмәғәт эшенә йәлеп итеү өсөн күп нәмә эшләй. Ҡатын-ҡыҙҙар хеҙмәтте һаҡлау, культура, сауҙа, әсәлекте һәм балалыҡты һаҡлау комиссияларында айырыуса күп була. 1926 йылда Өфө үҙәк эшселәр кооперативының кибеттәр комиссиялары составында ҡатын-ҡыҙҙар 52 процент тәшкил итә. Ҡатын-ҡыҙ халыҡ заседателдәренең һаны һиҙелерлек үҫә: 1925 йылда улар 13 кеше һайлана, ә 1927 йылда инде бөтә заседателдәр составының 25 процентын тәшкил итә [1]. Советтар эшен йәнләндереү буйынса партия күтәргән бурысты өфөләр ҡайнар яҡлай. Халыҡтың политик активлығының үҫеүен уның һайлау кампанияларында һаман күберәк ҡатнашыуы раҫлай. Әгәр 1926 йылда ҡала Советына һайлауҙарҙа һайлаусыларҙың тик өстән бер өлөшө генә ҡатнашһа, 1927 йылда инде уларҙың яртыһы тиерлек ҡатнаша. 1927 йылда Өфө Советына 262 депутат һайланып, шуларҙың 40 проценты — ВКП(б) ағзаһы, 9 проценты — комсомолдар һәм 51 проценты партияһыҙҙар була. Депутаттар араһында Өфөлә йәшәүсе бөтә төп милләттәрҙән вәкилдәр була, шул иҫәптән рустар —69,4 процент, башҡорт һәм татарҙар 24,3 процент тәшкил итә [2].

1921 йылдан ҡала Советы промышленность предприятиеларында пленар кәңәшмәләр үткәреүҙе, ай һайын һайлаусылар алдында депутаттарҙың отчет биреүен практикаға индерә. Советтың күсмә кәңәшмәләре тимер юл мастерскойҙарында, Октябрь революцияһы исемендәге судноларҙы ремонтлау мастерскойҙарында һәм ҡаланың башҡа күп предприятиеларында үткәрелә. Был саралар хеҙмәтсәндәрҙең киң массаһын Совет эшенә ылыҡтырыуға булышлыҡ итә. 1927 йылда уның 9 секцияһына 370-тән ашыу кеше инә.

Коммунистар партияһы эшселәрҙе дәүләт һәм йәмәғәт ойошмалары эшенә йәлеп итеүгә ҙур әһәмиәт бирә, сөнки ул быға пролетариат диктатураһының политик базаһын нығытыуҙа мөһим сара тип ҡарай. Өфө Советында ла эшселәр вәкилдәренең ҡатнашыуы йылдан-йыл арта. 1923 йылда улар депутаттарҙың 23,9 процентын, ә 1927 йылда инде 49,1 процентын тәшкил итә [3].

---

[1] ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты отчеты. 1927 йыл, ғинуар — октябрь. XII өлкә партконференцияһына. ВКП(б) ағзалары һәм кандидаттары өсөн генә. Өфө, 1927, 47-се бит; «Красная Башкирия», 1927, 8 март.

[2] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 5, д. 145, л. 38; «Красная Башкирия», 1927, 8 март.

[3] ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитетының XIII өлкә партконференцияһына отчеты. Өфө, 1929, 131—133-сө биттәр; ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты отчеты, 1927 йыл, ғинуар — октябрь. XII өлкә партконференцияһына, 34-се бит; Эшсе һәм ҡыҙыләрмеец депутаттарының Өфө ҡала Советының ҡыҫҡаса отчеты (1927 йыл, март — 1948 йыл, март). Өфө, 1928, 3-сө бит.

Эшселәрҙән иң аңлылары, йәмәғәт эшендә тәжрибә туплағандары идара итеү органдарына үрләтелә. Мәҫәлән, тимер юл мастерскойҙарында 1926—1928 йылдарҙа станоктан 200-ҙән ашыу эшсе етәксе постарға үрләтелә. Токарь Б. Ф. Трясоногов Башглавсуд ағзаһы итеп, ҡаҙан яһаусы Я. Я. Кузьмин халыҡ судьяһы итеп, ағас оҫтаһы М. А. Иванов республиканың эске эштәре халыҡ комиссары урынбаҫары итеп, слесарь Т. П. Сутягин Өфө ҡалаһының милиция бүлексәһе начальнигы итеп һайлана.

1922—1925 йылдарҙа эшселәрҙән үрләтелгән 20 кеше ҡаланың промышленность предприятиеларына етәкселек итә. Печатник Я. И. Корнеев — «Октябрьский натиск» типографияһының управляющийы, тире иләүсе П. П. Юшин — берләштерелгән күн заводтарының управляющийы, металлист В. Р. Замятин — 1-се һанлы дәүләт заводы директоры, эшсе-туҡыусы Я. И. Дмитриев — канатарҡан заводы управляющийы, М. О. Шалимов фанера фабрикаһы управляющийы итеп үрләтелә.

Совет сауҙаһына күп кенә пролетарийҙар ебәрелә. Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, тик 1927 йылда ғына 15 эшсе дәүләт магазиндарына мөдир һәм мөдир ярҙамсылары итеп тәғәйенләнә[1]. Ҡала милицияһы шулай уҡ эшселәр иҫәбенә даими тулыланып һәм көсәйтелеп тора.

Эшселәрҙе станоктан совет аппаратына үрләтеү үҙен аҡлай. Үрләтелгәндәрҙең күбеһе яңы вазифаларын уңышлы башҡара. Улар дәүләт предприятиелары һәм учреждениелары эшенә боевой рух һәм инициатива индерә.

Өфө хеҙмәтсәндәре республиканың ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙа ҙур роль уйнай. Был эшкә тәүгеләрҙән булып тимер юлсылар тотона. 1923 йылдың башында улар Иглин волосының Шаҡша, Яңы Троицк ауылдарын, Дмитриев волосының Дмитриевка ауылын һәм Оло Teләк волосының Оло Теләк ауылын шефҡа ала. Улар артынан фанера фабрикаһы эшселәре — Булгаков волосының Таптыҡ ауылын, транспорт эшселәре — Дмитриев волосының Нурлы ауылын, БашЦИК хеҙмәткәрҙәре — Удельно-Дыуанай һәм Бүләкәй-Күҙәй волостарын, РКИ халыҡ комиссариаты хеҙмәткәрҙәре Архангел волосын һ. б. шефҡа ала. 1923 йылдың аҙағына Өфө хеҙмәтсәндәре Өфө кантонының 21 ауылына шефлыҡ иткән.

Баш ҡала вәкилдәрен крәҫтиәндәр ҙур шатлыҡ менән ҡаршылаған, уларҙың килеүе ысын байрамға әйләнгән. 1923 йылдың 24 июлендә Черкассы ауылында шефтарҙың килеүе айҡанлы митинг була. Митингыла яҡын-тирә ауылдарҙан килгән 400 кеше алдында Өфө ҡала башҡарма комитеты исеменән крәҫтиәндәргә Ҡыҙыл байраҡ тапшырыла. Ҡала менән ауылдың элемтәләре мәсьәләләрен тикшереп, митингыла ҡатнашыусылар резолюция ҡабул иткән: «Бөгөнгө

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 3, д. 57, л. 58, 59; «Красная Башкирия», 1928, 22 июнь.

көн — Черкассы волосы өсөн әһәмиәтле көн, хеҙмәтсән синыфтың берләшеү һәм тығыҙ ойошоу көнө булыр. Шефтарыбыҙға рәхмәт әйтеп, тапшырылған Ҡыҙыл байраҡ эшселәр һәм крәҫтиәндәр берҙәмлегенең беҙҙең дөйөм кос тураһында көн һайын иҫкәртеп тороусы символы булып хеҙмәт итер тип ышандырабыҙ»[1]. Митингылар, йыйылыштар Өфө кантонының бөтән волостарында ла булып үткән.

Өфөлә, бөтә илдәге кеүек үк, шефлыҡ эшендә тәүҙә байтаҡ кәмселектәр булған. Берәүҙәр ярлыларға материаль ярҙам итеү менән шөғөлләнгән, икенселәр, ауыл тормошона тәрән үтеп инмәйенсә, культура-ағартыу характерындағы ғына ярҙам күрһәткән. Шефтарҙың килеүе регуляр булмаған, ҡағиҙә буларак, киң партияһыҙҙар массаһын йәлеп итмәйенсә, тик завод, фабрика һәм учреждениеларҙың партячейкалары ғына эш алып барған. Шефлыҡ эшен ойоштороуҙа РКП(б)-ның XIII съезы (1924 йыл, май) мөһим роль уйнай. Унда ҡала менән ауылдың элемтәһе мәсьәләләренә айырым иғтибар бирелә. Партия ойошмалары алдына шефлыҡ эшен массовый күренешкә әйләндереү бурысы ҡуйылған.

Мәскәү һәм Ленинград өлгөһөндә 1924 йылдың аҙағынан Өфө предприятиеларында шефлыҡ комиссиялары төҙөлә башлай. Уларҙың эшендә коммунистар менән бер рәттән партияһыҙҙар ҙа актив ҡатнаша башлай. 1925 йылдың 1 ғинуарына РКП(б)-ның II ҡала райкомының 10 шефлыҡ комиссияһында 172 кеше ҡатнаша, уларҙың 115-е РКП(б) ағзаһы һәм 57-һе партияһыҙ булған[2].

Шефлыҡ эшенә етәкселек итеү өсөн, райкомдар ҡаршыһында шефтар бюроһы ойошторола. Шефлыҡ комиссиялары ағзаларының кәңәшмәләре регуляр рәүештә (айына бер тапҡырҙан да һирәк түгел) үткәрелә, Өфө партияһы райкомдары һәм РКП(б) волкомдары бюролары кәңәшмәләрендә, производство һәм партия йыйылыштарында уларҙың отчеттары тыңлана. Мәҫәлән, 1925 йылда тимер юл мастерскойҙары шефлыҡ комиссияларының отчеты партия йыйылышында, шулай уҡ РКП(б)-ның Иглин волкомы бюроһында тыңлана. Бюро кәңәшмәһендә сығыш яһап, комиссия председателе шулай һөйләгән: «Шефлыҡ эшенең ике йыллыҡ тәжрибәһе нисек эшләргә өйрәтте. Шеф хәҙер ауылға ентекле методик әҙерлектән һуң ғына бара. Ауылға беркетелгән шефтар шефҡа алынғандар алдында үҙенең эше тураһында регуляр рәүештә отчет биреп тора. Былар бөтәһе лә эште көсәйтә. Шефтың урындағы ойошмалар, шулай уҡ айырым иптәштәр менән үҙ-ара мөнәсәбәттәре яҡшы»[3]. Күрелгән саралар шефлыҡ хәрәкәтен йәнләндереүгә булышлыҡ итә. Шефҡа алынған волостарға барыу регулярыраҡ була бара. 1925 йылда Өфөнән шефлыҡ комиссиялары ай һайын 45-әр мәртәбә киләләр.

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 2, д. 132, л. 11.
[2] Шунда уҡ, оп. 4, д. 69, л. 145, 146; д. 149; л. 124.
[3] «Красная Башкирия», 1925, 24 июнь.

Бөтә шефлыҡ эше камиллаша, уның йөкмәткеһе тәрәнерәк була бара. ВКП(б)-ның волость ячейкаларына, волость башҡарма комитеттарына, кооперацияларға ҙур ярҙам күрһәтелә. Тимер юл мастерскойҙары вәкилдәре 1925 йылда, Князево ауылының ВКП(б) ячейкаһы менән килешеп, политтүңәрәк һәм политграмота мәктәбе ойошторалар. Бының өсөн әҙерлекле өс эшсене бүләләр. Шефтарҙың актив ҡатнашлығында крәҫтиәндәр кооператив кибет асалар, ВЛКСМ ячейкаһы, пионерҙар отряды, ҡатын-ҡыҙ делегаткалар пункты ойошторалар.

Ауыл Советтарын политик яҡтан нығытыуҙа, уларҙың эшмәкәрлеген йәнләндереүҙә шефтар мөһим роль уйнайҙар. Улар ауылдарҙа ярлылар төркөмдәрен төҙөйҙәр, урта хәлле крәҫтиәндәрҙе кулактар йоғонтоһонан сығарыу өсөн көрәшәләр, крәҫтиәндәргә налог һалыуҙа синфи линияны ҡаты үткәрәләр. Ауылда политик эште көсәйтеү өсөн 1923—1928 йылдарҙа ҡаланың йөҙҙәрсә эшсеһе ебәрелә.

Промышленность аяҡҡа баҫтырылған һайын, шефтарҙың материаль ярҙамы арта бара. Сәсеү һәм урып йыйыу кампаниялары алдынан Өфөнөң төҙөүселәре, һыу юлы эшселәре, полиграфистары, металлистары шефлыҡҡа алынған ауылдарға ауыл хужалығы инвентарҙарын, тирмәндәрҙе ремонтлау өсөн эшселәр отрядтары ебәрә. Шефтар Өфө кантонының биш ауылында балалар яслеһе ойоштора. 12-се һанлы таҡта ярыу заводы эшселәре шефлыҡҡа алынған ауылдың 36 ярлы хужалығына кредитҡа ағас материалдары бирә.

Шефтар крәҫтиәндәргә баҫыуҙарҙың уңышын күтәрергә, малсылыҡты, умартасылыҡты дөрөҫ алып барырға ярҙам итергә тырыша. Күп кенә ауылдарҙа улар ауыл хужалығы түңәрәктәре ойоштора, тыңлаусыларҙы әҙәбиәт менән тәьмин итә. Шефлыҡ комиссиялары ағзаларының актив ҡатнашлығында 1924 йылдың башында Өфөлә ауыл хужалығы музейы асыла. Уның баҫыусылыҡ, малсылыҡ, умартасылыҡ һәм ауыл хужалығы машиналары бүлектәре була. Ҡалаға килеүсе крәҫтиәндәр музей экспонаттары менән таныша. Ирекле рәүештә эш хаҡтарынан бүлеп биреү юлы менән Өфө хеҙмәтсәндәренең йыйған аҡсаларына Топорнино, Яңы Троицк, Дмитриевка ауылдары вәкилдәре Мәскәүҙәге Бөтә Россия ауыл хужалығы күргәҙмәһенә бара [1].

Өфө вәкилдәре ауылды социалистик үҙгәртеп ҡороуҙы әҙерләүгә шаҡтай өлөш индерә. Улар крәҫтиәндәргә коммуналар, ерҙе бергәләп эшкәртеү товариществолары һ. б. ойоштороуҙа ярҙам күрһәтә.

Өфөләрҙең шефлыҡ итеүҙәре, шулай итеп, крәҫтиәндәрҙең политик һәм культура кимәлен даими күтәреүгә, ауыл хужалығын коллективлаштырыуҙың тәү шарттарын булдырыуға, ҡала менән ауыл араһында яңы мөнәсәбәттәр формалаштырыуға булышлыҡ итә. Өфө шарттарында, шефлыҡ комиссиялары ағзаларының күбеһен рус эшселәре тәшкил иткәнлектән, ә крәҫтиәндәрҙең күпселек өлөшө башҡорт

---

[1] «Власть труда», 1924, 31 ғинуар.

һәм татарҙарҙан торғанға күрә, шефлыҡ эше республикала йәшәүсе халыҡтарҙы интернациональ рухта тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнай.

Өфө партия ойошмаһы төрлө милләт хеҙмәтсәндәре араһында дуҫтарса мөнәсәбәт урынлаштырыуға, уларҙы пролетар интернационализм рухында тәрбиәләүгә ҙур иғтибар бирә. 1921 йылда Көнбайыш халыҡтарының интернациональ клубы асыла, уның составында поляк, литва, латыш, эстон, немец һәм башҡа халыҡтарҙың секциялары була. Клуб ағзалары өфөләрҙе халыҡ-ара эшселәр хәрәкәте, Көнсығыш һәм Көнбайыш халыҡтарының тарихы һәм культураһы менән таныштырыусы культура-ағартыу эше алып бара. Ҡала хеҙмәтсәндәре сит илдәрҙәге революцион көрәштең үҫешен тәрән ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтә.

Был осорҙа өфөләрҙең интернационализмы капиталистик илдәрҙә көрәшеүсе пролетариатҡа теләктәшлек күрһәтеүсе митингыларҙа һәм демонстрацияларҙа бигерәк тә асыҡ сағыла. 1924 йылда Өфөлә, бөтә илдәге кеүек үк, хеҙмәтсәндәр Англия, Франция һәм Японияның Ҡытайҙағы интервенцияһына ҡаршы сығыш яһай. 1925—1926 йылдарҙа капитал илдәрендәге ҡарагруһсылар фетнәһенә ҡаршы митингылар һәм йыйылыштар булып үтә. 1927 йылда Сакко һәм Ванцеттиҙы язалауға ҡаршы СССР һәм башҡа илдәр хеҙмәтсәндәре күрһәткән берҙәм нәфрәткә ҡала халҡы үҙенең протест тауышын килтереп ҡуша.

Өфө профсоюздары тарафынан забастовкала ҡатнашыусы япон, француз, немец һәм инглиз эшселәре файҙаһына күп тапҡырҙар өмәләр үткәрелә һәм аҡса ебәрелә. Инглиз горняктары өсөн эшселәр йыйған аҡсаны ебәреп, Профессиональ союздарҙың Башҡортостан советы пленумы 1926 йылдың авгусында үҙенең мөрәжәғәтендә былай тип яҙған: «Профессиональ союздарҙың Башҡортостан советы пленумы берләшкән 64 мең профсоюз ағзаһы исеменән үҙ талаптарын ныҡышмалы һәм батыр яҡлаусы Англия горняктарына үҙенең ялҡынлы пролетар сәләмен ебәрә. Башҡортостан профсоюздары Англияның забастовкала ҡатнашыусы горняктарына ярҙам итеү эшендә һәр ваҡыт актив ҡатнаштылар һәм был ярҙамды киләсәктә лә дауам итергә вәғәҙә бирәләр» [1].

1926 йылдың октябрендә инглиз горняктары хорының килеүе Өфө хеҙмәтсәндәре тормошонда ҙур ваҡиға һанала. Ҡунаҡтар Өфөлә ике көн була. Улар Хеҙмәт дворецында, В. И. Ленин исемендәге йорт-та һәм эшселәр клубтарында концерттар менән сығыш яһай, революцион һәм халыҡ йырҙарын башҡара [2]. Инглиз эшселәре менән осрашыу өфөләрҙең Көнбайыш пролетариаты менән теләктәшлеген көсәйтеүгә булышлыҡ итә. Ҡала предприятиеларында һәм учрежде-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 202, оп. 1, д. 197, л. 506.

[2] Формирование и развитие советского рабочего класса Башкирской АССР. Беренсе киҫәк, 91-се бит.

ппеларында Халыҡ-ара революция көрәшселәренә ярҙам итеү ойошмаһы (МОПР) ячейкалары төҙөлә. 1928 йылдың аҙағына Өфөлә 13 235 ағзаһы булған 125 ячейка иҫәпләнә [1]. «Капиитал тотҡондарына сәләм ебәрмәгән бер генә МОПР ячейкаһы ла булмаһын, МОПР-ҙың һәр бер ағзаһы революция көрәшселәренә үҙенең теләктәшлек һүҙен әйтһен һәм шуның менән алда буласаҡ көрәштәр өсөн уларға дәрт һәм көс өҫтәһен» [2],— тип әйтелгәйне МОПР-ҙың Өфө бүлексәһе өндәмәһендә.

Өфөнөң эшселәре, хеҙмәткәрҙәре һәм студенттары Болгария, Германия, Польша, Төркиә һәм башҡа илдәр хеҙмәтсәндәре менән хат яҙыша, үҙҙәренең хаттарында уларҙың капиталға ҡаршы героик көрәшенә тулы теләктәшлеген белдерә. Өфө комсомолецтары 1926 йылдың декабрендә үҙҙәренең чех дуҫтарына бына нәмәләр яҙған: «Һеҙгә үҙебеҙҙең ялҡынлы комсомол сәләмдәребеҙҙе ебәрергә һәм Чехословакия эшсе йәштәренең, быға тиклемге кеүек үк, киләсәктә лә эшселәр синыфының буржуазия менән көрәшендә һәм яңы ҡап ҡойғос һуғыштарға ҡаршы көрәштә алдынғы сафтарҙа тороуын теләүебеҙҙе әйтергә ашҡынабыҙ.

Бөтә буржуазияның пролетариатҡа һәм беренсе пролетар дәүләт булған СССР-ға ҡаршы берҙәм фронтын иғтибарға алып, беҙ, комсомол менән Көнбайыш һәм СССР-ҙың бөтә эшсе йәштәре араһында ныҡлы бәйләнеш булдырыу хәҙер бигерәк тә мөһим, тип иҫәпләйбеҙ [3]. Чехословакиянан ошондай яуап килгән: «Беҙ һеҙгә хатығыҙ өсөн рәхмәт белдерәбеҙ һәм үҙебеҙҙең комсомолецтарҙан ысын йөрәктән сәләм тапшырабыҙ. Һеҙҙең тәжрибәнән файҙаланыу өсөн һәм уртаҡ маҡсаттар: халыҡ-ара буржуазияны ҡолатыу һәм беҙҙе айырыусы сиктәрҙе емереү өсөн уртаҡ эшләргә берләшеү өсөн, беҙ инде күптән һеҙҙең менән элемтәгә инергә теләйбеҙ.

Эшселәр синыфының ҡарашы Советтар Союзына (ә капиталистар уға һөжүм әҙерләй) төбәлгән мәлдә беҙ эшсе йәштәрҙе һуғыш ҡурҡынысына ҡаршы көрәшкә ойошторабыҙ һәм һеҙҙе бөтә мөмкин булған саралар менән яҡларға ант итәбеҙ, сөнки һеҙҙең көрәш — беҙҙең көрәш ул.

Беҙ сиктәр аша һеҙгә ҡул һуҙабыҙ!» [4].

Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу йылдарында Өфө хеҙмәтсәндәре араһында Коммунистар партияһының абруйы тағы ла юғарыраҡ күтәрелә. Ҡала предприятиеларында һәм учреждениеларында партия, профсоюз һәм комсомол ҡатламдары үҫә, производство, йәмәғәт һәм культура тормошонда өфөләрҙең активлығы яңы баҫҡысҡа

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 63, л. 54.

[2] Лоҡманов Х. Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең интернациональ теләктәшлеген нығытыу тарихынан.— «Агитатор блокноты» (КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге журналы), 1970, № 7. 16-сы бит.

[3] ПА БОК КПСС, ф. 341, оп. 1, д. 240, л. 2.

[4] Шунда уҡ, л. 52, 53.

күтәрелә. Ҡала менән ауыл элемтәһен нығытыуҙа, Башҡортостан крәҫтиәндәренә бөтә яҡлап ярҙам күрһәтеүҙә ҙур уңыштарға ирешелә.

1921—1928 йылдарҙа Өфө хеҙмәтсәндәре партия органдары етәкселегендә граждандар һуғышы һәм аслыҡ әҙемтәләре менән бәйләнгән ғәйәт ҙур ауырлыҡтарҙы еңеп сыға. Улар промышленносты, транспортты, ҡала хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙа, сауҙаны һәм һаулыҡ һаҡлауҙы үҫтереүҙә, хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәлен күтәреүҙә ҙур уңыштар ҡаҙана һәм социализм юлында ҡала экономикаһын үҫтереүҙең ныҡлы нигеҙен тәьмин итә.

Башҡортостандың баш ҡалаһы булараҡ, Өфө йәш республиканың политик, хужалыҡ һәм культура тормошон ойоштороуҙа мөһим роль уйнай башлай.

# *Өфө беренсе биш йыллыҡтар осоронда (1928—1941 йылдар)*

## § 1. Ҡаланың индустриаль үҫеше

1928 йылдың октябренән совет халҡы СССР халыҡ хужалығын үҫтереүҙең беренсе биш йыллыҡ планын үтәү эшенә тотондо. План Башҡорт АССР-ы экономикаһы һәм культураһының бөтә өлкәләрендә лә ныҡ ҡына алға китеүҙе күҙ уңында тотто. Башҡортостан промышленносына капитал һалыуҙар 60,7 млн. һум тәшкил итте. Республиканың баш ҡалаһында промышленность предприятиеларын техник яҡтан реконструкциялау һәм яңынан төҙөү буйынса ҙур күләмле эштәр билдәләнде.

Беренсе биш йыллыҡтың башына Өфө промышленносы нигеҙҙә етештереүҙең һуғышҡа тиклемге кимәлен уҙып китте. 1928 йылда ҡалала 19 эре предприятие: тимер юл мастерскойҙары (1930 йылдан — паровоз-вагондар ремонтлау заводы), 1-се һанлы дәүләт заводы, Октябрь революцияһы исемендәге суднолар ремонтлау мастерскойҙары, спирт-араҡы заводы һ. б. эшләй ине. Уларҙа 8568 эшсе, шул иҫәптән 5009 квалификациялы һәм 145 инженер-техник работник эшләне. Уларҙың 25-е юғары, 59-ы урта техник белемле ине [1]. Өфө экономикаһында промкооперация һиҙелерлек роль уйнаны. 32 кустарь артеле 2050 кешене (бөтә кустарҙарҙың 70 процентын) берләштерҙе һәм бөтә промышленность продукцияһының биштән бер өлөшөнән күберәген эшләп сығарҙы [2].

1927/28 хужалыҡ йылына ҡала промышленносының тулайым продукцияһы 10,9 млн. һум ине [3]. Был сумма Башҡортостан промышленность етештереүенең 20 проценттан кәмерәген тәшкил итте. Өфө әле ул ваҡытта промышленностың тупланыуы буйынса республикала алдынғы урында торманы. Ул Россияның аграр окраинаһы-

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 10, л. 1, 2, 8.
[2] Шунда уҡ, л. 13; «Красная Башкирия», 1931, 13 май.
[3] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 10, л. 2.

ның революцияға тиклемге провинциаль ҡалаһы кимәлендә генә ине. Өҫтәүенә, промышленносты аяҡҡа баҫтырыу барышында уны өлөшсә реконструкциялауға ҡарамаҫтан, предприятиеларҙың ҡорамалдары туҙғайны, хеҙмәттең энергия менән ҡоралланышы түбән ине. Эшһеҙлек бөтөрөлмәгәйне әле. 1928 йылда ҡалала эшһеҙҙәр һаны 10 меңгә барып етте [1].

Һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтар Өфө ҡалаһын индустриаль яҡтан үҫтереүҙең ҙур перспективаларын асты. Өфө промышленность комбинатын, аҙыҡ-түлек, еңел промышленность предприятиеларын, промышленностың башҡа тармаҡтарын, айырыуса союз әһәмиәтендәге бик ҙур заводтарҙы — моторҙар эшләү һәм нефть эшкәртеү заводтарын сафҡа индереү хәл иткес әһәмиәткә эйә булды. Былар бөтәһе Өфөнөң илебеҙҙә ҙур индустриаль үҙәккә әйләнеүен тәьмин итте.

Үҙәк электр станцияһын (ЦЭС) һәм промышленность комбинатының башҡа предприятиеларын һалыу менән ҡалала яңы промышленность төҙөлөшө башланды. ЦЭС төҙөү планын эшләү илде индустриялаштырыу курсын Башҡортостан шарттарында ғәмәлгә ашырыуҙың конкрет формаларының береһе булды. ЦЭС төҙөү өсөн урынды Өфөнән 12 километр алыҫлыҡтағы Черниковка ауылы янынан һайлайҙар. Ошо урынға килеп тоташҡан, ул ваҡытта әле урман массивы һәм Ҡариҙел бөгөмөндәге яр буйы болондары биләп торған территорияла комбинаттың үҙ-ара бәйләнгән предприятиеларын: шырпы, ҡағыҙ һәм фанера фабрикаларын, таҡта ярыу һәм тире иләү-экстракт заводтарын төҙөү бурысы торҙо. Шулай итеп, индустриялаштырыу башланыу менән үк, алдағы ун йыллыҡтарҙа ҡаланың эре предприятиеларын урынлаштырыу районы һәм йүнәлеше билдәләнде.

1928 йылдың 16 сентябрендә электр станцияһына тантаналы рәүештә нигеҙ һалынды. Үҙәк электр станцияһының проектта ҡаралған ҡеүәте 4 мең киловатт була. Уны төҙөү өсөн 4,3 миллион һум аҡса бүленә. Партия ойошмаһы һәм йәмәғәтселек ҡала социалистик индустрияһының тәүге төҙөлөштәренә ҙур иғтибар бирә. ЦЭС төҙөлөшөндә тәүге айҙарҙа 200-ҙән артыҡ кеше эшләй. Бер йылдан һуң эшселәр һаны икеләтә тип әйтерлек арта. Рязань губернаһынан 30 квалификациялы ташсы килә. 1929 йылдың башында электр станцияһын һәм комбинатты төҙөү өсөн Башҡортостан совнархозы тресы хоҡуғында «Электропромстрой» Дәүләт төҙөлөш контораһы булдырылды.

Объекттарҙы төҙөү шулай ҙа планда күрһәтелгән сроктарҙан һуңланы. ЦЭС-ты һәм комбинаттың промышленность предприятиеларын төҙөү темптарында ярашлылыҡ булмау күренде. Республиканы индустриялаштырыуҙы тиҙләтеү буйынса дөйөм саралар ҡабул ителеү менән, был өлкәлә һынылыш яһалды. СССР Совнаркомының 1930 йылдың 28 октябрендә ҡабул иткән «Башҡорт АССР-ы про-

[1] «Красная Башкирия», 1928, 10 апрель.

ЦЭС-ка тантаналы рәүештә нигеҙ һалыу.



мышленносын үҫтереү тураһындағы» ҡарары, нигеҙҙә, комбинат төҙөлөшөн финанслауҙы яҡшыртыуҙы күҙҙә тотто һәм «кәрәкле ассигнованиеның 1931 йылдың контроль һандарына индерелергә тейешлеген»[1] күрһәтте. Яҡшы һөҙөмтәләр күренә лә башланы. 1931 йылдың 20 сентябрендә республиканың хөкүмәт һәм йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ҡатнашлығында электр станцияһы файҙаланыуға тапшырылды. Киләһе йылда шырпы фабрикаһы эшләй башланы. Ул — СССР-ҙағы иң яҡшы биш шырпы фабрикаһының береһе ине. 1933 йылда Черниковскиҙағы таҡта ярыу заводы сафҡа инде, тағы ла бер йылдан фанера фабрикаһы һәм тире иләү-экстракт заводы беренсе продукцияларын бирҙе. Өфө промышленность комбинатын төҙөү эше тамамланды. Ҡаланы индустриаль яҡтан үҫтереүҙә һиҙелерлек аҙым яһалды.

Шулай ҙа сағыштырмаса ҙур булмаған был предприятиеларҙы төҙөү промышленность үҫешенең етерлек кимәлдә юғары темптарын һәм уның структураһы үҫешен тәьмин итә алманы. Өфөлә союз әһәмиәтендәге эре предприятиелар төҙөү был проблеманы хәл итеүҙә ифрат ҙур роль уйнаны. Уларҙың беренсеһе моторҙар эшләү заводы булды.

1931 йылдың 15 июлендә ВКП(б) Үҙәк Комитеты Политбюроһы Өфөлә моторҙар эшләү заводын төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итте. Партияның Башҡортостан Өлкә Комитетына был заводты урынлаштырыу районын билдәләү эше йөкләтелде. 25 июлдә Өлкә Комитет бюроһы: «Богородский ауылы эргәһендәге майҙанды ярак-

[1] «Красная Башкирия», 1930, 7 ноябрь.

«Красная Башкирия» газетаһы күсмә редакцияһының «Электропромстройҙа» сығарған бер көнлөк бюллетены.




лы, талаптарға. заводты артабан үҫтереү перспективаларына яуап бирерлек тип иҫәпләргә» [1],— тигән һығымтаға килә. 27 июлдә СССР ВСНХ президиумының завод төҙөү тураһындағы тейешле ҡарары ҡабул ителә. Уның беренсе сираты йылына 100 мең мотор эшләп сығарыуға иҫәпләнгән була [2].

ВКП(б) Үҙәк Комитетының һәм хөкүмәт органдарының моторҙар эшләү заводын төҙөү тураһындағы ҡарары Өфө ҡалаһын илебеҙҙә ҡатмарлы машиналар эшләп сығарыусы мөһим үҙәктәрҙең береһе итеп үҫтереүҙе башлап ебәрҙе. Бындай перспектива бөтә республиканы индустриялаштырыу өсөн дә принципиаль әһәмиәткә эйә ине. Быға тиклем Башҡортостанда машиналар эшләү промышленносы асылда юҡ ине.

Өфө моторҙар эшләү заводын төҙөү 1931 йылдың 6 сентябрендә башланды. Был эште СССР Халыҡ Хужалығының Юғары Советы тарафынан ошо маҡсат менән ойошторолған 17-се дәүләт төҙөлөш тресы алып барҙы (һуңынан ул хәҙер ҙә эшләүсе 3-сө һанлы төҙөлөш-монтаж тресы итеп үҙгәртеп ҡоролдо). Трест урындағы эшсе көсө менән тулыланды. Заводты удар темптар менән һалыу күҙ уңында тотолдо.

Республика һәм ҡаланың етәксе органдары төҙөлөш эштәренең киң ҡолас алыуына иреште. Ошо уңай менән партия Өлкә Комитеты Өфө ҡалаһының партия һәм хужалыҡ ойошмалары алдына конкрет бурыстар ҡуйҙы. Моторҙар эшләү заводын төҙөүгә булышлыҡ итеү комитеты төҙөлдө. 1931 йылдың авгусынан 1932 йылдың июненә тиклем Моторостройға 111 яуаплы работник ебәрелде. Төҙөүселәргә ҡала Советы торлаҡ майҙандары бүлеп бирҙе. Тәүге айҙарҙа 38 барак, 3 йорт, контора төҙөлдө, 5,3 километр оҙонлоғонда тимер юл линияһы үткәрелде, 18 километр шоссе юл һалынды, телеграф, почта, телефон станцияһы эшләй башланы. Урындағы ресурстарҙан һәр төрлө төҙөлөш материалдары килтерелде. 1931 йылдың аҙаҡтарында төҙөүселәр коллективында бер нисә мең кеше иҫәпләнә ине инде [3]. Черниковка районындағы яңы төҙөлөштәрҙең партия ойошмаларына яҡшыраҡ етәкселек итеү өсөн, 1933 йылдың сентябрендә

---

[1] ПА БОК КПСС, д. 122, оп. 10, д. 38, л. 116.
[2] Шунда уҡ, д. 72, л. 712.
[3] Шунда уҡ, д. 61, л. 1; д. 193, л. 120.

Моторостройҙың партия комитеты ойошторола. Уға туранан-тура партияның Башҡортостан Өлкә Комитеты етәкселек итә. Партия комитеты төҙөлөштөң иң мөһим участкаларына етәкселек итеүсе ячейкаларҙың эшен берләштерә. 1933 йылдың ноябрендә яңы төҙөлөштәрҙең поселок Советы һайлана. Ул Өфө ҡала Советы башҡарма комитетына буйһона.

Моторҙар эшләү заводының төп объекттарын төҙөү икенсе биш йыллыҡ осоронда киң йәйелдерелде. Моторострой ҡала һәм республика йәмәғәтселегенең, бөтә хеҙмәтсәндәренең хәстәрлеге менән солғап алынды. Буласаҡ завод тирәһендә мәктәптәре, клубтары, мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениелары, амбулаториялары булған эшселәр поселогы төҙөлдө. Күп кенә район партия ойошмалары төҙөлөшкә эшсе көсө мобилизациялау менән шөғөлләнде. 1934 йылда бында 3600 эшсе эшләне, шуларҙан башҡорттар 11 процент тәшкил итте, татарҙар —11, рустар —67, ҡатын-ҡыҙҙар 14 процент иҫәпләнде. Партия ойошмаһы ныҡ үҫте. 1933 йылдың июлендә уның сафында 50 коммунист бар ине, 1934 йылдың аҙағында инде улар 269 булды. Ошо уҡ осорҙа комсомол ойошмаһы 70 кешенән 665 кешегә етте [1]. Финанслау, планды үтәү, эшсе көс менән тәьмин итеү һәм материаль-техник тәьминәт, эшселәрҙең торлаҡ-көнкүреш шарттарын яҡшыртыу, уларҙы культура яғынан хеҙмәтләндереү — быларҙың бөтәһенә лә төҙөлөштөң партия ойошмаһы бик ныҡ иғтибар бирҙе. Партияның Башҡортостан Өлкә Комитеты төҙөлөш эшенең барышын даими күҙәтеп торҙо, килеп тыуған ҡыйынлыҡтарҙы бөтөрөү сараларын күрҙе.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты, урындағы партия һәм хужалыҡ органдарының үтенесенә яуап итеп, 1934 һәм 1935 йылдарҙа Өфө моторҙар эшләү заводын төҙөүҙе тиҙләтеү һәм уны финанслауҙы арттырыу тураһында ҡарарҙар ҡабул итте [2]. Икенсе биш йыллыҡта төҙөлөшкә бөтәһе 95,3 млн. һум аҡса бүленде.

Ауырлыҡтарҙың булыуына ҡарамаҫтан, төҙөлөш эше туҡтауһыҙ алға барҙы. Икенсе биш йыллыҡтың аҙағында завод ғәмәлдә сафҡа инде. 1936 йылда У-5 маркалы тәүге өс мотор, комбайндарға ҡуйып, уңыш йыйыуҙа һынап ҡарау өсөн, Ростов һәм Саратов ҡалаларына ебәрелде. 1937 йылда завод 1081 мотор эшләп сығарҙы һәм эшләүсе заводтар иҫәбенә индерелде.

Завод беренсе класлы, нигеҙҙә илебеҙҙә эшләнгән, техника менән ҡоралландырылғайны. Производство илебеҙҙең күп кенә эре предприятиелары менән кооперацияла алып барылды. Заводты Силәбе, Сталинград, Харьков трактор заводтары, Куйбышев карбюратор заводы, Одессаның — «Красный профинтерн», Мичуринскиҙағы

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122; оп. 12, д. 325, л. 275; «Красная Башкирия», 1933, 30 декабрь.

[2] Шунда уҡ, оп. 13, д. 21, л. 32; оп. 16, д. 45, л. 11.

У-5 маркалы комбайн моторы — моторҙар эшләү заводының тәүге продукцияһы.




В. И. Ленин исемендәге завод иң кәрәкле нәмәләр: сүкелгән металл, ҡойолған суйын һәм башҡа деталдәр менән тәьмин итеп торҙолар.

Өсөнсө биш йыллыҡ осоронда заводтың етештереү ҡеүәте арта барҙы. 1938 йылдың 15 ноябрендә биш меңенсе мотор эшләп сығарылды. Был ваҡиға хөрмәтенә заводта күп кеше ҡатнашҡан митинг үткәрелә, ә клубта моторҙың сифатын тикшереү буйынса Бөтә Союз конференцияһы асыла. Уның эшендә ҡунаҡтар — Мәскәү, Ленинград, Саратов ҡалаларының төрҙәш предприятиеларынан килгән вәкилдәр ҡатнаша.

1940 йылда Өфө моторҙар эшләү заводы, программаны уңышлы үтәп, 6500 комбайн моторы эшләп сығарҙы [1]. Шул уҡ йылдың уртаһында заводтың эшселәре һәм инженер-техник работниктары яңы продукция үҙләштереү эшенә әҙерләнә башланылар. Шул айҡанлы предприятиены реконструкциялау эше йәйелдерелде.

Республикала нефть промышленносының булдырылыуы Өфөнөң индустриаль үҫешендә айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә булды. 1932 йылда башҡорт нефте асылыу менән, Хеҙмәт һәм Оборона Советының махсус ҡарары буйынса Өфө — Ишембай тимер юлы төҙөлә башлай. Хеҙмәт һәм Оборона Советы СССР Ауыр промышленность ха-

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1476, л. 25, 26.

лыҡ комиссариатына юл төҙөүҙе 1934 йылда тамамларға тигән бурыс ҡуя. Коммунистарҙың эште яҡшы ойоштороуы, төҙөүселәрҙең хеҙмәт батырлығы, Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең, шул иҫәптән Өфө ҡалаһы хеҙмәтсәндәренең дә, массовый рәүештә ярҙам итеүе arҡаһында, тимер юл срогында, йәғни бер йылдан кәмерәк ваҡыт эсендә, файҙаланыуға тапшырылды. 1934 йылдың 30 сентябрендә Өфөнән Ишембайға цистерналар менән беренсе состав килде. Республиканың баш ҡалаһы нефть сығарыусы район, шулай уҡ ауыл хужалығы райондарының яңы торкомо менән тимер юл бәйләнеше тота башлай.

Нефть эшкәртеүҙе ойоштороу яңы яҡлыҡты үҙләштереүҙең мөһим һәм тамамлаусы өлөшө булды. Ләкин бының өсөн составында көкөрт күп булған Ишембай нефтен эшкәртеү менән бәйләнгән ҡатмарлы фәнни-техник проблемаларҙы хәл итергә кәрәк була. Был нефтте эшкәртеүҙең специфик үҙенсәлектәрен билдәләп, Хеҙмәт һәм Оборона Советы 1934 йылдың 25 ғинуарында үҙенең «Көнсығышта нефть промышленносын үҫтереү тураһындағы» ҡарарында Ауыр промышленность халыҡ комиссариатына тейешле тикшеренеү эштәрен тиҙләтеү, Башҡортостан нефтен эшкәртеү урынын һәм ысулын билдәләү бурысын ҡуйҙы.

Үткәрелгән тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе нигеҙендә 1935 йылда Ауыр промышленность халыҡ комиссариаты һәм «Главнефть» Өфө ҡалаһы районында нефть эшкәртеүсе ҙур завод төҙөү тураһында ҡарар ҡабул итте. Был предприятие өсөн хәҙерге заман установкаларын Американың «Алко» һәм «Луммус» фирмаларынан алыу күҙ уңында тотолдо. Заводтың технологик схемаһын эшләү менән күп кенә үҙәк ғилми-тикшеренеү учреждениелары шөғөлләнде. Улар нефтте һәм уны эшкәртеүҙән алынған продукттарҙы көкөртһөҙләндереү, аппараттарҙы һәм ҡорамалдарҙы коррозиянан һаҡлау бурыстарын хәл иттеләр.

Көкөртлө нефтте эшкәртеү тәжрибәһен өйрәнеү һәм Өфө заводын төҙөүҙең ҡайһы бер мәсьәләләрен асыҡлау өсөн, бер төркөм совет белгестәре АҠШ-ҡа командировкаға ебәрелә. 1936 йылдың апрелендә Наркомтяжпром илдә нефть эшкәртеүҙең беренсе гиганты булған Өфө крекинг заводының беренсе сиратын төҙөүҙең техник проектын һәм генераль сметаһын раҫланы [1].

Заводты төҙөү өсөн «Уфимкрекингстрой» тресы ойошторола. Төҙөлөштөң етәксеһе итеп бик тәжрибәле, хужалыҡлы кеше, 1919 йылдан Коммунистар партияһы ағзаһы Д. Л. Михайлов билдәләнә. Заводтың ғилми-тикшеренеү лабораторияһына 1920 йылдан ВКП(б) ағзаһы, химия фәндәре докторы, профессор К. П. Лавровский етәкселек итте. Заводты төҙөү эшен бер нисә сиратта алып барыу ҡаралды. Беренсе сират асыҡ төҫтәге нефть продукттарын максималь һайлап алыуҙы, икенсе тапҡыр ҡыуыуҙы һәм таҙартыуҙы, ТЭЦ һәм ярҙамсы объект-

---

[1] «Красная Башкирия», 1936, 24 апрель.

тар (резервуарҙар, эстакадалар, һыу менән тәьмин итеүсе һ. б. объекттар) төҙөүҙе тәьмин итеүсе установкаларҙы үҙ эсенә ала.

Өфө крекинг заводын төҙөү 1935 йылдың майында киң йәйелдерелде. 10 майҙа ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты бюроһы биш көн эсендә «Уфимкрекингстройҙың» партия һәм профсоюз ойошмаларын төҙөргә тәҡдим итте. Был ваҡытта коллективта 600 кеше бар ине, 1936 йылдың 1 сентябрендә инде 3613 кешегә етә, шуларҙың 3008-е эшсе була [1].

1936 йылдың февралендә заводтың төп технологик установкалары ҡорамалдарын монтажлау башлана. 1937 йылдың 8 ғинуарында һынау өсөн файҙаланып ҡарағанда атмосфера-вакуум трубчаткаһы беренсе бензинды бирә. Ләкин аппаратураны һәм ярҙамсы хужалыҡты һынап ҡарау кәмселектәр булыуын күрһәтә. Монтажлауҙың сифаты түбән була. Әҙер булып өлгөрмәгән нефть торбаларға тығыла, көкөрт аппаратураны ашай. Эксплуатациялаусылар ҙа эште ныҡлап белмәй.

Етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү эше йылдан артыҡ дауам итте: заводтың проекты камиллаштырылды, капиталь ярҙамсы ҡоролмалар эшләнде, заводтың икенсе һәм өсөнсө сиратын төҙөү башланды, нефть эшкәртеүсе кадрҙар әҙерләнде. Партия Үҙәк Комитеты күрһәтмәһе буйынса, өҫтәмә рәүештә ҙур ресурстар мобилизацияланды. Ҡабул ителгән саралар төҙөлөштә хәлде яҡшыртты. 1938 йылдың 20 июнендә тәүге 17 тонна Өфө бензины алынды. Крекингстрой заводҡа әйләнде. 1939 йылдың башында уның беренсе сиратын төҙөү тамамланды.

Предприятиены төҙөүҙә Мәскәү Метростройы төҙөүселәре һәм монтажсылары, Баку, Грозный, Батуми, Саратов нефть эшкәртеүселәре өфөләргә ҙур ярҙам иттеләр. Сит ил белгестәре заводҡа техник ярҙам күрһәтеүҙе туҡтатҡан бер мәлдә быньң әһәмиәте айырыуса ҙур булды. Башҡа ҡалалар предприятиеларынан килгән эшселәр объекттарҙы файҙаланыуға тапшырғанға тиклем төҙөлөштә үҙҙәре теләп ҡалдылар.

Өсөнсө биш йыллыҡ осоронда яңынан-яңы производство комплекстары сафҡа инде. 1940 йылдың аҙағында Өфө нефть эшкәртеү заводы иң яңы ҡорамалдар менән йыһазландырылған эре предприятиеға әүерелә. Был завод коллективында 2 меңгә яҡын кеше иҫәпләнә [2]. Ундан артыҡ ҡеүәтле установка автомобилдәргә, тракторҙарға, самолеттарға яғыулыҡ бирҙе. Яңы производстволар үҙләштерелде [3]. 1941 йылда заводтың дүртенсе сиратын төҙөү эше киң йәйелдерелде.

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 14, д. 10, л. 374; Никифоров Ю. Н. КПСС — организатор нефтеперерабатывающей промышленности в Башкирской АССР.— «Партия в борьбе за социально-экономические преобразования в Башкирии» тигән китапта. Мәҡәләләр йыйынтығы. Өфө, 1968, 177-се бит.

[2] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 21, д. 7, л. 110.

[3] Винкельман А. П., Сорина Г. М. Ветеран башкирской нефтепереработки. Өфө, 1968, 24, 30-сы биттәр.

Өфөнөң индустриаль үҫеше еңел, аҙыҡ-түлек промышленносы предприятиеларын булдырыу йүнәлеше буйынса ла барҙы.

1929 йылда кустарь мастерской базаһында 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы ойошторолдо. Һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтар осоронда производствоны техник яҡтан камиллаштырыу эше барҙы — тегеү машиналары электроприводҡа күсерелде, туҡымаларҙы бесеү механизациялаштырылды; төймә тишектәре элек ҡул менән эшләнһә, хәҙер уны машина башҡарҙы. Тегеүҙә ағым системаһы индерелде. Фабриканың тулайым продукцияһы артты, уның изделиелары төрлөләнә төштө. 1940 йылда фабрика пальтолар, ирҙәр костюмдары, салбарҙар, ҡатын-ҡыҙ күлдәктәре тегеп сығарҙы. Эшселәр һаны 2 мең кешегә етте. Был предприятие промышленность производствоһына ҡатын-ҡыҙҙарҙы, шул иҫәптән төп милләт ҡатын-ҡыҙҙарын, ылыҡтырыуҙа шаҡтай роль уйнаны.

Кустарь мастерской базаһында 1929 йылда Ворошилов исемендәге аяҡ кейеме фабрикаһы булдырылды. Ул 30-ҙан ашыу машина — тегеү, биҙәкләү, һуҙыу һ. б. машиналар алды. Был иһә күн сырьеһын рационалерәк файҙаланырға мөмкинлек бирҙе. Беренсе биш йыллыҡта фабрика эшенең башҡа сифат күрһәткестәре лә яҡшыра төштө. Аяҡ кейеме эшләп сығарыу йылына 15 мең парҙан 146 мең парға етте, һәр продукция берәмегенең үҙкиммәте 2 тапҡырға кәмене. 1940 йылда фабрикала өс йөҙҙән артыҡ кеше эшләне. 1932—1940 йылдарҙа төп производство фондтары һәм тулайым продукция ике тапҡырға тиерлек артты [1].

Беренсе биш йыллыҡ осоронда аҙыҡ-түлек промышленносының эре предприятиеларын — макарон һәм кондитер фабрикаларын төҙөү башланды. Йылына 20 тонна кондитер изделиеһы етештереүсе ҙур булмаған предприятие 1933 йылда 10 мең тонна күләмендә продукция эшләп сығарыусы фабрикаға әйләнде. Был фабриканы ойоштороусыларҙың береһе һәм уның тәүге директоры В. И. Алексеев булды. 1932—1940 йылдарҙа кондитер фабрикаһының тулайым продукцияһы —6 тапҡырҙан артығыраҡҡа, эшселәр һаны 5 тапҡырға артты һәм алты йөҙ кешегә етте [2]. 1935 йылда макарон фабрикаһы төҙөлөп бөттө. Ул етештереү технологияһын даими камиллаштыра барҙы, продукцияның ассортиментын киңәйтте. 1932 йылда Өфөлә яңы икмәк заводы, унан һуң һөт заводы сафҡа инде [3].

Ҡала промышленносы үҫешендә иҫке предприятиеларҙы реконструкциялау мөһим роль уйнаны. Мәҫәлән, беренсе биш йыллыҡтар осоронда 1-се һанлы дәүләт заводы капиталь ремонтланды, техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырылды. Уның тулайым продукцияһы — 3 тапҡырға тиерлек, эшселәр һаны ике тапҡырға артты (107 кеше-

---

[1] 15 лет Советской Башкирии. Мәҡәләләр йыйынтығы. Өфө, 1934, 12-се бит; ЦГА БАССР, ф. 472, оп. 6, д. 822, л. 17; д. 824, л. 94.

[2] ЦГА БАССР, ф. 472, оп. 6, д. 822, л. 17; д. 824, л. 94.

[3] Шунда уҡ, ф. 804, оп. 2, д. 428, л. 7, 8.

нән 205 кешегә етте)[1]. Паровоз-вагондар ремонтлау заводы ла реконструкцияланды. Локомотивтарҙы ремонтлауҙа заводтың үткәреү һәләтен ике тапҡырҙан артығыраҡҡа күтәреү күҙ уңында тотолдо. 1930—1931 йылдарҙа унда реконструкциялауҙың беренсе сираттағы объекттары — йыйыу һәм парлау цехтары барлыҡҡа килде. Шулай ҙа 9,5 гектар майҙанда урынлашҡан предприятиены уның янындағы тауҙы емереү юлы менән генә ныҡлап киңәйтергә мөмкин булды. Был эш ҙур өҫтәмә сығымдар талап итте. Шуға күрә артабан завод производство программаһының үҫеше, уның бүтән эш күрһәткестәренең яҡшырыуы производство техникаһын һәм хеҙмәтте ойоштороуҙы камиллаштырыу иҫәбенә барҙы. 3-сө, 13-сө, 15-се һанлы ағас заводтарында яңы тиҙ бысыусы пилорамалар ҡуйылды, энергетика ҡеүәте арттырылды. Өфөнөң үҙәгендә урынлашҡан фанера фабрикаһы Нижегородка районына ағас заводтары янына күсерелде. Был иһә сырьены һәм продукцияны ташыу эшен еңеләйтте.

Икенсе биш йыллыҡта Октябрь революцияһы исемендәге суднолар ремонтлау заводы һәм 1-се һанлы дәүләт заводы яңы техник нигеҙгә күсерелде. Һуңғыһы 1933 йылда алтын сығарыу промышленносы өсөн тау ҡорамалдары эшлән сығарыуға күсте. Биш йыллыҡтың аҙағына уның производство базаһы шаҡтай киңәйҙе, ҡойоу һәм ҡаҙан цехтары төҙөлдө, яңы станоктар һәм механизмдар алынды. 1937 йылдан алып тау ҡорамалдары заводы яңы конструкциялағы газогенераторҙар етештереүҙе үҙләштерҙе һәм алтын сығарыу промышленносы менән бергә нефть промышленносын да хеҙмәтләндерә башланы. Был завод насостар, вагонеткалар, гидранттар һәм башҡа әйберҙәр эшләп сығарҙы. 1933—1940 йылдарҙа заводтың тулайым продукцияһы 4 тапҡырға тиерлек артты.

Социалистик индустриализация шарттарында ҡаланың кустарь промыслаларын социаль һәм техник яҡтан реконструкциялау тамамланды. Тап быны оноnда промышленность производствоһы өлкәһендә шәхси капиталға һуңғы хәл иткес удар яһалды. Беренсе биш йыллыҡта Өфөнөң кооперацияға инмәгән 30 процент кустарҙары һәм һөнәрселәре кооперация аша социалистик төҙөлөшкә ылыҡтырылды. 1940 йылда ҡалала 35 млн. һумлыҡ етештереү программаһы булған 30-ҙан ашыу эре промысла артеле эшләне; промкооперацияла 5,4 мең ағза иҫәпләнә ине[2].

Индустриаль төҙөлөштөң киң ҡолас алыуы һәм эшләүсе предприятиеларҙа етештереүҙең артыуы ҡаланың энергетика базаһын киңәйтеүҙе талап итте. Үҙәк электр станцияһының икенсе һәм өсөнсө сираттары төҙөлдө, ҡатмарлы электротехник ҡорамалдар ҡуйылды. Һөҙөмтәлә 1939 йылда ЦЭС-тың (Бөйөк Ватан һуғышы алдынан

---

[1] 15 лет Советской Башкирии, 119-сы бит.
[2] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1332, л. 5; ЦГА БАССР, ф. 472, оп. 6, д. 824, л. 103.

уның исеме 1-се һанлы ГЭС тип үҙгәртелде) ҡеүәте 10 мең киловатҡа етте.

30-сы йылдар уртаһында крекинг заводы осөн 1-се һанлы Өфө ТЭЦ-ы һәм моторҙар эшләү заводы осон 2-се һанлы ТЭЦ төҙөлә башланы. 4 мең һәм 12 мең киловатт ҡеүәтле был электр станцияларының беренсе сираттары 1939 һәм 1940 йылдарҙа эшкә ҡушылды. Өфө промышленность үҙәге электр станцияларының дөйөм ҡеүәте 1940 йылда 26 мең киловатт тәшкил итте [1].

Эшләп килгән төҙөлөш ойошмаларын киңәйтеү һәм яңыларын төҙөү, шулай уҡ төҙөлөш материалдары эшләп сығарыусы предприятиелар асыу арҡаһында бик күп промышленность объекттары һалырға мөмкинлек тыуҙы. Алебастр, ангидрит-цемент һ. б. заводтар сафҡа инде. Өсөнсө биш йыллыҡта ҡалала 3-сө һанлы трест, «Уфимнефтезаводстрой» (ул «Уфимкрекингстрой» базаһында төҙөлдө, 1945 йылда уның исеме «Башнефтезаводстрой» тип үҙгәртелде) иң эре төҙөлөш ойошмалары эшләй ине... «Уфимнефтезаводстройҙа» 5—7 мең эшсе иҫәпләнде, һәм улар йыллыҡ етештереү программаһын 60 млн. һумға тиклем күләмдә үтәп килде [2].

Илебеҙҙең көнсығыш райондары, шул иҫәптән Башҡортостан, экономикаһының үҫеүе, хужалыҡ бәйләнештәренең нығыуы менән бергә Өфөнөң эре тимер юл узелы булараҡ та әһәмиәте артты. Беренсе биш йыллыҡ осоронда Һамар — Златоуст тимер юлының икенсе юлдарын реконструкциялау һәм һалыу, шулай уҡ Өфө — Ишембай тимер юлын төҙөү менән Өфө станцияһы аша йөк ташыу байтаҡҡа артты. 1926 йылда Өфө станцияһына 151,1 мең тонна йөк килде һәм 140,9 мең тонна оҙатылды. 1932 йылда уҡ инде йөк әйләнеше ике тапҡырҙан күберәккә, ә 1939 йылда 8 тапҡырға тиерлек артты.

Мәскәү — Волга каналын сафҡа индергәс тә, Тыуған илебеҙ баш ҡалаһы менән һыу юлы аша ла регуляр бәйләнеш тотолдо. 1938 йылдың 10 июлендә Мәскәүҙән Өфөгә «Софья Перовская» тигән беренсе пассажир пароходы килде. Был рейс 9 көнгә һуҙылды. Мәскәү йүнәлешендә бөтәһе Мәскәү — Ока пароходствоһының 11 һәм Ағиҙел пароходствоһының 8 судноһы йөрөнө [3]. 1926 йылда һыу юлы менән Өфөгә 96,8 мең тонна йөк килде һәм 5,9 мең тонна оҙатылды. 1939 йылда инде йөк ҡабул итеү —261,3 мең тоннаға, ә йөк оҙатыу 90,9 мең тоннаға етте [4].

30-сы йылдарҙың беренсе яртыһында ҡала һәм республика осөн хәҙерге заман транспортының яңы төрө — һауа транспорты барлыҡҡа килде. 1932 йылда Өфөгә өс У-2 (ПО-2) самолеты осоп килде, 1933 йылдың 15 июлендә Өфө — Магнитогорск — Белорет — Стәрле-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 804, оп. 6, д. 851, л. 49.
[2] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 21, д. 7, л. 132.
[3] «Красная Башкирия», 1938, 15 июнь.
[4] ЦГА БАССР, ф. 472, оп. 6, д. 822, л. 50; д. 824, л. 99.

Өфө аэропорты. 1933 йыл.



тамаҡ — Мәләүез — Мораҡ — Баймаҡ — Архангель — Өфө маршруты буйынса беренсе даими авиация линияһы асылды [1]. Шул уҡ йылда халыҡҡа ашығыс медицина ярҙамы күрһәтеү, ауыл хужалығы культуралары ҡоротҡостарына һәм йоғошло ауырыуҙар таратыусыларға ҡаршы көрәшеү өсөн авиазвенолар төҙөлдө. 1933—1934 йылдарҙа Өфө авиаторҙары 2,8 мең пассажир, 145,7 тонна почта һәм йөк ташыны, һауанан 100 меңгә яҡын гектар сәсеүлекте, һыу ятҡылығын һәм урманды эшкәртте [2]. 1939 йылда авиация линиялары Өфөнө Башҡортостан, Татарстан, Удмуртия ҡалалары һәм ауылдары, шулай уҡ Свердловск, Силәбе, Пермь, Куйбышев һәм Ырымбур өлкәләре менән бәйләне. Өфө аэропортының эшләүе арҡаһында Урал һәм Волга буйының бөтә административ үҙәктәре үҙ-ара һауа юлы менән бәйләнгәйне.

Өфөнөң йылдам индустриаль үсеше эшселәр синыфы кадрҙарының тиҙ үсеүенә килтерҙе. Тәүҙә улар ҡала халҡы: үсеп килгән йәштәр, элек производствола эшләмәгән өлкәндәр (ҡатындар, эшһеҙҙәр), элекке кустарҙар, һөнәрселәр һ. б. иҫәбенә артты. Ләкин эшсе көсөнөң бындай эске резервтары тиҙҙән бөттө. Стихиялы рәүештә килеү менән бергә эшселәрҙе, колхоздар менән договорҙар төҙөп, ойошҡан рәүештә йыйыу (ул 1931 йылда башланды) ҙур әһәмиәткә эйә булды. Уның буйынса республиканың баш ҡалаһы төҙөлөштәренә йыл һайын меңәрләгән ауыл кешеләре килде. Мәҫәлән, 1934, 1936 һәм 1937 йылдарҙа ауыл ерҙәренән Өфөгә 131,7 мең кеше килде [3]. Уларҙың, ғәҙәттә, квалификацияһы юҡ ине.

---

[1] «Советская Башкирия», 1973, 9 февраль.
[2] «Вечерняя Уфа», 1973, 9 февраль.
[3] Формирование и развитие советского рабочего класса Башкирской АССР. Беренсе киҫәк, 118-се бит.

Ҡала предприятиеларында эшселәрҙе производствонан айырмайынса профессиональ-техник уҡытыу системаһы йәшәне. Төрлө курстар ойошторолдо, бригада менән уҡыу ҡулланылды. Икенсе биш йыллыҡ осоронда производствола массовый уҡыу нигеҙҙә техник минимум түңәрәктәрендә барҙы, аҙаҡтан гостехэкзамендар тапшырылды. Өфөлә ул 1935 йылда башланды. Киләһе йылда уҡ моторҙар эшләү заводының 781 эшсеһе гостехэкзамен бирҙе. I баҫҡыс техминимумды үҙләштереүселәр II баҫҡыс техминимум курстарын, мастерҙар курстарын һ. б. үттеләр. 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһында экзамен тапшырыусыларҙың дүрттән өс өлөшө юғары һөҙөмтәләр күрһәтте.

Ҡала промышленносы һәм транспорты өсөн квалификациялы эшселәр әҙерләүҙең төп формаларының береһе булып фабрика-завод уҡыусылары мәктәптәре торҙо. Был мәктәптәр нигеҙҙә тимер юлсылар, ағас, металл эшкәртеүселәр әҙерләп сығарҙы.

Өфө, уның предприятиелары һәм төҙөлөштәре башҡорт, татар һәм республиканың башҡа милләттәренән эшсе кадрҙар әҙерләүҙә шаҡтай ҙур роль уйнаны. Был мәсьәләне хәл итеү эшсе көстө ойошҡан рәүештә йыйғанда, ФЗУ мәктәптәрен комплектлағанда ла иҫәпкә алынды, ФЗУ мәктәптәрендә төп милләт йәштәре өсөн махсус әҙерлек группалары ойошторолдо, уларға уҡыуҙа, материаль-көнкүреш хәлен яҡшыртыуҙа һ. б. һәр төрлө ярҙам күрһәтелде. 1935—1936 йылдарҙа, мәҫәлән, Өфө паровоз-вагондар ремонтлау заводының ФЗУ мәктәбен —86, моторҙар эшләү заводыныҡын 138 башҡорт тамамланы. Был иһә сығарылыштың 48 процентын тәшкил итте [1].

Предприятиеларҙың производствоға башҡорт, татар һәм крайҙың аҙ һанлы милләттәрен йәлеп итеү тураһында план төҙөү практикаһы милли эшсе кадрҙар булдырыуға ярҙам итте. Улар курстарҙа йыш ҡына осраҡта туған телдәрендә уҡынылар, производствола эшләүсе тәжрибәле эшселәргә беркетелделәр һ. б.

Күрелгән саралар милли промышленность кадрҙары әҙерләүҙә билдәле бер алға китеште тәьмин итте, ҡаланың күп кенә предприятиеларында уларҙың һанын арттырырға мөмкинлек бирҙе. Мәҫәлән, моторҙар эшләү заводында 1935 йылдың 1 июленә 104 башҡорт, йыл ярымдан һуң —349, татарҙар шуға ярашлы рәүештә 312 һәм 413 ине. 1935—1936 йылдарҙа ПВРЗ коллективында башҡорттарҙың һаны 2,6 проценттан 5,2 процентҡа етте [2].

Был процесс ҡала халҡы составында төрлө милләт вәкилдәре һанының артабан үҫеүенә килтерҙе. 1939 йылда инде Өфөлә 15,4 мең башҡорт бар ине, йәғни улар ҡалалағы бөтә халыҡтың 6,1 процен-

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 17, д. 48, л. 60; «Путь Ленина», 1935, № 6, 18, 19-сы биттәр.
[2] Шунда уҡ.

тып тәшкил итте. Был ваҡытта татарҙар 15,6 процентҡа етте, сыуаштар, мариҙар, мордвалар 2,8 процент ине [1].

Ҡалала эшселәрҙең дөйөм һаны 1927/28 хужалыҡ йылындағы 8 меңдән 1941 йылға 29 меңгә тиклем етте [2]. 1939 йылдағы перепись мәғлүмәттәре буйынса, Өфөнөң 107 мең эшләүсе халҡының 35 проценты промышленноста, 10,3 проценты — төҙөлөштә, 10,3 проценты транспортта һәм элемтәлә эшләне, йәғни улар бөтә хеҙмәтсәндәрҙең 55,6 процентын тәшкил итте [3].

Ҡаланың индустриаль үҫешендә ирешелгән етди уңыштар өфөләрҙең юғары хеҙмәт активлығының һөҙөмтәһе булды. Социалистик ярышты киң йәйелдергәндә хеҙмәт активлығы айырыуса ныҡ күренде (социалистик ярыш беренсе биш йыллыҡтың башында уҡ массовый төҫ алғайны). В. И. Лениндың беренсе тапҡыр 1929 йылдың 20 ғинуарында «Правда» газетаһында баҫылып сыҡҡан «Ярышты нисек ойоштороорға?» тигән мәҡәләһе ярыштың бөтә ерҙә таралыуына сигнал булды. 1929 йылдың мартында тимер юл мастерскойҙарында һәм депола юғары хеҙмәт күрһәткестәренә өлгәшкән инициативалы группалар һәм удар бригадалар бар ине инде. Улар Башҡортостандың беренсе удар бригадалары иҫәбенә инде. Апрель—май айҙарында фанера фабрикаһы, электр станцияһы коллективтары һ. б. ярышҡа ҡушылды. Предприятиелар бер-береһе менән хужалыҡ-политик договорҙар төҙөнө, делегациялар менән алмашты. 1929 йылдың уртаһына ҡаланың бөтә эре предприятиеларында удар бригадалар бар ине.

Өфө эшселәре социалистик ярыштың биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн барған хәрәкәт, удар предприятие исеме өсөн көрәш, тулы бригада, үҙөҫтәмә промфинплан, хозрасчетлы бригадалар төҙөү кеүек формаларында актив ҡатнашты.

1930 йылдың майына Өфө паровоз-вагондар ремонтлау заводы республиканың беренсе удар предприятиеһы булды. Иҫкесә ҡорамалланған ПВРЗ паровоздар һәм вагондар ремонтлау буйынса иң юғары күрһәткестәргә өлгәште һәм илебеҙҙең төрҙәш предприятиелары менән ярышта еңеүсе булып сыҡты. Бында 138 удар бригада, 1700-ҙән артыҡ ударник хеҙмәт итте. Завод партияның XVI съезы хөрмәтенә «Ҡыҙыл исемлеккә» индерелде, һәм ул тимер юлсылар профсоюзы Үҙәк Комитетының һәм «Гудок» газетаһының күсмә Ҡыҙыл байрағын яулап алды. Завод коллективы Башҡортостанда йәмәғәт буксиры төҙөүҙең инициаторы ла булды, ул «Октябрь натискыһы» типографияһына өҙөклөктө бөтөрөүҙә ярҙам итте. 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы эшселәре үҙөҫтәмә план ҡабул иттеләр, улар продук-

---

[1] Народное хозяйство и культурное строительство Башкирской АССР. Статистический сборник. Өфө, 1964, 19-сы бит.

[2] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 10, л. 2; ЦГА БАССР, ф. 30, оп. 1, д. 4, л. 1—8.

[3] Население Башкирской АССР по данным Всесоюзной переписи населения 1939 г. Өфө, 1941, 37-се бит.

ция етештереү буйынса дәүләт планына ҡарағанда юғарыраҡ йөкләмәләр алдылар. Беренсе биш йыллыҡ аҙағына ҡала заводтарында һәм фабрикаларында эшселәрҙең 60 проценттан артығырағы социалистик ярышҡа ҡушылды. Был хәрәкәттең башында коммунистар һәм комсомолецтар торҙо. Производствола эшләгән коммунистарҙың 68 проценты ярышта ҡатнашты, шул иҫәптән ПВРЗ-ла коммунистарҙың 76 проценты, депола —81, Үҙәк электр станцияһында 99 проценты ярышҡа ҡушылды [1]. Икенсе биш йыллыҡ башында Өфө эшселәре араһында хеҙмәт активлығының яңы формалары таралды: үҙөҫтәмә пландарҙы һәм хозрасчеттағы бригадаларҙың эштәрен камиллаштырыу, йәмәғәт һәм дәүләт техник экзамендары үткәреү, производство отличниктары хәрәкәте, изотовсылар хәрәкәте һ. б. Паровоз-вагондар ремонтлау заводында, мәҫәлән, 452 кешенән торған 8 хозрасчет бригадаһы төҙөлөләр [2].

30-сы йылдар уртаһынан социалистик ярыштың үҫешендә яңы этап башланды — стахановсылар хәрәкәте барлыҡҡа килде. Уны түбәндәге сифаттар: норманы массовый рәүештә күп тапҡырға арттырыу, тәжрибә менән киң уртаҡлашыу, производство алдынғыларының техник прогреста ижади ҡатнашыуы характерлаған.

Башҡортостанда стахановсылар хәрәкәтен башлаусылар араһында өфөләр — ПВРЗ тимерсеһе И. А. Ворончихин, паровоз машинистары коммунист А. Г. Гурин һәм Я. П. Чернов, аяҡ кейемдәре фабрикаһы эшсеһе комсомолец В. И. Лоскутов һ. б. була. Новаторҙарҙың ҡаҙаныштары көндән-көн арта барҙы. Иң мөһиме шул: улар физик көсөргәнеш һөҙөмтәһе түгел, ә техниканы яҡшы үҙләштереү, эш методтарын камиллаштырыу һөҙөмтәһе була. Мәҫәлән, 1935 йылдың 15 октябрендә стахановсы В. И. Лоскутов смена заданиеһын ике сәғәткә алда үтәй, унан һуң ул ике норма бирә башлай, һуңға табан рекордлы күрһәткескә ирешә — норманы 450 процентҡа арттырып үтәй [3].

ВКП(б) Үҙәк Комитетының декабрь (1935 йыл) Пленумы ҡарарҙары нигеҙендә ҡаланың партия һәм хужалыҡ органдары стахановсылар сменалары, тәүлектәре, биш көнлөктәре һәм ун көнлөктәре ойоштороу буйынса ҙур эш алып барҙылар. 1935 йылдың 30 декабрендә ПВРЗ-ның тимерлек һәм ҡойоу цехтарында тәүге стахановсылар сменалары булып үтте. Шул уҡ ваҡытта стахановсылар участкалары барлыҡҡа килде. Бөтә Союз стахановсылар биш көнлөктәре көндәрендә (1936 йылдың 20—25 ғинуары) крекинг заводы төҙөлөшөндә нормалар 177 процентҡа үтәлде [4]. Биш көнлөктәр барышында Черниковск фанера комбинаты, шырпы һәм макарон фабрикалары, тегеү фабрикаһының айырым участкалары һәм башҡа кол-

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 12, д. 304, л. 91.

[2] Формирование и развитие советского рабочего класса Башкирской АССР. Беренсе киҫәк, 165-се бит.

[3] «Красная Башкирия», 1935. 18 октябрь, 16 ноябрь, 11 декабрь.

[4] Шунда уҡ, 1936, 29 ғинуар.

лективтар юғары производство күрһәткестәренә олгәштеләр. 1936 йылдың августында ҡала предприятиелары стахановсылар уң көнләгендә ҡатнаштылар. Моторҙар эшләү һәм нефть эшкәртеү заводтарының төҙөүселәре өҫтөн сыҡтылар. Моторҙар эшләү заводының ҡойоу цехында уң көнлөктөң тәүге көнөндә үк 78 кеше заданиеларын 150—200 процентҡа үтәне [1].

Тәүҙә ҡала предприятиеларында стахановсылар бик аҙ ине. Яңы хәрәкәт сағыштырмаса бик тиҙ арала хеҙмәтсәндәрҙең киң ҡатламдарын солғап алды. 1937 йылдың башына ПВРЗ-ла стахановсылар эшселәрҙең 35 процентын, моторҙар эшләү заводында (төҙөлөштән башҡа) — 36, «Уфимкрекингстройҙа» 43 процентын тәшкил итте [2]. 1941 йылда новаторҙар хәрәкәтендә Өфөләге 29 мең эшсенең 55 проценты ҡатнашты [3]. Һуғыштан алдағы йылдарҙа ярыштың бер юлы бер нисә станокты хеҙмәтләндереү һәм бер нисә профессияға эйә булыу кеүек формалары барлыҡҡа килде. Өфөлә был мөһим башлаңғыстарҙың инициаторҙары Октябрь революцияһы исемендәге судноләр ремонтлау заводының эшселәре булды. Тиҙҙән уларға эйәреүселәр бөтә эре предприятиеларҙа ла барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, 1939 йылда моторҙар эшләү заводында 57 стахановсы, 117 станокты хеҙмәтләндереп, продукция эшләп сығарыуҙың юғары кимәленә өлгәштеләр. Инструменталь цехтың күп станоксыһы И. Н. Бобров, мәҫәлән, сменаға 3—4 норма үтәне [4].

Новаторҙар үҙҙәренең оҫталыҡтарын йөҙләгән эшсе менән уртаҡлашты. Моторҙар эшләү заводында ғына 1941 йылдың башында 67 стахановсылар мәктәбе эшләне, унда 538 кеше уҡыны [5]. Производствола эшләүсе йәштәр алдынғы эшселәрҙең тәжрибәләрен уңышлы үҙләштерҙе. 1941 йылда Өфө предприятиеларында эшләүсе 3740 комсомолецтың 61,5 проценты стахановсы һәм ударник ине. Улар хеҙмәттә ҙур фиҙакәрлек һәм инициатива күрһәтте. Инженер-комсомолец Н. Л. Вовченко етәкселегендәге комсомолец йәштәр бригадаһы 1940 йылдың июлендә нефть эшкәртеү заводында «Луммус» установкаһын ҡорғанда бик ҡатмарлы мәсьәләне хәл итте. Улар, сит илдең ҡиммәтле күтәргесенән баш тартып, ифрат ҙур колоннаны үҙебеҙҙә эшләнгән кран ярҙамында күтәрҙеләр һәм алтынлата йөҙләгән мең һумлыҡ экономия яһанылар [6].

Ҡала предприятиеларында производство дисциплинаһын нығытыу, коллективтарҙы дәүләт пландарын үҙ ваҡытында үтәү өсөн мобилизациялау буйынса эш үткәрелде. 1940 йылдың августында Өфө партия активы йыйылышы СССР Верховный Советы Президиумы-

---

[1] Формирование и развитие советского рабочего класса Башкирской АССР. Икенсе киҫәк, 172-се бит.

[2] ПА БОК КПСС, ф. 122. оп. 17. д. 48. л. 58.

[3] Шунда уҡ. ф. 342, оп. 2. д. 1332, л. 40.

[4] «Красная Башкирия», 1940. 14, 16 гинуар.

[5] ПА БОК КПСС. ф. 342. оп. 2, д. 1332, л. 28.

[6] Шунда уҡ, д. 1331, л. 2, 3.

ның 1940 йылдың 26 июнендә сығарған «Һигеҙ сәғәтлек эш көнөнә, ете көнлөк эш аҙнаһына күсеү тураһында һәм эшселәрҙең, хеҙмәткәрҙәрҙең предприятиеларҙан һәм учреждениеларҙан рөхсәтһеҙ китеүен тыйыу тураһындағы» Указын үтәү буйынса саралар билдәләне. Был Указ һуғыш ҡурҡынысы үҫә барған шарттарҙа промышленносты күтәреү өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булды. Производствоны ойоштороуҙы яҡшыртыу, прогулдар һанын һәм кадрҙарҙың алмашынып тороуын кәметеү тәьмин ителде. 56 эре предприятие буйынса 1940 йылдың беренсе яртыһында прогулдар һаны 7,3 мең тәшкил итһә, шул уҡ йылдың икенсе яртыһында улар 3,4 мең булды, йәғни ике тапҡырҙан артығыраҡҡа кәмене. Шул уҡ осорҙа кадрҙарҙың алмашынып тороуы 3 тапҡырға тиерлек аҙайҙы [1].

XVIII Бөтә Союз партия конференцияһының (1941 йыл, февраль) илдең экономик һәм оборона ҡеүәтен көсәйтеүгә йүнәлтелгән ҡарарын бойомға ашырыу Өфө промышленносының эшен артабан камиллаштырырға булышлыҡ итте. Конференция йомғаҡтары 1941 йылдың 1 мартында ҡала партия активында һәм бөтә предприятиелар коллективтарының йыйылыштарында тикшерелде. Төп иғтибар штурмсылыҡты, технологик дисциплинаны боҙоуҙарҙы, ҡорамалдарҙың тулыһынса файҙаланылмауын бөтөрөүгә йүнәлтелде. Крекинг заводының, ПВРЗ-ның, «Дубитель» заводының һ. б. эшмәкәрлеген шаҡтай яҡшыртыу буйынса саралар күрелде. 1941 йылдың июненә эш графигын еренә еткереп үтәү өсөн көрәштә беренсе уңыштарға ирешелде. Октябрь революцияһы исемендәге суднолар ремонтлау заводы, фанера комбинаты, яҙыу машиналары заводы һ. б. продукция эшләп сығарыуҙың ярты йыллыҡ заданиеһын арттырып үтәнеләр.

Һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтар осоронда Өфөнөң индустриаль үҫешендә ҙур алға китеш булды. Ҡала промышленносын үҫтереүгә бик күп аҡса тотолдо. Предприятиеларҙың төп етештереү фондтары үҫте. Мәҫәлән, тегеү фабрикаһында етештереү фондтары 1932—1940 йылдарҙа 321 мең һумдан (1926 йыл хаҡтарында) 1,4 млн. һумға, кондитер фабрикаһында —892 мең һумдан 2,4 млн. һумға, тау ҡорамалдары заводында 695 мең һумдан (1933 йыл) 1 млн. һумға тиклем артты. Ләкин ҡала промышленносының етештереү фондтары нигеҙҙә яңы эре предприятиелар иҫәбенә үҫте. Шуны билдәләү ҙә етә: нефть эшкәртеү заводының ғына етештереү фондтарының ҡиммәте 1940 йылға 75,3 млн. һумға етте [2].

Бөтә ҡала промышленносы яңы техник нигеҙгә күсерелде. Егермегә яҡын эре предприятие сафҡа инде. Промышленностың тармаҡ структураһында үҙгәрештәр булды, уға 15 промышленность наркоматының предприятиелары инде. Производствоның яңы тармаҡтары — машиналар эшләү, нефть эшкәртеү һ. б. уңышлы үҫте. Өфө предприятиелары комбайн моторҙары, бензин, тау ҡорамалдары, фанера,

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1331, л. 33.
[2] ЦГА БАССР, ф. 472, оп. 6, д. 822, л. 17; д. 824, л. 94.

шырпы, кейем-һалым, аяҡ кейеме һ. б. эшләп сығарҙы. Биш йыллыҡтар осоронда ҡаланың яңы Черниковск промышленность районы (Сталин районы) үҫеп сыҡты. Унда ҙур хәҙерге заман заводтары һәм фабрикалары төҙөлдө, 50 меңдән ашыу кеше йәшәне. Ул Өфө районының 15 ауылын ҙур Өфө эсенә индерҙе.

Ҡала промышленность предприятиеларының тулайым продукцияһы 1927/28 хужалыҡ йылында 10,9 млн. һумға тигеҙ ине, 1933 йылда —48,8 млн., 1937 йылда —126 млн., ә инде 1940 йылда 169,5 млн. һумға етте [1]. Был һуңғы һуғыш алды йылында Өфө промышленносы етештереү күләме буйынса 1913 йылғы кимәлде 44 тапҡырға уҙып китте [2]. Башҡортостан баш ҡалаһының индустриаль үҫеш темптары дөйөм республиканыҡынан 4 тапҡырҙан күберәккә артты. Өфө республиканың промышленность үҫешендә ныҡлы рәүештә алдынғы урынды алып торҙо.

## § 2. Өфөнөң ижтимағи-политик тормошо

Һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтар юғары хеҙмәт күтәренкелеге менән генә түгел, бәлки Өфө хеҙмәтсәндәренең политик активлығының артабан үҫеүе менән дә характерланды. Өфө хеҙмәтсәндәре дәүләт эштәре менән идара итеүгә, уның үҙәк һәм урындағы органдарын ойоштороуға киңерәк ылыҡтырыла барҙы. Ҡаланың ижтимағи-политик тормошонда Өфө партия ойошмаһы етәксе ролде уйнаны.

1929 йылға ул 3133 коммунисты берләштерҙе, шуларҙың 1128-е производство эшсеһе, 1376-һы хеҙмәткәр ине [3]. Партия ойошмаһының милли составында ҡала халҡынан башҡорттар менән татарҙар сағыштырмаса аҙ ине. 1929 йылда партия сафтарын сит һәм тарҡалған элементтарҙан таҙартыу үткәрелде. Ҡала ячейкаларын таҙартҡанда ундағы ағзаларҙың 8,5 процентҡа тиклеме партия сафынан сығарылды. Промышленностың үҫеүе айҡанлы коммунист-эшселәр һаны артты. 1941 йылдың июнендә Өфө партия ойошмаһында 7742 коммунист иҫәпләнде. Фабрика-завод, төҙөлөш һәм башҡа ячейкалар селтәрҙәренең киңәйеүе менән Өфө партия ойошмаһының йоғонтоһо көсәйҙе. Мәҫәлән, 1929 йылда ҡалала 54 партия ячейкаһы иҫәпләнгән булһа, 1941 йылдың уртаһына инде коммунистар һаны 15-тән дә кәм булмаған тәүге партия ойошмалары ғына ла 94 ине [4].

ВКП(б) ҡала комитетының төҙөлөүе Өфө тормошо менән етәкселек итеүҙе яҡшыртыуҙа мөһим әһәмиәткә эйә булды. Тәү тапҡыр партия ҡала комитеты 1928 йылдың майында ике район партия

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1273, л. 2.
[2] Уфа за годы Советской власти (Статистический справочник), 25-се бит.
[3] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 7, д. 75, л. 128.
[4] Шунда уҡ, ф. 342, оп. 2, д. 1434, л. 131.

ойошмаһын ҡала ойошмаһы итеп берләштергәндән һуң төҙөлдө. Шулай ҙа республиканы райондарға бүлгәндә, 1931 йылдың башында партияның Өфө ҡала комитеты урынына ҡаланың ике район комитеты яңынан әлекке хәленә ҡайтарылды. 1934 йылда партияның Башҡортостан Өлкә Комитеты юллауы буйынса ВКП(б) Үҙәк Комитеты партияның Өфө ҡала комитетын төҙөү тураһында ҡарар сығарҙы. 1934 йылдың июнендә I ҡала партия конференцияһы булып үтте. Алдағы ике йылда Өфөлә өс район партия ойошмаһы төҙөлдө, 1941 йылға инде уларҙың һаны бишкә етте.

Өфөләрҙең профессиональ яҡтан ойошҡан булыуы уларҙың политик активлыҡтары күтәрелеүгә булышлыҡ итте. Беренсе биш йыллыҡтар осоронда ҡалала профсоюз ойошмаларының, айырыуса индустриаль союздарҙың, һаны артты. 1931 һәм 1934 йылдарҙа профсоюздарҙы тармаҡ буйынса һәм территориаль яҡтан ваҡайтыу үткәрелде. Өфөлә көнсығыш райондарҙың нефть промыслалары эшселәр союзының Үҙәк Комитеты үҙенең эшен йәйелдереп ебәрҙе. Ваҡайтыуҙар профсоюз органдарын цехҡа һәм бригадаға яҡынайтты, профсоюздарҙың түбәнге звеноларына етәкселек итеүҙе конкретлаштырыу өсөн шарттар тыуҙырҙы.

Ҡала тормошонда комсомолдың роле күтәрелде. Комсомолецтар күп кенә ҡиммәтле башланғыстарҙың инициаторҙары булдылар. Комсомол ойошмалары селтәре үҫте. 1934 йылда Өфөлә ВЛКСМ-дың ҡала, унан һуң район комитеттары ойошторолдо.

Социалистик төҙөлөштәге уңыштар хеҙмәтсәндәрҙең һайлауҙарҙа һәм ҡала Советы эшмәкәрлегендә киңерәк ҡатнашыуын тәьмин итте. 1929 йылда Советтарға һайлауҙарҙа хеҙмәтсәндәр һайлаусыларҙың 49 процентын, 1931 йылда —83, 1934 йылда 85 процентын тәшкил итте[1]. Һайлау кампаниялары барышында массовый агитация эше киң йәйелдерелде, һайлау алды йыйылыштары үткәрелде, депутаттарҙың отчеттары тыңланды.

Хеҙмәтсәндәрҙең социаль активлығының үҫеше ҡала Советы составын, беренсе сиратта эшселәр вәкилдәрен арттырыу иҫәбенә, яҡшыртырға мөмкинлек бирҙе. 1929 йылда Советҡа һайланған 228 депутаттың 39,4 процентын эшселәр, 33,2 процентын ҡатынҡыҙҙар, 48,4 процентын коммунистар тәшкил итте; 1934 йылда инде 470 депутаттың 41,3 процентын эшселәр, 34,5 процентын ҡатынҡыҙҙар, 56,8 процентын коммунистар алып торҙо. Шул уҡ йылдарҙа Советҡа һайланыусылар араһында башҡорттар 9.6 проценттан 16,4 процентҡа тиклем, татарҙар 14,2 проценттан 17,7 процентҡа тиклем артты[2].

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 10, д. 169, л. 172.

[2] Материалы к отчету о работе Уфимского городского Совета рабочих, крестьянских и красноармейских депутатов 13-го созыва за 1931—1934 гг. Өфө, 1934, 6-сы бит; Выборы в Советы Башкирии в 1934 г. Өфө, 1935, 50, 51-се биттәр.

Өфө Советының социаль-культура һәм административ-хоҡуҡ өлкәләрендә хоҡуҡтары киңәйҙе. 1928 йылдың 8 февралендә СССР Үҙәк Башҡарма Комитеты Президиумы раҫлаған ҡала Советтары тураһындағы положение нигеҙендә ҡала эсендәге төҙөлөштәр һәм ерҙәр Өфө Советына беркетелде. Предприятиелар һәм культура-көнкүреш учреждениелары (мәктәптәр, больницалар, мунсалар һ. б.) уның ҡарамағына күсте, ә улар менән етәкселек итеү өсөн махсус коммуналь бүлек ойоштоstartолдо. Советтың бюджет хоҡуҡтары киңәйҙе.

Республиканың партия һәм дәүләт органдары ҡала Советы пленумы эшен яҡшыртырға тырышты, ҡалалағы хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөнөң актуаль мәсьәләләрен тикшерҙе. Бындай тикшереүҙәр йөҙләгән эшсе, интеллигенция вәкилдәре өсөн дәүләт идараһы мәктәбенә әүерелде. 1930 йылда ғына Советтың 11 пленумы ултырыштарында 1449 кеше ҡатнашты. Депутаттарҙың һәм активистарҙың тормош тәжрибәһе, массаларҙың ихтыяждарын белеүҙәре ҡаралған мәсьәләләр буйынса дөрөҫ ҡарарға килергә ярҙам итте.

Ҡала Советы депутаттарының активлығы артты. Улар һайлаусылар алдында үҙҙәренең эшмәкәрлеге һәм ҡала Советының эше тураһында даимирәк отчет бирә башланылар. Һайлаусылар кәрәк булған осраҡтарҙа депутаттарҙы саҡыртып алыу хоҡуғынан файҙаландылар. Һайлаусыларҙың Совет эшендә ҡатнашыуының бер формаһы наказдар төҙөү ине. Мәҫәлән, 1934 йылда ҡала Советына наказдарҙа 3 меңгә яҡын тәҡдим була, уларҙа коммуналь һәм торлаҡ шарттарын, һаулыҡ һаҡлауҙы, культуралы хеҙмәтләндереүҙе, халыҡ мәғарифын, сауҙаны һ. б. яҡшыртыу күҙҙә тотолған.

Хеҙмәтсәндәрҙең ҡала Советы секцияларында ҡатнашыуы активлаша барҙы, секцияларҙың һаны төрлө йылда төрлөсә —10-дан алып 22-гә тиклем булды. Секциялар мөһим мәсьәләләрҙе алдан өйрәнделәр, улар буйынса рекомендациялар әҙерләнеләр. Унан һуң был мәсьәләләр Советта йәки уның башҡарма комитетында ҡаралды. Сауҙа-кооператив, финанс, халыҡ мәғарифы, транспорт, коммуналь секциялары айырыуса актив эшләне. Мәҫәлән, 1933 йылда сауҙа-кооператив секцияһы контроль постар ҡуйҙы, ҡала яңы хужалыҡтарына ярҙам ойоштorҙо, сауҙа ойошмаларында дәүләт аҡсаһын туҙҙырыуҙарҙы һ. б. фаш итте.

1932 йылдан Өфө предприятиеларында депутат группалары төҙөлә башлай. 1934 йылдың икенсе яртыһынан уларҙың һаны ҡапыл арта. Шул уҡ йылдағы һайлауҙарҙан һуң ҡалала 81 депутат группаһы төҙөлә: предприятиеларҙа — 63, учреждениеларҙа —11, уҡыу йорттарында 7 группа эшләне. Паровоздар депоһының, тау ҡорамалдары заводының, 8 Март исемендәге фабриканың һ. б. депутат группалары ҙур энергия менән эшләне. Депоның депутат группаһы һайлаусыларҙың 40 наказын үтәү буйынса саралар билдәләне. Һәр депутат эштең айырым участкаһына беркетелде. Тау ҡорамалдары заводында ике цех депутаттар группаһы ойошторолдо. Предприятиеның етәкселәре менән бергәләп улар стахановсылар хәрәкәтен йәйел-

дереү өсөн көрәштеләр, эшсе көстө дөрөҫ урынлаштырыуға, бракты аҙайтыуға өлгәштеләр. 1931—1934 йылдарҙа секциялар һәм депутат группалары эшенә 12,6 мең активист ылыҡтырылды, ә инде төрлө слеттарҙа, конференцияларҙа 42,4 мең кеше ҡатнашты.

Эшселәрҙең һәм ҡалалағы бөтә хеҙмәтсәндәрҙең политик активлығы үҫеү республика дәүләт аппаратының эшмәкәрлеген яҡшыртыуға булышлыҡ итте. Производство коллективтарының аппаратты таҙартыу буйынса кампанияларҙа ҡатнашыуы, эшселәрҙе станоктан дәүләт аппаратына үрләтеү, предприятиеларҙың учреждениеларға шефлыҡ итеүен ойоштороу был йәһәттән мөһим роль уйнаны.

Республиканың түбән аппараттарын, паркоматтарын тикшереүҙә һәм уларҙы синыф булыу яғынан сит, тарҡалған, бюрократик элементтарҙан таҙартыуҙа Өфө ҡалаһының тимер юлсылар, печатниктар, металлистар, аҙыҡ-түлек промышленносы эшселәре бригадалары ҡатнашты. 1931 йылда Өфө Советының РКИ секцияһы 13 учреждениеға таҙартыу үткәрҙе. 222 сотрудник персональ рәүештә һәм 213 сотрудник дөйөм список буйынса тикшерелде. Бөтәһе 24 кеше эштән сығарылды, 93 сотрудникка төрлө шелтә бирелде. Һөҙөмтәлә тикшерелеүселәрҙең 10 процентҡа яҡыны республика аппаратынан сығарылды.

1929—1932 йылдарҙа Башҡортостандың промышленность предприятиеларынан, төҙөлөштәренән һәм транспортынан 3 меңгә яҡын эшсе дәүләт һәм хужалыҡ учреждениеларына даими эшкә үрләтелде. Уларҙың байтаҡ өлөшөн өфөләр тәшкил итте. Тимер юл мастерскойҙарынан ғына 1928—1929 йылдарҙа 95 кеше үрләтелде, уларҙан 21 кеше республика органдарына, 4 кеше — ҡала, 10 кеше пердприятие эсендә үрләтелде, 60 кеше колхоз һәм совхоздарға ебәрелде. Күрһәтелгән кандидатуралар тәүҙә эшселәр йыйылыштарында тикшерелде. Ҡала предприятиелары коллективтары, уларҙың партия һәм профсоюз ойошмалары үрләтелгән кешеләргә ярҙам иттеләр, улар менән даими бәйләнеш тоттолар.

Аппарат эшен яҡшыртыу маҡсатында Өфө хеҙмәтсәндәре Мәскәү эшселәренең башланғысын яҡланылар һәм бер нисә дәүләт ойошмаһына шефлыҡ иттеләр. 1930 йылдан алып 1-се һанлы дәүләт заводы Башҡортостан ауыл хужалығы банкыһына, тимер юл депоһы — игенселек наркоматына, паровоз-вагондар ремонтлау заводы БАССР финанс наркоматына шефлыҡ итте һ. б. 1931 йылда эшселәр ҡаланың 11 учреждениеһына шефлыҡ итте. Депоның шефлыҡ итеүсе бригадаһы, мәҫәлән, 50 кешенән торҙо. Эшселәр группаһы БАССР игенселек наркоматы бүлектәренә беркетелгәйне. Улар аппараттың эшкә һәләтлеген, сотрудниктарҙың социаль составын, таҙартыу үткәреү буйынса комиссия ҡарарҙарының үтәлешен тикшерҙеләр. Бригаданың инициативаһы буйынса наркоматта үрләтелгән кешеләр өсөн курстар эшләне. Шефлыҡ итеүсе бригадалар үҙ эшмәкәрлегенең һөҙөмтәләре тураһында завод йыйылыштарында, БАССР эшсе-крәҫтиән инспекцияһы наркоматы коллегияһы ултырыштарында отчет

бирҙеләр. Бындай шефлыҡ түбәндән эшселәрҙең массовый контроле һәм производство эшселәренең дәүләт менән идара итеүҙә ҡатнашыу формаһы, дәүләт аппараты эшмәкәрлегенә уларҙың даими тәьҫир итеү формаһы булды.

Заводтарҙың һәм фабрикаларҙың учреждениеларға шефлыҡ итеүе нигеҙендә, 1930 йылда Ленинградтың «Красный путиловец» заводы эшселәре инициативаһы буйынса социалистик совместительство барлыҡҡа килде. Был шунан ғибарәт ине: эшселәр, производствонан ҡалып, дәүләт аппаратында идара итеүҙең айырым функцияларын түләүһеҙ башҡарҙылар. Мәҫәлән, ПВРЗ коллективы БашЦИК-ка социалистик совместительство тәртибендә эшләү өсөн 9 кеше ебәрә. Уларҙың береһе — электр станцияһы машинисы ударник Д. В. Попков, уның производство һәм тормош тәжрибәһе ҙур була. Уға хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын ҡарау эшен тапшыралар. Атап әйткәндә, ул бер крәҫтиәндең дөрөҫ раскулачить итмәүҙәре тураһындағы жалобаһын ентекләп тикшерә, был ҡарарҙың юҡҡа сығарылыуына һәм ғәйепле кешеләргә яза бирелеүгә ирешә. Һуңынан Д. В. Попков Өфөнөң водопровод селтәре директоры итеп тәғәйенләнә һәм ошо посында үҙен күрһәткән эшселәр коллективының ышанысын аҡлай.

Ҡала хеҙмәтсәндәре контроль эшенә һәм совет аппараты эшен яҡшыртыуға ҡала Советы эшсе-крәҫтиән инспекцияһы секцияһы һәм РКИ-ҙың предприятиеларҙағы ярҙам итеү группалары аша ылыҡтырылды. 1931 йылдан алып киң таралған ярҙам итеү группалары партия һәм хөкүмәт, партия-дәүләт контроле органдары ҡарарҙарының үтәлешен тикшерҙеләр, жалобалар һәм ғаризаларҙы тикшереүҙә ҡатнаштылар. Хеҙмәтсәндәрҙең дәүләт һәм хужалыҡ аппараты эшмәкәрлегенә контроллек итеүе «еңел кавалерия» группалары, РКИ жалобалар бюроһы аша ла бойомға ашырылды.

РКИ жалобалар бюроһы ҡыҫҡа ваҡытлы тикшереүҙәр үткәргән, ул ваҡытта уны «налеттар» тип атағандар. Бындай тикшереүҙәр ҡапыл үткәрелгән, тикшереүселәр учреждениеға килгәндә үҙҙәрен гәҙиттәге килеп йөрөүселәр итеп күрһәткәндәр. Ошондай бер күмәк тикшереү, мәҫәлән, 1929 йылдың апрелендә булып үтә. Унда Өфө предприятиеларынан 75 эшсе, рабкорҙар бригадаһы, 2 «еңел кавалерия» отряды ҡатнаша. Учреждениеларҙа бюрократизм, волокита, хеҙмәт дисциплинаһын боҙоу факттары фаш ителә [1]. Рейд һөҙөмтәләре республика газеталарының «РКИ биттәрендә» яҡтыртылды.

Өфөлә район Советтары төҙөлөү айҡанлы хеҙмәтсәндәрҙе дәүләт власы органдары эшмәкәрлегенә ылыҡтырыу артты. 1935 йылдың ноябрендә иҫке ҡала эсендә Ленин һәм Киров райондары төҙөлдө. 1936 йылда Сталин районы барлыҡҡа килде, ул промышленносы яңы төҙөлөштәрҙе, элекке Черниковск поселок Советын үҙ эсенә алды. Һуңыраҡ, 1938 йылдың апрелендә, Киров һәм Ленин райондары бағайтылды һәм тағы ике район ойошторолдо. Был биш райондан

[1] «Красная Башкирия», 1929, 26 апрель.

тыш, Өфө ҡала Советына Дим һәм Затон поселок Советтары буйһона ине. 1939 йылғы перепись мәғлүмәттәре буйынса, Өфө ҡалаһы территорияһында 250 меңгә яҡын кеше йәшәгән, шул иҫәптән Ленин районында 54,2 мең кеше, Киров районында — 49,2 мең, Жданов районында 41,2 мең кеше йәшәгән.

Өфө предприятиелары коллективтары ауылдарға, айырыуса коллективлашыуға әҙерлек һәм уны үткәреү осоронда ҙур ярҙам күрһәттеләр. 1928—1929 йылдарҙа шефлыҡ эше рәүешендә 1300 Өфө кешеһе, шул иҫәптән 727 партия ағзаһы, 363 комсомолец, ауылға китте[1].

Массовый колхоз хәрәкәте үҫеү менән, шефлыҡ итеү хәрәкәте һиҙелерлек активлашты. 1930 йылдың көҙөндә иген әҙерләүҙең артта ҡалыуын бөтөрөү өсөн ПВРЗ коллективының саҡырыуы буйынса ҡала предприятиелары республиканың 16 районын йәмәғәт буксирына алды. 300-гә яҡын активист эшсе ауылға китте. Улар урындағы партия һәм совет органдарына аңлатыу эше алып барыуҙа, ҡыҙыл ылауҙар ойоштороуҙа ярҙам итте. Эшселәр менән крәҫтиәндәрҙең бергә тырышып эшләүе арҡаһында, колхоздар иген әҙерләү планын уңышлы үтәнеләр.

Партияның саҡырыуы буйынса ауылда даими эшләү өсөн Өфөнән тиҫтәләгән егерме биш меңселәр ебәрелде. Улар колхоздар, МТС-тар ойошторҙолар һәм уларҙың етәкселәре булып киттеләр. Егерме биш меңселәрҙән 13-сө һанлы ағас заводынан А. И. Миньчук, тимер юл депоһынан Н. И. Максимов менән А. М. Федяев, ПВРЗ-нан И. С. Михайлов һ. б. Башҡортостандың төрлө райондарында эшләнеләр[2].

Эшселәр синыфының колхоз крәҫтиәндәренә ярҙамын көсәйтеү билдәһе аҫтында 1933—1935 йылдарҙа Өфөлә колхозсы-ударниктарҙың республика съездары булып үтте. Съездарҙың эшендә Өфө заводтарының, фабрикаларының, төҙөлөштәренең ударниктары ҡатнашты. Ҡала предприятиеларында бик күп митингылар һәм колхозсылар менән осрашыуҙар булды. I съездан һуң добровольцтарҙың яңы төркөмө — производствола эшләүсе 73 комсомолец ауылға даими эшкә китте. Эшселәр синыфы вәкилдәре хеҙмәтте ойоштора белеү һәм аңлы дисциплина өлгөһө күрһәттеләр, крәҫтиәндәргә яңы техниканы үҙләштерергә ярҙам иттеләр, ауылда партия идеяларын үткәреүселәр булдылар.

Совет ҡоролошоноң демократлашыуы менән, айырыуса 1936 йылдың 5 декабрендә СССР-ҙың яңы Конституцияһы ҡабул ителеү айҡанлы хеҙмәтсәндәрҙең йәмәғәт-политик активлығы үҫте. Бөтә илдәге кеүек үк, Өфөлә лә июндән декабрь бөткәнсе заводтарҙа, фабрикаларҙа, төҙөлөштәрҙә, учреждениеларҙа һәм уҡыу йорттарында илебеҙҙең Төп Законы проектын тикшереү барҙы. Унда 130 мең Өфө кешеһе ҡатнашты[3]. Проектты тикшереү барышында күп кенә тәҡдимдәр,

---

1 ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 10, л. 21.
2 ЦГА БАССР, ф. 394, оп. 2, д. 1077, л. 37—41; д. 1047, л. 68—128.
3 Шунда уҡ, ф. 91, оп. 1, д. 83, л. 14.

Э. Т. Кренкель.



өҫтәмәләр һәм төҙәтмәләр индерелде.

Советтарҙың Сираттан тыш VIII Бөтә Союз съезы асылған көндә Өфөнөң Хеҙмәт һарайы янында, Конституцияны хуплау билдәһе итеп, күп кеше ҡатнашҡан демонстрация булды.

1937 йылдың 20 июнендә Өфөлә булып үткән Советтарҙың X Бөтә Башҡортостан съезы Башҡорт АССР-ы Конституцияһын бер тауыштан ҡабул итте. Ул Өфөнөң ролен республиканың административ үҙәге булараҡ беркетте.

Социализмдың еңеүе партия һәм совет демократияһын киң йәйелдереү өсөн уңайлы шарттар тыуҙырҙы. Ләкин был процесс Сталиндың ул ваҡытта инде урынлашҡан шәхес культы тарафынан етди тотҡарланды. Демократияны бер ни тиклем сикләүҙәрҙе (был синфи дошман һәм уның агенттары менән ҡаты көрәш шарттарында мотлаҡ ине) Сталин партия һәм ил менән етәкселек итеү нормаһына әйләндерҙе. Социалистик законлылыҡты боҙоуҙар Өфөнөң партия, совет, профсоюз һәм хужалыҡ органдары эшмәкәрлегенә зарар килтерҙе. Ҡаланың күп кенә етәксе работниктары, экономика һәм культураның төрлө тармаҡтарында эшләүсе кадрҙар нигеҙһеҙ репрессияланды. Ләкин был нормаль булмаған күренештәр социалистик ҡоролоштоң тәбиғәтен үҙгәртмәнеләр һәм үҙгәртә лә алмайҙар ине.

СССР-ҙың яңы Конституцияһын тормошҡа ашырыу Советтарҙы нығытыуҙа һәм үҫтереүҙә ғәйәт ҙур роль уйнаны. Өфө Советының 1937 йылдың июнендә булып үткән пленумы «Советтарға һайлауҙарға әҙерлек айҡанлы Советтарҙың эшен үҙгәртеп ҡороу тураһындағы» мәсьәләне тикшерҙе. Пленум совет демократияһын боҙоусыларға ҡаршы көрәш тураһында киңәйтелгән ҡарар ҡабул итте, совет органдарының массалар менән бәйләнешен артабан нығытыу, түбәндән контролдең тәьҫирлелеген тәьмин итеү, ҡала Советы органдарының, уның депутаттарының һайлаусылар алдында яуаплылығын көсәйтеү буйынса саралар билдәләне.

Советтарҙы үҙгәртеп ҡороу барышында уларҙың эшмәкәрлегендә хеҙмәтсәндәрҙең ҡатнашыуы артты. Секциялар, депутат группаларының һаны байтаҡ артты. Һайлау участкаларында территориялар буйынса депутат группалары төҙөлдө. 1935 йылда ойошторолған урам комитеттарының эше яҡшырҙы. Бер йылдан һуң улар 140-ҡа

етте, активтар 820 кеше ине[1]. Һайлауҙарҙың наказдарын үтәүгә ҙур иғтибар бирелде. 1937 йылдың икенсе яртыһында ғына Өфө район Советтарының 354 депутаты һайлаусылар алдында отчет бирҙе[2].

Шундай шарттарҙа 1937 йылда Өфө һәм Ҡазан ҡала Советтары араһында социалистик ярыш договоры төҙөлдө. Өфө Советы һайлауҙарға әҙерлекте активлаштырырға, секциялар эшен яҡшыртырға, торлаҡ, водопровод, канализация төҙөү өсөн капитал һалыуҙарҙы үҙләштерергә, торлаҡ-коммуналь хужалыҡтың эшен яҡшыртырға һ. б. йөкләмәләр ҡабул итте. Ҡалалар араһындағы ярыш традицияға әйләнеп китте. Өфө район Советтары үҙ-ара социалистик ярыш договорҙары төҙөнөләр.

М. З. Мәүлетова.



Бөтә совет халҡы кеүек үк, өфөләр СССР Верховный Советына һайлауҙарға ҙур дәрт менән әҙерләнде. Ҡала һәм район партия ойошмалары халыҡтың бөтә ҡатламдары араһында агитация-массовый эште киң йәйелдерҙе. Йөҙләгән агитпункт төҙөлдө. Тиҫтәләгән мең һайлаусылар Конституцияны һәм һайлау законын өйрәнеү буйынса түңәрәктәргә ылыҡтырылды. Производствола һәм учреждениеларҙа эшләүселәр генә түгел, йорт хужабикәләре һәм пенсионерҙар ҙа политик тормошҡа актив йәлеп ителде. Эштең күп төрлө формалары һәм методтары: массовый йыйылыштар, митингылар, демонстрациялар, депутатлыҡҡа кандидаттар менән осрашыуҙар, группа менән һәм индивидуаль әңгәмәләр, агитмашина, кино, радио файҙаланылды. Агитация кампанияһында киң партия һәм совет активы, меңләгән эшсе һәм хеҙмәткәр ҡатнашты. Өфөнән ауыл райондарына ярҙамға 800 кеше ебәрелде. Ҡалала массовый-политик эштең бер ваҡытта ла әле бындай киң ҡолас алғаны юҡ ине.

1937 йылдың 12 декабрендә СССР Верховный Советына һайлауҙар ҡала хеҙмәтсәндәренең байрамы кеүек үтте. Улар халыҡ массаларының Коммунистар партияһына тулы ышанысының ҡеүәтле демонстрацияһына әйләнде. Өфөләр иртән иртүк һайлау участкаларына йүнәлделәр. Көндөҙгө сәғәт 12-гә 125 һайлау участкаһының бөтәһендә лә тиерлек тауыш биреү нигеҙҙә тамамланды. Һайлауҙар ысын мәғәнәһендә бөтә халыҡ һайлауы булды. Ҡаланың 163,5 мең һайлаусыһының 98,9 проценты үҙҙәренең тауышын коммунистар менән партияһыҙҙар блогы кандидаттарына бирҙе. СССР Верховный

[1] ЦГА БАССР, ф. 394, оп. 2, д. 958, л. 15, 16.
[2] Шунда уҡ, д. 909, л. 16.

Советына депутат итеп Өфөнән атаҡлы полярник-радист Э. Т. Кренкель, СССР Осоавиахимының Үҙәк Советы председателе П. С. Горшенин, ҡыҙыларместц Т. А. Крюков һайланды.

1938 йылдың 26 июнендә РСФСР һәм БАССР Верховный Советтарына һайлауҙар булды. Һайлауҙар алдынан шулай уҡ киң массовый-политик кампания алып барылды. 8 меңдән артыҡ агитатор һайлаусылар араһында эшләне. Өфө һайлаусыларының 99,4 проценты һайлауҙарҙа ҡатнашты, шуларҙың 99,5 проценты коммунистар менән партияһыҙҙар блогына үҙ тауыштарын бирҙе [1]. РСФСР Верховный Советы депутаттары араһында өфөләрҙән моторҙар эшләү заводының стахановсыһы Ш. Г. Хәкимова, крекинг заводының инженер-технологы М. З. Мәүлетова бар ине. Башҡорт АССР-ы дәүләт власының юғары органында 11 депутат Өфө вәкиле булды. Улар араһында 8 Март исемендәге фабрика тегенсеһе Г. З. Сафина, Дим паровоз депоһы слесары А. Т. Петров, Өфө депоһы машинисы К. И. Скоков һ. б. бар ине.

1939 йылдың 24 декабрендә булып үткән урындағы Советтарға һайлауҙар СССР-ҙың яңы Конституцияһы нигеҙендә дәүләт власы органдарын үҙгәртеп ҡороуҙа һуңғы этап булды. Өфө ҡала Советына һәм 5 район Советына 1500-ҙән артыҡ депутат һайланды. Улар өсөн һайлаусыларҙың 98,3 проценты тауыш бирҙе [2]. Ҡала Советының беренсе сессияһы ҡала хужалығы һәм культураһының төрлө тармаҡтары менән идара итеү органдарын — халыҡ мәғарифы, һаулыҡ һаҡлау, финанс, культура, коммуналь хужалыҡ, урындағы промышленность, сауҙа бүлектәрен төҙөнө. Бүлектәр янында даими комиссиялар: мәктәп, культура, һаулыҡ һаҡлау һ. б. комиссиялар ойошторолдо. Комиссиялар эшенә депутаттарҙан тыш киң актив ылыҡтырылды. Ҡала район Советтарының структураһы ла яҡынса шундай уҡ ине. Советтарҙың эшмәкәрлеген камиллаштырыу ҡала менән етәкселек итеүҙе яҡшыртырға ярҙам итте.

Халыҡ-ара хәл ҡатмарлашҡан шарттарҙа һуғышҡа тиклемге Өфөнөң иҗтимағи-политик тормошо халыҡты хәрби-патриотик тәрбиәләүҙе көсәйтеү менән характерланды. Бөтә совет кешеләре кеүек үк, өфөләрҙең юғары аңлылығы уларҙың социалистик Ватанды һаҡлауға әҙер тороуында сағылды.

Япон һуғыш суҡмарҙарының Хасан күле янындағы провокацион хәрәкәттәренә яуап рәүешендә ҡаланың хеҙмәт коллективтарында бик күп митингылар булып үтте. Мәҫәлән, 1938 йылдың 2 авгусында паровоз-вагондар ремонтлау заводы допризывниктары митингыһында ҡатнашыусылар: «Беренсе саҡырыу менән, бөтәбеҙ ҙә бер кешеләй илебеҙҙе һаҡларға баҫырбыҙ»,— тинеләр. Хасан күле районындағы һуғыштарҙа өфөләрҙән бер нисә кеше, шул иҫәптән Ф. Д. Митькин, В. Т. Ширяев һ. б. батырлыҡ күрһәтте. Моторҙар эшләү заво-

---

[1] «Красная Башкирия», 1938, 27 июль.
[2] Шунда уҡ, 1940, 8 ғинуар.

дының элекке сварщигы, элемтә отделениеһы командиры Ф. Д. Митькин һуғыш ҡыҙыу барған көндәрҙә Коммунистар партияһы сафына инә, батырлыҡ һәм ҡыйыулыҡ күрһәткәне өсөн Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән наградлана. Туған предприятиеһына әйләнеп ҡайтҡас, ул стахановсы һәм актив йәмғәтсе була, ҡала Советы депутаты итеп һайлана [1].

Аҡ финдарҙың дошманлыҡ хәрәкәтенә ҡаршы Совет хөкүмәтенең саралары да Өфө хеҙмәтсәндәре бер күңелдән яҡланылар. Крекинг заводының эшселәре, инженер-техник работниктары һәм хеҙмәткәрҙәре, Ҡыҙыл Армияның аҡ финдарға ҡаршы операциялары тураһындағы хәбәрҙәрҙе тикшереп, был ҡыйыу хәрәкәтте ҡайнар хуплаптылар. Совет-фин фронтында батырлыҡ күрһәтеүселәр араһында Башҡортостан медицина институтын тамамлаған хәрби врач А. П. Нефедова ла була. Хәрби заданиеларҙы өлгөлө үтәгәне һәм батырлыҡ күрһәткәне өсөн ул «Батырлыҡ өсөн» миҙалы менән наградлана.

Һуғыш алды йылдарында ҡалала оборона-массовый эш киң таралды. Уны ҡаланың Оборонаға, авиация һәм химия төҙөлөшөнә ярҙам итеү йәмғиәте (Осоавиахим), СССР Ҡыҙыл Тәре һәм Ҡыҙыл ярты ай йәмғиәттәре союзы һ. б. алып барҙы. Уларҙың бөтәһе лә Ҡыҙыл Армия өсөн квалификациялы белгестәр әҙерләү эшен киң йәйелдерҙеләр. 1939 йылда ВКП(б)-ның ҡала һәм район комитеттарында хәрби бүлектәрҙең төҙөлөүе оборона эшен ойоштороуҙа мөһим әһәмиәткә эйә булды.

Шулай итеп, һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтар осоронда дәүләт идараһы органдары артабан камиллашты һәм демократлаштырылды, уларҙың эшенә күп меңләгән ҡала халҡы ылыҡтырылды. Улар Өфөнөң һәм бөтә илдең ижтимағи-политик тормошонда күберәк ҡатнаша башланы. Эшселәр синыфының, бөтә хеҙмәтсәндәрҙең политик активлығы, дәүләт аппаратының халыҡтың революцион энергияһына һәм инициативаһына таяныуы социалистик төҙөлөш бурыстарын уңышлы хәл итеүҙең иң мөһим шарттары булды.

## § 3. Өфөләрҙең материаль-тормош хәлен яҡшыртыу, ҡала хужалығын үҫтереү

Илде индустриялаштырыу һәм ауыл хужалығын социалистик үҙгәртеп ҡороу ҡала хеҙмәтсәндәренең материаль хәлен ҡырҡа яҡшыртырға ныҡлы нигеҙ барлыҡҡа килтерҙе. Промышленноста шәхси секторҙы бөтөрөү 20-се йылдар аҙағына уҡ инде эксплуатациянан тамам азат итте. Беренсе биш йыллыҡта эшһеҙлек бөтөнләйгә бөтөрөлдө, алдағы көн өсөн ҡурҡыу юҡҡа сыҡты. Хеҙмәткә хоҡуҡ бөтә кеше өсөн дә реаль күренеш булды. Индустриялаштырыу һөҙөмтәһендә эшселәр хеҙмәтенең характеры тамырынан үҙгәрҙе. Яңы техниканы социалистик файҙаланыу хеҙмәтте еңеләйтте.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 394, оп. 3, д. 1480, л. 45, 53.

Беренсе биш йыллыҡ осоронда Өфөнөң бөтә эшселәре лә тиерлек 7 сәғәтлек, ә сәләмәтлек өсөн зарарлы производстволарҙа эшләүселәр һәм үҫмерҙәр 6 сәғәтлек эш көнөнә күсерелде. Бер үк ваҡытта ҡыҫҡартылған эш аҙнаһы индерелде, эш хаҡы арта барҙы. Тик һуғыш ҡурҡынысы тыуыу сәбәпле, 1940 йылдың уртаһында 8 сәғәтлек эш көнө менән ғәҙәттәге эш аҙнаһына күселде.

Хеҙмәткә түләү системаһы камиллаштырылды: ауыр хеҙмәттә эшләүселәрҙең эш хаҡы күтәрелде, эшселәрҙең күбеһе эшләнгән эшкә ҡарап түләүгә күсте, тигеҙләүселек бөтөрөлдө, квалификациялы һәм квалификацияһыҙ хеҙмәткә түләү дифференциацияланды.

Реконструкциялау осорондағы объектив ҡыйынлыҡтар ҡала халҡының үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндереү мөмкинлеген билдәле бер кимәлдә тотҡарланы. 1929 йылда Өфөлә, бөтә илебеҙҙәге кеүек үк, икмәккә һәм ҡайһы бер башҡа продукттарға, шулай уҡ промышленность тауарҙарына карточка системаһы индерелде. Был сара индустриялаштырыуҙың иң яуаплы участкаларында эшләүсе эшселәрҙе яҡшыраҡ тәьмин итергә мөмкинлек бирҙе. Ҡаланың иң мөһим төҙөлөштәре (Моторострой һ. б.) тәьмин итеүҙең юғарыраҡ категорияларына индерелде.

Хеҙмәтсәндәрҙе тәьмин итеүҙе яҡшыртыу өсөн ярҙамсы хужалыҡтар, эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең индивидуаль хужалыҡтары, децентрализацияланған әҙерләүҙәр (үҙҙәре әҙерләү) файҙаланылды. Мәҫәлән, 1932 йылда ПВРЗ-ның ярҙамсы хужалығының Новиковка ауылы районында 554 гектар сәсеүлеге, 4 тракторы, бер нисә йөҙ баш малы бар ине. Хужалыҡта 108 кеше даими эшләне. 1932 йылда бөтә йәшелсә культураларының тулайым йыйымы 21 мең центнерға етте (372,6 мең һумлыҡ булды). Децентрализацияланған әҙерләүҙәр өсөн завод Архангель һәм Саҡмағош райондарына беркетелгәйне [1]. Башҡа эре предприятиеларҙың да ярҙамсы хужалыҡтары бар ине. Улар бик тиҙ үҫте; уларҙың сәсеүлек майҙаны 1930 йылда 118 гектар булһа, 1934 йылда 3200 гектар ине, ә 1939 йылда инде 5572 гектарға етте [2].

Ҡала сауҙа системаһындағы үҙгәрештәр Өфө халҡын хеҙмәтләндереүҙә ыңғай роль уйнаны. Беренсе биш йыллыҡтың башында уҡ әле хосуси сауҙа ғәҙәти күренеш ине. Ул ваҡыттағы дефицит тауарҙар: туҡымалар, аяҡ кейемдәре, һәр төрлө һауыт-һаба, ит, балыҡ һ. б. менән ҡала халҡын тәьмин итеүҙә хосуси сауҙагәрҙәр дәүләт магазиндары менән ярышалар ине. Хосуси ларектар һәм палаткалар аҡрынлап кәмей барҙы. 1929 йылдың аҙағына дәүләт һәм кооператив сауҙаһы ҡала тауар әйләнешенең 80 проценттан артығыраҡын үҙ ҡулында туплағайны [3]. Шул уҡ йылдың 1 ноябренә өфөләрҙе 593 ма-

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 12, д. 451, л. 211—221.

[2] «Красная Башкирия», 1934, 21 ноябрь; ЦГА БАССР, ф. 394, оп. 3, д. 95, л. 153, 154.

[3] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 10, л. 32.

газин хеҙмәтләндерҙе, шуларҙың 199-ы дәүләт магазины, 166-һы кооператив һәм 228-се хосуси магазин ине [1]. 1932 йылда дәүләт сауҙаһы Өфө тауар әйләнешендә алдынғы урынды ныҡлы яулап алды. Дәүләт магазиндарының һәм ларектарының һаны 356-ға етте, тауар әйләнеше ҡаланың дөйөм сауҙа балансының 70 процентына тиклем артты [2].

Икенсе биш йыллыҡтар осоронда, бөтә илебеҙ хеҙмәтсәндәренеке кеүек үк, өфөләрҙең дә тормош кимәле байтаҡ күтәрелде. 1935 йылда икмәккә һәм аҙыҡ-түлеккә карточка системаһының бөтөрөлөүе, шулай уҡ 1937 йылда киң ҡулланыу промышленность тауарҙарына — кизе-мамыҡ, йөн, етен туҡымаларға, аяҡ кейеменә, парфюмерияға һ. б. әйберҙәргә ваҡлап һатыу хаҡтарының төшөүе быға ярҙам итте. Ҡала сауҙа селтәре киңәйҙе, халыҡты хеҙмәтләндереү культураһы күтәрелде. Аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙары һатыу буйынса эре махсуслаштырылған магазиндар күбәйгәндән-күбәйә барҙы. К. Маркс урамының 23-сө һанлы йортонда универмаг (хәҙерге ЦУМ) эшләй башланы. 1937 йылда Ленин урамының 45-се корпусында «Галантерея» магазины асылды. Уларға тауарҙар киң ассортиментта Мәскәүҙән килтерелеп торҙо. Шул уҡ ваҡытта Военторг, «Балалар донъяһы» магазиндары һәм яңы һалынған Башпотребсоюз һәм «Башкирия» ҡунаҡханаһы биналарында тәүге хәҙерге заман «Гастрономдары» асылды.

Халыҡтың һатып алыу һәләте үҫте. Мәҫәлән, 1936 йылда ҡаланың сауҙа ойошмалары кизе-мамыҡ туҡымлarҙы 2046 мең һумлыҡ, аяҡ кейемен 5706 мең һумлыҡ һатҡан булһа, 1937 йылда инде шуға ярашлы рәүештә 10286 һәм 8482 мең һумлыҡ һатты [3]. Киң ҡулланыу тауарҙарының айырым төрҙәренә үҫә барған һорау уларҙы етештереүҙән уҙып китте. Шуға күрә ҡайһы бер промышленность әйберҙәре дефицит булып ҡала килде. Өфөләргә бешкән икмәк тә етешмәне. Быны сәбәбе ҡала пекарняларының ҡеүәте бәләкәй булыуҙан ине. 1936 йылда икмәккә булған ихтыяж менән уны бешереү араһындағы айырма көнөнә 45 тоннаға тиклем тәшкил итте. Ҡала Советы бәләкәй пекарняларҙы аҡрынлап яңы ҡорамалдар менән йыһазландырып сафҡа баҫтырыу сараларын күрҙе.

Йәмәғәт туҡланыу предприятиеларының селтәре даими үҫте һәм камиллашты. Әгәр 1930 йылда Өфөлә йыллыҡ әйләнеше 2153 мең һум тәшкил иткән 48 ашхана һәм закусочный эшләгән булһа, 1939 йылда инде ҡала халҡын йыллыҡ әйләнеше 37 227 мең һум булған 257 ашхана, кафе һәм закусочный хеҙмәтләндерҙе [4].

Хеҙмәтсәндәр көнкүрешенең яҡшырыуы ҡулланыуҙың йәмәғәт фонды, социаль страхование (түләүһеҙ медицина хеҙмәте күрһәтеү,

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 90, л. 700.
[2] Шунда уҡ, ф. 472, оп. 1, д. 822, л. 26.
[3] ЦГА БАССР, ф. 394, оп. 2, д. 858, л. 94.
[4] Шунда уҡ, ф. 472, оп. 6, д. 822, л. 48; д. 824, л. 98.

дөйөм мәжбүри ете йыллыҡ белем биреү, пенсиялар, пособиелар түләү, түләүле отпускылар биреү һ. б.) иҫәбенә лә барҙы. Мәҫәлән, 1938 йылда өфөләр пенсия һәм пособиеларҙы 4 млн. күләмендә алған булһа, 1940 йылда инде уларға 7 млн. һум түләнде [1].

Халыҡтың тормош кимәлен күтәреүҙә торлаҡ төҙөлөшө, ҡала хужалығын төҙөкләндереү һәм үҫтереү мөһим әһәмиәткә эйә булды.

Һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтар осоронда Өфө үҙенең йөҙөн һиҙелерлек үҙгәртте. Уның халҡы ике тапҡыр ярымдан артығыраҡҡа үҫте — беренсе биш йыллыҡ башына 100 мең кеше булһа, 1940 йылда инде 270 мең кешегә етте. Ҡала төҙөлөштәренең майҙаны киңәйҙе. Элекке буш урындарҙа һәм Черниковка, Непейцево, Сипайлово, Лопатино, Дежнево һ. б. ауылдар территорияһында Өфөнөң яңы индустриаль районы үҫеп сыҡты.

Бер нисә йыл буйына Ленинградтың ҡалаларҙы проектлау дәүләт институты («Ленгипрогор») ҙур Өфөнөң генераль планын әҙерләне. Был план бер нисә тапҡыр ҡала Советы Президиумында, БАССР Совнаркомында ҡаралды һәм ахырҙа 1938 йылдың июлендә раҫланды. 15 йылға иҫәпләнгән генераль план Өфөнөң 500 мең халыҡлы эре промышленность һәм культура үҙәгенә әйләнеүенән сығып төҙөлдө. Иҫке урамдарҙы реконструкциялау менән бергә ҙур яңы төҙөлөш билдәләнде. Ҡала Өфө ярымутрауы буйлап көньяҡтан төньяҡҡа табан 23 километр оҙонлоғонда һәм 4-тән алып 8 километрға тиклем киңлектә төҙөлөргә тейеш була.

30-сы йылдарҙағы интенсив төҙөлөш ҡала йөҙөн бик ныҡ үҙгәртте. Майҙандарҙы һәм урамдарҙы яңы административ һәм торлаҡ йорттар биҙәне. Тәүге 4 һәм 5 ҡатлы йорттар барлыҡҡа килде. 1934 йылда Элемтә йорто (Главпочтамт), ә бер аҙ һуңыраҡ Башпотребсоюз бинаһы төҙөлә башланы (икеһе лә Ленин урамында). 1935—1938 йылдарҙа республиканың Хөкүмәт йорто һалынды. Уның алдында, Пушкин һәм Совет урамдары киҫешкән урында, майҙан (хәҙерге Совет майҙаны) барлыҡҡа килде. 1938 йылдың ноябренән бында хеҙмәтсәндәрҙең митингылары һәм байрам демонстрациялары үткәрелә башланы. Шул уҡ йылдарҙа Ленин урамы менән Киров урамы мөйөшөндә 300 урынлыҡ «Башкирия» ҡунаҡханаһы төҙөлдө, Карл Маркс урамының 12-се һанлы йортонда «Башнефть» тресы бинаһы һалынды (хәҙер авиация институты корпустарының береһе), Ленин урамы, 37-лә Башҡортостан территориаль геология идаралығы йорто һ. б. төҙөлдө. Яңы культура учреждениелары, магазиндар, больницалар, балалар баҡсалары, ясләләр асылды. Ҡала үҙәгендә, элек ҡуйы төҙөлгән урында, күп йорттар реконструкцияланды. Мәҫәлән, ҡала Советы (Ленин урамы, 5), Киров район Советы (Октябрь революцияһы урамы, 1) биналарына һ. б. өҫөнсө ҡаттар төҙөлдө.

«Красная Башкирия» газетаһының 1939 йылғы 30 октябрь һаны Өфөлә булып үткән үҙгәрештәрҙе түбәндәгесә тасуирланы: «Бына

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 394, оп. 3, д. 311, л. 101.

Хөкүмәт йорто.



бында ҡасандыр «Мадам Фанниҙың эшләпә мастерскойы» тигән вывескалы бер ҡатлы йорт, ә уның эргәһендә ҡайыштар һәм төймәләр һата торған киоск тора ине. Ҡысҡырып торған вывескалы торғаштар йорттары урынында бөтә квартал буйынса тиерлек бик гүзәл күп ҡатлы Башсоюз бинаһы төҙөлдө. Уның эргәһендә үк уға лайыҡлы күрше — Почтамт бинаһы ҡалҡып сыҡты. Уларҙың тирә-яғында өсөнсө-дүртенсе ҡаттары өҫтәп төҙөлгән ҙур йорттар пәйҙа булды. Хөкүмәт йорто, белгестәр йорто, актерҙар, медиктар йорттары, ҡунаҡханалар һәм тиҫтәләгән башҡа яңы йорттар ҡала урамдарында ҡалҡып торалар...» 1928—1936 йылдарҙа ғына Өфөлә 294,8 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны сафҡа индерелде [1].

Шулай ҙа торлаҡ төҙөлөшө темптары промышленностың интенсив үҫеүенән килгән халыҡ үҫешенән бик күпкә артҡа ҡала ине. Ҡаланың бөтә торлаҡ фонды 1928—1940 йылдарҙа 35 процентҡа артты, был ваҡыт эсендә ҡалала йәшәүсе халыҡ һаны ике тапҡырҙан күберәккә артты. Әгәр 1928 йылда бер Өфө кешеһенә уртаса 5,3 квадрат метр торлаҡ майҙаны тура килгән булһа (РСФСР буйынса — 5,6 квадрат метр), 1937 йылда инде 3,6 квадрат метр тура килә ине [2]. Торлаҡ мәсьәләһе элеккесә ауыр булып ҡала килде. Торлаҡтың үтә ныҡ кәрәк булыуы һәм материалдарҙың етешмәүе арҡаһында яңы

[1] ЦГА БАССР, ф. 472, оп. 3, д. 1226, л. 115; ф. 91, оп. 2, д. 772, л. 18, 20.
[2] Шунда уҡ, ф. 91, оп. 2, д. 90, л. 717; ф. 472, оп. 3, д. 1226, л. 115.

төҙөлөштөң шаҡтай өлөшөн дөйөм торлаҡтар, бараҡтар, тейешле көнкүреш уңайлыҡтары булмаған, тоҡәтеп һалынған йорттар тәшкил итте. Бөтә уңайлыҡтары булған хәҙерге заман йорттары нигеҙҙә ҡаланың үҙәгендә урынлашҡайны һәм дөйөм торлаҡ фондында уларҙың өлөшө сағыштырмаса ҙур түгел ине. Хосуси милек булған торлаҡтар өҫтөнлөк итеп килде. Хатта урындағы Советтар ҡарамағындағы, йәмәғәт милкенә әйләндерелгән секторҙа ла 1940 йылда 1559 йорттоң 31 процентында водопровод, 3,3 процентында канализация үткәрелгәйне, 4,3 проценты үҙәктән йылытыла, 91,2 проценты электр менән яҡтыртыла ине [1].

Ҡала Советы урамдарҙы төҙөкләндереүгә (уларҙың оҙонлоғо 1940 йылда 235 километрға еткәйне) ҙур әһәмиәт бирҙе.

Юл төҙөлөшөнә ҡала бюджетынан ҙур суммалар тотонолдо, улар йылдан-йыл арта барҙы. Мәҫәлән, төҙөкләндереүҙең был статьяһына 1929 йылда 98,2 мең һум, 1937 йылда —868 мең һум, 1940 йылда инде 954 мең һум ебәрелде [2].

Урамдарҙың асфальт түшәмәһе яңыртылды. 30-сы йылдар аҙағына Хеҙмәт һарайы майҙанына, Ленин, Карл Маркс, Егор Сазонов урамдарына, Совет майҙанына асфальт йәйелде. Октябрь революцияһы, Пушкин һ. б. урамдарҙың тротуарҙарына асфальт түшәлде. Нижегородкала, Иҫке Өфөлә, Көнсығыш биҫтәлә таш түшәлгән юлдар төҙөкләндерелде. Ләкин таш түшәлгән урамдарҙың дөйөм майҙаны 1940 йылда ҡала урамдарының дөйөм майҙанының 35 процентын ғына тәшкил итте [3]

Өфө урамдары таҙарҙы, төҙөкләндерелде һәм яҡтырып, матурланып китте. Ҡала Советы ҡарары буйынса биналарҙы, киоскыларҙы, газета витриналарын даими рәүештә буяп торҙолар. Бары тик ҡала коммуналь хужалығы буйынса ғына ла йыл һайын 500-ҙән артыҡ йорт буяла ине. Урамдарҙы электр менән яҡтыртыу ҡала ситенә табан күсә барҙы. ЦЭС-ты эшләтә башлау менән, электр яҡтыһы меңләгән яңы квартираларға инде, шул иҫәптән ҡаланың иң ситтәге райондары ла электр менән яҡтыртылды. 1936 йылда бары тик Иҫке Өфөлә генә 1500 квартираға электр үткәрелде [4].

Өфөләр урамдарҙы йәшелләндереүгә, яңы баҡсалар, скверҙар яһауға һәм иҫкеләрен яңыртыуға күп көс һалдылар. Аллеялар таҙартылды, сәскә клумбалары яһалды, тиҫтәләгән мең ағас һәм ҡыуаҡлыҡтар ултыртылды. 1932 йылдан алып ҡалала питомник эшләй башланы, ул йәшелләндереү өсөн ултыртыу материалы бирҙе. 1932 йылда Өфөлә ултыртылған йәшел ағастар —30 гектар, 1939 йылда инде 42 гектар майҙанды алып торҙо. Туҡай һәм Пушкин урамдарындағы аллеялар яңыртылды һәм кәртәләп алынды, тимер юл вокзалы янында сквер яһалды.

---

[1] «Красная Башкирия», 1940, 22 июнь.
[2] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 217, л. 1; д. 322, л. 1; д. 771, л. 1.
[3] Шунда уҡ, д. 323, л. 5.
[4] «Красная Башкирия», 1936, 13 октябрь.

«Башкирия» ҡунаҡханаһы.



Ҡалала 2 парк, 6 баҡса һәм сквер эшләне. Үҙәк культура һәм ял паркында (хәҙер В. И. Ленин исемендәге парк) спорт майҙансығы йыһазландырылды, эстрада төҙөлдө. Луначарский исемендәге баҡсаның йәйге театрында урындағы һәм ситтән килгән артистар спектаклдәр һәм концерттар ҡуйҙы. 1932 йылдан Якутов исемендәге парктағы һәм Луначарский исемендәге баҡсалағы быуалар таҙартылды һәм ҡала халҡын кәмәлә йөрөтөү ойошторолдо.

Һыу менән тәьмин итеү һәм канализация Өфө өсөн ҡатмарлы проблема булып ҡалды. Водопровод системаһы ҡала ихтыяждарын тәьмин итә алмай ине, 1929 йылда ул ҡала урамдарының дөйөм оҙонлоғоноң 20 процентын ғына тәшкил итте. Һыуҙың тәүлеклек бирелеше йән башына иҫәпләгәндә бик түбән — РСФСР буйынса уртаса алғандың 14,8 проценты ғына ине [1]. 1931—1932 йылдарҙа иҫке водопроводты реконструкциялау һыу менән тәьмин итеүҙә киҫкен алға китеш бирмәне. Һыу биреү 19 процентҡа ғына артты, халыҡ һәм промышленность һыуға ҡытлыҡ кисереүен дауам итте.

1934 йылдың 5 мартында Башҡорт АССР-ы төҙөлөүгә 15 йыл тулыу айҡанлы СССР Совнаркомы махсус ҡарар ҡабул итте. Был ҡарарҙа Өфөлә ҡайһы бер ҡала хужалығы объекттары — водопровод, канализация, трамвай һ. б. төҙөү ҡаралды. Ҡаланан 20 километр алыҫлыҡта Ҡариҙел йылғаһында яңы водопроводтың беренсе сираты өсөн насос станцияһы, таҙартҡыс ҡоролмалар, резервуарҙар төҙөү

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 90, л. 701.

эше йәйелдереп ебәрелде. Был станция 1939 йылдың июлендә сафҡа инде. Тәүлек эсендә һыу биреү 708 куб метрҙан 35 мең куб метрға тиклем артты.

1935 йылда канализация төҙөү башланды. Быға тиклем таҙартыу махсус ылау менән башҡарылды, был иһә ҡаланың санитар хәленә насар йоғонто яһай ине. 1941 йылдың башында Өфөнөң үҙәк өлөшөндәге ҙур биналар канализацияның яңы системаһына тоташтырылды.

Һуғыш алды йылдарында өфөләрҙе 6 мунса, 30 парикмахерский хеҙмәтләндерҙе. 1935 йылдан механизацияланған прачечный эшләй башланы.

Ҡалала 4 янғын һүндереү часы һәм ҡайһы бер эре предприятиеларҙа янғын һүндереү дружиналары була. Халыҡ араһында профилактика эштәренең күп үткәрелеүенә ҡарамаҫтан (әңгәмәләр үткәрелә; янғынға ҡаршы саралар тураһында ҡала Советы махсус ҡарарҙар сығара ине), янғындар йыш сығып торған. Бары тик 1929 йылда ғына 113 тапҡыр янғын сыҡҡан. Улар ҡаланың коммуналь хужалығына ҙур зыян килтергән.

Ҡала транспортын ойоштороуҙа тамырҙан үҙгәреш булды. Өфөнөң пассажирҙар транспорты егеүле транспорттан (извозчиктар), автобус һәм аҙаҡ килеп рельслы (трамвай) транспорттан торған. 30-сы йылдар башына тиклем егеүле транспорт бик киң таралған була. Көн һайын 100-ҙән артыҡ еңел кырандас урамға сыға торған булған. Пассажирҙар горкомхоз тарафынан раҫланған тариф буйынса түләгән. Аҡрынлап извозчиктарҙы күбәйә барған автобус хәрәкәте ҡыҫырыҡлап сығара. 1928 йылда ике генә автобус маршруты булып, унда ни бары 5 машина йөрөгән. 1934 йылға инде маршруттар бишәү булып китә. Улар ҡала үҙәген тимер юл вокзалы, Сафронов пристане, Затон, моторҙар эшләү заводы һәм макарон фабрикаһы менән бәйләгән. Шул уҡ йылда автобус паркында 10 яңы 24 урынлы АМО маркалы машина барлыҡҡа килә. 1940 йылда инде өфөләрҙе 30 автобус хеҙмәтләндергән.

Өфөнөң республика районлары менән автобус аша даими бәйләнеше урынлашты. 1937 йылдың йәйендә К. Маркс һәм Свердлов урамдары киҫешкән урында автовокзал асылды. Бында көтөп тороу залы, балалы әсәләр бүлмәһе, уҡыу залы йыһазландырылды. Бынан Белоретҡа, Ырымбурға, Мәләүезгә, Яңауылға, Ҡариҙелгә, Саҡмағошҡа, Дүртөйлөгә, Кушнаренкоға йөҙләгән пассажир китә ине.

Ләкин тиҙ үҫеүсе, шаҡтай оҙонға һуҙылған ҡала транспорт яғынан етди ҡыйынлыҡтар кисерә ине. 1935 йылда төҙөлә башлаған трамвай был ҡыйынлыҡтарҙы бөтөрөүҙә ҙур роль уйнаны. 1937 йылдың 1 февраленән Өфөлә трамвай йөрөй башланы. Трамвай алты километр оҙонлоҡтағы участкала — ҡала Советынан — Пермь урамына һәм ҡала Советынан хәҙерге Бабушкин урамына тиклем һәм унан Совбольницаға киткән тармаҡ буйлап йөрөй ине. Унда 20 трамвай вагоны һыйышлы парк төҙөлдө. Алдағы йылдарҙа тимер юл вокзалына һәм Революционный урамы буйлап хәҙерге «Сельхозинститут»

трамвай туҡталышына тиклем ике яҡлы юл һалынды. Артабан был линия тағы ла 8,7 километрға ЦЭС-ҡа тиклем һуҙылды. 1941 йылға бер юллы трамвай линияһының оҙонлоғо 20 километрға етте. Өс маршрут буйынса 24 трамвай вагоны йөрөнө [1].

Өфөләге беренсе трамвай. 1937 йыл.



1938 йылдың йәйендә ҡала урамдарында тәүге таксомоторҙар күренә башланы. Ҡала М-1 маркалы дүрт урынлы 5 еңел машина алды. Таксиҙарҙың туҡтау урыны тимер юл вокзалы янында һәм Үрге сауҙа майҙанында яһалды.

1928 йылдың 1 ғинуарынан Өфөлә трансляциялау радио селтәре даими эшләй башланы. 1938 йылға тиклем ул киң таралманы. Яңы аппаратура алыу һәм ҡала линия хужалығын реконструкциялау менән радиолаштырыу мөмкинлектәре шаҡтай артты. Предприятиеларға — макарон фабрикаһына, ПВРЗ-ға, шулай уҡ Көнсығыш биҫтәләге һәм тимер юл районындағы йөҙләгән квартираға радио үткәрелде. 1940 йылда радио селтәре тағы 3 мең нөктәгә артты [2]. Иҫке Өфөлә, Нижегородкала, Кооперативный полянала йәшәүсе ҡала халҡының квартираларына ла радио индерелде. Шулай ҙа әле өфөләрҙең радиоға булған ихтыяждары тулыһынса ҡәнәғәтләндерелмәне.

Главпочтамттың замансa төҙөлгән бинаһы сафҡа баҫыу менән, Өфө элемтәселәренең эше яҡшырып китте. Халыҡты хеҙмәтләндереү һаны артты, корреспонденцияларҙы халыҡҡа тапшырыу срогы кәмене. 1938 йылда ҡалала йәшәүселәр көн һайын уртаса алғанда 17,5 мең хат, 470 посылка, 520 перевод, 18 мең экземпляр үҙәктә сығарылған газета һәм 25 мең урында баҫылған газета ала ине [3].

Ҡаланы телефон менән хеҙмәтләндереү камиллаштырыла төштө. 1936 йылға тиклем Өфө Союздың телефон селтәренә тура сыға алмай ине. Өфөнән ҡала-ара бәйләнеш тотоу ауыр булды. Быны иҫәпкә алып, СССР Совнаркомы Элемтә наркоматына Өфө — Куйбышев телефон линияһын асыу бурысын йөкләтте (Куйбышев Мәскәү менән тура бәйләнеш тота ине). 1936 йылдың аҙағында был линия эшләй башланы. Бер үк ваҡытта ҡала телефон станцияһын ҡайтанан ҡора-

[1] ЦГА БАССР, ф. 394, оп. 3, д. 239, л. 202.

[2] «Красная Башкирия», 1930, 15 июнь; ЦГА БАССР, ф. 394, оп. 3, д. 95, л. 343.

[3] «Красная Башкирия», 1938, 2 август.

малландырыу эше алып барылды. Иҫке коммутаторҙар ҡеүәтлерәктәре менән алмаштырылды. Ҡала телефон селтәре 650 номерға артты [1].

Өфө ҡала Советы халыҡҡа медицина хеҙмәте күрһәтеү мәсьәләләренә ҙур иғтибар итте һәм был хаҡта даими хәстәрлек күрҙе. 1930 йылда ҡалала 600 койкалыҡ 7 больница һәм 11 амбулатория бар ине. штатта 109 врач һәм 269 урта медицина персоналы торҙо [2]. Бынан тыш, промышленность предприятиелары (8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы, ағас заводы һ. б.) янында 6 врач-фельдшер пункты эшләне. Һаулыҡ һаҡлауға бүленгән бюджет ассигнованиелары артҡандан-арта барҙы. Әгәр 1930 йылда медицина хеҙмәте күрһәтеүгә 2172 мең һум ебәрелгән булһа, 1940 йылда инде 18 184 мең һум ебәрелде [3]. Был иһә больницаларҙы медикаменттар, ҡорамалдар менән тәьмин итеүҙе байтаҡ яҡшыртырға, ауырыуҙарҙың туҡланыуын һәйбәтерәк ойоштororға мөмкинлек бирҙе. Мәҫәлән, 1934 йылда 1930 йыл менән сағыштырғанда бер ауырыуҙы ашатыуға тәүлегенә 3 һум 50 тин түгел, ә 4 һум 20 тин ебәрелде, медикаменттар менән тәьмин итеү бер ауырыу иҫәбенән йылына 100 һумдан 200 һумға тиклем артты [4].

Иҫке больница биналарына ремонт яһалды һәм улар бер ни тиклем киңәйтелде, яңы больницалар һалынды. 1935 йылда Глумилино районында төҙөлгән 35 койкалыҡ һөйәк-туберкулез балалар санаторийы тәүге ауырыуҙарҙы ҡабул итте. 1941 йылда Совет больницаһының хирургия корпусы сафҡа инде. Моторҙар эшләү заводы районында яңы поликлиника һәм 100 койкалыҡ больница асылды.

Шулай ҙа больницалар селтәренең киңәйеүе Өфө территорияһы һәм халҡы үҫешенән шаҡтай артта ҡала ине әле. Дауалау учреждениеларының күпселеге иҫке, тар ағас биналарға урынлашҡайны. Врачтар ҙа етешмәне. 1936 йылда штат буйынса ҡаралған 221 врач вазифаһында ни бары 134 врач эшләне, урта медицина персоналы 354 кеше ине [5]. Артабан врач кадрҙары менән тулыланыу шаҡтай дәрәжәлә Башҡортостан медицина институтын тамамлаусылар иҫәбенә барҙы. 1939 йылдың башында Өфөлә инде 247 врач һәм 814 урта медицина персоналы эшләне. Улар 1632 койкалыҡ 15 больницаны һәм 13 амбулаторияны хеҙмәтләндерҙе [6]. 12 ашығыс ярҙам күрһәтеү службаһы халыҡҡа кисектергеһеҙ ярҙам күрһәтте [7].

Ҡалала санитария күҙәтеүе яҡшырҙы. 1941 йылда уны 20 санитария инспекторы һәм уларҙың 36 ярҙамсыһы башҡарҙы [8]. Бынан

---

[1] «Красная Башкирия», 1936, 13 август, 28 сентябрь.
[2] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 110, л. 3.
[3] Шунда уҡ, д. 111, л. 4; д. 453, л. 90; д. 844, л. 45.
[4] Шунда уҡ, д. 323, л. 10.
[5] Шунда уҡ, д. 453, л. 88.
[6] ЦГА БАССР, ф. 472, оп. 6, д. 824, л. 11.
[7] Шунда уҡ, д. 744, л. 47.
[8] Шунда уҡ, ф. 91, оп. 2, д. 774, л. 47.

тып, был эшкә киң ҡатлам йәмәғәтселек ылыҡтырылды. Урамдарҙың, ишек алдарының, квартираларҙың, баҙарҙарҙың торошон махсус санитария комиссиялары күҙәтеп торҙо. Промышленность предприятиеларында, ашханаларҙа һәм буфеттарҙа махсус бюллетендәр элеп ҡуйылды. Эш урынындағы таҙалыҡ өсөн иң яҡшы сменаларға, бригадаларға һәм айырым работниктарға вымпелдар тапшырыу индерелде.

Ҡала бюджеты ҡала коммуналь хужалығы һәм халыҡты культура-көнкүреш яғынан хеҙмәтләндереүҙәге үҫештең дөйөмләштерелгән күрһәткесе булып тора. Ул 1928/29 йылдарҙағы 4083,4 мең һумдан (сығымдар буйынса) 1940 йылда 50 649,3 мең һумға тиклем етте [1], йәғни 12 тапҡырҙан артығыраҡҡа үҫте. Бюджет ассигнованиеларының байтаҡ өлөшө ҡаланың яңы төҙөлөшөнә, төҙөкләндереүгә, өфөләрҙең материаль һәм культура ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә китте.

Һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтар осоронда Өфө илебеҙ Көнсығышының хәҙерге заман машиналар эшләү, нефть эшкәртеү, ныҡ үҫкән еңел һәм аҙыҡ-түлек промышленносы булған эре индустриаль үҙәгенә әйләнде.

Социалистик төҙөлөш барышында ҡала халҡының синфи структураһында тамырҙан үҙгәреш булды. Эксплуататор синыфтар вәкилдәре юҡ ителде. Өфө халҡы эшселәрҙән, интеллигенциянан, хеҙмәткәрҙәрҙән, кооперациялаштырылған кустарҙарҙан торҙо.

Ҡаланың йөҙө лә үҙгәрҙе. Ул байтаҡ таҙарҙы, төҙөкләндерелде. Гүзәл күп ҡатлы йорттар, асфальт йәйелгән урамдар, яңы баҡсалар, скверҙар, транспорттың хәҙерге заман төрҙәре барлыҡҡа килде, ҡала коммуналь хужалығы нығыны. Партияға, үҙ иленә, коммунистик идеалдарға ысын күңелдән бирелгән яңы совет кешеләре үҫте.

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 112, л. 20; Бюджет Башкирской АССР на 1941 г. и отчет об исполнении бюджета БАССР за 1940 г. Өфө, 1941, 29-сы бит.

# *Өфөлә культура төҙөлөшө уңыштары (1917—1941 йылдар)*

## § 1. Мәғариф һәм фән

Бөйөк Октябрь Россия хеҙмәтсәндәренә социализмға юл асты. В. И. Ленин һәм партия яңы йәмғиәт ҡоролошоноң еңеүен культура революцияһы үткәреү кәрәклеге менән бәйләнеләр, уны социалистик төҙөлөштөң мөһим өлөшө итеп ҡаранылар.

Халыҡтың наҙанлығын бөтөрөүҙе В. И. Ленин культура революцияһының иң мөһим бурыстарының береһе итеп ҡарай. «...Беҙҙең илебеҙҙә әле наҙанлыҡ кеүек күренеш бар икән,— тине ул,— халыҡты политик ағартыу тураһында һөйләү үтә ауыр... Наҙан кеше политиканан ситтә тора, уны тәүҙә әлифбаға өйрәтергә кәрәк» [1]. Бына шуға күрә лә В. И. Ленин Совет власын урынлаштырыуҙың тәүге көндәренән үк культура төҙөлөшөн хеҙмәтсәндәр массаһы өсөн иң кәрәкле, һәр төрлө культураның нигеҙен һалған нәмәнән — халыҡты грамотаға өйрәтеүҙән башлауҙы талап итә. 1919 йылдың 26 декабрендә «РСФСР халыҡтары араһында наҙанлыҡты бөтөрөү тураһында» Халыҡ Комиссарҙары Советының декреты баҫылып сыға. Уға ярашлы рәүештә «республиканың 8 йәштән алып 50 йәшкә тиклемге уҡый йәки яҙа белмәгән бөтә кешеләре үҙенең теләге буйынса туған телдә йәки рус телендә грамотаға өйрәнергә бурыслы» [2] була. 1920 йылда наҙанлыҡты бөтөрөү буйынса Бөтә Россия ғәҙәттән тыш комиссияһы төҙөлә.

Урындарҙа ла шундай уҡ комиссиялар ойошторола. Өфөлә Наҙанлыҡты бөтөрөү буйынса ғәҙәттән тыш комиссия 1921 йылда барлыҡҡа килә. Уның инициативаһы менән ҡаланың предприятиелары һәм учреждениеларында мәктәптәр, наҙанлыҡты бөтөрөү буйынса пункттар һәм киске курстар асыла. Уларҙа уҡыусылар дәреслектәр

---

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 44-се том, 174-се бит.

[2] Директивы ВКП(б) и постановления Советского правительства о народном образовании за 1917—1947 гг., вып. 2. М.—Л., 1947, 118-се бит.

һәм уҡыу кәрәк-яраҡтары менән бушлай тәьмин ителә, уҡыу көндәрендә улар 2 сәғәткә элегерәк эштән бушатыла. Уҡытыу рус, башҡорт һәм татар телдәрендә алып барыла. Культура фронты работниктарын тағы ла нығыраҡ туплау һәм өлкәндәрҙе уҡытыуҙы юлға һалыуҙа уларҙың инициативаһын күтәреү маҡсатында 1924 йылдың февралендә Өфөлә «Бөтһөн наҙанлыҡ» йәмғиәте ойошторола. Ҡаланың интеллигенцияһы «Бөтәһе лә наҙанлыҡты бөтөрөү фронтына» тигән лозунгыға ҡушыла.

Ул осорҙа газеталарҙа йыш ҡына ошондай белдереүҙәр күренә торғайны: «Наҙанлыҡты бөтөрөү пункттарында буш урындар бар. Унда ҡаланың 18 йәштән 50 йәшкә тиклемге наҙан граждандары ҡабул ителә. Уҡытыу — көндөҙ һәм кис. Бушлай уҡытыла. Кәрәкле уҡыу әсбаптары 3, 5, 7, 11, 17, 24-се һанлы мәктәптәр эргәһендәге уҡыу пункттарында бушлай бирелә»[1]. Һәм хеҙмәтсәндәр уҡыуға баралар. Улар тырышып уҡырға һәм яҙырға өйрәнәләр. Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 1925 йылда Өфөлә ликбез системаһында 4 мең самаһы кеше уҡыған[2]. Наҙандарҙың байтағы үҙ аллы уҡыған.

Ҡала партия ойошмаһы наҙанлыҡты бөтөрөү өсөн барған массовый хәрәкәтте халыҡты политик ағартыу эше менән тығыҙ бәйләп алып барырға тырыша. Шуның өсөн мәктәптәрҙә халыҡты уҡыуға һәм хисапҡа өйрәтеү менән бер рәттән политик, әҙәби һәм тәбиғи-ғилми темаларға әңгәмәләр үткәрелә, театрҙарға һәм музейҙарға йөрөү һәм башҡалар ойошторола.

Мәктәптәрҙә һәм ликбез пункттарында уҡытып сығарыуҙар, гәҙиттә. тантаналы шарттарҙа үткәрелә. «Власть труда» газетаһы Өфө ҡаҙармаларында булған ваҡиғаны бына нисек яҙған: «Бөгөн бында наҙанлыҡҡа ҡаршы көрәш батырҙарын хөрмәтләйҙәр. Ҡыҙыл Армия үҙенең юлбашсыһының бойороғон үтәне. Ул пролетарҙар байрамы — 1 Май алдынан ҡараңғылыҡҡа ҡаршы фронт батырҙарын хөрмәтләй. Стеналарҙы тултырып: «Беҙ 1 Майҙы тәүге тапҡыр уҡый-яҙа белеп байрам итәбеҙ», «Китап бирегеҙ, хәҙер мин уны үҙем уҡый һәм аңлай алам» тигән лозунгылар эленгән. Сәхнә эргәһендә уң яҡта тау башына менеп «Мин белемле» тип яҙылған Ҡыҙыл байраҡты ғорур тотоп тороусы ҡыҙылармеец һүрәте төшөрөлгән бик ҙур, матур плакат ҡуйылған. Сәхнәнән һул яҡты уҡыусылар эштәренең күргәҙмәһе биләгән[3].

Бынан һуңғы йылдарҙа ҡаланың партия, совет һәм профсоюз ойошмалары наҙанлыҡты бөтөрөү өсөн көрәште көсәйтәләр. Предприятиеларҙа һәм транспортта был эш производство үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып башҡарыла. Фабрикаларҙа һәм заводтарҙа сменалы мәктәптәр ойошторола, матростар навигация ваҡытында судноларҙа

---

[1] «Красная Башкирия», 1925, 14 ғинуар, 3, 23 сентябрь.
[2] ЦГА БАССР, ф. 798, оп. 2, д. 431, л. 286.
[3] «Власть труда», 1922, 7 май.

уҡыйҙар. Әсәләре ликбез мәктәптәренә йөрөгән балалар өсөн ҡала Советы махсус балалар баҡсалары һәм ясленәре ойоштора.

Өфөлә 30-сы йылдар башына наҙанлыҡҡа ҡаршы көрәштә ярайһы уҡ уңыштарға өлгәшелә. Был ликбездарҙы аҙ белемлеләр менән эшләүгә үҙгәртеп ҡорорға мөмкинлек бирә, уларҙа уҡыусылар төп фәндәр буйынса башланғыс мәктәп күләмендә белем ала.

Октябрь революцияһынан һуң бик тиҙ совет мәктәптәрен булдырыу буйынса ҙур эш йәйелдерелә. 1917 йылдың 11 декабрендә һәм 1918 йылдың 16 октябрендә РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советының халыҡ мәғарифы буйынса декреттары: «РСФСР-ҙың берҙәм хеҙмәт мәктәбе тураһында положение» һәм «Берҙәм хеҙмәт мәктәбе тураһында декларацияһы» баҫылып сыға. Уларҙа мәктәп эшен ойоштороуҙың яңы принциптары һәм йәмғиәтселеге иғлан ителә. Синфи һәм ҡатлам өҫтөнлөктәре, уҡыу өсөн түләү бөтөрөлә. Эшселәр һәм ярлы крәҫтиән балалары өсөн мәктәптәргә киң юл асыла. Мәктәп диндән айырыла. Берҙәм хеҙмәт мәктәбе булдырыла. Малайҙарҙы һәм ҡыҙҙарҙы бергә 9 йыл уҡытыу индерелә: I баҫҡыс мәктәптәрендә —5 йыл (8 йәштән 13 йәшкә тиклемге балалар өсөн), II баҫҡыс мәктәптәрендә —4 йыл (13 йәштән 17 йәшкә тиклемге балалар өсөн).

Өфөлә совет мәктәптәренең урынлашыуы, тотош илебеҙҙәге кеүек үк, көсөргәнешле синфи көрәш шарттарында бара. 1917 йылдың 15 декабрендә ҡала уҡытыусыларының реакцион өлөшө мәктәптәрҙе үҙгәртеп ҡороуҙы туҡтатыуҙы, мәктәп эшенә ҡыҫылмауҙы талап итеп ҡала етәкселәренә ультиматум ҡуя. Был талаптар кире ҡағылғас, Бөтә Россия уҡытыусылар союзының Өфө бүлексәһе етәкселегендә уҡытыусыларҙың эш ташлауы башлана. Күп кенә мәктәптәр ябыла. Уҡытыусыларҙың уҫал уй менән эш ташлауы Өфө хеҙмәтсәндәренең нәфрәтен тыуҙыра. Ҡала профессиональ союздары идараларының берлектәге ултырышы 1918 йылдың 8 ғинуарында «саботажлыҡҡа енәйәтсел саҡырыуҙарға ҡушылыусы уҡытыусыларға, үҙҙәре хеҙмәт итергә тейешле булған эшкә ҡаршы сығып, халыҡ алдындағы үҙ бурыстарын енәйәтсел рәүештә онотҡандары өсөн, ҡайнар нәфрәт һәм протест белдерергә» [1] ҡарар итә.

Ул көндәрҙә Өфө ҡалаһының партия һәм совет органдары уҡытыусыларҙы реакцион союз йоғонтоһонан тартып алыу өсөн күп көс һала. Бының өсөн матбуғат, йыйылыштар, уҡытыусылар съездары киң файҙаланыла. Уҡытыусылар араһында алып барылған тәрән мәғәнәле һәм күп яҡлы идея-политик эш уларға партия политикаһын яҡшыраҡ аңларға булышлыҡ итә һәм уларҙы Совет власына яҡынайта. Уҡытыусыларҙың саботажлығы һындырыла. Мәктәптәрҙә уҡыуҙар башлана.

Аҡгвардиясыларҙың Өфөнө ваҡытлыса баҫып алыуы ҡалала халыҡ мәғарифының үҫешен тотҡарлай. Мәктәптәрҙең материаль ба-

---

[1] Подготовка и проведение Великой Октябрьской социалистической революции в Башкирии (февраль 1917 г. — июнь 1918 г.), 262-се бит.

zaһыныҡ зыян күрә. Күп кенә мәктәптәр бөлгөнлөккә төшә, ә ҡайһылары тотошлай емерелә. Мәҫәлән, «Ғалиә» мәҙрәсәһенең стеналары ғына тороп ҡала. Өфө гимназияларының уҡыу әсбаптары һәм китапханалары һәләк була.

Өфөнө Колчак бандаларынан азат иткәс тә, партия ойошмаларының саҡырыуы буйынса, бөтә ҡала йәмәғәтселеге мәктәптәрҙе аяҡҡа баҫтырыуға тотона. Мәктәп биналарын һәм йыһаздарын ремонтлау, утын әҙерләү һәм ташыу буйынса өмәләр ойошторола. Уҡытыу-тәрбиәүи эште үҙгәртеп ҡороу дауам итә. РКП(б)-ның VII Өфө губерна конференцияһы (1920 йылдың июне) крайҙың бөтә партия ойошмаларына «берҙәм хеҙмәт мәктәптәрен төҙөүҙә актив ҡатнашырға» ҡуша һәм «...халыҡ мәғарифына коммунистик һәм совет төҙөлөшөнөң иң мөһим мәсьәләһе тигән ҡарашты бөтә саралар менән яҡларға, шуның өсөн бөтә ойошмаларға халыҡ мәғарифы бүлектәренә тулыһынса булышлыҡ итергә...» [1] кәрәклекте күрһәтә.

Күрелгән саралар һөҙөмтәһендә Өфөләге мәктәптәр селтәре аяҡҡа баҫтырылыу ғына түгел, бәлки киңәйтелә. Яңы мәктәптәр асыла, эшләп килгәндәре үҙгәртеп ҡорола. 1919 йылда Өфөләге иң тәүге уҡыу йорттарының береһе — ирҙәр өсөн хөкүмәт гимназияһы — базаһында 2-се һанлы II баҫҡыс мәктәп булдырыла, Александровский урамындағы (хәҙерге К. Маркс урамы, 31) шәхси татар гимназияһы II баҫҡыс татар мәктәбе итеп үҙгәртелә һ. б. 1919—1920 йылдарҙа бик күп рус-татар мәктәптәре асыла. Совет мәктәптәрен төҙөүҙә Өфөнөң алдынғы педагогтары Н. Н. Нимвицкая, М. Н. Нимвицкая, К. Д. Стрежнева, А. Н. Шишкина, О. Е. Шипова, М. В. Архангельская, Ш. Х. Сүнчәләй, Л. П. Гнедков актив ҡатнаша.

Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 1921 йылдың аҙағына Өфөлә 70-тән ашыуыраҡ мәктәп булған. Уларҙың күпселеге бәләкәй (40—50 балаға иҫәпләнгән), материаль базалары насар ине. 1921 йылда йотлоҡ башланғас, күп кенә уҡыу йорттары ябылған. Илебеҙҙең экономикаһын аяҡҡа баҫтыра барыу менән бергә аҡрынлап мәктәптәрҙең дә эше яҡшырған. 1923 йылда Өфөләге эшләп килгән мәктәптәр эреләтелгән. Эшселәрҙең һәм хеҙмәт интеллигенцияһы балаларын мәктәпкә йәлеп итеү үҫкән. 1925 йылдың уртаһында 8—11 йәшлек балаларҙың 73,5 проценты мәктәпкә йөрөй [2].

Совет мәктәбен төҙөү уҡытыусылар кадрҙарын әҙерләү һәм белемен арттырыу мәсьәләһен бөтә ҡырҡыулығы менән алға ҡуя. Партия ойошмалары етәкселегендә 20-се йылдарҙа ҡалала ҡыҫҡа сроклы курстарҙа һәм уҡытыусылар конференцияларында мәктәп работниктарының политик һәм методик белемен күтәреү буйынса ҙур эш йәйелдерелә. Был саралар уҡытыусыларҙы идея йәһәтенән тәрбиәләүҙә, уларҙың квалификацияһын күтәреүҙә ҙур роль уйнай. Мәк-

---

[1] Резолюция областных конференций Башкирской партийной организации и пленумов обкома КПСС (1917—1940 гг.), 65, 66-сы биттәр.

[2] ПА БОК КПСС, ф. 365, оп. 1, д. 396, л. 97.

тәптә белем биреүҙең йөкмәткеһе лә тамырынан үҙгәрә. Мәктәп фәндәрен марксистик-ленинсы методология нигеҙендә үҙгәртеп ҡороу башлана. Уҡытыуҙы тормошҡа һәм етештереүсәнле хеҙмәткә бәйләп алып барыуға йүнәлтелгән яңы ысул да уҡыусыларҙың донъяға материалистик ҡарашын үҫтереүҙә хәл иткес роль уйнай. Мәктәп эшенең йөкмәткеһе лә нык үҙгәрә һәм ул партия-совет политикаһы йүнәлешен ала.

Мәктәптәрҙең материаль базаһын нығытыу, уҡытыусыларҙы идея яғынан ҡоралландырыу, яңы кадрҙар әҙерләү культура революцияһының иң мөһим бурыстарының береһен — дөйөм белем биреүҙе тормошҡа ашырыу өсөн кәрәкле тәүшарттар тыуҙыра. 1930 йылдың 17 августында Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитеты һәм СССР Халыҡ Комиссарҙары Советы балаларға һәм үҫмерҙәргә мәжбүри дөйөм башланғыс белем биреүҙе индереү тураһында ҡарар ҡабул итә. Өфөлә ул 1931 йылдан индерелә, ә 1932 йылдың аҙағында ете йыллыҡ дөйөм белем биреүгә күсеү башлана. ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1931 йылдың 5 сентябрҙәге «Башланғыс һәм урта мәктәп тураһында» һәм 1932 йылдың 25 августындағы «Башланғыс һәм урта мәктәптәрҙә уҡыу программалары һәм режимы тураһындағы» ҡарарҙары яҡтылығында ҡала партия ойошмаһы етәкселегендә уҡытыу-тәрбиәүи эште үҙгәртеп ҡороу һәм камиллаштырыу саралары үткәрелә. Мәктәптәрҙә политехнизациялау тормошҡа ашырыла бара. Үҫеп килеүсе йәш быуынды коммунистик рухта тәрбиәләүгә етди иғтибар бирелә. Педагогик коллективтар уҡыусыларға физик, эстетик һәм хеҙмәт тәрбиәһе биреү буйынса эш алып бара. Был бурысты хәл итеүҙә мәктәптән тыш учреждениелар ҙа — пионерҙар йорттары, балаларҙың техник станциялары ла ҡатнаша. Өфөлә йыл һайын мәктәптәр һаны арта бара. (10-сы таблицаны ҡарағыҙ.)

10-сы таблица*

**Ҡалала мәктәптәр селтәре үҫеше**

| | Уҡыу йылдары | | |
|---|---|---|---|
| | 1923\|24 | 1937\|38 | 1940\|41 |
| Мәктәптәр бөтәһе | 24 | 67 | 74 |
| Шул иҫәптән: | | | |
| башланғыс мәктәптәр | 20 | 26 | 26 |
| тулы булмаған урта —»— | — | 19 | 19 |
| урта —»— | 4 | 22 | 29 |
| Уҡыусылар һаны | 7129 | 43 207 | 45 302 |
| Уҡытыусылар һаны | 274 | 1354 | 1512 |

* Таблица түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса төҙөлдө: Уфа за годы Советской власти (Статистический справочник), 57-се бит; ПА БОК КПСС, ф. 365, оп. 1, д. 324, л 54, 55.

Таблицанан күренеүенсә, Өфөлә халыҡ мәғарифы 40-сы йылдар башына ҙур уңыштарға өлгәшә. Дөйөм белем биреү мәктәптәренең һаны 1923/24 уҡыу йылынан 1940/41 уҡыу йылына тиклем 3 тапҡырға, ә уҡыусылар һәм уҡытыусылар һаны — 6 тапҡырға арта. Үҫеш нигеҙҙә тулы булмаған урта һәм урта мәктәптәр иҫәбенә бара. Мәктәптәрҙең йылдам үҫеүе икенсе һәм өсөнсө биш йыллыҡ пландар тарафынан халыҡ мәғарифы өлкәһендә ҡуйылған бурыстарҙың уңышлы үтәлеүен асыҡ иҫбатлай.



Л. А. Галанова.

Уҡытыусылар составының сифаты ла яҡшыра. Мәҫәлән, әгәр 1924 йылда ҡала мәктәптәрендә эшләүсе уҡытыусыларҙың 20 проценты ғына юғары белемле булһа, 1940 йылда ул 43 процентҡа етә[1]. Уҡытыусыларҙың байтағы сығышы ягынан эшселәр һәм крәҫтиәндәр була. Улар араһында партия һәм комсомол ағзалары арта.

Мәктәпкә үҙенең 32 йыл хеҙмәтен һалған талантлы уҡытыусы Л. А. Галанова хаҡлы рәүештә ҡала халҡының хөрмәте менән файҙалана. Ул 1923 йылдан 1937 йылға тиклем 11-се мәктәптең директоры була, мәктәп хәҙер уның исемен йөрөтә. Уңышлы эшләгәне өсөн Лидия Андреевна ике тапҡыр Хеҙмәт Геройы исеменә лайыҡ була, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана.

Һоҡланғыс педагог һәм ғалим З. Ш. Шакиров та Башҡортостандың тәүге милли мәктәптәрен ойоштороуға һәм нығытыуға күп хеҙмәт һәм көс һалды. Ул II баҫҡыс 4-се һанлы мәктәптең (һуңынан 2-се урта мәктәп) директоры булыу менән бер рәттән уҡытыусыларҙың белемен күтәреү курстарында эшләй. 1929 йылда ул К. А. Тимирязев исемендәге педагогик институтта уҡыта башлай, башҡорт теленең фонетикаһы һәм диалектологияһы буйынса уңышлы фәнни эш алып бара. З. Ш. Шакировҡа 1944 йылда Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре тигән почетлы исем бирелә, һуңынан ул Ленин ордены һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградлана. 1981 йылда республика йәмәғәтселеге совет башҡорт мәктәбенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, күренекле тел ғалимының тыуыуына 100 йыл тулыуҙы киң билдәләне.

[1] ПА БОК КПСС, ф. 365, оп. 1, д. 324, л. 54—55; ф. 342, оп. 2, д. 1082, л. 118—119.

З. Ш. Шакиров.



Халыҡ мәғарифы өлкәһендә өлгәшкән уңыштар һөҙөмтәһендә Өфө халҡының грамоталылығы 1920 йылдағы 48,2 проценттан 1939 йылда 88,7 процентҡа күтәрелә [1].

Совет властының тәүге йылдарынан уҡ йәштәрҙең профессиональ белемен күтәреүгә етди иғтибар бирелә. Һөнәрселек һәм профессиональ-техник мәктәптәр уның төп формаһы була. Ике йыллыҡ һөнәрселек мәктәптәре слесарҙар, тимерселәр һәм балта оҫталары әҙерләп сығарған. Профессиональ-техник мәктәптәр юғары квалификациялы эшселәр (металл һәм ағас эшкәртеү буйынса), урындағы һәм кустарсылыҡ промышленносы өсөн түбәнге административ-техник работниктар әҙерләгән. Был мәктәптәрҙә уҡытыу 4 йыл буйына дауам иткән. 1920—1922 йылдарҙа һөнәрселек мәктәптәре Өфө тимер юл мастерскойҙары, 2/5-се берләштерелгән ағас эшкәртеү заводы, металсылар, тире иләүселәр, йылғасылар союздары эргәһендә төҙөлә. 1922 йылда профессиональ-техник мәктәптәр ойошторола.

Өфөлә профессиональ белем биреүҙе ойоштороу дөйөм белем биреү мәктәптәрен төҙөүҙән еңел булманы. Биналар, ҡорамалдар, уҡыу әсбаптары, квалификациялы уҡытыусылар етешмәне. Тәүге осорҙа берҙәм программа, дәреслектәр булмай. Партия ойошмаһы профессиональ белем биреүҙең тәүге мәктәптәре тураһында ҙур хәстәрлек күрә. Ул ҡала Советының, хужалыҡ органдарының иғтибарын мәктәптәрҙе тәьмин итеү өсөн материаль средстволар табыуға йүнәлтә. 1922 йылда профессиональ-техник мәктәп элекке Александровский һөнәрселек училищеһы (хәҙерге Ленин урамы, 7) бинаһын ала. Өфө хеҙмәтсәндәре үҙ көсө менән ул бинаны ремонтлай, слесарь-механик, токарь-механик, художестволы ҡырҡыу мастерскойҙарын, мәктәп электр станцияһын һәм механик тирмән ойоштороп йыһазлай. Уҡыусылар һәм педагогик совет «Власть труда» газетаһы аша мәктәпте төҙөүҙә ҡатнашҡан кешеләргә ихлас күңелдән рәхмәт белдергән [2].

Һөнәрселек мәктәптәрен ойоштороуҙа, уларҙың материаль базаһын нығытыуҙа Өфө халҡының, бигерәк тә эшселәрҙең, ҡатнашлығы ҙур була. Йылғасылар, полиграфсылар һәм тимер юлсылар үҙ көстәре

[1] Итоги Всероссийских переписей 1920 г. по Уфимской губернии. Итоги демографической переписи. Распределение населения по полу, возрасту и грамотности. Өфө, 1920, 2, 3-сө биттәр; ЦГА БАССР, ф. 804, оп. 2, д. 880, л. 3.

[2] «Власть труда», 1922, 9 июль.

менән уҡыу мастерскойҙарын йыһазлай. Улар хужалыҡ ойошмалары аша етешмәгән инструменттарҙы, сырье һәм башҡа нәмәләрҙе алыуға өлгәшә. Эшселәр мәктәптәргә утын ташый, өмәләр ойоштора. Йылғасылар үҙҙәре шефлыҡ иткән мәктәпкә бер көплөк эш хаҡын күсерәләр ҙә: «Йылғасы, уҡы! Бына һиңә беҙҙең өлөш. Ҡыҙыл һөнәрмәнде көтәбеҙ!»,— тип яҙғандар. Мәктәп өсөн иң ауыр ваҡытта йылғасылар «43 уҡыусыны тулыһынса материаль тәьмин итеүҙе үҙ өҫтәренә алырға» ҡарар иткәндәр.

Уларҙың өлгөһөнә башҡа производство эшселәре лә эйәргән [1].

Уҡыу йорттары селтәрен киңәйтеү менән бер рәттән эшселәрҙе профессиональ әҙерләүҙең яҡшыраҡ, дөйөм белем биреүҙе хеҙмәт күнекмәләре менән бергә ҡушыу тураһындағы ленинсы принципҡа яуап бирерлек формаларын, эҙләү дауам итә. 20-се йылдарҙың уртаһында эҙләгән форма табыла. 1923 йылда һөнәрселек училищелары фабрика-завод өйрәнсектәре (ФЗУ) мәктәптәре итеп үҙгәртеп ҡорола. ФЗУ мәктәптәренең уҡыу программалары техник һәм махсус предметтар менән бер рәттән ҙур дөйөм белем биреү материалдарын да үҙ эсенә ала. Уҡыусыларҙы идея-политик тәрбиәләүгә етди иғтибар бирелә. Уға бөтәһенән элек йәмғиәтте өйрәнеү курсын уҡытыу арҡаһында өлгәшелә. Ул йылдарҙа һалынған нигеҙҙә һуңынан профессиональ-техник белем биреү үҫә һәм нығый. Әгәр 1927 йылда Өфөләге ике ФЗУ мәктәбендә 81 кеше уҡыған булһа, 1938 йылда 8 мәктәптә 984 кеше уҡый [2].

Илдең экономикаһының көслө үҫеүе халыҡ хужалығына квалификациялы эшселәр килеүен ҡырҡа арттырыуҙы талап итә. Уларҙы әҙерләүҙең әле йәшәп килгән системаһы был бурысты хәл итә алмай ине. Шуға күрә СССР Верховный Советы Президиумы 1940 йылдың 2 октябрендә «СССР-ҙың дәүләт хеҙмәт резервтары тураһында» Указ ҡабул итә, унда ике йыллыҡ һөнәрселек һәм тимер юл училищеларының һәм алты айлыҡ фабрика-завод уҡыуының (ФЗО) киң селтәрен булдырыу билдәләнә. Училищелар металлургтар, таусылар, нефтселәр, тимер юлсылар әҙерләргә тейеш ине. Йәштәрҙе массовый һөнәрҙәргә өйрәтеү ФЗО мәктәптәрендә билдәләнә. Уҡыусылар тулыһынса дәүләт тәьминәтенә алына.

Башҡортостанда 1940 йылда хеҙмәт резервтарының 10 уҡыу йорто төҙөлә, шуның өсөһө (тимер юл училищеһы һәм ике ФЗО мәктәбе) Өфөлә урынлаштырылған була [3]. Промышленность һәм транспорт өсөн кадрҙар әҙерләү даими үҫә. Мәктәп һәм училище тамамлаусылар эшселәр синыфының лайыҡлы өҫтәмәһенә әүерелә.

---

[1] Ваганова Л. А. Становление профессионально-технического образования в Башкирии (1920—1928 гг.) — В кн.: Вопросы истории Башкирии. 1-се сығарылыш (Совет осоро). Өфө, 1972, 64-се бит.

[2] ЦГА БАССР, ф. 472, оп. 6, д. 824, л. 8.

[3] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 20, д. 353, л. 473; ЦГА БАССР, ф. 54, оп. 1, д. 2, л. 37.

Коммунистар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең милли республикаларҙа квалификациялы белгестәр әҙерләү тураһында даими ҡайғыртыуы арҡаһында Өфөлә техникумдар селтәре булдырыла һәм йылдам үҫә. 1920 йылдың февралендә Псков ауыл хужалығы училищеһы Өфөгә күсерелә, ул крайҙың ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыуға һәм үҫтереүгә ярҙам итергә һәләтле агроном кадрҙары әҙерләргә тейеш ине. Губерна башҡарма комитеты училищеға ҡаланың иң яҡшы йорттарының береһен — Александровский урамындағы элекке Руханиҙар семинарияһы йортон (хәҙерге К. Маркс урамы, 3), ә уҡыу хужалығын ойоштороуға Миловка ауылындағы помещик имениеһын бирә [1]. 1920 йылдың мартында политехникум эшләй башлай. РСФСР Мәғариф халыҡ комиссариатының профессиональ белем биреү буйынса Баш комитетының 10 мартта ҡабул иткән ҡарарында: «Өфөлә уны юғары уҡыу йортона үҙгәртеп ҡороу хоҡуғы менән Өфө политехникумы тип аталған урта типтағы уҡыу йорто асырға»,— тип әйтелгәйне [2].

20-се йылдарҙа башҡа техникумдар ҙа: Башҡорт педагогия, Сыуаш педагогия, Ер төҙөү техникумдары, шулай уҡ фармацевтика, музыка мәктәптәре асыла. 30-сы йылдарҙа Өфөлә Тимер юл, Геология-эҙләнеү, Авиамеханика, Төҙөләш, План-экономика, Физкультура, Китапхана техникумдары һәм башҡа техникумдар асыла. 1940 йылда 11 техникумда һәм уларға тиңләштерелгән башҡа 20 махсус мәктәптә 5016 кеше уҡый [3].

1920 йылдың 15 ғинуарында асылған Халыҡ мәғарифы институты ҡала тормошонда ҙур ваҡиға була. Ул Совет хөкүмәте ҡарары буйынса Телеграф урамындағы 9-сы йортта (хәҙерге Цюрупа урамы, 9) урынлашҡан элекке Уҡытыусылар институты базаһында ойошторола һәм Башҡортостанда культура революцияһын ғәмәлгә ашырыуҙа ҙур роль уйнай. 1920 йылдың 11 октябрендә Өфө губерна башҡарма комитетының ҡарары менән институтҡа ҙур рус ғалимы К. А. Тимирязевтың исеме бирелә [4]. Уның өс бүлеге: социаль-экономик, тәбиғәт-география һәм физика-математика бүлектәре урта мәктәптәр өсөн уҡытыусылар әҙерләй.

Ҡыҙылармеецтар, эшсе-металсылар, ағас эшкәртеүселәр, йылғасылар, тимер юлсылар, ауыл йәштәре институттың тәүге студенттары була. Улар уҡыуҙы ауыр ваҡытта, илдә аслыҡ һәм емереклек хөкөм һөргәндә башлай. Был шарттарҙа урындағы власть органдары, йәмәғәт һәм хужалыҡ ойошмалары, хеҙмәтсән массалар тарафынан уларға материаль ярҙам күрһәтеү айырыуса ҙур роль уйнай. Проф-

---

[1] Ганеев Р. Советы Башкирии в 1919—1920 гг. (по материалам Уфимской губернии). Өфө, 1961, 108-се бит.

[2] Шунда уҡ.

[3] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1082, л. 119; ЦГА БАССР, ф. 804, оп. 2, д. 880, л. 56—57.

[4] Ганеев Р. Советы Башкирии в 1919—1920 гг., 108-се бит.

союздар эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡынан отчисление-лар яһай, кейем-һалым бүлә, студенттарға ваҡытлы ярҙам күрһәтеү буйынса һәр төрлө кампаниялар үткәрә. Тимер юл мастерскойҙары, ағас бысыу заводтары коллективтары 20-се йылдарҙа йыш үткәрелгән «пролетар студенттарға ярҙам итеү» аҙналарында өмәләр ойоштора һәм уның аҡсаһын студенттар файҙаһына бирә [1].

Партия һәм совет органдары, шулай уҡ ҡала хеҙмәтсәндәре тарафынан институтҡа күрһәтелгән ярҙам ауырлыҡтарҙы еңергә мөмкинлек бирә, уны артабан нығытыуға һәм үҫтереүгә булышлыҡ итә. 1929 йылда Халыҡ мәғарифы институты юғары уҡыу йорто — К. А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институты итеп үҙгәртеп ҡорола. Институтты финанслау йылдан-йылға киңәйә, уның материаль базаһы нығый. 30-сы йылдарҙың аҙағында унда 5 факультет: тел һәм әҙәбиәт (рус һәм башҡорт бүлектәре менән), тарих, география, тәбиғәт, физика-математика факультеттары эшләй ине. 1929 йылдан 1940 йылға тиклем педагогия институты 2310 уҡытыусы һәм ғилми работник, шул иҫәптән башкорт һәм татарҙарҙан бер меңдән ашыуыраҡ, уҡытыусы һәм ғилми работник әҙерләп сығара. Профессорҙар-преподавателдәр составында ла байтаҡ үҙгәреш була. Ул һан яғынан да, сифат яғынан да үҫә. Әгәр 1929 йылда 57 уҡытыусы, шул иҫәптән 1 профессор булһа, 1940 йылда — 102 уҡытыусы, шуларҙан 21 профессор һәм доцент эшләй.

РСФСР Халыҡ Комиссарҙары Советы ҡарары буйынса 1930 йылдың июлендә ҡаланың икенсе юғары уҡыу йорто — Башҡортостан ауыл хужалығы институты (К. Маркс урамы, 3) асыла. Уға тиклем республиканың ауыл хужалығы өсөн юғары квалификациялы белгестәр әҙерләүҙең төп үҙәге шефлыҡ итеүсе К. А. Тимирязев исемендәге Бөтә Союз ауыл хужалығы академияһы була. Ләкин колхоз һәм совхоз производствоһы тиҙ үҫкән шарттарҙа ул Башҡортостандың агрономдарға, ветеринар врачтарға булған ихтыяжын бик аҙ дәрәжәлә лә ҡәнәғәтләндермәй. Институт асылыу был мөһим проблеманы радикаль хәл итеү ине. Уҡыуҙар 1930 йылдың 1 октябрендә ике факультетта — үҫемлекселек һәм малсылыҡ факультеттарында башлана. Яңы юғары уҡыу йорто йылдам үҫә. Тәүге йылда унда 99 студент уҡый, профессорҙар-преподавателдәр коллективы 13 кешенән торған [2]. 1930—1932 йылдарҙа институтта физика, дөйөм һәм агрономия химияһы, ботаника, механизация, үҫемлекселек, тупраҡты өйрәнеү һәм игенселек, ауыл хужалығын социалистик реконструкциялау, социалистик игенселек һәм малсылыҡ совхоздары ойоштороу кафедралары, ситтән тороп уҡыу секторы һәм эшселәр факультеттары ойошторола. Бөйөк Ватан һуғышы алдынан унда 21 кафедра, 63 препо-

---

[1] ЦГАОР СССР, ф. 5463, оп. 9, д. 224, л. 16; «Красная Башкирия», 1925, 12 март.

[2] Бахтизин Н., Богданова Р. Кузница сельскохозяйственных кадров. Өфө, 1972, 12-се бит.

ВЛКСМ-дың XV йыллығы исемендәге медицина институтының уҡыу корпусы.



даватель, шул иҫәптән 3 профессор һәм 18 доцент, эшләй ине. 1941 йылға тиклем институт 396 агроном, зоотехник һәм ветеринар врач әҙерләп сығарған.

1932 йылдың 15 ноябрендә Өфөнөң өсөнсө юғары уҡыу йорто — медицина институтын тантаналы асыу булды. Иң тәүҙә 320 студент ҡабул ителә, дәрестәрҙе 23 преподаватель, шуларҙан 2 профессор һәм 2 доцент, алып бара. Институтта уҡыу процесын ойоштороу, кафедралар төҙөү һәм уларҙы йыһазландырыу, профессорҙар-преподавателдәр һайлап алыу буйынса ҙур һәм көсөргәнешле эш бара. 1940 йылда бында 1932 йылдағы 6 кафедра урынына 32 кафедра эшләй. Уларҙа 96 преподаватель, шуның эсенән 16 профессор һәм 16 доцент була. Медицина институты бик ҙур уҡыу йортона әүерелә. Ул 1941 йылға тиклем 1055 врач әҙерләп сығара [1].

30-сы йылдарҙа ҡалала партия һәм совет работниктары әҙерләү буйынса Юғары коммунистик ауыл хужалығы мәктәбе, Свердловск политехник институтының уҡыу-консультация пункты, 1940 йылда — Өфө сит ил телдәре институты асыла.

Партия һәм совет органдары, яңы уҡыу йорттары ойоштороп, студенттарҙың социаль составын яҡшыртыу буйынса ҙур эш алып

[1] Шерстенников Н. А. Башкирский медицинский институт имени XV-летия ВЛКСМ. Өфө, 1959, 54, 57-се биттәр.

бара. Иң мөһим проблемаларҙың береһе шунда ине. Был бурысты хәл иткәндә В. И. Лениндың күрһәтмәләренән сығып эш ителә. Ул, 1917 йылдың октябрендә башланған революция «идара итеүҙең бөтә өлкәләренә, дәүләт төҙөлөшөнөң бөтә эштәренә, яңы тормошҡа етәкселек итеүҙең бөтә эштәренә, буржуазия, капиталистик ҡол биләүселәр, буржуаз интеллигенция, бөтә бай, милек тотоусылар урынына түбәндән алып юғарыға тиклем яңы синыф килгән саҡта ғына»[1] аҙағына тиклем алып барыласаҡ, тип күрһәткәйне. Эшселәр һәм ярлы крәҫтиәндәр араһынан студенттар һайлап алыу бик ауыр була. Йәштәрҙең, бигерәк тә башҡорт һәм татар йәштәренең, күпселегенең юғары уҡыу йорттарына инеү өсөн кәрәкле белеме юҡ ине. Юғары мәктәп курсын үтеүгә эшселәрҙе һәм крәҫтиәндәрҙе күпләп әҙерләү ысулын табырға кәрәк ине. Шундай ысулдарҙың береһе эшселәр факультеты була.

Н. К. Дмитриев.



Өфөлә беренсе рабфак 1921 йылдың 8 ноябрендә политехникум эргәһендә асыла. Унда партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары тәҡдиме менән эшселәр һәм крәҫтиәндәр генә ҡабул ителә. Урындағы милләттәрҙең хеҙмәтсәндәрен ҡабул итеүгә айырыуса иғтибар бирелә. Ләкин әҙерлектәре етерлек булмау сәбәпле, тәүге рабфакка ҡабул ителгәндәрҙең араһында башҡорт һәм татарҙар 1921 йылда 3 процент ҡына тәшкил иткән. Тиҙҙән рабфактар эргәһендә әҙерлек курстары ойошторола һәм 1925/26 уҡыу йылында рабфаксыларҙың яртыһын башҡорттар һәм татарҙар тәшкил итә.

30-сы йылдарҙа Өфөлә яңы рабфактар: ауыл хужалығы, медицина, «Востоксталь», кооператив, тимер юл рабфактары асыла. 1927 йылдан 1937 йылға тиклем ҡала рабфактарын 11 меңдән ашыуыраҡ кеше тамамлай. Уларҙы тамамлап сығыусыларҙың байтағы уҡыуҙы Өфө, Мәскәү, Ленинград, Свердловск, Ҡазан, Саратов һәм башҡа ҡалаларҙың юғары уҡыу йорттарында дауам итә.

1941 йылда Өфө институттарында 3300 студент уҡый. Уларҙың күпселеге күптән түгел генә рабфаксылар ине[2]. Ҡаланың рабфактары студенттарҙың социаль составын яҡшыртыуҙа, башҡорт һәм татар йәштәрен юғары белемгә йәлеп итеүҙә айырыуса ҙур роль уйнай.

---

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 37-се том, 444-се бит.

[2] Культурное строительство РСФСР. Статистический сборник. М., 1958, 372-се бит.

С. И. Руденко.



Юғары уҡыу йорттары төҙөү менән бергә Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте Башҡортостанда фәнде үҫтереү өсөн ҙур көс һала. Революцияға тиклем Өфөлә ҙур булмаған бактериология ғилми-тикшеренеү институты һәм крайҙы өйрәнеү музейы ғына эшләгән, унда минералдарҙы, палеонтологик, археологик, биологик һәм башҡа коллекцияларҙы йыйыу һәм ҡайһыларын өйрәнеү тупланған була.

Социалистик төҙөлөш йылдарында ҡалала киң ғилми тикшеренеүҙәргә башланғыс һалына. Башҡорт халҡының көнкүрешен, культураһын һәм тарихын өйрәнеү буйынса Ғилми йәмғиәт 1922 йылда үҙенең эшмәкәрлеген башлап ебәрә. Ул этнографик тикшеренеүҙәр, геология-эҙләнеү эштәре үткәрә, ҡыҙыҡлы ғилми докладтар, бәхәстәр ойоштора, хеҙмәттәр баҫып сығара. Йәмғиәт республикала фәндең күп кенә мөһим тармаҡтарын барлыҡҡа килтереүгә һәм үҫтереүгә булышлыҡ итә.

20-се йылдар уртаһында Өфөлә Н. А. Семашко исемендәге физиатрия, трахома, физика, тире-венерология ғилми-тикшеренеү институттары ойошторола. 1930 йылда Башҡортостан комплекслы ғилми-тикшеренеү институты төҙөлә, уның гуманитар, медицина һәм ветеринария фәндәре, ауыл хужалығы, промышленность, кооперация һәм сауҙа бүлектәре була. Тиҙҙән уның күпселек бүлектәре үҙ аллы ғилми учреждениелар булып китә. Мәҫәлән, 1931—1932 йылдарҙа ауыл хужалығын социалистик реконструкциялау, промышленность, марксистик-ленинсы педагогика, башҡорт милли культураһы ғилми-тикшеренеү институттары барлыҡҡа килә. 1932 йылдың аҙағында Өфөлә 14 ғилми-тикшеренеү учреждениеһы булып, уларҙа 87 ғилми хеҙмәткәр эшләй.

Республикала һәм ҡалала ғилми эҙләнеүҙәрҙе башлауҙа һәм йәйелдереүҙә СССР Фәндәр академияһының комплекслы экспедициялары мөһим роль уйнай, уларҙа Н. К. Дмитриев, С. И. Руденко, С. И. Снегиревский һәм башҡа ҙур ғалимдар ҡатнаша.

30-сы йылдарҙа геология өлкәһендәге эҙләнеүҙәр байтаҡ эффектлы була. Тимер рудаһы, таш күмер, хром, вольфрам, марганец, асбест, фосфориттар һәм башҡа ҡаҙылма байлыҡтарға геологик-эҙләнеү эштәре киң үткәрелә. 1932 йылда Ишембай ауылы эргәһендә нефть эҙләү уңышлы тамамлана. Геологтарҙың асышы Башҡортостан өсөн күренекле ваҡиға була. Ул республикала нефть эҙләү эштәрен киңәйтеүгә булышлыҡ итә.

1937 йылдың апрелендә Өфөлә үткәрелгән I Бөтә Башҡортостан ғилми конференцияһы крайҙың геологик төҙөлөшөн һәм ер аҫты байлыҡтарын тикшереүҙәргә йомғаҡ яһай. Ул республиканы Советтар Союзының иң перспективалы һәм шул уҡ ваҡытта тикшеренеүҙәр өсөн иң ҡатмарлы өлкәләренең береһе тип характерлай. Конференция, күп кенә ҡаҙылма байлыҡтар үҙҙәренең күләме һәм сифаты яғынан промышленность әһәмиәтенә эйә, тип билдәләй [1].

Ауыл хужалығы өлкәһендә ғалимдарҙың тырышлығы малдарҙың продукт биреүсәнлеген һәм Башҡортостан баҫыуҙарының уңышын күтәреүгә йүнәлтелгәйне. Улар бөртөклө, техник һәм аҙыҡ культураларын эшкәртеү, сортлы орлоҡсолоҡ мәсьәләләре өҫтөндә эшләйҙәр, тупраҡтың үҙенсәлектәрен һәм уның уңдырышлылығын һәр яҡлап тикшерәләр.

Бер нисә эре проблема менән шөғөлләнеүсе медиктар ҙа ҙур уңышҡа өлгәшә. Башҡортостанда киң таралған трахома, туберкулез һәм биҙгәк ауырыуҙарына ҡаршы планлы көрәш ойоштороу шул проблемаларҙың береһе була. Дауалау һәм профилактика сараларын дөрөҫ ойоштороу меңәрләгән кешеләрҙе ошо ауырыуҙарҙан ҡотҡарып алып ҡала. Халыҡтың санитария һәм гигиена торошо мәсьәләләренә, профессиональ ауырыуҙарҙы өйрәнеүгә етди иғтибар бирелә, был промышленность эшселәренең, уҡыусыларҙың һәм башҡаларҙың көнкүреше һәм хеҙмәте гигиенаһы нормаларын эшләргә мөмкинлек бирә.

Өфө бактериология институты республика әһәмиәтендәге ҙур ғилми-тикшеренеү учреждениеһына әүерелә. Унда эпидемиология бүлеге, суд-медицина һәм клиник-диагностика бүлексәләре, энтомология бүлеге булған биҙгәккә ҡаршы көрәш станцияһы ойошторола. 30-сы йылдарҙа институт лабораторияһы республиканы сыворотканың күп кенә төрҙәре (дифтерияға, дизентерияға һәм башҡа ауырыуҙарға ҡаршы), шулай уҡ скарлатина һәм сәсәккә ҡаршы вакцина менән тулыһынса тәьмин итә [2].

Революцияға тиклемге Башҡортостанда һаулыҡ һаҡлауҙың мөһим быуыны — санаторий-курорт дауалауы юҡ ине. Медицина институты ғалимдары республиканың курорт мөмкинлектәрен асыҡлау, минераль һыуҙарҙың бай запастарын лабораторияла һәм эксперименталь-клиник тикшереү буйынса ҙур эш башҡаралар. Уларҙың ҡайһы берҙәре, мәҫәлән, Красноусол һәм Янғантау сығанаҡтары Башҡортостандан ситтә лә киң танылыу тапты.

20—30-сы йылдарҙа Өфөлә тарих буйынса күп кенә әҙәбиәт баҫып сығарыла. Уларҙың тәүгеләре — «Октябрь революцияһының Өфө йыйынтығы», «Урал аръяғында (Колчак батшалығында)» тигәндәре 1919 йылда, крайҙы аҡгвардиясыларҙан азат иткәс тә, баҫы-

[1] Наука в Советской Башкирии за 50 лет. Өфө. 1969, 465-се бит.

[2] 50 лет Уфимского научно-исследовательского института вакцин и сывороток. Өфө, 1955, 5-се бит.

лып сыҡҡайны. РКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты эргәһендә Октябрь революцияһы һәм Россия Коммунистар партияһы тарихы материалдарын йыйыу һәм өйрәнеү буйынса Комиссияның (Истпарт) бүлексәһе ойошторолғас, революцион хәрәкәт һәм граждандар һуғышы тарихын өйрәнеү активлаша. Революцион хәрәкәт ветерандары В. Д. Галанов, А. А. Кийков, Л. П. Гнедков кеүек кешеләр ярҙамында Истпарт материалдар табыу һәм уларҙы таратыу буйынса бик ҙур эш башҡара. 20-се йылдарҙа ул «Уралдын үткәндәренән», «1905. Өфөлә һәм Урал заводтарында 1905 йылғы революцион ваҡиғалар», «Үтелгән юл. Урал алды райондарында пролетариат диктатураһы осон көрәш тарихына ҡарата» һәм башҡа күп кенә йыйынтыҡтар баҫып сығара [1]. Был баҫмаларҙың күпселеге революцион хәрәкәттә, Октябрь революцияһында һәм граждандар һуғышында ҡатнашыусыларҙың ҡайһы саҡта шәхси иҫтәлектәрҙе тарихи документтар менән яраштырып һөйләгән тулҡынландыргыс хикәйәте булып тора. Айырым етешһеҙлектәре булыуға ҡарамаҫтан, был хеҙмәттәр республиканың яңы, совет осоро тарихын булдырыуҙа мөһим маяҡ була, ә уларҙа баҫылған материалдар Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы проблемалары буйынса тәүге сығанаҡтар базаһын булдырыуға ҙур өлөш индерә.

Өфө тарихсылары өйрәнгән мәсьәләләр йыл һайын арта бара. Совет осорона тиклемге тарих проблемалары ла эшләнә. Был йәһәттән Ленинград һәм Мәскәү ғалимдары ҙур ярҙам күрһәтә. Башҡортостан тарихын өйрәнеүҙә Ленинград тарихсыһы А. П. Чулошников күренекле эҙ ҡалдыра. Башҡортостанда XVII быуатта һәм XVIII быуаттың беренсе яртыһында феодаль мөнәсәбәттәрҙең үҫешен тикшереп, ул 1936 йылда «Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса материалдар» тигән документаль йыйынтығының беренсе киҫәген, ә 1940 йылда — «Башҡортостанда 1755 йылғы восстание» тигән монографияһын баҫтырып сығара. Ленинградтың икенсе бер ғалимы С. И. Руденко башҡорттарҙың культураһын һәм көнкүрешен өйрәнеү менән шөғөлләнә. 30-сы йылдарҙа Өфөлә Милли культура институтында эшләгән академик М. К. Любавский республиканың революцияға тиклемге тарихын өйрәнеүгә ҙур өлөш индерә. Ул XVII һәм XVIII быуаттарҙа башҡорттарҙың ерҙәрҙе файҙаланыуы тарихы буйынса күп кенә тикшеренеүҙәр әҙерләй.

Тел ғалимдары ла уңышлы эшләй. Уларҙың тырышлығы арҡаһында башҡорт милли яҙмаһы булдырыла, әҙәби телдең диалектологик базаһы билдәләнә. 1925 йылда тәүге тапҡыр башҡорт теле грамматикаһы баҫып сығарыла. 1940 йылда башҡортса яҙыуҙы рус графикаһы нигеҙендә эшләнгән яңы алфавитҡа күсереү ижтимағи-политик һәм культура тормошонда ҙур әһәмиәткә эйә була.

---

[1] Наука в Советской Башкирии за 50 лет, 479—481-се биттәр.

## § 2. Әҙәбиәт һәм сәнғәт

Октябрь революцияһының еңеүе илебеҙ халыҡтары әҙәбиәте һәм сәнғәте үҫешенең яңы осорон аса. Ул осор әҙәбиәттә һәм сәнғәттә синфи, партиялылыҡ һәм халыҡсанлыҡтың ленинсы принциптары, уның коммунистик идеялылығы раҫланыу менән характерлана. Был принциптар башҡорт совет әҙәбиәтен формалаштырыуҙа хәл иткес һыҙаттар була. Уның барлыҡҡа килеүе һәм үҫеүе Өфө ҡалаһы менән тығыҙ бәйләнгән, ҡала республиканың экономик үҙәге булыу менән бергә ҙур культура үҙәге лә ине. Бында яҙыусылар, шағирҙар һәм журналистар кадрҙары, китап нәшриәте эше, ваҡытлы матбуғат тупланғайны.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының тәүге көндәренән алып ҡаланың әҙәби тормошо яҙыусыларҙың Ленин партияһы тирәһенә тупланыуы, совет ысынбарлығын яҡтыртыуҙың художестволы сараларын эҙләү менән билдәләнгән. Революцияны шатлыҡлы ҡаршылаусы яҙыусыларҙың береһе Мәжит Ғафури була. «Хөкөм көнө» тигән шиғырында ул революцияны халыҡтарҙың иҙеүселәргә ҡарата юғары ғәҙел хөкөмө тип атай. Граждандар һуғышы йылдарында М. Ғафуриҙың поэзияһы замандың героик рухын, көрәшеүсе халыҡтың уйҙарын һәм тойғоларын, уларҙың еңеүгә ышанысын сағылдыра.

Был осорҙа Сәйфи Ҡудаштың ижады яңы идея-тематик йөкмәткегә байый. Ул йәш Совет республикаһының һәм уның армияһының тарихи еңеүҙәрен данлаусы күп кенә сағыу әҫәрҙәр («Ҡыҙыл байраҡ», «Ҡыҙыл яугир», «Ҡыҙыл Армияға» һ. б.) ижад итә. Шул ваҡытта уҡ йәш авторҙар — Шамун Фидан, Ярлы Кәрим, Ғариф Ғүмәр, Сәйфи Бәҙри үҙҙәренең яңы тормош өсөн көрәш идеяһы менән һуғарылған тәүге поэтик әҫәрҙәре менән сығыш яһай. Ш. Ә. Хоҙайбирҙиндең проза һәм публицистик әҫәрҙәре күренә башлай.

Чех яҙыусыһы Ярослав Гашек үҙенең фельетондары һәм очерктары менән Өфө халҡында киң танылыу яулап ала. 5-се армияның күп тиражлы «Беҙҙең юл» газетаһында ул Өфө поптарынан һәм обывателдәренән үткер һәм рәхимһеҙ көлөүсе 30-ға яҡын («Өфө буржуйы көндәлегенән», «Бер поптың трагедияһы», «Эсерҙар ижады», «Изге ҡан» һ. б.) фельетон һәм хикәйә баҫып сығарған.

Республиканың баш ҡалаһын Стәрлетамаҡтан Өфөгә күсереү менән әҙәби көстәр байтаҡ өҫтәлә. Өфөгә Дауыт Юлтый, Имай Насыри, Төхфәт Йәнәби, Булат Ишемгол килә. «Белем», «Яңылыҡ», «Сәсән» журналдары биттәрендә йәш яҙыусылар Ғөбәй Дәүләтшин, Ғәйнан Хәйри, Сәғит Агиш, Али Карнай, Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти, Сәләх Кулибай, Батыр Вәлид әҫәрҙәре күренә башлай.

Рус яҙыусылары Н. П. Недолин, С. Л. Кирьянов, Б. Д. Четвериков һәм башҡалар «Свет творчества», «Огни Востока» журналдарында һәм «Красная Башкирия» газетаһы тирәһенә туплана. С. П. Злобин оҙаҡ ваҡыт Өфөлә йәшәне һәм эшләне. Ул 1928 йылда

Ярослав Гашек. Өфө, 1919 йыл.



«Башҡортостан буйлап» тигән әҙәби-этнографик юл яҙмаларын, ә икенсе йылда башҡорт халҡының милли геройы тураһында «Салауат Юлаев» тигән тарихи романын баҫтырып сығара.

Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм социалистик реконструкциялау осоронда башҡорт әҙәбиәтенең бөтә жанрҙары ла үҫә һәм тематикаһы киңәйә. Уның темалары һәм образдары тормош тарафынан билдәләнә. Халыҡ хужалығын күтәреү, эшселәрҙең һәм крәҫтиәндәрҙең союзын, халыҡтар дуҫлығын нығытыу өсөн көрәш, яңы йәмғиәт төҙөү — башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрендә күтәрелгән төп темалар бына ошолар.

Ҡаланың әҙәби тормошо йәнләнә. А. С. Пушкин, Д. Н. Мамин-Сибиряк, Ғабдулла Туҡай, Ш. М. Бабич һәм башҡаларҙың ижадтарына арналған кисәләр үткәрелә. 1923 йылдың июнендә Мәжит Ғафуриҙың ижади эшмәкәрлегенең 20 йыллыҡ юбилейен үткәреү башҡорт әҙәбиәтенең ысын байрамына әүерелә. Башҡорт АССР-ы Үҙәк Башҡарма Комитеты, әҙәбиәтте үҫтереүҙәге уның ҙур хеҙмәтен таныу билдәһе итеп, уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән почетлы исем бирә. Ҡала Советы юбилярға айырым йорт бүләк иткән (1949 йылда Гоголь урамы, 28-се йортта шағирҙың мемориаль йорт-музейы асылды), ә ул элек йәшәгән Никольский урамына М. Ғафури исеме бирелде. Һәр төрлө әҙәби түңәрәктәр һәм «Башҡортостан шағирҙары йәмғиәте» (1922) ойошторола [1]. Өфө яҙыусыларының яңы әҫәрҙәре тикшерелә, ижади методты, стилде эҙләү дауам итә.

Йәш башҡорт яҙыусыларының ижади үҫешендә Бөтә Союз яҙыусылар ойошмалары тарафынан үткәрелгән кәңәшмәләрҙә һәм конференцияларҙа ҡатнашыу, рус, татар һәм башҡа халыҡтар әҙәбиәтенең күренекле вәкилдәренең Өфөләге сығыштары ҙур әһәмиәткә эйә була. 1927 йылдың июлендә ҡала яҙыусылары алдында А. И. Безыменский сығыш яһай. Ул совет әҙәбиәтендәге һәр төрлө идеологик һәм художество ағымдары тураһында һөйләй [2]. Тәжрибә уртаҡлашыу маҡсаты менән Өфөлә төрлө ваҡытта татар яҙыусылары Ғ. Ҡотой, Ҡ. Нәжми, тәнҡитсе Ғ. Нигмәти, сыуаш прозаигы Н. В. Васильев-Шубоссини һәм башҡалар була.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 798, оп. 1, д. 907, л. 48.

[2] «Башҡортостан», 1927, 24 июль.

1928 йылдың ноябрендә яҙыусыларҙың I Өфө ҡала конференцияһы пролетар яҙыусыларҙың Башҡортостан ассоциацияһын (БАПП) төҙөй, ул пролетар яҙыусыларҙың Россия ассоциацияһы (РАПП) составына инә. Һуңғы йылдарҙа яҙыусылар ойошмаһының төҙөлөшөн камиллаштырыу дауам итә. Яҙыусыларҙың I Бөтә Союз съезына әҙерләнеү уңайы менән 1932 йылдың февралендә Өфөгә А. А. Фадеев һәм В. А. Луговской килә. А. А. Фадеев әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә партия политикаһын аңлатып ҡаланың ижади работниктары алдында бер нисә тапҡыр сығыш яһай. Уның ярҙамында башҡорт яҙыусыларының М. Горький менән тығыҙ бәйләнеше булдырыла.

А. М. Таһиров.



1934 йылда Өфөлә СССР Яҙыусылар союзының Ойоштороу комитеты бригадаһы эшләй. ул Башҡортостан республикаһы баш ҡалаһы хеҙмәтсәндәренең тормошон өйрәнә, китап уҡыусылар менән осраша, башҡорт әҙәбиәтенең иң яҡшы әҫәрҙәрен рус теленә тәржемә итеүҙе ойоштора. «Хәҙерге башҡорт әҙәбиәте» (1933), «Башҡорт поэзияһы» (1934) тигән йыйынтыҡтар Мәскәүҙә рус телендә баҫып сығарыла.

1934 йылдың 15 мартында Өфөлә Ҡыҙыл Армия йортонда Башҡортостан яҙыусыларының I съезы асыла. Уның эшендә Мәскәү, Үзбәкстан, Татарстан һәм башҡа өлкәләрҙең яҙыусылары ҡатнаша. Съезд башҡорт совет әҙәбиәте үҫешенә йомғаҡ яһай, Коммунистар партияһы тарафынан һүҙ оҫталары алдына ҡуйылған бурыстарҙы тормошҡа ашырыу юлдарын билдәләй. БАССР Яҙыусылар союзының идараһы һайлана, уның председателе А. М. Таһиров була.

Был осорҙа ҡала эшселәре һәм уҡыусы йәштәре араһынан бик күп талантлы яҙыусылар үҫеп сыға. 30-сы йылдарҙың баштарында типография эшсеһе Хәсән Мохтар әҙәбиәткә килә. Ул үҙенең революцион ваҡиғаларға арналған әҫәрҙәре («Октябрь домбаһында», «Дауыл алдынан» повестары) менән уҡыусыларҙың ихтирамын яулап ала. Өфө моторҙар эшләү заводы төҙөүсеһе Кирәй Мәргән эшселәр тормошонан очерктар һәм хикәйәләр яҙа башлай. Әкрәм Вәли, М. Хәй, Хәниф Кәрим, Маҡсуд Сөндөклө, Ғәйнән Әмири, Ҡадир Даян, Мәлих Харистың исемдәре Башҡортостанға киң билдәле була. Шул осорҙа Өфөлә рус яҙыусылары И. П. Недолин, М. Н. Нагаев, мари әҙиптәре Я. Я. Ялкайн һәм Н. И. Тишин, сыуаш шағиры Я. Г. Ухсай уңышлы эшләй.

С. М. Мифтахов.



Тәүге биш йыллыктарҙа башкорт әҙәбиәте байтак үҫеш кисерә. Әҫәрҙәрҙең тематикаһы киңәйә, яҙыусыларҙың художестволы оҫталығы үҫә. Мөһим жанр булған роман тулы граждандык хокуғын ала, был милли әҙәбиәттең өлгөрөп етеү һыҙығына сығыуын күрһәтә. Кыҫка ғына осорҙа Д. Юлтыйҙың «Кан», А. Таһировтың «Һалдаттар» һәм «Кыҙылармеецтар», И. Насыриҙың «Күҙәй», А. Карнайҙың «Беҙ кайтырбыҙ» һәм башка киң эпик әҫәрҙәре баҫылып сыға, уларҙа башкорт халкының социалистик революцияға һәм Совет власының тантана итеүенә табан үҫеш юлы һүрәтләнә.

Илде социалистик үҙгәртеп короу процесында яңы кешенең формалашыуы 30-сы йылдарҙағы әҙәбиәттә төп темаларҙың береһе була. Мәҫәлән, А. Карнайҙың «Далалағы уттар», Һ. Л. Дәүләтшинаның «Айбикә», Ғ. Хәйриҙең «Катын», И. Насыриҙың «Еңелгән ятыу» тигән повестарында, Р. Ниғмәтиҙең «Баҫыу хөкөмө», Б. Ишемғолдоң «Зианчура», С. Кудаштың «Хат» тигән поэмаларында, А. Таһировтың һәм С. Мифтаховтың драмаларында яңы герой, уның башкорт ауылдарын үҙгәртеп короу өсөн көрәше сағыу һәм образлы кәүҙәләнгән.

Социалистик индустриялаштырыу тураһында тәүге әҫәрҙәр тыуа. Яҙыусылар Өфөләге яңы төҙөлештәр барышын ҙур иғтибар менән күҙәтәләр, улар тураһында очерктар яҙалар, уларға поэмаларын, шиғырҙарын бағышлайҙар (Ғ. Сәләмдең «Гигант тыуасак яланда», Д. Юлтыйҙың «Шеф-паровоз» һәм «Мәйсәрә» тигән әҫәрҙәре). М. Хәй «Өфө моңдары» тигән шиғырҙар шәлкемендә социалистик Өфөнөң — ижад итеүсе, эшсән каланың йөҙөн ҙур лирик йылылык менән тасуирлай. Ботә был әҫәрҙәр Өфө яҙыусыларының тыуған калаһына лайыклы хөрмәте булды.

Милли әҙәбиәттең үҫеүе менән бер рәттән Өфөлә рус, совет һәм сит ил яҙыусыларының күп әҫәрҙәре башкорт телендә баҫылып сыға. 20-се йылдарҙа ук М. Горькийҙың, Д. А. Фурмановтың, Ю. Н. Либединскийҙың хикәйәләре һәм повестары, Д. Бедныйҙың, А. И. Безыменскийҙың, Р. Тагорҙың һәм башкаларҙың шиғырҙары баҫылып сыккайны. 30-сы йылдарҙа сит телдәрҙән тәржемә ителгән әҙәбиәтте баҫып сығарыу тағы ла киңерәк колас ала. Һуғыштан алдағы ун йылда А. С. Пушкиндың, Н. А. Некрасов, А. П. Чехов, В. В. Маяковский, А. А. Фадеев, Н. А. Островский, Т. Г. Шевченко, Джамбул Джабаев, К. В. Иванов, Г. Гейне, Д. Лондон һәм башка бик күп әҙиптәрҙең әҫәрҙәре донъя күрә.

Башҡорт яҙыусыларының илебеҙҙең башҡа республикалары әҙәбиәте эшмәкәрҙәре менән бәйләнеше нығый һәм киңәйә. Капиталистик илдәрҙең прогрессив яҙыусылары менән бәйләнеш булдырыла. А. М. Таһиров Төркиәлә булып ҡайта. Өфө яҙыусылары Анри Барбюс һәм Эрих Вайнерт менән хат алыша. Немец яҙыусыһы-антифашист Фридрих Вольфтың 1936 йылда Өфөгә килеүе ҡаланың әҙәби тормошонда күренекле ваҡиға була.

Өфөнөң шағирҙар ҡалаһы, йәнле әҙәби хәрәкәт ҡалаһы икәнлеге беҙҙең Тыуған илебеҙҙән ситтә лә билдәле була.

В. Б. Мортазин-Иманский.



Хәҙер Өфө йырға Афинанан бай,
Унда руда һәм машинаны данлай Кулибай,
Уның тураһында миңә лә йырламай
булмай, —

тип яҙған күренекле поляк шағиры Юлиан Тувим.

Совет власы урынлашҡас, илебеҙҙең тиҫтәләгән милләттәренең театр культураһы үҫеүгә киң мөмкинлек тыуа. Башҡорт совет театры ла үҙенең тыуыуы менән Бөйөк Октябргә бурыслы.

Халыҡ мәғарифының Өфө губерна бүлеге коллегияһы татар-башҡорт бүлексәһенең мәктәптән тыш эштәр секцияһына 1919 йылдың 5 декабрендә «ашығыс рәүештә мосолмандар труппаһының булыуы тураһында мәғлүмәттәр йыйырға һәм уны коллегия ҡарауына тапшырырға» ҡуша [1]. Ошо документ Өфө дәүләт татар-башҡорт күргәҙмә театрын ойоштороу йәһәтенән рәсмиләштереүгә башланғыс һала. Коллективҡа «Нур», «Ирек», «Ширҡәт» театраль берекмәләренән һәм атаҡлы «Сәйяр» — «Илгиҙәр актерҙар йәмғиәте» тип аталған татар труппаһынан артистар саҡырыла. Бында оҙаҡ йылдар буйына В. Б. Мортазин-Иманский, Н. Сакаев, М. Мутин, Н. А. Таждарова, Ш. Ғ. Шамильский (Вахитов), Х. Дауытов, М. Мирвәлиева, Р. Урманцева, Н. Макулова, Ф. Латипов һәм башҡа ҙур оҫталар эшләгән. 20-се йылдарҙа театрға йәш актерҙар: Ғ. Ғ. Ушанов, Б. Ә. Йосопова, Ғ. Х. Ҡарамышев, Т. Ф. Рәшитова, Ә. Ф. Зөбәйеров, Ғ. М. Минһажев, Х. Ғ. Бохарский килә, улар һуңынан башҡорт совет сәхнә сәнғәтенең нигеҙен тәшкил итә. 1926 йылда Өфө сәнғәт техникумында театр бүлеге асыла, һәм шул ваҡыттан бирле башҡорт театрының квалификациялы кадрҙар алыу сығанағы була.

Театрҙың күпселек тәүге спектаклдәре үк социалистик йөкмәтке-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 801, оп. 1, д. 10, л. 23.

М. Ә. Мәһәҙиев.



һе, көн үҙәгендәге мәсьәләләрҙе күтәреүе менән айырылып тора. Ғ. Ғ. Ибраһимов, Ғ. Камал, М. Фәйзи һәм башҡа драматургтарҙың пьесалары репертуарға шул йүнәлеште бирә. Коллектив агитация концерттары ла ҡуя. 1925 йылда М. Ғафуриҙың «Ҡыҙыл йондоҙ» драмаһын ҡуйыу театр тормошонда ҙур ваҡиға була. Унда башҡорт крәҫтиәндәренең граждандар һуғышында ҡатнашыуы һәм яңы тормош өсөн көрәше тураһында һөйләнелә. Спектакль киң отклик тыуҙыра.

Театр үҫә, уның культура бәйләнештәре киңәйә бара. 1927 йылда ул Мәскәүҙә гастролдә була, баш ҡала тамашасылары һәм СССР Советтарының IV съезы делегаттары алдында сығыш яһай; 1930 йылда СССР халыҡтары сәнғәте Олимпиадаһының почетлы дипломын яулай. 1935 йылда театрҙың Мәскәүҙәге, Волга буйы һәм Уралдың промышленность үҙәктәрендәге гастролдәре уңышлы үтә. Шул уҡ йылда Башҡорт драма театрының ижади ҡаҙаныштары уға академия театры исемен биреү менән билдәләнә.

30-сы йылдарҙа театр социалистик сәнғәттең төп темалары булған хеҙмәт, илде революцион яңыртыу темаларын уңышлы үҙләштерә. Эшселәр синыфының көрәшен, промышленностағы хеҙмәт батырлығын күрһәткән спектаклдәр ижтимағи тормоштағы һәм кешеләрҙең аңындағы ҙур үҙгәрештәрҙе сағылдыра. А. Таһировтың «Завод», И. Насыриҙың «Сибай», С. Кулибайҙың «Домна» тигән әҫәрҙәре һәм республиканың йәш эшселәр синыфы вәкилдәрен һынландырыусы башҡа әҫәрҙәр театр репертуарында урын ала. Коллективлаштырыу осорондағы синфи көрәш Д. Юлтыйҙың «Тирмәндә», С. Мифтаховтың «Һаҡмар» һәм «Ялан ҡыҙы», Н. Ҡариптең «Алма» пьесалары буйынса ҡуйылған спектаклдәрҙең идея һәм художество үҙенсәлектәрен билдәләй. Иң яҡшы сәхнә әҫәрҙәренең үҙәк геройы коммунист була.

Башҡорт халҡының героик үткәнен яңыса аңлатыусы спектаклдәр күренә башлай. Б. Бикбайҙың «Ҡарлуғас», М. Ғафуриҙың Ғ. Әмири һәм В. Ғ. Ғәлимов сәхнәләштергән «Ҡара йөҙҙәр» һәм С. М. Мифтаховтың «Зимагорҙар» спектаклдәре даими уңыш менән бара.

Социалистик сәнғәт театр эшмәкәрҙәренең яңы тибын тыуҙырҙы. Режиссерҙар В. Б. Мортазин-Иманский, М. Ә. Мәһәҙиев, Х. Ғ. Бохар-

скийҙың оҫталығы тәрән йөкмәткеле һәм баҙыҡ була, һуғышҡа тиклемге осорҙа художество йәһәтенән өлгөрөп етә. Өфө сәнғәт техникумында белем алған актерҙарҙың: А. Ҡ. Мөбәрәков, З. И. Бикбулатова, Б. Н. Имашев, Ғ. М. Туҡаев, Р. С. Янбулатова, Р. Ғ. Сәүбанова, Ғ. Р. Шамуҡов, Р. С. Сыртланов һәм башҡаларҙың үҙенсәлекле таланттары ул йылдарҙа сағыу беленә.

Я. А. Протазановтың «Салауат Юлаев» фильмында һәм Н. Ф. Погодиндың «Мылтыҡлы кеше» спектаклендә күп кенә башҡорт актерҙарының ҡатнашыуы башҡорт совет театр культураһының ижади өлгөргәнлегенең дәлиле була. Ленинды һынландырған спектакль театрҙың социалистик реализм юлында өлгәшкән иң яҡшы идея-художество сифаттарының сағылышы була. «Хәҙер, йомғаҡ яһалғас, — тип яҙған 1941 йылдың 7 февралендә «Красная Башкирия» газетаһы, — театр ошоға тиклем ҡуйғандарынан бик ныҡ айырылып торған спектакль ижад иткән. Был бик көсло, тулҡынландырғыс хистәр спектакле».

Өфөлә рус театрын ойоштороу ҡаланы Колчактан азат итеүҙең беренсе көндәренә тура килә. В. И. Чапаевтың 25-се уҡсылар дивизияһы политбүлеге комиссары Д. А. Фурманов етәкселегендә 1919 йылдың июнендә Өфөлә ойошторолған театраль труппа яңы сәхнә коллективын төҙөүҙә билдәле роль уйнай. Ҡалала театр коллективы 1919 йылдың йәйендә ойоша һәм дәүләт күргәҙмә театры тигән исем ала. Шул уҡ йылдың 12 сентябрендә труппа беренсе спектаклен күрһәтә.

Халыҡ мәғарифының Өфө губерна бүлеге «Юғарғы театраль коллегия» төҙөй, ул — шунан һуң Башҡортостан Мәғариф халыҡ комиссариатының сәнғәт бүлеге тип, ә һуңынан Башҡорт АССР-ы Халыҡ Комиссарҙары Советы эргәһендәге Сәнғәт эштәре буйынса идаралыҡ тип атала. Уның алдына труппаны сезон һайын тулыландырыу һәм күргәҙмә театрҙың репертуарын билдәләү бурысы ҡуйыла. Ләкин театрҙың ойошоу һәм ижади формалашыу процесы 20-се йылдарҙың аҙағына тиклем һуҙыла. Хеҙмәт һарайы сәхнәһендә бик аҙ ғына коллективтар ике-өс сезон эшләй алған.

1929 йылда Өфөлә Центропосредрабистың (сәнғәт работниктары профсоюзы эргәһендәге актерҙар яллауға ярҙам итеү буйынса Үҙәк бюро) музыкаль комедия театры гастролдә булған. Уларҙың сығышы уңышһыҙ булған һәм труппа тарҡалған. 11 кешенән торған коллектив унан айырылып сыҡҡан [1]. Ул тиҙҙән ҡалала «Берҙәм ойөм» тигән музыкаль пьеса ҡуйған. Унан һуң эшселәр тормошона, уларҙың хеҙмәтенә һәм көнкүрешенә арналған «Фабкомды саҡыр», «Галстук», «Шлак» тигән спектаклдәр күрһәткән. Уларҙың барыһы ла ҙур уңыш менән үткән.

---

[1] «Красная Башкирия», 1930, 30 ғинуар.

Х. Ғ. Бохарский.



Шуға күрә 1930 йылдың көҙөндә, алдағы театр сезонына әҙерләнеү тураһында мәсьәлә килеп тыуғас, Өфө буш йөрөгән труппа эҙләп тормай, ә шул коллективты саҡыра. Ул коллектив Мәскәү, Ленинград һәм башҡа ҡалаларҙан килгән актерҙар менән тулыландырыла, профсоюздарҙың Башҡортостан советы театры тип атала, һуңынан — Өфө ҡала театры тип, ә шунан һуң Республика рус драма театры итеп үҙгәртелә.

Үҙенең формалашыу осоронда уҡ театр тамашасыларға Н. Ф. Погодиндың «Балта тураһында поэма», В. М. Киршондың «Икмәк», А. А. Афиногеновтың «Ҡурҡыу» тигән спектаклдәрен күрһәткән, уларҙа социалистик төҙөлөш темаһы тулы тауыш менән яңғырай. Шулай уҡ А. И. Безыменскийҙың «Атыу тауышы», А. А. Фадеевтың «Ҡыйралыш», И. А. Зархиҙың «Шатлыҡ урамы» драмалары, М. Горькийҙың пьесалары буйынса спектаклдәр ҡуйылған.

30-сы йылдарҙың икенсе яртыһы театрҙың байтаҡ ижади ҡаҙаныштары йылы була. Уның сәхнәһендә В. В. Вишневский, К. А. Тренев, А. Н. Толстой, Д. А. Фурманов, В. В. Иванов, И. В. Шток һәм башҡаларҙың әҫәрҙәре кеүек совет драматургияһының иң яҡшы пьесалары бара. Өфөнө аҡгвардиясыларҙан азат итеү ваҡиғаларын һүрәтләгән «Чапаев» спектаклен тамашасылар тәрән тулҡынланыу менән ҡабул иткән.

Театрға ҡала театраль сәнғәте тарихының иң яҡшы биттәрен яҙған талантлы йәш актерҙар килә. Улар араһында хәҙерге күренекле сәхнә оҫталары И. К. Глушарин, Ф. П. Крашенинников, А. Я. Закк, Е. Т. Фролова, Е. Н. Кузнецова, Н. М. Дроздов һәм башҡалар була. Периферия сәхнәһендә В. И. Ленин образын тыуҙырыусыларҙың береһе М. Л. Кондратьевты театрға саҡырыу Н. Погодиндың «Кремль куранттары» драмаһын ҡуйырға мөмкинлек бирә. Спектаклдең премьераһы 1941 йылдың 4 февралендә була.

1932 йылда Өфөлә Берләштерелгән ҡурсаҡ театры, ә 1936 йылда йәш тамашасылар театры асыла.

Социалистик төҙөлөш йылдарында Өфө башҡорт профессиональ музыкаһының барлыҡҡа килеү һәм үҫеү үҙәгенә әүерелә. Халыҡ йырҙары Башҡортостан профессиональ сәнғәтенә көс биреүсе шифалы ерлек була. Башҡорт халыҡ йырҙарын эшкәртеүҙең тәүге тәжрибәләре Х. К. Ибраһимов, И. С. Салтыков-Волконский, А. С. Ключарев, С. Ғәбәши, Ғ. С. Әлмөхәмәтов һәм башҡа композиторҙарҙың исемдәре менән бәйләнгән.

Өфө композиторҙары 20—30-сы йылдарҙа романстар һәм йырҙар, камерный ансамблдәр өсөн пьесалар яҙа. М. М. Вәлиев «Легенда», «Увертюра», «Аҡ ҡайын» әҫәрҙәрен, А. С. Ключарев «Салауат», «Урал» поэмаларын, Х. К. Ибраһимов йырҙар, бейеү көйҙәре, марштар яҙа, К. Й. Рәхимов көйҙәрҙе инструменттар һәм оркестрға һала.

М. Л. Кондратьев.



Башҡорт композиторҙары үҙҙәренең әҫәрҙәрен ижад иткәндә бөйөк рус музыкаль культураһының күп быуатлы тәжрибәһенән йүнәлеш һәм ярҙам алалар. Совет хөкүмәте ҡарары буйынса 1932 йылда Мәскәү консерваторияһы эргәһендә башҡорт студияһы асыла. Ике йылдан һуң Ленинград хореография училищеһында башҡорт бүлеге ойошторола. Милли кадрҙар әҙерләү өсөн башҡа махсус институттарҙың да ишектәре киң асыла. 30-сы йылдарҙың аҙағында Өфөнөң музыкаль тормошо һәр яҡлап киң ҡолас ала. 1940 йылда ойошторолған Башҡортостан композиторҙар союзы үҙ тирәһенә тәжрибәле композиторҙарҙы һәм талантлы йәштәрҙе туплай.

30-сы йылдарҙың икенсе яртыһында Өфөнөң ҙур ғына төркөм профессиональ опера йырсылары бар ине. Б. Н. Вәлиева, Ш. В. Вәлиәхмәтова, Х. Л. Ғәлимов, Ғ. С. Хәбибуллин һәм башҡалар 1938 йылдың декабрендә үҙенең беренсе сезонын асҡан Башҡорт дәүләт опера театрының (1939 йылда Башҡорт опера һәм балет театры итеп үҙгәртелә) ижади нигеҙен тәшкил иткән. Коллектив классик операның иң яҡшы әҫәрҙәре өҫтөндә эшләй башлай. П. И. Чайковскийҙың «Евгений Онегин», Д. Вердиҙың «Риголетто» һәм «Травиата», Ш. Гуноның «Фауст», А. С. Даргомыжскийҙың «Русалка», Ж. Бизеның «Кармен»ы — йәш труппаның тәүге үҙ аллы спектаклдәре бына шулар. Хореографик училищены, Өфө сәнғәт техникумын тамамлап сығыусылар башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбле бейеүселәре менән берлектә театрҙың балет труппаһын ойошторалар һәм «Коппелия» тигән хореографик спектакль әҙерләйҙәр (1940). Беренсе башҡорт операһы «Һаҡмар»ҙың премьераһы 1940 йылдың февралендә үтә, уның музыкаһын С. М. Мифтаховтың драмаһы мотивтары буйынса М. М. Вәлиев яҙған.

1939 йылда Башҡорт дәүләт филармонияһы ойошторолоу менән ул башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамблен, хор, ҡурайсылар ансамблен, тынлы оркестр һәм халыҡ инструменттары ансамблен, күсмә оперетта коллективын һәм эстрада бригадаһын берләштергән.

Халыҡ власының тәүге көндәренән алып Өфө край рәссамдарының идея, ойошоу һәм ижади берекмәһе үҙәгенә, башҡорт һынлы сәнғәтенең бишегенә әүерелә.

1919 йылдың августа Өфө рәссамдарының беренсе күргәҙмәһе асыла. Һуңынан 1921, 1923 йылдарҙа яңы күргәҙмәләр ойошторола. Ләкин был күргәҙмәләр Совет власы тарафынан рәссамдар алдына ҡуйылған бурысҡа яуап бирмәй ине әле. Ул күргәҙмәләрҙең һәр береһендә 10-дан да артыҡ рәссам ҡатнашмай, ә экспонаттарҙың ҙур күпселеге йыш ҡына тәбиғәт күренеше этюдтарынан һәм һәр төрлө формалистик тәжрибәнән торған.

Рәссамдар 1925 йылда Революцион Россияның рәссамдар ассоциацияһына (АХРР) берләшкәс, Өфөнөң художество тормошонда билдәле һынылыш була. 1926 йылдың майында АХРР-ҙың Өфө филиалы күргәҙмә ойоштора. Унда И. Н. Самариндың «Карл Маркс портреты», «Паровоз», «Тимер юлда 1 Май», В. С. Сыромятниковтың «Большевизм өсөн!», М. Н. Елгаштинаның «Башҡорт ауылы», К. А. Дәүләткилдиевтең һәм С. В. Олейниковтың әҫәрҙәре айырыуса билдәләп үтелә.

Филиалдың унан һуңғы күргәҙмәләре социалистик реализмға һәм сәнғәттә идеялылыҡҡа йүнәлеш алған рәссамдарҙың ҡаҙаныштарын нығыта. Өфө рәссамдары илебеҙҙәге иң ҙур күргәҙмәләрҙә Башҡортостандың һынлы сәнғәтен лайыҡлы күрһәтә, Башҡорт халҡының яңы тормошон асып бирә белгән, крайҙың тәбиғәтен асыҡ сағылдырыусы К. А. Дәүләткилдиев, Т. В. Крюков, И. Н. Самарин, А. Э. Тюлькин, Г. П. Черкашенинов һәм башҡа рәссамдар Октябрҙең 10 йыллығына арнап Мәскәүҙә ойошторолған СССР халыҡтары сәнғәте күргәҙмәһенән хөрмәт менән әйләнеп ҡайталар. Тиҙҙән Өфөлә ике ҙур күргәҙмә — АХР-ҙың (Революцион рәссамдар ассоциацияһы — 1928 йылдан алып АХРР шулай йөрөтөлә) Мәскәү, Ленинград, Урал һәм Волга буйы рәссамдары ҡатнашлығында күргәҙмәһе һәм Өфө художество музейының 10 йыллығына бағышланған республика күргәҙмәһе булып үтә.

1933 йылда музей станокта эшләнгән живопись әҫәрҙәренә конкурс иғлан итә. Уның шарттары принципиаль мөһим бурысты — художестволы образдарҙа халыҡтың ысын тарихын, Совет Башҡортостаны кешеләренә хас типик яҙмышты һәм характерҙы сағылдырыу бурысын ҡуя. Конкурс байтаҡ яңы исемдәрҙе аса, күп кенә рәссамдар өсөн етди һынау була. Совет осорондағы Өфөнөң тормошон художестволы һүрәтләүҙе башлап ебәргән А. Э. Тюлькин, К. А. Дәүләткилдиев, М. Н. Елгаштина һәм башҡа оло рәссамдар менән бергә эшләгән рәссам А. П. Лежневтың ижады ул йылдарҙа башҡорт һынлы сәнғәтенең ҙур ҡаҙанышы була. А. П. Лежнев Е. Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышына арналған әҫәрҙәр серияһын барлыҡҡа килтерә.

1934 йылдың июлендә Башҡортостан рәссамдары союзы төҙөлә. Башҡортостан рәссамдары 1935 йылдағы «Урал—Кузбасс» һәм

1937 йылдағы Бөтә Союз юбилей күргәҙмәләре экспонаттары өҫтөндә эшләүгә йәлеп ителә. Ҡала рәссамдары был күргәҙмәләргә бына тигән әҫәрҙәр менән килә. А. П. Лежнев һәм В. С. Сыромятников совет сәнғәте өсөн ҡәҙерле булған В. И. Ленин образына мөрәжәғәт итә. К. А. Дәүләткилдиев, С. В. Олейников һәм В. П. Андреевтың әҫәрҙәрендә Октябрь революцияһы темаһы сағылдырыла. Башҡортостан рәссамдары ҡуйған әҫәрҙәрҙең күпселеге совет халҡының хеҙмәт шауын яңынан күҙ алдына килтерен баҫтыра.

«БАССР-ҙың XX йыллығы» тигән бик ҙур экспозиция (1939) 30-сы йылдарҙағы һынлы сәнғәт үҫешенә үҙенсәлекле бер йомғаҡ яһай. Унда 40-лап рәссам ҡатнаша, улар үҙҙәренең картиналарында тыуған яҡтың революцион тарихын, Башҡортостанда Совет власының урынлашыуын, республиканы индустриялаштырыуҙы, ауылда социалистик мөнәсәбәттәрҙең раҫланыуын, тыуған яҡ тәбиғәтен, ҡала һәм ауылдарҙың яңы йөҙөн, кешеләрҙең тормошон һәм йолаларын, эшселәр синыфы, крәҫтиәндәр һәм интеллигенция вәкилдәренең образын сағылдыра. Ул коммунизм идеялары менән рухланған халыҡ тормошоноң һәм көрәшенең тулҡынландырғыс панорамаһы була.

1940 йылда Өфөнөң әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре 1941 йылда Мәскәүҙә буласаҡ декадаға әҙерләнә башлай. Һүҙ «башҡорт халҡы культураһының үҫешен, башҡорт халҡының героик үткәнен һәм хәҙергеһен бөтә тауыштан, иҫтә ҡалырлыҡ образдар теле менән һөйләрлек» [1] әҫәрҙәр тыуҙырыу тураһында бара ине. Ләкин фашистик Германияның беҙҙең илебеҙгә мәкерле һөжүме был эште туҡтата. Декада кисектерелә.

## § 3. Культура-ағартыу эше. Матбуғат һәм китап сығарыу эше

Ҡаланың яңы, социалистик культураһын үҫтереүҙә клубтар, китапханалар, музейҙар, кинотеатрҙар ҙур роль уйнай. Совет власы урынлашҡас, был учреждениелар тамырынан үҙгәртеп ҡорола, яңылары ойоштоpола. Улар эшенең төп йөкмәткеһе Коммунистар партияһының политикаһын аңлатыу, социалистик төҙөлөш бурыстарын хәл итеүгә хеҙмәтсәндәрҙе туплау, яңы кешене тәрбиәләүгә булышлыҡ итеү ине. Ҡыҙыл Армияның политик органдары граждандар һуғышы осоронда Өфө халҡын политик ағартыу эшен ойоштороуҙа клубтарға бик ҙур ярҙам күрһәтә. Хәрби комиссарҙар һәм агитаторҙар халыҡ алдында докладтар һәм лекциялар менән сығыш яһай, Ҡыҙыл Армия газеталарын, листовкаларын һәм саҡырыуҙарын тарата.

Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитетының агитация-инструкторлыҡ поездарының Өфөлә булыуы ҡала культура-ағартыу учрежде-

---

[1] «Красная Башкирия», 1941, 1 ғинуар.

Халыҡ власының тәүге көндәренән алып Өфө край рәссамдарының идея, ойошоу һәм ижади берекмәһе үҙәгенә, башҡорт һынлы сәнғәтенең бишегенә әүерелә.

1919 йылдың августа Өфө рәссамдарының беренсе күргәҙмәһе асыла. Һуңынан 1921, 1923 йылдарҙа яңы күргәҙмәләр ойоштороla. Ләкин был күргәҙмәләр Совет власы тарафынан рәссамдар алдына ҡуйылған бурысҡа яуап бирмәй ине әле. Ул күргәҙмәләрҙең һәр береһендә 10-дан да артыҡ рәссам ҡатнашмай, ә экспонаттарҙың ҙур күпселеге йыш ҡына тәбиғәт күренеше этюдтарынан һәм һәр төрлө формалистик тәжрибәнән торған.

Рәссамдар 1925 йылда Революцион Рәсәйҙең рәссамдар ассоциацияһына (АХРР) берләшкәс, Өфөнөң художество тормошонда билдәле һынылыш була. 1926 йылдың майында АХРР-ҙың Өфө филиалы күргәҙмә ойоштора. Унда И. Н. Самариндың «Карл Маркс портреты», «Паровоз», «Тимер юлда 1 Май», В. С. Сыромятниковтың «Большевизм өсөн!», М. Н. Елгаштинаның «Башҡорт ауылы», К. А. Дәүләткилдиевтең һәм С. В. Олейниковтың әҫәрҙәре айырыуса билдәләп үтелә.

Филиалдың унан һуңғы күргәҙмәләре социалистик реализмға һәм сәнғәттә идеялылыҡҡа йүнәлеш алған рәссамдарҙың ҡаҙаныштарын нығыта. Өфө рәссамдары илебеҙҙәге иң ҙур күргәҙмәләрҙә Башҡортостандың һынлы сәнғәтен лайыҡлы күрһәтә, Башҡорт халҡының яңы тормошон асып бирә белгән. крайҙың тәбиғәтен асыҡ сағылдырыусы К. А. Дәүләткилдиев, Т. В. Крюков, И. Н. Самарин, А. Э. Тюлькин, Г. П. Черкашенинов һәм башҡа рәссамдар Октябрҙең 10 йыллығына арнап Мәскәүҙә ойошторолған СССР халыҡтары сәнғәте күргәҙмәһенән хөрмәт менән әйләнеп ҡайталар. Тиҙҙән Өфөлә ике ҙур күргәҙмә — АХР-ҙың (Революцион рәссамдар ассоциацияһы — 1928 йылдан алып АХРР шулай йөрөтөлә) Мәскәү, Ленинград, Урал һәм Волга буйы рәссамдары ҡатнашлығында күргәҙмәһе һәм Өфө художество музейының 10 йыллығына бағышланған республика күргәҙмәһе булып үтә.

1933 йылда музей стапокта эшләнгән живопись әҫәрҙәренә конкурс иғлан итә. Уның шарттары принципиаль мөһим бурысты — художестволы образдарҙа халыҡтың ысын тарихын, Совет Башҡортостаны кешеләренә хас типик яҙмышты һәм характерҙы сағылдырыу бурысын ҡуя. Конкурс байтаҡ яңы исемдәрҙе аса, күп кенә рәссамдар өсөн етди һынау була. Совет осорондағы Өфөнөң тормошон художестволы һүрәтләүҙе башлап ебәргән А. Э. Тюлькин, К. А. Дәүләткилдиев, М. Н. Елгаштина һәм башҡа оло рәссамдар менән бергә эшләгән рәссам А. П. Лежневтың ижады ул йылдарҙа башҡорт һынлы сәнғәтенең ҙур ҡаҙанышы була. А. П. Лежнев Е. Пугачев етәкселегендәге Крәҫтиәндәр һуғышына арналған әҫәрҙәр серияһын барлыҡҡа килтерә.

1934 йылдың июлендә Башҡортостан рәссамдары союзы төҙөлә. Башҡортостан рәссамдары 1935 йылдағы «Урал—Кузбасс» һәм

1937 йылдағы Бөтә Союз юбилей күргәҙмәләре экспонаттары өҫтөндә эшләүгә йәлеп ителә. Ҡала рәссамдары был күргәҙмәләргә бына тигән әҫәрҙәр менән килә. А. П. Лежнев һәм В. С. Сыромятников совет сәнғәте өсөн ҡәҙерле булған В. И. Ленин образына мөрәжәғәт итә. К. А. Дәүләткилдиев, С. В. Олейников һәм В. П. Андреевтың әҫәрҙәрендә Октябрь революцияһы темаһы сағылдырыла. Башҡортостан рәссамдары ҡуйған әҫәрҙәрҙең күпселеге совет халҡының хеҙмәт шауын яңынан күҙ алдына килтереп баҫтыра.

«БАССР-ҙың XX йыллығы» тигән бик ҙур экспозиция (1939) 30-сы йылдарҙағы һынлы сәнғәт үҫешенә үҙенсәлекле бер йомғаҡ яһай. Унда 40-лап рәссам ҡатнаша, улар үҙҙәренең картиналарында тыуған яҡтың революцион тарихын, Башҡортостанда Совет власының урынлашыуын, республиканы индустриялаштырыуҙы, ауылда социалистик мөнәсәбәттәрҙең раҫланыуын, тыуған яҡ тәбиғәтен, ҡала һәм ауылдарҙың яңы йөҙөн, кешеләрҙең тормошон һәм йолаларын, эшселәр синыфы, крәҫтиәндәр һәм интеллигенция вәкилдәренең образын сағылдыра. Ул коммунизм идеялары менән рухланған халыҡ тормошоноң һәм көрәшенең тулҡынландырғыс панорамаһы була.

1940 йылда Өфөнөң әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре 1941 йылда Мәскәүҙә буласаҡ декадаға әҙерләнә башлай. Һүҙ «башҡорт халҡы культураһының үҫешен, башҡорт халҡының героик үткәнен һәм хәҙергеһен бөтә тауыштан, иҫтә ҡалырлыҡ образдар теле менән һөйләрлек»[1] әҫәрҙәр тыуҙырыу тураһында бара ине. Ләкин фашистик Германияның беҙҙең илебеҙгә мәкерле һөжүме был эште туҡтата. Декада кисектерелә.

## § 3. Культура-ағартыу эше. Матбуғат һәм китап сығарыу эше

Ҡаланың яңы, социалистик культураһын үҫтереүҙә клубтар, китапханалар, музейҙар, кинотеатрҙар ҙур роль уйнай. Совет власы урынлашҡас, был учреждениелар тамырынан үҙгәртеп ҡорола, яңылары ойоштtorола. Улар эшенең төп йөкмәткеһе Коммунистар партияһының политикаһын аңлатыу, социалистик төҙөлөш бурыстарын хәл итеүгә хеҙмәтсәндәрҙе туплау, яңы кешене тәрбиәләүгә булышлыҡ итеү ине. Ҡыҙыл Армияның политик органдары граждандар һуғышы осоронда Өфө халҡын политик ағартыу эшен ойоштороуҙа клубтарға бик ҙур ярҙам күрһәтә. Хәрби комиссарҙар һәм агитаторҙар халыҡ алдында докладтар һәм лекциялар менән сығыш яһай, Ҡыҙыл Армия газеталарын, листовкаларын һәм саҡырыуҙарын тарата.

Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитетының агитация-инструкторлыҡ поездарының Өфөлә булыуы ҡала культура-ағартыу учрежде-

[1] «Красная Башкирия», 1941, 1 ғинуар.

ниеларының эшен йәнләндерә. 1919 йылдың ноябрендә Өфөлә В. И. Ленин исемендәге агитпоезд [1], ә бер йылдан һуң Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитеты Председателе М. И. Калинин етәкселегендә «Октябрь революцияһы» агитпоезы [2] булып үтә. Поездарҙың сотрудниктары Өфө губерна Советы башҡарма комитетының бөтә бүлектәренең эшен тикшерә, уларға культура-ағартыу эшен көсәйтеүҙә ярҙам итә. Партия, профсоюз ойошмалары һәм Ҡыҙыл Армия клубтары эргәһендә политик белем түңәрәктәре ойошторола, күренекле партия һәм совет етәкселәре ҡала хеҙмәтсәндәре алдында йышыраҡ сығыш яһай башлай. 1921 йылда Өфөлә культура-ағартыу учреждениеларына етәкселек итеү өсөн губерна политик-ағартыу комитеты (губполитпросвет) ойошторола. Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу менән бергә клубтар һәм ҡыҙыл мөйөштәр һаны ла арта бара. Хеҙмәтсәндәр үҙҙәре уларҙы төҙөүҙең инициаторҙары була. Паровоздар депоһы эшселәре, Никольский сиркәүен ябып, унда үҙҙәренең көсө менән 500 урынлыҡ клуб йыһазландыра. 1924 йылдың 7 ноябрендә уны тантаналы асыу була. Шул уҡ йылда «Коммунистар», «Комсомол», «Аллаһыҙҙар» һәм «Ҡатын-ҡыҙҙар» клубтары эшләй башлай [3].

Клубтар 20-се йылдарҙа Өфө халҡы араһында дингә ҡаршы киң пропаганда алып бара, «Аллаһыҙҙар» йәмғиәте көсө менән әңгәмәләр, лекциялар, атеистик әҙәбиәт күргәҙмәләре үткәрелә. Дингә ҡаршы диспуттар ҙур популярлыҡ менән файҙалана. 1924 йылдың майында И. Якутов исемендәге баҡсала «Ерҙә донъяның һәм тормоштоң барлыҡҡа килеүе» тигән темаға үткәрелгән диспут 5 меңгә яҡын кешене йәлеп итә. Унда ҡатнашыусы священник күп кенә һорауҙарға аҙ ғына булһа ла аңлайышлы итеп яуап бирә алмаған. Бындай диспуттар дингә ҡарата күптәрҙең күҙен асҡан [4].

«Пасха», ураҙа һәм ҡорбан байрамдары, башҡа дини байрамдар ваҡытында дингә ҡаршы айырыуса ҙур кампаниялар үткәрелгән. Халыҡты дини йолаларҙан ситләтеү маҡсатында концерттар, спектаклдәр һәм комсомол карнавалдары ойошторолған. Ошолар һөҙөмтәһендә сиркәүгә һәм мәсеткә йөрөүселәр һаны йылдан-йыл кәмей бара. Мосолман дин әһелдәренең 1926 йылда Өфөлә үткәрелгән съезы йәштәр араһында атеистик ҡараштың киң таралыуын билдәләп үткән [5]. Оло кешеләрҙең дингә ышаныуы ла кәмей. Дини учреждениеларҙы бөтөрөү кәрәклеге тураһындағы һүҙҙәр йыша барған. 1928 йылда Өфөлә 29 дини учреждение, шул иҫәптән

---

[1] Ганеев Р. Г. Агитпоездар һәм агитпароходтар, «Ағиҙел» 1961, № 11, 84-се бит.

[2] Очерки по истории Башкирской АССР, II том (Советский период), 139-сы бит.

[3] «Власть труда», 1924. 11, 19 ноябрь.

[4] ПА БОК КПСС, ф. 377, оп. 1, д. 179, л. 58.

[5] Шунда уҡ, ф. 122, оп. 5, д. 12, л. 96.

17 сиркәү, 6 мәсет, һәр төрлө дини секталарҙың 6 ғибәҙәт ҡылыу йорто була [1]. 1928 йылдың майында 1-се дәүләт заводы һәм 2-се тирмән эшселәренең берлектәге йыйылышы ҡала Советынан монастырь сиркәүен ябыуҙы һорап ҡарар ҡабул иткән. Эшселәр: «Сиркәү урынына кино бирегеҙ», — тигәндәр [2].

Плебеҙҙең башҡа ҡалаларындағы кеүек үк, Өфөлә лә яңы йолалар һәм традициялар барлыҡҡа килә. Улар, мәҫәлән, ҡыҙыл туйҙар, октябриналар ине. Йәш өфөләр, поптың фатихаһынан баш тартып, бергә эшләгән иптәштәренең изге теләктәрен хуп күрәләр. «1 июндә урман заводы эшселәре яңы йола буйынса ике ҡыҙыл туй үткәрҙеләр. Туйҙар завод клубында булды. Клубҡа 350-ләп кеше тулды», — тип яҙҙы «Власть труда» газетаһының эшсе хәбәрсеһе [3]. Октябрина тураһында бына бер хәбәр: «Депоның фирҡәһеҙ эшсеһе Васильев ҡатыны менән үҙҙәренең яңы тыуған ҡыҙын һыуға сумдырыуҙан һәм поптың сеңләүенән баш тарттылар. Баланы ата-әсәһе, сиркәүгә алып бармайынса, ҡыҙыл мөйөшкә килтерҙеләр һәм унда октябрина булды. Балаға Маргарита исеме бирелде. Иптәштәре урындағы коммунистик ячейка, профсоюздар һәм комсомолдар исеменән ҡотлап сығыш яһаны. Тантана ысын йөрәктән һәм йылы булды» [4].

Өфөнөң меңәрләгән кешеләре клубтар тормошонда актив ҡатнаша. Улар лекцияларға, докладтарға һәм спектаклдәргә ихлас йөрөй. «Зәңгәр блуза» художестволы үҙешмәкәр түңәрәктәренең концерттары ҡала халҡы араһында айырыуса ҙур уңыш менән файҙалана. Уның постановкалары мөһимлеге, үткерлеге һәм музыкаллеге менән айырылып тора.

Һуғыштан алдағы биш йыллыҡтар клуб эше үҫешендә яңы этап була. Хеҙмәтсәндәрҙең культура кимәле күтәрелеүе клубтарҙың эшен тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ һәм йөкмәткелерәк итергә мөмкинлек бирә. Әҙәби, музыка, фото һәм башҡа түңәрәктәр барлыҡҡа килә, уларҙа ҡатнашыусыларҙың һаны арта. Классик һәм совет әҙәбиәтен пропагандалау көсәйә. Хеҙмәтсәндәр яҙыусылар, рәссамдар, музыканттар һәм артистар менән осраша. Медицина работниктары, геологтар, тарихсылар улар алдында лекциялар менән сығыш яһай. Тимер юлсыларҙың, мотор эшләүселәрҙең һәм нефтселәрҙең ҙур клубтары төҙөлә.

Спорт эштәрен ойоштороуҙа ла клубтарҙың роле ҙур була. Октябрь революцияһынан һуңғы тәүге йылдарҙа уҡ Өфөнөң күп кенә эшселәр клубтары эргәһендә физкультура һәм хәрби түңәрәктәр төҙөлә. Партия һәм комсомол ойошмалары физкультура һәм спортты үҫтереүҙә бик актив ҡатнаша. Ҡала Советы башҡарма комитеты эргәһендә физик культура советы ойошторола. «Динамо» спорт йәм-

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 63, л. 63.
[2] «Красная Башкирия», 1928, 7 май.
[3] «Власть труда», 1924, 6 июнь.
[4] «Красная Башкирия», 1925, 16 ғинуар.

ғиәте барлыҡҡа килә (1925). «Динамо» стадионы (ул хәҙер ҙә бар), һыу-кәмә станцияһы, йөҙ метрлыҡ тир, спорт майҙаны төҙөлә.

Өфөлә йыл һайын физкультура хәрәкәте киңәйә бара. 1930 йылда 38 түңәрәктә (гимнастика, волейбол, саңғы, футбол, еңел атлетика һәм башҡа түңәрәктәр), тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 2 меңдән артығыраҡ кеше шөғөлләнгән [1]. Спорт байрамдары һәм ярыштары үткәрелә. Өфөләр Бөтә Союз ярыштарында ла ҡатнаша. 1930 йылда улар Хабаровск—Мәскәү саңғы походында ҡатнаша, 1935 йылда 11 динамовсы саңғыла Өфө—Ырымбур—Белорет—Өфө маршрутын үтә, ә 1936 йылда саңғысылар төркөмө Өфө—Пермь—Киров—Ҡазан—Горький юлын үтә. Ярослав—Мәскәү араһында икенсе саңғы ярышында ҡатнашыусы З. Т. Фәризовҡа Башҡортостанда беренсе булып СССР-ҙың спорт мастеры исеме бирелгән [2].

1935 йылда призывҡа тиклемге 6 комсомолец: Ә. Һ. Бикчәнтәев, А. Старцев, Х. Ш. Мостафин, А. Кожаров, М. Сафиуллин һәм Р. Х. Хәйруллин кәмәлә Өфөнән Мәскәүгә тиклем походта була. Улар тотош юлды 38 көндә үтеп, Бөтә Союз спартакиадаһы асылған көндө, 18 июлдә, финишҡа еткәндәр. Походты уңышлы тамамлағандары өсөн егеттәр СССР Оборона халыҡ комиссариаты, Осоавиахимдың Үҙәк советының ҡиммәтле бүләктәре менән наградлана, уларҙы СССР Оборона халыҡ комиссары урынбаҫары М. Н. Тухачевский ҡабул иткән [3]. 1935 йылдың 23 майында Өфө—Новосибирск араһын велосипедта үтеүгә старт бирелә. Ауыр юл бер ай самаһына һуҙыла. Спортсылар ауыр һынауҙа намыҫ менән еңеп сыға. 30-сы йылдарҙа йәш авиамоделселәр ҙә байтаҡ уңышҡа олгәшә. 1933 йылда Мәскәүҙәге ярышта Өфө йәштәренең ике моделе Бөтә Союз рекорды ҡуя. Ә 1938 йылда Володя Байковтың моделе оҙаҡ осоу буйынса донъя рекордын уҙып китә.

Ҡаланың физик культура һәм спорт тормошоноң үҫә барған роле промышленность предприятиеларында һәм учреждениеларҙа спорт секцияларының һанын арттырыуҙа, мәктәп, техникум һәм юғары уҡыу йорттары уҡыусыларының физик әҙерлеген яҡшыртыуҙа айырыуса асыҡ күренә.

Өфө халҡының культура һәм белем кимәлен күтәреүҙә китапханалар мөһим урын тота. Революцияға тиклем китапханалар нигеҙҙә ҡала үҙәгендә генә урынлашҡайны. Улар халыҡ араһында ағартыу эше алып бармаған, күсмә китапханалар булмаған, китапхана работниктарын әҙерләү ғәмәлдә ойошторолмағайны.

Совет власы урынлашҡас, ҡаланың партия органдары бөтә кеше йөрөрлөк китапханалар булдырыуға керешә. Улар шәхси китап йыйынтыҡтарын конфискациялау, учреждениелар һәм ойошмаларҙың китапханаларын реквизициялау, ирекле ярҙам ойоштороу юлы менән

---

[1] ЦГА БАССР. ф. 1178, оп. 1, д. 11, л. 48.
[2] «Вечерняя Уфа», 1973, 17 апрель.
[3] Башкирия спортивная, Өфө, 1971, 27, 33, 47-се биттәр.

тулыландырыла. Китапханалар селтәре йылдам үҫә. 1930 йылда ҡалала 78 китапхана, шул иҫәптән политик ағартыу ойошмаларының — 10, мәктәптәрҙең — 28, профсоюздарҙың — 22, ведомстволарҙың — 14 һәм Ҡыҙыл Армияның 4 китапханаһы була [1]. Даими китапханалар менән бер рәттән күсмәләре лә барлыҡҡа килә, улар башлыса йылғасыларҙы, тимер юлсыларҙы һәм ҡыҙылармеецтарҙы хеҙмәтләндерә. Ғилми-тикшеренеү учреждениелары үҫеү һәм юғары уҡыу йорттары барлыҡҡа килеү менән ғилми китапханалар селтәре ойоша. Бактериология, ауыл хужалығы һәм медицина институттары үҙҙәренең ғилми китапханаларын ойоштора.

Үҙәк ғилми китапхана Өфөнөң культура тормошонда айырым урын тота. Ул 1921 йылдың 9 июнендә элекке помещик Молло йортонда (хәҙерге К. Маркс урамы, 6) асыла [2]. Өфө губерна земствоһы, Статистика комитеты, Духовный семинария китапханаларының китаптары уның нигеҙен тәшкил итә. Тәүҙә китапхана тулы аҙна эшләмәй. Уға көнөнә 25-ләп кеше йөрөй. Китапхананың фонды йыл һайын киңәйә бара. 1932 йылдан башлап ул матбуғат продукцияһын РСФСР-ҙың бөтә мөйөштәренән ала башлай. Был — китап фондын тулыраҡ һайлап алырға ныҡлы нигеҙ булдыра. Уның эске төҙөлөшө лә үҙгәртеп ҡорола. Комплектлау, әҙәбиәтте эшкәртеү секторҙары, белешмә-библиография һәм методик бүлектәр ойоштороla. Китап уҡыусылар менән эшләү ҙә йөкмәткелерәк була бара. Улар өсөн лекциялар, кисәләр, докладтар, әңгәмәләр, сәхнәләштерелгән әҙәби һәм тематик кисәләр үткәрелә. Китап күргәҙмәләре, Башҡортостандың массовый китапханаларына методик ярҙам ойоштороla.

Үҙәк ғилми китапхана аҡрынлап республика китапханаһы характерын ала бара. Шул сәбәпле ул —1930 йылда асыҡ (публичный) китапхана итеп, ә 1936 йылда Башҡортостан республика китапханаһы итеп үҙгәртеп ҡорола, уға һуңынан Н. К. Крупская исеме бирелә. Уны булдырыуҙа Надежда Константиновна актив ҡатнаша. 1934 йылдың апрелендә ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитетының беренсе секретары Я. Б. Быкинға ул былай тип яҙған: «Башҡортостан дәүләт асыҡ китапханаһының бинаһы нисек? Унда китаптар етерлекме, китап һаҡлағыс нисек ҡуйылған, уҡыу залы нисек? [3]

Партия һәм совет органдарының даими ярҙамы Н. К. Крупская исемендәге Башҡортостан республика китапханаһын илебеҙҙең иң ҙур китапханалары рәтенә сығарҙы. 1941 йылда уның фондында ярты миллион самаһы китап була (1921 йылда унда 14 мең дана китап булғайны). Бында фәндең бөтә тармаҡтары буйынса китаптар — рус, башҡорт, татар, ғәрәп, фарсы, төрөк, инглиз, француз, испан һәм башҡа телдәрҙә сыҡҡан баҫмалар бар. Фәнни коммунизм-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 798, оп. 1, д. 1917, л. 186.
[2] Шунда уҡ, д. 1744, л. 430.
[3] «Советская Башкирия», 1969, 9 март.

ға нигеҙ һалыусыларҙың үҙҙәре йәшәгән ваҡытта немец телендә баҫып сығарылған китаптары айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Бында К. Маркстың «Капитал» (Гамбург, 1885), Ф. Энгельстың «Англияла эшселәр синыфының хәле» (Лейпциг, 1845), В. И. Лениндың «Россияла капитализмдың үҫеүе» (СПб., Паллада, 1908); үҙ ваҡытының культура ҡомартҡылары булған һирәк осрай торған матбуғат әҫәрҙәре: М. В. Ломоносовтың «Россия грамматикаһы» (СПб., «Император Фәндәр академияһы, 1788), Фирдәүси (1849), А. Навои (1893) әҫәрҙәре һәм башҡалар бар [1].

1928 йылда Башҡортостан үҙәк китап палатаһы булдырыла [2]. Бында бик һирәк осрай торған китаптар — П. И. Рычков, П. С. Паллас, Н. В. Ремезов, В. М. Черемшанскийҙарҙың хеҙмәттәре кеүек крайҙы өйрәнеүсе материалдар, шулай уҡ Башҡорт АССР-ы буйынса Октябрь революцияһынан һуң сыҡҡан бөтә әҙәбиәт йыйылған һәм системаға һалынған. Китап палатаһы республиканың белешмә-библиографик үҙәгенә әүерелә. 40-сы йылдарҙың башында уның фондтарында 115 мең дана самаһы китап һәм газета һаҡланған.

Музейҙар ҙур культура-ағартыу эше алып барған. 1919 йылда крайҙы өйрәнеү музейы Көнсығыш халыҡтарының тарихи-социаль музейы итеп, ә 1923 йылда Башҡортостан республика крайҙы өйрәнеү музейы итеп үҙгәртеп ҡорола. Уға элекке помещик Чижева йортоноң (хәҙерге Октябрь революцияһы урамы, 10) өҫкө ҡаты бирелә. 20—30-сы йылдарҙа музей работниктары Башҡортостандың тарихы, уның халыҡ хужалығының үҫеше, тәбиғәте менән таныштырыусы материалдар йыйыу һәм яңы экспонаттар ҡуйыу буйынса ҙур эш башҡара. Шулай уҡ революцион ваҡиғаларға, күренекле дәүләт эшмәкәрҙәренең, яҙыусыларҙың һәм ғалимдарҙың тормошона һәм эшмәкәрлегенә арналған күргәҙмәләр ойоштороla. Музейға килеүселәр һаны йыл һайын арта барған. Әгәр 1924 йылда улар 1660 кеше булһа, 1940 йылда 27 мең кешенән ашып киткән [3].

1920 йылда Өфө художество музейына нигеҙ һалына (урман промышленниги Лаптев йортонда — хәҙерге Гоголь урамы, 27). Уны ойоштороуҙа үҙенең тыуған ҡалаһына 102 картинаһын бүләк иткән рәссам-академик М. В. Нестеров һәм музейҙың беренсе директоры Мәскәү художнигы И. Е. Бондаренко яҡындан тороп ҡатнашҡан.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының ҡарары буйынса 1941 йылда асылған В. И. Лениндың Йорт-музейы Өфөнөң һәр кешеһенең йөрәгенә ҡәҙерле булған иҫтәлекле урынға әүерелә. Бында В. И. Лениндың тормошо һәм көрәше, уның Өфөлә булыуы тураһында һөйләүсе мөһим документтар һәм материалдар йыйылған.

---

[1] Республиканская библиотека Башкирской АССР. Памятка читателю. Өфө, 1958, 6—7-се биттәр.

[2] ЦГА БАССР, ф. 798, оп. 1, д. 1961, л. 124.

[3] «Бөтә Башҡортостан 1925 йылда» тигән адрес-белешмә һәм телефондар китабы. Өфө. 1925, 207-се бит. Башҡортостан ССР Союзында. Статистик йыйынтыҡ. Өфө, 1972, 242-се бит.

Ҡала халҡын политик һәм культура йәһәтенән тәрбиәләүҙә матбуғат мөһим роль уйнай.

Өфөлә Октябрь революцияһынан һуң большевиктарҙың Өфө комитеты органы булған «Вперед!» газетаһы, «Известия Уфимского Совета рабочих и солдатских депутатов» * газетаһы, Өфө губревкомы һәм Мосолмандар хәрби советы органы «Көрәш» газетаһы сыға. Совет власының тәүге айҙарында буржуаз һәм эсер-меньшевистик «Уфимский вестник», «Известия торгово-промышленных предприятий», «Тормош», «Голос рабочего», «Социалист-революционер» һәм башҡа газеталар сығып торған. Граждандар һуғышы башланыу айҡанлы 1918 йылдың июнендә эшселәр, крәҫтиәндәр, ҡыҙылармеецтар һәм батрактар депутаттары Советтарының VI Өфө губерна съезы большевиктар тәҡдиме буйынса буржуаз газеталарҙы контрреволюцион эшмәкәрлектәре өсөн ябыу тураһында ҡарар сығара.

Тәүге совет газеталарына ҡыйын була. Полиграфик база ярлы ине, ҡағыҙ, квалификациялы хәреф йыйыусылар, журналистар етешмәй. Һәр редакция ҡағыҙҙы ҡайҙан һәм нисек тура килһә, шунан алған. 1920 йылда партияның Өфө губерна комитетының бер отчетында: «Ҡағыҙ мәсьәләһе бик ҡырҡыу тора. Кризис аҙна һайын тигәндәй тыуып тора, һәм урындағы «Известияны» сығарыуҙы туҡтатмау өсөн ғәҙәттән тыш саралар күрергә тура килә тип һис тә арттырмайынса әйтеп була» [1], тип билдәләнгән. Саралар күрелә һәм газеталар сығып тора. Улар хеҙмәтсәндәрҙең киң массаһына Коммунистар партияһы идеяларын еткерә, буржуаз пропаганданы фашлай, ленинсы милли политиканы аңлата, урындағы буржуаз милләтселеккә лә, шулай уҡ бөйөк державасылыҡ шовинизмына ла ҡаршы көрәшә, газета уҡыусыларҙы пролетар интернационализм рухында тәрбиәләй.

Илебеҙҙең халыҡ хужалығы үҫеүе менән газеталарҙың материаль хәле яҡшыра, полиграфик базаһы киңәйә. Ваҡытлы матбуғаттың һаны ла арта. 20-се йылдарҙа Өфөлә 4 республика газетаһы: «Власть труда», «Башҡортостан», «Йәш юҡсыл», «Яңы ауыл» газеталары сыға. Ижтимағи-политик һәм әҙәби-художестволы журналдар: «Белем», Сәсән», «Ленин юлы», «Дәһри», «Яңылыҡ» һәм «Башҡортостан хужалығы» сығарыла башлай. 30-сы йылдарҙың башында күп тиражлы фабрика-завод газеталары баҫылып сыға. Паровоздар ремонтлау заводында — «Железняк», депола «Ударник на рельсах» газеталары сығып торған.

Газеталарҙың тиражы үҫә. 1928 йылдың аҙағында «Йәш юҡсылдың» тиражы 2200 дана, «Башҡортостан йәштәренең» — 1050, «Башҡортостандың» — 5300, «Яңы ауылдың» — 13000, «Красная Башки-

---

* «Вперед!» һәм «Известия Уфимского Совета рабочих и солдатских депутатов» газеталары Февраль буржуаз-демократик революцияһынан һуң сыға башлай.

[1] Ахунзянов Т. Н. Очерки по истории печати Советской Башкирии. Өфө, 1979, 22-се бит.

В. И. Лениндың Йорт-музейы.



риянын» — 13700 дана тәшкил иткән, йәғни бөтә газеталарҙың бер юлы сыҡҡан тиражы 35 мең дананан, ә 1930 йылда — 80 мең дананан (журналдарҙы ла ҡушып) ашып киткән[1]. Артабанғы йылдарҙа ваҡытлы матбуғаттың йылдам үҫеүе дауам иткән. 1940 йылда Өфөлә 106 мең тираж менән 7 республика газетаһы, шул иҫәптән башҡорт телендә — 3, рус телендә — 2, татар телендә 2 газета сығарылған[2].

«Власть труда» газетаһы ҡала тормошон тулы һәм сағыу яҡтырта, ул 1925 йылдың ғинуарынан «Красная Башкирия» тип атала. 20-се йылдарҙа газета ҡала халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙағы һәр уңышты ихлас пропагандалай. Моторҙар эшләү, крекинг-завод һәм башҡа яңы төҙөлөштәрҙә Өфө кешеләренең героик тырышлығын газета һәйбәт сағылдыра. 20—30-сы йылдарҙа йәйелдерелгән культура төҙөлөшөндә газета бик ҙур роль уйнай. Яңы мәктәптәрҙең, рабфактарҙың барлыҡҡа килеүен, тәүге юғары уҡыу йорттарының, театрҙарҙың, клубтарҙың, китапханаларҙың һәм башҡа культура усаҡтарының формалашыуын газета үҙ биттәрендә киң яҡтырта.

Культура революцияһын тормошҡа ашырыуҙа китаптың роле ҙур була. Бына шуға ла Өфөнөң партия һәм совет органдары нәшриәт эшенә баштан уҡ етди иғтибар бирәләр. Йәш Совет республикаһы-

[1] Ахунзянов Т. И. Печать Советской Башкирии, 1-се китап. Өфө, 1967, 114, 115, 125-се биттәр.

[2] Матбуғат, художестволы әҙәбиәт һәм сәнғәт. Өфө, 1944, 9-сы бит.

ның «Матбуғат тураһындағы» декретына таянып, улар шәхси типографияларҙы национализациялайҙар. Улар бер-ике генә иҫке конструкциялы китап баҫыу машиналары булған ваҡ кустарь предприятиелар ине. Хәрефтәрҙе ҡулдан йыялар, шрифтар запасы лә аҙ ине.

Типографияларҙы национализациялау китап сығарырға мөмкинлек бирә. Өфөләге беренсе совет типографияһына етәкселек итеүҙе губерна ревкомы 1917 йылдың декабрендә энергиялы һәм һәләтле ойоштороусы коммунист А. А. Юрьевка ҡуша. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә листовкалар һәм брошюралар сығарыу ойошторола, улар булып үткән ваҡиғаларҙы аңлата, массаларҙың революцион тәжрибәһен, яңы ҡоролошто нығытыу буйынса уларҙың көндәлек эшмәкәрлеген дөйөмләштерә. РКП(б)-ның губерна комитеты тарафынан Ф. Энгельстың «Коммунизм принциптары», В. И. Лениндың «Совет власының нәүбәттәге бурыстары» тигән хеҙмәттәре баҫып сығарыла. Губерна мосолмандар комиссариаты татар телендә К. Маркстың һәм Ф. Энгельстың «Коммунистар партияһы манифесын», РСДРП(б)-ның Программаһын һәм Уставын баҫып сығара.

Октябрь еңгәндән һуң мәктәптәр осон дәреслектәр төҙөү һәм уны баҫтырып сығарыу киҫкен проблема булып әүерелә. Халыҡ мәғарифының Өфө губерна бүлеге дәреслектәр сығарыуҙы юлға һалырға ынтылып ҡарай, ләкин ҡаланы аҡгвардеецтар баҫып алыу сәбәпле был эшкә тотонорға мөмкинселек булмай.

Өфөлә совет китап нәшриәтен үҫтереүҙең яңы осоро 1919 йылдың уртаһында, Колчак бандаларын ҡыуып ебәргәндән һуң, башлана. Полиграфия базаһын национализациялау һәм нығытыу буйынса тәүге саралар граждандар һуғышы ваҡиғалары тарафынан юҡҡа сығарылған. Типографияларҙың бер өлөшө тулыһынса емертелә, һаҡланып ҡалғандарында буяуҙар, цинк, ҡағыҙ, яғыулыҡ етешмәгән. Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, аҡ чехтар ҡала типографияларынан 130 боттан артығыраҡ ғәрәп шрифтарын алып киткәндәр [1]. Печатниктарҙың күбеһе армияға алынған йәки халыҡ хужалығының башҡа тармаҡтарына эшкә киткән.

РКП(б)-ның Өфө губерна комитеты полиграфия базаһын юлға һалыу буйынса киҫкен саралар күрә: типографиялар берләштерелә, квалификациялы печатниктар армиянан һәм башҡа эштәрҙән кире саҡырып алына. Тотош губернала нәшриәт эшен берләштереү маҡсатында 1921 йылдың ғинуарында Дәүләт нәшриәтенең губерна бүлексәһе төҙөлә [2]. Дәүләт, кооператив һәм башҡа нәшриәттәргә етәкселек итеп, ул ҡағыҙҙы һәм башҡа милкәтте типографияларға бүлеп бирә, китаптар сығарыуҙы ойоштора. Нәшриәт эше анығыраҡ характер ала.

1922 йылдың октябрендә Башҡортостан дәүләт нәшриәтен Дәү-

---

[1] ПА БОК КПСС. ф. 1, оп. 1, д. 226, л. 12.
[2] Шунда уҡ, д. 123, л. 109.

ләт нәшриәтенең Өфө губерна бүлексәһе менән бергә ҡушҡандан һуң, берләштерелгән пай товариществоһы — «Башкнига» ойошторола. Ул республикала нәшриәт эшен үҫтереү һәм матбуғат продукцияһын таратыу өсөн яуаплы була. Товариществоға төрлө ойошмалар һәм ведомстволар инә (Башҡорт АССР-ы Мәғариф халыҡ комиссариаты, Өфө ҡала Советы, Башсовнархоз, Башҡорт АССР-ы һаулыҡ һаҡлау халыҡ комиссариаты, ғилми йәмғиәттәр, Башпрофсовет, Башҡорт АССР-ы Аҙыҡ-түлек халыҡ комиссариаты, Башсельхозкредит, Башсельхозтрест). Полиграфия базаһын артабан туплау дауам итә. 1922 йылда Өфө, Стәрлетамаҡ һәм Табын типографиялары милкен берләштереү юлы менән Өфөлә ҙур «Октябрьский натиск» типографияһы төҙөлә [1]. Ошо ваҡыттан алып Башҡортостанда китап нәшриәте эше нигеҙҙә баш ҡалала туплана. Республикала йыл һайын сығарылған бөтә китаптарҙың 80 проценты самаһы ошонда баҫыла [2].

Нәшриәт эшен үҙгәртеп ҡороу китап һәм брошюралар сығарыуҙы арттырырға булышлыҡ иткән. Тәүге осорҙа улар араһында рәсми (отчеттар, бойороҡтар һәм ҡарарҙар йыйынтыҡтары һәм башҡалар), белешмә баҫмалар (уставтар, инструкциялар һәм башҡалар) күберәк була. 1923 йылда был ике торҙағе баҫмалар бөтә баҫып сығарылған китаптарҙың яртыһынан күбеһен тәшкил иткән; ғилми һәм фәнни-популяр әҙәбиәт һаны буйынса — икенсе, агитацион әҙәбиәт — өсөнсө, дәреслектәр дүртенсе урында торған.

1923 йылда башҡорт телендә беренсе китап барлыҡҡа килә. Коммунистар партияһы милли телдәрҙә әҙәбиәт сығарыуға даими иғтибар итә. РКП(б)-ның XIII съезы уны сығарыуҙы бөтә саралар менән киңәйтергә ҡуша. Съезд ҡарарҙары башҡортса китап сығарыуҙы көсәйтергә булышлыҡ итә. Әгәр 1923 йылда башҡорт телендә 4,5 баҫма табаҡ китап сығарылһа, 1933 йылда —1447, ә 1937 йылда 4750 табаҡ китап сығарылған [3]. 1922—1932 йылдарҙа ғына ла сығарылған китаптарҙың дөйөм һаны 32 тапҡырға артып киткән, ә бер китаптың уртаса тиражы шул уҡ осорҙа 900-ҙән 4555 данаға еткән [4].

Артабан нәшриәт эшмәкәрлеге һаман ҙурыраҡ масштаб алған, ул 1936 йылда Володарский урамындағы 2-се йортта (хәҙер унда Өфө күн-галантерея фабрикаһы урынлашҡан) яңы типография асылғас, бигерәк тиҙ үҫкән. 1933—1938 йылдарҙа ҡалала тиражы 8,3 миллион дананан ашыуыраҡ булған 1406 исемдәге китап сығарылған [5]. Матбуғат продукцияһының сифаты ла яҡшырған.

---

[1] Материалы по истории профдвижения рабочих полиграфического производства Башкирии. Өфө, 1927, 20-се бит.

[2] «Бюллетень БЦСУ», 1924, № 5, 10, 11-се биттәр.

[3] Социалистическое строительство Союза ССР (1933—1938 йылдар). Статистик йыйынтыҡ. М.—Л., 1939, 154-се бит; ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 6, д. 636, л. 212.

[4] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 11, д. 218, л. 76.

[5] Куватов С. С. Башкирия издает. Өфө, 1969, 24-се бит.

Китап нәшриәте фронтында өлгәшелгән уңыштар һан күрһәткестәре менән генә сикләнмәй әле. Яңы, социалистик культураны төҙөү өсөн китаптарҙың тематикаһы ла хәл иткес роль уйнай. К. Маркс, Ф. Энгельс һәм В. И. Лениндың хеҙмәттәре, партия һәм совет органдарының документтары, китап уҡыусыларҙың киң даирәләре өсөн марксизм-ленинизм буйынса популяр әҙәбиәт күп даналарҙа баҫып сығарыла. Дингә ҡаршы әҫәрҙәрҙе, художестволы әҙәбиәтте әҙерләүгә етди иғтибар ителә. Китап продукцияһы составында дәреслектәр ҙур урын алып торған. Ошолар арҡаһында наҙанлыҡты бөтөрөүҙә һәм белемде үҫтереүҙә ҙур уңыштарға өлгәшергә мөмкинлек тыуа.

Шулай итеп, Совет власы йылдарында Өфө ҙур культура үҙәгенә әүерелгән. Бында тиҫтәләгән яңы мәктәптәр төҙөлгән, балаларҙы дөйөм ете йыллыҡ уҡытыу индерелгән һәм оло кешеләргә белем биреү проблемаһы хәл ителгән, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттары, ғилми-тикшеренеү институттары булдырылған. Милли интеллигенцияның ҙур отряды үҫеп сыҡҡан. Әҙәбиәт һәм сәнғәт ҙур уңыштарға өлгәшкән, яңы тормошто, совет кешеләренең батыр хеҙмәтен, халыҡтар дуҫлығын сағылдырыусы күп кенә эпик полотнолар барлыҡҡа килгән, Өфө театрҙары һәм музейҙары тотош республикала һәм унан ситтә лә киң танылыуға өлгәшкән.

# *Өфө Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында*

## § 1. Ҡаланың һуғыш осорондағы тормошо

1941 йылдың 22 июнендә фашистик Германия Советтар Союзына мәкерле рәүештә баҫып инә. Беҙҙең Тыуған илебеҙ кисергән бөтә һуғыштар араһында иң рәхимһеҙе булған Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Совет кешеләрен агрессорға емергес отпор биреү өсөн ҡаҡшамаҫ ҡыйыулыҡ һәм еңеүгә инанғанлыҡ солғап ала. Бөтә илдәге кеүек үк, һуғыштың тәүге көндәрендә Өфө предприятиеларында һәм учреждениеларында ла күп һанлы митингылар булып үтә. Паровоздар ремонтлау заводы эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре фашистарҙың баҫып инеүен нәфрәт менән ғәйепләй һәм транспорттың туҡтауһыҙ эшләүен тәьмин итергә, фронтҡа бөтә яҡлап ярҙам күрһәтергә әҙер тороуҙарын белдерә. Унарлаған эшсе үҙҙәрен Ҡыҙыл Армия сафына алыуҙарын һорап ғариза бирә. Моторҙар эшләү заводы коллективының күп меңләгән кеше ҡатнашҡан митингыһы резолюцияһында: «Гитлерсыларҙың юлбаҫарҙарса баҫып инеүҙәренә яуап итеп, беҙ стахановсыларса, бракһыҙ һәм аварияһыҙ эшләргә... хәрби эште өйрәнергә һәм үҙебеҙҙе яуыз дошманға ҡаршы көрәшкә әҙерләргә йөкләмә алабыҙ... Беҙ Ҡыҙыл Армия сафына баҫырға һәм һуңғы тамсы ҡаныбыҙ ҡалғансы Тыуған илебеҙ бойондороҡһоҙлоғон һәм азатлығын һаҡлап ҡалырға әҙербеҙ», — тип әйтелгәйне [1]. «Әгәр Тыуған ил талап итһә, беҙ, машинистар, бронепоездарға ултырырға һәм һуғышҡа китергә әҙербеҙ», — тип белдерәләр паровоз депоһы эшселәре митингыла [2].

Район хәрби комиссариаттарына, партияның район һәм ҡала комитетына бер үк үтенесте белдергән меңәрләгән ғаризалар килә. Ул да булһа фронтҡа китеү теләге ине. Күп ҡыҙҙар-комсомолкалар

---

[1] «Ҡыҙыл Башҡортостан», 1941, 24 июнь; ПА БОК КПСС, ф. 342. оп. 2, д. 17, л. 1.

[2] «Красная Башкирия», 1941, 2 июль.

үҙҙәрен хәрәкәт итеүсе армияға медицина сестралары итеп ебәреүҙе һорай. Мобилизациялауҙың тәүге ике көнөндә Өфөлә добровольцтарҙан ике меңгә яҡын ғариза алына. Һуғыш башланғандан һуң бер нисә аҙна эсендә Ҡораллы Көстәр сафына унар меңләгән өфөләр саҡырыла. Ҡеүәтле патриотик хәрәкәттең башында коммунистар һәм комсомолецтар барған.

Хәрби ваҡыт талаптарына ярашлы рәүештә ҡала совет һәм партия органдарының эшмәкәрлеге үҙгәртеп ҡорола. Улар армияға мобилизациялау, хужалыҡты хәрби шарттарға үҙгәртеп ҡороу мәсьәләләрен оператив хәл итә, предприятиеларҙа, транспортта хеҙмәт етештереүсәнлеген бөтә яҡлап күтәреүҙең яңы резервтарын эҙләп таба, хеҙмәтсәндәрҙең патриотик башланғыстарын үҙ ваҡытында күтәреп ала.

ВКП(б) ҡала комитеты һәм район комитеттары аппараттарында, Советтарҙың башҡарма комитеттарында дисциплина, ойошҡанлыҡ, революцион һиҙгерлек күтәрелә. Заводтарҙы, электр станцияларын, ягыулыҡ складтарын, элемтә предприятиеларын һаҡлауға, янғынға ҡаршы көрәш хеҙмәтен ойоштороуға махсус иғтибар бирелә. Партия һәм совет работниктары предприятиеларҙа йышыраҡ була башлаған, килеп тыуған хәлде аңлатҡан, тарҡатыусыларға, паникерҙарға, ялған хәбәр таратыусыларға ҡаршы киҫкен көрәш алып барырга саҡырған. ВКП(б)-ның ҡала комитеты һәм район комитеттары хужалыҡ һәм йәмәғәт ойошмаларының эшмәкәрлегенә контролде көсәйткәндәр, армияға китеүсе етәксе работниктар урынына ашығыс рәүештә кадрҙар һайлап алғандар, яңы һайланған тәүге партия ойошмалары секретарҙары өсөн семинарҙар үткәргәндәр.

Масса-политик эш тә бөтә көсө Тыуған илде һаҡлауга мобилизациялау бурыстарына буйһондорола. Митингылар һәм йыйылыштар уҙгарыла. Унда фашизм фаш ителә, дошманға ҡаршы көрәште көсәйтеү буйынса бурыстар билдәләнә. 1941 йылдың 12 сентябрендә ҡалала антифашистик митинг була. Унда резолюция ҡабул ителә. Был резолюцияла: «Тылда булһаҡ та, беҙ үҙебеҙҙе фронттагы кеүек хис итәбеҙ. Беҙ тағы ла ҙурыраҡ энергия менән эшләйәсәкбеҙ, хәрби һәм санитария белемдәренә эйә буласаҡбыҙ» [1]... — тип әйтелгәйне. Идеологик эштә халыҡтың революцион һәм боевой традицияларын, Ватан азатлыгы өсөн һугышта рус ҡоралының еңеүен пропагандалау алгы планга ҡуйыла. Хеҙмәтсәндәр өсөн фронттағы хәл тураһында, илдәге һәм донъялагы ваҡигалар хаҡында лекциялар һәм докладтар уҡыла. Пропаганданың көсө дөрөҫлөктә ине. В. И. Ленин: «...Әгәр беҙ әсе һәм ауыр дөрөҫлөктө туранан-тура әйтергә ҡурҡмаһаҡ, беҙ бөтә һәм төрлө ҡыйынлыҡтарҙы еңергә, һис шикһеҙ һәм мотлаҡ еңергә өйрәнәсәкбеҙ» [2], — тип күрһәткәйне. 1943 йылдың аҙагына Өфөлә 39 агитколлектив эшләй. Улар 4,5 мең агитаторҙы

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1367, л. 50.

[2] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 44-се том, 210-сы бит.

берләштергән [1]. Партияның район комитеттары, ҙур предприятиеларҙың парткомдары эргәһендә агитпункттар эшләй.

Һуғыштың тәүге көндәрендә үк Ҡыҙыл Армия өсөн резерв әҙерләү йәйелдерелә. Мәскәү һәм Ленинград хеҙмәтсәндәре башлангысы буйынса кала предприятиеларында һәм учреждениеларында халыҡ ополчениелары отрядтары, һауа һөжүменә һәм ағыулы газдарға ҡаршы оборона группалары, медицина сестралары курстары барлыҡҡа килә. 1941 йылдың октябренән Дәүләт Оборона Комитеты ҡарары менән дөйөм мәжбүри хәрби уҡыу индерелгән. Бер йыл эсендә, 1942 йылдың 1 октябренә, Өфөлә дөйөм уҡытыу аша 10 мең кеше үткән. Бынан тыш, һауа һөжүменә һәм ағыулы газдарға ҡаршы оборона группаларында, төрлө оборона түңәрәктәрендә 30 меңдән ашыу кеше уҡыған [2]. 1942 йылдан башлап хәрби комиссариаттар эргәһендәге комсомол-йәштәрҙең махсус уҡыу бүлектәрендә автоматсылар, минометсылар, танкыларҙы ҡырыусылар, снайперҙар, сапер-шартлатыусылар әҙерләнгән. Бары бер йыл эсендә генә бында 4 мең кеше хәрби белем алган [3]. Осоавиахим мәктәптәре һәм түңәрәктәре 1,6 мең телеграфист, радист, шофер, Ворошилов уҡсылары һәм санинструкторҙар әҙерләп сыгарған [4]. Өфө аэроклубы һауа-десант частары өсөн 1,2 мең парашютист әҙерләгән [5]. Бынан тыш, аэроклубта, планер һәм диңгеҙ клубтарында, элемтә мәктәптәрендә йөҙәрләгән буласаҡ летчиктар, моряктар, элемтәселәр тәүге әҙерлек алған.

Башҡортостан территорияһында хәрби частар һәм соединениелар төҙөү башланған. Августа запастағы уҡсылар бригадаһы булдырылған. Ул һугыш йылдарында фронт частарын тулыландырыу өсөн меңәрләгән һуғышсылар әҙерләгән. 1941 йылдың көҙөндә Өфөлә 361-се уҡсылар, 74-се һәм 76-сы кавалерия дивизиялары төҙөлгән.

1941 йылдың ноябрь башында ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты, Верховный Совет Президиумы һәм БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы башҡорт кавалерия дивизиялары төҙөү тураһында һорап Дәүләт Оборона Комитетына мөрәжәғәт итәләр. Республика хеҙмәтсәндәренең теләктәрен хуплап, Дәүләт Оборона Комитеты ике милли дивизия (112-се һәм 113-сө) төҙөргә рөхсәт иткән.

Был соединениеларҙы төҙөү Өфөлә башлана. Байтаҡ һанда башҡорт һәм татар командирҙары хәрәкәт итеүсе армиянан саҡыртып ҡайтарыла. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының командиры итеп фронттан ҡайтарылган полковник коммунист М. М. Шайморатов билдәләнә. Политработниктар вазифалары партия Өлкә Комитеты, ҡала һәм район комитеттары работниктары иҫәбенә тулы-

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 3, д. 34, л. 113.
[2] Шунда уҡ, оп. 2, д. 1483, л. 67; д. 1665, л. 15.
[3] Шунда уҡ, д. 1668, л. 43, 119, 136.
[4] Шунда уҡ, л. 63; д. 1671, л. 13.
[5] «Советская Башкирия», 1972, 16 апрель.

112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы частарының парады. 1942 йыл, 23 март.



ландырыла. Республиканың колхоздары һәм совхоздары дивизия өсөн 13 мең ат, меңәрләгән центнер иген, фураж биргән. Өфө предприятиелары һалҡын ҡорал, арба һәм башҡа кәрәк-яраҡтар әҙерләгән. 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы меңәрләгән комплект кейем-һалым теккән.

1942 йылдың апрелендә 112-се кавалерия дивизияһы, хәрби әҙерлекте тамамлап, фронтка китә. 113-сө дивизия базаһында төҙөлгән запастағы уҡыу полкы Ҡыҙыл Армияның кавалерия частары өсөн резерв әҙерләгән.

Аҙағыраҡ Өфөлә 214-се уҡсылар дивизияһы, бер нисә айырым артиллерия һәм пулемет частары ойоштороло. Ҡалаһың предприятиелары һәм учреждениелары запастағы һәм ойошторолоусы частарға шефлыҡ иткән, уларҙы транспорт средстволары, төҙөлөш материалдары, инструменттар менән тәьмин иткән, ашханалар һәм ҡыҙыл мөйөштәрҙе йыһазландырырға ярҙам иткән.

Яңы һәм хәрәкәт итеүсе соединениеларҙы һәм частарҙы комплектлау өсөн ҡала хеҙмәтсәндәрен даими рәүештә мобилизациялау үткәрелә. Һуғыш башланған көндән алып 1943 йылдың аҙағына тиклем Өфө Ҡыҙыл Армияға 88 952 кеше биргән, шулар эсенән 3082 коммунист, 9671 комсомолец була [1].

Тыуған илде берҙәм һуғыш лагерына әйләндереү кәрәклеге экономиканы хәрби нигеҙгә ҡыҫҡа ваҡытта үҙгәртеп короуҙы, көнбайыш

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1808, л. 1.

районларынан күп һандағы предприятиеларҙы, материаль байлыкты, шулай уҡ халыҡты тәрән тылға эвакуациялауҙы талап итә. Тулы булмаған һандар буйынса, 1941—1942 йылдарҙа Өфөгә (тулыһынса йәки өлөшләтә) 40-тан ашыу промышленность предприятиеһы эвакуациялана[1]. Уларҙың ҡайһы берҙәре эшләүсе шундай уҡ завод һәм фабрикалар менән берләштерелә, күптәре, ҡулайлаштырылған биналарға урынлаштырылып, үҙ аллы предприятиелар рәүешендә эшкә ебәрелә. Мәҫәлән, Запорожье, Гомель, Станислав паровоздар ремонтлау заводтарының ҡорамалдары Өфө паровоздар ремонтлау заводында урынлаштырыла, Үрге Волга моторҙар заводы Өфө моторҙар эшләү заводы майҙансығында урынлаштырыла. Паровоздар һәм вагондар депоһы Мәскәүҙән, Одессанан, Ясиноватая станцияһынан ҡорамалдар ала. Одесса, Мәскәү, Киев кабель заводтары ҡорамалдары базаһында 1941 йылдың ноябрендә Өфө кабель заводы төҙөлә. Эвакуацияланған химия промышленносы предприятиеларына — Ярославлдең ике резина заводына, Рубежанскиҙың (Донбасс) химия заводына, Мәскәүҙең ике буяу заводына — урындағы промышленность предприятиеларының биналарын бирә, ә үҙҙәре башҡа биналарга күсерелә. Гостиный дворҙың бинаһында Мәскәүҙең «Красный текстильщик», Серпуховтың Ново-Ткацкий һәм Мәскәү өлкәһенең Раменский «Ҡыҙыл байраҡ» туҡыу фабрикалары ҡорамалдары урынлаштырыла. Шул нигеҙҙә Өфө кизе-мамыҡ комбинаты барлыҡҡа килә. 1 Май исемендәге шырпы фабрикаһының производство майҙандарында Калуганың «Гигант» шырпы фабрикаһы урынлаштырыла, аяҡ кейемдәре фабрикаһында Витебскиҙың «Прогресс» аяҡ кейемдәре фабрикаһының ҡорамалдары ҡуйыла.

Мәскәүҙең макарон фабрикаһы һәм Харьковтың бисквит фабрикаһы ҡаланың оҡшаш предприятиелары менән берләштерелә. Өфө кондитер фабрикаһы базаһында 1941 йылдың ноябрендә Мәскәүҙән килгән витамин заводы файҙаланыуға тапшырыла.

Республиканың һәм ҡаланың партия органдары эвакуацияланган завод һәм фабрикаларҙы ҡабул итеүгә һәм урынлаштырыуға туранан-тура етәкселек итә. ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитетының махсус ҡарарҙары менән ошо маҡсаттар өсөн кәрәкле транспорт һәм эшсе көстәр бүленә. Предприятиеларҙы ташыуҙа һәм аяҡҡа баҫтырыуҙа меңәрләгән кеше ҡатнаша.

Өфөгә шулай уҡ күпләгән дәүләт, йәмәғәт, фәнни һәм культура учреждениелары күсерелә. Бында СССР-ҙың элемтә халыҡ комиссариаты, СССР-ҙың Дәүләт контроле халыҡ комиссариаты, РСФСР-ҙың урындағы промышленность, социаль тәьминәт һәм башҡа халыҡ комиссариаттары эшләй. Украинаның Фәндәр академияһы, Яҙыусылар, Композиторҙар, Художниктар, Архитекторҙар союздары, УССР-ҙың Т. Г. Шевченко исемендәге Дәүләт академия опера һәм балет

---

[1] Шул мәғлүмәттәр буйынса иҫәпләнде: ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 21, д. 14, л. 9—20; ЦГА БАССР, ф. 933, оп. 1, д. 3134, л. 38, 39.

театры, байтаҡ уҡыу йорттары, ғилми-тикшеренеү һәм проект учреждениелары урынлашты.

Ҡала хеҙмәтсәндәре һуғыш һөҙөмтәһендә килеп тыуған хәлде яҡшы аңлай. Улар эвакуацияланып килеүселәрҙе туғандарса ҡаршы ала, уларға һәр төрлө ярҙам күрһәтә. Уларҙы урынлаштырыу өсөн юғары уҡыу йорттарының, техникумдарҙың дөйөм ятаҡтары, клубтар һәм башҡа йәмәғәт ойошмаларының биналары файҙаланыла. Унар меңләгән өфөләр килеүсе ғаиләләргә үҙҙәренең квартираларынан урын бирә.

Яңы торлаҡ төҙөлөшө лә алып барыла. Сталин районында 1941 йылдың июлендә — бер ҡатлы йорттар һәм бараҡтар, октябрендә — оборона предприятиелары эшселәре өсөн 56 квартиралы йорт төҙөлә башлай. Сталин (хәҙерге Коммунистик), Ғафури, Чернышевский, Солтанов урамдары менән сикләнгән кварталда алты һәм һигеҙәр квартиралы йорттар төҙөү йәйелдерелә. Ноябрҙә Высоковольтный (хәҙер Комсомольский) урамында торлаҡ йорттар төҙөү башлана [1].

1941—1942 йылдарҙа Өфөгә бөтәһе 104 мең эвакуацияланған кеше килә. Бынан тыш, промышленность предприятиеларына һәм ҡала төҙөлөшөнә республиканың ауыл райондарынан эшсе көстәре саҡырылып килтерелә. Был халыҡ һанының ҡырҡа артыуына килтерә. Әгәр 1939 йылғы перепись буйынса Өфөлә 250 мең кеше иҫәпләнһә, ә 1945 йылдың башына 382 мең иие (айырылып сыҡҡан ҡала Черниковск менән бергә) [2].

1941 йылдың октябренән 1943 йылдың майына тиклем Өфөлә Коммунистик Интернационалдың Башҡарма Комитеты урынлаша. Ул Ленин һәм Революцион урамдарының мөйөшөндәге Пионерҙар йортоноң бинаһын биләй (хәҙер бында П. Тольятти исемендәге Өфө авиация техникумы урынлашҡан). Коминтерндың күп кенә етәкселәре «Башкирия» ҡунаҡханаһында йәшәй. Өфөлә халыҡ-ара коммунистик хәрәкәттең күренекле эшмәкәрҙәре Георгий Димитров, Пальмиро Тольятти, Вильгельм Пик, Долорес Ибаррури, Клемент Готвальд, Морис Торез, Вальтер Ульбрихт эшләгән.

Коминтерндың Башҡарма Комитеты һуғыш шарттарында халыҡ-ара коммунистик хәрәкәткә етәкселекте тәьмин итә. Күп кенә коммунистик партиялар менән радио аша бәйләнеш булдырыла. 1942—1943 йылдарҙа Өфөнән поляк, болгар, чех, серб, немец, француз, итальян һәм башҡа телдәрҙә тапшырыуҙар алып барыла. Коммунистик Интернационалдың Башҡарма Комитеты етәкселәре үҙҙәренең сығыштарында фашизмға ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәтен көсәйтергә, һәр бер баҫып алынған илдә бөтә прогрессив көстәрҙе берләштерерлек киң антифашистик фронт булдырырға саҡыралар.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 835, л. 6.
[2] Шунда уҡ, ф. 472, оп. 6, д. 858, л. 34, 56.

Был бинала (Ленин һәм Революцион урамдары мөйөшө) 1941—1943 йылдарҙа Коминтерн башҡарма комитеты урынлашҡан. *1975 йылғы фотография.*



Коминтерндың етәкселәре икенсе донъя һуғышы барышында килеп тыуған актуаль теоретик проблемаларҙы, шул иҫәптән фашизмды тар-мар иткәндән һуң халыҡ демократияһы дәүләтен төҙөү мәсьәләләрен, тикшерәләр. Уларҙың мәҡәләләре «Коммунистик Интернационал» журналында һәм башҡа баҫмаларҙа баҫылып сыға. Журналдың бер нисә һаны (1941 йылда № 10—11, 12, 1942 йылда № 1—2) Өфөлә сыға.

Халыҡ-ара коммунистик хәрәкәттең етәксе кадрҙарын әҙерләү дауам итә. Өфөгә яҡын Кушнаренко ауылында Коминтерн мәктәбе эшләй. Унда төрлө илдәрҙең компартиялары вәкилдәре уҡый. Г. Димитров, Д. Ибаррури, В. Пик мәктәпкә йыш киләләр, унда лекциялар уҡыйҙар.

Коминтерндың сотрудниктары ҡала һәм республиканың тормошо менән ҡыҙыҡһынып торалар, предприятиеларға киләләр, хеҙмәтсәндәр алдында докладтар менән сығыш яһайҙар, кәңәшмәләрҙә ҡатнашалар. Мәҫәлән, Д. Ибаррури 1942 йылдың 7 мартында Халыҡ-ара ҡатын-ҡыҙҙар көнөнә арналған ҡала тантаналы йыйылышында телмәр менән сығыш яһай. Ул хеҙмәтсән ҡатын-ҡыҙҙарҙың интернациональ бурысы хаҡында һөйләй, ҡаланың бөтә ҡатын-ҡыҙҙарын илдең оборона ҡеүәтен нығытыу өсөн фиҙакәр хеҙмәткә саҡыра.

Һуғыш йылдарында Өфө хеҙмәтсәндәре яраланған һуғышсыларҙы иғтибар һәм хәстәрлек менән солғап алған. 1941 йылдың июлендә үк ҡалала беренсе госпиталдәр ойошторола, ә 1942 йылдың ноябрендә

улар 20 була; бында 11 мең яраланған кеше дауалана [1]. Госпиталдәр өсөн больницаларҙың, поликлиникаларҙың, мәктәптәрҙең яҡшы бинаһы бирелгән. Унда эшләү өсөн йөҙәрләгән врачтар, медицина сестралары ебәрелә. Предприятиелар һәм учреждениелар госпиталдәрҙе шефҡа алалар, уларға яғыулыҡ әҙерләүҙә, китапханалар ойоштороуҙа, дауаланып ятҡан һуғышсыларҙы культуралы хеҙмәтләндереүҙә ярҙам итәләр. Медицина персоналдарының арыу-талыу белмәй эшләүе, йәмәғәтселектең ярҙамы яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Яраланғандарҙың 50 проценттан ашыуы һауыҡҡандан һуң хеҙмәткә ҡайта.

Өфөләр етем ҡалған балалар хаҡында ла ҙур хәстәрлек күргән. Ҡалала фронт полосаһынан сығарылған балалар йорттары урынлаштырыла. Тимер юл вокзалында ойошторолған махсус бүлмә аша эвакуациянан килгән меңәрләгән бала үтә. Мәскәүҙең «Красный богатырь фабрикаһы коллективының өлгөһөндә 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһының унарлаған эшселәре етем балаларҙы ҡарауға алған. Был башланғыс башҡа предприятиеларҙа ла күтәреп алына.

Ауырыу һәм йонсоған үҫмерҙәрҙе һауыҡтырыу буйынса саралар күрелә. 1942 йылдың декабрендә ВЛКСМ Үҙәк Комитетының ҡарары буйынса Өфөлә балалар санаторийы асыла. Ике йыл эсендә унда 3370 кеше дауалана [2]. Бынан тыш 1943 йылда 600 урынлыҡ йәйге санаторий һәм туберкулез интоксикацияһы менән булған балалар өсөн 75 урынлыҡ санаторий асыла [3].

1942 йылдың ноябренән Ватан һуғышы инвалидтарына ярҙам күрһәтеү буйынса Өфө ҡала комиссияһы эшләй. Йәмәғәтселектең киң ярҙамы менән ул инвалидтарҙы уҡытыу һәм эшкә урынлаштырыуҙы ойоштора, уларға материаль ярҙам күрһәтә. Туғыҙ госпиталдә счетоводтар, бухгалтерҙар, тегеүселәр, телеграфистар, умартасылар курстары эшләй. Ҡыҙыл Армия йортонда яралыларҙы ун һөнәр буйынса уҡытыу алып барыла. 1945 йылға 2,5 мең һуғыш инвалиды эшкә урынлаштырыла. Инвалидтарға һәм фронтовиктар ғаиләләренә ярҙам күрһәтеү буйынса бер нисә тапҡыр айлыҡ үткәрелә. Һуғыш йылдарында уларға 355 мең һум бер тапҡыр күрһәтелә торған материаль ярҙам бирелә, 7 мең кубометрҙан ашыу утын килтерелә, йорттар һәм квартиралар ремонтлау өсөн 73 мең һум ссуда бүленә [4].

Халыҡты аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙары менән тәьмин итеүҙә, уларҙы культура-көнкүреш яғынан хеҙмәтләндереүҙә һуғыш ҙур ауырлыҡтар тыуҙырған. 1941 йылдың август—сентябрь айҙарында Өфөлә, башҡа ҡалаларҙағы кеүек үк, икмәккә, шәкәргә, кондитер изделиеларына, ә 1 ноябрҙән — ит, балыҡ продукттарына, майға, ярмаға, макаронға карточка индерелгән. Хеҙмәтсәндәрҙе тәьмин итеү нормаһы уларҙың башҡарған эшенә ҡарап бүленгән.

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1672, л. 1, 20.
[2] ВЛКСМ-дың Үҙәк архивы, ф. 7, оп. 2, д. 22, л. 17.
[3] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 905, л. 15; д. 906, л. 85.
[4] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 3, д. 326, л. 97.

Ҙур предприятиеларҙа эшселәрҙе тәьмин итеү бүлектәре асылған. Дөйөм туҡланыуҙы киңәйтеүгә етди иғтибар бирелә. 1941 йылдың ноябрендә ҡала Советы башҡарма комитеты ҡарары буйынса өҫтәмә рәүештә 8 ашхана асылған [1].

ВКП(б) Үҙәк Комитеты һәм СССР Халыҡ Комиссарҙары Советының 1942 йылдың 7 апрелендәге «Эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәрҙең ярҙамсы хужалыҡтары һәм йәшелсә баҡсалары өсөн ерҙәр бүлеү хаҡындағы» ҡарарына ярашлы рәүештә Өфөнөң предприятиелары һәм ойошмаларына 25 мең га ер беркетелә [2]. Мәҫәлән, моторҙар эшләү заводы ярҙамсы хужалығының 1 мең га ере, 60 тракторы һәм башҡа ауыл хужалығы машиналары була. Ярҙамсы хужалыҡтарҙа етештерелгән продукттар эшселәр туҡланыуын яҡшыртыу маҡсаттарында файҙаланыла. Һуғыш йылдарында киң үҫеш алған коллектив һәм индивидуаль йәшелсәселек мөһим ярҙамсы була.

Ҡала кешеләренә ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәре аҙыҡ менән ҙур ярҙам күрһәткән. 1942 йылдың көҙөндә колхозсылар араһында үҙ запастарынан оборона предприятиелары эшселәренә дәүләт әҙерләүҙәр хаҡы буйынса һатыу өсөн продукттар бүлеү хәрәкәте башланған. Был инициативаны беренсе булып Тәтешле районы колхозсылары күрһәткән. Улар 1943 йылдың ғинуарында Өфөгә Ҡыҙыл ылау менән 150 йөк аҙыҡ оҙатҡан.

Ҡаланың да ауылға ярҙамы көсәйгән. Предприятиелар коллективтары МТС-тарға, совхоздарға һәм колхоздарға шефлыҡ иткән, тракторҙар һәм комбайндар ремонтлау өсөн күсмә механика мастерскойҙары, эшселәр бригадалары ебәргән. Ауылға шефлыҡ ярҙамы күрһәтеүҙең инициаторы булып 1942 йылдың февралендә тау ҡорамалдары заводы сығыш яһай. Уның өлгөһөнә бөтә ҙур промышленность предприятиелары һәм төҙөлөш трестары ҡушылған. Улар 1942—1943 йылдарҙа республиканың 30 МТС-ына һәм 16 совхозына шефлыҡ иткән [3].

1942 йылдың йәйендә Өфөнән бөтә был хужалыҡтарға ремонт бригадалары килгән. Предприятиелар МТС-тарға, совхоз һәм колхоздарға 250 мең һумлыҡ төрлө материалдар һәм инструменттар биргән [4]. Тракторҙар һәм ауыл хужалығы машиналары өсөн запас частар етештереү ойошторола. 1943 йылда бары мотор эшләүселәр генә 204 мең һумлыҡ запас частар етештергән [5].

1945 йылда ҡайһы бер завод коллективтары 33 күсмә ремонт мастерскойы, шулай уҡ 20 металл киҫеүсе станок эшләп үҙҙәре шефлыҡ иткән МТС-тарға ебәргән [6].

---

[1] ЦГА БАССР. ф. 91. оп. 2. д. 835, л. 5.
[2] ПА БОК КПСС. ф. 342. оп. 2, д. 1716. л. 10.
[3] Шунда уҡ, ф. 122. оп. 21, д. 21, л. 68; оп. 23, д. 579, л. 3.
[4] Шунда уҡ, ф. 342, оп. 2. д. 1651, л. 48.
[5] Шунда уҡ. ф. 122. оп. 23. д. 25. л. 98.
[6] Шунда уҡ, ф. 3151, оп. 1. д. 30, л. 160.

Ҡала партия ойошмаһы МТС-тарҙы һәм колхоздарҙы етәксе кадрҙар менән нығытыу тураһында хәстәрлек күргән. ВКП(б)-ның ҡала комитеты бюроһы ҡарарҙары менән партия һәм комсомол активынан 230 кеше ауылға даими эшкә ебәрелгән.

Өфөләр ауыл хужалығы эштәрендә актив ҡатнашҡан. Мәҫәлән, 1942 йылда партия һәм совет органдары игән утау һәм йыйыу эшенә 10 меңдән ашыу кеше ебәргән. Меңәрләгән эшсе, хеҙмәткәр, уҡыусы колхоз һәм совхоздарға алдағы йылдарҙа ла ярҙам иткән.

Ҡала предприятиелары һәм учреждениелары коллективтары ауылда масса-политик эште йәйелдереүгә бөтә яҡлап булышлыҡ иткән. Улар ҡыҙыл мөйөштәр йыһазландырған, агитацион бригадалар, художество үҙешмәкәр түңәрәктәр ебәргән. 1942 йылда бары тик Ленин районы колхоздарға һәм совхоздарға 8 мең китап, 800 төрлө музыка инструменттары, 650 комплект шахмат һәм шашка биргән. Сәсеү һәм урып-йыйыу кампанияларында 25 агитбригада [1] ауылға сыҡҡан.

Өфө хеҙмәтсәндәре, Башҡортостан хеҙмәтсәндәре кеүек үк, немец-фашист оккупацияһынан зыян күреүсе райондарға ҙур ярҙам күрһәткән. Ул төрлө формала булған. 1943 йылдың 4 апрелендә өфөләр йәштәрҙең дөйөм республика субботнигында ҡатнаша. 14 августа ҡаланың промышленность предприятиеларында воскресник булып үтә. Был көндәрҙә эшләгән аҡса Сталинградты аяҡҡа баҫтырыу фондына ебәрелә. Бынан тыш, ҡала кешеләре 6 меңдән ашыу китап, күп кенә уҡыу-яҙыу әсбаптары, балалар кейеме, шулай уҡ 150 мең һум аҡса йыйған [2]. Был средстволар Сталинград ҡалаһында Салауат Юлаев исемендәге урта мәктәп төҙөүгә киткән республика фондына ингән. 1943 йылдың майында аяҡҡа баҫтырыу эштәрендә туранан-тура ҡатнашырға теләүсе йөҙәрләгән Өфө ҡыҙҙары һәм йәштәре герой ҡалаға киткән.

1943 йылдың 1 сентябрендә Моторҙар эшләү заводы коллективы республиканың бөтә хеҙмәтсәндәренә азат ителгән райондарҙың хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙа актив ҡатнашырға саҡырып мөрәжәғәт иткән. Завод эшселәре эштән һуң Украина ССР-ының Ворошиловград өлкәһенә ебәрергә әҙерләнгән тракторҙарға запас частар әҙерләгән. Башҡа предприятиеларҙа пландан тыш элемтә средстволары, электр йыһаздары, төҙөлөш материалдары һәм башҡалар эшләнгән. Күп кенә коллективтар көнбайыш өлкәләр халҡына ярҙам фондына үҙҙәренең бер көнлөк эш хаҡын индергән. 1943 йылдың октябрь урталарында Башҡортостандан Украинаға промышленность йыһаздары менән беренсе эшелон киткән. 1943—1944 йылдарҙа Өфө хеҙмәтсәндәре ворошиловградсыларға 95 станок, 45 мотор, 18 йәшник электр

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 608, оп. 13, д. 215, л. 58.

[2] Шунда уҡ, д. 214, л. 9.

приборҙары, 15 тонна ҡорос, 80 кубометр ағас һәм башҡа материалдар ебәргән [1].

Ҡаланың комсомол ойошмалары Донецк күмер бассейнын яңынан тергеҙеүгә ярҙам итәләр. ВЛКСМ-дың Өфө ҡала комитеты бюроһы ҡарары буйынса йәш эшселәр шахталар өсөн торлө инструменттар әҙерләйҙәр һәм реставрациялайҙар, электр слесарҙарына йөҙәрләгән набор комплектлайҙар.

Дошман оккупацияһынан азат ителгән райондарға хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыуҙа ярҙам күрһәтеү СССР халыҡтарының һуғыш йылдарындағы туғандаш дуҫлығы нығыуының һәм хеҙмәттәшлегенең асыҡ сағылышы булып тора.

1944 йылда ҡаланың административ бүленешендә үҙгәрештәр була. Тоньяҡ өлөштә промышленностың йылдам үҫеүенә бәйле рәүештә РСФСР Верховный Советы Президиумының 1944 йыл, 5 декабрь Указы менән Сталин районы Черниковск ҡалаһына үҙгәртеп ҡорола. Аҙ ғына элегерәк, 1944 йылдың 6 март Указы буйынса Дим эшселәр поселогы Өфө составына район сифатында индерелә.

1944 йылда өфөләр республиканың бөтә хеҙмәтсәндәре менән бергә Башҡорт АССР-ының ойошторолоуына 25 йыл тулыуҙы ҙур патриотик күтәренкелек шарттарында билдәләп үтә. 25—26 мартта Өфөлә Верховный Советтың юбилей сессияһы була. Сессия эшендә промышленность һәм ауыл хужалығы алдынғылары, партия һәм совет работниктары, һуғыштарҙа дан алған яугирҙәр ҡатнаша. Мәскәүҙән, Украина һәм Ҡаҙаҡ ССР-ынан, Татар һәм Сыуаш АССР-ынан, күрше өлкәләрҙән ҡунаҡтар килгән.

Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте республиканың сирек быуат эсендә өлгәшкән уңыштарын тейешенсә баһалай. ВКП(б) Үҙәк Комитетының һәм СССР Халыҡ Комиссарҙары Советының ҡотлауында һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтарҙа экономика һәм культура өлкәһендәге ҙур уңыштар тураһында, хеҙмәтсәндәрҙең тылдағы һәм Бөйөк Ватан һуғышы фронттарындағы героик батырлыҡтары тураһында әйтелә. Ошо юғары баһаға яуап итеп, Башҡортостан хеҙмәтсәндәре партия Үҙәк Комитетына һәм Совет хөкүмәтенә хат ебәргән. Был хатта дошманды тулыһынса еңеү өсөн Ҡыҙыл Армияны кәрәк булған бөтә нәмә менән тәьмин итергә көстәрен йәлләмәйәсәктәре тураһында белдергәндәр. Хатҡа республиканың 1 миллион 62 мең кешеһе ҡул ҡуйған [2].

## § 2. Өфө хеҙмәтсәндәре — фронтҡа

Һуғыштың тәүге көндәренән үк ҡала хужалығын хәрби тәртипкә үҙгәртеп ҡороу, фронтҡа һәр яҡлап ярҙам ойоштороу буйынса эш йәйелдерелә. 1941 йылдың йәйге һәм көҙгө ауыр көндәрендә Өфө

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 933, оп. 1, д. 4299, л. 17—30.

[2] «Красная Башкирия», 1944, 23 март.

эшселәре иң яуаплы мәсьәлә — хәрби продукция үҙләштереү, транспорт эшен яҡшыртыу, эвакуацияланып килгән предприятиеларҙы сафҡа индереүҙе башҡара. Нефть эшкәртеү заводын киңәйтеү буйынса ашығыс саралар күрелә. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә хәрби самолеттар өсөн бензиндың юғары октанлы сорттарын, ауыл хужалығы өсөн яғыу һәм майлау материалдарын етештереү яйға һалына.

Паровоздар ремонтлау заводы «ФД» маркалы ҡеүәтле локомотивтар ремонтлауға, ә уның айырым цехтары һуғыш припастары етештереүгә керешә. Дәүләт Оборона Комитеты заданиеһы буйынса 10 паровоз ҡаты яғыулыҡтан шыйыҡ яғыулыҡҡа күсерелгән. 1942—1943 йылдарҙа завод коллективы дүрт бронепоезд: «Александр Невский, «Полководец Суворов», «Салауат Юлаев» һәм «Өфө» бронепоездарын төҙөп, фронтҡа ебәргән.

Өфө автомобилдәр ремонтлау заводы Оборона халыҡ комиссариаты өсөн автомобилдәр ремонтлау буйынса заданиелар үтәй. Черниковск ағас-фанера комбинаты авиация промышленносы, артиллерия саңғылары өсөн фанера етештереүҙе үҙләштерә. Кизе-мамыҡ комбинаты хәрби кейем һәм техник туҡымалар сығара. 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы, XVIII партсъезд исемендәге артель ҡыҫҡа тундар, шинелдәр, гимнастеркалар, салбарҙар, бүректәр, пилоткалар һәм эске кейемдәр теккән. Башкоопромсовет һәм Башкоопинсоюз предприятиелары арбалар, сбруйҙар, поход кухнялары, патрон сумкалары, саңғылар, тимер сыбыҡтан эшләнгән заграждениеларҙы үтеп сыҡҡанда ҡулланыла торған ҡыпһыуырҙар һәм башҡа инструменттар етештергән. Аҙыҡ промышленносы предприятиелары ла фронт ихтыяждары өсөн эшләгән. Мәҫәлән, витамин заводы яралы һуғышсыларҙы дауалағанда ҙур эффект биреүсе препараттар сығарған.

Ҡалала ҙур ғына капиталь төҙөлөш йәйелдерелгән. Бары тик «Өфөнефтезаводстрой» тресы ғына Химия промышленносы халыҡ комиссариатының ике яңы заводын, шулай уҡ эшләүсе дүрт предприятиеның яңы цехтарын төҙөгән.

Ҡаланың электр энергияһына булған үҫә барыусы ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн Өфөнөң Үҙәк электр станцияһында, беренсе һәм икенсе һанлы ТЭЦ-тарҙа өҫтәмә ҡеүәттәр сафҡа индерелә, юғары вольтлы яңы электр тапшырыу линиялары һалына, ҡала подстанцияһы, трансформатор пункттары төҙөлә.

Һуғыш осоро шарттарына ярашлы рәүештә тимер юл үҙәгенең эше үҙгәртелә. Поездарҙың хәрәкәт итеүе яңы графикка күсерелә, юлдың йөк үткәреү һәләтлеге арта. Өфөнөң тимер юлсылары Себерҙән һәм Уралдан ағылыусы һалдаттарҙың һәм хәрби йөктәрҙең фронтҡа туҡтауһыҙ китеүен тәьмин итә.

Ҡаланың промышленносын, төҙөлөшөн һәм транспортын эшсе көстәр менән тәьмин итеү мөһим һәм ауыр проблемаларҙың береһе була. Меңәрләгән эшселәр һәм белгестәр фронтҡа киткәйне. Станоктар артына квалификацияһы булмаған ҡатындар, үҫмерҙәр баҫҡай-

«Полководец Суворов» бронепоезы. 1942 йыл.



ны. Эвакуацияланған завод һәм фабрикаларҙың эшселәре тулы булмаған составта килеүе хәлде ҡатмарлаштырғайны. Күп тигәндә һуғышҡа тиклемге коллективтың өстән бере генә килгәйне.

Совет хөкүмәте хеҙмәт ресурстарын рациональ файҙаланыуға йүнәлдерелгән саралар күрә. Эш көнөнөң дауамы арттырыла, сираттағы отпускылар аҡса түләү менән алмаштырыла. Ҡала халҡының етештереү хеҙмәте менән шөғөлләнмәгән өлөшөн промышленноста һәм төҙөлөштә эшләүгә мобилизациялау үткәрелә. 1942—1945 йылдарҙа ҡаланың эре предприятиеларына 10 меңдән ашыу өфөлө йәлеп ителгән[1]. Бынан тыш, Өфө промышленносына һәм төҙөлөштәренә ауыл ерҙәренән меңәрләгән кеше ебәрелгән.

Шулай итеп, хеҙмәткә яраҡлы ҡала һәм ауыл халҡы, күбеһенсә ҡатындар һәм йәштәр, һуғыш йылдарында эшсе көстәрен тулыландырыуҙың төп сығанағы була. Мәскәүҙән, Ленинградтан, Харьковтан, Рыбинскиҙан һәм башҡа ҡалаларҙан предприятиелары менән эвакуацияланып килеүселәр Өфө эшселәре составына ҡушылған. Был кадрҙар, күпселектә квалификациялы кадрҙар, йәш эшселәрҙе өйрәтеүҙә ҙур роль уйнай. Һуғыш алдынан пенсияға киткән өлкән быуын эшселәре станоктар артына кире ҡайтҡан. Улар ҙа үҙҙәренең бай тәжрибәләрен йәштәргә биргән.

Производствоға күп һанлы йәштәр килеү сәбәпле, уларҙың квалификацияһын күтәреү беренсе дәрәжәләге бурыс була. Бригада ысулы менән һәм айырым уҡытыу массовый профессия кадрҙары әҙерләүҙең төп методы була. Ҡатмарлыраҡ һөнәрҙәрҙе үҙләштереү

[1] ЦГА БАССР, ф. 933, оп. 1, д. 3508, л. 10; д. 4038, л. 2—4.

өсөп курстар ойоштороla. 1944 йылда ғына ҡаланың 49 предприятиеһында һәм төҙөлөшөндә 16,4 мең эшсе үҙҙәренең квалификацияһын күтәргән [1].

Дәүләт хеҙмәт резервтары системаһы квалификациялы эшселәр әҙерләүҙең икенсе мөһим формаһы була. Һуғыш йылдарында һөнәрселек училищеларында һәм ФЗО мәктәптәрендә уҡытыу сроктары ҡыҫҡартыла, уҡыусылар һаны арта. Был уҡыу йорттарының селтәрҙәре Өфөлә киңәйтелгән. Эвакуация буйынса Ленинград училищеларынан һәм мәктәптәренән 420 уҡыусы, Рыбинскиҙан металлистарҙың һөнәрселек училищеһы һәм башҡалар килгән [2]. 1942 йылдың аҙағына өс һөнәрселек, бер тимер юл училищеһында һәм туғыҙ ФЗО мәктәбендә 6925 кеше уҡыған [3].

Эшселәрҙең, инженер-техник работниктарҙың фиҙакәр хеҙмәте, промышленность продукцияһы сығарыуҙы арттырыуҙың, фронтты бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеүҙең мөһим шарты була. Һуғыштың тәүге көндәренән үк предприятиелар коллективтары ҙур рух күтәренкелеге менән эшләй башлай. «Бөтәһе лә фронт өсөн, бөтәһе лә дошманды еңеү өсөн!» — лозунгыһы аҫтында хәрби заказдарҙы тиҙерәк үтәү өсөн хәрәкәт йәйелдерелә.

Мәскәү, Горький, Свердловск комсомолецтары: «Үҙең өсөн генә түгел, ә фронтҡа киткән иптәшең өсөн дә эшләргә»,— тигән башланғыс менән сығыш яһай. Ике йөҙсөләр, өс йөҙсөләр, меңселәр, йәғни үҙҙәренең удар хеҙмәте менән етештереү нормаларын ике, өс, ун тапҡыр арттырып үтәүселәр, барлыҡҡа килә. Бер нисә һөнәрҙе башҡарыу һәм күп станокты хеҙмәтләндереү хәрәкәте үҫә.

Өфө паровоздар депоһында А. Захаров һәм М. Сибәғәтуллин һуғыштың тәүге көндәренән үк смена нормаларын 200—300 процентҡа үтәй башлай, машинистар А. Арефьев, А. Яковлев паровоздарҙың тәүлектә үткән юлын ике тапҡырға арттырған [4]. Моторҙар эшләү заводы эшселәре А. Микрюков, М. Ғәббәсов, тау ҡорамалдары заводы эшселәре Ф. Малышев, Е. Колосовский, А. Ғәзизов смена заданиеларын 4—5 тапҡырға арттырып үтәгән [5]. Паровоздар ремонтлау заводында И. Сергеевтың ҡаҙансылар бригадаһы 3 көн эсендә һуғышҡа тиклем 12 көн талап ителгән эш күләмен башҡарып сыҡҡан. Башта унарлаған һәм йөҙәрләгән, аҙаҡ меңәрләгән алдынғы производственник ике йөҙсөләр, өс йөҙсөләр хәрәкәтенә ҡушылған. 1941 йылдың 1 сентябренә паровоз ремонтлау заводында һәр дүртенсе эшсе ике йөҙсө булған [6].

Тимер юл транспортында 1940 йылда барлыҡҡа килгән Лунин хәрәкәте үҫә. Новосибирск депоһы машинисы Н. А. Лунин миҫалын-

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 472, оп. 6, д. 891, л. 87.
[2] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 21, д. 5, л. 71, 80.
[3] Шунда уҡ, ф. 342, оп. 2, д. 1650, л. 12.
[4] «Ҡыҙыл Башҡортостан», 1941. 28 июнь.
[5] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 21, д. 9, л. 207; ф. 342, оп. 2, д. 1318, л. 18.
[6] «Красная Башкирия», 1941, 25 сентябрь.

да паровоз бригадалары үҙ көстәре менән үҙҙәренең паровоздарын ремонтлай. Улар ҙур средстволар ғына экономиялап ҡалмай, ә ремонттың сифатын күтәрә, локомотивтарҙың йыуыу араһындағы юл үтеүен арттыра. Өфө һәм Дим деполарында лунинсылар һаны 1941 йылдың июль — сентябрь айҙарында ике тапҡырға артҡан.

1941 йылдың октябрендә Өфө паровоздар депоһының машинистары Туманов һәм Засыпкин үҙҙәренең паровозын хәрбиләштерелгән тип, ә паровоз бригадаһын хәрби подразделение тип белдергән. Уларҙың өлгөһөнә эйәреп, Өфө юлсыларының һәм башҡа станцияларҙың коллективтары үҙҙәрен хәрби подразделение тип иғлан иткән һәм етештереү заданиеларын хәрби приказ кеүек үтәй башлаған. Машинистар паровоздарҙың депоға инмәй йөрөүен оҙонайтҡандар, юлсылар поездарҙы ҡабул итеү һәм тапшырыу ваҡытын ҡыҫҡартҡандар.

Өфө юл бүлексәһенең иң яҡшы машинистарының береһе коммунист П. Домират «ун биш меңселәр» — паровоздарҙың йыуыу араһында ремонт яһамайынса 15 мең километр юлды үтеүенә өлгәшеүсе паровоз бригадалары ярышына етәкселек иткән. Ярышыусылар етешһеҙлектәрҙе юлда бөтөрәләр, паровоздарҙың тәүлек эсендә үткән юлын байтаҡҡа арттыралар.

1941 йылда Октябрь революцияһы байрамы алдынан Уралмашзавод һәм Горький автозаводы комсомолецтары инициативаһы буйынса комсомол-йәштәр бригадаларының фронт бригадаһы тигән исемде алыу өсөн ярышы башлана *. «Хеҙмәттә һуғыштағы кеүек!» — тигән лозунг уларҙың девизы булған. Башҡортостанда бындай беренсе бригада Өфө моторҙар эшләү заводы цехтарының береһендә мастер М. Д. Рахманғолов сменаһында барлыҡҡа килә. Бригада башта заданиены 1,5—2 тапҡырға, ә аҙаҡ 3 тапҡырға арттырып үтәй. Уға Советтар Союзы Геройы Н. Ф. Гастелло исемендәге фронт бригадаһы тигән исем бирелә. Аҙаҡ комсомол-йәштәр бригадалары ҡаланың бөтә ҙур предприятиеларында барлыҡҡа килгән.

1942 йылда, ВКП(б) Үҙәк Комитетының фронтҡа ярҙамды көсәйтеү тураһындағы Беренсе май саҡырыуына яуап итеп, хеҙмәтсәндәрҙең социалистик ярышы яңы көс менән ҡыҙып киткән. Илдең ҡайһы бер предприятиелары коллективтары, шул иҫәптән Өфө моторҙар эшләү заводы коллективы, промышленность тармаҡтары буйынса Бөтә Союз ярышын башларға тәҡдим индергән. Партия Үҙәк Комитеты был башланғысты хуплаған. Еңеүселәр өсөн Дәүләт Оборона Комитетының, ВКП(б) Үҙәк Комитетының, ВЦСПС-тың һәм халыҡ комиссариаттарының күсмә Ҡыҙыл байраҡтары булдырыла. Бынан тыш, производство алдынғыларын бүләкләү өсөн аҡса бүленә.

---

* Фронт бригадаһы тигән исем пландарын даими рәүештә 150—200 процентҡа үтәгән, бригаданың бөтә ағзалары ла юғары квалификацияға өлгәшкән, производствола һәм көнкүрештә өлгөлө булған бригадаларға бирелгән.

Ҡаланың партия һәм комсомол ойошмалары халыҡ башланғысын таратыу өсөн актив тотона. Май—июнь айҙарында ВКП(б) ҡала комитетының, район комитеттарының пленумдары булып үтә. Унда ярышты киңәйтеү тураһындағы мәсьәлә ҡарала. Предприятиеларҙа ҙур масса-политик эш башҡарыла. Партия ойошмалары һуғыш шарттарында аңлатыу эше тураһындағы Ленин күрһәтмәләренән сығып эш итә. «Бер йыйылыш та, бер кәңәшмә лә,— тип күрһәткән Ленин,— шундай мәсьәлә беренсе урынға ҡуйылмайынса үтмәһен: һуғышҡа ярҙам итеү өсөн бөтәһен дә эшләнекме икән, көсөбөҙ етерлек тиклем һалынғанмы, фронтҡа етерлек тиклем ярҙам ебәрелгәнме?» [1]

Өфөлә промышленностың бөтә тармаҡ предприятиелары Бөтә Союз ярышына ҡушылған. 1942 йылда мотор төҙөүселәр коллективы ҙур уңыштарға өлгәшкән. Бында 290 комсомол-йәштәр бригадаһы эшләгән. Август айында заводҡа Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағы бирелгән. Үҙ тармағы предприятиеларының ярышында нефть эшкәртеү заводы айырылып торған. 1942 йылда ул төрлө нефть продукттарын 1940 йылдағыға ҡарағанда 2,2 тапҡыр артыҡ етештергән. Коллектив Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағын алған һәм уны һуғыштың аҙағына тиклем үҙендә тотҡан.

Производствола туранан-тура эшләгән коммунистар ярышта алдынғы ролде уйнаған. Мәҫәлән, паровоздар ремонтлау заводында Бөтә Союз ярышы башланған саҡта уҡ коммунистар стахановсылар вахтаһына баҫҡан. 1942 йылдың июле аҙағына, үҙҙәренең миҫалдары менән хеҙмәт етештереүсәнлегенең дөйөм күтәрелешенә булышлыҡ итеп, бөтә партия ағзалары тип әйтерлек смена заданиеларын 2—3 тапҡырға арттырып үтәгән. Заводҡа шулай уҡ Дәүләт Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағы тапшырылған.

Бөтә Союз социалистик ярышы шунда уҡ һиҙелерлек һөҙөмтәләр биргән. Фронтҡа киткәндәрҙе алыштырған яңы эшселәр хеҙмәт күнекмәләрен тиҙ үҙләштергән, һаман күберәк кешеләр етештереү нормаларын үтәгән. Ҡала предприятиеларында 1942 йылдың апреленән октябренә тиклем продукция етештереү дөйөм алғанда 73 процентҡа артҡан [2].

1943 йылдың башында Куйбышев хеҙмәтсәндәре пландарҙы арттырып үтәү иҫәбенә Ҡыҙыл Армия Верховный Баш командованиеһының махсус фондын булдырырға тәҡдим итә. Эшселәр синыфы был инициативаны бөтә ерҙә лә күтәреп алған. Өфөлә беренсе булып паровоздар ремонтлау заводы был саҡырыуға ҡушылған. Бында удар айлыҡ иғлан ителгән, эшселәр фронт вахтаһына баҫҡан. Өфө узелы тимер юлсылары пландан тыш 64 ауыр йөк поезы үткәргән. Киров

---

[1] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы. 41-се том, 117, 118-се биттәр.

[2] Гибадуллин Б. Г. Советская Башкирия в годы Великой Отечественной войны. Өфө, 1971, 118-се бит.

Советтар Союзы Геройы Н. Ф. Гастелло исемендәге фронт-комсомол йәштәр бригадаһы.



районы предприятиелары ғына 1943 йылда 70 миллион һумлыҡ[1] өҫтәмә продукция эшләп сығарған.

Партия һәм комсомол ойошмалары комсомол-йәштәр бригадаларының ярышын артабан киңәйтеү сараларын күргән. 1943 йылдың авгусында Өфөлә эшсе йәштәрҙең республика съезы булып үтә, унда 600 кеше килгән. Делегаттар, шул иҫәптән өфөләр, хеҙмәтте ойоштороу тәжрибәһе менән, уның етештереүсәнлеген күтәреү методтары менән уртаҡлашҡан. Съезд Башҡортостандың бөтә йәш эшселәренә комсомолдың 25 йыллығын яңы хеҙмәт уңыштары менән ҡаршыларға тигән мөрәжәғәт ҡабул иткән. Съезда ҡатнашыусылар Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһына ҡотлау хаты ебәргән. Унда былай яҙылғайны: «Беҙ бер уй, һеҙҙең батырлығығыҙға лайыҡлы булыу, фронтҡа ярҙамды ике һәм ос тапҡыр арттырыу, Ҡыҙыл Армияға дошманды ҡыйратырға ярҙам итеү теләге менән йәшәйбеҙ. Беҙ һеҙҙең осоп һуғыш ҡоралы һәм кейем-һалым әҙерләйбеҙ, уны һеҙгә күпме кәрәк, шул тиклем бирәсәкбеҙ»[2].

1943 йылдың көҙөндә Коммунистар партияһы саҡырыуы буйынса комсомол-йәштәр бригадалары «Аҙ эшселәр менән күп оборона продукцияһы» тигән хәрәкәт йәйелдерәләр. Өфөлә ярыштың был методы тәү башлап моторҙар эшләү заводында йәйелдерелә. Мәҫәлән, производствоны ағым методына күсереү һәм технологик процестарҙы камиллаштырыу иҫәбенә Мария Привезенцеваның комсо-

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1775, л. 6.
[2] Шунда уҡ, ф. 122, оп. 23, д. 79, л. 64.

мол-йәштәр бригадаһы 12 кешенең 8-ен бушата һәм шул уҡ ваҡытта заданиеһын ике тапҡырҙан күберәккә арттырып үтәй. М. М. Привезенцева Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы ордены менән наградлана [1]. 1944 йылдың башына ҡала предприятиеларында йәштәр бригадаларынан 600 эшсе бушатыла, улар кеше етешмәгән производство участкаларына күсә.

Хеҙмәтсәндәрҙең патриотизмы, ижади инициативалары республикала 1944 йылдың башында Башҡорт АССР-ының 25 йыллығы хөрмәтенә йәйелдерелгән социалистик ярышта асыҡ сағылыш таба. Ярышҡа ҡушылып, өфөләр ҙур производство уңыштарына өлгәшәләр. Моторҙар эшләү, нефть эшкәртеү, паровоздар ремонтлау, витамин заводтары һәм башҡа предприятиелар алған йөкләмәләрен үтәй.

1944 йылдың йәйендә һәм көҙөндә производство заданиеларын ваҡытынан элек үтәү өсөн көрәш тағы ла ҙур көс менән йәйелдерелә. Эшселәр һәм инженер-техник работниктар «иң яҡшы токарь», «иң яҡшы мастер», «иң яҡшы участок начальнигы» һәм башҡа исемдәр өсөн ярыша. Профессиялар буйынса ярыш хеҙмәтсәндәрҙең киң ҡатламын активлаштырырға ярҙам итә. Предприятиеларҙа стахановсылар мәктәбенең һаны арта, техник конференциялар һәм техник минимум буйынса экзамендар үткәрелә. Һөҙөмтәлә моторҙар эшләү заводында бер нисә ай эсендә 400 эшсе профессия буйынса иң яҡшы тигән исем ала. Нефть эшкәртеү заводында, ТЭЦ-та йөҙәрләгән производстворниктар үҙҙәренең разрядтарын арттыра, күптәр «иң яҡшы оператор», «иң яҡшы мастер» тигән исемде яулап ала.

Һуғыш йылдарындағы ярыш үҙенсәлегенең береһе уның массовый характер алыуы ине. Меңәрләгән йәштәр һәм үҫмерҙәр, заводҡа, фабрикаға һәм төҙөлөшкә килеп, тиҙ арала эшсе профессияларына эйә булдылар, хеҙмәт ысулдарын даими камиллаштырҙылар. Ударниктар, стахановсылар, комсомол-йәштәр бригадалары һаны арта. Әгәр 1943 йыл башына Өфөлә 285 комсомол-йәштәр бригадаһы булһа, 1944 йылдың майына ул 1316 ине, шул иҫәптән фронт бригадаһы исемен яулап алған 592 бригада бар ине [2]. 1944 йылдың август айында эшсе йәштәрҙең II республика съезы була. Бында иң яҡшы йәштәр бригадаларының уңыштары билдәләнә.

Промышленностың төрлө тармаҡтарында өлкән һәм урта йәштәге эшселәр юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге өлгөһө күрһәтә: нефть эшкәртеү заводы операторҙары — Е. С. Фролова, М. Б. Шәймөхәмәтов, Н. Ф. Яҡупова; паровоздар ремонтлау заводы эшселәре — Н. М. Суровцев, Н. Н. Чижов; «Өфөнефтезаводстрой» тресы слесары — Я. М. Мөхәмәҙиев; Өфө паровоз депоһы машинистары коммунистар — В. П. Бровко, Г. В. Белобородова; кизе-мамыҡ комбинаты эшселәре А. И. Дроздова, Т. Х. Хәтмуллина һәм башҡа бик күптәр.

Өфөнөң иң ҙур предприятиелары һуғыш йылдарында Дәүләт Оборона Комитетының, ВЦСПС-тың һәм халыҡ комиссариаттарының күс-

[1] ПА БОК КПСС. ф. 342, оп. 3, д. 121, л. 37.
[2] Шунда уҡ, д. 39, л. 58; д. 72, л. 12.

мә Ҡыҙыл байраҡтарын яулап алалар, күп кенә алдынғы йәштәр бригадаларына ВЛКСМ Үҙәк Комитетының һәм ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә Комитетының Почет грамоталары тапшырыла. Производство заданиеларын уңышлы үтәгән өсөн моторҙар эшләү заводы — Ленин һәм Ҡыҙыл Байраҡ ордендары менән, ә нефть эшкәртеү заводы Ленин ордены менән наградлана. Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғас, Дәүләт Оборона Комитетының Ҡыҙыл байраҡтары был предприятиеларға мәңге һаҡлау өсөн бирелә.

Һуғыш йылдарында яңы предприятиеларҙы сафҡа индереү, сафтағыларын киңәйтеү, социалистик ярышты киң йәйелдереү һөҙөмтәһендә Өфөлә етештереү күләмдәре өҙлөкһөҙ артҡан. 1945 йылдың башына промышленность продукцияһы, 1940 йыл менән сағыштырғанда, биш тапҡыр артыҡ етештерелгән [1]. Унарлаған эвакуацияланған заводтарҙы файҙаланыуға тапшырыу иҫәбенә машиналар эшләү ныҡ артҡан. Нефть эшкәртеү икенсе ҙур тармаҡ булған. Өфө нефть эшкәртеү заводы һуғыш йылдарында бензин етештереүҙе өс тапҡырҙан күберәк арттырған. Яңы тармаҡтар: химия промышленносы, электр лампалары заводы, туҡыу, витамин фабрикалары барлыҡҡа килгән. Ағас, күн эшкәртеү, тегеү, аяҡ кейемдәре предприятиеларында производство киңәйгән.

Һуғыш йылдарында Өфө, нигеҙҙә, фронт ихтыяждары өсөн эшләүсе күп тармаҡлы ҙур ҡалаларҙың береһенә әүерелә. Өфөләр, бөтә ил хеҙмәтсәндәре кеүек, фиҙакәр хеҙмәте, ижади инициативаһы менән дошманды еңеүгә үҙ өлөштәрен индерә.

Икеләтә, өсләтә энергия менән эшләп, совет кешеләре бер үк ваҡытта үҙҙәренең материаль средстволары менән фронтҡа ярҙам итәләр. Һуғыштың тәүге көндәрендә үк хеҙмәтсәндәр дәүләттең өҫтәмә материаль һәм аҡса ресурстарын булдырыу тураһында инициатива менән сығалар. Өфөлә лә оборона фондын булдырыу өсөн патриотик хәрәкәт башлана. Тау ҡорамалдары заводы эшселәре үҙҙәренең митингыһында: «Халыҡ средстволары иҫәбенә оборона фондын булдырып, беҙ үҙебеҙҙең мораль-политик берҙәмлегебеҙҙе, гитлерсы бандаларға ҡаршы аяуһыҙ көрәшкә әҙерлегебеҙҙе иҫбат итәбеҙ»,— тип белдергәндәр [2]. Ҡала предприятиелары коллективтары был фондҡа ай һайын бер эш хаҡын индерергә ҡарар итәләр, аҡса средстволары, дәүләт заемдары облигациялары, ҡиммәтле әйберҙәр индергәндәр. 1942 йылдың февраль айына өфөләр күп кеше ҡатнашлығында уҙғарылған субботниктарҙа һәм воскресниктарҙа эшләп алынған эш хаҡтары һәм средстволар иҫәбенә оборона фондына 7 миллион һум аҡса индерәләр. Бынан тыш, 2,7 миллион һум суммаһына дәүләт заемдары облигациялары тапшырылған [3].

---

[1] Формирование и развитие советского рабочего класса Башкирской АССР. Беренсе булек, 249-сы бит.
[2] «Красная Башкирия», 1941, 5 август.
[3] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1565, л. 35.

«Өфө» танкыһы атакала. «Бөйөк Ватан һуғышы» кинофильмынан кадр, 14-се серия.




Комсомол инициативаһы буйынса илдә Ҡыҙыл Армия өсөн боевой техника төҙөүгә средстволар йыйыу башлана. Был хәрәкәткә Өфө комсомолецтары ла ҡушыла. 1941 йылдың октябрь айында улар «Башҡортостан комсомолецы» самолеттар эскадрильяһы төҙөү өсөн средство йыйырға тәҡдим иткән. Уларҙың патриотик башланғыстары бөтә республикала ҡайнар яҡлау таба. Авиаэскадрилья төҙөү өсөн өфөләр 3,3 миллион һум индерәләр [1]. Ҡала хеҙмәтсәндәре «Башҡортостан истребителе», «Башҡортостан нефтсеһе», «БАССР-ҙың 25 йыллығы» исемендәге эскадрилья, «Башҡортостан әлемтәсеһе», «Башҡортостан пионеры» танк колонналары төҙөү өсөн дә средство йыйыуҙа ҡатнашҡан.

Ҡыҙыл Армия һуғышсылары хаҡында хәстәрлек күреү үҙ теләктәре менән йылы әйберҙәр, бүләктәр йыйыуҙа һәм фронтҡа ебәреүҙә лә сағылған. Өфөләр һуғыш йылдарында фронтовиктар өсөн 82 меңдән ашыу йылы әйберҙәр йыйған. 1941—1943 йылдарҙа улар 4 миллион һумдан ашыу торған байрам бүләктәре әҙерләп, фронтҡа ебәргән. Хеҙмәтсәндәр бүләктәр менән бергә боецтарға уларҙы батырлыҡҡа рухландырыусы хаттар ҙа ебәргән. «Ҡәҙерле боецтар,— тип яҙған моторҙар эшләү заводы эшсәндәре.— Һеҙгә ялҡынлы сәләм ебәрәбеҙ һәм беҙҙең ҙур булмаған бүләгебеҙҙе ҡабул итеүегеҙҙе һо-

[1] ПА БОК КПСС, ф. 608, оп. 13, д. 227, л. 8.

райбыҙ. Ул һеҙҙең хаҡтағы хәстәрлегебеҙҙе тағы бер тапҡыр күрһәтеп тора. Көрәшегеҙ һәм яҡлағыҙ беҙҙең Тыуған илебеҙҙе, гитлерсы бандиттарҙы аяуһыҙ туҡмағыҙ» [1].

Фронт менән тығыҙ бәйләнеш, һуғышсылар хаҡында хәстәрлек күреү — ҙур мораль көскә эйә була. Ул командирҙарҙың һәм боецтарҙың һуғышсан рухын, Тыуған ил яҙмышы өсөн уларҙың яуаплылыҡ тойғоһон күтәргән. В. И. Лениндың граждандар һуғышы осоронда «ҡыҙылармеецтарға тылдан күрһәтелгән һәр төрлө ярҙам Ҡыҙыл Армияны һис шикһеҙ көсәйтеүгә килтерә, уларҙың күңелен күтәрә, ауырыуҙар һанын кәметә һәм уларҙың һөжүм итеү һәләтен арттыра» тип әйткән һүҙҙәре яңы көс менән раҫланды [2].

## § 3. Өфөләрҙең хәрби батырлыҡтары

Унар меңләгән өфөләр Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында батырҙарса һуғышты.

Республика территорияһында төҙөлгән соединениелар һәм частар үҙҙәрен аямайынса һуғышты. Улар араһында өфөләр ҙә байтаҡ ине. Һуғыш башланыр алдынан Башҡортостандан көнбайышҡа ебәрелгән 186-сы уҡсылар дивизияһы 1941 йылдың 24 июнендә Көнбайыш Двина йылғаһында Полоцк янында хәрби хәрәкәттәрен башлай. Дивизия Көнбайыш Двинаны аша сығыуҙы тотҡарлап, дошмандың мотомеханизациялы частарының атакаларын аяуһыҙ кире ҡаға, ләкин өҫтөн торған көстәрҙең ҡыҫымы аҫтында позицияһын ҡалдырып китергә мәжбүр була. Артҡа сигенгәндә, ул ауыр һуғыш алып барған, өс тапҡыр ҡамауға эләккән һәм, дошманға ҙур юғалтыуҙар килтереп, унан йырып сыҡҡан. Сентябрь — декабрь айҙарында дивизия Волганың үрге ағымында оборона тота, ә 26 декабрҙә һөжүмгә күскән һәм 1942 йылдың февраль урталарына тиклем, Калинин өлкәһенең тиҫтәләгән ауылын азат итеп, 100 километрҙан ашыуға алға киткән.

186-сы дивизия Курск янында немец-фашист армияларын ҡыйратыуҙа, Белоруссияны, Польшаны азат итеүҙә ҡатнашҡан, Германия территорияһында һуғышҡан. Походтарҙа һәм һуғыштар менән ул 4 мең километрҙан ашыу юл үткән. Дивизия частары тарафынан күп һанда дошман техникаһы юҡ ителгән, 36 мең гитлерсы үлтерелгән һәм яраланган, күп һанда әсирҙәр һәм трофей ҡулға алынган[3]. Боевой заданиеларҙы өлгөлө үтәгәне өсөн дивизия Ҡыҙыл Байраҡ, II дәрәжә Суворов, II дәрәжә Кутузов ордендары менән наградланған. Уға «Брест» исеме бирелгән. Һуғышта дивизияның күп кенә һуғышсылары менән бер рәттән өфөләр — артиллерия полкы коман-

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 2, д. 1318, л. 77.

[2] Ленин В. И. Әҫәрҙәрҙең тулы йыйынтығы, 41-се том, 332—333-сө биттәр.

[3] СССР Оборона министерствоһы архивы, ф. 1437, оп. 1, д. 37, л. 366, 367.

112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы артиллеристары дошманды утҡа тота. 1942 йыл.



диры П. С. Попенко, авторота командиры Г. Я. Хәбибетдинов һәм водителдәр С. П. Арефьев, Г. С. Ғәзизов, Я. В. Луговой һәм башҡалар батырлыҡ күрһәткән.

Совет ғәскәрҙәренең Мәскәү янындағы ҡаршы һөжүме ҡыҙған ваҡытта, 1941 йылдың 26 декабрендә, 361-се уҡсылар дивизияһы һуғышҡа кергән. Калинин фронтының 39-сы армияһы составында ул Елисаветино районында «Шуберт һыҙығын» өҙгән. Дошман тылында партизандар менән бергә хәрәкәт итеп, дивизия частары бер нисә дошман гарнизонын юҡ иткәндәр, дошмандың күп кенә көстәрен тотҡарлағандар. Хәрби уңыштары өсөн дивизия 1942 йылдың мартында гвардия исемен алған. Һуғыш йылдарында ул бөтәһе 1,5 мең ауыл һәм ҡаланы, шул иҫәптән 15 ҡаланы, азат итеүҙә ҡатнашҡан, 57 мең немец һалдатын һәм офицерын сафтан сығарған [1].

Дивизия составында йөҙәрләгән өфөләр ҡыйыу һуғышҡан. Мәҫәлән, һуғышсылар араһында политик-тәрбиәүи эште уңышлы алып барғаны өсөн, һуғышта батырлыҡ күрһәткәне өсөн дивизия политбүлеге начальнигы ярҙамсыһы Ә. Һ. Бикчәнтәев Ҡыҙыл Байраҡ орденына һәм башҡа наградаларға лайыҡ була (хәҙер күренекле башҡорт яҙыусыһы). М. Ф. Әхмәтйәнов, И. В. Исаев, Г. С. Хангилдин ҡыйыу һуғышҡандар.

---

[1] СССР Оборона министерствоһы архивы, ф. 1092, оп. 1, д. 2, л. 72.

1942 йылдың июлендә Брянск фронтында Башҡорт кавалерия дивизияһы тәүге хәрби һынау үтә. Шул уҡ йылдың аҙағында ул Сталинград янында немец-фашист ғәскәрҙәрен ҡыйратыуҙа ҡатнаша, 1943 йылдың ғинуар айында Төньяҡ-Донецҡа сыға һәм ынтылышлы һөжүм менән Белая Калитваны яулап ала. Февраль айында дивизия дошман тылы буйлап рейдта ҡатнаша һәм мөһим оператив бурысты уңышлы хәл иткәне өсөн 16-сы гвардия дивизияһына үҙгәртеп ҡорола. Йөҙәрләгән һалдат боевой награда ала. Оно һуғыштарҙа дивизия ҙур юғалтыуҙар кисергән, уның командиры генерал-майор М. М. Шайморатов та һәләк була.

Башҡорт атлылары 1943 йылдың сентябрендә Чернигов өсөн барған һуғыштарҙа күп батырлыҡтар күрһәтә. Өс көн эсендә улар кеше йәшәгән 24 пунктты, шул иҫәптән Мена, Волосковцы, Березна ҡалаларын, азат итә [1]. Черниговты яулаған ваҡытта оҫта хәрәкәт иткәне өсөн дивизия «Чернигов» исеме ала. Сентябрь аҙағында ул Днепрҙы аша сыға һәм 61-се армияның алдынғы частарына кисеү аша сығыуҙы тәьмин итә. Ҡыйыулыҡ һәм батырлыҡ күрһәткәндәре өсөн тиҫтәләрсә һалдат Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.

16-сы гвардия дивизияһы үҙен Эльбаға тиклемге еңеү юлында бөтмәҫ дан менән ҡаплай. Уның һуғыштағы батырлыҡтары Ленин, Ҡыҙыл Байраҡ, II дәрәжә Суворов һәм II дәрәжә Кутузов ордендары менән билдәләнгән.

Башҡорт кавалерия дивизияһында йөҙәрләгән өфөләр һуғышҡан. Республика Осоавиахим комитеты председателе Д. Ш. Ариткулов дивизия штабының комиссары итеп тәғәйенләнә. Бер үк ваҡытта ул реактив артиллерия батареяһының комиссары ла була. Дошман тылына рейд ваҡытында 1943 йылдың февраль айында Д. Ш. Ариткулов һәләк була. Уның батырлығы Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән билдәләнә. Партия өлкә комитетының элекке работнигы Б. С. Сәйетгәлин полктарҙың береһенең комиссары була. Ул эскадрондарҙы атаҡаға ҡыйыу алып барған, һуғышсыларҙы үҙ өлгөһө менән рухландырған. 1943 йылдың ғинуар айында Б. Сәйетгәлин батырҙарса һәләк була. Дивизияла Өфөнән врачтар Ә. Ғ. Дәүләтов, Ҡ. И. Ҡотлобаева, фельдшерҙар Һ. А. Әхмәтова, Ә. Нафиҡова һәм башҡалар хеҙмәт итә. Хәрби батырлыҡтары өсөн улар хөкүмәт наградаларына лайыҡ булған.

II дәрәжә Суворов һәм II дәрәжә Богдан Хмельницкий орденлы Ҡыҙыл байраҡлы 214-се Кременчуг-Александрия уҡсылар дивизияһы Тыуған ил өсөн ҡыйыу һуғыша. Ул Сталинград, Белгород, Харьков һәм Кременчуг янындағы һуғыштарҙа ҡатнаша, Польша, Чехословакия, Германия территорияһында һуғыша. Һуғыштарҙа өлгө күрһәткән был соединение воиндары араһында өфөләр ҙә була: миномет

---

[1] СССР Оборона министерствоһы архивы, ф. 1094, оп. 35 839, д. 1, л. 5.

взводының командиры В. К. Ғирфанов, рядовойҙар Г. М. Ғилманов, Г. С. Сабиров, И. Т. Филичев һәм башҡалар [1].

Сталинград янындағы һуғышта Башҡортостанда төҙөлгән 124-се айырым уҡсылар бригадаһы ҡатнаша. Уның составында Өфөнән барған һуғышсылар — элемтә офицеры Ғ. Ғ. Әмиров (күренекле башҡорт яҙыусыһы), рота командиры урынбаҫары М. В. Кляковкин, взвод командиры Н. Х. Ғәзизов, рядовойҙар С. К. Әҡсәнов, В. П. Сенякин геройҙарса һуғыша. Салауат Юлаев исемендәге 1292-се Башҡорт танкыға ҡаршы һуғышыусы артиллерия полкы составында күп кенә өфөләр һуғыша.

1941 йылдың көҙөндә Өфөнән үҙ теләге менән 650 комсомолец һауа-десант частарына һайлап алына. Десантсылар дошман тылына емергес удар ҙар яһай, массовый геройлыҡ күрһәтә. 1942 йылдың июль айында десант частарының береһенең командованиеһы ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә комитетына хат ебәрә. Хатта былай тип яҙылғайны: «Немец баҫҡынсыларына ҡаршы көрәштә Башҡортостандың 100 комсомолецы үҙҙәрен Тыуған илдең һәм Коммунистар партияһының тоғро улдары итеп күрһәтте. Улар үҙҙәренең өлгөләре менән башҡа воиндарҙы хәл иткес еңеүгә рухландырҙы [2].

1942 йылдың май башында республика фронтҡа 3,7 мең комсомолка ебәрә, улар араһында Өфө ҡалаһынан 200-ләп ҡыҙ була. Улар зенит-артиллерия һәм зенит-прожектор частарында хеҙмәт итә, Сталинград янында, унан Украинала, Белоруссияла, Польшала, Германияла һуғыша. Хөкүмәт наградаларына лайыҡ булған зенитчицалар араһында Өфө комсомолкалары З. Ф. Мамыкина, А. М. Киреева, Н. А. Косарева, М. А. Исакова һәм башҡалар була.

1943 йылда 254-се полктың 56-сы гвардия уҡсылар дивизияһының рядовойы Өфө комсомол ойошмаһында тәрбиәләнгән Александр Матросовтың үлемһеҙ батырлығы бөтә илгә таралды.

Ҡыҙыл Армия көнөндә, 1943 йылдың 23 февралендә, полктың бер подразделение комсомолецтары хәрби приказды нисегерәк итеп яҡшыраҡ үтәү — дошмандың мөһим терәк пунктын Чернушки ауылын алыу тураһында кәңәшләшәләр. Александр Матросов: «Мин ҡулдарым ҡорал тота алғансы, йөрәгем тибеүҙән туҡтағансы немецтар менән һуғышасаҡмын», — тип белдерә. Таңға табан һуғыш башлана. Дошмандың ике фланг дзоты юҡ ителә, ләкин өсөнсөһөнән, үҙәк дзоттан, немецтар ут асыуҙы дауам итә. Алты автоматчик дзотҡа шыуышып килергә тырышып ҡарай, ләкин уңышһыҙ була: берәүҙәр үлтерелә, икенселәр ауыр яралана. Шул саҡ Матросов алға шыуышып үтә лә автоматтан амбразураға бер-бер артлы атып ебәрә. Дошман пулеметы тынып ҡала, боецтар атакаға ташлана, ләкин бер нисә секундтан пулемет яңынан үлемесле утын аса. Бөтә подразделение-

---

[1] Бирюков Н. И. На огненных рубежах. Өфө, 1969, 184, 185-се биттәр; СССР Оборона министерствоһы архивы, ф. 1274, оп. 159 039, д. 2, л. 46.

[2] ПА БОК КПСС, ф. 341, оп. 7, д. 56, л. 438.

ға үлем япай. Матросов үҙ ғүмерен ҡорбан итеп, еңеү яуларға ҡарар итә. Ул дзотҡа ташлана һәм кәүҙәһе менән амбразураны ҡаплай. Совет яугирҙәре, дәррәү күтәрелеп, дошманға ҡеүәтле ташҡын булып ташлана һәм уны аяуһыҙ көрәштә ҡырып бөтә.

Гвардия рядовойы А. М. Матросовҡа үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. 1943 йылдың 8 сентябрендә СССР Оборона халыҡ комиссары И. В. Сталин приказ сығара. Унда былай тип әйтелгәйне: «Иптәш Матросовтың бөйөк батырлығы Ҡыҙыл Армияның бөтә яугирҙәре өсөн хәрби батырлыҡ һәм геройлыҡ өлгөһө булып хеҙмәт итергә тейеш». Александр Матросовтың исеме 254-се гвардия уҡсылар полкына бирелә, һәләк булған ҡаһарман батыр полктың 1-се ротаһы исемлегенә мәңгегә индерелә. Геройҙың иҫтәлеге Өфө ҡалаһында ла ҡәҙерләп һаҡлана. ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты һәм БАССР Халыҡ Комиссарҙары Советы ҡарары менән уның исеме 64-се урта мәктәпкә, ҡаланың культура һәм ял паркына, балалар хеҙмәт колонияһына, кинотеатрға һәм ҡала урамдарының береһенә бирелә. Һуғыш йылдарында 200-ҙән ашыу яугир дошманды еңеү өсөн шундай уҡ батырлыҡ эшләй һәм үҙ-үҙен ҡорбан итә. Башҡорт АССР-ы Миәкә районы егете гвардия лейтенанты М. Х. Ғобәйҙуллин офицерҙар араһында беренсе булып Александр Матросовтың батырлығын ҡабатлай. Бөтә ил Башҡортостан комсомолы тәрбиәләгән геройҙарҙың үлемһеҙ батырлығын ҡәҙерләп иҫкә ала. 1980 йылдың 8 майында, Еңеү көнө алдынан, «Еңеү» паркында, Ағиҙел йылғаһының бейек ярында, тантаналы шарттарҙа Александр Матросовҡа һәм Миңлеғәли Ғөбәйҙуллинға һәйкәл асылды (авторҙары — Ленин һәм Дәүләт премиялары һәм Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев премияһы лауреаты, скульптор, СССР халыҡ художнигы академик Л. Е. Кербель, архитектор Г. Г. Лебедев). Ул рус һәм башҡорт халыҡтарының, бөтә совет халҡының дөйөм дошманға ҡаршы көрәштә бергә ҡойолған ҡаны менән нығытылған ҡаҡшамаҫ дуҫлығын сағылдыра. Һәйкәл республика хеҙмәтсәндәренең һуғышсан батырлығына хөрмәт билдәһе булып тора, батырлыҡ — ул тимер дисциплина һәм бурысҡа тоғролоҡ икәнде хәтерләтә.

Өфө урман заводының элекке эшсеһе, танкыға ҡаршы ҡорал расчеты командиры Николай Попов үҙен еңеү хаҡына ҡорбан итә. Һуғышта ҡоралы эштән сыҡҡас, ул гранаталар менән дошман танкыһының гусеницаһы аҫтына ташлана һәм уны шартлата. Н. И. Попов Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була [1].

Өфөнән килгән летчиктар күп кенә фронттарҙа үҙҙәрен аямайынса һуғыша. 1941 йылдың июлендә үк авиаэскадрилья командиры капитан Л. В. Михайлов үлемһеҙ батырлыҡ эшләй. Һуғыштарҙың береһендә дошман снарядынан уның самолеты яна башлай һәм бейеклекте юғалта. Михайлов янғын менән солғап алынған машинаһын дошман танкылары колоннаһына йүнәлтә һәм Н. Ф. Гастеллоның батыр-

[1] СССР Оборона министерствоһы архивы, ф. 33, оп. 793 756, д. 38, л. 205.

А. Матросов менән М. Ғөбәйҙуллинға һәйкәл.



М. F. Гәрәев. 1945 йыл, апрель.



лығын ҡабатлай. Ҡыйыу пилотҡа үлгәндән һуң Советтар Союзы Геройы исеме бирелә [1].

1942 йылдың сентябрендә Сталинград янында Өфө авиаклубында тәрбиәләнгән летчик-штурмовик М. F. Гәрәев үҙенең һуғышсан батырлығын башлай. Данлы шоңҡар һуғышты Германияла тамамлай. Ул 250 хәрби осош яһай, дошмандың күп һалдаттарын һәм техникаһын ҡыйрата. 1945 йылдың 23 февралендә М. F. Гәрәевкә Советтар Союзы Геройы исеме бирелә, ә 19 апрелдә ул был юғары исемгә икенсе тапҡыр лайыҡ була.

Сталинград янында, Курск дуғаһында, Белоруссияла илбаҫарҙарға ҡаршы Советтар Союзы Геройы летчик-штурмовик Г. С. Киселев һуғыша. Һуғыштарҙа Г. Киселевты өс тапҡыр бәреп төшөрәләр, ике тапҡыр ул фашистар ҡулына эләгә. Ләкин ул ике тапҡыр пленда ҡаса һәм үҙенең часына ҡайта. Ул унарлаған танк, автомашина, тимер юл эшелондарын юҡ итә [2].

Өфө летчиктары Б. В. Мельников, В. А. Томаров, А. А. Яковлев, Г. Х. Минибаев, А. В. Вакульский, И. В. Пятяри, П. А. Комлев һәм башҡалар Советтар Союзы Геройы була.

Сталинград һәм Мәскәү яндарындағы аяуһыҙ һуғыштарҙа Өфөнән өлкән сержант Г. А. Ветошников ҡатнаша. Днепр буйында һуғыштарҙа уның сапер взводы һөжүм итеүсе частарға йылғаны аша сығыуҙа ярҙам итә. Ветошников сафтан сыҡҡан катер йөрөтөүсене алмаштыра һәм дошмандың көслө уты аҫтында автоматчиктарҙы һәм пулеметчиктарҙы йылға аша сығара. Ул яраланғандан һуң да катерҙы ташламай һәм хәрби бурысты уңышлы үтәй. Шуның өсөн ул Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. 1945 йылда Г. Ветошников һуғышта үлемесле яра ала. Хәҙер ҡала урамдарының береһе уның исемен йөрөтә. Днепрҙы аша сыҡҡанда күрһәткән батырлыҡтары өсөн өфөләр В. П. Доброрезға, Т. Т. Кусимовҡа, Н. П. Мельниковҡа, А. Ф. Михайловҡа, В. И. Черкасовҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелә.

Литваны азат итеүҙә ҡатнашып, батарея командиры И. И. Новожёнов геройҙарса һуғыша. Бөтә артиллеристар ҙа, шулар араһында

---

[1] «Советская Башкирия», 1972, 20 сентябрь.

[2] СССР Оборона министерствоһы архивы, ф. 33, оп. 793756, д. 59, л. 48—50.

И. И. Новоженов та һәләк була, ләкин дошманды ебәрмәйҙәр. Ҡала урамдарының береһе һәм ул уҡыған 57-се мәктәптең пионер дружинаһы Советтар Союзы Геройы И. И. Новоженовтың исемен йөрөтә.



Г. А. Ветошников.

Польша ерендәге һуғыштарҙа танк механик-водителе С. И. Зорин да дан ҡаҙана. Эксен ҡалаһы янында ул беренсе булып дошман позицияларына бәреп инә һәм уның 7 ут нөктәһен юҡ итә. Шуның өсөн Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Һуғыштан һуң ул Өфө ҡалаһының 1-се трамвай депоһында эшләй. Депо уның исеме менән аталған.

Германия территорияһындағы һуғыштарҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн өфөләр — кавалерия полкы командиры П. И. Иванов, взвод командиры А. Н. Степанов Советтар Союзы Геройы исеме алдылар.

Бер нисә танҡыр фиҙакәрлек һәм ҡыйыулыҡ күрһәткәндәре өсөн Башҡортостандан егерме һалдат Дан орденының тулы кавалеры булды. Уларҙың икеһе — Ю. А. Ларин, П. Д. Попов — Өфө егеттәре.

Ҡаланың башҡа яугирҙәре — фронтовиктар Тыуған илде ҡыйыу яҡлай һәм юғары хөкүмәт наградаларына лайыҡ була. Өфө ҡалаһында ете йыллыҡ мәктәпте һәм кооператив техникумды тамамлаған Ғ. И. Сәлмәнов Мәскәүҙән Берлинға тиклем юл үтә. Уның батырлығы, оператив һәм тактик оҫталығы тураһында ике тиҫтәнән ашыу хәрби ордендары һәм миҙалдары шаһит булып тора. Ғ. И. Сәлмәнов һуғышты майор булып тамамлай, ә хәҙер ул армия генералы, күренекле совет ғәскәр башлығы.

Төньяҡ-Көнбайыш фронтта 133-сө айырым уҡсылар бригадаһының батальон комиссары Ш. Х. Чанбарисов үҙен аҡыллы һәм ҡыйыу һалдат итеп күрһәтә, аҙаҡ күп йылдар (1957—1981) Башҡорт дәүләт университетының ректоры булып эшләй. 1942 йылдың августында комбат Ф. В. Смекалин һәм комиссар Ш. Х. Чанбарисов етәкселеге аҫтында бер төркөм һалдаттар ауыр урман-һаҙлыҡ шарттарында, аҙыҡ һәм боеприпастар булмаған килеш, 15 көн ҡаты һуғыш алып барған һәм ҡамауҙан сыҡҡан [1].

Йөҙәрләгән өфөләр Хәрби Диңгеҙ Флотына саҡырылған, хәрби караптарҙа хеҙмәт иткән. Хеҙмәт итеүен Октябрь революцияһына тиклем Балтикала башлаған вице-адмирал Ю. Ф. Ралль Бөйөк Ватан

[1] На Северо-Западном фронте. 1941—1943 гг. М., 1969, 44, 45-се биттәр.

Ленин орденлы Өфө нефть эшкәртеү заводының Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған работниктарына һәйкәл *(1965 йылда ҡуйылды).*



һуғышы йылдарында крейсерҙар эскадраһына етәкселек итә һәм тәжрибәле флот етәксеһе данына лайыҡ була.

Орудия командиры мичман А. З. Байдак Гангут (Ханко) ярымутрауын оборопалауҙа, Ленинград һәм Кенигсберг янындағы [1] һуғыштарҙа ҡатнашҡан.

Төрлө соединениеларҙа һәм частарҙа, ялан госпиталдәрендә Өфө ҡалаһынан йөҙәрләгән медицина работниктары хеҙмәт иткән.

Дошман тылында партизандар хәрәкәтендә ҡатнашыусы совет патриоттары фашист илбаҫарҙарын еңеүгә ҙур өлөш индерә. Халыҡ үсен ҡайтарыусылар сафына төрлө яҡтан өфөләр килә. Белоруссияла партизан отрядтарының береһе дошман тылына хәрби задание менән ебәрелгән Өфө ҡалаһы чекисы К. В. Зюков тарафынан төҙөлгән. 1942 йылдың июль айында был отряд Константин Заслонов бригадаһы менән берлектә Орша ҡалаһы районында хәрәкәт иткән. 1942 йылдың аҙағында К. В. Зюков «Алексей»ҙың (А. Ф. Данукаловтың) партизандар бригадаһы командиры урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. Уның етәкселегендә партизандар Суражский районы ауылдарында дошман гарнизондарын ҡыйрата, бер нисә язалау отрядтарын юҡҡа сығара. 1944 йылдың ғинуарында К. В. Зюков һуғышта һәләк була [2].

Комсомолец И. П. Александров хәрби пленныйҙар лагерынан ҡаса, Могилев өлкәһендә партизан отрядтарының береһенең командиры була. Ике йыл эсендә отряд 20-нән ашыу тимер юл эшелоны шартлата, дошмандың күп көсөн һәм техникаһын юҡ итә. И. П. Александров һуғыштарҙа үҙенең тәүәккәллеге, ҡыйыулығы менән айырылып тора, һуғышсыларҙы үҙ өлгөһө менән рухландыра. 1944 йылдың 22 мартында ул батырҙарса һәләк була. Хәрби хеҙмәттәре өсөн Ҡыҙыл Байраҡ, I дәрәжә Бөйөк Ватан һуғышы ордендары һәм миҙалдар менән наградлана [3].

Башҡортостан медицина институтын тамамлаған врач Ф. Ф. Кургаев һуғыштың тәүге көндәрендә үк ҙур төркөм ауыр яралылар менән бергә дошман оккупациялаған территорияла ҡала. Иң ауыр шарт-

---

[1] «Советская Башкирия», 1973, 16 февраль.

[2] Белоруссия Компартияһы Үҙәк Комитеты эргәһендәге Партия тарихы институтының партархивы, ф. 3500, оп. 19, д. 20, л. 99.

[3] Шунда уҡ, оп. 19, д. 15, л. 28.

тарҙа урындағы халыҡ ярҙамы менән ул күп һуғышсыларҙы дауалай, уларға партизандарға китергә ярҙам итә. Һатлыҡ йән ҡыйыу патриотты тоттора. Гитлерсылар Филипп Кургаевты атып үлтерә. Ләкин Өфө врачы хаҡындағы иҫтәлек йәшәй. Уның исеме Минск янындағы Тарасово ауылы кешеләре эшләгән обелискыға уйылып яҙылған [1].

Минск партизандар соединениеһының Суворов исемендәге бригадаһында 1942 —1944 йылдарҙа Өфө журналисы З. Н. Ишмаев һуғыша. Ул үҙен ҡыйыу шартлатыусы итеп күрһәтә, күп кенә хәрби операцияларҙа ҡатнашҡан. Белоруссияла өфөләр А. М. Ғөбәйҙуллин, Е. Г. Зенцова, А. Д. Мишенев, Ф. У. Усманов һәм башҡалар һуғышҡан.

Польшалағы партизандар хәрәкәтендә актив ҡатнашыусыларҙың береһе хәрби летчик, Өфө аэроклубында тәрбиәләнеүсе А. В. Кузнецов була. Һуғыштарҙың береһендә уның самолетын бәреп төшөрәләр, һәм ул пленға эләгә. Поляк коммунистары уға лагерҙан ҡасырға ярҙам итә. Кузнецов поляк партизандар бригадаһының етәксеһенә әүерелә. Бригада гитлерсыларға ауыр удар яһай. Немецтар уға ҡаршы үс алыусы отрядтар ебәрә, А. Кузнецовтың башы өсөн ҙур аҡса тәҡдим итә. Ләкин партизандар тоттормаусан була. Совет ғәскәрҙәре килеүгә бригадала 4 меңдән ашыу һуғышсы иҫәпләнә. Фашистарға ҡаршы көрәштә күрһәткән хеҙмәттәре өсөн А. В. Кузнецов Польшаның бер нисә ордены менән наградлана. Ул — Лодзь ҡалаһының почетлы гражданины [2].

Чехословакияла К. Готвальд исемендәге партизандар бригадаһында Өфө уҡытыусыһы коммунист И. Ф. Еникеев һуғыша. Ул емергес группаға етәкселек итә. Емергес группалар ҡуйған миналарҙан күп кенә поездар, автомашиналар һауаға оса. И. Ф. Еникеев туғандаш Чехословакияның юғары наградалары менән бүләкләнә.

Италияла Ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәтендә ҡатнашыусылар араһында А. В. Коляскиндың исеме яҡшы билдәле. 1943 йылдың октябрендә 14 совет һуғышсыһы итальян коммунистары ярҙамында плендан ҡасалар һәм Коляскин етәкселегендә отряд төҙөйҙәр. Итальян партизандары менән берлектә отряд ике йыл буйына фашист илбаҫарҙарына ҡаршы көрәшә.

## § 4. Һуғыш йылдарында культура һәм фән

Һуғыш культура, фән, мәғариф учреждениелары алдына яңы бурыстар ҡуйҙы. Уларҙы ифрат ауыр шарттарҙа хәл итергә тура килде. Культураның төрлө тармағының күп кенә работниктары армияға

[1] «Советская Башкирия», 1971, 20 июнь.

[2] Гибадуллин Б. Г. Советская Башкирия в годы Великой Отечественной войны, 100, 101-се биттәр.

алынғайны, уҡыу йорттарының, культура-ағартыу учреждениеларының күп кенә биналарында госпиталдәр, хәрби-уҡыу пункттары, дөйөм ятаҡтар урынлашҡайны. 1942 йылдың башында 63 мәктәп бинаһының 56-һы хәрби һәм башҡа маҡсаттарҙа файҙаланылды [1]. Занятиелар 3—4 смена ҡыҫҡартылған план буйынса уҙғарылған. Ҡайһы бер мәктәптәр ваҡытлыса эштәрен туҡтатырға мәжбүр булды.

Партия һәм совет органдары бөтә балаларҙы ла мәктәптәрҙә уҡытыуҙы тәьмин итеү буйынса ашығыс саралар күрә. Бер нисә бинанан дөйөм ятаҡтар бушатыла, аҙ һанлы мәктәптәр берләштерелә. Уҡыусыларҙың мәктәпте ташлауын булдырмау өсөн ҙур эш башҡарыла. Өҫ, аяҡ кейеме, дәреслектәргә мохтаж булғандарға ярҙам итеү, мәктәптәрҙә иртәнге ҡайнар аш ойоштороу өсөн саралар күрелә. Мәктәпкә йөрөй алмаған балалар менән уҡытыусылар өйҙәрҙә дәрес уҙғара. Йыл һайын уҡыусыларҙы йәй көнө уҡытыу үткәрелә. Һуғыш осорондағы ауырлыҡтарҙы еңә барып, педагогик коллективтар юғары кимәлдә дәрес биреүҙе тәьмин итәләр.

Производствола эшләгән үҫмерҙәрҙе уҡытыу өсөн, 1943 йылдың октябрендә сменалы ете йыллыҡ һәм урта дөйөм белем биреү мәктәптәре булдырыла; 1944 йылдың апреленән улар эшсе йәштәр мәктәбе тип атала башлай. 1945/46 уҡыу йылында Өфөлә ошондай 5 мәктәп эшләй, уларҙа 717 уҡыусы уҡый.

Әммә һуғыш ваҡытында ҡалала мәктәптәр селтәре аҙыраҡ кәмей. 1941/42 уҡыу йылы башында 68 мәктәп булып, унда 40,3 мең бала уҡыһа, ә 1944 йылда 60 мәктәп һәм 22,6 мең уҡыусы була [2]. Мәктәптәрҙең һаны кәмеү уларҙың ҡайһы берҙәренең ҡушылыуы менән аңлатыла. Уҡыусылар контингенты кәмеү өлкән класс уҡыусыларының производствоға һәм төрлө курстарға китеүе арҡаһында була.

Мәктәп тормошонда, уҡытыу-тәрбиә эшенең йөкмәткеһендә һәм формаһында үҙгәрештәр була. Патриотизм тәрбиәләүгә, хәрби-спорт сараларына етди иғтибар бирелә. Уҡытыусылар уҡыусыларға совет халҡы тарихының героик биттәрен, халыҡтың илбаҫарҙарға ҡаршы фиҙакәр көрәшен, был материалды Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғалары материалдарына оҫта бәйләп, асыҡ күрһәтәләр. Өлкән кластарҙа дөйөм белем биреү буйынса занятиелар ойоштороla. Бөтә мәктәптәрҙә саңғы ярыштары, кростар, эстафеталар, хәрби һәм спорт значоктарына нормалар тапшырыу үткәрелә. Уҡыусылар йәмғиәттә файҙалы эшкә киңерәк ылыҡтырыла.

Ҡаланың уҡытыусылары һәм уҡыусылары фронтҡа ярҙам итеүҙең патриотик хәрәкәтендә актив ҡатнаша. Улар һалдаттарға йылы әйберҙәр, бүләктәр йыялар, танк һәм самолеттар төҙөүгә аҡса индерәләр. Партияның һәм хөкүмәттең «Фронтҡа күберәк металл!», «Медикаменттар етештереүгә күберәк дарыу средстволары!» тигән саҡы-

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 22, д. 340, л. 68—70.
[2] ЦГА БАССР, ф. 933, оп. 1, д. 3544, л. 14; ф. 798, оп. 3, д. 281, л. 248.

рыуҙарына яуап итеп, уҡыусылар улар меңләгән тонна металл һыныгы, меңәр килограмм дарыу үләндәре йыялар. Өфө мәктәптәрендә 280 тимур командаһы эшләгән. Улар фронтовиктар ғаиләләренә, һуғыш инвалидтарына йорт хужалығында ярҙам иткән.

Һуғыш йылдарында уҡытыусылар әҙерләү, махсус белем алмаған йәш кадрҙарҙың квалификацияһын күтәреү етди проблемаға әүерелә. Педагогия институтында һәм педагогия училищеһында урта мәктәптәрҙе тамамлағандар иҫәбенә уҡытыусылар әҙерләү буйынса курстар ойоштороло, ситтән тороп уҡыу киңәйтелә. Башҡортостанда уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты мәктәп работниктарының квалификацияһын күтәреү буйынса ҙур эш алып бара. Йәй көндәрендә Өфөлә курстар һәм семинарҙар ойоштороло. Унда республика ҡала һәм ауылдарынан йөҙәрләгән педагогтар уҡый.

Юғары һәм урта махсус уҡыу йорттарында төрлө профессия кадрҙары әҙерләү дауам итә. Һуғыш башланғанда ҡалала 5 институт эшләгән: педагогия, уҡытыусылар, ауыл хужалығы, медицина һәм сит ил телдәре институты (1942 йылда сит ил телдәре институты педагогия институты менән бергә ҡушылған). 1941 йылдың октябренән 1943 йылдың авгусына тиклем Өфөлә Мәскәүҙең Ленин орденлы 1-се медицина институты була. 1942 йылда авиация институты асыла, И. М. Губкин исемендәге Мәскәү нефть институтының филиалы булдырыла. 1944 йылдың февралендә Өфөнөң 6 юғары уҡыу йортонда 5 мең самаһы студент уҡыған [1].

Юғары уҡыу йорттарының профессор-преподавателдәр составы Мәскәүҙән, Ленинградтан, Киевтан эвакуацияланып килгәндәр иҫәбенә тулыланған. Ҡайһы бер кафедраларға күренекле белгестәр етәкселек иткән: академик Л. А. Булаховский, профессорҙар Н. Н. Петровский, Я. В. Ролл, Н. Д. Моргулис һәм башҡалар. Уларҙың килеүе педагогик һәм фәнни эште йәнләндергән.

Тулы булмаған мәғлүмәттәр буйынса, һуғыш йылдарында ҡалала юғары белемле 1,5 меңдән ашыу белгес — врачтар, агрономдар, зоотехниктар, уҡытыусылар әҙерләнгән [2].

Өфөлә 14 урта махсус уҡыу йорттары, шул иҫәптән авиация-төҙөлөш, геологоразведка, юл, финанс-экономика һәм физкультура техникумдары, педагогия һәм музыка училищелары, шулай уҡ урта медицина кадрҙары әҙерләү буйынса фельдшер-акушер, юридик мәктәптәре эшләгән. 1942 йылдың октябрендә был уҡыу йорттарында 3,2 мең кеше уҡыған [3].

Коммунистар партияһы тарафынан эшләнгән берҙәм хәрби хужалыҡ программаһы оборона характерындағы мөһим проблемаларҙы хәл итеүгә илдең фәнни көстәрен йәлеп итеүҙе күҙ уңында тота.

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 3, д. 33, л. 39.
[2] Шунда уҡ, ф. 122, оп. 23, д. 337, л. 27.
[3] Шунда уҡ, оп. 22, д. 337, л. 11, 12; ЦГА БАССР, ф. 798, оп. 8, д. 368, л. 5.

һуғыштың тәүге көндәренән үк Башҡортостандың ғилми учреждениелары (уларҙың күптәре Өфөлә урынлашҡайны) халыҡ хужалығын хәрби нигеҙгә үҙгәртеп ҡороу менән бәйләнгән тематикаға күсерелә.

Һуғыш йылдарында Өфө эре ғилми үҙәккә әүерелә. Урындағы тикшереү ойошмалары менән бергә бында 1941 йылда эвакуацияланып килгән Украина ССР-ы Фәндәр академияһы, Нефть халыҡ комиссариатының Юғары баҫымдар институты һәм башҡа ғилми учреждениелар эшләй.

Украина Совет Социалистик Республикаһының Фәндәр академияһы Өфөлә булыу ваҡытында (1941—1943) Башҡортостандың тәбиғәт ресурстарын өйрәнеүгә һәм производствоны камиллаштырыуға, шулай уҡ ижтимағи фәндәрҙе үҫтереүгә ҙур өлөш индерә. Уның составында 548 хеҙмәткәр эшләй, шул иҫәптән академияның 42 тулы хоҡуҡлы члены һәм 53 член-корреспонденты була[1]. Украина ССР-ы Фәндәр академияһы Президиумы янында Башҡортостандың һәм Көньяҡ Уралдың ресурстарын мобилизациялау буйынса махсус комиссия эшләй. Комиссия файҙалы ҡаҙылмаларҙы табыу, энергетиканы, нефть промышленносын, ҡара һәм төҫлө металлургияны үҫтереү, эшсе көстәрҙе файҙаланыу буйынса төрлө институттарҙың тикшеренеүҙәрен координациялай. Ул институт эштәренең һөҙөмтәләрен дөйөмләштерә, уларҙы БАССР хөкүмәте ҡарамағына тапшыра. Өфөлә украин ғалимдарының тиҫтәләгән хеҙмәттәре баҫылып сыға[2].

Мәскәү, Украина, Башҡортостан ғалимдарының берлектәге көстәре менән республиканың сырье һәм энергетика ресурстарын фронт ихтыяждарына файҙаланыу буйынса ҙур эш алып барыла. 1941—1943 йылдарҙа геологтар марганец, колчедан, баҡыр-цинк һәм боксит рудаларының яңы ятҡылыҡтарын аса. УССР Фәндәр академияһының геологтары Башҡортостандың айырым райондарының күмер һәм нефть биреүсәнлеген өйрәнә, күмер ятҡылыҡтарының запасын билдәләү картаһын төҙөй.

Өфө төҙөлөш материалдары институты коллективы Украинаның күренекле ғалимдары академик П. П. Будниковтың, И. Г. Гольденбергтың, С. А. Берзондың актив ҡатнашлығында урындағы төҙөлөш материалдарының яңы төрҙәрен эҙләп таба. П. П. Будников һәм инженер С. П. Зорин тәҡдим иткән технологик схема буйынса Өфөлә илдә беренсе булып ангидрит цементы заводы төҙөлә. Яңы производство технологияһын эшләгән өсөн уның авторҙарына СССР-ҙың Дәүләт премияһы бирелә.

---

[1] История Академии наук Украинской ССР. 1-се китап. Киев, 1967, 141-се бит (украин телендә).

[2] Вядро Ш. Я. Немеркнущие страницы братской дружбы. — Из истории Советской Башкирии. Ученые записки БГУ. 41-се сығарылыш. Өфө, 1969, 101-се бит.

1942 йылдың июнь айында Ҡазанда Урта Волга һәм Кама буйы ресурстарын оборона ихтыяждарына мобилизациялау буйынса СССР Фәндәр академияһының вице-президенты академик Е. А. Чудаков етәкселегендә төҙөлгән комиссия яңы нефть ятҡылыҡтарын асыу менән шөғөлләнә. 1942 йылдың йәйендә һәм көҙөндә генә Башҡортостанда СССР Фәндәр академияһының һәм Нефть халыҡ комиссариатының 100 хеҙмәткәре нефть сығарыу проблемаларын арттырыу өҫтөндә эшләй [1].

1942 йылда көнсығыш райондар, айырыуса «Икенсе Баку» промыслалары, шыйыҡ яғыулыҡты биреүсе төп районға әүерелә. Бындағы нефть, Кавказ нефтенән айырмалы рәүештә, көкөртлө ҡушылмаларға бай булғанға күрә, яғыулыҡ алыуҙың яңы технологик процестары талап итәлә. Ошо мәсьәләне хәл итеү өҫтөндә СССР Фәндәр академияһының күп кенә коллективтары эшләй. Улар Өфө нефть эшкәртеү заводында эксперименталь эштәр алып бара. Профессор А. В. Фрост етәкселегендәге бер төркөм ғалимдар юғары октанлы авиабензин алыу ысулын эшләй. Был ысул беренсе булып Өфө нефть эшкәртеү заводында производствоға индерелә. Ғалимдарҙың актив ярҙамында предприятие установкаларын реконструкциялау үткәрелә, был иһә тәүлегенә өҫтәмә рәүештә 280 тонна бензин алыу мөмкинлеген бирә.

Ғалимдар шулай уҡ нефть сырьеһынан шартлатҡыс матдәләр эшләү өҫтөндә лә эшләй. СССР Фәндәр академияһының Органик химия институты сотрудниктары көкөртлө бензиндан толуол алыу юлын асалар. Был ысул Өфө нефть эшкәртеү заводында уңышлы ҡулланыла.

Ғилми-тикшеренеү учреждениелары хәрби продукция етештереүҙе камиллаштырыу һәм уның сифатын күтәреү өсөн күп эшләйҙәр. Промышленноста уңышлы файҙаланылған тиҫтәләгән яңы станоктар, машиналар һәм механизмдар эшләнгән.

Республиканың рельефы, тупрағы, үҫемлеге, климаты, ауыл хужалығы производствоһы ресурстары өйрәнелгән. Н. А. Преображенскийҙың «Көньяҡ Уралдың көнбайыш битләүенең геоморфологик очеркы», Д. В. Богомоловтың «Башҡорт АССР-ында тупраҡ барлыҡҡа килеү шарттарының һәм тупраҡ географияһының характеристикаһына ҡарата», Б. Н. Быстровтың «Башҡорт АССР-ының урман-дала шарттарында урман культураларын етештереү» кеүек хеҙмәттәре һәм башҡалар баҫып сығарылған [2]. УССР Фәндәр академияһының ботаника институты, Башҡортостандың үҫемлек донъяһын өйрәнеп, 1,5 меңдән ашыу үҫемлекте тулы һүрәтләп белешмә төҙөгән.

Ғалим-медиктар ҙур ғилми-тикшеренеү эше алып барған. Улар эффектлы дарыуҙар эҙләп тапҡан, яралы һалдаттарҙы дауалауҙың

---

[1] Левшин Б. В. Академия наук СССР в годы Великой Отечественной войны. 1941—1945 гг. М., 1966, 121-се бит.

[2] Наука в Советской Башкирии за 50 лет, 468-се бит.

яңы методтарын эшләгән. Эпидемиология һәм микробиология институтында күп кенә препараттар, шул иҫәптән гангренаға ҡаршы сыворотка, етештереүҙе үҙләштерәләр. Академик А. В. Палладин, $K_3$ витаминының үҙенсәлеген өйрәнеп, был препараттың яраларҙы бөтәштереүҙе тиҙләтеүен билдәләй. Уның етәкселегендә Өфө витамин заводында $K_3$ витаминын етештереү яйға һалына. 1942 йылда Украина Фәндәр академияһы президенты А. А. Богомолец етәкселегендә сотрудниктар группаһы антиректикуляр цитотоксик сыворотка ала. Ул пуля тейгәндән һынған һөйәкте дауалағанда һәм инфекцион ауырыуҙарға ҡаршы көрәшкәндә ҡулланыла.

Медицина институты профессорҙары Г. В. Алипов, А. А. Полянцев, И. Г. Ҡадиров операция һәм йәрәхәттәрҙе, остеомиелиттарҙы, ҡан тамыры аневризмын дауалау методикаһын камиллаштыра. Профессорҙар И. Ф. Случевский һәм Н. И. Савченко травматик неврозд арҙы, атап әйткәндә баш мейеһе йәрәхәтенән һаңғырауланыуҙы һәм һаңғырау-телһеҙлекте, дауалауҙың яңы ысулдарын тәҡдим иткән. Буғыш йылдарында Өфөнөң ғалим-медиктары ҙур практик әһәмиәткә эйә булған 200-ләп ғилми эш башҡара. 50-нән ашыу преподаватель, улар араһында академик Н. Д. Стражеско, профессорҙар В. Х. Василенко, П. Е. Лукомский, Д. И. Татаринов, республика госпиталдәрендә консультация алып бара, иң ҡатмарлы операциялар эшләй.

УССР Фәндәр академияһының Ижтимағи фәндәр институты, Башҡортостан тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институты хеҙмәткәрҙәре экономика, тарих, әҙәбиәт белеме, фольклористика буйынса актуаль темалар өҫтөндә эшләй. Ижтимағи фәндәр өлкәһендәге хеҙмәттәр хеҙмәтсәндәрҙе һуғыш яланындағы ҡаһармандыҡтарға һәм тылдағы фиҙакәр хеҙмәткә мобилизациялау мәсьәләһенә буйһондорола. Совет патриотизмын, халыҡтар дуҫлығы идеяһын пропагандалауға айырыуса әһәмиәт бирелә. Әҙәби тәнҡиттә социалистик Тыуған илде яҡлауға, фашизмға ҡаршы көрәшкә арналған әҫәрҙәрҙең әһәмиәте ныҡлап күрһәтелә.

Туғандаш Украинаның тарихсылары һәм әҙәбиәт белгестәре Өфөлә етди ғилми тикшеренеүҙәр алып бара. «Украина тарихының очерктары», «Украина культураһының тарихы» кеүек коллектив хеҙмәттәр барлыҡҡа килә. Башҡортостанға төрлө ваҡытта килгән украиндарҙың ауыҙ-тел ижадын өйрәнеү һөҙөмтәһендә, «УССР-ҙан ситтәге украин халыҡ ижады. Башҡортостан украинецтары» тигән йыйынтыҡ әҙерләнә. Украин әҙәбиәт белгестәре һәм яҙыусылары рус һәм украин халыҡтары араһында башҡорт әҙәбиәте ҡаҙаныштарын пропагандалай. Был йәһәттән Павло Тычинаның «Мәжит Ғафури ижадында патриотизм» (1942) тигән хеҙмәте өлгө булып тора. Унда башҡорт халыҡ шағирының ижадына анализ яһалған.

1943 йылдың ғинуарында УССР төҙөлөүҙең 25 йыллығына арналған Украина Фәндәр академияһының юбилей сессияһы була. Уның эшендә Өфө йәмәғәтселеге вәкилдәре лә ҡатнаша. Юбилей көнөндә Украина ССР-ы хөкүмәте Башҡортостан хеҙмәтсәндәренә телеграм-

ма ебәргән. Унда «хеҙмәттә һәм яуҙа башҡорт һәм украин халыҡтарының дуҫлығы нығый... Украин халҡы үҙенә башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың күрһәткән туғандарса ярҙамын бер ваҡытта ла онотмаҫ» [1] тип әйтелгәйне.

Совет кешеләренең политик аңлылығы һәм уларҙың патриотизмы дошманға ҡаршы уңышлы көрәш алып барыуҙың кәрәкле шарты була. Был сифаттарҙы тәрбиәләүҙә һәм үҫтереүҙә культура-ағартыу учреждениелары ҙур роль уйнай. Улар художестволы үҙешмәкәрлеккә етәкселек иткән, хәрби патриотик фильмдар күрһәткән, хәрби частарҙы, госпиталдәрҙе хеҙмәтләндергән. В. И. Лениндың Йорт-музейына коллектив барыуҙар ойошторолған. Музейға килеүселәр бөйөк юлбашсының революцион эшмәкәрлеге, уның Өфөгә килеүе тураһындағы материалдар менән танышҡан. Өфө янындағы Красный Яр ауылында урынлашҡан М. В. Фрунзе һәм В. И. Чапаев музейында рус, башҡорт һәм башҡа халыҡтарҙың граждандар һуғышы йылдарындағы героик көрәше тураһында стенд булдырылған.

Матбуғат мөһим роль уйнай. «Красная Башкирия», «Ҡыҙыл Башҡортостан» республика газеталары Совинформбюро сводкаларын, Башҡортостан һуғышсыларының хәрби батырлыҡтары, тылдағы хеҙмәт уңыштары тураһында материалдарҙы үҙ ваҡытында баҫып сығара. Республика нефтселәренең уңыштары «Башҡортостан нефте» журналы биттәрендә сағылдырыла. Политик-масса эшендә ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты сығарған «Агитатор блокноты» ҙур ярҙам күрһәткән. Өфөгә байтаҡ һанда үҙәк газета-журналдар килгән.

Партияның идеологик эшендә радио ҡеүәтле сара була. Мәскәү һәм урындағы радио тарафынан бирелгән Совинформбюро сводкалары, фронттағы хәлдәрҙе күҙәтеүҙәр, хеҙмәтсәндәрҙең тылдағы патриотизмы тураһындағы күп һандағы тапшырыуҙар совет кешеләренең йөрәгендә йәнле отклик тапҡан.

Хәрби-патриотик тәрбиәлә марксизм-ленинизм классиктарының һуғыш һәм армия, социалистик Ватанды һаҡлау тураһындағы хеҙмәттәре, Башҡортостан китап нәшриәте сығарған политик әҙәбиәт баһалап бөтөргөһөҙ ярҙам күрһәткән. Бөйөк Ватан һуғышының ғәҙеллеген аңлатҡан, армияның һәм халыҡтың фиҙакәрлеген күрһәткән китаптар һәм брошюралар башҡорт теленә тәржемә ителеп баҫылып сыҡҡан.

Әҙәбиәт һәм сәнғәт халыҡтың бөтә көсөн Ватанды һаҡлауға мобилизациялауға хеҙмәт итә. Башҡортостан шағирҙары һәм яҙыусылары тәрән патриотик һәм хәрби әҫәрҙәр менән сығыш яһай. Уларҙың күптәре фронтҡа китә. Уттар һәм һыуҙар аша үтеп, улар Ҡыҙыл Армия һуғышсыларын данлаған юғары идеялы әҫәрҙәр тыуҙыра. Күп кенә яҙыусылар һәм шағирҙар, шулар араһында С. М. Мифтахов,

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 23, д. 50, л. 1.

Али Карнай, Х. Ғ. Мөхәмәтйәров, Х. А. Ҡунаҡбаев, Н. К. Кәрипов, М. Х. Харисов һәм башҡалар һуғыш яландарында ҡорбан була.

Сәйфи Ҡудаш, Рәшит Ниғмәти, Баязит Бикбай, Сәғит Агиш, Ғариф Ғүмәр һәм башҡалар һуғыш йылдарында Өфөлә йәшәй һәм хеҙмәт итә. Бында хәрәкәт итеүсе армиялағы яҙыусылар һәм шағирҙар ебәргән әҫәрҙәр баҫып сығарыла.

Һуғыш ваҡытындағы әҙәбиәт барыһынан элек үҙенең төплө реализмы һәм дошманды еңеүгә тәрән ышанысы менән характерлана. Уның бөтә жанрҙарының төп темаһы Совет Тыуған илен һаҡлау була.

Һуғыштың тәүге көндәрендә үк Рәшит Ниғмәтиҙең «Тыуған илем өсөн», Хәниф Кәримдең «Асыу йыры», Ҡадир Даяндың «Тыуған ил улдарына» тигән агитацион-публицистик шиғырҙары барлыҡҡа килә. Тиҙҙән Башҡортостан Яҙыусылар союзы республиканың күренекле шағирҙарының патриотик шиғырҙары ингән «Тыуған ил саҡыра» тигән йыйынтығын баҫып сығара.

Фашист илбаҫарҙарын хурлыҡ менән тамғалап, шағирҙар һуғышсыларға һәм тылдағы хеҙмәтсәндәргә мөрәжәғәт итә, уларҙы Тыуған ил — әсә хаҡына батырлыҡҡа саҡыра. Өлкән быуын шағиры Сәйфи Ҡудаштың «Саҡырыу» (1942), «Бөтә йөрәктән» (1943) тигән йыйынтыҡтарҙа баҫылып сыҡҡан шиғырҙары шундай. Р. Ниғмәтиҙең «Мөхәббәт һәм нәфрәт йыры» тигән, Б. Бикбайҙың «Утлы юлдар», «Беҙҙең ҡала» исемендәге йыйынтыҡтарында баҫылған шиғырҙары һәм поэмалары популярлыҡ менән файҙаланған.

Һуғыш йылдарындағы поэзияла совет кешеләренең уй-тойғолары сағылдырыла, мөхәббәт һәм дуҫлыҡ, ҡаһарманлыҡ һәм батырлыҡ данлана. Ҡурҡыу белмәүсе патриот һуғышсыларҙың образдарын кәүҙәләндереп, шағирҙар улар батырлығының сығанаҡтарын һәм бөйөклөгөн асып биргән. Поэзияла совет халҡының туғандаш дуҫлығы сағылыу тапҡан. Ул дошманды еңеүҙең мөһим факторҙарының береһе була. Дуҫлыҡ һәм интернационализм идеяһы Сәйфи Ҡудаштың, Сәләх Кулибайҙың, фронтовик йәш шағирҙар Мостай Кәрим, Ғилемдар Рамазановтың шиғыр һәм поэмаларының нигеҙҙәрендә ята.

Башҡорт прозаһы совет кешеләренең героизмын һүрәтләүсе яңы әҫәрҙәр менән байый. Күп кенә яҙыусылар газеталарҙа очерктар һәм хикәйәләр баҫып сығара. Ул әҫәрҙәрҙә фронт һәм тыл геройҙарының әҙәби портреттары бирелә. 1942 йылда Б. Ф. Баяновтың «Фронт хикәйәләре» тигән китабы донъя күрә. Ә. Н. Кирәйев Башҡорт кавалерия дивизияһының хәрби тормошона, уның воиндарының батырлыҡтарына арналған «Башҡорттар» (1943), «Егеттәр» (1944) йыйынтыҡтарын сығара. Башҡорт атлыларының фронт тормошо айырым юл яҙмаларында ла сағылдырыла [1]. Яҙыусы Б. Бикбай «Само-

---

[1] К у д а ш С. Дон далаларында.— Башҡорт атлылары. Өфө, 1943; А г и ш С. Фронтҡа. Өфө, 1943.

лет һатып алған Хәбирйән» очерығында хәрби машина төҙөргә 100 мең һум аҡса биргән патриот колхозсы образын тыуҙыра. Ғ. Ғүмәр ирҙәр профессияһына эйә булған ҡыҙҙар тураһында һөйләй.

Фронтта һәм партизандар отрядтарында дошманға ҡаршы көрәш тураһында, һуғыш шарттарында совет кешеһенең рухи тормошо, уның һуғышҡа мөнәсәбәте тураһында драматик әҫәрҙәр барлыҡҡа килә. Драматургияла тарихи темалар өҫтөндә эшләүгә ынтылыш яһала. Ләкин ҡайһы бер яҙыусылар Башҡортостандың үткәнен идеаллаштырыуға юл ҡуя, башҡорттарҙың 1812 йылдағы Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыуын боҙоп күрһәтә. 1945 йылдың февралендә ВКП(б) Үҙәк Комитеты «Башҡортостан партия ойошмаһында агитация-пропаганда эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары хаҡында» ҡарар ҡабул итә. Партия Үҙәк Комитеты идеологик хаталарҙың һәм боҙоуҙарҙың тамырҙарын асып күрһәтә, уларҙы төҙәтеү юлдарын билдәләй. Башҡортостан яҙыусылары алдында башҡорт халҡының тарихын, уның иң яҡшы милли традицияларын, рус халҡы менән бергә царизмға һәм сит ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшен дөрөҫ сағылдырыусы әҫәрҙәр ижад итеү бурысы ҡуйыла.

Театр сәнғәте хеҙмәтсәндәрҙе идея-политик тәрбиәләү средстволарының береһе булды. Һуғыш башланыу менән, Башҡорт опера һәм Башҡорт драма театрҙары берләшә. Шулай уҡ рус һәм башҡорт ҡурсаҡ театрҙары бергә ҡушыла. Өфө йәш тамашасылар театры ябыла. Башҡорт опера һәм драма театры һәм Өфө драма театры составтарына эвакуацияланған Украина театр коллективтарының төп көстәре ҡушыла. 1944 йылда ҡалала музыкаль комедия театры эшләй башлай.

Театрҙар үҙҙәренең репертуарҙарын яңынан ҡарап сыға, совет халҡының героик көрәшен сағылдырыусы, кешеләрҙе яңы ҡаһарманлыҡтарға рухландырыусы яңы әҫәрҙәр менән тулыландыра. Башҡорт драма театры коллективы героик граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғыштары тураһындағы пьесаларҙы — Н. Ф. Погодиндың «Мылтыҡлы кеше», Л. М. Леоновтың «Ябырылыу», Рәшит Ниғмәтиҙең «Ағиҙел ярында» һәм башҡаларҙы сәхнәгә ҡуя. Өфө рус драма театры сәхнәһендә А. Е. Корнейчуктың немец-фашист оккупанттарына ҡаршы көрәшкә арналған «Фронт», Н. Е. Виртаның «Ауыр көндәр», шулай уҡ К. А. Треневтың «Любовь Яровая» пьесалары бара.

Опера һәм балет театры коллективы Х. Ш. Заимов һәм А. Э. Спадавеккианың «Аҡбуҙат», М. М. Вәлиевтең һәм Н. Н. Пейконың «Айһылыу», Н. К. Чемберджиҙың «Ҡарлуғас» милли операларын, Л. Б. Степановтың «Сыңрау торна» балетын ҡуя. Репертуарҙы рус классик опералары байыта. Спектаклдәрҙә башҡорт артистары менән бер рәттән популяр украин йырсылары И. С. Паторжинский, З. М. Гайдай һәм башҡалар уңышлы сығыш яһай.

Башҡорт дәүләт филармонияһы ҙур эш алып бара. Уның артистары хәрби частарҙа, госпиталдәрҙә, предприятиеларҙа, колхоздарҙа

Өфө артистарының фронтҡа килгән бригадаһы 16-сы Башҡорт гвардия дивизияһында. 1943 йыл, март.



һәм совхоздарҙа йыш була, концерттар менән фронтҡа бара. Филармонияның фронт бригадалары 1943 йылда ғына һуғышсылар алдында 300 тапҡыр сығыш яһай[1]. Драма театрҙары бригадалары ла фронтта була.

Композиторҙар совет халҡының патриотизмы хаҡында, Бөйөк Ватан һуғышының героикаһы тураһында күп кенә йырҙар ижад итә. Улар араһында З. Ғ. Исмәғилевтең «Тыуған илде бирмәбеҙ», «Еңеүселәргә дан», «Шайморатов генерал», Х. Ф. Әхмәтовтың «Башҡорт батырҙары» һәм башҡалар бар. «Башҡорт композиторҙары — Ҡыҙыл Армияға», «Башҡорт дивизияһы өсөн оборона йырҙары» исемле ике йыр йыйынтығы баҫып сығарыла. Оркестрҙар өсөн яңы әҫәрҙәр, романстар барлыҡҡа килә. Ҡаланың музыкаль культураһын үҫтереүгә рус композиторҙары байтаҡ өлөш индерә. Башҡорт коллегалары менән ижади берлектә улар ҙур әҫәрҙәр ижад итә.

Совет халҡының дошманға ҡаршы көрәше һынлы сәнғәттә киң сағылыу таба. Рәссам А. П. Лежнев «Башҡорт дивизияһының Воронеж янында һуғышыуы» тигән картина, И. И. Урядов — «Разведкала», К. И. Герасимов — «Башҡорт кавалерия дивизияһына байраҡ тапшырыу», «Фашистарҙың йыртҡыслығы», Р. У. Ишбулатов — «Катюша», А. Э. Тюлькин «Танк десанты фронтҡа бара» һәм башҡа картиналар ижад итә. Скульптор В. Г. Морозова Советтар Союзы Геройы А. Матросов бюсын яһай.

1942 йылдың мартында Өфөлә «Тыуған ил өсөн» тигән тематик художество күргәҙмә асыла. Унда һуғыш һәм хеҙмәт героикаһы тураһында картиналар, плакаттар күрһәтелә. 1944 йылдың башында

[1] Советская Башкирия. Исторические очерки. Өфө, 1957, 308-се бит.

шундай уҡ темаға икенсе күргәҙмә асыла. Бынан тыш, рәссам И. П. Урядов, А. Э. Тюлькин ижадына бағышланған күргәҙмәләр ойошторола.

Ауыр һуғыш йылдарында ҡаланың фән, культура һәм сәнғәт работниктары үҙҙәренең арыу-талыуҙы белмәгән хеҙмәте менән оҙаҡ көтөлгән еңеү көнөн яҡынайта.

Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡы үҙ Тыуған иленең социалистик еңеүҙәрен, азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап алып ҡала, донъя империалистик реакцияһының удар көсөн тар-мар итә. Был көсөргәнешле көрәштә Советтар Союзының бөтә хеҙмәтсәндәре менән бергә өфөләр массовый батырлыҡ һәм хеҙмәт героизмы күрһәтә. Ҡала унар меңләгән ҡыйыу яугирҙәрен фронтҡа ебәрә. Улар дошманға ҡаршы фиҙакәр һуғышын, юғары хөкүмәт наградаларына лайыҡ була. Һуғыш йылдарында Өфөнөң индустриаль ҡеүәте үҫә. Ул илдең армияны бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин итеүсе бөтмәҫ-төкәнмәҫ хәрби арсеналына әүерелә. Өфөләр үҙҙәренең Тыуған ил алдындағы изге бурысын намыҫ менән үтәй, фашистик Германияны еңеүгә лайыҡлы өлөш индерә.

# Өфө социализм төҙөүҙе тамамлау этабында

## § 1. Ҡаланың ижтимағи-политик тормошо *

9 майҙа урындағы ваҡыт менән төнгө сәғәт 4-тә радио фашистик Германияны еңеү тураһында күптән көтөлгән хәбәрҙе килтерә. Өфөлә һәм Черниковскиҙа йәшәүселәрҙең күбеһе был хәбәрҙе станоктар, агрегаттар янында ҡаршылай. Кабель, витамин заводтарында һәм башҡа предприятиеларҙа төнгө сменаларҙа шунда уҡ стихиялы митингылар башлана. Ҡала тиҙ уяна. Нефть эшкәртеү заводы операторы М. Б. Шәймөхәмәтов (һуңынан ул Социалистик Хеҙмәт Геройы була) еңеү көнө алдынан бер тәүлек тип әйтерлек вахтала тора. Ял итергә ятыуы була, күршеләре килеп инә. Йөҙҙәре шатлыҡтан балҡый, хистәре йөрәктәренә һыймай: «Еңеү! Еңеү!». «Былдай төндә йоҡо аламы һуң инде? — тип хәтерләй М. Б. Шәймөхәмәтов.— Юҡ! Урамға кешеләр янына сыҡтым, ә урам дүрт йыллыҡ тынлыҡтан һуң гөр килә ине...» [1]

Таң атыуға ҡала флагтар, транспаранттар менән биҙәлә. 9 май — эш көнө түгел. Урамдарҙа кешеләр ҡайнаша. Күптәр үҙ предприятиеларына, үтә ауыр шарттарҙа фронтты бөтә кәрәкле нәмәләр менән тәьмин иткән предприятиеларға, бара. Завод идаралығы янына моторҙар эшләү заводының меңдәрсә эшселәре, инженер-техник работниктары һәм хеҙмәткәрҙәре йыйыла. Трибунанан тулҡынландырғыс телмәрҙәр, Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡын еңеүгә рухландырыусы һәм ойоштороусы Коммунистар партияһы хөрмәтенә дан һүҙҙәре яңғырай.

Көн буйы урамдарҙа музыка уйнай; майҙандарҙа ҡала халҡы бейей һәм йырлай. Өфө тантана итә. Бөтә халыҡ байрамы ҡара төн-

---

* 1956 йылда Черниковск Өфө менән берләштерелә. Шуға күрә главала һүҙ, айырым осраҡтарҙан тыш, Өфө тураһында бер бөтөн хужалыҡ һәм ижтимағи-политик комплекс рәүешендә бара.

[1] «Советская Башкирия», 1965, 8 май.

гә тиклем дауам итә, ә иртән инде кешеләр беренсе тыныс хеҙмәт вахтаһына баҫа.

Өфө һәм Черниковск партия ойошмалары алдында ҡыҫҡа ваҡыт эсендә экономиканы һуғыштан һуң үҙгәртеп ҡороуға етәкселек итеү, уны артабан үҫтереү юлдарын билдәләү бурысы тора. 1945 йылдың 15 майында булып үткән Өфө партия активы «Ҡала партия ойошмаһының иң яҡындағы бурыстары тураһындағы» мәсьәләне тикшерә һәм киңәйтелгән ҡарар ҡабул итә. Коммунистар промышленность предприятиелары һәм төҙөлөш ойошмаларының техник-экономик күрһәткестәрен яҡшыртыуға, төҙөкләндереүгә, колхоз ауылына ярҙам күрһәтеүгә айырыуса иғтибар йүнәлтә.

Тыныс ижади хеҙмәткә күсеү ҡаланың экономик, ижтимағи-политик һәм культура тормошоноң бөтә сфераларында башлана. Һуғыш йылдарының әҙемтәләре әкренләп бөтөрөлә, халыҡ ҡулланыуы тауарҙарын етештереү арта. СССР Верховный Советы Президиумы Указына ярашлы рәүештә, ҡайтанан 8 сәғәтлек эш көнө, эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәрҙең регуляр ялы булдырыла, эш сәғәтенән тыш мәжбүри эшләүҙәр бөтөрөлә.

Демобилизацияланған яугирҙәрҙең ҡайтыуы һуғыштан һуңғы Өфөнөң тормошонда оло ваҡиға була. 1945 йылдың июнендә СССР Ҡораллы Көстәренең личный составындағы өлкән йәштәге яугирҙәрҙе демобилизациялау тураһында закон ҡабул ителгәндән һуң, ҡаланың партия һәм совет органдары еңеүсе яугирҙәрҙе ҡаршылау өсөн саралар планы эшләй. Район комиссиялары төҙөлә, тимер юл вокзалында һәм пристанда демобилизацияланыусыларҙы ҡабул итеү өсөн махсус пункттар йыһазландырыла. Ҡаланың бөтә предприятиеларында һәм ойошмаларында буш вазифалар һәм эш урындары асыҡлана. Һәр демобилизацияланған яугирҙе өйөнә ҡайтҡандан һуң бер айҙан да һуңламай эшкә урынлаштырыу бурысы ҡуйыла.

27 июлдә Берлиндан сыҡҡан эшелондың республика сиктәренә яҡынлашыуы билдәле була. «Өфөләрҙең көтөр түҙемлеге ҡалмағас,— тип яҙа газета,— улар, кемдәрҙең ҡайтып килеүен белер өсөн, яҡташ яугирҙәргә самолет ебәрергә ҡарар итә... Осрашыу Бөгөлмәлә була...»[1] Ҡайтып килеүселәрҙең исемлеген һәм адрестарын алғас, ҡала Советы башҡарма комитеты хеҙмәткәрҙәре уларҙы райондарға тарата. Комсомолдар яугирҙәрҙең ғаиләләре йәшәгән квартираларға ҡыуаныслы хәбәрҙәр менән йүнәлә.

Оҙаҡ көтөлгән сәғәттәр яҡынлаша... 28 июлдә төштән һуң Башҡортостан баш ҡалаһының хеҙмәтсәндәре вокзал алды майҙанына йыйыла. Еңеүселәрҙе икмәк-тоҙ, сәскә шәлкемдәре менән ҡаршылайҙар. Эшелон начальнигы рапорт бирә:

— Өфөгә Берлиндан 290 өфөлө һәм Черниковск кешеһе, ауыл райондарынан 160 яугир ҡайтты.

---

[1] «Красная Башкирия», 1945, 29 июль.

Еңеүсе яугирҙәрҙең өйгә ҡайтыуы. 1945 йыл, август.



Трибунала республиканың, Өфө һәм Черниковскиҙың партия һәм совет органдары етәкселәре. Улар яҡташтарын еңеү һәм өйҙәренә ҡайтыу менән ҡотлай, тыныс хеҙмәттә уңыштар теләй. Митинг кисен һуң ғына ябыла. Демобилизацияланыусыларҙы машиналар менән квартираларға тараталар.

1945 йылда ҡалаға бөтәһе 5,4 мең элекке һалдат һәм офицер ҡайта. Уларға материаль-көнкүреш ярҙам күрһәтәләр һәм эшкә урынлаштыралар. Йыл аҙағына 3118 кеше предприятиеларҙа һәм ойошмаларҙа эшләй ҙә инде. Элекке яугирҙәр квалификацияларын күтәрә йәки яңы һөнәр үҙләштерә алһын осон, бөтә ерҙә лә барлыҡ шарттар тыуҙырыла. Сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт эсендә шул уҡ йылда 1307 яугир үҙенең квалификацияһын күтәрә[1]. Улар, шулай уҡ һәләк булған яугирҙәрҙең ғаиләләре Коммунистар партияһы һәм Совет дәүләтенең иғтибары һәм хәстәрлеге менән солғап алына. Уларҙы материаль-көнкүреш хеҙмәтләндереү мәсьәләләре партия комитеттары ултырыштарында, хеҙмәтсәндәр депутаттары Советтары сессияларында күп тапҡырҙар тикшерелә. Атап әйткәндә, 1945 йылдың 14 декабрендә ҡала Советы сессияһында, күрелгән саралар һөҙөмтәһендә өфөләрҙең был категорияһына 640 квартира бирелде һәм 1713 кешенең квартираһы ремонтланды, аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына өҫтәмә фондтар бүленде, тип билдәләнә.

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1080, л. 56.

Һуғыштан һуңғы тәүге йылдарҙа ВКП(б) өлкә һәм ҡала комитеттары етәкселегендә (1946 йылдың апреленән алып 1953 йылдың декабренә тиклем партия Өлкә Комитетының беренсе секретары һәм бер үк ваҡытта, 1950 йылдың мартына тиклем, ҡала комитетының беренсе секретары С. А. Ваһапов була, ул партияның XIX съезында Үҙәк Комитет ағзаһы итеп һайлана) устав нормалары һәм талаптарына яраҡлы рәүештә ҡаланың партия һәм башҡа йәмәғәт ойошмалары эше үҙгәртеп ҡорола. 1946—1947 йылдарҙа тәүге партия, профсоюз һәм комсомол ойошмаларында отчет-һайлау йыйылыштары, район һәм ҡала партия һәм комсомол конференциялары була.

Партия ойошмалары нығына, социалистик төҙөлөштөң бөтә участкаларында ла уларҙың роле үҫә, хеҙмәтсәндәр араһында абруйы күтәрелә. КПСС сафтарының үҫеүе бының ышандырғыс дәлиле булып тора. Әгәр 1946 йылдың 1 ғинуарына ҡалала (Өфө һәм Черниковск) 12 368 коммунист булһа, 1958 йылдың ошо уҡ датаһына уларҙың һаны 24 608-гә етә[1]. Ҡала партия ойошмаһының составы һиҙелерлек үҙгәрә. 1948 йылда ойошманың өстән ике өлөшө тип әйтерлек һуғыш йылдарында һәм унан һуң ҡабул ителгән коммунистарҙан тора. Был коммунистар, бигерәк тә йәш партия ағзалары, араһында политик тәрбиәне, теоретик әҙерлекте көсәйтеүҙе талап итә. Өфөлә һәм Черниковскиҙа киске марксизм-ленинизм университеттары асыла, райкомдар эргәһендә киске партия мәктәптәре төҙөлә, предприятиеларҙа һәм ойошмаларҙа түңәрәктәр һәм политик мәктәптәр һаны арта.

Партия комитеттары производство коллективтарында социалистик ярышҡа етәкселек итә, алдынғы тәжрибәне өйрәнеү, дөйөмләштереү һәм таратыу менән ныҡышмалы һәм маҡсатҡа яраҡлы шөғөлләнә. Хеҙмәтсәндәрҙең ижади башлангыстарын үҫтереүгә экономик конференциялар, төҙөүселәр һәм башҡаларҙың конференцияһы кеүек күп һанлы дөйөм ҡала саралары хеҙмәт итә.

Ҡала халҡының хеҙмәт һәм политик активлығы бигерәк тә КПСС-тың XX съезынан һуң социалистик демократияны артабан үҫтереү, партия тормошо һәм дәүләт етәкселегенең ленинсы нормаларын аяҡҡа баҫтырыу шарттарында үҫә. Был хаҡта, атап әйткәндә, КПСС Үҙәк Комитетының промышленносҡа һәм төҙөлөшкә идара итеүҙе камиллаштырыу тураһындағы февраль (1957 йыл) Пленумы ҡарарҙарын өфөләрҙең киң һәм ижади тикшереүе асыҡ һөйләй. Тикшереү бөтә коллективтарҙа ла үтә. Булып үткән йыйылыштарҙа 9 меңдән ашыу кеше сығыш яһай, 250-гә яҡын конкрет тәҡдим индерелә. 100 меңдән ашыу Өфө кешеһе 1958 йылда ете йыллыҡ пландың контроль һандарын тикшереүҙә ҡатнаша, уларҙың 8,5 меңгә яҡыны үҙ тәҡдимдәрен индерә[2].

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 7, д. 118, л. 148; ф. 3151, оп. 1, д. 13, л. 103; ф. 342, оп. 44, д. 37, л. 1.

[2] «Советская Башкирия», 1957, 21 июль; 1958, 12 декабрь.

Башҡортостандың үҙ ирке менән Россияға ҡушылыуының 400 йыллығын (1957 йылдың июне) һәм Бөйөк Октябрҙең 40 йыллығын байрам итеү ҡала тормошонда ҙур ваҡиғалар булып тора. Улар халыҡтар дуҫлығын артабан нығытыу билдәһе аҫтында үтә, хеҙмәтсәндәрҙе совет патриотизмы һәм пролетар интернационализм рухында тәрбиәләүгә булышлыҡ итә. Был даталарҙы өфөләр ҙур рухланыу шарттарында билдәләй. Яңы Өфө нефть эшкәртеү, кабель, паровоздар ремонтлау заводтары, шулай уҡ 3-сө ТЭЦ һәм 3-сө төҙөлөш-монтаж тресы коллективтары данлыҡлы юбилейҙар хөрмәтенә ярыш инициаторҙары булып сығыш яһай. Ҡала предприятиеларында йыһаздарҙы ҡулланыуҙың экономия режимын нығытыуҙың йәмғәт смотрҙары үткәрелә, рационализаторлыҡ тәҡдимдәрен индереү буйынса комиссиялар төҙөлә. Уларҙа меңдәрсә эшселәр, инженер-техник работниктар һәм хеҙмәткәрҙәр ҡатнаша. Ҡабул ителгән йөкләмәләр уңышлы үтәлә. Илебеҙ өфөләрҙән миллиондарса һумға пландан тыш продукция ала.

Рәсми тантаналар алдынан 1957 йылдың июнендә йәштәрҙең беренсе республика фестивалендә ҡатнашҡан 2 меңгә яҡын егет һәм ҡыҙ ҡала халҡына сағыу, үҙенсәлекле сәнғәт күрһәтә. Улар парктарҙа, баҡсаларҙа, клубтарҙа, Культура һарайҙарында сығыш яһай. Өфөлә райондарҙың йыр байрамдары, массовый ял итеүҙәр, СССР халыҡтарының дуҫлығына арналған тематик кисәләр үтә.

1957 йылдың 16 июнендә тантаналы шарттарҙа Башҡортостандың үҙ ирке менән Россияға ҡушылыуының 400 йыллығы иҫтәлегенә Дуҫлыҡ монументына нигеҙ һалына. Совет майҙанында үткәрелгән, республиканың икенсе Ленин ордены менән наградланыуына арналған митингыла меңдәрсә хеҙмәтсән ҡатнаша.

Верховный һәм урындағы Советтарға һайлауҙар ҡаланың ижтимағи-политик тормошонда мөһим роль уйнай. Улар ысын-ысындан бөтә халыҡ байрамына әйләнә һәм Коммунистар партияһы политикаһын тотош яҡлауҙың ышандырғыс дәлиле булып хеҙмәт итә.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ҡала Советы составында етди үҙгәрештәр була. 1957 йылдың мартында уға 662 депутат һайлана, уларҙың 67,3 процентын (1947 йылда — 24,1 процент) эшселәр тәшкил итә. Был социализм төҙөүҙе тамамлау этабында дәүләткә идара итеүҙә эшселәр синыфының роле үҫә барыуының сағыу иҫбатланышы [1].

Советтарҙың массалар менән бәйләнеше һәр яҡлап киңәйә һәм нығына, уларҙың аппараты камиллаша, ойоштороу эше һиҙелерлек йәнләнә. Улар экономика һәм ҡаланы төҙөкләндереү, хеҙмәтсәндәрҙең тормош хәлен яҡшыртыу мәсьәләләре менән тәрәнерәк шөғөлләнә башлай. Советтарҙың даими комиссиялары аша депутаттар һәм активистар хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөнөң бөтә өлкәләренә

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1971, л. 11, 13; д. 1314, л. 46.

лә үтеп инә, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә тәьҫирле ярҙам күрһәтә. Мәҫәлән, 1954 йылда Өфө ҡала Советының төҙөкләндереү буйынса комиссияһы депутаттарҙан һәм активтан 5 бригада төҙөй. Уларҙың һәр береһе айырым участкала: урамдарға яҡтылыҡ биреү һәм ҡаланы электр энергияһы менән тәьмин итеү, йәшелләндереү, санитар таҙартыу, юл һәм мунса-кер йыуыу хужалығы менән шөғөлләнә. Бригадаларҙа эшкә белгестәрҙе йәлеп итеү комиссияларға ҡала Советы башҡарма комитеты ҡарарҙарының үтәлеүен квалификациялы контролдә тоторға, хужалыҡтың айырым яҡтарын тәрән өйрәнергә, хеҙмәтсәндәрҙе хеҙмәтләндереүҙең актуаль проблемаларын башҡарма комитет тикшереүенә индерергә мөмкинлек бирә. Уларҙың тәҡдимдәре буйынса, мәҫәлән, асфальт түшәлмәләрҙең сифаты тураһындағы, һыу менән тәьмин итеүҙең торошо һәм перспективалары тураһындағы, мунсалар төҙөү тураһындағы һәм башҡа мәсьәләләр ҡарала [1]. Һаулыҡ һаҡлау, мәғариф, торлаҡ төҙөү комиссиялары күп эш күрһәтә.

Дуҫлыҡ монументы.



Ҡаланың производство һәм политик тормошонда профсоюз ойошмаларының роле һиҙелерлек күтәрелә. Улар массаларҙың ижади активлығын үҫтереүгә, хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәт тәрбиәләүгә күп иғтибар бүлә.

Профсоюз ойошмалары хеҙмәтсәндәрҙе производство, йәмәғәт эштәре менән идара итеүгә йәлеп итеүҙе көсәйтә. Был проблеманы хәл итеүҙә мөһим сара булып КПСС Үҙәк Комитетының декабрь (1957 йыл) Пленумынан һуң производство кәңәшмәләренең эшмәкәрлеген яҡшыртыу тора. 1958 йылдың мартына ҡалала күп меңле активҡа таяныусы 166 даими производство кәңәшмәһе эшләй. Ленин орденлы Өфө нефть эшкәртеү заводында 1958 йыл дауамында дөйөм завод һәм цех производство кәңәшмәләренең 5 ултырышы була. Уларҙа эшләнгән тәҡдимдәр буйынса ҡайһы бер цехтар берләштерелә, был иһә административ-хужалыҡ тотоноуҙарын 240 мең һумға

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 2093, л. 1—10; д. 2092, л. 20—29.

кәметергә мөмкинлек бирә. Кәңәшмәләрҙә ҡатнашыусылар нефть продукттарын юғалтыуҙы кәметеү буйынса 23 тәҡдим индерә[1].

Профсоюздар эшселәрҙең квалификацияһын күтәреү, уларҙың хеҙмәт һәм көнкүреш шарттарын яҡшыртыу менән тәьҫирлерәк шөғөлләнә башлай. Улар торлаҡ бүлеүгә, сауҙа һәм йәмәғәт туҡланыуы предприятиеларының эшенә контролде көсәйтә. Быға 1947 йылдан коллектив договорҙар төҙөү практикаһын аяҡҡа баҫтырыу ҙа, шулай уҡ КПСС-тың XX съезынан һуң фабрика-завод комитеттарының хоҡуҡтарын киңәйтеү ҙә булышлыҡ итә.

Комсомол комитеттары ҡала партия ойошмаһының лайыҡлы ярҙамсылары булып тора. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа улар экономиканы үҫтереүгә, оборона-патриотик һәм спорт эштәрен, художестволы үҙешмәкәрлекте йәйелдереүгә һиҙелерлек өлөш индерә. Комсомолдар бөтә ижтимағи-политик кампанияларҙа актив ҡатнаша. Улар йәштәрҙең биш йыллыҡ пландарҙы ваҡытынан алда үтәү өсөн ярышына етәкселек итә. ВЛКСМ комитеттары экономия һәм һаҡсыллыҡ өсөн көрәштә бигерәк тә күп эшләй. Был үҫеп килеүсе быуында производство эштәре өсөн яуаплылыҡ тойғоһо, үҙ предприятиеларында хужа булыу тойғоһо тәрбиәләүҙең төп линияларының береһе була.

ВЛКСМ-дың 40 йыллығы хөрмәтенә йәйелдерелгән һаҡсыллыҡ походы һиҙелерлек һөҙөмтәләр бирә. 3-сө трест комсомолдары төҙөлөш майҙансыҡтарында һәм эш урындарында тәртип урынлаштыра, материалдарҙың ныҡлы иҫәбен булдыра. Был бары тик 1957 йылда ғына ла комсомол копилкаһына 800 мең һумға яҡын аҡса индерергә мөмкинлек бирә. Өфө нефть эшкәртеү заводының йәш производственниктары нефть продукттары, пар, электр энергияһы, реагенттарҙы тотоноуға контроль ойоштора. Технологик юғалтыуҙарҙы кәметеү иҫәбенә илебеҙ өҫтәмә рәүештә 3 мең тоннанан ашыу нефть продукттары ала[2]. ВЛКСМ-дың 40 йыллығы хөрмәтенә Өфө егеттәре һәм ҡыҙҙары комсомол копилкаһына бөтәһе 120 миллион һумға яҡын аҡса индерә[3].

Ҡала комсомолдары социалистик ярыштың яңы формаһы — коммунистик хеҙмәт өсөн хәрәкәттең инициаторҙары булып сығыш яһай. Уға Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводының АВТМ-1 ҡоролмаһынан Ғүмәр Теләшев — хәҙер Социалистик Хеҙмәт Геройы — етәкселегендәге йәштәр коллективы беренсе булып ҡушыла. 1958 йылдың 21 ноябрендә ҡабул ителгән «Бурыстарҙа» эшселәр хеҙмәткә ысын коммунистик мөнәсәбәттең өлгөләрен раҫлай. Юғары производство йөкләмәләре ҡабул итеү менән бергә, улар коммунистик әхлаҡ принциптарын һаҡлау өсөн поход башлай. «Йәмәғәт мәнфәғәттәрен шәхси мәнфәғәттәрҙән өҫтөн ҡуйырға, үҙеңдең бар булмышыңды йәмғиәткә

---

[1] «Советская Башкирия», 1958, 1 октябрь.

[2] Винкельман А. П., Сорина Р. М. Ветеран башкирской нефтепереработки. Өфө, 1968, 69-сы бит.

[3] Комсомол Башкирии. Өфө, 1959, 13-сө бит.

арнарға тигән коммунистик принципты күҙ ҡараһы кеүек һаҡларға, — тип әйтелә «Бурыстарҙа». — Производствола, уҡыуҙа, көнкүрештә өлгө булырға. Үҙеңде бөтә ерҙә лә коммунистарса тоторға. Оло ысын дуҫлыҡ менән йәшәргә. Дуҫың өсөн утҡа ла, һыуға ла инергә! Бөтә ҡайғы һәм шатлыҡтар ҙа — уртаҡ. Бер-береңә эштә һәм тормошта ярҙам итергә, үҙеңдең тәжрибәң менән уртаҡлашырға» [1].

Коммунистик хеҙмәт өсөн ярышҡа К. Чаплыгина менән А. Шакулинаның (Өфө синтетик спирт заводы) йәштәр сменалары, И. Негодин менән В. Черняевтың (Өфө нефть эшкәртеү заводы) технологик бригадалары һәм башҡалар ҡушыла.

Һуғыштан һуңғы осорҙа республиканың баш ҡалаһы ауыл хужалығын артабан үҫтереүгә ҙур ярҙам күрһәтә. Ҡала предприятиеларында запас частар сығарыу юлға һалына, МТС-тарға һәм совхоздарға йыһаз һәм материалдар ебәрелә. Бары тик 1946 йылда ғына ла Өфө менән Черниковскиҙың промышленность предприятиелары үҙҙәре шефлыҡ иткән 55 МТС-ҡа 104 станок, 60 электр моторы бирә, 18 поход мастерскойы булдырыла. Ауыл хужалығы техникаһын ремонтларға 240 белгес урындарға китә [2].

Ҡаланың ауылға ярҙамы КПСС Үҙәк Комитетының сентябрь (1953 йыл) Пленумынан һуң бигерәк тә арта. 1954 йылдың яҙына Өфө предприятиелары 7 ауыл районына һәм 36 МТС-ҡа шефлыҡ итә. Промышленность предприятиелары 1955 йылда колхоздарға 149 станок һәм сварка агрегаты, 2 миллион һумлыҡ инструменттар, запас частар һәм материалдар бирә. 1954 йылдың яҙында ҡаланың шефлыҡ ярҙамы күрһәтеүсе предприятиелары коллективтары үҙҙәренең трактор паркы менән 5,5 мең гектарҙан ашыу сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе күтәрә, ә көҙ шул тиклем үк ерҙе туңға һөрә [3].

Кадрҙар менән етди ярҙам күрһәтелә. Сиҙәм һәм ҡалдау ерҙәрҙе үҙләштереүҙә меңдән ашыу Өфө кешеһе ҡатнаша. Промышленность предприятиеларынан МТС һәм совхоздарға 219 инженер һәм техник, 150-нән ашыу тракторсы һәм комбайнер китә [4].

Коммунистар партияһы социалистик ҡаланың кәмендә 30 мең ныҡлыраҡ әҙерлекле вәкилен ауылда даими эшләү өсөн ебәрергә саҡыра. Өфөлә йәшәүселәрҙең күбеһе был саҡырыуҙы ҡайнар хуплай һәм артта ҡалған колхоздарға китергә теләк белдерә. Ҡала вәкилдәре ауылға производствоны заманса индустриаль ойоштороу тәжрибәһе, юғары хеҙмәт культураһы алып килә, улар техниканы һәйбәт белеүен күрһәтә. Утыҙ меңселәр яңы эш урындарында үҙҙәрен ыңғай яҡтан күрһәтә. Мәҫәлән, Өфө эшсеһе В. М. Бобрук Зианчура районының «Дружба» колхозы председателе вазифаһын һәйбәт башҡара; Өфө предприятиеларының элекке етәкселәренең береһе

---

[1] «Ленинец», 1958, 22 ноябрь.
[2] «Красная Башкирия», 1946, 1 август; 1947, 24 ғинуар, 9 март.
[3] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1823, л. 31.
[4] Шунда уҡ.

Д. И. Ремидовский Әлшәй районының «Завет Ленина» колхозын алдынғылар рәтенә сығара.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ҡала халҡы сәсеүҙә, мал аҙығы әҙерләүҙә, сәсеүлектәрҙе эшкәртеүҙә, уңыш йыйыуҙа торған һайын күберәк ҡатнаша. Мәҫәлән, 1951 йылдың урып йыйыу кампанияһында Өфөнөң 3,8 мең кешеһе һәм 302 ҡала автомашинаһы ҡатнаша. 1954 йылдың көҙөндә республиканың колхоз һәм совхоздарында 11,5 мең Өфө эшсеһе, хеҙмәткәре һәм студенты, 300-ҙән ашыу автомашина ҡатнаша. Бынан тыш, транспорт предприятиелары баҫыуҙарҙан ҡалаға 15 мең тоннанан ашыу картуф һәм йәшелсә ташый[1]. Йәштәр сиҙәм игенен йыйыуҙа актив ярҙам күрһәтә.

Ҡаланың шефлығы ауыл хужалығының материаль-техник базаһын нығытыу һәм камиллаштырыу менән генә сикләнмәй. Өфөнөң партия ойошмаһы ауылда ойоштороу һәм идеология эшен яҡшыртырға ярҙам итә. Күргәҙмә агитация средстволары әҙерләү, клубтарҙы йыһазландырыу өсөн күп нәмә эшләнә. Ҡаланың художестволы үҙешмәкәр коллективтары ауылдарҙа концерттар күрһәтә, халыҡ таланттарының ижади үҫешенә ярҙам итә.

Өфөләр бөтә совет халҡы менән бергә империалистик көстәрҙең СССР-ға һәм халыҡ демократияһы илдәренә ҡаршы соҡсоноуҙарын иғтибар менән күҙәтә. Улар бөтә донъяла тыныслыҡ өсөн көрәшкә актив ҡушыла. Ҡала халҡы был изге эшкә үҙ өлөшөн бөтәһенән элек Совет дәүләтенең ҡеүәтен нығытыу, экономиканы артабан үҫтереү, яңы хеҙмәт ҡаҙаныштары менән индерә. 1950 йылда Өфөнөң бөтә өлкән халҡы тыныслыҡ яҡлыларҙың Бөтә Донъя конгресы даими комитетының атом ҡоралын тыйыу һәм уны беренсе булып ҡулланған хөкүмәтте хәрби енәйәтсе тип иғлан итеү тураһындағы Стокгольм саҡырыуына ҡул ҡуя.

Ҡаланың ижтимағи-политик тормошонда өфөләрҙең интернациональ бәйләнештәренең киңәйеүе һәм нығыныуы ҙур урын ала. 1956 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында Болгария менән Румынияның, 1957 йылда Бирманың парламент делегациялары була. Ҡунаҡтарҙы предприятие, учреждение һәм уҡыу йорттарының коллективтарында йылы ҡаршылайҙар.

Ҡала предприятиеларында һәм уҡыу йорттарында күп илдәрҙең вәкилдәре белем, тәжрибә ала. Өфөләр 1957 йылда статистика техникумын тамамлаған Корея йәштәрен тыуған илдәренә туғандарса оҙата. Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводы сит ил белгестәре өсөн алдынғы тәжрибәне үҙләштереү мәктәбенә әүерелә. 1955 йылдан башлап бында халыҡ демократияһы илдәренән, Африканан килгән практиканттар өйрәнә. Күп кенә дәүләттәрҙең нефтяниктар делегациялары заводта айырым производстволар менән таныша.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1823, л. 32; ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 29, д. 92, л. 13.

Политик активлыктың күтәрелеүе массаларҙың ҙур хеҙмәт энтузиазмы менән бергә бара. Каланың эшселәре һәм интеллигенцияһы, Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәтенең эске һәм тышҡы политикаһын ҡайнар яҡлап, бөтә хужалыҡ-политик кампанияларында актив ҡатнашып, үҙҙәренең эш урындарында фиҙакәр эшләй.

## § 2. Өфөнөң артабанғы индустриаль үҫеше

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ҡаланың промышленность етештереүе эвакуацияланған предприятиеларҙы сафҡа индереү һәм элеккеләрен киңәйтеү иҫәбенә һиҙелерлек арта. Шулай ҙа һуғыш осороноң экономикаһы, нигеҙҙә фронт заказдарын үтәп, бер яҡлыраҡ үҫә, был ҡайһы бер кире күренештәргә килтерә. Продукция етештереү хеҙмәт һәм материаль тотоноуҙарҙы иҫәпкә алмайынса, теләһә ниндәй юл менән арттырыла, ҡорамалдар туҙып бөтә. Паровоздар ремонтлау заводында, мәҫәлән, һуғыштың һуңғы өс йылында планлаштырылған 400 станоктың ни бары 37-һе генә ремонтлана. Иҫкәртеү ремонты графигын үтәмәү арҡаһында тау ҡорамалдары заводында 1945 йылда станоктар паркының өстән бер өлөшө тик тора [1]. Һуғыштан һуңғы тәүге йыл ҡыйынлыҡтары эшсе көстәрҙең бик ныҡ кәмеүе менән тағы ла ҡатмарлана. Был юғары квалификациялы белгестәрҙе реэвакуациялау һәм 8 сәғәтлек эш көнөн аяҡҡа баҫтырыу һөҙөмтәһендә шулай килеп сыға. 1946 йылда Өфөлә 19 меңдән ашыу эшсе етешмәй [2].

Предприятиеларҙы тыныс көндәр продукцияһын сығарыуға массовый күсереү ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙыра. Ҡыҫҡа ваҡытта изделиеларҙың номенклатураһын билдәләргә, етештереүҙең яңы технологияһын эшләргә, ҡоролмаларҙың бер өлөшөн алмаштырырға, кадрҙарҙы яңынан уҡытырға кәрәк була. Ҡаланың промышленносы сама менән бер йыл эсендә үҙгәртеп ҡорола.

1946 йылда илебеҙ дүртенсе биш йыллыҡ планды үтәргә тотона. Унда Өфөнөң дә урыны билдәләнә. Бөтә предприятиеларҙың да тулайым продукция сығарыуын һиҙелерлек арттырыу, нефть эшкәртеүҙе, халыҡ ҡулланыуы тауарҙары етештереүҙе киңәйтеү, транспорттың эшен яҡшыртыу һәм артабанғы фәнни-техник прогреҫҡа өлгәшеү бурыстары ҡуйыла. Был маҡсаттарға ҙур капитал һалыуҙар бүленә.

Ҡала хеҙмәтсәндәре һуғыштан һуңғы тәүге биш йыллыҡ пландарын ваҡытынан алда үтәү өсөн ярыш йәйелдерә. 1947 йыл аҙағына стахановсылар бөтә сдельщиктарҙың 64,5 процентын тәшкил итә [3]. Һуғыштан һуңғы тәүге йылдар производствоһы новаторҙары-

---

[1] «Красная Башкирия», 1946, 9 март.
[2] Очерки по истории Башкирской АССР, II том (Советский период), 457-се бит.
[3] «Красная Башкирия», 1948, 22 февраль.

П. Б. Удалов.



ның алдынғы эш ысулдары киң таралыу таба. Өфө нефть эшкәртеү заводында П. Б. Удалов етәкселегендә АВТ ҡоролмаһы коллективы, Мәскәү мастеры В. Морозов өлгөһөндә, хеҙмәткә стахановсылар ысулын индереү планын ҡабул итә. Уны тормошҡа ашырыу 4 миллион һумдан ашыу аҡсаны экономияларға булышлыҡ итә. Йөҙҙәрсә алдынғы эшсенең ижади өлөшө коллективҡа 1948 йылда уҡ биш йыллыҡ аҙағына планлаштырылған производство кимәлен яуларға мөмкинлек бирә. Дәүләт планын уңышлы үтәгәне һәм мөһим нефть продукттарын сығарыуҙы һиҙелерлек арттырғаны өсөн 1948 йылдың майында завод Ленин ордены менән наградлана.

Дүртенсе биш йыллыҡта производстволағы даими факторҙарҙы файҙаланыу нигеҙ итеп алынған ярыш киң формаларҙа тарала. Шул йәһәттән эштең тиҙләтелгән ысулдары өсөн хәрәкәт характерлы күренеш була. Был ысулдарҙың инициаторҙары булып Мәскәү токары Павел Быков менән Ленинград токары Генрих Борткевич сығып яһай. Уларҙың тәжрибәһен беренселәрҙән булып паровоздар ремонтлау заводы токарҙары ҡабул итә; станоктар паркының 20 проценттан ашыуы күтәренке режимдарҙа эшләй башлай. Тау ҡорамалдары заводында металл эшкәртеүҙең яңы ысулдарын токарь П. Меньшиков үҙләштерә, ул хеҙмәт етештереүсәнлеген 3—4 тапҡырға күтәрә [1]. Тиҙерәк эшләүселәр ярышы моторҙар эшләү заводында киң тарала. Бында шулай уҡ Мәскәүҙең «Калибр» заводы мастеры Н. А. Российский башланғысы буйынса стахановсыларса коллектив хеҙмәт өсөн хәрәкәт йәйелдерелә. Мотор эшләүселәрҙең тәжрибәһе бөтә предприятиеларҙа ла таратыла. Бригадаларҙан һәм ҡоролмаларҙан башланған хәрәкәт эрерәк производство подразделениеларын солғап ала. Электр ҡорамалдары һәм штамповка заводтарында 4-әр цех «Стахановса коллектив хеҙмәт цехы» тигән почетлы исемде йөрөтә.

1948 йылда Краснохолм камволь комбинаты мастеры А. С. Чутких яҡшы сифат бригадаһы тигән исем өсөн, һәр эшсе беренсе сортлы ғына продукция сығарһын өсөн ярыш башларға тәҡдим итә. Өфө кизе-мамыҡ комбинатында туҡыусы П. Тарасова менән бригадир Н. Смирнова, унан һуң бөтә 24 комсомолец-йәштәр бригадаһы һәм 560 йәш эшсе уның өлгөһөнә эйәрә. Был предприятиеға 1948 йылда

[1] Улин В., Янгуразов А. Развитие промышленности Башкирии. Өфө, 1958, 68-се бит.

беренсе сортлы продукция сығарыуҙы пландағы 93 процент урынына 98 процентҡа еткерергә мөмкинлек бирә [1]. Продукцияның сифатын күтәреү өсөн хәрәкәт масштабтары тураһында түбәндәге һандар һөйләй: был хәрәкәттә тәүге йылда уҡ Өфөлә һәм Черниковскиҙа 1500-ҙән ашыу бригада ҡатнаша. 500-ҙән ашыу коллектив «Иң яҡшы сифат бригадаһы» исеменә лайыҡ була [2].

1949 йылға ярыштың бөтә формаларында ҡаланың 90 процент самаһы эшсеһе, инженер-техник работниктары һәм хеҙмәткәрҙәре ҡатнаша [3]. Ижади инициатива, юғары производство күрһәткестәренә өлгәшеү Өфө һәм Черниковск предприятиеларына дүртенсе биш йыллыҡ заданиеларын 1950 йылдың декабрь башына үтәргә мөмкинлек бирә. Илебеҙ өҫтәмә рәүештә йөҙ миллиондарса һумлыҡ продукция ала.

Биш йыллыҡ йылдарында Өфөнөң промышленность продукцияһы күләме, нигеҙҙә, технологик процестарҙы камиллаштырыу, производство майҙандарын рационалерәк файҙаланыу һәм ҡорамал бермегенән продукция алыуҙы арттырыу иҫәбенә 63 процентҡа арта. 29 предприятие биш йыллыҡты 4 йылда һәм унан да аҙыраҡ ваҡытта үтәй, 4 мендән ашыу стахановсы 2—3 йылда теүәлләй [4].

Асылда яңы ҡеүәттәрҙе индермәйенсә, Черниковск предприятиелары ла биш йыллыҡ планды байтаҡҡа арттырып үтәй. Нефть эшкәртеү бер нисә тапҡырға, электр лампалары сығарыу 6 тапҡырға, урындағы һәм кооператив промышленность продукцияһын әҙерләү 1,5 тапҡырҙан ашыуға арта [5].

Социалистик ярыш бишенсе биш йыллыҡта (1951—1955) киң ҡолас ала. Өфөләр ҡала экономикаһының бөтә тармаҡтарын, хеҙмәтсәндәрҙең материаль тормош һәм культура кимәлен артабан күтәреү мәсьәләләрен хәл итә. Предприятиеларҙа сифат күрһәткестәрен яҡшыртыу өсөн көрәш көсәйә. Был хәрәкәткә Мәскәү өлкәһенең «Пролетарская победа» фабрикаһы инженеры Ф. Л. Ковалевтың эш ысулы ҙур тәьҫир яһай. Ул хеҙмәттең алдынғы алымдарын системалы һайлап алыуҙы, дөйөмләштереүҙе һәм уларҙы планлы рәүештә производствоға индереүҙе ойоштора.

Күп кенә заводтарҙа, фабрикаларҙа һәм төҙөлөштәрҙә методик бюролар, комиссиялар, советтар, техник кәңәшмәләр төҙөлә. Улар новаторҙарҙың иң яҡшы эш алымдарын өйрәнә һәм һайлап ала, шуға нигеҙҙә алдынғы тәжрибәне дөйөмләштергән техник инструкциялар төҙөй, эшселәрҙе производство новаторҙарының эш алымдарына өйрәтеү буйынса практик кәңәштәр бирә. Өфө нефть эшкәртеү заводында оператор М. Б. Шәймөхәмәтов бригадаһының эш алым-

---

1 Этапы большого пути. Комсомол Башкирии в цифрах и фактах. 1917—1970 гг. Өфө, 1970, 141-се бит.
2 «Красная Башкирия», 1949, 21 июнь, 27 декабрь.
3 Шунда уҡ, 1949, 4 март.
4 ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 29, д. 1, л. 21; д. 11, л. 42.
5 Шунда уҡ, ф. 3151, оп. 16, д. 8, л. 63.

М. Б. Шәймөхәмәтов.



дары өйрәнелә һәм производствоға индерелә, бригада технологик режимды оҫта алып барыу арҡаһында заданиеларҙы системалы рәүештә арттырып үтәй һәм тәүлек һайын пландан тыш байтаҡ продукт эшләп сығара. Өфө кизе-мамыҡ комбинатында Ф. Л. Ковалев ысулы буйынса 1435 кеше уҡытыла, был хеҙмәт етештереүсәнлеген 30,5 процентҡа күтәрә. Норманы үтәүсе эшселәр һаны 90 проценттан 96,5 процентҡа күтәрелә [1].

Бишенсе биш йыллыҡ йылдарында меңдәрсә өфөләр юғары хеҙмәт күрһәткестәре менән дан ҡаҙана. Кабель заводында токарь Б. Г. Бирюков менән аппаратсы З. М. Нуғаева, яҙыу машиналары заводында строгальщик Н. И. Шабрин менән слесарь Х. Ш. Нәсибуллин, авторемонт заводында эшселәр Д. И. Богданов менән А. Т. Мөхәмәтов ике биш йыллыҡ нормаларын тултыра.

Өфө һәм Черниковскиҙың промышленносы ла бишенсе биш йыллыҡ заданиеларын ваҡытынан алда тамамлай, был иһә тулайым продукцияла ҙур үҫеште тәьмин итә. Черниковск предприятиеларында тулайым продукция сығарыу, мәҫәлән, ике тапҡырҙан да арта. Бер нисә йөҙ яңы продукция эшләп сығарыу үҙләштерелә. Хеҙмәт етештереүсәнлеге һиҙелерлек күтәрелә: моторҙар төҙөү заводында ул —75 процентҡа, Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводында —1,5 тапҡырға, 3-сө треста 2 тапҡырға арта [2]. Промышленностың бөтә тармаҡтарында ла ҙур үҙгәрештәр була. Производствоның техник кимәле һәм культураһы үҫә. Предприятиеларҙа ауыр эш процестарын комплекслы механизациялау һәм автоматлаштырыу башлана, бөтә ерҙә лә иҫкергән ҡорамалдар алмаштырыла һәм модернизациялана, прогрессив технологик процестар ҡулланыла.

Һуғыштан һуңғы ике биш йыллыҡты уңышлы үтәү һөҙөмтәһендә Өфөлә промышленность етештереүе күләме 4 тапҡырҙан ашыуға арта. Был — ҡаланың экономикаһын артабан үҫтереү өсөн һәйбәт шарттар тыуҙыра. 1956—1958 йылдарҙа тулайым продукция сығарыу тағы ла 66,7 процентҡа, ә хеҙмәт етештереүсәнлеге 38,1 процентҡа арта [3]. Техник реконструкция киң масштабтарҙа дауам итә. Моторҙар эшләү заводында ғына ла ҡойоу һәм механика цехтарында

[1] «Красная Башкирия», 1951, 1 июль.
[2] ПА БОК КПСС, ф. 3151, оп. 21, д. 50, л. 10, 19, 94, 113.
[3] Шунда уҡ, ф. 342, оп. 44, д. 7, л. 94; д. 30, л. 17.

автоматик ағым линиялары ҡуйыла, 232 берәмек ҡорамал модернизациялана, деталдәрҙе электр осҡоно һәм ультратауыш менән эшкәртеү һ. б. индерелә [1].

Нефть эшкәртеү һәм нефть химияһы промышленносы бигерәк тә тиҙ үҫә. 1958 йылда ҡалалағы тулайым промышленность продукцияһы етештереүҙең өстән бере уның өлөшөнә тура килә. 1951 йылдың уртаһына Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводының беренсе сиратын төҙөү тамамлана. 21 июлдә 1-се һанлы электр менән тоҙһоҙландырыу ҡоролмаһы начальнигы М. С. Зонов нефть ҡабул итергә команда бирә. Ике көндән һуң ҡоролма нормаль технологик режимға сыға. 25 июлдә 1-се һанлы АВТ ҡоролмаһының өлкән операторы Анатолий Зеленкин сменаһы тәүге продукция — бензин эшләп сығара. Завод сафтағы предприятиелар иҫәбенә инә. Һуңынан башҡа производстволар эшләй башлай. 1955 йылда заводты ҡороу нигеҙҙә тамамлана.

Йәш коллектив тәүге көндәрҙән үк яңы технологик процестарҙы үҙләштереүҙә юғары темп ала, производство резервтарын эҙләү һәм эшкә ҡушыу өҫтөндә ныҡышмалы эшләй. Был заводтың ҡеүәтен даими үҫтереүгә, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә, продукцияның үҙкиммәтен кәметеүгә булышлыҡ итә. 1956 йылда ғына ла бында төп технологик ҡоролмаларҙы 15—27 процентҡа арттырырға мөмкинлек биргән 120-нән ашыу камиллаштырыу индерелә. Бер эшсегә етештереү 1956 йылда 42 процентҡа тип әйтерлек күтәрелә [2].

Яңы техника һәм тағы ла камилыраҡ технология базаһында производствоны комплекслы камиллаштырыу Яңы Өфө заводы коллективына илебеҙҙең нефть эшкәртеү промышленносының флагманы булырға, был тармаҡтың эре предприятиеһына әүерелергә ярҙам итә.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Ленин орденлы Өфө нефть эшкәртеү заводында ҙур үҙгәрештәр була. Бында ла ҙур капиталь төҙөлөш алып барыла, яңы ҡеүәттәр сафҡа индерелә. Коллектив илебеҙҙә беренсе булып күп кенә технологик процестарҙы: көкөртлө нефттән юғары октанлы бензин, дизель яғыулығы һ. б. алыуҙы үҙләштерә. 1945 йылдан алып 1958 йылға тиклем нефть эшкәртеү бер нисә тапҡырға арта, ә тулайым продукция етештереү 1938 йылға сағыштырғанда тиҫтәләрсә тапҡырға үҫә.

1957 йылдың 12 ноябрендә тармаҡтың иң йәш предприятиеһы — Черниковск (хәҙер КПСС-тың XXII съезы исемендәге Өфө) нефть эшкәртеү заводы сафҡа инә.

Өфө СССР-ҙа эре нефть эшкәртеү үҙәгенә әүерелә. 1945 йылда ни бары 7 төрлө продукция сығарылһа, 1958 йылда ҡаланың өс нефть эшкәртеү заводы коллективтары 40-ҡа яҡын продукция етештерә.

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 41, д. 82, л. 13.

[2] Улин В., Янгуразов А. Развитие промышленности Башкирии, 97—99-сы биттәр.

Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводы. Алғы планда АВТ-1 королмаһы, бында 1951 йылдың 25 июлендә тәүге продукция алына.



Нефть эшкәртеү нигеҙендә ҡала промышленносының яңы тармағы — нефть химияһы үҫә башлай. 1956 йылдың 16 октябрендә уның тәүге предприятиеһы — Өфө синтетик спирт заводы продукция бирә. Предприятие эшләй башлауҙың тәүге ике йылында инженер-новаторҙар Г. В. Туков, Д. А. Рубцов, слесарҙар В. Н. Трубко, Г. И. Кукарев һәм башҡалар технологик процестарҙы, ҡорамалдарҙы файҙаланыуҙы яҡшыртыу буйынса 300-гә яҡын тәҡдим индерә. Уларҙы индереү коллективҡа 1958 йылда продукция эшләп сығарыу планын байтаҡҡа арттырып үтәргә мөмкинлек бирә. Бары тик тәүге өс йылда ғына ла илебеҙ эшкәртеү өсөн 70 миллион бот иген талап ителерлек күләмдә этил спирты ала [1].

Өфө химия заводы тамырынан үҙгәртеп ҡорола, унда яңы төр продукттар етештереү ҡеүәттәре сафҡа индерелә. 1950 йылда тәжрибә рәүешендә 2,4-Д гербицидын сығарыу башлана, 1957 йылда был препаратты етештереү буйынса эре тоннажлы цех сафҡа инә. Ауыл хужалығы өсөн ағыулы химикаттар сығарыу шул уҡ йылда 7 тапҡырға арта [2].

Илебеҙҙең халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуға һәм артабан үҫтереүгә машиналар эшләү һәм металл эшкәртеү предприятиелары һиҙелерлек өлөш индерә. Ҡайһы бер башҡа предприятиелар менән ҡушылған Өфө моторҙар эшләү заводы ҡалала иң ҙур предприятиеға әүерелә.

---

[1] Кочергин Н. Первенец башкирской нефтехимии. Өфө, 1973, 43-сө бит.
[2] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 6, д. 5, л. 4.

С. М. Киров исемендәге завод цехтарының береһендә. 1952 йыл.



Һуғыштан һуң бында комбайн моторҙары, шулай уҡ металл карауаттар, кухня плитәләре, ит турағыстар, кәстрүлдәр сығарыу яңынан башлана. Артабан коллектив фән һәм техниканың һуңғы һүҙенә яуап биреүсе тағы ла ҡатмарлыраҡ продукция, шул иҫәптән юғары етештереүсәнле станоктар, етештереүҙе үҙләштерә.

Тау ҡорамалдары заводы ла үҙенең профилен һәм йөҙөн үҙгәртә. 1951 йылда предприятиены реконструкциялау тамамлана. Ул насостар, оло ҡеүәтле стационар дизелдәргә запас частар һәм тау-байыҡтырыу фабрикалары өсөн төрлө ҡорамалдар әҙерләүгә махсуслаша.

Эвакуацияланған предприятиелар базаһында һуғыш йылдарында барлыҡҡа килгән электр техникаһы промышленносы 1945—1958 йылдарҙа продукция ассортиментын тотош яңырта һәм етештереү күләмен бер нисә тапҡырға арттыра. 1957 йылда был тармаҡтың тулайым продукция хаҡы 300 миллион һумдан артып китә [1].

Өфө электр лампалары заводы 1945 йылда — нормаль яҡтыртҡыс, ә 1947 йылдан башлап миниатюр лампалар етештереүгә күсә. Яңы цехтар сафҡа индерелә, Мәскәү электр лампалары заводы ярҙамында тағы ла камилыраҡ изделиелар сығарыуға тейешле техник документация булдырыла. Бына тигән производство уңыштары коллективтың фиҙакәр хеҙмәт һөҙөмтәһе булып тора. 1945 йылдан башлап 1958 йылға тиклем яҡтыртҡыс электр лампалары сығарыу 2,4 миллиондан 55,5 миллион данаға, ә миниатюр лампалар (1947 йылдан)

[1] Улин В., Янгуразов А. Развитие промышленности Башкирии, 106-сы бит.

0,6 миллиондан 38,7 миллион данаға арта. Заводтың тауар продукцияһы һуғыштан һуңғы осорҙа (1958 йылға) 29 тапҡырға арта [1].

Шулай уҡ юғары техник-экономик күрһәткестәргә өлгәшкән кабель һәм түбән вольтлы электр аппаратуралары заводтарының да ҡаҙаныштары шаҡтай ҙур була.

Ҡаланың боронғо тармағы — ағас эшкәртеү промышленносы үҙ ҡеүәттәрен системалы рәүештә үҫтерә. Алдынғы предприятиеларҙа: Черниковск ағас-фанера (хәҙер Өфө фанера) комбинатында, шырпы фабрикаһында, 2-се һанлы Өфө ағас һәм фанера заводтарында (улар 1958 йылда Өфө йорттар төҙөү-фанера комбинатына берләштерелә) ҡорамалдар тулыһынса тип әйтерлек алмаштырыла һәм модернизациялана. Мебель етештереү ойошторола, синтетик ыҫмалалар нигеҙендә ағас-юнысҡы плитәләре һәм башҡа изделиелар етештерелә башлай. 1940 йыл менән сағыштырғанда йәбештерелгән фанер етештереү 2 тапҡырҙан ашыуға, ә шырпы етештереү 1,9 тапҡырға арта [2].

Еңел һәм аҙыҡ-түлек промышленносының 60 предприятиеһы, 18 промысла артеле Өфө экономикаһында һиҙелерлек урын тота. 1957 йылда улар 400 мең парҙан ашыу аяҡ кейеме, шул тиклем үк бүрек, бик күп өҫ кейеме һәм башҡа изделиелар эшләп сығара [3]. Халыҡ ҡулланыуы тауарҙары етештереүгә кизе-мамыҡ комбинаты, 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы, макарон фабрикаһы һәм башҡа ҡайһы бер предприятиелар ҙур өлөш индерә.

Совет дәүләте Өфөлә капитал төҙөлөшкә ҙур средстволар бүлә. 1958 йылда улар 105 миллион һум тәшкил итә [4]. Икенсе төрлө әйткәндә, бер йылда ғына ла был маҡсаттар өсөн республиканың бөтә халыҡ хужалығына икенсе биш йыллыҡта һалынғанға (93 миллион һум) ҡарағанда күберәк средство тотонола [5]. Үҫә барыусы капитал һалыуҙарҙы үҙләштереү өсөн ҡаланың бөтә төҙөлөш индустрияһын тамырынан үҙгәртеп ҡороу талап ителә.

1947 йылда Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводын төҙөү өсөн ойошторолған 21-се һанлы трест иң эреләрҙең береһенә әүерелә. Был коллектив Орджоникидзе районындағы бөтә нефть эшкәртеү һәм нефть химияһы, химия һәм промышленностың башҡа тармаҡтары предприятиеларын һала. Инженер-техник работниктар һәм алдынғы эшселәр төҙөлөштә камиллаштырыуҙың ҡатмарлы мәсьәләләрен хәл итә. Бында объекттар һалыуҙың индустриаль ысулдары киң ҡулланыла, коллектив беренселәрҙән булып йыйылма тимер-бетон етештереүҙе үҙләштерә. Эшләй башлауының тәүге ун йылында треста хеҙмәт етештереүсәнлеге өс тапҡырҙан ашыуға үҫә.

---

[1] Уфимский электроламповый завод — один из передовых среди родственных предприятий страны. Өфө, 1965, 5, 6, 8-се биттәр.

[2] Народное хозяйство и культурное строительство Башкирской АССР. Статистический сборник. Өфө, 1959, 24-се бит.

[3] «Советская Башкирия», 1957, 19 сентябрь.

[4] Уфа за годы Советской власти (Статистический справочник), 33-сө бит.

[5] Башкирия за 50 лет. Статистический сборник. Өфө, 1969, 81-се бит.

1945 йылда «Өфөнефтезаводстрой» тресы базаһында төҙөлгән «Башнефтезаводстрой» тресы нигеҙҙә промышленность объекттары төҙөй, һуңынан торлаҡ йорттар һәм культура-көнкүреш учреждениелары һалыуға махсуслаша. Ҡорамалдарҙы һәм торба үткәргестәрҙе монтажлау өсөн 1958 йылда «Востокнефтезаводмонтаж» тресы ойоштолора. Ҡаланың күптәнге коллективы — 3-сө һанлы трест машиналар төҙөү һәм металл эшкәртеү предприятиеларын һалыуға үҙенең көсөн туплай. 1958 йылда Өфөлә төҙөлөш-монтаж эштәрен бөтәһе 8 махсуслаштырылған трест һәм 5 эре идаралыҡ башҡара.

Партия һәм совет органдары төҙөлөш подразделениеларын квалификациялы кадрҙар менән нығытыу, ныҡлы производство базаһы булдырыу һәм төҙөлөш сроктарын ҡыҫҡартыу, ҡоролмаларҙың сифатын яҡшыртыу һәм үҙкиммәтен түбәнәйтеү тураһында даими хәстәрлек күрә.

Энергетика ҙур үҫеш ала. 1950 йылда электр станцияларының дөйөм ҡеүәте 68 мең киловатт тәшкил итә. 0,4—35 киловольт көсөргәнешле линияларҙың оҙонлоғо 500 километрға етә [1]. Шулай ҙа был ҡаланың үҫә барыусы талаптарын ҡәнәғәтләндермәй. Энергетика базаһын нығытыу өсөн 2-се һанлы ТЭЦ киңәйтелә, яңы йылылыҡ электр станциялары интенсив төҙөлә. 1951 йылдың октябрендә 3-сө һанлы ТЭЦ-тың беренсе турбогенераторы сафҡа индерелә, ә инде 1956 йыл аҙағында 4-се һанлы ТЭЦ ток бирә. Был станцияларҙа тағы ла камилыраҡ һәм экономиялыраҡ юғары параметрлы ҡорамалдар ҡуйыла.

Электр селтәрҙәренең оҙонлоғо ике тапҡыр тиерлек арта. Шуның менән бергә терәк ҡала подстанциялары 110 киловольт көсөргәнешле линиялар менән яңы ТЭЦ-тарға тоташтырыла. Бөтә селтәр эшенең ышаныслылығы күтәрелә. Өфөнөң электр станциялары берҙәм Башҡортостан системаһына тоташтырыла, уның аша улар Ырымбур һәм Силәбе энергия системаһы менән бәйләнә. Революцияға тиклемге осор менән сағыштырғанда ҡала электр станцияларының ҡеүәте 1956 йылда 300 тапҡырға арта. 1958 йылда улар 1913 йылда бөтә Россияла эшләп сығарылғанға ҡарағанда күберәк электр энергияһы эшләп сығара [2].

Һуғыштан һуңғы осорҙа транспорт тамырынан үҙгәрә. Өфө тимер юл узелын техник үҙгәртеп ҡороу тамамлана: Дим, Өфө, Черниковск станцияларының юл хужалығы киңәйә һәм яҡшыра, стрелкалы күсергестәр, автоблокировка һәм радиофикация үҙәкләштерелә һәм автоматлаштырыла, тейәү-бушатыу эштәре нигеҙҙә механизациялана. 1955 йылдың февралендә юлдың электрлаштырылған Дим — Кропачево участкаһы файҙаланыуға тапшырыла, киләһе

---

[1] «Вечерняя Уфа», 1970, 22 декабрь.

[2] «Советская Башкирия», 1957, 17 ғинуар; Т а х а е в Х. Я., П а р х о м е н к о И. И. Уфа — столица Башкирской АССР, 65-се бит.

йылдың ғинуарында Өфөнән Димгә һәм Оло Тәләккә ҡала яны электр поездары йөрөй башлай.

Төп магистралде электрлаштырыу узелдың үткәреү һәләтен арттыра. Поездарҙың тиҙлеге арта. Йөк составының уртаса ауырлығы 160 тоннаға тиклем арта. Электрлаштырылған участканы эксплуатациялауҙың тәүге йылында Дим депоһы машинистары бөтәһе 6585 ауыр йөклө поезд йөрөтә, уларҙа пландан тыш 2,3 миллион тонна төрлө йөктәр ташыла. Дәүләт 3 миллион һумға яҡын табыш ала [1]. Өфө республиканың эре тимер юл узелына әйләнә. Уның өлөшөнә Башҡортостан тимер юлдары йөк әйләнешенең биштән бере төшә.

Нефть эшкәртеү заводтарын сырье биреүсе районлар һәм потребителдәр менән тоташтырыусы прогрессивыраҡ транспорт — торба үткәргестәр бигерәк тә тиҙ үҫә. 1946, 1950, 1954 йылдарҙа Өфө — Туймазы нефть үткәргесенең 3 тармағы, һуңынан Өфө — Новосибирск продукттар үткәргесе файҙаланыуға тапшырыла. Өфө аша Туймазы — Омск нефть үткәргесе лә үтә. Уның буйынса нефть йөктәренең төп ағымы йүнәлә. Торба үткәргестәр буйынса республиканан ситкә сығарылған шыйыҡ яғыулыҡтар 1958 йылда Башҡортостандан ташылған йөктәрҙең өстән берен тәшкил итә [2].

Йылға транспортының эшен яҡшыртыу өсөн күп нәмә эшләнә, порт тулыһынса үҙгәртеп ҡорола. Механизациялау һәм ҡорамалдар кимәле буйынса ул илебеҙҙә иң яҡшыларҙың береһенә әйләнә. Ағиҙел йылға пароходствоһы илебеҙ верфтарында һәм Венгрияла төҙөлгән комфортабелле теплоходтар ала. 1945 йылда нефть ташыу флотына нигеҙ һалына.

1958 йылдың 24 авгусында Өфө йәмәғәтселеге йылғасылар менән бергә Ағиҙел йылғаһында пар суднолары йөрөй башлауҙың 100 йыллығын билдәләй. Был ваҡытҡа ҡала пристандәренә республиканың йылға транспортындағы бөтә йөк әйләнешенең өстән икеһе тура килә [3]. Йылға порты республиканың баш ҡалаһын Мәскәү, Ҡазан, Пермь һәм башҡа ҡалалар менән тоташтыра, шулай уҡ 11 урындағы һәм ҡала яны пассажир линиялары була.

Һуғыштан һуң шунда уҡ дөйөм ҡулланышлы автомобиль транспортын яңыртыу башлана. Автопассажирҙарҙы регуляр рәүештә йөрөтөү яңыртыла. 1946 йылдың июнендә Өфөнө Бөрө һәм Ырымбур менән тоташтырыусы тәүге ҡала-ара линиялар асыла. 1948 йылда уларҙың һаны 9-ға етә, ә 1958 йылда республиканың күпселек район үҙәктәренә рейс автобустары ебәрелә.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Өфө аэропортынан самолеттар Мәскәүгә һәм илебеҙҙең башҡа ҡалаларына, күп кенә район үҙәктәренә оса башлай. 1945 йылдан алып 1957 йылға тиклем һауа транспорты

---

[1] «Советская Башкирия», 1956, 10, 11 февраль.

[2] Кузнецов В. Н. Транспорт Башкирии. Өфө, 1960, 55-се бит.

[3] Тахаев Х. Я., Пархоменко И .И. Уфа — столица Башкирской АССР, 68-се бит.

менән йөк ташыу — 14, пассажирҙар йөрөтөү 16 тапҡырға тип әйтерлек арта. Бары тик 1955 йылда ғына ла 8 мең пассажир, 994 тонна йөк, 268 тонна почта ташыла [1]. Летчиктар ауыл хужалығына ҙур ярҙам күрһәтә.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтарҙы ваҡытынан алда үтәү һәм промышленностың артабан үҫеүе республика баш ҡалаһының индустриаль йөҙөн үҙгәртә. Өфө промышленность узелы 1958 йылда илебеҙҙең иң эре индустриаль үҙәктәренең береһенә әйләнә. Бында Башҡортостандың промышленность-производство персоналының 40,8 проценты була һәм республика промышленносының бөтә тулайым продукцияһының 45,9 проценты сығарыла [2].

## § 3. Ҡала хужалығының үҫеүе. Халыҡтың тормош хәле яҡшырыуы

Һуғыш ҡала хужалығына бик ҙур зыян килтерә, күп мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе икенсе планға күсерә. Хеҙмәт һәм материаль ресурстар фронт ихтыяждарын тәьмин итеүгә туплана, улар дөйөмләштерелгән торлаҡ фондын, транспортты, урамдарҙы, тротуарҙарҙы һәм башҡаларҙы ҡарауға етмәй. Ҡорамалдарҙы туҙғансы файҙаланыу шуға килтерә: 1945 йылда бөтә түбәләр ҙә ремонтлауға мохтаж була, пассажирҙарҙы автобус менән йөрөтөү туҡтала, трамвай маршруттары һаны кәмей. Ҡалала һыу етешмәү үҙен нык һиҙҙерә, культура-көнкүреш предприятиелары ихтыяжды тәьмин итмәй.

Һуғыштан һуңғы тәүге йылда ҡала хужалығында етди алға китештәр булмай. Средстволар, материалдар һәм, иң мөһиме, эшсе көсө етешмәгәнлектән, билдәләнгәндәрҙең бөтәһен дә тормошҡа ашырып бөтөп булмай. Юл төҙөү планы — яртылаш, һыу үткәргестәр һалыу — 15 процентҡа, ә трамвай хәрәкәтен киңәйтеү ни бары 5 процентҡа ғына үтәлә [3].

Нормаль тыныс тормошто яйға һалыу ВКП(б)-ның Өфө һәм Черниковск ҡала һәм район комитеттары һәм Советтарҙың беренсе сираттағы бурыстарына әүерелә. 1946 йылдың майында партияның Өфө ҡала комитеты һәм ҡала Советы башҡарма комитеты халыҡҡа «Өфө ҡалаһының бөтә граждандарына» тигән асыҡ хат менән мөрәжәғәт итә. Унда былай тиелә: «Өфөлә йәшәүсе һәр кемдең дөйөм эшкә үҙ хеҙмәтен һалыуы кәрәк... Ҡаланы төҙөкләндереүҙә кәмендә биш көн эшләргә — Башҡортостандың баш ҡалаһында йәшәүсе һәр кешегә беҙҙең саҡырыу шундай» [4]. ВКП(б)-ның Черниковск ҡала

---

[1] Кузнецов В. Н. Транспорт Башкирии, 29-сы бит; Народное хозяйство Башкирской АССР. Статистический сборник. Өфө, 1967, 140-сы бит.

[2] Народное хозяйство Башкирской АССР, 32-се бит.

[3] «Красная Башкирия», 1946, 4 март.

[4] Шунда уҡ, 1946, 14 май.

комитеты менән ҡала Советы башҡарма комитеты ла ошондай уҡ хат баҫып сығара.

Хаттар предприятиелар, уҡыу йорттары һәм учреждениелар коллективтарында тикшерелә. Меңдәрсә хеҙмәтсәндәр ихаталарҙы, парктарҙы, урамдарҙы таҙартырға һәм тәртипкә килтерергә тотона. Ҡала халҡы эштән һуң һәм ял көндәрендә һыу үткәргестәр өсөн траншеялар ҡаҙа, тротуарҙарҙы асфальт түшәүгә әҙерләй. Бары тик ошо объекттарҙа ғына ла 1946 йылда өфөләр 35 мең кеше-көндән ашыу эшләй. 1947 йылда иһә ҡалала йәшәүселәр төҙөкләндереүгә 200 меңдән ашыу кеше-көн бирә [1].

Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте ҡалаға ҙур ярҙам күрһәтә, уны төҙөкләндереүгә өҫтәмә средстволар бүлә. СССР Министрҙар Советы бындай ҡарарҙарҙы Өфө һәм Черниковск буйынса 1947 һәм 1949 йылдарҙа сығара [2]. Дөйөм алғанда, улар буйынса өҫтәмә рәүештә 100 миллион һумға яҡын аҡса бүленә. Был средстволарҙың байтағы торлаҡ төҙөлөшөнә йүнәлтелә. Дүртенсе биш йыллыҡта торлаҡ төҙөлөшө, нигеҙҙә, Черниковскиҙа туплана. 1948—1950 йылдарҙа бында 135 мең квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға тапшырыла, ә Өфөлә 20,6 мең квадрат метрҙан артмай [3].

Һуғыштан һуңғы тәүге өс йылда ҡала хужалығы тәртипкә килтерелеп кенә ҡалмай, шулай уҡ күпмелер дәрәжәлә үҫеш тә ала. Һыу үткәргестең етештереүсәнлеге үҫә, ул 1948 йылда тәүлегенә 36 мең кубометр самаһы һыу бирә [4]. Ленин, Сталин (хәҙерге Коммунистик урам), Карл Маркс урамдары һәм башҡа урамдар асфальтлана, баҙарҙар төҙөкләндерелә, парктар һәм скверҙар тәртипкә килтерелә. Ҡала транспорты пассажирҙар ташыуҙы арттыра.

Һуғыш йылдарында ҡала элек эшләнгән пландарҙа һәм проекттарҙа ҡаралыуы мөмкин булмаған темптарҙа һәм масштабтарҙа үҫә. Һуғыш уларға үҙ төҙәтмәләрен индерә. Эвакуацияланған предприятиеларҙы урынлаштырыу, торлаҡ, нигеҙҙә, ваҡытлыса файҙаланыу өсөн булған культура-көнкүреш объекттарын төҙөү берҙәм план буйынса алып барылмай. Был һуңынан ҙур ҡыйынлыҡтарға килтерә. Ҡаланы төҙөүҙе тәртипкә һалыу, уны перспектива менән алып барыу ихтыяжы тыуа. «Ленгипрогор» институтына Өфө һәм Черниковскиҙы 20 йылға үҫтереүҙең генеральный планын төҙөү заданиеһы бирелә. 1948 йылдың апрелендә РСФСР Министрҙар Советы Черниковскиҙы төҙөүҙең генеральный планын раҫлай. 1949 йылдың июнендә БАССР Министрҙар Советы Өфөнө реконструкциялау һәм үҫтереүҙең генеральный планын ҡарай һәм хуплай [5].

---

[1] «Красная Башкирия», 1946, 21 август; 1948, 17 март.

[2] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1313, л. 3; «Красная Башкирия», 1949, 4 март.

[3] «Красная Башкирия», 1949, 2 июль; 1950, 5 декабрь.

[4] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1329, л. 8.

[5] «Красная Башкирия», 1949, 12 ғинуар, 2 июль.

Промышленность төҙөлөшөн ҡала ситендә алып барыу, ҡайһы бер предприятиеларҙы үҙәктән күсереү, территорияны артабан төҙөкләндереү, хеҙмәтсәндәрҙең ял итеү зонаһын киңәйтеү күҙ уңында тотола. Бик күп культура-көнкүреш объекттары: цирк, кинотеатрҙар, больницалар, мәктәптәр һәм балалар учреждениелары һалыу билдәләнә. Транспорт артабан үҫеш ала; трамвай юлдары оҙонайтыла, троллейбус линиялары һуҙыу, Ағиҙел аша күпер, юя күперҙәре һалыу һ. б. планлаштырыла. Торлаҡ төҙөлөшө халыҡ һанының 1,5 тапҡырға артыуын планлаштыра. Үҙәктә һәм Өфө — Черниковск магистрале буйынса (хәҙерге Октябрь проспекты) күп ҡатлы йорттар төҙөү билдәләнә.

Өфө менән Черниковскиҙың пландары айырым үҫеүҙе күҙ уңында тотһа ла, улар үҙ-ара ныҡлы яраҡлаштырыла. Архитектурала һәм планировкала бик күп дөйөм һыҙаттар һәм бер төрлө хәл итеүҙәр була. Ҡала эсе транспорты, энергетика, һыу үткәргес һәм канализация селтәрҙәренең дөйөм үҫеше, ял итеү өсөн берҙәм йәшеллек зонаһын формалаштырыу һ. б. билдәләнә.

Пландарҙа халыҡ өсөн бик уңайлы булған социалистик ҡала төҙөү ҡарала. Улар кешеләр тураһында, уларҙың хеҙмәте, сәләмәтлеге һәм ялы тураһында хәстәрлек менән һуғарыла. Торлаҡ төҙөлөшө өсөн асыҡ һәм аныҡ перспективалар асыла, төҙөлөш йылдан-йыл киңәйә. Дүртенсе һәм бишенсе биш йыллыҡтарҙа ғына ла ҡалала (Өфө һәм Черниковск) 700 мең квадрат метрҙан ашыу уңайлы торлаҡ майҙаны файҙаланыуға тапшырыла [1].

Торлаҡ төҙөлөшөнөң төп күләмен «Башнефтезаводстрой», 3-сө, 21-се һанлы һәм «Өфөстрой» трестары башҡара. Шуның менән бергә 1956—1958 йылдарҙа Горький автозаводы коллективы өлгөһөндә өйҙәрҙең бер өлөшө инициатива ысулы, буласаҡ йәшәүселәрҙең көсө, менән төҙөлә. Ҡала предприятиеларында һәм ойошмаларында кәрәкле ресурстар эҙләнә, төҙөлөш материалдары етештереү юлға һалына. Моторҙар төҙөү заводы коллективы үҙендә — шлак блоктары, «Башнефтегеофизика» тресы ағас эҙерләү участкаһы һәм бут ташы эҙерләүҙе ойоштора. Бөтәһе 1957—1958 йылдарҙа инициатива ысулы менән төҙөлгән 67,5 мең квадрат метр торлаҡ файҙаланыуға бирелә [2]. Былар 1—2-шәр ҡатлы ҙур булмаған йорттар була. Түбән ҡатлы йорттарҙы тиҙ төҙөү ҡырҡыу булған торлаҡ проблемаһын бер аҙ еңеләйтергә мөмкинлек бирә. Шулай ҙа был эштең кире яғы ла була: ҡаланың сикләнгән территорияһы рациональ файҙаланылмай, был йорттарҙы бөтә төр уңайлыҡтар менән дә тәьмин итеү ауырлаша.

КПСС Үҙәк Комитеты һәм СССР Министрҙар Советының «СССР-ҙа торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереү тураһындағы» (1957) ҡарарынан һуң был маҡсатҡа капитал һалыуҙар һиҙелерлек арта. 1958 йылда Өфөлә улар 34,5 миллион һумға етә [3]. Төҙөлөш ойошмалары йорттарҙы

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 41, д. 71, л. 38.
[2] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1982, л. 40; д. 2267, л. 7.
[3] Уфа за годы Советской власти. (Статистический справочник), 34-се бит.

типовой проекттар буйынса төҙөүгә күсә. Торлаҡ төҙөү темптары үҫә. Мәҫәлән, 1956 йылда — 135 мең, 1957 йылда — 170 мең һәм 1958 йылда 224 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлә һәм файҙаланыуға тапшырыла [1].

Ҡала халҡының торлаҡ шарттары яҡшыра. Әгәр 1945 йылда бер кешегә 3,1 квадрат метр йәшәү майҙаны тура килһә, 1958 йылда ул 4 квадрат метрҙан ашыуға етә [2].

1958 йылдың 1 ғинуарына ҡаланың бөтә торлаҡ фонды 2 миллион квадрат метр тип әйтерлек тәшкил итә, шуның 70,3 проценты урындағы Советтар һәм ведомстволар ҡарамағында була [3].

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ҡаланың йөҙөн үҙгәртеүсе күп кенә административ һәм культура-көнкүреш ҡоролмалары файҙаланыуға тапшырыла. «Победа» (1946) һәм «Родина» (1952) кинотеатрҙары, Г. К. Орджоникидзе исемендәге Нефтселәр культура һарайы (1956), Башҡорт дәүләт университеты (1957), ВЛКСМ-дың 40 йыллығы исемендәге төҙөүселәр клубы (1958), Пионерҙар һарайы (1958), Башҡортостан тимер юлы идаралығы (1959) биналары ҡаланы биҙәй.

Ҡаланың көньяҡ өлөшөндә бер ҡатлы өйҙәр урынында Совет майҙанын оформить итеү тамамлана, төньяғында — бушлыҡта — Орджоникидзе исемендәге майҙан барлыҡҡа килә. Улар хеҙмәтсәндәрҙең байрам демонстрацияларын үткәрә торған традицион урындарына әүерелә. Беренсе Май (Нефтселәр культура һарайынан алып Ульяновтар урамына тиклем), Калинин урамдары һәм башҡалар тамамланған төҫ ала. Ленин урамында күп ҡатлы торлаҡ йорттар күтәрелә. Элекке Ивановский майҙанында (И. С. Якутов исемендәге парк ҡаршыһында) тимер юлсыларҙың микрорайоны барлыҡҡа килә. Октябрь проспектына башланғыс һалған кварталдар интенсив төҙөлә.

Бөтә яңы күп ҡатлы торлаҡтар ҙа уңайлы булыуҙары менән нык айырыла. Улар электр яҡтыртҡысы, һыу үткәргес, канализация, үҙәк йылытҡыс һ. б. менән тулыһынса тәьмин ителә. Үрмәксе ауҙарын хәтерләткән сымдар һуҙылған агас бағаналар урамдарҙан алына. Торлаҡ йорттарҙы, ҡала хужалығы объекттарын һәм предприятиеларҙы электр энергияһы менән тәьмин итеү ер аҫты кабель селтәренә күсерелә. Киске һәм төнгө ваҡытта ихаталар һәм урамдар һәйбәтерәк яҡтыртыла. 1955 йылда ҡалала 5276, шул иҫәптән 3227 металл бағаналы яҡтыртыу нөктәһе була [4].

Урамдарҙың таш түшәлмәләре йылдан-йыл яҡшыра, тротуарҙар, кварталдарҙағы һәм ихаталарҙағы йәйәүлеләр юлдары асфальтлана.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 2267, л. 5.

[2] Шунда уҡ, л. 6; Заседание Верховного Совета БАССР пятого созыва (шестая сессия). Стенографический отчет. Өфө, 1961, 113-сө бит.

[3] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1982, л. 60.

[4] Шунда уҡ, д. 1839, л. 32.

Беренсе Май урамы.



1953—1959 йылдарҙа бөтәһе 1,4 миллион квадрат метрҙан ашыу юл һәм тротуар асфальтлана, 370 мең квадрат метрға яҡын юл ремонтлана [1].

Йәшелләндереү буйынса ҙур эш башҡарыла. Йәшелләндереү һуғыштан һуңғы беренсе йылда башлана һәм даими арта бара. 1948—1950 йылдарҙа, мәҫәлән, урамдарға һәм парктарға 240 мең, ә 1957 йылда инде 700 мең төрлө ағас һәм ҡыуаҡ ултыртыла. 1958 йылдың 1 гинуарына ҡаланың парктары һәм баҡсалары 71 гектарҙы биләй: 113 километр урам, 30 гектар сквер, бульвар һәм аллея йәшелләндерелә. Газондар һәм сәскә түтәлдәренең дөйөм майҙаны 21 гектарға етә [2]. Өфөнөң төньяҡ өлөшөндә «Победа» һәм «Нефтяник» парктары, көньяғында Киров исемендәге баҡса яһала, Дим районында парк асыла.

Бәләкәй формаларҙағы архитектура даими камиллаштырыла. Урамдарҙағы сауҙа, «Союзпечать», көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү киоскылары яңыртыла. Күп кенә парктар һәм скверҙарҙың ағас ҡоймалары урынына ҡуйылған заманса металл ҡоймалар ҡаланы биҙәй. Витриналар, вывескалар, йорттарҙың буяуы заманса эстетик һәм художестволы талаптарға яраҡлаштырыла.

---

[1] Тахаев Х. Я., Пархоменко И. И. Уфа — столица Башкирской АССР, 71-се бит.

[2] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 6, д. 6, л. 221.

Өфө тағы ла ҡупшылана һәм матурлана төшә, буласаҡ магистралдәрҙең, яңы төҙөлөш райондарындағы торлаҡ кварталдарының һыҙаттары асығыраҡ төҫмөрләнә. Төҙөкләндереүгә бүленгән средстволарҙың системалы артыуы, был эшкә промышленность предприятиелары, төҙөлөш һәм башҡа ойошмалар коллективтарын йәлеп итеү ҙур ҡаланың ҡатмарлы проблемаларын уңышлы хәл итергә мөмкинлек бирә. 1956 йылда Ағиҙел йылғаһы аша Ырымбур кисеүе бөтөрөлә. Һәр яҙ һайын һүтеп алына торған элекке плашкоут * күпер урынына машиналар йөрөрлөк, даими эшләүсе күперҙән Октябрь байрамы алдынан тантаналы шарттарҙа хәрәкәт асыла. Был Өфө үҙәгенең Дим районы, ҡала яны һәм республиканың көньяғы менән бәйләнешен һиҙелерлек яҡшырта.

Ҡаланы һыу менән тәьмин итеү һәм канализация селтәрен киңәйтеү иң ҡырҡыу проблемаларҙың береһе була. 1946 йылда 19179 йорттоң 800-ө генә һыу үткәргес селтәренә тоташтырылған була, ә һыу 134 йортҡа ғына, унда ла өҙөклөктәр менән бирелә. 197 йорттоң ғына канализацияһы була [1].

Ҡала Советы тарафынан насос станцияларының ҡеүәттәрен арттырыу, яңы һыу үткәргес һәм канализация линиялары һалыу буйынса саралар күрелә. Өҫтәмә рәүештә һыу алыу колонкалары ҡуйыла. 1947—1950 йылдарҙа уларҙың һаны 78-ҙән 120-гә тиклем арта [2]. 1952 йылдан башлап ҡаланың көньяҡ өлөшөндә һыу хлорлауҙы туҡтаталар. Уны таҙартыу өсөн СССР-ҙа беренсе тапҡыр бөтөнләй яңы технология — ультрафиолет нурҙар менән нурландырыу ҡулланыла. Фильтрлау станцияһының үткәреү һәләте икеләтә арта, селтәргә һыу биреү һиҙелерлек күбәйә. 1958 йылда һыу үткәргестең етештереүсәнлеге тәүлегенә 108,5 мең кубометр тәшкил итә [3]. 1945 йылда һыу үткәргес селтәренең оҙонлоғо 60, ә 1957 йылда инде 309,7 километр тәшкил итә. Өфөлә йәшәүсе һәр кешегә һыу тотоноу 1913 йыл менән сағыштырғанда тәүлегенә 8 литрҙан 87 литрға тиклем күтәрелә [4].

Һуғыштан һуң шунда уҡ коммуналь-көнкүреш предприятиеларына һәм торлаҡ йорттарына йылылыҡ үткәреү башлана. 10 йылда, 1947 йылдан алып 1957 йылға тиклем, йылылыҡ селтәренең оҙонлоғо 3 тапҡырҙан ашыуыраҡҡа арта, йылылыҡ биреү ҙә шул тиклемгә ҡәҙәр үҫә. Йылылыҡ селтәренә 1312 объект тоташтырыла, уларҙың 70 процентын торлаҡ йорттар тәшкил итә [5].

---

* Плашкоут — яҫы төплө, палубаһыҙ судно. Порт эсендә йөктәр ташыу һәм күперҙәр һалыу өсөн файҙаланыла. *(Тәрж.)*.

[1] «Красная Башкирия», 1946, 4 июнь.

[2] Шунда уҡ, 1950, 26 ноябрь.

[3] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1982, л. 57.

[4] Тахаев Х. Я., Пархоменко И. И. Уфа — столица Башкирской АССР, 71, 72-се биттәр; Уфа за годы Советской власти. (Статистический справочник), 42-се бит.

[5] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 6, д. 6, л. 229.

Советтар яғыулыҡ әҙерләүгә ҙур иғтибар бүлә. Үҫә барыусы ҡаланы яғыулыҡ менән үҙ ваҡытында тәьмин итеү мөһим хужалыҡ кампанияһына әүерелә. Йыл һайын июнь—сентябрҙә ҡала эсендә транспорт ташыуҙарының төп массаһы потребителдәргә күмер һәм утын килтереүгә төшә. Яғыулыҡ ташыуға яҡын-тирәләге райондарҙың транспорты йәлеп ителә. Мәҫәлән, 1946 йылда Өфө һәм Шишмә районларының колхоздары ғына ла бының өсөн 330 ылау бүлә.

Ҡаланы яғыулыҡ менән тәьмин итеү проблемаһы йылдан-йыл ҡатмарлаша. Уны хәл итергә газ үткәреү ярҙам итә. Туймазы — Өфө газ үткәргесен ҡороу удар темптар менән алып барыла, бер үк ваҡытта бүлеү селтәрҙәре төҙөлә. 1953 йылдың 21 июлендә торлаҡ-көнкүреш ихтыяждары өсөн ҡалаға газ килә. Ленин урамындағы 2-се йортта йәшәүселәр яңы төр яғыулыҡты беренсе булып ҡуллана башлай, ә йыл аҙағына 600 квартираға газ индерелә [1].

Артабан газификациялау темптары үҫә. 1958 йылдың 1 ғинуарына 228,5 километр ҡала һәм ихата газ селтәре төҙөлә, яғыулыҡтың уңайлы төрө 15 457 квартираға килә. Бынан тыш, был ваҡытҡа 300-гә яҡын котельный, ашхана, балалар һәм дауалау учреждениелары, мәктәптәр газ файҙаланыуға күсә [2]. 1958 йылда Дим районына һәм Затонға газ үткәреү башлана, халыҡ баллонлы шыйыҡландырылған газ менән торған һайын күберәк ҡуллана. Газ менән тәьмин итеү өфөләрҙең көнкүреш шарттарын һиҙелерлек яҡшырта. Өҫтәүенә, газ ҡулланыу башҡа төрлө яғыулыҡҡа ҡарағанда байтаҡҡа арзанға төшә.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ҡала эсендәге транспортты һәм халыҡты ташыуҙы ойоштороу эшен яйға һалыуҙа ҙур ҡыйынлыҡтар кисерергә тура килә. 1945 йылда ни бары 13 трамвай вагоны була, улары ла ныҡ иҫкергәйне. Уларҙы ремонтлау паровоздар ремонтлау һәм моторҙар төҙөү заводтарында ойошторола. 5 трамвай вагоны һәм иҫке юлдарҙы төҙәтеү, яңыларын һалыу өсөн механизмдар, материалдар, ҡорамалдар бүлеп, Моссовет етди ярҙам күрһәтә. 1947 йылда трамвай пассажирҙарҙы яңынан вокзалға илтә башлай, 1948 йылда Черниковскиға хәрәкәт аяҡҡа баҫтырыла. Артабан яңы линиялар төҙөлә, Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводы яғына табан маршруттар асыла. 1958 йылға трамвай юлдарының дөйөм оҙонлоғо 61,8 километр (1945 йылда — 35,7 километр) тәшкил итә. 142 вагондан торған хәрәкәт итеүсе состав 10 маршрутты хеҙмәтләндерә [3]. 11 йылда пассажирҙар ташыу 15,7 миллиондан 53,6 миллион кешегә тиклем арта.

1946 йылда ҡала маршруттары буйлап — тимер юл вокзалына, Затонға һәм Иҫке Өфөгә автобус хәрәкәте яңынан асыла. Бөтәһе 6 автобус йөрөй. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә автобус паркы күп тапҡырға арта һәм 1958 йылда инде 200-гә яҡын машина иҫәпләнә. Улар 54,8 миллион кеше ташый.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1840, л. 4.
[2] Шунда уҡ, оп. 6, д. 6, л. 212—214.
[3] Шунда уҡ, л. 226.

Элемтә предприятиелары артабан үҫеш ала. Телефон аппараттарының һаны 1940 йылдан 1958 йылға тиклем 2325-тән 8500-гә ҡәҙәр арта. Яңы почта бүлексәләре асыла.

Медицина-санитария хеҙмәтләндереүе һиҙелерлек яҡшыра, дауалау учреждениеларының селтәре киңәйә. Медицина службаһын үҙгәртеп ҡороу уны халыҡҡа яҡынлаштыра, врач ярҙамының сифатын күтәрә. Больницалар менән поликлиникаларҙы берләштереү тормошҡа ашырыла. Ҡаланың ситке районнарында яңы дауалау учреждениелары барлыҡҡа килә. 1958 йылда Өфө халҡын 7 545 койкалыҡ 37 больница хеҙмәтләндерә [1]. Дауалау учреждениеларында 1652 врач һәм махсус урта белемле 3373 медработник эшләй [2]. Өфө медиктары республика ҡалаларындағы һәм райондарындағы халыҡҡа квалификациялы врач ярҙамы күрһәтә. Санитария авиацияһы ҙур үҫеш ала. Бары тик 1957—1959 йылдарҙа ғына ла ул меңгә яҡын осош яһай.

Халыҡтың тормош кимәле күтәрелеү, һаулыҡ һаҡлау органдарының эше яҡшырыу, дөйөм һәм санитария культураһы күтәрелеү ҡалала йоғошло ауырыуҙар менән ауырыуҙың һиҙелерлек кәмеүенә, бала табыуҙың күтәрелеүенә, балаларҙың үлеүе түбәнәйеүгә килтерә. Мәҫәлән, 1958 йылда Өфөлә туберкулездың актив формалары менән ауырыу 1950 йылға сағыштырғанда 3 тапҡырҙан ашыуыраҡ кәмей [3].

Сауҙа тамырынан үҙгәрә. Палаткалар һәм ваҡ магазиндар селтәре кәметелә, улар урынына заманса эре ваҡлап һатыу предприятиелары йыһазландырыла. Бер үк ваҡытта һатып алыусыларҙы хеҙмәтләндереүҙең прогрессив ысулдары: тауарҙарҙы күрһәтеп ҡуйыу, магазиндарҙа, ашханаларҙа, кафеларҙа үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү индерелә. Сауҙа технологик ҡорамалдар, һыуытҡыстар һ. б. менән тулыландырыла. 1958 йылда ҡала халҡы 746 магазин һәм сауҙа палаткаһы, 415 йәмәғәт туҡланыуы предприятиеһынан файҙалана. 1945—1958 йылдарҙа тауар әйләнеше яҡынса 3,1 тапҡырға үҫә [4].

50-се йылдарҙа ҡала халҡына көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү предприятиелары селтәре киңәйә, тәҡдим ителгән уңайлыҡтар иҫәбе даими арта. Көнкүреш хеҙмәте күрһәтеүҙең тарихи формалашҡан тармаҡтарына яңылары өҫтәлә, көнкүреш техникаһы һәм көндәлек йорт кәрәк-яраҡтары алып тороу өсөн тәүге прокат пункттары асыла. Артелдәрҙе эреләтеү һәм махсуслаштырыу хеҙмәтләндереү сифатын яҡшырта, уның үҙкиммәтен төшөрә. Мәҫәлән, аяҡ кейемдәрен ремонтлау тотошо менән махсуслаштырылған «Коопремонт»

---

[1] Т а х а е в Х. Я., П а р х о м е н к о И. И. Уфа — столица Башкирской АССР, 87-се бит.

[2] Народное хозяйство и культурное строительство Башкирской АССР, 164-се бит.

[3] Л у к м а н о в С. З. Развитие здравоохранения Башкирской АССР. Өфө, 1958, 33-сө бит.

[4] Уфа за годы Советской власти. (Статистический справочник), 47-се бит; Народное хозяйство Башкирской АССР, 194-се бит.

артеленә туплана. Был күп кенә производство процестарын механизацияларға, ҡабул итеү пункттарының һанын арттырырға мөмкинлек бирә. 1958 йылда Өфөлә 198 көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү предприятиеһы эшләй. Улар ҡала халҡына 28 миллион һумлыҡ хеҙмәт күрһәтә [1].

Коммунистар партияһы һәм Совет хөкүмәте халыҡтың тормош кимәлен яҡшыртыу тураһында көндәлек хәстәрлек күрә. Был йүнәлештә эшләнгән бөтә нәмә өфөләргә лә туранан-тура ҡағыла. Хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәлен күтәреү өсөн 1946 йылда ныҡ юғары сауҙа хаҡтары һәм бик түбән пай хаҡтары бер-береһенә яҡынлаштырыла. Был 1947 йылда карточка системаһын бөтөрөргә шарттар тыуҙыра. Бер үк ваҡытта аҡса реформаһы үткәреү һумдың һатып алыу һәләтен күтәрә. 1948—1954 йылдарҙа аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарының хаҡы 7 тапҡыр төшөрөлә. Бишенсе биш йыллыҡта ғына ла эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәрҙең реаль эш хаҡы 39 процентҡа күтәрелә [2].

Артабанғы йылдарҙа ҡала халҡының тормош кимәлен күтәреүгә йүнәлтелгән ҡайһы бер мөһим саралар тормошҡа ашырыла. 1956 йылдың июлендә ҡабул ителгән дәүләт пенсиялары тураһындағы закон пенсия эштәренең тороштон тамырынан яҡшырта. Өфөлә пенсионерҙарҙың һаны ике тапҡырға тип әйтерлек арта, уларҙың күбеһенең пенсиялары ҡырҡа күтәрелә. Шул уҡ йылда эш көнө ял һәм байрам алды көндәрендә 2 сәғәткә ҡыҫҡартыла. 1957 йылда түбән эш хаҡы алыусы работниктарҙың эш хаҡы арттырыла, халыҡтан йыйылған налогтарҙың күләме кәметелә. Эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәрҙең реаль доходы бер йылда ғына ла 7 процентҡа арта [3].

1958 йылда күп кенә өфөләрҙең тормошонда һиҙелерлек үҙгәрештәр була. Промышленностың төп тармаҡтары предприятиеларында эш хаҡын кәметмәйенсә 7, ә күп кенә производстволарҙа 6 сәғәтлек эш көнөнә күсеү тормошҡа ашырыла. Дөйөм белем биреү мәктәптәренең юғары кластарында, махсус урта һәм юғары уҡыу йорттарында уҡыған өсөн аҡса түләү бөтөрөлә. Халыҡтың реаль доходы эшләүсе бер кешегә иҫәпләгәндә бер йылда тағы ла 5 процентҡа арта [4].

Ҡала халҡының яҡшыраҡ туҡлана һәм кейенә башлауы ла уларҙың тормош кимәленең күтәрелеүе тураһында һөйләй. 1956 йылда сауҙа селтәре аша 1955 йылға ҡарағанда 172,8 миллион һумға күберәк промышленность һәм аҙыҡ-түлек тауарҙары реализациялана. Ит, май, шәкәр һәм һөт һатыу ике тапҡырға тип әйтерлек арта [5]. Өфөләрҙең дәүләт һаҡлыҡ кассаларында йыйылған аҡсалары йыл-

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 46, д. 7, л. 29, 333.

[2] Экономическая жизнь СССР. Хроника событий и фактов. 1917—1965. Книга вторая. 1951—1965. М., 1967, 469, 498-се биттәр.

[3] Шунда уҡ, 573-сө бит.

[4] Шунда уҡ, 562-се бит.

[5] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1971, л. 69.

дан-йыл күбәйә, вкладчиктар һаны арта. 1958 йылда һәр вкладтың уртаса суммаһы 165 һумға (1961 йылғы хаҡтар менән) етә [1].

Шәхси баҡсалар ҡала кешеләренең күбеһенең аҙыҡ-түлек запасын тулыландырыуҙың етди сығанағы була. 1945 йылда йәшелсә баҡсаларының майҙаны 900 гектарға арта һәм 3,8 мең гектар (Черниковскиҙан башҡа) тәшкил итә. Картуф һәм йәшелсәнән дөйөм уңыш 34 мең тоннанан артып китә [2]. Предприятиелар һәм ойошмалар баҡсасыларға ер һөрөүҙә ярҙамлаша, сәсеү һәм уңыш йыйыу ваҡытында транспорт бирә. Өфөләрҙең шәхси ҡарамағында байтаҡ мал була. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа коллектив баҡсасылыҡ киңәйә башлай. 1958 йылдың 1 ғинуарына ҡала халҡының коллектив баҡсалар майҙаны 553 гектарҙы тип әйтерлек biләй [3].

Промышленность предприятиеларындағы эшселәр тәьминәте бүлектәренең ярҙамсы хужалыҡтары була, уларҙан алынған продукция йәмәғәт туҡланыуын яҡшыртыуға китә.

РСФСР Верховный Советы Президиумының 1956 йылдың 24 июль Указы менән Өфө һәм Черниковск ҡалалары берләштерелә. Республиканың берҙәм административ, хужалыҡ һәм культура үҙәге — Өфө ҡалаһы барлыҡҡа килә. Бер үк ваҡытта Жданов һәм Сталин райондарын бөтөрөү иҫәбенә райондар ҙурайтыла. Ҡала 6 административ районға: Ленин, Киров, Орджоникидзе, Калинин, Совет һәм Дим райондарына бүленә. Өфөнөң яңы сиге барлыҡҡа килә, ул 1956 йылда 254 квадрат километр территорияны биләй. Был ваҡытта ҡалала 470 меңдән ашыу кеше йәшәй.

Ҙур ҡала ойоштороу уны артабан үҫтереү өсөн яңы перспективалар тыуҙыра. Был Өфөнө 25 йылға үҫтереүҙең «Ленгипрогор» институты эшләгән яңы генеральный планында сағылыш таба. План 1958 йылдың сентябрендә ҡала Советы сессияһында тикшерелә һәм раҫлана.

Генеральный план ҡала төҙөлөшөнөң яңы принциптарынан һәм эре үҙәктәрҙе планлаштырыу практикаһынан сығып төҙөлә. Яҡын йылдарға төп төҙөлөш массивтары итеп хәҙерге Октябрь проспекты райондары һәм уның эргәләрендәге территориялар, киләсәктә Тужиловка райондары билдәләнә. Хәҙерге В. И. Ленин исемендәге майҙан районында яңы ҡала үҙәге төҙөү ҡарала. Промышленность төҙөлөшө, нигеҙҙә, ҡаланың төньяҡ өлөшөндә, торлаҡ кварталдарынан алыҫта билдәләнә. Генеральный планда төп иғтибар биналарҙың ҡаттарын арттырыу юлы менән ҡала территорияһын рациональ файҙаланыуға бирелә. Төҙөкләндереүҙең бөтә төрҙәрен үҫтереүгә, халыҡ өсөн мөмкин тиклем күберәк һәйбәт шарттар тыуҙырыуға ҙур урын бирелә.

Республика баш ҡалаһының яңы горизонттары асыла.

---

[1] Цвети, Башкирия. Очерки, статьи, репортажи, статистика, фотодокументы о Башкирии накануне XXIII съезда КПСС. Өфө, 1966, 36-сы бит.

[2] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1084, л. 13.

[3] Шунда уҡ, оп. 6, д. 6, л. 221.

# Өфө коммунистик төҙөлөш юлында

## § 1. Өфө хеҙмәтсәндәренең коммунизмдың материаль-техник базаһын төҙөүгә индергән өлөшө

Етештереүсе көстәр үҫешендәге уңыштар һәм ижтимағи мөнәсәбәттәрҙең ирешелгән кимәле, шулай уҡ донъя аренаһындағы тамырҙан үҙгәрештәр 1959 йылдың ғинуарында КПСС-тың XXI съезына: «Беҙҙең илебеҙҙә социализм тамам һәм тулыһынса еңеү яуланы», — тигән мөһим һығымта яһарға мөмкинлек бирҙе [1]. Съезда, Советтар Союзы коммунистик йәмғиәтте киң ҡолас менән төҙөү осоронa аяҡ баҫты, тип билдәләп үтелде. Партияның XXII съезы (1961 йыл, октябрь) коммунизм төҙөү программаһын ҡабул итте. Унда коммунизмдың материаль-техник базаһын төҙөү, коммунистик ижтимағи мөнәсәбәттәрҙе формалаштырыу, яңы кеше тәрбиәләү кеүек мөһим бурыстар билдәләнде. Был бурыстар СССР-ҙың халыҡ хужалығы үҫешенең етенсе (1959—1965), һигеҙенсе (1966—1970), туғыҙынсы (1971—1975) һәм унынсы (1976—1980) биш йыллыҡ пландарында конкрет сағылыш тапты. Улар КПСС-тың XXI, XXIII—XXV съездарында ҡабул ителде. Партияның XXVI съезында раҫланған 1981—1985 йылдарға һәм 1990 йылға тиклемге осорға СССР-ҙың экономик һәм социаль үҫешенең Төп йүнәлештәре совет халҡы алдында яңы перспективалар асты.

Партия халыҡтың төп тырышлығын экономиканың бөтә тармаҡтарын артабан йылдам күтәреүгә тупланы. Илдең көнсығыш райондарына, шул иҫәптән Башҡортостанға, беренсе дәрәжәләге иғтибар бирелде. Пландарҙа эре производство базаһы, нығынған транспорт бәйләнештәре, квалификациялы кадрҙары булған республика баш ҡалаһына ҙур ғына урын бирелде. Өфө промышленносын нефть эшкәртеүгә махсуслаштырыуҙы көсәйтеү һәм уның нигеҙендә нефть химияһын тиҙерәк үҫтереү ҡаралды. Машиналар эшләү һәм прибор-

---

[1] Советтар Союзы Коммунистар партияһының нәүбәттән тыш XXI съезы. Стенографик отчет, 2-се том. М., 1959, 443-сө бит.

ҙар төҙөү үҫешенең юғары темптары билдәләнде. Яңы эре производстволар төҙөү, промышленносты техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырыуҙы тормошҡа ашырыу бурыстары ҡуйылды. Был программаны ғәмәлгә ашырыу өсөн ғәйәт ҙур средстволар талап ителде. 1959—1979 йылдарҙа дәүләт ҡала экономикаһына 5 миллиард һумдан ашыу аҡса бүлде.

Билдәләнгән пландарҙы үтәү өсөн көрәш партия һәм совет органдары, бөтә йәмәғәт ойошмалары һәм производство коллективтары эшмәкәрлегенең төп йөкмәткеһенә әүерелде. Хужалыҡ мәсьәләләрен рациональ хәл итеү маҡсатында 1961 йылдың аҙағында һәм 1962 йылдың башында КПСС-тың район комитеттары һәм ҡала комитеты эргәһендә техник-экономик советтар төҙөлдө. Уларҙың составына предприятиелар етәкселәре, экономистар, ғалимдар индерелде. Советтар предприятиелар эшен анализланы, производствоны камиллаштырыу буйынса рекомендациялар эшләне, промышленность һәм төҙөлөш үҫешенең перспектив мәсьәләләрен ҡараны.

Көсәргәнешле һәм ҡатмарлы заданиелар төҙөлөштөң техник кимәлен күтәреүҙе талап итте. Уның материаль базаһы ҡала партия ойошмаһы инициативаһы менән нығытыла барҙы. 1959—1960 йылдарҙа ике тимер-бетон изделиелар заводы төҙөлдө. 1962 йылдың декабрендә — 3-сө эре панелле йорттар төҙөү заводы, 1965 йылда сантехник заготовкалар заводы сафҡа индерелде. Кирбес, асфальт һәм тауар бетоны етештереүсе ҡеүәттәр арттырылды. Төҙөлөш майҙандарына етештереүсәнлерәк яңы техника килтерелде.

Төҙөлөшкә идара итеү артабан үҫеш алды. «Башнефтехимремстрой» (1960), 2-се «Строймеханизация» (1966), эре панелле йорттар төҙөү (1968) һәм башҡа яңы трестар төҙөлдө. Төҙөлөш ойошмаларына берҙәм етәкселек итеүҙе һәм уның эшмәкәрлеген координациялауҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн 1968 йылда «Главбашстрой» ойошторолдо. 1979 йылда төҙөлөш индустрияһының 129 предприятиеһы уның етәкселегендә Өфөлә төҙөлөш-монтаж эштәрен башҡарҙы. Төҙөлөш ойошмаларын махсуслаштырыу киңәйтелде. 3-сө һәм 21-се трестар промышленность һәм торлаҡ төҙөлөшөн алып бара. «Башнефтехимремстрой» һәм «Востокнефтезаводмонтаж» трестары химия һәм нефть химияһының мөһим объекттарын төҙөй һәм реконструкциялай. «Башнефтезаводстрой» һәм эре панелле йорттар төҙөү трестары торлаҡ йорттар һәм культура-көнкүреш объекттары төҙөй. Бынан тыш, төҙөлөш ойошмаларының эсендә лә төҙөлөш һәм эштәрҙең төрө буйынса махсуслашыу үткәрелде. Хеҙмәттең шулай бүленеше төҙөлөш сифатына һәм темпына ыңғай тәьҫир итте, эштең прогрессив ысулдарын индереүҙе тиҙләтте.

Төҙөлөштө индустриялаштырыу ундағы прогрестың төп йүнәлеше булды. Уға биналарҙың йыйылмалылығын һәм механизация кимәлен күтәреү, яңы материалдар ҡулланыу иҫәбенә ирешелде. Өфө төҙөүселәре ҡоролмаларҙы свайлы нигеҙҙәргә ултырта башланы.

1959 йылдан башлап ҡалала эре панелдәрҙән йорттар төҙөү киң ҡолас алды. Нефть химияһы производстволарын төҙөү ысулы камиллаштырылды. Тәүҙәрәк монтажсылар колонналар ҡуя, шунан һуң ғына уларҙы ҡатмарлы аппаратуралар менән йыһазландыра ине. Быныҡ өсөн бер нисә ай кәрәк була торғайны. Ваҡыт үтеү менән, колонналарҙы ерҙә йыйып, әҙер булғас ҡына урынына ҡуя башланылар. Монтажлау сроктары ҡырҡа кәмене. Ә 1972 йылдың башында «Востокнефтезаводмонтаж» тресы работниктары СССР-ҙа беренсе булып дистанцион идара итеү мачталары ярҙамында бер нисә сәғәт эсендә биш йөҙ тонналыҡ өс реактор монтажланы [1].

Капиталь төҙөлөш пландарын үтәү ҡала һәм республика партия ойошмаларының етди хәстәрлегенә әүерелде. КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты, ҡала комитеты, тәүге партия ойошмалары был тармаҡтың эштәрен яҡшыртыу маҡсатында байтаҡ сара күрҙе. 21-се трестың партия комитеты нефть химияһы объекттарын төҙөү сроктарын ҡыҫҡартыу өсөн көрәштең боевой штабы булып сығыш яһаны. 1963 йылда ғына ла ул 12 куст партия йыйылыштары һәм заказсы заводтарҙың партия комитеттары менән бергә 8 ултырыш үткәрҙе. Уларҙа төҙөлөштөң төп мәсьәләләре тикшерелде һәм эшлекле ҡарарҙар ҡабул ителде. Партия комитеты ойошторған оператив группа контроль постары селтәре аша эре объекттарҙағы эштәр барышын күҙәтте. Был иһә төҙөлөштәге етешһеҙлектәрҙе тиҙерәк бөтөрөргә мөмкинлек бирҙе [2].

Ҡала партия ойошмаһына профсоюздар һәм комсомол ҙур ярҙам күрһәтте. Улар синтетик спирт, химия, нефть эшкәртеү, моторҙар эшләү заводтарының айырым производстволарын төҙөүгә шефлыҡ итте. Комсомол уларға меңдәрсә егеттәрҙе һәм ҡыҙҙарҙы эшкә ебәрҙе. Төҙөлөүсе объекттарҙа комсомол штабтары, профсоюздарҙың оператив группалары һәм контроль постары булдырылды. Улар төҙөлөштө ҡорамалдар менән тәьмин итеүҙә ярҙам итте, субботниктар ойошторҙо.

ВЛКСМ-дың Өфө ҡала комитеты синтетик спирт заводындағы этил спирты производствоһының икенсе сиратын удар комсомол төҙөлөшө тип иғлан итте. Шефтар объектта хеҙмәтте ойоштороуҙа ҡатнашты, бөтә участкаларҙа ла комсомол группалары, комсомолец-йәштәр бригадалары төҙөнө. Төҙөлөш майҙансығына ҡорамалдарҙы ваҡытында ебәреп тороу кәрәклеге килеп тыуғас, ҡала комитеты һәм төҙөлөштөң комсомол штабы тәьмин итеүсе бөтә 100 заводтың йәштәрен кәрәкле аппаратураларҙы срогынан алда әҙерләргә саҡырып сығыш яһаны. Тәьмин итеүселәр өфөләрҙең һорауын үтәне. Удар комсомол төҙөлөшөндә ай һайын йәкшәмбе өмәләре үткәрелде: ҡаланың әле бер, әле икенсе районы егеттәре һәм ҡыҙҙары эшләне.

---

[1] «Советская Башкирия», 1972, 9 апрель.
[2] Шунда уҡ, 1964, 18 гинуар.

Өфө быяла-сүс туҡымалар эшләү заводының урау-сиратыу участкаһы.



Ә йәйге каникул осоронда төҙөүселәр сафын Өфөнөң юғары уҡыу йорттары студенттары тулыландырҙы [1].

Төҙөлөштө камиллаштырыу, ҡала ойошмаларының даими ярҙамы, төҙөүселәрҙең фиҙакәр хеҙмәте ҙур күләмдәге эштәрҙе башҡарып сығырға мөмкинлек бирҙе. 1959—1980 йылдарҙа Өфө промышленноның бөтә тармаҡтарында 325 производство, цех һәм ҡоролма төҙөлдө. Мәҫәлән, Черниковск нефть эшкәртеү заводында (1963 йылдан — КПСС-тың XXII съезы исемендәге Өфө нефть эшкәртеү заводы) төп технологик ҡоролмалар булдырылды, синтетик спирт заводының икенсе һәм өсөнсө сираттары төҙөлдө. 1961 йылда быяла-сүс туҡыма заводы сафҡа индерелде. 1960—1965 йылдарҙа «Мир» тигеү фирмаһының производство корпустары һалынды. Моторҙар эшләү заводында * «Москвич-412» автомобиль двигателдәре йыйыу корпусы төҙөлдө, уның дөйөм производство майҙаны 90 мең квадрат метр тәшкил итте. Унынсы биш йыллыҡ осоронда киҙе-мамыҡ комбинаты, кондитер һәм сәй төрөү фабрикалары төҙөлдө, синтетик спирт заводында фенол һәм ацетон етештереү буйынса ҙур комплекс рекордлы ҡыҫҡа срокта төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырылды, тиҫтәләрсә башҡа промышленность объекттары сафҡа индерелде.

Ҡала промышленносы сифат яғынан мөһим үҙгәрештәр кисерҙе. Ҡорамалдарҙы модернизациялау, технологияны һәм хеҙмәтте ойоштороуҙы камиллаштырыу нигеҙендә уны үҫтереүҙең интенсив факторҙарының роле һаман күтәрелә барҙы. Производствоның мөһим мәсьәләләрен хәл итеүҙә фәндең ярҙамы бик ҙур. 60—70-се йылдарҙа фән практика менән һиҙелерлек яҡынлашты. Был производствоға индерелеүсе техник яңылыҡтарҙың ҡеүәтле ағымында, фәнни учреждениеларҙа практик әһәмиәткә эйә булған тикшеренеүҙәр күләменең артыуында, туранан-тура промышленноста һынауҙарҙың киңәйтелеүендә, предприятиеларҙың ғилми-тикшеренеү институттары

[1] «Комсомольская правда», 1960, 28 февраль; «Советская Башкирия», 1962, 7 апрель.

* 1978 йылдан — Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе.

һәм юғары уҡыу йорттары менән ижади дуҫлығының ныҡый барлығында күренде.

Заводтарҙа тәжрибә-тикшеренеү цехтары, үҙәк завод лабораториялары ойошторолдо. Тәүге тәжрибә-тикшеренеү цехтары 1959 йыл аҙағында нефть эшкәртеү һәм химия заводтарында барлыҡҡа килде. КПСС-тың Орджоникидзе район комитеты һәм предприятиеларҙың партия комитеттары ярҙамында улар алдынғы инженер-техник работниктар һәм эшселәр менән комплектланды. Тәжрибә-тикшеренеү цехтары яңы техниканы һәм технологияны производствоға индереү менән шөғөлләнде. Мәҫәлән, Өфө нефть эшкәртеү заводында тикшеренеүселәр предприятиены юғары көкөртлө нефть эшкәртеүгә уңышлы күсереүҙә, торба үткәргестәр һәм аппараттарҙың коррозияһына ҡаршы көрәштә күп йәһәттән ярҙам күрһәтте. Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводында улар юғары көкөртлө нефть коксын байыҡтырыу проблемаһын хәл итте. Химия заводының * үҙәк лабораторияһы работниктары ҡатнашлығында гербицидтар, хлорамин етештереү процессы камиллаштырылды.

Өфө нефть институты менән Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводы араһында эшлекле тығыҙ бәйләнеш урынлаштырылды. Ул бигерәк тә 1965 йылда институт уҡытыусыларын, фәнни хеҙмәткәрҙәрен һәм тәжрибә-тикшеренеү цехы инженерҙарын берләштергән тикшеренеүселәр группаһы төҙөлгәс, нығыны. Синтетик спирт заводы новаторҙары СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының химия институты, Башҡорт дәүләт университеты һәм Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү нефть химияһы институтының Өфө филиалы коллективтары менән бергәләп байтаҡ проблемаларҙы хәл итте. Промышленность предприятиелары заказдары буйынса ҡала ғалимдары башҡарған эштәр күләме артты. Мәҫәлән, «БашНИПИнефть» тикшеренеүҙәренең 90 проценты самаһы «Башнефть» предприятиелары менән договорҙар буйынса үткәрелде [1].

Техник прогресс өсөн көрәштә меңдәрсә хеҙмәтсәндәр ҡатнашты. Синтетик спирт заводының һәр икенсе работнигы, Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводының — һәр өсөнсө, моторҙар эшләү заводының һәр дүртенсе работнигы рационализатор булды. Техник прогрестың ҡатмарлы бурыстары новаторҙарҙың ижади көсөн берләштереүҙә яңы эш формаларын тыуҙырҙы. 60-сы йылдар башында предприятиеларҙа комплекслы ижади бригадалар, йәмәғәт конструкторлыҡ бюролары һәм йәмәғәт ғилми-тикшеренеү институттары барлыҡҡа килде.

Новаторлыҡты үҫтереүҙә комплекслы ижади бригадалар ҙур әһәмиәткә эйә булды. 1974 йылда Өфөлә бындай бригадаларҙың һаны 1565-кә етте [2]. Улар производствола эшләүселәрҙең әһәмиәтлерәк тәҡдимдәрен эшкәртеү өсөн конструкторҙарҙы, мастерҙарҙы һәм эш-

* 1979 йылдан — Өфө «Химпром» производство берекмәһе.
[1] «Вечерняя Уфа», 1971, 1 май.
[2] Шунда уҡ, 1974, 24 октябрь.

селәрҙе берләштерҙе. Инженерҙарҙың белемен производство тәжрибәһе менән берләштереү ҡатмарлы техник мәсьәләләрҙе хәл итергә мөмкинлек бирҙе.

Йәмәғәт-конструкторлыҡ бюролары (ОКБ) инженер-техник работниктарҙың һәм эшселәрҙең икенсе коллектив ижад формаһы булды. Беренсе ОКБ 1960 йылдың авгусында Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводында ойошторолдо. Артабан улар башҡа предприятиеларҙа ла барлыҡҡа килде. Бындай бюролар билдәләнгән уйлап табыуҙарға һыҙмалар әҙерләне һәм заказдар эшләне, уларҙың проекттарын төҙөнө, новаторҙарға техник консультациялар бирҙе. Шуның менән уйлап табыусылар һәм рационализаторҙар тәҡдимдәрен оформить итеү тиҙләтелде.

Төрлө һөнәр белгестәренең берләштерелеүе, эшселәрҙең, инженерҙарҙың, ғалимдарҙың хеҙмәттәшлеге ҙур фәнни-производство мәсьәләләрен уңышлы хәл итеүҙе тәьмин итте. Мәҫәлән, синтетик спирт заводының йәмәғәт ғилми-тикшеренеү институты предприятиеның үҫеш перспективаларын билдәләне. 1970 йылға тиклем хеҙмәт етештереүсәнлеген байтаҡ күтәреү, продукция сифатын иң яҡшы өлгөләр кимәленә еткереү, уның үҙкиммәтен кәметеү, производство культураһын ҡырҡа яҡшыртыу ҡаралды. Был бурыстарҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн институт тиҫтәләрсә төрлө ойоштороу-техник саралар үткәреүҙе планлаштырҙы. Завод ҡуйылған маҡсаттарға ирешге.

Өфө хеҙмәтсәндәре, даими эшләүсе производство кәңәшмәләре, техник комиссиялар, сифат буйынса йәмәғәт инспекциялары, экономик анализ бюролары кеүек йәмәғәт ойошмаларында ла ҡатнашып, техник прогресҡа булышлыҡ итте. Һөҙөмтәлә техник ижад элеккегә ҡарағанда ла коллективыраҡ, йоғонтолораҡ була башланы. Бирелгән тәҡдимдәрҙең техник кимәле күтәрелде, талантлы уйлап табыусылар һәм рационализаторҙар күбәйҙе.

Фән һәм производствоның үҙ-ара интенсив бәйләнеше актуаль техник проблемаларҙы уңышлы хәл итергә, прогресты тиҙләтергә һәм производствоның эффектлылығын күтәрергә ярҙам итә.

Предприятиеларҙы ҡайтанан техник ҡоралландырыу эше тормошҡа ашырылды. Программа менән идара ителеүсе станоктар, технологик процестарҙы комплекслы механизациялау һәм автоматлаштырыу ысулдары производствоға индерелде. Моторҙар эшләү заводында бөгөмлө валдарҙы эшкәртеү буйынса 1971 йылда сафҡа индерелгән автоматик линия 140-ҡа яҡын агрегаттан тора, уларҙың һәр береһе ғәҙәттәге тиҫтәләрсә станокты алмаштыра. Валдарҙы элекке ҡорамалдар менән эшкәртеүгә ҡарағанда, хеҙмәт етештереүсәнлеге 6 тапҡырға артты[1]. 1974 йылда «Москвич-412» автомобиль двигателдәре производствоһында 36 автоматик линия эшләне, улар эшкәртеү, транспорт, контроль һәм идара итеү машиналары, прибор-

---

[1] «Вечерняя Уфа», 1971, 28 апрель; «Советская Башкирия», 1971, 30 ноябрь.

«Мир» тегеү берекмәһе цехтарының береһендә.



ҙары һәм короламаларының берҙәм комплексын тәшкил итте[1]. Унынсы биш йыллык осоронда производствоны комплекслы механизациялау һәм автоматлаштырыу процесы көсәйҙе. 1976—1980 йылдарҙа 230 цех һәм участка комплекслы механизацияланды[2]. Промышленность роботтары индерелә башланы. Беренсе робот моторҙар эшләү производство берекмәһенең штамплау-сварка цехындағы престарҙың береһенә ҡуйылды. Ул заготовканы үҙе ала, штампыға ҡуя, әҙер штамповканы алып, тараға һала[3].

Производствоға идара итеүҙә телевидение һәм электрон-хисаплау техникаһы файҙаланыла башланы. Промышленность телевидениеһы ҡалала тәү башлап 1967 йылда сантехник заготовкалар заводында ҡуйылды. Был предприятие директорына һәм диспетчерына производство процестарын даими белеп торорға мөмкинлек бирҙе. Күп кенә заводтарҙа һәм төҙөлөш ойошмаларында хисаплау машиналары ҡуйылды. Улар ярҙамында оптималь производство пландары, тауар продукттары әҙерләү рецептары, объекттарға төҙөлөш материалдары килтереү расписаниелары төҙөлә. Һөҙөмтәлә планлаштырыу һәм идара итеүҙең оперативлығы һәм һығылмалылығы күтәрелде.

---

[1] «Советская Башкирия», 1974, 15 август.
[2] «Вечерняя Уфа», 1980, 30 декабрь.
[3] «Советская Башкирия», 1980, 17 гинуар.

2-се һанлы ТЭЦ-тың идара итеү пульты.



Промышленностың үҫеүе менән бергә электр энергияһына талап та артты. Уны кәрәкле күләмдә алыу өсөн Өфө 1959 йылда Павловка ГЭС-ына тоташтырылды. Ҡалалағы дүрт йылылыҡ-электр үҙәгенең ҡеүәттәре артты. 1966 йылға уларҙың ҡаҙандары ҡаты яғыулыҡтан газ яғыулығына күсерелде. ТЭЦ ҡорамалдары реконструкцияланды һәм яңыртылды. Тик 1965—1970 йылдарҙа ғына ла дөйөм ҡеүәте 367 мең киловатт булған 9 турбогенератор сафҡа индерелде. Бөтә төп технологик процестар ҙа тиерлек автоматлаштырылды. Новаторҙар йылылыҡ-электр үҙәктәренең эшен камиллаштырыуға шаҡтай ҙур өлөш индерҙе. Мәҫәлән, 3-сө ТЭЦ-тың баш инженеры Ф. А. Липинский уйлап тапҡан горелканы индереү станцияның экономиялылығын һиҙелерлек күтәрҙе. Был яңылыҡ өсөн Ф. А. Липинский БАССР-ҙың атҡаҙанған фән һәм техника эшмәкәре тигән исемгә лайыҡ булды. «Липинский лампаһы» ҡаланың һәм илдең башҡа станцияларында ла ҡулланыла. Ҡорамалдарҙы реконструкциялау һәм модернизациялау һөҙөмтәһендә йылылыҡ-электр үҙәктәренең ҡеүәте 1959—1980 йылдарҙа 2,5 тапҡырға артты. Өфө экономикаһын үҫтереүҙең ныҡлы энергетик базаһы булдырылды.

Капиталь төҙөлөш, ҡорамалдарҙы яңыртыу промышленностың төп производство фондтарын байтаҡ үҫтерергә булышлыҡ итте. Улар 1959—1970 йылдарҙа 2,8 тапҡырға, ә 1974—1979 йылдарҙа тағы ла 2,7 тапҡырға тиерлек артты һәм 1979 йылда 27 миллиард һумдан ашыу тәшкил итте.

Производствоны киңәйтеү һәм техник яҡтан камиллаштырыу промышленность эшенең һан һәм сифат күрһәткестәрен яҡшыртырға мөмкинлек бирҙе. КПСС-тың XXII съезына әҙерлек осоронда Өфө хеҙмәтсәндәре мәскәүҙәр башланғысын яҡлап сыҡты һәм юғары сифатлы продукция сығарыу өсөн көрәш йәйелдерҙе. Улар ышаныслылығы, тышҡы күренеше менән илебеҙҙәге иң яҡшы өлгөләрҙән һис

тә ҡалышмаған тиҫтәләрсә изделиелар эшләп сығарҙы. Өфөләр 1981 йылға юғары баһаға — дәүләт Сифат тамғаһына лайыҡ булған 670 төр продукция әҙерләне [1]. Улар араһында бутил спирты, альфа-метилстирол, бензол, толуол, «Ағиҙел» электр ҡырынғысы, телефон шнуры бар. Электр ҡырынғысы Ерҙә генә түгел, космоста ла юғары баһаға лайыҡ булды. 1974 йылдың июлендә «Салют-3» фәнни орбиталь станция экипажы командиры ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, СССР-ҙың летчик-космонавы П. Р. Попович Ергә: «Ағиҙел» кеүек һоҡланғыс аппарат менән ҡырынғанда, ысын мәғәнәһендә ҡәнәғәтләнеү тойғоһо кисерәһең», — тип хәбәр итте [2]. Шунан бирле үҙ караптары бортынан биргән репортаждарында «Ағиҙел» ҡырынғысы тураһында маҡтап телгә алыу совет космонавтарының традицияһына инде.

Эшләп сығарылған изделиеларҙың ассортименты яңыра барҙы. 1965—1973 йылдарҙа ғына ла Өфөлә 550-нән ашыу яңы продукция төрө үҙләштерелде [3]. Мәҫәлән, синтетик спирт заводы нефтехимиктары Советтар Союзында беренселәрҙән булып промышленность шарттарында этил-пропилен каучугы, бутил спирты, нефть һәм газ сырьеһынан полиэтилен, метилстирол етештерә башланы. Моторҙар эшләү производство берекмәһендә «Москвич» автомобиле өсөн 1968 йылдан алып сығарыла башлаған двигатель яңы изделиеларҙың береһе булды. Двигателдең ышаныслылығы, яҡшы йөрөү сифаттары халыҡ-ара автораллиҙарҙа ла иҫбатланды. Өфөлә эшләнгән мотор ҡуйылған «Москвич-412» автомобилдәре 1968 йылда Сиднейҙа финишҡа уңышлы килде, ә 1970 йылдың июнендә улар Лондондан Мехикоға тиклем барҙы. Был илебеҙҙә машина эшләүҙең юғары кимәлен асыҡ сағылдырҙы.

Техник базаны камиллаштырыу, продукция сифатын күтәреү өсөн көрәш, уның яңы төрҙәрен эшләп сығарыу производство культураһының һәм эффектлылығының үҫеүенә булышлыҡ итте.

Фәнни-техник революция шарттарында халыҡ хужалығын артабан үҫтереү уға идара итеү формаларын һәм ысулдарын камиллаштырыуҙы талап итте. КПСС Үҙәк Комитетының сентябрь (1965 йыл) Пленумында ҡаралған экономик реформа был проблеманы хәл итеү юлдарын билдәләне. Ул планлаштырыуҙы тамырынан яҡшыртыуҙы, предприятиеларҙың хужалыҡ эшендәге үҙ аллылығын киңәйтеүҙе, хеҙмәт коллективтарында юғары производство күрһәткестәренә ирешеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙы күҙ уңында тотто.

Өфөлә планлаштырыуҙың һәм экономик стимуллаштырыуҙың яңы системаһына күсер алдынан ҙур әҙерлек эше алып барылды. Уға ҡала партия ойошмаһы етәкселек итте. КПСС-тың ҡала комитеты предприятиелар һәм төҙөлөштәр етәкселәренең, баш белгестә-

[1] «Вечерняя Уфа», 1981, 19 февраль.
[2] Шунда уҡ, 1974, 10 июль.
[3] Түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса иҫәпләп сығарылды: «Вечерняя Уфа», 1972, 8 июнь; «Советская Башкирия», 1974, 28 февраль.

репең экономик уҡыуын ойошторҙо, тәүге партия ойошмалары секретарҙары менән семинарҙар үткәрҙе. Уларҙа яңы шарттарҙа ойоштороу һәм тәрбиә эшенең формалары һәм ысулдары ентекләп өйрәнелде. Хеҙмәт коллективтары реформаға ныҡлап әҙерләнде. Предприятиеларҙа хеҙмәтсәндәргә партия һәм хөкүмәттең хәҙерге этаптағы экономик политикаһы киң аңлатылды. Экономик белемдәрҙе күтәреү курстары асылды. Ойоштороу әҙерлеге лә алып барылды.

Реформа аҡрынлап ғәмәлгә ашырылды. Беренселәрҙән булып «1 Май» шырпы фабрикаһы, витамин, геофизик приборҙар, сантехник заготовкалар заводтары, кизе-мамыҡ комбинаты, «Башнефтезаводстрой» һәм эре панелле йорттар төҙөү трестары яңыса эшләүгә күсте. Артабан ҡаланың башҡа производстволары ла хужалыҡ итеүҙең яңы ысулына күсерелде. Был эш, нигеҙҙә, 1969 йылға тамамланды. Реформаны үткәреү һәр хеҙмәтсәндең һәм бөтә коллективтың предприятиелар эшендәге дөйөм һөҙөмтәләрҙе яҡшыртыуға ҡыҙыҡһыныуын арттырҙы, производствоның эске резервтарын асыҡлау буйынса инициативаны үҫтереүгә булышлыҡ итте.

Хеҙмәтте фәнни нигеҙҙә ойоштороу шундай мөһим резервтарҙың береһе булып тора. Партияның ҡала һәм район комитеттары хеҙмәтте фәнни ойоштороуҙы (НОТ) киң индереүгә беренсе дәрәжәләге әһәмиәт бирҙе. 1966 йыл башында КПСС-тың ҡала комитеты предприятиеларҙың техник һәм партия етәкселәре менән бергә НОТ мәсьәләләре буйынса актив аңлатыу эшен башлап ебәрҙе. Алдынғы тәжрибәне дөйөмләштереү, таратыу һәм белгестәрҙең белемен күтәреү өсөн КПСС ҡала комитетының техник-экономик советы эргәһендә НОТ буйынса методик группа ойошторолдо. Был эшмәкәрлек ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе. Ә 1966 йылдың аҙағына Өфө предприятиеларының күбеһендә штатҡа ингән НОТ лабораториялары һәм бюролары барлыҡҡа килде. Улар етәкселегендә 103 ижади бригада эшләне [1]. Машиналар эшләүҙә НОТ-тың камиллашҡаныраҡ формалары барлыҡҡа килде. 1968 йылда был тармаҡ предприятиеларында 200 ижади группа һәм бригада эшләне. Улар НОТ буйынса сараларҙың 350 планын әҙерләне. Шуларҙан ғәмәлгә ашҡан 260 сара 1,9 миллион һумлыҡ экономик эффект бирҙе [2].

Нефть эшкәртеү һәм нефть химияһы предприятиеларында хеҙмәтте фәнни ойоштороу яҡшырҙы. Тула өлкәһенең Щекино химия комбинаты тәжрибәһен өйрәнеү быға бик ныҡ ярҙам итте. Комбинатта производствоны, хеҙмәтте һәм эш хаҡы системаһын ойоштороуҙы камиллаштырыу юлы менән персоналдар һанын кәметеп, бер үк ваҡытта продукция етештереүҙе арттырыуға өлгәштеләр. «Башнефтехимзаводы» берекмәһе, шул иҫәптән уның Өфөләге группаһы коммунистары 1969 йылдың майында щекинсылар өлгөһөнә эйәрҙе. Ләкин Башҡортостан нефтехимиктары уларҙан айырмалы рәүештә

---

[1] «Советская Башкирия», 1967, 20 апрель.
[2] «Вечерняя Уфа», 1969, 29 ғинуар.

эште бер генә заводта түгел, ә берекмәгә ҡараған бер нисә завод масштабында яңыса ойоштороҙо. Экономияланған эш хаҡы фондының байтаҡ өлөшө хеҙмәт етештереүсәнлегенең ирешелгән кимәленә ҡарап, заводтар араһында ҡайтанан бүленде. Был инде берекмәләге бөтә заводтарҙың экономик күрһәткестәрен тиҙ арала яҡшыртырға ярҙам итте.

Республикала үткәрелгән тәжрибә «Башҡортостан эксперименты» тип аталды. Уны тормошҡа ашырыуҙа меңдәрсә эшсе һәм хеҙмәткәр актив ҡатнашты. Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводының 23-сө цехы коллективы, эшселәрҙең эш күләмен анализлап ҡарағандан һуң, цехтағы 20 операторҙы бушатырға мөмкин тигән һығымтаға килде. Синтетик спирт заводының 20-се цехы работниктары хеҙмәтләндереү зоналарын киңәйтеү, профессияларҙы берләштереү юлы менән 42 кешене эштән бушатырға тәҡдим итте [1]. Хеҙмәт ресурстарын рациональ файҙаланыу һөҙөмтәһендә Өфөнөң нефть химияһы заводтарында эшләүселәр һаны 1974 йылға бөтәһе 3,5 меңдән ашыуыраҡ кешегә кәмене [2]. Эштән бушатылған кешеләр яңы производстволарға күсерелде. Эксперимент үткәреү «Башнефтехимзаводы» берекмәһе предприятиелары эшселәренә, инженер-техник работниктарына һәм хеҙмәткәрҙәренә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү буйынса туғыҙынсы биш йыллыҡ заданиеларын өс йыл ярымда үтәргә мөмкинлек бирҙе. КПСС Үҙәк Комитеты уларҙы ҙур хеҙмәт еңеүе менән ихлас һәм ҡайнар ҡотланы.

Ижтимағи производствоның үҫеүе транспортты реконструкциялауҙы талап итте. Ҡалала һәм республикала йөк ташыу әйләнешенең күп өлөшө Өфө тимер юл узелына төшкәнлектән, ул техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырылды. Узелдың бөтә линиялары ла тиерлек электровоздар хеҙмәтләндереүенә күсерелде. Тимер юл составтары яңыртылды. Станция һәм юл хужалыҡтары яңынан йыһазландырылды. Поездар хәрәкәтенә идара итеүҙә автоматика средстволары киң индерелде, тейәү һәм бушатыу эштәрен механизациялау кимәле күтәрелде. Өфө станцияһының аҙ ҡеүәтле элекке вокзалы урынына яңы вокзал төҙөлөп, ул 1970 йылдың 6 ноябрендә тантаналы рәүештә асылды. Файҙалы майҙаны буйынса ул элеккеһенән 4 тапҡырға ҙурыраҡ. Вокзалда платформаларға сығыу өсөн тоннель, автоматик һаҡлыҡ камералары, белешмә алыу өсөн ҡулайламалар бар. Тимер юл транспортының материаль базаһын камиллаштырыу уның работниктарының ижади активлығын күтәреү менән бергә алып барылды. Улар вагондарҙың йөк һыйҙырышлылығын мөмкин тиклем тулыраҡ файҙаланыу буйынса алдынғы ысулдарҙы файҙаланды, поездарҙы тиҙерәк йөрөтөүгә, вагондарҙың тик тороуын кәметеүгә ирешеләр. Былар бөтәһе бергә йөк ташыу күләмен арттырырға ярҙам итте.

---

[1] «Советская Башкирия», 1971, 26 ғинуар; 1972, 4 апрель.
[2] «Вечерняя Уфа», 1972, 2 декабрь; 1974, 17 сентябрь.

Тимер юл вокзалы.



Һауа транспортында ла тамырҙан үҙгәрештәр булып үтте. Ваҡыт үтеү менән, Өфө үҙәгендә тороп ҡалған аэропорт ҡаланан ситкә күсерелде. Ул 1960 йылда яңы участкала төҙөлә башланы [1]. 1962 йылдың аҙағына оператив һәм техник служба биналары, ҡунаҡхана һәм склад бүлмәләре файҙаланыуға тапшырылды. 1966 йылдың 14 ғинуарында сәғәтенә 400 пассажирҙы үткәреү мөмкинлегенә эйә булған аэровокзал асылды. Самолеттар паркы яңы типтағы машиналар менән яңыртылып тора. Ете йыллыҡ осоронда парк, нигеҙҙә, АН-2 һәм ЛИ-2 тибындағы самолеттарҙан торған булһа, туғыҙынсы биш йыллыҡ осоронда АН-24, ТУ-124, ТУ-134 «А», ә һуңғараҡ ТУ-154, ЯК-40, ИЛ-18 самолеттары менән тулыландырылды. Хәҙерге заман лайнерҙары Өфөнө Башҡортостандың бөтә райондары менән тиерлек һәм илебеҙҙең 60-тан ашыу өлкә һәм республика үҙәктәре менән бәйләне. Авиаторҙар эшенең эффектлылығы күтәрелде. 1960—1978 йылдарҙа пассажирҙарҙы йөрөтөү һигеҙ тапҡырҙан күберәккә, ә йөк ташыу дүрт мәртәбәгә артты. 1972 йылда беренсе тапҡыр миллиондан ашыу пассажир хеҙмәтләндерелде. Өфө аэропорты эш күләме буйынса илебеҙҙең 15 иң эре аэропорты иҫәбенә инде. Летчиктарҙың ауыл хужалығына һәм медицина өлкәһенә ярҙамы арҡандан-арта.

Өфө йылға узелына ла һиҙелерлек реконструкция үткәрелде. 1961—1972 йылдарҙа 15 порт краны булған йөк тейәү-бушатыу участкаһы, бер километр оҙонлоғонда яҡшы йыһазландырылған причалдар линияһы төҙөлдө. Бөтә тейәү-бушатыу эштәре лә тип әйтерлек механизацияланды, крандарға идара итеү автоматлаштырылды. Ағиҙел йылғаһының үтеү ауыр булған урындары тәрәнәйтелде.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 933, оп. 1, д. 8524, л. 178.

һөҙөмтәлә йылға узелы бөтөнләй башҡа төҫ алды. Бәләкәй пристандән ул оло портҡа әүерелде. Бында ҙур теплоходтар һәм Волга танкерҙары инә башланы. 1961—1979 йылдарҙа йөк ташыу күләме 6 тапҡырға тиерлек артты һәм 1979 йылда 16 миллион тоннанан ашыу тәшкил итте.

Автомобиль транспорты ла камиллаштырылды. Торбалар буйлап үткәрелгән нефть, нефть продукттары һәм газ ағымы артты.

Техник прогресс кадрҙарҙың экономик белеменә юғары талаптар ҡуйҙы. Шуға күрә Өфөлә ете йыллыҡ башынан алып авиация һәм нефть институттары эргәһендә белгестәрҙең квалификацияһын күтәреү курстары асылды, һуңғараҡ улар техник прогресс һәм экономик белем университеттары итеп үҙгәртелде. Партияның район комитеттары эргәһендә партия-хужалыҡ активы мәктәптәре һәм семинарҙары эшләне. КПСС-тың ҡала комитеты эргәһендәге киске марксизм-ленинизм университетында экономика мәсьәләләре тәрәнерәк өйрәнелә башланы. Предприятиеларҙа ике-өс йыллыҡ техник прогресс университеттары, лекторийҙар эшләне. Хеҙмәтсәндәр коммунистик хеҙмәт, алдынғы тәжрибә мәктәптәрендә, халыҡ университеттарында, квалификация күтәреү курстарында үҙҙәренең техник һәм экономик белемен тәрәнәйтте. 1973 йылда эшләгән кешеләрҙең яртыһы экономик белем системаһына йәлеп ителде, үҙенең профессиональ оҫталығын арттырыу өҫтөндә эшләне. КПСС Үҙәк Комитетының «КПСС-тың XXV съезы ҡарарҙары нигеҙендә производствоның эффектлылығын һәм эштең сифатын күтәреүҙә хеҙмәтсәндәрҙең экономик белеме ролен көсәйтеү буйынса Башҡортостан партия ойошмаларының эше тураһындағы» ҡарары (1978 йылдың авгусы) ҡабул ителгәндән һуң, экономик белемдең практик йүнәлешлелеге көсәйтелә, тыңлаусылар һаны арта. Был уҡыуҙар Өфө хеҙмәтсәндәрендә юғары идеялылыҡ тәрбиәләүҙә, уларҙың ижади активлығын үҫтереүҙә ышаныслы сара булды.

Коммунизм төҙөлөшө киң ҡолас алған осорҙа совет кешеләренең производстволағы активлығы һәм инициативаһы һиҙелерлек күтәрелә, уларҙың хеҙмәткә мөнәсәбәте үҙгәрә бара. Фәнни-техник революцияның хәҙерге этабы, шулай уҡ ижтимағи-экономик тормоштоң бөтә сфераларында ла Коммунистар партияһы һәм Совет дәүләте ғәмәлгә ашырған үҙгәрештәр был процестарҙың объектив шарты булып тора. Социалистик ярыш киң ҡолас ала; уның формалары һәм йөкмәткеһе байытыла бара. Хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәт өсөн хәрәкәттең киң йәйелеүе ошо хаҡта һөйләй. Был хәрәкәт КПСС-тың XXI съезы алдынан барлыҡҡа килде, ә 1959 йылдың ғинуарында инде Өфөнөң 5 йәш коллективы коммунистик хеҙмәт бригадаһы исемен йөрөтә һәм 300 коллектив был исем өсөн көрәшә ине [1]. Партия һәм башҡа йәмәғәт ойошмалары яңы ижади башланғысты яҡланы һәм уға тейешле йүнәлеш биреү тураһында хәстәрлек күрһәтте. Ҡала масштабын-

---

[1] «Ленинсы», 1959, 10 ғинуар.

да һәм туранан-тура предприятиеларҙа ярыш алдынғыларының слеттары үткәрелде, иң яҡшы тәжрибә дөйөмләштерелде һәм производствоға индерелде. Урындағы матбуғат ярыш барышын, новаторҙарҙың йөкләмәләрҙе үтәүен көн һайын яҡтырта барҙы.

Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводының технологик установкаһынан ҡалала был хәрәкәтте башлап ебәргән Г. Г. Теляшев етәкселегендәге комсомолец йәштәр бригадаһының уңыштары бөтәһе өсөн дә өлгө булды. Был коллектив хеҙмәт етештереүсәнлеген ике тапҡырға арттырыуға ирешеп, установканың ремонт араһындағы ваҡытын нормалағы 90 тәүлек урынына 600 тәүлеккә еткерҙе. Бындай ҡаҙаныш Бөтә Союз практикаһында булғаны юҡ ине әле. 3-сө трестан 1960 йылда коммунистик хеҙмәт бригадаһы исеменә лайыҡ булған А. Х. Ғәзиев етәкселегендәге штукатурҙар бригадаһының да фиҙакәр хеҙмәте ярышыусылар өсөн өлгө булды. Коллектив йөҙҙәрсә промышленность, административ, культура-көнкүреш биналарын һәм торлаҡ йорттарып «бик яҡшы» һәм «яҡшы» билдәләренә биҙәне.

Был хәрәкәт бик тиҙ йәйелдерелеп, тотош коллективтарҙы солғап алды. 1960 йылдың июнендә Яңы Өфө нефть эшкәртеү һәм химия заводтарының эшселәре менән хеҙмәткәрҙәре коммунистик хеҙмәт предприятиеһы тигән исем өсөн көрәшергә ҡарар итте. Артабан был көрәшкә башҡа коллективтар ҙа ҡушылды. Хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәт өсөн хәрәкәт хеҙмәтсәндәр ярышының төп формаһына әүерелде. 1975 йылда унда ҡаланың 202 мең эшсәне, 2,8 мең бригада, 5 меңдән ашыу цех, бүлек һәм участка ҡатнашты. Ярыш барышында 113 мең алдынғы эшсе, инженер-техник работник һәм хеҙмәткәр коммунистик хеҙмәт ударнигы булды. 5 предприятие «Коммунистик хеҙмәт коллективы» исемен алыуға ирешә. Был исемде беренселәрҙән булып 1961 йылда — сәй төрөү фабрикаһы, 1962 йылда 4-се тегеү фабрикаһы һәм 1-се ТЭЦ яуланы [1].

Хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәт өсөн хәрәкәт күп төрлө үҙ-ара ярҙам формаларын барлыҡҡа килтерҙе: алдынғы бригадалар бригадирҙары артта ҡалғандарға күсте, тәжрибәле эшселәр йәштәрҙе шефҡа алды, икенсе һөнәрҙәргә өйрәнеү практикаға инде. Валентина Гагарованың һоҡланғыс башланғысы Өфөлә ҡайнар яҡлау тапты. 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы мастерҙары П. В. Потапенко, Р. С. Ариткулова тәүгеләрҙән булып уның өлгөһөнә эйәрҙе. Аҙаҡ тиҫтәләрсә эшсе, инженер һәм техник артта ҡалған участкаларға күсте һәм уларҙы алдынғылар сафына сығарҙы. Синтетик спирт заводының кадровый работниктары, мәскәүҙәр өлгөһөнә эйәреп, 1964 йылдың февралендә йәш эшселәрҙе шефҡа алды, улар менән профессиональ һәм тормош тәжрибәһен уртаҡлашты. Был инициатива Өфөнөң бөтә предприятиеларында ла күтәреп алынды һәм артабан кәңәшсе-тәрбиәселәр институтына әүерелде.

---

[1] Кузеев Р. Г. Рабочий класс — создатель коммунизма. Өфө, 1969, 162-се бит; ЦГА БАССР, ф. 171, оп. 1, д. 1103, л. 94.

Хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәт өсөн көрәш барышында производство резервтарын мөмкин тиклем яҡшыраҡ файҙаланыу, хеҙмәтте ойоштороуҙың фәнни методтарын индереү, профессияһы буйынса иң яҡшы һәм башҡа шуның кеүек почетлы исемдәр өсөн ярыш башланды һәм киң таратылды. Социалистик ярыш үҙенең бөтә формаларында ла яңы йәмғиәт төҙөүҙә ҡеүәтле сара булып торҙо.

Унынсы биш йыллыҡ осоронда илебеҙҙә Ростов өлкәһе хеҙмәтсәндәренең инициативаһы буйынса артта ҡалыусы предприятиеларҙы булдырмау өсөн хәрәкәт киң ҡолас алды. Ростовтар тәжрибәһе менән танышҡандан һуң, КПСС-тың ҡала комитеты бюроһы уларҙың эш алымдарын индереү буйынса киң программа билдәләне. Артта ҡалыусы коллективтар булмаған эш системаһын индереүгә һәм уның эшенә контроллек итеү буйынса штаб төҙөлдө; системаның иң мөһим мәсьәләләрен билдәләүсе положение, коллективтар эшмәкәрлегенең отчет һәм контроль тәртибе эшләнде. Һөҙөмтәлә промышленность предприятиеларында продукция реализациялау буйынса планын үтәмәгән подразделениелар һаны 1979 йылда бер ярым тапҡырға кәмене [1].

Экономикаға идара итеүҙе камиллаштырыу, техник прогресс, алдынғы тәжрибәне файҙаланыу, хеҙмәтсәндәрҙең юғары ижади активлығы билдәләнгән пландарҙы уңышлы тормошҡа ашырыуҙы тәьмин итте. Өфөнөң халыҡ хужалығы үҫеше пландары ваҡытынан алда тултырылды: 1965 йылдың 25 октябренә — ете йыллыҡ, 1970 йылдың 26 октябренә — һигеҙенсе, 1975 йылдың 30 ноябренә туғыҙынсы биш йыллыҡ план үтәлде. Был осорҙа хеҙмәт етештереүсәнлеге 1,5, 1,3 һәм 1,4 тапҡырға күтәрелде [2]. Ҡала хеҙмәтсәндәре унынсы биш йыллыҡ заданиеларын да срогынан алда, 1980 йылдың 15 декабренә, үтәне. Айырым предприятиелар быға байтаҡ алда өлгәште. Ике Ленин орденлы һәм Ҡыҙыл Байраҡ орденлы Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү һәм төп производство күләме буйынса биш йыллыҡ планды 1980 йылдың майына тултырҙы. КПСС Үҙәк Комитеты мотор эшләүселәрҙе ҙур хеҙмәт еңеүе менән ихлас ҡотланы. «Был ҡаҙаныштар, — тип әйтелгәйне ҡотлауҙа, — күп меңле мотор эшләүселәр коллективының фиҙакәр хеҙмәте, партия, профсоюз һәм комсомол ойошмаларының фән һәм техниканың өр-яңы ҡаҙаныштарын производствоға индереү, производствоны механизациялау һәм автоматлаштырыу, социалистик ярышты үҫтереү, алдынғы тәжрибәне файҙаланыу, эштең сифатын күтәреү буйынса актив һәм маҡсатҡа йүнәлешле эш алып барыуы арҡаһында яуланды».

Ҡала экономикаһы һиҙелерлек үҫте. Промышленность производствоһы күләме 1959—1979 йылдарҙа 5 тапҡырға тиерлек артты,

---

[1] «Вечерняя Уфа», 1980, 5 апрель.

[2] «Советская Башкирия», 1966, 27 ғинуар; 1971, 26 ғинуар; «Вечерняя Уфа», 1975, 24 декабрь.

Е. П. Шерстобитов.



1979 йылда ул 4 миллиард һумдан ашыу булды. Халыҡ хужалығының күп тармаҡтары артабан да үҫеш алды. Ләкин уларҙың шаҡтай дәрәжәлә техник прогресты билдәләүселәре өҫтөнлөклө темп менән үҫтерелде. Был иһә промышленностың тармаҡ структураһында үҙгәрештәргә килтерҙе. Нефть эшкәртеү, химия һәм машиналар эшләүҙең удель ауырлығы артты.

Нефть эшкәртеү һәм химия Өфө экономикаһында төп тармаҡҡа әүерелде. Нефть химияһы улар араһында беренсе урынды алды. Синтетик спирт заводы илебеҙҙә иң эре нефть химияһы предприятиеһы булып тора. Уның коллективы күп кенә яңы производстволарҙы һәм технологик процестарҙы үҙләштереүҙә беренселәрҙән булды. Заводта иң арзан этил спирты, Советтар Союзында эшләп сығарылған полиэтилендың биштән бер өлөшө етештерелә. Нефть эшкәртеү заводтарының айырым производстволары нефть химияһы профиленә күсерелде. Уларҙа юғары көкөртлө нефтте эшкәртеү үҙләштерелде, уны химик юл менән эшкәртеүгә күселде. Етештерелгән продукция төрҙәре буйынса был заводтар нефть химияһы комбинаттары итеп үҙгәртелде. Химия заводы ауыл хужалығы ихтыяждары өсөн ағыулы химикаттар етештереү буйынса илдең баш предприятиеһына әүерелде. 1978 йылда СССР-ҙа етештерелгән гербицидтарҙың өстән бере уның өлөшөнә тура килә.

Һигеҙенсе биш йыллыҡта Өфөнөң промышленность структураһында яңы тармаҡ — нефть сығарыу тармағы барлыҡҡа килде. 1961 йылдың 20 авгусында уҡ әле 6-сы скважинанан (Дмитриевка ауылынан алыҫ түгел) девон нефтенең ҡеүәтле фонтаны урғылды. Был дата Өфө эргәһендә промышленность нефтен асыу көнө тип иҫәпләнә. Беренсе эксплуатация скважинаһы 1966 йылда эшләй башланы. «Ҡара алтын» сыҡҡан урындар базаһында ҡала тирәһендә һәм уға яҡын райондарҙа «Өфөнефть» нефть промыслаһы ойошторолдо. Һуңғарак ул эре нефть һәм газ сығарыу идаралығына әүерелде.

Халыҡ ҡулланыу тауарҙарын етештереү һәм ассортиментын киңәйтеү ҡала экономикаһында яңы баҫҡысҡа күтәрелде. Был процесс халыҡ өсөн тауарҙар эшләп сығарыусы тармаҡтарҙың йылдам үҫеүе, шулай уҡ уларҙы етештереүгә ауыр индустрия предприятиеларын йәлеп итеү иҫәбенә бара. Промышленностың еңел һәм аҙыҡ-түлек тармаҡтары үҫте. «Мир» фирмаһы иң ҙур предприятие булып етеште, 1960—1970 йылдарҙа ул 12,5 миллион берәмек тегеүле изделие бирҙе.

Макарон фабрикаһы үҙенең етештереүсәнлеге буйынса илдең шундай предприятиелары араһында тәүге урындарҙың береһен яуланы. Ауыр промышленностың производство көүәттәре киң файҙаланылды. Культура-көнкүреш тауарҙарын 1959 йылда 15 предприятие генә етештергән булһа, 1977 йылда уларҙың һаны 47-гә етте. Улар араһында химия, геофизик приборҙар, быяла-сүс туҡыма, тау ҡорамалдары заводтары бар ине. Уларҙа күп төрлө продукция — кер йыуыу машиналары, электр ҡырынғыстары, яҡтыртҡыстар, йыуыу средстволары, туҙан һурҙырғыстар, туристар өсөн наборҙар һәм башҡа — бөтәһе меңгә яҡын исемдәге продукция эшләп сығарылды. Ләкин ҡайһы бер тауарҙарҙы етештереү халыҡ талабын ҡәнәғәтләндереп бөтмәй ине әле.

Ә. Ш. Дәүләтҡолова.



Шулай итеп, производство масштабтары үҫеү менән бергә, уның тармаҡ структураһы ла ҡатмарланды. Был техник прогресты билдәләүсе тармаҡтарҙың юғары темптарҙа үҫеүендә, производство һәм нефть сығарыуҙың байтаҡ яңы төрҙәре барлыҡҡа килеүендә, ҡулланыу тауарҙары етештереүсе предприятиеларҙың үҫешен тиҙләтеүҙә асыҡ күренде. Производствоны туплау көсәйтелде. Әгәр 1960 йылда эшселәр һаны 3 меңдән ашыу булған предприятиелар өлөшөнә бөтә предприятиеларҙың 4,3 проценты һәм тулайым продукцияның 42 проценты тура килһә, 1980 йылда улар шуларға ярашлы рәүештә 12,7 һәм 64,3 процент тәшкил итте. Концентрациялауҙың үҫеүе, шулай уҡ көнкүреште хеҙмәтләндереүҙең ҡайһы бер тармаҡтарын промышленность составынан сығарыу промышленность предприятиелары һанын 1959 йылдағы 175-тән 1980 йылда 120-гә тиклем ҡыҫҡартыуға килтерҙе.

Күп яҡлы үҫеш һөҙөмтәһендә Өфө Башҡортостандың иң алдынғы экономик үҙәге булыуын һаҡлап ҡалды. Ләкин башҡа ҡалаларҙың үҫеүе айҡанлы, республика промышленность продукцияһын етештереүҙә уның өлөшө 1960 йылдағы 47,7 проценттан 1978 йылда 40 процентҡа тиклем кәмене.

Етештереүсе көстәрҙең үҫеше халыҡ составында ла үҙгәрештәр алып килде. Эшселәр һаны 1959 йылдағы 185 мең кешенән 1974 йылда 300,5 меңгә, йәғни 60 процентҡа, ә инженер-техник работниктар һаны был осорҙа 12 меңдән 34 меңгә тиклем, йәғни 283 процентҡа, артты. Халыҡ хужалығының етештереүсе тармаҡтары менән бергә, халыҡты культура-көнкүреш хеҙмәтләндереү сфераһының киңәйеүе эшселәр синыфы сафтарының артыуын билдәләне.

М. F. Хафизов.



Социаль структура пропорциялары ла үҙгәрҙе. Эшселәр өлөшө бер аҙ кәмене, ә инженер-техник работниктар өлөшө артты. Әгәр 1959 йылда эшселәр эшләгән халыҡтың 68,6 процентын, ә инженер-техник работниктар 4,5 процентын тәшкил иткән булһа, 1974 йылда улар шуға ярашлы рәүештә 66,7 һәм 7,7 процент булды. Был мәғлүмәттәр фәнни-техник интеллигенцияның һуңғы йылдарҙағы үсеш темпы буйынса башҡа социаль группаларҙы уҙып китеүен күрһәтә. Был законлы процесс һәм бөтә илгә хас күренеш. «Ул партияның фәнни-техник прогресты һәр яҡлап үҫтереүгә, халыҡтың культураһын һәм белемен артабан күтәреүгә йүнәлтелгән политикаһының һөҙөмтәһе булып тора, — тип билдәләнде партияның XXIV съезына КПСС Үҙәк Комитетының Отчет докладында [1].

Өфө күп милләтле ҡалаға әүерелә бара. Ҡалала 100-гә яҡын төрлө милләт вәкилдәре йәшәй һәм эшләй. Һәр предприятиела башҡорттар, рустар, татарҙар, сыуаштар, мариҙар — 20—35-ләп милләт вәкилдәре иңгә-иң терәп хеҙмәт итә. Тыуған ил хаҡына бергәләп хеҙмәт итеү, тиң хоҡуҡлылыҡ шарттарында көндәлек аралашыу ысын мәғәнәһендә туғанлыҡ мөнәсәбәттәрен үҫтереүгә булышлыҡ итә. Иптәше тураһында кешеләр уның милләтенә ҡарап түгел, ә хеҙмәтенә, әхлаҡ сифаттарына ҡарап фекер йөрөтә. Был турала Социалистик Хеҙмәт Геройы, Өфө нефть эшкәртеү заводының өлкән операторы З. Н. Дауытов бик яҡшы әйтте: «Ысынлап та, эш көндәрендә үҙ коллективыңдың күп милләтле булыуы тураһында уйлап та бирмәйһең. Иптәштәрҙе беҙ эш сифаттарына ҡарап баһаларға өйрәнгәнбеҙ. Төрлө милләт вәкилдәренең берҙәм коллектив тәшкил итеүен беҙ күрмәйбеҙ икән, бында ғәжәпләнерлек бер ни ҙә юҡ» [2].

Эшселәр синыфының профессиональ-квалификация составындағы, хеҙмәт характерындағы һәм йөкмәткеһендәге үҙгәрештәр техник прогресс һөҙөмтәләренең береһе булып тора. Ҡул хеҙмәтенә нигеҙләнгән һөнәрҙәр кәмей бара, хәҙерге заман техникаһын хеҙмәтләндереүсе работниктар һаны арта. Техник прогресс эшсенең хеҙмәт эшмәкәрлеген ижади йөкмәтке менән тулыландыра, интеллектуаль хеҙмәт өлөшөнөң артыуына алып килә. Тимәк, эшселәр синыфы менән интеллигенция хеҙмәтенең характерын яҡынайтыуҙа мөһим аҙым яһала. Техник прогресс тәьҫирендә инженер-техник работник-

[1] КПСС-тың XXIV съезы материалдары. М., 1972, 74-се бит.
[2] «Советская Башкирия», 1974, 28 ноябрь.

тарҙың квалификацияһы күтәрелә бара. Уларҙың ҡайһы берҙәре производствола эшләү менән бергә фәнни тикшеренеүҙәр алып бара.

Т. М. Вилданов.



Коммунизм төҙөүселәрҙең алғы сафында атлаусы эшселәр һәм инженер-техник работниктарҙың һоҡланғыс кадрҙары барлыҡҡа килде. Уларҙың хеҙмәт батырлығы киң танылыу яулаһы һәм Коммунистар партияһы менән Совет хөкүмәте тарафынан юғары баһаланды. 1983 йыл башында ҡаланың 16 предприятиеһы һәм төҙөлөш ойошмаһы байрағында ордендар балҡыны. 1976 йылда Өфөнөң М. В. Фрунзе исемендәге резина-техник изделиелар заводы производство күләме, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү һәм продукция сифатын яҡшыртыу буйынса туғыҙынсы биш йыллыҡ заданиеларын ваҡытынан алда үтәгәне өсөн Октябрь Революцияһы ордены менән наградланды; 21-се төҙөлөш тресына Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены тапшырылды. Ҡаланың 11 хеҙмәт коллективы Бөтә Союз социалистик ярышында юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкәне, 1980 йылға һәм унынсы биш йыллыҡҡа экономик һәм социаль үҫеш планын уңышлы үтәгәне өсөн КПСС Үҙәк Комитеты, СССР Министрҙар Советы, ВЦСПС һәм ВЛКСМ Үҙәк Комитетының күсмә Ҡыҙыл байраҡтарына лайыҡ булды. Улар араһында «Башнефтегеофизика» геофизика тресы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы «Востокнефтепроводстрой» төҙөлөш-монтаж тресы, Ленин һәм Октябрь Революцияһы орденлы Яңы Өфө нефть эшкәртеү, быяла-сүс туҡыма, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы ВЛКСМ-дың 40 йыллығы исемендәге синтетик спирт заводтары коллективтары бар ине. Меңдәрсә өфөләр Советтар Союзы ордендары һәм миҙалдары менән наградланды, ә 62 кеше Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән юғары исемгә лайыҡ булды. Улар араһында — моторҙар эшләү производство берекмәһе слесары Ф. Ә. Нухов, синтетик спирт заводының өлкән машинисы Е. П. Шерстобитов, КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетының беренсе секретары М. З. Шакиров, «Нефтепроводмонтаж» тресы электросварщигы Р. Ҡ. Бәхтийәров, 21-се трестың комплекслы биҙәүселәр бригадаһы бригадиры М. Ә. Ғәлимов, Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводының өлкән операторы М. Ғ. Хафизов, моторҙар эшләү производство берекмәһенең генеральный директоры В. Д. Дьяконов, Өфө быраулау эштәре идаралығы мастеры Т. М. Вилданов.

Өфө хеҙмәтсәндәре ҡала экономикаһы үҫешендәге уңыштарға илдең бөтә экономик һәм фәнни-техник потенциалына таяныу, Совет-

Ф. Ә. Нухов.



тар Союзының сит ил дәүләттәре менән хеҙмәттәшлегендә ҡатнашыу һөҙөмтәһендә иреште. Россия Федерацияһының 30-ҙан ашыу автономиялы республикаһы, крайҙары һәм өлкәләре, бөтә союздаш республикалар хеҙмәтсәндәре өфөләргә ҙур химия һәм нефть эшкәртеү объекттарын төҙөргә ярҙам итте. Моторҙар эшләү заводының механика-йыйыу корпусын монтажлау өсөн сит илдең 10 фирмаһынан һәм СССР-ҙың 29 станоктар эшләү заводынан ҡорамалдар килтерелде. Ҡаланың ил экономикаһына индергән өлөшө артты. Ундағы предприятиеларҙың продукцияһы Советтар Союзының бөтә райондарына тип әйтерлек оҙатыла һәм донъялағы 50 илгә сығарыла.

Өфө белгестәре, төрлө объекттар төҙөүҙә, ҡорамалдарҙы монтажлауҙа ҡатнашыу өсөн, илдең байтаҡ райондарына һәм сит илдәргә барҙы. Ҡала төҙөүселәре Тольяттиҙағы автозаводтың суйын металлургияһы цехында технологик металл конструкциялар ҡорҙо, Алыҫ Көнъяҡ, Урта Азия, Волга буйы, Себер һәм Алыҫ Көнсығыш киңлектәрендә торба үткәргестәр һалды. Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводы вәкилдәре донъяның 20 илендә нефть химияһы предприятиеларын һәм производстволарын үҙләштереүҙә һәм сафҡа баҫтырыуҙа ярҙам итте. Египеттағы бейек Асуан плотинаһын төҙөүҙә ҡатнашҡан совет белгестәре араһында Өфө вәкилдәре лә бар ине.

Үҙ-ара тәжрибә уртаҡлашыу көсәйҙе. Синтетик спирт заводы работниктары Ленинград, Польша һәм Чехословакиялағы коллегаларынан өйрәнә. Өфө тегенселәре илебеҙҙәге төрҙәш предприятиеларҙың күп тәжрибәһен үҙҙәрендә файҙаланды. Башҡортостан баш ҡалаһы хеҙмәтсәндәре лә үҙҙәренең эш практикаһы менән йомарт уртаҡлаша. Нефть эшкәртеү һәм химия производстволарында үҙ ватандаштарыбыҙ менән бергә, ГДР, Чехословакия, Болгария, Һиндостан, Эфиопия һәм башҡа илдәр вәкилдәре лә әҙерлек үтә. Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводында ғына ла йылына 500-ҙән ашыу кеше стажировкала була. СССР-ҙың һәм Экономик Ярҙамлашыу Советы ағзалары булған илдәрҙең нефть эшкәртеү һәм нефть химияһы промышленносы белгестәре менән ҡалала системалы рәүештә үткәрелеп торған кәңәшмәләр һәм конференциялар өфөләр туплаған производство тәжрибәһенең ҡиммәтен билдәләүсе дәлил булып тора. Халыҡ-ара күргәҙмәләр алдынғы тәжрибәне уртаҡлашыуҙа мөһим роль уйнай. Өфө заводтары һәм фабрикалары үҙ изделиелары өлгөләрен йыл һайын 15—16 халыҡ-ара күргәҙмәлә һәм йәрминкәлә күрһәтә. Рес-

Ҡаланың көньяҡ «ҡапҡаһы».



публиканың 1981 йылда Лейпцигтағы халыҡ-ара күргәҙмәлә ҡатнашыуы ҙур ваҡиға булды. Башҡортостандағы байтаҡ предприятиеларҙың продукцияһы 350 квадрат метрлыҡ майҙанда урынлаштырылды, улар араһында Өфөнөң данлыҡлы предприятиелары — моторҙар эшләү производство берекмәһе, «Химпром» производство берекмәһе, «Геофизприбор» производство берекмәһе, Башҡортостан «Ағиҙел» производство-художество берекмәһе һәм башҡа предприятиеларҙың изделиелары бар ине.

Бөтә Союз социалистик ярыш барышында хеҙмәт берҙәмлеге, дуҫлығы нығый бара. Өфөнөң нефть эшкәртеүселәре һәм нефтехимиктары Баку, Сумгаит, Саратов, Ҡазан, Омск, Яңы Куйбышевск, Волгоград һәм башҡа ҡалаларҙағы төрҙәш предприятиелар коллективтары менән, төҙөүселәр — Татарстан, Омск өлкәһе, Куйбышев, мотор эшләүселәр Ижевск, Пермь, Төмән машина эшләүселәре менән уңышлы ярыша.

Производство бәйләнештәрен киңәйтеү һәм тәрәнәйтеү ҡала халыҡ хужалығы үҫешен тиҙләтте, берҙәм социалистик экономика уңыштарына, илебеҙҙәге бөтә халыҡтарҙың артабан яҡынайыуына булышлыҡ итте. Күп милләтле Совет дәүләтенең экономикаһы бөтә милләттәр һәм халыҡтарҙың дөйөм маҡсаттары һәм мәнфәғәттәре нигеҙендә барлыҡҡа килгән берҙәм хужалыҡ организмына үҫеп әүерелде. Совет Башҡортостаны баш ҡалаһының экономикаһы ла дөйөм Союз халыҡ хужалығы комплексының состав өлөшө булып тора.

Шулай итеп, коммунистик төҙөлөш осоронда Өфө экономикаһы сифат яғынан тағы ла юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелде. Халыҡ хужалығының масштабтары байтаҡ киңәйҙе һәм үҫеш темптары күтәрелде. Уның тармаҡ структураһы ҡатмарланды һәм артабан камиллаштырылды. Ҡаланың социаль структураһы ла сифат һәм һан яғынан үҙгәрештәр кисерҙе. Өфөнөң эшселәр синыфы, интеллигенцияһы, бөтә хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең тырыш хеҙмәте менән коммунизмдың материаль-техник базаһын төҙөүгә тос өлөш индерә.

## § 2. Өфө үҫә һәм төҙөкләндерелә

50-се йылдар аҙағынан алып Башҡортостан баш ҡалаһы үҫешендә өр-яңы этап башланды. Был ваҡытта Өфөнөң төньяҡ өлөшө — Черниковск, шулай уҡ Дим районы, Затон һәм Тимашево поселоктары үҙ аллы йәшәй ине. Торлаҡ фондының яртыһын бер ҡатлы индивидуаль ағас йорттар тәшкил итте. Ҡалалағы төҙөлөш эштәре төрлө ерҙә төрлө ведомстволар тарафынан алып барылды. Ҙур Өфө территорияһында планлы төҙөлөш алып барыуҙы тәьмин итеү өсөн 1958 йыл аҙағында ҡала Советы башҡарма комитеты эргәһендә Капиталь төҙөлөш идаралығы ойошторолдо. Ул торлаҡ төҙөлөшөнөң, ә 1971 йылдан алып культура-көнкүреш объекттары төҙөлөшөнөң дә төп заказсыһы булды. Идара итеүҙе һәм средстволарҙы үҙәкләштереү берҙәм инженерлыҡ-төҙөлөш һәм архитектура политикаһын үткәреү өсөн шарттар тыуҙырҙы. Ҡаланы төҙөкләндереүҙә урындағы Советтың роле күтәрелде.

1959 йылдың сентябрендә РСФСР Министрҙар Советы ҙур Өфө үҫешенең генеральный планын раҫланы, ул ҡаланың берҙәм архитектура ансамблен төҙөүгә нигеҙ һалды. План, халыҡ һанының 700 мең кешегә етеү мөмкинлеген күҙ уңында тотоп, алдағы 25 йылға иҫәпләнгәйне. Ләкин экономиканың йылдам үҫеүе һөҙөмтәһендә ҡала етеҙерәк темптарҙа үҫте. 1959 йыл башына унда 516,9 мең, 1966 йылда — 682,5 мең, 1976 йылда 922,7 мең кеше йәшәй ине, ә 1980 йылдың 12 авгусында Өфө РСФСР-ҙа бер миллион халыҡ йәшәгән ун беренсе ҡала булды. Проектты ҡайтанан эшләү кәрәклеге килеп тыуҙы, был эште «Ленгипрогор» институтына һәм Башҡортостандың проект ойошмаларына тапшырҙылар. РСФСР Министрҙар Советы 1971 йылдың майында Өфө үҫешенең яңы генераль планын раҫланы. Унда алдағы 25—30 йылға ҡаланың үҫеш перспективалары билдәләнде. Планда Өфө ярымутрауы тип йөрөтөлгән майҙанда эске төҙөлөштәрҙе тамамлау һәм унда ҡала халҡының 80 процентын урынлаштырыу күҙҙә тотола. Ағиҙел менән Ҡариҙел йылғаларының һул яҡ ярҙарындағы майҙандар резерв итеп ҡалдырылды. Баш ҡала архитектураһын яҡшыртыу, транспорт магистралдәрен киңәйтеү, коммуналь хужалыҡты камиллаштырыу ҡаралды. Партия һәм совет органдары ҙур Өфө үҫешенә йүнәлеш бирҙе һәм контроллек

В. И. Ленин һәйкәле.



итте. Төҙөлөштөң киң масштаблы һәм ҡатмарлы була барыуын иҫәпкә алып, КПСС-тың ҡала комитеты ҡарары менән 1966 йылдың августында партияның ҡала комитеты һәм ҡала Советы башҡарма комитеты эргәһендә ҡала төҙөү советы төҙөлдө. Уның ағзалары — архитекторҙар, геологтар, төҙөкләндереү буйынса белгестәр — ҡала райондарын төҙөү сираты һәм уларҙың инженерлыҡ әҙерлеге, иҫке кварталдарҙы үҙгәртеп ҡороу, ҡалала иң мөһим биналарҙы һәм ҡоролмаларҙы урынлаштырыу мәсьәләләрен ҡарапы. Ҡала төҙөү советы хәҙерге Өфөнө формалаштырыуҙың генераль штабына әүерелде.

Ҡала торлаҡ һәм культура-көнкүреш төҙөлөшөнөң быға тиклем күрелмәгән ғәйәт ҙур масштабтары һәм юғары темптары нигеҙендә үҫә. Төҙөлөш, башлыса, буш майҙандарҙа алып барыла. Шул рәүешле Октябрь проспекты, Р. Зорге урамы, Мотор эшләүселәр һарайы районында торлаҡ массивы, Урман-парк районы барлыҡҡа килде. Ҡаланың күпьяҡ өлөшө — К. Маркс, Ленин, Революцион, Цюрупа, Фрунзе, Ғафури, Достоевский урамдары реконструкциялана. «Утренний»,

«Телецентр», «Зеленая роща», «Әй», «Энтузиастар», «Инорс» һәм башҡа яңы торлаҡ комплекстары интенсив үҫә.

Ҡалала индивидуаль төҙөлөш туҡтатылды. Урындағы Советтар 1962 йылдан алып шәхси төҙөүселәрҙең средстволарын күп квартиралы кооператив йорттар төҙөүгә йүнәлтә. Был ҡала территорияһын рациональ файҙаланырға, төҙөлөштө тиҙләтергә һәм өфөләрҙе бөтә уңайлыҡтары булған квартиралар менән тәьмин итергә мөмкинлек бирә.

Өфөнөң торлаҡ фонды йылдам төҙөлөш һөҙөмтәһендә 1940—1979 йылдарҙа 9 тапҡырға артты һәм 10,8 миллион квадрат метр самаһы тәшкил итте. Торлаҡ фондының үҫеш темптары буйынса Өфө илдәге тәүге ете ҡала иҫәбенә инде [1]. Быға реконструкция эштәре ваҡытында иҫке һәм емерелергә торған йорттарҙы күп һүтергә тура килеүгә ҡарамаҫтан өлгәшелде.

Яңы төҙөлөштәр менән бер рәттән, ҡалала ғәмәлдәге торлаҡ фондын планлы рәүештә яңыртыу һәм төҙөкләндереү эше лә алып барыла. 1961—1979 йылдарҙа ғына ла 2,5 меңгә яҡын йортҡа капиталь ремонт үткәрелде. Улар һыу үткәргестәр, канализация, үҙәкләштерелгән йылытыу системаһы менән тәьмин ителде. Ведомство торлаҡтарын урындағы Советтар ҡарамағына тапшырыу ҙур күләмдә шундай эштәр башҡарырға ярҙам итте. 1961—1979 йылдарҙа Советтарҙың торлаҡ фонды 5,7 тапҡырға артты [2].

Массовый төҙөлөш типовой проекттар буйынса алып барыла. Әммә был ҡоролмаларҙың бер төрлөлөгөнә килтерҙе. Шуға күрә ҡаланы билдәләнгән территорияла уңайлыраҡ итеп ойоштороуға ҙур иғтибар бирелә. Архитекторҙар кварталдарҙағы ваҡ төҙөлөштәрҙән баш тартты. Культура-көнкүреш учреждениелары комплексы булған микрорайондар төҙөлә башланы. Биналарҙы иркен урынлаштырыу киң ҡулланыла. Кварталдар эсендә транспорт магистралдәре һалынмай. Был иһә йорттарҙы тауыштан һаҡлай, хәрәкәтте хәүефһеҙ итә. Матур урман массивы менән уратып алынған Урман-парк торлаҡ микрорайоны шундай төҙөлөш өлгөһө булып тора.

Төҙөлөш структураһы ла үҙгәрҙе. 1958 йылда әле ҡалала бәләкәй ағас йорттар күберәк булһа, 1965 йылда биш ҡатлы йорттар ҡалаға йәм бирҙе. Бейек йорттар төҙөү башланды. 1962 йылда Ленин һәм Революцион урамдары мөйөшөндә туғыҙ ҡатлы тәүге йорт һалынды. 1972 йылда Фрунзе һәм Воровский урамдары киҫешкән урында ун дүрт ҡатлы беренсе йорт үҫеп сыҡты. Һуңға табан ҡалала күп ҡатлы йорттарҙы күреү ғәҙәткә инеп китте. 1971 йылда улар файҙаланыуға тапшырылған дөйөм майҙандың яртыһынан күберәген тәшкил итте [3]. Ғәҙәттәге биш ҡатлы йорттар янында бейек биналарҙың һалыныуы Өфө архитектураһын төрлөләндерә, торлаҡ фондын тығыҙыраҡ

---

[1] «Литературная газета», 1980, 30 апрель.
[2] «Вечерняя Уфа», 1980, 15 февраль.
[3] Шунда уҡ, 1972, 22 ғинуар.

итә. Урман-парк комплексы йорттары бейек һәм оҙон итеп һалынған өс микрорайонды берләштерҙе. Бында урындағы рельеф уңайлы файҙаланылды, йәшеллек зонаһы һаҡлап ҡалынды һәм киңәйтелде.

Ҡала архитектураһын формалаштырыуҙа йәмәғәт биналары ла мөһим роль уйнаны. Улар индивидуаль проекттар буйынса төҙөлөп, Өфөнөң күп урамдарын һәм майҙандарын йәнләндерҙе һәм тағы ла күркәмерәк итте. 1965 йылдың 24 сентябрендә Фрунзе урамында М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры бинаһы асылды («Гипротеатр» берекмәһенән архитектор Р. Бегунц һәм конструктор Н. Максимюк етәкселегендәге проектлаусылар группаһы проекты, уны 3-сө төҙөлөш тресы төҙөнө). Р. Зорге урамын 1967 йылда мөһабәт Спорт һарайы биҙәне. Уның архитектураһы уңайлылығы һәм ябайлығы менән айырылып тора. Һарай быяла менән алюминдан төҙөлдө. 1969 йылдың ғинуарында машина эшләүселәр урамы менән Беренсе Май урамы киҫешкән урында Машина эшләүселәр һарайы асылды. Ул баш ҡалала заманса һалынған иң матур биналарҙың береһе. 16 метр самаһы бейеклектәге урам яғы пилондары уға күркәм төҫ бирә. Пилондар араһындағы витраждар ҡоростан, алюмин һәм быяланан эшләнгән. 1970 йылда Пушкин урамында оригиналь бина — Актерҙар йорто һалынды (проекттың авторы — «Башкиргражданпроект» институтының баш архитекторы Ю. А. Пацков, уны 3-сө трест работниктары төҙөнө). 1979 йылда «Башнефтезаводстрой» тресы төҙөүселәре Туҡай урамында КПСС Өлкә Комитеты һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының административ бинаһын файҙаланыуға тапшырҙы (проекттың баш архитекторҙары В. Б. Залегаллер, Ю. П. Паечкин). 1981 йылда Ленин һәм Киров урамдары мөйөшөндә 3-сө трест коллективы мөһабәт Нефтселәр культура һарайын төҙөнө (проект авторҙары — архитекторҙар: БАССР-ҙың атҡаҙанған төҙөүсеһе М. П. Мазин, О. В. Новиков, В. С. Фирсов). Гранит, быяла һәм бетон менән биҙәлгән ошо һәм башҡа күп кенә биналар үҙҙәренең килешле линиялары менән конструкцияларҙың еңеллеген һәм көсөн сағылдыра.

Рәссамдар һәм архитекторҙар ҡоролмаларҙың тышҡы биҙәлешенә ҙур иғтибар бирҙе. Уларҙы биҙәүҙә мәрмәр вағы, аҡ плитә, монументаль-декоратив биҙәктәр файҙаланылды. Тәүге монументаль живопись — нефть институты бинаһы фасадында «Уҡыу һәм хеҙмәт» темаһына үртәлгән балсыҡтан эшләнгән һүрәт 1962 йылда барлыҡҡа килде. «Ватан-әсә» мозаик панноһы резина-техник изделиелар заводы Культура һарайын, «Башҡортостан» рельеф-скульптура композицияһы «Россия» ҡунаҡханаһы эргәһендәге йорттарҙың береһен биҙәне.

Өфө куранттары — ҡаланың айырым бер ғорурлығы. Улар Совет майҙанында тәүге тапҡыр 1967 йылды ҡаршылаған төндә һуҡты. Шул уҡ йылда, Октябрҙең 50 йыллығына ҡарата, «Россия» ҡунаҡханаһы фасадына тағы бер сәғәт ҡуйылды. СССР-ҙың 50 йыллығы

Октябрь революцияhы hәм граждандар hуғышы геройҙарына hәйкәл.



алдынан Үҙәк баҙар янындағы административ бинала, һуңғараҡ тағы бер нисә урында куранттар һуға башланы.

Ҡаланың айырым урындары монументаль һынлы сәнғәт әҫәрҙәре менән байытылды. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 50 йыллығы алдынан ҡала үҙәгендә, Октябрь проспектында, В. И. Ленинға бронзанан ҡойолған мөһабәт һәйкәл ҡуйылды (авторҙары — СССР Художество академияһының член-корреспонденты, СССР Дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ художнигы М. Ф. Бабурин, архитектор Г. И. Гаврилов). Һәйкәлдә юлбашсы ҡулын алға һуҙған килеш ынтылышлы хәрәкәттә һүрәтләнгән.

1965 йылдың йәйендә Беренсе Май майҙанында Башҡортостандың үҙ ирке менән Россияға ҡушылыуының 400 йыллығы хөрмәтенә Дуҫлыҡ монументы асылды (авторҙары — скульпторҙар: М. Ф. Бабурин, Г. П. Левицкая, архитекторҙар: Е. И. Кутырев, Г. И. Гаврилов). 35 метр бейеклегендәге ҡыҙғылт төҫтәге обелиск күккә олғашып тора. Түбәндә ике ҡатын-ҡыҙ фигураһы — башҡорт һәм рус ҡыҙы һынландырылған. Улар араһында, обелисканың нигеҙендә, башҡорт вәкилдәренең рус батшаһы илселәренә Россияға ҡушылыу тураһында грамотаны тапшырыуын һүрәтләгән гранит рельеф ҡуйылған. Нигеҙҙең ҡалған өс яғын хәҙерге Башҡортостандың ҡаҙаныштарын һүрәтләгән күп фигуралы рельеф биҙәй. Монумент рус һәм башҡорт халыҡтарының ҡаҡшамаҫ дуҫлығын сағылдырыусы символға әүерелде.

1967 йылдың ноябрендә башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевҡа һәйкәл ҡуйылды (авторҙары — СССР-ҙың Дәүләт премияһы лауреаты, Төньяҡ Осетин АССР-ының һәм БАССР-ҙың халыҡ художнигы скульптор С. Д. Тавасиев, архитектор профессор И. Ғ. Ғәйнетдинов). 1978 йылдың сентябрендә Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденлы М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры бинаһы алдындағы майҙанда башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы, Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриға һәйкәл асылды (авторҙары — СССР-ҙың халыҡ художнигы, академик скульптор Л. Е. Кербель, архитектор Л. В. Хихлуха). Калинин районында Орджоникидзе исемендәге майҙанды һәм Ильич скверын, Совет районында И. Якутов исемендәге балалар паркын, Киров районында Пушкин аллеяһын һәм Цюрупа урамын, Дим районында Үҙәк майҙанды яңы һәйкәлдәр биҙәне.

Башҡортостан баш ҡалаһы төҙөлөштәрендә тау ландшафтын, урындағы башҡа үҙенсәлектәрҙе оҫта файҙаланыу уның архитектура йөҙөнә күркәмлек һәм йәм өҫтәй. Ҡаланы өс яҡтан уратып алған Ағиҙел, Ҡариҙел һәм Дим йылғалары Өфө планировкаһына индерелгән. Ағиҙел ярҙарына бетон түшәлә. М. Ғафури, М. И. Калинин исемендәге яңы культура һәм ял парктары барлыҡҡа килде, элеккеләре төҙөкләндерелә. Бөтә урамдар ҙа тип әйтерлек йәшелләндерелде. Өфөнө күп төрлө ағастар — йүкә, ҡайын, миләш, аҡ шыршы һәм декоратив ҡыуаҡтар биҙәй. Уларҙы ултыртҡанда пейзаж стиле киң

Рихард Зорге урамы.



ҡулланылды. Башҡортостан баш ҡалаһын унда йәшәүселәр йәшелләндерҙе. Йыл һайын меңдәрсә кеше яҙ һәм көҙ көндәрендә урман һәм баҡса айлыҡтары үткәреүҙә ҡатнашты. Йөҙҙәрсә мең төп ағас, миллиондарса төп ҡыуаҡ һәм сәскәләр ултыртылды. Өфөләрҙең актив ҡатнашлығында Дан бульвары, мотор эшләүселәр Культура һарайы эргәһендә парк, Өфөнөң 400 йыллығы исемендәге сквер булдырылды. Йорттарҙың ишек алдарында емеш ағастары ултыртылды. Ҡала халҡының тырышлығы, хәстәрлеге менән Өфө РСФСР-ҙа иң йәшел ҡалаларҙың береһенә әүерелде.

Типовой проекттар буйынса массовый төҙөлөш шарттарында ҡаланы биҙәүгә яңы элементтар өҫтәү уның йөҙөн һиҙелерлек үҙгәртте. 1970 йылға ҡаланың төньяҡ өлөшөндә — Калинин һәм Орджоникидзе райондарында, үҙәк өлөшөндә — Совет районында эре торлаҡ массивтарын төҙөү, нигеҙҙә, тамамланды *. Беренсе Май, Ульяновтар, Машина эшләүселәр, Октябрҙең 50 йыллығы, СССР-ҙың 50 йыллығы урамдары матурланды һәм төҙөкләндерелде. Иң күркәм һәм һоҡланғыс урамдарҙың береһе — Октябрь проспекты. Ул элекке Өфө менән Черниковск ҡалалары араһындағы майҙанда төҙөлдө һәм ҡаланың төньяҡ менән көньяҡ өлөштәрен тоташтырҙы. Тәүҙәрәк проспектта, нигеҙҙә, биш ҡатлы торлаҡ йорттар һалынды. Артабан уның архитектура ансамблен тығыҙ һәм ун ике ҡатлы биналар тулыландырҙы. Торлаҡ йорттар эргәһендә мәктәптәр, балалар һәм

* 1977 йылдың мартынан алып ҡаланың үҙәк өлөшө яңы барлыҡҡа килгән Октябрь районы составына индерелде.

медицина учреждениелары, магазиндар, йәмәғәт туҡланыуы предприятиелары төҙөлдө.

Октябрь проспектында күп кенә ҙур ғилми учреждениелар, шул иҫәптән СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының байтаҡ институттары, нефть химияһы поризводствоһының ғилми-тикшеренеү институты, нефть һәм нефть продукттарын йыйыу, әҙерләү һәм транспортлау буйынса ғилми-тикшеренеү институты урынлашты. Проспекттың иң үҙәк ҡалҡыу ерендә КПСС-тың Өфө ҡала комитеты һәм ҡала Советы башҡарма комитеты бинаһы төҙөлдө. Бина алдында — В. И. Ленин исемендәге майҙан. Тап шул майҙанда бейек гранит постаментта бөйөк юлбашсыға һәйкәл ҡуйылды. Майҙан эргәһенән М. Ғафури исемендәге яңы парк башлана. Яҡында ғына «Россия» ҡунаҡханаһы, кинотеатр, бер нисә сауҙа учреждениеһы урынлашҡан. Был майҙан дөйөм ҡала үҙәгенә, тантаналы митингылар, байрам демонстрациялары үткәреү урынына әүерелде. Оригиналь архитектура биналары — цирк, «Искра» кинотеатры, «Өфө» универмагы һәм башҡалар проспектҡа йәм өҫтәй. Проспекттың буйынан-буйына ике яҡлап йүкә аллеялары ултыртылды, газондар эшләнде.

В. И. Лениндың тыуыуына 110 йыл тулыуҙы байрам итеүгә әҙерләнгән көндәрҙә һәм уның Өфөлә ике тапҡыр булыуы хөрмәтенә КПСС Өлкә Комитеты инициативаһы менән В. И. Лениндың Йорт-музейының мемориаль зонаһын төҙөү эштәре киң йәйелдерелде. Революцияға тиклемге боропғо Өфөнөң бер өлөшө ҡайтанан аяҡҡа баҫтырылды: ағас йорттар төҙөлдө, тротуарҙарға — таш-плитә, урамдарға эре таш түшәлде, һирәк кенә урам фонарҙары ҡуйылды. Был почетлы һәм уникаль эштә Башҡортостандың хеҙмәт коллективтарынан йөҙҙәрсә төрлө һөнәр кешеләре ҡатнашты. Шул уҡ ваҡытта 1900 йылда Ленин урында ғы социал-демократтар менән осрашҡан паркты реконструкциялау эше лә башланды. 1982 йылдың 2 июлендә Өфөлә Ленин мемориалы тантаналы асылды. Хәҙер мемориаль зона В. И. Лениндың Йорт-музейы менән бергә донъя пролетариатының юлбашсыһы һәм остазының яҡты иҫтәлеген мәңгеләштерә.

Ҙур төҙөлөш инженерлыҡ коммуникацияларын һәм транспорт бәйләнештәрен байтаҡҡа киңәйтеүҙе талап итте. Өфөгә 1966 йылда Бохара, ә 1978 йылда Ырымбур газы килгәс, газ индереү бигерәк тә ҙур масштаб алды. 1960—1979 йылдарҙа ҡала эсендәге газ үткәргестәр оҙонлоғо 400-ҙән 900 километрға тиклем артты. Газ үткәрелгән квартиралар һаны ишәйҙе. Һыу үткәргестәр һәм канализация селтәрҙәре киңәйтелде. Яңы һыу туплау һәм таҙартыу ҡоролмалары төҙөлдө, иҫкеләре реконструкцияланды (Иҫке Өфөлә, Дим районында һәм башҡа урындарҙа). Шул уҡ осорҙа канализация селтәренең оҙонлоғо 3,8 тапҡырға артты һәм 387 километрға етте, ә һыу үткәргес селтәренең оҙонлоғо 401-ҙән 755 километрға тиклем артты. Ҡаланы һыу менән тәьмин итеү яҡшырҙы. Әгәр 1960 йылда һәр кешегә тәүлегенә 84 литр һыу тура килһә, 1980 йылда был һан 260 литр

тәшкил итте. Был илдең күп кенә эре ҡалаларындағыға ҡарағанда ла күберәк.

Инженерлыҡ ҡоралмалдарының үҫеше мөмкин тиклем һәйбәтерәк көнкүреш уңайлылыҡтары булған квартираларҙың артыуына килтерҙе. Йәмәғәт торлаҡ фондының 86-нан 98 процентҡа тиклеме 1975 йылда һыу үткәргес, канализация, үҙәкләштерелгән йылытыу селтәре, газ, ванна һәм душ, бейек йорттарҙың бөтәһе лә тиерлек лифттар менән тәьмин ителде. Инженерлыҡ ҡоралмалдары үҫеүе менән бергә уны хеҙмәтләндереү ҙә камиллаштырыла. Өфөнөң Урман-парк микрорайонында илебеҙҙә беренселәрҙән булып (Мәскәү һәм Ленинградтан ҡала) 1973 йылда йорт ҡоралмалдарының эшенә контроллек итеүсе берләштерелгән диспетчер службаһы булдырылды. Бөтә биналарҙың подъездары менән диспетчер бүлмәһе араһында бәйләнеш булдырылған, авария булған хәлдә электромонтерҙар, газовиктар, сантехниктар йорттарҙа йәшәүселәргә ярҙамға ашыға.

Ҡаланың үҫеүе менән, телефон бәйләнеше һәм урамдарҙы яҡтыртыу камиллаштырылды. Яңы станция һәм станция-ара ҡоролмалар төҙөлдө, иҫкеләре реконструкцияланды, был телефон бәйләнешенең сифатын һәм тиҙлеген яҡшыртты. 1961—1980 йылдарҙа телефон нөктәләренең һаны 4 тапҡырҙан күберәккә артты [1], ләкин был ғына ҡала ихтыяжын ҡәнәғәтләндерә алмай әле. Телефон-автоматтар селтәре киңәйтелде. 1959 йылда уларҙың һаны 171 булһа, 1980 йылда 1041-гә етте. Ҡала-ара телефон бәйләнеше лә киңәйә. 1975 йыл башында автоматик ҡала-ара телефон станцияһы сафҡа индерелде [2]. Урамдарҙы яҡтыртыу үҙгәртелде. 1958 йылдан алып урамдарға, майҙандарға һәм парктарға көн яҡтыһы биреүсе лампалар ҡуйылды. Яҡтыртылған урамдар һаны артты. 1961 йылда ҡалала 20 мең яҡтыртҡыс булһа, 1974 йылда ул 23 меңдән ашыуыраҡ тәшкил итте [3], уларҙың тышҡы йөҙө лә шаҡтай яҡшыртылды. Кистәрен Өфө йылдан-йыл матурлана бара.

Башҡортостан баш ҡалаһының интенсив үҫеше, халыҡ һанының артыуы пассажирҙар транспорты проблемаһын киҫкенләштерҙе. Күп хеҙмәт талап иткән предприятиеларҙың торлаҡ массивтарынан байтаҡҡа алыҫ булыуы был мәсьәләне тағы ла нығыраҡ тәрәнәйтте. Өҫтәүенә, ҡала территорияһы буйҙан-буйға һуҙылған. Былар юлдың оҙонлоғон һәм унда йөрөү ваҡытын арттыра. Ошо ҡатмарлы проблеманы хәл итеү өсөн байтаҡ саралар күрелде. Ҡаланың көньяҡ һәм төньяҡ өлөштәрен тоташтырыусы өс мөһим транспорт магистрале булдырылды. Уларҙың береһе — Октябрь проспекты буйлап, икенсеһе — Менделеев урамы, өсөнсөһө Р. Зорге урамы буйлап үткәрелде.

Юлдар селтәре реконструкцияланды һәм киңәйтелде. 1959—

---

[1] Түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса иҫәпләнде: ЦГА БАССР, ф. 171, оп. 4, д. 26, л. 3, 5; Башҡорт АССР-ының халыҡ хужалығы 60 йылда. Статистик йыйынтыҡ. Өфө, 1979, 104-се бит; «Вечерняя Уфа», 1980, 12 ғинуар.

[2] «Вечерняя Уфа», 1975, 15 ғинуар.

[3] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 2359, л. 38; «Вечерняя Уфа», 1974, 20 ноябрь.

Салауат Юлаев һәйкәле.



1975 йылдарҙа 477 километр юл, 5 юл күпере, Дим һәм Сафронов пристане тапҡырында Ағиҙел аша күперҙәр һалынды. Етмешенсе йылдар башында Цюрупа, Аксаков, Октябрҙең 50 йыллығы урамдары һәм Октябрь проспекты аша сығыу өсөн тәүге ер аҫты юлдары төҙөлдө. Былар барыһы ла ҡаланың төрлө районларын тығыҙыраҡ бәйләргә, транспорт хәрәкәтен яҡшыртырға, йәйәүлеләр өсөн уны тағы ла хәүефһеҙерәк итергә мөмкинлек бирҙе.

Транспорт селтәре даими киңәйтелә. 1959—1970 йылдарҙа 40 километрға яҡын трамвай юлдары һәм 490 километр автобус маршруттары асылды. 1962 йылдың ғинуарында ҡалала яңы төр транспорт — троллейбус булдырылды. Ул тәүҙә 5 километр алыҫлыҡҡа — тау ҡорамалдары заводынан алып ауыл хужалығы институтына тиклем йөрөнө. Һуңғараҡ троллейбус линиялары Октябрь проспекты, Беренсе Май, Ульяновтар, К. Маркс, СССР-ҙың 50 йыллығы, Р. Зорге, Менделеев урамдары буйлап үткәрелде, ә 1979 йылда уларҙың оҙонлоғо 100 километр тәшкил итте. Был осорҙа ҡалала 24 трамвай, 12 троллейбус һәм 37 автобус маршруттары бар ине.

Транспорт предприятиеларының материаль-техник базаһы байтаҡ нығытылды, хәрәкәт итеү составы тулыландырылды һәм яңыртылды. Әгәр 1959 йылда Өфө халҡын 279 автобус, 120 трамвай вагоны һәм 149 таксомотор [1] хеҙмәтләндерһә, 1979 йылда 251 автобус, 388 трамвай, 203 троллейбус һәм 786 такси бар ине. Бөтә төр транспорт паркы, нигеҙҙә, яңы маркалы машиналар иҫәбенә киңәйтелде. Уларҙың ҡайһы берҙәре илебеҙҙә беренсе тапҡыр Өфө урамдарында һынау үтте. Мәҫәлән, Чехословакияла эшләнгән комфортабелле тауышһыҙ трамвайҙар шундайҙар иҫәбенә инә. Һөҙөмтәлә йәмәғәт транспортының эше бер ни тиклем яҡшырҙы. 1960—1972 йылдарҙа пассажирҙар йөрөтөү 138,7 миллион кешенән 286 миллион кешегә тиклем артты [2].

Промышленностың, бигерәк тә нефть химияһының, үҫеүенә бәйле тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса хәл иткес саралар талап ителде. Предприятиеларҙы техник яҡтан ҡайтанан ҡоралландырыу, технологик процестарҙы камиллаштырыу ҡаланың санитария торошон яҡшыртырға мөмкинлек бирҙе. Күп кенә махсус саралар ғәмәлгә ашырылды. Предприятиеларҙа тирә-яҡ мөхитте һаҡлау буйынса службалар ойошторолдо, таҙартыу ҡоролмалары, газ-туҙан һурғыс установкалар төҙөлдө. Ваҡ котельныйҙар ябылды. КПСС-тың XXII съезы исемендәге нефть эшкәртеү, синтетик спирт, химия заводтарынан ағып сыҡҡан бысраҡ һыуҙы таҙартыу өсөн биологик таҙартыу ҡоролмалары төҙөлдө. 1963 йылда химия заводында бысраҡ һыуҙы нейтраллаштереү буйынса ҡеүәтле станция эшләй башланы. Һыу менән тәьмин итеүҙең әйләнеш узелдары был заводта беренсе булып индерелде. Унынсы биш йыллыҡ осоронда ҡаланың промышленность пред-

---

[1] Башкирия за 50 лет, 77-се бит; ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 2166, л. 34.

[2] Уфа за годы Советской власти, 39-сы бит; «Вечерняя Уфа», 1973. 9 гинуар.

приятиеларында бысраҡ һыуҙы ағыҙмаусы системалар проектланды һәм индерелде. Һөҙөмтәлә, промышленность производствоһы күләме артыуға ҡарамаҫтан, атмосфераны һәм күл-йылғаларҙы бысратыу кәметелде. Йәшелләндереү майҙандарын киңәйтеү һауаны яҡшы таҙартырға булышлыҡ итте. Ағиҙел һәм Ҡариҙел йылғаларының санитария торошо яҡшырҙы.

Илебеҙҙең башҡа ҡалалары менән бергә төҙөкләндереү эштәрен яҡшыраҡ башҡарыу өсөн ярышта ҡатнашыу күп йәһәттән өфөләргә ҡала хужалығын һәр яҡлап үҫтереүҙә уңышҡа ирешергә булышлыҡ итте. Был дуҫтарса ярыштарҙа Өфө бер нисә тапҡыр еңеүсе булып сыҡты. Торлаҡ фондын дөйөмләштереү, коммуналь хеҙмәт күрһәтеү һәм ҡала хужалығын алып барыу кимәле буйынса Башҡортостан баш ҡалаһы Россия Федерацияһында тәүге урындарҙың береһен яуланы.

Был ҡаҙаныштар — республика, ҡала партия һәм совет органдарының даими иғтибары һәм оҫта етәкселек итеүенең, баш ҡаланың меңдәрсә хеҙмәтсәндәре эшмәкәрлегенең һөҙөмтәһе. Өфөләр, ҡала тағы ла матурыраҡ, таҙараҡ, йәмлерәк булһын өсөн, хеҙмәтен дә, ваҡытын да йәлләмәне. Тиҫтәләрсә мең кеше йорттарҙы, урамдарҙы, парктарҙы, скверҙарҙы тәртипкә килтереү өсөн күп тапҡыр өмәгә сыҡты.

Ижтимағи мөнәсәбәттәр, экономика, ҡала хужалығы үҫешендәге прогресс XXIV ҡала партия конференцияһына (1975 й., декабрь) Өфөнө өлгөлө социалистик ҡала итеү бурысын ҡуйырға мөмкинлек бирҙе. 1978 йылдың июлендә ҡала партия-хужалыҡ активы йыйылышында Өфөлә йәшәүсе бөтә кешеләргә мөрәжәғәт ҡабул ителде. Унда был маҡсатҡа ирешеүҙең конкрет юлдары билдәләнде: производствоны һәм төҙөлөштө өлгөлө кимәлгә күтәрергә; пассажирҙар һәм йөк транспортының бөтә төрҙәренең дә аныҡ ритм менән һәм аварияһыҙ эшләүен тәьмин итергә; халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү сфераһының бөтә звеноларында ла эште яҡшыртырға; биналарҙы һәм ҡоролмаларҙы, территорияларҙы һәм микрорайондарҙы тәрбиәләп тотоуҙы һәм төҙөкләндереүҙе яҡшыртырға; ҡала кешеләрен коммунистик мораль рухында тәрбиәләргә, юғары әхлаҡ сифаттары, изге күңеллелек, үҙ-ара ихтирам һәм коллективизм тойғолары тәрбиәләргә [1]. Һәр предприятиены, ойошманы һәм учреждениены, һәр районды өлгөлө итеү буйынса пландар төҙөлөп, ғәмәлгә ашырыла. Был ғәйәт ҙур эштең бөтәһенә лә партияның ҡала һәм район комитеттары эргәһендәге махсус штабтар йүнәлеш бирә. Өфөнө өлгөлө социалистик ҡала итеү өсөн көрәш унда йәшәүсе һәр кешенең эше була бара.

Шулай итеп, Өфө тарихының бары тик һуңғы осоро уны хеҙмәтсәндәрҙең тормошо өсөн мөмкин тиклем яҡшыраҡ уңайлыҡтар тыуҙырыусы хәҙерге ҙур социалистик ҡала итеп формалаштырыуҙа хәл

---

[1] «Вечерняя Уфа», 1978, 10 июль.

иткес роль уйнаны. Был процесс ҡала үҫешенең бығаса күрелмәгән темптары һәм киң ҡоласы, уның йөҙөндәге тамырҙан үҙгәрештәр менән характерланды. Боронғо Өфө йәшәрә, көндән-көн матурыраҡ һәм күркәмерәк була бара.

## § 3. Хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәлен күтәреү

Кешеләрҙең материаль һәм рухи ихтыяждарын тағы ла тулыраҡ ҡәнәғәтләндереү — социализмда ижтимағи производствоның иң юғары маҡсаты. Ул бигерәк тә коммунистик төҙөлөштөң хәҙерге этабында уңышлы ғәмәлгә ашырыла. Илдең үҫә барған экономик потенциалы партия һәм хөкүмәтебеҙгә совет халҡының тормош кимәлен күтәреүгә тағы ла күберәк көс һәм средстволар һалырға мөмкинлек бирә.

Хеҙмәткә түләү хеҙмәтсәндәрҙең материаль ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүҙә төп сығанаҡ булып тора. Был өлкәлә күп кенә ҙур социаль-экономик саралар үткәрелде. Минималь эш хаҡы күләме ҙурайтылды, уртаса эш хаҡы алған эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең ставкалары һәм окладтары арттырылды. Премия биреү системаһы камиллаштырылды. Һөҙөмтәлә 1958—1965 йылдарҙа Өфө промышленносында эшләүсе бер кешенең уртаса айлыҡ эш хаҡы 95 һумдан 113 һумға артты, ә 1980 йылда ул 190 һум тәшкил итте. Бығаса хеҙмәткә түләү был тиклем күтәрелгәне юҡ ине.

Түләүҙәр һәм льготаларҙың ҡулланыуҙың йәмәғәт фондтары иҫәбенә артыуы — халыҡ доходтары артыуының икенсе мөһим сығанағы. Мәғариф һәм медицина хеҙмәте күрһәтеү сфераһы киңәйә, пенсия менән тәьмин итеү, балаларҙы мәктәпкәсә учреждениеларға йөрөтөү һәм башҡа саралар ғәмәлгә ашырыла. Өфөлә ете йыллыҡ осоронда үрҙә әйтеп үтелгән маҡсаттарға сығымдар ике тапҡырға тиерлек артты һәм 1966 йылда 31,4 миллион һум тәшкил итте[1]. Былар менән бер рәттән, хеҙмәтсәндәр һуңғы ваҡытта предприятиеларҙа булдырылған йәмәғәт фондтарының артыуы һөҙөмтәһендә өҫтәмә льготалар алды.

Эш хаҡын күтәреү һәм яйға һалыу, түләүһеҙ һәм льготалы хеҙмәт күрһәтеүҙе киңәйтеү түбән һәм юғары эш хаҡы алған работниктар категорияларының доход кимәлдәре араһындағы айырманы ҡырҡа кәметте, дөйөм алғанда, совет халҡының тормош хәлен яҡшыртты. Ғаилә бюджеты артты. Ҡала хеҙмәт һаҡлыҡ кассаларындағы суммаларҙың артыуы шул турала һөйләй. 1958—1972 йылдарҙа һаҡлыҡ кассаларына аҡса һалыусылар һаны 196 меңдән 342 меңгә етте, ә бер кешенең кассаға һалған аҡсаһының уртаса суммаһы 165 һумдан 555 һумға, йәки 3,4 тапҡырға, артты[2].

---

[1] «Советская Башкирия», 1967, 27 сентябрь.

[2] Түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса иҫәпләнде: ЦГА БАССР, ф. 1458, оп. 1, д. 1090, л. 34; «Вечерняя Уфа», 1972, 26 декабрь.

Октябрь проспекты.



Халыҡтың аҡса доходтарының арта барыуы уларҙың талаптарын да байтаҡ күтәрҙе. Шул сәбәпле ҡаланың сауҙа селтәре артабан киңәйтелде. Тиҫтәләрсә яңы сауҙа предприятиелары файҙаланыуға тапшырылды. Улар араһында 300 эш урынлы «Өфө» универмагы, К. Маркс, Революцион, Беренсе Май урамдарындағы заманса магазиндар, Р. Зорге урамындағы һәм Октябрь проспектындағы универсамдар бар. Россия Федерацияһында иң ҙур баҙарҙарҙың береһе — өҫтө ябыулы Үҙәк колхоз баҙары төҙөлдө. 1980 йылда бөтәһе 654 сауҙа предприятиеһы эшләне. Уларҙың эш формалары һәм алымдары камиллаштырылды, һатып алыусылар ихтыяжы тулыраҡ ҡәнәғәтләндерелә. 1959 йылдан башлап Өфөлә халыҡҡа кредитҡа тауарҙар һатыла, мебель гарнитурҙары, һыуыткыстар, автомобилдәр һәм башҡа дефицит тауарҙар һатып алыу өсөн алдан заказдар ҡабул ителә башланы. Күп магазиндарҙа үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү, тауарҙарҙы алдан төрөп, хаҡын күрһәтеп һатыу формалары индерелде. Тар профилдәге предприятиелар — промышленность тауарҙары, икмәк, кондитер, һөт продукттары, йәшелсә һәм башҡа тауарҙар һатыуға махсуслаштырылған магазиндар асылды. Сауҙа предприятиеларын махсуслаштырыу менән бәйле рәүештә, ҡала халҡына уңайлы булһын өсөн төрлө магазин комплекстары булдырылды. Улар Үҙәк баҙар, Мотор эшләүселәр һарайы, Телецентр райондарында, Октябрь проспектында асылды.

Халыҡ өсөн тауарҙар етештереү һәм уларҙың ассортиментын киңәйтеү, сауҙа селтәрен үҫтереү һәм хеҙмәтсәндәр доходының артыуы нигеҙендә ҡаланың ваҡлап һатыу тауар әйләнеше даими үҫә.

1979 йылда ул, 1958 йылдағы менән сағыштырғанда, 4,6 тапҡырҙан күберәккә артты һәм 1012,8 миллион һумға етте. Һатыуға сығарылған тауарҙарҙың дөйөм күләме генә түгел, ә уларҙың составы ла һиҙелерлек үҙгәрҙе. Ҡулланыу структураһы шаҡтай яҡшырҙы. Икмәк һатыу Өфөләге бер кеше иҫәбенә 1958 йылдағы 170 килограмдан 1968 йылда 127 килограмға тиклем кәмене. Уның ҡарауы, юғары сифатлы аҙыҡ-түлек — ит продукттары (шул уҡ осорҙа 11 килограмдан 45 килограмға тиклем), май, кондитер изделиелары, шәкәр, емеш һәм башҡа тауарҙарҙы реализациялау артты. Бынан тыш, продукттарҙың бер ни тиклемен ҡала хеҙмәтсәндәре колхоз баҙарҙарында һатып алды, йорт эргәһендәге участкаларҙа, коллектив баҡсаларҙа үҫтерҙе.

Сауҙала культура-көнкүреш тауарҙары тағы ла күберәк урын алды. Бында ла совет кешеләренең тормош һәм культура кимәле күтәрелеү һөҙөмтәһендә, характерлы үҙгәрештәр булып үтте. Элек иң кәрәкле тип иҫәпләнмәгән, әммә хәҙер күп ғаиләләрҙең көнкүрешендә ныҡлы урын алған тауарҙарға талап артты. Мәҫәлән, 1958 йылда өфөләр 6456 телевизор һатып алһа, ун йылдан һуң 25 220 телевизор, кер йыуыу машиналары шуға ярашлы рәүештә —2415 һәм 25 200, һыуытҡыстар —695 һәм 1200 дана һатып алды [1]. Шулай уҡ еңел автомобилдәр, заманса конструкциялы мебелдәр, магнитофондар, транзисторлы радиоалғыстар һәм башҡалар менән сауҙа итеү киңәйтелде.

Йәмәғәт туҡланыуы системаһында ла һиҙелерлек ыңғай үҙгәрештәр булып үтте. Уның материаль-техник базаһы даими киңәйтелә. 1958—1980 йылдарҙа ашхана, буфет, кафе, ресторандар һаны 415-тән 848-гә тиклем еткерелде. Ә уларҙағы урындар һаны 12 меңдән 67,6 меңгә тиклем етте [2]. Был һандарҙы сағыштырыу клиенттарҙы йылдам хеҙмәтләндереүгә һәләтле эре предприятиеларҙың ойошторолоуын күрһәтә. Тағы бер үҙенсәлекте билдәләп үтергә кәрәк: йәмәғәт туҡланыуында яңы предприятиеларҙың күбеһе хеҙмәтсәндәрҙең эш урындарында асылды. Шулай уҡ «Россия», «Башҡортостан», «Алтын башаҡ», «Һаҡмар» ресторандары, «Урал», «Театр», «Урман», «Батыр» кафелары төҙөлдө. Уларҙың һәр береһе рациональ йыһаздары, эске биҙәлештәре менән айырылып тора.

Өфөнө ауыл хужалығы продукттары менән тәьмин итеүҙе яҡшыртыу йәмәғәт туҡланыуы предприятиелары эшен камиллаштырыуҙа ҙур роль уйнаны. Был маҡсаттарҙа ҡала эргәһендәге зонала картуф һәм йәшелсә үҫтереү майҙандары киңәйтелде. Партия һәм совет органдары предприятиеларҙы һәм ойошмаларҙы теплицалар һәм парниктар төҙөүгә йәлеп итте. Уларҙы «Башнефть» берекмәһе, химия, нефть эшкәртеү, моторҙар эшләү һәм башҡа заводтар төҙөнө.

---

[1] «Вечерняя Уфа», 1969, 4 февраль.

[2] Народное хозяйство Башкирской АССР, 194-се бит; «Вечерняя Уфа», 1980, 11 март.

«Өфө» универмагы.




1972 йылда «Башнефть» берекмәһенең 60 мең квадрат метр майҙанлыҡ теплица-парник комбинаты үҙе генә лә өфөләрҙе 11 мең центнер йәшелсә менән тәьмин итте. 1979 йылдан башлап ҡала предприятиелары малсылыҡ продукттары етештереү өсөн ярҙамсы хужалыҡтар төҙөй башланы.

Йәмәғәт туҡланыуы системаһын киңәйтеү уның эшен камиллаштырыу менән бергә алып барылды. Ашхана һәм кафеларҙың күбеһендә әҙерләнгән аҙыҡ-түлектең сифаты яҡшыртылды, меню төрләндерелде, хеҙмәтләндереү культураһы күтәрелде. Махсуслаштырылған предприятиелар — ашханалар, ҡоймаҡ, пирожки, билмән бешереп һатыу урындары, йорт кухнялары барлыҡҡа килде. Ярым фабрикаттар, кулинария изделиелары һатыу киңәйтелде. Үҙ-үҙеңде хеҙмәтләндереү алымы, комплекслы аштар әҙерләү киң таралды. Предприятиеларҙың ҡайһы берҙәре эшселәр ашханаларын тәьмин итеү буйынса бөтә сығымдарҙы үҙ өҫтөнә алды. Был иһә аштарҙың хаҡын кәметергә булышлыҡ итте.

Яңы ашхана, кафе һәм рестарандарҙы файҙаланыуға тапшырыу, халыҡты хеҙмәтләндереү культураһын күтәреү хеҙмәтсәндәрҙең киң массаһы өсөн йәмәғәт туҡланыуын уңайлы һәм файҙалы итергә мөмкинлек бирҙе.

Халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеүҙең ныҡлап үҫеш алыуы һуңғы йылдарҙа билдәле үҙгәрештәрҙең береһе булды. Ул ҡала предприятиеларының актив ярҙамында ҙур дәүләт һалымдары иҫәбенә киңәйтелде. Мәҫәлән, 21-се төҙөлөш тресы коллективы 1964 йылда айырым бина бүлеп, уны көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү комбина-

ты итеп йыһазландырҙы. Химия, резина-техник изделиелар заводтары, «Башсантехмонтаж» тресы һәм башҡа предприятиелар 1967 йылда социаль-культура саралар фондын файҙаланып, ателье һәм мастерскойҙар төҙөргә тәҡдим итте. КПСС-тың ҡала комитеты һәм ҡала Советы башҡарма комитеты был башланғысты хупланы, уны башҡа хеҙмәт коллективтары яҡлап сыҡты [1]. Ҙур төҙөлөш һөҙомтәһендә 1980 йылда 608 сервис предприятиеһы эшләй ине, был 1959 йылдағы һан менән сағыштырғанда өс тапҡырға күберәк [2].

Замансa ҡорамалдар менән тәьмин ителгән көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү службаһы халыҡ хужалығының механизацияланған эре тармағына әүерелде. Ҡалала индивидуаль тегеү, кейемдәрҙе химик таҙартыу һәм буяу фабрикалары, аяҡ кейемдәре һәм сәғәт ремонтлау урындары, автомобилдәрҙе техник хеҙмәтләндереү станциялары, кер йыуыу һәм прокат пункттары эшләй. Махсуслаштырылған предприятиелар менән бер рәттән, һигеҙенсе биш йыллыҡ осоронда халыҡҡа көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү буйынса тотош комплекстар барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, 1972 йылда Октябрь проспектында асылған сауҙа-көнкүреш үҙәгендә аҙыҡ-түлек һәм хужалыҡ тауарҙары һатып алырға, ашханала туҡланырға, костюм тектерергә заказ бирергә, парикмахерҙа булырға һәм аяҡ кейемен ремонтлатырға мөмкин. 1980 йылда көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү работниктары халыҡҡа бөтәһе 530 төр хеҙмәт күрһәтте. Был 1959 йылдағынан ун алты тапҡырға күберәк.

Тормош хәленең яҡшырыуы, сервистың камиллаштырылыуы өфөләргә уның ярҙамынан киң файҙаланырға мөмкинлек бирҙе. 1959—1980 йылдарҙа бер кешегә көнкүреш хеҙмәте күрһәтеү йылына 6 һум 30 тинлән 39 һумға тиклем күтәрелде [3].

Мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениелары селтәрен киңәйтеү хеҙмәтсәндәрҙең тормош шарттарын яҡшыртыуҙа, йәш быуынды тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнай. Был эш, нигеҙҙә, ҡала предприятиелары средстволары иҫәбенә башҡарылды. 1960 йылда 225 урынлыҡ ике балалар баҡсаһы төҙөгән Өфө нефть эшкәртеү заводы был йәһәттән өлгө күрһәтте. Уға башҡа коллективтар эйәрҙе. Балалар баҡсалары махсус проект буйынса төҙөлдө, матур итеп биҙәлде, ҡайһы берҙәрендә йөҙөү бассейндары, оранжереялар бар. Территориялары һәйбәтләп төҙөкләндерелде, йәшелләндерелде. 1980 йылда Өфөлә бөтәһе 262 мәктәпкәсә учреждение бар ине. Уларға 50 меңдән ашыу бала йөрөнө, был ете йыллыҡ башындағы менән сағыштырғанда ике тапҡырҙан ашыуыраҡҡа күберәк. Ясле һәм баҡсалар селтәрен киңәйтеү ҙур социаль әһәмиәткә эйә. Дәүләт тағы ла күберәк балалар ҡарау һәм тәрбиәләү хәстәрлеген үҙ өҫтөнә алды, ә ҡатын-ҡыҙҙарҙың өҫтәмә отряды ижтимағи производствоға килде. Ғаилә бюджеты артты.

---

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 2576, л. 27; оп. 6, д. 213, л. 58—59.

[2] Түбәндәге мәғлүмәттәр буйынса иҫәпләнде: «Советская Башкирия», 1959, 28 март; «Вечерняя Уфа», 1980, 11 март.

[3] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 2166, л. 43; «Вечерняя Уфа», 1980, 30 декабрь.

Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводы медсанчасының 8-се һаулы больницаһы.



Ҡалала төҙөлөштөң ҙур масштабтарҙа алып барылыуы хеҙмәтсәндәрҙең торлаҡ шарттарын яҡшыртырға мөмкинлек бирҙе. 1959—1980 йылдарҙа 185 меңдән ашыу ғаилә яңы квартираларға күсте. 1959 йылда бер кешегә уртаса 4,2 квадрат метр ғына торлаҡ тура килһә, 1979 йылда ул 7,9 квадрат метрға етте. Торлаҡ проблемаһын хәл итеүҙә һан яғы ғына түгел, сифат яғы ла мөһим роль уйнай. 1962 йылдан алып өфөләрҙе бараҡтарҙан, подвалдарҙан, авария хәлендәге йорттарҙан, ә һуңғараҡ промышленность зонаһында йәшәүселәрҙе капиталь төҙөлөш йорттарына күсереү башланды. 1971 йылға бөтәһе 13,5 меңдән ашыу ғаилә, ә унынсы биш йыллыҡ осоронда тағы ла 10 меңдән ашыу ғаилә шул рәүешле күсерелде. Йәнә шуныһы әһәмиәтле: әгәр 1957 йылда яңы квартираларға күсеүселәрҙең 30 процентына ғына айырым квартира бирелгән булһа, хәҙер һәр ғаиләгә торлаҡ майҙаны айырым бирелә.

Халыҡ һаулығын һаҡлау системаһы камиллаштырылды. Уның үсешен дәүләт һәм ҡаланың эре предприятиелары финансланы. Мәҫәлән, КПСС-тың XXII съезы исемендәге нефть эшкәртеү заводы 18-се поликлиниканың 1971 йылда сафҡа индерелгән яңы корпусын тәьмин итеү һәм йыһазландырыу өсөн 627 мең һум аҡса тотондо. Бында яҡшы йыһазландырылған кабинеттар бар. Һыу менән дауалау бүлегендә дауалау душы бар, ылыҫ һәм кислород ванналары ҡабул итергә мөмкин. 1972 йылда поликлиникаһы булған күп профилле республика балалар больницаһы асылды. Был комплекстың 8 корпусы, нигеҙҙә, Өфө халҡы һәм Башҡортостандың бөтә ке-

шеләре 1970 йылдың 11 апрелендә Бөтә Союз коммунистик субботнигында эшләп алған аҡсаға төҙөлдө. Күп кенә башҡа ҙур медицина учреждениелары ла төҙөлдө. 1980 йыл башында Өфө халҡын 17 больница, 3 бала табыу йорто, 6 диспансер, 23 поликлиника, 8 санэпидстанция хеҙмәтләндерҙе. Һаулыҡ һаҡлау базаһын киңәйтеү һәм камиллаштырыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙары, ҡорһаҡ һәм күкрәк травмалары менән интеккәндә квалификациялы ярҙам күрһәтеү үҙәктәре ойоштororға, стоматология, педиатрия, физиотерапия службаларын киңәйтергә, дауалауҙың яңы ысулдарын индерергә мөмкинлек бирҙе.

Был осорҙа ҡала медиктарының һаны бер нисә тапҡырға артты, уларҙың оҫталығы күтәрелде. 1981 йылға хеҙмәтсәндәр һаулығын һаҡлауҙа 5,4 меңгә яҡын врач, бөтәһе 26,8 мең медицина работнигы эшләне. Күҙ ауырыуҙарын дауалау белгестәре — профессор Ғ. Х. Ҡоҙаяров һәм уның уҡыусыһы РСФСР-ҙың атҡаҙанған врачы В. Л. Ғизҙәтуллин киң танылыу яуланы. РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың атҡаҙанған врачы, Социалистик Хеҙмәт Геройы М. Ф. Сакаева үҙ ярҙамсылары менән илебеҙҙә беренселәрҙән булып «Яһалма бөйөр» аппаратын ҡулланды һәм бик күп пациенттарҙың ғүмерен һаҡлап алып ҡалды. Профессор Ә. И. Бикбаева, БАССР-ҙың атҡаҙанған врачтары Н. Н. Корниенко, А. Я. Наседкин ҡолаҡ һәм тамаҡ ауырыуҙарын дауалау буйынса уңышлы эш алып барҙы. Хирургия өлкәһендә профессорҙар Н. Ғ. Ғатауллин, М. Ә. Ғәлиев, доцент Р. И. Титовтар һоҡланғыс һөҙөмтәләргә иреште. БАССР-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәрҙәре профессорҙар И. Ғ. Ҡадиров менән Ғ. Н. Тереғолов практик медицинаға ҙур өлөш индерҙе.

Дауалау-профилактика саралары киң үткәрелде. Йәше тулғанға тиклем бөтә балалар ҙа врачтарҙың даими күҙәтеүендә тәрбиәләнә. Мәктәпкәсә йәштәге балаларға, үҫмерҙәргә, өлкәндәргә медицина тикшереүҙәре үткәреү регулярлаштырылды. Медицина һәм профсоюз органдары хәүефһеҙлек техникаһын һәм промышленность санитарияһын камиллаштырыу хаҡында ҙур хәстәрлек күрә. Промышленносты, транспортты һәм төҙөлөштө хәҙерге заман техникаһы менән йыһазландырыу, производствоны механизациялау һәм автоматлаштырыу хеҙмәт шарттарын яҡшыртыуға булышлыҡ итте. 1962 йылдан башлап Өфөлә, ленинградтар һәм мәскәүҙәр башланғысына эйәреп, юғары хеҙмәт культураһы һәм техник эстетика элементтарын индереү өсөн массовый хәрәкәт башланды. Цехтарҙа гөлдәр, сәскәләр ултыртылды, стеналар, ҡорамалдар яҡтылыҡ техникаһының фәнни нигеҙендә үҙенсәлекле төҫтәргә буялды. С. М. Киров исемендәге заводта, 1225-се автоколоннаның ремонт бокстары һәм башҡа күп кенә предприятиелар биналарында хеҙмәт процесына функциональ музыка индерелде. Кеше хеҙмәтендә шул рәүештә тағы ла яҡшыраҡ шарттар тыуҙырылды.

Халыҡтың һаулығы уның ялын дөрөҫ ойоштороуға ла бәйле. Тағы ике байрам көнө индереү (8 Март, Еңеү көнө), 1967 йылдың

июленән башлап өфөләрҙә биш көнлөк эш аҙнаһына күсереү, түләүле отпускыларҙың минималь оҙайлылығын арттырыу, хеҙмәтләндереү сфераһын киңәйтеү һөҙөмтәһендә хеҙмәтсәндәргә һәйбәтләп ял итеү өсөн өҫтәмә мөмкинлектәр барлыҡҡа килде. Уның яңы формаларының береһе — төнгө профилакторийҙар. Шундай профилакторийҙарҙың тәүгеһен 1960 йылда най башлангысында нефть эшкәртеү заводтары һәм «Башнефтезаводстрой» тресы асты. 1979 йылда 9 профилакторий бар ине инде. Эш көнөнән һуң һәр кис ял итеүселәрҙе завод автобустары алып ҡайта һәм иртүк тағы эшкә алып китә.


И. Г. Гатауллин.

Производствола эшләгән меңдәрсә кеше йыл буйына профилакторийҙарҙа үҙ отпускыһын файҙаланмайынса ла санаторий дауалауының тулы курсын үтә.

Ял итеү базалары өфөләрҙә киң танылыу яуланы. Уларҙы баш ҡала предприятиеларының һәм ойошмаларының күбеһе төҙөнө. 1980 йылға тиклем 20 йылда 20 ял базаһы төҙөлдө. Павловка һыу һаҡлағысының яр буйында урманлы тауҙар ҡуйынында КПСС-тың XXII съезы исемендәге нефть эшкәртеү заводының «Тау һауаһы» ял базаһы урынлашҡан. Һоҡланғыс Урал тәбиғәте, яһалма диңгеҙ киңлеге, ылыҫлы ағастарҙың һәм төрлө үләндәрҙең хуш еҫтәренә бай тау һауаһы бындағы уңайлы шарттарҙы тағы ла күркәмерәк итә. Ял итеүселәр ҡарамағында — торлаҡ коттедждары, кафе, клуб, китапхана, «Спутник» теплоходы. Өфөләр өсөн Адлерҙа «Башҡортостан» ял базаһы асылды. Баш ҡалала йәшәүселәр союз санаторийҙарында ял итеп тә сәләмәтлеген нығыта. Үҙебеҙҙең ил һәм сит ил буйлап сәйәхәт, ял һәм байрам көндәрендә ҡала ситендә массовый ял итеү кеүек актив ял формалары тағы ла киңерәк үҫеш ала.

Өфө балаларының йәйге ялын ойоштороуға айырым иғтибар бирелә. Ҡайһы бер предприятиелар кескәйҙәр өсөн ҡала ситендә дачалар төҙөнө. Йәй көндәрендә унда балалар баҡсалары күсерелә. Өлкәнерәк йәштәге балалар өсөн Башҡортостан территорияһында бик күп пионер лагерҙары төҙөлдө. Ә Ҡара диңгеҙ буйында 1963 йылда асылған Салауат Юлаев исемендәге лагерь Өфө пионерҙарының иң ҙур горурлығы. Бында йыл һайын 700-ҙән ашыу уҡыусы көньяҡ ҡояшында ҡыҙынып, ял итеп, бай тойғолар алып ҡайта. 1978 йылда пионер лагерҙарында бөтәһе 55 меңдән ашыу, йәки 1959 йыл менән сағыштырғанда 4 тапҡырға күберәк, уҡыусы ял итте.

Шулай итеп, Коммунистар партияһының һәм Совет хөкүмәтенең халыҡ доходтарын арттырыу һәм хеҙмәтләндереү сфераһын киңәй-

теү буйынса эҙмә-эҙлекле үткәргән киң саралар системаһы һөҙөмтәһендә кешеләрҙең тормошо байтаҡҡа яҡшырҙы.

Партияның XXVI съезының, КПСС Үҙәк Комитетының СССР-ҙың Аҙыҡ-түлек программаһын ҡабул иткән май (1982 йыл) Пленумы ҡарарҙарын үтәү совет кешеләренең тормош хәлен артабан яҡшыртыу, уларҙың ижади активлығын һәр яҡлап үҫтереү өсөн яңы мөмкинлектәр аса.

## § 4. Өфө хеҙмәтсәндәренең ижтимаги-политик тормошо

Совет кешеләренең фиҙакәр хеҙмәте, илебеҙ тормошоноң бөтә өлкәләрендәге революцион үҙгәртеп ҡороуҙар СССР-ҙа нык үҫкән социалистик йәмғиәт төҙөү менән билдәләнде. Был этапта социализмдың ижади мөмкинлектәре, тәрән гуманистик әһәмиәте тағы ла тулыраҡ асыла бара. Нык үҫкән социализм даими рәүештә коммунистик мөнәсәбәттәргә күсә барған бөтә ижтимағи мөнәсәбәттәр системаһының юғары кимәлдә өлгөрөүе менән характерлана. Уға хеҙмәтсәндәрҙең ҡаҡшамаҫ идея-политик һәм социаль туплланғанлығы, уларҙың Коммунистар партияһының бөйөк идеалдарына тәрән бирелгәнлеге, марксизм-ленинизм принциптарына тоғролого хас.

Нык үҫкән социалистик йәмғиәт — коммунистик формация үҫешендәге законлы этап. 1961 йылдың октябрендә булып үткән КПСС-тың XXII съезы партияның өсөнсө Программаһын — коммунизм төҙөү программаһын ҡабул итте. Съезд эшендә Башҡортостан партия ойошмаһынан 65 делегат ҡатнашты. Улар араһында өфөләр ҙә бар ине: Социалистик Хеҙмәт Геройы төҙөүселәрҙең комплекслы бригадаһы бригадиры М. С. Бегулов һәм Дим локомотив депоһы машинисы Р. Н. Маннуров, Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводының өлкән операторы Ә. Ф. Вәлиева, КПСС Өлкә Комитетының беренсе секретары З. Н. Нуриев, шағир Мостай Кәрим, КПСС-тың ҡала комитетының беренсе секретары М. Й. Йәнгиров һәм башҡалар. Өфө хеҙмәтсәндәре, бөтә совет халҡы кеүек үк, съезд ҡарарҙарын бер күңелдән ҡабул итте һәм уларҙы тырыш хеҙмәте менән тормошҡа ашыра башланы.

Совет иленең коммунизмға табан атлауы КПСС-тың йәмғиәттә етәксе роленең артабан үҫеүенә килтерҙе. Коммунистар партияһы, совет халҡының авангардында барып, партия ойошмаларына, бөтә коммунистарға талапты даими арттырҙы, уларҙың активлығын үҫтерҙе, массалар менән эш стилен һәм алымдарын камиллаштырҙы.

КПСС Үҙәк Комитетының октябрь (1964 йыл) Пленумы партияның, бөтә совет йәмғиәтенең тормошонда мөһим этап булды. Ул партияның В. И. Ленин васыяттарына, марксизм-ленинизмға тоғролоғон күрһәтте, партия тормошоноң һәм етәкселек итеү принциптарының ленинсы нормаларын ҡәтғи һаҡлауға һәм киңәйтеүгә партия

КПСС Өлкә Комитеты һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы бинаһы.



һәм халыҡтың ижади эшмәкәрлегенә ҡамасаулаған бөтә нәмәне юлдан ҡыйыу алып ташлауға ныҡлы ихтыяр сағылдырҙы. Пленум Л. И. Брежнев иптәште КПСС Үҙәк Комитетының Беренсе секретары итеп һайланы.

Коммунистик төҙөлөштөң мөһабәт пландарын тормошҡа ашырыу Өфө хеҙмәтсәндәренең политик етәксеһе булған ҡала партия ойошмаһы эшмәкәрлеген артабан камиллаштырыуҙы талап итте. КПСС-тың ҡала комитеты, район комитеттары, тәүге партия ойошмалары ойоштороу һәм идея-политик эштең кимәлен күтәрҙе. Партия эшендә йәмәғәт башланғыстары үҫте. 60-сы йылдар башынан ҡала һәм район комитеттары эргәһендә штаттан тыш бүлектәр, секторҙар, комиссиялар ойоштора башланы. Шул арҡала партия комитеттарына үҙ активын киңәйтергә, тәүге ойошмаларға ярҙамын һәм производствоға йоғонтоһон көсәйтергә мөмкин булды.

Ҡала партия ойошмалары хеҙмәтсәндәрҙең ижади инициативаһын һәм хеҙмәт активлығын күтәреүгә даими ирешә барып, уларға коммунистик тәрбиә биреүгә, коммунистарҙың идея яғынан сыныҡыуына иғтибарҙы көсәйтте. Марксистик-ленинсы белем биреү системаһы камиллаштырылды. Партия пропагандаһы тормош менән, коммунистик төҙөлөш практикаһы менән тығыҙ бәйләнештә алып барылды, унда догматизм һәм сикләнгәнлек күренештәре ҡыйыу бөтөрөлдө.

КПСС-тың Өфө ҡала комитеты һәм халыҡ депутаттарының ҡала Советы бинаһы.



Күп яҡлы идеологик һәм ойоштороу эше партия ойошмаларының массалар менән бәйләнешен нығытыуға булышлыҡ итте. Хеҙмәтсәндәрҙең алдынғы вәкилдәрен партия сафына ҡабул итеү партия ойошмаларының сифат составын артабан яҡшыртты. 1961—1979 йылдарҙа Өфөлә коммунистар һаны 32,5 меңдән 58,1 мең кешегә тиклем, йәки 1,8 тапҡырға, артты. Шул уҡ осорҙа тәүге партия ойошмаларының һаны 739-ҙан 935-кә етте. Уларҙың эске структураһы яҡшырҙы. Әгәр 1961 йылда ҡалала 685 цех ойошмаһы, ә участкаларҙа 599 партия группаһы булһа, 1979 йыл аҙағына уларҙың һаны 1349-ға һәм 1820-гә етте. Былар партия ойошмаларының производствоға тағы ла нығыраҡ яҡынайыуын, уларҙың хужалыҡ мәсьәләләрен хәл итеүгә, хеҙмәтсәндәр араһындағы тәрбиә эшенә йоғонтоһоноң көсәйеүен күрһәтте.

Совет йәмғиәте үҫешенең хәҙерге этабы социалистик дәүләт ҡоролошоноң артабан нығыуы, Советтарҙың күп яҡлы эшмәкәрлегендә асыҡ сағылыш тапҡан социалистик демократизмдың эҙмә-эҙлекле киңәйтелеүе менән билдәләнде. Власть органдарын формалаштырыуҙа, дәүләт ҡарарҙарын эҙерләүҙә, уларҙың үтәлешенә контроллек итеүҙә тағы ла киңерәк халыҡ массалары актив ҡатнаша. Өфө хеҙмәтсәндәре Советтарға депутат итеп алдынғы эшселәрҙе, фән һәм сәнғәт эшмәкәрҙәрен, партия һәм совет работниктарын һайлай. Улар араһында — СССР-ҙың унынсы саҡырылыш Верховный Советы депутаты Өфөнөң «Химпром» производство берекмәһенең электролиз

аппаратсыһы Ә. М. Йомағолов, уп етенсе саҡырылыш ҡала Советы депутаттары — Социалистик Хеҙмәт Геройы Өфө быраулау эштәре идаралығының быраулау мастеры Т. М. Вилданов, Башҡортостан ауыл хужалығы институты ректоры А. М. Байков, Н. К. Крупская исемендәге Республика китапханаһы директоры М. Х. Закиров, Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе токары М. К. Мерзляков. 1980 йылда Өфөнән 16 депутат СССР һәм РСФСР Верховный Советтарына, 69 депутат — БАССР Верховный Советына һәм 2125 депутат урындағы Советтарға һайланды. Депутаттар составында сифат яғынан үҙгәрештәр булып үтте. Мәҫәлән, 1959 йылда ҡала Советында юғары, тамамланмаған юғары һәм урта белемле депутаттар 46,7 процент булһа, 1980 йылда улар 91,6 процент тәшкил итте. Ҡатын-ҡыҙ депутаттарҙың процент кимәле 42,7-нән 51-гә етте. Шулай итеп, депутаттарҙың дөйөм белеме күтәрелде, ҡаланың йәмәғәт тормошонда ҡатын-ҡыҙҙар активлығы артты. Совет составы халыҡтың политик һәм культура кимәленең үҫеүен сағылдыра.

КПСС-тың XXIII һәм XXIV съездары ҡарарҙары нигеҙендә урындағы Советтарҙың роле үҫте, эшмәкәрлеге төрләнде, хоҡуҡтары киңәйтелде. Әлек улар күберәк халыҡ мәғарифы, төҙөкләндереү, сауҙа, һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләре менән шөғөлләнә ине. Хәҙер Советтар үҙ территорияһындағы предприятиеларҙың һәм хужалыҡ ойошмаларының эшенә компетенциялары сиктәрендә йүнәлеш бирә һәм контроллек итә, социаль-культура, торлаҡ төҙөлөшө һәм төҙөкләндереү маҡсатында предприятиелар һәм ойошмаларҙың средстволарын тотоноу буйынса үҙ хоҡуҡтарын киңерәк файҙалана башланы. Советтарҙың материаль-финанс базаһы нығытылды. Уларҙың эшмәкәрлегендә йәмәғәт башланғыстары көсәйтелде.

Хеҙмәтсәндәр депутаттары Советтары үҙҙәренең социаль составы буйынса ла, эштәренең йөкмәткеһе буйынса ла ысын мәғәнәһендә халыҡ Советы, эшселәр синыфы, крәҫтиәндәр һәм интеллигенцияның, илебеҙҙең бөтә милләттәре һәм халыҡтарының ихтыярын сағылдырыусы булып тора. Шуға күрә 1977 йылдың 7 октябрендә СССР-ҙың туғыҙынсы саҡырылыш Верховный Советының сираттан тыш етенсе сессияһында ҡабул ителгән СССР Конституцияһы буйынса улар халыҡ депутаттары Советтары тип аталды. Яңы Конституцияла Советтарҙың хоҡуҡтары һәм полномочиеларының киңәйеүе асыҡ сағылыш тапты. Дәүләт һәм йәмәғәт тормошоноң бөтә сфераларында ла уларҙың эшмәкәрлеген артабан камиллаштырыу өсөн яңы мөмкинлектәр асылды.

60—70-се йылдарҙа ҡаланың ижтимағи-политик тормошо, тотош илдәге кеүек үк, ҙур тарихи әһәмиәткә эйә булған ваҡиғаларға бай булды. 1967 йылда совет халҡы Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 50 йыллығын, 1970 йылда — Коммунистар партияһына һәм Совет дәүләтенә нигеҙ һалыусы, пролетар революцияның даһийы Владимир Ильич Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы, 1972 йылда — ССР Союзы төҙөлөүҙең 50 йыллығын тантаналы бил-

дәләп үтте, 1977—1978 йылдарҙа, бөтә халыҡ тикшергәндән һуң, СССР, РСФСР һәм БАССР Конституциялары ҡабул ителде.

Октябрҙең 50 йыллығына әҙерлек осоронда партия һәм комсомол ойошмалары хеҙмәтсәндәрҙең идея яғынан сыныгыуына ҙур иғтибар бирҙе. Партия уҡыуҙары системаһында ғына ла 40 мең коммунист, ә партияһыҙ активтан 10 меңдән ашыу кеше уҡыуҙың торло формаларына йәлеп ителде. Массовый пропаганданың торло формалары киң файҙаланылды, яңылары барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, КПСС-тың ҡала комитеты Октябрь уҡыуҙары ойошторҙо. Уларҙың программаһында лекциялар циклы, быуындар осрашыуы, тематик кисәләр урын алды. Өлкән коммунистар, революция, граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары, партия һәм совет работниктары, ғалимдар, культура эшмәкәрҙәре уҡыуҙарҙа ҡатнашыуға йәлеп ителде. Агитация-масса эшенең формалары камиллаштырылды. Ҡаланың бөтә предприятиеларында, учреждениеларында, ойошмаларында тиҙ арала танылыу яулаған политинформаторҙар институты барлыҡҡа килде.

Йәштәрҙе политик тәрбиәләүгә айырым иғтибар бирелде. 1967 йылдың июнендә Өфөлә өс быуындың республика слеты булып үтте. Парктарҙа, стадиондарҙа ҡарт большевиктар, Бөйөк Октябрь ветерандары, граждандар һәм Ватан һуғыштарында ҡатнашыусылар менән 60-сы йылдар йәштәре осрашты. Өсөнсө быуын вәкилдәре комсомолдың тәүге ике быуыны боецтарына һәм эпсәндәренә үҙҙәренең еңеүҙәре һәм ҡаҙаныштары тураһында рапорт бирҙе, революцияға, партия эшенә, халыҡ эшенә тоғро булырға ант итте. Меңдәрсә йәш патриоттар комсомол ойошмаларының инициативаһы менән революция, һуғыш һәм хеҙмәт даны урындары буйлап походта йөрөнө.

Йыйылған материалдар нигеҙендә предприятиеларҙа, уҡыу йорттарында музейҙар, хәрби һәм хеҙмәт даны бүлмәләре ойошторолдо. Революцион ваҡиғалар һәм социалистик Ватанды һаҡлауҙа күрһәтелгән героик батырлыҡтар билдәһе булып һәйкәлдәр һәм обелискылар асылды. Дан бульварында ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы данлыҡлы летчик М. Ғ. Гәрәевкә бюст ҡуйылды. Дим локомотив депоһы хеҙмәтсәндәре үҙ средстволарына Ватан осөн һуғышта һәләк булған депо работниктарына һәйкәл төҙөнө. 8 Март исемендәге тегеү фабрикаһы территорияһында уның элекке работнигы, Бөйөк Ватан һуғышында батырлыҡ күрһәткән К. И. Абрамоваға һәйкәл асылды.

Илһамлы хеҙмәт тулҡыны күтәрелгәндән-күтәрелә барҙы. Меңдәрсә предприятиелар, мәскәүҙәр һәм ленинградтар өлгөһөнә эйәреп, 1967 йылғы халыҡ хужалығы планын ваҡытынан алда үтәү өсөн социалистик ярышҡа ҡушылды, һәр нәмәлә экономия, техник прогресты тиҙләтеү өсөн поход башланы. Был ярыш Өфөлә лә киң ҡолас алды. Яңы Өфө нефть эшкәртеү һәм резина-техник изделиелар заводтары, «Мир» тегеү фирмаһы уның инициаторҙары булып сығыш яһаны. Ҡаланың хеҙмәт коллективтары 1967 йылда пландан тыш кәмендә 30 миллион һумлыҡ продукция эшләп сығарырға йөк-

ләмә алды. Өфөләр уны уңышлы үтәп сыкты. Юбилей ярышында ирешкән уңыштары өсөн каланың 49 алдынғы предприятиеһы һәм ойошмаһы Иҫтәлекле байраҡтарға лайыҡ булды. Иң яҡшы 7 коллектив КПСС Үҙәк Комитеты, СССР Верховный Советы Президиумы, СССР Министрҙар Советы һәм ВЦСПС-тың Иҫтәлекле байраҡтары менән наградланды. Улар араһында Яңы Өфө нефть эшкәртеү, моторҙар эшләү, витамин заводтары, «Мир» фирмаһы бар. КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты, БАССР Министрҙар Советы һәм профсоюздар Өлкә Советының Иҫтәлекле байрағы Өфө калаһына мәңгелеккә һаҡлау өсөн тапшырылды. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһында, граждандар һуғышында актив ҡатнашыусылар юбилей хөрмәтенә ордендар һәм миҙалдар менән наградланды. Улар араһында Өфөнән дә 298 кеше бар ине.

М. С. Бегулов.



1969 йылдың мартында Россия Федерацияһы составында тәүге автономиялы республика — Башҡорт АССР-ы төҙөлөүҙең 50 йыллығы билдәләп үтелде. 1969 йылдың ғинуар — март айҙарында Өфөлә үткәрелгән республика ҡалалары һәм районнары көндәре был юбилейҙың иң ҙур сараларының береһе булды. Салауат химиктары, Илеш һәм Хәйбулла игенселәре, Нефтекамск энергетиктары, Туймазы нефть сығарыусылары, Башҡортостандың бүтән районнары һәм ҡалалары вәкилдәре экономика һәм культура өлкәһендәге уңыштары тураһында Өфөгә килеп хәбәр итте. Улар предприятиеларҙа булды, производство алдынғылары, ғалимдар, артистар менән осрашты. Был Башҡортостандың Совет власы осоронда яулаған ҡаҙаныштары тураһында үҙенсәлекле бер отчет булды.

Өфөләр республиканың илле йыллыҡ юбилейын тантаналы байрам итте. Бөтә коллективтарҙа ла байрамға арналған йыйылыштар булып үтте. Меңдәрсә кешеләр ҡатнашҡан демонстрациялар үткәрелде, социалистик Ватандың азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн һәләк булған көрәшселәрҙең ҡәберҙәренә һәм һәйкәлдәренә веноктар һәм сәскәләр һалынды. 22 мартта Өфөлә КПСС Өлкә Комитеты һәм БАССР Верховный Советының берлектәге тантаналы ултырышы үткәрелде.

Башҡорт АССР-ының 50 йыллығын байрам итеүҙә ҡатнашҡан РСФСР Верховный Советы Президиумы Председателе М. А. Яснов республика байрағына Октябрь Революцияһы орденын беркетте.

В. И. Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы байрам итеү илебеҙҙең, бөтә донъяның идея һәм политик тормошонда ғәйәт ҙур әһәмиәт-

кә эйә булды. Был бөйөк датаны ҡаршылап, партия ойошмалары хеҙмәтсәндәрҙе коммунистак рухта тәрбиәләүҙе көсәйтте, ленинизм идеяларын пропагандалау буйынса ҙур эш башҡарҙы. Комсомолецтар һәм йәштәрҙе В. И. Лениндың тормошо һәм эшмәкәрлеге өлгөһөндә, Коммунистар партияһының һәм совет халҡының данлы революцион, боевой һәм хеҙмәт традицияларында тәрбиәләү тағы ла киңерәк йәйелдерелде.

Ленин уҡыуҙары хеҙмәтсәндәр араһында политик белемде пропагандалауҙың массовый формаһына әүерелде. Улар Өфөлә 1968 йылда ойошторолған Ленин халыҡ мәктәптәрендә үткәрелде.

СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы ғалимдары предприятиеларҙа фән көндәре үткәреү инициаторҙары булып сығып яһаны. Партияның Киров район комитеты был башлангысты хупланы һәм һәр фәнни учреждениеға, юғары уҡыу йортона конкрет предприятие беркетте. Был тәжрибә ҡаланың башҡа райондарында ла ҡулланыла башланы. Ғалимдар һәм юғары уҡыу йорттары уҡытыусылары айына бер тапҡыр заводтарҙа һәм фабрикаларҙа булып, хеҙмәтсәндәр менән осрашты. Улар В. И. Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы КПСС Үҙәк Комитеты әҙерләгән теоретик документтарҙы пропагандаланы, фәнни эҙләнеүҙәр һәм асыштар, республиканың етештереүсе көстәре үҫешендә фәндең роле тураһында һөйләнеләр. Шунан бирле фән көндәре системалы рәүештә үткәрелә башланы.

Ботә ил бөйөк юлбашсыбыҙҙың йөҙ йыллыҡ юбилейы хөрмәтенә удар хеҙмәт вахтаһына баҫты. Яңы патриотик башлангыстар киң таратылды. Халыҡ хужалығы үҫеше пландарын ваҡытынан алда үтәү өсөн юбилей хөрмәтенә социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Меңдәрсә эшселәр һигеҙенсе биш йыллыҡ заданиеларын срогынан алда үтәргә йөкләмә алды. Комсомолецтар «Һәр кемгә — ленинсы эш наряды», «В. И. Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыу хөрмәтенә — нормапан тыш 100 удар эш сәғәте» девиздары менән эшләне. Өфөнөң хеҙмәт коллективтары Мәскәү кизе-мамыҡ фабрикаһы туҡыусыларының 1970 йылдың 22 апрелендә экономияланган сырье иҫәбенә эшләргә тигән ҡиммәтле башлангысын ҡайнар хупланы.

1970 йылдың 11 апрелендә Ботә Союз коммунистик субботнигын үткәреү совет кешеләренең юғары аңлылығын күрһәтте. Өфөлә 500 меңдән ашыу кеше — ветерандар, эшселәр, хеҙмәткәрҙәр, уҡыусы йәштәр, хужабикәләр — станоктар янына баҫты, төҙөлөштәрҙә эшләне, ҡаланы төҙөкләндереүҙә ҡатнашты. Бер көндә 3 миллион һумдан ашыу суммаға промышленность продукцияһы эшләп сығарылды. Совет кешеләре был көндө хеҙмәт байрамы тип атаны. В. И. Лениндың тыуған көнөн ҡаршылап субботниктар үткәреү унан аҙаҡҡы йылдарҙа ла традицияға инде.

Массовый хеҙмәт күтәренкелеге һоҡлангыс уңыштарға алып килде. Өфөлә 21,4 меңдән ашыу кеше В. И. Лениндың тыуыуына

100 йыл тулыу көнөнә шәхси биш йыллыҡ планын тултырҙы. Тотош коллективтар үҙҙәренең йөкләмәләрен үтәне.

Тыуған илебеҙ ярышта еңеүселәрҙең ҡаҙаныштарын билдәләп үтте. Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводы, Өфө һал ағыҙыу производство берекмәһе, «Нефтепроводмонтаж», «Башнефтезаводстрой» трестары — ҡаланан ботәһе 10 коллектив — КПСС Үҙәк Комитеты, СССР Верховный Советы Президиумы, СССР Министрҙар Советы һәм ВЦСПС-тың Ленин юбилейы Почет грамоталары менән наградланды. Өфө ҡалаһы, 50-нән ашыу предприятие һәм ойошма КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты, БАССР Верховный Советы Президиумы, БАССР Министрҙар Советы һәм профсоюздар Өлкә Советының Ленин юбилейы Почет грамоталары менән наградланды. Баш ҡаланың 50 меңләп алдынғы эшсеһе, интеллигенция вәкилдәре «Хеҙмәт батырлығы өсөн. Владимир Ильич Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыу хөрмәтенә» юбилей миҙалына лайыҡ булды.

Юбилейҙы байрам иткән көндәрҙә бөтә урындарҙа ла хеҙмәтсәндәрҙең тантаналы йыйылыштары булып үтте. 1970 йылдың 22 апрелендә В. И. Ленин исемендәге майҙанда бөйөк юлбашсыбыҙ һәйкәле янында күп меңдәрсә йәштәр ҡатнашлығында митинг үткәрелде. Күп коллективтар был көндө экономияланған сырье иҫәбенә эшләне. Юбилей В. И. Ленин пландарының көсөн һәм тормошсанлығын күрһәтте.

КПСС-тың XXIV съезы (30 март —9 апрель, 1971) СССР-ҙың коммунизмға табан үҫеш юлында ҙур ваҡиға булды. Съезд ныҡ үҫкән социализм шарттарында совет йәмғиәте үҫешендә лә, халыҡ-ара аренала ла принципиаль әһәмиәткә эйә булған байтаҡ мәсьәләләр күтәрҙе. Унда Совет иле экономикаһын күтәреүгә билдәләнгән курс, донъялағы ике йәмғиәт системаһы торошона һәм үҫеш перспективаларына, донъя революцион хәрәкәтенә фәнни анализ, Тыныслыҡ программаһы бөтә совет халҡы тарафынан хупланды, тотош донъяла киң яҡлау тапты.

КПСС-тың Өфө ҡала комитеты һәм район комитеттары, илдең бөтә партия ойошмалары кеүек үк, XXIV съезд күрһәтмәләренә таянып, 1973—1974 йылдарҙа партия документтарын алмаштырыуҙы үткәрҙе. Коммунистарға яңы өлгөләге партия билеттары тапшырылды. Унда Советтар Союзы Коммунистар партияһына нигеҙ һалыусы юлбашсыбыҙ В. И. Лениндың портреты төшөрөлгән, уның күңелдәргә үтеп ингән «Партия — эпохабыҙҙың аҡылы, намыҫы һәм выжданы» тигән һүҙҙәре яҙылған. Яңы партия билеттарын беренсе булып партия, граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғышы һәм хеҙмәт ветерандары, производство алдынғылары алды.

Партия документтарын алмаштырыу партия абруйын, коммунистарҙың ижтимағи-политик һәм хеҙмәт активлығын, дисциплинаһын артабан күтәрергә булышлыҡ итте. Бөтә партия ойошмаларының эшмәкәрлеге, хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндә КПСС-тың XXIV съезы ҡуйған бурыстарҙы үтәүҙә уларҙың конкретлығы һәм эшлек-

лелек сифаттары яҡшырҙы. Коммунистарҙың үҙ-ара талапсанлығы артты.

КПСС-тың Өфө ҡала ойошмаһы партия документтарын алмаштырыу һөҙөмтәһендә ойоштороу һәм политик эштә яңы тәжрибә тупланы, массалар менән бәйләнешен нығытты.

Ҡабул ителгән ҡарарҙар үтәлешен тикшереү һәм контроллек итеү мәсьәләләренә, партия һәм дәүләт дисциплинаһын ҡәтғи һаҡлауға ҙур иғтибар бирелде. Партия ойошмалары администрация эшмәкәрлегенә контроллек итеү хоҡуғын активыраҡ файҙаланды, был эшкә, коммунистар менән бер рәттән, партияһыҙҙарҙы ла йәлеп итеп, халыҡ контроле органдарына ярҙам итте.

Халыҡ контроле органдарының эшмәкәрлеге хеҙмәтсәндәрҙе киңерәк йәлеп итеүгә нигеҙләнде. Өфөлә, бөтә урындарҙағы кеүек үк, предприятиеларҙа, төҙөлөштәрҙә, учреждениеларҙа, уҡыу йорттарында халыҡ контроле группалары һәм постары ойошторолдо. 1980 йылда 26 меңдән ашыу халыҡ контролерын берләштергән 4 меңгә яҡын шундай группа һәм пост булып, уларҙың яртыһынан күберәген коммунистар һәм комсомолецтар тәшкил итте. Улар партия һәм хөкүмәт директиваларының үтәлешен тикшерҙе, хужаһыҙлыҡҡа һәм башҡа етешһеҙлектәргә ҡаршы көрәште. Халыҡ контроле органдары бик күп мөһим сараларҙың инициаторҙары булып сығыш яһаны. Материалдарҙы, энергияны, аҡса средстволарын экономиялауға поход иғлан иткән мәскәүҙәр һәм ленинградтар башланғысы бөтә илдә ҡайнар яҡлау тапты. Башҡортостанда 1967 йыл уртаһында профсоюздар Өлкә Советы менән республика Халыҡ контроле комитеты экономия һәм һаҡсыллыҡ өсөн йәмәғәт смотрын башлап ебәрҙе. КПСС Өлкә Комитеты хуплаған был хәрәкәттә Өфөнән 70 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. Бирелгән тәҡдимдәрҙе индереү һөҙөмтәһендә был кампанияның өс айында 8 миллион һумдан ашыуыраҡ аҡса экономияланды [1]. Артабан смотрҙар системалы рәүештә үткәрелә башланы.

Халыҡ контроле органдары үҙҙәренең эшмәкәрлегендә йәмәғәт ойошмаларына, күп һандағы активистарға даими таяна. Бындай берҙәмлектең уңышлылығы «Комсомол прожекторы» эше миҫалында асыҡ күренә. Уның тәүге отряды синтетик спирт заводында ойошторолдо. Артабан «прожектор» отрядтары һәм штабтары бөтә эре предприятиеларҙа һәм ойошмаларҙа ла төҙөлдө. 1980 йылда улар 9,5 мең йәш өфөлөнө берләштерҙе.

Прожекторсылар партия һәм хужалыҡ органдарына производство резервтарын табырға ярҙам итте, етешһеҙлектәрҙе асты. Мәҫәлән, Дим районының комсомол дозорҙары вагондарҙың буш тороуына ҡаршы көрәш алып барҙы. «Мир» тегеү фирмаһында брак сәбәптәрен асыҡларға һәм уларҙы бөтөрөргә ярҙам иткән рейдтар үткәрелде. Орджоникидзе районының «Комсомол прожекторы» штабы нефть, нефть продукттары һәм электр энергияһын юғалтыуҙы кәме-

---

[1] «Советская Башкирия», 1967, 1 декабрь.

теү осон күп көс һалды. Халыҡ контроле органдарының эше, уға хеҙмәтсәндәрҙең киң активын йәлеп итеү юғары яуаплылыҡ һәм һаҡсыллыҡ атмосфераһын булдырырға ярҙам итте.

Ирекле халыҡ дружиналары хеҙмәтсәндәр осон йәмәғәт эшендә ҡатнашыуҙа мөһим формаларҙың береһе булды. Улар илдә 1958 йыл аҙағында ойоштора башланы. Өфөлә 1959 йылдың апрелендә 19 мең дружинник иҫәпләнә ине. Тиҙ арала йәмәғәтселектең ҙур косопә әүерелеп, улар 1980 йылда үҙ сафтарында 90 мең кешене берләштерҙе. Дружинниктар йәмәғәт урындарында тәртип һаҡланы, хәрәкәт хәүефһеҙлеге осон көрәште, тәртип боҙоуҙарҙы иҫкәртеү буйынса эш алып барҙы. Мәҫәлән, химия, «Уфимкабель», синтетик спирт заводтарының дружиналары эшселәр йәшәгән урындарҙа эш алып барыуға айырым иғтибар бирҙе, насар ғаиләләрҙе шефҡа алды.

Йәмәғәт тәртибен һаҡлауға Өфө йәштәре тос өлөш индерә. 1970 йылда комсомолдың ҡала комитеты һәм район комитеттары эргәһендә мәскәүҙәр өлгөһөндә оператив отрядтар төҙөлә башланы. Улар социалистик милекте һаҡлауҙы тикшереү буйынса рейдтар үткәрҙе, ҙур профилактик эш алып барҙы.

70-се йылдарҙың тәүге яртыһында Совет иле коммунизмдың материаль-техник базаһын нығытыуҙа, халыҡтың материаль хәлен һәм культура кимәлен байтаҡҡа күтәреүҙе тәьмин итеүҙә ҙур уңыштарға ирешге. Илебеҙҙең ижтимағи тормошо байтаҡҡа яҡшырҙы: совет йәмғиәтенең әхлаҡи-политик берҙәмлеге нығыны, СССР халыҡтарының дуҫлығы тағы ла нығыраҡ көсәйҙе. 1972 йылда ССР Союзының 50 йыллыҡ юбилейын билдәләп үтеү бының асыҡ сағылышы булды.

Өфөләр был бөтә халыҡ байрамын лайыҡлы ҡаршыланы. Ҡаланың хеҙмәт коллективтары туғыҙынсы биш йыллыҡ заданиеларын срогынан алда үтәү, юғары награда — КПСС Үҙәк Комитеты, СССР Верховный Советы Президиумы, СССР Министрҙар Советы һәм ВЦСПС-тың Юбилей почет знагын алыу осөн массовый ярыш йәйелдерҙе. 15 туғандаш республикаға арналған хеҙмәт вахталары көндәрендә Өфө предприятиелары пландан тыш тиҫтәләрсә миллион һумлыҡ продукция эшләп сығарҙы. 1972 йылдың 11 айлыҡ планы срогынан алда үтәлде. Өфөнөң промышленность, төҙөлөш һәм транспорт ойошмаларынан 15 предприятие иң юғары һөҙөмтәләргә ирешге. Улар Юбилей почет знактары менән наградланды.

СССР-ҙың 50 йыллыҡ юбилейына әҙерлек осоронда үткәрелгән лекцияларҙа, докладтарҙа һәм әңгәмәләрҙә партиябыҙҙың ленинсы милли политикаһының тантана итеүе, экономиканы һәм культураны үҫтереүҙә туғандаш республикалар яулаған ғәйәт ҙур уңыштар, ССР Союзы төҙөлөүҙең бөтә донъялағы тарихи әһәмиәте киң билдәләнде. 1972 йылдың декабрендә БАССР Халыҡ хужалығы ҡаҙаныштары күргәҙмәһе асылып, ул даими эшләй башланы. Күргәҙмә павильонында республиканың гәйәт ҙур экономик үҫешен сағылдырған 3 меңдән ашыу төрлө экспонат ҡуйылды.

Өфө ҡалаһына Октябрь Революцияһы орденын тапшырыу.




ССР Союзының алтын юбилейы илебеҙҙең бөтә халыҡтарының мәңгелек һәм ҡаҡшамаҫ дуҫлығы, туғандарса берҙәмлеге һәм тупланғанлығының байрамы булараҡ үткәрелде. Юбилей хөрмәтенә Башҡорт АССР-ы, башҡа совет республикалары кеүек үк, Халыҡтар дуҫлығы ордены менән наградланды. Тыуған илебеҙҙең был юғары наградаһына Башҡортостан экономика һәм культура үҫешендә яулаған уңыштары, совет халыҡтарының дуҫлығын һәм хеҙмәттәшлеген нығытыуға ҙур өлөш индергәне өсөн лайыҡ булды. 1974 йылдың 15 ғинуарында КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты һәм БАССР Верховный Советының берлектәге тантаналы ултырышында КПСС Үҙәк Комитеты Политбюроһы ағзалығына кандидат, КПСС Үҙәк Комитеты секретары Д. Ф. Устинов республикаға дүртенсе орденды тапшырып: «Совет Башҡортостанының данлы биографияһы, һоҡланғыс крайығыҙҙың бөтә тарихы КПСС-тың ленинсы милли политикаһының тормошсанлығын, хеҙмәт кешеләре араһында бөйөк дуҫлыҡтың көсөн һәм еңелмәҫлеген асыҡ сағылдырыусы дәлил ул»,— тине [1].

1974 йылда өфөләр үҙ тыуған ҡалаһының 400 йыллығын байрам итте. Юбилейға әҙерлек КПСС-тың XXIV съезы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу өсөн көрәште көсәйтеү, туғыҙынсы биш йыллыҡ задание-

[1] «Советская Башкирия», 1974, 16 ғинуар.

ларын срогынан алда үтәү, халыҡтар дуҫлығын нығытыу һәм йәштәрҙе Коммунистар партияһы һәм совет халҡының героик традицияларында тәрбиәләү билдәһе аҫтында алып барылды. Партия һәм комсомол уҡыуҙары системаһында, халыҡ университеттарында Башҡортостандың һәм уның баш ҡалаһының тарихы, экономикаһы, культураһы буйынса материалдар киң файҙаланылды.

Байрамга әҙерләнгәндә ҡала халҡы уны төҙөкләндереү буйынса ҙур эш башҡарҙы. Ағиҙел буйында Дуҫлыҡ монументы эргәһендә комсомолецтар Өфөнөң 400 йыллығы исемендәге сквер эшләне.

20 меңдән ашыу Өфө работниҡы 1974 йылғы производство заданиеларын, ә 4 меңдән ашыу хеҙмәт алдынғыһы шәхси биш йыллыҡ пландарын сентябргә үк үтәне. Өфөнөң промышленность предприятиелары пландан тыш ботәһе 45 миллион һумлыҡ продукция эшләп сығарҙы. Хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндәге ҙур уңыштары, революцион хәрәкәттәге ҡаҙаныштары һәм нигеҙ һалыныуына 400 йыл тулыу айҡаплы Өфө ҡалаһы Октябрь Революцияһы ордены менән наградланды.

28 ноябрҙә Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бинаһында КПСС-тың Өфө ҡала комитеты һәм хеҙмәтсәндәр депутаттары ҡала Советының берлектәге тантаналы ултырышы булып үтте. Унда производство алдынғылары, фән һәм культура эшмәкәрҙәре, партия, совет һәм йәмәғәт ойошмалары етәкселәре, Октябрь революцияһы, граждандар һәм Ватан һуғыштары ветерандары, Башҡортостан ҡалалары һәм райондары вәкилдәре ҡатнашты. Ултырышты хеҙмәтсәндәр депутаттарының ҡала Советы башҡарма комитеты председателе Ә. Х. Вәлиев асты. КПСС Үҙәк Комитеты, СССР Верховный Советы Президиумы ағзаһы, партияның Башҡортостан Өлкә Комитетының беренсе секретары М. З. Шакиров республика баш ҡалаһының данлы юбилейы тураһында доклад менән сығыш яһаны. Ул КПСС Үҙәк Комитеты һәм СССР Верховный Советы Президиумы ҡушыуы буйынса ҡала байрағына Октябрь Революцияһы орденын таҡты. Тантаналы йыйылыш трибунаһынан өфөләрҙе Ҡазан, Ырымбур, Кировоград, Галле ҡалаһы (Германия Демократик Республикаһы) делегациялары етәкселәре юбилей һәм награда менән ҡайнар ҡотланы.

Декабрҙә КПСС Өлкә Комитетының беренсе секретары М. З. Шакиров, моторҙар эшләү заводының йыйыусы-слесары В. В. Рожков һәм Социалистик Хеҙмәт Геройы Өфө нефть эшкәртеү заводының өлкән операторы З. Н. Дауытов составында Өфө ҡалаһы делегацияһы КПСС Үҙәк Комитетында йылы һәм ихлас ҡабул ителде. Делегация Башҡортостан баш ҡалаһы хеҙмәтсәндәре исеменән берлектәге тантаналы ултырыштың ҡотлау хатын һәм ҡаланың символик асҡысын тапшырҙы.

Өфөнөң 400 йыллығы өфөләр өсөн генә түгел, ә республиканың ботә хеҙмәтсәндәре өсөн дә шатлыҡ менән тулы оло байрам булды, ул ленинсы милли политиканың һәм халыҡтар дуҫлығының тантанаһына әүерелде.

КПСС-тың XXV съезы (24 февраль — 5 март, 1976) СССР-ҙа коммунистик төҙөлөштөң яңы рубеждарын билдәләне. Съезда Башҡортостан коммунистарының 188 меңле армияһы вәкилдәре араһында өфөләр ҙә ҡатнашты: Ленин орденлы Өфө нефть эшкәртеү заводының олкән операторы С. Х. Ғәбдиева, Дим локомотив депоһы машинисы А. Н. Кадацкий, КПСС ҡала комитетының беренсе секретары Е. В. Куликов, «Мир» производство тегеү берекмәһенең тегенсе мотористкаһы З. Ғ. Тәҡиева, СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының химия институты директоры урынбаҫары профессор Г. А. Толстиков, КПСС Өлкә Комитетының беренсе секретары М. З. Шакиров, 41-се урта мәктәп уҡытыусыһы Л. Ғ. Хәсәнова, Социалистик Хеҙмәт Геройы Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводы директоры Т. З. Хурамшин һәм башҡалар. Коммунистар, бөтә Совет халҡы партияның XXV съезына КПСС Үҙәк Комитетының Отчет докладында әйтеп бирелгән положениеларҙы һәм һығымталарҙы ҡайнар хупланы. Илдең социаль-экономик үҫеш перспективаларын билдәләп, съезд коммунистик идеалдарҙың тантана итеү юлында мөһим этап асты.

СССР-ҙың, союздаш һәм автономиялы республикаларҙың Конституцияларын ҡабул итеү илебеҙ тормошонда күренекле ваҡиға булды. Өфөләр СССР Конституцияһы проектын тикшереүҙә актив ҡатнашты. Күп һандағы йыйылыштарҙа, партия һәм совет органдарына килгән хаттарҙа Башҡортостандың олкән йәштәге бөтә халҡы донъяла беренсе дөйөм халыҡ социалистик дәүләтенең Төп Законы проектын хупланы. Проект тексын асыҡлауға һәм яҡшыртыуға, партия һәм дәүләт органдары эшен камиллаштырыуға йүнәлтелгән 20 меңгә яҡын тәҡдим индерелде[1]. Россия Федерацияһы һәм Башҡорт АССР-ы Конституциялары проекттарын тикшереүгә лә өфөләр шундай уҡ ҡыҙыҡһыныу менән ҡараны.

СССР-ҙың, РСФСР һәм БАССР-ҙың Төп Законы проекттарын өйрәнеп, хеҙмәтсәндәр дәүләт ҡоролошоноң хәҙер ғәҙәти булып киткән демократик принциптарын, илебеҙҙең бөтә милләттәре һәм халыҡтарының тиңлеген һәм туғанлығын яңынан төшөндө.

1977 йылдың октябрендә СССР-ҙың яңы Конституцияһының, унан аҙаҡ РСФСР һәм БАССР Конституцияларының ҡабул ителеүе совет халҡын коммунизм төҙөүҙә яңы ҡеүәтле ҡорал менән тәьмин итте.

60-сы йылдар уртаһынан башлап партия ауыл хужалығын үҫтереү хаҡында айырым хәстәрлек күрә. КПСС Үҙәк Комитетының март (1965) Пленумы ауыл хужалығы производствоһын тотороҡло күтәреүгә йүнәлтелгән саралар билдәләне. Коммунистар партияһының хәҙерге этаптағы аграр политикаһын тормошҡа ашырыуға өфөләр ҙә ҙур өлөш индерә. 1978 йылда ҡаланың һәр өсөнсө предприятиеһы колхоздарға һәм совхоздарға төрлө техника, ҡорамалдар, запас частар, нефть химияһы продукттары ебәрҙе. Төҙөлөш һәм монтаж

[1] «Вечерняя Уфа», 1977, 27 октябрь.

ойошмалары ауылда ҙур күләмдә эш башҡара. Ауыл хужалығы культураларын утау, мал аҙығы әҙерләү, уңыш йыйыу буйынса субботниктарҙа һәм воскресниктарҙа ҡаланың меңдәрсә кешеләре ҡатнаша. Ете йыллыҡ башынан колхоздарға һәм совхоздарға уңыш йыйыу осоронда промышленность предприятиеларында уҡытып сығарылған комбайнсылар, тракторсылар, урғыс машинистары килә башланы. Өфөләрҙең квалификациялы ярҙамы һиҙелерлек һөҙөмтәләр бирҙе. Билгеләп тә 1978 йылда — КПСС Үҙәк Комитетының июль Пленумы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыуҙың тәүге йылында — Өфөнөң республика ауыл хужалығына ярҙамы тос булды. Тиҫтәләрсә мең өфөлө ауыл эшсәндәренә крайҙың игенселек тарихында тәүге тапҡыр юғары рубеж яуларға ярҙам итте: һәр гектарҙан 20,3 центнер иген йыйып алып, Тыуған ил бураларына 2 миллион 802 мең тонна иген һалынды. Унынсы биш йыллыҡ осоронда Башҡортостан игенселәре дәүләткә бөтәһе 11 миллион 238 мең тонна — үткән биш йыллыҡтағынан 77 процентҡа күберәк иген тапшырҙы. Был иһә илде икмәк менән тәьмин итеүгә республика индергән ҙур ғына өлөш булды.

Шефлыҡ бәйләнештәре нығыны. 1974 йылда Өфө предприятиелары һәм ойошмалары 122 колхозға һәм совхозға шефлыҡ итте[1]. Ярҙам системалы, һәр яҡлы, масштаблы була барҙы. Ҡала халҡы колхоздарға һәм совхоздарға производство-техник базаны нығытыуҙа, хужалыҡ төҙөлөшөндә, ауыр эш процестарын механизациялауҙа һәм электрлаштырыуҙа тағы ла активыраҡ ярҙам итте. Ҡалала төрлө предприятие һәм ойошма коллективтарының тырышлығы берләштерелде, был иһә айырым колхозға йәки совхозға ғына түгел, ә тотош районға ярҙам итергә мөмкинлек бирҙе. КПСС-тың Совет район комитеты 1965 йылда шундай шефлыҡ формаһының инициаторы булып сығыш яһаны. Партияның Калинин район комитеты башланғысы буйынса 1970 йылдан башлап ауылға ярҙам итеү өс йылға иҫәпләнгән перспектив пландар буйынса алып барыла. Көстәрҙе һәм средстволарҙы туплау предприятиелар мөмкинлектәрен дөрөҫ файҙаланырға, эффектлы ярҙам итергә мөмкинлек бирҙе. Мәҫәлән, 1972 йылда Орджоникидзе районы хеҙмәтсәндәре Өфө районында йәшелсә үҫтереү өсөн 10 гектарға яҡын майҙанда теплицалар төҙөнө. 1974 йылда Совет районының производство коллективтары вәкилдәре Нуриман районының ауыл хужалығы работниктарына һыйыр малдары һимертеү буйынса беренсе класлы малсылыҡ комплексы төҙөп бирҙе. Йылына 10 миллион дана йомортҡа һәм 2 мең центнер ит етештереү күҙ уңында тотолған ҡошсолоҡ фабрикаһын саҡмағоштарға Ленин районы хеҙмәтсәндәре төҙөнө; предприятиеның 18 корпусы — автоматлаштырылған ҡош аҙбарҙары, инкубатор бүлмәләре, складтар 8 гектар майҙанды биләне[2]. Шуның менән ҡала хеҙмәтсәндәре ауыл хужалығы хеҙмәтен индустриаль нигеҙгә күсерергә яр-

---

[1] «Вечерняя Уфа», 1974, 1 февраль
[2] «Вечерняя Уфа», 1972, 10 июль; 1974, 28 сентябрь; 1975, 17 гинуар.

ҙам итте. Был ярҙамдың икенсе яғы ла әһәмиәтле: өфөләр ауылда эшләгәндә механизмдарҙы грамоталыраҡ, дөрөҫөрәк эксплуатациялау өлгөһө күрһәтә, ҡалалағы производство культураһы менән таныштыра.

Партияның ҡала һәм район комитеттары колхоз һәм совхоздарҙа идеологик эш алып барыуҙа ойошторған һәр яҡлы ярҙам мөһим роль уйнай. Ҡала предприятиелары лекторҙары, художестволы үҙешмәкәр ижадта ҡатнашыусылар ауылдарға йыш бара башланы.

Өфөнөң экономикаһын үҫтереү, хеҙмәтсәндәрҙең политик инициативаһын үҫтереү һөҙөмтәһендә ауылда шефлыҡ эше яңы формалар менән байытыла, күп яҡлыраҡ һәм йөкмәткелерәк була бара.

Өфө хеҙмәтсәндәре һуңғы йылдарҙа социалистик илдәр халҡы менән тағы ла тығыҙыраҡ дуҫлыҡ бәйләнештәре урынлаштырҙы. Уларҙың формаһы күп төрлө. Предприятиелар коллективтары араһында контакттар нығый бара; улар ярышыу өсөн килешеүҙәр төҙөй, делегациялар менән алмаша, алдынғы тәжрибә менән уртаҡлаша.

Күп кенә мәктәптәрҙә һәм предприятиеларҙа интернациональ дуҫлыҡ клубтары барлыҡҡа килде. Шуларҙың береһе — ГДР менән дуҫлыҡ клубы «Спартак» — 86-сы урта мәктәптә 1960 йылда уҡ төҙөлдө. Клуб ағзалары немец эшселәр һәм коммунистар хәрәкәте ветерандары, үҙ тиҫтерҙәре менән хат алышты, В. И. Лениндың немец эшселәр хәрәкәте менән бәйләнештәре тураһында күп материал өйрәнде һәм немец теленән русса тәржемә итте. Галле ҡалаһында доктор Курт Фишер исемендәге мәктәп уҡыусылары менән тығыҙ контакт урынлаштырылды. Интернациональ дуҫлыҡ клубтарында туғандаш илдәргә арналған лекциялар, әңгәмәләр, күргәҙмәләр, дуҫ дәүләттәрҙең белгестәре, сит илдәрҙә булып ҡайтҡан туристар менән осрашыуҙар уҙғарыла.

Өфөләрҙең дуҫлыҡ бәйләнештәре бигерәк тә Галле ҡалаһы хеҙмәтсәндәре менән тығыҙ. Галле, Өфө кеүек үк, химия промышленносының мөһим үҙәге булып тора. Бер төрлө оҡшаш производстволарҙың булыуы ике алыҫ ҡаланың дуҫлығын нығытыуға булышлыҡ итте. 1965 йылдың ғинуарында Өфөлә ГДР менән Совет дуҫлығы йәмғиәтенең ҡала бүлексәһе асылғас, был дуҫлыҡ ойоштороу йәһәтенән формалашты. Өфөнөң эре промышленность предприятиелары һәм төҙөлөш ойошмалары — Яңы Өфө нефть эшкәртеү һәм химия заводтары, 3-сө, 21-се һәм «Башнефтезаводстрой» төҙөлөш трестары, күп кенә юғары уҡыу йорттары, мәктәптәр һәм ижади ойошмалар был йәмғиәттең коллектив ағзалары булып китте. ГДР менән дуҫлыҡ йәмғиәте бүлексәһе һәм уның тәүге ойошмалары күп төрлө саралар үткәрә. Немец халҡының иң күренекле вәкилдәренең юбилейҙары киң билдәләп үтелә. ГДР хеҙмәтсәндәренең социализм төҙөүҙәге уңыштары пропагандалана.

Өфө менән Галле араһында партия линияһы буйынса, предприятиелар һәм уҡыу йорттары араһында тығыҙ бәйләнеш булдырылды. 1966 йылдың июнендә Өфөгә СЕПГ Үҙәк Комитеты Политбюроһы

КПСС-тың XXVI съезында ҡатнашҡан МНРП делегацияһын Өфө аэропортында ҡаршылау. 1981 йыл, 1 март.



ағзалығына кандидат, партияның Галле округ комитетының беренсе секретары Хорст Зиндерман (хәҙер СЕПГ Үҙәк Комитеты Политбюроһы ағзаһы, Дәүләт советы Председателенең урынбаҫары, ГДР-ҙың Халыҡ палатаһы президенты) етәкселегендә партия делегацияһы килде. Немец дуҫтар Башҡортостан партия ойошмаһы структураһы менән танышты, КПСС-тың Орджоникидзе район комитетының нефть химияһы предприятиеларына етәкселек итеү тәжрибәһен өйрәнде. Бер аҙ һуңыраҡ БАССР-ҙың партия, совет һәм хужалыҡ работниктары делегацияһы уларға яуап визиты яһаны. Предприятиелар, юғары уҡыу йорттары араһында фәнни-техник бәйләнештәр йәйелдерелде. Өфө химия заводы менән Галле округының Биттерфельд химия комбинаты араһында эшлекле тығыҙ контакт булдырылды. 1970 йылда фәнни-техник, экономик һәм иҗтимағи хеҙмәттәшлек тураһында протокол төҙөлдө. Шул ваҡыттан алып ике предприятие белгестәре күп тапҡыр бер-береһендә булды, техник документация, изделиелар өлгөһө менән алмашты. Тығыҙ бәйләнештәр дуҫтарҙың ыңғай тәжрибәһен өйрәнеүҙе һәм уны производствоға индереүҙе тиҙләтте.

Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге Башҡорт дәүләт университеты менән Галле-Виттенбергтағы Мартин Лютер исемендәге университет араһында дуҫлыҡ урынлашты. Ике юғары уҡыу йорто араһында 1966 йылда төҙөлгән договорҙа уҡытыу, фәнни тикшеренеү һәм тәрбиә эштәре өлкәһендә хеҙмәттәшлек итеү ҡаралды. Лекциялар уҡыу,

фәнни конференцияларҙа һәм тантаналарҙа ҡатнашыу осон профессорҙар һәм уҡытыусылар менән алмашыу традицияға инде. Производство практикаһы һәм стажировка үтеү осон студенттар һәм аспиранттар менән алмашыу үткәрелә.

Халыҡ-ара хәл ваҡиғалары Өфө хеҙмәтсәндәре күңелендә ҡайнар сағылыш тапты. Улар Вьетнам халҡының Америка агрессияһына ҡаршы ғәҙел көрәшен ҡырҡа яҡлап сыҡты. Был политик теләктәшлектә лә, Ватаныбыҙ файҙаһына һәм уның ҡеүәтен нығытыу осон фиҙакәр хеҙмәттә лә, Тыныслыҡ фондына средстволар йыйыуҙа ла асыҡ күренде. Ҡала предприятиеларында һәм учреждениеларында көрәшеүсе Вьетнам, ғәрәп илдәре, Чили һәм Афғанстан халыҡтары менән күп тапҡыр массовый теләктәшлек митингылары үткәрелде.

Социалистик илдәр менән дуҫлыҡ бәйләнештәрен нығытыу, тыныслыҡ осон көрәш халыҡтарҙың политик аңлылығын тәрәнәйтте, интернациональ ҡараш даирәһен киңәйтте, туғандарса дуҫлыҡ тойғоларын көсәйтте.

Шулай итеп, Өфөнөң киң хеҙмәтсән массалары илдең, республиканың, ҡаланың күп яҡлы ижтимағи-политик тормошонда әүҙем ҡатнашты. Былар — йәмғиәтебеҙҙең юғары политик өлгөргәнлегенең, ныҡ үҫкән социализм шарттарында совет кешеләренең социаль активлығы көсәйеүенең дәлиле.

1981 йылдың 23 февраленән 3 мартына тиклем КПСС-тың сираттағы XXVI съезы булып үтте. Делегаттар составында Өфө ҡала партия ойошмаһы ағзалары: КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитетының беренсе секретары М. З. Шакиров, БАССР Верховный Советы Президиумы председателе Ф. В. Солтанов, БАССР Министрҙар Советы председателе З. Ш. Аҡназаров, КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты секретарҙары В. Л. Воюшин, Т. И. Ахунзянов, профсоюздарҙың Башҡортостан Өлкә Советы председателе Д. Ш. Дәүләтбаев, «Башнефть» производство берекмәһенең генеральный директоры Е. В. Столяров, эре панелле йорттар төҙөү тресының малярҙар бригадиры З. С. Вәлиева, «Башнефтехимзаводы» берекмәһенең баш инженеры Н. Х. Вәлитов, КПСС-тың XXII съезы исемендәге нефть эшкәртеү заводы операторы Р. М. Ғәлиәхмәтова, С. М. Киров исемендәге завод директоры Р. А. Гәрәев, Главбашстрой начальнигы В. Я. Громаков, Социалистик Хеҙмәт Геройы Өфө почтамтының почтальондар бригадиры Ә. Ш. Дәүләтҡолова, Башҡортостандың халыҡ шағиры Социалистик Хеҙмәт Геройы Мостай Кәрим (М. С. Кәримов), быяла-сүс туҡымалар эшләү заводының еп ураусыһы Н. В. Литвинова, Өфө локомотив депоһы машинисы В. Т. Нәбиуллин һәм башҡалар бар ине. Делегаттар КПСС Үҙәк Комитетының Генеральный секретары Л. И. Брежнев иптәштең «Советтар Союзы Коммунистар партияһының XXVI съезына КПСС Үҙәк Комитетының отчеты, эске һәм тышҡы политика өлкәһендә партияның нәүбәттәге бурыстары» тигән докладын ҙур иғтибар менән тыңланы. Башҡортостан партия ойошмаһы вәкилдәре совет коммунистарының юғары форумы эшен-

дә актив ҡатнашты. Съезда М. З. Шакиров телмәр менән сығыш яһаны.

Съезд эшләгән көндәрҙә КПСС-тың XXVI съезында ҡатнашҡан МНРП делегацияһы МНРП Үҙәк Комитетының Беренсе секретары, Монгол Халыҡ Республикаһының Бөйөк халыҡ хуралы Президиумы Председателе Юмжагийн Цеденбал иптәш етәкселегендә 1—2 мартта Өфөлә булып китте. Башҡортостан баш ҡалаһы монгол дуҫтарҙы ихлас күңелдән ҡаршы алды. Мотор эшләүселәрҙең Культура һарайында үткәрелгән монгол-совет дуҫлығы митингыһы совет һәм монгол халыҡтарының ҡаҡшамаҫ берҙәмлеген һәм туғанлығын сағыу кәүҙәләндерҙе.

XXVI съезд совет йәмғиәтенең даими нығый барған социаль-политик һәм идея берҙәмлеген, эшселәр синыфы, колхоз крәҫтиәндәре һәм интеллигенцияның ҡаҡшамаҫ союзын, СССР халыҡтарының туғандарса дуҫлығын асыҡ күрһәтте. Ун беренсе биш йыллыҡ рубеждарын һәм киләһе ун йыллыҡ перспективаларын билдәләп, съезд совет халҡының ижади эшендә яңы этап асты. Ул өс меңенсе йыл алдынан Тыуған илебеҙ йөҙөн күп йәһәттән билдәләйәсәк.

Съездан һуң партия һәм халыҡтың бөтә тырышлығы экономик, социаль һәм культура үҫешенең гәйәт ҙур бурыстарын хәл итеүгә йүнәлтелде.

1982 йылдың ноябрендә КПСС Үҙәк Комитетының Генеральный секретары, СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Л. И. Брежнев вафат булды. КПСС Үҙәк Комитетының сираттан тыш ноябрь (1982 йыл) Пленумы Ю. В. Андропов иптәште бер тауыштан КПСС Үҙәк Комитетының Генеральный секретары итеп һайланы. Пленумда партияның эске һәм тышҡы политик курсының күсәгилешлелеге раҫланды.

Хәҙерге этапта коммунистик төҙөлөш программаһына эйә булған совет халҡы Коммунистар партияһы пландарын ғәмәлгә ашырыу өсөн ныҡышмалы көрәшә.

# *Өфө — Башҡорт АССР-ының культура үҙәге (1945—1980 йылдар)*

## § 1. Халыҡ мәғарифы һәм фән

В. И. Лениндың коммунизм фән, техника һәм культураның иң юғары ҡаҙаныштарынан, хәҙерге заман мәғарифынан башҡа мөмкин түгел тигән күрһәтмәһенән сығып, Коммунистар партияһы йәмғиәттең рухи үҫеше тураһында һәр саҡ ғәйәт ҙур хәстәрлек күрҙе. Был йәһәттән һуғыштан һуңғы йылдарҙа айырыуса күп эшләнде. Өфөнөң культура тормошоноң һәр яҡлап күтәрелеүе — бының сағыу миҫалы, уның һуңғы ун йыллыҡтар эсендәге тарихының иң мөһим һыҙаттарының береһе булды. Ҡаланың социаль-экономик яҡтан көслө үҫеүе әҙәбиәт, профессиональ һәм үҙешмәкәр сәнғәт өлкәһендә ижади көстәрҙең һәм таланттарҙың сәскә атыуы, күп һанлы уҡыу йорттарының, ғилми учреждениеларҙың эшмәкәрлеген йәйелдереү һәм камиллаштырыу өсөн иң уңайлы мөмкинлектәр бирҙе.

Дөйөм белем биреү мәктәптәренең эшен яҡшыртыу беренсе сираттағы бурыстар иҫәбендә хәл ителде. Халыҡ мәғарифы мәсьәләләре йыл һайын партияның ҡала һәм район комитеттары тарафынан, урындағы Советтарҙың сессияларында тикшерелде. Бөйөк Ватан һуғышы тамамланыу менән, бөтәһенән элек ете йыллыҡ дөйөм белем биреү тураһындағы законды тормошҡа ашырырға, һуғыш ваҡытының ҡыйынлыҡтары арҡаһында уҡыуҙы туҡтатҡан йәштәрҙе мәктәпкә кире ҡайтарыуға өлгәшергә кәрәк ине. Ошо маҡсаттарҙа 1945 йылдың йәйендә үк инде мәктәп йәшендәге балаларҙың аныҡ иҫәбен алыу ойошторолдо, мәктәптәрҙең микрорайондары барлыҡҡа килтерелде, уҡыусылар һәм уларҙың ата-әсәләре менән әңгәмәләр үткәрелде. Айырыуса мохтажлыҡ кисергән балалар дөйөм белем биреү фондынан материаль ярҙам алды. Һуғыш йылдарында производствоға киткән егеттәр һәм ҡыҙҙар белем алыуҙы тамамлай алһын өсөн, эшләүсе йәштәргә киске мәктәптәр һаны артты.

Һөҙөмтәлә мәктәптән ситтә ҡалған балалар һаны бик тиҙ кәмене. Әгәр 1943/44 уҡыу йылында мәктәп йәшендәге балаларҙың 11 про-

центы уҡымаған булһа, 1945/46 уҡыу йылында иһә ул—фәҡәт 0,8 процент ҡына тәшкил итте [1]. 50-се йылдар уртаһына ҡалала мәжбүри етле йыллыҡ уҡытыу тулыһынса тормошҡа ашырыла ине. Был кимәлгә өлгәшеү Өфөгә РСФСР-ҙың 120 ҡалаһы иҫәбендә йәштәргә дөйөм урта белем биреүгә күсә башларға мөмкинлек бирҙе. Халыҡтың йылдам артыуы менән бергә бындай мөһим социаль проблеманы хәл итеү уҡыусылар һанының бик тиҙ артыуына алып килде. 1945/46 уҡыу йылында мәктәптәрҙә 32,9 мең, 1955/56 уҡыу йылында — 56,9 мең, ә 1980/81 уҡыу йылында инде 109,4 мең уҡыусы уҡыны.

Бындай шарттарҙа нормаль уҡытыу процесын тәьмин итеү өсөн күп ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға тура килде. Һуғыштан һуңғы тәүге йылдарҙа ҡайһы бер мәктәптәр барактарҙа һәм шәхси йорттарҙа урынлашҡайны. Дәрестәр өс һәм хатта дүрт сменала алып барылды. Мебель, уҡыу әсбаптары, мәктәп кәрәк-яраҡтары етешмәне. Халыҡ мәғарифының юғары темпта үҫеүе һәм камиллашыуы уның материаль базаһын етди нығытыуҙы, мәктәптәр төҙөүҙе киңәйтеүҙе талап итте. Илдең экономикаһы нығыу менән бергә мәғарифҡа дәүләт ассигнованиелары арттырылды. 1960—1980 йылдарҙа ғына Өфө буйынса был маҡсаттарға сығымдар өс тапҡыр тиерлек — 8,2 миллион һумдан 23,9 миллион һумға артты. Бынан тыш, партия һәм совет органдары өҫтәмә ресурстар эҙләнеләр. Улар мәктәп биналары төҙөүгә промышленность предприятиелары средстволарын йылыҡтырҙылар, мәктәптәрҙә яңы уҡыу йылына иң яҡшы әҙерләү өсөн социалистик ярыш йәйелдерҙеләр, шефлыҡ ойоштorҙолар. Әгәр 1945 йылда предприятиеларҙың шефлыҡ ярҙамы ике генә мәктәпкә күрһәтелһә, 50-се йылдар уртаһына иһә ул ҡаланың бөтә мәктәптәренә тиерлек таратылды. Мәктәптәр төҙөү йылдам барҙы. 1959 йылдан алып 1980 йылға саҡлы 95 яңы типовой мәктәп бинаһы һәм булғандарына төкәтмә файҙаланыуға тапшырылды. Уларҙың бөтәһендә лә хәҙерге замап ҡорамалдары менән йыһазландырылған уҡытыу кабинеттары, мастерскойҙар, спорт залдары бар. Мәктәптәрҙең уҡытыу, материаль базаһы байтаҡ киңәйҙе, сифат яғынан яңы баҫҡысҡа күтәрелде. Мәҫәлән, киноаппараттар, телевизорҙар, лингофон кабинеттары, магнитофондар, кодоскоптар һәм башҡа уҡытыу техникаһы киң ҡулланылды.

Күрһәтеп үтелгән саралар мәктәп селтәренең системалы үҫешен тәьмин итте. 1980/81 уҡыу йылында Өфөлә 1945/46 уҡыу йылындағы 64 мәктәп урынына 114 дөйөм белем биреү мәктәбе эшләне. Халыҡ мәғарифы системаһында йәштәргә эштән айырылмайынса белем алырға мөмкинлек биреүсе киске мәктәптәр мөһим урын алып тора. 1980/81 уҡыу йылында ошондай 29 мәктәп булды, уларҙа ҡала уҡыусыларының 12 процентҡа яҡыны уҡыны. Бынан тыш, физик йәки аҡыл үҫешендә кәмселектәре булған балалар өсөн

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 342, оп. 12, д. 172, л. 9; ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 1226, л. 30.

7 махсус мәктәп ойошторолдо. 1956 йылда Өфөлә яңы типтағы беренсе уҡытыу-тәрбиә биреү учреждениеһы интернат-мәктәп асылды. 1980 йылда уларҙың һаны —6-ға, ә контингенты 2,7 мең кешегә етте. Ҡағиҙә булараҡ, бында уҡыусылар — ғаиләләрендә тәрбиәләнеү өсөн тейешле шарттары булмаған балалар һәм үҫмерҙәр. Ҡалала шулай уҡ 600-гә яҡын тәрбиәләнеүсеһе булған 6 балалар йорто эшләй. Быларҙың бөтәһе лә Коммунистар партияһының һәм Совет дәүләтенең үҫеп килеүсе йәш быуын, уҡыусыларға иҗтимағи тәрбиә биреүҙе киңәйтеү һәм ғаиләгә ярҙам итеү тураһында гәйәт ҙур хәстәрлек күреүен раҫлай.

Халыҡ мәғарифының көслө үҫеүе уҡытыусылар кадрҙарын тулыландырыу һәм яҡшыртыу проблемаһын айырыуса киҫкен ҡуйҙы. 1945—1980 йылдарҙа Өфөлә уҡытыусылар һаны 758-ҙән 4595-кә тиклем артты. Уларҙың өстән ике өлөшөнөң юғары белеме булды, ә 40-сы йылдар уртаһында 24 проценты ғына юғары белемле ине. Педагогтарҙың квалификацияһын күтәреү планлы рәүештә алып барылды. Был йәһәттән Өфөлә урынлашҡан Башҡортостан уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институты ҙур ғына роль уйнай.

Ҡаланың күп уҡытыусылары педагогик хеҙмәттең ысын оҫталарына әүерелде, балаларҙы уҡытыуҙа һәм тәрбиәләүҙә юғары күрһәткестәргә өлгәшәләр. Мәҫәлән, 1980/81 уҡыу йылы йомғаҡтары буйынса 3698 уҡытыусы үҙҙәренең класы йәки предметы буйынса тулы өлгәшкә ирешә. 1955/56 уҡыу йылында бындай һөҙөмтәләргә 85 кеше генә өлгәшкәйне. Уҡытыусының ауыр, ләкин изге хеҙмәте Тыуған ил тарафынан юғары баһалана. 1980 йылдың башына Өфө мәктәптәренең 350 иң яҡшы работнигы ордендар һәм миҙалдар менән наградланды, 87 педагог РСФСР һәм БАССР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусыһы тигән почетлы исемгә лайыҡ булды.

Һуғыштан һуңғы осор дөйөм белем биреү мәктәбенең эшмәкәрлегендә тамырҙан үҙгәрештәр менән билдәләнде. Ул оҙаҡ йылдар буйына уҡыусыларҙы башлыса юғары уҡыу йорттарына инеүгә әҙерләне. Ләкин урта белем биреүҙең киңәйеүе сәбәпле, вуздарҙа уҡыуҙы мәктәпте тамамлаусыларҙың бер өлөшө генә дауам итә ала ине. Ҡалғандары халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарына киттеләр, һәм бында уларҙың хеҙмәт эшмәкәрлегенә етерлек әҙерлектәре булмауы күренде.

Шуның өсөн 50-се йылдар уртаһынан мәктәпте политехнизациялау көсәйҙе. Йәштәргә практик күнекмәләр биреү, билдәле бер специальносҡа ҡыҙыҡһыныу уятыу саралары күрелде. 1954/55 уҡыу йылынан башланғыс кластарҙа хеҙмәт дәрестәре, V—VII кластарҙа уҡытыу мастерскойҙарында занятиелар, VIII—X кластарҙа машиналар өйрәнеү һәм электротехника буйынса практикумдар индерелде.

КПСС-тың XX съезы политехник уҡытыуҙы үҫтереү, уҡыусыларҙы хеҙмәткә киңерәк ылыҡтырыу кәрәклегенә айырыуса күрһәтеп үтте. Был маҡсаттарҙа Өфөнөң бөтә мәктәптәрендә тиерлек мастерскойҙар һәм машиналар өйрәнеү кабинеттары булдырылды, произ-

Башҡорт дәүләт педагогия институтының төп корпусы.



водство, промышленность предприятиелары менән бәйләнеш көсәйҙе. Уҡыусылар бригадалары хеҙмәт тәрбиәһе биреүҙең эффектлы формаһына әүерелде; улар ремонт һәм төҙөлөш эштәре башҡарҙылар, ауыл мәктәптәренә ярҙам күрһәттеләр. 1958 йылда уҡ инде ҡалала 300 бригада иҫәпләнде, уларҙа 7,5 мең уҡыусы ағза булып торҙо [1]. Был хәрәкәттең артабан үҫеүе бишенсе хеҙмәт сиреген үткәреүгә алып килде, ул өлкән класс уҡыусыларының халыҡ хужалығы әһәмиәтендәге эштәрҙә массовый рәүештә ҡатнашыуын тәьмин итте. 1974 йылдың йәйендә Өфө мәктәптәрендә 200-ҙән ашыу хеҙмәт берекмәһе, шул иҫәптән тыуған ҡаланы уның 400 йыллыҡ юбилейына төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса 109 отряд ойошторолдо. Йөҙәрләгән уҡыусы хеҙмәтләндереү сфераһында эшләне. 4 меңдән ашыу өлкән класс уҡыусыһы республиканың төрлө төҙөлөш объекттарында хеҙмәт итте. Улар 400 мең һумдан ашыу капитал һалыуҙар үҙләштерҙе [2]. Хеҙмәт һәм ял лагерҙары барлыҡҡа килде.

КПСС-тың XXIII съезы, совет мәктәбен артабан дөйөм белем биреү, хеҙмәт, политехник мәктәп итеп үҫтереү йүнәлешен билдәләп, илдә дөйөм урта белем биреүгә күсеү бурысын ҡуйҙы. 1966/67 уҡыу йылынан алып Өфөлә аҡрынлап яңы уҡытыу пландары һәм программалары индерелә. Башланғыс мәктәптә уҡыу срогы өс йылға тиклем ҡыҫҡартыла. Өлкән кластарҙа факультатив занятиелар үткәреү башланды. Улар уҡыусыларҙың айырым фәндәрҙең нигеҙҙәрен тағы

[1] ЦГА БАССР, ф. 798, оп. 9, д. 2968, л. 104.
[2] «Ленинец», 1974, 15 октябрь.

ла тәрәнерәк өйрәнеүгә булған ҡыҙыҡһыныуҙарын иҫәпкә алырға мөмкинлек бирә. 1968 йылда ҡала уҡыусыларының фәнни ойошмаһы барлыҡҡа килде, уларҙың олимпиадаларҙа, смотрҙарҙа, техник ижад күргәҙмәләрендә ҡатнашыуҙары киңәйҙе. Былар барыһы ла йәш үҫмерҙәргә фән һәм техниканың хәҙерге кимәленә яуап биреүсе ныҡлы белемдәр алырға ярҙам итә.

Үҫеп килеүсе йәш быуынға профессиональ ориентация биреү, уны производствоға өйрәтеү айырыуса 1977 йылдың декабрендә КПСС Үҙәк Комитетының һәм СССР Министрҙар Советының «Дөйөм белем биреү мәктәптәре уҡыусыларын уҡытыуҙы, тәрбиәләүҙе һәм уларҙы хеҙмәткә әҙерләүҙе артабан камиллаштырыу тураһындағы» ҡарары ҡабул ителгәндән һуң яҡшыртылды. 1980 йылда Өфө мәктәптәрендә металл һәм ағас эшкәртеү буйынса 180 мастерской, 56 тегеү мастерскойы, 16 автомобилдәр өйрәнеү кабинеты бар ине, уларҙа 1042 станок, 1529 тегеү машинаһы, 24 автомашина иҫәпләнде. Бынан тыш, өс мәктәп-ара уҡытыу-производство комбинаты булдырылды, унда йыл һайын 16 специальность буйынса 7 меңгә тиклем өлкән класс уҡыусыһы уҡытыла. Был иһә мәктәп балаларына токарь, электр монтажсыһы, автомобиль йөрөтөүсе, тегенсе-мотористка һ. б. һөнәрҙәргә эйә булырға мөмкинлек бирҙе. Урта мәктәпте меңәрләгән тамамлаусылар производство специальносы буйынса разряд биреләү тураһында таныҡлыҡ алды. Уҡытыуҙы етештереүсән хеҙмәт менән бергә ҡушыуҙың ленинсы идеяһы беҙҙең мәктәп тарафынан һаман тәрәнерәк үҙләштерелә. Уҡыусыларҙы практик яҡтан әҙерләү, уларҙың халыҡ хужалығында эшләү өсөн хеҙмәт күнекмәләренә эйә булыуы арта.

Педагогик коллективтар идея-тәрбиә эшенең кимәлен даими күтәрәләр, уҡыусы йәштәрҙә коммунистик аңлылыҡ, актив тормош позицияһы, юғары әхлаҡи сифаттар, социалистик Тыуған илгә сикһеҙ бирелгәнлек формалаштырыу өсөн көрәшәләр. Был мөһим бурысты хәл итеүгә пионер һәм комсомол ойошмалары ҙур өлөш индерә. Улар уҡыусыларға хеҙмәт, хәрби-патриотик, эстетик тәрбиә биреү, балалар ижадын үҫтереү һәм башҡа йүнәлештәр буйынса төрлө ҡыҙыҡлы саралар үткәрә. Өфөнөң бөтә мәктәптәрендә лә тиерлек интернациональ дуҫлыҡ клубтары ойошторолған. 1958 йылда Пионерҙар һарайы асылыу менән, ҡалала пионер тормошо күпкә байыраҡ, йөкмәткелерәк булып ҡалды. Уның 44 түңәрәге һәм «Юность» обсерваторияһы эшенә 5 меңдән ашыу уҡыусы ылыҡтырылғайны. Һарайҙа йыл һайын 100 меңгә тиклем бала ҡатнашҡан төрлө слеттар, утренниктар, лекторийҙар, йәшлек көндәре үткәрелде [1].

Белем биреүҙең йөкмәткеһен камиллаштырыу, уҡытыу-тәрбиә процесының структураһындағы һәм формаларындағы үҙгәрештәр

---

[1] Тахаев Х. Я., Фенин Л. Н., Куприянова М. Н. Уфа. Справочник-путеводитель. Өфө, 1966, 98-се бит.

ҙур ғына уңыштар килтерә. Массовый көндөҙгө мәктәп йәштәрҙең күпселеге өсөн урта белем алыуҙың төп юлы булып ныҡына. 1979/1980 уҡыу йылында Өфө мәктәптәрендә өлгөрөш 1945/46 йылдағы 78,6 процент урынына 99.7 процент тәшкил итте. 22 мәктәп, йәки уларҙың һәр бишенсеһе, тулы өлгәшкә ирешге. Мәктәпте тамамлап сығыусы 8093 уҡыусының 185-е мәктәпте — алтын миҙал, 1621-е маҡтау грамотаһы менән тамамланы.

Хәҙер ҡалала урта дөйөм белем биреүгә күсеү ғәмәлдә тамамланған. 70-се йылдар уртаһынан алып инде һигеҙенсе кластарҙы тамамлаусыларҙың 99 проценттан күберәге уҡыуҙы туғыҙынсы кластарҙа, техникумдарҙа, ҡала профессиональ-техник училищеларында һәм урта белем биреүсе башҡа уҡыу йорттарында дауам итте.

Былар һәммәһе лә дөйөм урта белем биреүҙе артабан үҫтереү һәм камиллаштырыу, мәктәптә уҡытыу-тәрбиә эшенең кимәлен күтәреү буйынса КПСС-тың XXVI съезы билдәләгән бурыстарҙы ғәмәлгә ашырыу өсөн ныҡлы нигеҙ булдырҙы.

Йәштәрҙе уҡытыу эшендә тулыһынса үҙгәртеп ҡоролған профессиональ-техник белем биреү системаһы мөһим һәм арта барыусы роль уйнай. 1959 йылда хеҙмәт резервтары училищелары һәм мәктәптәре профессиональ-техник училищеларға (ПТУ) үҙгәртеп ҡоролдо, уларға егеттәр һәм ҡыҙҙар һигеҙенсе класты тамамлағас уҡырға баралар ине. Ләкин фәнни-техник прогресс йәштәрҙең дөйөм белем кимәленең юғарыраҡ булыуын талап итте. Промышленноста барлыҡҡа килгән күп кенә яңы профессияларҙы физиканы, химияны, математиканы урта мәктәп программаһы күләмендә белмәй тороп үҙләштереп булмай ине. Шуға күрә 1966 йылдан алып урта мәктәпте тамамлаусылар өсөн техник училищелар ойошторола башланы. Тиҙҙән эшсе профессияһынан тыш тулы урта белем дә биреүсе ПТУ-лар барлыҡҡа килде. Партияның XXIV съезы уҡыу йорттарының был принципиаль яңы тибының киң селтәрен булдырыуҙы кәрәкле тип тапты. Дөйөм урта белемле квалификациялы эшселәр әҙерләүгә әҙмәәҙлекле күсеү ҡарала.

Уҡытыуҙың был перспектив формалары бик тиҙ популярлыҡ ҡаҙанды, йәштәрҙең киң массаһын ылыҡтырҙы. Быны Өфө миҫалында ла күреп була. 1953 йылда уҡ ҡалала 9 профессиональ-техник белем биреү училищеһы була, ә 1980 йылда уларҙың һаны 29-ға етә, шул иҫәптән 12 урта белем биреүсе училище бар ине (уларҙың тәүгеһе 1970 йылда асылды). Ошо уҡ йылдарҙа уҡыусылар һаны 2,3 меңдән 18,3 меңгә тиклем үҫте, ә урта белем биреүсе училищеларҙа иһә 9,6 мең кеше уҡый ине инде. Профессиональ-техник белем биреү системаһы аша квалификациялы эшселәр әҙерләү күрһәтелгән осорҙа 10 тапҡыр артты һәм йылына 11 мең кешенән ашып китте. КПСС-тың XXV съезы «...бер юлы һөнәр ҙә, дөйөм урта белем дә алырға мөмкинлек биреүсе профессиональ-техник уҡыу йорттарында йәштәрҙән халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтары өсөн юғары квалифика-

циялы эшселәр әҙерләүҙе тәьмин итергә»[1] тигән талап ҡуйҙы. Шулай итеп, профессиональ-техник училищелар эшселәр синыфына лайыҡлы алмашты профессиональ яҡтан әҙерләүҙең һәм уны формалаштырыуҙың төп мәктәбе һәм шуның менән бергә дөйөм урта белем биреүҙе тормошҡа ашырыуҙың реаль юлдарының береһе булып китте.

Халыҡ мәғарифының башҡа звеноларында ла тамырҙан үҙгәрештәр булды. Барыһынан элек ғәмәлдә тап бына һуғыштан һуңғы осорҙа ҡала техникумдары селтәре үҙенең хәҙерге йөҙөндә барлыҡҡа килде. Халыҡ хужалығының һәм культураның кадрҙарга арта барған ихтыяждарына ярашлы рәүештә күп кенә яңы урта махсус уҡыу йорттары барлыҡҡа килде. 1946 йылда — нефть техникумы, 1952 йылда 2-се һанлы медицина училищеһы асылды. 50-се йылдар аҙағында һәм 60-сы йылдар башында бер нисә техникум барлыҡҡа килде. Шулай, 1957 йылда — еңел промышленность техникумы, 1959 йылда — тимер юл транспорты техникумы, тағы ла ике йылдан энергетика һәм төҙөлөш техникумдары белгестәр әҙерләй башланы. 1964 йылда музыка-педагогия училищеһы тәү башлап уҡыусылар ҡабул итте. Һуңыраҡ совет сауҙаһы техникумы, йылға училищеһы һәм башҡалар асылды. 1980 йылда Өфөлә 23 урта махсус уҡыу йорто эшләне. Уларҙа уҡыусылар һаны 33 меңгә, шул иҫәптән көндөҙгө бүлектә 20 меңгә, киске һәм ситтән тороп уҡыу бүлектәрендә 13 мең самаһына, етте. Автомобиль транспорты, авиация, урмантехника, энергетика, кооператив техникумдары, 1-се һанлы медицина училищеһы, мәктәпкә тиклемге педагогия училищеһы иң эреләрҙән һанала.

Урта махсус уҡыу йорттарының эше һиҙелерлек яҡшырҙы, уларҙың материаль базаһы нығыны. Уҡытыу, производство практикаһын үткәреү методтары камиллашты, уҡытыу процесында техник средстволар киң ҡулланылды, уҡытыуҙың тормош менән бәйләнеше көсәйҙе. Уҡыусыларҙың техник ижады үҫә, унда эксперименталь-конструкторлыҡ бюролары (ЭКБ) айырым урын алып тора. Бында мөһим халыҡ хужалығы әһәмиәтенә эйә булған эштәр үтәлә. Мәҫәлән, автомобиль транспорты техникумының ЭКБ ағзалары «Башавтодорҙың» заказы буйынса уҡыу йылы барышында юл проекттары эшләйҙәр, ә йәй көнө студенттарҙың төҙөлөш отрядтары составында уларҙы ғәмәлдә тормошҡа ашыралар. Ошондай проекттар буйынса йөҙәрләгән километр автомобиль юлдары һалынды ла инде. Урта махсус мәктәптә йәштәрҙе идея яғынан тәрбиәләү кимәле күтәрелде, уның формалары төрләләндерелә. Пальмиро Тольятти исемендәге авиация техникумында преподавателдәр һәм уҡыусылар көсө менән интернациональ дуҫлыҡ музейы ойошторолдо. Ул Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Өфөлә Коминтерндың Башҡарма комитеты булыуға бағышланған. 1981 йылда унда меңәрләгән совет кешеләре. 60-тан

[1] КПСС-тың XXV съезы материалдары. М., 1976, 221-се бит

Галле округынан ҡунаҡтар П. Тольятти исемендәге Өфө авиация техникумының интернациональ дуҫлыҡ музейында. Вернер Фельфе Почетлы ҡунаҡтар кенәгәһенә яҙыу яҙа. 1979 йыл, 12 ноябрь.




ашыу сит ил делегацияһы булды. СЕПГ Үҙәк Комитеты Политбюроһы ағзаһы, партияның Галле округ комитетының беренсе секретары Вернер Фельфе 1979 йылдың ноябрендә Галле округы делегацияһы етәксеһе сифатында Башҡортостанда булған сағында музейҙың Почетлы ҡунаҡтары кенәгәһенә былай тип яҙҙы: «Беҙ Коминтерндың ленинсы гвардияһы алдында баш эйәбеҙ. Һеҙҙең Коминтерн традицияларын изге хөрмәтләүегеҙ пролетар интернационализм рухына яуап бирә. Беҙ Коминтерндың васыяттарын һаҡлау һәм үҙ бурыстарыбыҙҙы уның рухында үтәү өсөн барыһын да эшләйәсәкбеҙ».

Ҡаланың техникумдары туғыҙынсы һәм унынсы биш йыллыҡтарҙа ғына 82 мең белгес әҙерләп сығарҙы.

Өфө элеккесә Башҡортостанда юғары белемле кадрҙар әҙерләү буйынса төп урынды алып торҙо һәм илдең юғары уҡыу йорттарының эре үҙәгенә әүерелде. Булған институттар йылдам үҫте, яңылары — 1948 йылда нефть институты, 1967 йылда — педагогия, 1968 йылда сәнғәт институты барлыҡҡа килде. Бынан тыш, 1957 йылда К. А. Тимирязев исемендәге педагогия институты базаһында Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге Башҡорт дәүләт университеты асылды. 1980 йылда ҡалала 7 вуз эшләне. Уларҙа тик көндөҙгө бүлектәрҙә генә лә 1946 йылдағы 4 мең урынына 28 меңдән ашыу студент уҡыны. Уҡытыуҙың ситтән тороп һәм киске уҡыу формалары киң үҫеш алды. Бөтә институттар янында ла тейешле бүлектәр

Башҡорт дәүләт университетының төп корпусы.



булдырылды, икенсе ҡалаларҙа урынлашҡан вуздарҙың филиалдары һәм уҡытыу-консультация пункттары (УКП) асылды. 80-се йылдар башында Мәскәү кооперация яғынан хеҙмәтләндереү технология институтының филиалы һәм Бөтә Союз ситтән тороп уҡыу финанс-экономика институтының факультеты, шулай уҡ тағы ла 4 вуздың уҡытыу-консультация пункттары эшләне. Уҡытыуҙың бөтә формаларын иҫәпкә алғанда, 1981 йылда ҡалала 47 мең студент иҫәпләнде. Улар менән занятиеларҙы 3588 преподаватель, шул иҫәптән 156 доктор, профессор, 1655 фән кандидаты һәм доцент алып барҙы. Был шуны аңлата ине: ғилми дәрәжәле һәм званиелы юғары мәктәп работниктары һаны 1958 йылғы кимәлде ос тапҡырға һәм һуғыштан һуңғы тәүге йылдарҙың күрһәткестәрен бер нисә тапҡырға ашып китте.

Вуздарҙың эшмәкәрлегендә ғәйәт ҙур сифат үҙгәрештәре булды. Өфө нефть институтының миҫалы характерлы. Ул 400 студент уҡыған ике факультет составында И. М. Губкин исемендәге Мәскәү нефть институтының филиалы нигеҙендә барлыҡҡа килде. Ул саҡта 38 преподавателдең 3-һө генә фән кандидаттары ине. Хәҙер институт бик эре уҡытыу-фән үҙәгенә әүерелде. Уның хәҙерге замандың юғары талаптарына яуап биргән уҡытыу-материаль базаһы яңынан булдырылды. 1980 йылға 45 кафедрала 844 преподаватель, улар араһында 34 фән докторы һәм 342 фән кандидаты эшләне. Былар бөтәһе лә биш яңы факультет, шул иҫәптән илдә берҙән-бер торба үткәргес транспорты факультеты, шулай уҡ Башҡортостандың иң мөһим нефть химияһы үҙәктәрендә — Стәрлетамаҡта, Салауатта,

Октябрьскийҙа филиалдар асырға мөмкинлек бирҙе. 1980 йылда институтта 11 меңдән ашыу студент уҡыны. Был ваҡытта ул тиҫтәләгән специальность буйынса 23 мең инженер-техник работник әҙерләне. Уны тамамлаусылар араһында Ленин һәм Дәүләт премиялары лауреаттары, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, илебеҙ промышленносының эре предприятиелары һәм тотош тармаҡтары етәкселәре бар. 1980 йылға экономик һәм социаль үҫеш планын һәм тотош унынсы биш йыллыҡ заданиеларын уңышлы үтәгән һәм Бөтә Союз социалистик ярышында юғары күрһәткестәргә өлгәшкән өсөн институт коллективы СССР Юғары һәм урта махсус белем биреү министерствоһының һәм мәғариф, юғары мәктәп һәм ғилми учреждениелар профсоюзы Үҙәк Комитетының күсмә Ҡыҙыл байрағы менән наградланды.

Икенсе техник вуздың — Г. К. Орджоникидзе исемендәге Өфө авиация институтының да нығыныуы шулай уҡ динамикалы рәүештә барҙы. 60-сы йылдар башында ул К. Маркс урамына күсеп урынлашты. Бында уның 200 уҡытыу-ғилми лабораторияһы булған, бик шәп йыһазландырылған биш корпусы төҙөлдө. 8 Март урамында институттың студенттар ҡаласығы үҫеп сыҡты. Студенттар һаны 1946 йылдағы 616-нан 1980 йылда 9545-кә, ә институтты тамамлап сығыусылар һаны шул уҡ йылдарҙа 64-тән 1199 кешегә етте. Институт 16 специальность буйынса инженерҙар әҙерләүсе һәм йылдам үҫә барыусы эре күп профилле вузға әүерелде. Ул илебеҙҙең алдынғы юғары уҡыу йорттары иҫәбенә инде. 1977 йылда СССР ВДНХ-һында «Уҡытыу-тәрбиәүи эште ойоштороуҙа Өфө авиация институтының тәжрибәһе» тигән семинар үткәрелде. Квалификациялы кадрҙар әҙерләүҙәге һәм фәнни тикшеренеүҙәрҙе үҫтереүҙәге ҙур хеҙмәттәре өсөн институт 1982 йылда хөкүмәттең иң юғары наградаһына — Ленин орденына лайыҡ булды.

Университеттың асылыуы ҡаланың фәнни һәм культура тормошонда ҙур ғына ваҡиға булды. Тәүҙә уның 5 факультеты бар ине. Артабан тарих-филология һәм физика-математика факультеттары дүрт үҙ аллы факультетҡа бүленде, химия һәм юридик факультеттар барлыҡҡа килде. Преподавателдәр составы һиҙелерлек артты һәм нығынды. 1980 йылға уларҙың 61 проценты фән докторы һәм кандидаты ине. Үҙенең йәшәү осоронда университет уҡыу йорттары, ғилми учреждениелар һәм халыҡ хужалығы өсөн 17 мең квалификациялы белгес әҙерләп сығарҙы.

Һуғыштан һуңғы осорҙа ҡаланың өлкән вуздары — ауыл хужалығы һәм медицина институттары танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Уларҙың уҡытыу, материаль-техник базаһы нығыны, яңы факультеттары барлыҡҡа килде, коллективтары үҫте. Башҡортостан ауыл хужалығы институтының уңыштары айырыуса һәйбәт. 1963 йылда ул төп уҡыу корпусын, ә артабан механизация һәм зооинженер факультеттары бинаһын, бер нисә студенттар ятағы алды; студенттар контингенты 6 меңгә етте. Юғары квалификациялы ауыл хужалығы белгестәре

Башкортостан ауыл хужалығы институтының төп корпусы.



әҙерләүҙәге һәм фәнде үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн 1980 йылда институт республика вуздары араһында беренсе булып Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланды.

Вуздарҙың уҡытыу-тәрбиә эше системаһында ҙур ыңғай үҫеш булды. Юғары мәктәптәрҙең тормош, производство менән бәйләнештәре нығыны. Бөтә уҡытыу процесы үҙгәртеп ҡоролдо, ул вуз стеналарында уҡ актив рәүештә тикшеренеү күнекмәләре һәм үҙ аллы ижади фекерләү үҫтереүгә йүнәлтелде, сөнки белгес хәҙерге заман производствоһы шарттарында бынан башҡа эшләй алмай.

Студенттарҙы ғилми тикшеренеүҙәргә киң ылыҡтырыу ҡала вуздары эшмәкәрлегенең характерлы һыҙаты булып әүерелде. Был маҡсатҡа студенттарҙың конструкторлыҡ бюролары (СКБ), кафедралар янындағы ғилми һәм техник түңәрәктәр хеҙмәт итте. Уларҙың ҡайһы берҙәре һәйбәт уңыштарға иреште. 1966 йылда авиация институтында барлыҡҡа килгән СКБ-1, һауа мендәрендә хәрәкәтләнеүсе транспорт средстволарын эшләп, бер нисә мөһим производство бурысын хәл итте. Уның коллективы Төмән нефтселәре заданиеһы буйынса һауа мендәрендә хәрәкәтләнеүсе күп йөк һыйҙырышлы үҙйөрөшлө «Тайфун» платформаһын проектланы. Ул йөрөү һынауҙарын уңышлы үтте. Платформа 1973—1974 йылдарҙа Канада менән АҠШ-та, «Совет йәштәре» күргәҙмәһендә күрһәтелде. Шунда уҡ СКБ-2-лә төҙөлгән күп маҡсатлы «Дельфин» самолетының да моделе ҡуйылғайны. Студенттарҙың һуңғы хеҙмәттәренең береһе — кеше ярҙамынан тыш эшләй ала торған «Һауа мендәрендә эшләүсе саң һурҙырғыс». Күҙәтеүсе механизм уға ҡаршылыҡтарҙы үтергә мөмкинлек бирә, эштең башланыу һәм тамамланыу ваҡыты көйләнә. Саң һурҙырғыс промышленность предприятиеларында ла, шулай уҡ көнкүрештә лә файҙаланыуға тәғәйенләнгән. Авиация институтында барлығы 48 түңәрәк, 10 СКБ, студенттарҙың 2 ғилми-тикшеренеү лабора-

Өфө авиация институтының төп корпусы.



торияһы булдырылды. Институт Волга буйы зонаһы студенттарының ғилми эшмәкәрлеге буйынса баш вуз итеп расланған, бер нисә тапҡыр Бөтә Союз конкурстарында һәм смотрҙарында юғары наградалар менән билдәләнде.

Университетта күп һанлы ғилми түңәрәктәр һәм ижади берекмәләр эшенә студенттарҙың күпселеге ылыҡтырылған. Мәҫәлән, тарих факультетының археология түңәрәге бер нисә йыл буйына уңышлы эшләне. Студенттар тарафынан асылған үткән заман ҡомартҡылары «Башҡортостандың археологик картаһы» тигән йыйылма хеҙмәткә инде.

Бөтә студенттарҙы ла үҙ аллы ғилми тикшеренеүҙәргә һәм техник ижадҡа ылыҡтырыуҙың иң эффектлы юлдарын эҙләү дауам итә. Был проблеманы хәл итеү формаларының береһе Өфө нефть институтында табылды. Бында 1971 йылда технология факультетында студенттарҙың ғилми-тикшеренеү институты (СНИИ) ойошторолдо. Ул 36 лабораторияһы булған айырым ике ҡатлы корпусты биләй. Унда бөтә бишенсе курс студенттары-технологтары ла стажировка үтә, сөнки ғилми сотрудник сифатында эшләү уҡытыуҙың мотлаҡ өлөшө булып тора. Студенттар башҡарған тикшеренеүҙәр мөһим халыҡ хужалығы әһәмиәтенә эйә. СНИИ сотрудниктары асыштарының ҡайһы берҙәре бөтә Союзға билдәле. Студенттарҙың массовый ғилми-техник ижадын үҫтергәне, актуаль фәнни-техник мәсьәләләрҙе эшләүҙә актив ҡатнашҡаны, нефть эшкәртеү промышленносы өсөн яңы технологик процестар барлыҡҡа килтереүгә ҙур өлөш индергәне өсөн студенттарҙың ғилми-тикшеренеү институты 1974 йылда Ленин комсомолы премияһына лайыҡ булды. Үҙе йәшәгән тутыҙ йыл эсендә

Өфө нефть институтының төп корпусы.



СНИИ экономик эффекты 70 миллион һумдан ашыу булған 9 миллион һумлыҡ тикшеренеү башҡарҙы, 350-нән ашыу авторлыҡ танытҡлығы алынған[1].

Уҡытыу-тикшеренеү эш системаһы авиация институтында ла индерелгән. Ул уҡытыу процесы менән ғилми тикшеренеүҙәрҙе органик рәүештә бергә ҡушыуҙы, һәр студенттың ижади эҙләнеүҙә мотлаҡ ҡатнашыуын күҙҙә тота. Был йәһәттән университетта, ауыл хужалығы, медицина институттарында (бында ла СНИИ төҙөлгән) һәм башҡа институттарҙа ла байтаҡ алға китеш булды.

1980 йылда Өфө вуздарында ғилми һәм эҙләнеү эштәренең төрлө формаларында бөтәһе 21 меңгә яҡын студент ҡатнашты. Улар 1979 йылда ғына ла 317 мәҡәлә һәм фәнни доклад баҫтырып сығарҙылар, уйлап табыуҙарға 28 авторлыҡ танытҡлығы алдылар. Тәбиғәт, техник һәм гуманитар фәндәр буйынса студенттарҙың иң яҡшы эше өсөн 1978/79 уҡыу йылында Бөтә Союз конкурсы йомғаҡтары буйынса ҡала вуздарының 38 вәкиле «Студенттарҙың иң яҡшы эше өсөн» миҙалдары һәм СССР Юғары һәм урта махсус белем биреү министерствоһының һәм ВЛКСМ Үҙәк Комитетының Дипломдары менән наградланды.

Студенттарҙың коммунистик инанғанлығын формалаштырыуға, педагогик коллективтарҙың һәм йәмәғәт ойошмаларының бөтә идея-тәрбиәүи эшенең кимәлен күтәреүгә ғәйәт ҙур иғтибар бирелде.

---

[1] «Ленинец», 1980, 8 май.

Марксистик-ленинсы теорияны уҡытыу камиллаштырылды, студенттарҙың уның менән ҡыҙыҡһыныуы артты. Ósoнсо хеҙмәт семестры, студенттарҙың төҙөлөш отрядтарында (ССО) эшләүе ҙур халыҡ хужалығы һәм тәрбиәүи әһәмиәткә эйә. Улар Өфөлә 60-сы йылдар башынан алып төҙөлә башланы һәм бай традициялар тупланы. ССО боецтары Усть-Балыҡ — Курган — Өфө — Әлмәт нефть үткәргесен, Бохара — Урал газ үткәргесен, Белорет — Шишмә тимер юлын һалыуҙа, Германия Демократик Республикаһында бер нисә объект төҙөүҙә ҡатнаштылар. Унынсы биш йыллыҡ осоронда ғына студенттар төҙөлөштәрҙә 70 миллион һумдан ашыу суммага төрлө эш башҡарҙылар.

Өлгөрөштөң күтәрелеүе, студенттарҙың теоретик һәм практик әҙерлегенең яҡшырыуы, белгестәр сығарыуҙың артыуы бөтә ыңғай алға китештәрҙең асыҡ кәүҙәләнеше булып тора. 1980 йылға Өфө вуздары промышленносҡа, ауыл хужалығына, һаулыҡ һаҡлауға һәм культураға 90 меңдән ашыу белгес бирҙе.

Бер үк ваҡытта юғары уҡыу йорттарында уңышлы ғилми-тикшеренеү эше алып барылды. Улар эшмәкәрлегенең был органик составы өлөшө тайпылышһыҙ үҫә барҙы. Ғилми тикшеренеүҙәрҙең экспериментал базаһы үҫте, уларҙың әһәмиәте һәм эффектлылығы артты, производствоға һаман күберәк асыштар индерелде.

Университет ҡаланың һәм республиканың эре фән үҙәгенә әүерелде. Уның кафедраларының һәм лабораторияларының тырышлығы хәҙерге заман фәненең күп кенә фундаменталь проблемаларын һәм мөһим халыҡ хужалығы бурыстарын хәл итеүгә йүнәлтелгән. Математика факультетында функциялар теорияһы, дифференциаль тигеҙләмәләр өлкәһендә етди эҙләнеүҙәр алып барылды. Республикала математиканың яңы йүнәлешенә — иҫәпләү математикаһына нигеҙ һалынды. Иҫәпләү лабораторияһында ЭВМ-дан телмәр формаһында информация биреү ҡоролмаһы барлыҡҡа килтерелде. Аппарат телмәрҙең промышленность синтезаторы сифатында промышленность роботтарын, автоматлаштырылған системаларҙы тауышландырыу һ. б. өсөн файҙаланылырға мөмкин. Университет белгестәренең ижади эҙләнеүе СССР ВДНХ-һының I дәрәжә дипломы менән билдәләнде [1]. Физиканың төрлө бүлектәре — прикладной ядро физикаһы, ҡаты есемдәр теорияһы, электроника, магнит күренештәре физикаһы буйынса эҙләнеүҙәр киң генә ҡолас алды. Һуңғы йүнәлештең үҫешенә профессор М. М. Фарзтдинов етәкселек итте, уның исеме илебеҙҙең, шулай уҡ сит илдәрҙең дә ғалимдарына киң билдәле. Химия факультетында профессор К. С. Минскер етәкселегендә поливинилхлоридтарҙың деструкция һәм стабилләшеү процестары тикшерелә. Был проблема Фән һәм техника буйынса СССР дәүләт комитетының иң мөһим эштәре планына инә. Университет ғалимдары (профессорҙар

---

[1] «Правда», 1979, 27 февраль.

А. С. Дмитриев, В. Г. Конарев һәм башҡалар) сығарған китаптар илебеҙ вуздары өсөн уҡыу әсбабы итеп раҫланған.

Һуғыштан һуңғы тәүге осорҙа техник фәндәр өлкәһендә ҡаҙаныштар айырыуса һиҙелерлек булды. Шулай, авиация институты Башҡортостандың эре машиналар эшләү предприятиеларының тикшеренеү группалары менән берлектә машиналар эшләүҙә техник прогресты тиҙләтеүгә ҙур ғына өлөш индерҙе. Институт ғалимдары механик эшкәртеү һәм йыйыуҙың технологик процестарын камиллаштырыу буйынса бер нисә тәҡдим индерҙеләр, металдарҙы ҡырҡыуҙың инструмент аҙ ашала торған оптималь температураһының даими булыуы тураһында яңы физик положениены билдәләнеләр, станоктарҙың, автоматик линияларҙың, ҡоролмаларҙың һ. б. ш. принципиаль яңы моделдәрен эшләнеләр[1].

Ваҡыт үтеү менән, вуздың фәнни потенциалы тағы ла интенсивыраҡ файҙаланыла башланы. Коллективтың тырышлығы актуаль ҙур күләмле комплекслы темаларға йүнәлтелде. 70-се йылдар аҙағында һәм 80-се йылдар башында Өфө авиация институты «Авиация технологияһы» тигән ғилми-тикшеренеү программаһына етәкселек итә башланы. Уға бергәләп башҡарыусылар сифатында илдең 50 вузы инә. Программаның маҡсаты — осоу аппараттары двигателдәре етештереү технологияһын тәрән камиллаштырыу.

Вузда академик фәнни учреждениелар менән ҡыҙыҡлы һәм перспективалы ижади дуҫлыҡ тәжрибәһе тупланған. УССР Фәндәр академияһының Е. О. Патон исемендәге Электр сваркаһы институтының, Өфө авиация институтының һәм производствола эшләүселәрҙең уртаҡ тырышлығы менән микроплазма электр сваркаһын эшләү һәм индереү бының асыҡ раҫланышы булып хеҙмәт итә ала. Яңылыҡ изделиеларҙың үҙкиммәтен ҡырҡа кәметеү менән бергә уларҙың тағы ла юғарыраҡ сифатын тәьмин итә. Эре проблемаларҙы хәл итеү институт янында бер нисә ғилми-тикшеренеү бүлеге ойоштороуға алып килде. 1980 йылда уның штатында 1200-ҙән ашыу сотрудник бар ине. Шул саҡта уҡ тикшеренеүҙәрҙең йыллыҡ күләме 1964 йылдағы 0,3 миллион һум урынына 9,5 миллион һумға етте. Сығымдарҙың һәр һумына 4 һумға тиклем экономия эффекты тура килде. 70-се йылдар аҙағында институт йыл һайын 15-кә тиклем монография һәм китап, 400-ләп ғилми мәҡәлә баҫып сығарҙы.

Эшкә шундай уҡ комплекслы, системалы ҡараш һәм производствоға ярҙамдың арта барыуы нефть институтындағы ғилми тикшеренеүҙәргә лә характерлы. Вуздың ғалимдары нефть һәм газ сығарыу һәм транспортлау ысулдарына бер нисә мөһим камиллаштырыу индерҙеләр. Улар араһында промысла эсе селтәре торбалары өсөн материал сифатында пластмассаларҙы ҡулланыу буйынса тәҡдимдәр; баҫымдарҙы үлсәүҙең ышаныслылығын һәм аныҡлығын күтәреүсе приборҙар барлыҡҡа килтереү; магистраль торба үткәргестәрҙе ре-

---

[1] Наука в Советской Башкирии за 50 лет, 367, 370-се биттәр.

СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Президиумы бинаһы.



монтлағанда траншеяларҙы асыу өсөн роторлы экскаватор конструкциялау бар. Институтта 40-сы йылдарҙан алып инде кокслау һәм нефть коксы етештереү процесын яҡшыртыу, термик крекинг буйынса тикшеренеүҙәр башҡарылды.

Профессор Б. В. Клименок етәкселегендә ғалимдар төркөмө күкертле нефттән дизель яғыулыҡтары һәм майҙарының түбән температурала туңыусы сорттарының рецептураһын эшләне. Нефть эшкәртеүҙең иң мөһим проблемаларының береһе — нефттән ҡорамалдарҙың коррозияһын киметереп сығарыусы һәм нефть продукттарының сифатын түбәнәйтеүсе органик булмаған компоненттарҙы оптималь айырып алыу буйынса тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе ҙур теоретик һәм практик әһәмиәткә эйә. Институтта алып барылған эҙләнеүҙәрҙең оригиналлеге тураһында шул факт та һөйләй: уның сотрудниктары йыл һайын тиҫтәләгән авторлыҡ таныҡмалары һәм патенттар алды. 1980 йылда ғына хужалыҡ договорҙары буйынса 4,9 миллион һум суммаға 99 предприятие менән ғилми эш алып барылды.

Фәнде үҫтереүгә ауыл хужалығы институты ғалимдарының индергән өлөшө байтаҡ. Улар тарафынан Башҡортостандың төп тәбиғәт зоналарына ярашлы рәүештә хужалыҡты алып барыуҙың рациональ системаһы эшләнде, уның тупраҡтарының үҙенсәлектәре өйрәнелде, дөрөҫ сәсеү әйләнештәрен үҙләштереү, малдарҙың продуктлылығын арттырыу һ. б. буйынса ҡиммәтле тәҡдимдәр индерелде. Автомобилдәрҙе, тракторҙарҙы һәм ауыл хужалығы машиналарын

файҙаланыу күрһәткестәрен һәм уларҙы ремонтлау методтарын яҡшыртыу юлдары өйрәнелде, автотранспорт двигателдәренең ҡеүәтен, оҙаҡҡа сыҙамлылығын һәм экономиялылығын арттырыу буйынса эштәр алып барылды, дизелдәр өсөн аккумулятор тибындағы яғыулыҡ насостары барлыҡҡа килтерелде. Договорҙар буйынса тиҫтәләгән колхоздар, совхоздар, «Сельхозтехниканың» район берекмәләре менән ғилми тикшеренеүҙәр башҡарылды.

Медицина институты коллективы медицина ярҙамының төрлө төрҙәре буйынса яңы диагностика, терапия һәм профилактика методтары индерҙе. Нефть һәм химия производстволары эшселәре араһында профессиональ ауырыуҙар һәм уларҙы кәметеү юлдары ла өйрәнелде.

Һуғыштан һуңғы осорҙа Өфө институттарында аспирантура аша ғилми кадрҙар әҙерләү йәйелдерелде. Ул айырыуса һуңғы йылдарҙа интенсив барҙы. 1950 йылда ғына әле аспиранттарҙы ике вуз ғына әҙерләне, унда 15 кеше иҫәпләнде. 60-сы йылдар башына инде ҡалала булған бөтә юғары уҡыу йорттарының да аспирантуралары бар ине, уларҙың ғилми советтары кандидатлыҡ диссертацияларын яҡлауға ҡабул итеү хоҡуғы алдылар. 1965 йылға аспиранттар һәм соискателдәр һаны —238-гә, 1975 йылға 726 кешегә етте. Йәш ғалимдарҙы әҙерләү сифаты күтәрелде. 1968—1972 йылдарҙа ғына аспирантурала уҡыуҙы 160 специальность буйынса 354 кеше тамамланы. Был дипломлы педагогтар һанын арттырыуҙың бик мөһим резервы һәм бер үк ваҡытта вуздарҙың фәнни мөмкинлектәре үҫеү күрһәткестәренең береһе булды.

Өфө байтаҡ һанда яңы эре ғилми-тикшеренеү учреждениелары барлыҡҡа килеүгә бәйле рәүештә лә илдең әһәмиәтле фән үҙәге булып формалашты. 1951 йылда Тау-геология институтын, Биология институтын, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтын һәм ике бүлекте — органик химия һәм экономик тикшеренеүҙәр бүлектәрен — үҙ эсенә алған СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы ойошторолдо. Филиалдың Президиумына геология-минералогия фәндәре докторы, профессор Г. В. Вахрушев етәкселек итте. Филиал республикала ғилми эштәрҙе координациялауҙа һәм уның халыҡ хужалығын һәм культураһын үҫтереүҙең актуаль проблемаларын хәл итеүҙә ҙур роль уйнаны. Шулай, 1960 йылдың октябрендә органик химия институты итеп үҙгәртелгән химия бүлеге сотрудниктары нефттең көкөрт-органик ҡушылмаларын синтезлауҙың яңы методтарын эшләне. Геологтар Башҡортостан территорияһында таралған боронғо (кембрийға тиклемге) һәм йәшерәк ултырма ҡатламдарҙың йәшен билдәләнеләр, яңы райондарҙа нефтқә эҙләнеү-разведка бырауланы эшенең ҡуйылышын нигеҙләнеләр. Биологтар менән биохимиктар тарафынан формалар барлыҡҡа килеү процестарында һәм үҫемлектәрҙең уңайһыҙ факторҙарға тотороҡлолоғо күренештәрендә нуклеин кислоталарының роле өйрәнелде; был иһә ауыл хужалығы культураларының уңыш биреүсәнлеген күтәреүҙең күп мәсьәләләрен яңыса

хәл итергә мөмкинлек бирҙе. Ул ваҡытта геология өлкәһендә иң мөһим тикшеренеүҙәргә профессорҙар А. И. Олли, К. Р. Тимерғазин, химия өлкәһендә профессор Р. Д. Оболенцев етәкселек иттеләр.

К. Р. Тимерғазин.



60-сы йылдар башына СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалында күп кенә фәнни йүнәлештәр барлыҡҡа килде; улар араһында нефттең көкөрт-органик ҡушылмалары химияһы, үҫемлектәрҙең нуклеин алмашыныуы һәм формалар барлыҡҡа килеү процестары, Урал—Волга буйы нефть ятҡылыҡтарының урынлашыу законлылыҡтары донъя Союз әһәмиәтенә эйә булды. Ләкин ул саҡта юғары квалификациялы кадрҙар етешмәне, фәнни-техник база йомшаҡ булды. Академик учреждениеларҙы үҙгәртеп ҡорған осорҙа (1963) Башҡортостан филиалының эшмәкәрлеге туҡтатылды, уның тәбиғәтте өйрәнеү профилдәре министерстволарға бирелде, Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты, Экономик тикшеренеүҙәр бүлеге Фәндәр академияһының ярашлы бүлектәре етәкселегендә эшләүҙе дауам иттеләр.

1967 йылда СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы яңынан аяҡҡа баҫтырылды. Ул үҙенең элекке учреждениеларын һәм яңы барлыҡҡа килтерелгән ике бүлекте — биохимия һәм цитохимия, физика һәм математика бүлектәрен — берләштерҙе. Яңы лабораториялар һәм секторҙар ойошторолдо. Ғилми кадрҙар күпкә ныҡыны. 1980 йылда ғилми сотрудниктар составында 39 фән докторы һәм 250 фән кандидаты иҫәпләнде, 1967 йылда иһә уларҙың һаны ярашлы рәүештә 12 һәм 118 ине. Филиал Президиумы председателе С. Р. Рафиҡов, Физика һәм математика бүлегенең сектор мөдире А. Ф. Леонтьев, Химия институты директоры Г. А. Толстиков СССР Фәндәр академияһының член-корреспонденттары итеп һайланды.

Әҙерлекле работниктары булған һәм материаль-техник яҡтан яҡшы тәьмин ителгән Башҡортостан филиалы эре региональ фәнни һәм координациялаусы үҙәккә әүерелде. Вуздар һәм тармаҡ ғилми-тикшеренеү институттары менән тығыҙ бәйләнеш урынлашты. был иһә берләштерелгән лабораториялар булдырыуға алып килде. Уларҙың комплекслы фәнни-техник проблемалар буйынса эш тәжрибәһе СССР Фәндәр академияһы Президиумы тарафынан хупланды. Ғалимдарҙың производство менән, промышленность һәм ауыл хужалығы предприятиелары менән һөҙөмтәле хеҙмәттәшлеге ныҡый. Шуға нигеҙҙә математика, ҡаты есемдәр физикаһы, ядро физикаһы, техник

А. Ф. Леонтьев.



кибернетика, цитохимия, генетика, нефть химияһы, полимерҙар химияһы һәм халыҡ хужалығы өсөн актуаль булған башҡа йүнәлештәр буйынса интенсив фундаменталь тикшеренеүҙәр йәйелдерелде. Теоретик һәм практик яҡтан мөһим һөҙөмтәләр араһында ҡиммәтле үҙсәнлектәре булған яңы полимерҙар синтезлауҙы, синтетик каучук һәм флотореагенттар, төрлө металдарҙың рудаларын байыҡтырыу өсөн экстрагенттар алыуҙың юғары эффектлы катализаторҙарын, яңы нефть һәм газ ятҡылыҡтары эҙләү буйынса практик тәҡдимдәрҙең нигеҙе булып тороусы Урал тектоникаһының яңы концепцияһын эшләүҙе билдәләргә кәрәк. Информация-үлсәү системаларының схемаларын эшләү өсөн элементтар һәм ҡоролмалар синтезлау теорияһы үҫтерелде; был ныҡ ышаныслы яңы автоматлаштырыу средстволары булдырырға мөмкинлек бирҙе. Функциялар теорияһы, дифференциаль тигеҙләмәләр теорияһының айырым бүлектәре, генетиканың, селекцияның һәм ауыл хужалығы культураларының уңыш биреүсәнлеген күтәреүҙең молекуляр-биологик нигеҙҙәре уңышлы эшләнә. Филиалда математика, химия һәм башҡа фәндәр өлкәһендә оригиналь фәнни мәктәптәр барлыҡҡа килде. Улар ирешкән уңыштар тыуған ил һәм донъя фәне тарафынан танылыу таба.

Экономик тикшеренеүҙәрҙә ҙур үҙгәрештәр булды. Улар башлыса 1990 йылға тиклемге оҙайлы перспективала Башҡорт АССР-ының етештереүсе көстәрен комплекслы үҫтереүҙең экономик һәм социаль проблемаларын өйрәнеүгә тупланды. 1975 йылға шундай прогноз-план төҙөлгәйне. Дауам иткән эштәр республика комплексының быуат аҙағына тиклем үҫешен моделләштереүҙе тәьмин итәсәк. Тотош алғанда, СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының эшмәкәрлеге республика халыҡ хужалығының иң мөһим тармаҡтарында фәнни-техник прогресты тиҙләтеү өсөн фәнни нигеҙ әҙерләүҙе тәьмин итеүгә йүнәлтелгән.

Ижтимағи фәндәрҙе үҫтереүҙә сифат яғынан алға китеш булды. Край тарихын өйрәнеү яңы баҫҡысҡа күтәрелде. Р. М. Рәимовтың «Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының төҙөлөүе», З. А. Әминевтең «Башҡортостанда Октябрь социалистик революцияһы һәм граждандар һуғышы», Р. Г. Кузеевтың «Башҡорт халҡының килеп сығыуы» тигән монографиялары, ике томда «Башҡорт АССР-ы тарихы буйынса очерктар», «КПСС-тың Башҡор-

тостан ойонмаһы тарихы буйынса очерктар», ике кисәктән торған «Башҡорт АССР-ы совет эшселәр синыфының формалашыуы һәм үсеүе» тигән коллектив дөйөмләштереүсе хеҙмәттәр барлыҡҡа килде. Бер нисә ҙур документаль йыйынтыҡ, шул иҫәптән «В. И. Ленин һәм Башҡортостан», «Башҡортостанда Октябрь», «Ғәйрәтлелек һәм батырлыҡ документтары» китаптары, баҫылып сыҡты. В. И. Лениндың тыуыуына 110 йыл тулыуға ҡарата ғалимдарҙың, крайҙы өйрәнеүселәрҙең, журналистарҙың уртаҡ хеҙмәте менән барлыҡҡа килтерелгән, ун китаптан торған «Башҡортостан Лениннанаһы» серияһы сығарылды.

Филология өлкәһендә башҡортса-русса һәм русса-башҡортса һүҙлектәрҙе, СССР-ҙа милли-рус грамматикаларын барлыҡҡа килтереүҙең беренсе тәжрибәһе булып торған «Башҡорт һәм рус телдәренең сағыштырма грамматикаһын» баҫып сығарыу мөһим фәнни һәм практик әһәмиәткә эйә булды. Әҙәбиәтте өйрәнеү, башҡорт совет әҙәбиәте тарихы буйынса күп һанлы хеҙмәттәр донъя күрҙе. «Башҡорт халыҡ ижады» тигән күп томлы баҫма сығарыла. Хәҙерге башҡорт теленең академик аңлатма һүҙлеге өҫтөндә эш тамамлана.

Башҡорт телен, әҙәбиәтен һәм тарихын өйрәнеүҙәге, республикала мәғарифты һәм культураны үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн 1982 йылда СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты «Почет билдәһе» ордены менән наградланды.

Ижтимағи фәндәр буйынса етди эҙләнеүҙәр шулай уҡ университетта һәм башҡа вуздарҙың байтаҡ фәнни көс тупланған тейешле кафедраларында ла алып барылды.

Тармаҡ ғилми-тикшеренеү учреждениеларында эш киң ҡолас алды. Уларҙың барлыҡҡа килеүенә һәм үҫеүенә экономика талаптары, айырыуса нефть һәм нефть химияһы промышленносының көслө үҫеүе сәбәп булды. 1947 йылда Өфө нефть ғилми-тикшеренеү институты (УфНИИ) барлыҡҡа килде, ул аҙаҡтан Башҡортостан нефть промышленносы ғилми-тикшеренеү һәм проектлау институтына (БашНИПИнефть) үҙгәртеп ҡоролдо. Ул нефть ятҡылыҡтарын разведкалауҙың, быраулау һәм нефть сығарыу техникаһын һәм технологияһын камиллаштырыуҙың күп кенә мөһим мәсьәләләрен хәл итте. Институт ҡалала иң эре ғилми-тикшеренеү учреждениеһы булып китте.

Һуңғы осорҙа БашНИПИнефть коллективы Башҡортостанда шыйыҡ ягыулыҡ сығарыуҙың юғары кимәлен һаҡлауға йүнәлтелгән саралар комплексы тәҡдим итте. Улар нефттең разведкаланған запастарын интенсив үҫтереүҙе, атап әйткәндә ятҡылыҡтарҙы ҙур тәрәнлектәрҙә эҙләү иҫәбенә үҫтереүҙе, ҡатламдарҙы тулыраҡ файҙаланыуҙы тәьмин итә. Һуңғы мәсьәләне хәл итеү өсөн, институт тәҡдиме буйынса «Башнефть» берекмәһендә илебеҙҙә беренсе булып ҡатламдарға йоғонто яһауҙың химик методтары ҡулланылды. Улар-

ҙың эффекты республикала ҙур капитал һалыуҙар яһамайынса ҙур нефть яҡтылығы асыуға тиң.

Бер нисә йыл буйына институт нефть сығарғанда тирә-яҡ мөхитте һаҡлау мәсьәләләре менән уңышлы шөғөлләнде. Башҡортостан нефтселәренең промыслаларҙан ағып сыҡҡан һыуҙы даими баҫымды һаҡлау өсөн ҡатламдарға кире ҡыуыуы — был тикшеренеүҙәр һөҙөмтәләренең береһе. Шуның менән гәйәт күп сөсө һыуҙы экономиялауға һәм һыу яҡтылыҡтарын бысраныуҙан һаҡлауға өлгәшелә. БашНИПИнефть — СССР ВДНХ-һының даими ҡатнашыусыһы, уға илебеҙҙең топ күргәҙмәһенең 60-тан артыҡ миҙалы бирелгән.

Республикала нефть эшкәртеүҙең үҫеүе фән алдына яңынан-яңы талаптар ҡуйҙы. 1956 йылда УфНИИ-ҙан Башҡортостан нефть эшкәртеү буйынса ғилми-тикшеренеү институты (БашНИИНП) бүленеп сыҡты. Ул тиҙҙән күп кокортло нефттәрҙе эшкәртеү технологияһы мәсьәләләре буйынса илебеҙҙә топ институтҡа әүерелде. Үткәрелгән тикшеренеүҙәр нефтте файҙаланыуҙы яҡшыртырға, унан алынған продукттарҙы арзанайтырға мөмкинлек бирҙе. Институт тарафынан юлдарға түшәү өсөн яңы сифатлы битум тәҡдим ителде, ул юлдарҙың хеҙмәт итеү ваҡытын ике тапҡыр арттырырға, уларҙы ремонтлауға сығымдарҙы кәметергә һәм төҙөүҙе тиҙләтергә мөмкинлек бирә. Был продукцияның һәр тоннаһы 28 һумды янда ҡалдыра, ә ул йылына 1,5 миллион тоннанан ашыу эшләп сығарылды[1]. БашНИИНП Советтар Союзының бөтә заводтарында ла битум етештереү өлкәһендә техник политиканы билдәләй. Ул нефть коксын етештереүҙе камиллаштырыуҙа ла мөһим роль уйнай, унан башҡа төҫлө металлургия, электрон промышленносы эшләй алмай. Институттың кокслау буйынса тәҡдимдәре тармаҡтың күпселек предприятиеларында индерелгән.

1957 йылда — Өфө нефть химияһы производстволарының ғилми-тикшеренеү институты (НИИнефтехим), бер йылдан һуң Бөтә Союз нефть һәм нефть продукттары йыйыу, әҙерләү һәм транспортлау институты — илебеҙҙә ошондай берҙән-бер ғилми учреждение ойошторолдо. НИИнефтехим нефть һәм газ нигеҙендә продукция синтезлау проблемалары буйынса хаҡлы рәүештә СССР-ҙа етәксе институттарҙың береһе булып иҫәпләнә. Уның коллективының тырышлығы яңы производстволарҙың оригиналь технологик процестарын булдырыуға, уникаль үҙсәнлекле продукттар алыу методтарын эшләүгә йүнәлтелгән. Институт 15 министерство һәм ведомство предприятиелары менән берлектә эшләй.

Ижтимағи производствоның үҫеш темптарын тиҙләтеүҙә фәндең роле артыуы яңы тикшеренеү учреждениелары ойоштороуға алып килде. 1964 йылда Бөтә Союз үҫемлектәрҙе һаҡлауҙың химик саралары ғилми-тикшеренеү институтының Өфө филиалы ойошторолa (1981 йылдан алып Бөтә Союз гербицидтар һәм үҫемлектәр үҫеше

[1] «Советская Башкирия», 1974, 6 ғинуар.

регуляторҙары ғилми-тикшеренеү технология институты). Ул гербицидтар һәм башҡа хлорлы органик ҡушылмалар алыу технологияһын эшләү буйынса иң эре фәнни үҙәккә әүерелде. Филиал тарафынан ҡый үләндәренә ҡаршы көрәшеү өсөн күп яңы саралар производствоға индерелде. Уларҙың фәҡәт береһе генә — пропанид илгә йылына 20 миллион һумлыҡ экономия бирә. Филиалдың фәнни эштәренең эффектлылығы уларға киткән сығымдарҙан һигеҙ тапҡыр артып китә[1].

1971 йылдан алып Өфөлә Бөтә Союз нефть промыслаһы геофизикаһы ғилми-тикшеренеү институты эшләй. Уның бурысы — скважиналарҙы тикшереү өсөн геофизик методтар һәм аппаратуралар эшләү. Ятҡылыҡтарҙы фәнни нигеҙләнгән һәм эффектлы файҙаланыуҙы тәьмин итеүсе бер нисә ныҡ һиҙгер прибор барлыҡҡа килтерелде һәм сериялы етештереүгә тәҡдим ителде.

Медицина, биология, ауыл хужалығы һәм башҡа профилдәге ғилми учреждениелар мөһим теоретик һәм практик тикшеренеүҙәр алып барҙы. Күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты сотрудниктары медик-практиктар менән берлектә 1962 йылда үткән тормоштоң ауыр мираҫы булған трахоманы бөтөрөүгә өлгәштеләр. Өфө офтальмологтары илебеҙҙә беренселәр рәтендә күҙҙең мөгөҙ ҡатлауын ҡатлаулап һәм туранан-тура күсереп ултыртыу, селтәр ҡатлауының ҡубыуын дауалау методикаһын, глаукоманы иртә диагностикалауҙың яңы методтарын эшләнеләр. И. И. Мечников исемендәге Өфө вакциналар һәм сывороткалар ғилми-тикшеренеү институты коллективының элек Башҡортостанда таралған холера, сәсәк, биҙгәк кеүек ауырыуҙар менән көрәштә уңыштары байтаҡ. Институтта алынған 30 препарат Советтар Союзындағы ҡулланыусыларға ғына түгел, бәлки күп кенә сит илдәргә лә ебәрелә. Һаулыҡ һаҡлауҙағы, медицина фәнен үҫтереүҙәге, кадрҙар әҙерләүҙәге хеҙмәттәре өсөн институт 1980 йылда Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланды. 1956 йылда ойошторолған Өфө гигиена һәм профессиональ ауырыуҙар ғилми-тикшеренеү институты хеҙмәттең санитария-гигиена шарттарын, төрлө матдәләрҙең һәм производство процестарының эшселәрҙең сәләмәтлеге торошона йоғонтоһон өйрәнеү менән шөғөлләнә. Ул шулай уҡ һауала, һыу ятҡылыҡтарында, тупраҡта химик матдәләр миҡдары нормативтарын да эшләй. Республикала колхоз-совхоз производствоһын үҫтереүҙең күп мәсьәләләре менән 1957 йылдан алып Башҡортостан ауыл хужалығы ғилми-тикшеренеү институты шөғөлләнә.

1980 йылда Өфөлә бөтәһе 26 ғилми-тикшеренеү учреждениеһы иҫәпләнде, уларҙа 3 меңдән ашыу сотрудник эшләне. Һуңғы йылдарҙа яңы фәнни йүнәлештәр барлыҡҡа килде. Тикшеренеүҙәрҙең дөйөм кимәле күтәрелде һәм уларҙы мөһим проблемалар буйынса координациялау яҡшырҙы. Был проблемаларға вуздарҙың, тармаҡ һәм академик ғилми-тикшеренеү институттарының, предприятиеларҙың ра-

[1] «Советская Башкирия», 1980, 4 июнь.

ботниктары ылыҡтырылды. Фән менән производство араһында һәр яҡлап контакттар урынлаштырылды. Ғилми эштәрҙең эффектлылығы күтәрелде һәм уларҙы халыҡ хужалығына индереү сроктары ҡыҫҡарҙы. Ҡаланың ғалимдары техник прогресҡа етди өлөш индерҙе.

Башҡортостандың баш ҡалаһы һәм Советтар Союзының башҡа ҡалалары, шулай уҡ күп кенә сит илдәрҙең ғалимдары араһында хеҙмәттәшлек һаман тығыҙыраҡ һәм емешлерәк була барҙы. Ҡала ғалимдары күп халыҡ-ара конференцияларҙың эшендә ҡатнашты. Өфөнөң фән үҙәге булараҡ абруйының үҫеүе тураһында унда системалы рәүештә мөһим фәнни проблемалар буйынса союз, региональ һәм вуз-ара конференциялар, кәңәшмәләр, семинарҙар үткәрелеүе һөйләй.

Тотош алғанда, ҡала тарихының һуғыштан һуңғы осоро халыҡ мәғарифын һәм кадрҙар әҙерләүҙе, фәнде үҫтереү өсөн иң уңышлы осор булды. Бөтә был йүнәлештәр буйынса Башҡортостан тормошонда Өфөнөң етәксе роле ҡырҡа артты.

## § 2. Әҙәбиәт һәм сәнғәт

Бөйөк Ватан һуғышында еңеү, илебеҙҙең коммунизм төҙөү юлынан артабан алға барыуы әҙәбиәт, театр, музыка һәм һынлы сәнғәт алдында яңы бурыстар ҡуйҙы. Ҡаланың ижади интеллигенцияһы, үҙенең бөтә көсөн совет кешеләрен рухи яҡтан тәрбиәләү эшенә биреп, яңы йәмғиәт төҙөүгә лайыҡлы өлөш индерҙе.

Был почетлы бурысты үтәүҙә әҙәбиәт һәм сәнғәт работниктарына Коммунистар партияһы яғынан даими ярҙам күрһәтелде. Һуғыштан һуңғы тәүге осорҙа уларҙың эшмәкәрлеге программаһын ВКП(б) Үҙәк Комитетының идеология мәсьәләләре буйынса 1946—1948 йылдарҙағы ҡарарҙары билдәләне. Күрһәтелгән ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу буйынса Өфөлә ҙур эш башҡарылды. Улар бөтә ижади коллективтарҙа киң тикшерелде. 1946 йылдың октябрендә ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы художестволы интеллигенция менән идея-политик эште яҡшыртыу, уның һөҙөмтәле эшләүе өсөн кәрәкле шарттар булдырыу буйынса конкрет саралар билдәләне. Башҡортостан Яҙыусылар союзының етәкселеге нығытылды. Яҙыусылар ойошмаһының органы «Литературная Башкирия» альманахы сыға башланы. Артабан да республиканың һәм ҡаланың партия ойошмалары әҙәбиәтте үҫтереү тураһында даими хәстәрлек күрҙеләр. Яҙыусыларҙың кәңәшмәләре, совет әҙәбиәте һәм сәнғәтенең актуаль проблемалары буйынса дискуссиялар, уҡыусылар конференциялары һ. б. практикаға инде.

1954 йылдың июнендә Өфөлә Башҡортостан яҙыусыларының II съезы саҡырылды. Ул әҙәбиәт, тәржемә һәм әҙәби тәнҡит өлкәһендә башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһаны, иғтибарҙы тормошто тәрән һәм дөрөҫ итеп һүрәтләүгә, совет кешеһе образын сағыу күрһәтеүгә, ҡыйыу рәүештә яңы художестволы формалар һәм саралар

әҙләүгә йүнәлтте. Һуңынан яҙыусылар съездары регуляр рәүештә үткәрелде, ә һуғыштан һуңғы осорҙа бөтәһе ете съезд булды.

Бында 1958 йылда үткәрелгән РСФСР Яҙыусылар союзы Ойоштороу комитетының II пленумы ҡаланың әҙәби тормошонда ҙур ваҡиға булды. Пленумда башҡорт әҙәбиәтенең үҫеше ентекләп һәм ҡыҙыҡһыныу менән тикшерелде. Уның эше республика яҙыусылары ижадына файҙалы йоғонто яһаны, туғандаш халыҡтар әҙәбиәттәре вәкилдәре менән бәйләнештәрен нығытыуға булышлыҡ итте. Бындай бәйләнештәр һаман даимирәк, торлорәк була барҙы. Бүтән республикаларҙан яҙыусыларҙың килеү уңайы менән дискуссиялар, фекер алышыуҙар, китап күргәҙмәләре һәм уҡыусылар менән осрашыуҙар ойошторолдо. Айырым халыҡтар әҙәбиәттәренең аҙналыҡтары, ун көнлөктәре, айлыҡтары үткәрелде.

Башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы Мәжит Ғафуриға һәйкәл.



Өфөлә ҙур уңыш менән рус поэзияһы айлығы (1964), украин әҙәбиәте һәм сәнғәте ун көнлөгө (1969), Якутия әҙәбиәте һәм сәнғәте көндәре (1972), сыуаш әҙәбиәте (1976), Ҡарағалпаҡ АССР-ы әҙәбиәте һәм сәнғәте (1977), ҡаҙаҡ әҙәбиәте (1977), украин әҙәбиәте (1979), Россия әҙәбиәте (1982), Таулы Алтай әҙәбиәте һәм сәнғәте (1982) көндәре булып үтте. Улар культураларҙың үҙ-ара байығыуына, ижади работниктарҙың профессиональ оҫталығы үҫеүгә хеҙмәт итте. 1980 йылдың авгусында башҡорт совет әҙәбиәтенә нигеҙ һалыусы Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы Өфөлә һәм шағирҙың тыуған ерендә байрам итеү күп милләтле совет культураһы тормошонда ҙур һәм сағыу ваҡиға булды.

Әҙәбиәтселәрҙең заводтарҙа һәм төҙөлөштәрҙә, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа туранан-тура хеҙмәтсәндәр менән аралашыуы даими рәүештә тәрәнәйҙе һәм системалы характер алды. Ул бер ҡасан да 60-сы йылдарҙың икенсе яртыһындағы һәм 70-се йылдарҙағы, Бөйөк Октябрҙең, Башҡорт АССР-ының ярты быуатлыҡ юбилейҙарын, В. И. Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыуҙы, СССР төҙөлөүҙең 50 йыллығын байрам итеү барышындағы кеүек актив һәм тығыҙ булмағандыр, моғайын. Тик 1967—1972 йылдарҙа ғына яҙыусыларҙың өфөләр менән 1800-гә яҡын осрашыуы булды. Йыш ҡына дөйөм ҡала поэзия, сатира һәм юмор кисәләре, иҫтәлекле даталарға, юби-

Рәшит Ниғмәти.



ляр яҙыусыларға арналған әҙәби кисәләр үткәрелде. Профессиональ әҙәбиәтселәр газета редакциялары, уҡыу йорттары, Культура һарайҙары һ. б. эргәһендә эшләгән тиҫтәләгән әҙәбиәт түңәрәктәренә һәм берекмәләренә етәкселек итеүгә күп көс бирҙеләр.

Хеҙмәтсәндәр менән бәйләнештең нығыуы, йәш таланттар тураһында хәстәрлек күреү һәм уларға практик ярҙам итеү әҙәбиәткә яңы көстәрҙең килеүен тәьмин итте. Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаларының һаны 1946 йылдағы 31-ҙән 1980 йылда 125-кә етте. Унда рус секцияһы эшләй, ул ошо уҡ осорҙа 3-тән 17 кешегә тиклем артты. Союздың 100-ҙән ашыу ағзаһы Өфөлә йәшәй. Республикала әҙәбиәттең үҫеүе Өфө менән айырылғыһыҙ бәйләнгән.

Һуғыштан һуңғы осор башҡорт әҙәбиәтенең үҫеп етеү, идея һәм художество яғынан өлгөрөү, уның яңы бейеклектәр яулау осоро булды. Өлкән быуын яҙыусылары һөҙөмтәле эшләпе. Прозала, поэзияла, драматургияла яңы исемдәр барлыҡҡа килде. З. А. Биишеваның, Мостай Кәримдең, Назар Нәжмиҙең, Ғ. Й. Рамазановтың, Х. Ғ. Ғиләжевтың, Ш. С. Бикҡолдоң, ә һуңыраҡ Ә. М. Мирзаһитовтың, Ә. Ҡ. Атнабаевтың, Ф. Ә. Иҫәнғоловтың, Р. Ә. Сафиндың, Я. Х. Хамматовтың һәм башҡаларҙың тауыштары бөтә көсө менән яңғыраны. Тормошто художестволы аңлау артабан тәрәнәйҙе, әҫәрҙәрҙең тематикаһы һәм жанрҙары киңәйҙе, әҙиптәрҙең оҫталығы артты. Был иһә етди ижади бурыстарҙы хәл итергә мөмкинлек бирҙе.

Тәбиғи, яҙыусылар өсөн, һуғыш тамамланғас та, совет кешеһенең бөйөк батырлығы үҙәк, төп темаларҙың береһе булып ҡалды. Ул Ә. Һ. Бикчәнтәевтең Советтар Союзы Геройы А. Матросов тураһындағы «Үлемһеҙлеккә хоҡуҡ» повесында (1950), башҡорт әҙәбиәтендә һуғыш темаһына арналған тәүге роман — Ғ. Ғ. Ибраһимовтың «Бер полк кешеләре» әҫәрендә асыҡ сағылды. Шағирҙар рухландырғыс совет патриотизмына, халыҡтарҙың ҡаҡшамаҫ дуҫлығына, һуғышсы-азат итеүсенең батырлығына илһамланып дан йырланылар. М. Кәримдең «Ҡара һыуҙар», Х. Кәримдең «Яҡты йондоҙ», М. Сөндөклөнөң «Макар Мазай» эпик поэмаларының һәм шулай уҡ күп һанлы шиғырҙарҙың төп мәғәнәһе бына шундай. Артабан һуғыш темаһы күләмлерәк, масштаблыраҡ итеп эшләнә. Быны И. В. Сотниковтың 60-сы йылдарҙа донъя күргән «Ут эсендәге Дунай», «Бөтә донъяға яҡтылыҡ» китаптары раҫлай. Д. Ф. Исламов күп планлы «Мәскәү

юлы» романында (1968) Тыуған илебеҙҙең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн бөтә халыҡ көрәшенең сағыу картинаһын асып бирҙе. И. Ә. Абдуллин да хәрби тематика өҫтөндә актив эшләне. Уның «Карпатта таң ата» пьесаһы (1966), «Хуш, Рим» романы (1969) совет партизандарының, шулар иҫәбендә Ҡаршылыҡ күрһәтеү хәрәкәтендә ҡатнашыусы өфөләрҙең дә батырҙарса көрәше тураһында һөйләй. Ш. Бикҡолдоң «Әле йәшәйбеҙ икән» романы, Ә. Х. Хәкимовтың һуғыш темаһына яҙылған повестары ла ҡыҙыҡлы.

Мостай Кәрим.



Һуғыш тураһында документаль проза киң үҫеш алды. Республикабыҙҙан сыҡҡан Советтар Союзы Геройҙары тураһындағы «Башҡортостандың данлы улдары» исемле дүрт томлыҡ, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы М. Ғ. Гәрәевтең «Штурмовиктар һөжүмгә бара», Башҡорт гвардия кавалерия дивизияһының элекке полк комиссары С. Р. Әлибаевтың «Көндәлектән биттәр» һәм башҡа китаптар баҫылып сыҡты.

Күп кенә яҙыусыларҙың Башҡортостандың тарихи үткәненә мөрәжәғәт итеүе ҙур ижади уңыштар менән билдәләнде. Хеҙмәтсәндәрҙең иҙеүселәргә ҡаршы көрәше, башҡорт халҡының данлы хәрби традициялары, уның рус һәм башҡа халыҡтар менән дуҫлығы, башҡорттарҙың Совет власын нығытыу һәм социалистик йәмғиәт төҙөү өсөн көрәштә ҡатнашыуы лайыҡлы сағылыш тапты. 40-сы йылдарҙың аҙағында Әкрәм Вәлиҙең ауыл хужалығын коллективлаштырыу һәм башҡорт совет интеллигенцияһының формалашыуы тураһында һөйләүсе «Беренсе аҙымдар» һәм Сәғит Агиштың «Нигеҙ» романдары донъя күрҙе. Һ. Л. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» монументаль роман-эпопеяһы (1952) башҡорт әҙәбиәтендә айырым урын алып тора. Ул социаль дөйөмләштереү тәрәнлеге һәм юғары художество-психологик сифаттар менән айырылып торҙо һәм беҙҙең быуат башында башҡорт халҡының тормошон, уның революцияға барған тарихи юлын ышандырырлыҡ итеп сағылдырҙы.

З. А. Биишеваның «Кәмһетелгәндәр», «Оло Эйек буйында», «Емеш» романдарынан торған «Яҡтыға» трилогияһы һуғыштан һуңғы прозаның оло ҡаҙанышы, тотош башҡорт әҙәбиәтенең этаплы әҫәре булды. Был киң эпик әҫәр Башҡортостанда Совет власын урынлаштырыу өсөн героик көрәште, социалистик төҙөлөштөң ленинсы планын тормошҡа ашырыуҙың тәүге аҙымдарын дөрөҫ һүрәтләй.



Сәйфи Ҡудаш.

Ф. Ә. Иҫәнғоловтың «Арыш башағы» романы (1969) юғары баһаға лайыҡ булды. Унда партиялы ялҡынлылыҡ һәм юғары художестволы көс менән граждандар һуғышы йылдарында башҡорт ауылының реаль күренештәре, ундағы синфи көрәштең көсөргәнешлелеге күҙ алдына баҫтырыла. Ҡ. Мәргәндең «Бөркөт ҡанаты» романы край тарихындағы бик мөһим ваҡиғаға — башҡорт халҡының үҙ ирке менән рус дәүләтенә ҡушылыуына арналған. Ғ. Ғ. Ибраһимовтың «Кинйә» романы башҡорт хеҙмәтсән массаларының 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышында ҡатнашыуы, Е. И. Пугачевтың яҡын көрәштәше Кинйә Арыҫланов тураһында һөйләй.

Тарихи, революцион тематика поэзияла ла яҡты сағылыш тапты. В. И. Лениндың Өфөлә булыуы менән бәйләнгән ваҡиғаларға Рәшит Ниғмәтиҙең «Осҡондан ялҡын», Муса Ғәлиҙең «Ағиҙел йыры», Ҡадир Даяндың «Таң алдынан» поэмалары бағышланған. Юлбашсының образы революцион алыштар һәм Башҡортостан хеҙмәтсәндәре яҙмышында булып үткән бәхетле үҙгәрештәр фонында һүрәтләнә. Был әҫәрҙәр башҡорт поэтик Лениниананың төп фондына инде.

М. Сөндөклөнөң Өфөнөң эшсе-революционеры Иван Якутов һәм Ғ. Й. Рамазановтың Шәһит Хоҙайбирҙин тураһындағы поэмалары биттәрендә беҙҙең алдыбыҙға ғәйрәтле көрәшселәр килеп баҫа. Юденич бандаларынан Петроградты һаҡлау героикаһы Ғәйнан Әмириҙең «Толпарҙар» поэмаһында художестволы кәүҙәләнеш тапты.

Әҙәбиәттә хәҙерге тема, тыныс ижади хеҙмәтте, яңы кешенең формалашыуын күрһәтеү маҡтаулы урынды алды. Был проблематика ауыл хужалығы тураһындағы әҫәрҙәрҙә тулыраҡ күрһәтелә. Әкрәм Вәлиҙең «Май ямғыры» романы 50-се йылдарҙың тәүге яртыһында ауыл хужалығын күтәреү буйынса партия ҡуйған бурыстарҙы тормошҡа ашырыуға арналған. Х. Ғ. Ғиләжев «Погонһыҙ һалдаттар» исемле популяр романында шул осорҙағы ауыл тормошо тураһында ҡатмарлы мәсьәләләрҙән ситкә китмәйенсә һөйләп бирә. Ғ. Ғ. Ибраһимовтың совет крәҫтиәндәре һәм нығый барыусы дуҫлыҡ тураһындағы «Умырзая» романы ҡыҙыҡлы. Хәҙерге ауылдың проблемалары башҡа авторҙарҙың күп кенә повестарында күтәрелә.

Әҙәбиәтселәр ҡаланың һәм республиканың индустриаль үҫешендә, хәҙерге эшселәр синыфында барған ғәйәт ҙур үҙгәрештәргә һаман активыраҡ яуап бирә. Был темаға арналған әҫәрҙәр араһында Ә. Һ. Бикчәнтәевтең «Ожмах вәғәҙә итмәйем» романы (1963) бар.

Ул нефть химияһы комбинаттарының береһе материалында яҙылған. Ә. М. Мирзаһитов «Күршеләр» пьесаһында эшсе кешенең намыҫы, коллективтағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр тураһында яҙҙы. Р. Ғ. Солтангәрәев «Йылы ямғыр» повесында башҡорт нефтселәренең ауыр хеҙмәтен дөрөҫ итеп күрһәтте. Шулай уҡ К. Мәргән, Н. В. Асанбаев һәм башҡалар эшселәр тормошоноң төрлө яҡтарына үҙҙәренең әҫәрҙәрен арнанылар. Һуғыштан һуңғы әҙәбиәт промышленность эшсәндәренең образдарын тулыраҡ һүрәтләү менән характерлана. Ләкин тотош алғанда ҡала тематикаһын асыу ауыл тормошон күрһәтеүҙән артта ҡала әле.

Һуңғы йылдарҙа нық үҫкән социалистик йәмғиәттең актуаль проблемалары һәм ҡатмарлы процестары башҡорт яҙыусыларының ентекле иғтибарын йәлеп итте. Прозала һәм шиғырҙарҙа социаль, әхлаҡи-философик, этик сюжеттар эшкәртелде. Бындай йүнәлеш, мәҫәлән, М. Кәримдең «Йылғалар һөйләшә», «Йылдар эҙенән», Н. Нәжмиҙең «Тынлыҡҡа ҡолаҡ һалып», «Дуҫты саҡырыу», Р. Ә. Сафиндың «Һоҡланыу» поэтик йыйынтыҡтарына, Ә. Ҡ. Атнабаевтың «Замандашым» поэмаһына, Х. Ғ. Ғиләжевтең «Минең ырыуым» шиғырҙар циклына характерлы. Был планда М. Кәримдең «Оҙонօҙаҡ бала саҡ» повесы нық айырылып тора. Ул беҙҙең йәмғиәттең тарихи аҙымдарын, донъяны үҙгәртеүсе кешенең үҫеүен сағылдыра, әҫәр дөйөмләштереү тәрәнлеге, шул уҡ ваҡытта романтик күтәренкелек, лиризм менән иғтибарҙы тарта.

Бер үк ваҡытта хеҙмәт, тыныслыҡ һәм халыҡтар дуҫлығы темалары, героик-патриотик тема артабан үҫеш алды һәм байыҡты. Совет халҡының коммунизм төҙөүҙәге уңыштары, Тыуған илгә, Коммунистар партияһына тоғролоғо тураһында күп әҫәрҙәр баҫылды. Ҡала шағирҙарының лирик палитраһы ғәҙәттән тыш бай. Тыуған Башҡортостанға, уның баш ҡалаһы Өфөгә илһамлы юлдар арналған. Өфө тураһында Әкрәм Вәли былай тип яҙҙы:

Тик һаман да минең күңелемдә
Тәү һөйләшкән тыуған тел кеүек,
Тыуған ҡалам килде хәтеремә,
Онотолмай торған йыр кеүек.

Башҡорт әҙәбиәте үҙенең уңыштары менән бөтә Союзда һәм халыҡ-ара аренала танылды. Уның иң яҡшы әҫәрҙәре күп милләтле совет әҙәбиәтендә һиҙелерлек урын алды. Үҙәк нәшриәттәрҙә йыл һайын башҡорт авторҙарының тиҫтәләгән китаптары сыға. Улар СССР халыҡтарының 40 телендә һәм сит илдәрҙә 19 телдә баҫылды. Башҡорт драматургтарының иң яҡшы пьесаларын илебеҙҙең 100-ҙән ашыу театры ҡуйҙы.

Башҡорт яҙыусыларын Советтар Союзының төрлө ҡалалары һәм республикаларының, сит илдәрҙең йәмәғәтселеге күп тапҡыр ҡабул итте. 1950 йылда улар ҡатнашлығында Мәскәүҙә башҡорт поэзияһы аҙналығы үтте. 1955 йылда баш ҡалала башҡорт әҙәбиәте һәм сән-

З. А. Биишева.



гәте ун көнлөгө булды. Өфөнән һүҙ оҫталарының ҙур төркөмө Ҡазанда (1961), Ленинградта (1969), Ульяновскиҙа (1970), Украиналa (1970, 1978), Ҡаҙағстанда һәм Ҡарағалпаҡстанда (1976) башҡорт әҙәбиәте, культураһы аҙналыҡтарын һәм көндәрен үткәреүҙә ҡатнашты. Улар Сыуашстанда, Якутияла һ. б. ҡунаҡта булдылар. Башҡорт АССР-ының яҙыусылар ойошмаһы вәкилдәре дөйөм союз күләмендә үткәрелгән әҙәби сараларҙа ҡатнашыуға ылыҡтырылды. Ә. Мирзаһитов СССР Яҙыусылар союзы идараһының секретары, М. Кәрим Россия Федерацияһы Яҙыусылар союзы идараһының секретары, булып торалар.

Иң күренекле яҙыусыларҙың хеҙмәттәре юғары баһаланды. Р. Ниғмәтигә, М. Кәримгә, С. Ҡудашҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме бирелде. Күп әҙәбиәтселәр хөкүмәт наградаларына лайыҡ булды. 25 шағир һәм яҙыусыға Салауат Юлаев исемендәге һәм Ғ. Сәләм исемендәге республика премиялары бирелде. Мостай Кәримгә 1972 йылғы СССР Дәүләт премияһын һәм 1979 йылда совет әҙәбиәте өлкәһендәге күренекле хеҙмәттәре өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән юғары исемде биреү бөтә башҡорт әҙәбиәте һәм культураһы өсөн ҙур, шатлыҡлы ваҡиғалар булды. Танылған һүҙ оҫтаһы шулай уҡ балаларға һәм йәштәргә арналған әҫәрҙәре өсөн ЮНЕСКО-ның махсус жюрийы тарафынан Андерсен исемендәге Халыҡ-ара премия менән билдәләнде; уға РСФСР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре тигән почетлы исем бирелде. 1982 йылда Назар Нәжми М. Горький исемендәге РСФСР Дәүләт премияһы лауреаты булды.

Өфө тарихының һуғыштан һуңғы осоронда сәнғәттең башҡа төрҙәрендә лә байтаҡ рухи байлыҡтар тыуҙырылды.

Ҡала театрҙары ҙур эҙләнеүҙәр һәм ижади үҫеш юлы үтте. 40-сы йылдар уртаһында улар үҙ эшендә, барыһынан элек репертуарҙы тулыландырыуҙа, етди ҡыйынлыҡтар кисерҙе. Ул саҡта башлыса революцияға тиклемге тормошто һүрәтләгән пьесалар ҡуйылды. Хәҙерге заман темаларына яҙылған әҫәрҙәр аҙ ине, улары ла һәр саҡ юғары художество сифаттары менән айырылып торманы.

Театр коллективтарының эшмәкәрлеге КПСС-тың Өлкә Комитеты һәм ҡала комитеты тарафынан бер нисә тапҡыр ентекләп ҡаралды. Һөҙөмтәлә хәл яҡшыға табан үҙгәрә башланы. 1945—1955 йылдарҙа урындағы авторҙар 80-гә яҡын сәхнә әҫәре яҙҙы. Ҡала театрҙары, байтаҡ киң һайлау мөмкинлеге алып, репертуарҙарын ныҡ

үҙгәрттеләр. Уларҙа совет йәмғиәтенең тормошо, революцион үткән тормош төп урынды алып торҙо. 50-се йылдар башында инде Башҡорт дәүләт академия драма театрында эшселәр синыфы, колхоз крәҫтиәндәре тураһында бер нисә пьеса барҙы. Мостай Кәрим драмаһы буйынса Рифғәт Фәйзи ҡуйған «Яңғыҙ ҡайын» спектакле өфөләр тарафынан айырыуса ныҡ тапылды.

З. Ғ. Исмәғилев.



Артабан театр репертуарының тематик йүнәлеше киңәйә. Күп спектаклдәр тамашасыларҙы хәҙерге замандың йәнле тойоу, дөрөҫлөк менән шатландырҙы, ҡатмарлы әхлаҡи проблемаларҙы күтәрҙе. Бер нисә уңышлы сәхнә әҫәре һуғыш йылдарының героик пафосын сағылдырҙы, совет кешеләренең юғары патриотизмын һәм батырлыҡтарын данланы.

Коллективтың социаль-көнкүреш темаларына яҙылған пьесаларға мөрәжәғәт итеүе бик һөҙөмтәле булды. Хатта күптән үткән ваҡиғаларҙы күрһәтеп тә, театр хәҙерге көндәргә ауаздаш булған проблемаларҙы күтәрергә, кешеләрҙең фекеренә һәм тойғоларына актив йоғонто яһарға тырышты. Был планда М. Кәримдең «Ай тотолған төндә» пьесаһын ҡуйыу (1964) ҙур ижади ҡаҙаныш булды. Спектаклдең режиссеры Ш. М. Мортазина, төп ролде башҡарыусы З. И. Бикбулатова, рәссамы Ғ. Ш. Имашева, шулай уҡ пьесаның авторы К. С. Станиславский исемендәге РСФСР Дәүләт премияһына лайыҡ булдылар. Тамашасылар ҡайһы бер комедияларҙы, мәҫәлән, И. Ә. Абдуллиндың «Тиле йәшлек» һәм «Их, Өфө ҡыҙҙары!» спектаклдәрен йылы ҡаршыланылар.

Театрҙың тырышлығы һөҙөмтәһендә башҡорт сәхнәһендә Тыуған илебеҙ һәм донъя классикаһының иң яҡшы өлгөләре ҡуйылды. В. Шекспирҙың «Отелло», А. П. Чеховтың «Ваня ағай», Ф. Вольтерҙың «Мағомет» спектаклдәре хәтерҙә оҙаҡ һаҡлана.

60-сы йылдарҙа Башҡорт драма театры Н. Ф. Погодиндың «Мылтыҡлы кеше» һәм «Өсөнсө патетик» пьесаларын ҡуйҙы. Режиссер В. Ғ. Ғәлимов, В. И. Ленин ролен башҡарыусы А. Ҡ. Мөбәрәков яуаплы бурысты уңышлы үтәп сыҡтылар. Юлбашсы образын тыуҙырыу театрҙың идея-политик өлгөргәнлеген, актерҙарҙың юғары башҡарыу оҫталығын күрһәтте. Башҡорт драматургтары менән ижади дуҫлыҡ нығыны, быным һөҙөмтәһендә Ә. Ҡ. Атнабаевтың »Ул ҡайтты», Ә. Мирзаһитовтың «Әсәләр көтәләр улдарын», Н. В. Асанбаевтың «Аҡ сирендәр», М. Кәримдең «Ташлама утты, Прометей!» кеүек оригиналь постановкалар йыл һайын сығып торҙо. Һуңғы

З. И. Бикбулатова.



спектакль 1978 йылда Ленинградта Бөтә Россия милли драматургия фестивалендә I дәрәжә Дипломға лайыҡ булды.

Тотош алғанда театрҙың репертуары тематика һәм жанрҙарҙың төрлөлөгө, тормош күренештәрен киң һүрәтләү менән айырылып торҙо. Коллективтың профессиональ культураһы үҫте, спектаклдәрҙең режиссураһы һәм художество биҙәкләнеше яҡшырҙы. Быларҙың һәммәһе бергә театрға хаҡлы популярлыҡ килтерҙе һәм уны ҡалала халыҡ иң күп йөрөгән театрға әүерелдерҙе.

1970 йылда Өфө йәмәғәтселеге Башҡорт академия драма театрының 50 йыллығын билдәләне. Ул Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланды. Шул уҡ ваҡыттан алып театр башҡорт әҙәбиәте классигы Мәжит Ғафуриҙың исемен йөрөтә. Ҡаланың өлкән театр коллективында бына тигән күп сәхнә оҫталары үҫеп сыҡты. Өфөләр А. Ҡ. Мөбәрәковҡа һәм З. И. Бикбулатоваға СССР-ҙың халыҡ артисы тигән почетлы исем бирелеү менән ғорурланалар. Труппаның 30-ға яҡын ағзаһы, шул иҫәптән Р. С. Сыртланов, Ғ. М. Туҡаев, Р. С. Янбулатова, Х. И. Ҡудашев, Д. З. Фәйзуллина, Г. А. Мөбәрәкова, И. Х. Йомағолов, Ш. Р. Рәхмәтуллин, З. Ҡ. Атнабаева һәм башҡалар РСФСР-ҙың һәм БАССР-ҙың халыҡ һәм атҡаҙанған артистары исемен алдылар.

Үҙенең 60 йыллыҡ юбилейын Башҡорт академия драма театры илебеҙҙең иң ҙур һәм ҡыҙыҡлы милли театраль коллективы булып ҡаршыланы. Яҡшы традицияларҙы һаҡлап һәм уларға таянып, театр арыу-талыуһыҙ ижади эҙләнеүҙәрҙе дауам итә.

Республика рус драма театры һуғыштан һуңғы тәүге йылдарҙа етди ҡыйынлыҡтар кисерҙе. Иң төп мәсьәләләрҙе — бина, репертуар, кадрҙар тураһындағы мәсьәләләрҙе — хәл итергә кәрәк ине. Партия һәм совет органдарының даими ярҙамы менән етешһеҙлектәр аҡрынлап еңеп сығылды. Театрҙың эшмәкәрлеге һиҙелерлек яҡшырҙы. Коллектив күп кенә ҡыҙыҡлы, хәтерҙә ҡалырлыҡ спектаклдәр тыуҙырҙы. 40-сы йылдар аҙағында һәм 50-се йылдарҙың тәүге яртыһында К. М. Симоновтың «Рус мәсьәләһе», К. А. Треневтың «Любовь Яровая»һы, шулай уҡ Э. Л. Войничтың «Күгәүен», Л. Н. Толстойҙың «Анна Каренина», В. Шекспирҙың «Король Лир» кеүек классик

әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған спектаклдәр улар араһында иң яҡшылары булды.

1955 йылда театр Н. Ф. Погодиндың «Кремль куранттары» пьесаһын яңы вариантта ҡуйҙы. В. И. Ленин ролен РСФСР-ҙың халыҡ артисы М. Л. Кондратьев талантлы уйнаны. Бынан һуң ул юлбашсының ролен билдәле «Дошман өйөрмәләре», «Ленин путевкаһы буйынса», «Улар беренселәр булды» фильмдарында уйнаны. Актер образдың ныҡ ышандырырлыҡ һәм тәьҫирле булыуына өлгәшә алды.

А. Ҡ. Мөбәрәков.



50-се йылдар аҙағында һәм 60-сы йылдар башында коллектив тағы бер нисә тапҡыр рус классикаһына мөрәжәғәт итте. Ләкин, ваҡыт үтеү менән, беҙҙең совет ысынбарлығын сағылдырған әҫәрҙәргә һаман күберәк иғтибар бирелде. Театр динамикалы, тамашасыны тулҡынландырырлыҡ спектаклдәр тыуҙырырға ынтылды. А. Н. Арбузовтың «Иркутск тарихы», А. Б. Чайковскийҙың «Алыҫтағы йондоҙ яҡтыһы», Э. С. Радзинскийҙың «Мөхәббәт тураһында 104 бит» әҫәрҙәре ҡуйыла. Был һәм башҡа күп пьесаларҙа кешеләр араһындағы ҡатмарлы мөнәсәбәттәр аша хәҙерге тормош мәсьәләләре ҡарала, уларҙың геройҙары — беҙҙең замандаштар. Ошо уҡ линия театр ҡуйған күп кенә яңы спектаклдәрҙә үҫтерелә (Э. А. Рязанов менән Э. В. Брагинскийҙың «Хеҙмәттәштәр», Н. А. Мирошниченконың «Аҡ кошто һаҡлағыҙ!», А. Н. Арбузовтың «Мәрхәмәтһеҙ уйындар», Н. В. Думбадзеның «Борсолма, әсәй!» әҫәрҙәре һәм башҡалар).

Артистарҙың художество оҫталығының үҫеүенә Башҡорт академия драма театры менән ижади хеҙмәттәшлек булышлыҡ итте. 1957 йылда күренекле башҡорт сәхнә оҫталары ярҙамында Ҡ. Даяндың «Таңсулпан» пьесаһы ҡуйыла. Унан һуңғы йылдарҙа С. М. Мифтаховтың «Зимагорҙар», Ә. М. Мирзаһитовтың «Ауыл күренештәре», Х. Ғ. Ғиләжевтең «Ил балаһы» әҫәрҙәре тамашасыларға күрһәтелде.

В. И. Лениндың тыуыуына 110 йыл тулыуҙы коллектив премьера — совет драматургияһы Ленинианаһының иң яҡшы әҫәрҙәренең береһе — М. Ф. Шатровтың «Алтынсы июль» пьесаһы буйынса ҡуйылған спектакль менән ҡаршыланы.

Һуңғы йылдарҙа Республика рус драма театры репертуарҙы камиллаштырыу, спектаклдәрҙең идея-художество кимәлен күтәреү өҫтөндә ныҡышмалы эшләүҙе дауам итте. Был бурыстарҙы хәл итеү өҫтөндә баш режиссер Ғ. Ғ. Ғиләжев, коллективтың ветерандары

Башҡорт дәүләт академия драма театры. «Зимагорҙар» спектакленән күреныш.



Л. А. Бенин, В. Б. Бенифанд, В. В. Прибылов, Р. И. Байкова, Н. М. Дроздов һәм башҡалар эшләнеләр. Совет театр сәнғәтен үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн театр 1981 йылда Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланды.

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының эшмәкәрлеге етди ҡаҙаныштар менән билдәләнде. Уның спектаклдәрен миллионлаған тамашасы ҡараны. Репертуарҙы даими яңыртыу, режиссураны яҡшыртыу, актерҙарҙың оҫталығының күтәрелеүе театрға танылыу алып килде. Ҡайһы бер спектаклдәр берҙәй уңыш менән 200 тапҡыр һәм унан да күберәк күрһәтелде. 1976 йылда театр яңы бина алды, даими сәхнәгә эйә булды. Уның ҙур ижади биографияһында яңы осор башланды. Иң яҡшы эштәр (И. В. Штоктың «Илаһи комедияһы», С. Айтматов әҫәре буйынса ҡуйылған «Аҡ пароход» спектакле һәм башҡалар) тамашасыларҙың, театр йәмәғәтселегенең юғары баһаһына лайыҡ булды. Өфө ҡурсаҡ театры актерҙары 1979 йылда Азия илдәре ҡурсаҡ театрҙарының халыҡ-ара фестивале дипломдарын яулап алдылар. Улар унда Россия Федерацияһы исеменән сығыш яһанылар.

Милли башҡорт циркының тыуыуы ҡаланың культура тормошонда ҙур ваҡиға булды. Уның беренсе сығышы 1973 йылдың сентябрендә булды. Йәш талантлы коллектив күп кенә оригиналь, үҙенсәлекле номерҙар индерелгән «Сәскә ат, Башҡортостан!» тигән сағыу байрам программаһын күрһәтте. Өфө аренаһында сығыш яһағандан һуң,

цирк аншлаг менән илебеҙҙең күп ҡалаларында тәүге сығыштарын яһаны, ә «Бөрйән айыуҙары» тигән ҙур аттракцион сит илдә, атап әйткәндә Парижда, гастролдә булды. Үҙ сиратында офоләр совет һәм сит ил циркының күренекле артистары менән киң танышыу мөмкинлеге алдылар.

Һуғыштан һуңғы осорҙа профессиональ музыка сәнғәте үҫәге буларaҡ Өфөнөң роле ҡырҡа артты. Быға барыһынан элек башҡорт композиторҙарының ижади активлығының күтәрелеүе булышлыҡ итте. Улар күп төрлө жанрҙарҙа хәҙерге заман әҫәрҙәре тыуҙырыу һәм темаларҙы киңәйтеү өҫтөндә уңышлы эшләнеләр, музыкаль тәьҫирлелектең яңы сараларын эҙләнеләр. Ҙур әҫәрҙәр — опералар, балеттар, симфониялар, ораториялар, кантаталар йышыраҡ күренә башланы.

Был һөҙөмтәле үҙгәрештәрҙең башланғысы 40-сы йылдарҙа һәм 50-се йылдарҙың тәүге яртыһында һалынғайны. Ләкин ул йылдарҙағы ҡайһы бер әҫәрҙәр тәрәнлек яғынан аҡһанылар. Опера һәм балет театры репертуарында милли тематика етерлек булманы.

Башҡортостан хеҙмәтсәндәре тормошондағы мөһим ваҡиғаларҙы сағылдырыусы монументаль, күләмле сәхнә әҫәрҙәре тыуҙырыу кәрәклеге ныҡ һиҙелә ине. Был мәсьәләне хәл итеүгә композитор З. Ғ. Исмәғилев ҙур өлөш индерҙе. 1954 йылда ул милли музыка культураһы тарихында иҫтәлекле ваҡиға булып әүерелгән героик-эпик «Салауат Юлаев» операһын тамамланы. Ул теманың тәрән асылыуы, реалистик йүнәлтелгәнлек, драматургик төҙөлөштөң аныҡлығы, ҙур эске көскә эйә булған моң менән айырылып тора. Талантлы композитор тағы ла күп кенә гүзәл әҫәрҙәр ижад итте. Дәрт, шатлыҡ менән тулы «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһы, тарихи сюжетҡа ҡоролған «Шәүрә», «Урал илселәре» һәм хәҙерге заман темаһына яҙылған «Ағиҙел тулҡындары» опералары шулар иҫәбенә инә. Һуңғыһы өсөн З. Ғ. Исмәғилевкә М. И. Глинка исемендәге РСФСР Дәүләт премияһы бирелде. 1982 йылда композиторға СССР-ҙың халыҡ артисы тигән почетлы исем бирелде.

Хәҙерге заман тематикаһы башҡа авторҙар тарафынан да уңышлы эшләнде. Был пландағы иң яҡшы әҫәрҙәрҙең береһе — Х. Ф. Әхмәтовтың «Замандаштар» операһы (1970). Уның геройҙары башҡорт нефтен башлап асыусылар, йәштәр. Опера үҙенсәлекле моңло теле, образдарҙың ышандырырлыҡ итеп асып бирелеүе менән һоҡландыра. Р. Ә. Мортазиндың Башҡортостанда Совет властын урынлаштырыу тураһындағы «Дауыл» операһы музыка белгестәре һәм музыка һөйөүселәр тарафынан юғары баһаланды.

Балет музыкаһы үҫешендә лә сифат яғынан мөһим үҙгәрештәр булды. Үҙен сәхнә һәм музыкаль драматургия закондарының оҫта белгесе итеп күрһәткән композитор Н. Ғ. Сабитов был жанрҙа бик күп эшләне. Үҙенең беренсе «Тау бөркөтө» балетын ул 1954 йылда Х. Ф. Әхмәтов менән берлектә яҙҙы. Артабан уның тарафынан «Гөлнәзирә», «Буратино», «Яратам һине, тормош» һәм, аҙаҡ килеп,

Н. Ғ. Сабитов.



«Айгөл иле» тыуҙырылды. Был балеттың нәфис музыкаһы башҡорт йырҙары интонацияһына яҡын, шул уҡ ваҡытта ритмдары, оригиналь оркестровкаһы буйынса заманса яңғырай.

Симфоник һәм камерный музыка өлкәһендә ҡаҙаныштар иғтибарға лайыҡлы, бында Р. Ә. Мортазин һәм З. Ғ. Исмәғилев үҙҙәрен айырыуса күрһәттеләр. Композиторҙар З. Ғ. Исмәғилев, Х. Ф. Әхмәтов, М. М. Вәлиев, Т. Ш. Кәримов, Ш. Ш. Ибраһимов, К. Й. Рәхимов, Р. В. Сәлмәнов, Ш. З. Кульбарисов һәм башҡалар күп гүзәл йырҙар һәм романстар ижад иттеләр. Уларҙа Тыуған илгә, партияға һәм халыҡҡа мөхәббәт йырлана, һуғыштағы батырлыҡ һәм хеҙмәт героикаһы данлана.

Һуңғы йылдарҙа композиторҙарҙың күпселегенең хор жанры менән ҡыҙыҡһыныуы артты. З. Ғ. Исмәғилевтең «Ленин», «Ленинға дан йырлайбыҙ», «Мин — россиянмын» кантаталары, А. Матросов менән М. Ғөбәйҙуллиндың геройҙарса батырлығына арналған «Үлемһеҙлек» вокаль-симфоник поэмаһы, Х. Ф. Әхмәтовтың юғары граждандыҡ һәм патриотизм менән айырылып торған «Лениниана», «Бөйөк Ватан һуғышы геройҙарына» исемле хор циклдары, Р. М. Хәсәновтың «Минең шәжәрәм», Л. З. Исмәғилеваның «Үлемһеҙ шиғыр» ораториялары йәмәғәтселек тарафынан киң танылды.

Башҡорт музыкаһында инструменталь концерт жанры барлыҡҡа килде. Уның үҫеше Н. Ғ. Сабитовтың, Р. Х. Ғәзизовтың һәм башҡаларҙың ижады менән бәйләнгән.

Өфө композиторҙары етди ижади уңыштарға өлгәштеләр, музыка культураһын үҫтереүгә тос өлөш индерҙеләр. Башҡорт АССР-ы Композиторҙар союзы ағзаларының һаны 1968 йылдан алып 1976 йылға тиклем генә лә ике тапҡырға артты һәм 26 кешегә етте. Уларҙың составы Мәскәү һәм Ҡазан консерваторияларын тамамлаусылар иҫәбенә системалы рәүештә тулылана. 1973 йылда Өфө сәнғәт институтында әҙерләнгән композиторҙарҙың беренсе сығарылышы булды. Ҡаланың иң йәш вузы студенттарҙың яҡшы музыкаль әҙерлеге менән танылып та өлгөрҙө. Унда уҡыусылар ҙур халыҡ-ара конкурстарҙа бер нисә еңеүгә иреште.

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры ҡаланың музыкаль тормошо үҙәге булып ҡалыуын дауам итте. Ул башҡорт композиторҙа-

рының бөтә төп сәхнә әҫәрҙәрен ҡуйҙы, өфөләрҙе рус, совет һәм сит ил классикаһының алтын фондына ингән опералар һәм балеттар менән таныштырҙы.

50-се йылдарҙа уҡ инде коллектив башҡарыу оҫталығының юғары кимәленә өлгәште, ул 1955 йылда Мәскәүҙә башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте ун көнлөгөндә күренде. Башҡа спектаклдәр менән бергә театр баш ҡала тамашасыларына З. Ғ. Исмәғилевтең этаплы хеҙмәт булып киткән «Салауат Юлаев» операһын һәм Л. Б. Степановтың «Сыңрау торна» балетын күрһәтте. Унда Зәйтүнгөл ролендә ун көнлөккә бәйләнешле рәүештә СССР-ҙың халыҡ артисткаһы исемен алған З. Ә. Насретдинова бик яҡшы сығыш яһаны. «Правда» газетаһы ул көндәрҙә былай тип яҙҙы: «Башҡорт балетының уңыштары ла шатлыҡлы. Ул республиканың күптән түгел генә барлыҡҡа килгән


З. Ә. Насретдинова.

бик йәш сәнғәте. Йәш булыуына ҡарамаҫтан, ул үҙенең профессиональ өлгөргәнлеге, ҙур художество ҡиммәте буйынса ниндәй ҙә булһа ташламаларға мохтаж түгел. Ике балет та — матур халыҡ риүәйәтен кәүҙәләндереүсе «Сыңрау торна» ла, бәләкәй генә испан ауылының ялҡынлы һәм батыр ҡыҙына бағышланған «Лауренсия» ла — башҡорт балеты артистарының, һис шикһеҙ, илдең иң яҡшы балет коллективтары рәтендә тороуын күрһәтте» [1].

Театр даими рәүештә постановкаларҙың йөкмәткеһен һәм формаһын камиллаштырҙы, репертуарҙы яңыртты. 50-се йылдар уртаһынан алып А. П. Бородиндың «Кенәз Игорь», М. И. Глинканың «Иван Сусанин», И. И. Дзержинскийҙың «Тымыҡ Дон», Т. Н. Хренниковтың «Дауылда» операларының, И. Штраустың «Зәңгәр Дунай», Ф. З. Яруллиндың «Шүрәле» балеттарының премьералары булды. Бынан һуңғы осорҙа репертуар урындағы композиторҙарҙың әҫәрҙәре иҫәбенә байтаҡ киңәйҙе. Коллективтың ҙур мөмкинлектәрен күрһәтеүсе шундай ҡыҙыҡлы постановкалар, мәҫәлән, С. В. Рахманиновтың «Алеко», Ж. Бизеның — Р. К. Щедриндың «Кармен-сюита» балеты, В. И. Мураделиҙың «Октябрь», Ю. С. Мейтустың «Рихард Зорге» опералары сәхнәгә ҡуйылды.

Театрҙың иң яҡшы әҫәрҙәре тормош талаптарына һәм тамашасыларҙың эстетик ихтыяждарына яуап бирҙеләр, уларҙы режиссураның матурлығы, етдилеге, әҫәрҙәрҙең юғары музыкаль кимәлдә бу-

[1] «Правда», 1955, 11 июнь.

Ф. В. Нафикова.



лыуы менән йәлеп иттеләр. Театрҙа ижади, инициативалы коллектив тупланды. Бында талантлы режиссерҙарҙың, дирижерҙарҙың һәм башҡарыусыларҙың тотош плеядаһы үҫеп сыҡты. Өлкән быуын вокалистары, РСФСР-ҙың халыҡ артистары Ғ. С. Хәбибуллин, Б. Н. Вәлиева, М. Х. Хисмәтуллин, М. Ғ. Сәлиғәскәрова менән бер рәттән Х. З. Мәжитов, З. Ғ. Мәхмүтов, Н. З. Әбдеев, Н. И. Бызина, И. Г. Ивашков, С. Ҡ. Ғәлимова, Н. Х. Аллаярова һәм башҡалар уңышлы сығыш яһай башланылар. Башҡорт балетының юлы З. Ә. Насретдинованың, Т. Ш. Хоҙайбирҙинаның, Г. Ғ. Сөләймәнованың, Ф. В. Нафикованың, М. А. Таһированың, Л. С. Ҡыуатованың, Х. Ғ. Сафиуллиндың, Ф. М. Саттаровтың исемдәре менән айырылғыһыҙ бәйләнгән.

Музыкаль культураны үҫтереүҙә һәм пропагандалауҙа Башҡорт дәүләт филармонияһы мөһим роль уйнай. Уның составында ҡаланың һәм республиканың иң популяр художество коллективтарының береһе — Башҡорт АССР-ы халыҡ бейеүҙәре ансамбле эшләй. Уға күп йылдар буйына РСФСР-ҙың atҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Фәйзи Ғәскәров етәкселек итте. Тамашасыларҙы ансамблдең һәр ваҡыт башҡорт бейеү фольклоры традицияларына тоғролоғо, профессиональ оҫталығы, костюмдарының матурлығы йәлеп итә. Уның сығыштары һәр саҡ күтәренке, байрамса шарттарҙа үтә.

1969 йылда филармония эргәһендә дәүләт хор капеллаһын ойоштороу менән Өфөнөң музыкаль тормошо һиҙелерлек байыҡты. Ул башҡорт профессиональ музыкаһының элек булмаған хор традицияларын формалаштырыуҙа алға табан ҙур аҙым булды. Капелланың күп төрлө программаһы музыка йәмәғәтселеге тарафынан хуплап ҡаршы алына. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә капелла ижади өлгөргәнлек осорона өлгәште, Россия Федерацияһының танылған хор коллективтары менән бер рәткә баҫты. 1973 йылда ҡалала тәү тапҡыр филармонияның һәм сәнғәт институтының симфоник оркестры ойошторолдо.

Филармонияның концерт эшмәкәрлеге киң билдәле, уның артистары көсө менән 1979 йылда ғына 5 меңдән ашыу концерт бирелде һәм 1,3 миллион тамашасы хеҙмәтләндерелде. Баш ҡалала һәм бөтә республикала солистар Ф. Я. Ҡудашеваны, Р. Ф. Йәнбәковты, И. М. Смаковты һәм башҡаларҙы йылы ҡаршыланылар. Тематикаһы ҡала халҡының киң ҡатламдарына тәғәйенләнгән музыкаль-әҙәби

лекторий ойошторолған. Йәй осоронда баҡсаларҙа һәм парктарҙа музыка һәм йыр байрамдары үткәрелә. Композиторҙарҙың ижади кисәләре, танылған музыканттар менән осрашыуҙар традицияға әүерелде.

Шуның менән бергә филармония Өфөлә даими рәүештә совет, шулай уҡ сит илдәрҙең иң танылған ансамблдәренең һәм айырым йырсыларының, музыканттарының гастролдәрен ойошторҙо.

Үҙ сиратында Советтар Союзының күп кенә ҙур ҡалаларында Өфө артистарын йылы ҡаршыланылар. Башҡорт драма театры Урта Азия һәм Волга буйы республикаларында, Себерҙә һәм Уралда гастролдәрҙә булды, үҙенең иң яҡшы эштәрен мәскәүҙәргә һәм ленинградтарға күрһәтте. Опера һәм балет, рус драма театрҙары күп ерҙәрҙә булды.

Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры. «Сыңрау торна» балетынан күренеш. Зәйтүнгөл — РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы Г. Сөләймәнова. Йомағол — РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Ф. Саттаров.



Сәхнә оҫталарының сит илдәрҙә күп тапҡыр сығыш яһауҙары һуғыштан һуңғы осорҙоң күренеп торған үҙенсәлеге, уларҙың юғары профессиональ өлгөргәнлегенең күрһәткесе булып тора. Балет труппаһының танылған солистары бер нисә тапҡыр һәм даими уңыш менән яуаплы гастролдәрҙә булдылар. Башҡорт халыҡ бейеүҙәре ансамбленә Европаның, Азияның һәм Африканың 40 дәүләтендә ҡайнар алҡышланылар.

Һынлы сәнғәт үҙәге булараҡ та, Өфөнөң әһәмиәте тайпылышһыҙ артты. Уның бөтә төрҙәре һәм барыһынан элек живопись актив үҫте. 40-сы йылдарҙың икенсе яртыһында урындағы рәссамдарҙың ижадында һуғыш темаһы ныҡ айырылып торҙо. Советтар Союзы Геройҙарының портреттар серияһы тыуҙырыла. Р. У. Ишбулатовтың «Өфөлә еңеү байрамы» тигән картинаһы ҙур популярлыҡ ҡаҙанды. Һуңынан Ә. Ф. Лотфуллин ауыр һуғыш осорона үҙенең «Хушлашыу», «Көтөү. 1941» тигән иң яҡшы әҫәрҙәрен бағышланы. Күп кенә живописецтар тарихи-революцион материал өҫтөндә лә эшләне. Улар Ленин образын айырыуса йылылыҡ менән һүрәтләнеләр. 50—60-сы йылдарҙа тыуҙырылған бер нисә полотнола юлбашсының Өфөлә булыуының төрлө моменттары кәүҙәләндерелә. Б. Д. Ежовтың «Россия тураһында уйҙар», «В. И. Ленин Өфөлә», В. А. Поздновтың «В. И. Ленин һәм Н. К. Крупская Өфөлә» картиналары иң ҡыҙыҡ-

лылар. И. И. Урядовтың, К. И. Герасимовтың, А. Э. Тюлькиндың, Б. Я. Палеханың эштәре лә ошо уҡ сюжетҡа арналған.

Ҡала рәссамдарын Салауат Юлаев образы йәләп итте. Ул А. А. Кузнецовтың «Салауаттан һорау алыу» тигән полотноһында монументаль дөйөмләштереү тапты. Тарихи картиналарҙан Р. М. Нурмөхәмәтовтың «Шәриғәт ҡорбандары» полотноһы ла айырыуса эмоциональ йоғонто көсө менән айырылып тора. Автор замандың ҡараңғылығы, дин менән ағыуланған кешеләрҙең мәрхәмәтһеҙлеген оҫта күрһәтеп бирә.

Һуңғы осорҙоң һынлы сәнғәтендә совет ысынбарлығын күрһәтеү үҙәк урынды алып тора. Живопись оҫталары, иң мөһим ваҡиғаларға һәм күренештәргә йылдам яуап биреп, заман менән бергә атлайҙар. Башҡорт нефтенә эштәрҙең тотош серияһы арналған. Был тема В. П. Андреев тарафынан тәрән һәм һәр яҡлап асылған. Уның «Беренсе девон нефте», «Эстакада янында» картиналары билдәле. Ф. А. Кащеевтың Башҡортостан нефтселәре тормошон сағылдырған картиналары ҙур тәьҫир ҡалдыра. Хеҙмәт, Тыуған ил темалары Б. Ф. Домашников, А. В. Пантелеев һәм башҡа рәссамдарҙың полотноларында кәүҙәләнеш тапты.

Күп картиналар революцияға тиклемге һәм социалистик Өфөгә бағышланған. Иҫке ҡаланың төрлө күренештәре рәссамдар тарафынан В. И. Лениндың Өфөлә булыуы тураһындағы теманы эшләүгә бәйле рәүештә күрһәтелгән. А. Т. Платоновтың «Стачка. 1905 йыл» полотноһында ҡала тарихынан героик эпизод һүрәтләнгән. Башҡортостан баш ҡалаһы йөҙөнөң йылдам үҫеш, яңырыу һыҙаттары А. Э. Тюлькиндың «Өфө төҙөлә», А. В. Пантелеевтың «Өфө ТЭЦ-ы», П. П. Салмасовтың «Майҙа Өфө», А. Д. Бурзянцевтың «Өфө яңылығы» һәм башҡаларҙың эштәрендә кәүҙәләндерелгән.

Өфө рәссамдары, заман талаптарына яуап биреп, ҡаланы биҙәү эшенә ҙур өлөш индерҙеләр. Урамдарҙы, майҙандарҙы, йәмәғәт биналарын эстетик яҡтан биҙәүҙә яңы материалдар (мозаика) һәм прикладной сәнғәттең чеканка һәм керамика кеүек төрҙәре ҡулланылды. Оҫталар төркөмө тимер юл вокзалын, моторҙар эшләүселәр, резина-техник изделиелар заводы Культура һарайҙарын, циркты һәм башҡаларҙы комплекслы художестволы биҙәүҙе башҡарҙы. Өфөлә монументаль-декоратив сәнғәт тәү тапҡыр ошондай күләмдә һәм формала үҫте.

Рәссамдар менән тығыҙ дуҫлыҡта скульпторҙар эшләнеләр. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа ҡалапы Дуҫлыҡ монументы һәм башҡа күп кенә һәйкәлдәр биҙәне. Уларҙың иң мөһабәттәренең береһе — 1975 йылдың апрелендә асылған Октябрь революцияһы һәм граждандар һуғышы геройҙарына һәйкәл. Ул Өфө скульпторы Л. В. Кузнецов һәм А. В. Семенов проекты буйынса бронзанан Ленинград «Монумент-скульптура» заводында ҡойолдо. Өфө скульпторҙары замандаштарының, хеҙмәт кешеләренең — яңы йәмғиәт төҙөүселәрҙең күп һанлы образдарын тыуҙырҙылар. Иң яҡшы эштәр тәьҫирле худо-

жество формаһы һәм тәрән йөкмәткеле эҙләнеү менән айырылып торалар. Б. Д. Фузеевтың «Оператор», «Ҡыҙыл башҡорт», А. П. Шутовтың «Революционер Иван Якутов», З. Р. Басировтың «Комдив Бәхтизин», «Аппассионата» скульптуралары, Т. П. Нечаеваның керамикаһы. М. К. Якубовтың чеканкаһы ошо хаҡта һөйләй.

Театраль-декоратив сәнғәт ҙур уңыштарға өлгәште. Был өлкәлә Башҡорт академия драма театрының баш рәссамы Ғ. Ш. Имашеваның эшмәкәрлеген билдәләп үтергә кәрәк. Ул үҙенең тасуирлы, иллюстрациялауҙан азат булған алымын таба алды. Шуға күрә ул эшләгән һәр бер сәхнә биҙәүе тамашасыға драматургтың һәм режиссерҙың фекерен еткерергә ярҙам итеп кенә ҡалманы, бәлки спектаклде гүзәл ижади табыштар менән байыҡтырҙы, үҙ аллы художество ҡиммәтенә әүерелде. Опера һәм балет театрында икенсе үҙенсәлекле оҫта, республикала сценографияға нигеҙ һалыусы М. Н. Арсланов эшләй. Уның ижадына бай фантазия, декорациялар эшләүҙең күп төрлө алымдарын уңышлы ҡулланыу, ҙур эмоциональ йөкмәткеле көсө характерлы. Ошо уҡ жанрҙа В. П. Плекунов уңышлы эшләй.

Һуңғы ваҡытта промышленность һәм китап графикаһына һаман күберәк иғтибар бирелә. Графиктар Р. Ғ. Ғүмәровтың, Э. М. Сәитовтың, В. Д. Диановтың әҫәрҙәре республика хеҙмәтсәндәре тарафынан киң танылды.

Һуңғы йылдарҙа Башҡорт АССР-ы Художниктар союзының составы ныҡ үҙгәрҙе һәм тулыланды. 1980 йылда уның ағзаларының һаны 83-кә етте. Ҡаланың 30-ҙан ашыу рәссамының почетлы исемдәре бар, ә Ғ. Ш. Имашеваға, А. Э. Тюлькинға, Р. М. Нурмөхәмәтовҡа, М. Н. Арслановҡа — РСФСР-ҙың халыҡ рәссамы, ә Б. Ф. Домашниковҡа СССР-ҙың халыҡ рәссамы тигән юғары исем бирелде.

Ҡаланың художество тормошонда, һынлы сәнғәтте үҫтереүҙә төрлө күргәҙмәләр мөһим роль уйнаны. Уларҙың күбеһе илебеҙ һәм республикабыҙ тарихындағы юбилей даталарына арналды. Өфөнөң күренекле оҫталарының дөйөм күргәҙмәләре, йәш живописецтар әҫәрҙәренең күргәҙмәләре лә ойошторолдо. Унда рәссамдар бергәләп һәм айырым-айырым ижади отчет менән сығыш яһанылар, тамашасылар алдында һынау үттеләр. Бының менән бер рәттән урындағы рәссамдарҙың полотнолары бөтә иң ҙур — бөтә Союз, республика («Совет Россияһы») һәм зона («Социалистик Урал») күргәҙмәләрендә күрһәтелде.

1974 йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында беренсе тапҡыр үткәрелгән IV «Социалистик Урал» зона күргәҙмәһе Өфөнөң күп һанлы һынлы сәнғәт һөйөүселәре өсөн ҙур байрам булды. Экспозиция күп яҡлылыҡ һәм масштаблылыҡ менән айырылып торҙо. Унда 7 өлкәнән 320 авторҙың меңдән ашыу әҫәре күрһәтелде. Өфө оҫталары барыһынан да күберәк — 317 эш тәҡдим иттеләр. Иң яҡшы картиналар араһында Р. М. Нурмөхәмәтовтың («Алыҫ Төньяҡта» триптихы). Э. Ф. Лотфуллиндың, Б. Я. Палеханың («Быуат башы»), Ф. А. Кащеевтың, В. А. Поздновтың («Буровойға»), В. А. Руденчен-

коның полотнолары, Б. Ф. Домашниковтың — лирик һәм А. В. Пантелеевтың индустриаль пейзаждары билдәләнде. Күргәҙмә ҙур уңыш менән үтте.

Өфөнөң 400 йыллығына арналған Башҡортостан рәссамдары әҫәрҙәренең күргәҙмәһе бик ҡыҙыҡлы булды. Ул үҙенә төрлө быуын рәссамдары ижадының киң күрһәтелеүе һәм жанрҙар төрлөлөгө менән йәлеп итте, ҡала һынлы сәнғәт оҫталарының ижади диапазоны тураһында тулы күҙаллауҙар бирҙе.

Мәскәүҙә, Ленинградта, Ҡазанда, Горькийҙа Өфө рәссамдарының шәхси күргәҙмәләре үткәрелде. Уларҙың иң яҡшы әҫәрҙәре Польшала, Венгрияла, Германия Демократик Республикаһында, Чехословакияла, Румынияла, Кореяла, Вьетнамда, Англияла, Австрияла, Италияла булды.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа сәнғәт эшмәкәрҙәренең Өфө һәм республика хеҙмәтсәндәре менән бәйләнеше йылдам үҫте. Башҡортостандың ижади союздары ғына йыл һайын предприятиеларҙа һәм уҡыу йорттарында, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа йөҙәрләгән осрашыуҙар үткәрҙеләр. Ҡалаларҙа һәм райондарҙа әҙәбиәт һәм сәнғәт аҙналыҡтары, «Театраль яҙ» фестивалдәре традицияға әүерелде. Эшселәр һәм колхозсылар менән даими осрашыуҙар рухи ҡиммәттәр ижад итеүселәрҙең материаль байлыҡтар тыуҙырыусылар алдында үҙенсәлекле отчеттары булып әүерелде. Композиторҙар, артистар, рәссамдар халыҡ культура университеттары, лекторийҙар, халыҡ филармониялары һәм ижад йорттары, «Белем» йәмғиәте эшендә актив ҡатнаштылар. Бөтә Россия театр йәмғиәтенең Башҡортостан бүлексәһе. Башҡортостан хор йәмғиәте совет сәнғәтенең ҡаҙаныштарын актив пропагандаланы.

Өфө театрҙарының һәм филармонияның гастроль эшмәкәрлеге киң билдәле. Башҡорт академия драма театры 1979 йылда ғына республиканың 21 районында булды, 170 спектакль күрһәтте, уларҙы 73 мең кеше ҡараны. Ҡала артистары концерттар менән предприятиеларҙа, баҫыу стандарында һәм фермаларҙа концерттар менән сығыш яһанылар, тамашасылар конференциялары ойошторҙолар. Улар художестволы үҙешмәкәрлектә ҡатнашыусыларға ҙур шефлыҡ ярҙамы күрһәттеләр, агитбригадаларҙың программаларын төҙөүҙә һәм эшкәртеүҙә ярҙам иттеләр.

Рәссамдарҙың шефлыҡ ярҙамы киңәйҙе. Улар күп кенә Культура йорттарын, клубтарҙы, китапханаларҙы, мәктәптәрҙе биҙәнеләр, һынлы сәнғәт тураһында лекциялар уҡынылар, үҙешмәкәр рәссамдарға консультациялар бирҙеләр. Был күп төрлө саралар культура ҡиммәттәренең ҡала һәм республика халҡының иң киң ҡатламдарының көндәлек тормошона һаман тәрәнерәк инә барыуына булышлыҡ итте.

Өфөлә әҙәбиәт һәм театр тәнҡитселәренең, сәнғәт һәм музыка белгестәренең квалификациялы отряды барлыҡҡа килде. Улар тарафынан башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәтенең үҫеш мәсьәләләре буйынса етди ғилми хеҙмәттәр барлыҡҡа килтерелде. Улар көндәлек театр

һәм музыка тормошонда, йәпле әҙәби процеста һаман активыраҡ ҡатнашалар.

40-сы йылдар уртаһынан алып 80-се йылдар башына тиклемге осор Өфөнөң ижади тормошонда гүзәл ҡаҙаныштар менән билдәләнде. Улар Башҡортостан культураһының артабан йылдам үҫеүенә хеҙмәт итеп кенә ҡалманы, бәлки унан ситтә лә алыҫҡа билдәле булды. Иң яҡшы әҙәби, музыка, сәхнә әҫәрҙәре һәм ҡала рәссамдарының картиналары күп милләтле совет культураһының хазинаһына инделәр.

## § 3. Культура-ағартыу эше. Китап сығарыу эше һәм массовый информация саралары

Өфөләрҙең культура һәм белем кимәлен күтәреүҙә, уларҙың политик белемдәрен камиллаштырыуҙа һәм сәнғәткә йәлеп итеүҙә ҡаланың культура-ағартыу учреждениелары мөһим һәм һаман арта барған роль уйнай. Ләкин ауыр һуғыш йылдарында уларҙың күптәре үҙҙәренең эшен йә йомшарттылар, йә бөтөнләй туҡтаттылар. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙең был йоғонтоло сараһы мөмкин тиклем киң һәм эффектлы файҙалана алырлыҡ шарттар тыуҙырырға кәрәк ине. Шуға күрә ВКП(б) Үҙәк Комитеты партияның Башҡортостан өлкә комитеты отчеты буйынса 1945 йылдың 27 ғинуарындағы ҡарарында, «республика культура-ағартыу учреждениелары торошоноң ташландыҡ хәлдә булыуын» билдәләп, 1945 йылдың беренсе яртыһында уҡ уларҙың эшмәкәрлеген тулыһынса яңынан башлау өсөн кисектергеһеҙ саралар күреүҙе талап итте [1].

Үҙәк Комитеттың күрһәтмәләрен тормошҡа ашырғанда республиканың баш ҡалаһына беренсе дәрәжәләге әһәмиәт бирелде. ВКП(б) Өлкә Комитетының һәм Башҡорт АССР-ы хөкүмәтенең 1945 йылдың 22 июлендәге «Өфө ҡалаһы буйынса культура-ағартыу учреждениелары селтәрен аяҡҡа баҫтырыу тураһында» ҡарары был эштең конкрет программаһын билдәләне. Бөтә саралар менән культура учреждениеларының материаль базаһын, кадрҙарын нығытыу кәрәклеге күрһәтелде. Хәрби ихтыяждар өсөн ваҡытлыса алынған клубтарҙың, китапханаларҙың биналарын бушатыуҙың, уларҙың мөлкәтен ҡайтарып биреүҙең ваҡыты билдәләнде [2]. Өс йылдан һуң партияның өлкә комитеты бюроһы ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен тикшерҙе, булған клубтарҙың һәм ҡыҙыл мөйөштәрҙең эшен активлаштырырға тәҡдим итте. Шуның менән бергә культура маҡсаттары өсөн яңы биналар төҙөүҙе йәйелдереү ҡаралды [3].

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 25, д. 13, л. 194.
[2] Шунда уҡ, д. 142, л. 54.
[3] Шунда уҡ, оп. 28, д. 212, л. 9, 10.

Партияның ҡала комитеты, ҡала Советы башҡарма комитеты, профсоюз һәм комсомол ойошмалары был бурыстарҙы тормошҡа ашырыуға күп көс һәм энергия бирҙеләр. 50-се йылдар башына уҡ инде Өфөнөң культура-ағартыу учреждениелары селтәре һиҙелерлек тулыланды. Тап бына һуғыштан һуңғы тәүге йылдарҙа ҡаланың төньяҡ өлөшөндә (ул саҡта Черниковск) «Нефтяник», «Строитель» клубтары, «Победа» кинотеатры кеүек эре культура усаҡтары барлыҡҡа килде. Һуңғыһына Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡының Еңеү көнөндә нигеҙ һалынды, һәм уны төҙөү 1947 йылда тамамланды.

50-се йылдарҙа промышленность предприятиелары үҙҙәренең Культура һарайҙарын һәм Культура йорттарын төҙөй башланылар. Улар араһында Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводының Г. К. Орджоникидзе исемендәге Культура һарайы (1956) айырылып торҙо. «Башнефтезаводстрой» тресының, 3-сө һанлы трестың төҙөүселәре һәм башҡа коллективтар Культура һарайҙары алды.

Дәүләт бюджетынан ассигнованиелар иҫәбенә күп объекттар төҙөлдө. Өфөнөң хәҙерге хәлдәге кино селтәре формалашты. 1953 йылда «Родина» кинотеатры асылды. 1961 йылда бер юлы ике кинотеатр — Ю. А. Гагарин исемендәге һәм Г. С. Титов исемендәге кинотеатрҙар, ә 1970 йылда ҡалала тамашасылар залы иң ҙур булған, бик һәйбәт йыһазландырылған киң форматлы «Искра» кинотеатры асылды.

Шул уҡ осорҙа өфөләр тағы бер нисә бик мөһим культура-ағартыу учреждениеһы алдылар. Ҡаланы һәм 100 километрҙан ашыуыраҡ радиуста урынлашҡан райондарҙы хеҙмәтләндереүсе телевидение үҙәген төҙөү тамамланды. 1960 йылда Н. К. Крупская исемендәге республика китапханаһының бинаһы ҡалҡып сыҡты. Башҡорт АССР-ының 50 йыллығы алдынан моторҙар эшләүселәрҙең бына тигән Культура һарайы һалынып бөттө. 1970 йылда «Юбилейный» Культура һарайы, Актерҙар йорто, 1976 йылда Өфө химия заводының Культура һарайы асылды.

1980 йылда Өфөлә 28 клуб, Культура йорто һәм һарайы, 4 дәүләт музейы, 14 культура һәм ял паркы, баҡса эшләне. Ҡала халҡы 15 кинотеатрҙың (6 мең урын) һәм 15 профсоюз кино установкаһы (7 мең урын) хеҙмәттәре менән файҙаландылар.

Культура-ағартыу учреждениеларының материаль базаһы киңәйеү һәм нығыныу менән бергә уларҙың эшмәкәрлеге йөкмәткеһендә һәм формаларында тамырҙан үҙгәрештәр булды. Һуғыш тамамланыу менән, бөтәһенән элек клуб, айырыуса түңәрәк эштәре байтаҡ йылдам рәүештә яңынан башланды һәм камиллашты.

50-се йылдарҙа культура-ағартыу эшенең күләме һәм эффектлылығы артты. Быға өсөн барған һайын уңайлыраҡ шарттар тыуҙы. Халыҡтың ижтимағи активлығы, тормош хәле, белем кимәле күтәрелде. Эш көнөн ҡыҫҡартыу арҡаһында хеҙмәтсәндәрҙең буш ваҡы-

ты күбәйҙе. Һөҙөмтәлә ҡала халҡының культура усаҡтары эшмәкәрлегендә ҡатнашлығы һиҙелерлек артты, халыҡ ижады яңы баҫҡысҡа күтәрелде. Был 1955 йылда Мәскәүҙә Башҡорт әҙәбиәте һәм сәнғәте ун көнлөгөнә әҙерлек осоронда айырыуса асыҡ күренде. Һәр ижади коллектив активлашты, дөйөм ҡала саралары, йырҙарҙы һәм бейеүҙәрҙе иң оҫта башҡарыуға конкурстар һ. б. ш. үткәрелде. Ун көнлөктөң отчет концерттарында художестволы үҙешмәкәрлектең 200-гә яҡын вәкиле ҡатнашты. Уларҙың байтаҡ өлөшөн өфөләр тәшкил итте.

Ләкин культура-ағартыу эшендә етди кәмселектәр ҙә ҡалып килде. Ул халыҡтың талаптарын тулыһынса ҡәнәғәтләндермәне. Тормош яңы проблемалар ҡуйҙы, хеҙмәтсәндәрҙе культураға, үҙешмәкәр сәнғәткә ылыҡтырыуҙың яңы формаларын эҙләүҙе талап итте. Шуға күрә ҡаланың партия һәм совет органдары культура-массовый эште даими рәүештә камиллаштырҙылар, Культура һарайҙарының, клубтарҙың, ҡыҙыл мөйөштәрҙең эшмәкәрлеген яҡшыртыу буйынса семинар-кәңәшмәләр үткәрҙеләр, ыңғай тәжрибәне дөйөмләштерҙеләр.

Төрлө саралар һөҙөмтәһендә 50-се йылдарҙың икенсе яртыһында уҡ инде Культура һарайҙары һәм йорттары, клубтар масса-политик һәм тәрбиәүи эште артабан күтәреүгә өлгәштеләр, меңәрләгән кешеләрҙең ижади мөмкинлектәренең һәр яҡлап асылыуы өсөн шарттар тәьмин иттеләр. 1958 йылға Өфөлә 300-гә яҡын һәр төрлө художестволы үҙешмәкәрлек түңәрәге иҫәпләнде, уларҙа 6 меңдән ашыу кеше шөғөлләнде [1]. Клуб учреждениелары предприятиеларҙың культура тормошоноң ысын үҙәгенә, хеҙмәтсәндәрҙең яратҡан ял итеү урынына әүерелде. «Башнефтезаводстрой» тресының «Строитель» Культура йорто эргәһендә 30 түңәрәк эшләне. Уларға меңдән ашыу, йәғни бөтә коллективтың һигеҙҙән бер өлөшө, йөрөнө [2]. Бында даими рәүештә лекциялар, тематик кисәләр үткәрелде, яҡтылыҡ-тауыш газеталары сығарылды. Г. К. Орджоникидзе исемендәге Культура һарайына, М. И. Калинин исемендәге Культура йортона, «Нефтяник» һәм А. А. Андреев исемендәге клубтарға ҡала кешеләрен күп төрлө һәм ҡыҙыҡлы саралар ылыҡтырҙы.

Художество коллективтары эшенең һан яғынан ғына түгел, ә сифат яғынан күрһәткестәре лә, уларҙың оҫталығы үҫеүе лә бик характерлы. Үҙешмәкәр артистар өфөләрҙең дөйөм хөрмәтен яулап алдылар, ә уларҙың ҡайһы берәүҙәре республиканан һәм хатта илебеҙҙән ситтә лә билдәле булып киттеләр. М. И. Калинин исемендәге Культура йортоноң Башҡорт йыр һәм бейеү ансамбле Йәштәрҙең VI Бөтә донъя фестивалендә бронза миҙал менән наградланды.

Үҙешмәкәр артистар традицияға әйләнгән ҡала һәм республика йәмәғәт йыр смотрҙарында, конкурстарында һәм байрамдарында ак-

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 94, д. 80, л. 42, 138.
[2] Шунда уҡ, л. 122, 123.

тив ҡатнаштылар. Бындай эште ойоштороуҙың яңы формалары ла килеп сыҡты. «Дуҫлыҡ, культура һәм хеҙмәт» эстафетаһы барлыҡҡа килде, аҙаҡтан ул бөтә илгә таралды. 1956 йылда Өфө нефть эшкәртеү заводының «Нефтяник» клубында республикала тәүге агитбригадаларҙың береһе барлыҡҡа килде. 1958 йылдың майында Өфөлә тәү тапҡыр «Театраль яҙ» һәм «Халыҡ ижады көнө» үткәрелде, уларҙа ярашлы рәүештә 17 драма коллективы һәм 40-тан ашыу художество үҙешмәкәрлек коллективы ҡатнашты [1].

Культура-ағартыу эше 60—70-се йылдарҙа айырыуса киң ҡолас алды һәм төрләнде. Уға был осорҙоң иҫтәлекле даталарына әҙерләнеү һәм уларҙы байрам итеү төп йоғонто яһаны.

Ҡаланың партия һәм совет органдары культура учреждениеларын хеҙмәтсәндәрҙе идея яғынан тәрбиәләүҙе, марксистик-ленинсы теорияны, КПСС-тың съездары билдәләгән коммунистик төҙөлөш бурыстарын пропагандалауҙы көсәйтеүгә йүнәлттеләр. Бының өсөн бер тапҡыр үткәрелә торған саралар ғына түгел, бәлки лекциялар циклдары, ленинсы халыҡ университеттары һәм масса-политик эштең башҡа формалары ла файҙаланылды. Докладтарҙың, лекцияларҙың һәм әңгәмәләрҙең тематикаһы даими рәүештә байыҡтырылды.

Культура-ағартыу учреждениелары өфөләрҙең үҙешмәкәр художестволы ижадын артабан үҫтереү өсөн күп эшләнеләр. Ул сифат яғынан үҫте. Уның идея кимәле, башҡарыу культураһы, тематик йүнәлеше камиллаштырылды. Жанр яғынан төрлөлөгө артты. Үҙешмәкәр коллективтар халыҡ йырҙары һәм бейеүҙәре менән бер рәттән үҙ репертуарҙарын классик һәм иң яҡшы хәҙерге әҫәрҙәр менән байыттылар. Культура һарайҙары һәм йорттары эргәһендә ойошторолған симфоник оркестрҙар, балет труппалары, хор капеллалары, вокаль-инструменталь ансамблдәр, һүрәт төшөрөү студиялары ғәҙәттәге хәлгә әүерелде. Драма түңәрәктәре үҙ аллы театрҙар булып үҫтеләр —1980 йылда уларҙың һаны 16-ға еткәйне инде.

Күп кенә художество үҙешмәкәрлек коллективтары профессионалдар кимәленә яҡынлашты. 1981 йылға уларҙың 37-һе юғары башҡарыу оҫталығы һәм хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләү буйынса ҙур эштәре өсөн халыҡ театры исеменә лайыҡ булды. Шундай коллективтарҙың береһе — моторҙар эшләүселәр Культура һарайының 1965 йылда ойошторолған академик капеллаһы. Уның репертуарында 500-ҙән ашыу хор һәм яңғыҙ йыр иҫәпләнә. Капелла йөҙәрләгән концерт бирҙе, һәм уның сығыштары Башҡортостанда ғына түгел, бәлки Советтар Союзының эре ҡалаларында, Болгарияла, Финляндияла, Чехословакияла булды. Почетлы «Халыҡ коллективы» исемен шулай уҡ моторҙар эшләүселәр Культура һарайының башҡорт бейеүҙәре ансамбле, Г. К. Орджоникидзе исемендәге Культура һарайының симфоник оркестры менән хор капеллаһы, ВЛКСМдың 40 йыллығы исемендәге Культура йортоноң ҡатын-ҡыҙҙар ака-

[1] ЦГА БАССР, ф. 1910, оп. 1, д. 389, л. 37.

Моторҙар эшләүселәр Культура һарайы.



демик хоры, Өфө резина-техник изделиелар заводы Культура һарайының цирк студияһы һәм башҡалар йөрөтә. Үҙешмәкәрлектә ҡатнашыусы тиҫтәләгән өфөләр РСФСР-ҙың һәм Башҡорт АССР-ының атҡаҙанған артисы һәм атҡаҙанған культура работнигы тигән юғары исемде йөрөтә.

Художестволы үҙешмәкәрлек, халыҡ таланттарының асылыуы өсөн ғәйәт ҙур мөмкинлектәр биреп, быға тиклем булмағанса массовый характер алды. 60-сы йылдар аҙағында Өфө клубтарында һәм Культура һарайҙарында 30 меңгә яҡын кешене эсенә алған бер нисә йөҙ һәр төрлө түңәрәк һәм коллектив эшләне. Йәмәғәт смотрҙары һәм конкурстары үткәргәндә художестволы үҙешмәкәрлектә ҡатнашыусылар һаны тағы ла арта барҙы. Шулай, Октябрь революцияһының ярты быуатлыҡ юбилейы хөрмәтенә ҡала смотр-конкурсында 200 предприятиенан һәм учреждениенан — 70 мең, ә СССР-ҙың 50 йыллығына арналған смотр-фестивалдә 552 коллективҡа берләшкән 100 мең кеше ҡатнашты [1]. I Бөтә Союз үҙешмәкәр художестволы ижад фестивалендә (1976) Өфөлә 3688 концерт бирелде, уларҙы 600 меңгә яҡын тамашасы ҡараны [2].

Клуб учреждениеларының эшмәкәрлеге һаман төрләрәк була барҙы. Унда әхлаҡ тәрбиәһенә, хеҙмәтсәндәрҙең буш ваҡытын ойоштороуға һәм дөйөм культура кимәлен күтәреүгә байтаҡ урын бирел-

---

[1] «Вечерняя Уфа», 1973, 8 ғинуар.
[2] «Советская Башкирия», 1976, 30 май.

де. Халыҡ университеттары, төрлө белем тармаҡтары буйынса лекторийҙар һәм ҡыҙыҡһыныу буйынса клубтар ойошторолдо, телдән журналдар сығарылды, һорауҙар һәм яуаптар кисәләре, диспуттар, предприятиеларҙың коллектив ял кисәләре, урам байрамдары үткәрелде.

Һанап үтелгән башланғыстарҙың күбеһе йылдам таралды һәм тормошҡа ныҡлап инде. Был, мәҫәлән, халыҡ университеттарына ҡағыла. Уларҙың тыңлаусылары әҙәбиәт һәм сәнғәт, фән һәм техника, марксистик-ленинсы эстетика һәм этика буйынса үҙҙәренең белемдәрен тулыландыралар. Әгәр 1960 йылда ҡалала 6 халыҡ университеты булһа [1], 1980 йылда инде улар 114 иҫәпләнде, ә тыңлаусылар һаны 62 меңгә етте.

Һуңғы йылдарҙа өфөләрҙә кино һәүәҫкәрлеге киң популярлыҡ ҡаҙанды. Бер нисә киностудия һәм түңәрәк барлыҡҡа килде. Уларҙың активында юғары идея-художество кимәлендә эшләнгән байтаҡ ҡына ҡыҫҡа метражлы фильмдар бар. «Авангард» Культура йортоноң 1971 йылда ғына барлыҡҡа килгән киностудияһы һәүәҫкәр фильмдарҙың Бөтә Союз конкурсында (1973) һәм Бөтә Россия смотрында (1975) I дәрәжә дипломдар менән наградланды. Студия ағзалары квартал һайын «Эшсе экраны» киножурналы сығарҙылар. Уның төп темаһы — коллективтың көндәлек эше, төп геройы — хеҙмәт кешеһе.

Эштең яңы формалары халыҡтың арта барыусы рухи ихтыяждарын иҫәпкә алды, ҡыҙыҡһыныуҙары һәм һәүәҫлектәре төрлө булған тағы ла күберәк кешеләрҙе ылыҡтырҙы; был ике ял көнө менән биш көнлөк эш аҙнаһы ваҡытында айырыуса мөһим.

Өфөләрҙең культура тормошонда кинотеатрҙар арта барған роль уйнаны. Ҡаланың кино селтәре киңәйеп кенә ҡалманы, бәлки техник яҡтан камиллашты, ҡайһы бер кинотеатрҙар киң экранлы итеп ҡайтанан ҡорамалландырылды. Фильмдар фонды байтаҡ тулыланды.

Киң йәмәғәтселеккә таянып, кинотеатрҙар халыҡ менән бәйләнеште көсәйттеләр, үҙҙәренең эшмәкәрлек формаларын төрләндерҙеләр. Мәҫәлән, Өфөнөң иң яҡшы кинотеатрҙарының береһе «Победа» фильмдар күрһәтеүҙән тыш лекциялар, художестволы үҙешмәкәрлек сығыштары, яҙыусылар, артистар, революция һәм хеҙмәт ветерандары менән осрашыуҙар, башҡа саралар үткәрҙе. Уларҙың йоғонтоһон баһалау өсөн, бында көн һайын дөйөм алғанда 5 мең кеше булғанлығын иҫәпкә алырға кәрәк, ә 1979 йылға 45 миллион тамашасы хеҙмәтләндерелгән. Кинотеатр бер нисә тапҡыр РСФСР Культура министерствоһының һәм ВЦСПС-тың күсмә Ҡыҙыл байрағын яуланы, уға «РСФСР-ҙың иң яҡшы кинотеатры» дипломы бирелде, ул СССР ВДНХ-һында ҡатнашты. «Родина» кинотеатры работниктары ла юғары күрһәткестәргә ирештеләр, уларға коммунистик хеҙмәт

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 2349, л. 41.

Н. К. Крупская исемендәге Республика китапханаһы.



коллективы исеме бирелде. Улар киноны пропагандалауға, сеанс алдынан тамашасыларҙың ялын ойоштороуға ҙур иғтибар бирҙеләр. Фойела эстрада оркестры уйнай, һәр төрлө күргәҙмәләр үткәрелә, сәскәләр хәстәрләп үҫтерелә. Балалар бүлмәһе эшләй, унда ата-әсәләр картина ҡараған саҡта балаларын ҡалдыра алалар. Киң форматлы «Искра» кинотеатры базаһында совет кино сәнғәтенең ҡаҙаныштарын пропагандалаусы Кино йорто асылды. Бөтә был саралар тамашасылар һанының бик ныҡ артыуын тәьмин итте. Һуңғы осорҙа дәүләт кинотеатрҙары йыл һайын 11 миллиондан ашыу кешене хеҙмәтләндерҙе. Бынан тыш, 2,7 миллионға тиклем тамашасы профсоюз киноустановкалары ҡуйылған залдарҙа фильмдар ҡараны.

Китапханаларҙың эше даими яҡшырҙы, уларҙың материаль базаһы нығыны, китап фондтары йылдам артты. 1957 йылда уҡ әле Өфөлә 2 миллион китап булған 94 китапхана иҫәпләнде [1], ә 1980 йылда инде дөйөм фонды 16,2 миллион томдан торған 375 китап һаҡлағыс бар ине. Н. К. Крупская исемендәге республика китапханаһы Башҡортостанда китапхана эшенең танылған үҙәге булып тора. Һуғыштан һуңғы ун йыллыҡтарҙа уның фонды дүрт тапҡыр артты һәм 1980 йылда 1,8 миллион китап, журналдар комплекттары һәм башҡа баҫмалар иҫәпләнде. 8 залда бер юлы 600-гә тиклем уҡыусы

[1] Народное хозяйство и культурное строительство Башкирской АССР. Статистик йыйынтыҡ. Өфө, 1959, 155-се бит.

эшләй ала. Улар ҡарамағында яҡшы ойошторолған белешмә-библиография бүлеге, илдең иң яҡшы китап һаҡлағыстары менән бәйләнгән китапхана-ара абонемент бар. Өфөләр араһында китапхананың популярлығы артҡандан-арта. 1979 йылда бында 450 мең кеше теркәлгән, ә даими уҡыусылар һаны 50 меңдән ашты.

Республика һәм ҡала китапханалары менән бер рәттән бөтә эре предприятиеларҙа, учреждениеларҙа һәм уҡыу йорттарында китапханалар эшләне. Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе завкомы китапханаһында ғына 22 меңгә яҡын кеше файҙаланған 200 меңгә тиклем китап булды. Китаптарҙы уҡыусыларға яҡынайтыу өсөн, уларҙы 80 күсмә китапхана һәм абонементтары, уҡыу залдары булған 3 филиал аша цехтарҙа һәм бүлектәрҙә биреү ойошторолғайны. Бындай массовый культура усаҡтары марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен һәм беҙҙең партия политикаһын пропагандалауға байтаҡ өлөш индерҙеләр, ҡала халҡын коммунистик тәрбиәләүҙә ҡатнаштылар, уның культура һәм фәнни-техник кимәлен күтәрҙеләр. Халыҡты китапхана хеҙмәтләндереүенең үҙәкләштерелгән системаһы, уҡыусыларҙы анкеталау индерелде, яңы баҫмаларҙың килеүе тураһында информация камиллаштырылды. Уҡыусылар конференциялары, лекциялар, пропагандист һәм агитатор көндәре, әҙәби кисәләр, диспуттар, яҙыусылар менән осрашыуҙар, ил тормошондағы мөһим ваҡиғалар менән бәйләнгән тематик күргәҙмәләр үткәрелде. Был китапханаларға уҡыусыларға тағы ла яҡынайырға, уларҙың һанын арттырырға мөмкинлек бирҙе. 70-се йылдарҙа Өфөлә йәшәүсе һәр өсөнсө кеше китапханала уҡыусы булып торҙо.

Ҡаланың культура-ағартыу учреждениелары араһында уның 4 музейы лайыҡлы урын алып тора. В. И. Лениндың мемориаль Йорт-музейы өфөләрҙең айырыуса ҙур ғорурлығы булып тора. Ул — Уралда юлбашсының тормошо менән туранан-тура бәйләнгән берҙән-бер тарихи ҡомартҡы. Музей ҡәҙерләп һаҡлана. В. И. Лениндың Үҙәк музейы ғилми сотрудниктары ярҙамында уның экспозиция планы камиллаштырыла, мемориаль һаҡлау зонаһын төҙөү тамамланды. Музей Ленин идеяларын пропагандалауҙа актив ҡатнаша, хеҙмәтсәндәрҙе, айырыуса йәштәрҙе, бөйөк юлбашсының тормошо һәм революцион эшмәкәрлеге өлгөһөндә тәрбиәләүҙә баһалап бөтөргөһөҙ роль уйнай. Коммунистар партияһына һәм Совет дәүләтенә нигеҙ һалыусыға халыҡтың һөйөүе сикһеҙ, музейға килеүселәр ағымы өҙөлмәй. В. И. Ленин йәшәгән бүлмәләр буйлап Өфөлә йәшәүселәр генә түгел, бәлки Советтар Союзының төрлө яҡтарынан һәм сит илдәрҙән килгән күп һанлы ҡунаҡтар тәрән тулҡынланыу менән үтәләр. 40 йыл эсендә, 1981 йылдың ғинуарына, бында донъяның 69 иленән 2,8 миллион кеше булды [1].

Музейҙа лекция-экскурсиялар ғына үткәрелеп ҡалмай, бәлки төрлө быуын кешеләренең осрашыуҙары, пионер дружиналарының тан-

---

[1] «Советская Башкирия», 1981, 21 ғинуар.

таналы сборҙары, В. И. Ленинды һәм Н. К. Крупскаяны күргән һәм тыңлаған Бөйөк Октябрь, граждандар һәм Бөйөк Ватан һуғыштары ветерандарының сығыштары ойошторола. Йорт-музейҙа унарлаған мең уҡыусы пионер галстуктары таҡты, комсомол билеттары алды, Өфө гарнизонының күп кенә һуғышсылары хәрби ант бирҙеләр. Музей сотрудниктары ҙур консультация эше алып бара, Ленин бүлмәләре һәм мөйөштәре ойоштороуҙа ярҙам итеүҙе, В. И. Лениндың тормошо һәм эшмәкәрлеге, уның Өфөлә булыуы тураһында белешмә биреүҙе һорап, илебеҙ ҡалаларынан һәм ауылдарынан, сит илдәге дуҫтарҙан килгән күп һанлы хаттарға яуап бирә.

1982 йылда КПСС Үҙәк Комитеты Секретариаты ҡарары буйынса Ленин мемориалы базаһында В. И. Лениндың Үҙәк музейының Өфө филиалын төҙөү буйынса эштәр башланды.

Өфөләге иң өлкән музей — Крайҙы өйрәнеү музейы ҡалала идеологик эштең мөһим үҙәктәренең береһе, башҡорт халҡы, республиканың башҡа милләттәре тарихының, культураһының һәм сәнғәтенең ҡиммәтле ҡомартҡыларын һаҡлаусы булып тора. Ул 1952 йылда реконструкцияланды, совет осоро бүлеге яңы экспонаттар һәм иллюстрациялар менән байтаҡ тулыландырылды. Артабан тематик экспозициялар даими яңыртылып торҙо, был музейҙың популярлығы үҫеүгә булышлыҡ итте. 1964 йылда ҡала йәмәғәтселеге уның йөҙ йыллығын билдәләне.

Һуғыштан һуңғы осорҙа Башҡорт дәүләт художество музейының эшмәкәрлеге айырыуса киң йәйелдерелде. Уға 1954 йылда уның нигеҙ һалыусыһы, живопись академигы М. В. Нестеровтың исеме бирелде. Музей живопись, графика һәм скульптураның уникаль коллекцияһы, халыҡ ижадының гүзәл өлгөләре менән байытылды. Уның фондтарында күренекле рус рәссамдарының һәм Европа живописы оҫталарының, совет живописецтарының, барыһынан элек Башҡортостан һынлы сәнғәт вәкилдәренең полотнолары һаҡлана. Йылдан-йыл экспозицияның идея-тематик кимәле яҡшырҙы, экскурсанттарҙы хеҙмәтләндереү культураһы күтәрелде. Музейҙа ике даими бүлек — революцияға тиклемге рус һәм совет сәнғәте бүлектәре бар. Бынан тыш, регуляр рәүештә тамашасыларҙы Башҡортостандың һәм туғандаш республикаларҙың профессиональ сәнғәте ҡаҙаныштары, сит ил оҫталарының эштәре менән таныштырыусы күргәҙмәләр ойошторола. Музей коллективы фәнни-нәшери һәм пропаганда эшмәкәрлеге алып бара, рәссамдар менән осрашыуҙар, асыҡ ишек көндәре, лекторийҙар һәм башҡа саралар ойоштора. Асылған көндән алып художество музейы 1,5 миллион кешене ҡабул итте.

Хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙә һәм уларҙың йөкмәткеле массовый ялын ойоштороуҙа ҡала баҡсаларының һәм парктарының роле күтәрелә барҙы. Уларҙың дөйөм тоҙоклого, материаль-техник йыһазланышы һәм художество-политик биҙәлеше танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Мәҫәлән, 247 гектар майҙанды биләгән М. Ғафури исемендәге паркка килеүселәрҙе Ю. Гагарин исемендәге кинотеатр,

планетарий, уҡыу залы, спорт майҙансыҡтары, уйын ҡоролмалары — балалар һәм өлкәндәр өсөн аттракциондар, бильярд, йәйге эстрада хеҙмәтләндерә. Бында бөтә йәштәге кешеләр үҙҙәре теләгәнсә ял итә ала. Халыҡ менән эшләүҙең бай тәжрибәһе тупланған, уның формалары, тематик йүнәлеше камиллаштырыла. Парктарҙа халыҡ уйындары, ял кисәләре, концерттар, тансалар үткәрелә, ҡыҙыҡһыныу буйынса клубтар барлыҡҡа килде. Политик-тәрбиәүи характерҙағы саралар — лекциялар, ҡыҙыҡлы кешеләр менән осрашыуҙар, диспуттар, тематик байрамдар (ҡыш, китап, сәнғәт байрамы һәм башҡалар) йышыраҡ үткәрелә башланы. Быларҙың барыһы парктарға йыл һайын йөҙәрләгән мең өфөләрҙе ылыҡтыра. А. В. Луначарский исемендәге баҡса хаҡлы дан тота. Уға ике тапҡыр «Илдең иң яҡшы баҡсаһы» исеме бирелде. М. Ғафури, «Нефтяник», М. И. Калинин исемендәге парктарҙың популярлығы арта бара. Улар йыл әйләнәһенә хеҙмәтсәндәрҙең ялын ҡыҙыҡлы итеп ойоштора. М. Ғафури исемендәге парк В. И. Лениндың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған бөтә Союз смотры лауреаты булды.

Политик аң-белем биреү йөкмәткелерәк була барҙы. Ул хеҙмәтсәндәрҙең яңынан-яңы ҡатламдарын солғап алды. Лекция пропагандаһында бөтә Союз «Белем» йәмғиәтенең Өфө ҡала ойошмаһы мөһим урын алды. Ул 1948 йылда ойошторолдо һәм ул саҡта 560 ағзаны берләштерҙе. 1981 йылға уға 10,7 мең фән, культура һәм сәнғәт работниғы, халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтары белгестәре, производство алдынғылары инде. Уларҙың киң массовый аудиторияһы бар. Һуңғы йылдарҙа Өфөлә марксистик-ленинсы теорияның, КПСС тарихының, СССР-ҙың эске һәм тышҡы политикаһының төрлө мәсьәләләре буйынса көн һайын 200—250 лекция уҡылды. 1979 йылда йәмғиәт ағзаларының хеҙмәтсәндәр алдында 86 мең сығышы булды. Пропаганданың тыңлаусыларға ҙур идея һәм эмоциональ йоғонто көсө менән айырылып тороусы яңы формалары барлыҡҡа килде. Мәҫәлән, ҡалала предприятиеларҙа һәм ойошмаларҙа вуздарҙың һәм ғилми-тикшеренеү институттарының ғалимдары, преподавателдәре, сотрудниктары көсө менән үткәрелгән фән көндәре киң таралды. 1979—1980 йылдарҙа ғына В. И. Лениндың тыуыуына 110 йыл тулыуға, уның Өфөлә булыуының 80 йыллығына әҙерлек һәм уларҙы үткәреү барышында был сараларҙа 1400-гә тиклем кеше ҡатнашты, лекцияларҙы һәм докладтарҙы 1,8 миллион кеше тыңланы.

1965 йылдан алып ҡалала Бөтә Россия тарих һәм культура ҡомартҡыларын һаҡлау йәмғиәтенең район бүлексәләре эшләп килә. Улар тарихи ҡомартҡыларҙы тәртипкә килтереү, уларҙы реставрациялау һәм пропагандалау буйынса байтаҡ эш башҡарҙылар. Өфөнөң элек дәүләт иҫәбенә алынған 86 ҡомартҡыһына өҫтәп, тағы ла 150 ҡомартҡы табылды һәм өйрәнелде, 7 экскурсия маршруты эшләнде, крайҙы өйрәнеүселәрҙән, тарихсыларҙан, һуғыш һәм хеҙмәт ветерандарынан актив булдырылды. Йәмғиәттең эшмәкәрлеге айы-

Өфөлә сығарылған газеталар һәм журналдар.




рыуса үҫеп килеүсе йәш быуын өсөн ҙур танып белеү һәм тәрбиәүи әһәмиәткә әйә.

Хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләүҙең күп яҡлы процесында ваҡытлы матбуғат үтә мөһим урын алып тора. Өлкә һәм ҡала партия ойошмалары уға һәр ваҡыт беренсе дәрәжәләге әһәмиәт бирҙеләр. Һуғыштан һуңғы тәүге йылдарҙа уҡ журналистар һәм полиграфистар кадрҙары ныҒытылды, газета работниктарының уҡыуы яйға һалынды, әшсе хәбәрселәр активы киңәйтелде. 1947 йылда Өфөлә хәреф йыйыусылар, печатниктар, төпләүселәр әҙерләүсе һөнәрселек училищеһы асылды. Полиграфия промышленносы ихтыяждарына бюджет ассигнованиелары артты.

Былар ҙың бөтәһе ҡалала сығыусы «Красная Башкирия», «Ҡыҙыл Башҡортостан» *, «Ҡыҙыл таң» республика газеталарының тиражын, форматын һәм сығыу йышлығын арттырырға, шулай уҡ һуғыш ваҡытында ваҡытлыса ябылған баҫма органдарҙы яңынан сығара башларға һәм яңыларын сығарырға мөмкинлек бирҙе. «Октябрь»

* 1951 йылдан алып «Красная Башкирия» һәм «Ҡыҙыл Башҡортостан» газеталары «Советская Башкирия» һәм «Совет Башҡортостаны» тип атала башланы.

(1946), «Пионер» һәм «Башҡортостан уҡытыусыһы» (1952) журналдары, республика йәштәр газетаһы «Ленинсы» (1951) аяҡҡа баҫтырылды. «Лес — Родине» (1947), «Уфимский железнодорожник» (1950) ведомство газеталары сыға башланы.

50-се йылдар башында Өфөлә бер тиражы 140 мең дана тәшкил иткән 4 республика, 5 тармаҡ газетаһы, «Черниковский рабочий» ҡала газетаһы һәм бер нисә күп тиражлы газета [1] сығарылды. Артабан күп тиражлы газеталар һаны байтаҡ арта. Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводының «Нефтепереработчик» (1955), «Башнефтезаводстрой» тресының «Строитель» (1958), Өфө химия заводының «Химик» (1963) һәм башҡа баҫма органдар барлыҡҡа килә. 60-сы йылдарҙың уртаһынан алып ҡала вуздары үҙҙәренең күп тиражлы газеталарын сығара башланы.

1981 йылға промышленность предприятиеларының — 22, вуздарҙың 6 газетаһы сыҡты. Улар, ваҡиғаларҙың эсендә тороп, производствоның, уҡыуҙың, ижтимағи тормоштоң төп мәсьәләләрен хәл итеүҙә партия ойошмаларының һуғышсан ярҙамсылары булдылар, алдынғы тәжрибәне пропагандаланылар һәм етешһеҙлектәрҙе астылар. Мәҫәлән, ҡалала беренсе күп тиражлы «Моторостроитель» эшсе газетаһы (Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе) ярты быуат буйына үҙ коллективының эштәрендә тап бына шундай ролде уйнаны. Газетаның комплекттары — индустриаль Өфө флагманының йәнле тарихы, ысын йылъяҙмаһы. Күп тиражлы газеталар хәбәрселәр активына, эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр араһынан даими авторҙарға киң таяндылар. Шулай ҙа завод матбуғаты тотош алғанда ведомстволы булып ҡалды. Өфө тормошон ваҡытлы матбуғатта тағы ла киңерәк һәм төрлө яҡлабыраҡ яҡтыртыу кәрәклеге тыуҙы.

Шуға күрә 1969 йылда «Вечерняя Уфа» газетаһының сыға башлауы ҡаланың ижтимағи һәм культура тормошонда мөһим ваҡиға булды. Ул өфөләрҙең хөрмәтен бик тиҙ яулап алды. 1969—1979 йылдарҙа уның тиражы 43,6 меңдән 100 мең данаға тиклем артты. Ҡаланың хеҙмәт көндәре, хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләү «Вечерняя Уфа» газетаһының иғтибар үҙәгендә тора. Газета хеҙмәтсәндәрҙең уҡыуы, көнкүреше һәм ялы тураһында һөйләй, беҙҙең замандашыбыҙҙың яңы һыҙаттарының барлыҡҡа килеүен күрһәтә. Өфөноң ҡала хужалығына, төҙөкләндереүгә һәм үҫеш перспективаларына күп урын бирелә. Газета тирәһенә актив хәбәрселәрҙең ҙур төркөмө тупланған.

1968 йылда Өфөлә «Башҡортостан ҡыҙы» («Дочь Башкирии») журналы сыға башланы. 12 йылда уның тиражы 40 меңдән 90 мең данаға тиклем артты.

Урындағы газета һәм журналдарҙың үҙ уҡыусылары менән бәйләнеше нығыны һәм яңы формалар менән байыны, редакцияларға

---

[1] ПА БОК КПСС, ф. 122, оп. 73, д. 86, л. 94.

хаттар ағымы көсәйҙе, уларҙың эшендә йәмәғәтселектең роле күтәрелде. Эшсе хәбәрселәр хәрәкәте бығаса күрелмәгән массовый төҫ алды. 1955 йылда, һуғыштан һуң тәү тапҡыр, эшсе һәм ауыл хәбәрселәренең 3-сө республика съезы булды. Унда күп кенә өфөләр ҡатнашты. Артабан былдай съездар регуляр рәүештә саҡырылды. Уларҙың һәр береһе алдынан эшсе хәбәрселәрҙең ҡала йыйылышы булып үтте.

Партияның ҡала комитеты авторҙар активының журналислыҡ оҫталығын күтәреүгә ҙур иғтибар бирҙе. «Советская Башкирия» һәм «Ленинец» газеталары редакциялары эргәһендә эшсе хәбәрселәр мәктәбе ойошторолдо. Уларҙың тыңлаусылары совет матбуғатының төп бурыстарын һәм принциптарын өйрәнделәр, материалдарҙы эшкәртеү алымдары, журналистика практикаһы менән таныштылар. 1965 йылда асылған Өфө эшсе хәбәрселәр университеты уҡыуҙың иң юғары формаһы булды [1].

Өфө республика журналистары араһында ойоштороу һәм методик эштең үҙәгенә әүерелде. 1957 йылда СССР Журналистар союзының Башҡортостан секцияһы ойошторолдо. 1980 йылда уның сафында 622 ағза иҫәпләнә ине. Секция союз ағзаларының ижади үҫеүенә булышлыҡ итә, баҫылған материалдарҙың сифатын күтәреү өсөн көрәшә. Башҡортостан журналистарының ете съезы булып үтте инде.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа урындағы матбуғаттың кимәле һиҙелерлек күтәрелде, республика тормошонда уның роле артты. 1967 йылда СССР Верховный Советы Президиумы Указы менән «революцион хәрәкәттә, Башҡортостанда Совет власын урынлаштырыу һәм нығытыуҙа актив ҡатнашҡаны, хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик тәрбиәләү, уларҙы хужалыҡ һәм культура төҙөлөшө бурыстарын үтәүгә туплау буйынса уңышлы эше өсөн» [2] «Советская Башкирия» газетаһы Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланды. 1968 йылда ойошторолоуының 50 йыллығы айҡанлы һәм коммунистик төҙөлөш бурыстарын хәл итеүгә ҙур өлөш индергәне өсөн ошондай уҡ юғары наградалар менән «Совет Башҡортостаны» һәм «Ҡыҙыл таң» газеталары ла наградланды.

Һуңғы осорҙа ҡаланың полиграфия базаһы тамырынан киңәйтелде һәм яҡшыртылды. 1971 йылда КПСС-тың Башҡортостан Өлкә Комитеты нәшриәтенең яңы газета-журналдар комплексы сафҡа инде. Уның типографияһы көн һайын 1,7 миллион дана газета һәм айына 300 мең дананан ашыу журнал сығарыуҙы тәьмин итеүсе ҡеүәтле хәҙерге заман машиналары менән ҡорамалландырылған. Бында 1980 йылда бер дөйөм тиражы 671 мең данаға еткән 5 республика һәм

---

[1] Ахунзянов Т. Печать Советской Башкирии, 2-се китап. Өфө, 1970, 322-се бит.

[2] «Советская Башкирия», 1967, 2 март.

Матбуғат йорто.



бер ҡала газетаһы һәм шулай уҡ 6 журнал сыға. Бынан тыш, 9 үҙәк баҫма — «Правда», «Известия», «Советская Россия», «Комсомольская правда» һәм башҡалар баҫыла. Яңы типография арҡаһында өфөләр был газеталарҙың яңы номерҙарын практик алғанда мәскәүҙәр менән бер үк ваҡытта уҡыу мөмкинлеге алдылар.

Ҡала халҡы алдырған ваҡытлы баҫмалар һаны йылдам үҫте. Әгәр 1964 йылда Өфөлә 332 мең данаға яҡын үҙәк һәм республика газета-журналдары яҙҙырылған булһа, 1980 йылда инде 1,2 миллиондан ашыу данаға яҙҙырылды, йәғни һәр мең кешегә бөтәһе 1273 дана төрлө баҫма тура килде.

Өфөлә Башҡортостан китап нәшриәте уңышлы эшләй. Ул — Россия Федерацияһында иң ҙур нәшриәттәрҙең береһе. Беҙ ҡараған йылдарҙа ул интенсив рәүештә үҫте. Шундай сағыштырыу ҡыҙыҡлы. Һуғыштан һуңғы тәүге биш йыл эсендә (1946—1950) 5,4 миллион дана тираж менән 1095 исемдә китап, брошюра һәм башҡа әҙәбиәт баҫып сығарылған[1], ә 1974—1979 йылдарҙа инде дөйөм тиражы 25,9 миллион дана булған 2001 баҫма сығарылды. Ә 1945 йылдан алып 1980 йылға тиклем бөтәһе 152, 3 миллион данала 19 меңдән

[1] Куватов С. С. Башкирия издает. Өфө, 1969, 31-се бит

ашыу китап баҫып сығарылды. Хәҙер китап нәшриәте йыл һайын дөйөм тиражы 5 миллион дананан ашыу булған 340 исемдә китап, брошюра, плакат сығара. Баҫма продукцияның байтаҡ өлөшө башҡорт телендә баҫылды. Марксизм-ленинизмға нигеҙ һалыусыларҙың хеҙмәттәрен тәржемә итеүгә һәм баҫып сығарыуға айырыуса иғтибар бирелде. Был эш һуғыш ваҡытында өҙөлөп торғайны. Ләкин ул 1945 йылда уҡ яңынан башланды, һәм башҡорт телендә уҡыусы 1969 йылда ғына К. Маркс, Ф. Энгельс, В. И. Ленин әҫәрҙәре һәм төрлө партия документтары менән 244 исемдәге китап алды. Уларҙың тиражы 1,3 миллион дананан ашты [1].

Хәҙерге башҡорт китабы бөтә жанрҙарҙа, төрлө тематикала сығарыла. Ижтимағи-политик, тарихи һәм мемуар әҙәбиәт күп баҫылды. Нәшриәт планында башҡорт шағирҙары һәм прозаиктарының әҫәрҙәрен баҫып сығарыу, рус һәм донъя әҙәбиәте классиктарының, совет яҙыусыларының әҫәрҙәрен тәржемә итеү ҙур урын алып торҙо. Балалар өсөн китап сығарыу артты. Илебеҙҙәге бөтә башҡорт мәктәптәре Башҡортостан китап нәшриәте сығарған дәреслектәр буйынса эшләйҙәр. Фәнни, производство-техник һәм культура-ағартыу тематикаһы буйынса баҫмалар һаны артты. Сығарылған әҙәбиәттең идея-теоретик кимәлен күтәреүгә йүнәлтелгән практик саралар күрелде. Китаптарҙың художестволы биҙәлеше һәм полиграфик яҡтан башҡарылышы квалификациялыраҡ була барҙы. Өфөлә сығарылған китаптар Советтар Союзының тиҫтәләгән өлкәләрендә һатыла. Уларҙың иң яҡшылары Бөтә Россия, Бөтә Союз һәм халыҡ-ара китап күргәҙмәләрендә Башҡортостандың китап сығарыу оҫталығын күрһәтәләр, юғары наградалар менән билдәләнәләр.

Ҡаланың ижтимағи һәм культура тормошонда радио һәм телевидение мөһим урын алып тора. Юғары эмоциональ тәьҫир итеү көсөнә лә эйә булған был оператив массовый информация саралары үҙ йоғонтоһон киңәйтте, һаман күберәк тыңлаусыларҙы һәм тамашасыларҙы йәлеп итте. Өфө радиоһы көн һайын ҡала эшсәндәренең хеҙмәт уңыштары тураһында һөйләй, республикалағы, илдәге һәм сит илдәрҙәге ваҡиғалар менән таныштыра, сәнғәтте һәм әҙәбиәтте пропагандалауға, яңы кешене тәрбиәләү проблемаларына байтаҡ урын бирелә. Микрофон алдында производство алдынғылары, артистар, яҙыусылар, ғалимдар, етәксе работниктар системалы рәүештә сығыш яһайҙар. Радио тапшырыуҙар рус, башҡорт һәм татар телдәрендә алып барыла. Эфирға өфөләр ятраҡан «Беҙҙең ҡалала» радио журналы регуляр рәүештә сыға.

1959 йылдың ғинуарынан алып Өфө телевидение үҙәге эшләй башланы. Мәскәү — Өфө радиореле линияһын сафҡа индереү Үҙәк телевидениеның, шулай уҡ «Интервидение» һәм «Евровидение» тапшырыуҙарын регуляр рәүештә трансляцияларға мөмкинлек бирҙе. 60-сы йылдар уртаһында телевидение үҙәгендә икенсе программа

[1] Куватов С. С. Башкирия издает, 33-сө бит.

ойоштороу өсөн яңы ҡеүәтле станция ҡуйылды. Күсмә станция ойоштороу менән, урындағы телевидениеның оперативлығы ҡырҡа артты. Уның тиҫтәләрсә рубрикаһы булған программаһы бик киң. Телевидение үҙәгенең ижади работниктар коллективы барлыҡҡа килде. Уларҙың профессиональ кимәлен шунан күрергә була: улар тыуҙырған һигеҙ документаль фильм Үҙәк телевидение аша күрһәтеүгә ҡабул ителгән. «Башҡорт балеты биттәре», «Эшсе даны» документаль фильмдары, Башҡорт АССР-ының 60 йыллығына күрһәтелгән төҫлө тулы метражлы «Сәскә ат, Башҡортостан» телефильмы уңышлы эшләнгән.

Телевидение өфөләрҙең генә түгел, бәлки ретрансляторҙар ярҙамында республика баш ҡалаһынан тапшырыуҙарҙы ҡараусы бөтә Башҡортостан халҡының тиерлек көнкүрешенә тиҙ һәм ныҡлап урынлашты. Телевидение экраны һәр ғаиләгә илдең, бөтә донъяның тормошон, кино сәнғәтен һәм театр сәхнәһен яҡынайтты.

Радио тапшырыу һәм телевидение ҙур политик-тәрбиәүи эш алып бара, ҡала хеҙмәтсәндәренең культура кимәлен күтәреүгә булышлыҡ итә. Радиолаштырыуҙың юғары темптары һәм телевидение установкалары һанының артыуы бының өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырҙы. Әгәр 1945 йылда Өфөлә 23,3 мең радио нөктә булһа, 1980 йылда инде ул 301 мең иҫәпләнде. Бынан тыш, өфөләрҙең үҙҙәренең 320 меңдән ашыу радиоалғысы һәм 240 мең телевизоры булды.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Өфөлә бөтә массовый информация сараларын үҫтереүҙә етди уңыштарға өлгәшелде. Уларҙың материаль-техник базаһы нигеҙҙән яҡшыртылды йәки өр-яңынан барлыҡҡа килтерелде, кадрҙарҙың эшен ойоштороу һәм уларҙың составы камиллаштырылды. Яңы газеталар һәм журналдар сыға башланы. бөтә баҫмаларҙың тиражы артты, телевидение барлыҡҡа килде. Баҫма продукцияның, радио һәм телевидение тапшырыуҙарының сифаты яҡшырҙы, уларҙың хужалыҡ һәм культура төҙөлөшө мәсьәләләрен хәл итеүгә йоғонтоһо артты.

## § 4 Физкультура һәм спорт

Физик культура кешене коммунистик тәрбиәләүҙең иң мөһим элементтарының береһе булып тора. Ул — шәхесте һәр яҡлап гармониялы үҫтереүҙең мотлаҡ шарты. Физик культура етештереүсәнле хеҙмәткә, буш ваҡытты рациональ файҙаланыуға, оҙаҡ йылдарға ныҡлы сәләмәтлек һәм ижади активлыҡты һаҡлап ҡалыуға, Тыуған илде һаҡлауға әҙерлеккә булышлыҡ итә. Шуға күрә Өфөнөң партия һәм совет органдары даими рәүештә спорт-масса һәм физкультура-һауыҡтырыу эшенә иң етди иғтибар бирҙеләр. Был йәһәттән һуғыштан һуңғы тәүге ауыр йылдарҙа уҡ, бигерәк тә 1948 йылдың декабрендә ВКП(б) Үҙәк Комитеты тарафынан «Физик культураны һәм спортты массовый үҫтереү һәм спорт оҫталығын күтәреү тураһында» ҡарар ҡабул ителгәндән һуң, күп нәмә эшләнде.

Ҡарарҙы үтәү барышында ҡалала физкультура хәрәкәтен артабан үҫтереүҙе тәьмин итеүсе йоғонтоло саралар тормошҡа ашырылды. Йәш өфөләр республикала был эштең иң яҡшы ҡуйылышы өсөн социалистик ярыш инициаторҙары булып сығыш яһанылар. ГТО значкистары, спорттың төрлө төрҙәре буйынса разрядниктар әҙерләү өсөн конкрет йөкләмәләр билдәләнде һәм шарттар тыуҙырылды. Иң яҡшы спортсылар йәмәғәт инструкторҙары, физкультура ойоштороусылар һәм судьялар булып китте. Спортты популярлаштырыу өсөн, лекциялар уҡылды, боксерҙарҙың, көрәшселәрҙең, гимнастарҙың үрнәк сығыштары үткәрелде. Физкультураны һәм спортты үҫтереүгә ассигнованиелар арттырылды.

Спорт ҡоролмалары төҙөү киң йәйелдерелде. 1948 йылда «Водник» стадионы асылды. 1951 йылдың йәйендә генә ҡалала 30 баскетбол, 148 волейбол майҙансығы, 27 гимнастика ҡаласығы төҙөлдө[1]. Төҙөлөш күләме арттандан-артты. 1960 йылда «Труд» стадионы реконструкцияланды, 1962 йылда «Спартак» ирекле спорт йәмғиәтенең республикала иң ҙур спорт павильоны, 1967 йылда хоккей майҙансығы булған 5 мең урынлы быua тигән Спорт һарайы һәм ябыҡ йөҙөү бассейны сафҡа инде. Һуңғы йылдарҙа шулай уҡ 400 метрлы резина-битум йүгереү юлы булған «Нефтяник» спорт комбинаты, һикереү трамплины, университеттың һәм авиация институтының күп залды спорт комплекстары, тиҫтәләгән спорт майҙансыҡтары ҡоролдо.

1980 йылда ҡала спортсылары ҡарамағында бөтәһе 8 стадион, 194 спорт залы, 91 футбол майҙаны, 82 спорт тиры, 2 ябыҡ йөҙөү бассейны, 3 трамплин, 118 саңғы базаһы булды. Бынан тыш, торлаҡ массивтарҙа һәм уҡыу йорттарында, производство территорияларында йөҙәрләгән волейбол, баскетбол һәм комплекслы спорт майҙансыҡтары, ә ҡышҡа хоккей коробкалары төҙөлгән.

Спорттың материаль базаһын нығытыу менән бергә тренерҙар, инструкторҙар, методистар, спорт судьялары әҙерләүгә мөһим әһәмиәт бирелде. Бында меңәрләгән белгес әҙерләп сығарған Башҡортостан республика физик культура техникумы күренекле роль уйнаны. Физкультура кадрҙарының һәм спортсыларының байтаҡ өлөшө вуздарҙа уҡыны. 1980 йылда Өфөнөң 980 төп физкультура работнигының 90 процентҡа яҡыны юғары һәм урта махсус белемле ине.

Ҡаланың спорт базаһы, уның һәйбәт тәбиғәт шарттары, квалификациялы тренер кадрҙарының булыуы массовый физик культураны үҫтереү өсөн дә, шулай уҡ юғары спорт оҫталығын арттырыу өсөн дә бөтә кәрәкле тәүшарттар тыуҙырҙы.

Физик культура менән спорттың һиҙелерлек йәнләнеүе 40-сы йылдарҙың икенсе яртыһынан уҡ башланды. 1947 йылдың июлендә ҡала спартакиадаһы булды. Унда завод, фабрика, уҡыу йорттары физкультура коллективтары ҡатнашты. Улар команда һәм шәхси

[1] «Красная Башкирия», 1951, 6 октябрь.

беренселек өсөн көрәштеләр. Спартакиаданы асыусы физкультура парадында 13 спорт йәмғиәтенән 10 мең кеше ҡатнашты. Ул «Яуҙарҙа еңдек, хеҙмәттә лә еңербеҙ!» — тигән девиз аҫтында үтте [1]. Спортсылар һанының һәм уларҙың оҫталығының даими рәүештә артыуы ҙур ярыштарҙы йышыраҡ үткәрергә мөмкинлек бирҙе. 1951 йылдың йәйендә үк инде ҡалала 11 мең кеше ҡатнашҡан һәр төрлө 18 ярыш үткәрелде [2]. Был 1948 йылдың шундай уҡ күрһәткестәренән өс тапҡыр артыҡ ине. Өфөлә системалы рәүештә республика ярыштары, Волга буйы ҡалалары һәм автономиялы республикаларының иң көслө еңел атлеттарының, боксерҙарының, теннисистарының, штангистарының зона осрашыуҙары үткәрелде. Бында 1950 йылда саңғы буйынса РСФСР һәм СССР беренселегенә ярыштар үткәреү ҡалала физкультура хәрәкәтенең байтаҡ үҫеүенең күрһәткесе булды. Бөтә был ярыштарҙа хужалар иң актив ҡатнашты һәм йыш ҡына еңеүселәр булып сыҡты. Спорттың күп төрҙәре буйынса өфөләр Башҡорт АССР-ында алда барҙылар, ә ҡайһы берҙәре Россия Федерацияһында иң көслөләр булып киттеләр.

50-се йылдар башында ҡалала һуғыштан һуң СССР-ҙың беренсе спорт мастерҙары үҫеп сыҡты: Павел Казанков — спорт атлауы буйынса РСФСР чемпионы һәм рекордсмены; В. И. Кривошеин илдең йыйылма командаһы ағзаһы, донъяның иң көслө 10 йүгереүсеһе иҫәбенә инеүсе; Светлана Гармс — бейеклеккә һикереү буйынса Европа еңел атлеттарының иң яҡшы ҡаҙаныштарына яҡынлашыусы; Г. Г. Лободин — бокс буйынса СССР чемпионы. 1954 йылға 6 кеше спорт мастеры булды. Артабан уларҙың һаны күпкә йылдамыраҡ артты. Бер 1956 йылда ғына иң юғары спорт исемен Өфөнөң 9 иң яҡшы спортсыһы яуланы. Спортсы-разрядниктар, ГТО значкистары һаны ла йылдан-йыл артты.

Ләкин уңыштар башлыса уҡыусы йәштәр иҫәбенә өлгәшелде. Спорттың төрлө төрҙәре тигеҙ үҫмәй ине әле. Шулай, 1954 йылда ҡалала 40-ҡа яҡын футбол командаһы иҫәпләнде һәм шул уҡ ваҡытта 16 спорт йәмғиәтендә барлығы 5 акробаттар секцияһы, бокс буйынса —2, классик көрәш буйынса 1 секция бар ине. Спорттың ҡайһы бер төрҙәре (хоккей, фехтование һәм башҡалар) бөтөнләй үҫтерелмәне [3]. Физкультура-спорт эше массовый характерҙа булманы, иғтибар спортсыларҙың ҙур булмаған төркөмөнә тупланды.

50-се йылдар аҙағынан алып ҡалала физик культура һәм спорт кимәле һиҙелерлек күтәрелде. Профсоюз, комсомол, хужалыҡ ойошмалары был мөһим эшкә һаман күберәк өлөш индерҙеләр. Спорт-масса эше производство коллективтарында айырыуса һиҙелерлек үҙгәрҙе. Уны үҫтереүгә промышленность предприятиелары күп средстволар бүлде. Үҙҙәренең ҡоролмалары һәм инвентары булыу уларҙың

---

[1] «Красная Башкирия», 1947, 22 июль.
[2] Шунда уҡ, 1951, 6 октябрь.
[3] «Советская Башкирия», 1954, 12 сентябрь.

«Труд» стадионында спидвей буйынса халыҡ-ара ярыштар. 1966 йыл.



күптәренә физкультура хәрәкәтен активлаштырырға, спорт менән системалы рәүештә шөғөлләнеүселәр һанын байтаҡ арттырырға мөмкинлек бирҙе. Бында айырыуса һөҙөмтәләргә өлгәшкән физкультура коллективтары спорт клубтары хоҡуғын яулап алды. 1962 йылда моторҙар эшләү заводының Н. Гастелло исемендәге спорт клубы, 1965 йылда Яңы Өфө нефть эшкәртеү заводының — «Батыр», 1968 йылда 3-сө һанлы төҙөлөш тресының «Уфимец» спорт клубтары шулай барлыҡҡа килде. 1972 йылда ҡалала бындай клубтар һаны 9 ине инде.

Клубтар төҙөү, спорт йәмғиәттәренең маҡсатҡа йүнәлешле эше физкультура хәрәкәтенә ойошҡанығраҡ характер бирҙе, Өфө өсөн яңы булған спорт төрҙәренең (һыу аҫтында йөҙөү, уҡтан атыу, дельтапланеризм, парус спорты һәм башҡалар) барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итте, спортсылар оҫталығының һәм квалификацияһының ҡырҡа күтәрелеүенә алып килде. 60-сы йылдарҙа разрядниктар һаны 22 меңдән 60 меңгә тиклем артты [1], 1980 йылда ҡалала 156 СССР-ҙың спорт мастеры, 3 халыҡ-ара класлы спорт мастеры бар ине.

Физкультура эшенең массовыйлығының элек күрелмәгән үҫеше иғтибарға лайыҡлы. 1965 йылда Салауат ҡалаһынан һуң Өфө сәләмәтлек һәм спорт ҡалаһы исеме өсөн поход инициаторҙарының береһе булып сығып яһаны. Башланғыс бөтә илдә киң яҡлау тапты һәм үҙәк профсоюз һәм спорт ойошмалары тарафынан хупланды.

[1] ЦГА БАССР, ф. 91, оп. 2, д. 2348, л. 49; «Вечерняя Уфа», 1970, 10 гинуар.

«Нефтяник» стадионында Физкультурниктар көнө. 1974 йыл.



1981 йылға ҡалала 393 физик культура коллективы төҙөлгәйне. Спорттың 39 төро үҫеш алды, улар араһында саңғы, еңел атлетика, волейбол, спорт гимнастикаһы, баскетбол, атыу, хоккей, шахмат һәм башҡалар — иң популярҙары. 227 мең өфөлө, йәғни ҡалала йәшәүсе һәр дүртенсе кеше, физкультура һәм спорт менән шөғөлләнде. Айырым ярыштарҙа бик күп спортсылар ҡатнаша ине. Шулай, 1970 йылғы йәйге ҡала спартакиадаһы ваҡытында 138 мең самаһы кеше ярышты, шуларҙың 6,7 меңе спорт разрядтары нормаһын үтәне. 1974/75 йылдарҙың ҡышҡы спартакиадаһы стартына 200 мең кеше сыҡты. «Алтын шайба» һәм «Күн туп» призларына ярыштарҙа күп йөҙләгән мәктәп, йорт һәм урам командалары ҡатнашты.

Спорт-масса эшенең бындай активлашыуына 1971 йылда «Хеҙмәткә һәм СССР-ҙы обороналауға әҙер бул» яңы физкультура комплексын индереү булышлыҡ итте. Ул көндәлек тормошҡа ныҡлап урынлашты. 1980 йылда ГТО нормаларын тулыһынса 536 мең кеше тапшырҙы. Төрлө физкультура-һауыҡтырыу саралары һаман киңерәк индерелә. Бер нисә стадион эргәһендә («Труд», «Нефтяник») урта һәм өлкән йәштәге кешеләр өсөн физкультура группалары ойошторолған. Күп коллективтарҙа производство гимнастикаһы үткәрелә, бының өсөн махсус тәнәфестәр-физкультура минуттары бүленә. Тиҫтәләгән предприятиеның һәм ойошманың ҡала ситендә спорт базалары бар, улар бер юлы 90 меңгә яҡын кешене ҡабул итә ала. Физик

культураның ҡала кешеләренең хеҙмәт эшмәкәрлегенә яһаған ыңғай йоғонтоһо һиҙелерлек арта бара.

Массовый физкультура хәрәкәте өфөләрҙең күп кенә күренекле спорт ҡаҙаныштарының нигеҙе булды. Уларҙың ҡайһы берҙәренең исемдәре беҙҙең илдә һәм сит илдәрҙә киң танылды. Был йәһәттән мотоцикл спорты характерлы. 60-сы йылдарҙың тәүге яртыһында Ф. В. Шәйнуров, И. А. Плеханов, Ю. Д. Дудорин, Б. А. Самородов бер нисә тапҡыр СССР һәм Европа чемпиондары исемен яуланылар. 1966 йылда Ғ. Ф. Ҡадиров боҙҙа мотоцикл уҙыштары буйынса донъя чемпионы булды. Ул был юғары спорт титулын 6 йыл һаҡланы. Башҡортостан уҙышыусыларының уңыштары Өфөнө мотоцикл спортының билдәле халыҡ-ара үҙәгенә әүерелдерҙе.

70-се йылдарҙа хоккей йылдам үҫеш алды. Өфөнөң «Салауат Юлаев» командаһы беренсе лига лидерҙарының береһенә әүерелде һәм 1978 йылда совет хоккейының юғары лигаһында сығыш яһау хоҡуғын яулап алды. Команданың йәштәрҙән торған составы йәштәр араһында ил беренселегендә еңде.

Пистолеттан атыу буйынса донъя рекордсмены һәм чемпионы, 1968 йылғы олимпиада уйындары призеры Р. В. Сөләймәнов, штангистар донъя рекордсмендары В. Г. Козлов һәм М. И. Шабаев, шашка буйынса СССР чемпионкаһы С. П. Огородникова, саңғы двоеборьеһы буйынса Европа чемпионы Ф. Ш. Закиров, еңел атлетика кросында СССР чемпиондары С. А. Васькова һәм М. Г. Абдуллин, Европа чемпионы һәм 1975 йылда коньки спорты буйынса 10 мең метрға йүгереүҙә донъя рекордын ҡуйыусы В. И. Варламов, дзюдо буйынса СССР чемпионы И. Ф. Хөснөтдинов һәм башҡа күптәр ҙур спорт даны яуланылар. Өфө нефть институтының студенты, ике тапҡыр Европа чемпионы И. А. Соколов башҡорт спорты тарихында беренсе тапҡыр «йүгереүсе ҡабан» сәбенә бәләкәй калибрлы винтовканан атыу буйынса Мәскәүҙә 1980 йылғы XXII Олимпиада уйындары чемпионы булды. Ул олимпиаданың алтын миҙалын яулап ҡына ҡалманы, бәлки яңы донъя рекордын да ҡуйҙы.

Өфөләр араһында спорт йәмғиәттәренең Россия һәм үҙәк советтары беренселегендә, халыҡ-ара иптәштәрсә осрашыуҙарҙа еңеүселәр күп. Өфөнөң йыйылма командаһы «Правда» газетаһы призына Бөтә Союз еңел атлетика кростары финалында ҡалалар коллективтары араһында ике тапҡыр (1974 һәм 1975 йылдарҙа) 2-се урынды яуланы. Ҡала стадиондарында даими рәүештә мотоцикл уҙыштары, хоккей, футбол һәм спорттың башҡа төрҙәре буйынса халыҡ-ара һәм Бөтә Союз ярыштары үткәрелә.

Өфө Башҡортостан спорт тормошоноң үҙәге булып тора. Бынан республиканың күренекле спортсыларының иң ҙур күпселеге сыҡты. Шуға күрә Башҡорт АССР-ының спорт командалары башлыса өфөләрҙән комплектланды. Улар шулай уҡ яуаплы ярыштарҙа Россия Федерацияһының, илдең йыйылма командалары составына ла инде. Бөтә был уңыштар — физкультура ойошмалары етәкселәренең, алты

спорт мәктәбенең, спорт клубтарының һәм башҡа коллективтарҙың тренерҙары һәм педагогтарының күп йыллыҡ тырыш эшенең һөҙөмтәһе. Бында 1974 һәм 1977 йылдарҙа Мәскәү, Ленинград, Киев, Минск һәм башҡа ҡалаларҙың социологтары ҡатнашлығында физик культура һәм спорт проблемалары буйынса Бөтә Союз фәнни-практик конференцияларын үткәреү Өфөлә тупланған тәжрибәнең ҡиммәтен үҙенсәлекле таныу булды[1].

Һуңғы ун йылдарҙа Өфөлә физкультура хәрәкәтен үҫтереүҙә ғәйәт ҙур һикереш булды. Күп кенә яңы спорт ҡоролмалары төҙөлдө һәм булғандары реконструкцияланды, уларҙы файҙаланыу яҡшырҙы. Балалар йәшенән алып пенсия йәшенә тиклем халыҡтың бөтә төркөмдәренә физик культура һәм спорт менән шөғөлләнеү өсөн уңайлы шарттар тыуҙырылды. Спорт-һауыҡтырыу саралары комплекслы характерҙа булды һәм улар төрлө кимәлдә — хеҙмәтсәндәрҙең йәшәгән урындарындағы спорт ячейкаларынан алып бөтә ҡала күләмендәге спартакиадаларға тиклем үткәрелде. Физкультура хәрәкәтенең массовыйлығы үҫеү менән бергә Өфө спортсыларының оҫталығы ла артты. Улар спорттың айырым төрҙәре буйынса союз һәм донъя аренаһына сыҡтылар.

[1] «Советская Башкирия», 1974, 20 апрель; 1977, 11 декабрь.

Үҙенең 400 йыллыҡ тарихында Өфө үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылған крайҙың хәрби-административ үҙәгенән илдең эре экономик һәм культура үҙәгенә, автономиялы республиканың баш ҡалаһына тиклем бай, ҙур тарихи ваҡиғалар менән тулы юл үтте. Бөтә был юлда ҡаланың яҙмышы беҙҙең бөйөк Тыуған илебеҙ тарихы менән айырылғыһыҙ бәйле булды. Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының еңеүе Өфө тарихында айырыуса данлы һәм күренекле осорҙо асты. Коммунистар партияһы Үҙәк Комитетының һәм Совет хөкүмәтенең ғәйәт ҙур ярҙамында Өфөнөң промышленносы йылдам үҫә башланы. Яңы гигант заводтар — моторҙар эшләү, нефть эшкәртеү заводтарын һәм башҡаларҙы төҙөү, эшләп килгән предприятиеларҙы реконструкциялау һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтар осоронда уҡ ҡаланың йөҙөн тамырҙан үҙгәртте.

Совет Башҡортостаны баш ҡалаһының көслө үҫеүенә туғандаш республикалар менән тығыҙ бәйләнештәр, экономика һәм культура өлкәһендә тәжрибә алмашыу һәм барыһынан элек бөйөк рус халҡының, Мәскәү, Ленинград һәм илдең башҡа промышленность үҙәктәре эшселәр синыфының эскерһеҙ дуҫлығы һәм ярҙамы булышлыҡ итте. Өфө пролетар интернационализм идеяларының асыҡ кәүҙәләнешенә, Советтар Союзы Коммунистар партияһы эҙмә-эҙлекле үткәргән ленинсы милли политика тантанаһының символына әүерелде.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында совет халҡы өлөшөнә ауыр һынауҙар тура килде. Дүрт йыл буйына тиерлек ҡатылығы буйынса тиңдәше булмаған алыштарҙың тауышы тынманы, уларҙа һәр ике яҡтан миллионлаған һалдат ҡатнашты. Өфө был йылдарҙа фронттың иң мөһим арсеналы булған Уралдың иң ҙур цехтарының береһенә әүерелде. Ҡаланың заводтары һәм фабрикалары Совет Армияһын ҡорал, һуғыш кәрәк-яраҡтары, яғыулыҡ-майлау материалдары, аҙыҡ-түлек һәм кейем-һалым менән өҙлөкһөҙ тәьмин итте.

Һуғыштан һуңғы ун йыллыҡтарҙа Өфөнөң промышленность потенциалы йылдам темптар менән үҫте. Үҙ тармаҡтарында иң эре булған заводтар һәм фабрикалар төҙөлдө, индустрияның яңы тармаҡтары — химия, микробиология, приборҙар эшләү һ. б. барлыҡҡа килде. Промышленностың үҫеүе менән бергә эшселәр синыфының сафтары йылдам артты. Әгәр революцияға тиклемге Өфөлә 3 мең генә эшсе иҫәпләнһә, хәҙер уларҙың һаны 300 меңдән ашып китте. Фән һәм техниканың өр-яңы ҡаҙаныштары менән ҡоралланған, Коммунистар партияһы тирәһенә тығыҙ тупланған һәм үҙенең фиҙакәр хеҙмәте менән коммунизм төҙөүҙең дөйөм эшенә тос өлөш индереүсе күп милләтле эшселәр синыфының барлыҡҡа килеүе Башҡортостанда Совет власының иң мөһим ҡаҙаныштарының береһе булып тора.

Өфө бер ҡасан да бөгөнгө кеүек шундай матур һәм яҡты булғаны юҡ ине әле. Ҡаланың тарихы һәм тормошо, уның ҡаҙаныштары республиканың үҫеүе менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Хәҙер Башҡортостан ҙур ғына экономик һәм фәнни-техник потенциалға эйә. Унынсы биш йыллыҡ осоронда ғына төп фондтар 1,4 тапҡырға үҫте һәм 30 миллиард һум самаһы тәшкил итте.

1981 йылдың 5 мартында СССР Верховный Советы Президиумында Л. И. Брежнев иптәш, республикаға характеристика биреп, былай тине: «Башҡортостан — иркен һәм, өҫтәп әйтәм, ныҡ үҫкән край. Ҡеүәтле химия, энергетика, машиналар эшләү, нефть, эре малсылыҡ һәм байтаҡ иген баҫыуҙары — бына ошолар һәм башҡа күп нәмәләр бар был автономиялы республикала. Тыуған илдең дөйөм потенциалына ул индергән өлөш биш йыллыҡтан биш йыллыҡҡа арта бара» [1].

Һикһәненсе йылдарға аяҡ баҫып, Коммунистар партияһы хәҙерге этапта совет йәмғиәтен артабан үҫтереүҙең фәнни нигеҙләнгән программаһын алға ҡуйҙы. Был программа партияның XXVI съезына КПСС Үҙәк Комитетының Отчет докладында һәр яҡлап теоретик һәм политик яҡтан нигеҙләнде, ун беренсе биш йыллыҡта һәм 1990 йылға тиклемге осорға илебеҙҙең экономик һәм социаль үҫешенең Төп йүнәлештәрендә конкрет кәүҙәләнеш тапты.

Бөтәһе лә кеше хаҡына, бөтәһе лә кеше өсөн тигән даими программа талаптарынан сығып һәм етмешенсе йылдарҙа өлгәшелгәндәргә анализ яһап, КПСС-тың XXVI съезы экономик үҫештең башлыса интенсив факторҙарына ҡыйыуыраҡ күсеүгә, бөтә эштең эффектлылығын һәм сифатын күтәреүгә XXIV һәм XXV съездарҙың күрһәтмәләрен яңынан раҫланы. «Һикһәненсе йылдарҙа, — тиелә Төп йүнәлештәрҙә,— Коммунистар партияһы үҙенең экономик стратегияһын ғәмәлгә ашырыуҙы эҙмә-эҙ дауам итәсәк. Был стратегияның юғары маҡсаты — бөтә ижтимағи производствоның эффектлылығын артабан күтәреү, хеҙмәт етештереүсәнлеген арттырыу, совет кешеләренең

---

[1] «Правда», 1981, 7 март.

социаль һәм хеҙмәт активлығын үҫтереү нигеҙендә халыҡ тормошоноң материаль һәм культура кимәлен тайпылышһыҙ күтәреү, шәхесте һәр яҡлап үҫтереү өсөн иң яҡшы шарттар тыуҙырыу»[1].

Ун беренсе биш йыллыҡ осоронда Өфөнөң халыҡ хужалығы ла артабан үҫәсәк. Нефть эшкәртеүҙә, химияла һәм нефть химияһында, энергетикала яңы рубеждар яуланасаҡ. Элеккесә, машиналар һәм приборҙар эшләү тиҙләтелгән темптар менән үҫәсәк. Еңел һәм аҙыҡ промышленносының етештереү күләме һиҙелерлек артасаҡ. Күн-аяҡ кейеме, трикотаж, кизе-мамыҡ производстволары, тегелгән әйберҙәр етештереү, художество промыслалары артабан үҫәсәк. Ауыр индустрия предприятиеларында халыҡ ҡулланыуы тауарҙары эшләп сығарыу мөһим әһәмиәткә эйә буласаҡ. Уларҙы «Башнефтехимзаводы», «Химпром», моторҙар эшләү берекмәләрендә, шулай уҡ фанера һәм йорт төҙөү-фанера комбинаттарында айырыуса күберәк эшләп сығарыу билдәләнгән. Был киң программаны тормошҡа ашырыу өсөн, ғәйәт күп средство талап ителәсәк. Ун беренсе биш йыллыҡта Өфөнөң халыҡ хужалығына капитал һалыуҙар, алдан билдәләнгән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 2,2 миллиард һум самаһы тәшкил итәсәк.

Киләһе биш йыллыҡта транспорттың бөтә төрҙәрен дә үҫтереү иң мөһим социаль-экономик бурыстарҙың береһе итеп ҡарала. Өфө тимер юл узелының урап үтеү юлын файҙаланыуға тапшырыу, һыу транспортының материаль-техник базаһын нығытыу, Өфө аэропортын реконструкциялауҙы башлау билдәләнгән.

Хәҙерге Өфө — республиканың культура һәм фәнни тормошоноң танылған үҙәге. Ҡалала СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы, тиҫтәләгән ғилми-тикшеренеү һәм проект институттары, 7 юғары һәм 23 урта махсус уҡыу йорто уңышлы эшләй. Улар фән һәм техниканың актуаль проблемалары буйынса тикшеренеүҙәр үткәрәләр, промышленность, ауыл хужалығы, халыҡ мәғарифы, һаулыҡ һаҡлау һәм культура өсөн квалификациялы кадрҙар әҙерләйҙәр. Совет кешеләрендә Тыуған илгә һөйөү, патриотизм һәм пролетар интернационализм, коммунистик идеялылыҡ, хеҙмәткә аңлы ҡараш тәрбиәләү эшендә ҡаланың әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре ҙур ярҙам күрһәтәләр. Өфөләрҙе һәм уларҙың ҡунаҡтарын өҙләкһеҙ арта барыусы күп һанлы культура-ағартыу учреждениелары хеҙмәтләндерә. КПСС-тың Өфө ҡала комитеты һәм ҡала Советы хеҙмәтсәндәр араһында идеология һәм культура-тәрбиә эшенә ҙур иғтибар бирә.

Бөйөк Ватан һуғышынан һуң Өфөлә төҙөкләндереү, халыҡтың торлаҡ-көнкүреш шарттарын яҡшыртыу буйынса ғәйәт ҙур эштәр башҡарылды. Торлаҡ төҙөлөшөнөң киң ҡолас менән алып барылыуы унарлаған мең кешеләрҙе яңы квартираларға күсерергә мөмкинлек бирҙе. Йорттарға һәм промышленность предприятиеларына тотош газ

[1] КПСС-тың XXVI съезы материалдары. Өфө, 1981, 156-сы бит.

һәм йылылыҡ үткәреү ҡаланың, уның һауа бассейнының санитар торошона ыңғай йоғонто яһаны.

Иң төп биҙәге соборҙар һәм мәсеттәр булған дворяндар-сауҙагәрҙәр Өфөһө урынына Совет власы йылдарында киң проспекттары һәм йәшел урамдары, күп ҡатлы уңайлы торлаҡ йорттары, Культура һарайҙары, театрҙары һәм башҡа йәмәғәт бинаһары булған социалистик Өфө үҫеп сыҡты. Хәҙер йөҙәрләгән мең өфөләр ҡаланы юғары культура һәм өлгөлө йәмәғәт тәртибе ҡалаһына әүерелдереү өсөн көрәшә.

Хәҙерге Өфө — киләсәккә ынтылған ҡала. 1971 йылда РСФСР Министрҙар Советы тарафынан раҫланған, Өфөнө үҫтереүҙең яҡындағы 25—30 йылға иҫәпләнгән генераль планы уның үҫеше өсөн ғәйәт ҙур перспективалар билдәләне. Генераль план мөһим архитектура-планлаштырыу проблемаларын принципиаль хәл итеүҙе күҙҙә тота; ул торлаҡ һәм культура-көнкүреш төҙөлөшөнөң, транспортты камиллаштырыуҙың, ҡаланы йәшелләндереүҙең һәм төҙөкләндереүҙең, өфөләрҙең хеҙмәте, көнкүреше һәм ялы өсөн иң уңайлы шарттар тыуҙырыуҙың төп йүнәлештәрен билдәләне.

Ун беренсе биш йыллыҡ осоронда ла Өфөлә торлаҡ һәм культура-көнкүреш төҙөлөшө генераль планға ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла. Төньяҡ, Төньяҡ-II, ЦЭС-I, ЦЭС-II, Энтузиастар микрорайондарында, Инорс, Сипайлово, Глумилино һәм Иҫке Өфө торлаҡ райондарында заманса эшләнгән күп ҡатлы йорттар ҡалҡып сығасаҡ. Массовый торлаҡ төҙөлөшө Дим районын һәм Затондың йөҙөн үҙгәртәсәк. Ағиҙел йылғаһының ярын төҙөү һәм төҙөкләндереү буйынса ҙур эштәр башланасаҡ. Реконструкциялауҙың киң программаһын тормошҡа ашырыу ҡала үҙәгенең йөҙөн үҙгәртәсәк. Өфөнөң төп урамы булған Ленин урамында яңы скверҙар барлыҡҡа киләсәк, кино-концерт комплексы, күргәҙмәләр залы булған Ижади союздар йорто, Республика крайҙы өйрәнеү музейы, авиация һәм индустриаль-педагогия техникумдарының яңы матур корпустары күтәреләсәк.

Авиация, педагогия һәм технология институттарының, университеттың яңы уҡытыу һәм лаборатория корпустары ҡаланы биҙәйәсәк. Яңы административ һәм йәмәғәт бинаһары төҙөләсәк. Кинотеатрҙар селтәре байтаҡ киңәйәсәк.

Ун беренсе биш йыллыҡта һаулыҡ һаҡлау учреждениелары селтәрен артабан киңәйтеү ҡарала. 1000 койкалыҡ больницаны, 200 койкалыҡ күҙ ауырыуҙары больницаһын төҙөү тамамланасаҡ, КПСС-тың XXII съезы исемендәге нефть эшкәртеү заводы медицина-санитария бүлеге 600 койкалыҡ яңы больница комплексы төҙөйәсәк. Поликлиникалар һәм профилакторийҙар селтәре киңәйәсәк. Яңы дауалау учреждениеларын файҙаланыуға тапшырыу халыҡтың больница койкалары менән тәьмин ителеүен һәм өфөләрҙе медицина яғынан хеҙмәтләндереү кимәлен байтаҡ күтәрәсәк.

Юл төҙөлөшө һәм төҙөкләндереү буйынса ҙур эштәр башҡарыу планлаштырыла. Ҡаланың автотранспорт хәрәкәте ныҡ көслө бул-

ған төп магистралдәрендә йәйәүлеләр өсөн ер аҫты юлдары төҙөү дауам иттереләсәк. 12 километр трамвай һәм 16 километр троллейбус линияһы һ. б. төҙөү һәм реконструкциялау билдәләнгән. Былар-ҙың бөтәһе ҡала электр һәм автобус транспорты хәрәкәтенең регулярлығын тәьмин итергә һәм пассажирҙар ташыуҙы ойоштороуҙы һиҙелерлек яҡшыртырға мөмкинлек бирәсәк. Өфөләрҙе транспорт менән хеҙмәтләндереү кимәлен метрополитен тамырҙан үҙгәртәсәк. Уны проектлау һәм беренсе сиратын төҙөүгә әҙерләнеү ун беренсе биш йыллыҡҡа билдәләнгән.

Бөтә совет халҡы менән бергә Өфө хеҙмәтсәндәре Коммунистар партияһы етәкселегендә ышаныслы рәүештә коммунистик йәмғиәт төҙөү юлынан баралар, үҙ хеҙмәттәрен коммунизмдың материаль-техник базаһын булдырыуҙың, социалистик культураны артабан үҫтереүҙең практик бурыстарын хәл итеүгә бирәләр. «Беҙҙең маҡсатыбыҙ мөһабәт, ул — коммунизм,— тип билдәләнде партияның XXVI съезына КПСС Үҙәк Комитетының Отчет докладында. — Һәм хеҙмәттәге һәр уңыш, героик ҡаҙаныштарҙың һәр йылы, һәр биш йыллыҡ беҙҙе был маҡсатҡа яҡынайта. Партия алдағы биш йыллыҡты ла ошо күҙлектән сығып баһалай. Алда күп эштәр тора. Ҙур, ҡатмарлы бурыстарҙы хәл итергә кәрәк. Ләкин беҙ уларҙы хәл итәсәкбеҙ, мотлаҡ хәл итәсәкбеҙ» [1].

---

[1] КПСС-тың XXVI съезы материалдары. Өфө, 1981, 105-се бит.

# ИСЕМДӘР КҮРҺӘТКЕСЕ

## А


Абдрахманов Әбделсәләм 80
Абдуллин И. Ә. 525, 529
Абдуллин М. Г. 561
Абдюшев Й. Я. 180
Аблай, Себер батшаһының улы, 52
Абрамова К. И. 486
Абрютин В. А. 124
Абулхәйер, Кесе жүз ханы 52
Абыҙгилдин Ғ. 189
Агиш Сәғит (Агишев С. И.) 351, 408, 525
Адельгейм Раф. Л. 194
Адельгейм Р. Л. 194
Аҙналин Юлай 59, 60, 61
Айвазовский И. К. 199
Айтматов С. 532
Аксаков П. Д. 49
Аксаков С. Т. 88, 132
Аҡназаров З. Ш. 498
Алексакин В. М. 203
Александр I 82
Александр II 92, 106
Александр III 118
Александров В. В. 120
Александров И. П. 400
Алексеев В. И. («Черный») 155, 175, 307
Алекторов А. Е. 124
Алипов Г. В. 406
Аллаярова Н. Х. 536
Алмазова 127
Алпаров Ғ. Х. 180, 189
Андреев 126
Андреев В. П. 361, 538
Андреев Г. В. 236
Андрей, епископ 234
Андропов Ю. В. 499
Анна Ивановна, императрица 48
Антонов Ф. П. 246
Анчуков 25
Аптекман О. В. 120, 121, 139
Аралбаев И. 180
Арбузов А. Н. 531
Аргентовский В. П. 118
Арефьев А. 385
Арефьев С. П. 393
Аристов С. 55
Ариткулов Д. Ш. 394
Ариткулова Р. С. 454
Арсланов М. Н. 539
Артемьев Г. 28
Артемьев И. В. 21
Арцыбушев В. П. 165, 166
Архангельская М. В. 339
Асанбаев Н. В. 527, 529
Атнабаев Ә. Ҡ. 524, 527, 529
Атнабаева З. Ҡ. 530
Атнағолов С. С. 180
Ауэр Л. С. 196
Афиногенов А. А. 358
Ахунзянов Т. И. 498


## Б


Бабич Ш. М. 180, 188, 190, 193, 194, 352
Бабурин М. Ф. 465, 467
Базилевский 96
Байдак А. З. 400

Байков А. З. 249
Байков А. М. 484
Байков В. 364
Байкова Р. И. 532
Бакаев А. Я. 236
Барбюс Анри 355
Басиров З. Р. 539
Баянов Б. Ф. 408
Бебель А. 119
Бегулов М. С. 482
Бегунц Р. А. 464
Бедный Демьян (Придворов Е. А.) 354
Безыменский А. И. 352, 354, 358
Белобородова Г. В. 389
Белоусов И. А. 236, 239
Бельская Ю. 197
Беляев Ф. А. 119
Беляков И. М. 209
Бенин Л. А. 532
Бенифанд В. Б. 532
Берзон С. А. 404
Бертрам 84
Берштейн Д. П. 116, 167
Бизе Ж. 359, 535
Биишева З. А. 524, 525
Бикбаева Ә. И. 480
Бикбай Баязит (Бикбаев Б. Ғ.) 351, 357, 408, 409
Бикбулатов М. А. 180
Бикбулатова З. И. 357, 529, 530
Бикҡол Шәриф (Бикҡолов Ш. С.) 524, 525
Бикчәнтәев Ә. Һ. 364, 393, 524, 526
Бирюков Б. Г. 424
Благоев Д. Н. 118
Блохин К. И. 99
Блохин Н. К. 123, 126, 181
Блэнди 270
Блюменталь Ю. Ю. 199
Блюхер В. К. 223
Бобров И. Н. 314
Бобрук В. М. 419
Богданов Д. И. 424
Богданов З. 180
Богданова З. 197
Богданович, губернатор 144
Богомолец А. А. 406
Богомолов Д. В. 405
Бойкова Л. И. 143
Бок 117
Боков А. 212
Бондаренко И. Е. 366
Борис, батша 53
Борисов А. Н. 56, 60
Бородин А. П. 535
Борткевич Г. С. 422
Боссе А. А. 89
Бохарский Х. Ғ. 355, 357
Брагин А. М. 161, 182
Брагинский Э. В. 531
Брежнев Л. И. 482, 493, 498, 499
Бриллиантов А. И. 216
Бровко В. П. 389
Бром А. П. 203, 227
Брусянин В. В. 190, 195
Брюханов Н. П. 165, 166, 202, 213, 215—217, 227, 233
Будников П. П. 404
Булаховский Л. А. 403
Бурзянцев А. Д. 538
Бурцевтар 25
Бызина Н. И. 536
Быкин Я. Б. 365
Быков П. Б. 422
Быстров Б. Н. 405
Быховский Н. Н. 137, 185
Бәзри Сәйфи (Бәҙриев С. Ф.) 180, 351
Бәрәкәтулла Ә.-Ш. 251
Бәхтийәров Р. Ҡ. 459

## В

Вавилов П. А. 203
Вавиловтар 25
Вайнерт Эрих 355
Вакульский А. В. 398
Вамбери 183
Ванцетти Б. 296
Варенцова О. А. 139
Варламов В. И. 561
Варламов К. А. 196
Василенко В. Х. 406
Васильев, эшсе 363
Васильев А. Ф. 161, 165
Васильева М. 363
Васильев-Гладков 126
Васильев-Шубоссини (Васильев Н. В.) 352
Васнецов В. М. 199
Васкова С. А. 561
Вахмунин 278
Вахрушев Г. В. 516
Ваһапов С. А. 415
Веденяпин В. А. 238, 239
Верди Д. 126, 128, 359
Верещагин В. В. 199
Вержбилович А. В. 196
Верниковская Н. В. 173, 186
Верстовский А. И. 89, 126
Ветошников Г. А. 398
Вехтер 126
Видинеев В. И. 127, 195, 239
Вилданов Т. М. 459, 484

Вирта Н. Е. 409
Вишневский В. В. 358
Владимирский М. Ф. 240
Власьев А. 53
Вовченко Н. Л. 314
Воейков П. 49
Войнич Э. Л. 530
Волконский Г. С. 63
Волконский Ф. Ф. 50
Володкевич 152, 153
Вольтер Ф. 529
Вольф Ф. 355
Воронин И. А. 147
Ворончихин И. А. 313
Воскобойников И. 66
Воюшин В. Л. 498
Врангель П. Н. 261
Вышенский Н. А. 118
Вәли Әкрәм (Вәлиев Ә. М.) 353, 525, 526
Вәлиев М. М. 359, 360, 409, 534
Вәлиев Ә. Х. 493
Вәлиева Б. Н. 359, 536
Вәлиева З. С. 498
Вәлиева Ә. Ф. 482
Вәлит Батыр (Вәлитов Б. Х.) 351
Вәлитов Н. Х. 498
Вәлиәхмәтова Ш. В. 359

## Г

Гаврилов Г. И. 465, 467
Гаганова В. И. 454
Газенбуш К. К. 120, 139, 143
Газенбуш К. М. 116
Гайдай З. М. 409
Галанов В. Д. 350
Галанова Л. А. 341
Галкин С. Т. 214
Гармс С. 558
Гастелло Н. Ф. 396
Гашек Я. 240, 351
Гейне Г. 354
Герасимов В. Ф. 219
Герасимов И. С. 250
Герасимов К. И. 410, 538
Герн П. 84
Герцен А. И. 78
Гиневский В. П. 213, 232
Глинка М. И. 128, 535
Глушарин И. К. 358
Гнедков Л. П. 339, 350
Гоголь Н. В. 89, 127
Голицын П. М. 59
Головинский 90
Гольденберг И. Г. 404
Гондатти Н. М. 196
Горев Ф. П. 127
Горелов В. Ф. 175
Горшенин П. С. 324
Горький А. М. 191, 194, 196, 353, 354, 358
Гостев И. 46
Готвальд Клемент 377
Готовцев К. В. 161, 165
Гофман И. К. 196
Грачев В. 236
Гребнев Л. И. 208
Громаков В. Я. 498
Громов А. П. 458
Грунт Я. Я. 261
Губанов И. 56—60
Гудков В. В. 118
Гудовщиков М. 38
Гузаков П. В. 250
Гуляев А. А. 189
Гуно Ш. 359
Гурвич Н. А. 6, 124
Гурин А. Г. 313
Густомесов В. П. («Володя Белый») 155, 175
Гутман И. И. 129, 150, 156, 164, 204, 205, 211, 266
Гутоп В. Б. 84
Гутоп М. Я. 84
Гәрәев М. Ғ. 378, 486, 525
Гәрәев Р. А. 498

## Ғ

Ғаббасов М. 385
Ғатауллин Н. Ғ. 480
Ғафури Мәжит (Ғафуров Ғ. Н.) 179, 180, 189, 190—193, 351, 352, 356 357, 467, 523, 530
Ғафурова З. К. 191
Ғиззәтуллин В. Л. 480
Ғиззәтуллина-Волжская С. 190, 197
Ғилманов Г. М. 395
Ғиләжев Ғ. Ғ. 532
Ғиләжев Х. Ғ. 524, 526, 527, 531, 532
Ғирфанов В. К. 395
Ғөбәйҙуллин А. М. 401
Ғөбәйҙуллин М. Х. 396, 397, 534
Ғүмәр Ғариф (Ғүмәров Ғ. М.) 351, 408, 409
Ғүмәров Р. Ғ. 539
Ғәбдиева С. Х. 493
Ғәбәши С. (Мөхәммәтов С. Х.) 180, 198, 359
Ғәзиев А. Х. 454
Ғәзизов А. 385
Ғәзизов Г. С. 393
Ғәзизов Н. Х. 395

Ғәзизов Р. Х. 534
Ғәйнетдинов И. Ғ. 467
Ғәлекәевтар, бер туғандар 278
Ғәли Муса (Ғәлиев Ғ. Ғ.) 526
Ғәлиев М. Ә. 480
Ғәлимов В. Ғ. 357, 529
Ғәлимов М. Ә. 459
Ғәлимов Х. Л. 359
Ғәлимова С. К. 536
Ғәлиәхмәтова Р. М. 498
Ғәскәров Ф. Ә. 536

## Д

Далай, тайша 52
Данилов П. 50
Данукалов А. Ф. 400
Даргомыжский А. С. 128, 359
Дауытов З. Н. 458, 493
Дауытов Х. 355
Даян Ҡадир (Даянов Ҡ. Х.) 353, 408, 526
Дебу И. 88
Демидов 82
Демидовтар 42
Деникин А. И. 243, 261
Деулин А. А. 238
Джабаев Джамбул 354
Дзевалтовский И. П. 250
Дзержинский И. И. 535
Дзержинский Ф. Э. 259
Дианов В. Д. 539
Димитров Г. М. 377, 378
Дмитриев А. С. 514
Дмитриев Н. К. 22, 347, 348
Дмитриев Я. И. 293
Доброрез В. П. 398
Докман С. Ф. 203
Докучаев В. В. 181
Долгушев П. И. 226
Долженков Т. Ф. 213
Долина М. И. 196
Домашников Б. Ф. 538, 539, 540
Домират П. 386
Дохов М. 53
Дроздов Н. М. 358, 532
Дроздова А. И. 389
Дударь М. С. 118
Дудорин Ю. Д. 561
Дудоров И. П. 226
Думбадзе Н. В. 531
Дуров С. 44
Дутов А. И. 223
Дьяконов В. Д. 459
Дәүләт Шөгөр 25
Дәүләтбаев Д. Ш. 498
Дәүләткилдиев К. Ә. 200, 360, 361
Дәүләткилдиева Ф. А. 180
Дәүләтҡолова Ә. Ш. 498
Дәүләтов А. Ғ. 394
Дәүләтшин Ғ. Ә. 351
Дәүләтшина Һ. Л. 354, 525

## Е

Евлампиев А. К. 203, 211, 216, 233
Ежов Б. Д. 537
Екатерина II 39, 83
Елгаштина М. Н. 190, 199, 360
Елизавета Петровна, императрица 42
Елпатьевский С. Я. 110, 118
Емельянова 153
Еникеев И. Ф. 401
Ермолаев А. С. 203
Ермолаева А. 236
Ермощенко В. И. 239
Ефимов Г. С. 223
Ефремов В. А. 182
Ефремов М. И. 161

## Ж

Жадовский А. Е. 78
Жариков А. А. 213, 219
Жилин К. И. 38
Жихарев А. 53

## З

Заварицкий А. Н. 174, 175, 181
Задовский Б. 212
Заимов Х. Ш. 409
Зайков 197
Закиров М. Х. 484
Закиров Ф. Ш. 561
Закк А. Я. 358
Залегаллер В. Б. 465
Заломов П. А. 194
Замятин А. Н. 181
Замятин В. Р. 293
Зарубин-Чика И. Н. (граф И. Чернышев) 56—60
Зархи Н. А. 358
Заслонов К. С. 400
Засулич В. И. 119
Засыпкин 386
Захаров А. 385
Зеленин Д. К. 183
Зеленкин А. 425
Зензинов В. М. 238, 239
Зенцов П. И. 203. 208, 210, 223. 260
Зенцова А. И. 260
Зенцова Е. Г. 401
Зефиров В. С. 88
Зиндерман Хорст 496
Злобин С. П. 351

Зонов М. С. 425
Зорин С. И. 399
Зорин С. П. 404
Зөбәйеров Ә. Ф. 180, 190, 197, 355
Зубарев П. Т. 233
Зубов С. 44
Зугман 204
Зуйков В. С. 236
Зюков К. В. 400
Зябловский Е. Ф. 8

## И

Ибаррури Долорес 377, 378
Ибраһимов Ғ. Ғ. 180, 188, 190, 193, 356
Ибраһимов Ғ. Ғ. 524, 526
Ибраһимов Х. К. 359
Ибраһимов Ш. Ш. 534
Иван (IV) Грозный 19, 20, 21
Иванов А. 253
Иванов В. В. 358
Иванов К. В. 354
Иванов М. А. 293
Иванов Н. И. 90
Иванов П. И. 399
Ивашков И. Г. 536
Игнатович 127
Игнатьев Р. Г. 6, 8, 18, 22, 124
Ильин М. М. 181
Имашев Б. Н. 357
Имашева Ғ. Ш. 529, 539
Инякин Ф. Ф. 274
Исаев И. В. 393
Исакова М. А. 395
Исламов Д. Ф. 525
Исмәғилев З. Ғ. 410, 533, 534, 535
Исмәғилева Л. З. 534
Исхаков Ғ. 197
Иҫәнбирҙин А. С. 194
Иҫәнбирҙин Ғ. С. 194
Иҫәнғолов Ф. Ә. 524, 526
Ишбулатов Р. У. 410, 537
Ишемғол Булат (Ғабдрахманов Ғ. З.) 180, 351, 354
Ишмаев З. Н. 401
Ишәлин Түрәй 56

## Й

Йомағолов И. Х. 530
Йомағолов Ә. М. 484
Йосопов Ф. 197
Йосопова Б. Ә. 355
Йәнбәков Р. Ф. 536
Йәнгиров М. Й. 482
Йәнәби Төхвәт (Кәлимуллин Т. К.) 351

## К

Кадацкий А. Н. 493
Кадомцев И. С. 141, 155, 159, 175
Кадомцев М. С. 141, 155, 223
Кадомцев Н. С. 233
Кадомцев С. Е. 141
Кадомцев Э. С. 141, 142, 155, 209, 250, 261
Кадомцева А. Ф. 141, 194
Кадомцева И. С. 141
Казанков П. 558
Казанский Ғ. 197
Казанцев И. 88
Калачев А. А. 124
Калинин М. И. 261, 262, 275, 362
Калнин О. Ю. 250
Каловскийҙар 25
Кальбреннер К. 127
Камал Ғ. (Камалетдинов Ғ. Ғ.) 197, 356
Каменев С. С. 247
Кандыкин Ф. И. 181
Карвовский Р. О. 126
Каргапольцев И. 239
Карклин Ф. И. 236, 239, 242
Карнай Али (Зөлкарнаев И. М.) 351, 354, 408
Кассель Д. 47
Каутский К. 119
Кащеев Ф. А. 538, 539
Квятковский А. А. 121
Кедров М. С. 258, 259
Келембет Амвросий, епископ 81
Керашев Т. М. 180
Кербель Л. Е. 396, 467
Керенский А. Ф. 206, 214, 218
Кийков А. А. 350
Кирданов Акимнаметка 25
Киреева А. М. 395
Киржацкийҙар 25
Кириллов В. 239
Кирилов И. К. 47, 48, 49, 53
Киршон В. М. 358
Кирьянов А. И. 215
Кирьянов С. Л. 351
Киряев А. Ф. 120
Киселев Г. С. 398
Киселев М. 223
Кларк П. И. 118
Клаузевиц К. 141
Клименок Б. В. 515
Клюзере Г.-П. 141
Ключарев А. С. 359
Кляковкин М. В. 395
Кляузников 127
Книпович Л. М. 141
Ковалев Ф. Л. 423, 424

Кожаров А. 364
Козлов А. Я. 274
Козлов В. Г. 561
Колмацкий С. Т. 99
Колосовский Е. 385
Колчак А. В. 234, 240, 243, 244, 261, 357, 369
Коляскин А. В. 401
Комлев П. А. 398
Конарев В. Г. 514
Конратьев М. Л. 358, 531
Кондратьев П. 31
Кони Ф. 89
Коншин Н. В. 113
Корнеев Я. И. 293
Корнейчук А. Е. 409
Корниенко Н. Н. 480
Корнилов Л. Г. 208, 209
Короленко В. Г. 161
Косарева Н. А. 395
Косоротов В. Е. 162
Коссовский В. И. 239
Костерин П. И. 148, 168, 204
Котомкин М. В. 250
Крамес 126
Красильников М. П. 124, 182
Краснов Д. И. 220
Крашенинников И. М. 181
Крашенинников Н. А. 190
Крашенинников Ф. П. 358
Кренкель Э. Т. 324
Кривов Т. С. 156, 203, 208, 219, 220, 249, 250
Кривошеин В. И. 558
Кригер Г. А. 92
Крохмаль В. Н. 120, 138, 139, 145
Крупская Н. К. 120, 138, 139, 141, 142, 143, 161, 365, 548
Крюков Т. А. 324
Крюков Т. В. 360
Кугушев В. А. 118
Кузев Әлиғула 25
Кузеев Р. Ғ. 518
Кузнец И. 44
Кузнецов А. А. 538
Кузнецов А. В. 401
Кузнецов В. 239
Кузнецов Л. В. 538
Кузнецов П. З. 209
Кузнецова Е. Н. 358
Кузьмин П. П. 239
Кузьмин Я. Я. 293
Кукарев Г. И. 426
Кукушкин 235
Кулибай Сәләх (Кулибаев С. Ғ.) 351, 355, 356, 408
Куликов Е. В. 493
Кульбарисов Ш. З. 534
Кургаев Ф. Ф. 400, 401
Курнатовский В. К. 119
Курчатов О. 118
Курчатова (Серебрякова А. В.) 118
Курчеевтар 25
Кусимов Т. Т. 398
Кутузов М. И. 82
Кутырев Е. И. 467
Кутяков И. С. 246
Кучкин А. П. 165, 207, 213, 217, 242
Күсем, Себер ханы 20, 27
Кызин П. А. 223
Кәрим Мостай (Кәримов М. С.) 408. 482, 498, 524, 527—529
Кәрим Хәниф (Кәримов Х. К.) 353, 408, 524
Кәрим Ярлы (Кәримов Ә. В.) 351
Кәримов Т. Ш. 534
Кәримовтар, бер туғандар 189

## Ҡ

Ҡадиров Ғ. Ф. 561
Ҡадиров И. Ғ. 406, 480
Ҡарамышев Ғ. Х. 355
Ҡоҙаяров Ғ. Ғ. 180, 250
Ҡоҙаяров Ғ. Х. 480
Ҡотлобаева К. И. 394
Ҡотой Ғ. (Ҡотоев Ғ. Н.) 352
Ҡудаш Сәйфи (Ҡудашев С. Ф.) 180, 188, 194, 351, 354, 408, 528
Ҡудашев Х. И. 530
Ҡудашева Ф. Я. 536
Ҡунаҡбаев Х. А. 408
Ҡыуатова Л. С. 536
Ҡәрипов Н. Ҡ. 356, 408

## Л

Лабинский А. М. 196
Лавровский К. П. 305
Ладыгин В. Д. 118
Лаптев 366
Ларин Ю. А. 329
Ларионов А. Л. 58
Ларионов Д. М. 289
Латипов Ф. 198, 355
Лебедев Г. Г. 396
Левицкая Г. П. 467
Лежнев А. П. 199, 361, 410
Ленин В. И. 8, 93, 117, 118, 121, 125, 138, 139, 140—143, 146, 148, 151, 163, 164, 166, 171, 175, 201, 203, 206, 207, 212, 213, 214, 219, 220, 228, 229, 240, 243, 244, 247, 249, 251, 257, 258, 268, 271, 272, 287—289, 312, 336, 347, 358, 361, 362, 366, 367, 369, 371, 387, 392, 463, 465, 469, 482, 485,

487—489, 496, 500, 523, 531, 537, 548, 549, 555
Ленский Д. 89
Леонов Л. М. 409
Леонтьев А. Ф. 517
Леопольдов Н. В. 120
Либединский Ю. Н. 354
Липинский Ф. А. 448
Лист Ф. 127
Литавкин 90
Литвинова Н. В. 498
Лихачев В. М. 143
Лобанов-Ростовский К. Ф. 23
Лободин Г. Г. 558
Локацков М. И. 239, 242
Локацков Ф. И. 236, 237, 239
Ломоносов М. В. 366
Лондон Д. 354
Лотфуллин Ә. Ф. 537, 539
Лоскутов В. И. 313
Лоссиевский М. В. 21, 124
Лось М. 183
Луговой Я. В. 393
Луговской В. А. 353
Лукомский П. Е. 406
Луначарский А. В. 195
Лунин Н. А. 385
Любавский М. К. 350

М

Мавринский И. Л. 153, 154
Мазин М. П. 465
Мазуренко Н. И. 255
Майлин Б. Ж. 180
Максимов 127
Максимов Н. И. 321
Максимова 90
Максимюк Н. К. 464
Макулова Н. 355
Мальков П. В. 174
Малых С. 236
Малышев А. И. 143
Малышев Ф. 385
Мамин-Сибиряк Д. Н. 352
Мамыкина З. Ф. 395
Манаев Н. 180
Маневич А. 257
Маннуров Р. Н. 482
Маркс К. 19, 118, 119, 120, 141, 366, 369, 371, 555
Мастриков М. 269
Матросов А. М. 395, 396, 410, 524, 534
Махин 231
Маяковский В. В. 354
Медведев П. М. 196
Медведев Ф. В. 274
Мейтус Ю. С. 535
Мельников Б. В. 398
Мельников Н. П. 398
Менделевич И. А. 289
Меньшиков П. 422
Меңгатай 27
Мерзляков И. 118
Мерзляков М. К. 484
Меркуров С. Д. 289
Мерәсев Ибраһим 56
Микадзе С. Д. 213
Микрюков А. 385
Минибаев Г. Х. 398
Минскер К. С. 513
Минһажев Ғ. М. 355
Миньчук А. И. 321
Миңлебаевтар, бер туғандар 278
Мирвәлиева М. 355
Мирзаһитов Ә. М. 524, 526, 527, 529
Мирошниченко Н. А. 531
Митькин Ф. Д. 324, 325
Мифтахов С. М. 354, 356, 357, 360, 407, 531
Михаил Романов, батша 53
Михайлов А. Ф. 398
Михайлов Д. Л. 305
Михайлов В. 124
Михайлов И. С. 321
Михайлов Л. В. 396
Михайлова М. А. 196
Михельсон И. И. 58
Мишенев А. Д. 401
Мишенев Г. М. 142, 145, 146
Молло 365
Момужьянц Х. Б. 213
Монюшко С. 126
Морат Гирәй, батша улы 24
Моргулис Н. Д. 403
Морин Ф. Ф. 205
Морозов В. 422
Морозова В. Г. 410
Мортазин Р. Ә. 533, 534
Мортазин-Иманский В. Б. 355, 357
Мортазина Ш. М. 529
Мостафин А. 180
Мостафин Х. Ш. 364
Мостовенко П. Н. 261
Мотиғый Ҡ. (Төхвәтуллин Ҡ. М.) 198
Мохтар Хәсән (Мохтаров Х. Б.) 353
Моцарт В. 127, 128
Мөбәрәков А. Ҡ. 357, 529, 530
Мөбәрәкова Г. А. 530
Мөхәмәҙиев Я. М. 389
Мөхәмәтйәров Х. Г. 408
Мөхәмmәтов А. Т. 424
Мөхәмmәтов-Ғәбәши Х. 183
Мравина Е. К. 196

Мураделп В. И. 535
Мурасин И. И. 46
Муромцев С. А. 164
Мутин М. 355
Мызгин И. М. («Петрусь») 155
Мыльников И. П. 203
Мәжитов Х. З. 536
Мәксүтов Б. З. 187
Мәргән Кирәй (Кирәев Ә. Н.) 353, 408, 526, 527
Мәүлетова М. З. 323, 324
Мәхмүтов З. Г. 536
Мәһәҙиев М. Ә. 357
Мясников И. С. 42
Мясоедов 56

Н

Навои А. 366
Нагаев М. Н. 353
Нагель 278
Нагой И. Г. 25
Нагой М. А. 24
Накоряков Н. Н. 155
Наседкин А. Я. 480
Насиров З. Ш. 180
Насретдинова З. Ә. 535, 536
Насыри Имай (Насыров И. Н.) 351, 354, 356
Нафикова А. 394
Нафикова Ф. В. 536
Негодин И. 419
Недолин Иван (Недолин-Маркелов И. П.) 351, 353
Некрасов 204
Некрасов Н. А. 354
Немвродов 89
Нестеров М. В. 199, 200, 367, 568
Нестеров М. Е. 165
Неуструев С. С. 181
Нефедова А. П. 325
Нечаева Т. П. 539
Ниғмәти Ғ. (Ниғмәтуллин Ғ. Ә.) 352
Ниғмәти Рәшит (Ниғмәтуллин Р. Н.) 351, 354, 408—410, 526, 528
Николай II 151, 152
Нимвицкая М. Н. 339
Нимвицкая Н. Н. 339
Нимвицкий Б. Н. 175
Ниц А. Ф. 173
Новиков В. А. 124
Новиков В. Н. 232
Новиков О. В. 465
Новицкий 127
Новоженов И. И. 398, 399
Носков В. А. 142
Нуғаева З. М. 424
Нуралы, Кесе жүз ханы 53
Нуриев З. Н. 482
Нуриманов Б. Я. 203, 227
Нуриманов М. Я. 198
Нурмөхәмәтов Р. М. 538, 539
Нухов Ф. А. 459
Нәбиуллин В. Т. 498
Нәжми Ҡәүи (Нәжметдинов Ҡ. Ғ.) 352
Нәжми Назар (Нәжметдинов Н. Н.) 524, 527
Нәсибуллин Х. Ш. 424

О

Оболенцев Р. Д. 517
Огородникова С. П. 561
Одинцов В. П. 174
Озерецковский Н. Я. 72
Олейников С. В. 360, 361
Олли А. И. 517
Ольшевский С. И. 255
Орленев П. Н. 196
Осипов Д. 45
Осокин И. П. 42
Островский А. Н. 90, 126, 127, 196
Островский Н. А. 354

Ө

Өммәти З. И. 194
Өмөтбаев М.-С. И. 125, 126

П

Павлов И. П. («Ваня Беленький») 155
Паечкин Ю. П. 465
Палатин М. К. 93
Палеха Б. Я. 538, 539
Палладин А. В. 406
Паллас П. С. 47, 366
Панин 278
Пантелеев А. В. 538, 539, 540
Паторжинский И. С. 409
Пацков Ю. А. 465
Пейко Н. И. 409
Пекарский П. П. 6
Пекер А. А. 6, 89
Пеккер Л. Х. (Виктор Поляков) 148
Перфильев С. 50
Першин Ф. Я. 218, 224, 249, 253, 261
Песляк 79
Петренко А. И. 139
Петров 90
Петров А. Т. 324
Петров Н. П. 223

Петрова 204
Петровский Н. Н. 403
Петр I 34
Пеутлинг Н. 84
Пик Вильгельм 377, 378
Писарев Д. И. 119
Пискунов А. И. 141
Пискунова Е. Н. 141
Плакса М. И. 213
Плаксиндар, бер туғандар 121
Платонов А. Т. 538
Плекунов В. И. 539
Плеханов Г. В. 119, 145
Плеханов И. А. 561
Плотников М. А. 205, 225
Погодин Н. (Стукалов Н. Ф.) 357, 358, 409, 529, 531
Подвойский Н. И. 230, 233
Подоксенов П. 155
Позднов В. А. 537, 539
Покровский Н. Н. 143
Полетаев М. А. 99
Полянкин И. В. 203, 209
Полянцев А. А. 406
Пономаревтар, бер туғандар 239
Попенко П. С. 393
Попков Д. В. 320
Попов Н. И. 396
Попов П. Д. 399
Попова В. Т. 115, 117
Попович П. Р. 449
Постников 250
Потапенко П. В. 454
Преображенский Н. А. 405
Преле Вильгельм 183
Прибылов В. В. 532
Привезенцева М. М. 388, 389
Протазанов Я. А. 357
Пугачев Е. И. 55, 56, 60, 62, 361, 526
Пупышев 117
Пухляков И. 236
Пушкин А. С. 125, 126, 352, 354
Пятяри И. В. 398

## Р

Радзинский Э. С. 531
Раевский Н. Н. 82
Ралль Ю. Ф. 399
Рамазанов Ғ. Й. 408, 524, 526
Ратиславский А. 34
Рафиҡов С. Р. 517
Рахманғолов М. Д. 386
Рахманинов С. В. 535
Ребелинский М. С. 84
Ребенда 233
Резанцев Д. В. 186
Ремезов Н. В. 124, 125, 366
Ремидовский Д. И. 420
Родионов М. И. 219
Рожков В. В. 493
Ролл Я. В. 403
Романов И. Н. 53
Российский Н. А. 422
Россини Дж. 127
Рубинштейн А. Г. 128, 127
Рубцов Д. А. 426
Рудавский П. П. 133
Руденко С. И. 348, 350
Руденченко В. А. 539, 540
Румянцев П. П. 141
Рыбаков С. Г. 124
Рыгалов В. С. 226
Рычков П. И. 8, 19, 21, 24, 47, 183, 366
Рәимов Р. М. 518
Рәмиев И. 212
Рәмиев С. Л. 188, 189, 193, 194
Рәхимов К. Й. 359, 534
Рәхмәтуллин Ш. Р. 530
Рәшитова Т. Ф. 355
Рязанов Э. А. 531

## С

Сабиров Г. С. 395
Сабитов Н. Ғ. 533, 534
Савченко Е. Ф. 155
Савченко Н. И. 406
Садиҡов З. Ш. 161
Сазонова М. 236
Сакаев Н. 197, 355
Сакаева М. Ф. 460
Сакко Н. 296
Салманов Д. К. 223
Салмасов П. П. 538
Салтанов А. П. 79
Салтыков С. Н. 120, 121
Салтыков-Волконский И. С. 359
Салтыков-Щедрин М. Е. 119
Самарин И. Н. 360
Самородов Б. А. 561
Саттаров Ф. М. 536
Сафин Р. Ә. 524, 527
Сафина Г. З. 324
Сафиуллин М. 364
Сафиуллин Х. Г. 536
Сафронов 96
Свидерский А. И. 120, 121, 139, 151, 202, 207, 209, 213—221, 227
Семенов А. В. 538
Семенов-Самарский 126
Сенякин В. П. 395
Сергеев А. 54, 55
Сергеев И. 385

Серебровский А. П. 175
Серебряков И. Д. 160
Серов А. Н. 128
Сибәгатуллин М. 385
Симон, епископ 269
Симонов К. М. 530
Ситдиков F. 189
Скворцов В. А. 128
Скоков К. И. 324
Скрябинский И. М. 203
Славянский 126
Слонов И. А. 196
Случевский И. Ф. 406
Смаков И. М. 536
Смекалин Ф. В. 399
Смирнова Н. 422
Снегиревский С. И. 348
Соколов В. 260
Соколов И. А. 561
Соколов Н. А. 89, 90
Соколов Н. В. 209
Соколов-Новоселов А. Н. 153
Соколовалар, бер тугандар, 90
Сокуров П. М. 185
Сокуровтар 25
Соловьев 253
Солтангәрәев Р. F. 527
Солтанов В. Х. 194
Солтанов Ф. В. 498
Сомов М. 6
Сомов Ф. И. 52
Сорокин В. В. 240
Сосфенов И. П. 84
Сотников И. В. 524
Софья, батша кызы 53
Сөләйманов Р. В. 561
Сөләйманова Г. F. 536
Сөндекле М. (Мәксүтов С. М.) 353, 524, 526
Спадавеккиа А. Э. 409
Сталин И. В. 240, 322, 396
Станишевский И. С. 223
Старцев А. 364
Степанов А. Н. 399
Степанов К. 45
Степанов Л. Б. 409, 535
Столяров Е. В. 498
Стражеско Н. Д. 406
Стрежнева К. Д. 339
Струйский П. П. 196
Стуков 261
Стуколкин Ф. С. 93
Сулимов Д. Е. 219
Сунгуров И. 89
Суровцев И. М. 389
Сутягин Т. П. 293
Сухарев П., дьякон 22
Сухов С. 115
Сүнчәләй С. Х. 193
Сүнчәләй Ш. Х. 339
Сыромятников В. В. 199
Сыромятников В. С. 360, 361
Сыртланов Р. С. 357, 530
Сыртланова (Шляхтина) Е. А. 197, 198
Сәгәдиев А. Г. 210
Сәитов Э. М. 539
Сәйетгәлин Б. С. 394
Сәйфелмөлеков Х. Ш. 250
Сәйфетдинов Ш. 188
Сәйфи-Казанлы Ф. К. 180, 193
Сәлигәскәрова М. F. 536
Сәлиев Б. 180
Сәлихов С. В. 118
Сәлмәнов F. И. 399
Сәлмәнов Р. В. 534
Сәләм F. (Fәлимов С. F.) 354
Сәмитова Ф. 197
Сәүбанова Р. F. 357

## Т

Тавасиев С. Д. 467
Тагор Р. 354
Таждарова Н. А. 355
Тараканова А. Е. 212
Тарасов И. 42
Тарасова П. 422
Татаринов Д. И. 406
Татищев В. Н. 51
Таһиров А. М. 190, 353—355, 356
Таһирова М. А. 536
Твердышев И. Б. 42
Теләпбиргәнов Ж. 180
Теләшев F. F. 418, 454
Тереголов Ә. F. 175
Тереголов F. Н. 480
Терехин Н. Я. 205
Тиманова В. В. 127
Тимергазин К. Р. 517
Тимирязев К. А. 345
Титов Р. И. 480
Тихон, патриарх 270
Тишин Н. И. 353
Толстой А. Н. 358
Толстой Д. А. 122
Толстой Л. Н. 164, 530
Толстой П. П. 185, 202, 218
Толстиков Г. А. 493, 517
Тольятти Пальмиро 377
Томаров В. А. 398
Томпсон 84
Торез Морис 377
Трегубов М. 223
Тренев К. А. 358, 409, 530
Трофимов В. В. 239

Троцкий (Бронштейн) Л. Д. 264
Трубко В. Н. 426
Трубников И. А. 185
Трясоногов Б. Ф. 293
Трясоногов Ф. П. 274
Тувим Ю. 355
Туишев Ф. 198
Туйкин Ф. К. 189, 194, 198
Туков Г. В. 426
Туҡаев Ғ. М. 357, 530
Туҡаев Яхъя 142
Туҡай Ғабдулла (Туҡаев Ғ. М.) 191, 352
Туманов 396
Туфан Х. Ф. 180
Тухачевский М. Н. 364
Тычина П. Г. 406
Тәҡиева З. Ғ. 493
Тюлькин А. Э. 190, 199, 360, 410, 411, 538, 539
Тәржеманов, мөфтөй 234
Тявка (Тевкель), Себер батшаһының улы 52

## У

Удалов П. Б. 422
Ульбрихт Вальтер 377
Ульянов А. И. 118
Ульянова М. А. 139
Ульянова-Елизарова А. И. 139
Ураҡов Килмөхәмбәт 42
Уржумцев И. 89
Урих Е. 84
Урлюк, тайша 52
Урманцева Р. 355
Урсын И. А. 183
Урус, кенәз 23, 24
Урядов И. И. 411, 538
Усаев Ҡәнзәфәр 59
Усманов Ғ. 187
Усманов Ф. У. 401
Устинов Д. Ф. 491
Ухсай Я. Г. 353
Ушанов Ғ. Ғ. 355

## Ф

Фадеев А. А. 353, 354, 358
Фарзтдинов М. М. 513
Федор Иванович, батша 23
Федоров 226
Федотова Г. Н. 127
Федяев А. М. 321
Фельфе Вернер 507
Фидаи Шамун (Шакирйәнов К. М.) 351
Филиппов С. С. 287
Филиппова Ф. 42
Филичев И. Т. 395
Филоненко В. И. 22, 182
Фирдәүси А. 366
Фирсов В. С. 465
Фок А. А. 79
Фосс Е. Н. 118
Фридолин (Дашин) В. Ю. 148, 149
Фролов Ф. С. 129, 150
Фролова Е. С. 389
Фролова Е. Т. 358
Фрост А. В. 405
Фрунзе М. В. 244, 245, 247, 407
Фузеев Б. Д. 539
Фурманов Д. А. 245—247, 354, 357, 358
Фәйзи М. (Фәйзуллин М. М.) 356
Фәйзи Рифғәт (Фәйзуллин Р. Ш.) 529
Фәйзуллина Д. З. 530
Фәризов З. Т. 364
Фәхретдинов Р. Ф. 183

## Х

Хамматов Я. Х. 524
Хангильдин Г. С. 393
Ханжаров Н. 197
Ханжин 244
Ханыков Я. В. 88
Харис Мәлих (Харисов М. Х.) 353, 408
Хатков А. Д. 180
Хафизов М. Ғ. 459
Хисмәтуллин М. Х. 536
Хитровская С. П. 173
Хихлуха Л. В. 467
Хоҙайбирҙин Ш. Ә. 212, 251, 351, 526
Хоҙайбирҙина Т. Ш. 536
Хотев-Самойлов 126
Хөснөтдинов И. Ф. 561
Хөсәйенов Ғәни 178
Хөсәйенов Мөхәмәтйән, мөфтөй 80
Хренников Т. Н. 535
Хурамшин Т. З. 494
Хәбиби Ә. В. 261
Хәбибетдинов Г. Я. 393
Хәбибуллин Ғ. С. 359, 536
Хәй М. (Мөхәмәтйәров Х. Ғ.) 353, 354, 408
Хәйри Ғәйнан (Хәйриев Ғ. Х.) 351, 354
Хәйруллин Р. Х. 364
Хәкимов К. Ғ. 180
Хәкимов Ә. Х. 525
Хәкимова Ш. Г. 324
Хәлилов В. Р. 493, 498
Хәмитова Н. Г. 212

Хәсәнов Р. М. 534
Хәсәнова Л. Ғ. 493
Хәтмуллина Т. Х. 389

Һ

Һамаров Ҡасҡын 56

Ц

Цветкова (Барсова) Е. Я. 128
Цеденбал Ю. 498
Цюрупа А. Д. 120, 121, 139, 142, 143, 148, 202, 205, 215, 216, 219, 227, 233, 289

Ч

Чайковский П. И. 128, 359
Чаковский А. Б. 531
Чанбарисов Ш. Х. 399
Чапаев В. И. 244, 247, 357, 407
Чаплыгина К. 419
Чачина О. И. 120, 121, 139
Чеверев А. М. 213, 260, 261
Чемберджи Н. К. 409
Червяков Е. В. 174
Черемшанский В. М. 88, 366
Черкасов В. И. 398
Черкашенинов Г. П. 360
Черников С. А. 168
Чернов Я. И. 313
Чернышевский Н. Г. 119
Чернядьев И. С. 261
Черняев В. 419
Чесалин 242
Четвериков Б. Д. 173, 351
Чехов А. П. 354, 529
Чечет И. 79
Чижева И. А. 132, 366
Чижов И. Н. 389
Чиков П. С. 93, 116, 117
Чистяков М. А. 236
Чокур, тайша 52
Чугурин И. Д. 240
Чудаков Е. А. 405
Чулошников А. П. 350
Чутких А. С. 422

Ш

Шабаев М. И. 561
Шабрин Н. И. 424
Шайморатов М. М. 374, 394
Шакиров З. Ш. 341
Шакиров М. З. 459, 493, 498
Шакловитый Л. Л. 53
Шакловитый Ф. Л. 53
Шакулина А. 419
Шалимов М. О. 293
Шаляпин Ф. И. 126
Шамильский (Вахитов Ш. Ғ.) 197, 355
Шамов 164, 167
Шамуков Ғ. Р. 357
Шарапов Г. 45
Шаровкин Н. В. 164
Шатров М. Ф. 531
Шатунов Н. А. 274
Шаховский А. А. 89
Шаширин Т. И. 155
Швец 239
Шевич В. 6
Шевченко Т. Г. 119, 354
Шекспир В. 529, 530
Шелгунов Н. В. 119
Шеломенцев А. Л. 231
Шеломенцев И. И. 233
Шереметевтар, графтар 38
Шереметев, граф 71
Шереметев В. С. 44
Шерстобитов Е. П. 456, 459
Шиллер Ф. 126
Шипова О. Е. 339
Ширмөхәммәтов М. 180
Ширяев В. Т. 324
Шишкин И. И. 199
Шишкина А. Н. 339
Шопен Ф. 127
Шорин В. И. 244
Шотман А. В. 212
Шоур М. М. 119
Штейнберг И. З. 214—216
Шток И. В. 358, 532
Штраус И. 535
Шуберт К. Б. 128
Шумилов 126
Шутов А. П. 539
Шәймөхәмәтов М. Б. 389, 412, 423
Шәйнуров Ф. В. 561
Шәмиғолов Ғ. К. 261
Шәрипов С. 197

Щ

Щедрин Р. К. 535
Щекатов А. Е. 8
Щелев Н. 223

Э

Эльцин Б. М. 202, 215, 217, 228
Энгельс Ф. 19, 119, 141, 366, 369, 371, 555

Ә

Әбдеев Н. З. 536
Әбдрәшитов Н. Н. 197
Әҡсәнов С. К. 395
Әлибаев С. Р. 525
Әлмөхәмәтов Ғ. 212
Әлмөхәмәтов Ғ. С. 198, 359
Әминев З. А. 518
Әмири Ғәйнан (Әмиров Ғ. Ғ.) 353, 357, 395, 526
Әхмәҙиев С. 198
Әхмәдуллин Ф. А. 212
Әхмәтйәнов М. Ф. 393
Әхмәтов Х. Ф. 410, 533, 534
Әхмәтов Я. Х. 236
Әхмәтова С. А. 394
Әхмәтов И. А. 202, 208, 214, 235

Ю

Юденич Н. Н. 252, 526
Юлаев Салауат 59, 60, 61, 467
Юлдашев Ҡанбулат 56
Юлтый Дауыт (Юлтый Д. И.) 351, 354, 356
Юматов В. С. 6, 88
Юрьев А. А. 209, 215, 216, 217, 233, 369
Юшин Н. Н. 293

Я

Яблочкина А. А. 127
Якоби И. В. 62
Яковлев А. 385
Яковлев А. А. 398
Якубов М. К. 539
Якупов К. Л. 240
Якупова И. Ф. 389
Якутов И. С. 119, 120, 141, 143, 153, 154, 156, 157, 161, 526
Яҡшыбаев С. 200
Яҡшығолов С. С. 187, 189
Ялкайн Я. (Ялкаев Я. Я.) 353
Ямашев Х. М. 158
Янбулатова Р. С. 357, 530
Яруллин Ф. З. 535
Яснов М. А. 487
Ястребов В. А. 90

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Инеш һүҙ . . . . . . . . . . . . . . . . . . 5

*Беренсе глава*

**Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыу**

§ 1. Өфө ҡалаһы территорияһы борон заманда . . . . . . . 11
§ 2. Башҡортостанда тәүге ҡаланың барлыҡҡа килеүе . . . . 18

*Икенсе глава*

**Феодаль Өфө**

§ 1. Территорияһы һәм халҡы. Өфөнөң экономик тормошо . . . 29
§ 2. Өфө — крайҙың административ үҙәге . . . . . . . . 48
§ 3. Өфө 1773—1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы осоронда . . 54

*Өсөнсө глава*

**Өфө крепостной ҡоролоштоң тарҡалыуы һәм кризисы осоронда**

§ 1. Территория. Ҡала хужалығы. Промышленность һәм сауҙа . . 62
§ 2. Өфөнөң халҡы. Ҡалаға идара итеү . . . . . . . . . 73
§ 3. Мәғариф һәм культура . . . . . . . . . . . . . 82

*Дүртенсе глава*

**Өфө промышленность капитализмы шарттарында**

§ 1. Капиталистик Өфолә промышленность һәм транспорт, сауҙа һәм кредит . . . . . . . . . . . . . . . . 92
§ 2. Территорияһы һәм халҡы. Ҡала үҙидараһы һәм ҡала хужалығы 102
§ 3. Өфө эшселәренең хәле. Тәүге марксистик түңәрәктәр . . . 115
§ 4. Культура . . . . . . . . . . . . . . . . . 121

*Бишенсе глава*

**Өфө империализм һәм буржуаз демократик революциялар осоронда**

§ 1. Промышленность һәм сауҙа. Халыҡ һәм ҡала хужалығы . . 129
§ 2. Өфө социал-демократик ойошмаһының барлыҡҡа килеүе һәм эшмәкәрлеге . . . . . . . . . . . . . . . . 138
§ 3. Беренсе рус революцияһы йылдарында . . . . . . . 146
§ 4. Өфө реакция һәм яңы революцион күтәрелеш осоронда. Февраль революцияһының еңеүе . . . . . . . . . . 161

*Алтынсы глава*

**XX быуат баштарында Өфөлә культура тормошо**

§ 1. Мәғариф. Тыуған яҡты өйрәнеү . . . . . . . . . 170
§ 2. Матбуғат . . . . . . . . . . . . . . . . 184
§ 3. Әҙәбиәт һәм сәнғәт . . . . . . . . . . . . 190

*Етенсе глава*

**Өфө Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы һәм граждандар һуғышы осоронда (1917 йылдың марты — 1920 йылдар)**

§ 1. «Бөтә власть Советтарға!» . . . . . . . . . . . 201
§ 2. Ҡалала Совет власының урынлашыуы һәм нығыныуы . . . 214
§ 3. Өфө хеҙмәтсәндәрен Октябрь ҡаҙаныштарын яҡлауға туплау . 228
§ 4. Өфөнө колчаксыларҙан азат итеү. Хужалыҡ емереклегенә ҡаршы көрәш. Фронтҡа ярҙам . . . . . . . . . . . 243

*Һигеҙенсе глава*

**Өфө халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу йылдарында (1921—1928 йылдар)**

§ 1. Тыныс төҙөлөшкә күсеү. Өфө — Башҡорт АССР-ының баш ҡалаһы . . . . . . . . . . . . . . . . 264
§ 2. Промышленность һәм ҡала коммуналь хужалығын аяҡҡа баҫтырыу . . . . . . . . . . . . . . . . 272
§ 3. Өфө хеҙмәтсәндәренең политик үҫеше . . . . . . . . 286

*Туғыҙынсы глава*

**Өфө беренсе биш йыллыҡтар осоронда (1928—1941 йылдар)**

§ 1. Ҡаланың индустриаль үҫеше. . . . . . . . . . . 299
§ 2. Өфөнөң ижтимағи-политик тормошо . . . . . . . . 316
§ 3. Өфөләрҙең материаль-тормош хәлен яҡшыртыу, ҡала хужалығын үҫтереү . . . . . . . . . . . . . . . 325

*Унынсы глава*

**Өфөлә культура төҙөлөшө уңыштары (1917—1941 йылдар)**

§ 1. Мәғариф һәм фән . . . . . . . . . . . . . . 336
§ 2. Әҙәбиәт һәм сәнғәт . . . . . . . . . . . . . 351
§ 3. Культура-ағартыу эше. Матбугат һәм китап сығарыу эше . . 361

*Ун беренсе глава*

**Өфө Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында**

§ 1. Ҡаланың һуғыш осорондағы тормошо . . . . . . . . 372
§ 2. Өфө хеҙмәтсәндәре — фронтҡа . . . . . . . . . 382
§ 3. Өфөләрҙең хәрби батырлыҡтары . . . . . . . . . 392
§ 4. Һуғыш йылдарында культура һәм фән . . . . . . . . 401

*Ун икенсе глава*

**Өфө социализм төҙөүҙе тамамлау этабында**

§ 1. Ҡаланың ижтимағи-политик тормошо . . . . . . . . 412
§ 2. Өфөнөң артабанғы индустриаль үҫеше . . . . . . . . 421
§ 3. Ҡала хужалығының үҫеүе. Халыҡтың тормош кимәле яҡшырыуы . . . . . . . . . . . . . . . . 431

*Ун өсөнсө глава*

**Өфө коммунистик төҙөлөш юлында**

§ 1. Өфө хеҙмәтсәндәренең коммунизмдың материаль-техник базаһын төҙөүгә индергән өлөшө . . . . . . . . . . . . . . 441
§ 2. Өфө үҫә һәм төҙөкләндерелә . . . . . . . . . . . 462
§ 3. Хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәлен күтәреү . . . . . . 474
§ 4. Өфө хеҙмәтсәндәренең ижтимағи-политик тормошо . . . 482

*Ун дүртенсе глава*

**Өфө — Башҡорт АССР-ының культура үҙәге (1945—1980 йылдар)**

§ 1. Халыҡ мәғарифы һәм фән . . . . . . . . . . . 500
§ 2. Әҙәбиәт һәм сәнғәт . . . . . . . . . . . . . 522
§ 3. Культура-ағартыу эше. Китап сығарыу эше һәм массовый информация саралары . . . . . . . . . . . . 541
§ 4. Физкультура һәм спорт . . . . . . . . . . . . 556

Йомғаҡлау . . . . . . . . . . . . . . . . . 563

Исемдәр күрһәткесе . . . . . . . . . . . . . . 568

**История Уфы**

КРАТКИЙ ОЧЕРК

*(на башкирском языке)*

Руссанан тәржемә ителде

Тәржемәселәре:

*С. В. Атнағолова, Ш. Т. Бикҡолов, Х. М. Ғәлиева, Р. Ғ. Енгалычева, З. Н. Ишмаев, Г. Р. Кәримова, Р. Һ. Ҡондоҙбаев, С. Ғ. Мөхтәруллина, Ф. С. Мырҙаҡаев, Ф. Я. Ниғмәтуллина, Р. Ғ. Ханнанов, Д. Ҡ. Үзбәков*

Редакторҙары *Р. Ф. Байбулатов, С. Ш. Сәитбатталова*
Рәссамы *А. А. Холопов*
Художество редакторы *В. П. Ковалев*
Техник редакторы *Г. Ә. Дауытова*
Корректорҙары *Ф. Х. Ихсанова, Г. Т. Хәмиҙуллина*

ИБ № 2531

Наборға бирелде 12. 07. 83. Баҫырға ҡул ҡуйылды 25. 11. 83. Ҡағыҙ форматы $60 \times 84^1/_{16}$. Тип ҡағыҙы № 1. Ябай яңы гарнитура. Ҡалҡыу ысул менән баҫылды Шартлы баҫма таб. 33,94. Шартлы буяу отт. 35,11. Учет.-изд. таб. 37,27. Тиражы 20000 экз. П11308. Заказ № 206. Хаҡы 1 һум 40 тин.

Башҡортостан китап нәшриәте. Өфө-25, Совет урамы, 18.
Башкирское книжное издательство. Уфа-25, ул Советская, 18.

Башҡорт АССР-ы Нәшриәттәр, полиграфия һәм китап сауҙаһы эштәре буйынса дәүләт комитетының Өфө полиграфия комбинаты. Өфө-1, Октябрь проспекты, 2.

1 һум 40 тин.

